С(Баш)
F21



РАМИ ГАРИПОВ

ПРОИЗВЕДЕНИЯ

В ТРЕХ ТОМАХ

II

УФА
«КИТАП»
1998

С(Баш к)
Г21

413582

РӘМИ ҒАРИПОВ

ӘҫӘРҘӘР

ӨС ТОМДА

II

ӨФӨ
«КИТАП»
1998

ББК 84 Баш
F 24

Төҙөүсеһе Н. В. Ғарипова

Рәссамы А. Р. Ғарипов



Ғарипов Рәми

F 24 Әҫәрҙәр (өс томда). 2-се том. Көндәлектәр, хаттар, мәкәләләр.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1998.— 592 бит.


5-295-02112-2 (т. 2)
5-295-01738-9

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың сираттағы томында уның ижади ғүмере дауамында яҙылған көндәлектәре, мәкәләләре, хаттары урын алды.

F $\frac{4702110100—36}{M\ 121(03)—98}$ 21—98

ББК 84 Баш

© «Китап», 1998



Рэлли Гарриов

Шишмә башына сәйәхәт

Булырҙың булмышынан тигәндәй, оло шәхестәрҙең бәлиғлығы бик иртә һыҙатланыусан. Баҡһаң, балалыҡ йылдарында уларҙың бәләкәс йөрәктәрен тетрәткән кисерештәре, хыял-фараздары, өмөт-юрауҙары — бөтәһенә, мәле еткәс, дәррәү шытып сығып, мул үрсем бирер бәрәкәтле орлоҡҡа тиң икән.

Шағир яҙмышы — быныҢ иң ғибрәтле миҫалы. Һүҙ, әлбиттә, ысын шағирҙар тураһында. Юриһә беҙҙә шиғыр яҙғылаған һәр кемгә ошо ҙур исемде бирергә ашығалар. Ысын шағир иһә тәбиғәттең серле йомғағы ул. Шул йомғаҡ эсендә, ер ҡуйынындағы затлы мәғдән кеүек, ижад аҫылташы үҫеп ята...

Бына ҡулында халҡыбыҙҙың данлыҡлы шағиры Рәми Ғариповтың тағы бер китабы. Баҫманың тәүге ҙур өлөшөн уның Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡып йөрөгәндә яҙып барған көндәлектәре тәшкил итә, икенсе өлөшө — Өфөгә ҡайтҡас, эшкә тотонған тәүге йылдарына бәйле.

Рәми үҫмерлектән, әҙәбиәткә ныҡлап ереккәнгә тиклем үк, шағир ине. Ул — тәбиғәт балаһы. Йәнтейәге Йүрүҙән буйҙарының гүзәл манзаралары уның йөрәгенә шиғриәт сатҡыһы һалған булыр. Өфөлә 9-ынсы интернатмәктәптә уҡығанда баяғы серле йомғаҡ тағы ла ҙурая, тығыҙлана төшә, үҙ эсенә яңы тәьсораттарҙы, кисерештәрҙе йома, киң донъяға табан «тәгәрләй».

Рәмиҙең Мәскәүгә уҡырға китеүе һис тә осраҡлы хәл түгел ине. Донъялағы берҙән-бер Әҙәбиәт институтына ул үҙенең киләсәген асыҡ итеп күҙаллауҙан, яҙмышының шиғриәттә икәнлегенә ышаныуҙан барып инә.

Институтта Рәми Ғарипов иҫ киткес ҡатмарлы, көсөргәнешле рухи тормош менән йәшәй. Береһенән-береһе ҡыҙыҡлы лекциялар, семинарҙар, күренекле шағирҙарҙың, абруйлы профессорҙарҙың дәрестәре... Ул күп уҡый, белемен арттыра, донъяға ҡарашын сарлай, әҙәбиәттә үҙенә генә хас юлды һайлай. Бынан тыш көндәлек биттәренә Рәми үҙе яҙған йәки уға килгән хаттар, рецензияға тартым күҙәтеүҙәр, лекцияларҙың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе, Мәскәү күренештәре, театр тәьсораттары, һабаҡташтары менән аңғәмәләре һибелгән. Шиғырҙары араһында ҡойоп ҡуйғандай һәйбәттәре лә осраштыра, йомшаҡтары ла бар. Быларҙың барыһы ла — эҙләнеү-һуғылыуҙарҙың, ынтылышлы йәшәүҙең татлы ла, эскелтем дә емештәре.

Көндәлек алып барған кеше уны, ғәҙәттә, бары тик үҙе өсөн генә яҙа. Рәми ҙә, моғайын, был дәфтәрҙең берәй ваҡыт матбуғатҡа сығаһын, хатта айырым том итеп баҫыласағын уйламағандыр. Шунлыҡтан уның яҙмаларында яһалмалыҡтың, үҙен булғандан яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ итеп күрһәтергә тырышыуҙың эҙе лә юҡ. Бөтәһенә тәбиғи, һәр һүҙе, хатта бер ҡатлыраҡ фекерҙәре, хаталары ихлас. Был, ысынлап та, ун һигеҙ — егерме йәшлек кенә шағирҙың күңел көҙгөһө. Беҙгә шуныһы ҡиммәт тә.

Йәшлектә кеше тура һүҙле, ҡырҡараҡ фекерле булыусан. Ул тотҡан ерҙән һындырырға ярата, күңеле тартмаған нәмәләрҙе ҡаты хөкөм итә. Рәми ҙә шулай: йә танылған яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен тәнҡитләп ташлай, йә һабаҡташтары менән бәхәсләшеп китә. Мәскәү көндәлегендә лә, Өфө яҙмаларында ла (бигерәк тә халыҡ ижады тураһындағы ентекле тикшереүҙәрендә, ҡайһы бер өлкән ҡәләмдәштәренә биргән нарыҡтарында), йәне көйөүҙән тыйыла ал-

майынса, шағир әсе-әсе һүҙҙәр ысҡындыра, нәфрәтләнә, рәнйей. Мәгәр, төптән уйлағанда, йыш ҡына уның хаҡлы булыуына ышанаһың, сөнки ул фекерен дәлилләй, анализға, кешеләрҙең ҡылыҡ-фиғылын эҙмә-эҙ күҙәтеүенә таяна. Хәйер, Рәми ғүмеренең аҙағынаса ваҡсыллыҡты, ике йөҙлөлөктө, графомандарҙы күрә алманы.

Әйтелгәндәрҙән: «Рәми Ғарипов тәүҙән үк ҙтә белдекле, торғаны бер тәкүә кеше булған икән», — тип уйланмаһын. Шиғриәттең иң юғары түбәләрен яулағансы ул күп һуғылды, ғазаплы икеләнеүҙәр, үкенеүҙәр ҙә кисерҙе. Ләкин шуныһы хаҡ — аҙаҡҡы һулышынаса ул күңеле менән йәш көйө ҡалды, фани донъя зауыҡтарының ҡәҙерен белде, хискә йомарт булды.

Беҙ уның көндәлегенән тағы шуны ла күрәбеҙ: ҙтә мауығыусан, ғишыҡтан тоҡанып барыусан егет ине ул. Һәр матур ҡыҙ уны йоҡонан яҙҙыра, утҡа һала, әйтерһең дә, ошо сибәр уның яҙмышы инде. Ҡайҙа бындай саҡта аҡылға таяныу! Хәйер, яҡындан танышҡас, ул тиҙ үк һыуына, үҙе илаһилаштырған шәхесенең ҡәҙимге йән эйәһе икәнлеген күреү уны гүйә айнытып ебәрә торғайны. Ысын мөхәббәте алда ине шул уның.

Саф күңелле, намыҫсан кеше булараҡ, Рәми дуҫлыҡта ла бик талапсан, талымлы ине. Шунлыҡтан яҡын дуҫтары ла аҙ булды уның. Хәҙер, донъялар үҙгәргәс, «дуҫ-ише» күбәйеп китте-китеүен, ә иң ауыр ваҡыттарында хәлен аңлаған, йөгөнә кергән ышаныслы кешеләре һанарлыҡ ҡына булды. Мин бында Мәрйәм апай Ғималованы, шағирҙың йәш ҡәләмдәштәре Рауил Бикбаев менән Тимер Йосоповто, аҙағыраҡ Рәми ҡорона килеп ҡушылған Динис Бүләковты, Хәсән Назарҙы, Сафуан Әлибайҙы күҙ уңында тотам. Үҙемде һөйләп тормайым, быныһы мәғлүмдер.

Йомғаҡлап шуны раҫлау урынлы һымаҡ: уҡыусы ҡулындағы китаптан күренеүенсә, байтаҡ йылдар үҙғас, шиғриәтебеҙҙең яҡты йондоҙо булып балҡыясаҡ Рәми Ғариповты бында айырым-асыҡ төҫмөрләргә мөмкин. Дөрөҫ, халыҡсанлыҡ, фәлсәфә һәлмәклеге, тулы мәғәнәһендәге әҙәби оҫталыҡ уға аҙағыраҡ киләсәк әле. Был сифаттар әлегә үҫеү, камиллашыу осорон кисерә. Әммә йәп-йәш шиғриҙың студентлыҡ йылдарында уҡ халҡыбыҙҙың данлы ла, зарлы ла тарихынан, даръялай сикһеҙ ауыҙ-тел ижадынан, тылсымлы теленән илһам табыуы, үҙен ошо хазиналарҙың тоғро һаҡсыһы итеп тойоуы хайран ҡалдырырлыҡ. Үкенескә, ул талантына бәрәбәр ҡәҙер-хөрмәтте иҫән ваҡытында күрмәй китте...

Был китап беҙҙе Рәми шишмәһенең башына алып ҡайта. Уның исемен мәңгелек асманына күтәргән, ижадына үлемһеҙлек биргән шиғриәт исемле серле донъяның ҡайҙа, нисек башланып китеүен күҙәтеү фәһемле лә, ҡыуаныслы ла.

Әхиәр Хәким

Кондәлектәр

Студент көндәлектәре*

9 октябрь.

Мостафа ағай! Һеҙгә һаман да өндәшмәй тороуым һәм хушлашмай китеүем өсөн бик ғәфү үтенәм. Сәбәбе бар: һеҙгә бер нисек тә буш ҡул менән инергә теләмәнем. Сөнки бер нәмә лә яҡшылап яҙмаған инем. Йәй буйы йөрәк һыҙлап тик йөрөнө. Башта яҙылғандарынан насар эшләһәм, нисектер енәйәт кеүек тойола. Ә яҙаһы килгән нәмәләр бик күп. Бер көн повестка алдым һәм кис, военкоматтан ҡайтыу менән, тиҙ генә бер нәмә яҙып ташланым. Был яҙҙан бирле, туҡтап тороуҙан һуң, беренсе тауыш ине. Ләкин мин элекке һымаҡ, һәр бер шифырҙан һуң шатланған кеүек, бер нисек тә рәхәтләнә алманым. Ҡапыл миңә үҙемдән бер ни ҙә сыҡмаҫ кеүек тойола. Ләкин тағы ла элекке фекерҙәремә ҡайтам. Ни эшләргә лә белмәйем.

Ә уҡыу бара. Күңелле. Былтыр иптәштәр араһындағы төрлө фекерҙәргә бирелеп, гел үҙемде нык яңылышҡан кеүек тойоп йөрөнөм. Был ышанмау һәр саҡ ғазапланы. Тормошта ниндәйҙер бик матур, иң кәрәкле нәмәне юғалтҡан кеше кеүек һиҙә инем үҙемде. Ә быйыл шатмын. Тик ваҡыт ҡына етмәй. Уҡырға, уҡырға, өйрәнергә! Аҙ белеү барыһынан да нык ҡурҡыта.

Үҙебеҙҙең семинар эшләмәй әле. Ирекле рәүештә Катаевҡа инеп йөрөйөм. Шекспировед М. Морозов тәржемә тураһындағы лекцияларын башланы. Һәр бер һөйләшеү ғүмеремдә ҙур ваҡиға. Миңә инде вузды бөтөү яҡынлашып килгән кеүек тойола. Ашығырға кәрәк. Мәскәүҙәге йылдар күҙ асып йомғансы үтеп китер, ә мин бик күп нәмәне үҙләштермәй ҡалырмын кеүек. Кистәрен ҡайһы көндәрҙә детгизға йүгерәм. Унда балалар әҙәбиәте тураһында бик ҡыҙыҡлы һөйләшеү һәм фекер алышыуҙар була. Ә беҙҙә бында педагогикаға нисектер ҡағылмайҙар. Унан рус булмағандар сит тел урынына рус телен генә үтә. Башҡа телдәрҙе өйрәнеү бик кәрәк. Назым Хикмәтте белеү өсөн, уҡыу башланғас та университетта төрөк телен тың-

* Ҡыҫҡартып баҫыла.

ларға ҡарар иттем. Былтырҙан бирле хыялланып йөрөй инем. Һәр кесаҙна һайын тыңлап йөрөгән булам, нимә сығыр. Унан был студенттарҙы күҙәтеү өсөн бик яҡшы. Беҙҙең институтҡа ҡарағанда бында бөтөнләй икенсе донъя!

Мәскәүҙә үткән көндәр кире әйләнеп ҡайтмаясаҡ. Мин әле үк күп нәмәләрҙе юғалттым. Әле һаман Ҙур театрҙа булғаным юҡ. Әлбиттә, быға студенттың мөмкинлеге лә юғыраҡ. Шулай ҙа быйыл артыҡ ауыр йәшәмәйем. Ҡышҡы каникулда Ленинградҡа барырға хыялланып йөрөйөм. Нисек булыр хәл яғы.

Назым Хикмәтте күреү бәхетенә ирештем. Был турала һеҙгә яҙып ебәргән инем. Әгәр һеҙ кәрәкле тапһағыҙ, мин уның бик баҫылыуын теләйем. Әсғәт рәсемгә төшөрҙө (теге оператор егет). МДУ тураһында ла яҙырға кәрәк булыр. Унда беҙҙең башҡорт егеттәре эшләй, шунан Советтар һарайын төҙөүгә күсәсәктәр. Ошо көндәрҙә минең әйберҙәрҙе комсомол йыйылышында күмәкләп тикшереү булды. Был әле беренсе ҡат шулай эшләнелә (подстрочниктар буйынса). Бабич (Даһи Бабичев) доклад яһаны. Унан фекер алышыуҙар. Мин бер аҙ ҡурҡтым да. Был һөйләшеүгә бик бурыслымын. Ҡайһы бер рус иптәштәр тәржемә итергә алды.

Мостафа ағай, һеҙ үҙегеҙҙең фекерҙәрҙе әйтерһегеҙ. Ләкин ваҡытығыҙҙы алыуҙан ҡурҡам. Һеҙҙең һайланыуға мин шатландым да һәм шәхсән үҙем өсөн күңелһеҙләндем дә. Һеҙҙең йәштәр менән бөтөнләй яңыса һәм уларға иғтибар итеп эшләй башлауығыҙға ышанам. Ләкин миңә хәҙер нисектер үҙемдең уҡытыусымды, бер туған ағай кеүек йылы, ябай булған һәм һәр саҡ ҙур хөрмәт менән иҫкә ала торған дуҫымды, шатлығымды юғалтырмын кеүек тойола. Нимәгәлер ҡурҡам. Һеҙ был һүҙҙәр өсөн асыуланмағыҙ, Мостафа ағай. Сәләмәтлек һәм уңыш теләйем. Рауза апайға, Илгизгә һәм кескәй гражданинға (исемен дә белмәйем әле үҙенең) күп сәләм.

Һеҙҙең Рәми

25 октябрь.

Зарабҡа, Рәмзиәгә. Силәбе өлк., Ҡоншаҡ р., Ҡорман ете йыллыҡ мәктәбе.

Ағаһы һәм еңгәһе! Бына һеҙҙең хатығыҙҙы уҡып шатландым бөгөн. Туғандарым минең, һеҙ бит тормошҡа кешеләр әҙерләйһегеҙ. Ни тиклем ауыр һәм яуаплы, бик күп ижад көсө, гәлсәр кеүек сафлыҡ һәм бирелгәнлек талап итә торған гүзәл эш эшләйһегеҙ һеҙ! Әле беренсе аҙымдарығыҙҙы ғына баҫаһығыҙ. Тәүге тәжрибәләр. Күпме әле яңылышыуҙар, күпме әле ауырлыҡтар! Һеҙҙән көнләшеп тә ҡуям. Минең дә балалар менән булғым килә. Ярай, мин уларҙың йөрәктәренә үҙемдең

һүҙем менән яҡты фекерҙәр яҙырға тырышырмын. Мин һеҙҙең арымай-талмай яңы кешеләр үҫтереүегеҙҙе һәм бының өсөн үҙегеҙҙе лә туҡтауһыҙ үҫтерә барыуығыҙҙы теләйем. Үҙең үҫмәй тороп, кешеләрҙе үҫтереү мөмкин түгел.

Саҡырыуығыҙға бик шатмын. Тик маршрут яғы нисек булыр инде. Мәктәбегеҙ тураһында яҙып тороғоҙ. Һеҙгә бер үтенес. Әгәр һеҙ шуны үтәй алһағыҙ, миңә бик ҙур ярҙам иткән булырһығыҙ. Мин һеҙҙән уҡытыусы көндәлеге алып барыуығыҙҙы үтенәм. Һәр бер иң характерлы уҡыусыны күҙәтеү, уларҙың үҫеүен билдәләү, холоҡтарын биреү, уларға мөнәсәбәтегеҙ һ. б. Педагогик эшегеҙ был көндәлектең эстәлеге булһын. Һәм мин һеҙгә бик ныҡ бурыслы булырмын. Был үҙегеҙ өсөн дә файҙалы буласаҡ. Газета, журналдарҙы алдырырға кәрәк. Был иң кәрәкле һе. Беҙҙең яҡта ишетелмәгән һүҙҙәрҙе, мәҡәл, әйтем, йыр-фәләндәрҙе яҙып барығыҙ.

Һеҙҙең Рәми

1 ноябрь, кесаҙна.

Рауил! Күп сәләм ағайыңдан. Бына әле китапхананан ҡайттым да Константин Паустовскийҙың «От Волги к Дону» очеркын уҡырға ултырғас, һиңә хат яҙмайынса булдыра алманым. Иртәгә беҙҙең совет әҙәбиәтенән семинар. Шул очеркты тикшерәсәкбеҙ. Һиңә лә уны бик яҡшылап өйрәнергә кәрәк булыр Сөнки бында илебеҙҙең бөйөк төҙөлөштәре тураһында һөйләнелә. Ә был һинең хыялың булырға тейеш. Мин һинең энергетик булыуыңды һәр хатымда өгөтләп яҙам. Бәлки, яңылышамдыр ҙа. Сөнки һөнәрҙе һәр кеше үҙе һайлап алырға тейеш. Ләкин кәңәш тә кәрәк. Кәңәште мин һиңә бер әсәнән тыуған туғаным булмаһаң да биргән булыр инем: һинең был эштә һәләтлегеңде күрәм. Энергетика хәҙер — илебеҙҙең иң ҙур киләсәге. Мин һинең был эште хәҙерҙән тәрән аңлауыңды һәм X класты яҡшы тамамлап, һис икеләнеп тормаҫтан бында, минең янға, бөйөк баш ҡалаға уҡырға килеүеңде күргем килә. Бөтә нәмә үҙ тырышлығыңда. Еңел юл түгел. Ә башҡаса юл һайларға һинең хаҡың да юҡ.

Рауил, бына әле мин уҡып ултырған очеркты был хатты алыу менән уҡып сыҡ: «Знамя», 8-се һан. Логинов — илгә 20-нән артыҡ гидростанция бүләк иткән кеше. Ул Сталинградҡа немецтар тарафынан емерелгән Днепрогэсты аяҡҡа баҫтырып килгән. Үҙ эшенең шағиры. Лениндың «Коммунизм — это есть Советская власть плюс электрификация всей страны» тигән һүҙҙәрен һин яҡшы белəһең.

2 ноябрь, йома.

Ленин китапханаһы. 2-се өҫтәл, 64-се урын. «Октябрь», 1930 йыл, 3-сө һан. Сәйфи Ҡудаштың «Шәйехзада Бабичтың ижад юлдары» тигән мәҡәләһе. Ҡыҫҡаса конспект.

1. Бабич Февралгә тиклем.

1905 йылғы революция еңелгәс тә, реакция осоронда «уралсылар», «таңсылар» һәм башҡаларҙың да тауыштары тына. Ҡаты цензура «үҙенең ҡара ҡанатын йәйҙе». Төшөнкөлөк. Өмөтһөҙлөк. Ул саҡта ғөмүм йәштәр тарафынан яратылып уҡыла һәм яңы ҡәләмдәргә остаз була килгән Туҡай ҙа ғүмеренең һуңғы йылдарын ғел төшөнкөлөк, өмөтһөҙлөк йырҙары менән осланы («Октябрь», 1930 й., 3-сө һан. 70-се бит).

«Ауылдың ваҡ буржуа — мулла ғаиләһендә тыуып, шул мөхиттә тәрбиәләнеү өҫтөнә, милләттең, ислам ғилеменең артҡа ҡалыуының, йотолоуының сәбәптәре ныҡ тикшерелә һәм төрөксөлөк, исламсылыҡ менән янырға тәрбиәләнә торған «Ғәлиә» ҡаҙанында ҡайнатылған Бабич ана шул юғарыла әйтелгән шарттар эсендә матбуғатҡа сыҡты».

2. «Ғәлиә»нең төп идеяһы.

1) Уҡыусыларҙың төрөклөк ҡанын-хисен ҡайнатыу. 2) Христиандарға дошманлыҡ, Ҡөрьәнде «дөрөҫ» аңлау һәм уны мәҙәниәткә нигеҙ һалыусы итеп таныу. 3) Ислам динен элекке «саф» хәленә ҡайтарып, реформа яһау һәм шул еп менән төрөк-татар ҡәбиләләрен бергә бәйләү. Киләсәктә ҙур бер төрөк илен барлыҡҡа килтереү (солтанғәлиевсыларҙың бер тамыры бына ҡайҙа ул). 4) Төрөк нәҫеленән булған һәр бер уҡыусының бурысы, ниндәй милләттән, ниндәй синыфтан булыуына ҡарамаҫтан, шул идеялар өсөн йәнен ҡорбан итергә тейеш ине. «Ғәлиә»нән уҡып сыҡҡан егеттәр тормошта шул идеяларҙы таратыусы, тамырландырыусы вәкилдәр булып сыҡты. Төркиәнән, Мысырҙан уҡып ҡайтҡан мөғәллимдәр, шул ерҙәрҙән килтерелгән дәреслектәр «Ғәлиә»нең идея мейесенә яғылған бензин хеҙмәтен үтәне» (70-се бит).

Бабичтың ғилми багажы шул «Ғәлиә» идеяларынан ғибәрәт.

1916 йылда Бабич Троицкиҙа уҡытыусы булып эшләй. Унан һуң «Ҡармаҡ» журналында, башҡорт мәркәз шураһында секретарь булып тора. 1918 йылдың йәйендә чехтар менән аңлашып, башҡорт милли частары төҙөргә вәкил булып Өфөгә килә.

Ахыр ғүмеренә тиклем уҡымай, фәҡәт көндәлек ваҡиғалар белеме менән «Ғәлиә» биргән идеяны тормошҡа ашырырға айҡалып-сайҡалып йөрөгән шағир була Бабич. «Бабичтың башланғыс шиғырҙары ла, бик күп татар-башҡорт шағирҙары кеүек, милләт ҡайғыһын ҡайғыртыу, уны алға ебәреү, татар милли капиталына үҫергә яйһыҙлаған феодал ҡара фекерле

иҫке муллаларҙы һүгеү, уларҙан көлөү, исламдың шәүкәтле ханлыҡ замандарын һағыныу, һыҡрау-һыҙланыу менән» башлана.

«Бабич үҙенең беренсе яҙмалары менән үк эшләнгән, шыҡылдап торған бер техника күтәреп сыҡты. «Беҙҙең юл» журналында Әбүс иптәштең «Бабич үҙенең беренсе яҙмалары менән башҡа яҙыусыларҙан айырылмай»,— тигән дәғүәһе һис дөрөҫ түгел. Идея нигеҙе яғынан Бабич уларҙан айырылмаһа ла, стиль, техника, музыкаллек һәм оҫталыҡ яғынан ул танылмай үлеп ҡалған татар шағирҙарынан ғына түгел, үҫеп еткән Туҡай абзаһы менән йәнәш тора. Сөнки Бабич үҙенең башланғыс шиғырҙары менән Туҡайҙың һуңғы шиғырҙары техникаһын яңыртып, матурлап алып китте» (71-се бит).

Донъя капиталы баҙар бүлер өсөн ҡанлы һуғыш майҙанына ташлана. Ҡара реакция революцион хәрәкәткә ҡаршы үҙенең бөтә рәхимһеҙлеген эшкә ҡуша. Шул хәлдәрҙең төбөн аңламаған Бабич «ут йотоп та, ҡан йотоп та» әрнеп иларға тотона:

Бына әле илап,
әле көлдөм.
Әле көлдөм,
әле һыҙландым.
Бына әле йырлап,
әле тындым,
Әле бар донъяһын
ҡыҙғандым!
Бер минутта ташты
күңелем,
Бер минутта булды ут.
Берсә янды, берсә туңды,
Бар ҙа булды бер минут.

Дәрдмәнд үҙенең ауыр, тәрән хистәре менән йылдар буйынса быҫҡып янһа, Бабич минутында янып күмергә әйләнә, минутында күкрәп сәскә ата.

Әйҙә, күңелем, бында торма,
Күккә, күккә, күккә ос.
Күккә ос, күктә тыныс,—
Бында һуғыш, бында ҡылыс.

Бабич реаль донъя алдында еңелеп, уны аңламағанлыҡтан, юлһыҙ аҙашҡанлыҡтан, «донъяның өҫтөнә «лас!» иттереп төкөрә лә, ғәрләнеп, өҙгөләнеп иларға, әрнергә» тотона. Һәм бынан бер минутҡа ла туҡтамай, революцияға тиклем күҙ йәшен шишмә итеп ҡоя.

Хатта уның сатираһы ла йәш аралаш көлөү урынын тота. «Ғәлиә»нең 10 йыллығына бағышланған «Бер тәмсил» шиғыры Зыя Камалиҙы маҡтап яҙған бер әҫәр.

Бабич матбуғатҡа тиклем «Ғәлиә»лә сыҡҡан «Эләктергес», «Парлаҡ» һ. б. журналдарҙа ҡәләмен шымарта. «Ҡаҙаҡтың халыҡ йырсылары менән шиғыр әйтешеп, бәйгегә сыҡты. «Аҡмулла» журналында «Чытырман», «Бәбәйчун» имзалары менән яҙышып, аҫтан ғына үткерләнде. Бабичтың яҙыша башлауы 12—13-сө йылдарҙа, хатта унан да элегерәк башлана.

Бабич сатирала Туҡайҙан ҡала икенсе сатирик. Ләкин Туҡайға ҡарағанда күпкә көслөрәк сатирик» (76-сы бит).

«Хәҙер инде үҙенең бөтә тәбиғәте менән шат, мәҙәксел Бабичтың ғүмеренең таңынан ҡояшы батҡансы булған эҙләнеү, тура юл, хәҡиҡәт таба алмау һәм ризаһыҙлыҡ фажиғәһенең тамырын билдәләргә кәрәк. Бабич ни өсөн ҡиблаһын бик йыш алыштырһа ла, дөрөҫ юл таба алманы?» Быныҡ «нигеҙе Бабичтың «Ғәлиә»ләге эске хыялый тормошо менән тышҡы иҡтисади тормошо араһындағы ҡушылмай торған ижтимағи соҡорҙа».

Бабич Февраль революцияһын үҙенең идеяларын конкретлаштырырға юл, зәмин таба алмайынса, аптыраған хәлдә ҡаршылай.

4 ноябрь, ял.

Ленин китапханаһы. С. Ҡудаш «Ш. Бабичтың ижад юлдары» (дауамы).

Бабич Февраль революцияһын уҡытыусы булып Троицкиҙа ҡаршылай. 1917 йылдың 13 мартында ул С. Ҡудашҡа яҙа:

«Ҡудаш! Малай, бер тинлек тә баш эшләмәй. Иҫерҙем, иҫерек мин, мәңге иҫерек. Әлмисаҡтан уҡ берҙе төшөрөп килгән иҫерек мин. Эйе, иҫерек булмағанда ла иҫерерһең, небось. Уйынмы ни һиңә! Распутиндар ҡулынан ысҡынған мәмләкәттең бер балаһы, бер диуанаһы, бер хөрриәт һөйгән, азатлыҡ теләгән ситлектәге меҫкен ҡоштоң балаһы бул да, иҫермә!.. Иҫерерһең, небось... Мин иҫерек хәҙер, биғәйбә, мәғрүр... Мөфтиҙең (провокатор Сафа мөфти ине) кәрәген бирҙегеҙме? Шәп булған, йәшәһен, урра... Хөрриәт, урра..!»

Азат ҡулыңды ҡыҫып, Шөпшә».

Революциянан һуң беренсе «Йәшәһен эшселәр!» шиғыры Троицкиҙа «Хөр милләт» газетаһында баҫылып сыға. Был Бабичтың алға аҙымы. Бынан һуң ул Өфөгә күсеп килеп, «Ирек» гәзите тирәһенә ойошҡан татар һыл революционерҙарына ҡушыла. Был гәзиттә уның «Утрау», «Байҙарға», «Мөртәт социалистар» һәм «Афарин» шиғырҙары баҫылып сыға. «Афарин»да Бабич айный башлай. Уның башҡорт милли автономиясыларына барып ҡушылыуы, мөхите, тәрбиәһе биргән идеа-

лына ирешеүе, үҙе юллаған азатлыҡҡа сығыу юлында көрәшкә атлаған беренсе аҙымы була.

Бабич — әхирәт министры

1917 йылдың йәйендә Ырымбурға күсеп, «Ҡармаҡ» журналында секретарь булып эшләй башлай. Ләкин ул бында журнал нәшире Мәхмүт Мәржәни менән таныша алмай. Икенсенән, Бабичты башында Манатов, Зәки Вәлиди кеүек мәғлүм пантюркистар, муллалар торған башҡорт хәрәкәте үҙенә тарта. Ул был хәрәкәткә йотолоп китә. Эҙләгәнен таба Бабич. Бабич хәҙер инде ябай шағир ғына түгел, ә «ил хакимы» булып активлаша. Бөмүми башҡорт съезы тарафынан мәркәз хөкүмәттең секретары булып һайлана. Бабич 1917 йылдың 23 октябрендә С. Ҡудашҡа яҙған хатында үҙенең тормошо, күпме хеҙмәт хаҡы алыуы, уны тотоноуы һәм башҡаларҙы яҙып килә-килә лә былай тип тамамлай:

«Хәҙер абзаң «Ҡармаҡ» мәмләкәтендә генә түгел, «башҡорт ханлығында» ла министр, бар уның менән шаяр хәҙер... «Хат яҙмайһың», тип һүгенәһегеҙ, төкөрәм!.. Уға ваҡыт бар ти бында... Министрлыҡты беләһең бит, арҡа ҡашырға ла ваҡыт юҡ... «Хаким унан кемсә рәхәт уламаз, рәхәт улса, рәхәт ил уламаз», тиҙәр. Хуш.

Хат яҙ.

Башҡорт хөкүмәтенең әхирәт министры: Ш. Бабич». (Хаким булған кеше рәхәт тора алмаҫ, хаким үҙе рәхәт торһа, ил рәхәт тора алмаҫ.— **Р. Ғ.**)

Был ваҡытта Октябрь социалистик революцияһы еңә, Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылып, большевиктар власты үҙ ҡулына ала. Башҡортостандың яртыһы — Дутов шауҡымы аҫтында, яртыһы — Совет яғында. Хәҙер инде Башҡорт мәркәз шураһы ни эшләргә, башҡорт халҡы ниндәй юл тоторға тейеш? Бына шул хаҡта Башҡорт шураһының секретары (иҫкесә 11 ноябрҙә) Бабич былай яҙа:

«Большевиктар Ваҡытлы хөкүмәтте төшөрөү менән, үҙ-ара һуғыш китте. Күп илдәр уларҙы танымай. Большевиктар бөтә ерҙе крәҫтиәнгә биреүҙе белдерә. Шул арҡала Башҡортостанда ерһеҙ халыҡтар менән һуғыш сығырға мөмкин. Хәҙер талауҙар бара. Суд, закон юҡ. Был хәл башҡорт кеүек законға баш эйеп өйрәнгән халыҡтың ҡанын ҡыҙҙыра. Бөтә халыҡ тарафынан танылған хөкүмәт юҡ. Ваҡытлы хөкүмәт Башҡортостанға йүнләп эшләргә ирек бирмәне. Был хәлдән ҡотолоу өсөн, ере, милке булған халыҡ уйы үҙ ҡайғыһын үҙе ҡарау, ерҙе, малды һаҡлауҙыр. Хәҙер икегә бүленгән Башҡортостан

һуғыш аҫтында ҡалырға мөмкин. Башҡорттар бер-бере менән һуғышырға тейеш түгел. Сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул — башҡорт. Бер кем яғында ла түгел. Үҙебеҙҙең яҡта. Беҙҙең талашлы эштәребеҙ юҡ... Ике миллионлы башҡорт халҡы юҡ-бар сәйәси уйындарға ҡатнашып, уйынсыҡ булыуы мөмкин түгел. Большевиктар бөтә халыҡтарға ирек бирәләр, ләкин тәртипһеҙлек менән бирәләр. Башҡорт халҡы бындай бүләкте ҡабул итергә тейеш түгел».

«Бына ҡайҙа Бабичтың юлы! Тиҙ көндә ҡоролтай йыйып, «ханлыҡ» иғлан итергә әҙерлек алып бара».

«Уларҙың хәрәкәтенә бер яҡтан большевизм, Совет хәрәкәте яйһыҙлаһа, икенсе яҡтан — татар милли мәҙәни мөхтәриәтселәре аяҡ сала: милләтте бүлгеләмәҫкә, мосолман булып эш итергә, татар капиталының өҫтөнлөгөн һаҡлап ҡалырға саҡыралар. Үткер телле, яныпторған милләтсе башҡортҡа әйләнгән Бабич был сығыштарға, әлбиттә, ҡарап ҡына ҡала алмай.

«Һеҙҙән түгел, башҡорт урыҫтан да,
Етер инде, бик күп ҡыҫылған...
Үҙе өсөн үҙе тырышҡанда
Таяҡ тыҡма, булһаң мосолман!
«Ҡушыл беҙгә, башҡорт»,— тигән менән
Айырылһынмы башҡорт милкенән?
Йәшел сапан, сәллә кейгән менән
Төлкөләгән мәғлүм һыртыңдан».

(«Башҡорт мөхтәриәтенә ҡаршы татарға»)

Бабич башы күккә тейеп шатлана. Башҡортостан мөхтәриәте (автономияһы) иғлан ителеү, Каруанһарай алыныуы менән һәм Беренсе башҡорт Ҡоролтайы вәкилдәренә бағышлап яҙған шиғырҙары шуны һөйләй. Шул ҡоролтайҙан һуң Бабич ысын мәғәнәһе менән ваҡ башҡорт «буржуа» шағырына әйләнә. Уның шиғырҙары Совет власын төҙөү дәүерендә башҡорт ярлыларына синфи теләктәрен томалаусы, һаташтырыусы милли араҡы була».

Бабич — контрреволюция агитаторы

1918 йылдың 5 февралендә Ырымбурҙа бөтә контрреволюция менән берлектә большевиктарға, Советҡа ҡаршы хәрәкәткә әҙерләнгән башҡорт милли хөкүмәтенең предпарламент ағзалары ҡулға алына һәм Совет нигеҙендә Башҡорт Ревкомы ойошторола. Ә башҡорт милли автономиясылары асыҡтан-асыҡ контрреволюция яғына сыға. Ырымбур атаман Дутов ғәскәрҙәре тарафынан алынғас, төрмәнән сығарылған башҡорт

43582

милли хәрәкәтенең башлыҡтары тәүҙә чехтарға һәм унан Колчакка барып һыйына. Дин, милләт, тупраҡ исеме менән башҡорт халҡының тулы азатлығы байрағы аҫтында башҡорт массаһын советҡа ҡаршы аяҡландыралар. Бабич был мәл ҡапыл шөбһәләнеп, икеләнеп ҡала. Күп уйлап тормаҫтан, милли буржуа азатлығын һаҡлау теләге менән ҡанлы фронтҡа ташланды:

Арыҫландар үҙ ерҙәрен
Залимдарҙан таптатмаҫ.
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сыҡҡан яу
Башҡорт ҡанын ҡаҡшатмаҫ.
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ!

Бабичтың агитаторлыҡ көсө ғәҙәттән тыш көслө була. Ул һалдаттарҙың психологияһын аңлап, уларҙың иң нескә ҡылдарына, иң ауыртҡан ерҙәренә сиртә белә. Ул синфи аңы түбән булған башҡорттарҙы иҫкәртә:

Алданма, аҡ күңел
башҡортом.
Юллатма йыланды
ҡуйыныңа.
Һарылып мәлғүндәр
муйыныңа,
Башыңды мөнйөрҙәр
әкертен!
(«Дошмандар»)

Бабич башҡорттарға байрам фәкәт «ҡыҙыл мәлғүн» большевиктар бөткәс кенә буласағын йырланы. «Фәскәр доғаһы» яҙып бирҙе.

Бабич — совет яғында

Бабич Советтар яғына сыҡҡас, беренсе ҡат үҙенең: «Беҙ ниңә ҡыҙылдарға ҡушылдыҡ» тигән тарихи хитабын яҙа:

Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафҡа,
Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға.
Азат Башҡортостан йөмһүрлеген
Таныйым тип хуплап торғанға.
Дутов, Колчак әйтә: эш башына
Алтын тажлы батша менһен, ти.
Батша менеп, һаман Николайҙай,

Ярлыларҙың ҡанын имһен, ти.
Большевиктар әйтә: һәр бер илгә
Камил мөхтәриәт бирелһен.
Һәр бер ярлы мазлум иҙелгән ил
Мөхтәриәт алһын, терелһен!

Бер-ике ай үткәндән һуң, Бабич тағы ла икеләнә (үлем алдынан):

Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.
Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр.
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен һөйләп,
Йырлап аға Һаҡмар, Яйыҡтар...
Килер микән аҡ көн беҙгә, тиеп
Уралҡайға ҡарап илайым.

«Әгәр ҙә Бабич үлеп ҡотолмаған булһа, ихтимал, идея яғынан бик ныҡ бәйләнгән Зәки Вәлидов менән төркиселек эҙенән Әнүәр паша янына, баҫмасыларға киткән булыр ине. Сөнки башҡорт контрреволюция хәрәкәте үҙе лә шул уҡ төркиселектең бер тармағы икәне беҙгә бик мәғлүм нәмә» (73-сө бит).

Бабич, шулай итеп, «аҙашыу бурандары эсендә,—нәҡ үҙе әйтмешләй,— ут йотоп та, ҡан йотоп, фажиғәле рәүештә» юғала.

Бабич беҙгә ҡайһы яғы менән ҡиммәт?

«Бабич революцияға тиклем булған татар, башҡорт шағирҙары араһында теленең байлығы, еңел яҙылыуы, стиленең шымалығы менән иң алда һәм айырым тора. Ул үҙенең шиғырҙарына халыҡ тәғбирҙәрен индереп, әҙәби телде байытыуға, Туҡайҙан ҡала, күп хеҙмәт итеүселәрҙең береһе. Бабич халыҡ мәҡәлдәрен, халыҡ дастандарын, йыр-көйҙәр тарихтарын йыйыу кеүек эштәрҙә йәштән үҡ көс ҡуйҙы.

Татар, башҡорт әҙәбиәтендә шиғырҙары төрлө сәскәләрҙән бәйләнгән букет кеүек төрлө формала яҙыуҙа остазлыҡ урынын тотҡан кешеләрҙең береһе Туҡай булһа, икенсеһе Бабич булды,— тип раҫлай Сәйфи Ҡудаш һәм үҙенең мәҡәләһен: — Беҙ уның идеологияһын үҙенә ҡалдырып, техникаһындағы ҡиммәтле яҡтарынан өйрәнергә һәм файҙаланырға тейешбеҙ»,— тип тамамлай.

6 ноябрь, шишәмбе.

Бөгөн — Виктор Михайлович. Оҙаҡ күренмәне ул. Докладтар ҙа туҡтап торҙо. Яңынан башлайбыҙ.

Борис Палкин Некрасовтың «Кемгә Рустә йәшәү яҡшы?» поэмаһында фольклор элементтары» тигән темаға һөйләй. Һәр бер бөйөк яҙыусының иң яратҡан һәм ҙур көс ҡуйған әҫәре бар: Пушкиндың «Евгений Онегин»ы, Гоголдең «Үлек йәндәр»е, Лермонтовтың «Демон»ы, ә Некрасовтың «Кемгә Рустә йәшәү яҡшы»һы. Халыҡ ижадын иҫ киткес оҫта рәүештә ҡулланыуы әҫәрҙе тағы ла тәрәнерәк итә, реализмды иң юғары дәрәжәгә күтәрә. Некрасов фольклорҙың ҡоло түгел, ә уны оҫта эшкәртеүсе. Ул һәр саҡ ижад итә. Некрасов халыҡтың үҙ ижадында һәр саҡ ирек һөйөүен, бәхет эҙләүен күрә. М. Исаковский һәм А. Твардовский Некрасовты үҙҙәренең уҡытыусыһы тип ҡарай. Стилизация яҡшыға килтермәй, ә фольклорҙы ижади рәүештә ҡулланырға кәрәк.

Буханов «Музыканың һәм текстың үҙ-ара бәйләнеше тураһында» һөйләй. Шиғырҙарҙың йырларға мөмкин һәм уҡырға мөмкин булғандары бар. Музыка иҫәбенә генә йөрөгән йырҙар ҙа бар. Улар онотола. Ҡайһы бер композиторҙар быны баһалап бөтөрмәй. Йырҙар ябай һүҙҙәр менән яҙылырға тейеш. Йырҙан һүҙҙе алып ташларлыҡ булмаһын. «Музыка — йырҙың ҡанаты»,— ти Исаковский. Бының менән ул һис тә текстың әһәмиәтен кесерәйтмәй. Һүҙ фекер әйтергә тейеш. Ни тиклем һүҙҙең көсө ҙур булһа, уның кеше йөрәгенә тәьсире лә ҙур, йыр ҙа ғүмерлек.

Исаковский — лирик, ә Твардовский — эпик. Исаковский Маяковскийға яҡын тора.

Наҙан текстар күп беҙҙә. Ҡайһы бер йырҙар дүрт юлдан булған һүҙ өйөмөнән тора. «Йырҙар үҙ аллы шиғыр булғанда ғына яҡшы, — ти Исаковский,— ә шуға музыка ла яҙылған булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Музыкала тыныш билдәләре юҡ. Шуның өсөн фекерҙең бөтөн булыуы мотлаҡ. Бүлмә фекерҙе! Йырҙы деталдәр менән тултырғанда, ул ауырая, хәтерҙә ҡалдырырға ҡамасаулай».

Бухановтың доклады бөтмәне әле. Ул бик ҡыҙыҡлы. Киләһе занятиеларҙа дауам итергә һөйләштек.

Хәҙер Бондиҙың лекцияһы башлана. Әле баҫымдар ҡуйылған күнегеүҙәр тикшерәбеҙ.

Беҙ уҡый башлау менән ритм стихияһына сумабыҙ. Был стихияла шағир үҙе теләгән фекерҙе әйтә. «Ритмические ушки на макушке». Шартлы рефлекс — ритмик тойғо дирижер таяғын күтәргәс үк башлана. Баҫымдар шиғырҙа сиратлашып килә. Баҫым төшкән ижектән һуңғы ижектәр һаңғырауланып ҡала. Гректар өндәрҙең, ижектәрҙең һуҙынҡылығына, тар-

тынҡылығына, уларҙың сиратлашып килеүенә нигеҙләнеп яҙған. Ҡытайҙарҙың шиғыры беҙҙең шиғырға бөтөнләй оҡшамаған. Уларҙың шиғыры образға һәм идеяға нигеҙләнгән. Рифмаһыҙ шиғыр булып ойошҡан әҫәрҙәр ҙә бар — «Борис Годунов». Баҫымдар йоп ижеккә төшә. Аҡ шиғыр. Ритмик яҡтан ныҡ ойошҡан. Блоктың «Когда вы стоите на моем пути», «Она пришла с мороза» шиғырҙары — шундайҙар. Шиғри энергиялы, шиғри эстәлекле прозалар ҙа бар. Тургеневтың әҫәрҙәре, М. Горькийҙың «Дауыл ҡошо тураһында йыр»ы рифмаһыҙ шиғыр менән яҙылған. Тик ул Горькийҙың үҙ теләге буйынса шиғыр юлдары менән баҫылмаған. Ләкин уны уҡығанда ритм тойғоһонан башҡа ҡабул итергә мөмкин түгел.

Иртә менән автобуста Даһи менән һөйләшеп килдек.

— Кисә ниңә йыйылышҡа килмәнең?

— Китапханала ултырҙым.

— Нимә уҡыныҡ?

— «Октябрь»ҙе.

— «Әҙәби Башҡортостан»дымы?

— Эйе, 1930 йылдан алып уҡый башланым. 3-сө, 4-се һандарын.

Ул нимәләр барлығын һораны. Мин Бабич тураһында һөйләп килдем. Ҡайһы бер шиғырҙарын уҡыттым. Бабич Даһиҙы бик ҡыҙыҡтырҙы һәм занятиенан һуң китапханаға барырға булдыҡ.

Бик матур шиғыр яҙғанһың, Дилара. «...Алъяпҡыслы һылыу ҡыҙҙарыңды үҙем һөйәм, үҙем көнләшәм». Ләкин көнләшмә, Дилара, ярамай. Әле күпме йәшәйһе ғүмер бар. Тормошҡа бит яңы аяҡ баҫабыҙ. Тәүҙә яҡшы итеп уҡып бөтөргә, бер-ике йыл ут сығарып эшләргә, үҙеңде һынап ҡарарға кәрәк. Унан һуң янып ижад итергә, шулай бит? Бер заман үҙең дә хайран ҡалып торорһоң! «Әсәй, әсәй!» — тип йөрөгән кешеләреңдең гөрләшеүе лә үҙе бер тормош буласаҡ. Улар ҙа бит «белем тейәп ҡайтыр Ҡазандан». Ә Таҡташ иң ҙур һәм иң яратҡан уҡытыусың булһа ла, бирешмә уға. Һинең инде үҙ тауышың тыуып килә. Мөмкин тиклем уның тәьҫиренән алыҫлашырға кәрәк. Ул үҙе лә шағирҙан нәҡ шуны талап итә.

Дилара, мөмкин булһа, ауылда һөйләгән докладыңды ебәрһәң ине. Минең дә бит «ауыҙымды асып тыңлағым килә». Ебәр, йәме? Тик үҙгәртмә! Мин һинең кескәй генә пионерың булып тыңлармын, студент булып түгел...

Ленинград хаҡында яҙа алманым үҙеңә. Ғөмүмән, унда барып ҡайтыу тормошомдоң иң матур көндәре булды.

Ҡазанға ҡайтырғамы? Саҡырғаның өсөн рәхмәт.

Ләкин мин былай ҙа унда булырға тейешмен. Күптәнге хыял. Тик күрешкәндә минең кеүек ҡырыҫ тәбиғәтле, уҫал сырайлы һәм өндәшмәүсән кешене күреү һиндә бик күңелһеҙ тәьҫир ҡалдырған булыр ине. Хыялда кеше кешене һәр саҡ үҙе теләгәнсә биҙәп тыуҙыра. Ә тәбиғәт иптәш ул — материалист-скульптор. Художник булыу яғынан ул һәр саҡта ла кешенең эске донъяһын тышҡа сығармай. Уйлармын әле. Хуш, Дилара!

Мәскәү, Рәми»

15 февраль, йома.

«Сүриә! (Класташы) Макаренконың педагогик әсәрҙәр йыйынтығын уҡып ултыра инем, Миша һинең хатыңды килтереп бирҙе.

Һин минең һуңғы «яңылыҡ» тураһында яҙылған хатты алмағанһың икән. Берәйһе алғандыр инде. Бынан кире почтаға яҙырмын. Ул шифыр түгел, күрәһең. Шулай ҙа мин уны эшләйәсәкмен. Һине шифыр уҡытып ғазаплағаным өсөн ғәфү ит, йәме! Һәр яңылыҡ ваҡытында ғына аңлашылып та бөтмәй бит! Етмәһә, тәнҡитселәр күҫәк тотоп сығыр әле! Яҡшылап яҙмайынса, баҫтырырға ебәрмәйем.

«Һиңә ғәжәпләнеп аптырайым... ҡыҙҙар менән һөйләшә алмауыңа»,— тиһең, Сүриә. Бына бит, һөйләшеп ултырам түгелме ни? Әгәр кәрәк икән, теләһә кем менән дә һөйләшәм. Кәрәк булмағанда, һүҙ өсөн һүҙ үлтереп, нимәгә һуң миңә таҫма телләнеп ултырырға? Һинеңсә лә шулайҙыр тип уйлайым. Бәлки, фекерҙәреңде йәшерәһеңдер. Бәлки, ҡыҙҙар халҡы мөхәббәт менән генә егеттәргә яҡынлашалыр»,— тиһең. Бына инде йүләр ҡыҙыҡай! Ни эшләп шулай уйлайым ти инде мин? Нимәне һинән йәшерергә? Йәй көнө һөйләшергә тура килмәүҙең үҙенең сәбәптәре булғандыр. Унан һуң, Сүриә, беҙҙең элек тә һөйләшкән юҡ та инде. Бергә эшләргә лә тура килмәне. Әгәр ҙә инде һинең үҙеңде борсоп йөрөгән әҙәбиәт, тарих, сәнғәт тураһында һорауҙарың булһа, әгәр ҙә бик күп уҡып, бергәләп фекер алышһаҡ, һәм һин миңә үҙеңдең медицина тормошо тураһында һөйләһәң, мин бик шат булыр инем. Һиңә нимә әйтәйем инде? Уңыш теләргә генә ҡала. Тик тормошҡа булған мөхәббәтте айырым бер кешегә булғанынан айырма. Улар бер-береһен тултыралар, биҙәйҙәр һәм бер-беренә ярҙам итәләр.

Класташың Рәми. Мәскәү».

3 март.

Степан Злобин менән осрашыу. Һөйләшеү — тарихи романдар тураһында.

— Тарихи роман — сәнғәттең фән менән ҡушылыуы ул. Айырым эпоханы өйрәнгәндә, үҙенде ғалим, тикшеренеүсе итеп һиҙергә тура килә. Ә художник әле йәшеренгән була. Фактографик материал-документтар менән бер рәттән фольклор ҙа кәрәк. Уларға геройҙың иң яҡшы сифаттары тупланған. Мәҫәлән, Салауат Юлаев тураһындағы материалдар ҡыҙыҡлы. Башҡорт халҡы үҙенең улы тураһында бик күп йырҙар, легендалар тыуҙырған. Материалдарҙы тарих фонында алырға кәрәк. Улар өҫтөндә эшләү традицияһын беҙгә классиктар ҡалдырған. Халыҡтың характерын күҙәтергә, уның тарихи үткәненә ҡарай белергә кәрәк.

— Батыр булып тыумайҙар. Салауат Юлаевтың балалығы башҡаларҙыҡы кеүек. Мин геройҙарымдың бала сағына күп урын бирәм, характерҙарының формалашыуын шул саҡтан уҡ күрһәтергә тырышам. Геройҙың кисерештәренә иһә үҙ автобиографияң да ҡатнаша. Уның характеры һин уйлағанса үҫмәҫкә лә мөмкин. Портретты халыҡ тыуҙырған, мин уны файҙаландым ғына.

— Салауат һәм Юлай әҫәрҙә үҙ аллы хәрәкәт итә. Мин Юлайҙы Салауатҡа ҡаршыраҡ итеп тә ҡуйҙым. Салауаттың психологияһы Юлайҙыҡына оҡшағанмы? Юҡ. Улар төрлөләр. Юлай — милли Ҡараһаҡал восстаниеһында ҡатнашҡан кеше. Феодал. Ҙур түрәлек, властарҙың ышанысы менән файҙаланған. Ә Салауат 20 йәшлек кенә батыр, шағир, йырсы.

С. Злобинға минең һорауҙар: «Как родилась мысль о написании «Салавата Юлаева?», «Как собрали материалы?», «Когда не могли не писать?», « Материалы о Гульбазир и Амине, наверное, только фольклорные. Интересно узнать, как создавались эти женские образы?».

— Мин Уралда осраҡлы булдым. Эшсе булып йөрөнөм. 5 экспедиция яһаным. 4 йыл материалдар йыйҙым. Арҡырыға-буйға өйрәндем был урындарҙы. Башҡорт телен өйрәндем. Фольклор йыйҙым. Эйе, Әминә менән Гөлбәзир фольклор нигеҙендә (домысливание) яҙылды. Аҙаҡ бик ҡыҙыҡлы килеп сыҡты. Мин ҡайһы бер нәмәләрҙе үҙем уйланым. Былар китапта яҙылғас, Башҡортостанда экспедиция үткәргән фольклорсылар мин уйлап сығарған материалдарҙы яҙып алған. Халыҡ уларҙың ҡайһыларын бер аҙ үҙгәрткән. Тик уйлап сығарыуҙар — реаль тормоштан.

Һорау: Тел өҫтөндә нисек эшләйһегеҙ?

— Бынығы иң ауыры. Һүҙҙәргә тарихи яҡтан килергә кәрәк. Һәр образдың характеры уның телен билдәләй. Әҫәрҙә һүрәтләнгән замандың телен яҡшы белеү шарт.

13 март.

Бына Диларанық үҙе менән дә күрештем. Хатында рәсеме. Аудиторияға инеп, конвертты асыу менән миңә, әйтерһең, әллә ҡасандан бирле таныш күҙҙәр ҡарап тора. Хатта уңайһыҙланып киттем. Тиҙ генә тышҡа йүгереп сыҡтым. Ә тышта тамсылар тама. Күк йөҙө салт аяҙ. Бөтә тирә-яҡ — үтә күренеүсән зәңгәрлек. Ҡарт тополдең бөрөләнергә әҙерләнгән ботаҡтарында сыпсыҡтар сыр-сыу килә. Сәүкәләр сәүкелдәшә. Аяҡ аҫтынан мөлдөрәп ваҡ ҡына йылғасыҡтар ағып ята. Рәсемгә оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙом. Нисектер үҙемдән үҙем оялдым... Шулай ҙа минең кемделер бик яратҡым килә.

18 март, шаршамбы.

Башҡортостанды, ниндәй ауырлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, йөрөп сығырға кәрәк. Был уй хәҙер баштан сыҡмай. Иң беренсе маҡсат — нефть райондары менән танышыу. Әле бит минең нефтте күргәнем дә юҡ. Был Башҡортостандың бөгөнгөһө һәм киләсәге. Унан һуң көнсығыш һәм көньяҡ, шулай уҡ үҙәк райондарҙа булырға кәрәк. Маҡсат — тел һәм халыҡ ижадын, тормошон өйрәнеү, тәбиғәт менән танышыу. Бәлки, Силәбе өлкәһенең Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарына ла сығырға тура килер. Халыҡтың һөйләшеү телен иғтибар менән өйрәнергә һәм фольклор йыйырға. Бынһыҙ инде мин йәшәй алмайым. Башҡортостанды үҙ күҙҙәрем менән ус төбөндә кеүек күреп торорға тейешмен.

Бына, исмаһам, яҙырға ҡул ҡысытып торған дәфтәр! Инде тик шундай дәфтәргә яҙасаҡмын.

Көн дә яҙырға! Ваҡыт һис тә булмағанда, бер-ике юл ғына булһын, яҙырға!

Ә күпме ҡыҙыҡлы күренештәр яҙылмай һәләк була! Һуңынан башыңды ташҡа ороп ила, кире ҡайтара алмаҫһың. Күҙәтеүҙәрҙе теркәп барырға кәрәк. Беренсенән, был — күнегеү. Икенсенән, кәрәкле. Өсөнсөнән, үтелгәндәрҙе иҫкә алып, шул юлдарҙы асып ҡара әле! Ни тиклем ҡыҙыҡлы. Бөтә күңелең менән үтелгәндәргә ҡайтаһың. Яҡшы нәмәләрҙе хәтерләп рәхәтләнәһең.

Хәҙер бына мәктәп яҙмаларын асып ҡараһам, йөрәк әллә нисек ашҡына башлай. Ни тиклем балалыҡ! Ниндәйҙер хуш еҫ бөркөлөп торған баҡсаға ингән кеүек булаһың.

Дүртенсенән, яҙмаларың үҙ-үҙеңде тикшереү, үҫешеңә ярҙам итеү өсөн кәрәк.

Ҡыҙыҡлы хаттарҙы ла теркәп барырға кәрәк булыр.

Бына әле Виталий Буханов килеп инде. Һүҙ Даль һәм Ушаков һүзлектәренә барып тоташты. Минең был һәр саҡ һөйләшә торған тема, һүҙҙәр, һүҙҙәр, һүҙҙәр! Минең аллаларым улар.

Далдең һәм Ушаковтың һүзлектәрен табыу — минең хыялым. Донъялағы иң, иң кәрәкле китаптар миңә былар. Ваҡыт барҙа бөтә Мәскәү букинистарынан эҙләп йөрөйөм мин уларҙы. Һаман тап иткәнем юҡ. Виталий үҙенең Ушаковы менән мине көнләштереп ҡуйҙы. Ә Далде осратып та алмаған! Мин философик һүзлек тураһында әйткәс тә, мине был артыҡ ҡыҙыҡтырмай, ти.

Күмәк йәшәү ҡыҙыҡлы . Әллә күпме яңылыҡ беленә. Ә кешеләр үҙҙәренең белгәнлеген күрһәтергә ярата. Шунан файҙалана белергә кәрәк. Бәхәсләшеүселәр, әлбиттә, бөтөнләй был турала уйламай. Ләкин бәхәсләшеү өсөн генә һүҙ көрәштергәндәр ҙә бар. Кирилл Ковальджи, Борис Никольский, Жора Тагиев бәхәс суҡмарҙары! Бына әле кис енси тормош тураһында бәхәс сыҡты. Ричард Донецкий башланы:

— Нисек үҙеңде бындай тормоштан тыйып тотмаҡ кәрәк. Был бит аскетизм!— тип ҡысҡырҙы ятҡан еренән. — Бөтөн бер дискуссия!

Ярай, был хаҡта үҙемдең бөтә фекерҙәрҙе имтихандарҙан һуң үҙемә генә һөйләрмен әле. Ә хәҙер — эш! Муйындан! Тау! Ике зачет ҡалды. Поспеловҡа — 19-сы быуат әҙәбиәте. Халтуринға — Мийво. Әле Виталий Мийвонан конспекттар һорап килгән. Ләкин минең конспекттан башҡалар файҙаланырлыҡ түгел.

Даһи кисә Мостай Кәримдән хат алған. Мин быйыл Мостафа ағайҙан хат алманым. Шиғырҙарҙы ебәрһәм дә, нилектәндер өндәшмәне. Был мине бик борсой. Үпкәләге килә. Ләкин кәрәкһеҙ. Эшләргә лә эшләргә — иң яҡшыһы шул!

Рафаэлдең (Рафаэль Сафин) открыткаһын алып, кисә бик күп хат яҙҙым. Диҡҡәт Бураҡаевҡа, Ләлә Биишеваға, Әлтәф Салауатовҡа (Ғафури районы), Диларағa (Дилара Зөбәйерова) һ.б. Ә «Совет Башҡортостаны»на «Кочжедо хаҡындағы һүҙ»ҙе ебәреп, Ғафаровҡа (редакторға) ҡыҫҡа ғына хат яҙҙым. Се Ман Иргә был тәржемәм хаҡында әйткәс, ҡулды ҡыҫып: «Рәхмәт. Миңә иҫтәлеккә бер данаһын бирерһең, йәме?» — тине. Ул был һүҙҙәрен шул тиклем балаларса әйтте, хатта мин «әллә бик бала булып күренәмме икән», тип, бер аҙ уңайһыҙланып та ҡуйҙым. Был беренсе тәржемәм минең. Уның баҫылып сығыуын бик күргем килә. Тәржемәнән үҙем әллә нисек ҡәнәғәтмен, яҡшы кеүек. Русса тәржемәнән дә көслөрәк кеүек. (Быныһы маҡтаныуҙыр инде!)

Даһиға ла бик оҡшар һымаҡ. Уға ла уҡығы килә.

Ә тәржемә миңә иң киткес байлыҡ бирәсәк икәнлеген бик асыҡ күрәм! Иң киткес файҙалы эш. Бөтөнләй башыңа килмәгән һүҙҙәрҙе эҙләйһең! Нәҡ үҙең яҙған һымаҡ. Үҙеңде үҫтереү, теленде байытыу һәм үҙеңдә шифыр культураһы тәрбиәләү өсөн тәржемә иң кәрәкле, иң файҙалы, иң ҡыҙыҡтырғыс һәм мауыҡтырғыс эш! Бынан кире был минең маҡсатым, девизым: тәржемә итеп өйрән, байы, тәрбиәлә үҙеңде!

Мостафа ағайҙың тиктәҫкә генә тәржемә итмәгәне үҙемдең тәүге тәжрибәнән үк аңлашыла. Уның байлығының, һүҙ хазинаһының шишмәһе бына нимәлә икән ул!!!

Хәҙер минең ҙур сер асылды!

Туҡтайым да — тағы яҙам. Ниндәй сихырлы был дәфтәр...

Тышта һибәләп кенә бөрсөк-бөрсөк ямғыр яуа. Мин ашханаға ашыҡтым. Һәр саҡ миңә һаулыҡ бирep ҡитә торған ҡыҙ бик етеҙ велосипедта йөрөй. Ҡарлуғас һымаҡ йылғыр. Бик матур ҡыҙ. Минең иғтибар ныҡ уҡтала уға.

Әлбириев Шәрифтең бәрәңгеһен ашаным. Ул уны яратмай. Миңә барыһы ла бата! Ысынлап та, мин ашауға Крылов кеүек! Миңә кешеләрҙең ашай алмауы ғәжәп күренә. Ә мин — трактор!

Сәғәт 11. Үҙебеҙҙең дачаға атлайым. Дядя Сережаларға барғайным.

Киске тынлыҡ. Күкһеллектә нескә генә алтын ураҡ булып ҡарағайҙарҙың ҡара шәүләләре араһынан йәш ай ялтырай. Әйтерһең дә, бөтә урманға ошо киске тынлыҡты ул яуҙырып тора! Мин сөскөрөп ебәрҙем. Бөтә ҡарағайҙар ҙа сөскөрөп ебәрҙе.

Сәғәт 12. Төн. Айдоян да, Кирилл да, Боря ла ҡайтты. Кирилл менән Боря галактика, донъя йөҙө тураһында һөйләшергә тотондо. Был һәр саҡтағы тема.

28 май, шаршамбы.

Кешеләрҙең аҡылдарын эсеп, иҫереп йөрөүҙәрен бөтә йөрәгем менән күрә алмайым. Бигерәк тә талантлы кешеләрҙең шундайҙарына асыу ҡайнай. Көсһөҙлөк был! Күңел бушлыҡтарын кешеләр шул ҡәбәхәт менән тултырып, үҙҙәрен һәләк итә. Бер ҡасан да үҙемде былай юғалтып эсмәйәсәкмен!

Жуковскийҙы ҡайтып уҡырға керешкәйнем, булманы, Кирилл, Боря, Ричард шаулашалар. Шауламауҙарын һораным. Ә Кирилл (Ковальджи) миңә былай тине: «Твоя какая-то особая система жизни. Ты очень замкнутый человек. Эгоист. Не умеешь жить в обществе». Ысынлап та, әллә шулаймы? Ысынлап та, мин был баһаға хаҡлымы? Ниңә шул тиклем бәләкәйергә? Яуап бирә белмәнем. Саҡ үҙемде ҡулға алдым.

Белинскийҙың Пушкин хаҡындағы икенсе мәҡәләһен уҡығанда, яҡтырғайны инде. Сәғәт 4. Тышҡа хәл алырға сыҡтым. Томан. Һалҡынса. Һандуғастар һайраша.

29 май, кесаҙна.

Ҡояш! Салт аяҙ. Йылы. Институтта уҡып ултырҙым.

Имтиханға оҙаҡ инмәй торҙом. Геннадий Николаевич ошо һорауҙарҙы бирҙе: 1) «Арзамас», 2) «Крылов мәҫәлдәренең үҙенсәлеге».

Өҫтән тау төштө!

Самба Люндун тапшыра алманы. Ершов Коля ҡыуылып сыҡҡан. Күсергәне өсөн. Георгий Исаев саҡ-саҡ ҡына яуап биргән.

Сүриәнең хатын алдым. Яуап яҙылды. Кәйеф шәп. Ҡайтҡас та урманға ял итергә сығып киттем. Алыҫта күк күкрәй. Ҡарғалар ямғыр буласағын хәбәр итә. Төш мәлендә Мәскәүҙә ҡойоп яуҙы. Ә бында ҡоп-ҡоро.

Кисә Көнбайыш әҙәбиәтенән Артамоновтың һуңғы лекцияһы булды. Лессингты үтеп туҡтаныҡ.

Лессинг 18-се быуаттағы иң ҙур немец мәғрифәтсеһе. Немец абсолютизмына ҡаршы ялҡынлы көрәшеүсе. Ул рәсми мәҙәниәтте фашлап, үҙенең «Гамбург драматургияһы»нда теоретик фекерҙәрен әйтә. Француз классицизмына Шекспирҙы ҡаршы ҡуя. Ул был инглиз драматургын яңы театр өсөн көрәштә байраҡ итә. Лессинг француз мәғрифәтсеһе Дидроға бик яҡын. Уның теоретик трактаттары ижадының үҙәге булып тора.

Даһи минең тумбочка өҫтөндәге газеталарҙы ҡарап ҡалды. Мин зарядка яһарға сыҡтым. Ҡояш! Күк йөҙө зәп-зәңгәр. Алма баҡсаһынан хуш еҫтәр аңҡый. Урман ҡоштар һайрауына сумған.

Мин зарядка эшләп торғанда, Даһи сыҡты ла, эшләпәһен батырыбыраҡ кейеп:

— Хуш, Рәми,— тине.

... Аҡрын ғына атлап китте ул. Нисектер йөҙө ҡараңғы, күҙҙәре нурһыҙ, күңеле буш булып күренде миңә.

Бәлки, беҙ яҡшы дуҫтар була алмабыҙ.

Кисәге урында Лессингҡа тотондом. Ләкин бик ашағы килә. Дүртенсе көн инде яҡшылап туйған юҡ. Икмәк менән сәй эскән булам. Кеҫәлә — 2 һум. Метроға ҡалдырҙым.

Бына, уҡып ятҡанда, ике иҫеректе күрәм. Һыу тулып ятҡан соҡор эргәһендә сайҡалышып торҙолар ҙа алға атланылар. Ныҡлап ҡараһам, Ғабдулла ағай (Әхмәтшин) менән Даһи! Ғәҙәттәге күренеш. Ағай «Тальян гармун» менән бер рәттән,

яҡшыраҡ пьесалар тыуҙырып өлгөргән булыр ине лә бит... Ә Даһиға ни ҡалған?!

Беҙгә бергә булыу бик ҡыйын.

Лессинг — Эмилия Галотти. Трагедия в пяти действиях.

«Мы пишем глазами любви, и только глазам следует быть нашими судьями».

2 июнь.

М. Морозовтың Шекспир сонеттары тураһындағы мәҡәләһен уҡыйым.

Институтта Белге Аитов менән осраштым. Ситтән тороп уҡый.

— Йә, нисек Ҡазан? — тип һораштым.

Бик ҙур хикәйә яҙып килтерҙем, ти. Беҙ һөйләшеп ултырғанда, Ш. Мөдәррис килеп сыҡты.

— Таныш бул: башҡорт егете,— тине Белге.

— Беҙ таныш инде,— тип күреште Мөдәррис.

Белге һәр саҡтағыса шаярып һөйләшә. Бер тигеҙ малайҙар булып һөйләшәбеҙ. Ул төҫө менән ысынлап та малай, үҙе оло ғына кеше инде. Хәрәкәтсән. Ҡаҡса. Һары йөҙлө. Һаҡалмыйыҡһыҙ. Һөйкөмлө. Нисектер бик яҡын. Атай мәрхүмде хәтерләтә. Ҡайһы саҡта күңел тулып китә. Атайымды хәтерләһәм, мин үҙемде көслөрәк, тулыраҡ һиҙәм. Тулы, аҡыллы, аҙ һүҙле, ләкин күп эшләгән кеше ине ул. Уны белгән кешеләр һәр ваҡыт яратып һөйләйҙәр һәм миндә ниндәйҙер йылы ғорурлыҡ уяна...

Белге бер яңылыҡ әйтте: Татарстанды һәм Башҡортостанды икешәр өлкәгә бүләсәктәр. Башҡортостанда Өфө өлкәһе һәм Стәрлетамаҡ өлкәһе булырға тейеш. Ҡыҙыҡ, уңайлыраҡ булыу өсөндөр инде...

Бульварға инеп, «Совет Башҡортостаны»н ҡараһам, Шамилдың Назым Хикмәттән тәржемәләре бөтөн бер бит булып баҫылып сыҡҡан! Зәһәр! Үҙемдең шиғырҙар баҫылғандай шатландым. Ҡараһам, аҫта минең мәҡәлә ла бар: «Назым Хикмәт менән осрашыу». Уҡып сыҡтым. Минеке тиерлек хәле ҡалмаған. Елгәрелгән! Ҡоро газета һүҙҙәре. Күңелһеҙләндем.

Мәҡәлә Назым Хикмәт менән тәүге осрашыу тураһында былтыр яҙылған ине.

Поезда тәржемәләрҙе уҡып ҡайттым. Бына шиғырҙар, исмаһам! Назым Хикмәт — үҙ халҡының иң дөрөҫ тауышы! Бөтәһенән дә бигерәк «Тыуыу» шиғыры оҡшай миңә. Тулҡынландырғыс, йылы, көслө! Ни тиклем кешегә мөхәббәт! Бөйөк һөйөү! Горький һөйөүе! Ҡайтҡас, яңынан уҡып сыҡтым. Урманда. Ҡыҫҡырып.

Бик асыҡтым. Маруся апайға индем. Ул күп итеп аҡ икмәк телде, күп итеп шәкәр һалды. Сәй ҡайнатырға иткәйне, көтөрлөкмө инде, йүгереп ҡоҙоҡтан һыу килтерҙем дә — туйындым.

Киске 8-гәсә уҡыным. Аҙаҡ ашханала сәй эсеп сыҡтым. Бына инде сәйхур булыу! Һыҙғырынып ҡайтып килһәм, Ғабдулла ағай менән Дания туҡтатты. Икеһенә лә ике ҡулды бireп күрештем. Еңеләйеп алғандар. Үҙҙәренән бик ҡәнәғәттәр. Диңгеҙ тубыҡтарынан! Йылмаялар. Буш һәм мәғәнәһеҙ был йылмайыу шатландырмай мине. Бәләкәй генә телдәре башҡа һыймаҫлыҡ нәмәләр һөйләй. Һүҙҙәр таҫма кеүек оҙон, ялҡытҡыс. Аҡыл һөйәкһеҙ телгә ҡол был саҡта. Башҡорттарҙың шулай булып йөрөүе бик ғәрләндерә мине. Тиҙерәк китергә ашыҡтым.

— Һинең бөгөн мәкәләң баҫылып сыҡҡан бит, ниңә әйтмәйһең?— тине Дания.

— Аҡса көт, ҡустым! — тине Ғабдулла ағай. Мин түҙеп тыңланым.— Нисә юл? Подвалмы әллә? Мәхмүтовтың нисә тәржемәһе?

— Кем һуң ул Мәхмүтов?

— Бар бында бер аспирант. Назым Хикмәткә специаллəшеп ята. Маңка!

Мин тертлəп киттем. Йөрәккə хəнйəр ҡаҙалған кеүек.

Киттем.

— Мин һиңə барырмын əле. Көт. Бына хəҙер барырмын, йəме? — тине Дания. Килмəне.

Бүлмəлə шау-шыу. Һыу һибешəләр. Ха-ха-ха!

3 июнь.

Эҫе. Йүкәләр аҫтында күләгәлә ултырып уҡыйым. Ғабдулла ағайҙы бөгөн дə күрҙем. «Һөйләштек». Минән аҡса һорай.

Кис Сережа ағайҙарға түтəл ҡаҙыштым, ҡыяр сəстек. Маруся апай көндөҙ помидор ултыртты. Ҡарағаттар сəскə атты. Урмандың асыҡ урындары елəк сəскəләре менəн күмелеп ята.

Ҡайтыуға Боря институттан хат килтергəн. Диларанан! (Зөбəйерова.) Шатланып конвертты асһам... Был ни эш? Аңламайым!

«Рəми!... Хатыңды алдым... Ҡыҙғанам, һин кешеләр тураһында кеше аша ғына фекер йөрөтəһең икəн. Ə белəһеңме, һине был ғəҙəтең тормошта бер нисə мəртəбə алдар. Ул тиклем бер ҡатлы булма!

... Йəшермəйем, күп нəмəләрҙе мин һинеңсə кисерə инем, шикелле, хистəр яғынан оҡшай инек, шикелле, беҙ. Яҡын итə инем. Кəңəштəр һорай инем. Ə хəҙер... Ярай, аҙыраҡ яңылыштым... Минең хистəрем əле бер нəмə менəн дə бысранмаған!!!

Мин әле бәхетле!!! Хуш. Шундай ҡараңғы ҡыҙ итеп күҙ алдыңа килтерһәң, мин һинең менән осрашмаясаҡмын!!! ... Хуш, миңә аҙ ғына таныш булған билгеһеҙ шәүлә!..

Әгәр ҙә минең хаттарым һаҡланһа, барыһын да яндыр. Яңһын улар... Хәҙер ул хаттарға яҙылған һүҙҙәр мине ғазапламайҙар...»

Эй, Дилара, Дилара!..

«Хуш, Дилара!

Бәхетле булыуыңды теләйем. Кәңәшеңде тыңлармын. Ә шулай ҙа яңылыш аңлағанһың мине. Рәсемең өсөн рәхмәт.

Сәләм менән «Билгеһеҙ шәүлә».

P. S. Әгәр кәрәкле тапһаң, шифырҙар һәм балалар тураһында һөйләшербеҙ. «Яҡын кеше итеүеңде» талап итмәйем. Бәлки, йылдар, юлдар ғына осраштырыр. Ҡурҡма».

4 июнь.

Ҡояш. Эҫе. Миләш сәскә ата. Сәскәләре уҡмашып, тәлгәшләнеп ултыра.

Киске тамаҡ ялғағандан һуң (бөгөн мин туҡ), Ғабдулла ағай менән һөйләшеп йөрөнөк. Барыһын да әйттем.

5 июнь.

Болотло!

Тәүге имтихан! Йөрәк ашҡына. Нисә йыл инде һынау бирәм, әммә һәр саҡ беренсе тапҡыр тапшырған һымаҡ. Яҡшылап зарядка эшләнем. Һалҡын һыу менән ҡойондом. Электричкала Шәриф Әлбириев, Петр Шевлоков менән барҙыҡ. Улар барғас та инде. Ә мин — юҡ. Бер ассистент ҡатын сығып: «Нисек инде былай мәктәптәгесә ултыраһығыҙ?» — тине. Мин ҡапыл тәүәккәлләнем.

— Йә, теләһә ҡайһыһын, күңелеңә оҡшағанын һайлап ал, Ғарипов,— тиҙәр. Ситтәге билетты алдым. Тик мин оҙаҡ әҙерләнермен, тип иҫкәрттем дә алғы өҫтәлгә ултырып әҙерләнә башланым. Миҫалдарҙы Пушкиндар, Лермонтовтар, рус һәм башҡорт мәкәл-йырҙарынан килтерҙем. Бер кемдекенә лә оҡшарға тейеш түгел улар.

9 июнь.

Төштән һуң, Айдояндың сезонкаһын алып, Мәскәүгә киттем. Союздан аҡса ебәргәндәр. Ғабдулла ағайға, Даһиға, миңә — 490-шар һум. Әсғәттең хәле бик мөшкөл. Уға 100 һум. Исмаһам, имтихан мәлендә ҡаңғырмаһын. Рауилға (ҡустыһы) мәктәпте тамамлауына сәғәт алырға кәрәк. 309 һум. Галяға тыуған көнөнә Треневтың «Һайланмалары»н алдым. 15 һум.

Нина Акимовналарға остом. Галя менән үбешеп күрешеүҙән баш тарттым.

— Ҡайҙа ла мин башҡорт! — тинем. Көлөштөк.

Бер сынаяҡ сәй эстем дә тиҙерәк ҡайтырға ашыҡтым. Рауилға сәғәт алыу эшен Нина Акимовна үҙенә алды. Иртә менән Даһи минең шифырҙарҙы уҡырға килде.

10 июнь.

Тарихтан беренсе киҫәкте уҡып сыҡтым. Кис Погодиндар баҡсаһына ҡыҙҙар волейбол уйнарға саҡырҙы.

11 июнь.

Петр Беренсенән Александр Икенсегә килеп еттем. 1812 йылғы Ватан һуғышына еттем. Кис йәнә волейбол уйнаныҡ. Минән көлөп рәхәтләнделәр.

Бына ун көн үтеп тә китте. Яҙырға мөмкин дә булманы.

Юҡ, шулай ҙа мин ялҡау. Ярай, шартлайһыңмы инде. СССР тарихынан имтихан тапшырылды. Отличноға. Һорауҙар:

1. Образование русского национального государства.

2. Столыпинская реакция. Внутренняя и внешняя политика Столыпина.

Марксизм-ленинизм нигеҙҙәренән һорауҙар:

1. Кооперативный план Ленина и его дальнейшее развитие И. В. Сталиным.

2. Перерождение бухаринцев в политических двурушников. Перерождение троцкистских двурушников в белогвардейскую банду убийц и шпионов. Злодейское убийство Кирова. Мероприятия партии по усилению бдительности большевиков.

Күпме эшләргә тура килде. Бер ҡасан да әле имтихандарға шулай әҙерләнгән булманы. Бигерәк тә марксизм-ленинизм буйынса ныҡ ултырырға тура килде. Юҡһа, былтырғы «4» өсөн күпме йөрәк әрнеп йөрөнө.

Курста күптәр имтихан бирә алмағас, мин бик ҡурҡтым. Режимды ла бөтөнләй үҙгәрттем хатта. Сәғәт киске 11-ҙән үк ятам һәм таңдан тороп эшләйем. Бына ҡасан ул эш ырай! Хәҙер гел шулай итергә тырышасаҡмын. Иртән бер кем ҡамасауламай. Урман хуш еҫе менән ҡойондора.

Баш яҡшы эшләй. Арыу юҡ. Белеүҙән дә рәхәт ни бар? Уҡыйһың — беләктәреңә көс өҫтәлә хатта.

Инде көнбайыш әҙәбиәтенән һуңғы һынау ҡалды.

Кисен Погодиндар баҡсаһында волейбол уйнайбыҙ. Өйрәнеп киләм булһа кәрәк. Валяның Зоя мәктәбендә уҡыуҙарлығын яңы ғына белдем. Уның менән дә мауығам, шикелле. Һәр кис

күрге килеп тик тора. Тик һиҙҙермәйем. Күпме ҡыҙға ғашиҡ булдым мин...

Үҙемде бер ҡыҙ тураһында ла уйламаҫҡа мәжбүр итеп ҡарайым... Ләкин был мөмкин түгел. Кемделер бик ныҡ, бик ныҡ яратҡым килә. Бер генә кеше тураһында уйлағы килә. Ғүмерлек юлдаш була алырлыҡ кешегә генә бөтә йөрәгем менән бирелгем килә. Ләкин ул юҡ. Юҡ ул кеше! Был ҡурҡыныс. Марияттан башҡа бер кемде лә шулай ярата алмам кеүек...

Был көндәрҙә Сүриәнән, Диларанан, Кларанан хат алдым. Яуап яҙманым әле. Ләлә Биишеваға ла үҙ өҫтөндә эшләү хаҡында бик күп яҙғы килә. Яғымлы ул миңә. Янып, уйланып, дәртләнеп йәшәй торған ҡыҙ. Сүриәгә ни тиклем ҙур хат ебәрҙем, бер ни яҙмаған! Үҙе миңә барыһына ҡарағанда ла яҡын тағы. Башҡа класташтар ҙа һағындырҙы.

Сәғәт төнгө 1-се ярты. Бүлмәлә бәхәс. Һүҙ форма менән эстәлеккә инеп китте. Урманға сығып, йүкәләр аҫтына урын йәйеп ятҡан инем, ямғыр яуа башланы.

22 июнь.

Бынан ун бер йыл элек таңдан тороп, атай, әсәй һәм кескәй һеңлем менән колхоз айғырын егеп, һабантуйға, район үҙәге Салауатҡа киткән инек. Иҫ китмәле матур таң ине был. Мин күсер булып алда ултырам. Көрән айғыр йомшаҡ ҡына юрғалап, бышҡыра-бышҡыра алға елә. Илай торғас, мине әсәйемдәр беренсе ҡабат һабантуйға алып бара. Хыялға һыйҙыра алмаҫлыҡ һабантуй тантанаһы. Бәйгеләр. Көрәш. Төрлө уйындар. Халыҡ ни генә уйлап тапмаған. Бөтәһе лә байрамса. Төштән һуң ҡапыл кешеләрҙең йөҙө икенсе төҫкә күсте. Көтөлмәгән хәбәр Йүрүҙән буйындағы халыҡты лаулап ҡайнаған диңгеҙгә әйләндерҙе. Байрамдың эҙе лә ҡалманы. Ығы-зығы. Һыҡрау. Күп ирҙәр туп-тура военкоматҡа китте. Бөтә кешенең йөҙө шомло, ҡайғылы, нәфрәтле. Төштән һуң халыҡ үлек ерләп ҡайтҡан кеүек ауылдарға таралды. Юл ҡара йылғаға әйләнде. Шомлоҡ бөтә тәбиғәткә лә күскән кеүек. Күк урманлы тауҙар киске эңергә төрөндө. Ҡояштың ҡыҙыл нурҙары ҡанға оҡшап бөтә ерҙе ҡыҙылға әйләндерә. Аттар кешнәшә. Бала-саға тауыштары. Ҡатын-ҡыҙҙар илауы. Ҡайғы диңгеҙе тәрән. Халыҡтың күплегенән, Йүрүҙән аша сыҡҡанда, кисеү быуылып торған һымаҡ. Ҡайһы берәүҙәр аттарын тәрән урынға төшөрөп, әллә ниндәй фажиғәләр булып бөттө. Атайым военкоматта ҡалды. Мин үҙем генә, ир кеше булып, әсәйем, һеңлемде ултыртып, көрән айғырҙы аҡрын ғына юрттырҙым.

Һәр нәмә бөгөнгөләй күҙ алдымда. Бына шулай, ауырлығы беҙ бәләкәйҙәрҙең елкәһенә лә төшкән дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышы башланды. Атайым беренсе көндәрҙә үк үҙе теләп һуғышҡа китте. Кире ҡайтманы. Был һабантуй атайым менән һуңғы ҡабат бергә булған ваҡиға булып ҡалды. Бер таңда атайымдың мине йоҡлап ятҡан еремдән күтәреп алып күкрәгенә ҡыҫып үпкәне һәм йылмайып: «Йә, улым, колхоз һиңә ҡала. Әсәйеңде тыңла, иркәләреңә ағай була бел. Һин инде хәҙер ҙурһың. Тырышып уҡы. Беҙ еңеп ҡайтырбыҙ»,— тип әйткәне минең күҙ алдымдан мәңге китмәйәсәк. Атайымдың йылмайған йөҙөнән тәгәрәп төшкән эре күҙ йәше битте һаман да яндырып торған кеүек. Ул тамсы минең бала йөрәгемә ялҡын булып тамды. Ул ялҡын мәңге һүрелмәйәсәк. Атайҙың яҡты иҫтәлеге минең йәнемдә һәр саҡ янып торасаҡ. Аҙ һүҙле, көнө-төнө эштән бушамаған, халыҡтың мөхәббәте менән йәшәгән атаның тормошо миңә үрнәк булып тора.

Һуғыш инде артта. Өфө, мәктәп, детдом тормошо ла артта. Мәскәүҙәге яҡты көндәрҙең икенсе йылы ла йәшен кеүек ялтлап үтте.

Һынауҙар ваҡыты — минең өсөн тормош һынауы ла. Үтелгәндәрҙең үкенесле булыуын теләмәйем. Хәҙер һуңғы имтихан ҡалды.

Сәғәт 2-лә Вавилин, Али Кәримов менән урманда конспект-тарҙы бергәләп уҡып яттыҡ. Кис — волейбол. Яҡшылар менән уйнаным. Насарҙар һәр берене өйрәтергә тырыша, ләкин бер ни сыҡмай. Насарҙар араһында беренсе булғансы, яҡшылар араһында һуңғы булыу яҡшы.

Кис «Тартюф»ты уҡыным да Даһиға киттем. Иртәгә иртән ҡайтып китә. Оҙатырға кәрәк. Мин барып ингәндә, сыуаш Макар, украинец Пальчик һәм Даһи Есенинды уҡып ултыра ине. Даһиҙың шиғырҙарын тикшерҙек.

23 июнь.

Даһиҙы оҙаттым. Институтта хаттар килгән. Ләләтуҡаевананан, Рауилдан (ҡустыһы), Гөлсөм Нәзметдинованан. Артыҡ нәмәләр юҡ.

24 июнь.

Көн буйы уҡылды. «Дон Жуан», «Мизантроп». Үҙемде шул кешеләр итеп күҙ алдына килтерһәм, ҡурҡыныс. Бәләкәйһең, түбәнһең! Уларҙың сифаттарын тойоу ҡыйын. Ләкин был киселеш бик күп түбәнлектән ҡасырға, уларҙы үҙеңә яҡын килтермәҫкә өйрәтә.

Кеше һәр саҡ алға ынтыла. Һәр саҡ үҙ-үҙе менән ҡәнәғәтләнмәй. Белгән һайын, уның күберәк белгеһе килә. Уға йылдар ҡосағында әллә ниндәй серҙәр йәшеренеп ятҡан кеүек тойола. Кешенең әллә ниндәй мөғжизәләр тыуҙырғыһы килә. Кеше мәңге көрәшкә һыуһай. Уның ғәҙәттән тыш бәхет менән ҡыуанғыһы, әллә ниндәй тәрән рәхәтлек менән ләззәтләнгеһе, әллә нисә күҙ менән күрелмәгән нәмәләрҙе күргеһе килә. Халыҡҡа ҙур, онотолмаҫ, юғалмаҫ бер эш эшләп ҡалдырғы, уның йылы һөйөүенә лайыҡ булғы, ғорурланырлыҡ улы булғы килә. Әллә күпме өмөт! Әллә күпме хыял! Алдыңда ҙур маҡсаттың ҡояштай янып тороуы бөтә тормошоңдо йылытып, нурға күмеп тора. Маҡсатһыҙ йәшәүҙән дә мәғәнәһеҙ тормош юҡ. Үтелгән юлды үкенмәҫлек итке килә. Мөмкин тиклем һәр көндән тейешле өлөшөңдө алып ҡалырға, уны киләсәктә башҡарасаҡ эштәр өсөн тупларға кәрәк. Үҙҙәренең бушҡа үткән көндәре өсөн ҡайғырмаған кешеләр бик ҡыҙғаныс миңә.

Шәмем тирәһендә төн күбәләктәре әйләнә. Ниндәй йүләрлек: утҡа осоп киләләр ҙә — яналар! Ут — сәскә түгел шул.

Тормошта ла шундай күренештәр булырға мөмкин. Сәскәне уттан айыра бел.

1 октябрь. III курс.

Йыйылышҡа һуңламайым тип, йүгереп килеп ингәндә, Иван Завалин менән партбюро секретары Марков ҡаршыға осраны:

— Һине комскомитетҡа һайларға билдәләнек, — тине Завалин.

Яңы комскомитет һайланды. Барыһы — 9 кеше. Шуларҙың береһе — мин. Игорь Сеньков секретарь итеп һайланды.

Диларанан, Гөлсөмдән, Хәкимйән Зариповтан (ҠДУ) һәм Таңһылыу Күсимованан хат алдым.

Гөлсөмгә һоҡланып бөтә алмайым.

Комскомитетҡа һайланыу шатлыҡ та, ниндәйҙер ҙур бер йөк тә. Ҡапыл мин үҙемде бик етди кеше итеп һиҙҙем. Башҡалар алдында яуаплы булыу нисектер миңә яңы көс индерҙе.

2 октябрь.

Виктор Шкловский сюжет тураһында өсөнсө әңгәмәһен үткәрҙе.

Семинар үҙенең быйылғы тәүге занятиеһын башланы. Унда Рафаэлде лә (Сафин) алып килдем. Ул әле бер кемгә лә беркетелмәгән. Үҙе беҙҙең Смирнов төркөмөнә теләй. Унда уға ҡыйын булыр һымаҡ. Сергей Лушник, Владимир Федоров, Володя Морозов, Володя Нарожнов, Вадим Зубарев үҙҙәренең

шиғырҙарын уҡыны. Сергей украинса уҡыны. Мин аҙ аңлайым. Рафаэлгә Сергей Васильевичтың ябай булыуы бик оҡшаны.

Семинарҙан һуң Шакирға (Янбаев) Хәҙисәнән килгән посылканы барып алдыҡ. Уның паспорты теркәлмәгән әле. Шуға күрә аҡса-фәлән булһа, мин алып биреп торам. Хәҙисә менән Шакир араһында иҫ киткес матур дуҫлыҡ, ҙур мөхәббәт. Шакир үҙе балаларса иҫерек унан! Уларҙың мөхәббәте беҙҙең өсөн дә шатлыҡ. Миңә бигерәк тә. Әйтерһең, мин дә — Шакир.

Посылканы алып ҡайтҡас, Рафаэлдең бүлмәһендә астыҡ һәм бөтәбеҙ ҙә бергә йыйылып, Шакир, Даһи, Рафаэль — Хәҙисәнең күстәнәсенән ауыҙ иттек. Алмалар, әллә ниндәй кәтермәстәр, шоколад һалған.

Даһи иртәгәге докладҡа әҙерләнгән. Фадеевтың «Йәш гвардия»һының икенсе баҫмаһы тураһында һөйләйәсәк. Бергәләп уҡып, тикшерҙек.

Хәҙер бына ниндәй күмәкбеҙ инде! Күңелле! Ҡауыштыҡ! Инде хат аша ғына һөйләшә торған саҡ-суҡтар түгел беҙ. Шакир, Рафаэль, Рәйес — әҙәбиәт институтының тәүге курс студенттары. Инде бер ай уҡынылар. Ҡыҙыҡ егеттәр. Һәр береһе бер төрлө. Һәр береһендә һоҡланғыс яҡтар бар.

Даһи менән, әлбиттә, мин күп һуғышам, ҡаршылашам. Әле бөгөн дә төкөшөп алдыҡ. «Совет Башҡортостаны»на МДУ-ны төҙөүсе Башҡортостан ҡыҙҙары тураһында бергәләшеп бит әҙерләнек. Даһи ойоштороусы булды. Мин «Өс һеңел» тигән очерк яҙҙым. Даһи бик ашыҡтырҙы. Тиҙ үк өлгөртөп бирҙем. Әсғәт фоторәсемдәрҙе лә өлгөрттө. Даһи уларҙы тиҙерәк Ғафаровҡа ебәрергә тейеш ине. Ләкин, үҙе яҙып өлгөрмәгәнгә, беҙҙекеләрҙе ебәрмәне. Партияның XIX съезы алдынан эшләнә торған эш өҙөлдө. Материал һуңланы. Мин ныҡ ҡына асыуландым. Үпкәләштек.

— Билләһи, баҫыласаҡ, асыуланма инде, Рәми, бына күр ҙә тор — баҫыласаҡ! — ти Даһи, ҡулын биреп.

Йәй көнө лә ул эште боҙҙо. Ул 1-се, мин 2-се курсты бөтөрөп, Башҡортостанға ҡайтҡас уҡ, Әсғәтте лә үҙебеҙ менән алып, Башҡортостан буйынса сәйәхәткә бергәләп сығып китергә тейеш инек. Был хаҡта ҡыш буйы һөйләшелде. Нисек булһа ла, алға ҡуйылған маҡсатҡа ирешергә тейеш инек. Булманы! Даһи бер имтиханын бирә алмай, уны яңынан тапшырып та тормайынса, Өфөгә ҡайтып китте. Беҙ Әсғәт менән ҡайтып төшөүгә, ул инде «Әҙәби Башҡортостан»ға инеп ултырған — фольклор йыйыу тураһында уйлап та бирмәй. Беҙ икәүләшеп кенә сығып китергә булдыҡ. Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалынан эш алып сығып киттек.

Йәй күңелле, файҙалы үтте. Беҙ ҡайтыуға Даһи өйләнергә лә өлгөрә һалған.

Нураниәнән тәүҙә оҙаҡ ҡына хат килмәй торҙо. Даһи нишләргә лә белмәй йөрөнө. Һәр иртә һайын төштәрен һөйләне. Көндәрҙән бер көндө барыбыҙға ла шатлыҡ булды — Даһиҙың кәләшенең хаты килде!

Даһи менән ҡаршылашырға тура килә икән, нишләйһең, яҙмыш бер. Йәшәйбеҙ бергә. Уның мин оҡшатҡан яҡтары ла бар. Күп сифаттары өсөн уға хөрмәт менән ҡарайым. Әле ул Али Карнайҙың «Беҙ ҡайтырбыҙ»ы буйынса пьеса яҙа. «Трагедия!» — ти үҙе. Дәртле тотондо. Һәр яҙғанын миңә уҡый бара. Нисек сығыр?

3 октябрь.

Аслы-туҡлы йәшәгән көндәр. Даһиҙың да, Рафаэлдең дә, Рәйестең дә, Рәмиҙең дә хәлдәре хөрт. Бер Шакирҙы ғына йолҡҡолайбыҙ. Аҡсаны мин барыһынан да күп алам. Крылов исемендәге 480 һумлыҡ стипендия. Ләкин минең ҡулда аҡса ут — ҡулды бешерә. Йә терегөмөш — тотоп булмай.

Росполиграфиздатҡа шылтыраттым. Ермаков иртәгә сәғәт 5-кә килергә ҡушты. Салауаттың шиғыр һәм йырҙар китабына яҙған мәҡәлә тапшырылды унда. Минең тәүге мәҡәлә-рецензия. Тәүге уҡыу көнөндә мине Серегин дирекцияға саҡырып, Росполиграфиздаттан килгән редактор менән таныштырҙы. Һәм бына мин бер 10—12 көнләп, Ленин китапханаһынан ҡайтмайынса, тәүге эште эшләйем: «Салауат Юлаев шиғырҙарының яҙмышы һәм уларҙың руссаға тәржемәһе хаҡында».

Редакторға ул оҡшаны һәм уның кәңәштәре лә файҙалы булды. Киләсәктә эштәр алып торорға һөйләшеп килештек. Миңә теләһә ниндәй ҡара эште башҡарып өйрәнергә кәрәк.

Рецензия күп нәмә бирәсәк.

Кис Переделкинола яңы студсовет һайланыҡ. Шакир ҙа һайланылды.

Студсоветҡа тиклем «Пушкин в воспоминаниях современников» тигән китапты уҡып ултырҙым. Спецкурсты ла Пушкин буйынса тыңлау өсөн С. М. Бонди группаһына яҙылдым. Быйыл Пушкинды ныҡлап өйрәнеү — төп маҡсатым. Әле уның миндә «Новые страницы Пушкина» тигән китабы ята.

13 ноябрь.

«Марият (Шакирова)! Бәлки, һин тормошоңа әллә күпме күңелһеҙлектәр килтергән Рәмиҙе онотоп та бөткәнһеңдер. Минең был хат һиңә бер аҙ сәйер тойолор. Һин көтмәгән-

һеңдер ҙә уны. Мин үҙемде һинең алда әллә ниндәй ғәйеп эшләгән кеүек хис итеп киттем...

Был ваҡыт эсендә Күсәкбей ҙур үҫә, шулай ҙа әсәһен һағына, уны күргеһе килә. Ошо теләк менән, иҫке-моҫко кейем кейенеп, әсәһе торған ауылға бара. Йәмилә өйҙә яңғыҙ ултыра. Күсәкбей килеп инеп хәйер һорай. Йәмилә ойотҡан ҡойоп бирә. Күсәкбей ҡатыҡты өс өлөшкә бүлә лә ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн ҡалдырып сығып китә. Йәмилә улын танымай. Ҡараҡоломбәт ҡайтҡас, уға үҙҙәренә инеп сыҡҡан хәйерсенең ойотҡанды өскә бүлеп, ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн ҡалдырып китеүен һөйләп бирә. Быны ишеткәс тә, Ҡараҡоломбәт нимәлер булаһын белеп, бошона, ҡайғыра башлай.

Күсәкбей 150 батырҙан торған ғәскәр йыйнап, ҡоралландыра. Күп тә үтмәй, Ҡараҡоломбәткә ҡаршы яуға сыға.

Ҡараҡоломбәт ырыуында бер генә йәнде лә ҡалдырмайым, бөтәһен дә ҡырып бөтөрәм, ти ул. Юлда осраған һәр бер кешене, хатта малдарын да ҡыра бара.

Ҡараҡоломбәт ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, һуңғы сиктә ҡасып йәшеренә.

Күсәкбей, бөтә йәндәрҙе ҡырып бөтөп, Ҡараҡоломбәт ауылына килә. Ҡараҡоломбәтте эҙләп табырға ҡуша. Ауылдан алыҫ түгел ырҙында 13 йәшлек ҡыҙ бала тап була. Күсәкбей уны үлтерергә йыйынғанда, ҡыҙ һүҙ башлап:

— Батыр, үлтермә мине. Мин һигеҙ йәштән алып Ҡараҡоломбәттең һарыҡтарын көтәм. Мин һеҙгә Ҡараҡоломбәттең йәшенгән урынын әйтәм: ул ана ырҙын аҫтында йәшеренде,— тигән.

Күсәкбей ырҙын эргәһенә барып, ҡулдарын бөйөрөнә таянып баҫҡан да:

— Ҡараҡоломбәт, сыҡ!— тип ҡысҡырған.

Ҡараҡоломбәт килеп сыҡҡас та сисендергән, танауын тишеп еп үткәрткән. Яланғас килеш ҡара һыйырға артҡа ҡаратып мендереп, Ҡыпсаҡ ырыуына табан алып ҡайтып китә.

Ҡыпсаҡ ырыуындағы бейек түбәле тауға мендерә. Быға тиклем әле һарағыға килтереп, унан бер йылға буйында ҡара һыйыр үлеп ҡала. Йылға Ҡараһыйыр тип атала. Унан һуң ҡыҙыл һыйырға атландырып, һарағыға кире килтерә. Йәйләүҙәрҙә кеше күрһен, тип Өмбәткә килтерә. Өмбәттән Иҙел аша Байназарға сығарып, эргәһендәге шул бейек тауға мендереп, Ҡараҡоломбәтте ҡоро ҡаҙанға һалып ҡура. Ҡурылған ваҡытта сыҡҡан тоҙлоғон (майын) бармағы менән ялай.

— Атайымдың ҡонон алдым! — ти Күсәкбей.

Тауҙы хәҙер Ҡурыуҙы тауы тип йөрөтәләр. Тауҙың башында, имәнлек араһында, ҡазып ултыртҡан таштары ята.

Ҡараҡоломбәттең хурлыҡҡа сыҙай алмай, ҡара һыйыр өҫтөндә Күсәкбейгә: «Мине ыҙалатҡансы, атай, сал!» — тигән урынды Атайсал яланы тип атап йөрөтәләр.

Күсәкбей, Ҡараҡоломбәтте ҡыйратҡас, уның ҡасып барған бер улын ҡыуып тотоп тормаған:

— Ярай инде, ҡалһын әйҙә бер йән!— тигән. Ана инде бер йән теге көтөүсе ҡыҙ менән бергә тороп, уларҙан хәҙерге Бөрйән кешеләре таралған.

Бөрйән бына шулай бер йәндән килеп сыҡҡан.

15 ноябрь.

«Ҡәҙерле туғандарым Зараб һәм Рәмзиә, һеҙ миңә тик шуның менән генә ярҙам итә алаһығыҙ, тик шул ғына миңә һеҙҙең иң ҙур һәм иң матур, онотолмаҫ ярҙамығыҙ буласаҡ — яҙығыҙ минә үҙегеҙҙең эшегеҙҙе, бөтә ишеткән мәҡәл һәм әйтемдәрҙе яҙығыҙ. Мин уның халыҡта күп икәнен беләм. Әлбиттә, һеҙҙең үҙегеҙгә генә эшләү бик ауыр. Ләкин бер юл бар: был эште һеҙ балаларға өйрәтегеҙ. Улар фольклор менән ҡыҙыҡһын. Дәрестән тыш итеп был эшкә тәртипле рәүештә күндерегеҙ. Һеҙҙең программаларҙа һәм педагогик мәҡәләләрҙә был эшкә иғтибар ителмәй. Бик ҡыҙғаныс. Ә бит был, Ушинский әйткәнсә, баланы күп нәмәгә өйрәтә, уны халыҡ эше өсөн тәрбиәләүҙә иң кәрәкле сараларҙың береһе. Фольклорҙың тәрбиәүи йоғонтоһо баланың аңына ла, тойғоһона ла, хыялына ла, теленә лә иҫ киткес ҙур. Халыҡ аҡылы ҙур оҫталыҡ, тәрән тойғолар, сикһеҙ хыялдар менән кешенең бөйөк образын тыуҙырған. Тапҡыр теле менән халыҡ бик күп быуаттар буйы дөрөҫлөк һәм ғәҙелһеҙлек, белем һәм наҙанлыҡ, бәхет һәм нәфрәт тураһында һөйләп килгән. Уның нигеҙенә быуаттар буйы халыҡтың яҡты тормошто яулау көрәше һалынған. Мәҡәлдәр — халыҡтың алтын аҡылы. Тәрбиә фәненең, педагогиканың башы — фольклорҙа. Бөтә нәмәнең башы — халыҡ аҡылында.

Мин бөтә йөрәктән һеҙҙең тәрбиә эшегеҙҙә халыҡ ижадына иғтибар итеүегеҙҙе теләйем. Ул — көслө һәм ватылмаҫ, иҫкермәҫ ҡорал.

Сәләм менән туғаныҡыҙ Рәми».

1 декабрь.

«Дилара! Һинең «көндәлек дәфтәрең»дә яратып, рәхәтләнеп уҡыным. Ул, бәләкәй генә булһа ла, ҙур тормош дәфтәре. Тормоштан да матур нимә бар?! Һинең уға шундай мөхәббәтең дә булғас, һин ҡарап туймаҫлыҡһың! Шаянһың, күңеллеһең, яғымлыһың һин, Дилара апа!

Мин тырышырмын, Дилара апа. Һеҙҙең йөҙөгөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырышырмын. Мин беләм: һеҙгә минең яҡшы уҡыуымды күреү йырҙан да рәхәт. Һеҙ иң матур шатлыҡ менән ҡыуана беләһегеҙ. Шундай кеше башҡаларҙы ла һөйөндөрә. Шундай кешеләр булғанда, төрлө ауырлыҡтар осрағанда ла тормош — яҡшы! Яҡшы бит, Дилара апа! Ҡыш та, яҙ ҙа, йәй ҙә, көҙ ҙә яҡшы!..

... Беҙҙә хәҙер ҡыш. Мавзолей эргәһендәге шыршыларҙың ботаҡтарына көмөш төҫтәге тәүге ҡарҙар түшәлгән. Энәләргә шундай рәхәт, шундай йылы. Ботаҡтарҙың һәлмәк кенә эйелеберәк ауырайып тороуында ниндәйҙер ғәҙәттән тыш бер матурлыҡ бар. Тәүге балаһы тыуасаҡ йәш әсәнең матурлығы бар ауырайып тороуҙа! Бындай әсәне күрҙем мин һәм уның ғорур матурлығына Горький кеүек һоҡландым. Быға тиклем мин әсәгә яратып, хөрмәтләп ҡараһам да, уның шул тиклем гүзәллеген белмәй инем. Кисә генә тойҙом мин уны бөтә йөрәктән. Нимә етә әсә булыуға! Бит ул тормошто төҙөүсене, уны йырлаусыны тыуҙыра!

Ул кисә студенттар кисәһенә килгән ине. Үҙе лә студентка ғына әле. Инде һуңғы йылы. Унан һуң ул, үҙенең нефтсе инженеры яғына ҡайтып, балалар уҡытасаҡ. Ә хәҙер ул минең ауылдаштың ҙур шатлығын уртаҡлаша. Әкрәм (Закиров) дипломын отличноға яҡлаған. Диплом эше нефть эшкәртеүгә ҙур ярҙам итәсәк, тигән Мәскәү ғалимдары. Минең ауылдашты Туймазыға ла, үҙебеҙҙең филиалға ла саҡыралар. Мин тәүҙә Туймазыға бар, унан «аспирантурала уҡыуың Башҡортостан өсөн файҙалыраҡ булыр», тинем.

Беҙ йырлаштыҡ , бейенек, көлдөк, иҫкәрҙек хатта. Тик мин бейемәнем. Әсә буласаҡ кешенең бейеүенә минең иҫем китте. Уны иң тәүҙә бейетеүҙәренә эстән генә нисектер ҡурҡыбыраҡ, риза булмай ултырҙым. Ә ул күбәләктәй еңеллек менән, аяғы ергә теймәй бейене! Бейеүендә ниндәйҙер бер һаҡлыҡ та бар. Был һаҡлыҡта яуаплылыҡ ҡына түгел, мөхәббәт тә йәшәгәнен мин, әйтерһең, әсә кеше кеүек аңланым. Был мөхәббәтте һис бер һүҙһеҙ нефтселәр ҙә, педагогтар ҙа, юристар ҙа, консерваториянан килгән йырсылар ҙа, мичуринсылар ҙа, тәнҡитсе Ғайса ла — бөтә башҡорт студенттары ла аңланылар. Йырсы Хөсәйен, кисәнең етәксеһе, тост күтәреү өсөн миңә һүҙ бирҙе. Бик ҡаушаным. Әйтер һүҙҙе әйтә алмай торҙом. Ә күҙ алдыма Әкрәмдең бөтә үтелгән юлы килеп баҫты. Ә ул көтөүсе ине.

9 декабрь.

Комсомол комитеты ултырышы булды. Алексей Ласуриа менән Крахмальниковаңың шелтәләрен төшөрҙөк.

Рус булмаған студент группалары тураһында һөйләшеү булды. Дәреслектәребеҙ — мәктәп китаптары! Ҡайһы бер студенттар тырышмай, дәрескә әҙерлекһеҙ йөрөйҙәр йә бөтөнләй лекцияға килмәйҙәр. Һүҙлек алып бармайҙар. Тел өйрәнеүҙә һүҙлекһеҙ эшләп булмай. Ҡайһы берәүҙәр әҙәбиәтте бик аҙ уҡый. Бөтөнләй уҡымағандар ҙа бар. Әхмәтов Фируз быйыл тик Сельвинскийҙың лирикаһын һәм Тихонов шиғырҙарын ғына уҡыған! Яҙыусы! Программа материалдарын ғына уҡыусылар бар. Күптәр китап өҫтөндә эшләй белмәй. Үҙ алдыңа эшләй белеү — иң кәрәклеһе.

Рус иптәштәр яңылыш һөйләүселәрҙе төҙәтмәй. Һүҙҙәрҙең баҫымдарына иғтибар юҡ. Рус телен өйрәнеү — һәр милләт студенты өсөн талапҡа әйләнергә тейеш.

Шағирҙар — тик шиғыр, прозаиктар тик проза ғына уҡый. Улай ярамай.

Жора Исаев үткән комскомитетта отчет бирергә тейеш ине, ләкин үҙе билдәләгән көнгә килмәне. Тәртип боҙа. Эшендә ныҡышмал, эҙмә-эҙлекле түгел. Йыйылыштарҙа яндырғыс телмәрҙәр тота, аҙаҡ һүнә. Жора шым ғына ултырҙы. Йыйылыш алдында дөйәләй ине, хәҙер төймәләй генә ҡалды.

Һөйләшеү файҙалы булһа кәрәк.

11 декабрь, кесаҙна.

«Марксизм-ленинизм классиктары әҙәбиәт тураһында» тигән темаға теоретик конференция тамамланды. Ижади семинарҙа Иван Ганабин шиғырҙары тикшерелде. Поезда ҡайтҡанда «Совет Башкортостаны»нан Ж. Кейекбаевтың «Һәнәр диалекты» тигән ҙур мәҡәләһен уҡып ҡайттым. Тел мәсьәләһенән ситтә булған проблемалар ҡатышһа ла, мәҡәлә ҡыҙыҡлы. Ул күтәргән башҡа мәсьәләләрҙең береһе — күрше өлкәләрҙәге башкорттарға мәҙәниәт ярҙамы күрһәтеү. Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты тураһында мөһим фекерҙәр бар. Тик был тураларғы мәсьәләне айырым бер мәҡәләлә күтәреп сығырға кәрәк ине.

12 декабрь, йома.

Горький буйынса спецкурстың семинарын бөтөрҙөк. Казарян «Горький һәм әрмән әҙәбиәте» тигән темаға аҡыллы доклад яһаны.

Горький күп башлап яҙыусылар менән бәйләнештә торған. Уның Т. Ахумянға яҙған хаты ҡыҙыҡлы. Рус матбуғатында шиғырҙары баҫылғас, Ахумян бер саҡ Горькийҙан открытка ала: «Летопись» журналы адресына минең исемгә, зинһар, шиғырҙарығыҙҙы ебәрегеҙ. А. Пешков». Ахумян, әлбиттә,

шулай эшләй. Бер аҙҙан Горькийҙан хат ала: «Әлбиттә, һеҙ яҙырға һәм күп яҙырға тейеш. Әммә шул тиклем үк һеҙгә тормошҡа яҡын булыу зарур... Үҙ-үҙегеҙгә биклəнмәгеҙ, ə бөтə донъяны үҙегеҙгə туплағыҙ. Тормоштоң ағыуы күп, əммə унда бал да бар — шул балды табығыҙ. Ҡоро лирик ҡына булмағыҙ, йəнегеҙҙе үҙегеҙҙең ҡулдар менəн төҙөгəн ситлеккə биклəмəгеҙ, сатирик, прозаик, ғəҙəттəге шат бер кеше булырға ла батырсылыҡ итегеҙ. Бөтəһен дə алырға һəм кешеләргə бирергə кəрəк. Замандың күпселек йəш шағирҙары кеше аяғы баҫмаған утрауҙарҙа, тормоштан һəм уның хаосынан ситтə йəшəй. Был, əлбиттə, ысынбарлыҡ сыуалышында йəшəүгə ҡарағанда, еңелерəк тə, уңайлыраҡ та. Əммə үҙ-үҙеңде ярлыландырыу, урлау был. Робинзон булырға кəрəкмəй. Йəшəргə — шауларға, көлөргə, эрлəшергə, яратырға кəрəк. Əлегə табылмаған нəмəне — яңы һүҙ, яңы рифма, яңы образдар табырға кəрəк. Шағир — ул донъя шаңдауы, ə үҙ күңелен генə туйындырыусы түгел. Бына шулай. Һеҙгə иң һəйбəт теләктəр менəн А. Пешков».

1934 йылда Ахумян Горькийҙың Мəскəү эргəһендəге дачаһында була. Горький уны шатланып ҡаршы ала: «Бына һеҙ ниндəй! Һеҙҙе мин тап ошолай... оҙон буйлы итеп күҙ алдыма килтергəйнем дə. Эйе, мин күптəн иғтибарға алдым, оҙон кешелəр лирик була. Мин дə шундай инем... Һəм күптəрҙе беләм — Ромэн Роллан, Чехов... Аҙаҡ тормош килтереп һуға, һыныңды бөклəй...»

Ахумяндың нимə өҫтөндə эшләгəнен белешеп, Горький уға ошондай кəңəш бирə:

«Төрлө яҡҡа ташланмаҫҡа өйрəнергə кəрəк. Сəнғəт быны яратмай. Ул көнсөл...»

Горькийҙың Əрмəнстан һəм эрмəн халҡы тураһында əйткəндəре лə йылы һəм йөрəктəн сыҡҡан һүҙҙəр: «Һеҙҙең илегеҙ хозур! Мин һеҙҙең тауҙарығыҙҙы күрҙем — ғорурҙар! Кешеләре лə шундай уҡ! Бынамын тигəн кешеләр! Уларға ауыр яҙмыш насип булған, əммə улар үҙ ҡайғыһын хаяһыҙҙар донъяһынан йəшерə белə, йырлай алалар. Һеҙ ҙə шундай уҡ булығыҙ! Көлөгөҙ, йышыраҡ йырлағыҙ — дошмандарға һəм ҡаршылыҡтарға үс итеп! Күңелегеҙ, йөрəгегеҙ менəн йəш булығыҙ! Йəшлек — ул ҙур нəмə!»

Бөгөн Ермиловтың Гоголь тураһында китабы тикшерелə.

Гоголь халыҡсан. Тормош дөрөҫлөгөн асыусы. Халыҡ поэзияһын, ижадын бөтə йөрəктəн тоя белеүсе. Үҙенə генə хас комизм менəн халыҡ фажиғəһен күрһəтеүсе Гоголдə шул тиклем тəбиғилек, ябайлыҡ, һоҡланырлыҡ матурлыҡ бар. Уның əҫəрҙəрен уҡығанда, ҡапыл ғына бер тойғонан икенсеһенə күсəһең. Əле генə шатланһаң, ҡапыл моңһоу була. Ул халыҡ

аҡылының тапҡырлығы менән көлә белә. Гоголь йырлай. Гоголь лирик. Гоголь теле — йыр. Уның көлөүе — халыҡ көлөүе. Бөтә эшәкелектән юғары торған көлөү. Унда киләсәккә өмөт арҡаһын баҫып торған ғазап тауын дер һелкетеп ауҙарып ебәрерлек көс бар. Был көс — Гоголь көсө. Ул рәхимһеҙ тантана менән ҡәбәхәтлектән, түбәнлектән көлә.

Ермилов китабының етешһеҙлектәре: авторға һәр саҡ дөрөҫ тон һаҡлау етешмәй. Ул Гоголдең идея ҡаршылыҡтарын да томалап ҡалдыра. Гоголде революционер яһап ебәреп, дөрөҫ булмаған юлға төшөп китә. Бының менән ул юбилей мәҡәләләренә яҡыная. Ермиловтың раҫлауына ышанғанда, Гоголде иҙелгән халыҡ йырсыһы итеп күргә тейеш булабыҙ. Был дөрөҫ түгел. Гоголдең ҡаршылыҡтарын томалаған хәлдә, беҙ Белинскийҙың уға яҙған хатына ышанмаҫҡа тейешбеҙ. Гоголдең, бөйөк художниктың, реакцион фекерләүсе икәнлеген дә инҡар итәбеҙ. Ярамай.

Әлбиттә, Ермилов китабы Гоголь тураһындағы бүтән хеҙмәттәрҙән күпкә өҫтөн. Ул һәр саҡ уҡыусыны тоя.

Китапта Белинскийҙың Гоголгә яҙған хаты булмауы ғәжәпкә ҡалдыра. Ә был хаттан башҡа Гоголь тураһында тулы һөйләп булмай.

Ермиловтың лакировкаһы уның Чехов хаҡындағы китабында ла бар. Ул Чеховты революционер яһай. Ә беҙ уның революциянан алыҫ тороуын яҡшы беләбеҙ. Чехов — демократ. Һуңғы көндәренә тиклем шулай була. Ә быға күҙ йоморға кәрәкмәй.

Беҙҙең институт үҙ баштары менән уйлай торған әҙәбиәтселәр үҫтерә. Казарянға ҡарайһың да әрмән әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһынаһың. Арнольд Тамм менән беҙ беренсе курстан уҡ фекерҙәштәр. Эстон халҡын уның аша күргә теләйем. Ул үҙ халҡының бөтә яҡшы сифаттарын үҙендә йыйған кеүек. Тыныс ҡына, ләкин үҙендә әллә күпме тынғыһыҙ фекер йөрөтә! Вадим Зубаревты тыңлау һәр саҡ ҡыҙыҡ. Фекер йөрөтөүе аҡыллы. Фөмүмән, мин кешеләрҙе күҙәтеүҙән рәхәтлек табам.

Ләкин үҙемә иң яҡын булған бер дуҫымдан ҡәнәғәт түгелмен. Һәр бер һөйләшеүендә, хәрәкәтендә, минең кем икәнде күрһәндәр, тип үҙенең ҙурлығын белдерергә тырышып, йөк өҫтөнә менеп баҫҡан ҡырмыҫҡа ҡыланышын күргән кеүекмен. Быны күреү ауыр һәм уңайһыҙ. Шиғыр башын әйләндерҙе егеттең... Барыһы ла яһалма, ят.

Был ҡыланыштары мине дуҫымдан кәртәләп, ситкә этеп торған япма. Үҙе быны тоймай. Әйткәнде ауыр ҡабул итә. Ә ул үҫергә һәләтле һәм өмөтлө. Уйлай, ҡайғыра, шатлана белә.

Рәйес (Низамов) асыҡ, ябай, тәбиғи, бер ниндәй позаһыҙ. Уға үҙеңдең бөтә етешһеҙлектәреңде, күңелендәге бөтә нәмәне һөйләге, уртаҡлашҡы килә.

Донъяла бөтә нәмәңде юғалтҡанда ла, кешелек намыҫыңды юйма, тим үҙ-үҙеңә, бәләкәй кешегә әйләнмә, ҡәҙереңде төшөрмә. Әлбиттә, тормош еңел нәмә түгел, әммә уны үҙең ауырайтыу кәрәкһеҙ. Кешеләрҙән ниҙер талап итер өсөн, үҙеңә ҡарата иң киҫкен, иң ҡаты талап ҡуйырға кәрәк.

13 декабрь, шәмбе.

Институтҡа Нина Акимовна килде. Ишектән уның кереп килгәнен күреп, ырғып торҙом да ҡаршы сыҡтым. Ул бөтә кеше алдында ҡосаҡлап алды. Уңайһыҙландым. Сумкаһынан буятылған бәшәй, бейәләй сығарҙы, йыуылған ҡулъяулыҡ менән кеҫәләгеһен алмаштырҙы. Уның һағынып, әсә кеүек килеүе мине бик тулҡынландырҙы. Ҡыҙы Галя тураһында һорашырға ла өлгөрмәнем, звонок. Раздевалкаға төшөп, пальтоһын кейҙерҙем дә оҙатып ебәрҙем. Шишәмбе килергә ҡушты. Әсғәт тә (Әшрәпов) киләсәк. Уны күптән күргән юҡ.

Бурыҫка 25 һум алып, Кузнецкий мостҡа, китап магазинына киттем. Мөҫәлиә Ғәлиевнаның (профессор М. Хәйруллина) тыуған көнөнә (15 декабрь) М. Кәримдең «Һайланма әҫәрҙәр»ен бүләк итергә уйлаһам, бөткән. Аптыраным — Мәскәүҙә лә уҡыусылар күп икән! Әхмәт Фәйзиҙең Туҡай тураһындағы романын, Ғ. Камалдың II томын, Һ. Таҡташтың йыйынтығын, татар йәштәренең китаптарын алдым. Мөҫәлиә Ғәлиевналарға киттем. Клара Булатовна ғына өйҙә ине (ул Булат Ишемғолдоң ҡыҙы, аспирантурала, педагог, 1951 йыл Өфөлә бер вагонда ҡайтҡанда таныштыҡ). Мөҫәлиә Ғәлиевна ҡайтҡас, баллап сәй эстек. Унан мин йәй йыйған фольклор материалдарымды — мәҡәл, әйтемдәрҙе, Брагин ташы легендаһын, Күсәкбей тураһында һәм «Орсоҡ», «Ғүмәров», «Йәтим ҡыҙ меҫкен Хәтирә», «Шаһибәрәк» йырҙарын уҡыным. Бик ҡыҙыҡһынып тыңланы Мөҫәлиә Ғәлиевна. Проза яҙырға кәрәк һиңә, тине.

Ниндәй ҡыҙыҡ тормош: әле генә мин уның дәрестәрен тыңлап ултыра инем. Ярата һәм бер аҙ ҡурҡа ла инем. Ә бөгөн апай менән ҡусты кеүекбеҙ.

Урмандан йырлап ҡайттым. Диларағa рәсемде ебәрҙем.

14 декабрь, йәкшәмбе.

Политэкономия бик ауырға әйләнеп бара. Аңламайым. Иван Федорович Сорокин йүләрерәк ҡарт. Һорау бирһәк, яуап ҡайтармай, ҡыҙып китә, лекциянан ҡыуып сығара.

«Пионер» журналы өсөн «Салауат батыр»ҙы тағы бер ҡат эшләп, Шәриф Бикҡолға хат яҙҙым. Практикаға унда ҡайтырымды әйттем.

Хәҙер ятам да һүҙлек уҡыйым. Төнгө сәғәт 2.

15 декабрь, дүшәмбе.

«Капитал»ға тотоноҙан алда Сталиндың «СССР-ҙа социализмдың экономик проблемалары»н ныҡлап уҡып сығырға булдым. Зачеттар, имтихандар башлана.

16 декабрь, шишәмбе.

Тәүге лекция — политэкономия. Бер аҙ аңлайым.

Артомонов Шелли тураһында һөйләне.

Шеллиҙы эҙмә-эҙлекле материалист итеп ҡарауға һағыраҡ килергә кәрәк. Ул — пантеист. Бөтә нәмәне иркәләүсе мөхәббәт алдында баш эйеп, көрәштән ситкә китә. Бөтә шиғырҙары ла тиерлек абстракт фәлсәфәнән тора. Танылған поэмаһы — «Аластор». Төп әҫәре — «Прометей».

Прометей — гректар тыуҙырған героик образ. Эсхилдың бына тигән Прометейы бар. Шелли нимә өҫтәй Прометейға? Яңы заман Прометейы физик ғазап ҡына түгел, рухи ыҙалар ҙа кисерә. Ул йөрәгенә килеп инеүсе бысраҡ тойғолар менән көрәшә.

Гетеның Фаусты мәңге эҙләнә, аҙаша, көрәшә, йәшәүҙең мәғәнәһен ошонда күрә. Шеллиҙың Прометейы иһә рухи яҡтан зәғифләнә, үлемде саҡыра. Ләкин ул килмәй. Был уға — бәхетһеҙлек. Шелли Прометейы шундай һығымтаға килә: донъяла иң яҡшыһы — мөхәббәт. Һәм ул Азия исемле ҡыҙҙы ярата. Мөхәббәт уны яңынан тергеҙә. Прометей азат булып, Азия менән Кавказ тауҙарына күсеп китә. Бөтә нәмә өҫтөндә мөхәббәт балҡып тора башлай. Был ут кешегә кешелекле мөхәббәт менән яна.

Шеллиҙың тарихи әҫәре — «Ченчи» трагедияһы. XVI быуат. Италия. Ҡарт Франциско Ченчи — бай дворян һәм бик боҙоҡ. Үҙенең улдарын һәм ҡыҙҙарын ғазаплай. Үҙенең 18 йәшлек ҡыҙы Беатриченың намыҫына тейә. Был тарихи, тормошта булған ваҡиға. Был ҡәбәхәтлекте ул үҙенең ҡатыны алдында эшләй.

БАЙРОН (1788—1824)

Шеллиҙың дуҫы, бәхәсһеҙ, бөйөк шағир. Шекспир һәм Мильтондан ҡала өсөнсө бәһлеүән. Байрондың олатаһы донъя әйләнә сәйәхәт яһаған адмирал, ҡыйыу диңгеҙ бүреһе. Атаһы

ике ҡатынға өйләнә. Тәүге ҡатының иренән тартып ала. Икенсеһенә ҙур байлығы өсөн өйләнеп, уны тәләфләп бөтөргәс, үҙен-үҙе үлтерә. Байрондың әсәһе Стюарттарға яҡын Гордондар нәҫеленән. Әсәһе лә үҙ-үҙен үлтерә. Ул улын бик яратһа ла, уны ғазаплай: әрләй, туҡмай. Бына ошондай тәрбиә алған Байрондың холҡо тигеҙ булмай. Ялҡынлы ярата, ялҡынлы күрә алмай. Ләкин ябай, ярлы халыҡҡа юғарынан ҡарауҙы иң ҙур түбәнлек һанай. Ул бик матур була. Бөтәһен үҙенә һоҡландыра. Үҙенең замандаштарында ул шиғриәте менән генә түгел, шәхесе менән дә иҫ киткес тәьҫир ҡалдыра. Уға антик матурлыҡ, ҙур аҡыл юлдаш була. Стендаль, Пушкин уны ныҡ тәнҡитләһәләр ҙә, яраталар.

Бонди «Граф Нулин» тураһында һөйләй.

Был Пушкиндың замандаш тәнҡитселәренә талаш өсөн ырғытҡан шаян поэмаһы. Надеждин Пушкиндың был әҫәрен, әҙәбиәтте мыҫкыл итеүсе поэма, тип атай.

Граф Нулин — француздыҡҡа төрөнгән рус. Был шул заманда киң таралған күренеш. Булавка, лорнет, эшләпә, зонтиктарға төрөнгән, ебәк ойоҡтар кейгән ҡылансыҡ граф Нулин тураһында яҙып, Пушкин йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултырта.

Пушкиндың был поэмаһы менән «Полтава» араһында декабристар күтәрелеше ята. Русь тормошондағы азатлыҡ хәрәкәтенең башында дворян-революционерҙар тора. Сенат майҙанында Каховский Милорадовичты ата. Ләкин бының өсөн Николай I биш декабристы аҫа. 500-ҙән артыҡ иң алдынғы рус кешеләре һөргөнгә ебәрелә. Реакция йылдары башлана. Һатылалар. Хыянат итәләр. Ошаҡтар йышая. Йәмғиәт ҡурҡыуға төшә. Полевой кеүек һатлыҡ, Булгарин кеүек шымсы яҙыусылар Пушкинға яла яға, демагогия менән ҡоторона. Был 30-сы йылдар була. Батша хөкүмәтенә ярҙамға рус буржуазияһы килә. Николай I Пушкин менән күҙмә-күҙ ике сәғәт һөйләшә. Пушкин батша янына үҙенең революцион шиғырын алып бара. «Пророк». Был — шиғырҙың бер өлөшө генә. Тулыһынса табылмаған. Мицкевич үҙенең Варшавалағы лекцияларында Николайҙы Пушкин алдында аҡланған тип һөйләй.

Пушкин менән һөйләшер алдынан Николай уның тураһында декабристарҙан һорашып барыһын да белешә. Улар иһә батша алдында үҙҙәрен барыһы ла лайыҡлы тота алмаған, бер-береһенә ғәйеп ауҙарғандар, фекерҙәренән кире дүнәләр. Рылеев та йомшаҡлыҡ күрһәтә. Батша илгә танылған шағирҙы үҙ яғына ауҙармаҡсы була. Ләкин Пушкин ҡыйыу яуап бирә, Сенат майҙанында булыр инем, ти.

«Дәүли (Дәүләтбаев Миңнулла, Салауат ҡалаһында йәшәй), хатыңды уҡып, тормошоң, яңы көйҙәр яҙыуың, артистар араһында халыҡ менән бергә ҡайнауың өсөн бөтә йөрәктән

шатландым. Тыныс ҡына йәшәгән кешеләргә тынғы бирмә, ян гел шулай.

Дәүли, һинең халыҡ менән аралашыуың, бигерәк тә Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Белорет яҡтарында йөрөүең өсөн көнләшәм һинән! Был бит һинең ижади тормошоң өсөн иң күп алған, иң ныҡ байыған осороң, Дәүли. Ҡыйын икәнен тоям. Ләкин был дәүереңдең киләсәге бар. Емешле киләсәге, Дәүли. Был йылдарыңды һин бик һағынырһың. Һин генә түгел, дуҫтарың да үткән тулы тормошоңдо һинең менән ғорурланып күҙ алдына килтерер.

Тик мин һинең уҡымауыңдан ҡурҡам. Әгәр һин көн һайын үҙеңдең буш урыныңды тултырырға ваҡыт таба алһаң, тормош һиңә ҙур уҡытыусы буласаҡ. Һис шикһеҙ үҫәсәкһең. Һин үҫеүгә ярһыған кеше. Туҡтама, музучилищела алған өҙөк-йолҡо белемең менән сикләнеп ҡалма. Көн һайын тултырмағанда, алған белем көн һайын кәмей, һайыға. Сөнки тормош көн, сәғәт, минут һайын үҫә, киңәйә, байыға. Йүнәлеш — алға сабыусы Тормош булырға тейеш. Һине солғап алған кешеләр араһында, үҫеп еттем, ҡалғаны миңә кәрәкмәй, тип уйлаған кешеләр күп. Һин үҙең күрәһең уларҙы. Үҙең көрәшәһең улар менән. Шуның өсөн һиңә Станиславскийҙы, Горькийҙы, Глинка менән Чайковскийҙарҙы өйрәнергә кәрәк. Ниндәй китаптар бик кәрәкле — яҙ миңә. Хәлдән килгәнсә тырышырмын. Яҙ, һора, ҡыйынһынма.

Нисек тә халыҡ көйҙәрен яҙып барырға тырыш. Мин йырҙарҙың көйҙәрен яҙа алмауым өсөн бик үкендем. Теләһә аҫып ҡуйһалар ҙа минең ҡулдан килмәй торған эш был. Шуның өсөн һин барһың, Дәүли. Үҙең ишеткән боронғо башҡорт көйҙәрен яҙып бар. Һиңә иң ҙур үтенес шул. Мөмкинлек булһа, йырҙың һүҙҙәрен дә яҙып ал.

Һиңә Әбйәлилдә «Орсоҡ», «Йәтим ҡыҙ меҫкен Хәтирә», «Саңдыуҙәк», «Фүмәров», «Бала ҡарға», «Аҡһаҡ ҡола айғыр» көйҙәрен ишетергә тура килер. Һораш. Бел. Яҙ! Уларҙы башҡарыусы кешеләрҙең исемлеген яҙа бар. Был үтенес Ғәфәргә лә (Вәлиуллин) тейә.

«Һүнмәҫ мөхәббәт»кә музыкаль биҙәү менән ҡотлайым. Үҙем ишетмәһәм дә, йөрәгем ишетә. Был эштә һәр саҡ халыҡ көйҙәрен файҙаланыуыңды теләйем. Ышанам: был яңы аҙымың һуңғыһы булмаҫ. Үҫә барырһың. Үҫкән — матур, Дәүли! Әлбиттә, буйға үҫмәсһең инде хәҙер. Шулай тоҡор ғына, ләкин ут булып тәгәрәп йөрөрһөң. Шулай бит?

«Фәрхетдин» булыуың менән дә ҡотлайым, Дәүли. Бына һин актер ҙа! Мин күҙ алдыма ла китерә алмайым хатта. Нисек уйнағаныңды ҡарап ултырһаң ине!

Беҙгә еңгә әҙерләргә итәһеңме? Беҙ бик шатбыҙ был хәбәргә. Ваҡыт инде. Тик мин бер кәңәш тә бирә алмайым был

өлкәлә. Белəһең бит минең «тәжрибәле» кеше икәнде! Таныштыраһыңмы? Яҙ, Дәүли.

Беҙҙең тын алышмы? Барыбыҙ өсөн дә яуап яҙмайым. Үҙемдең турала шул: ниндәйҙер еңеллек менән йәшәйем. Ә мәңге ғазапланырмын тип уйлай торғайным. Йөрәктәге әрнеү бер ҡасан да бөтмәҫ кеүек ине. Әйтерһең, мин тәрән диңгеҙ аҫтында инем. Ә хәҙер был баҫымдан атылып килеп сыҡҡанмын да диңгеҙ өҫтөндә сайҡалам. Зәңгәр күккә ҡарап тирбәләм. Тик үтелгәнде хәтерләү ҡурҡыныс булып та китә. Бит мин тормошта тәүге ҡабат шулай киҫерҙем! Һәм инде шулай ҡабат яна алмам кеүек ине. Әлбиттә, мин яратырмын һәм яратмай булдыра ла алмам. Һәр аҡыллы, матур ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡараһам да, йөрәк урынынан ҡуба... Әллә ниндәй көс бар уларҙа! Йылы ҡараштары яҡшы шифыр яҙғандан һуң кисергән рәхәтлекте бирә! Үҙеңде бөтөнләй икенсе төрлө, сабый кеүек саф, йыр кеүек тулы итеп тояһың! Ҡыҙҙарҙың, ысынлап та, кешене яңынан тыуҙырыу, яңыртыу, сафландырыу көсө бар! Улар янында һин үҙең ғәҙәттәгенән матурыраҡ күренәһең.

Бына кискә ҡалып поезда ҡайтып барам. Ҡаршымда бер студентка ултыра. Вагонға инеп ултырыу менән китап уҡырға тотондо. Ҙур зәңгәр күҙҙәре, оҙон керпектәре талған кеүек. Китабын ябып ҡуйҙы ла, башын тәҙрә яңағына һөйәп, күҙҙәрен йомдо. Ап-аҡ ҡына йөҙө балаларҙыҡы һымаҡ наҙлы, яғымлы. Шәле аҫтынан бөҙрәләнеп һарғылт сәстәре сығып тора. Бала ирендәре алланып, нык ҡымтылғандар. Матур танауының япраҡтары тын алыуҙан һиҙелерлек ҡалҡып-төшөп тора. Сабыйҙай йоҡлай. Арыған. Мин шул тиклем яратып ҡарап ултырам. Һиҙҙермәй генә башын күкрәгемә ҡуйып, ҡулдарымда йоҡлатҡым килә... Хатта йоҡлап киткәндә лә матур улар! Тупаҫлығың йомшара, күкрәгеңдә ғәйрәт арта.

Дәүли, мин ҡыҙҙарҙы әллә нисек яратам. Үҙем дә белмәйем. Бөтә ҡыҙҙарҙы ла яратам мин.

Атай булғың киләме һинең? Ә минең бик килә!.. Минең үҙ баламды — Салауатымды йә Зоямды һөйгөм, уларға бишек йыры яҙғым килә. Уларҙың әсәһен дә һөйгөм килә. Ул минән күп кенә йәшерәк булырға тейеш. Һағынам уны. Ләкин уның донъяла бармы, юҡмы икәнлеген белмәйем.

Уҡыу бара. Күңелле. Тиҙҙән имтихандар. «Салауат батыр» тигән әкиәт яҙып «Пионер»ға ебәрҙем. Практикаға унда ҡайтам. Өфө ҡышы һағындырҙы.

Ну яҙҙым да үҙеңә!

Тик яуапты бөтәбеҙгә яҙма. Миңә айырып яҙ.

Һинең Рәми».

Сергей Смирнов Е. Долматовскийҙың һуңғы китабы тураһында тәнкитләп һөйләне. Йәш кенә Котов шағирҙарҙың тормоштан ситтә булыуҙарына туҡталды. Ольга Берггольц, лирика хаҡында һөйләп, уйланыуҙарҙан, һағыштарҙан ҡурҡалар, тине. Сергей Васильев С. Михалков һәм А. Сурковтың ике шиғырын алып килгән. Йәштәр ҙур рәсми шағирҙарға эйәрәләр. «Черноморская песня» Михалковтыҡы. Был үрнәк түгел. Сурков «Девичья песня» тигән йырын үҙенең журналында сығарған. Насар үрнәк тарата. Н. Доризо поэтик ҡыйыулыҡ тураһында әйтте. Маяковский ҡыйыулығы. Тәрән фекер тәрән тойғоһоҙ булырға мөмкин түгел.

19 декабрь.

Иртән ашханаға барғанда дядя Сережаны күрҙем. Саҡырҙы. Уларҙа төшкә тиклем, Тихоновтың өйҙә юҡлығынан файҙаланып (ул Венала, Тыныслыҡты яҡлау конгресында), китапханаһынан китаптар ҡарап ултырҙым. Ни тиклем яҡшы китаптар! Мине шырпы ҡабы ҙурлығындағы «Евгений Онегин», «Фауст» һәм Гейненың йырҙар китабы таң ҡалдырҙы. Тихонов китапханаһынан үҙемде ҡыҙыҡһындырған иң кәрәкле китаптарҙың исемлеген яҙып алдым. Көндәлеккә күсереп ҡуям.

20 декабрь, шәмбе.

Виктор Ворошилский үҙенең шиғырын поляк телендә һәм подстрочнигы менән килтереп бирҙе. Тәржемә итергә тырышып ҡарайым әле. Китапхананан «Поляк теле грамматикаһы»н һәм Ҙур Совет энциклопедияһын алып, поляк теле тураһында уҡыным.

21 декабрь, йәкшәмбе.

Сталинды уҡыным. Переделкинола кис эшселәрҙең концерты булды. Беҙҙең драмтүңәрәк тәүге пьесаһын ҡуйҙы. Леня яҙған таҡмаҡтарҙы йырлап, дирекцияны, эшсе ҡыҙҙарҙы, кладовщикты тәнкитләнеләр. Концерт бөткәс, аҙ ғына бейеүҙе ҡарап торҙом да ҡайттым. Рәйескә һ. Таҡташты уҡыным.

22 декабрь, дүшәмбе.

Лекциянан һуң — тағы Нарожнов һәм Морозовтың персональ эше. Тағы эсеп кеше көлдөргәндәр. Кисәлә иҫерек килеш шиғыр уҡығандар. Исаев Жора, нимә эшләргә инде, тип аптыраны. Йыйылышта уларҙы институттан сығарыу тураһында тәкдим булды. Күпселек шул тәкдимгә ҡушылды. Мин дә.

23 декабрь, шишәмбе.

Диларанан хат алдым. Таҡташтың улы Авангард тураһында. Ул больницала ауыр хәлдә ята икән. Дилара уға барып шифырҙар уҡып киткән.

Лекциянан һуң Лида Андреева комскомитетҡа килгән бер хатты бирҙе. «Уҡы ла Исаевҡа, Таммға бирерһең, тине. Конвертты асып уҡый башлау менән аптырап киттем. Штамп баҫылып, машинкала шулай яҙылған:

«Секретарю парторганизации ВСЭК МПП СССР
тов. Ускову М. И.
от кандидата в чл. КПСС Никольской Л. К.

заявление.

В ноябре месяце 1951 года я вышла замуж за Севостьянникова Эдуарда Трофимовича, который в этот период является студентом Литературного института. Казалось бы, что человек, выбравший себе такую специальность, комсомолец, ясно отдавал себе отчет в своих действиях, когда решил устроить семью, но как видно, он до 24 лет не уяснил, какой он шаг делает и какие от этого будут последствия...

Муж уезжает на учебу, что же, это очень хорошо, я очень рада была за него, за его успехи. Но счастье наше было очень кратковременным — 4 месяца, по вине моего мужа.

Только после того, как я ему написала, что я в положении, он приехал на каникулы ко мне в Сталинград и начал говорить, что мы еще с тобой мало жили, чтобы могли иметь ребенка. Я начинаю сомневаться в моей любви к тебе. 6 февраля он уехал, а 20 февраля получаю от него письмо, что мы совершенно чужие, и он убедился, что он меня не любит. (Копию письма прилагаю.)

Встретились еще мы с ним в Москве. Разговор был у него такой, что мы с тобой должны оформить развод официально, причину разрыва он объясняет тем, что он еще не нагулялся, страшится семейной жизни, а главное, у него есть девушка, которую он полюбил.

Сердце у него оказалось любвиобильное, можно ожидать такой же истории и со второй и третьей и т. д.

Я, кандидат в члены КПСС, считаю, что Севостьянников Э. Т., как будущий писатель не сможет выполнить своей высокой задачи на идеологическом фронте. Поэтому я требую разобраться в аморальном поступке.

Л. К. Никольская

22 декабря 1952 года».

Теркәлгән хаттан:

«Здравствуй, Люся!

Люся, мне очень не хотелось писать тебе этого письма... Все это время я мучаюсь, ощущая на себе всю тяжесть совершенного мной преступления. Дорогая, пойми меня... не могу любить тебя, я это понял теперь совершенно ясно. Ты должна была видеть, как я старался убедить, обмануть самого себя перед самым отъездом. Нужно покончить с этим, или иначе я, честное слово, не выдержу... разве сердцу прикажешь. Прости, но я не могу больше. Виноват, страшно виноват перед тобой и перед твоей матерью. Передай ей, что я чувствую себя перед ней виновным не меньше, чем перед тобой.

Мы должны расстаться. Глубоко уважаю тебя и знаю, что я не стою твоего уважения и любви. Извини, но я больше не могу считать тебя своей женой и обманывать самого себя. Нужно покончить с этим, или я сойду с ума.

Эдуард. 12/II-52. Москва».

Барыһы ла асыҡ. Ни тиклем күп әле беҙҙә шундай ваҡ һәм ерәнгес кешеләр. Етмәһә, үҙе яҙыусы! Иң саф, иң йөрәкле кеше булырға тейешле ул! Минең баштан сыҡмай был хәҙер. Һәр кеше тураһында уйлаған һайын үҙемде лә хөкөм итәм: бер ҡасан да кешелегеңде ваҡлама!

25 декабрь, кесаҙна.

Иртәгә зачет! Эш әле муйындан. Был зачет теләһә ниндәй имтихандан да ауырыраҡ, яуаплыраҡ. Тик иптәш Сталин китабын ғына һәр кеше аңлай ала. Ә «Капитал» өсөн күп көс, тырышлыҡ кәрәк.

Есениндың һүҙҙәре иҫкә төшә: «Премудрость скучных строк». «Капитал»дың ҡайһы урындарын шифыр кеүек уҡығы килә. Киңлек! Тәрәнлек! Тапҡырлыҡ!

...Отелло көнсөл кеше генә түгел, кәмһетелеүе, раса яғынан түбәнһетелеүе арҡаһында баш күтәреүсе, ҙур кешелек тойғоһон һаҡлаған яныусы кеше лә! Объектив законнан сәнғәт законы ла киттә түгел. Ул да объектив закондар көсө менән хәрәкәт итә. Сәнғәт — тормош сағылышы. Шулай булмаһа, Ленин Толстойҙы, рус революцияһының көҙгөһө ул, тип атамаҫ ине. Был — беренсе объектив закон.

Унан, йөкмәтке менән форманың берлеге — сәнғәттең икенсе объектив законы. Улар бер-береһеҙ мөмкин түгел.

Объектив закондарҙы танымаһаҡ, тормошто боҙоп күрһәтәбеҙ. Идеологик хаталарҙың төп сәбәбе — тормош дөрөҫлөгөнән ситкә китеүҙә. Ҙур сәнғәттең геройы һәр саҡ Кеше. Кеше — ғорур яңғырай! Рәссам кешене бөтә ҙурлығында күрһәтергә тейеш. Ә беҙҙә кешеләр йыйылышта, руль артын-

да кеше булып күренә, ә ҡатыны янына ҡайтһа, бөтөнләй схемаға эйләнә.

Яңы йөкмәткe яңы форманы талап итә. Ләкин милли форманың яҡшы яҡтарын инҡар итергә ярамай. Уның консерватив, реакцион яҡтарын ғына алып ташлайбыҙ. Элекке формаға бик һаҡлыҡ менән килергә кәрәк. Опера бит үҙе иҫке форма! Дәүләт бит үҙе иҫке форма! Улар кәрәкме? Кәрәк. Тик уларҙың йөкмәткеһе генә башҡа, яңыса.

Образдарҙың типиклығы яҙыусының партиялылығы тураһында әйтә. Идея өсөн көрәш — типиклыҡ өсөн көрәш. Тормоштоң объектив закондарынан сығып тыуҙырылған типиклаштырыу булмаһа, идеяң һуҡыр бер тингә лә тормай. Идея ҡоро идея ғына булып ҡала.

27 декабрь, шәмбе.

Комскомитет ултырышы. Комитет, Савченконың тәртибен хөкөм итеп (шифыр кисәһендә эсеп килеп һуғыш сығарған), комсорг эшенән төшөрөргә булды. Гурьевҡа иҫкәрмә яһалды.

1953

1 апрель, шаршамбы.

Бөтә Мәскәү яҙғы яҡтылыҡ менән балҡый. Һәр кем йөҙөндә нур. Мәскәүҙәр бер туҡтауһыҙ ашыға ла ашыға. Бер ҡайҙа ла бүтән улар һымаҡ ашыҡҡан халыҡты күрмәҫһең. Миңә нисектер яҡын хәҙер ошо ашығыу. Үҙең дә һиҙмәҫтән йәшәү тиҙлегенә арттыра башлайһың.

Балаларҙың шау-шыуы менән тулған Тверь бульварынан атлап үтеү, әсәләрҙең яҙғы ҡояш йылыһында сабыйҙарын арбасыҡтарына һалып йоҡлатып, китап уҡып ултырыуҙары йәки шаяртыуҙарына ҡарап үтеү күңелгә рәхәтлек бирә.

Тверь бульвары Мәскәүҙә мин яратҡан иң матур урындарҙың береһе. Бында әле аяҡ аҫты кибеп етмәгән. Субырсубыр ҡар һыуҙары ағып ята. Ә тротуарҙа ҡоп-ҡоро.

Кешеләр витриналарҙағы газеталар янында туҡтап, аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға хаҡтар төшөүе тураһында шатланышып уҡый.

4 апрель, шәмбе.

З. Кедринаның Мохтар Ауэзов тураһында китабын уҡып сыҡтым. Унда «Абай» романына ҡылыҡһырлау бирелгән, яҙыусы ижадына тотош ҡаҙаҡ әҙәбиәте фонында анализ яһалған. Оҫталығына, теленә аҙыраҡ туҡталған, әлбиттә. Шулай ҙа был китаптан үҙемә күп файҙа алдым.

5 апрель, йәкшәмбе.

Ял. Рустарҙың пасхаһы. Көн ҡояшлы, яланға сығып китмәй булдыра алманым. Йылғаны аша сығып, бер кәбән төбөнә барып яттым да шифырҙар яҙҙым. Зәңгәр күктән һабантурғайҙары шат моңон ҡоя. Тәүге күбәләктәр леп-леп осоп йөрөй. Ҡар бик аҙ ҡалған. Ер-һыу һарҡып килә.

6 апрель, дүшәмбе.

Көнбайыш әҙәбиәтенән Стендалде дауам иттек.

Совет әҙәбиәтенән Сталин тураһында шифырҙарҙы тикшерәбеҙ. Смирновтың, Луговскойҙың, Долматовскийҙың һ. б.

бик күптәрҙең шиғырҙары бер төрлөләр, үтә дөйөмдәр. «Әлбиттә, ваҡыт үтеү менән был темаға яңы шиғырҙар ҙа яҙыласаҡ», — тине Казарян. «Кемдәрҙең тағы һүҙе бар?» — тип һораны профессор Новицкий. Беребеҙ ҙә өндәшмәнек. Ҙур ҡайғы әле иҫтә торғанда көслө әҫәрҙәр тыуҙырыу мөмкин түгел, тиеүҙә лә дөрөҫлөк бар. Ләкин сәнғәттә ваҡиғаға тура яуап булып тыуған көслө әҫәрҙәр ҙә бар тарихта. Быны Пушкин үлеменә яҙылған Лермонтов шиғыры иҫбатлай. Ул Пушкинды ерләгәнгә тиклем үк кешеләргә тарала. Ватан һуғышы, граждандар һуғышы дәүерендә уларға торорлоҡ әҫәрҙәр тыуҙырылды, тине Новицкий. Әммә, минеңсә, уның Пушкин менән Сталин араһында параллель үткәреүе бик үк дөрөҫ тә түгел. Төрлө тарихи заман, бөтөнләй икенсе шарттар, төрлө шәхестәр. Унан, яҡшы әҫәр яҙыу өсөн ваҡыт та кәрәк. Маяковский үҙенең «Ленин» поэмаһын 21 ғинуарға тиклем үк яҙа башлаған.

Яшиндың «Испытание» шиғыры оҡшаны. Берггольцтың «Сталинға»һы бик хөрт тамамлана, кәрәкмәгәнсә күп һүҙле. С. Маршак та шиғыр урынына чертеж һыҙа. Ғәфү ителмәҫлек шиғыр. Маргарита Алигерҙың «Коммунистарға»һында ла яһалмалылыҡ күп. Күҙ йәшһеҙ иларға кәрәк! Нимәгә сәбәләнергә! Яҡшы шиғырҙар: Сурковтыҡы, Исаковскийҙыҡы, Симоновтыҡы, Самед Вургундыҡы, Ғафур Ғәләмдеке, Мостай Кәримдеке.

МДУ-ла лекциялар уҡыусы Благой менән полемика. Благой Пушкинға үҙенән сығарып икенсе теманы бәйләй. Белинскийға таяна. Поэма Белинский аңлағанса түгел. Пушкин «Полтава»ла төп образ Петр Беренсене биреү маҡсатын ҡуймай бит. Ул үҙе яҙған мәҡәләһендә ҙур трагедияны сағылдырырға теләмәгәнен әйтә. Әгәр ҙә Мария образы булмаһа, әҫәр героик поэма тип аталыр ине. Ләкин Пушкин Марияға ҙур урын бирә. Ҡатмарлы тарихи ваҡиға менән бергә Пушкин кешеләрҙең шәхси тормошон да күрһәтә. Полтава уның өсөн — Русь тарихындағы фажиғәле ваҡиға.

Мария ни өсөн Мазепаға ғашиҡ булған? Мазепаның яҡшы һөйләй белеүе ҡыҙҙы ғашиҡ итә. Отелло ла бит үҙенең тормошон һөйләп Дездемонаны үҙенә ҡаратҡан. Тормошта бик йыш шулай була. Оло йәштәге кешеләргә бик йәш ҡыҙҙар ғашиҡ була. Ҙур артистарға, яҙыусыларға мөкиббән киткән ҡыҙҙар бик күп. Сөнки ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте үҙе таянырлыҡ ҙур көскә һәр саҡ мохтаж, улар шундай кешене һөйә.

Пушкин «Полтава» менән Николай реакцияһы ваҡытында беренсе сығыш яһай. Был ҙур политик сығыш. Унда шағир дәүләт эшмәкәре булып һүҙ ала. Украинаны Россияға ҡушыуҙың әһәмиәтен яҡшы аңлаған Пушкин был эшкә ҡаршы булған Мазепа кеүектәрҙе рус дәүләтенең дә, Украинаның да

хыянатсыһы итеп фашлай. Бөйөк реалист булараҡ, ул киләсәк өсөн прогрессив булған сараларҙың ҡаршылыҡһыҙ ғына, кешеләр фажиғәһенән башҡа ғына булыуын күрһәтә алмай. Тормошто ул бөтә ҡаршылығы һәм киҫкен дөрөҫлөгө менән күрһәтә.

Лекцияларҙан һуң партия ағзалары менән берлектә комсомол йыйылышы булды. Комсорг Егор Исаев төҫһөҙ генә доклад яһаны. Бер нәмә лә эшләнмәгән. Әйтерһең, беҙҙең комсомол ойошмаһы бөтөнләй юҡ! Ниндәйҙер йоҡо, ойоғанлыҡ! Егор йыйылыштарҙа бик ҡабынып һөйләп ала ла бер-ике көн эшләгәндән һуң һүнә. Үҙе лекцияларға килмәй, конспекттары юҡ. Нимә яҙалыр, ни менән йәшәйҙер? Ҡараңғы.

7 апрель, шишәмбе.

Рус музыкаһы тарихынан Балакиревты үтәбеҙ. Глинканың эшен дауам итеүсе. Бер ниндәй музыкаль мәктәптә уҡымайынса ла, бик ҙур белемгә эйә. Яҡшы пианист булараҡ, Лист музыкаһын оҫта башҡара. Көслө ихтыярлы кешеләрҙең береһе. Рус көйҙәре нигеҙендә үҙенең увертюраларын яҙа. 50—60-сы йылдар — ижадының сәскә атҡан осоро. Аҙаҡтан ул бөтөнләй музыканан китеп, тимер юлындағы учреждениеға ябай хеҙмәткәр булып инә. Рус музыкаль йәмғиәте композиторҙары менән көрәш ҡаршылығында, атаһының һәм ҡыҙ туғандарының фажиғәле үлеме арҡаһында, 1872 йылда уның тормошонда ҙур һынылыш килеп сыға. Был рухи боролош уның музыкаға кире ҡайтҡандан һуңғы ижадында нык эҙ ҡалдыра.

Балакирев Көнсығыш халыҡтарының музыкаһына тәрән мөхәббәт һәм хөрмәт менән ҡарай. Тыуған ере — Нижний Новгород. Ярлы дворян ғаиләһенән. 17 йәшендә үк дирижерлыҡ эшен башҡара. Ҡазан университетында физмат факультетында уҡый, Петербургҡа китә, Глинка менән таныша.

Музыка кешене сафландыра, бала күңелле итә. Яҡшы музыканы тыңлағанда үҙеңдә ниндәйҙер ауыр бер нәмәнән бушап ҡалған кеүек тояһың. Күңелеңә яҡтыраҡ, йылыраҡ була. Кешеләр тулыраҡ күренә.

Мусоргскийға күсәбеҙ!

Ул халыҡсан композиторҙарҙың иң ҙурыһы. Ижады халыҡты азат итеү темаһына арналған. Мусоргский идея яғынан Белинский, Чернышевский, Добролюбовтың уҡыусыһы. Аңлы реалист.

Музыка дәресенән һуң В. Дементьев инеп, семинарҙа ҡатнашырға саҡырҙы. Уға Тихонов тигән музыка белгесе етәксе икән. Дәүлигә был хаҡта яҙҙым. Уға үҙемдең шиғырҙарҙы (40 бит) яҙып ебәрҙем. Халыҡ көйҙәрен йыйнау тураһында ла яҙҙым.

8 апрель, шаршамбы.

Бына өсөнсө көн инде яңы метронан йөрөйбөҙ. Иҫ киткес ер аҫты һарайҙары минең күҙ алдында төҙөлдө. Элек Мәскәү йылғаһының өҫтөнән китә инек. Хәҙер йылға беҙҙең өҫтә ҡала! Смоленск станцияһын үтәбеҙ ҙә Арбаттан ҡалаға сығабыҙ. «Тере баҫҡыстарҙан» күтәрелеп етеү менән, ҡаршыла художник Г. Опрышко мәрмәрҙән эшләгән Иосиф Виссарионович тере кеүек баҫып тора.

9 апрель, кесаҙна.

Институтта сәғәт 1-ҙә халыҡ-ара хәл тураһында лекция башланды. Лекциянан алда Клара Фәйрузованан хат алһам да, уҡый алманым. Стәрлетамаҡ детдомынан. «Үлемһеҙ ҡыҙ»ҙы уҡығандар икән. Ләлә Биишеванан да хат алдым, яҡшы хат. Күсерәм.

«Һаумы, Рәми!

Бына тағы ла уҡыу башланды. Материалдар бик тығыҙ. Көн һайын тип әйтерлек дүрт пар уҡыйбыҙ. Көн һайын практик занятиелар. Әҙерләнеп өлгөрөүе ҡыйын. Шулай ҙа артта ҡалырға тырышылмай.

Практика яҡшы тамамланды. Беҙҙең эшкә яҡшы баһа бирҙеләр. Көҙгә лә үҙҙәренә килеүҙе һорап ҡалдылар. Ләкин был практика тик үҙебеҙҙе һынау ғына булды. Унда үҙебеҙҙең бик күп хаталарыбыҙҙы күрҙек һәм шулар өҫтөндә эшләргә мөмкинлектәр алдыҡ. Ҡайһы кешеләр был практиканан һуң үҙҙәренең яңылыш юл һайлағандарын күрҙе, күпселек дөрөҫ йүнәлеш алғанына шатланды. Практика мәктәп эшенең ни дәрәжәлә ҡатмарлы икәнен көҙгө кеүек асыҡ күрһәтте.

Һинең Зоя тураһында яҙған мәҡәләңде уҡып сыҡтым, ул миңә бик ныҡ тәьҫир итте. Һәм һиңә, бер нәмә лә һөйләмәгәнең өсөн, үпкәләп тә ҡуйҙым.

...Бөгөн генә Алғушаев миңә һинең сәләмеңде тапшырғайны. Сәләм өсөн рәхмәт. Һиңә Флүрә апай сәләм әйтә.

Хат көтөп, класташың.

4 апрель, 1953 йыл».

Был арала Рәшит Ғирфановтан, Ғәзизә Зәйнуллинанан хат алдым. Дилара өндәшмәй. Инде ул, бәлки, бер ҡасан яҙмаҫ. Шулай килеп сыҡты эштәр. Бер ҡасан да күреп һөйләшмәгән кешеләр нимәләр хаҡында ғына яҙмышманыҡ. Ярай әле, мин уның хаттарын юғалтмағанмын, элекке көндәлектәрҙә һаҡлана улар. Минең уның кеүек үҙенсәлекле, алсаҡ күңелле ҡыҙҙы бер ҡасан да осратҡаным юҡ ине. Хатта мин уның менән ныҡ ҡына мауыҡтым. Ләкин мин бер нисек тә киләсәк тураһында уйламай инем. Ә ул артығыраҡ уйланды булһа кәрәк. Ҡазанға саҡырҙы. Ысынлапмы, юрыймы — белмәйем. Мин Ҡазанға китергә лә уйлағайным. Ләкин Башҡортостан буйынса тәүге

сәйәхәтем уйҙа күптән йәшәй ине. Әсғәт (Әшрәпов) менән райондарҙа йөрөп, фольклор йыйнаным.

Хаттар туҡтап торҙо ла, мин Мәскәүгә килгәс, тағы йөрөй башланы. Яңы, 1953, йыл етеп килә ине. Диларағa мин шаярыу ҡатыш хат яҙҙым. Әлбиттә, ул шаярыу ғына түгел ине. Бер өлөшөн күсерәм.

Яңы йыл әкиәте

Яңы йылдың яңы шатлыҡтары,
Яңы бәхет менән, Дилара!
Ҡаршы алам уны һинең менән,
Айырһа ла беҙҙе ил-ара.
Күрмәнем мин күҙем менән,
Күңелем менән күрәм үҙеңде.
Оҙаҡ-оҙаҡ күрмәй торған кеүек,
Бик һағындым шаян һүҙеңде.
Ҡайһы урамылыр ҙур Ҡазандың...
Беҙ киләбеҙ ҡарға күмелеп.
Ут нурында ҡарҙар күбәләктәй
Һинең кеүек оса елпенеп.
Кем белгән һуң алсаҡ урман ҡыҙын
Осратыр тип улы тауҙарҙың?
Йылдарҙың бер йылы! Рәхмәт һиңә,
Юлыма һин шатлыҡ тыуҙырҙың!
Татлы хыял булдың һин, йәшәйһең
Йөрәгемдә минең, күҙ ҡарам.
Бәхетем дә, шатлығым да минең,
Диларам, һин минең Диларам...

Сәләм менән Рәми.

Мәскәү. 30 декабрь, 1952.

Һәр нәмәнең үҙ логикаһы бар. Тик аҡыл менән генә эш итеп булмай. Таш төшкән ерендә ауыр. Әгәр мин тик аҡыл менән генә эш итһәм, ғөмүмән, Дилара менән танышмаған да булыр инек. Беҙҙең танышыу ҙа бик сәйер генә. Мин уның бер татар календаренә яҙған шиғырын бик оҡшаттым. Шул турала уға үҙемдең фекерҙе яҙҙым да ебәрҙем: Дилара Зөбәйероваға, пединститутҡа, Ҡазанға. Һәм бер ниндәй ҙә яуап алманым. Мин борсолманым. Ләкин мин генә түгел, башҡа кешеләр ҙә йүләрлек эшләй икән был донъяла. Бөтөнләй онотолоп бөткәс, инде мин институттың икенсе курсында уҡый башлағас, бөтөнләй көтмәгән бер көндә Дилара миңә хат яҙа!

Уҡып шатландым. Һәм ғәжәпләндем! Ҡыҙыҡ бит донъя! Кем ул? Нимә менән ҡыҙыҡһына? Ни менән йәшәй? Ҡайҙа йүнәлгән уның юлы? Кемдәр менән аралаша? Тормошонда нимәләр күргән? Ниндәй ғаиләлә нисек тәрбиәләнгән? Нимәләр тураһында хыяллана? Кемде ярата ул? Ни өсөн ярата? Ни өсөн ул минең бынан бер йыл элек яҙған һүҙгә иғтибар итергә тейеш булған? Бына шундай икһеҙ-сикһеҙ һорауҙар минең башҡа килде лә барыһын да белергә теләнем. Яуапты икенсе йылға ҡалдырып тормайынса, бик тиҙ яҙып ебәрҙем. Бына бер заман туҡталмайынса һөйләшә башланыҡ. Хат-хәбәр аҙға ғына ла килмәй торһа, миңә ҡыйын һәм нимәлер етмәй торған булып китте. Мин дә уға, Отелло Дездемонаға үҙенең тормош юлын һөйләгән кеүек, бөтә үткәндәремде яҙҙым. Беҙ бик дуҫлаштыҡ һәм бер-беребеҙҙең тормошо менән йәшәй башланыҡ. Ул миңә үҙенең дуҫтары тураһында яҙҙы. Һаҙи Таҡташ тураһында ла һөйләне. Уның тураһында яңы нәмәләр яҙыуы, уның Аван исемле художник улы булыуы мине бик шатландырҙы. Аван тураһында ул бик күп йылы һүҙҙәр әйтте. Уның атаһына бик ныҡ оҡшаған булыуы менән дә таныштырҙы Дилара. Авандың ауырыуы, ул миңә таныш булмаһа ла, мине бик борсолдорҙо. Ләкин мин бөтөнләйгә әле Дилараның Аван өсөн дә, минең өсөн дә уртаҡ ҡәҙерле икәнлеген белмәгәйнем. Һәм Дилараның һуңғы хаты миңә көтөлмәгән яңылыҡ алып килде!

Ҡышҡы имтихандар ҙа үтеп китте. III һәм IV курстар практикаға таралды. Мин дә үҙемдең Башҡортостанға ҡайтып киттем. «Совет Башҡортостаны» газетаһына ебәрҙеләр. Мин ғүмеремдә тәүге ҡабат газетала эшләй башланым. Был, ғөмүмән, минең тормошомда тәүге эш башлауым.

15 февраль.

Юҡ, Дилара, мин бит һис тә һиңә
Ул бәхетте тәҡдим итмәйем.
Ышанмайым юлдар ҡауышыуға,
Бергә булыуҙы ла көтмәйем.
Хаҡлы түгел быға мин, Дилара,
Күрмә минең тороп ҡалғанды.
Мин бит көсһөҙ түгел, миңә шатлыҡ —
Һинең менән күреү Аванды.
Ул һауығыр, тиҙҙән эшкә ҡайтыр,
Ул шағиры булыр эшенең.
Тик һин миңә ҡалдыр ҙур дуҫлыҡты,
Йырын алма йырсы кешенең.
Мин үҙемде бала кеүек тоям,
Әгәр һине уйҙа уйлаһам.

Йөрәгемә йылы шатлыҡ тула —
Әллә ул көс, әллә ул илһам?
Әллә һин тик тиле хыялымдың
Ваҡытлыса килгән емеше?
Әллә мәңге янып ҡала торған
Йөрәгемдең һүнмәҫ өлөшө?
Әллә дуҫлыҡ, әллә мөхәббәт?
Тик килһәң һин минең күҙ алдыма,
Миңә яҡшы, миңә гел рәхәт...

Сәләм менән Рәми. Өфө.

Ошонан һуң Дилара яҙманы. Ләкин мин уның тураһында уйлауҙан туҡтаманым.

Ғаилә тураһында ла мин ныҡ уйландым. Үҙем теләгән ғаилә ҡора алмау мине бик ҡурҡыта. Сөнки һаманға тиклем минең ышаныслы бер кемем дә юҡ. Тик йөрөйөм шунда! Миңә инде бик күп йәшәгән кеүекмен. Минең хәҙер бик атай булғым килә, үҙемдең балаларымды күргем, уларҙы тәрбиәләгем килә. Ҡайһы саҡта мин үҙемде атай кеше итеп күҙ алдыма килтерәм дә ҡысҡырып көлөп ебәрәм! Миңә бик күп балаларым атай тип өндәшәләр!!! Ысынлап та, мин бер саҡ атай булырмын микән? Ә кем һуң ул әсә кеше? Бармы һин? Ҡайҙа? Кем? Их, ҡыҫыр инем күкрәгемә!..

10 апрель.

Төнгө сәғәт 1.20.

А. И. Герцендың «Кем ғәйепле?» романын уҡыным. Тәүҙә хаттарын, көндәлектәрен уҡыным. Иң беренсе мине Огарев менән булған бөйөк дуҫлығы ҡыҙыҡтырҙы. Күпме көс Герцендә! Уҡыған һайын фекерләүең киңәйә, тәрәнәйә. Уның ҡайһы бер афоризмдары миңә сәйер тойола. Уҡыу ыңғайында ҡайһы берҙәрен күсереп барасаҡмын.

«Холодный мечтатель неисправим: он останется навеки веков ребенком!»

«Гордость бесплодна, потому что ей ничего не нужно вне себя!!!»

«Человек до ста лет дитя! Да если б он и до пятисот лет жил, все был бы одной стороной своего бытия дитя. И жаль, если б он утратил эту сторону, — она полна поэзии. Что такое именины? Почему в этот день ярче чувствуется горе и радость, нежели накануне, нежели потом? Не знаю почему, а оно так. Не только именины, а всякая годовщина сильно потрясает душу».

Бына шундай уйланыуҙар Герценда бик күп. Герцен бик үҙенсәлекле, һәм ул ҙур психолог. Геройҙарҙың эске донъяһы, уларҙың кисерештәре, фекер йөрөтөүҙәре менән һин кисергән һәм фекер йөрөткән кеүек булаһың.

Хәҙер ятҡан килеш бер ярты сәғәт кенә һүҙлек уҡыйым да йоҡлайым.

11 апрель.

Иртән тороуға ап-аҡ ҡар яуған. Өшөп уяндым. Бына һиңә яҙ! Кис кенә тәүге йылы ямғыр яуа ине. Апрель ысынлап та алдаҡсы, ышанысһыҙ ай.

Бөгөн «Правда»ла З. Кедринаның Мохтар Ауэзов тураһында яҙылған тәнҡиттең Ҡаҙағстанда тикшерелеүе тураһында бәләкәй генә хәбәр бар ине. 30 ғинуарҙағы ул мәҡәләне мин уҡымағанмын. Подшивкаһын алып уҡып сыҡтым. Абайҙың рус телендәге һайланмаларын алып ҡайттым. М. Ауэзовтың китапҡа Абайҙың тормошо һәм ижады тураһында яҙылған мәҡәләһен һәм Леонид Соболевтың «Поэт-мыслитель» тигән баш һүҙен уҡып сыҡтым.

Абай афоризмдары.

Человек — дитя своего времени. Но если ты дурен, не обвиняй в этом своих современников.

Сын своего отца — недруг народу, сын народа — твой друг.

Делись тайнами с тем, у кого нет друзей, дружи с тем, у кого много друзей. Избегай того, кто беззаботен, будь с тем, кто опечален.

Гнев без воли — вдовец, ум без печали — вдовец, любовь без верности — вдова, ученый без последователей — вдовец.

Поможешь пустому человеку — только себе повредишь.

Кричащий в гневе — смешон, молчащий в гневе — страшен.

Плохой друг — твоя тень: в солнечный день беги — не убежишь, в пасмурный день ищи — не сыщешь.

Теряет надежды лишь безвольный. Ведь истина, что в мире нет ничего постоянного, значит, и зло не вечно.

Доброжелатель твой лишь ты сам.

Абайҙың шиғырҙарын уҡып ултырғанда Рафаэль (Сафин) инде лә:

— Әйҙә, Рәми, киноға барайыҡ, — тине.

Беҙгә Дамдинов та ҡушылды. Төн ҡараңғы ине. Батҡаҡҡа бата-сума Чоботовоға сыҡтыҡ. Клубта үҙебеҙҙең бик күп егеттәрҙе осраттыҡ. «Анна Каренина» тигән фильм ҡараныҡ.

Ҡайтҡанда йондоҙҙар ҡараныҡ (мин үҙем был эште яратҡас, һәр саҡ башҡаларҙы ла мәжбүр итәм).

— Давай, йырлайыҡ, — тине Рафаэль. «Каруанһарай»ҙы яңғыратып ебәрҙек. Төндәге тауыш урманда ныҡ яңғырай.

Гүзәл, иҫ киткес матур йыр! Киң һәм моңло көй! Бормаланып-бормаланып аҡҡан саф йылға кеүек миңә был йыр.

Рафаэль яҡшы йырлай. Уның бик ҙур йыр культураһы һәм матур, моңло тауышы бар. Роялдә лә башҡорт йырҙарының байтағын башҡара ала, тик күбеһенең һүҙҙәрен белмәй. Беҙ бик йыш киске аштан һуң ашханала рояль яныңа йыйылабыҙ ҙа, башҡорт, татар һәм рус көйҙәрен тыңлап, оҙаҡ ҡына ултырып алабыҙ. Шакир (Янбаев) йыр башлап ебәрә. Рәйес тә (Низамов) күңеле төшкән саҡта ҡушыла. Ә мин һәр саҡ моңғорлап ултырам инде ул! Рафаэль уйнай ҙа, йырлай ҙа. Бик бирелеп, музыканы бөтә йөрәге, йәне-тәне менән тойоп, оҫта итеп уйнай. Туған моңдар беҙҙе үҙ-ара нығыраҡ бәйләй, уның тәьҫирендә беҙ бер-беребеҙгә яҡын һәм йылы булып китәбеҙ.

Беҙҙең шулай шаулашып ултырғандар һуңынан бит иң матур иҫтәлектәргә әйләнәсәк! Бергә уҡып йөрөгән көндәр тормошобоҙҙағы иң яҡты, иң бәхетле көндәр булып ҡаласаҡ. Был студентлыҡ йылдары беҙҙең киләсәктә әҙәбиәттә бергә эшләйәсәк көндәрҙе әҙерләй. Әҙәбиәт институтында уҡыусы әҙәбиәтселәрҙән беҙ бит — тәүге студенттар! Инде үҙебеҙҙең ғаиләгә Марат Кәримовты көтәбеҙ. Ул — һалдат. Хаттарын, шиғырҙарын бергәләп уҡыйбыҙ, тикшерәбеҙ, Рафаэль уға яҙып та тора. Маратҡа беҙҙең өмөт бик ҙур. Шуға ла көтәбеҙ уны. Прозаиктар, тәнҡитселәр, драматургтар кәрәк. Ғабдулла ағайҙы (Әхмәтшин) алыштырыусы булырға тейеш. Ул Әҙәбиәт институтын беренсе тамамлап сығыусы драматург. Быйыл ул беҙҙән китәсәк. «Эх, алмағастар» пьесаһын дипломға әҙерләп, бер көндә беҙгә уҡып сыҡты. Фекерҙәребеҙҙе әйткән булдыҡ.

Миңә лә сират етеп бара бит! Уҡып бөтөргә ике йыл ғына ҡалды. Ғабдулла ағай артынан мин дә осасаҡмын! Хәҙер инде миңә шиғырҙарымдың тематикаһын да киңәйтеү яғын уйларға, нығыраҡ эшләргә кәрәк. Әле үҙемә оҡшағанырактарын бер дәфтәргә күсереп яҙам. Тәүге йыйынтыҡтың ул нигеҙе булырға тейеш. Өфөлә саҡта Союзға инеп, Мостафа ағай менән байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Мин уға «Салауат батыр»ҙы уҡыным. Әкиәтте оҡшатманы ул. Теле генә һәйбәт, тине. Яңынан тәрән итеп уйларға ҡушты. Ә шиғырҙарҙың тематикаһы тар булыуын әйтте. Үҙенә оҡшағандарын һайлап алып, газетаға ҡалдырып китергә кәңәш бирҙе. Мин ҡалдырҙым, тик редактор Ғафаров уларҙың ҡайһы бер урындары менән килешмәне. Бер төндә беҙ уның менән оҙаҡ бәхәсләшеп ултырҙыҡ. Ул шиғырҙарға редактор булып ҡына, газета өсөн яуаплылыҡ иҫәбенән сығып, үҙен ел-ямғырҙан һаҡлап ҡалыу

яғынан ҡарап килә. «Дөрөҫ» шиғыр булһын тик, ә шиғыр шиғыр булмаҫҡа ла мөмкин! Миҫалға Мәжит Ғафуриҙың «Ленинизм — минең маяғым» тигән шиғырын килтереп, үрнәк итеп ҡуйҙы. Ләкин миңә был риторикаға алып бара торған үрнәк булып тойола. Ғафуриҙан өйрәнергә, бик күп өйрәнергә кәрәк, ләкин уның тарыраҡ булыуын да күргә кәрәк. Ҡыҫҡаһы, Ғафаров менән мин килешмәнем. «Шулай ҙа үҙ һүҙлерәк һин, ҡустым. Быныңяҡшыға илтмәүе бар», — тине ул.

Шиғыр газета битендә ҡарасҡы булып, уҡыусыларҙы ҡурҡытып торорға тейеш түгел. Был уҡыусыларҙы шиғырҙан ситкә этәрә. Шуның өсөн дә бит хәҙер «газета теле» тип аталған термин да бар. «Газета шиғыры» тип йөрөтөлгән уҡыусыһыҙ шиғырҙар ҙа бар.

Мин уға үҙемдең тәүге очеркты — Зоя Космодемьянская тураһындағы «Үлемһеҙ ҡыҙ»ҙы уҡыным. Үҙенә алып ҡалды. Икенсе көндө корректураһын бирҙеләр. Башта Игебаев уҡып сыҡҡан. Корректорҙар менән бер нисә мәртәбә бергә уҡыныҡ, һәм иртән Өфө урамдарында «Үлемһеҙ ҡыҙ» витриналарҙа һәм «Совет Башҡортостаны» йәбештерелгән ҡоймаларҙа тора ине. Кешеләрҙең туҡталышып уҡығандары мине бик шатландырҙы. Күп итеп һатып алдым да детдомдағы, интернаттағы таныштарға, иптәштәргә, тәрбиәселәргә ҡалдырып киттем. Килгәс тә Шакир, Рәйес, Рафаэль менән бергәләп уҡыныҡ. Тик был саҡта инде мин үҙемдең был очеркты яратып туҡтағайным, шуға үҙемдең уҡығым килмәне. Шакир уҡыны. Юҡҡа ғына ул шәп диктор булмаған икән! Башҡортостанда уның һөйләгәнен бик яраталар ине. Ғөмүмән, көсһеҙ әйбер ҙә, Шакир уҡығас, һәйбәт ишетелеп китә ала.

Рафаэль менән мин кинонан ҡайтыуға, Рауил килгәйне. Минең барып сыҡмауға аҙыраҡ һүҙ әйтеп алды. Үҙем дә белмәйем, мин нисектер уға һис тә бер туған ағайға оҡшамаған кеүекмен. Бер ҙә бер туған кешеләр һымаҡ һөйләшеп йөрөгәнебеҙ ҙә юҡ. Хат аша һөйләшкәндә генә мин уны бик яратам һәм туғаным бар икән тип уйлайым. Нисектер, ул мине бик ҡоро кеше һәм ҡаты бәғерле, уҫал итеп күрәлер кеүек. Ул мине яраталырмы-юҡмы, ләкин мин һәр саҡ уның миңә ниндәйҙер ҙур хөрмәт менән ҡарағанын һәм минән бер аҙ ҡурҡҡанын тоям. Бәлки, был минең үҙемә генә шулай тойолалыр?

Һуғыш ауырлығын беҙ уның менән көн һайын бәләкәй арбаға егелеп, йә бесән, йә утын, йә һалам, йә бәрәңге, йә сыбыҡ итеп тарттыҡ. Әсәйҙән миңә уның ғәйебе өсөн дә бик йыш эләгә ине. Беҙ һәр саҡ бергә йөрөнөк. Бергә емеш-еләк йыйҙыҡ, утын ҡырҡтыҡ, баҡсаны кәртәләргә сыбыҡ ташыныҡ,

ер ҡаҙҙыҡ, ферма малдарын көттөк, колхоз тайҙарын ҡараныҡ, башаҡҡа йөрөнөк, бергә хатта урлаштыҡ. Бер генә нәмәне мин ҡушҡанса эшләмәй икән, уға мин сикһеҙ аяуһыҙ булдым. Туҙҙырғансы һуғып ебәрә инем... Еләк йыйғанда бер генә еләкте булһа ла ҡапҡанын күрһәм, асыуым килә торғайны. Сөнки мин үҙем һауытым тулмайынса бер бөртөк тә ҡапмайым һәм өйгә ниндәй ҙур һауыт булһа ла тултырмайынса ҡайта алмайым. Тултырырға! Һис һүҙһеҙ! Инәйҙе көйҙөрмәҫкә, гел генә ҡыуандырып торорға тырышам. Рауил уйнарға сығып китһә, елтерәтеп алып ҡайтып китәм. Ә ниңә уға уйнап йөрөргә? Баҡса уталмай ҡалһынмы? Ҡыш бәрәңгеһеҙ аҫҡа сыулап ултырырғамы? Яҙ сәсерлек бәрәңге булмаһынмы? Йорт-ҡура тишек торһонмо? Хатта мин инәйемдең ҡоро утынға тип ситән-фәләнде һурып алып китеүенә лә асыуым килә. Ә синдек мөйөшөн ҡарағай сыраҡ тип тумырып алыуына күҙ йәштәрем менән илайым...

Аҙ ғына ваҡытым булһа, колхоз идараһына инәм дә ололар һөйләшеүен тыңлап ултырырға яратам. Колхозда эшләгем килә. Ләкин инәйем мин эшләгән дә етер, ти. Ә мин ат һарайына барып, Хәйруллаға аттар тышарға булһа ла, эсерергә булһа ла ярҙам иткем килә. Ә Рауил килеп ҡыҫылып йөрөһә, ҡыуып ҡайтарам: «Бар, ҡайтып, бәрәңге ҡаҙып, йыуып ҡуй! Усаҡҡа яҡ!»

Ҙур бер китап яҙырға мөмкин ул көндәр хаҡында!

Ниндәйҙер бер бик иртә тормошҡа ингән бала булдым мин. Һуғыш бөтөп, Өфөгә сығып китҡәс ҡенә Рауилды яраттым һәм бик йыш иҫкә төшөрөп һағына, үкһеп-үкһеп илай торғайным.

Йылдар үтте, Рауилды Өфөгә үҙем тәрбиәләнгән интернатҡа урынлаштырҙым. Бергә лә йәшәнек. Ләкин мин һаман да эшкә сумған була торғайным. Детдомда — детсовет председателе, бүлмәлә — староста, класта — комсорг. «Йәш гвардия» мәктәп газетаһының редакторы, әҙәбиәт түңәрәгенең председателе.

1947 йылдан бирле мәктәптә ҡулъяҙма журнал сығарҙым. Уны үҙем яҙам, әҙерләйем. Эпиграммалар, төрлө фельетондар яҙам. Башҡаларҙың да шиғырҙарын эшләйем. Етмәһә, әҙәби түңәрәктең «Туған тел» газетаһын да сығарам. Редколлегия ағзалары Сәғит менән Рифҡәттән бик йыш ҡына ҡәнәғәт булмайым. Бәрелештәр булып ала. Рифҡәт менән, бергә эшләй торғас, дуҫлаштыҡ, ауылдашым Сәғит менән иһә алыҫлаштыҡ. Унан һуң тарих түңәрәгенең газетаһын да Фәзимә Солтанова миңә сығарырға ҡуша ине. Иртә менән малайҙарҙы зарядка яһаттырам. 9 класта уҡығанда, төшкә тиклем аэроклубта йөрөнөм. Төндәрен кочергаркаға инеп ултырып бик оҙаҡ яҙынам йә уҡыйым. Уҡылған бик күп әйберҙәрҙе күсереп яҙам.

Хәҙер уларға ҡарарға ҡурҡыныс — бер һандыҡ тулып ята. Көндәлек тә алып барам.

Мәктәптә саҡта мин Чернышевский һәм Добролюбов менән бик ныҡ мауыҡтым. Уларҙың тәьҫире миңә бик ҙур булды. Рахметов кеүек булыу тураһында уйлап, бик сығырға тырыша инем. 40 градуслы һыуыҡтарҙа ла иртә менән тышта зарядка яһарға күнектем. Тәнде ҡар менән йыуа инем. Ә йәй көндәре ҡоҙоҡтан алған һыу менән ҡойонам йә фонтан аҫтында торам. Өҫкә кеймәйенсә, яланбаш йөрөйөм. Күп ваҡыт турникта булашам. Миңә иптәштәр:

— Рахметов, — тип өндәшә башланылар. Был миңә бик оҡшай ине.

Тәрбиәселәр минең менән дуҫ булһа ла, төндә бик оҙаҡ ултырғаным өсөн уларға һүҙ тейгәнлектән, бик йыш умывальныйға инеп бикләнәм. Иң яратҡан дуҫым Усманов Ширҡәт мине ҡайҙа булһа ла йәшерә! Бүлмәләге күп кенә иптәштәр мине төрлө һүҙҙәрҙән һаҡларға тырыша. Ә ҡайһылары телемдән, эпиграммаларымдан ҡурҡып, минең әйберҙәрҙе яндырыу дәрәжәһенә лә барып етте.

Минең бәләкәй генә тормошомда ҙур хәлдәр, ҙур ваҡиғалар күп булды. Әлбиттә, йүләрлектәр ҙә, аҡылһыҙлыҡтар ҙа булды. Улары өсөн һуңынан бик һыҙланырға тура килһә лә, был тормошто үтмәгән булһам, яҙа ла алмаған булыр инем. Үҙемсә мин көрәшеп йәшәнем кеүек һәм уның өсөн үкенмәйем. Шиғырҙарым шул үҙемдең бәләкәй генә көрәшемдең ҡоралы булып тыуҙы. Мин быны үҙемдең иң ҡиммәтле сифатым тип иҫәпләйем. Бер ҡасан да шиғыр өсөн шиғыр яҙманым. Улар минең мөхәббәтем дә, ҡайғым дә, шатлығым да ине. Уларҙа мин балҡыным һәм һүндем, һыҙландым һәм рәхәтләндем. Уларҙа минең күҙ йәштәрем һәм йөрәгемдең утлы киҫәктәре бар. Һәр шиғырҙа мин көсөмдән килгән тиклем нимә лә булһа әйтергә, нимә лә булһа күрергә, фекерҙәрем менән уртаҡлашырға теләнем. Миңә яҙмай тороу һис тә мөмкин түгел ине. Яҡшы итеп яҙыу өсөн мин ҡот осҡос күп яҙҙым. Төндәр, көндәр буйы яҙҙым.

Рауил минең йәшәүҙе күрҙе. Мин элекке Рәми түгел инем инде. Шуға күрә лә ул миңә ололау менән ҡарайҙыр инде.

Мәскәүгә килдем. Шул тормошто үтмәйенсә, бында килә алмаған булыр инем. Кем белә, әгәр ҙә мин булмаһам, Рауил әле бына шулай бында уҡып та ултырмаҫ ине? Ҡыҙыҡ бит тормош!

Өҫтәл тартмаһынан үҙемдең яңы төшкән рәсемде алдым да артына былай яҙып ҡустыға бүләк иттем:

«Рауил! Һиңә һәр саҡ иғтибарһыҙ, һалҡын булған, аҙ һүҙле, уҫал ағайыңдан, ниндәйҙер бер яратыу менән, бергә йәшәгән

йылдар иçтәлеге. Мәскәү. Рәми». Рауил көлдө һәм барыһы ла дөрөç тигән ҡараш менән ҡараны. Йөрәгем нисек ҡуша, шулай яҙҙым. Мин бөтә кешеләргә шулай булдым һәм буласаҡмын. Әлбиттә, был миңә тормошомда бик ҙур бәхетһеҙлектәр ҙә килтереп сығарасаҡ. Ләкин мин кеше булырға теләйем. Барыһын юғалтҡан бәхетһеҙ түгел, кешелеген юғалтҡан бәхетһеҙ.

12 апрель, ял.

Мин үҙемдең файҙалы буласағыма ышанам. Был минең йәшәүемдең бөтә маҡсаты. Бер ниндәй ауырлыҡ та был маҡсатҡа барыуҙа мине ҡурҡытмай. Дин менән ағыуланған кеше нисек итеп алланың көҙрәтенә ышанған булһа, мин нәҡ шул ышаныс менән хеҙмәттең иң ҙур көс икәнлегенә ышанам.

13 апрель.

Һәр кешенең үҙенә күрә йомшаҡлығы була. Үҙебеҙҙең ауылдағы умарта ҡарауылсыһы булып эшләгән бер һуҡыр апай иçкә килеп төштө. Лампаны ҡабыҙып, онотмаç өсөн яҙып ҡуйҙым. Физзеямал апай — умартасы. Ул бурҙарҙан ҡурҡа. Мин ҡурҡмайым. Ләкин мин уның экиәттәрен тыңламай ҡалыуҙан ҡурҡам. Шуның өсөн гел бергәбеҙ. Ул апай юҡ инде...

Семинарҙа бөгөн Ольга Берггольцтың «Знамя»лағы һуңғы шиғырҙары тикшерелә. Василий Чалай(Чегаев) сығыш яһай.

Чегаев шиғырҙарҙы өçтән-мөçтән генә ялмап сыҡты, шағирәнең үҙенә генә хас сифаттарын асып күрһәтмәне. Миклай Казаковтың сығышынан һуң хәҙерге поэзияның торошо тураһында бәхәс сыҡты. Шиғырҙы уҡыусылар бик аҙ булыуы, һатылмай ятҡан китаптар тураһында һөйләштек.

Өс хат алдым! Диларанан! Фәзизә Зәйнуллинанан һәм һеңлем Мөршиҙәнән. Өсөһө лә ҡыҙыҡлы. Диларанан хат көтмәй инем инде. Тик бик сәйер хат. Аптырап ҡалдым:

«Рәми! Оҙаҡ яҙмауым өсөн ғәфү ит. Шулай кәрәк ине. Ой, Рәми, шундай насар пессимист мин. Ой, насар. Минең йәшәйһем килмәй. Тик Ватаныма хеҙмәт итмәй китеүем генә ауыр. Ә нәни ғүмерем аҙ ғына ла йәл түгел. Ә йәшәйһе килә. Ниндәй матур бит ул тормош.

Рәми, хуш.

Зоя тураһында яҙыуың бик, бик оҡшаны, шығырың ғәжәп матур. 9 апрель, 1953 йыл».

Шул ғына хаты. Белмәйем, ни булған уға? Бер нисек тә аңламайым. Кешеләрҙе, тормошто һөйгән кеше бер нисек тә пессимист була алмай. Үҙен һөйөүсе, кешеләр шатлығы менән шатлана белмәгән кеше генә пессимист! Сөнки ул үҙе өсөн

генә йәшәй. Тормошо бәләкәй кеше генә бәләкәй шатлыҡлы һәм ул юҡ ҡайғыны ҙур итеп күреүсән, һыҙланыусан, илаусан, һыҡраныусан.

Мөршиҙәнең хатынан:

«Рәми ағай! «Мәңге бергә» тигән шифырыңды миңә ятларға бирҙеләр. Оҙаҡламай Сталин бабайға ҡарата сбор була. Сталин бабай үлгән көндө мәктәптә митинг булды. Шифырыңды бик яратып ятланым. Ағай, тағы ла ниндәй шифырҙар яҙҙың?

Һине яратыусы туғаның Мөршиҙә. Зөфәр, Асрар ағайҙарҙан, Саимә, Ғәзимә апайҙан бик күп сәләм. Рауил ағайыма күп сәләм.

Арҡауыл. 5 апрель, 1953 йыл».

14 апрель.

«Дилара! Нишләйһең һин? Йүләрләнмә. Нишләп һин пессимист була ти? Мин хатта пессимист һүҙен яҡшы белһәм дә, һүҙлектән ҡарарға мәжбүр булдым: пессимизм үҙҙәренең үлемен, уның килеп етеүен тойоп һуҡрана торған реакцион синыф кешеләренең генә ҡарашы. Ул хеҙмәт кешеләренең ҡанын һөлөк кеүек һурып, ҡыҫала кеүек ҡыҙарған кешеләр философияһы. Сөнки улар кешеләрҙе, тормошто, ижад итеүҙе һөймәй, үҙҙәрен генә яраталар. Улар үҙҙәренең эшһеҙлектәренән шундай.

Мин был һүҙҙәр менән һүнгән өмөт, илау-ыҡтау менән тереклек итәм. Ә һиңә ни ҡалған, Дилара? Нисек һиңә оят түгел?

Һиңә мораль уҡырға йыйынмайым. Әгәр белгең килһә, һиңә ҡарағанда мин тормоштоң ауырлығын өс мәртәбә артығыраҡ та күргәнмендер, бәлки, күберәктер ҙә... Һинең һүҙҙәрҙе уҡыһас, атайымдың һуңғы ҡараш ташлауы күҙ алдыма килде. Ә күпме, күпме кешеләр беҙ йәшәгән тормош өсөн ғүмерҙәрен ҡорбан итте. Әле бер нәмә эшләргә өлгөрмәйенсә, тормошҡа шундай мәғәнәһеҙ һәм оятһыҙ ҡарарға мин иң, иң ауыр ваҡытта ла булдыра алмаҫ инем. Кешеләр өсөн ҡыуанмаған йәндең генә шатлығы бик бәләкәй була! Ул кешеләр бәхетенә тарһына. Йәшәү уға күңелһеҙ. Сөнки уның йәшәүе үҙе өсөн генә. Нисек итеп ундай кеше «Ватанға хеҙмәт итмәй китеүем генә ауыр» тиергә мөмкин? Ышанмайым. Һүҙҙәреңә ышанмайым, Дилара. Бәлки, мине үртәр өсөн генә яҙғанһыңдыр? Ләкин мин һинең һәр һүҙеңә һис тап төшмәгән сабыйға ышанған кеүек ышандым һәм ышанғым килә. Мин һинең бөтә ҡайғыңды уртаҡлаша алырмын кеүек. Һине йыуатырлыҡ көсөм дә бар һымаҡ. Ләкин пессимист менән минең тамсы ла уртаҡлығым юҡ. Ихтыяр етмәүҙән генә әйтелгән фекер, дөрөҫөрәге, бер ҡысҡырыу ғына хатың. Һин бик яҡшы күңел-

леһең, Дилара! Бала күңеллеһең. Ләкин бер аҙ ихтыярһыҙраҡ. Ихтыяр яҙышҡан кешегә иң, иң кәрәкле сифат. Уны үҙеңдә бөтә ғүмерең буйы тәрбиәләргә кәрәк. Минеңсә, һиңә тормоштан, халыҡтан айырылып, кабинетта ултырыуың тотҡарлыҡ итә. Кабинет — яҙыусының урыны түгел. Унда икенсе кеше ултырырға тейеш. Һин түгел. Ҡайҙа иң ҙур яуаплылыҡ — шунда яҙыусының тормошо. Йәш кешегә үҫергә, бик күп матур кешеләрҙең яҙмышы менән байырға кәрәк. Дилара, былар һиңә билдәле бит инде: ниңә үҙ-үҙеңде быуып тораһың? Һиңә бит ике йыл ғына булһа ла хәбәрсе булып эшләргә кәрәк. Юҡһа, мин һинең өсөн ҡурҡам, Дилара. Әгәр хәлемдән килһә, һине кабинеттан һөйрәп сығарып, тормошҡа хәбәрсе итеп ҡыуыр инем!!! Ысын, ысын! Сөнки һин унда үҙең ҡатнашып, үҙең яныҫ йөрөйәсәкһең. Ә үҙе янмаған кемде яндырһын инде?!

Үҙемдең тормош тураһында яҙып тормайым. Сөнки һин үҙеңдеке тураһында бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәйһең. Тимәк, минеке менән дә ҡыҙыҡһынмайһың.

Дуҫтарса сәләм менән Рәми. Мәскәү.

Аванға ҙур сәләм. Нисек уның сәләмәтлеге? Барып хәл белешәһеңме? Яҙ, йәме.

Бик уҫал яҙылды булһа кәрәк. Ярай инде. Ҡабан күленә төшмәҫһең әле, моғайын».

15 апрель.

Институтҡа барманым. Йүткерәм. Ныҡ ҡына һалҡын тейҙергәнмен икән. «Салауат»ты дауам итәм. Яҙғанда «Салауат» көйө менән «Сыңрау торна»ны ҡатыштырып, үҙем ниндәйҙер көй сығарып, бөтә йырҙарын да йырлап яҙҙым. Бүлмәлә бер кем дә булмағандан рәхәт. Үҙ-үҙем менән тиле кеше кеүек һөйләшәм.

Тик Даһи (Бабичев) килеп бер аҙ эште туҡтатты. Ҡыҙы Гүзәлде ерләгән, ҡатыны Нураниәне бик ауыр хәлдә больницала ҡалдырып килгән. Үҙе заочно уҡырға йыйына. «Салауат»ты яҙып бөтмәй бер кемгә лә уҡымам тигәйнем, түҙмәнем — уҡыным. Даһиға, Рафаэлгә лә уҡыным.

16 апрель.

Тихонов менән музыкаль драматургия тураһында һөйләшеү. Яҡшыны тыуҙырыу өсөн һиңә тиклем кешелек хеҙмәте ирешкән яҡшылыҡты үҙләштерергә, уға ныҡлы эйә булырға кәрәк. Мелодияны юғалтыу — төп музыка сараһын юғалтыу ул. Уннһыҙ музыка музыка түгел.

Музыкаль драматургия бик үҙенсәлекле жанр. Быныҡ өсөн шиғыр культураһына эйә булыу төп шарт. Беҙгә классик либ-

реттоларҙы тикшереп, анализ яһарға кәрәк буласаҡ. Тәүге анализ өсөн «Мазепа»ға тупланаласаҡбыҙ.

Тихонов миңә оҡшаны. Беренсе занятиела була алмауым өсөн үкендем. Бәлки, миңә либретто яҙырға тура килмәҫ. Ләкин мин музыкаль драматургия тураһында бик аҙ ғына булһа ла белергә тейешмен. Был эш мине бик ҡыҙыҡһындыра. Бәлки, киләсәктә мин либретто яҙырмын да. Теләк һәм дәрт бар. Өфөлә «Сыңрау торна» балетын ҡарау һәм йәйге сәйәхәттә ишеткән халыҡ йырҙары, легендалар мине бик ҡанатландырып тора. Мин музыканы аңлай башланым, уны яратыуым көндән-көн арта бара. Ләкин был өлкәлә мин бик ныҡ наҙанмын әле. Театрҙарға йөрөүҙе лә үҙ алдыма маҡсат итеп ҡуясаҡмын. Юҡһа, Мәскәүҙә йәшәп, унан өйрәнмәй йөрөүем өсөн бер ҡасан да үкенеп бөтә алмаясаҡмын. Әгәр аспирантурала уҡырға тура килмәһә, Мәскәүҙә йәшәй торған ни бары ике йыл ғүмер ҡалды!

Даһи миндә йоҡланы. Кис Ғафуриҙы уҡыныҡ. Ул йоҡлағас, мин Ғәлиәскәр Камалдың фельетондарын, публицистикаһын уҡып һоҡландым. Унан өйрәнерлек нәмә бик күп. Шиғырҙарының да яҡшылары бар.

Иртән Даһи менән ашханаға киттек.

Кисә, 20 апрелдә, диплом яҡланылар. Башынан аҙағына тиклем тыңлап ултырҙым. Сергей Михалков бик нығытып сығыш яһаны, ҙур талаптар ҡуйҙы, Иван Галабиндың шиғырҙарын тәнҡитләне. Сергей Антонов һәм Лидин Иван Завальскийҙың хикәйәләре буйынса сығыш яһаны. Алексей Сурков Меркуловты бөтөнләй тар-мар итте. Иң йомшаҡ диплом уныҡы ине. Ажаев председателлек итте.

23 апрель.

Осетияла ҡатын кешене бер ҡасан да ире «ҡатын» тип атамай. «Ой хужаһы» йәки «минең хужам» тип өндәшә. Тәржемәсегә ни эшләргә?

Осетияла ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт итеү, уны ололау осетин халҡының эпостарында ла сағыла, унда Әсә образы ҙур урын алып тора.

Синонимдарҙың да үҙҙәренә генә хас булған мәғәнәүи төҫмөрҙәре бар, тәржемәлә иң тура килгән һүҙҙе һайлап алырға кәрәк. Флобер «для каждого явления есть одно слово» тигән. Ул ювелирный тәржемәсе булған. Тәржемә ҙур әҙерлек талап итә. Тәржемәсе редактор ҙа булырға тейеш. Ритмик форманы ныҡ һаҡлауға табынырға кәрәкмәй, ләкин мөмкин тиклем авторҙың фекеренә һәм нөсхәгә яҡын килергә кәрәк.

Чимитовтың рус теленән бурят-монгол теленә Сергей Михалковтың балалар өсөн «Ленин музейында» тигән китабын

тәржемә итеүенә туҡталдыҡ. Чимитов бурят-монгол теленең һәм шиғыр төҙөлөшөнөң үҙенсәлеге тураһында һөйләне. Уға рус шиғыр төҙөлөшөнә хас үлсәүҙәр — ямб, хорей, h. б. хас түгел. Элекке шиғырҙарҙа рифмалар булмаған, хәҙер мөмкин булған урында аллитерациялар ҙа, рифмалар ҙа бар. «Беҙ хәҙер ике яҡтан рифмалайбыҙ», — тине Чимитов. Көлөштөк.

Тәржемәсе юлдарҙы алыштырып ҡуйырға тулыһынса хаҡлы.

Б. Ромашов семинарында Ғабдулла (Әхмәтшин) ағайҙың пьесаһы тикшерелде. Оҡшаттылар. Пьеса дипломға ғына түгел, театрҙарҙа ла барырға мөмкин тигән баһа алды. Ғабдулла ағай бик шат ине.

24 апрель.

Үҙ-үҙемә ҡағиҙәләр:

Һәр саҡ асыҡ бул. Иланы, тимә, илағанын күрһәт, һөйләмә, протокол төҙөмә, ә күрһәт. Чехов, ударил гром, тимәй, ә күк күкрәгәнен һүрәтләй. Шаблондарҙы яҡын килтермә үҙеңә. Иҫке сюжеттарҙан ҡурҡма, ләкин уларға үҙеңсә кил. Һәр нәмәлә үҙеңсә бул. Һәр нәмәне Толстой кеүек үтә күр. Бер ҡасан да үҙеңдең әҙәреңдә әйтә торған фекерҙе үҙең алдан уҡ әйтеп торма, ә уҡыусы уны уҡып сыҡҡандан һуң ғына үҙе фекерләп ҡуйһын. Уҡыусы геройҙар менән йәшәһен, кисерһен, улар менән бергә эшләһен, һөйһөн, үҙе бер тормошто үтһен, ғазапланһын. Толстойҙың бөтә әҫәрҙәре лә шулай уҡыусыны тотоп алыусан, үҙҙәре менән йәшәтеүсән. Үҙеңдең яҙа торған әйбереңде яҡшы бел. Итексене яҙаһың икән, итек тегә белмәҫкә лә мөмкинһең, ә итексене ныҡ белергә тейешһең. Эшләнмәгән көйөнсә әҫәреңде дуҫтарыңа уҡыма, уларҙың маҡтауҙарын ишетмә. Бер ҡасан да үҙеңде халыҡ ижадынан айырма. Уға эшлекле кеше булып тотон. Күмелмә уның аҫтында. Тәржемәне лә үҙеңдең юлдашың ит. Тәржемә һине иң ҙур яҙыусыларҙың фекере, оҫталығы һәм теле менән байыта, тәртипкә өйрәтә. Этнограф бул. Халыҡтың тарихын, тормошон, көнкүрешен, сәнғәтен өйрән, теленең музыкаллегенә, моңона ҡолаҡ һал, тапҡыр һүҙен яҙып бар. Классиктарҙан өйрән. Рус классиктарынан тыш, башҡа халыҡтарҙың да бөйөк яҙыусыларын өйрәнеүҙән бер ҡасан да туҡтама.

25 апрель.

Яҡты, матур, тулы киләсәге булған дөрөҫлөк кенә — ҙур дөрөҫлөк.

Стипендия алдыҡ. Бурыстарҙы түләнем. Даһиға —120, Бухановҡа — 10, Гумматовҡа — 5. Рәшиттәргә барып 35 һум ҡалдырып киттем. Букинистарға кереп Даль һүҙлеген эҙләп

йөрөнөм. Бик асығып киткәс, балық ыуылдырығынан бешерелгән икмәк алдым (200 грамм), ләкин 50 грамм да ашай алманым, урнаға төшөрөп киттем. К. Чуковскийҙың «Мастерство Некрасова» китабын эҙләнем. Юҡ. Таҡташтың һайланма йыйынтығы сыҡҡан икән. Алдым.

Иртәгә ял. Комсомолецтар Ленин тауҙарына, МДУ яныңа, ағас ултыртырға барасаҡбыҙ.

27 апрель.

Көн болотло. Күңел дә болотло. Ярай әле Рафаэль менән Рәйес янда. Лекцияларҙы ла һүлпән генә тыңлайым да Переделкиноға ҡайтып, һүҙлек күсерергә тотонам. Үҙемдең һөйләшеүгә инмәгән, һирәк ишетелгән башҡорт һүҙҙәрен дә, таш, ҡаҙылма исемдәрен, үҫемлек, үлән, сәскә, ағас исемдәрен, тауар, туҡымаларҙы, хайуан һәм йәнлектәрҙе, ҡоштарҙың исемдәрен, төрлө ауырыу атамаларын аңлатмалар менән яҙа башланым. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү тураһында минең бик күп уйлаған бар. Ләлә Биишева менән был хаҡта һөйләшә лә торғайныҡ. Телселәр менән был эште бергәләп эшләп булыр ине. Ләкин әле мин телде аҙ беләм. Ләлә яҡшы белә. Практикаға ҡайтҡанда, беҙ уның менән был хаҡта оҙаҡ һөйләшеп ултырғайныҡ. Мин унан Жәлил Кейекбаевтың лекцияларын да алғайным, ләкин күсереп ултырырға ваҡыт булманы.

Мәскәүгә Рәшит Ниғмәти менән Мостай Кәрим килгән. Күрешмәнек әле. Иртән Рафаэль менән «Москва»ға шылтыраттыҡ. Мостафа ағай өйҙә юҡ ине. Рәшит Ниғмәти: «До четырех часов в любое время приходите!» — тине. Һуңғы лекцияның бер сәғәтен ҡалдырҙыҡ та Шакир, Рәйес, Рафаэль, мин — күмәкләшеп ҡунаҡханаға киттек, 802-се бүлмә. Шаҡырға беребеҙ ҙә ҡыймай. Тәүҙә мин шаҡыным. Юҡ, өндәшмәйҙәр. Дежурный, ял итәләр, тине. Борсомаҫҡа булдыҡ. Сәғәт 3-кә тиклем көтөп ултырҙыҡ. Мин Кремль һарайына, ҡарт стеналарға ҡарап тороп, Иосиф Виссарионовичтың Мавзолей трибунаһында баҫып тороуын, уны тәүге ҡабат күреүемде күҙ алдымдан үткәрҙем. Мин уны был трибунала өс ҡабат күрҙем. Беренсе Май етә инде. Мәскәү байрам кейемдәрен кейә.

Ишекте Шакир шаҡыны. Асылды. Индек. Рәшит Ниғмәти барыбыҙ менән дә күрешеп сыҡты. Мостафа ағай юҡ. Ағай сәй тәҡдим итте. Йырларға ҡушты. Рафаэль роялдә уйнап ебәрҙе. Рәшит ағай ҙур бүлмәлә хан кеүек йөрөп ята. «Сәлимәкәй»ҙе уйнағас, үҙе лә: «Ғашиҡ булдым ҡара ҡашыңа», — тип ҡушылып китте. Бик күңелле ултырҙыҡ.

28 апрель.

Бородиндан һуң ҙур рус композиторы булып Римский-Корсаков күтәрелеп сыға. 15-тән артыҡ опера тыуҙыра. Бер үк ваҡытта педагогик эшмәкәрлеге менән дә дан ҡаҙана. Бик күп талантлы музыканттар тәрбиәләй. Белеме буйынса ул — диңгеҙ офицеры. Диңгеҙ оркестры менән етәкселек итә. Белинский, Чернышевский, Добролюбов йәш диңгеҙ офицерының уҡытыусылары була. Стасов, Балакирев уның прогрессив ҡараштарын тәрбиәләүҙә ярҙам итә. Йәш композитор Вагнер эстетикаһына ҡаршы сыға, рустың реалистик сәнғәтен схоластик формализмдан ҡыйыу яҡлай. Ул рус модернистарын фашлауҙа ла роль уйнай.

Ҡайһы бер тәнҡитселәр Римский-Корсаковты үҙенең мелодияһы булмауҙа ғәйепләй. Ул халыҡ ижадына ныҡ таяна, музыкаһы халыҡ йырҙарына үтә яҡын. Рус кешеләренең иң яҡшы сифаттарын, характерын, рухи көсөн, сафлығын, күңел киңлеген, халыҡтың үҙ ижадын белмәй тороп, Римский-Корсаков бер ҡасан да тулы һәм киң итеп, ҙур оҫталыҡ менән музыка яҙа алмаған булыр ине.

1—2 май.

Бына инде май көндәлеге яҙа башланым. Берендә Рәғиҙәнең туйын үткәрҙек. Тәүге ҡабат мин студенттар туйында ҡатнаштым. Класташым Рәғиҙә, ауылдаш. Туйға саҡырып килгәс, уның бөтә тормош юлы, бергә уҡып йөрөгөн көндәр, детдомда һәм интернатта бергә йәшәлгән йылдар күҙ алдыма килеп баҫты. Туйҙа уҡыған шиғырҙы ғына яҙып ҡуям.

Ике йәш ғүмерҙең ҡушылыуын ҡотлап,
Яҡташтарҙың Мәскәү туйында,
Теләк теләп һеҙгә бар йөрәктән
Әйтәм ни булғанын уйымда.
Ҡайындарҙың япраҡ ярған сағын
Һайлап алды ғүмер яҙығыҙ.
Йәшәүегеҙ емеш ҡойғанғаса
Шул яҙҙы һеҙ һаҡлап ҡалығыҙ.
Татыу йәшәгеҙ һеҙ, студент дуҫтар,
Бөгөнгөләй, ғүмер буйына.
Ауырлыҡтар килһә, уртаҡ булһын,
Ә тормош бит түгел туй ғына.
Ил ҡыуанһын һеҙҙең эшегеҙгә,
Мин теләйем ҙурын шатлыҡтың,
Һәм мөхәббәт сәскәһендә һәр саҡ
Таң ысығы кеүек сафлыҡты.

Юра тигән юрист-аспирант егет менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Үҙе лә шифырҙар, хикәйәләр яҙған егет. Әҙәбиәтте ныҡ һөйә. Классиктарҙы яҡшы белә. Ә минең наҙанлығым өсөн йөрәк ҡыҫылып ултыра. Күпме нәмәләр хаҡында нигеҙле фекер йөрөтөүҙән мәхрүммен! Хатта әҙәбиәтсе булмаған кешеләр менән дә һөйләшеүе уңайһыҙ. Өҫтән-мөҫтән генә йөҙөргә мин булдыра алмайым. Намыҫым ҡушмай. Тик бер нәмәне үҙемә тылҡыйым: уҡырға, уҡырға һәм уҡырға!

Туйҙа төнө буйы ултырҙыҡ. Тик Даһиға килеп йөрөгән Рифғәт тигән егет һуғыш сығарҙы. Көскә аралап алдыҡ. Мөсәлиә Ғәлиевнаны (Хәйруллина) беҙ Флүрә Хәлитова менән оҙатып ҡайтып килгәндә, таң яҡтыра башлағайны инде. Һалҡынсараҡ ел иҫә. Плащты сисеп бирҙем. Кеймәй. Икәүләп ябындыҡ та алдыҡ.

Мөсәлиә Ғәлиевна туйҙан бик ҡәнәғәт ине. «Бына инде, уҡыусыларығыҙҙың да туйҙары башланды»», — тиеүемә:

— Инде сират һинеке, Рәми, — тип көлдө.

Иртән Рәғиҙә барыбыҙҙы ла уятып, сәй ултыртып йөрөй ине. Мин бүләк иткән елбәҙәк яулыҡты муйынына һалған. Ул наҙлы ғына елберләп ҡуя. Туйға килеүселәрҙең яртыһы ҡайтып киткән: Әсғәт, Хөсәйен, Рауил, Рәғиҙә, Флүрә, Рәшиҙә, Аня, Оля, Расита (испанка), Люция, Рима, Маһинур, Фирүзә һәм мин мәжлеста дауам иттек. Фирүзә менән койкала стенаға һөйәлеп һөйләшеп ултырҙыҡ.

— Әйҙә әле, Фирүзә, беҙ бит әле танышманыҡ та, — тинем мин. Өфө ҡыҙы ул. Фирүзә Еникеева. Мәскәүгә килгәненә дүрт йыл. Өсөнсө ҡыҙҙар мәктәбен тамамлап килгән. Әле экономический институтта уҡый. Имтихандарҙан һуң Башҡортостанға пароходта бергәләп ҡайтырға һүҙ ҡуйыштыҡ. Уны бер ҡарауҙан уҡ яҡын иттем. Күҙҙәре уның ниндәйҙер көслө ҡараш менән ҡыйыу һәм аҡыллы, бер аҙ уйсанараҡ та итеп ҡарай. Артыҡ күп тә һөйләшмәй, артыҡ алсаҡ та түгел. Һынаулы һәм ғорур күҙ ҡарашы йөрәкте елкендерә. Ләкин уға минең тәбиғәттәге кешеләр оҡшамаҫ кеүек. Ә оҡшарға тырышыу инде минең эшем түгел.

Беҙ һөйләшеп ултырғанда Әсғәт (Әшрәпов) фотоға төшөрҙө. Измайловский паркына барып бик оҙаҡ йөрөнөк. Бер мәл татарҙар йыйынына барып сыҡтыҡ.

— Давай аптыратайыҡ әле быларҙы, — тине Хөсәйен (Мәжитов) миңә. — Беҙ көрәшә башлаһаҡ, бөтәһе лә килеп етәсәк.

Сисенеп ташланыҡ та Хөсәйен менән бер заман бик ныҡ итеп серәшә-серәшә алпан-толпан йөрөп алыша башланыҡ. Ысынлап та, беҙҙе күҙ асып йомғансы һырып алдылар. Татарҙар менән бергә өйөрөлөргә төштөк. Халыҡ бик ҡыҙыҡлы

уйнай. Уларҙың күплегенә иҫ китте. Йырлайҙар, бейейҙәр, әйләнәләр... Берәй ял көнөндә шуны күҙәтер өсөн генә килергә кәрәк булыр әле. Йырҙары беҙҙең яҡ йырҙарына һис оҡшамаған.

Метрола мин Фирүзәнең бер минең менән генә күрешмәй айырылыуына ғәжәпләндем. Хәтер ҙә ҡалыбыраҡ ҡуйҙы. Башҡа төрлө уйҙар ҙа килде.

3 май.

Кисә кис көндәлек яҙып ултырғанда Рафаэлдең ағаһы килде. Ишектән ингәс үк йылмайып, бик күптәнге таныш һымаҡ:

— Сафин! — тип ҡул бирep күреште.

Ул килгәндә Рафаэль урамға сығып киткәйне. Аҙыраҡ торғас ҡына килеп инде. Рафаэль минең летчиктарға бик яҡын булыуымды, аэроклубты бөтөп, осоуымды әйтеп:

— Рәми ҙә беҙҙең летчик кеше! — тип ҡуйҙы. Беҙ, ысынлап та, тиҙ уртаҡ тел табып, авиация тураһында һөйләшеп алып киттек. Миңә ул бик оҡшаны. Асыҡ. Ябай. Ысындан да һауа арыҫланы. Лейтенант. Аҙаҡтан минең бүлмәлә ҡосаҡлашып тороп ятып йоҡланыҡ. Иртән Таҡташты, Туҡайҙы уҡып ултырҙыҡ. Мәскәүгә өсәүләшеп сығып киттек. Унан һуң Рафаэль менән мин Переделкиноға юлландыҡ, ағаһы Мәскәүҙәге дуҫына китте. Бөгөнгө хаттарҙы уҡыныҡ. Миңә Ҡазандан Хәким (Зарипов) яҙған, һаман әҙәбиәт менән хыяллана. Үҙе юрист. Илдар Юзеевтың хәле һаман да насар икән.

Переделкинолағы буфетҡа инеп, вино, һыра менән һыйландыҡ. Кәйефләнеп алып, йылға буйлап йырлашып, һөйләшеп йөрөнөк. Ҡыҙҙар тураһындағы һүҙ һаман да ялҡытмай. Был темаға беҙ уның менән күп һөйләшәбеҙ. Туйҙар ҙа үткәрәбеҙ, балалар ҙа үҫтерәбеҙ, Дим буйына дачалар ҙа һалып ҡуябыҙ, ағастар ҙа ултыртабыҙ! Үкенесен ҡалдырмайбыҙ донъяның! Үҙебеҙ рәхәтләнеп көләбеҙ...

4 май.

Диплом яҡлау. Иң беренсе булып Константин Ваншенкин яҡланы. Өсөнсө булып драматург Ғабдулла ағай яҡларға тейеш. Минең саҡырыуға пединституттан Рәғиҙә, Рима, Рәшиҙә, Флүрә, консерваториянан Хөсәйен (Мәжитов) менән Әлфиә килгәйне. Ғилемдар ағай ҙа, Шамил да (Мәхмүтов), Миҙхәт тә бар ине. Союздан да барҙар. Ажаев председателлек итә. Ғабдулла ағайҙың дипломы өсөн мин тыныс. Яҡшы буласаҡ.

Ләкин бар эште Ғабдулла ағай үҙе боҙҙо. Өс сығарылышты тыңлап, беренсе тапҡыр шундай маҡтансыҡ сығышты ишеттем. Шул тиклем уңайһыҙландым, теләһә ер тишегенә инеп

кит! Имеш, ул башҡорттарҙан беренсе булып әҙәбиәт институтын тамамлаусы! Әйтерһең, быға тиклем башҡорт әҙәбиәте булмаған. Әйтерһең, ул башҡорт драматургияһына ниҙер һалыусы! Белмәйем, ни булған уға... Һөйләгәндәрен яҙып алырға иткәйнем, булдыра алманым, ҡулдарым ҡалтырай ине.

Бөтәһе лә ҡысҡыра:

— Етәр, Әхмәтшин, етәр!

Даһи минең арттан президиумға записка бирергә ҡушты. Бирҙем.

— Әллә һин яҙыңмы? — тинем.

— Эйе, — тине ул. — Һөйләйем.

— Нимә тураһында?

— Үҙебеҙҙең хаҡта.

— Һин бит иҫерек, Даһи, кеше көлдөрмә.

— Уныһы минең эш.

— Юҡ, һинеке генә түгел. Мин һиңә һүҙ бирмәүҙәрен һорайым.

Президиумға записка ебәрҙем. Аҙаҡ беҙ Рафаэль менән диплом йыуырға «Баку» ресторанына барманыҡ. Даһи Рәйескә мине унда «доносчик» тип атаған.

Партия Үҙәк Комитеты үҙенең ҡарарында Башҡортостан тарихсыларына артабан эшләү өсөн программаны күрһәтеп бирҙе.

Усманов ошолай үҙенең «хатаһын» таный.

«Совет Башҡортостаны», 27 март, 1953 йыл. И. Зарипов һәм И. Нигмәтуллин мәҡәләһенән. «Башҡорт аттары»:

«Алыҫҡа һуҙылып киткән киң дала. Унда ҡыш көндәре саҡ ҡына ел булһа ла, ҡарҙы ер өҫтөнән бер туҡтауһыҙ һепертеп кенә тора. Ә ҡаты елле көндәрҙә ҡар бураны күҙ асҡыһыҙ. Соҡорҙар, һирәк осрай торған сауҡалар һәм урмандар ышығында ғына бураныҡ, тымыҡ һауаны осратырһың. Бына шул ышыҡтарҙа Матрай районы колхоздарының һәм 109 номерлы йылҡысылыҡ заводының йылҡылары тибендә йөрөп ҡыш сыға. Бында башҡорт халҡының боронғо ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса йылҡы көтөүҙәрен табунщиктар түгел, ә өйөргә ҡуйылған тоҡом айғырҙары көтәләр. Улар йылҡыларҙы бүреләрҙән һаҡлайҙар, бер генә сит кешене лә өйөргә яҡын ебәрмәйҙәр. Буран тынып торһа, өйөр айғырҙары көтөүҙәрен арҡа ерҙәргә ҡыуалар. Сөнки ҡалҡыу ерҙә ҡар йоҡа, йылҡыларға тибенеүгә еңел була. Буран ҡуҙғалһа, улар көтөүҙәрҙе тағы ла ышыҡҡа күсерәләр. Шуның өсөн дә бында табунщиктарға эш артыҡ ауыр түгел. Улар ике өйөр айғырҙары берберенә менән талашмаһындар өсөн генә, ситтән ҡарап, күҙәтеп йөрөйҙәр... Башҡорт тоҡомло аттар йөк ташыуҙа ла, һыбай

йөрөүҙә лә ныҡ, сыҙамлы. Улар ҡыш көнө тибендә үҙҙәренүҙҙәре аҫрап сығаралар...

18 май.

Дж. Родариҙың балалар өсөн яҙған шиғырҙарын тикшерҙек. Балаларға ҡыҙык әйбер ололарға ла ҡыҙыҡ. Балаға мораль уҡыусы түгел, тәрбиәсе кәрәк. Бала тәбиғәтенә ҡоро дидактика тәьҫир итмәй, итә икән — кире яғы менән. Джанни Родари донъяны бала күҙе менән ҡабул итә.

Беҙ лекциянан сығыуға, Хөсәйен Мәжитов килгәйне. Консерваторияға саҡырҙы. Бөгөн уның диплом имтиханы. Беҙ Рафаэль менән барып инеүгә, бөтә башҡорттар йыйылып бөткәйне. «Снегурочка»нан Мизгирҙы йырлай.

19 май.

Чайковский. Әгәр ҙә «Евгений Онегин» лирик опера булһа, «Пиковая дама» тәрән психологик әҫәр. Музыкала психологияны биреү — Чайковскийҙың төп сифаты. «Пиковая дама» — социаль драма. Германға үҙенең яратҡан ҡыҙының мөхәббәтенә ирешеү өсөн байлыҡ кәрәк. Графиняның серле кәртенә эйә булыу моменты уның тормошон хәл итә. Германдың күңелендә ике фекер. Ул Лизаны һөйә һәм аҡса тураһында уйлай. Байыу идеяһы аҙаҡҡа табан маҡсатҡа ирешеү сараһына әйләнеп китә. Был Лиза менән Германдың яҙмышын да хәл итә. Графиняның йөрәге ярылып үлә. Лиза мөхәббәтенән ваз кисә. Герман һәләк була. Яҙмыш һәм мөхәббәт бер-береһе менән көрәшә. Лиза үҙенең ғүмерен, Герман һәләк булғандан һуң, һыуға ташланыу менән тамамлай.

Чайковскийҙың симфониялары ла рус музыкаһында ҡиммәтле ҡомартҡы булып тора. Дүртенсе симфонияһы, мәҫәлән, тәрән эстәлекле. Ул яҙмыш көсөнөң кеше бәхетенә ҡамасауланыуын күрһәтә.

Әҫәр халыҡтың киләсәккә өмөт менән ҡарауы, еңеүе, тантана итеүе менән тамамлана.

Зоя Космодемьянская бына ни өсөн бик яратҡан был симфонияны!

Алтынсы симфония — Чайковскийҙың һуңғы симфонияһы. Бында ла яҙмыш (фатум) менән көрәшеү. Ләкин уның финалы фажиғәле, хәсрәтле. Ләкин бында ла яҙмыш алдында көрәшһеҙ генә баш эйеп ҡалыу юҡ. Тормош — көрәш талап итә. Тормошта һәм кешеләрҙә яҡшылыҡты күреү талабы Чайковскийҙа ғәҙәттән тыш көслө була. Үҙенең иғтибарлы һәм киң күңелле булыуы менән ул бөтә кеше тарафынан яратыла

һәм бөтәһенә лә кәрәкле була. Уның тормошо бик күп кешеләр менән бәйле.

Чайковский музыкаһы бөтә Европала яңғырай, ҡайҙа ла уның даны йөрөй.

«Обыкновенно вдруг, самым неожиданным образом, является зерно будущего произведения, — тип яҙа ул Надежда Филатовна Мекка, — если почва благоприятная, то есть расположение к работе, зерно это с непостижимой силой и быстротой пускает корни, показывается из земли, пускает стебель, листья, сучья, наконец, цветы. Я не могу иначе определить творческий процесс, как посредством этого уподобления... Напрасно я бы старался выразить словами все неизмеримое блаженство, которое охватывает меня, когда является главная мысль и когда она начинает разрастаться в определенные формы. Забываешь все, делаешься как сумасшедший. Все внутри трепещет и бьется, едва успеваешь намечать эскизы, одна мысль перегоняет другую».

«Моцарт, Бетховен, Шуберт, — тип яҙа ул шағир К. Романовҡа, — сочиняли свои бессмертные творения совершенно так, как сапожник шьет сапоги, то есть изо дня в день и большей частью по заказу. В результате выходило нечто колоссальное...»

22 май.

30 майҙа рус теле тарихынан зачет. Кисә Тургеневтың «Рудин»ын уҡып сыҡтым. Островскийҙың пьесаларын башланым. Китапхананан «Дворянское гнездо» романын алдым. Эш муйындан! Көнбайыш әҙәбиәте бөтөнләй уҡылмаған! Имтихандарға әҙерлек көндәре минең өсөн иң яҡшы, иң тулы көндәр буласаҡ!

Тургеневтың теленә, тәбиғәт һулышына иҫереп уҡыйһың. Бына хәҙер Виноградовтың «Бөйөк рус теле»н уҡый башлайым.

«В языке своем народ в продолжении многих тысячелетий и в миллионах индивидиумов сложил свои мысли и свои чувства. Природа страны и история народа, отражаясь в душе человека, выражались в слове. Человек исчезал, но слово, им созданное, оставалось бессмертной и неисчерпаемой сокровищницей народного языка; так что каждое слово языка, каждая его форма-есть результат мысли и чувства, через которые отразились в слове природа страны и история народа».

К. Д. Ушинский

«Истинная национальность состоит не в описании сарафана, но в самом духе народа. Поэт даже, может быть, и тогда национален, когда описывает

совершенно сторонний мир, но глядит на него глазами своей национальной стихии, глазами своего народа, когда чувствует и говорит так, что соотечественникам его кажется, будто это чувствуют и говорят они сами».

Н. В. Гоголь

«Какой красивый русский язык: все преимущества немецкого без его ужасной грубости».

Ф. Энгельс

23 май.

Тышта йоӄланым.

Көнбайыш әҙәбиәтенән Флоберҙы үтәбеҙ. Ғөмүмән, көнбайыш әҙәбиәте һәм рус әҙәбиәте буйынса лекцияларҙы мин ныҡ тырышып яҙам. Конспекттарҙы яҡшы тышлы ҙур дәфтәргә яҙып барам һәм уларҙы бик яратам. Мин уларҙы студент йылдарымдың матур иҫтәлеге итеп һаҡлап ҡаласаҡмын. Киләсәктә улар миңә кәрәк тә буласаҡ әле. Сөнки мин уларға үҙемдең фекерҙәремде лә ҡушып яҙам.

Кис Рәйес һыра менән һыйларға алып китте. Аҙаҡ бик оҙаҡ ғаилә, мөхәббәт, әҙәбиәт тураһында һөйләшеп йөрөнөк. Уға Добролюбов, Чернышевский, Некрасов һәм Тургенев тураһында, «Современник» журналындағы ҡаршылыҡтар хаҡында һөйләнем. Мин үҙемдең һүҙҙәрҙең Рәйескә файҙалы икәнлеген беләм, шуға һөйләгем килә. Ә бына семинарҙарҙағы сығыштар миңә нисектер яһалма һәм мәғәнәһеҙ кеүек.

Сөнки һәр семинар ҙа бөтә йөрәктән бәхәсләшеү, фекер алышыу була алмай, формаль рәүештә бурыстарҙы үтәү булып китә. Бындай саҡтарҙа тыңлап ҡына ултырғаның хәйерле.

Унан һуң, семинарҙа әҙәбиәтте ныҡ өйрәнгән кешеләр ҙә ҡатнаша. Уларҙы тыңлау бик файҙалы. Оҫта барҙа — ҡулыңды тый, остаз барҙа — телеңде тый, тип тик ултырам. Быныңменән мин, әлбиттә, күп нәмәне юғалтам. Һөйләргә өйрәнеү кәрәк бит. Шулай ҙа, нығытып уйлап ҡараһаң, һөйләй белеү — эшләй белеү түгел, тип тә ҡуяһың. Ә минең эшләргә өйрәнгем килә.

24 май.

Тирә-яҡ йәм-йәшел. Алмағастар, муйылдар ап-аҡ сәскәлә ултыра. Ландыштар ҙа, сирендәр ҙә, еләк тә сәскә атҡан. Ҡайындарҙың япраҡтары ҡояш нурҙарына ялтырап күренә. Иң яратҡан ағасым ҡайын минең. Бигерәк тә юл ситендәге яңғыҙ ҡайынды яратам. Ул, иртән институтҡа ашыҡҡан саҡта, иң

беренсе булып мине ҡаршы ала һәм кире ҡайтҡанда оҙатып ҡала.

Тәбиғәттең һәр күренешендә үҙенә генә хас матурлыҡ бар. Шуларҙың бөтәһен дә тоя белергә, Тургенев кеүек һүрәтләй алырға кәрәк. Хәҙер мин тәбиғәт тураһында Тургеневһыҙ уйлай алмайым.

Ә Добролюбовты уҡығандан бирле мин йәшәй башланым. Шулай ҙа һуңғы ваҡытта уйланыуға бирелдем. Файҙалы әйберҙәр яҙа алмау ҡурҡыта. Үҙ-үҙемә күп ваҡыт ышанып етмәй ҙә ҡуям.

Ә мөхәббәт йоҡлай. Бик ныҡ һөйгөм һәм һөйөлгөм килә. Һөйөрлөк кешем юҡ. Ата булғым килә минең. Яратҡан дуҫым ғына түгел, ныҡ яратҡан ҡатыным да булырға тейеш. Бына инде институтты тамамларға ике генә йыл ҡалды. Өйләнеү һис тә иртә түгел. Ваҡлағым килмәй үҙемде. Тулы тормош менән йәшәгем килә. Үҙемдең ҡатынымдан башҡа мин бер кемгә лә булырға тейеш түгел. Кисә Рәйес менән был турала һөйләшкәндә:

— Эштән ҡайтыуыңа муйыныңа балаң килеп аҫылынырлыҡ булмаһа, нимәгә ул ғаилә ҡороу! — тигәс, ул көлөп ҡуйҙы.

25 май.

Совет әҙәбиәте семинарында комедиялар тураһында һөйләштек. Буханов Виталий менән Чебодаев Михаил һөйләне.

Жанр — ҙур культура. Уны инҡар итеү ярамай. Сатирик комедия — хәҙер иң кәрәкле жанрҙарҙың береһе. Әле мещанлыҡ тулып ята. Сатира өсөн ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Ҡурҡаҡ сатирик та, ябай әҙәбиәтсе лә түгел.

К. С. Станиславскийҙан:

«Люби искусство в себе, а не себя в искусстве».

«Надо самому научиться брать то, что нужно и важно... Надо уметь брать полезное... Недостатки перенимать легко, но достоинства — трудно».

«Собственный пример — лучший способ заслуживать авторитет».

26 май.

Глазунов — симфонист. Уның музыкаһының иң күҙгә ташланып торған үҙенсәлеге — драматизм булмауы. Был турала уның үҙенә Чайковский әйтә һәм борсолоуын белдерә. Сөнки был Глазунов ижадының сикләнгәнлеген күрһәтә.

Лядов — музыкант-миниатюрист. Ваҡ әҫәрҙәр генә яҙа. «Баба Яга», «Кикимора» кеүек характерлы әҫәрҙәре бар. Ул — лирик. Драматик момент уның ижадында ла бик аҙ урын ала. Лядов халыҡ ижадына ла тарыраҡ ҡараш менән килә.

Глазунов та, Лядов та — Петербург композиторҙары һәм уларҙың рус музыкаһында үҙ урындары бар.

Мәскәү композиторҙарынан был ваҡытта Танеев үҫеп сыға. Ул ашыҡмай, бик уйланып яҙа. Оҙаҡ уйланыуы, үтә рационаллеге Чайковскийҙы борсой. Танеев — бик яҡшы педагог, музыкант-ғалим, оҫта пианист та булып таныла.

Аренский үҙенең симфонияларында бик тә Чайковскийға яҡын. Ләкин ул уға лирико-элегик яғы менән генә оҡшаш. Уға ла драматизм хас түгел.

Ипполитов-Иванов — Римский-Корсаковтың уҡыусыһы. Уға Чайковскийҙың тәьҫире бик ҙур. Иң күренекле әҫәрҙәренән — «Кавказ эскиздары» операһы. Тургеневтың «Ася»һы буйынса яҙылған.

Рус операһын башҡарыу 19-сы быуат аҙағында юғары дәрәжәгә күтәрелә. Быға тиклем рус театрҙарында итальяндар хөкөм һөрә. 90-сы йылдарҙа бик күп йырсылар, сәхнә оҫталары үҫеп сыға. Был ваҡытҡа Чайковский опералары ҙур популярлыҡ яулап ала. Мәскәүҙә Мамонтов театры барлыҡҡа килә. Унда Врубель, Серов кеүек оҫта художниктар эшләй һәм бында бөйөк Шаляпиндың тауышы яңғырай башлай. Уны бөтә донъя ишетә. Шаляпин Борис Годунов, Иван Грозный, Князь Игорь кеүек ҙур һәм ҡатмарлы образдарҙы тыуҙыра.

19-сы быуат аҙағында реалистик тенденция менән идеалистик йүнәлештәрҙең ҡаршылығы көсәйә. Музыкаль тәнҡит өлкәһендә 19-сы быуат классиктарына ревизия яһау башлана. «Таҙа сәнғәт» ағымы барлыҡҡа килә. Был ағым рәссамдар араһында ла тарала. Көнбайыш музыкаһындағы импрессионистик ағым 1905 йылғы революциянан һуң киң ҡолас йәйә. Экспрессионистар, символистар, модернистар күбәйеп китә. Был реакцион йүнәлештәргә Римский-Корсаков, Рахманинов, Глазунов, Лядов, Танеевтар ҡаршы сыға.

Скрябин башта (1903 йылға тиклем) реалистик әҫәрҙәр яҙа. Йәш композиторҙың музыкаһына кеше бәхете өсөн көрәшеү, бунтарлыҡ темалары хас. Аҙаҡ ул реализмдан ситкә китә, модернистик музыка менән мауыға, тональносын юғалта, өндәр йыйылмаһына күсә, юғала. Һуңғы йылдар Скрябины менән йәш, бунтарь Скрябин араһында ҙур айырма бар.

Сергей Васильевич Рахманинов — Чайковский һәм кучкистар традицияһын тайпылғыһыҙ дауам итеүсе. Модернистик тәнҡитселәр уның өҫтөнә бер туҡтауһыҙ тәнҡит өйә, эпигонлыҡта ғәйепләйҙәр. Ул да, йәш Скрябин һымаҡ, тыйылғыһыҙ бунтарь булып күтәрелә. 1905 йылдан һуң да был темпераментын юғалтмай һаҡлап алып ҡала. Уның ижадында Тыуған ил темаһы, рус тәбиғәте, рус кешеһенең характеры сағыла.

Рахманинов үҙенең ғүмерен Америкала тамамлаһа ла, һәр ваҡыт рус кешеһе булып ҡала. Ул 1953 йылдың 28 мартында Америкала үлә. Ватан һуғышы барған ваҡытта ул Ҡыҙыл Армияға ярҙам фондына үҙенең концерттарын ҡуя.

27 май.

Рус теленән диктант яҙҙыҡ. Проза теорияһы буйынса киске 6-ла Л. Тимофеев зачет алды. Социалистик реализм методының төп үҙенсәлектәре тураһындағы һорау әләкте. Насар һөйләнем. Шулай ҙа Тимофеев «рәхмәт, рәхмәт» тигән булды. Минән һуң, иң аҙаҡҡа ҡалып, Арнольд Тамм һөйләне. Ул, тәнҡитсе кеше, яҡшы һөйләй, әлбиттә. Иртәгә музыка теорияһынан зачет.

Рафаэлде кисә Ижад йортона күсереп ҡуйҙым. Уларҙың бүлмәһенә заочниктарҙы урынлаштырасаҡтар. Рафаэль һыуыҡ тейҙергән. Танауы ҡанай. Сәләмәтлеге яҡшы түгел. Быйыл сирҙән башы сыҡманы. Тормошондағы иң ауыр йылылыр был уға. Бик интекте.

Кисә ул, Шакир менән һөйләшеп ултырғандан һуң, миңә килде.

Мин Шакирға булған бөтә ҡарашымды әйтеп, үҙенә хат яҙырға булдым. Ә әлегә бөтә йөрәктән иптәштәрсә һөйләшеү мөмкин түгел.

28 май.

Профессор С. А. Богусловскийҙың «Глинка»һын уҡый башланым.

«Создает музыку народ, а мы музыканты, только ее оранжируем».

Глинка.

Композитор, пианист, йырсы, педагог, шағир һәм рәссам ул Глинка. Бөтә ғүмере буйына телдәр өйрәнә. Латин, француз, немец, инглиз, испан телдәрен белә, фарсы теле менән дә таныша. Глинка, Пушкин кеүек, башҡа халыҡтарҙың ижадына ҙур ихтирам менән ҡарай, уларҙы өйрәнә һәм һөйә. Ул сәйәхәт итергә ярата һәм был мөхәббәт уға күп яңылыҡ бирә.

Чайковский уның «Славься» тигән данлау йырын «архигениальный» тип атай. Глинка беренсе рус милли операһын ижад итеүсе. Был опера бөйөк рус операларының ҡояшы булып балҡый һәм уларға увертюра булып тора.

1 июнь.

«Язык создается народом. Деление языка на литературный и народный значит только то, что мы имеем, так сказать, «сы-

рой» язык и отработанный мастерами. Первым, кто прекрасно понял это, был Пушкин, он же первый показал, как следует пользоваться речевым материалом народа, как нужно обрабатать его».

М. Горький

«Не надо забывать, что наша страна разноязычна неизмеримо больше, чем любая из стран Европы».

М. Горький

Ҡояш инде бешермәй — күләгә аҫтында ҡалдым. Етерлек яндым бөгөнгә. Серәкәйҙәр генә рәхәтләнде ҡанды эсеп. Елаҫ кенә ел үлән баштарын елберләтә. Юғарыла ҡарағай ботаҡтары өҙлөкһеҙ шаулай. Улаҡтан тирмән ҡуласаһына шарлап төшкән тауыш бер туҡтауһыҙ ишетелеп тора. Урман иртәнән бирле ҡоштар моңона сумған. Ҡайһыһы һыҙғыра, ҡайһыһы тел шартлата, ҡайһыһы сипылдай, ҡайһыһы сырылдай, ҡайһыһы шыҡырҙай. Яҡында ғына өҙөп-өҙөп кәкүк саҡыра. Уға һаҡауланырға иртә әле. Тәүге кәкүк тауышын мин ун өсөнсө майҙа иртән ишеткәйнем. Еләк тә шул тирәлә сәскә ата башланы. Әле улар ап-аҡ сәскәлә. Ап-аҡ күбәләктәр леп-леп кенә осоп йөрөй. Ахыры, улар еләк күбәләктәре. Яҙҙың тәүге көндәрендә, тәүге һары сәскәләр сыҡҡан саҡта, тик һары күбәләктәр генә күренә ине. Ә был аҡ күбәләктәр гел еләк сәскәләре өҫтөндә уралалар.

Эҫенән тамаҡ ҡатты. Ләкин уҡып бөтмәйенсә, бер ҡайҙа ла ҡуҙғалмаҫҡа!

3 июнь.

Бына Тургеневтың «Аталар һәм балалар»ын уҡып сыҡтым. Романдың аҙағында: «Август, 1861» тигән дата тора. Күңелдә әллә ниндәй үҙем дә аңламаған нәмә.

Тургеневтың был романын уҡығанда, элеккеләрен уҡығандағы һымаҡ, бер бөртөк тә күҙ йәшем сыҡманы. Ләкин ул миңә бөтә уҡылған әйберҙәрҙән дә нык тәьҫир итте.

— Беләһеңме, Леня, Тургеневты уҡығандан һуң мин хәҙер шиғырҙар яҙа алмам инде, — тинем. — Белмәйем, ни булды миңә. Шиғырҙарымды ҡалдырыу ауыр миңә. Башҡаса мин шағир булмам кеүек. Рафаэль дауам итһен минең шиғырҙарҙы. Ул миңә бик яҡын. Мин уға бик күп ярҙам итергә тейешмен. Ул инде мине ҡыуып етте һәм ул уҙып китеп, алға, юғарыға, ҙур шағир булыуға атларға тейеш.

Яҡшы хикәйә яҙыу өсөн миңә әле бик күп эшләргә кәрәк. Урманда шиғырҙар яҙған ҙур йәшел дәфтәрҙе ҡарағай төбөнә алып ырғыттым. Үҙ-үҙемә:

— Йүләр! Малай! Бәхетһеҙ!— тип ҡысҡырҙым. Тауышым үҙемде ҡурҡытты.Йәшел үләндә тәгәрәнем. Ләкин илай алманым.

Июндә әллә ниндәй әле һис бер күрелмәгән көс бар һымаҡ...

4 июнь.

19-сы быуат рус әҙәбиәтенән консультация. 40—60-сы йылдар. Герцен, Огарев, Тургенев, Гончарев, Островский. Һуңлап килгәндәр ишектән аяҡтарын һаҡ ҡына баҫып инә. Бөтәһен дә һаҡал-мыйыҡ баҫҡан. Имтихан мәлендә хәле һәр саҡ шулай студенттарҙың. Василий Чалай ғәҙәттәгесә аҡылһыҙ, көлкөлө һорауҙарын бирә.

Берәүҙәр көлә, берәүҙәр сырай һыта, берәүҙәр тыя, берәүҙәр юрый ҡоторталар. Ә Поспеловҡа һылтау ғына булһын, бәхәсләшә бирә. Танау аҫтындағы трапеция формаһындағы сал инә башлаған һорғолт мыйығы ирендәренең төрлө мимикаһына уйнап тора. Геннадий Николаевич ҡулдарын ҡатыштырмайынса һис ҡасан һөйләй алмай. Ул ҡулына эйәген ҡуйған килеш күҙен ҡыҫып ҡына тыңлай ҙа муйынын төрлө яҡҡа һуҙып-борғолап һөйләй башлай. Бәләкәй генә һоро күҙҙәре янып тора. Ҡаршы фекер әйткәндә, һөҙәк кенә ҙур маңлайындағы тирәһе йыйырыла, һирәк ҡаштары бер-береһенә яҡына.

Йүнле һорауҙар булманы.

Тургеневтың «Аталар һәм балалар» романы ике һорауҙа буласаҡ. «Аусы яҙмалары» ла ике һорауға бүленә.

Поспелов яҙыусыларҙың иң ҙур әҫәрҙәре буйынса даталарын ҡуйып таблица эшләргә кәңәш бирҙе. Менделеев таблицаһы кеүекме, тип көлөштөк.

Китапханаға төшөп Гончаровтың «Обломов»ын, Чернышевскийҙың мәҡәләләрен алдым да Виталий Буханов менән ҡайтып киттек.

Электричкала ҡайтып еткәнсе бер пионерканың мәсьәлә сығарғанын ҡарап килдем. Форма кейгән. Муйынында — ҡыҙыл галстук. Күҙҙәре шул тиклем аҡыллы ҡарай. Миңә ҡарап бик матур итеп йылмайҙы. Йөрәк ашҡынып китте. Исемен һорай алманым.

Төн. Бына инде Тургеневтың икенсе повесын да уҡып сыҡтым. «Ася» ла, «Тәүге мөхәббәт» тә ҡот осҡос фажиғәле! Тургеневтың шундай бөйөк оҫталығына һоҡланып бөтә алмайым. Шулай ҙа Горькийҙы уҡығым килә минең хәҙер. Уны уҡыған-

да һәр саҡ шифыр яҙғым килә. Ә Тургеневты уҡығандан һуң йәшәге лә килмәй.

Һәр бер әҫәрендә мин үҙемде күргән кеүек булам. Ә үҙеңде Тургеневса күреүҙән ниндәй ауырлыҡ булырға мөмкин? Үҙемде мин хәҙер аңламайым.

Диларағa көндөҙ хат яҙҙым.

«Дилара!

Бик ныҡ хәтереңде ҡалдырҙым буғай? Һин дөрөҫ асыуландың миңә. Аңлайым. Һин бөтөнләй шундай тупаҫлыҡты көтмәгәйнең. Ләкин мин быныңөсөн үкенмәйем. Ғәфү итеүеңде лә теләмәйем. Һине уйлағанда мин элекке кеүек яҙмайым да, кисермәйем дә. Был юлдарҙы ла үҙем дә аңламағаң һалҡынлыҡ менән яҙам. Ләкин минең һиңә бер генә ҡабат ҡарағым, күргем килә. Бына имтихандарҙы бөткәс, Ленинградҡа барып киләм дә пароходта Ҡазан аша ҡайтырға ниәт итәм. Һине күргә тейешмен, әгәр ҙә был һине ҡурҡытмаһа?

Ҡазанда мин өс көнгә генә туҡталам. Унда минең бер кемем дә юҡ. Бер кем дә көтмәй мине. Әгәр ҙә мөмкин булһа, һин миңә Туҡайҙың, Таҡташтың ҡәберен күрһәтерһең, үҙең яратҡан урындарға алып барырһың. Теләмәһәң, мин үҙем генә ҡарармын да, һин йөрөгән урамдарҙы, һин яратҡан урындарҙы күрермен дә юлымды дауам итермен. Әгәр осрашһаҡ, һин миңә шифыр яҙып маташыусы итеп ҡарама. Һәм бер ни ҙә һорашма. Хәҙер мин шифырҙар яҙа алмайым. Бөтә йөрәктән кисереп яҙған һуңғы шифырым да һиңә булды. Инде хәҙер минең әйберҙәрҙе уҡырға тура килмәҫ. Һинең хәтереңде ҡалдырған һуңғы хатты мин үҙемә лә бик ауыр булған саҡта яҙҙым. Хатымда, бәлки, дөрөҫлөк тә барҙыр аҙыраҡ. Ләкин үҙеңдең хаҡта шулай уйлама. Ул минең үҙемә асыуым, үҙ-үҙемде хөкөм итеүем генә.

Риза булһаң, яҙ. Өндәшмәһәң, бер ни ҙә юҡ, тип аңлармын.

Хуш. Сәләм менән Рәми».

Рафаэль менән һөйләштек. Мин шифырҙарҙан һыуыныуымды һөйләгәс, ул ғәжәпләнде.

— Юҡ уй уйлама, әле бик күп яҙаһы бар. Был һинең ваҡытлыса ғына күңелһеҙләнеүең,— тип йыуатҡан булды.— Әле генә йыйынтыҡ сығарырға дәртләнә инең бит!

«...вина — это редкость, это исключение из правила; беда — это эпидемия. Умышленный поджог — это вина; зато из миллионов людей находится один, который решается на такое дело. Есть другой признак, нужный для дополнения к первому. Беда обрушивается на том самом человеке, который исполняет условие, ведущее к беде; вина обрушивается на других, принося виноватому пользу. Этот последний признак чрезвычайно точен».

«Признак верен, но если применять ее с некоторой проницательностью, с внимательным разбором фактов, то окажется, что вины почти никогда не бывает на свете, а бывает только беда».

(Разбойник тураһында. 186-сы бит.)

Чернышевский Тургенев геройын бына шул бәләһе тырнағындағы кеше итеп тикшерә. Уның бәләһе — ул йәшәгән мөхиттең һәм ул алып барған ваҡ тормошҡо, маҡсатһыҙ, һай йәшәүҙең бәләһе. Ул аҡыллы һәм намыҫлы. Ләкин ул үҙе йәшәгән йәмғиәттең ҡорбаны. Тургеневтың бик күп геройҙары — бына шул тормошҡо ҡорбандары.

Ҙур тормошта үҙеңдең бөтә көсөңдө бирep ҡатнашмаһаң, һин бик бәләкәй һәм бик ҡыҙғаныс кеше. Сөнки кешенең урыны — ҙур тормошта. Шундай кеше генә ҙур һәм ғүмерле эске донъя менән йәшәй. Ҙур тормоштан айырып ҙур нәмәләр тураһында уйлау — йоғошло ауырыу менән бер. Йәшәмәйенсә йәшәү тураһында уйлау кеүек. Кеше тулы тормош менән йәшәргә тейеш. Чернышевскийҙы уҡып, шундай фекергә киләһең.

«Как бы ни были умны и благородны собеседники, если они не говорят о делах общественного интереса, они начинают сплетничать или пустословить».

«...Какова широта взгляда, такова и широта решений».

«Нельзя не пропитаться пьяным запахом тому, кто живет в кабаке, хотя бы сам он не выпил ни одной рюмки; нельзя не проникнуться мелочностью воли к тому, кто живет в обществе, не имеющем никаких стремлений, кроме мелких житейских расчетов».

«Ребенок, который боится буки, зажмуривает глаза и кричит как можно громче, что буки нет, что бука — вздор,— этим, видите ли, он ободряет себя. Мы так умны, что стараемся уверить себя, будто все, чего трусим мы, трусим единственно от того, что нет в нас силы ни на что высокое,— стараемся уверить себя, что все это вздор, что нас только пугают этим как ребенка букою, а в сущности ничего такого нет и не будет».

Үҙеңдәге бөтә ваҡлыҡты, бөтә ҡәбәхәтлекте, бысраҡлыҡты ваҡытында, ваҡытында бөтөр! Бөтә ихтыярыңды, көсөңдө бир. Аҙаҡ һуң булыр, үкенерһең, ләкин үтелгән кире әйләнеп ҡайтмаҫ. Был еңел түгел. Үҙ-үҙең менән көрәшеүҙән ауыр, ғазаплы нәмә юҡ. Ләкин үҙ-үҙеңде еңеү һине бик көслө итә. Үҙен еңгәндәр тормошта еңә ала. ¡ Бәләкәй генә нәмәнән, әйтәйек, тәмәкенән алып, үҙеңде еңергә, ҙурына тиклем еңергә тырыш. Үҙеңдең сәләмәтлегең өсөн зарарлы булған бөтә кире нәмәне еңергә ихтыяр көсөңдө ек. Таҙа тәндә — таҙа рух. Ихтыяр, ихтыяр һәм ихтыяр көсө генә һинең ауыр, ғазаплы хеҙмәтеңә юлдаш. Еңеү, иң ауыр еңеү, бик бәләкәй нәмәләрҙе еңеүҙән башлана. Тамсынан күл йыйыла. Ептән арҡан ишелә.

Берәүҙән мең була. Бәләкәй нәмә тип ҡараған тәмәкең дә — һинең ғүмереңдең, кешеләрҙең тормошо өсөн көрәшкә арналған ғүмереңдең йәшерен, аҫтыртын һәм яуыз булған дошманы. Бәләкәй аламалыҡты ғәҙәт итмә.

Былар һүҙ генә түгел— тормошом. Белəм: миңə бик, бик ауыр буласаҡ. Белгән өсөн дə шулай ҡарар итəм. Бөгөндән! Чернышевский миңə һəр саҡ уҡытыусы булып ҡаласаҡ.

Йəшəү ни тиклем ауыр! Йəшəү ни тиклем ғазаплы! Лəкин мин йəшəү яҡлы. Йəшəүҙе генə һөйəм мин. Уны хыянатһыҙ һөйөргə тейешмен.

Чернышевскийҙың мəҡəлəһен 4-се яртыла ғына уҡып сыҡтым. Ə иртəн башлағайным!

5 июнь.

Һис күңелем төшмəй генə Гончаровтың «Обломов»ын уҡый башланым. Лəкин ни күрəм?! Айырыла ла алмайым! Бына һиңə Гончаров! Характерҙар ни тиклем төрлө-төрлө! Тел ниндəй тəбиғи! Аптыраным. Кискə тиклем 100 биттəн артығыраҡ уҡып туҡтаным. Иртəн, баш арымаған саҡта, Белинскийҙың «Взгляд на русскую литературу 1847 года» мəҡəлəһен уҡып ҡуйырға булдым. Герценды уҡыу өсөн дə баштың бик саф булыуы кəрəк. Һəр һөйлəм һайын фекер, фекер, фекер.

Рəйес килеп сыҡты. Имтихандарҙы нисек биргəнен, Белинский тураһында фильм ҡарауын, Белинскийҙың тəнҡитенə Некрасовтың асыуланып йөрөүен (һинең шиғырыңа мин асыуланған кеүек, тип көлдө), аҙаҡ дуҫлашыуҙары тураһында һөйлəне.

Бөгөн Рафаэль менəн Шакир ҙа имтихан тапшыра. Ни менəн ҡайтырҙар инде?

7 июнь.

Ҡояш бешерə. Талғын ғына ел иҫə. Күңел сыуаҡ көн кеүек яҡты. Үҙ-үҙемде ҡулға алып киləм. Тартмайым. Телəһə ниндəй ваҡлыҡтарҙан үҙемде тыям. Уҡыйым һəм уҡыйым. Был тулы тормошло көндəр өсөн күңел ғазапланырлыҡ түгел. Ян һин, тормош, балҡы, гөрлə!

Кисə Тоня менəн урманда һөйлəшеп йөрөп ҡайттым. Мин үҙемде бала кеүек хəсрəтһеҙ, ғəмһеҙ итеп тойҙом. Төнө буйы, яҡтырғансы, Тоняны ҡосаҡлап ултырғым килде. Тик китаптар көтə ине. Тоняға ла иртəгə имтихан. Нимəһе менəн ул миңə яҡын? Бит мин бөтөнлəй уның менəн бергə булыу тураһында уйламайым. Һис бер уйһыҙ, борсолоуһыҙ яратам уны. Яратам мин рустарҙы. Үҙемдə əллə рус ҡаны булғанғамы? Юҡ, мин үҙемде тик башҡорт ҡына итеп тоям. Лəкин рус кешеһе

алдында миңә һәр сак рәхәт. Донъяла иң, иң ышанычлы, ябай, көслө, акыллы һәм киң күңелле кешеләр — рустар. Мин уларҙы үҙемдең бәләкәй генә тормошомдан сығып ҡына түгел, ә рус фекеренең ҙур тарихынан, әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт тарихынан сығып күрәм.

— Шул тиклем йыраҡҡа барып уҡыйһың. Һинән башҡа бында шайтан да килмәҫ,— тине Тоня. Көләштөк. Өҙөп-өҙөп кенә һандуғас һайрай, кәкүк саҡыра. Үләһдәрҙең хуш еҫе аңҡый. Тоня ултырҙы. Мин дә. Бер ҡайын сыбығына болаштыҡ... Мин, тиле, уны үптем дә алдым... Ул минең күкрәгемә башын ҡуйып оҙаҡ тынып ҡалды. Йөрәгем дөп-дөп тибә. Мин уны ҡосағыма ҡыҫтым. Һүҙҙәр шундай яғымлы. Тик улар бөтөнләй аҙ. Беҙ сәскәләр араһында ҡосаҡлашып, баштарҙы терәшеп оҙаҡ ултырҙыҡ. Мин үҙемдең ҡыйыулыҡҡа һәм уның ҡарышмауына, бер һүҙ ҙә әйтмәүенә аптыраным. «Бына һиңә урман шүрәлеһе...» Ҡояштың һуңғы нурҙары күк йөҙөн аландырған, күгелйем болоттар ҡыҙыл нурға сумып, ниндәйҙер сихырлы ҡаялар кеүек күтәрелеп тора. Беҙ етәкләшеп йылғаға йүгереп төштөк. Мин уны үҙым да йүгереп килгәндә күтәреп алып өйрөлттөм. Йылғала ҡойондоҡ, шаярҙыҡ, көләштөк.

Островскийҙың пьесаларын Ленянан алып ҡарағанда Герцендың «Былое и думы» китабы килеп сыҡты. Герцен менән Огаревтың дуҫлығы тураһында яҙылған бүлекте уҡып сығырға ине. Таптым! IV глава: «Ник и Воробьевы горы». Шунда уҡ уҡып сыҡтым. Йөрәк дөп-дөп типте. Нисектер ашҡындым... Ниндәй саф, ҙур дуҫлыҡтың башланыуы!

Тәүҙә Герцен нисектер аңлашылмаған һәм күңелһеҙ кеүек ине, хәҙер ул минең аллама әйләнде. Йәйге каникулда мин уны ныҡлап уҡыясаҡмын.

Инде хәҙер төн. Инде 8 июнь... Асыҡ тәҙрәнән ҡоштар тауышы ишетелә. Уяналар. Күк йөҙө лә ағара. Ҡарағайҙар асыҡ булып күренә башланы. Өҙөп-өҙөп кәкүк саҡырҙы ла тынды. Фәжәп!

Иҫкә ҡылт итеп Тоня менән йөрөгән мәл килеп төштө.

— Йә, кәкүктән ғүмеребеҙҙең күпмелеген һорайыҡ,— тине Тоня.

Тәүҙә минекен һораныҡ. Кәкүк алты ҡабат ҡысҡырҙы ла туҡтаны. Бына йүнһеҙ кәкүк! Тоняға ун бер тапҡыр ҡысҡырҙы.

— Һиңә бит күберәк вәғәҙә итә!— тинем. Көләштөк. Ана, тағы кәкүк саҡыра... «Гроза»ны уҡыйым.

Бер ҡарғаның ғына ҡарҡылдап ҡуйыуы сәйер тойолдо. Урманға ҡаҡлығып, яңғырап китте. Ә баҡаларҙың тауышы һис тә туҡтамай. Төн үҙенең тормошон дауам итә...

Кис. Рафаэль хаттар алып килде. Берӗне Клара Фәйрузованан (Стәрлетамаҡ детдомынан), икенсӗне — Инга Бочарева. Зоя мәктәбендә уҡыусы таныш ҡыҙ яҙған.

Төштән һуң, болоттар ойоша торғас, күк күкрәргә тотондо. Ямғыр еҫе килә башланы. Ләкин яуманы. Ваҡыт-ваҡыт күк күкрәй, йәшен ялтлап китә.

9 июнь.

Тәүге имтихан! Тапшырҙым! Рус әҙәбиәтенән дә ҡотолдом. Яҡшы! Мин ингәндә, ике генә билет ҡалғайны. Алдым. 16-сы билет: 1. Островскийҙың 60—70-се йылдарҙағы ижады. 2. Тургеневтың «Новь» романы. Ҡаптым. «Новь»ты өҫтән-мөҫтән генә беләм.

— Геннадий Николаевич, билетты алмаштырырға мөмкинме?— тим.

— Ҡара үҙең, бер балл төшәсәк,— тине Поспелов. Алдым. 1-се билет. Белинскийҙың реализм өсөн көрәше. Островскийҙың «Гроза»һы! Минекеләр! Хуш!

Төштән һуң көн болотланы.

10 июнь.

Сергей Михайлович Бондиға «Баҡыр һыбай» буйынса зачетты тапшырып ҡуйҙым. Кис Рәйес менән, һыра эсеп, һөйләшеп ултырҙыҡ.

11 июнь.

Көнө буйы политэкономиянан әҙерләндем. Кис Рәйескә киттем. Рафаэль дә унда ултыра ине. Барып ингәс тә Таҡташтың руссаға тәржемә ителгән шиғырҙарын уҡыныҡ.

Имтихандар бөткәс, мин өс көнгә Ленинградҡа барып киләм. Ә Рәйес мин ҡайтыуға пароходта Ҡазанға барыу өсөн билет әҙерләп торасаҡ. Унан пароходта Кама һәм Ағиҙел буйлап Өфөгә ҡайтасаҡбыҙ. Өфөлә Рафаэль мине көтөп, Мариятты (класташы) ҡаршылап, эштәрен бөтөрөп торорға тейеш. Редакцияларҙа һәм Союзда икебеҙҙең уртаҡ йыйынтыҡты сығарыу тураһында мәсьәләне хәл итеп, ауылға ҡайтып китергә ҡала. Унан Салауат һәм Ҡыйғы райондарында фольклор йыйнарға. Лаҡлының тау тишегенә поход яһарға. Ҡаратауға барырға, беҙҙә, Рафаэлдә ҡунаҡ булырға, колхозда эшләп алырға, балыҡ ҡармаҡлап ял итергә, район газетаһында шиғырҙар баҫтырырға, хәл-көс йыйнап, яңынан Мәскәүгә килергә — быйылғы пландар шул.

16 июнь.

Политэкономиянан да имтихан тапшырылды. Отлично. Үҙем дә ҡәнәғәт. Әҙәбиәткә әҙерләнгәндәге кеүек күп уҡырға тура килмәне. Леня менән бергәләп әҙерләндек. Был көндәрҙә яҡшы йоҡланым, арыманым. Һәр иртә һайын һәм кис ятып алдынан һалҡын һыу менән ҡойонам. Миша менән быуаға барып һыу ҙа индек. Аңлашылмаған һорауҙарҙы унан һорайым. Сөнки ул Абаканда тарих факультетында уҡыған. Күп белә. Күңеле төшкәндә, яҡшы итеп аңлата. Тик ҡыҙҙарҙан бушамай. Люба менән Галя килеп миңә лә ҡамасаулайҙар. Леня өндәшмәй. Ә мин ҡыуам уларҙы. Миша быны яратмай.

Руслан Смоленскиға ҡайтып китте. Уның койкаһы урынына түңәрәк өҫтәлде ултыртып, өҫтөн сәскәләр менән тултырҙыҡ. Тәҙрәләрҙе һәр ваҡыт асып ҡуябыҙ. Төндә лә асыҡ ҡалалар. Тик йоҡлай алмай ятҡанда мин уларҙы ябып ҡуям. Бер уйға батһам, һис сығып булмай. Күҙ алдымдан әллә күпме кешеләр үтә. Уйҙарымда әллә нимәләр эшләп бөтәм. Ауылға ҡайтып, үҙебеҙҙең баҡсаға ҡарағай, шыршы, йүкә, ҡайын, емеш-еләк ултыртып бөтәм! Мәктәп алдындағы элекке партизандар ҡәберенә мәктәп балалары менән ағастар килтереп ултыртам, ҡәберҙе яҡшы рәшәткә менән кәртәләп, йәшел буяу менән буяп ҡуям. Клуб тирәһенә ауыл йәштәре менән ял баҡсаһы эшләп, төрлө ағастар үҫтереп ебәрәм!.. Ни генә килмәй башҡа. Бөтә ауыл баҡсаларға сума!..

Рафаэль менән ауылдар буйлап йөрөйбөҙ, бик күп йырҙар, легендалар һәм әкиәттәр йыябыҙ. Мин «Салауат»ты һоҡланғыс әйбер итеп яҙып бөтәм һәм ҙур роман яҙырға тотонам. Балалар әҙәбиәте тураһындағы мәсьәләне, ғөмүмән, хәҙерге әҙәбиәттең торошо тураһындағы мәсьәләләрҙе күтәреп сығам. Әҙәбиәттең үҫешенә Белинский кеүек ярҙам итәм, Ғафури, Сәләм, Хәй һәм һуғышта һәләк булып ҡалған башҡа яҙыусы, шағирҙарҙың тормошо, ижад юлы тураһында яҡшы китаптар яҙам. Иң көслө йәштәрҙе туплап, әҙәбиәтте бөтә Союз уҡый торған ҙур һәм бай әҙәбиәткә әйләндерәбеҙ...

Йоҡо килмәй. Әллә ниндәй ҡулдан килмәҫлек уйҙар инә башҡа. Ниңә кеше шул тиклем йүләр була икән! Күпме өмөт! Күпме хыял! Ниндәй ҙур маҡсат! Әйтерһең, тормош мине бик ҙур эштәр эшләргә үҙе саҡырған! Бөтәһе лә күҙ алдынан үтә. Мин үҙемде ниндәйҙер бөйөк бер китап уҡыған кеүек хис итәм. Йөрәк ашҡына! Осам... Ләкин баҫылып ҡалам һәм үҙемдең хыялдарым бишегендә үҙем дә һиҙмәҫтән иҫереп йоҡлап китәм...

Кисә Тоня менән урманда йөрөп ҡайттыҡ. Ул, ҡайтайыҡ, имтиханға әҙерлән, ти. Мин аҙ ғына йөрөйөк, уҡып бөттөм бит, тим. Тағы аҙ ғына йөрөйбөҙ. Минең уны ҡосаҡлап үпкем

килә, ҡыйыулыҡ етмәй... Ул да хәҙер минең алда ҡыйыу түгел...

35 йәшлек сағында ул үҙенең романдарын бер-береһенә бәйләп, 19-сы быуаттың гигант эпопеяһына беркетеп «кешелек комедияһы» тип атай. Ул уны Дантеның «Божественная комедия»һына ҡаршы баҫтыра. Тормош инде урта быуат шағирының идеалдарынан алыҫ атлаған. Ул үҙенең йырсыһын тыуҙыра.

Бальзак үҙенең өҫтәлендә ултырған Наполеон статуэткаһының ҡылысына: «Я пером докончу то, чего ему не удалось довершить шпагой»,— тигән һүҙҙәрҙе яҙып ҡуя. Буржуаз донъяның ысынбарлығын художестволы һүҙ менән күрһәтеү — уҡыусыны буржуаз тереклек итеү менән килешеп ҡарау идеяһынан азат итә. Килешергә ярамай! Бальзак үҙе һис тә революционер түгел, ләкин үҙенең әҫәрҙәре менән уҡыусыны килешмәүгә, көрәшеүгә саҡыра.

Бальзак стиль һәм тел өлкәһендә лә тотош бер революция яһай һәм быға ҡаршы төкөрөктәрен сәсеп, ажғырып сыҡҡан рецензенттарға: «Как вы смеете называть себя писателями в присутствии литературного маршала Франции?! Только Готье, Гюго да я знаем французский язык!»— тип әйтергә һис тә уңайһыҙланып тормай.

Бальзак романтиктарҙың тормоштан ҡасыуҙарына, үҙҙәренең татлы хыялдарын сәңгелдәктә тирбәтеүҙәренә ҡаршы сыға. Әҙәбиәттә ул тормоштоң йәнле көҙгөһө итеп күрә. Тормош дөрөҫлөгөн асып һала. Энциклопедик аҡыл эйәһе Кювье методын әҙәбиәткә индерә. Үҙ геройҙарының тормошон бөтә ҡатлаулылығында тәрән тоя белеүҙә Бальзак иң көслө яҙыусыларҙың береһенә әйләнә.

Беҙҙең әҙәбиәттәге схематизм нәҡ шул геройҙарҙың тормошона ҙур психологик, ҙур кеше, ҙур идеал менән инә белмәүҙән, кешеләрҙе тәрән итеп өйрәнә белмәүҙән килә. Ә мин Әхнәф Кирәйҙең «Нарыштау итәгендә» романын хатта уҡый ҙа алманым. Йәй нисек тә булһа үҙемде мәжбүр итеп ҡарайым әле.

Ни тиклем ныҡышмалы өйрәнергә кәрәк классиктарҙан! Рустарҙан, француздарҙан, инглиздәрҙән, немецтарҙан — барыһынан да! Һәм тормоштан!

Алда бит ҡот осҡос эш тора! Ҡурҡыныс та, шатлыҡлы ла! Минең матди мөмкинлектәрем бик тар. Шулай ҙа алға ҡуйған маҡсатты үтәмәйенсә ҡуймаясаҡмын. Бальзак менән танышыу миңә көс бирә кеүек.

Ярай, бик алыҫҡа киттем. Ә төн бик ҡыҫҡа. Сәғәт 4-се 20 минут. Ҡоштар ҙа сутылдаша башланы. Әтәстәр ҡысҡыра.

Миңә оҙаҡ йәшәүҙән бигерәк, эстәлеклерәк йәшәп ҡалырға кәрәк. Башҡа рәхәтлек хәҙер инде минең өсөн кәрәкмәй ҙә!

Бальзак өсөн түбән һәм юғары темалар юҡ, ә тормош ҡына бар. Ә тормошта — бөтәһе лә!

Бальзактың фажиғәһе — капиталистик донъяға ҡәбер ҡазыусыны — пролетариатты күрмәүендә. Ул алға ҡарай алмай, арый, талсыға. Ул үҙ романдарының геройына, үҙ заманының ҡорбанына әйләнә. Ҡот осҡос эш уны яндыра. Үлер алдынан ғына ул графиня Эвелина Ганскаяға өйләнә. Ҙур йөрәк тибеүҙән туҡтай.

Тик ул үҙенең икенсе, мәңгелек ғүмерен тыуҙырып ҡалдырырға өлгөргән була инде.

Ярай, бер нисә сәғәткә хуш, Бальзак. Хәҙер инде 5-се ярты. Миңә ҡойоноп алырға ла аҙыраҡ ял итергә кәрәк.

20 июнь.

Сәғәт 11-ҙә килеп торҙоҡ. Арлы-бирле йыуындыҡ та ашханаға ашыҡтыҡ. Рауилдың 24-е көнө имтиханы. Шунан уларҙың геодезиянан Мәскәү янындағы территорияла практикалары башлана.

«Шагреневая кожа»ны уҡып сыҡтым.

Ял итергә сыҡҡанда Тоня менән Жаннаны осраттым. Икеһе лә бик матурланып киткәндәр, яңы күлдәктәр кейгәндәр. Жаннаны оҙатып, Тоня менән йылға буйына төшөп киттек. Аяҡ аҫты ямғырҙан һуң еүеш. Кис шундай тымыҡ, йылы. Ер өҫтөн томан ҡаплаған. Косилка менән сабылған клевер күкрәкте ҡытыҡлап торған дымлы бесән еҫе аңҡыта. Рәхәт! Ай йөҙә...

Тоняны оҙатып ҡуйҙым. Ике ҡабат үбештек тә ул башҡортса:

— Хуш бул!— тине.— Иртәгә ҡайын төбөнә ваҡытында сыҡ йәме, Рәми!— тине.

21 июнь.

Ял көнө еттеме, бөтә Мәскәү урмандарға, яландарға тарала. Бөтә йылға буйы, урман араһы балалар, әсәләр, аталар, ҡыҙҙар, егеттәр менән тулған. Гармун, патефон тауыштары яңғырай. Пионер лагерына килгән балаларҙың йыр тауыштары, барабан һуғып, борғо ҡысҡыртыуҙары күңелгә әллә ниндәй шатлыҡ индерә. Балалар күбәләктәр артынан үҙҙәренең төрлө ҡоралдары менән үҙҙәре лә күбәләк кеүек йүгерәләр. Өйкөм-өйкөм булып эшселәр ағас төптәрендә күләгә аҫтында үлән йәймәһенә ятып һыра эсәләр. Аулағыраҡ урындарҙа ҡыҙҙар — егеттәрҙе, егеттәр ҡыҙҙарҙы иркәләп, ҡосаҡлашып һөйләшеп ултыралар. Тик беҙ, студенттар ғына, уларҙан алыҫыраҡ ки-

теп имтихандарға әҙерләнеп ятабыҙ. Йылға аръяғындағы тауға, үҙемдең ҡуш ҡарағай янына, күтәрелдем. Йылғала һыу инеп алғас, рәхәт булып китте. Төнө буйы уҡыу арытҡан аҙыраҡ. Таҫтамалды башҡа сәллә итеп, ҡояш һуҡмаһын өсөн, яҡшылап ураным да Бальзакты уҡырға тотондом. Бөтөнләй икенсе донъяға сумаһың, бөтөнләй икенсе кешеләр! «Отец Горио»ға тотондом.

22 июнь.

Уйлай башым, уйлай башым,
Уйлай ҙа ул аптырай.
Уҫаҡ япраҡтары кеүек
Тик йөрәгем ҡалтырай...

Бына мин аҡланда ятам. Уҫаҡ төбөнә иртән үк килеп уҡый башланым.

«Отец Горио» миңә бигерәк тә оҡшай. Ниндәй характерҙар, ниндәй тәрәндәр! Растиньяк, Вотрен, отец Горио, хужа ҡатын Воке — бөтәһе лә төрлө-төрлө. Бигерәк тә каторжан Вотрен тураһында уҡығанда оҙаҡ уйланып ултырҙым. Әсәнең Растиньякка яҙған хатын уҡып, Дилараның әсә хаҡындағы фекерен уйлап, үкереп иланым...

23 июнь.

Көнбайыш әҙәбиәтенән консультация булды. Ҡайтҡас та уҡырға ултырҙым. Англичандарҙы уҡырға өлгөрөп булмаҫ, ахыры. Иҫ киткес күп уҡырға кәрәк. Баш, күҙҙәр әллә нисек сыҙай...

Иртәгә — һуңғы штурм!

Унан IV курс! Хатта күңел ышанмай.

Иртәгә нишләһәм дә имтиханды тапшырырға тейешмен! Леня ла тырыша. Ә Миша артыҡ ултырмай. Ваҡытында ятып йоҡлай. Йә Любаһына китә. Ул, әлбиттә, барыһын да тиерлек уҡыған, күп белә. Ә мин Көнбайыш әҙәбиәтенә быға тиклем ҡул да тейҙермәгәнмен. Ни тиклем күп нәмәне белмәгәнемде әле генә күрәм!

25 июнь.

Һуңғы һөжүм!

Төштән һуң — Мәскәүгә! Әле Стендалдең «Ҡыҙыл һәм ҡара» романын уҡып сыҡтым. Хәҙер мин Горькийҙың ни өсөн Стендалде үҙенең уҡытыусыһы итеп иҫәпләүен аңлайым. Ниндәй тәрән эске донъя! Иҫ киткес психологик оҫталыҡ менән яҙылған.

Кис.

Сыҡманы эш! Йән көйә, үкендерә. Уҡып ултырып, һуңлағанмын да ҡуйғанмын! Барһам, институтта инде имтихандар бөткәйне. Тағы ла бер төн түҙергә! Ә баш сатнап килә. Бөтә тән туҡмалған кеүек.

Почтаға инеп Мәрйәм апа ебәргән 200 һум аҡсаны һәм стипендияны (445 һум) алдым да ҡайтып киттем. Фәҙәттәгесә икенсе вагонға инһәм, Сергей Васильевич Смирнов, беҙҙең ижади семинар етәксеһе, тора! Йылмайып ҡулын һуҙҙы — күрештек. Һөйләшеп киттек. «Һин миңә зачет тапшырманың булһа кәрәк?»— тине бер саҡ Сергей Васильевич.

— Юҡ. Мин бит семинарҙарҙа һис тә сығыш яһаманым. Бына 3 йыл инде һеҙҙең семинарҙа йөрөйөм үҙем.

— Зачеткаң бындамы һуң?

— Бында,— тип, мин зачеткамды сығарҙым. Ул зачет ҡуйҙы ла:

— Ничего, көҙгә яҡшы итеп шифырҙар яҙып килтерерһең. Тикшерербеҙ,— тине.— Һин үҙең Башҡортостандан бит әле?

— Эйе.

— Бөгөн һеҙҙең Назар Нәжмиҙе күрҙем. Һеҙҙең «Әҙәби Башҡортостан» журналын тикшереү булып үтте.

Назар Нәжми, Мостай Кәрим тураһында һүҙ сығып китте. Михаил Дудинды ла иҫкә алдыҡ. Мин унан институтта уҡыған йылдары, элек ҡайҙа эшләүен, фронтта булыуы хаҡында һораштым. Сергей Васильевич үҙенең метро төҙөүҙә проходчик булып эшләүен, панфиловсылар менән бергә Мәскәү эргәһендәге һуғышта булыуын һөйләне. Ә бит үҙе көмрө ул...

Переделкиноға тиклем шулай һөйләшеп килдек. Ул ары, Мичуринскиға, китте. Миңә күңелле булып китте. Бөгөнгө хәсрәт тә йомшарғандай булды. Шундай ҙур кешеләрҙең ябайлығы шатландыра. Ниндәйҙер эске көс өҫтәлә үҙеңә!

Аҙыраҡ ҡына уҡыным да станцияға Тоняны ҡаршыларға киттем. Төн айлы, йылы. Бер күбә төбөнә килеп ултырҙыҡ та сәғәт 12-гә тиклем ул минең ҡосаҡта йырҙар йырланы, мине төрлөсә ирештерҙе. Мин бик аҙ һөйләнем. Үпкем килмәне. Нисектер мин уны һалҡын яратам. Ул мине бер нәмәһе менән дә һоҡландырмай, тик уның менән бергә булғанда, миңә күңелле, башҡа нәмәләр хаҡында аҙ ғына булһа ла онотоп торам. Тик шул ғына. Ә йөрәк күҙ йәштәре менән янып яратҡан төндәрҙе, ғазапланыуҙарҙы һағына... Һәр саҡ уның тураһында уйлау миңә рәхәт тә, ғазаплы ла... Ахыры, мин бер кемде лә уны яратҡан һымаҡ һөйә алмамдыр! Ниңә шул тиклем үкенесле булды тәүге тойғолар, тәүге хыялдар... Шул мөхәббәт алдында хәҙер мин бик, бик түбәндә кеүекмен...

Ә Дилара? Белмәйем мин уны. Бәлки, улдыр минең бәхетем? Ә ул көтә мине. Нисек күрешербеҙ уның менән? Ниндәй ул? Ул ысынлап та хаттарындағыса микән? Әгәр ҙә ул яратып, мин яратмаһам, ни тиклем ауыр буласаҡ! Уның яҙмышы өсөн мин нисектер ҡурҡам. Их һин, тормош!.. Күңел шул тиклем күпте көтә, күпте өмөт итә... Ҙур мөхәббәт менән, бер генә кеше менән матур, тулы, бәхетле тормош менән йәшәге килә. Барһыңмы һин, шундай көтөлгән көн? Барһыңмы алда? Белмәйем. Ниндәй йүләр мин... Йоко килмәй. Ә иртәгә өсөнсө курсты тамамларға. Унан тағы алға атларға кәрәк...

26 июнь.

Хуш бул, хуш бул, өсөнсө йыл! Бөгөн инде мин дүртенсе курс студенты! Ышаныуы ла ауыр. Әле генә мәктәп парталарында Мәрйәм апаны, Мөсәлиә Ғәлиевнаны тыңлап ултыра инем бит! Ваҡыт ниндәй тиҙ үтә!

Һуңғы имтихан — «бишле»! Ләкин иң ҡурҡҡан билет эләкте. Ныҡыша торғас, имтиханды кафедра мөдире Валентина Александровна Дынниктың үҙенә тапшырҙым.

Ҡайтҡанда Егор Исаев менән бергә ҡайттыҡ. Тәүге курста уның менән булған бәрелештә һөйләп көлдөм. «Башта һуғышып яҡынайыу һәйбәтерәк»,— тине Жора.

27 июнь.

Дмитрий Ефимович Ляшкевич менән Ленинградҡа китеүселәр тураһында һөйләштем. Дамдинов «юғалған» икән. Шуның урынына мине алып барырға булдылар. Автобус менән барырға. Курсташтар менән башҡаса бергәләп йөрөргә тура килмәйәсәк. Беҙҙең курстан Ванцет Чукраев, Миша Вавилин, Леня Соловьев һәм Виталий Буханов бара. Минең менән — бишәүбеҙ. Ҡалған юлдаштар — институттың студияһында уҡыған үҙбәк яҙыусылары һәм аспиранттар.

Мәскәүҙән Рафаэль менән бергәләп ҡайттыҡ. Поездан төшкәс, Тоня ла осраны. Рафаэль гел шаяртып килде. Мин Тоня менән һөйләшмәнем. Кисә асыуланышҡайныҡ. Имтихан бирep ҡайтҡас, уны күрергә тип сыҡһам, Жанна менән беҙҙең иҫерек студенттар янында ураланып йөрөй. Егор Цагараев та, Иван Завалин да лыҡма иҫеректәр. Ә Тоня һәм Жанна улар менән шаярып, үҙҙәренә ниндәйҙер ҡыҙыҡ табалар. Мин Тоняға, мне все это противно, тинем. Ул көлдөрөргә тырышһа ла, көлмәнем. Бөгөн дә Тоня менән һөйләшке килмәй. Уны оҙатып барҙым да:

— Йә, хуш, Тоня. Мин китәм,— тинем.

Ул аптырап ҡалды.

— Нисек, Рафаэль түгелме ни? Һин бөгөн ҡурҡынысһың, Рәми.— Бер аҙ тынып ҡалғандан һуң, ул ҡалтыранған тауыш менән:

— Хат яҙырһың, Рәми, йәме?— тине.

— Ярай.

Тағы тынып ҡалдыҡ.

— Йә, хуш бул, Тоня.

Ул, тулҡынланып өндәшмәй торҙо ла, ҡапыл минең ҡосаҡҡа ташланды һәм ҡайнар ирендәре менән үбеп алды. Мин дә үптем дә ашығып китеп барҙым. Ул, бер аҙ баҫып торғандан һуң, өйҙәренә табан йүгерҙе һәм ҡараңғыға инеп юғалды.

Мин үҙемә-үҙем асыуландым. Нисектер күңел тулып китте һәм тамаҡҡа утлы төйөр тығылды...

Тихоновтарға инеп, Сәләм тураһында һорашып сығырға булдым. Ләкин уларҙа мәжлес бара ине. Тетя Маруся уның ҡатынын ғына саҡырып сығарҙы. Мин Ленинградта 1939 йылда Сәләмдең үлеп ҡалыуын, ә хәҙер миңә уның ҡәберен табырға кәрәклеген әйттем. Ләкин ул хәтерләмәне.

— Ниндәй айҙа үлде һуң ул?— тип һораны Тихоновтың ҡатыны.

— Бына ошо июнь, июль айҙарында. «Литературная газета»ла Николай Семенович үҙе некролог яҙып сыҡты. Ул Сәләмде яҡшы белергә тейеш. Ул беҙҙең бик ҙур шағир ине...

Эш сыҡманы. Ашығып бүлмәгә ҡайттым да плащты, бәләкәй сумаҙанды алып Рафаэлгә индем. Рафаэль күпергә тиклем оҙатып барҙы. Тиҙҙән электричка ла килеп етте. Институтҡа барғанда егеттәр үҙебеҙҙең аудиторияла йоҡлайҙар ине. Тик Ванцет ҡына йоҡоло тауыш менән:

— Ә, һин килеп еттеңме, Рәми, бына буш матрац бар, ал да өҫтәлгә ятып йоҡла,— тине. Коридорға сыҡтым да көндәлек яҙырға ултырҙым...

28 июнь.

Автобус сәғәт 5-тә генә килде. Ҡуҙғалдыҡ. Мәскәү таң нурҙарына мансылған. Пушкин майҙанына сыҡтыҡ та Горький урамы буйлап елдерәбеҙ. Майҙанда мәғрүр Пушкин оҙатып ҡалды, ә Белорус вокзалы эргәһенән үткәндә ҡулына таяғын һәм эшләпәһен тотҡан Горький күтәрелде. Мин улар тураһында сәйер тулҡынланыу менән уйлап барҙым. Улар минең иң яратҡан уҡытыусыларым. Ләкин мин уларҙы бик аҙ беләм әле. Миңә шул тиклем күп белергә һәм Бальзак һымаҡ эшләргә кәрәк! Ҙур өмөт һаман ҙурая ла ҙурая. Мин яҙырға тейешмен. Минең шиғырҙар ҙа, поэмалар ҙа, хикәйәләр ҙә, роман да, пьесалар ҙа, сценарий ҙа, тәнҡит мәҡәләләре лә һәм фольклор тураһында китап та яҙғым килә. Сәләмдең тормошо һәм ижады тураһында ла яҙғым килә. Ә ваҡыт шул тиклем аҙ, шул тик-

лем ҡыҫҡа. Миңә инде 20 йәш тә тулды. Ә бер ни эшләргә өлгөрмәнем! Ә Добролюбов минең йәштә күпме эш эшләгән! Туҡай бөйөк шиғырҙар яҙған! Мин бер нәмә лә эшләргә өлгөрмәй һүнеп ҡалырмын кеүек. Был ҡурҡыта... Тиҙерәк, тиҙерәк, тиҙерәк йәшәргә кәрәк!

Новгород! Тарих буйынса күпме уҡылған бөйөк Новгород! Иң боронғо рус ҡалаларының береһе!

Виталий менән яр башына килеп ултырҙыҡ. Аръяҡта — Кремль. Уның эргәһендәге баҡсанан музыка яңғырай.

Ҡунаҡханала бөтәбеҙгә лә урын етмәне. Автобуста йоҡларға булдыҡ. Мин бөгөн йоҡламаҫҡа ҡарар иттем.

Хәҙер инде төн. Сәғәт 12 булып килә. Ләкин эңер төшөп килгәндәге кеүек яп-яҡты. Башта ғәжәпләндем. Бит бында хәҙер аҡ төндәр! Шунан ары ҡараңғы булмай. Бөтә төньяҡ, таң атып килгәндәге һымаҡ, алһыу төҫкә ингән. Новгород батырҙар йоҡоһо менән йоҡлай. Новгородта һуғышта ни бары 48 йорт ҡына бомба ярсыҡтарынан сәләмәт ҡалған. Ә ҡалған йорттар бөтәһе лә тиерлек йә емерелгән, йә ватылған. Шул харабалар өҫтөнән яңы бөйөк Новгород күтәрелгән.

Мин аллеялар буйлап, бушап ҡалған баҡсаның хуш еҫтәрен һулай-һулай, Кремль стеналарына ҡарап, алға атлайым. Минең менән — уйҙарым ғына бергә. Ҡыҙыҡ бит тормош. Кем уйлаған минең бындай аҡ төндә боронғо рус ҡалаһының ҡарт стеналары эргәһендә бер заман уйланып ултырырҙы? Мин үҙемде әкиәттәге һымаҡ хис итәм. Алһыу күк йөҙөнә күтәрелгән сиркәүҙәрҙең тәреләре миндә үҙемә лә аңлашылмаған тойғолар уята. Минең улар менән бер төрлө уртаҡлығым булмаһа ла, улар нисектер яҡын. Миндә әсәйемдән килгән рус ҡаны бар. Рус йырҙарын тыңлағанда һәм сиркәү һуҡҡан саҡтарҙа, рус ҡатындарының эске матурлығы тураһында уйлағанда, йә рустың тапҡыр һүҙҙәрен, мәҡәл-әйтемдәрен ишеткәндә, Васнецовтың «Өс баһадир»ына, Репиндың «Бурлактар»ына ҡарағанда, Стасовтың баһадир һынын күргәндә, Пушкиндың һәм Некрасовтың шиғырҙарын уҡығанда, миндә тик рустарға ғына хас булған тойғо уяна, йөрәк нисектер ярһып тибә һәм күңел рәхәт бер ғорурлыҡ менән тула. Бына әле, Новгородҡа ҡарап ултырғанда, мин тағы ла шул иң матур тойғоларҙы кисерҙем.

О, рус ере!

Был һүҙҙәрҙе мин рус кешеһе кеүек аңлайым. Тән сымырҙап китә һәм беләктәргә әллә ниндәй көс инә. Мине рус ҡыҙы тыуҙырғаны өсөн мин балаларса шатланам. Ләкин мин башҡортса уйлайым, туған телем итеп башҡортса һөйләшәм һәм башҡорт булыуым өсөн ғорурланам. Тик мин үҙемдең башҡортлоғом менән сикләнеүҙән бик алыҫмын.

Ҡояш сығыр саҡта ғына автобуҫка кире ҡайттым. Барыһы ла йоҡлай. Йоҡағыраҡ ябынғандар дуға бөгә. Николайға плащымды сисеп яптым. Ул уянып китте.

— Һин ниңә йоҡламай ултыраһың?— тине ул, күҙҙәрен ыуып.

— Мин әле генә килдем. Кремлде ҡарап йөрөнөм.

— Әйҙә киттекме тағы?

— Киттек.

Беҙ Кремлгә инеүгә, ямғыр яуа башланы. «Россияның мең йыллығы» һәйкәле аҫтына инеп ултырҙыҡ. Һәйкәл таҡта менән көпләнгән. Ҙур ремонт бара. Николай һәйкәл тураһындағы һүҙҙәрҙе күсереп алды:

«Сооружен в 1862 году по проекту художника Мекешина М. О. Идея создания памятника, возникшая накануне Крестьянской реформы 1861 г., когда Россия переживала политическую обстановку, характеризованную В. И. Лениным «как революционная ситуация», преследовала цель пропаганды незыблемости самодержавного строя в России. Однако памятник далеко выходит за эти рамки, на нем представлена богатейшая галерея выдающихся деятелей России с древнейших времен до середины 19-го столетия. Среди фигур, помещенных на памятнике, государственные деятели: Владимир Святославич, Ярослав Мудрый, Владимир Мономах, Иван III, Петр I. Народные герои: Александр Невский, Дмитрий Донской, Дмитрий Пожарский, Кузьма Минин, Иван Сусанин, Богдан Хмельницкий. Выдающиеся полководцы: Румянцев, Суворов, Кутузов, флотоводцы Лазарев, Нахимов. Деятели наук, литературы и искусства: Ломоносов, Пушкин, Лермонтов, Гоголь, Глинка, Брюллов. Памятник отлит в Петербурге, высота его 15 метров. В 1943 году памятник был разобран немецко-фашистскими захватчиками. В конце 1944 года памятник полностью восстановлен».

Бер ҡартты тотоп алып шул хаҡта һөйләттек. Немецтар һәйкәлде, Германияға трофей итеп, үҙҙәренең музейҙарына оҙатыу өсөн бөтөнләй әҙерләп бөткән була. Тәүҙә уны новгородлылар немец фашистарының бомбаларынан һаҡлау өсөн быҫҡы онтаҡтары менән күмеп ҡуялар. Ләкин уны немецтар бик тиҙ табып ала. Германияға оҙатырға әҙерләйҙәр. Ләкин беҙҙең ғәскәрҙәр ҡотҡарырға өлгөрә.

Һәйкәлдең осона ҙур крест һәм сәмреғош һыны төшөрөлгән.

Беҙ ҡайтҡанда егеттәр уянғайны инде. Ашханаға индек. Николай менән вино эсеп йылынып алдыҡ. Аҙаҡ автобус менән йәнә Кремлгә киттек.

Софийский соборҙы ҡараныҡ (1045—1050). Владимир Ярославич тарафынан һалдырылған. Софийский собор ҡаршыһында данлыҡлы Гранатовая палата урынлашҡан. Әле унда ремонт бара.

Кеше үҙе тураһында, үҙенең яҡшылығын насарлығына ҡарағанда күберәк белгеһе килә. Был, минеңсә, кеше тәбиғәтенең йомшаҡлығы. Үҙеңдең яҡшылығыңды ла, насарлығыңды ла кешеләрҙең мөнәсәбәтенән белергә тейешһең. Кешелә үҙеңдең яратҡан сифаттарыңды күреү — ул кешене һиңә һиҙелмәҫтән яҡын итә, кешенең үҙен ҙурайта, матурлай. Дуҫлыҡты һүҙҙәр, анттар менән тотоп тороу мөмкин түгел. Әгәр ҙә бер-береңә ышаныс юғала икән, дуҫлыҡ та юғала. Шуның өсөн бер-береңде аңлай белеүҙе үҫтерергә, бер-береңде үҙ-ара байыҡтырырға кәрәк. Дуҫың һине үҫтерһең, һин уны үҫтер! Минең шундай дуҫлығым бармы? Әйтеүе нисектер ҡурҡыныс.

Сәғәт иртәнге 11-ҙә Новгородтан сығып киттек.

29 июнь.

Ленинград! Беренсе туҡталған урын — Әҙәбиәтселәр йорто. Аҙаҡ Нева ярҙарына килдек. Ҡаршыбыҙҙа — «Аврора». Виталий минең эргәлә тороп тирә-яҡты күҙәтә.

— Здесь больше неба,— ти. «Европа» ҡунаҡханаһына киттек. Киске аштан һуң Леня, Ванцет, Миша, Виталий Невский проспекты буйлап сыҡтыҡ. Урамда көстәрҙе, тындарҙы үлсәттек. 50 кг һығам, 4 литр ярым өрәм.

30 июнь.

«Европа»ла, юлда арып килгәнлектән, йомшаҡ урынға ятҡас уҡ, һөйәктәр иреп киткән кеүек булды. Бишебеҙгә бер номер бирҙеләр. Ап-аҡ итеп түшәлгән койкалар, өҫтәл, ултырғыс, телефон, диван... Йәнең теләгәнсә йәшә — аҡсаң ғына булһын. Мин ғүмеремдә беренсе ҡабат ҡунаҡханала туҡтаддым.

Ленинградтың тәүге башлап Петр I тарафынан һалыныуын (1703), уның үҫеш тарихын, революция көндәрендәге мөһим урындарын һәм хәҙерге ҙур әһәмиәтле ерҙәрен ҡарарға тейешбеҙ.

1—10 октябрь.

Нимәлер етмәй. Иң-иң ҡәҙерле нәмәмде юғалтҡан кеүекмен. Тик бер өмөт кенә бар: яҙырға тейешмен, яҙа аласаҡмын. Ләкин элекке кеүек йәшәй аласаҡмынмы — белмәйем. Йәрәк утһыҙ, янмай ҙа, тулҡынланмай ҙа. Ниҙер көтәм, ниҙер эҙләйем — нимә? Үҙемә лә аңлашылмай. Башҡа саҡта мин яна торғайным, кисерә торғайным, хәҙерге хәлгә бер ҡасан да осраҡаным юҡ. Төндәрен йоҡлай алмайым. Уйланам да уйланам. Утты яҡтыртам да үҙемде уҡырға мәжбүр итәм. Берҙән-бер йыуанысым — һүҙҙәр! Тел өҫтөндә эшләйем. Лекцияларға бар-

майынса, көндәр буйы Ленин китапханаһында ултырып, һүҙлек төҙөйөм. Халыҡтың тел байлығы уның иң матур легендаларында, йырҙарында, мәҡәл һәм әйтемдәрендә. Бына ун көн инде «Батырҙар тураһында эпос» китабын күсереп ултырҙым. «Мәргән менән Маянһылыу», «Юлай менән Салауат», «Ҡараһаҡал» һәм «Аҡбуҙат» легендаларын яҙып алдым.

Н. Крашенинниковтың хикәйәләрен уҡып сыҡтым. Уларҙа, ысынлап та, элекке Башҡортостандың үлә барыуын күрәһең. Тик миңә Крашенинниковтың башҡорттарҙы гел генә буйһоноусан кеше итеп һүрәтләргә тырышыуы оҡшамай. Улар бөтәһе лә иҙелгән, кәмһетелгән, тормошҡа ризаһыҙлыҡ күрһәтмәйҙәр. Был башҡорт тарихына тик бер яҡлы ғына ҡарау. Ә Салауат кеүек азатлыҡ өсөн күтәрелгән кешеләрҙе телгә лә алыу юҡ. Был бөтөнләй бер яҡлы! Шулай ҙа был хикәйәләр миңә Салауат хаҡында яҙыу өсөн күп нәмәләр бирҙе. Салауат тураһында поэманың пландары тағы ла үҙгәрҙе. Легендалар ғына етмәй. Башҡортостан тарихын һәм уның хаҡында ниндәй әҙәбиәт бар — бөтә нәмәне уҡып өйрәнергә кәрәк. Минең Салауат бөтөнләй ҙур һәм яңы, тулы булырға тейеш. Хәҙергә мин уны тыуҙыра алмайым. Ләкин ул минең башымдан сыҡмай. Поэма хаҡында уйламаған көнөм юҡ минең. Нимә генә уҡыһам да, нимә генә ишетһәм дә, минең күҙ алдыма Пугачев һәм Салауат, халыҡтар дуҫлығының көрәштә нығыуы, Башҡортостандың ауыр үткәндәре тора. Башҡортостан тураһында В. И. Даль, С. Т. Аксаков, Р. Г. Игнатьев, М. Е. Салтыков-Щедрин, Л. Н. Толстой, П. И. Добротворский, Глеб Успенский, Д. Н. Мамин-Сибиряк, Н. В. Ремезов, А. М. Горький һәм башҡа бөтә яҙыусы һәм тарихсыларҙың яҙмаларын уҡып сығырға кәрәк миңә, уларҙы тәржемә итергә һәм улар хаҡында үҙемә лә яҙырға кәрәк. Был мине байыҡтырасаҡ ҡына.

Уйлап ҡараһаң, Башҡортостан тормошонан күпме нәмә яҙырға мөмкин! Башҡорттарҙың Батыйхан менән һуғышыуҙары, Кузьма Минин һәм Дмитрий Пожарский ғәскәренә ҡушылып, поляк интервенттары менән һуғышыуы, 1812 йылғы Ватан һуғышында үҙ ғәскәрҙәре менән Парижға барып инеүҙәре, Суворов ғәскәрҙәре менән Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнашыуҙары, Пугачев хәрәкәтенең төп көсө булыуҙары. Рустәрәк һуғышында Севастополде яҡлашыуҙары, Бөйөк Октябрь көндәрендә Петроград өсөн һуғышыуҙары, Шәһит Хоҙайбирҙиндың тормошо. Ватан һуғышы көндәрендә Башҡорт дивизияһының үтелгән юлдары һәм генерал Шайморатовтың, Таһир Күсимовтың, Байғужа Сәйетғәлиндың, Батыр Нафиҡовтың, Зөбәй Үтәғоловтың, Муса Гәрәевтың һәм тағы әллә күпме кешеләрҙең тормоштары хаҡында ни саҡлы әйберҙәр яҙырға булыр ине! Былар беҙҙең гүзәл тарихыбыҙ түгелме һуң? Беҙгә

ғорурланмаҫка мөмкинме һуң? Беҙ, әлбиттә, ғорурланабыҙ, ләкин эшләмәйбеҙ. Үҙебеҙҙең тарихҡа, гүзәл кешеләребеҙгә ғәмһеҙ ҡарайбыҙ. Халыҡ ижадын, уның гүзәл ҡомартҡыларын йыймайбыҙ, тейешенсә өйрәнмәйбеҙ, яҡшы итеп эшкәртмәйбеҙ. Күпме дәртле кешеләрҙе милләтселектә ғәйепләп, уларға ярҙам итмәйенсә, һәләк итәбеҙ. Белем етмәй, хужа була белеү етмәй, намыҫ етмәй, тәүәккәл рухлы булыу етмәй, ныҡышмалылыҡ етмәй беҙгә. Беҙ бик бәләкәй эш эшләйбеҙ. Ә халыҡ ҙур эш көтә. Уның үҙ улдары менән башҡа халыҡтар араһында ғорурланғыһы килә. Ә беҙ булған нәмәләребеҙҙе лә күрһәтә алмайбыҙ. Берҙәмлек етмәй беҙгә. Бер-беребеҙҙең уңышына ҡыуана белмәйбеҙ, үҙ-ара ярҙам итмәйбеҙ. Бер-беребеҙҙең етешһеҙлектәре өсөн һыҙлана, ҡайғыра белмәйбеҙ, үҙебеҙ менән генә йәшәйбеҙ.

Тәнҡит юҡ беҙҙә. Тәнҡит мәҡәләләрә мәктәп балаларының инша яҙыуҙарынан уҙмай. Фекер юҡ. Ҡыйыулыҡ юҡ. Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим тураһында һөйләшмәйбеҙ. Ә халыҡ ярата уларҙы. Сәләмдең иң яҡшы әҫәрҙәрен баҫып сығармайбыҙ. Һуғыш яланында ятып ҡалған Хәйҙәребеҙ, Мифтахтарыбыҙ, Харистарыбыҙ, Кәримдәребеҙ тураһында телгә лә алмайбыҙ. Карнайҙы онотҡанбыҙ. Ә йәштәр үгәй бала кеүектәр. Бер кем уларҙы күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Бер кем улар хаҡында ҡайғыртмай ҙа, уларҙың яҙмышы өсөн борсолмай ҙа. Ә бит улар әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге, алмашсылар. Йәштәр ойошмаған да, дуҫлашмаған да. Шуға нисек һыҙланмаҫка кәрәк! Бына дүртенсе йыл инде мин ошо хаҡта аптырап уйлайым. Үҙемдең яҙмышты, Рафаэлде, Рәйестә, Шакирҙы, үҙемдең башҡа ҡәләмдәштәрем хаҡында уйлайым. Яҙыусы булыуҙан элек, беҙ тулы кеше була алмайбыҙ. Бәләкәй тормош менән йәшәйбеҙ. Мин үҙебеҙҙең киләсәкте бөтөнләй былай күҙ алдына килтермәй инем. Һәр береһенә әллә ниндәй өмөттәр менән хаттар яҙҙым. Уларҙың һәр береһенә лә мин үҙемә ышанған кеүек ышана инем. Юҡ, тормош күпкә ҡатмарлыраҡ икән. Үҙемдең өмөтөм менән бик нык алдандым мин. Мин эҙләгән дуҫлыҡ, йылылыҡ, кешелеклелек табылманы. Ләкин мин һаман да төңөлмәйем. Ә ғүмер үтә. Миңә инде туп-тулы 21 йәш!!!

Шакир: «Аҡса өсөн яҙаһың һин!»— тине миңә. Был миңә үҙ дуҫымдың арҡанан килеп хәнйәр ҡаҙауы менән бер. Был һүҙҙәрҙе миңә башҡа берәү әйтһә, бер ниндәй ҙә ауырлыҡ булмаҫ ине. Уларҙы Шакир әйтте. Дошманым да былай әйтмәҫ. Сөнки мин бынан бик алыҫ һәм ят. Бөтә нәмәмде юғалтһам да, үҙ-үҙемдең кешелегемде бер ҡасан да юймам.

Яҙыу — минең тормошом, иң матур хыялдарым, иң яҡты тойғоларым, иң ҙур ышанысым. Яҙыу — йәшәүем минең. Уға

хыянат итә алмайым мин. Унан башҡа мин үҙемдең барлығымды ла тоя алмайым. Яҙыуҙан башҡа йәшәү юҡ миңә. Миңә уның даны ла, малы ла кәрәкмәй. Миңә уның менән тормошҡа үҙем бирә алған тиклем файҙалы булыуым ғына кәрәк. Үҙемдең кәрәклегемде тойоуҙан ҙур бәхет минең өсөн юҡ. Бөтә ғазапланыуым һәм иң ҙур шатлығым да — яҙыуҙа. Ул минең бөтә киләсәгем. Мин уны аҡса һата алмайым. Әлбиттә, үҙемдең хеҙмәтемә түләүгә шатмын һәм бынан баш тартыу мәғәнәһеҙлек булыр ине. Һәр бер эшсе үҙенең хеҙмәтен баһалауҙы, уны ҙурлауҙы көтә. Сөнки ул үҙенекен ала. Ләкин аҡса миңә ҡояш түгел. Уға һуҡырҙар ғына табына. Донъяға һине әсәң тыуҙырһа, кешеләр өсөн һине эшең тыуҙыра. Эш — икенсе әсә. Ул ғына һине кеше итә, матурлай, биҙәй һәм үҫтерә. Эшһеҙ һин буш, мәғәнәһеҙ, шатлығың — ялған, ашағаның — харам, һөйөүең — үҙеңдең хайуанлығыңды ғына һөйөү!

Донъяла бар ике матур әсә.
Икеһе лә улар бөйөктәр.
Тик икеһе мине кеше иткән,
Икеһе лә ҡояш кеүектәр.
Әгәр, әсәй, һинән генә тыуһам,
Кеше булмаҫ инем мин ерҙә.
Ә хеҙмәтем — һин икенсе әсәм!
Айырылмам һинән ғүмерҙә.

Был антым минең. Шул ант менән мин әҙәбиәткә тыуҙым, шул ант менән халҡым өсөн йәшәрмен, шул ант менән үлеү мине үкендермәҫ.

Шакир менән бөтә йөрәктән һөйләшә алмайым хәҙер. Ул булған урында миңә тығыҙ, һауа аҙ, тынсыу. Һүҙ яраһы, ысынлап та, бөтмәй икән. Мин бит уны ниндәйҙер балаларға ғына хас булған ышаныу менән ярата инем, хөрмәт менән, йылы ололау менән ҡарай торғайным. Уның Хәҙисәне яратыуы мине шул тиклем, үҙем яратҡан кеүек, шатландыра һәм киләсәктә дуҫтарса йәшәүҙе күҙ алдыма килтерә ине. Ә Хәҙисә кеүек кешеләр һирәк. Мин ҡыш Өфөгә ҡайтҡанда уны күреү онотолмаҫ бер иҫтәлек булып ҡалды. Һөйләшеп туя алманыҡ. Хәҙер уның алдында ла уңайһыҙ. Әгәр ҙә ул Шакир менән минең мөнәсәбәтте белһә, уға был бик ауыр булыр кеүек. Шакир беҙгә килеп ултыра-ултыра ла ҡайтып китә.

Рәйес миңә бергә мәктәптә уҡып йөрөгән сағынан уҡ яҡын. Тормоштарыбыҙ тышҡы яҡтан бер-беребеҙҙекенә бик оҡшаш. Мәктәпкә тиклем ул һөнәрселек училищеһында уҡып, аҙаҡ пароходта эшләгән. Мәктәптә сағында мин сығарған журналда үҙенең шиғырҙарын яҙа башланы. Әҙәбиәт институтында бергә

уҡыуға икебеҙ ҙә шатландыҡ. Бер-беребеҙгә шиғырҙар уҡыйбыҙ. Мин һәр саҡ үҙ фекерҙәремде әйтәм, тәнҡитләйем, кәңәштәр бирәм. Ә ул минең әйберҙәргә ҡарата бер һүҙ ҙә әйтмәй. «Яҡшы!» ти ҙә ҡуя. Шиғырҙары йомшаҡ әле. Институтҡа килеү менән әҙәбиәткә бик етди ҡарай башланы. Эҙләнә, ләкин һүлпәнерәк эшләй. Кеше булыу яғынан асыҡ күңелле, ябай һәм йылы.

7 октябрҙә Әҙәбиәтселәр йортонда Есенин тураһында ҙур һөйләшеү булды. Корней Зелинский ҡыҙыҡлы сығыш яһаны. Рафаэль дә, мин дә был көндө түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ. Беҙгә саҡырыу билеты ебәрмәгәйнеләр, беҙ бер нәмәгә ҡарамайынса, хатта комсомол йыйылышын ташлап, Әҙәбиәтселәр йортона йүгерҙек. Инер алдынан Ғилемдар Рамазановты, Миҙхәт Ғәйнуллинды, Ғайса Хөсәйеновты осраттыҡ. Улар буфетҡа ғына килгән икән.

Есенин тураһында бындай ҙур һөйләшеү тәүге ҡабат ҡына. Үҙе һәләк булғандан бирле Есенин исеме — әҙәбиәт тарихында иң ҡыҙыҡлы яҙмышҡа осраған исем. Донъяла бер ниндәй шағир ҙа кешеләргә Есенин кеүек тәьҫир яһамаған. Уның шиғырҙарын уҡып, бик күп кешеләр үҙ-үҙҙәрен Есенин яҙмышына бәйләгәндәр, бик күптәр тормоштан киткәндәр һәм һәләк булғандар. Есенин үҙенең «ҡара кеше»ле ижады менән «есенинщина» тигән исем ҡалдырған. «Ҡара кеше»не мин үҙем тыңлағандан һуң миңә ҡот осҡос булды. Бер аҙнаға яҡын уның йоғонтоһонда йөрөнөм. Бер туҡтауһыҙ ғазапландым. Ләкин бөтә халыҡ яратҡан Есенинды мин Өфөлә саҡта уҡ ярата инем.

Чернышевский эстетикаһы.

Чернышевский эстетика өлкәһендә гениаль хеҙмәте менән Белинский эстетикаһын артабан үҫтереүсе һәм тәрәнәйтеүсе тиергә була. Уның «Эстетические отношения искусства к действительности» тигән темаға яҙылған диссертацияһы үлемһеҙ. Был саҡта уға 25 йәш була.

Гегелдең идеалистик эстетикаһы сәнғәт сәнғәт өсөн тигән фекергә ҡайтып ҡала. Гегель сәнғәттәге матурлыҡты тормоштағы матурлыҡтан өҫтөн ҡуя. Уны күккә, аллаға мендерә. Был эстетика ысынбарлыҡты кәмһетә, түбәнгә ҡуя. Уның буйынса абсолют рух ҡына сикһеҙ. Гегель кешенең дөрөҫлөккә, яҡтылыҡҡа, матурлыҡҡа ынтылыуын «тупаҫ тормош» итеп күрә. Уныңса, «тупаҫ ысынбарлыҡтағы» фекер һәм фәндең объектив закондарының сәнғәткә бер ниндәй мөнәсәбәте юҡ. Быныҡ менән Гегель сәнғәттең йәмғиәт тормошона булған йоғонтоһон һәм тәрбиәүи әһәмиәтен бөтөнләй кире ҡаға. Гегель «сәнғәте» һәм «әҙәбиәте» көрәшһеҙ, пассив матурлыҡ ҡына һәм ул

ләззәт өсөн генә кәрәк! Был әҙәбиәтте бөтөнләй буш бер уйынсыҡҡа әйләндереү, уның көрәш ҡоралы булыуынан мәхрүм итеү, әлбиттә. Чернышевский бындай эстетиканы тар-мар итә. Ул, Белинский кеүек үк, иң беренсе нәүбәттә әҙәбиәт менән сәнғәтте халыҡ өсөн көрәш ҡоралы итеп күрә. Һәм эстетиканың үҙәгенә материализмдың төп принцибын һала (первичность материи, вторичность сознания).

Нимәлә һуң матурлыҡтың асылы? Гегель уны идеяла, образ һәм идеяның берлегендә генә күрә. Был матурлыҡ тормоштан бөтөнләй айырылып алына. Гегелсә, матурлыҡ бары кеше хыялы тыуҙырған шәүлә генә! Беҙ уның менән ләззәтләнергә генә тейешбеҙ! Был паразит эстетикаға ҡаршы Чернышевский үҙенең бөйөк формулаһын ҡуя. «Прекрасное есть жизнь. Прекрасно то существо, в котором мы видим жизнь такою, какова должна быть она по нашим понятиям: прекрасен тот предмет, который выказывает в себе жизнь или напоминает нам о жизни».

Матурлыҡ ул алға барыусы тормошта, бәхет өсөн көрәшеүсе тормошта. Сәнғәттәге матурлыҡ — тормоштағы матурлыҡты образдар ярҙамында күсереү. Сәнғәт матурлығы — тормош матурлығын сағылдырыу. Тик ул көҙгөләге сағылыу ғына түгел. Сәнғәт фотография түгел. Сәнғәт образдар аша дөйөмләштереп, һайлап, типиклаштырып сағылдыра, ысынбарлыҡ сәнғәттең сығанағы. Матурлыҡ — тарихи категория, Чернышевский көрәшкә саҡыра. Үҙенең бөтә ғүмере буйынса ул матур киләсәккә яҡынайыу өсөн көрәшә. Уның өсөн һәр саҡ үҫкән, матур хәрәкәт иткән, алға ынтылған көрәшле тормош матур. Сәнғәт тормошҡа тоғро булырға, уның кире яҡтарын да күргә тейеш. Раҫлау менән бергә фашларға ла тейеш.

26 октябрь.

Есениндың шиғырҙарын уҡыным. Рауил килде. Ә Уралды (ҡустыһы) кисә Мәскәү буйлап йөрөттөм. Ленин музейында булдыҡ. Төнө буйы үҙемдең шиғырҙар өҫтөндә ултырҙым, күсереп яҙҙым, төҙәттем. Йыйынтыҡ әҙерләйем. Ат шикелле эшләйем. Тик күп лекцияларҙы ҡалдырҙым. Быныҡ өсөн комсомол йыйылышында бештеләр. Яңы комскомитет һайланыҡ. Көнкүреш секторында минең урында беренсе курстан Гибельман эшләйәсәк. Ниһәйәт, ҡотолдом!

27 октябрь.

Вадим Зубарев менән Третьяков галереяһына барғанда шиғырҙар хаҡында һөйләштек. Мин уға форма өсөн генә яҙған бер шиғырымды уҡыным.

Иçеңдәлер ул көн —
Мин киттем.
Хушлашҡанда һурып
Бер үптем.
Моңһоу күҙҙәреңдән
Йәш сыҡты.
Тик сафлығы булып
Ысыҡтың,
Йөрәгемә минең
Ул тамды.
Тамған ерен уның
Ут алды.
Бер күрешмәй оҙаҡ
Йөрөһәк тә,
Һаман яныр ул ут
Йөрәктә.

Вадимға эстәлеген аңлаттым. Оҡшатты. «Форма ғына түгел бында, дөрөҫлөк»,— тине ул. Шунан һуң был шиғыр үҙемә лә оҡшаны.

27 октябрь.

Третьяковкаға Рауил менән Рәшит Сәлихов килгәйне. Репиндың «Иван Грозный»ы янында ғәҙәттәгесә бик оҙаҡ ҡарап ултырҙым. Нисә тапҡыр ҡараһам да, тәндәрем сымырлап китә. Уны яҙғанға нисә йылдар үткән инде, ә күпме кешеләр нисә йылдар буйына һаман да картинаға ҡарап тулҡынлана. Һәм мәңге тулҡынланасаҡтар. Третьяковкаға килгән һайын «Аленушка»ны ҡарап туймайым. Ул минең үҙемдә генә булһа ине!

Был — иң күп эшләгән айым булды. Нилектәндер шул тиклем илһамланып яҙа башланым. Элек миңә шиғыр яҙыу шатлығы нисектер ғәҙәттән тыш бер ваҡиға була торғайны. Ә хәҙер ул көн һайын ҡабатлана торған ғәҙәттәге эшкә әйләнеп бара. Өмөтһөҙлөк һәм һыҡрау көндәре үтте. Мин ирекле һәм көслө. Үҙемде бер кем алдында ла бәйле тоймайым.

Яҙасаҡ нәмәләр сикһеҙ! Ә Салауат тураһында яҙыу минең тормошомдоң иң ҙур маҡсаттарының береһе. Бәлки был йәшлек дыуамаллығы ғыналыр. Ләкин мин шуның менән йәшәйем, янам һәм алда шундай эштең тороуы мине көслө итә. Институтты бөтөү менән ныҡлап эшкә керешәсәкмен. Үҙемдең пландар тураһында тик Рафаэлгә генә һөйләгем килә. Бер кемгә лә мин шулай асыҡ түгелмен. Уға әйткән һүҙҙәрҙе мин хатта көндәлеккә лә яҙа алмайым. Әгәр ҙә минең яратҡан дуҫ ҡатыным булһа, мин тик уға ғына шулай һөйләр инем.

Бәлки, миңә бөтөнләй үҙемде асмай торған, минең эске тормошомдо аңламай торған ҡатын да тура килер, кем белһен... Ә Марият минең ғүмер буйы ғазапланып уйлай торған кешем булды. Бына инде уны тәү башлап күргәнгә һигеҙенсе йыл. Дүрт йыл буйы ул минең бөтә ҡаныма һеңде. Ҡот осҡос илленсе йыл килеп етте... Кешегә үҙенең бәхет эҙләүе генә бәхет, ә ҡапыл күкрәп килгән, көтөлмәгән бәхетте ул күрмәй... Хәҙер мин үткән мөхәббәтемде генә яратам. Мин хәҙер алдағы көндәрҙең көсөнә бөгөнгө көндөң көсөнә ҡарағанда нығыраҡ ышанам. Артҡа сигенеү мөмкин түгел. Был кәрәкмәй ҙә. Алға барған тормошто күрмәйенсә, уға үҙеңдең бәләкәй генә тормошоңдо ҡаршы ҡуйыуҙан да көлкөлө көсһеҙлөк юҡ. Был ҙур юлдан килгән ҙур йөк арбаһының тәгәрмәстәре аҫтына инеп, уны хәҙер ауҙарам тип, һаҙҙан сыҡҡан баҡаның һытылыуы менән оҡшаш. Тормошто тәрәндән аңлаған кеше былай була алмай. Тормоштоң үҙ һүҙе бар: Алға! Алға! Алға!

1 ноябрь.

Мин юлда. Көҙ көнө әле минең бер ҡасан да Өфөгә ҡайтҡаным юҡ. Мин үҙем менән тәүге китабымды алып ҡайтып барам. Ул минең тәүге мөхәббәтем менән бер. Уның яҙмышы — минең тормошомдоң яҙмышы. Был минең тәүге ҡабат әҙәбиәткә үҙ тауышымды ҡушыуым. Ҡайтыу менән үк шиғырҙарымды Мостафа ағайға күрһәтергә тейешмен. Иң ныҡ ышанған кешем ул ғына. Ул минең иң яратҡан уҡытыусым. Ләкин мин үҙемдең уға яратҡан уҡыусы булыуыма ышанып етмәйем.

2 ноябрь.

Төнө буйы Стефан Цвейгтың китабын уҡып килдем. Көндөҙ вагондағы кешеләрҙе тыңланым. Яҡшыраҡ урынға күсеп ултырып, «Беҙҙең Әҙәбиәт институтыбыҙ» тигән мәҡәлә яҙҙым.

Тәүге китап — тәүге һөйөү.

Бына мин тағы ла юлда. 57-се поезд, 8-се вагон, 41-се урын. Тәҙрә эргәһендә. Аҡиҙел күперен сығып киттек. Дим буйҙары артта ҡалды. Шул Аҡиҙел күперен сыҡҡан һайын мин йәшлектең йәйғор күперенән сыҡҡан һымаҡ булам. Бөтә үтелгәндәр иҫкә килеп төшә. Моңһоу булып киттә. Шул күперҙән ырғып, үҙемде донъянан юҡ итергә ҡарар иткән саҡ өсөн һаман да уңайһыҙ һәм оят. Ләкин ул күпер миңә ғәҙәттән тыш кәҙерле лә. Уға бер ҡасан да ҡабаттан кисерелмәй торған иң ҡайнар тойғоларым бәйләнгән.

Мариятты күрә алманым. Бик үкенесле булды. Ул ҡайһылыр районға практикаға киткән. Әгәр яҡын бер районда булһа,

мин уның янына барып та килгән булыр инем. Вакыт бик аҙ булды. Тәүге ҡабат минең шиғырҙарҙы Яҙыусылар союзында тикшереү генә күңелле булды.

Тормошто белергә, белемеңде арттырыу өсөндә һәр көн эшләргә, уны киңәйтергә һәм тәрәнәйтергә, талантыңды һәр көн тырыш хеҙмәтең менән үҫтерә барырға, үҙеңдең художество фантазияңды бик зирәк итеп, отҡор итеп тәрбиәләргә һәм художестволы зауығыңды иң яҡшы үрнәктәр менән байытырға, иң ҙур оҫталарҙан өйрәнергә, телде һәм халыҡ яҙмышын бик нығытып үҙләштерергә, һәр бер нәмәгә тәнҡит күҙе менән ҡарай белергә, һәр саҡ ҡыҙыҡһыныусан бала булып тормошто ҡабул итергә кәрәк. Бына минең үҙ алдыма ҡуйған һүҙем. Башҡаса юл юҡ. Шул ғына һине әҙәбиәттең ҙур һәм дөрөҫ юлына илтәсәк.

Әҙәбиәтсегә тәнҡит, дөрөҫ һәм тәрән тәнҡит, һулар һауа кеүек кәрәкле. Уйлап-уйлап йөрөйһөң дә, беҙҙә шундай тәнҡит юҡ бит, тип күңелһеҙләнәһең. Яҙыусылар үҙҙәре тураһында бөтә йөрәктән һөйләшергә ҡурҡалар. Ә һөйләшерлек әҙәбиәт бар.

Тәнҡитсе, яҙыусы кеүек үк, ижад итергә тейеш. Ижади тәнҡит кенә яҙыусыға үҙ-үҙен табырға, уның үҫеүенә булышлыҡ итә ала һәм уҡыусы алдында яҙыусының тотҡан урынын аңларға ярҙам итә. Тәнҡитсе яҙыусының үҙенсәлеген һәм уның шул үҙенсәлеккә нисек ирешеүен күрә белергә, башҡаларға асып бирергә тейеш. Ә беҙҙең «тәнҡит», аңлатыуҙан бигерәк, үҙе тома һүҙлыр!

Кешеләрҙең әҙәбиәткә һәм сәнғәткә мөнәсәбәте тураһында фекер йөрөтөргә кәрәк. Кемдәр һуң улар, хәҙерге кешеләр? Нимә талап итә улар? Ниңә был хаҡта беҙ, балыҡ кеүек, һис өндәшмәйбеҙ икән? Кәсепселәргә тәнҡит кеүек ҙур, ауыр һәм ҡатмарлы ижад эшен тапшырып ҡуйҙыҡ түгелме? Был бит әҙәбиәттең үҫеүенә кәртә булып, тотҡарлыҡ итә. Был яуапһыҙлыҡ уҡыусыларҙы ла биҙҙереп бөтөрә, үҙебеҙҙең әҙәбиәтебеҙгә булған мөнәсәбәттең ҡотон юғалта. Әҙәбиәтте баһалауҙың бындай методын юҡ итергә кәрәк.

Ә ниңә сәнғәттең бөтә төрҙәренең дә бер-береһенә булған мөнәсәбәте тураһында киң итеп һөйләшмәҫкә? Мәҫәлән, живопись һәм әҙәбиәт, музыка, скульптура һәм әҙәбиәт һ. б. Улар араһындағы бәйләнештә күрмәй, күҙ йомоп ҡалыу мөмкинме һуң? Быны күрмәү «тәнҡитселәрҙең» шул тиклем сикләнгән ҡарашлы булыуын әйтеп тора.

Ә бит кешеләр тормошта торған һайын рухи яҡтан матурлана, тәрәнәйә һәм байыраҡ була баралар. Кешеләр өҙлөкһөҙ үҫә. Тәнҡитсегә иң әүәле кеше булырға кәрәк. Ә беҙ бәләһ

кәйбеҙ. Был — ҡурҡыныс. Шул ауырыуға ҡаршы көрәшә белмәйбеҙ. Ҡурҡа ла белмәйбеҙ.

23 ноябрь.

«Комсомольская правда»ның 19 ноябрь номерынан «Плесень» фельетонын уҡып, үҙемдең бөтә тормошомдо ҡарап сыҡтым. Бик күп яңылышыуҙан һаҡланыу һәм иптәштәрҙе һаҡлау өсөн унда бик кәрәкле иҫкәрмә бар.

Аҡса ни тиклем аҙҙыра кешене! Әсәләрҙең артыҡ мөхәббәте, һуҡыр һөйөүе баланы бөтөнләй боҙа, кешелектән сығара. Эш эсмәүҙә түгел, эскеселеккә булған мөнәсәбәттә. Үҙ ҡарашыңды дөрөҫ итеп билдәләргә кәрәк. Нимәнән һуң эсәләр? Күңелдәре бушлыҡтан! Эшһеҙ, ҡыҙыҡһыныуһыҙ кеше шул бушлыҡты араҡы менән тултыра.

А. Фадеев буйынса бөгөн Апресян семинары. Ул Фадеевтың «Последний из Удэге» романын һөйләй.

30-сы йылдарҙа Березов, Александров һ. б. тәнҡитселәр был романда Лев Толстойҙың ҙур тәьҫирен күрәләр. Уларҙың күпселеге Толстой менән Фадеев араһында параллель үткәрәләр. Фадеев үҙен Толстойҙың уҡыусыһы итеп таный.

Толстой философияһы менән Фадеевтың донъяға ҡарашында ниндәй бәйләнеш бар һуң? Ленин Толстой философияһының реакцион асылын, уның христиан диненә нигеҙләнеүен киҫкен тәнҡитләй. Йәмғиәттә һәр кем үҙ-үҙен камиллаштырыу менән шөғөлләнергә тейеш тигән Толстойҙың философияһы — ул замандан тыш, синыфтарҙан тыш. Ул кешене ғөмүмән ала. Толстой синфи көрәштән кешене айырып ала һәм үҙ өҫтөндә эшләргә ҡуша. Толстой революцияны танымай. Ленин Толстойҙың бөтә философияһын ҡаты тәнҡит утына ала. Уның философияһы — непротивление злу насилием. Шундай толстовщинаны 30-сы йылдарҙа тәнҡитселәр Фадеевҡа бәйләйҙәр. Ләкин был бөтөнләй дөрөҫ түгел. «Удэге»лә төп фекер булып йәмғиәттә кешеләрҙең рухи яңырыуы ҙтә. Был романдың төп идеяһы. Фадеевтың хатаһы тамсы ла толстовщинала түгел, «Удэге»ләге Лена Костенецкая тигән героиняһы ла бер нисек тә Толстойҙың Наташа Ростоваһы түгел. Ул бик тәрән психологик образ.

26 ноябрь.

К. Паустовский семинарына индем. Машинаға кешенең мөнәсәбәте тураһында бик ҡыҙыҡлы һөйләшеү булды.

Бөгөн Рафаэль менән икебеҙгә лә Арбаттағы киоскынан Лермонтовтың I томын һатып алдыҡ. Көнө буйы бала кеүек шатланышып йөрөнөк.

30 ноябрь.

А. Фадеев романы буйынса махсус курс. «Йәш гвардия» романын тикшерәбеҙ. Арнольд Тамм романдың икенсе вариантына өҫтәлгән күренештәрҙең композиция үҫешенә ҡамасауламағанын һөйләй. Сюжет — характерҙарҙың үҫеш тарихы. Геройҙың характеры хәрәкәттә булырға тейеш. Олег — романдың төп геройы. Ләкин Фадеев Олегтың һуңғы көндәрен күберәк һөйләп сығыуға иғтибар итә, ә был уның характерын асыуҙы йомшарта. Арнольд ҡайһы бер главаларҙан күп кенә урындарҙы төшөрөп ҡалдырыуҙан романдың эстәлегенә һис бер зарар килмәҫ ине, тигән фекерҙә. Ә Роальд Недосекин романдың кәрәкһеҙгә оҙонайтылыуына туҡталды. Күләм самаһыҙ ҙурайыу тәьҫир итеү көсөн юғалта төшә, сюжеттағы артыҡ ваҡиғалар романдың төп йүнәлешен ситкә алып китеп тарҡата. Унан һуң геройҙарҙың ҡапыл герой булып китеүҙәре тормош дөрөҫлөгөн юғалта. Мәҫәлән, Олег беренсе күренеүҙә үк батырлыҡ күрһәтә. Олег образы театраль башлана.

7 декабрь.

Рафаэль поэмаһын күтәреп минең янға төштө лә һуңғы главаһынан өҙөктәр уҡыны. Яҡшы! Был уның бөтөнләй юғары күтәрелеүе. Уның һәр яҙған юлы минең күҙемдән үтә, әйтерһең, мин үҙем яҙам. Был поэма беҙҙе тағы ла нығыраҡ бәйләне.

Кисә университетҡа Эля Мицкевич менән Әнисә килгәйне. Рафаэль Эля менән мауығып йөрөй, ә Рәйестең Әнисәгә күҙе төшкән. Рафаэль буфеттан вино алып, бергәләп ултырырға тигәс, мин ҡасып тигәндәй сығып киттем, уларға ҡамасауламаҡсы булдым.

Ғайсаға шылтыраттым. Өйҙә! Уға һуңғы шиғырҙарҙы уҡыйһы бар. Бер ашханаға инеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Ғайсаны мин Рафаэлдең поэмаһын уҡырға саҡырҙым. Бер кис ултырырға булдыҡ.

Ләлә Туҡаеваның хаты ла бик ҡыуандырҙы. Үткән төндә Есениндың «Эт тураһында йыр»ын, иртән Лермонтовтың «Елкән»ен тәржемә итеү ҙә, көндәрҙең матур булыуы ла, ә кис русса тәүге шиғыр яҙып ҡарау ҙа мине гел ҡанатландырып йөрөттө.

Шиғыр миңә, уны нығыраҡ аңлаған һайын, ғазаплы табышмаҡҡа әйләнә бара. Белгән һайын үҙеңдең белмәгәнлегеңде беләһең. Быныҡ һайын үҙеңә талапсаныраҡ, киҫкенерәк була бараһың. Үҙ-үҙемдән ҡәнәғәтһеҙләнеүем дә арта бара. Ғәжәп бит кешенең тәбиғәте! Шунда ла йәшәүҙең ҡыҙығы, эҙләнеү ғазабының татлылығы!

Әгәр ҙә мин шағирлыҡ юлын һайламаған булһам да, теләһә ниндәй юлда ла, барыбер шағир булып танылыр инем. Һәр эштең үҙ шағиры булырға тейеш.

12 декабрь.

Кисә Сәйфуллин Фауаз менән күрештек. Ансамбль менән килгәндәр. Оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Сәйет Исмәғилевтең улы — скрипкала, Фауаз менән Солтанов тигән егет баянда уйнай. Рафаэль баянда уйнауын ныҡ ҡына онотҡан. Мин уның яңылышыуҙары һайын кисереп ултырҙым. Фауаз менән Бәҙриев Ратмир беҙҙе ҡунаҡ итте. Шакирә, Рауилә, Роля Ямалетдинова (Лаҡлы ҡыҙы, райондаш) һөйләшеп ултырҙыҡ.

13 декабрь.

Кисә башҡа бик ҡыҙыҡлы бер фекер килде. Киләһе дәфтәрҙә Рафаэль менән бәхәсләшкәндәге фекерҙәрҙе ҡыҫҡа ғына булһа ла яҙып барырға!

Лермонтов хаҡында бәхәсләштек:

Уның фекере: Лермонтовты Кавказ тыуҙырған. Ул Кавказда булмаһа, «Беҙҙең заман геройы»н, «Демон»ды, «Мцыри»ҙы, «Ҡасҡын»ды тыуҙырмаған булыр ине.

Минең фекер: Лермонтовты үҙенең заманы, үҙенең йәмғиәте тыуҙырған. Рус тормошо — уның ижадының нигеҙе, туп-рағы. Кавказ ярҙамсы ролде генә уйнай. Лермонтовтың төп геройы — рус кешеһе.

Бына шундай бәхәстәр аҙым һайын. Рафаэлдең фекерҙәрен дәфтәремә бынан һуң үҙ ҡулдары менән яҙҙырасаҡмын. Теләһә, мин дә уның дәфтәренә яҙасаҡмын. Тик ул көндәлектәр алып бармай.

Әгәр ҙә мин шул бәхәстәрҙән һуң Рафаэлдең ҡайһы бер яҡтары өсөн бик борсолоп күңелһеҙләнеп ҡуйһам, ул мине бала кеүек күреп, бик тиҙ хәтерем ҡалыусанлыҡта ғәйепләй башлай. Мин бөтөнләй үпкәләүҙән түгел, ә уның ҡайһы бер сифаттары өсөн бөтә йөрәктән һыҙланыуҙан күңелһеҙләнәм. Сөнки уның шул сифаттары тәрәнәйеп китеү мөмкин. Беҙ бергәләп үҫергә тейешбеҙ. Унан башҡа бит минең яҡын кешем юҡ.

15 декабрь.

Алда тағы имтихандар, йоҡоһоҙ төндәр, тынғыһыҙ көндәр. Был сессия ҡалғандарының бөтәһенә ҡарағанда ла ҡурҡыта. Сөнки мин төп көстө лекциялар тыңлауға бүлә алманым, бөтә ваҡытты шиғырҙар яҙыуға бирҙем, үҙемдең тәүге китапты әҙерләнем. Китап инде нәшриәт ҡулында. Ҡышҡы практикаға

ҡайтҡанда уны бөтөнләй хәл итеп китәсәкмен. Ҡайһы бер шиғырҙарҙы алып ташларға, ҡайһыларын яңынан эшләп сығырға, ҡайһыларын өҫтәргә кәрәк булыр. Йыйынтыҡты, әлбиттә, мин иртәрәк сығарамын. Үҙем теләгән тиклем көс юҡ унда. Шулай ҙа тәүәккәлләнем инде. Баҫылып сыҡҡанға тиклем уның өҫтөндә эшләйәсәгем генә бер аҙ мине тынысландырып тора.

Ә хәҙер бөтә көстө уҡыуға бирергә! Башҡаларҙан ҡалышыу бик ауыр буласаҡ. Хурлығы ни тора! Теләһәң сәсрәп кит! Еңергә, еңергә кәрәк. Бөгөндән ат кеүек эшләй башларға.

«Совет Башҡортостаны»нан 695 һум аҡса килде. Ә бына Урал (бер туған ҡустыһы) өсөн һыҙландыра. Үҙең ас йөрөһәң дә, уның тураһында уйлайһың. Йөрәк әрнеп-әрнеп ҡуя. Хәҙер мин тәүге ҡабат ата-әсәнең бала өсөн ҡайғыртыуын үҙ йөрәгем менән аңланым. Мин әсә лә түгел, ата ла түгел, ағай ғына. Шулай ҙа ағай булыу миңә бик күп нәмәне әйтте. Миңә уны ас йөрөтөү енәйәт кеүек тойола. Үҙ-үҙемде йолҡоп ташларҙай булып китәм.

Рәйес менән бөгөн Зайлалова апай янына барып, Уралды Өфөгә ҡайтарып, интернатҡа урынлаштырыу хаҡында һөйләштек. Зайлалова апай был хаҡта Рәйес артынан әйтеп ебәргән. Уралды, каникулдары башланғас, Өфөгә ебәрергә һөйләштек. Әйҙә, ул мин үҙем дә, Рауил дә тамамлап сыҡҡан мәктәптә уҡыһын. Хат алышып, һөйләшеп торасаҡбыҙ. Мин уға нисек тә ваҡытымды бүлергә тырышырмын. Ә беҙ Рафаэль менән иркенерәк йәшәрбеҙ. Юҡһа, минең ауырлыҡ уға ла төшә. Хәҙер беҙҙең бөтә тормошобоҙ уртаҡ. Бер һауыттан ашайбыҙ, бер һумды ла уртаға бүләбеҙ. Уралға ул да йәлләмәйенсә, тыныс күңел менән генә ҡарай алмай.

Кисә (14.XII) Рафаэль менән Әҙәбиәтселәр йортона Тыныслыҡ советының Века сессияһында ҡатнашыусылар менән осрашыуға барҙыҡ. Илья Эренбург председателлек итте. Луи Арагон үҙенең һуңғы поэмаһынан өҙөктәр уҡыны. Концерт та бик яҡшы булды. Максим Михайлов минең иң яратҡан йырым «Эй, ухнем»ды иҫ киткес оҫталыҡ менән йырлай.

Ҡазанға Хәкимгә лә, Диларағa бик ҙур хат яҙаһы бар. Ә Диларағa хәҙер яҙмай торорға булдым. Ә үҙемдең уның тураһында бөтәһен дә белгем килә. Хәҙер уның ҡайҙа икәне лә билдәһеҙ. Ауылға уҡытырға киттеме икән? Һаман да редакцияла эшләйме? Белмәйем. Ә Марият һаман ғазаплай. Уны уйлау ҡурҡыныс та, рәхәт тә.

Рафаэль дә шулай. Йыш ҡына Риманы иҫкә төшөрә, үкенеп бөтә алмай. Рима хәҙер тормошта. Ә ни тиклем яратты ул Рафаэлде! Ә Рафаэль уны ул тормошҡа сыҡҡас ҡына яратты.

— Шулай уҡ та, ҡыҙҙар хаҡында хыялланып ғүмер үтер икән?— тибеҙ ҙә аптырашта ҡалабыҙ.

Ярай, миңә лә төнәргә ваҡыттыр. Инде әтәстәр ҙә ҡысҡырыша башланы.

16 декабрь.

Лозунг иезуитов: «Цель оправдывает средства». Иезуит в переносном смысле — лукавый человек, способный оправдывать высокой конечной целью всякую подлость и низость.

Бөгөнгө көндө Достоевскийға бирергә булдым, лекцияға барманым.

Достоевскийҙы уҡыуы ауыр. Арыта. Күңел болғана. Раскольниковтың эсенә шул тиклем инәһең, әйтерһең, уның урынында һин үҙең йәшәйһең. Ҡот осҡос!

17 декабрь.

Миңә донъяла музыка ыңғайына ғына боҙҙа шыуыуҙан да рәхәт ял итеү юҡ кеүек. Рәхәтләнеп арыйһың. Ә ҡыҙҙарҙың матурлығы һине бөтөнләй иҫертә. Бөтә ҡыҙҙарға ла бер юлы ғашиҡ булып йөрөйһөң. Бер аҙ моңһоу ҙа.

«Сәнғәт — ул образдар менән фекерләү».

Потебня

«Шағир ғәжәпләндерергә тейеш».

Палавиченко

Немецтар үҙҙәренең баш ҡалаһы тураһында яҙмаған. Ә француздар Париж хаҡында күпме роман, шиғыр тыуҙырған! Немецтар һәр саҡ провинция менән мауыға.

Дилараның һуңғы хатын тағы ла уҡып сыҡтым. Хәкимдең уның хаҡында әйткән фекерҙәре йөрәкте өйкәп йөрөй ҙә йөрөй.

Ә Дилараның үҙе менән һөйләшке килә. Ләкин хәҙер уның ҡайҙа икәнен дә белмәйем. Һуңғы хатына яуап яҙмауға бик үкенәм хәҙер.

«Хәким! Һинең һуңғы хатыңды алғанға күп ваҡыттар үтеп китте инде. Ә мин һаман да яҙа алманым үҙеңә. Иғтибарһыҙлыҡтан тип уйлама. Сөнки һинең фекерҙәрҙе мин иң тәүҙә башҡа ла һыйҙыра алманым. Үҙемдең турала ла күп уйланым. Күп фекерҙәрең менән килешә алмайым. Һинең Дилара хаҡында үҙең уйлағандарҙы миңә асыҡтан-асыҡ яҙыуың һәйбәт. Сөнки мин уны башҡалар күҙе менән дә күрергә тейешмен.

Йәшермәйем, ул беренсе күреүҙә миңә оҡшаманы. Мин уны нәҡ һинең күҙҙәрең менән күрҙем. Һәм был миңә бик тыныс

булырға, һалҡын аҡыл менән эш итергә мөмкинлек бирҙе. Мин шулай булдым да. Тик миңә Ҡазанда уҡэргән өс көн ғәҙәттән тыш күңелһеҙ булды.

Ләкин мин Дилараны ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күреүҙә бик яңылышҡанмын. Һуңғы көндә, элек мин уны нисек күҙ алдыма килтергән булһам, шулай күрҙем һәм бик ғәжәпкә ҡалдым. Кешеләрҙең ни тиклем ҡатмарлы һәм тәрән, төрлө-төрлө булыуына тағы ла бер ҡат ышандым. Бигерәк тә ижад кешеһенең.

Дилара бик үҙенсәлекле кеше. Яҙыуын дауам итһә, ижадында ла шулай буласаҡ. Уға оҡшаған кешене белмәйем әле мин. Тышҡы матурлығы менән ул мине үҙенә һис тә тартмай, әлбиттә...

Уның үтелгән тормошо бик ҡатмарлы. Ул бала сағында әсәһе менән бергә төрмәлә лә ултырған булһа кәрәк. Кешенең характерын һис тә уның тормошонан, мөхитенән айырып ҡарау ярамай... Уны аңлай белергә кәрәк. Беләһеңме, Хәким, Татарстанда һәм беҙҙә лә ҡатын-ҡыҙ араһында уның кеүек яҙған кешеләрҙе әле күрмәнем. Ул ғәжәп матур әҫәрҙәр яҙасаҡ кеше.

Беҙҙә, Хәким, яһалма, йөрәкһеҙ, һуңғы дәрәжәлә ихласһыҙ яҙылған әйберҙәр ишәйеп ҡитте. Быға йөрәк әрней, асыу килә... Ә бына Дилараның шиғырҙарын уҡығас, бөтә йөрәктән шатланаһың. Ул бик һирәк осрай торған нескә күңелле шағирә... Уның балалар тураһындағы шиғырҙарын уҡыған да, Маяковскийға бик яҡын булыуын тояһың, ниндәйҙер уртаҡлыҡ бар.

Хәким, һин Дилараның шиғырҙарын иғтибар менән уҡып сыҡ әле. Ул бик үҙенсәлекле. Ул халыҡ ижадын да бик оҫта ҡуллана белә. Минең уға яҙған лирик шиғырҙарҙы «Совет Башҡортостаны» газетаһының ноябрь һандарынан ҡара әле. Улар Дилараға арнап яҙылған. Ундағы һуңғы («Аҡҡош кеүек йөҙәһең һин...») шиғырҙа шул юлдар Дилараның миңә яҙған һуңғы йыры:

Әгәр таң йондоҙо булһам,
Таң һайын ҡалҡыр инем.
Асыҡ тәҙ(е)рәндән һине
Ҡарап йоҡлатыр инем.
Һандуғас булһам, иртәһен
Һайрап уятыр инем.
Ел булһам, иҫеп, ҡайғыңдың
Барһын таратыр инем.

Халыҡ йырҙарына бик яҡын юлдар бит!

Дилара ғәҙәттән тыш ныҡ кисерә торған, хатта бер аҙ экзальтациялы ҡыҙ. Уны күптәр аңламаҫҡа мөмкин. Уны еңелерәк күреүселәр ҙә булыуы бар. Кешегә бик ҙур кешелек хисе менән, иғтибар менән ҡарарға кәрәк.

Мин Дилараны аңлайым. Ул матур йөрәкле. Тик минең ярҙам итә алмауым ғына ҡыҙғаныс. Ҡайҙа икәнен дә белмәйем уның.

Йә хуш, Хәким. Яҙ.

Сәләм менән Рәми».

19 декабрь.

«Кәлимә!

Хатың менән бик ҡыуандырһаң да, һаман әле үҙеңә яҙа алманым. Ваҡыт юҡлыҡтан түгел, ә һиңә бик күп һөйләге килгәндән, ахыры. Хатыңды алғандан бирле күңелемдән генә әллә күпме нәмәләр хаҡында һөйләнем инде мин! Тик һин уларҙы ишетмәйһең генә.

Мин әгәр бер кешене бик яҡын итеп күрһәм, уның алдында үземде ғәҙәттән тыш яуаплы кеүек тоям. Үҙ яҙмышымды уға аҙ ғына бәйләгән булһам да, мин уның тормошонда ниндәй ҙә булһа бер яҡты эҙ ҡалдырғым килә. Әҙ генә булһа ла уның уйҙарын, тойғоларын, кешеләргә ҡарашын байытҡым килә. Кешеләр бер-береһе өсөн бәхет булырға тейештәр бит, Кәлимә. Минең шиғырҙар яҙа башлауымдың да төп маҡсаты шунда. Ләкин үҙем теләгәнсә һаман яҙа алмайым. Был миңә ғәҙәттән тыш ауыр.

Шул тиклем көсөргәнешле йәшәүеңде уйлап ҡарайһың да үҙеңә бер йүләр кеше һымаҡ күренәһең...

Бына, Кәлимә, һин дә индең минең тормошҡа. Бәлки, ваҡытлыса ғыналыр, ә бәлки, бик оҙаҡҡалыр? Белмәйем. Сөнки мин кешегә ғәҙәттән тыш ваҡһыу. Минең менән ризалашып йәшәү бик ҡыйын. Шунлыҡтан дуҫтарым да иң алыҫ кешеләргә әйләнеп ҡуя. Был хәлде мин бик ауыр кисерәм.

Миндә ике кеше йәшәй. Улар бер-береһе менән өҙлөкһөҙ һуғыша. Үҙем теләгәне көслөрәк кеүек.

«Йәш көстәр» өсөн рәхмәт. 8 мартта уның береһен үҙемә алырмын, береһен һиңә бирермен. Ятһындар.

Ә бейек тау башына, әгәр ҙә һиңә минең менән күтәрелеү күңелһеҙ булмаһа, күтәрелербеҙ. Йәме?..

Кәлимә! Һиңә бер генә һорау: нимә ул бәхет?

Тик үҙеңсә әйт, йәме.

Рәми. Мәскәү».

Әсғәт Әшрәпов килде. Рафаэль менән Марат Кәримовтың хатын уҡып ултыра инек. Марат хәҙер Өфөлә, «Ленинсы»ға

эшкә урынлашырға йөрөй. Әсғәт миңә аҡса килтергән. Яңы йылды минең бүлмәлә үткәреү хаҡында һөйләштек.

20 декабрь.

Әсғәт менән сәнғәт хаҡында һөйләшеп йөрөнөк. Ул Каспий нефтселәре тураһында яңы документаль фильмдың нисек эшләнеүе һәм үҙенең диплом эше тураһында һөйләне. Ҡайтҡас, Рафаэль Әсғәткә үҙенең поэмаһын уҡырға булды.

26 декабрь.

«Яңы йыл менән, Лира! Бәләкәй генә хатың менән бик шатландырҙың. Тик миңә шағир тимә. Мин әле үҙем теләгәнсә бер ни ҙә яҙырға өлгөрмәнем. Ләкин мин һинең дә «Әсәйем ҡулдары»нда үҙ әсәңдең ҡулдарын, уның йөрәген күреүгә бик шатландым. Нимә генә яҙһам да, уларҙа башҡа бик күптәрҙең үҙҙәрен күреүе — был минең бөтә маҡсатым.

Әлбиттә, тормош ҡатмарлы. Ә кеше, Чехов әйткәнсә, бөтә яҡтан да — аҡылы менән дә, йөрәге менән дә, хатта кейеме менән дә матур булырға тейеш. Мин кешеләрҙе шулай күргем килгән өсөн яҙам. Үҙемдең шиғырҙа мин бик күп әсәләрҙе үҙемдең әсәй аша матурлағым килде. Шиғырҙар шулай тыуа. Улар һинең үҙеңде тыуҙыра, үҫтерә, эҙләндерә.

Яңы йылды ҡаршылағанда, Кремль куранттары 1953 йылдың һуңғы сәғәтен һуғып, 1954 йыл башланғанда, Мәскәүҙә яҡын дуҫың бар икәнен дә хәтерлә. Мин дә «Салауат» пароходында Өфөгә бергә ҡайтҡан шиғырҙар яратыусы ҡараҡай ғына бер ҡыҙҙы күҙ алдыма килтерермен.

Хәҙергә — имтихандар. Унан Өфөгә практикаға ҡайтам.

Хуш. Рәми».

М. Горькийҙың «Мещандар»ын ҡарап иҫ китте. Бик дәртләнеп ҡайттым. Осҡо килә! Үҙебеҙҙең бүлмәлә чехтар Юзеф Цисоржевский, Франтишек Каутман менән ҡараным. Франтишек минең әсәй тураһында очерк яҙырға уйлауын әйтте. Чехословакиялағы ҡатын-ҡыҙҙар журналына вәғәҙә биргән икән. Мин ярҙамлашырға булдым.

Төндә бик оҙаҡ Юзеф килтергән китаптарҙы ҡарап яттым. Ул букинистарҙан сәнғәт буйынса китаптар йыя.

27 декабрь.

Йоҡонан бик һуң торҙом. Рафаэль кискә тиклем күҙем ауырта тип ятты. Урал, Рауил (ҡустылары) янында ҡунып, һуң ғына ҡайтып керҙе. Кис Әсғәт килде. Рафаэлде уяттым да

Рәйескә (Низамов) йүгерҙем. Өйҙә юҡ. Өсәүләп Шураларға киттек. Рафаэль Шураның патефонын төҙләтеп ташланы. Яңы йылды беҙҙең бүлмәлә ҡаршыларға булдыҡ. Университеттан Диҡҡәт Бураҡаев, Рамазан һәм Марат үҙҙәренең ҡыҙҙары менән килһәләр, Рафаэль менән Рәйес Эля менән Әнисәне саҡырһалар, Әсғәт Валяһы менән булһа, миңә Шура ла «яраған». Ә Шакир Янбаев беҙгә ҡатышмай торған кеше инде хәҙер.

Кисә театрҙан ҡайтып килгәндә, Әнисәне бер егет менән күрҙем. Киев вокзалы эргәһендә һөйләшеп тора ине. Мин өндәшмәнем. Ул күрмәне. Төҫкә бик матур ул. Үҙе тик егеттәр менән йөрөр өсөн генә тыуған ҡыҙ инде. Теләһә кемгә эйәреп китә, теләһә кемде эйәртә. Шуға ла үҙемдең йөрәк ҡуҙғалып ҡуйыуына аптыраным. Нисектер күңелһеҙ булып китте. Үҙемдең яңғыҙлығымды тағы ла нығыраҡ тойҙом. Ниңә һуң мин хәҙер бер генә ҡыҙҙы ла тулыһы менән йөрәгемә индерә алмайым. Хатта ҡурҡыта. Ә минең шул тиклем яратҡым килә. Әйҙә, ул яратыу теләһә ниндәй ғазаплы, үкендергес булһын! Тик минең ғәҙәттән тыш янып яратҡым килә. Ләкин мин быға ышанмайым. Әйтерһең, йөрәк мәңгегә йоҡлаған! Ниңә шулай? Бынан өс йыл элек минең күкрәгемдә ут йомғағы ята ине. Әллә ниндәй ләззәт, һыҙланыу менән яна ине йөрәк! Төндәрен йоҡлай алмай яҙам да яҙам, көндәрен — уҡыйым да уҡыйым, үҙем тамсы ғына ла арымайым, атлап түгел, гел осоп ҡына йөрөй инем! Ә хәҙер, әйтерһең, туңғанмын. Күңел боҙланған. Ҡот осҡос һалҡынлыҡ! Кем һуң иретә алыр уны? Мариятмы? Юҡ, ышанмайым. Ул хәҙер мине яратһа ла, мин уны ярата алмайым. Шул ярата алмау мине ғазаплай. Мин Мариятта хәҙер үҙемдең тәүге мөхәббәтемде генә яратам, уның шул тиклем үкендергес булыуына, тойғоларымдың яуапһыҙ ҡалыуына һаман да һыҙланам. Күргем килә уны. Ләкин уны күреү һәр саҡ шул үтелгәндәрҙе хәтерләтә лә үҙемде яратмайым. Үҙемдең ғорур була алмауыма асыу килә. Ул тамсы ла үҙемдең хыялда тыуҙырған Мариятҡа оҡшамаған...

Бына янға Борис Палкин килде.

— Көндәлек яҙаһыңмы?

Был һорау миңә бик уңайһыҙ. Сөнки мин бер кемдең дә шулай көндәлек алып барыуын күргәнем юҡ әле. Был нисектер башҡаларға буш нәмә булып күренә.

Был яҙмаларҙа тормошомдоң бәләкәй генә булһа ла серле эҙе бар. Урман араһында йөрөгән эҙҙәр кеүек улар. Үҙем генә уларҙы уҡый беләм. Ләкин минең йөрөгәнде бер кем дә күрмәһен. Хатта Рафаэль килеп торһа ла уңайһыҙ. Ул быны аңлай, ахыры. Бер ҡасан да: «Нимә яҙаһың?»— тип һорамай. Был яҡшы.

28 декабрь.

Төнгө сәғәт 5-кә тиклем ултырғанмын да ҡуйғанмын. Тағы ла йоҡлап булманы. Фадеев буйынса Апресянға зачет тапшырҙым. Ә Николай Старшиновты ҡыуып сығарған. Морозовҡа зачет ҡуймаған. Ярай, бынаһынан да ҡотолдоҡ!

Мунсала ла Энгельстың «Людвиг Фейербах»ын уҡып ултырҙым. Рафаэль дә килеп керҙе. Мин уға иртә менән Әкрәм Биишев ҡалдырып киткән хатты бирҙем.

29 декабрь.

Философиянан конспекттар булмаған өсөн зачет бирә алманым.

Рафаэлгә Назым Хикмәттең «Һайланмалар»ын һатып алдым. Ул минән, юҡһа, үҙемдәгеләрҙе бүләк итеүемде һорағайны. «Рафаэль, был бит яратҡан ҡыҙыңды миңә бир, тигән кеүек була»,— тигәйнем.

Рафаэль китапҡа нык шатланды.

30 декабрь.

Иртән Хәҙисә менән Шакир килеп инде. Хәҙисәне һағынып көткәйнек. Ул Мәскәүҙә бер 20 көнләп торорға, музейҙарҙа, театрҙарҙа, Третьяков галереяһында булырға тейеш.

Хәҙисәгә инде тормошҡа сығырға, әсә булырға күптән ваҡыт еткән. Ул шул тиклем бала күңелле, саф, матур! Һәр һөйләшеүҙән һуң уның донъяға ҡарашының асыҡ һәм дөрөҫ булыуын күреп һоҡланаһың. Уның үҙенә генә хас ҡатын-ҡыҙ матурлығы һиңә сикһеҙ рәхәтлек бирә. Ҙур һоро күҙҙәренә ҡарап тороу ғына ла күңелде сафландыра.

Горький утверждает, что язык служит «костью, мускулом, нервом, кожей фактов», которые создаются человеком.

«Надо такой четкости, такой ясности слов, фразы, которые могут быть даны только силою этого языка, ибо — покамест, только он способен создавать картины подлинной художественной правды, только он способен придать образу пластичность и почти физическую видимость, ощутимость».

Литературный язык.

«Деление языка на литературный и народный значит только то, что мы имеем, так сказать, «сырой» и обработанный мастерами язык»,— пишет М. Горький. Писателей он считает формовщиками языка.

«Чтобы хорошо писать, надо хорошо знать свой родной язык»,— говорит Горький Е. Ганьшину.

«Героическое дело требует героического слова».

«Экономнейший способ организации мысли и есть образ».

«Пишите гуще»,— таково неизменное требование Горького.

Лермонтов стремится «разгорячить кровь русской поэзии, вывести ее из состояния пушкинского равновесия».

Уйланыуҙар

Башҡорт теленең үҫешенә ислам диненең схоластик китаптары бер ниндәй ҙә файҙа килтермәгән. Ә рус телендә христиан дине хаҡында яҙылған китаптарҙың бик ҙур йоғонтоһо бар бит.

Шиғыр яҙа башлаусы йәш кешегә шундай мәсьәләләрҙе ҡуйырға кәрәк: халыҡ ижадын, телен өйрәнеү; үҙеңде ҙур кеше итеп әҙерләү: сәсәндәр, аҡындар, ашуҡтар образынан үрнәк алыу; бөтә классиктарҙан, туғандаш халыҡтарҙан өйрәнеү: шағир тынғыһыҙ күрәлсе булһын, алдында ҙур бурыстар торһон.

Ябайлыҡ һәм ябай булырға тырышыу бар. Тәүгеһендә — тормош, һуңғыһында — уның күләгәһе. Ҡояшты болот ҡаплаһымы, күләгә юғала. Шағир булып күренергә тырышыу — меҫкенлек. Ҡырмыҫҡаны йөк башына меңһә лә күрмәйҙәр.

Бәләкәйләнергә теләмәһәң, йөрәгеңә халыҡты һыйҙыр, уның менән йәшә.

Ашыҡҡан кеше абынырға ла мөмкин. Ләкин ашыҡҡаны яҡшы. Тормош ашыға.

Кешеләрҙе бер-береһе менән булған уртаҡлығы яҡынайта. Яҡшы — яҡшыға, насар насарға ынтыла.

Ятҡан һыу таҙа булмай, эсмә уны.

Дошманыңдан да өйрән, дуҫыңды ла өйрәт.

Бер кешенең дөрөҫлөгө мең кешенең яңылышыуын да еңә. Ялғандың ғүмере ҡыҫҡа.

Хыял менән генә йәшәгән — хыялый ғына. Тормош тыуҙырған хыял ғына ҡанатлы.

Яҙыусынан үҙе булдыра алмағанды яҙыуҙы талап итеү — ул итексенән салбар тегеүҙе һорау.

Әгәр ҙә минең балалыҡ Ватан һуғышы йылдарына тура килмәһә, мин шиғырҙар яҙа башламаған булыр инем. Ватан һуғышы минең йөрәктә иң тәрән эҙ ҡалдырҙы, яҙмайынса булдыра алманым. Әгәр ҙә мин әҙәбиәт өсөн тыуһам, мине Ватан һуғышы тыуҙырҙы, атайымдың шул һуғышҡа китеп һәләк булып ҡалыуы, әсәйемдең шул көндәрҙә беҙҙең менән үткәргән яңғыҙ тормошо, өс-дүрт көн ас ултырған көндәр, бөтә кешенең һуғышты тойоп йәшәүе — минең бәләкәй генә йөрәгемә иң ҙур тормош булып инде.

1954

1 ғинуар.

Яңы йылдың сәғәте. Хуш бул, иҫке йыл! Мин һиңә бик күп яңылыҡ килтергән көндәрең өсөн бурыслымын. Ауыр, бик ауыр көндәрең дә булманы түгел. Үҙемдең киләсәгем өсөн ҡурҡҡан, ҡайғырған, икеләнгән, шикләнгән көндәр ҙә булды. Тик алға ҡуйған ҙур маҡсаттан тайпылған өмөтһеҙ көн булманы һәм бынан кире лә булмаҫ.

6 ғинуар.

Урал поезға билет алып ҡайтҡан. Яҡшы. Зачетты имтихандарҙан һуң бирергә рөхсәт итмәнеләр. Беҙҙең институттағы формаль ҡарашҡа бигерәк эс боша. Рафаэлдең шифыры «Совет Башҡортостаны»нда баҫылған. Бер генә шифыры. Шуға күңелһеҙләнеп ултыра.

Әлтәфтең хаты ла, Марияттың хаты ла бик шатландырҙы мине.

Марият, Марият! Миңә бөтә донъя яҡтырып киткән кеүек булды.

7 ғинуар.

Төнө буйы йоҡлай алманым. Марият күҙ алдымдан китмәне. Иртән, сәғәт 7-се яртыла кочегар ағай ишекте шаҡыҫас, ырғып торҙом да Уралды уяттым. Поезд 1-ҙә китә. Урал менән электричкала һөйләшеп барҙыҡ. Мариятҡа яҙған хатты яңынан уҡып сығып, конвертҡа һалдым да:

— Бына еңгәңә хат! – тигән булдым. Урал, көлөп:

— Ҡайҙа, үҙем илтеп тапшырам!— тине.— Күрермен дә уны.

— Юҡ, әле ярамай!..

Рауил оҙатырға килә алманы — имтихан.

Урал тураһында интернат директорына хат яҙҙым. Насар малай түгел, уңырһығыҙ, тинем. Урал көлдө.

Поезд китте.

Бар ине Урал. Юҡ Урал. Нисектер моңһоу булып китте.

Хәйерле юл һиңә, Уралым...

Мин уға ауыл хужалығы академияһы тураһында нығлап уйларға ҡуштым, был хаҡта уның көндәлегенә лә бер трактат яҙҙым. Үҙе уйлаһын хәҙер.

8 ғинуар.

Киске поезд менән үҙебеҙҙең Сажиҙә Зайлалова апайҙы Өфөгә оҙаттыҡ.

— Уралды кисә ҡайтарып ебәрҙек, ҡарағыҙ инде,— тинем. Сажиҙә апай хатлашып торорға адресын да ҡалдырҙы (Өфө, К. Маркс урамы, 17/19, кв. 65).

Рафаэль көнбайыш әҙәбиәтенән отличноға тапшырып ҡайтҡан! Яҡшы!

9 ғинуар.

«Ҡыҙыл буҡет» китабын тәү тапҡыр уҡығаныма 15 йыл тулды! Миңә ул саҡта 6 йәш ине.

Сәләм — минең тормошома ингән беренсе шағирым! Уның тормошо һәм ижады тураһында бик яҡшы китап яҙырға тейешмен мин. Уны белгән яҙыусыларҙан, ҡатынынан һорашырға кәрәк. Мин уйлаған был эш беҙҙә әле башланмаған да.

Тышта бөгөн шундай йәмле! Аҡрын ғына ваҡ ҡар яуа. Ҡояш йоҡа ғына болоттар артынан тоноҡ ҡына яҡтырта. Ел юҡ. Тып-тын. Ә мин философия менән ултырам.

10, 11, 12 ғинуар.

Философияны уҡып, конспекттар яҙҙым. Баш ҡалҡытырлыҡ та ваҡыт булманы. Үҙемдең сығарға иҫем китә. Был көндәрҙә бөтөнләй профессор булып бөттөм. Маркстың «Фейербах хаҡындағы тезистар»ын ғына аңлап бөтөрмәнем булһа кәрәк. Философик һүҙлекте бик йыш аҡтарырға тура килә.

13 ғинуар.

Иртә менән институтҡа барғанда Чалай менән Шевлюкты тыңлап иҫ киттем. Толстой буйынса шундай юҡ нәмәләрҙе лә белмәйҙәр. Яҙыусылар!

Бөгөн Поспелов бик күптәрҙе бөлдөргән. Күптәр имтихандарын бик насарға тапшырған. Мәсьәләне партия йыйылышында тикшергәндәр, шикелле. Бик сәйер!

1872. «Новая теория символической поэзии Артура Рембо»:

«Первое, с чем должен ознакомиться человек, желающий стать поэтом,— это с самим собой. Он исследует свой внутренний мир, внимательно изучая его во всех деталях. Овладев этим знанием, он должен всячески расширить его пределы. С первого взгляда задача кажется довольно простой: в каждом из нас

постепенное развитие совершается естественным путем. Но в данном случае речь идет о том, чтобы стать настоящим чудовищем... Представьте себе человека, старающегося вырастить у себя на лице бородавку. Я говорю, что надо быть ясновидцем, стать ясновидцем. Поэт становится ясновидцем в результате долгого и строго обдуманного расстройства всех своих чувств... Это не передаваемая мука, перенести которую можно лишь... с нечеловеческими усилиями... Он ведь познает неведомое, и если бы даже, сойдя с ума, он в конце концов утратил понимание своих видений, ему все-таки удалось созерцать их воочию!»

14 ғинуар.

Көн йылы. 15 саҡрымлап урманда саңғыла йөрөгәнмендер. Внуковоға барып сыҡтым. Ай һыуҙай яҡты, шаңдаҡланып тора.

Зачетты Политехнический музейҙа «Учительская газета»ның философия һәм педагогика бүлегендә тапшырҙым! Нестеренко минең конспекттарҙы ярты сәғәт тиерлек ҡараны. Ваҡ ҡына һорауҙар бирҙе.

Электричкала бик матур бер ҡатындың ире менән балалар шикелле шаярышып килеүен ҡарап ҡайттым. Ире бөгөн 4 сәғәт кенә йоҡлаған. Ҡатынының ҡулбашына башын ҡуйып йоҡларға итә. Ҡатын миңә ҡарап көлә лә иренең башын этә — уңайһыҙлана. Ә ул үпкәләне лә ҡуйҙы.

Ҡатын миңә ҡарап гел йылмайып ултырҙы.

Бер һүҙ әйтмәйенсә, кешеләр ҡараштары менән генә лә әллә күпме нәмә тураһында һөйләшә ала. Һүҙ менән әйтһәң, шулай матур булмаҫ ине!

Ә бер көндө, Яңы йылды ҡаршылап ҡайтҡанда, Рафаэлдең Эляның иңбашына башын һалып килеүе һис тә оҡшамағайны...

15 ғинуар.

Әле Ибсен тураһында Луначарский мәҡәләһен уҡырға ултырҙым. Норвегияның иң ҙур драматургы ул /1828 — 1906/.

Бранд — это образ цельного и сильного человека. Но идеал его есть только идеал. Что этот идеал — неизвестно. В этом трагедия Ибсена. Он хочет звать свой народ все выше и выше. Но куда? Полная мистика.

Пер Гюнт — это изображение человека, который видоизменяется в зависимости от обстоятельств. Мягкий как воск. Принимает любую форму. Он подобен луковице, с которой можно снимать ее одежды и таким образом уничтожить ее всю, кроме одежек, у него нет ничего за душой.

Ибсен один из величайших профессоров «бунта человеческого духа». Но когда человек дорожит «бунтом» ради «бунта», тогда он сам не понимает, к чему бунт должен привести.

Ибсен привлекателен своим «нравственным беспокойством», своим интересом к вопросам совести, моральным характером своей проповеди. Но его мораль так же отвлеченна, а поэтому так же бессодержательна, как мораль Канта.

Плехановтың мәкәләһе, әҫәрҙәрҙе художество яғынан тикшермәһә лә, миңә бик оҡшаны. Был минең Плеханов менән тәүге танышыуым. Ул ғәҙәттән тыш белемле! Уҡыйһың да уны — үҙеңдең уйың да киңерәк, тәрәнерәк була бара.

16 ғинуар, төн.

Джек Лондонға тотондом. Хәҙер инде яҡтыра башлар, ә йоҡо килмәй. Аҙ уҡыһам да, файҙалыраҡ уҡығым килә. Имтихан иһә — минең өсөн һылтау ғына. Бөтәһе лә үҙем өсөн. Хәҙер уҡып ҡалмаһам, күп нәмәне юғалтыуым мөмкин.

Мартин Иденды үҙемә оҡшауы ғәжәп. Әйтерһең, ул — мин. Нисектер рәхәт миңә.

17 ғинуар. Төнгө сәғәт 3.

Лондон тормошто Горький кеүек белә.

«Играя в незнакомую игру, никогда не делать первого хода».

«Разум ее был юным, как она сама. Но инстинкт ее был стар, как человечество, и даже еще старше. Он родился в те давние времена, когда родилась сама любовь...»

18 ғинуар.

Мартин Иден! Ниндәй ҡурҡыныс һинең тормошоң! Ҡайҙа һин, элекке Мартин Иден? Ауыр һинең тормошоңдо уҡыу! Ләкин һинең тормошоңа ҡарау миңә бик кәрәкле. Миңә бик ауыр булған саҡта мин һине һәр саҡ иҫкә алырмын, көслөрәк булырмын.

Бөттөм! Китаптың һуңғы битендәге юлдар Мартинды йоткан диңгеҙ тулҡындары кеүек ҡағылды миңә... Кеше тупраҡты алтын итә, алтын кешене тупраҡ итә...

Джек Лондондың был китабын башҡортсаға тәржемә итке килә.

18 ғинуар.

Институтта миңә аҡса килгән тинеләр. Ревизорҙар килеп сыҡмаһын, тип йөрәкте ус төбөндә тотоп китеп барам. Күҙ алдымдан Мартин Иден китмәй тик тора. Институтҡа барып, аҡсаны алһам, тағы аптыраным. Әллә берәйһе көлөп 46 һум ебәрҙе микән? «Гарипову Студенту» тип, студент һүҙен ҙур хәреф менән исем урынына яҙғандар. Почтаға барһам, ул ра-

диокомитеттан! Ләкин минең унда бер әйбер ҙә ебәргәнем юҡ. Аҡсаны алып сыҡҡас, Искәндәр Гумматов осраны, бурыҫҡа аҡса һораны. Биш һум сығарып бирҙем дә ашханаға киттем. Минең янға ике жулик килеп ултырҙы. Береһе минең йәштәрҙәге егет — Валерий, икенсеһе — ун дүрт йәштәге малай, Леонид. Өҫтәлдә минең Лондонды күреп, был малай Джек Лондонды һөйләп алып китте. Мин таң ҡалдым. Мин ишетмәгән яҙыусыларҙы белә. Трифоновтың «Студенттар» повесын тәнҡитләп ташланы. Мин бик ҡыҙыҡһынып тыңланым. Жуликтарға бөтөнләй үҙ кешеләре булып күрендем, ахыры. Мине араҡы менән һыйларға булдылар. Баш тарттым. Бик ҡыҫтағас, бер аҙ ауыҙ иттем. Малайҙың араҡыны һыу кеүек эсеүенә йөрәк ҡыҫылып китте.

— Һин нимә эстең? — тим, күҙҙәренә ҡарап.

— Ә нимә?

— Күҙ йәштәрен! — тинем. Ул көлдө.

— Беҙгә әсе түгел!

Был һүҙҙәрҙән мин уларҙың бөтә тормошон аңланым. Бөгөн улар Киев вокзалында урлашырға тейеш. Был турала улар студенттар зачет хаҡында һөйләшкән кеүек әйтте миңә. Кисә Валерийҙың үҙен сисендереп, 180 һум аҡсаһын алғандар.

Официанткаға улар кеҫәләренән аҡсаны кәбеҫтә кеүек сығарып түләне. Мин дә үҙемдең тәңкәләрҙе сығарҙым һәм, үҙем дә һиҙмәҫтән, ҡыҙарҙым. Официатка сдача бирҙе, алманым. Жуликтар күңелһеҙләнеп ҡалды. Мин уларға ниңә оҡшағанымды аҙаҡ ҡына аңланым. Мин бит уларға үҙем кеүек үҙ кеше итеп ҡараным!

«Упорство — вот тайна писательского мастерства, говорил Лондон. Он установил для себя чрезвычайно жесткий режим и неуклонно следовал ему, работая порою по девятнадцать часов в сутки. За шестнадцать лет напряженного творческого труда Лондон написал около пятидесяти книг».

19 ғинуар.

Көнө буйы ҡар яуҙы. Көнө буйы Мопассандың «Тормош» романын уҡыным.

Кис Рауил Уралдың хатын килтерҙе. Һаман әле интернатҡа урынлашмаған. Үҙе уҡып йөрөй. Уны ҡайтарып ебәргәнгә үкенеп ҡуйҙым.

Мин Мопассанды элек нисек тә уҡымаҫҡа тырыштым, һәм яҡшы иткәнмен. Егермене уҙғас ҡына уҡырға кәрәк уны.

20 ғинуар.

«Марият! Күҙ алдыңа килтерһәң ине: тирә-яҡта шундай сафлыҡ, шундай иркенлек! Ҡарағайҙарҙың, шыршыларҙың

йәшел ботаҡтарына күпереп кенә торған ҡар түшәлгән. Ботаҡтарҙа ул, муйыл сәскәһе кеүек, тәлгәш-тәлгәш уҡмашып тора. Улар шундай һәлмәк кенә булып, ниндәйҙер бик матур ауырлыҡ менән түбәнгә аҫылынып тора. Миңә тик ауырлы йәш әсә генә шулай матур булыр ине кеүек. Миңә был донъялағы иң изге матурлыҡ булып тойола. Сөнки тик әсә йөрәгенең аҫтында ғына башланған яңы ғүмерҙең йөрәге тибә. Йәш әсәгә шунан да ҙур ғорурлыҡ юҡ кеүек был саҡта.

Бына иртәгә һуңға һинең тормошҡа килгән көнөң, Марият. Һинең өсөн берәү генә булған иң ҡәҙерле кешеңдең иң ныҡ шатланған көнө. Ыны һин аңлайһыңмы, Марият?

Мин үҙемде әле бер ҡасан да шундай яңғыҙ, шундай күңелһеҙ тойғаным юҡ ине. Их, Марият!.. Әгәр ҙа бына шул ваҡытта донъяла мине бер генә аңлай торған кеше булғанда, мин ни тиклем бәхетле булыр инем. Ниңә кешегә ҡайһы саҡта түҙә алмаҫлыҡ ауыр?

Башҡа ваҡыттарҙа мин был һорауға яуап бирә алам. Ә бөгөн — юҡ. Бөгөн минең тормоштан юғалғым килә, бөтөнләйгә киткем килә. Ләкин мин иртәгә уны тағы ла нығыраҡ яратасаҡмын. Мин тормошто ғәҙәттән тыш яратыр өсөн тыуғанмын. Кәрәк булһа, тик уның өсөн генә үлергә әҙермен.

Марият, бәлки, был уйҙар бик сәйер тойолор. Ләкин улар бөгөнгө уйҙар ғына түгел...

Мин аҙым һайын кешеләрҙең бер төрлө һөйләп, бөтөнләй икенсе төрлө йәшәгәндәрен күрәм. Ләкин күптәр ыны күрмәй...

Был көндәрҙә һинең турала бик күп уйланым мин. Беҙҙең быуын да олоғая бара, Марият. Һин инде бына эшкә лә китәһең. Ә мин һинән алдараҡ эшләй башларға тейеш инем.

Ә мин һинең күберәк уҡыуыңды теләйем. Һиңә китапхана институтын бөтөргә кәрәк. Әгәр ҙә һин үҙеңдең был эшеңде бөтә йөрәктән яратаһың икән, көҙгә тиклем эшләп, уны ныҡ аңлап, үҙеңә нимә етмәгәнен бөтә яҡтан да белеп, көҙгә яңынан уҡый башларға кәрәк, Марият! Беләм, һинең әсәйеңә, туғандарыңа ярҙам иткең килә. Ләкин һин күберәк ярҙам итерлек бул, бөтә яҡтан да алыҫараҡ ҡара... Мин һиңә ошонан башҡа бер ниндәй ҙә яҡшы кәңәш бирә алмайым.

Ә миңә шулай ҙа һинән алдараҡ эшләй башларға. Һинең үҙеңә уҡыу өсөн ярҙам итергә кәрәк.

Шуға нисек ҡарайһың, Марият? Яҙ, йәме.

Әлбиттә, һин үҙ тормошоңдо минән башҡа ла хәл итергә мөмкинһең һәм хаҡлыһың да. Ләкин мин үҙ тормошомдо һинән башҡа күҙ алдыма килтерә алмайым. Һин берҙән-бер өмөтөм минең, Марият.

Әгәр ҙә беҙҙең тормош мин теләгәнсә килеп сыҡмаһа, мин әҙәбиәттән башҡа үҙемә бер ниндәй ҙә йыуаныс эҙләмәйем. Үҙем өсөн аҙ ғына булһа ла йәшәүҙең ҡыҙығы ҡалмаясаҡ. Минең балаларым — яҙғандарым ғына йәшәһендәр.

Әлбиттә, мин шофер, летчик булып та (хәҙер минең күҙ яҡшы күрә), заводта эшсе булып та, бер өс йыл уҡыһам, агроном булып та (был эште яратам мин) эшләй алам. Ләкин үҙемә иң ауыр, иң изге эш — әҙәбиәттән башҡа мин бер ниндәй ҙә ҡәнәғәтлек тапмаясаҡмын.

Марият! Һин быны бик тәрәндәй аңлаһаң ине. Был эш бит минең бер нисек тә дауалап булмай торған ауырыуым.

Һине юғалтыу — минең үҙемдең шәхси тормошомдо юғалтыу, ә әҙәбиәтте юғалтыу — үҙемде бөтөнләй юғалтыу.

Марият, минең башҡалар әйтмәгән бик күп фекерҙәрем бар. Малым да, даным да юҡ, ләкин кешеләргә ҡалдыра торған иң яҡты һүҙҙәрем бар.

Мин һинең үҙ тормошомда иң яҡын дуҫым да, кәңәшсем дә, иң беренсе уҡыусым да, балаларға иң яҡшы әсә лә, хатта үҙемдең дә әсәм булыуыңды тойғом, күргем килә, Марият...

Марият, быны уҡыйһыңдыр ҙа мине «бына бер бәлә кеше» тиһеңдер. Йә, хуш, ғәйепләмә. Бөгөн мин яңғыҙ. Ярай, алыҫта булһаң да, һин бар әле.

Бына һинең менән һөйләшкәс, еңелерәк, исмаһам.

Рәми».

21 ғинуар.

Саңғыла йөрөп килдем дә Мопассандың «Пышка» хикәйәһен уҡып сыҡтым. Бөтә юғары синыф кешеләре бер фәхишәнең ике бөртөк күҙ йәшенә лә, тырнағына ла тормай! Хикәйә мине таң ҡалдырҙы.

22 ғинуар.

Марияттың тыуған көнө бөгөн. Кисә уға ике шиғыр яҙҙым. Иртә менән «Йүрүҙән» шиғырын яҙа башланым. Китаптың исемен шулай атағым килә.

23 ғинуар.

ЦДЛ-да институттың 20 йыллығы үткәрелде. А. Сурков асты, Замошкин телмәр тотто.

24 ғинуар.

Тәүге ҡабат Ҙур театрҙа булдым. «Иван Сусанин» күҙ алдымдан китмәй.

Ҡайтҡанда Әсғәт Әшрәпов минең койкала йоҡлап ята ине. Танауынан тартып уяттым. Һағындырған шайтаның!

25 ғинуар.

Войничтың «Овод»ын уҡып сыҡтым. Көслө әҫәр. Һәр кемгә уҡырға ҡушасаҡмын. Ҡапыл, көтмәгәндә, Даһи Бабичев килеп инде. Өфө хәлдәрен һөйләп ташланы. Ҡыҙы бар — Таңсулпан (Т. Бабичева, актриса). Минең тыуасаҡ ҡыҙҙың исемен ҡушҡан! Рафаэлде Өфөгә оҙатырға сыҡтыҡ.

30 ғинуар.

Белгән һайын үҙемдең бик күп нәмәләрҙе белмәүемде генә беләм. Имтихан тапшырылды.

Уралдан хат алдым. Интернатҡа урынлашҡан. Ҡыуанып бөтә алманым. Торған һайын ныҡыраҡ яратам үҙен.

Кисә Рауил килде. Башлы малай. Шулай ҙа ул миңә Урал кеүек эҫе түгел. Арала ниндәйҙер кәртә бар. Үҙем дә аптырайым. Әйтерһең, беҙ бер әсәнән түгел...

Минең тыуған көн 12 февралдә. Ләкин минекен дә Боряныҡы менән бергә үткәрҙек. Нина Акимовна (Шевкунова) бик тәмле итеп пирог бешергән.

31 ғинуар.

Бүлмәлә үҙем генә уйланып ята инем, Алгис килеп инде.

— По-прежнему у тебя книг много, по-прежнему ладонь крепкая, — тине ул, көлөп. Ул ҡапыл килеп керҙе, хатта мин күҙҙән йәшемде лә һөртөргә өлгөрмәй ҡалдым.

Р. Роллан:

«Нужно воспитывать в душах любовь к истине, чувство истины, властную потребность к истине... Нужно иметь смелость вырвать, если надо — силой... Есть только одно лекарство — правда. Надо видеть и отображать жизнь такой, как она есть...»

Толстой — Ролландың бөйөк уҡытыусыһы. Роллан «Война и мир» авторына хат яҙа һәм унан /1887 йыл, 4 октябрь/ ғүмер буйы көс биргән бөйөк хат ала.

Роллан: «Он /Толстой/ мне представляется, подобно Жан-Жаку Руссо, сидящим на развалинах старого мира, разрушению которого он содействовал, на пороге нового мира, наступление которого он, сам того не желая, подготовил, и которому предстоит идти дальше, оставив его позади».

Ленин характеристикаһына ниндәй яҡын!

Рус әҙәбиәтенә Ромэн Роллан аша күсәм. Иң тәүҙә Толстойҙың Ролланға яҙған хатын уҡып сығырға кәрәк.

Фөмүмән, мин хәҙер әҙәбиәтте үҙемсә өйрәнә, үҙемсә аңлай башланым. Иҫке донъя миңә яңыса асыла. Үҙемде һуғышҡа инергә торған һалдат кеүек тоям.

Поспеловҡа имтихан биреү өсөн генә әҙерлек түгел был, ҙур тормошҡа әҙерлек. Алда — ҙур яҙмыш һынауы тора. Файҙалы булырға тейешмен.

12 февраль.

Төн. Переделкино. Бына инде тәүге әтәстәр ҙә ҡысҡырыр. Инәйем, бәлки, йоҡоһонан уяныр ҙа был таңда бынан 22 йыл элек үҙенең тәүге балаһын тыуҙырған мәлде хәтерләр. Бәлки, уйға ҡалыр. Бәлки, йылмайыр. Алыҫтағы улын күҙ алдына килтереп, бәлки, уның тәүге өнөн ишетер. Әсә йөрәге! Һинән дә матур йөрәк бармы һуң? Әсә! Кем һуң минең турала һинең кеүек шулай ҡайғырһын? Әсә өсөн минең бер кем булыуым да кәрәкмәй.

Миңә инде 22 йәш! Күңелгә әллә нисек: мин яңғыҙмын. Уҡыйым да уҡыйым. Һуңғы ун көн эсендә мин үҙемде ун йыл йәшәгән кеүек тойҙом. Өс көн ашарға ла булманы. Тартырға ла юҡ. Ә шулай ҙа әгәр ҙә мин донъяла булмаһам? Ниндәй үкенес!.. Ярай әле, әсәй, мине тыуҙырғанһың. Ярай әле мин бармын!

Әсәйем ҡулдары

Мине тапҡан саҡта һиңә, әсәй,
Ун ете йәш булған ни бары!
Уйнап ҡына йөрөр саҡтарыңда
Мине һөйгән һинең ҡулдарың.
Әсәй! Яңғыҙың һин, белмәйһеңдер
Алтын икәнлеген ҡулыңдың,
Бөгөнгөләй күҙ алдымда һаман
Башланыуы кескәй юлымдың.
Шул көн иҫеңдәме һинең, әсәй?
Шул көн минең һәр саҡ иҫемдә.
Тәүге ҡабат бергә бесән саптыҡ
Һөҙәк кенә тауҙың битендә.
Моңланып бер кәкүк саҡырғанда
Үҙең янып бирҙең салғымды.
Тыуып килгән ҡыҙыл ҡояш нуры
Үҙ салғымдан уйнап сағылды.
Һин эргәмдә ҡарап торҙоң, әсәй,
Көләмһөрәп минең һелтәүгә.
Һәм маҡтаған булдың, дәртләндереп,
Йүнле сыпһаһам да мин тәүҙә.

Үҙ ҡулдарың менән күрһәттең һин:
— Тарыраҡ ал, — тинең, — алдыңды.
Тартып ҡына өйөрөп сап шулай —
Бер үләне ҡалмаҫ салғындың.
Һыуҙай алып китте кескәй салғым —
Сәскәләрҙең ғүмере ҡыйылды.
Ысыктары тамғас, мөлдөрәшеп,
Улар илашҡандай тойолдо.
Һин һоҡланып ҡарап тора инең
Йәшел үләндәге эҙемә.
Йылмайһаң да үҙең, һинең дә бит
Йәш тулғайны, әсәй, күҙеңә.
— Атайың да шулай саба ине...
Был тиклем дә оҡшар икәнһең!..
Тик һин, атай, күрмәй был эҙҙәрҙе,
Мәңге ҡайтмаҫ өсөн киткәйнең.
Шул эҙҙәрҙә ине башланыуы
Кескәй генә хәҙмәт юлымдың.
Әсәй! Ул саҡ белмәй инем әле
Алтын икәнлеген ҡулыңдың.

Ә бөгөн мин уны тағы ла нығыраҡ беләм.

Бына тәүге әтәстәр ҙә ҡысҡыра. Мин дә 22 йыл элек бөтә донъяға, минең дә кеше булғым килә, тип ҡысҡырғанмын.

Артыҡ яратам мин һине, йәшәү! Мин ысынлап та ҙур әсәнең — тыуған илдең улы булғым, унан яратылаһым килә.

13 февраль.

Башҡа бер фекер килде. Шаблон тураһында мәҡәлә яҙырға. Миҫал өсөн Әкрәм Вәлиҙең М. Ғәли тураһында яҙған мәҡәләһен алырға.

Шаблон — сәнғәт дошманы, ул традиция түгел. Традиция иҫке нигеҙендә яңыны тыуҙырыу, ә шаблон — үлергә мәле еткән ҡарттың меҫкен таяғы!

Кеше ҡартайғас таяҡҡа тотона һәм һаҡланып ҡына үҙенә ҡурҡыныс булмаған урындан йөрөй. Вәлиҙәр шул таяҡҡа тотонған һәм йәштәргә лә шуның менән йөрөргә ҡушалар. Әгәр ҙә был таяҡты тотмаһаң, һине шағир итеп танымайбыҙ, тип ҡурҡыталар. Ләкин был таяҡтың икенсе осо ла бар. Ул уҡыусыларҙың башына һуға. Бынығы бигерәк тә ҡурҡыныс. Тотош әҙәбиәткә тотҡарлыҡ. Был сыҫкан ояһын хужаларса алып ырғытырға ваҡыт түгелме?

14 февраль.

Бына яҡтырҙы ла инде. Бөтә тирә-яҡ күгелйем төҫкә сумған. Ваҡ ҡына ҡар яуа. Щедриндың «Господа Головлевы»



Рәми Ғарипов ҡатыны менән. Май, 1955 йыл.

китабын уҡып сыҡтым да үҙ-үҙемдән ҡурҡып көҙгөгә ҡараным. Кисә лә йоҡлай алмағайным. Ай ярым инде китаптан айырылғаным юҡ. Нисек түҙәмдер, аптырайым. Әллә мин берәй ауырыуға әйләндем микән? Улай тиһәң, көҙгөнән бер ниндәй ҙә ауырыу ҡарамай. Рәми әле көслө, ат кеүек! Их, һин, Рәми, Рәми! Конспекттарҙы уҡып ятҡанда, Рафаэль ҡайтып керҙе. Мин бик шатландым. «Ни эш бөтөрә өфөләр?» — тәүге һорау. Поэмаһын Союзда тикшергәндәр.

Мостай Кәрим яҡшы кәңәштәр биргән. Марат Кәримов «Ленинсы»ла эшләй икән.

15 февраль.

Кис Рафаэль менән тағы ла Өфө шағирҙары тураһында һөйләштек.

Азат Абдуллин да килде. Сәй эстек. Ҡатыны /Разия/, ҡыҙы /Гүзәл/ тураһында һөйләштек. Бик ярата.

16 февраль.

Надяны /Надежда Васильевна/ күрмәгәнгә байтаҡ булып китте. Имтихан тапшырғас ҡына барып сығырмын инде. Уның менән булған хәлдәр тураһында һуңынан иркенләп яҙырмын

әле. Хәҙергә үҙем быны башҡа ла һыйҙыра алмайым. Күҙҙәре күҙ алдымдан китмәй! / 31 ғинуар, «Сорочинская ярмарка». Февраль төнө. Иҫ киткес!/

23 февраль.

Тапшырҙым! Өҫтән тау төшкән кеүек булды. Толстойҙың «Һуғыш һәм солох»ҡа тиклемге ижадын һәм Некрасовтың «Тимер юл»ын һөйләнем. Үҙемдән көтөлмәгәнсә ҡәнәғәтмен.

24 февраль.

Мин хәҙер үлгәнсегә тиклем Горький менән бергә! Ул минең күҙҙәремде донъяға асты. Ул миңә иң беренсе кеше булып Кеше тураһында һөйләне.

7-се класта саҡта мин уның «Әҙәбиәт тураһында»ғы китабын табып, тәүге ҡабат әҙәбиәт, тормош һәм Кеше тураһында уйландым. Ул мине Өфөгә килтерҙе. Ул мине үҙенең институтына саҡырҙы. Бына дүртенсе йыл инде мин уның әҙәбиәт тураһындағы китаптарын эҙләп йөрөйөм. Ә бөгөн уның миңә иң кәрәкле, көн һайын кәңәшләшә, һөйләшә торған китаптары ҡулымда /23 — 27-се томдары!/. Горькийҙың 30 томын да табырға тейешмен.

Бөгөнгө китап өсөн аҡса эҙләп йөрөү ғүмергә онотолмаҫ. Һорамаған кеше ҡалманы. Институттағы машинистка ҡотҡарҙы. Ярҙам кассаһынан аҡса алып бирҙе. Үҙен Ҙур театрға алып барырға тип уйлап ҡуйҙым.

Белмәйем, нилектән мин китаптар күрһәм шул тиклем аҡылдан яҙам?! Уларға мин тыныс ҡына ҡарай алмайым. Мин хәҙер үҙемдең тормошомдо уларҙан башҡа бер генә сәғәткә лә күҙ алдыма килтерә алмайым. Кеше аҡылы тыуҙырған иң бөйөк мөғжизә, ысынлап та, китап миңә.

Горькийҙың китап тураһында фекерен, әйтерһең, мин донъяла иң тәрән аңлаған кеше!

Кеше була алһам, ул һәйкәлде аҡ мәрмәрҙән китап итеп эшләһендәр һәм уға тик шул һүҙҙәрҙе генә яҙһындар ине: «Горький улы — шағир Рәми».

Мин китаптар алып ҡайтҡас, Адар:

— Вот разбойник! Вот кеше! — тип ҡысҡырҙы. Был миңә бик оҡшаны. Рафаэль, шаяртып:

— Үҙең үлгәс, был китаптарың кемгә ҡала инде? — тине. Мин:

— Горькийҙың бөтә томдары ла һиңә ҡаласаҡ! — тинем. Бик оҙаҡ фәлсәфә һаттыҡ.

Горький кеүек белһәм ине мин кешеләрҙе. Горький кеүек яҙһам ине улар тураһында!

Горький донъя яҙыусылары араһында кешенең иң ҙур, иң аҡыллы, иң ҙур йөрәкле дуҫы! Уны уҡып, үҫәһең, матурланаһың, үҙеңдең йәшәүеңде бик, бик кәрәкле итеп тояһың! Ә был тойоуһыҙ кеше булырға мөмкин түгел. Тормошта кеше булып йәшәү генә кешенең иң ҙур матурлығы!

Мин инде күпме яҙыусыларҙы уҡыным. Ләкин Горький уларҙың бөтәһенән дә ҙур! Горький иң ҡатмарлы кешеләрҙе аңлау өсөн дә иң кәрәкле кеше.

Блокты ла Горькийса аңланым мин хәҙер. Ул минең өсөн тағы ла тәрәнерәк, матурыраҡ. Блоктың көсһөҙлөгөнөң сәбәптәрен асығыраҡ күрҙем. Бер кем дә Блокты Горький кеүек ябай аңлатмай.

Рафаэлгә Блок оҡшамай. Ә Горькийҙы уҡыһа — оҡшаясаҡ. Горькийҙы ла ул эле тойоп етмәй. Мин уға Горькийҙың Толстой тураһындағы мәҡәләләрен уҡырға биргәйнем, ул һаман да әле уҡып ҡарамай. Әлегә өндәшмәй торам. Ҡыҙыҡһыныу тураһында бик ныҡытып һөйләшергә кәрәк әле. Бөтә нәмәне тәрәнерәк белергә тырышыу менән ағыуланыуһыҙ кешенең тәрәнлеген тойоп буламы һуң инде?!

Рафаэлдең Горькийға һалҡынлығы ваҡытлыса ғыналыр. Поэмаһының иң кәрәкле урынын алып китә алмай йөрөй әле. Ә Горькийҙы мин уның тормошона ла индерәсәкмен!

15 март.

Бына мин тағы Мәскәүҙә! Өфөнән 14 мартта килеп төштөм. Өфөлә үткәрелгән көндәр бер ауыр төш кеүек.

Ялған дуҫың оҡшаш күләгәгә.
Ҡояш булһа, ҡалмаҫ артыңдан.
Әгәр инде көнөң болот булһа,
Юғалыр ул өнһөҙ алдыңдан!

Әле лә үҙемде ауырыу итеп торам. Шулай ҙа китапты редактор ҡулына тапшырҙым. Редактор Сәләх Кулибай булыр, ахыры. Ғәйнан ағай ныҡ үпкәләп ҡалды булһа кәрәк. Минең менән һөйләшеп тә торманы. Ибраһим Абдуллин менән бик ҡаты бәрелешеп алдыҡ Мөбәрәков менән Йәнбулатова алдында. Юлда Асанбай менән осранылар. Имеш, мин бик тыйнаҡһыҙ, еүеш танау! Ә ул — әҙәбиәттә алла!

Хәким Ғиләжев ағай — һаман элеккесә. Оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Яҙһа, яҙа ла ала. Үҙенән бәләкәйҙәргә лә тиң ҡарай. Ҡустыһы Абдулла Ғиләжевтың улы бар — Илдар.

Китапты бүлектәргә бүлеп торманым. Шиғырҙар нисек, ҡасан яҙылған, шулай урынлаштырҙым.

16 март.

Һағындым һеҙҙе, китаптарым!
Тағы Блокка тотондом.

Блок проходит мимо Ленина. Он не слышит «музыки» в речах Ленина. Ему, напротив, кажется, что большевики — это какой-то поплавок на поверхности разбушевавшихся народных масс, а Ленин и его разумность, очевидно, казались Блоку лишь порожением того же интеллигентского разума, который хочет сделать прививку своих программных зятей к великому, внезапно выросшему... дереву, родившемуся из недр народа.

17 март.

Чернышевский үҙенең сәнғәттең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәте тураһындағы диссертацияһын яҙғанда инде танылған тәнҡитсе була. Уның тирәһендә ҙур көрәш башлана. Сөнки был диссертация политика, философия, эстетика мәсьәләләрен күтәрә. «Прекрасное есть жизнь» — төп тезис. Прекрасное һүҙен ул матур мәғәнәһендә генә алмай. Һәр кеше матурлыҡ эҙләй. Ә ул — тормошта. Етмәһә, уны яуларға кәрәк! Тормош матур булырға тейеш. Чернышевский тормош тураһында уның киләсәген күҙ алдына килтереп фекер йөрөтә.

Идеал тормош менән билдәләнә. Эш, көс, таҙалыҡ — крәҫтиән идеалы. Ул Некрасов ижадында матур бирелә. Улар — Чернышевский һәм Некрасов — бик яҡындар.

Сәнғәт — һауын һыйыр түгел /Герцен/.

Маркс, Энгельс трагедия жанрына — тарихи ҡотолғоһоҙлоҡ тип ҡарайҙар. Трагедия тарихи ихтыяждан тыуа. Осраҡлылыҡтан трагедия тыумай: ҡыҙыҡай мәктәпкә бара, трамвай аҫтына эләгә — был шәхси һәләкәт. Есенин шиғырындағы поезд артынан сапҡан ҡолон — был трагедия. Трагедияны ижтимағи мөнәсәбәттәрҙән сығып эҙләргә кәрәк. Чернышевский беренсе булып трагедиялар булмай торған ижтимағи мөнәсәбәттәр тураһында әйтә.

Ә Чернышевскийҙың үҙенең бөтә тормошо — иң ҙур трагедия.

Лирик шағир үҙе кисергән нәмәне генә түгел, ә башҡалар кисереүе мөмкин булған нәмәне биреүе менән көслө. Хыял, күҙаллау фекерҙе тултыра. Яңы эстәлек яңы форма талап итә.

Тамара мине төшөндә күргән. Ҡурҡыныс төш. Көслөп һөйләттерҙем: оккупация, немецтар... Мин йылмаям. Мине Тамара поезд тәгәрмәстәренән тапатып үлтерә. Төндә шиғыр яҙҙым.

* * *

Төшөмдә мин үлгәнмен дә, имеш,
Һин өҫтөмә тупраҡ ташлайһың.
Яратыуҙан янып һүнгәнемде
Шунда ғына аңлай башлайһың.
Һин ташлаған бер ус дымлы тупраҡ
Утлы сәскә булып атҺа ла,
Йөрәгеңдән сыҡҡан күҙ йәштәрең
Һуғарырға уны аҡҺа ла,
Бик һуң инде, бик һуңланың, иркәм:
Һыу бирергә кәрәк һыуһағас!
Ваҡытында кәрәк мөхәббәтең.
Нәфрәтең да өтә — һуңлағас...

Мин бөтөнләй элекке Рәми түгел...

Әгәр ҙә һәр кеше үҙенең тормошон бөтә дөрөҫлөгө менән яҙа алҺа, был китаптар ни тиклем ҡыҙыҡлы булыр ине! Донъяла күпме кеше бар, уларҙың һәр береһенең тормошо үҙенсә, үҙ төҫө бар. Мин үҙемдең тормошома ла ингән һәр бер яңы кешене күреп ғәжәпләнәм, аптырайым, яратам, нәфрәтләнәм. Ниңә барыһын да йөрәккә яҡын алам икән мин? Ниңә тыныс ҡына була алмайым?

18 март.

Миҙхәт Ғәйнуллин аҒайҙан Рафаэль менән барып аҡса алдыҡ та яҡшылап ашаныҡ, һыра эстек, кино ҡараныҡ. Аҙыраҡ еңел булып ҡалды. Кис ҡайтып килгәндә, ҡыш көнөндә, йәйғор күрҙек. Ай шаңдағы болоттар менән киҫешкән урында ике яҡта ла бәләкәй генә йәйғор нуры күренә ине. Ғәжәп!

19 март.

Халыҡ — ижад итеүсе. Халыҡ — иң ҙур шағир, иң ҙур йырсы. Нимә генә тыуҙырмай һуң халыҡ? Барыһын да! Халыҡ өмөтө — иң ҙурыһы. «Салауат» поэмаһында халыҡ образын шулай бирергә кәрәк. Уның бөтә ҡараңғы, әрнеүле, ғазаплы тормошон күрһәтеү менән бергә, ҙурлығын да бирергә!

Натурализм эстетикаһы.

Натурализмдың ике варианты бар. Береһе — бөтә тормош фаҡттарын бер нисек тә һайлап, баһалап тормайынса күрһәтергә кәрәк, ти. Был сәнғәт ҡанундарына бөтөнләй ҡаршы килә. Икенсе төркөм һайлау ихтыяжын таный.

Тәбиғәттә, тормошто нисек бар, шулай сағылдырыу тураһында әле Дидро әйтә. Уныңса, тәбиғәттә дөрөҫ булмаған бер

ни ҙә юҡ. Чернышевскийҙың диссертацияһын бик ныҡ хәтерләтә был. Ул да, Дидро ла факттарҙы һайлау һәм баһалауға бик ныҡ иғтибар итә. Улар тәбиғәт һәм ысынбарлыҡтың кәрәкле яҡтарын һайлап күрһәтеү яғында тора, натурализм методына ҡаршы сығалар.

Сәнғәт дөрөҫлөгө натуранан ҙурыраҡ, тәрәнерәк, тығыҙыраҡ. Сөнки унда булған ғына түгел, булырға мөмкин нәмә лә күрһәтелә. Дидро Аристотелдең был фекеренә ҡушыла. Бальзак Дидро идеяларына ҡушылып, уға бик ҙур баһа бирә, үҙенең ижадында шуның өсөн дә реалистик һүрәтләүҙә иң тәрән характерҙарҙы биреүгә өлгәшә. Тәбиғәт китапҡа мохтаж түгел! Уны күсереүҙең сәнғәт менән бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ, ти Бальзак.

Деталдәрҙе дөрөҫ күсереү, әгәр ҙә бөтөн бер дөрөҫлөктө күрһәтеүгә ярҙам итмәһә, уның бер кәрәге лә юҡ, тигән фекерҙе Лев Толстой ҙа әйтә. Толстой деталде фекер әйтеү, тойғо-кисерештәрҙе биреү өсөн генә ҡуллана.

Тәбиғәттә сәнғәт образдар, фән төшөнсәләре аша сағылдыра.

Сәнғәт әҫәре әле яҡшылап күренмәгән, ләкин киләсәктә бик асыҡ күренәсәк тормошто ҙурайтып күрһәтергә тейеш.

Натуралист предметҡа фетиш итеп ҡарай, уға табына, үҙгәртергә теләмәй. Ә үҙгәртергә кәрәк. «Возвышаться над действительностью!» — тигән лозунг ҡуя Горький һәм «факттар әҙәбиәтенә» ҡаршы көрәшә.

Литературный факт — факт типизированный.

23 март.

Башҡортостан тыуған көн. Рәйес Низамов килеп ҡотланы.

26 март.

Кисә Рафаэлдең поэмаһын Миҙхәт ағайҙарға барып уҡныҡ. Әле исеме лә юҡ. Ләкин поэма бар. Бындай әйберҙе һуңғы ваҡытта бер кемдең дә яҙғаны юҡ. Уның нисек тыуыуын мин генә яҡшы беләм. Ул бер шифыр ғына ине. Йәй уны миңә Йыланлыла үҙҙәренең лапаҫтары башында ятҡанда уҡыны. Шунан бирле ул үҫте лә үҫте. Миңә уның һәр юлы башынан аҙағына тиклем таныш. Бер генә юл да кисерешһеҙ, яныуһыҙ, эҙләнеүһеҙ яҙылманы. Мин Рафаэлгә һәр саҡ ҡаты булдым, ләкин уның һәр юлына эстән генә шатландым. Мин уның былай үҫеүенә дүрт йыл элек бөтөнләй ышанмай инем. Ә кисә ул минең күҙ алдымда тамам шағир булып тыуып етте. Поэманы кисә күптәр аңланы, ләкин тойоп еткермәне. Ә поэма миңә аңлашылмауҙан бигерәк, тойолорлоҡ булыуы менән

үҙенсәлекле. Йәштәр бындай тел менән әле яҙмай. Ул халыҡсан, ябай, матур, мәғәнәле. Теле өсөн генә лә рәхәтләнеп тыңланым! Ә был көс түгелме инде! Әгәр ҙә Рафаэль туҡтамаһа, шул урындан артҡа сигенмәһә, ул ысын шағирҙың тәүге матур, яҡты, өмөтлө аҙымын баҫты. Әле ул бына йоҡлап ята. Үҙенең мин аңлаған шағир икәнлеген дә белмәй әле ул. Уны һаҡларға, үҫтерергә кәрәк /күңелем тула/. Үҙенә тейешенсә ҡарай белһен һәм иҫермәһен. Иҫерҙеңме — бөттөң. Башҡаса үҫеп булмай. Мин тик шуның өсөн ҡурҡам.

Әле мин үҙем «Салауат»ты яҙмайынса шағир түгел. Күңелем, хыялдарым, уйҙарым менән генә, бәлки, шағирмындыр.

Тормошто һәм әҙәбиәтте Рафаэлдән күберәк беләм. Белемем дә тәрәнерәк. Ләкин мин шағир түгел әле. Ул — шағир!

30 март.

Маратҡа институтҡа килеү тураһында хат яҙҙым. Юҡһа, уны ЦКШ-ҡа инергә димләйҙәр. Нисек тә күндерергә кәрәк. Рафаэль дә яҙҙы. Киләсәктә үҙебеҙҙең ныҡлы әҙәби коллективты булдырыу тураһында ла һөйләнем.

Сергей ЕСЕНИН

«Крәҫтиән шағирҙары» тип үҙҙәрен-үҙҙәре атап йөрөгән шағирҙар заманында күп була. Ләкин улар онотолған.

Есенин Клюев менән танышҡас, бик аптырай. Уның крәҫтиән кейеме кейеүе лә ғәжәпләндерә. Ул аҡ ҡайылған күлдәк кейә, шифырҙарын йырлап уҡый. Есенин уға оҡшарға тырыша һәм уға бер экзотика итеп ҡарай.

1926 йылда Есениндың тәүге йыйынтығы сыға. Әлбиттә, был тулы йыйынтыҡ түгел. Сөнки уның «Гуляй поле» поэмаһы — контрреволюцион әҫәр. Есениндың яҡшы шифырҙары 1946 йыл һәм 1952 йылғы йыйынтығында сыҡты.

Есенин үҙенең автобиографияһын үлерҙән бер йыл алда яҙа.

Ике Сергей Есенин бар. Тәүгеһе — кабак шағиры. Ауырыу, йонсоу. Коммунизм эпохаһының дошманы. Хулиган, бандит шифырҙары яҙыусы — богема ҡалдығы: патриархаль кулак ауылының һуңғы йырсыһы. Бындай Есенин үҙенән һуң есенинщинаны ҡалдырҙы.

Бар икенсе Есенин. Донъяға ғәҙәттән тыш ғашиҡ булған, бөтә тереклекте һөйгән, тәбиғәткә иң матур йырҙар йырлаған шағир.

1925 йылды инде Есенин сырайына тупраҡ төҫө кергән оятһыҙ бер эскесе. Тарҡалған. Күҙ ҡабаҡтары һалынып төшкән. Физик матурлығын юғалтҡан. Үлемде йырлай.

Есениндың фажиғәһе — совет эпохаһында үҙенең ят булыуын тойоуҙа.

«Әсәй — Рәсәй» «Совет Башҡортостаны»нда баҫылған /15/III /. Ғариф Ғүмәр һәм Ғәфәр Вәлиуллин шиғырҙары менән бергә. Гонорарын бөгөн генә алдым. Маратҡа һәм Рафаэлгә Горькийҙың «О литературе» китабын эҙләп сығып киттем. Яҙыусылар лавкаһынан башҡа бер ҡайҙа ла юҡ. Ә ул ябылғайны инде. Арып, асығып бөттөм. Етмәһә, һул яңаҡҡа йоҙроҡтай шешек сыҡҡан. Бөтә Мәскәү минең мөгөҙгә ҡарай кеүек.

Кисә Учалыға Мәүлиҙәгә ул көткән шиғырҙарҙы ебәрҙем. Рафаэлгә «Йүрүҙән ҡыҙы»н уҡыным. Мәүлиҙә менән ете йыл үткәс күрешеү көнөнә яҙғайным. Рафаэль оҡшатты.

31 март.

Кисә /30/III/ Маяковскийҙың әсәһе үлгән. «Правда»ла белдереүҙе уҡыным да, баҫҡыҫҡа һөйәлеп тартып торһам, Евтушенко күтәрелеп килә. Бер әзербайжан егете уға:

— Бына һин Маяковскийҙың әсәһе тураһында шиғыр яҙғанһың да, ә ул үлгән. Шатлыҡтан үлгәндер инде, — тине.

Евтушенко башта көлөмһөрәп торҙо ла:

— Дурак! — тип тыныс ҡына үтеп китте. «Дурак» тинем мин дә эстән генә.

Рафаэль Ленин китапханаһында «Йәш төҙөүсе» газетаһының 1935, 1936 йылғы һандарын аҡтарып ҡайтты. Мәлих Харистың шиғырҙарын тапмаған. Мостай Кәримдең тәүге шиғырҙарынан көлөштөк.

— Мостай Кәрим дә шағир булып тыумаған икән дә!

1 апрель.

Рафаэль поэмаһын «Әсә йөрәге» тип атаны. Мостай Кәримгә ебәрергә булдыҡ.

7 апрель.

Мәүлиҙәнән хат алдым да лекцияны тыңлай алмайынса уйланып ултырҙым. Минең балалығым тороп ҡалған Миәс тураһында яҙған.

Бүлмәгә ҡайтҡас та Чернышевскийҙың көндәлектәрен уҡырға тотондом. Мин уларҙы мәктәптә саҡта уҡ уҡып иҫергәйнем, ә хәҙер тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ. Чернышевский — минең үҙ тормошомдо ойошторооуға иң беренсе һәм иң ныҡ

тәьҫир иткән яҙыусы. Мәктәп йылдары унһыҙ булһа, мин бик күп нәмәне юғалтҡан булыр инем.

Бына Рафаэль театрҙан асығып ҡайтыр. Уға сәй ҡайнатырға ла ваҡытты йәлләйем. Шулай ҙа ҡайнатып ҡуйҙым. Төнө буйы уҡыясаҡмын.

8 апрель.

Яҡтырғас ҡына йоҡларға яттым. Рафаэль шунда уҡ уятып та өлгөрҙө.

— Лекцияңды ҡалдырма!

Тороп тышҡа сыҡтым. Ҡояш! Яҡты! Ҡайындарҙың олоно ап-аҡ. Зарядка эшләп, турникта атылдым.

Ашау тураһында ике көн инде уйламаныҡ. Рафаэль дә, мин дә туҡбыҙ тиерлек.

Ашханала Азат Абдуллин ултыра ине. Ул бер ҡыш ҙенең иптәш малайҙары менән ҡыр кәзәһе атып алыуын һөйләне. Ауылдарында /Үргендә/ ике ҡарт һунарсы был малайҙарҙан көнләшә икән. Ҡыр кәзәһен атыу тыйылған саҡ булған. Теге ҡарттар районға шылтыратҡан, 150-шәр һум штраф һалғандар.

Азат һунар тураһында һөйләп китте. Ә мин һунарсыларҙы тыңларға яратам.

8 апрель.

Рафаэль менән Нина Акимовнаға киттек. Шатланып ҡаршы алды, һыйланы, носкиҙарҙы алмаштырҙы. Вера Инберҙың «Минуты слабости» шиғырын уҡып маҡтаны. Ләкин мин уны, яҡшы түгел, тинем. Үҙеңдең ғазабың менән ҡыланыу шиғриәт түгел.

Ҡайтырға сыҡҡанда, мин Нина Акимовнаға хат яҙасағым тураһында әйттем. Башынан үткәндәрен минең өсөн яҙа башлауын үтенәсәкмен. Юҡһа, мин уның һөйләгәндәрен яҙып бара алманым. Ә ул иҫ киткес бай тормошло, ғәҙәттән тыш күҙәтеүсән. Авиация тормошон, Ҡырым тәбиғәтен, граждандар һуғышы осорон яҡшы белә. Ватан һуғышы ваҡытында Башҡортостанда эвакуацияла булған.

Хушлашып урамға сыҡҡас:

— Аяҡҡа ниндәй рәхәт! — тине Рафаэль. Нина Акимовнаның был әсәлек хәстәрлеге, бәлки, йылдар үткәҫ, онотолор ҙа. Ә минең рус ҡатынының шундай матурлығы тураһында яҙғым килә. Йылы, тәрән, киң итеп!

9 апрель.

Бик көтөлгән хат килде. Нәшриәттән! Мин бик шат!

10 апрель.

Сәләх Кулибайҙың һәм Баязит Бикбайҙың минең «Йүрүҙән» китабына фекерҙәрен аҙаҡ яҙырмын инде. Рафаэлгә лә, Рәйескә лә уҡыттым рецензияны. Баязит Бикбай мине, ашыға, ти. Ә мин һуңлайым кеүек. Рецензия мине тар-мар итһә лә, бик шатландым. Асыуҙан шатландым. Алда ҙур эш торғанға шатландым. Ә уларҙың шундай ғәмһеҙлегенә аптырарға ғына кәрәк. Халтура! Күрһәтермен әле мин һеҙгә!

Ә тышта ғәжәп! Ап-аҡ ҡар яуған. Бер-ике сәғәт эсендә! Бына һиңә яҙ!

«Рифҡәт!

Күңелһеҙ хат яҙам һиңә.

Бына һинең менән хушлашҡанға ла байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Бәлки, минән хат көтмәйһеңдер ҙә инде.

Беҙҙең нисек хушлашҡанды онотмағанһыңдыр. Өфөнән мин бер ҡасан да шундай ауыр уйҙар менән киткәнем юҡ ине...

Бөтәһен дә күҙ алдынан юғалтыр өсөн мин тәүге ҡабат яңғыҙ ғына иҫерҙем! Поезд һуңлап килергә тейеш ине. Мин үҙемде шул тиклем яңғыҙ һиҙҙем — үкереп илағы килде. Ләкин мин илай алманым. Сөнки мин үҙемдең көсөмә ышанам. Һәм минең көсһөҙ булғаным да юҡ. Кешеләрҙең ниндәй ваҡытта ла кешелеген һаҡлап ҡалыуы иң ҙур матурлығы кеүек. Ысынлап та шулай, Рифҡәт. Донъяла бөтә нәмәҙе — иң яҡын кешеләреңде, дуҫтарыңды, иң яҡты тойғоларыңды, мөхәббәтеңде юғалтырға мөмкин, ләкин үҙеңдең кешелегеңде юғалтыу мөмкин түгел.

Мин Өфөгә ҡайтыр алдынан ике ай буйы бер туҡтауһыҙ уҡып, бик-бик арығайным. Бер ҡасан да шулай күп эшләгәнем булманы. Күп көндәр асығып үтте. Ҡайтҡанда ла ас ҡайттым. Ярай, быға мин инде күнеккәнмен. Өфөлә — тағы ла... һеҙгә барғанда ғына үҙемде иркенерәк тойҙом. Рәхмәт һиңә лә, Сәғиткә лә, Рауилгә лә/тик ул минең сәғәтте генә һатманы/».

11 апрель.

Туҡта, нимәгә һуң мин Рифҡәткә бындай хат яҙырға булдым? Үҙемде йәлләтергәме? Өфөлә үткәргән көндәремде үҙем белгән етмәгәнме? Кәрәкмәй! Икенсе хат яҙырға кәрәк.

Кәлимәнең хатын алдым. Күҙ алдымда хәҙер тик ул ғына. Мин шул тиклем дәртле, ҡанатлы! Миңә бөтә кешеләр ҙә шундай яғымлы, миңә шундай яҡты! Урамда йомшаҡ ҡар яуа. Ул да миңә йылы.

Белмәйем, ни өсөн мин уның хаттарына шул тиклем шатланам? Был турала уның үҙенә лә әйткем килә, ләкин кәрәк-

мәй. Беҙ дуҫтар ғына! Ә башҡа мөнәсәбәт булырға тейеш түгел.

Кисә институттан ҡайтып килгәндә Надяны осраттым. Мин ашығып килә инем. Йәшел пальто кейгән. Бер ҡыҙ бала күтәргән. Башта мин уны Надяға оҡшаған ҡыҙ тиһәм, ул үҙе булып сыҡты. Мин уның бала күтәреүен нисектер бик ҡыҙыҡ күрҙем. Аҙаҡ шатланып киттем. Күрештек. Бала күк күҙле, алты айлыҡ, бик матур.

— Был ниндәй бала?

— Минең үҙемдеке! — тине Надя, миңә һынаулы ҡарап. Уның ҙур ҡара куҙҙәрендә миңә ҡарата үпкә лә бар ине.

— Ниңә һин, Рәми, өндәшмәйҫә генә йылмаяһың икән? — тине Надя.

Ә мин эстән генә шул йылмайыуым өсөн үҙемде үҙем әрләп бөтә алмай тора инем. Тыйыла алмайым да ҡуям.

Арттан Надяның апаһы ла ҡыуып етте. Бала уныҡы икән. Надя мине уның менән таныштырҙы.

— Галя, — тине.

Мин: — Рәми, — тигәс, ул да ҡабатланы.

Галя, ахыры, минең турала ишеткән. «Шул икән» тигән һымаҡ йылмайып ҡарап ҡуйҙы.

Беҙ Надя менән бергә ултырҙыҡ та мин Паустовскийҙың Тарас Шевченко тураһында яҙған бәләкәй генә китабын уҡынным. Ләкин Надя ҡарап ултырғанда уҡып булманы.

— Мә, үҙең уҡы, — тип уға китапты бирҙем.

Баланың исемен һорағанда, Надя:

— «Татьяной названа она» тип, «Евгений Онегин» юлдарын ҡабатланы.

Таня! Ниндәй матур исем! Баланың үҙе кеүек. Мин уға шундай яратып ҡараһам да, ул минән ҡурҡкан кеүек. Мин хатта ҡабат уға бағырға ла уңайһыҙландым...

Бүлмәгә ҡайтҡас, Рафаэль миңә Мәлих Харистың Лермонтовтан «Ҡаҫҡын» тәржемәһен маҡтап бөтә алманы. Ә мин Мостай Кәрим менән Сәләх Кулибайҙың «Мцыри»ҙы тәржемә итеүҙәрен әйттем. Хөрт. М. Кәрим эшенә һис тә оҡшамаған, тинем.

Шунан һуң Сүриәнең «Ебәрелмәгән хаттар»ын уҡып сыҡҡандан һуң, уға хат яҙырға ултырҙым.

«Сүриә! Теге төндә һинең менән Өфө буйлап һөйләшеп йөрөгәндән һуң да, һинең «Ебәрелмәгән хаттарың»ды уҡып сыҡҡандан һуң да һөйләйһе һүҙҙәр күп. Ләкин бер ҙә иркенләп ултыра алмайым. Өфөнән бик күңелһеҙ, ауыр уйҙар менән ҡайттым. Бигерәк тә үҙебеҙҙең яҙыусылар менән һөйләшкәндән һуң.

Һин әйткәнсә, бер ағас ҡына булып йәшәһәң, әлбиттә, бер ни ҙә булмаҫ ине. Хаттарыңды поезда уҡыным. Бөтәһен дә аңланым булһа кәрәк. Ярай әле уларҙы, көсләшеп булһа ла, алғанмын үҙеңдән! Тик шулай ҙа дуҫыңа ышанмауың өсөн ғәрләндем бер аҙ, Сүриә. Мин бит һинән бер нәмәне лә йәшермәйем. Хатта кәрәкмәгәнен дә һөйләгәнмендер. Сөнки мин һиңә бөтә йөрәктән ышанам. Әгәр ҙә мин һиңә ҡарата киҫкенерәк, ваҡһыуыраҡ булһам, һине яҡын күреүҙән генә. Беҙ дуҫтар булып ҡаласаҡбыҙ.

Әлбиттә, алдағы көндө белеп булмай. Төрлөсә үҙгәрергә мөмкинбеҙ. Һәр хәлдә яҡшы яҡҡа үҙгәрергә тырышырбыҙ. Шулай ҙа тормоштоң үҙ һүҙе бар. Берәүҙәр өйләнгәс үк үҙҙәренең дуҫлыҡтарын да, йәшлектәрен дә онота. Тормош баҫылған кешеләрҙе баҫа. Тик мин үҙемде улай итеп күҙ алдына ла килтерә алмайым.

Сүриә, һин артыҡ киҫереүсән. Был яҡтан беҙ оҡшағанбыҙ. Тормошобоҙ ҙа оҡшашыраҡ. Тик мин уның ауырлығын да, матурлығын да иртәрәк татыным.

Сүриә, һин миңә Марият тураһында күп әйтәһең. Нисек итеп мин уға элекке ҡарашта ғына тороп ҡала алам? Һүҙ ҙә юҡ — ул яҡшы күңелле, матур, аҡыллы. Ләкин миңә был ғына етәме һуң? Мин бит ҙур уртаҡлыҡ теләйем. Миңә ул тормош өсөн кәрәк. Уның мине бик нык аңлауы кәрәк. Мөхәббәте кәрәк уның миңә. Ләкин, мин уны күрҙемме һуң? Ул, ысынлап та, минең ғүмерлек дуҫым була аламы һуң? Минең тик мөхәббәт өсөн генә йәшәгем килмәй. Ә инәлергә, түбәнһенергә мин булдыра алмайым. Уның ҡыҙғаныуы ла кәрәкмәй. Үҙемә үҙем баһа бирә алырлыҡмын. Ә ғорурлыҡ хатта артығыраҡ та шикелле миндә. Миңә уның өсөн үҙемде бөтөнләй юҡ итергә йыйыныуымдан саҡ тороп ҡалғаным да еткән. Ул көн инде артта. Минең тормошҡа, эшкә булған мөхәббәтем көслөрәк. Мин үҙемдең рухым, күңелем менән хәйерсе түгел!..

Ләкин мин әле өмөт өҙгәнем юҡ. Ул өмөт инде һигеҙ йыл буйы йәшәй. Унан айырылыу миңә бик ауыр. Һаман да уға ышанғым килә. Ә ваҡыт көтөп тормай. Етмәһә, мин оҙаҡ йәшәй ҙә алмам. Мин үҙ ғүмеремде шифырҙарымда ғына түгел, эшләгән эшемдә генә түгел, балаларымда ла күргем килә. Мин хәҙер үҙемдә аталыҡ хисен тоям. Минең менән бөтә шатлығын, ҡайғыһын, тормошон, мөхәббәтен уртаҡлаша алған дуҫ-юлдашым уларҙың әсәһе лә булырға тейеш. Һәм мин үҙемдең тик уға ғына булыуымды теләйем.

«Мариятты онотаһың» тиһең, Сүриә. Беҙ, бәлки, бергә лә булмабыҙ. Ләкин, оноторға теләгәндә лә, уны онота алмам инде. Минең иң яҡты тойғоларым, хыялдарым яуапһыҙ ҡалһа ла, ул һәр саҡ йөрәктә утлы миң булып ҡалыр, ахыры. Мин,

әлбиттә, башҡаса шундай аҡылһыҙ, шундай эскерһеҙ, шундай көслө итеп ярата алмам. Тәүге тойғолар — кешегә иң ҡәҙерле тойғолор... Фәмүмән, кешеләргә бәхет һунлап килеүсән.

Ә Рафаэль тураһында ни әйтәйем. Ул да шулайыраҡ. Яратҡан ҡыҙы тормошта инде хәҙер.

Бер уйлап ҡарағанда көлкө: һине яратмағанды һөйәһең, һине һөйгәнде яратмайһың! Шулай ҙа йәшәү яҡшы! Йәшәргә, янырға кәрәк!

Бүлмәгеҙгә, бигерәк тә мине бәрәңге менән һыйлаған ҡыҙҙарға, Кәлимәгә күп сәләм».

13 апрель.

Тәржемә тураһында:

Тәржемә теүәл булырға тейеш түгел, ул дөрөҫ булырға тейеш. Әгәр ҙә тәржемәләр рус телендәге шиғыр булмаһа, мин уларҙы яҡшы тип тапмайым. Улар үҙ аллы, рус телендәге кеүек булһын. Ҡайһы бер деталдәрҙе ҡорбан итергә лә мөмкин. Дөрөҫлөк өсөн. Образдарҙы ла үҙгәҙ табырға мөмкин. Ләкин ул образ шул уҡ фекерҙе биреү өсөн кәрәк. Тәржемә итеү ҡайһы берҙә үҙенсәлекле шиғыр яҙыуға ҡарағанда ла ауырыраҡ. Нөсхәнең стилистик ауынан ҡотолорға кәрәк. Тел үҙгәнсә булырға тейеш. Нөсхә конструкцияһы һиҙелһә, был тәржемәне һәләк итә. Идиомаларҙы тәржемә итергә тырышыу — мәғәнәһеҙ. Үҙ телендәге ҡулланыштарҙы файҙаланырға кәрәк. Нөсхәнең ҡоло булыу үҙендәге шағирҙы һәләк итә. Һин ижад итергә тейешһең.

Ләкин нөсхәнең үҙенсәлеген, колоритын, буяуҙарын һаҡларға кәрәк. Ошонда инде тәржемәсенең таланты. Һүҙҙәрҙе һайлай белеү нөсхәнең рухына инеүҙән генә булырға мөмкин.

Гейнены подстрочниктан тәржемә итеү мөмкин түгел. Ул подстрочникта — пошлятина, гениаль шағир түгел.

Тәржемәсе шағир булһа, нөсхәгә яҡыныраҡ.

Тәржемәсе эше ғәҙәттән тыш ауыр, ижади эш. Ул бик белемле булырға тейеш. Бәлки хатта авторҙың үҙенән дә белемлерәк булыу шарттыр. Тәбиғәтте, тәбиғәт белемдәрен өйрәнеү бик күп нәмә биреүе мөмкин. Ә тормошто белеү мотлаҡ.

Ике генә сәғәт йоҡланым. Төнө буйы Сәләх Кулибайға һәм Рәмиә Дәүләтова тигән ҡыҙыҡ ҡыҙыҡайға хат яҙҙым.

14 апрель.

Иртә менән институтҡа килгәс, Рафаэль минең Сәләх Кулибайға яҙған хатты уҡыны ла һаҡ булырға ҡушты.

— Был турала яҙып тороу бер нисек тә уларға тәьҫир итмәйәсәк.

Хатта мин үземдең «Йүрүзән» тураһында, уға ҡарата Баязит Бикбайҙың рецензияһы һәм Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһы тураһында яҙғайным.

— Былай киҫкен булыу һиңә бер ни ҙә килтермәйәсәк. Сәләх Кулибайҙың бит һин уға шул тиклем ихлас яҙырлыҡмы, түгелме икәнлеген белмәйһең. Ул, бәлки, Баязит Бикбайға бик яҡындыр. Ә Сәләмгә ҡарата уны бик кире ҡаршта тиҙәр. Сәләмде ул һис тә яратмай, ти. Бәлки, «Шоңҡар»ҙы Сәләмдең йыйынтығына индермәүҙә ул иң беренсе үҙе тырышҡандыр. Сәләм уны яратмаған. Ғөмүмән, Сәләмгә бик күп кешеләр асыу һаҡлап йөрөй бит. Иҫеңдәме, былтыр Переделкинола йыйылышып ултырғанда, Ғабдулла ағай нимә тине?

— Нимә тине һуң? Мин хәтерләмәйем.

— Белеп ҡуйығыҙ: иң оло ағайығыҙ ҙа Сәләм тураһында һөйләүҙе яратмай. Булғандыр инде шунда берәй нәмә...

Рафаэль әйткәс кенә Ғабдулла ағайҙың һүҙҙәре иҫкә төштө. Ысынлап та, ул был хаҡта әйткәйне шул. Әхнәф Кирәй ағай ҙа бар ине.

Рафаэль менән мин был хаҡта метронан сығып, троллейбуҫҡа ултырғас та һөйләштек. Яҙылған хатты ебәрмәҫкә булдым. Ләкин был миңә бик ҡыйын. Нисек инде, дөрөҫлөктө күрә тороп, өндәшмәйенсә ҡалырға? Сәләх Кулибайҙың хатын, Бикбай ағайҙың рецензияһын алғандан бирле мин был хаҡта ныҡ уйланым.

15 апрель.

— Бөгөн Маяковский үлгән көн, — тип башланы үземең лекцияһын Павел Иванович Новицкий.

Нисек итеп шул тиклем ҙур шағир үҙен-үҙе үлтерә?

Маяковский үлгәндән һуң РАПП сығарған китап бар. Маяковский үлемен ялған аңлата торған китап! «Любовная лодка разбилась о быт». Маяковскийҙың был һүҙҙәрен РАПП-сылар бөтә халыҡҡа ялған рәүештә тарата. Маяковский үземең бәләкәй мөхәббәте өсөн үлде, тиҙәр. Ялған! Маяковский үземең ҡеүәтен, көсөн агитка һәм плакатҡа бирҙе, тиҙәр. Ялған! Маяковский — бөйөк сатирик! Улар Маяковскийҙың «Ленин» поэмаһын бөтөнләй телгә лә алмай. Был мөмкин булмаған күренеш. Ләкин РАПП-сылар быны мөмкин итте. РАПП секретариаты Маяковскийҙы наҙанлыкта һәм буржуаз индивидуализмда ғәйепләне. Был — Маяковскийға тулыһынса яла яғыу документы. Маяковскийҙы һәләк иттеләр, ул үзен-үҙе үлтермәй. Маяковскийҙы шағирға иҫәпләмәнеләр, совет халҡынан айырылған бунтарь интеллигент итеп ҡаранылар, был уның тураһында Авербах кеүек һатлыҡ йәндәр таратҡан яла ине.

Институтта диплом яҡлау башлана бөгөн. Тыңларға кәрәк. Алдағы йылда беҙҙең курс та, диплом, диплом, тип йөрөр. Күңел ышанмай хатта.

Лекциянан һуң Буниндың шиғырҙарын уҡыным. Тәүге ҡабат. Быға тиклем әле уны ҡулыма ла тотоп ҡарағаным юҡ ине. Китапты астым да нишләптер «Родина» шиғырын уҡыным. Башҡаларҙы ла уҡығым килде.

Вася Шкаевтан уның ниндәй шиғырын яратыуын һораным. Ул ошо шиғырҙы әйтте. «Иң талантлы шиғыры», — тине. Мин уны тағы уҡып сыҡтым да дәфтәремә күсереп ҡуйҙым. Бынан кире тыуған ил тураһындағы бөтә шағирҙарҙың да шиғырын шулай яҙып алырмын.

16 апрель.

Рәйескә «Һуҡыр» тигән шиғырымды уҡыным. Шул тиклем тулҡынландым, уҡығанда күҙгә йәштәр тулды.

Һуҡыр

Килмәнеңме?
Килмә...
Инде көтмәм,
Инде бер ҡасан да көтмәмен.
Бынан һуң да мине көтөрһөң тип
Бер ҡасан да өмөт итмәмен.
Тик мин артыҡ ышанғайным һиңә.
Артыҡ һөйгәнгәлер, ахыры.
Бик өҙөлөп көттөм
«Ни хәл?» тиеүеңде.
Ләкин:
«Һуҡырайған бахырың...»
Тигән һүҙҙе генә
Көтмәгәйнем!..
Юғалтыуы ауыр күҙемде.
Ләкин
Мең ҡат ауырыраҡ миңә
Ишетеүе шундай һүҙеңде!..
Бит йәшәүҙән
Мин һис туҡтаманым!
Мин бит һаман әле бер кеше!
Мин йәшәүҙе хәҙер
Артығыраҡ һөйәм,
Күрмәһә лә күҙем
Ҡояшты,

Зәңгәр күкте.
Балаларҙың күҙен,
Үләндәрҙе,
Һыуҙы һәм ташты...
Таш түгел бит минең был йөрәгем,
Һөйөү яна унда кешегә.
Нәфрәт тә бар унда
Күңеле менән
Тома һуҡыр һинең ишегә!..

17 апрель.

Мәүлиҙәнән хат алдым. Минең шиғырҙы алған икән. Тыныҫландым. Тик уға ғына тыныҫлыҡ булмаҫтыр. Сөнки ул бөтә шиғырҙарҙы ла үҙе тураһында яҙылған тип уйлай шикелле. Мин уға арнап «Йүрүҙән ҡыҙы»н ғына яҙҙым. Бөтә мөхәббәт шиғырҙары ла Мариәт менән Дилараға арналған.

18 апрель.

«Һуҡыр»ҙы Рафаэлгә уҡығас, оҙаҡ бәхәсләштек. Уныңса, минең һуҡыр исеменән яҙыуым дөрөҫ түгел.

Ә минеңсә, лирик геройҙы төрлө алымдар менән бирергә мөмкин. Бындай алым Лермонтовта ла, Туҡайҙа ла, башҡа шағирҙарҙа ла бик күп. Һәр саҡ үҙең менән булған хәлде генә яҙырға тигән ҡағиҙә юҡ. «Поэт... не только нянька своей души», — ти Горький. Лирикала әйтеп еткерелмәгәнлек һәм шартлылыҡ булырға тейеш. Был уны төрләндерә генә. Киңәйтә лә. Блок бик күп шиғырҙарын ҡыҙ кеше булып та яҙа. Ләкин уға ир кеше булған өсөн генә ышанмау дөрөҫ түгел.

Рафаэль Лермонтовтың «Мцыри» тураһындағы докладын уҡыны.

— Минән көлөп рәхәтләнеп инде, — ти. Ул минең көлөүҙе киреһенсә аңлай. Ә мин уның кешеләр алдында көлкөгә ҡалмауы өсөн генә көләм. Бер генә урынһыҙ һүҙ, урынһыҙ сағыштырыу ҙа булмаһын тип көләм. Рафаэль иһә йыш ҡына үҙ һүҙен һүҙ итергә тырышып бәхәсләшә. Бынан көлмәү мөмкин түгел. Ғөмүмән, әле Рафаэль бөҙрәлектән биҙмәгән. Унда ысынбарлыҡты тойоу көслө. Ә был бөҙрә болоттарҙа юғаласаҡ. Докладын әле яҙып бөтмәгән. Ҡороҡ икәнен дә әйттем. Башҡа бер кем дә уға минең кеүек киҫкен, ваҡһыу түгел. Ләкин мин үҙемде быға хаҡлы һанайым. Сөнки мин уны яратам, шуға ла етешһеҙлектәрҙән азат була барыуын теләйем.

Бөгөнгө көндәлекте уның үҙенә уҡытам. Бик бәхәсле урындарын бынан кире уның үҙенән яҙҙырып барасаҡмын. Юҡһа, мин тик үҙемдең дөрөҫлөктө генә яҙып барыуым мөмкин.

Рафаэль үҙе көндәлек алып бармай. Ә минең көндәлектәргә бер аҙ ирония менән ҡарай. Был яҙмалар уның фекерҙәренең көндәлеге лә булырға тейеш.

21 апрель.

Кис Рафаэлдең үҙенә көндәлекте уҡыттым.

— Ну оҫта яҙаһың да инде, — ти. Көлә-көлә уҡыны. Аҙаҡтан:

— Ниңә мин һиңә шиғырыңдың насар түгел икәнлеген әйткәнде яҙманың? — тине. — Яҙылышы, оҫталығы яғынан бер ниндәй ҙә бәйләнер урыны юҡ, тинем бит. Ниңә минең маҡтағанды ла яҙмайһың?

Көлөштөк тә ашарға киттек.

24 апрель.

Институтка бармайынса, көнө буйы күҙҙәр ауыртҡансы уҡыным. Хәҙер минең кабинет балконда. Һауа саф, йылы, бер кем дә ҡамасауламай.

Кисә кис поезда ҡайтҡанда Надяны осраттым. Ләкин Переделкиноға еткәнсе уның үҙенә күренмәй ултырып, «Фома Гордеев»ты уҡып килдем. Ул да уҡый ине һәм мине күрмәне. Станцияға етер алдынан ул китабын сумкаһына һалды ла тәҙрәнән ҡарап килде. Поезд туҡтағас та уйланып, үҙ-үҙен онотоп ултырғанда, мин алдына сығып:

— Төштөк, Надя! — тиеүгә, ул тертләп китте һәм нисектер бик оялсан йылмайыу менән йылмайҙы ла тиҙ генә тороп, ниндәйҙер бер көслө ынтылыу менән килеп күреште. Ҡулы ныҡ һәм көслө уның. Ҡыҫып күреште. Ә ҙур ҡара күҙҙәре оҙон ҡара керпектәре аҫтынан йылы бер нур менән яҡтырып ҡарай. Ләкин был яҡтылыҡта миңә үпкәләү ҙә бар. Миңә нисектер уңайһыҙ. Нисек һүҙ башларға ла белмәйем. Яһалма килеп сығыр төҫлө.

— Йә, хәлдәр нисек? — тим.

— Бер көйө... — ти ул һәм һаман да шул уҡ ҡараш менән текләй, һораулы, саф, күңелһеҙ йылмайыу менән йылмая.

— Ә үҙеңдең нисек?

— Яҡшы!

Уның ҡарашында көнсөллөк тә күренә. Миңә был бик ғәжәп тойола. Ул, бик арыған кеше кеүек, тәрән итеп көрһөнөп ҡуйҙы. Был көрһөнөүҙә һыҙланыу тауышы ла ишетелгән кеүек. Әйтерһең, ул был тауышты минең бик яҡшы ишетеүемде теләй. Ә мин көләм, тыйыла алмайым.

— Китабыңды ҡасан алаһың? — тине ул.

— Хәҙер, — тинем мин.

— Ә хәҙер ул үҙем менән бергә түгел бит, өйҙә, Рәми.

— Киттек, әйҙә! — тинем мин. Ә үҙем эстән генә был китаптың мине уңайһыҙ хәлдән сығарыуына шатландым.

Ҡышҡы юл менән китмәйенсә, кешеләр йөрөмәгән юл менән киттек.

— Ниңә шулай һәр ваҡыт шәп атлайһың, әкрен генә барайыҡ, — тине ул. Яғымлы итеп һәр саҡ әйтә торған һүҙҙәрен әйтте. — Ниңә, Рәми, шулай һәр саҡ йылмаяһың икән? Әйт әле, нимә уйлайһың?

— Бер ни ҙә уйламайым, Надя.

— Дөрөҫ түгел — уйлайһың.

— Уйлаһам да, яҡшы уй уйламайым.

— Сәйер кеше һин, Рәми.

Өндәшмәй, тын ғына киләбеҙ.

— Ниңә өндәшмәйһең? Һөйлә, ниндәй яңылыҡтарың бар?

— Яңылыҡтарым юҡ. Булһа ла башҡорт телендә генә.

— Шиғырҙар яҙҙыңмы?

— Яҙҙым.

— Русса тәржемә итһәң ине.

— Белмәйем бит, Надя.

— Беләһең һин!..

Тел тураһында һөйләшеү китә. Миңә ысынлап та ҡыйын. Уға уҡығым килә. Ләкин ул бер һүҙемде лә аңламай. Уға ҡыйын. Ә шиғырҙың эстәлеген аңлатыу миңә бөтөнләй мәғәнәһеҙ кеүек. Шулай ҙа аңлатам. Ул уйға ҡала. Мин көләм. Өйҙәренә юлды юғалттым.

— Их һин! — тип көлдө Надя. Туҡтап торҙоҡ. Ҡояш ҡыҙарып байып бара. Талғын ғына ел иҫә. Йылы. Тирә-яҡта яҙғы еҫ аңҡый.

— Беләһеңме, Рәми, минең шул тиклем уҡығым килә.

—Уҡырға кәрәк! — тим мин.

Ләкин ул, уҡырға мөмкинселек юҡ, ти. Унан Шолоховтың «Тымыҡ Дон»ын һөйләй. Ә мин уны һаман уҡымағанмын. Аҙаҡ ул тағы минең сәйер булыуымды әйтә. Минең асыҡ булмауыма үпкәләй. Өйҙәренә еткәс, мин кермәҫкә ҡарышам. Миңә уңайһыҙ. Әсәһенән бигерәк, телһеҙ апаһы Любанан уңайһыҙ. О, ул телһеҙҙәрҙең ҡарашы! Шулай ҙа Надя мине инергә күндерҙе. Әсәһе бөтәһен дә белгән, ахыры. Люба уға аңлатҡан булһа кәрәк. Ул башын күтәреп, йылмайып иҫәнләште лә миңә ҡараманы. Әсә!.. Мин әсә йөрәген аңлайым.

Был өйҙә мин ғүмеремдә беренсе ҡабат ҡыҙ кеше менән ҡосаҡлашып ғазаплы бер төндө үткәрҙем... Беҙ айырыла алманыҡ. Әгәр ҙә мин шиғырҙар яҙмаған кеше булһам, бөтә маҡсатым әҙәбиәт булмаһа, шул иртәнән үк Надя минең ҡатыным

булыр ине. Ләкин үкенмәйем! Мин тормоштоң миңә бер ҙур сер булып тойолған яғын күрҙем. Ҡатын-ҡыҙҙың көсөн тойҙом. Шул төн Надя менән күрешкән һайын күҙ алдымдан китмәй. Уға иң ҙур яҡшылыҡ эшләгем килә. Ләкин уға йөрәгемде биргем килмәй. Ә уға минең йөрәгем кәрәк. Ә йөрәгем минең берәү генә һәм ул үҙенең һуңғы тибешен бирергә лә әҙер булып тик берәүҙе генә һаҡлап янды.

Марият, Марият, Марият!

Хәҙер мин уны ул саҡтарҙағы кеүек ярата алмайым. Ләкин ҡатын-ҡыҙҙы мин яратам. Тик өмөтһөҙ һәм өнһөҙ яратам. Ә Надя миңә:

— Ниңә өндәшмәйһең? — ти. — Ниңә уйҙарыңды әйтмәйһең?

Ләкин кеше бер ҡабат ауыҙы бешкәс, һалҡын һыуҙы ла өрөп эсә. Ә эсмәйенсә булдыра алмай. Тик хәҙер миңә:

— Яратам! — тип әйтеү үлем менән бер һымаҡ. Уны бер ҡабат әйтеп алданғанға күрә, хәҙер бер кемгә лә әйтә алмайым.

Бөгөн көнө буйы Горькийҙы уҡыным. Шекспир — бөйөк, Пушкин — бөйөк, ләкин Горький донъяның барлыҡ Шекспирҙарынан, барлыҡ Пушкиндарынан ҙурыраҡ минең өсөн.

Иртә менән «Шевченко»ны уҡып бөтөрҙөм, һәр бите һайын күҙ йәштәрем менән илап уҡыным.

Рафаэль Ғәйшә апайҙың хатын килтерҙе һәм «Совет Башҡортостаны»нда минең «Йүрүҙән» баҫылыуын әйтте. Ләкин Рәйес был газетаны Рафаэлгә бирмәгән. Өс ҡабат үҙенә барҙым — өйҙә юҡ. Мин өйҙә юҡта кергән, ләкин газетаны ҡалдырмаған. Асыуландым. Ниңә кеше кешене шатландырыуҙан ҡурҡа?

Ярай, күҙҙәрем ауырта, бөгөнгә етер. Йоҡла, Рәмүк, йоҡла!

22 апрель.

Иҫ киткес йылы. Ҡоштар һайрай. Бөтөнләй йәйгесә! Ашап килдем дә хужалыҡ эштәренә тотондом. Спорт майҙансығы яһаныҡ. Дача алдына 6 төп гөлйемеш ағасы ултырттым.

Төн. Тышта ап-аҡ ҡар. Иртә менән йәй ине! Кисен — ҡыш! Саңғыла йөрөргә мөмкин. Төштән һуң һалҡын ел сыҡты, еүеш ҡар яуа башланы.

Нина Акимовналарға барҙым. Ҡайтҡанда Рәйес осраны. Өҫтөнә кеймәй барып, мунса инеп сыҡҡан да вагондан буранға сығырға ултыра. Плащты сисеп бирҙем дә йүгерҙек. Рәйес Байрондың ҙур томы менән битен ҡаплап килә. Сәстәребеҙ апаҡ булды. Яҙ көнөндә бындай һыуыҡты бер ҡасан да күргән юҡ ине әле.

23 апрель.

Төнө буйы буран ҡоторҙо. Лекцияларҙан һуң Рафаэль менән Ленин китапханаһына киттек. Бик асыҡтырған. Икебеҙҙең дә бик ашағы килә. Ләкин кеҫәлә бер тин дә юҡ. Рафаэль менән көнөнә ике мәртәбә бер порция ашап йөрөйбөҙ. Быйылғы йыл ауырға тура килде. Алған стипендия бурыстарҙы түләргә лә етмәй. Әҙәбиәт институтындағы был йылдар беҙҙең ғүмерҙе лә ҡыҫҡарта. Намыҫлы йәшәү ауырыраҡ әле.

«Ленинсы», 30 март, 1954 йыл. «Тәнҡит һәм библиография». «Йәш көстәр». Фәйзи Сиразетдинов, Марат Кәримов, Карам Бакиров, Рәми Ғарипов, Абдулхаҡ Игебаев шиғырҙарына тәнҡит. Хәким Ғиләжев яҙған.

«Рәми Ғариповтың «Минең шыршыларым» шиғырында йылылыҡ, үҙенсәлек бар, ләкин дөйөмләштереү етешмәй әле. «Йыр» шиғырында һуңғы ике юлы һәйбәт яҙылған. Ә бына «Бәхет йылғаһы» хәтерҙе ҡалдырыусы, композицион үҙәге булмаған бер шиғыр. Тәүҙә бурлактар һүрәтләнә, аҙаҡ контраст формаһында пароходта йырлап барыусы йәштәр йыры бирелә. Беренсенән, был күп ҡабатланған алым, икенсенән, бурлактар ябай картина рәүешендә генә бирелә, ә икенсе бүлектә иһә, ҡоро, уңышһыҙ декламациянан башҡа бер нәмә лә юҡ. Шулай итеп, Волганың тулы образы урынына бер-береһенә эске логика менән бәйләнмәгән ваҡ деталдәр генә килеп сыҡҡан. Р. Ғарипов шулай уҡ һүҙҙәр менән дә һаҡ ҡыланмай. Ул шиғырҙы йә сағыштырыуҙар менән күмеп ташлай, йә булмаһа, күҙ алдына килтереп булмай торған ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр ҡуллана:

Кисләй. Ҡояш
Ҡыҙған тимер төҫлө,
Ҙур тау булып күренә яҡында.
Күк йөҙөн ул,
Ҡыҙыл диңгеҙ итеп,
Батып бара Волга артына.

Артыҡ ҡуйы түгелме? Был картинаның нагрузкаһы нимәлә? Аңлашылмай.

Киләсәктә Рәми Ғарипов был йәһәттән уйланыбыраҡ эш итергә тейеш».

Алла һаҡлаһын бындай судьяларҙан! Бер ҡасан да шундай тәнҡит мәкәләһе яҙмам!

28 апрель.

Маяковский буйынса махсус курс. Тимофеевҡа аптырайым. Бер ниндәй ҡағыҙға ҡарамайынса, бер туҡтауһыҙ һөйләй. Нисек итеп шул тиклем күп һөйләй ала икән? Автомат кеүек.

Ә үҙе һаман да бер нәмә хаҡында төрлө вариацияларҙа һөйләй ҙә һөйләй, һөйләй ҙә һөйләй, һөйләй, һөйләй... Ә яңы фекер бик һирәк килеп сыға. Әҙәбиәт теорияһы һәм совет әҙәбиәте тарихынан уның дәреслектәрен уҡыу файҙалыраҡ, уларҙы мин нисектер яратып уҡыйым. Ә бына лекциялары... Бына әле лә ул өҫтәлгә ҙур, киң күкрәген һалып, ултырғыҫҡа быйма кейҙерелгән зәғиф аяғын терәп алған да бәләкәй ботинка кейгән икенсе аяғына баҫҡан килеш бер туҡтауһыҙ һүҙҙәр яуҙыра. Уң яҡҡа төшөп торған тыңлауһыҙ оҙон һоро сәсе һәр саҡ туҙған булыр. Башы ғәҙәттән тыш ҙур һәм һимеҙ йөҙлө. Ә бала беләге ҙурлығындағы ҙур, осло бармаҡтары бер туҡтауһыҙ алтын сәғәтенең сылбырҙары менән уйнап тора. Ул бармаҡтары менән дә һөйләй кеүек. Мөгөҙ ситле ҙур күҙлеге өҫтәлдәге ҡалын күк папкаһы өҫтөндә ята. Бер кем дә тиерлек уны тыңламай. Берәүҙәр хыялға батып ултыра, берәүҙәр китап уҡый, берәүҙәр йоҡлай, берәүҙәр шифыр яҙа. Ләкин бер кем дә тауышланмай. Ә мин бына уның үҙе тураһында яҙырға тотондом.

Даһи Бабичев, уның квартираһында булып, иҫе китеп һөйләгәйне. Бер ерән сәсле мыжыҡ малайы бар икән. Егет булып бөтһә лә, һаман үҙен иркәләйҙәр, ти, күпме теләһә, шул тиклем аҡса бирәләр, етмәһә, үҙенә айырым машина ла бар, ти! Ә Тимофеевтың эш бүлмәһендәге өҫтәл уның үҙе кеүек үк ҡалын һәм ҙур икән!

Күпме ҙур кешеләрҙең балалары имгәккә әйләнә!

Кис Рафаэль менән бәхәсләшеп ултырҙыҡ. Мин Гейненың шифырын тәржемә итә башлағанға ул минең шифыр яҙмай, бүтән юлға төшөп, шифриәттән ситләшеүем мөмкинлегенән ҡурҡа. Уныңса, үҙ-үҙеңде аша һикерергә кәрәк! Ваҡытынан алда тыуырға кәрәк!

Бәлки, яҙғандарым үҙем теләгәнсә лә сыҡмаҫ, ләкин бөтәһе лә бар йөрәктән буласаҡ. Яҙғым килгәндә генә яҙам. Ә быуаҙ булмағанда тыуҙырып булмай. Нимә менән быуаҙһың, шуны тыуҙыр. Һәр нәмәне үҙең ныҡлап ышанып еткәс кенә, яҙмайынса булдыра алмағанда ғына яҙырға кәрәк. Үҙ-үҙеңдән һәм уҡыусынан көлөргә кәрәкмәй.

Рафаэль һөйләгән нәмәләрҙе мин уның үҙенән нығыраҡ уйлайым һәм аңлайым. Бөтә эҙләнеүем — ғазаплы, ауыр эҙләнеү. Мин үҙемде эҙләйем. Хәҙергә — төп бурысым шул. Насар булһын — үҙемдеке булһын. Бер туҡтауһыҙ өйрәнергә кәрәк, э бер туҡтауһыҙ һөйрәлергә түгел. Башҡалар миңә оҡшамаған, мин дә уларға оҡшарға теләмәйем. Һәр кем үҙенсә булғанда ғына ҡыҙыҡ.

30 апрель.

Надяны күрәм тип сыгып киткәйнем, ул төнгө сменала эшләй икән. Әсәһе миңә йылы ҡарай кеүек. Тик һөйләшкәндә бөтөнләй ҡаушап ҡала. Ҡыҙыҡ! Ниңә икән?

Электричкаға ултырып, ҡалаға киттем. Ләкин Надя күренмәне. Киев вокзалында Корней Чуковскийҙың Блок хаҡындағы китабын уҡып ултырҙым. Төндә оҙаҡ йоҡлай алманым.

4 май.

1 Майҙың нисек үтеүе тураһында яҙа алманым. Бер пьеса яҙырлыҡ булды. Әсғәт минең янға институтҡа килеп, үҙҙәренең ятағына саҡырып ҡайтты. Беҙҙең Рафаэль менән аҡса ла юҡ ине, Әсғәт фотолар һатырға булды. Рафаэль байрам итмәй ҡалырға ла уйлағайны, мин күндерҙем. Байрам итһә, уның ғәҙәте шул: йә кейем насар, ти, йә ҡыҙы юҡҡа зарлана. Мин киске 6-ла Надяны Киев вокзалына барып ҡаршы алдым. Урманда йөрөнөк, усаҡ яҡтыҡ. Табынға аҙаҡ ҡына килдек. Бөтә нәмә мин уйлағанса килеп сыҡты: Әсғәттең Галяһы Рафаэлгә ғашиҡ булды!

5 май.

Кис ямғыр яуғанда Надяларға өй алдына ике төп һыуһар ағасы ултыртырға алып киттем. Барғанда күк күкрәй, йәшен яҡтырып китә. Ә ямғыр йылы, рәхәт, үҙем бик шатмын. Һыуһарҙар әле яңы ғына бөрөләрен ярып сығырға тора. Йылы ямғырҙан һуң йәшәреп китәсәктәр.

Надя йүгереп сығып ҡосаҡлап алды — битемдән үпте лә ямғырҙа һуңға ҡалып килеүем өсөн шелтәләп алды. Әсәһе Валентина Степановна бик ҡыуанды. Надя менән ике урынға соҡор ҡазып ултырттыҡ та йәшен яҡтыһында йөрөргә сығып киттек. Күк күкрәй. Бөтә урман күгелйем төҫ менән яҡтырып китә. Надя минең ҡуйынға һыйына. Сәсен елдәр туҙҙыра. Ә ҙур ҡара күҙҙәре йәшен яҡтыһында бигерәк тә матур. Миңә рәхәт...

6 май.

Коваленков семинарында Рафаэлдең поэмаһы тикшерелде.

Рафаэль тәүҙә башҡортса төрлө ритмдағы бүлектәрҙе уҡып ишеттерҙе.

Лина Костенко: Рафаэль психологик деталдәрҙе яҡшы биргән. Кисерештәр тәрән, дөрөҫ. Әммә әсәнең һуғышҡа мөнәсәбәте ҡалыплаштырылып бирелгән. Әҫәрҙә күҙ йәштәре күп. Бер үк сағыштырыуҙар йыш ҡабатлана.

Утан: Тема яғын Сафин бик ныҡ белеп асҡан. Поэма оҙон. Риторика, декларация күберәк. Эмоциональ яҡтан әҫәр бик көслө. Туй күренеше оҡшаны. Поэмала башҡорттар күберәк булһын ине.

Жуховицкий: Беренсе тәьҫир авторҙың бик талантлы икәнен күрһәтә. Поэманың фекере — бик кешелекле. Юҡһа, тоғролоҡ тип, ҡатын-ҡыҙ яҙмышын ғәҙәттә кешелекһеҙ рәүештә яңғыҙ ҡалдыралар. Поэманы ҙур шиғыр иткәндә яҡшыраҡ булыр ине.

Лилиана Стефанова: Подстрочник хәлендә генә булыуына ҡарамаҫтан, поэманы бик яратып тыңланым. Ул яңы, үҙенсәлекле, ихлас, йылы яҙылған. Мин бындай әҫәрҙе үҙебеҙҙең семинарҙа тыңлауға шатмын.

А. Коваленков: Поэмамы, шиғырмы тип бәхәсләшмәйек. Поэма төрлөсә булырға мөмкин. Алайыҡ Пушкиндың «Баҡыр һыбай»ын. Евгенийҙың шәхси яҙмышы менән тарих яҙмышы араһында конфликт. Поэманың философик һәм һүрәтләү планы бар. Был пландар гармониялы, бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. Сафин поэмаһы ла шундай уҡ ике планлы.

Муса Йәлил шиғырынан алынған эпиграф бөтә поэмаға камертон булып яңғырай. Әҫәрҙең яҡшы нигеҙе бар һәм ул дөрөҫ һалынған.

Реалистик деталдәр күберәк булһын ине. Риторика күберәк.

Французлар ҙур шиғырҙы ла поэма ти. Ә был лиро-эпик поэма. Ә Костенконың уны 22 мәртәбә ҡыҫҡартырға кәрәк тиеүе бик еңел. Ҡыҫҡартырға мөмкин. Тик кәрәкме һуң? Кәрәкмәй. Был — поэма. Уға формаль логика менән ҡарарға ярамай. Әлбиттә, уны тулыландырырға кәрәк. Әсә характеры асыҡ. Ә Иршатты тәрәнерәк бирергә мөмкин. Филман образын да киңәйтергә кәрәк. Әҫәрҙең идеяһы бик кешелекле. Тик реалистик һүрәттәрҙе көсәйтергә ине. Поэманы руссаға тәржемә итергә кәрәк. Шағирҙың үҙ тауышы бар. Беҙ телде белмәһәк тә, уның шағир икәнен тойҙоҡ.

7 май.

Эстеттар Пушкинды үҙ байрағы итергә тырышты. Ләкин Пушкин бер ҡасан да уларҙыҡы булманы. Плеханов быны яҡшы аңлата. Ләкин уның үҙ хаталары бар.

Мәңгелек критерийҙар юҡ. Һәр ваҡыттың үҙ сәнғәте бар. Бер ваҡыттағы сәнғәт икенсе ваҡыттағы кешеләрҙең талабына ярамай, тине Плеханов. Ләкин был дөрөҫмө һуң?

Сәнғәт һәр саҡ хәрәкәттә. Һәр дәүер уға яңылыҡтар өҫтәй. Тәнҡит, Плехановса, синфи, шул уҡ ваҡытта мәрмәр кеүек һалҡын да булырға тейеш. Ҡыҙ ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын!

Плеханов материализмды механик рәүештә аңлата.

Марксистик объективлыҡ партиялы, ти Ленин. Ә Плеханов бынан ситтә. Марксизмға объективлыҡ ят, ти.

Плехановтың иң яҡшы практик эштәре уның үҙ теорияһын тар-мар итә.

Вася Шкаев М. Горький буйынса Лев Толстой портреты тураһында доклад яһаны. Ләкин күптәр Горькийҙың «Заметкалар»ын уҡымай килгән. Доклад буйынса Вл. Нарожнов һүҙ алды һәм яҙыусының биографияһы, шәхесе менән артыҡ мауыҡмаҫҡа кәрәклеген әйтте. Уға Коля Старшинов ҡаршы сыҡты. Яҙыусының ижады уның тормошонан айырылғыһыҙ, тине. Толстовщина, есенинщинаға тукталды. Маяковскийға оҡшарға тырышыусыларҙы һүтте. Нарожнов, минеңсә, хаҡлы түгел. Яҙыусының шәхесе тураһында беҙҙә бөтөнләй һөйләнелмәй.

Толстой тураһындағы портреттан беҙ Горькийҙың үҙен дә күрәбеҙ. Был бик ҡыҙыҡ.

Горький үҙ әҫәрҙәрендә композицион яҡтан тарҡауыраҡ, ләкин Толстой тураһындағы портрет — классик өлгө. Бер ниндәй ҙә артыҡ һүҙ, кәрәкһеҙ сағыштырыу тапмаҫһың унда.

8 май.

Гейне Маркс менән осрашҡан саҡта Марксҡа —25, Гейнеға 46 йәш була. Был осрашыу Гейне ижадында ҙур боролош яһай. Гейне — революция барабансыһы. Энгельс Гегелде тик бер генә кеше — Гейне генә аңлағанын әйтә.

11 май.

Маяковский Демьян Бедныйға һалҡын ҡарашта. Ә Демьян Бедный Маяковскийға ҙур шағир итеп ҡарай.

Ә ижад яғынан Маяковский Д. Бедный менән яҡын булыуын әйтә.

Рус футуризмы 1910—11 йылдарҙа рус символизмының емеректәре өҫтөндә барлыҡҡа килә. Уны йәштәр күтәрә. Был йәштәр классик мираҫты, традицияларҙы анархистик кире ҡаға. Нигилизм. Инҡар итеү пафосы. Ленин анархизмды «вывернутая наизнанку буржуазность» тип атай. Уның нигеҙендә буржуаз индивидуализм ята. Футуристар — иң яланғас формалистар. Улар араһында тәрән белемле Жирмундский үҙ тирәһенә башҡаларҙы туплай. Виктор Шкловский Маяковский артынан ҡалмай һәм уға ҙур йоғонто яһай. Формалистар яңы һүҙҙәр тыуҙыра, боронғо рус һүҙҙәрен тергеҙергә тырыша. Велимир Хлебников бөтә ил буйынса үҙ шиғырҙарын йырлап йөрөй. Лингвистар уны гений итеп күрә. Ул боронғо рус телен бик яҡшы белә. Һүҙгә бик һиҙгер, зирәк була. Футуристар

төркөмөнөң һәр сығышы яңъял, һуғыш менән тамамлана. Уларға төрлө публика йөрөй. Асеев, Елена Гуро, Божедар — иң талантлы футуристар. Улар араһында Бурлюктар, Игорь Северянин, Лифшиц һ. б. кешеләр була. Маяковский Игорь Северянинға ҡапма-ҡаршы позицияла тора. Виктор Перцов — футуристарҙың теоретигы.

Футуристар араһында бәхетһеҙ кешеләр күп була, аслыҡтан ҡапҡа аҫтарында үләләр.

«Пощечина общественному вкусу» һәм «Дохлая луна» — футуристарҙың программалы йыйынтыҡтары. Шаманлыҡ күнекмәләре. Был шамандар араһында Маяковский бер үҙе тормош тураһында буржуаз донъяға нәфрәтен күрһәткән шиғырҙар яҙа, аҡ ҡарға була. 1914 йылда «И нам мясо» тигән мәкәләһендә Маяковский үҙенең футуристар менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ икәнен әйтә, символистарға, декаденттарға ҡаршы сыға. Йәшлек киҫкенлеге арҡаһында уның бик күп дошмандары йыйыла. Уның тәүге китабы — «Простое как мычание» — Горький ярҙамында донъя күрә.

12 май.

Писарев Чернышевскийҙың «Что делать?» романы тураһында.

«Народный заступник» —60-сы йылдарҙан ҡалған термин. Унан бер аҙ «шәхес культы» аңҡый. «Народный заступник»тан «герой»ға бер аҙым ғына. Рахметовтар халыҡтың иң яҡһыған мәлендә бик кәрәк. Улар массанан башҡа бер ни ҙә түгел. Писарев та, Чернышевский ҙа уны шулай аңлай.

Киләсәк — бөгөнгөнөң ҡайһы бер күренештәрендә, шулар өсөн көрәшендә.

Михайловский Глеб Успенскийҙың ғазаплы ижадын «больная совесть» тип атай. Достоевскийҙың ижадын ул «жестокий талант» тип атай. Плеханов Маркс һәм Энгельс әҫәрҙәрен тәржемә итә, Россияла марксизмды пропагандалай. Ленин уның народниктар менән көрәшеүен һәм «К вопросу о развитии монистического взгляда на историю» китабын юғары баһалай. Плеханов сәнғәткә ҡарата Толстой фекере менән бәхәсләшә. Толстой сәнғәт бөтә телдәрҙә лә аңлашыла, ти. Ә Плехановса, әҫәрҙең эстәлеге — фекерҙә һәм тойғола. Плеханов дөрөҫ китап яҙмаҫҡа ла мөмкин, әммә уның ҡыҙыҡһыҙ яҙыуы мөмкин түгел.

13 май.

Институтта диплом яҡлау булды. Федя Сухов өсөн шатмын. Донъяны үҙ күҙе менән күреп, үҙ йөрәге менән тоя белә.

14 май.

Ленин китапханаһында «Әҙәби Башҡортостан»дың 3-сө һанын уҡып ултырҙым. Сталин иҫтәлегенә арналған шиғырҙарҙың береһе лә оҡшаманы. Ниғмәти ҙә, Хәниф Кәрим дә, Ғәйнан ағай ҙа бер үк нәмәне ҡабатлай. Әнүәр Бикчәнтәйҙең хикәйәләр тураһында мәҡәләһе примитив, позаға баҫыу. Эренбург менән С. Антоновтың һүҙҙәренән цитаталар килтереү менән тулған. Мостай Кәримдең шиғырҙары ғына журналға ҡот биреп тора. Тик оҙонораҡтар.

М. Тажиҙың сатираһы йомшаҡ, бер ҡатлы. Мәҙинә Саҡаеваның мәҡәләһе публицистика бүлегенә ниңә индерелгән? Аңлашылмай.

Китапхананан күңелһеҙләнеп сыҡтым. Етмәһә, бик асыҡтырған. Ҡаңғырып торҙом да Нина Акимовнаға шылтыраттым. Барып кереүемә, ашарға әҙерләп ҡуйған.

Поезда Рәйестә осраттым. Һуңғы ваҡытта минең менән һөйләшмәй йөрөй. Шакир менән генә уртаҡ тел таба.

Төнгө сәғ. 3. Овеянико-Куликовскийҙың Гете тураһындағы мәҡәләһен уҡып сыҡтым. Ни тиклем аҙ белəм мин! Ҡот осҡос! Йөрәгемдә шуға ниндәйҙер ярһыу ҙа, ғәрлек тә ҡайнай. Гете — диңгеҙ, мин — тамсы! Мин үҙемде, Гетены белгəс, асығыраҡ күрҙем. Шатланам да, ҡайғырам да. Уйлаған уйҙарымды аҙ ғына булһа ла тормошҡа ашыра алмаясағым ҡурҡыта. Ләкин үҙемдә ниндәйҙер йыйылып ятҡан көс тә тоям. Был көстө кешеләргә бирергə өлгөрə алмай ҡалғанда — ни тиклем ҡурҡыныс!

Фекерҙең асылы — абстрактлыҡта. Фекер ни тиклем абстракт булһа, ул шул тиклем ҙур, ə ни тиклем конкретыраҡ булһа, шул тиклем тойғоға яҡын. Көслө тойғоло, кисерешле кеше үҙ тойғоларын аҡылына буйһондора алһа, ул ирекле кеше (Спиноза).

Көслө тойғоно һин аҡылың менəн еңə алмаһаң, аҡыл эше менəн мауыҡмаһаң, һин ирекле түгел, ə ҡолһоң. Үҙ тойғоларыңдың ҡоло.

Яңы йəмғиəттең элементтары иҫкеһендə барлыҡҡа килə. Идеялар көрəше аңлыраҡ булған һайын, улар партиялыраҡ. Художник иһə ни тиклем ҙур булһа, уның тенденциозлығы — партиялылығы аңлыраҡ. Энгельс, Маркс Эсхилды, Дантены, Сервантесты, Шекспирҙы иң тенденциоз художниктар тип билдəлəне. Тенденциялылыҡ — партиялылыҡтың иң төп билдəһе.

1905 йылда Ленин əҙəбиəттəге партиялылыҡ тураһындағы мəҡəлəһе менəн сығыш яһаны. Аполитичноҫка ҡаршы төшөп, бөтə əҙəбиəттең һəм сəнғəттең партиялылығын талап итте. «Ижади ирек» һəм «партияһыҙлыҡ» иллюзияларын тар-мар

итте. Лениндың хатаһы — уның тик коммунистик партиялылыҡты ғына таныуында.

— Йәшәгән, ти, бер ҡыҙ,— тип башланым. Ямғыр аҫтында оҙаҡ-оҙаҡ йөрөнөк. Аяҡ аҫты бысраҡ, ә беҙ йөрөйбөҙ ҙә йөрөйбөҙ. Ямғырҙа ла, еүеш ерҙә лә бер матурлыҡ бар кеүек.

Мин ҡайтҡанда, Рафаэль Франтишек менән Адарға үҙенең ғашиҡ булып ҡайтыуы тураһында һөйләп ята ине.

— Һин ҡатын-ҡыҙҙы һөймәйһең, ә үҙеңдең хыялыңды яратаһың,— ти Франтишек уға.— Һин шәүләләрҙе һөйәһең. Был — душевный анонизм.

— Һеҙ һөйә белмәйһегеҙ,— ти Рафаэль. — Тыныс мөхәббәт был! Мин ул ҡыҙҙың күҙҙәре өсөн генә лә бөтә йөрәгемде бирергә әҙер!

— Ә ниңә бирмәнең? Китәләр уны ҡыҙ менән! Какую там ты душу, ты ужин свой жалел,— тим. Көлөштөк. Мөхәббәт тураһында бик оҙаҡ бәхәсләштек.

Адар ит ҡыҙҙырып ҡуйған. Күҙ асып йомғансы тар-мар иттек. Рафаэль сәй ҡуйҙы.

18 май.

Йоҡламаным. Төнө буйы уйландым да уйландым, тарттым да тарттым. Икенсе китаптың исеме «Ҡурай» буласаҡ. Ул тематик яҡтан киңерәк, халыҡ ижадына яҡыныраҡ, тәрәнерәк, оҫтараҡ булһын ине.

Килер бер көн һәм мин: «Һуңғы башҡорт ҡәбере өҫтөндә һуңғы ҡурайсы уйнар көн алыҫ түгел», тигән бысраҡ фекергә үҙ яуабымды бирәсәкмен!

Һуңғы ҡурайсы, имеш! Өфөгә ҡайтҡанда, мин ҡурайҙы опера театрында тулҡынланып тыңлап ултырҙым. Ә бөгөн төндә «Ҡурай» әкиәтенән башлап, Дәүлиҙең Кремлдә ҡурай уйнауына тиклем булған бөтә тарихты уйлап сыҡтым.

Станцияла Рафаэль сигарет алып бирҙе лә институтҡа киттек. Килһәк, китаптың 60 процент аҡсаһы килгән! 2800 һум! Бындай аҡсаны ҡулға алыу әллә нисек хатта! Почтаға барҙыҡ та аҡсаны Рафаэль һанап алды.

— Ну йәшәйбеҙ хәҙер һинең менән! — тинем Рафаэлгә. Уға мин «Йүрүҙән»дең аҡсаһы килеү менән костюм алып бирергә тип ҡуйғанмын.

Занятиеға инеп торманыҡ. ГУМ-ға киттек. Рафаэлгә мин апрель аҙағында костюм тураһында һөйләшкәндә «квитанция» яҙып биргәйнем:

Ярай ҡайғырма һин кейем юҡҡа,
Шиғырымдан костюм тегермен.

Рафаэль һуңлап ҡайтты. Минең адресҡа Надяға ҡағылышлы алама һүҙ ыҫкындырҙы. Асыу килде. Ә мин Надя менән күрешкән һайын уға һоҡланып бөтә алмайым. Беҙ бик дуҫлаштыҡ. Тик мин уға булған тойғомдо мөхәббәт тип кенә атай алмайым. Ул бик яҡын миңә. Ул шундай саф күңелле, аҡыллы ҡыҙ! Минең уға бер ниндәй ҙә бысраҡлыҡ эшләгем килмәй.

24 май.

Көн иҫ киткес. Надяға баҡса ҡаҙышырға киттем. Ул, мин барғанда, Рая менән ҡарағаттар араһында ята ине. Мин барып күрештем дә эшкә тотондом. Ер әле еүеш һәм ҡаты. Был урында элек ҡалын урман булған. Рая Надяға:

— Ҡара әле, Надя, Рәми ниндәй эшсән! — тине. Мин, ысынлап та, дәрт менән эшләнем. Тирләмәнем. Надя миңә көслəп-көслəп, сәс төшөп тормаһын өсөн, яулыҡ бәйләне. Сәғәт 2.30-ғаса ҡаҙҙыҡ, Валентина Степановна ашарға саҡырҙы. Ҡуҙғалаҡлы аш бик оҡшаны.

Надя концертҡа ашыға. Бөгөн ул фабрикаһында шиғыр һөйләй. Киттек. Оялырмын тип мине индермәне. Бик яҡшы һөйләгән. Ҡайтҡанда урман араһынан килдек, һөйләшеп ултырҙыҡ.

25 май.

Стипендия алдыҡ. Надяға китап алдым.

Кис Рафаэль менән уның ҡыҙҙарға булған ҡарашы тураһында бик ҡаты ғына һөйләшеп алдыҡ. Бер ҡыҙҙы хат менән хәбәр итеүенә ҡарамаҫтан, ҡаршы ала бармаған. Кешегә иғтибарһыҙлығы өсөн шелтәләнем.

26 май.

Лекциялар бөттө! Диплом эштәре тураһында йыйылыш үткәрҙек. Кис Рауил килде. Рафаэль уға F. Сәләмдең «Бала» поэмаһынан өҙөктәр уҡыны. Шиғриәт хаҡында оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ.

— Ниндәй ҡыҙыҡ йәшәйһегеҙ! — тине Рауил.— Беҙҙә икенсерәк шул...

Рауилды поезға ултыртып ебәрҙем дә Надяның ҡайтҡанын көтөп йөрөнөм. Мәскәүгә китеүсе поезд менән тәүҙә Востряковаға тиклем барып килдем дә, Надяны тап итмәгәс, икенсе поезд менән Суковоға тиклем барҙым. Ҡайтҡанда икенсе вагонға индем, Надя өсөнсөлә, килгән икән. Арттан йүгереп килеп ҡосаҡлап алды. Бөгөн мин уның алдында ҡыйыуһыҙ инем. Ул мин биргән «Северное сияние» китабын уҡып йөрөй. Пушкиндың үлеме тураһында илап уҡыған.

Надя миңә тартмаҫка ҡуша. Миңә уның был сифаты оҡшай, тик мин юрый ҡарышам. Ул миңә үҙенең уҡытыусы булғыһы килеүен әйтте. Ул бик яҡшы әҙәбиәт уҡытыусыһы буласаҡ. Миңә хәҙер уның өсөн дә педагогик китаптар уҡырға кәрәк буласаҡ.

Урман өҫтөнән ураҡ кеүек ҡыйылып, ҡыҙғылт ай ҙа сыҡты. Надя тәбиғәтте күҙәтергә ярата. Уның был яғы ла оҡшай миңә. Тик мин уның үҙенә һәйбәт яҡтары тураһында әйтергә яратмайым. Был хаҡта ситләтеп кенә белдерәм.

Ишек алдында ҡосаҡлашып ултырҙыҡ. Минең сәстәремде һыйпап иркәләгәндә, бөтә тән буйлап сәс аҫтынан ялҡын йүгергән кеүек. Мин хатта уны үбергә лә уңайһыҙлана башланым.

Ҡайтҡанда, бөтөнләй яҡты ине. Йылға буйы күк томан менән ҡапланған. Ә миңә ғәҙәттән тыш яҡты, иркен...

27 май.

Бик яҡшы йоҡлағанмын, Франтишек уятты. Ашханала Шәриф Әлбиреев Гейне буйынса зачет була икәнлеген әйткәс, аптырап киттем. Профессор Металлов, ниндәй темаға әҙерләндең, тип һорағас, һеҙ ниндәйҙе бирһәгеҙ, шуға, тинем. Ул Гейне поэзияһының халыҡсанлығы һәм «Атта Тролль» поэмаһы тураһында һөйләргә ҡушты. Өҫтәп, мин уға үҙемдең Гейненан тәржемәләремде лә уҡыным. Бик ҡыҙыҡһынып тыңланы.

— Мин телегеҙҙе белмәйем. Ләкин уҡыуығыҙ оҡшай. Гейненың мелодияһы! — тине профессор.

Тәүге зачет бик еңел һәм яҡшы бирелде.

Рафаэль Люся менән урманда йөрөп ҡайтты. Үпкән! Үбешеү тураһында һөйләштек.

Надяның иренән үбеү үҙе бер ғүмер!

Франтишекты иртәгә Чехословакияға оҙатасаҡбыҙ. Имтихандарын тапшырып бөткән.

3 июнь.

Рус теленән имтихан тапшырып сыҡтым. Был — рус теле буйынса һуңғы имтихан. Күҙ алдыма мәктәптәге һәм институттағы бөтә рус теле уҡытыусылары килеп баҫты: Фәлимә Абдуллина, Мәхмүт Еникеев, Рәбиға Әсәнова, Антонина Ильинична Сухабай, Мөсәлиә Фәлиевна Хәйруллина, Әминә Ҡорамовна Йыһаншина — Арҡауылда һәм Өфөлә уҡытҡан уҡытыусыларым. Елпатьевский, Елена Кузьмина һәм Александр Никитич Власенко — институттағылары. Шулар араһында бер-икеһен генә яратманым. Улар миңә бер ни ҙә бирә алманы. Ҡыҙғаныс,

бәхетһеҙ уҡытыусылар! Ҡалғандары бөтәһе лә үҙҙәренсә миндә яҡты эҙ ҡалдырҙы.

Бөгөн мин бик бәхетле. Тик был бәхеткә өйрәнелгән өсөн генә ул тойолмай. Ә тарих күҙе менән ҡараһаң, иҫ киткес!

Надя мине көтөп торған. Балкондан йүгереп килеп төштө лә ҡосаҡлап алды. Ялан буйлап сығып киттек.

— Йә, ниңә бер нәмә лә һөйләмәйһең?

Мин көлдөм.

— Һинең көлөүең әллә ниндәй?

Мин өндәшмәнем.

— Нимә уйлайһың һин, Рәми?

— Минең менән күңелһеҙҙер һиңә, Надя?

— Ниңә улай тиһең?

— Мин нимә уйлағандарымды һиңә әйтергә лә ҡурҡам, Надя... Миңә ҡәҙерле булған нәмәләр һиңә ҡыҙыҡ булмаҫҡа мөмкин. Кисә һиңә теге философик һүҙлекте килтергәс, Галя көлдө. Ниңә уға бындай китаптар килтерәһең, ул уҡыймы инде уларҙы, ти. Надяға ҡыҙыҡлы романдар ғына кәрәк.

— Мин беләм инде уның шулай әйтерен! — тине Надя әрнеү менән,— уның һүҙҙәре һиңә шулай тәьҫир иткән! Эйе,— тип көрһөнөп ҡуйҙы ул.

— Крупскаяны уҡып бөттөңмө әле?

— Юҡ әле.

— Әгәр ҙә һин ысынлап теләһәң, ынтылһаң, мин хәлемдән килгән тиклем һинең өсөн дә йәшәр инем, һинең өсөн дә уҡыр инем. Һин быға ышанаһыңмы, Надя?

— Ышанам.

Мин осоусы баластар, тиҙ йөрөүсе итектәр тураһында рус һәм башҡорт әкиәттәренән бик ҙур «лекция» уҡып ташланым. Халыҡ үҙенең әкиәттәрендә һәр саҡ хыялын әйтә, идеалын күрә... Алдымдан Горький бара, тик уны Надя ғына күрмәй. Уға Горький мәҡәләләрен дә уҡырға кәрәк әле. Уларҙың баҡсаһындағы ҡайын аҫтына килдек, ул тал сыбыҡтан үрелгән креслоға ултырҙы. Ә мин ҡайынға һөйәлеп баҫып торам. Һалҡын ел иҫә. Ай, утта янған ураҡ кеүек, ҡыҙыл һәм нескә генә. Ай янындағы йондоҙ ғына яҡты. Надяның ҡара сәстәрен елдәр туҙҙыра. Ҙур ҡара күҙҙәре тағы ла ҡарараҡ. Оҙон ҡара керпектәрен бер күтәреп, бер йомоп, ул бик оҙаҡ күккә ҡарап ултырҙы ла:

— Һин көслөһөң, Рәми, ә мин һинең яныңда бер туҙан ғына,— тип ҡуйҙы.

— Бер ҡасан да шулай тимә миңә!— тип ҡысҡырҙым мин асыу менән.— Улай тип әйтеүе бик еңел ул!

— Һин бәхетле булырһың,— тине ул йомшаҡ ҡына. Уның тын ғына сыҡҡан тауышында ниндәйҙер көнләшеү ҙә, түбәнһенеү ҙә бар ине. Миңә һәр саҡ уның шундай тонын күтәреү ауыр, йөрәк әрнеткес. Мин үҙемә үҙем тупаҫ һәм ҡорос һымаҡ ҡаты, үткер тойолам. Ә үҙемдең бала кеүек ғәмһеҙ, шат, асыҡ, бала кеүек бер ҡатлы булғым килә.

Өндәшмәйенсә, оҙаҡ ултырғандан һуң, мин:

— Есть у меня Надежда, но Нади нет,— тинем. Үҙемдең тауышымдан үҙемә ҡурҡыныс булып китте.

— Һинең «Надяң» булыр, Рәми, ә бына мин үҙемде һин ҡайтып киткәндән һуң бер нисек тә күҙ алдыма килтерә алмайым. Нисек йәшәрмен?

Мин ҡурҡыныс көлдөм.

— Бер биш йылдан һуң минең һиңә ҡарағым килә: һин бик бәхетле булырһың, Рәми!

— Йә бик бәхетле, йә бик бәхетһеҙ. Ә уртаса булмаясаҡмын! Ниңәлер мин бик ныҡ эсермен һәм юғалырмын кеүек. Йәки бик көслө булып ҡалырмын. Әгәр ҙә бик көсһеҙ булһам, бер ҡәбәхәтлек эшләргә минең көсөм етер ине...

Надя, ҡапыл ғына йоҡоһонан ҡурҡып уянған бала әсәһенең ҡуйынына ныйынған кеүек, ярһыулы тауыш менән:

— Нисек етер ине?— тип бышылданы һәм мине нығытып ҡыҫып алды. Мин башҡа килгән уйҙы ҡапыл бер еңеллек менән:

— 5 грамм ҡурғаш етә!— тинем.

Надя:

— Һин миңә бик яҡшы фекер әйттең!— тип ҡысҡырҙы. Был тын ҡысҡырыу минең бөтә тынлығымды шартлатты. Тыным быуылды, күкрәгем ҡыҫылды. Был ҡәбәхәт һүҙҙәрҙе әйтеүҙән дә артыҡ түбәнлек юҡ. Ниңә әйттем? Ниңә, нилектән? Ниндәй хурлыҡ!

— Ҡайт, Рәми, ҡайт, һин мине аҡылдан яҙҙыраһың, ҡалдыр мине, ҡалдыр!!! — тип ялбарҙы Надя.

Ниңә әйттем? Ниңә әйттем, ниңә? Һуң ине инде, бик һуң ине. Ниндәй түбәнлек!

Ҡыҙыл ураҡ яныңдағы йондоҙ, һүнәм-һүнәм тип торған кеүек, ҡалтырап күренә. Һалҡын ел ҡайындың оҙон толомон бөтә көсө менән килтереп һуға, япраҡтар йөрәк өҙгөс тауыш менән шаулай. Бер ҡасан да минең шулай туңыуҙан тирләгәнем юҡ ине.

— Ҡайт, Рәми, ҡайт!..

— Юҡ, ҡайтмайым. Бар, йоҡла инде, Надя, һиңә иртәгә фабрикаға эшкә барырға кәрәк. Ял ит, Надя.

— Ҡайт, Рәми, үтенәм!

Мин өндәшмәйем. Туңам.

Надя ҡапыл һикереп торҙо ла баҡса эсенә йүгерҙе. Ҡараңғылыҡҡа сумды ла юғалды. Баштан күҙ асып йомғансы әллә күпме ҡурҡыныс уйҙар үтте. Уның һайын бөтә тирә-яҡты ниндәйҙер шомло тынлыҡ баҫты. Йөрәк тибеүем үҙ-үҙемә ишетелә. Ҡот осҡос һүҙҙәр! Сәғәткә ҡарайым — 3 минут үткән. Ә Надя юҡ! Миңә был 3 сәғәт булып тойолдо. 5 минут үтте. Ни булды? Ҡот осҡос...

Ҡапыл йыр яңғыраны. Надя! Ул еңел атлап, ҡош кеүек талпынып килә! Ниндәй матур уның атлауы. Үҙе ярһыу, йылы, наҙлы.

Кеше ни тиклем тиҙ үҙгәрә! Минең йүгереп барып күтәреп алғым килә уны! Бар көсөмә йөрәгемә ҡыҫҡым килә! Бала ирендәрен үпкем килә. Миңә ҡапыл ғына ҡанат үҫеп киткән кеүек. Ауыр төш кеүек көн үтте. Тик мин түмәрҙән торманым.

Надя йүгереп килеп минең сәстәремде үҙенең көслө бармаҡтары менән һыуғып туҙҙырҙы ла иҫ киткес бер еңеллек менән ҡайын ботағына бәйләп ҡуйылған гамак селтәренә һикерҙе һәм ауҙы. Гамак бәүелеп китте. Ә Надя шат тауыш менән йырлай:

— Мне мгновенье — наслажденье,

Остальное — трын-трава!..

Ниндәй мәғәнәһеҙ йыр! Ләкин ул уны шашып, шатлыҡ, дәрт менән йырлай. Мин һикереп торҙом да Надяны ҡоторонып бәүетергә тотондом. Уның башы ла, аяғы ла ҡайын ботаҡтарына барып һуғыла, ә үҙе шат тауыш менән:

— Етәр, Рәми, етәр! Ебәр, йүләр,— тип балаларса ҡысҡыра.

Мин талғыныраҡ бәүетә башланым. Үҙем рәхәтләнеп көләм. Был көлөүҙә бер ниндәй ҙә ҡорос ҡатылығы юҡ ине. Мин бөтөнләй балаға әйләндем. Надя ла — бала. Миңә — 22, уға 20 йәш!

Бәлки, шуның өсөн дә беҙгә йәшәү ҡурҡыныс та, шатлыҡ та булып тойолғандыр? Бәлки, шуның өсөн дә мин йүләр һүҙҙәр әйтәм дә, ул уға шулай уҡ йүләр яуап ҡайтаралыр? Бәлки, шуның өсөн дә беҙгә ҡапыл һалҡын, ҡапыл ялҡын бөркөләлер? Ә тыныс ҡына урталыҡ юҡ. Ярай әле, тәүге һөйөү үткән йөрәктән. Юҡһа, мин бөтөнләй аҡылдан яҙыр инем... Хушлашҡанда, беҙ иҫерек кеүек инек. Ул оҙатып ҡалды, ә мин осоп ҡайттым. Яҡтыра.

4 июнь.

Бүлмәлә элекке эшсән ғаилә юҡ. Шау-шыу, оятһыҙ һүгенеү, әшәке һүҙҙәр. Рафаэль дә быға бит асыуланып йөрөй. Мин тешемде ҡыҫып түҙәм. Дузенов ҡайҙалыр бер яҙыусының

ҡатыны менән ләззәтләнеп ҡайтҡан да ауыҙынан һеләгәйе аҡып маҡтана.

— Нишләргә инде? — ти Рафаэль.

Көн генә һыуыҡ, юҡһа мин уларҙың йөҙөн дә күрмәҫ инем.

5 июнь.

Б. Бурсовтың Белинский, Чернышевский, Добролюбов тураһында китабын уҡый башланым.

Надя менән урман буйлап оҙаҡ һөйләшеп, йырлашып йөрөнөк. Надя матур йырлай. Ә мин, көйләп, һыҙғырам ғына. Һандуғас булып һайрайым, кәкүк булып саҡырам, ул рәхәтләнеп көлә. Етәкләшеп тә, ҡултыҡлашып та, ҡосаҡлашып та йөрөйбөҙ. Өшөтөп китһә, мин уны, ай-вайына ҡарамай, өйрөлтөп алам. Ай урағы ҡалынайып килә. Теге төндә ул ҡанлы кеүек ҡыҙыл ине, бөгөн һөттәй аҡ! Тәбиғәт ни тиклем кешенең эсенә инә! Әйтерһең, ул кеше күңеленә яраҡлашып ҡына тора. Бөгөн беҙ балалар кеүек ғәмһеҙ. Бер генә лә күңелһеҙ һүҙ юҡ. Йылға буйына, буралы шишмә янына, төштөк тә мөлдөрәп ятҡан ай урағына ҡарап торҙоҡ. Мин Надяны күтәреп алдым да:

— Ташлайыммы һине шунда, алып сыҡ миңә алтын ураҡты!— тинем.

— Ташлама, Рәми, һинең яныңда ғына ҡалғым килә,— тине ул, иркәләнеп.

6 июнь.

Үлек кеүек йоҡлағанмын. Рафаэль ғәҙәттәгесә:

— Тор инде, тор!— тип ҡабатлай.

Хәҙер ул баштан һыйпап, әсә булып уятыу ғәҙәтен ташланы. Ләкин юғалған ролдәре урынына яңылары табылып тора. Беҙ хәҙер бөтөнләй бер-беребеҙгә күнегеп бөттөк. Бергә йәшәгән был йыл һуңынан иң яҡты иҫтәлек булып ҡаласаҡ. Кешене тик бергә йәшәгәндә генә белергә мөмкин. Рафаэлде мин бөтә ауырлыҡтарҙа ла, бөтә нәмәлә лә башҡаларҙан күберәк күрҙем, ләкин һаман да әле уның яңы сифаттары асыла. Шуның өсөн дә уның менән күңелһеҙ түгел.

8 июнь.

Консерваторияға Рафаэль менән һуңлап барҙыҡ. Диплом яҡлау бөткәс кенә, Исмәғилевте (Заһир Исмәғилев, композитор) ҡотлаған саҡта ғына, индерҙеләр. Бик күп үҙебеҙҙең башҡорт егеттәре, ҡыҙҙары килгән — студенттар, аспиранттар. Әхнәф Кирәй беҙҙең съезға ҡайтыуыбыҙ тураһында һорашты.

«Салауат»ты тыңлай алмауыбыҙ үкендерҙе.

9 июнь.

Төн. Күк күкрәй. Ҡойоп ямғыр яуа. Бөтә урман тотош ҡара стенаға әйләнде. Ҡапыл йәшен ялтлап китә һәм бөтә урман күгелйем яҡтылыҡ менән яҡтыра ла тағы телһеҙ ҡала. Ҡарағайҙар тоноҡ, ләкин ниндәйҙер мөһәбәт тауыш менән гөүләй.

Надя хәҙер эштән ҡайтып киләлер. Шундай ямғыр һәм күк күкрәүе аҫтында йәшен яҡтыһында мин уның менән урман буйлап йөрөгөм килә. Миңә шундай ҡурҡыныс ваҡытта ҡатын-ҡыҙ менән булыу нисектер һәйбәт. Был матурлыҡты мин бәләкәй саҡтан тоям.

Һуғыш ваҡытында инәйем менән көҙгө төндә тирә-яҡта бүреләр олоп ултырған саҡта бесән тейәү ҙә, Ҡазан пристанендә Дилараның (Зөбәйерова — татар шағирәһе) мине шундай йәшенле ямғыр аҫтында оҙатып ҡалыуы ла тормошомдоң ниндәйҙер иң матур, ғәҙәттән тыш сәғәттәре булып ҡалған.

Съезға ҡайтырға булдым. Рафаэль менән Рәйес дирекцияның рөхсәтен белеп ҡайтҡандар. Тик Надяны ҡалдырып китеү генә йәлерәк.

10 июнь.

Имтихан бирелде. Ҡайтҡас, Надяға иң кәрәкле китаптарҙы һайланым. Ике сумаҙан. Киттем. Ул төнгө 1-ҙә генә ҡайта. Ҡайын аҫтындағы гамакта 3 сәғәт көтөп яттым. Унан ҡаршыларға киттем.

Надя менән ҡаршылаған был таң — иң матур таңым! Уны, ахыры, ысынлап яратам. Мин бөтә донъяға ғашиҡ! Бөтә нәмә ҡулымдан килә кеүек. Китаптарға Надяның шатланыуы — бәхет!

11 июнь.

Бөгөн Мәскәүҙәге һуңғы көн. Билет алдым. Надя эшләгән фабрикаға барып, уны саҡырып сығарҙым да төнгө сәғәт 2-лә китәсәгемде әйттем. Ул һөйләшә лә алмай тик тора.

— Станцияға оҙата төшөрһөңмө? — тигәс, шатланып китте.

14 июнь.

Өфө! Килеп еттем!

Иң беренсе кемде күрермен, тип килә инем, Хәким Ғиләжев менән радиокомитетта эшләгән Лена килеп сыҡты. Өйләнешкәндәр. Ҡотланым. Тайфа осраны.

— Бабай! — тип ҡысҡырҙы. Һөйләштек. Имтихан тапшыра икән.

15 июнь.

Иртән ҡалаға сыҡҡас та Рафаэлде осраттым. Союзға киттек. «Әҙәби Башҡортостан»ға индек. Унда минең шиғырҙар, Рафаэлдең поэмаһы ята. Баҫмағандар. Мостай Кәримде осраттыҡ. Уның атайҙарса йылы йылмайыуы ниндәйҙер көс бирә. Минең был йылмайыуҙы һәр саҡ иҫемдә ҡалдырғым килә.

2 сентябрь.

Философия үҙе бер айырым фән булып тормаған. Быны беҙ грек, ҡытай философиялары тарихынан да беләбеҙ.

Донъяны таныуҙа философия ҡапма-ҡаршы ике — материалистик һәм идеалистик — тармаҡта үҫә башлай.

Философик фекерҙең таңында уҡ әле грек философтары үҙҙәренең әҫәрҙәрен дидактик поэмалар менән яҙған, философия фән һәм сәнғәт менән ныҡ бәйләнештә булған. Бөйөк идеалист Платон грек прозаһының бөйөк художнигы ла.

Тәүге грек материалистары диалектик та булалар. Улар ҡапма-ҡаршылыҡтар көрәшен дә, донъялағы бөтә нәмәнең дә хәрәкәттә, үҙгәрештә булыуын күрә.

Бөтә философия тарихы — материализм һәм идеализмдың көрәш тарихы. Материализм һәм диалектика Марксҡа тиклем дә булған.

Марксҡа тиклемге философия үҙ бурысын донъяны белеп аңлауҙа ғына күрһә, Маркс донъяның үҙен үҙгәртеүҙә күрҙе. Демокрит та, Эмпедокл да, Гераклит та, Бэкон да (яңы материалист) донъяны аңлатты ғына, ә үҙгәртеү тураһында һүҙ ҡуҙғатманылар.

Бэкон белемдә көс күрҙе. Ләкин ул кешенең тәбиғәткә техник һөжүменән уҙып китә алманы. Ул фән көсөнөң тәбиғәткә булған мөнәсәбәтенә генә туҡтап, ижтимағи тормошто күрә алманы.

Идеалистар — Гераклит, Гегель — донъяны хәрәкәттә, үҫеүҙә күрҙеләр, әммә ҡапма-ҡаршылыҡтар тарихын өйрәнмәнеләр.

Италиялағы Кампанелла, Франциялағы Сен-Симон һәм Фурье, Англиялағы Роберт Оуэн — социал-утопистар. Ләкин улар социализмды нигеҙләүҙә идеалист булып ҡалды, революцион хәрәкәттең башында тора алманылар.

Боронғо Ҡытай һәм Индия философияһы ғәҙәттән тыш бай, тик ул өйрәнелмәгән әле.

Боронғо Грецияла философия беҙҙең эраға тиклемге IV быуатта уҡ барлыҡҡа килә.

Ҡара диңгеҙ ярҙары гректар тарафынан баҫып алына. Бәләкәй Азиялағы гректар Көнсығыш халыҡтары менән ара-

лаша башлай һәм грек философияһы континенталь Грецияның үҙендә түгел, ә киттә барлыҡҡа килә.

IV быуатта грек философтары донъяның үҙгәреп тороуын күрә. Фалес та, Анаксимандр, Анаксимен да донъяның нисек барлыҡҡа килеүен, ҡайҙа табан хәрәкәт итеүен белергә тырыша.

Фалес — һыуҙы, дымды тәбиғәттең төп стихияһы тип атай. Ул донъя һыуҙан яралған, ти.

Анаксимен донъя башланғысын һауала күрә.

Анаксимандр билдәле булмаған матдәне таный.

Фалес үҙе сәйәхәтсе купец була. Милеттан Египетҡа килеп, математика һәм астрономия башланғыстары менән таныша. Нил йылғаһының ташып тороу хәленә Египет халҡының экономикаһы бәйләнгән. Нил — туйҙырыусы йылға. Уның ҡасан ташырын белеү өсөн күк есемдәрен өйрәнеү — астрономия, ерҙе үлсәү өсөн геометрия фәндәре барлыҡҡа килә. Фалес, был фәндәрҙе өйрәнеп, ҡасан ҡояш тотоласағын әйтә.

Пифагор — легендар шәхес. Ул донъя һандан яралған тигән фекерҙе әйтә. Пифагореецтар тәү башлап һандың сифатҡа күсеүен билдәләйҙәр.

8 сентябрь.

Мәскәүгә килгәндән бирле тәүге яҡшы көн — яҙҙым. Бетховендың Ромэн Роллан яҙған бөйөк тормошон уҡыным. Нюранан китаптарҙы килтереп, бөтәһен тәртипкә килтерҙем, кәштәләргә урынлаштырҙым. Күңелгә нимә етмәй тиһәм, китаптарҙың үҙ янымда булмауы шулай күңелде өйкәп торған икән. Рафаэль инде тәүге имтиханын да бирep ҡайтты.

Тәүге уҡыу көнөндә үк Ләлә Биишеванан хат килеп торған. Силәбе өлкәһенең «Бүре» совхозында уҡыта башлаған. Яҡшы хат. Шәп уҡытыусы буласаҡ. Уның менән бәйләнеште өҙмәҫкә кәрәк.

Рифҡәт китап сығыу менән ебәрергә тейеш. Түҙемһеҙлек менән көтәм. Әллә нисек, үҙ күҙҙәрем менән күреп, үҙ ҡулдарым менән тотоп ҡарамайынса, күңел ниңәлер ышанып етмәй.

Бөтә аҡсаны таратып бөттөм. Бурыстарҙы түләнем. Әсгәттең хәле хәрт икән — уға 100 һум ебәрҙем. Рауилгә лә, Уралға ла — 100-ҙәр һум. Өйҙә йүнәтеү өсөн дә 600-ҙәп артыҡ аҡса китте. Тағы үҙем буп-буш ҡалдым. Бишенсе йыл! Еңелгә тура килмәне был йылдар миңә. Шулай ҙа бөтә ҡаршылыҡтар ҙа еңелде. Аҙ эшләмәнем. Хәҙер инде икенсе китапты әҙерләй башларға кәрәк. Етдиерәк темаларға тотонорға кәрәк. Тормоштоң үҙенә, кешеләргә! Күп йырланым үҙемде. Был юлды тарайта.

Мостай Кәрим был хаҡта миңә бер нисә мәртәбә иҫкәртте инде. Тематикаң тар, ти. Дөрөҫ. Ләкин мин үҙемде аша һикерә алмайым. Аяғыңды һындырырһың. Ә эҙәбиәт хәҙер минең бөтә тормошома әйләнде. Мин унан бер аҙым да ситкә китә алмайым.

Институтты бөткәс тә хәбәрсе булып эшләй башларға кәрәк. Газетала эшләгән быйылғы йәйҙән һуң мин был уйҙың дөрөҫлөгөнә тағы нығыраҡ ышандым. Хәбәрсе — тормош эҙләүсе. Бөтә нәмә асыҡлығы, бөтә тәрәнлеге менән иң элек уның күҙенә ташлана. Ул эҙләй, таба. Әммә бер туҡтауһыҙ үҙ өҫтөндә эшләргә кәрәк. Тормош ауырлыҡтары менән маҡтур.

Ял көнө Рәшит Гәрәев менән Ленин тауҙарына барып ҡайттыҡ. Мин бер татарыбыҙ ҙа булды, тип бик шатландым. Минзәлә егете. Татарстандан беренсе курсҡа бер үҙе генә эләккән. Бер-беребеҙҙең шиғырҙары, тормошо менән таныштыҡ. Тәүге китабы ла сыҡҡан. Миндә яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы. Мостай Кәримде бик ярата. Үҙҙәренең шағирҙарынан бигерәк тә Сибғәт Хәкимде телгә ала.

Мин уға «Әсәм ҡулдары»н уҡығас, ул үҙенең әсәһе хаҡында бик тулҡынланып, һағынып һөйләне. Һәм был миңә бик ныҡ оҡшаны.

10 сентябрь.

Ҡол биләүселәр демократияһы ваҡытында сәйәси көрәш киң ҡолас ала һәм ораторлыҡ сәнғәте — риторика бик ныҡ үҫә. Сицилияла, һуңынан Афинала сәйәси белемдәр өйрәтелә. Был белемгә өйрәтеүселәрҙе софистар тип атайҙар. Улар был ваҡытта оҫта драматургтар, композиторҙар була. Традицион белем һәм тәғлимәттәр софистар тарафынан ҡаты тәнҡитләнә.

Һәр нәмәне лә үҙҙәре теләгәнсә раҫлай был софистар. Мәҫәлән, былай: йәшәйеш бар ҙа, юҡ та.

Софистикаға Сократ ҡаршы төшә. Ул ҙур аҡыл эйәһе була, тормош тураһында үҙенең ижтимағи-сәйәси фекерҙәрен пропагандалай. Ул Афина демократияһынан көлә, ҡаты тәнҡит аҫтына ала. Уның оппозицияһы Афина хөкүмәтенә ҡурҡыныс һала һәм ул хөкөмгә тарттырыла — үлем язаһы бирелә. Уны ағыу эсереп үлтерәләр.

Сократ философияны дөрөҫ йәшәү фәне, тип атай, ул кешене йәшәү сәнғәтенә өйрәтергә тейеш, ти. Быныҡ өсөн белем кәрәк. Белем — фекер. Ләкин һәр фекер белем түгел. Иҫбатланған фекер генә — белем.

Философияның төп лозунгыһы, уныңса: познай самого себя! Ә тышҡы донъяны аңлап белеү мөмкин түгел, ти. Сократ донъяны таныуҙан бөтөнләй баш тарта. Был идеализм менән

материализдың тәүге бәрелеше була. Сократ — идеализмдың тәүге ҙур вәкиле, нигеҙ һалыусыһы.

Сократ мәктәбендәге уҡыусылар араһында ҡапма-ҡаршылыҡлы йүнәлештәр барлыҡҡа килә. Платон идеализмы объектив төҫ ала.

Платон үҙенең Афинала урынлашҡан йәмғиәт ойошмаһын Академия тип атай. Сөнки был ойошма урынлашҡан йорт Академо тигән батырға ҡуйылған һәйкәл эргәһендә була. Хәҙерге академия һүҙе шунан башланып киткән.

16 сентябрь.

Мәршиҙәнең (һеңлеһе) хатын алдым. Мәүлиҙә үлгән, тигән. Ул юҡ донъяла! Башҡа һыймай. Ышанмайым. Ышана алмайым. Мәүлиҙә юҡ. Мәңгегә юҡ! Минең тәүге шиғырҙарымды яҙҙырған Мәүлиҙә юҡ. Беҙҙең тау башында ҡайындар араһында һөйләшеп ултырған көн тәүгеһе һәм һуңғыһы булған. Ниндәй яҡты ине ул көн!.. Ниндәй йылы ине... Ниндәй үкенесле ғүмер! Беҙ бер-беребеҙҙе яҡты балалыҡ тойғолары менән яратыштыҡ. Бергә уҡыныҡ. 7 йыл үткәс, тәүге ҡабат бергә ултырып, һөйләштек, шаярҙыҡ, ҡайындарға һоҡландыҡ, мәтрүш сәскәләрен еҫкәнек. Хушлашҡанда, айырыла алмай, бер-беребеҙгә бер ҡасан да онотолмаҫлыҡ итеп ҡарашып торҙоҡ, ҡайын аҫтында үҫкән ике пар бөрлөгәнде бүлешеп ашаныҡ... Йәшлек әле генә башланған саҡта, ул юҡ! Мәүлиҙә, Мәүлиҙә! Хатта мин кисерә лә алмайым. Йөрәк ышанмай.

18 сентябрь.

Үҙебеҙҙең Переделкинола Леонид Леонов менән осраштыҡ. Кергәс үк беҙгә:

— Мин бит һеҙҙең менән әрләшергә килдем,— тине һәм, ысынлап та, тиргәй башланы. «Я не верю в таланта с алкоголем, как не верю в хирурга перед операционным столом в пьяном виде». Яҙыусыға сәләмәтлек кәрәге хаҡында һөйләне. Хатта тәмәке тартырға ла ҡушманы.

20 сентябрь.

Өсөнсө ҡабат Ясная Полянала булдым!

Толстой музейында был барыуҙа мине бер башҡорт кешеһенең Толстойға бүләк иткән сылбырлы ҡашығы ғәжәпләндерҙе. Бик оҫта итеп ағастан юнып эшләнелгән (сылбырҙары ла ағас). Толстойҙың һуңғы секретары Булгаковтан был ҡашыҡ тураһында уға ғәрәпсә ни яҙылғаны хаҡында һораштым. Ул: «Граф Лев Николаевич Толстойға Арыҫланғәле Сол-

тановтан», тип яҙылған», — тине. Бының тарихын белергә ине! Былтыр барғанда нишләптер был ҡашыҡты күрмәгәйнем.

Толстойҙың китапханаһында ни тиклем хазина! Әҫәрҙәренең һуңғы баҫмаһы ғына ла 96 томдан тора. Шуларҙың 30 томы — тик хаттар! Ясная Поляналағы китапханаһында китаптары 22 мең томлыҡ! Ул 12 телдә уҡый белгән. Фәжәп!

29 сентябрь.

24 сентябрҙә Колонный залда Абай кисәһе үтте. Әнүәр Бикҡәнтәев менән бергә ултырҙыҡ. Асыҡ, йылы, бик ябай кеше.

Кисә Рифкәттән сығып килгән китабымдың «таҙа биттәрен» алып, сикһеҙ шатландым. «Йүрүҙән» — минең үҙ балам. Мин уны бөтәһенән дә яҡыныраҡ күрәм. Ләкин уның менән генә ҡәнәғәт була алмайым. Үҙем теләгән ҡайһы бер шиғырҙар китапҡа инмәй ҡалды. Нисек ҡаршыларҙар инде... Китапҡа Мостай Кәримдең рецензия яҙыуын бик теләр инем.

30 сентябрь.

Көн ямғырлы. Япраҡтар ҡойола.

Баланың тәүге фәне — әкиәт. Әкиәт — тәүге тәрбиәсе. Ул балаға иң аңлайышлы донъя.

Ә бишек йырынан башлап баланың тойғоһон гармониялы тәрбиәләү башлана.

Ҡыҙ бала ҡурсаҡ уйнатһын, ир бала ҡулына уйынсыҡ алһын. Баланың ҡулын тәрбиәләүгә бик ҙур иғтибар итергә кәрәк.

1 октябрь.

Константин Федин менән осраштыҡ.

2 октябрь.

Ислам дине VII быуатта Фәрәбстанда барлыҡҡа килә. Шул ваҡытта уҡ мосолмандарҙың изге китабы — Ҡөрьән, изге риүәйәттәр (сөннәттәр) төҙөлгән, дини закондар (шәриғәт) эшләнгән.

Ҡөрьән йыһандың килеп сығыуын шулай аңлата: «Алла «бул» тигәс тә «күк һәм ер» барлыҡҡа килгән». Ҡөрьәндә яҙылғанса, алла йыһанды бик ҙур оҫталыҡ менән, һис бер тешһеҙлеккә юл ҡуймай, 6 көн эсендә яратҡан. «Бер-береһе өҫтөнә көмбәҙ ҡуйып, алты күкте яратҡан». Күк йөҙөн ул «ҙунда бер генә лә ек ҡалмаҫлыҡ итеп» төҙөгән һәм биҙәгән.

Ҡөрьән (Библиялағы кеүек үк) Әҙәм һәм уның бисәһе тураһындағы һәм уларҙың тормошон кешелек донъяһы тарихының иң бәхетле «алтын быуаты» итеп күрһәтеүсе хикәйәләрҙән тора һәм теге донъялағы ожмахты һүрәтләй.

Ҡөрьән Евангелиеның яуызлыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтмәү тураһындағы тәғлимәтенә оҡшаш. Ҡөрьән дә, Евангелие ла хеҙмәтсәндәргә үҙҙәренең иҙеүселәрен яратырға тәҡдим итә. Ҡөрьән быны «мосолмандар» булған өсөн, ә Евангелие «яуызлыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтергә ярамағанлыҡтан» шулай эшләргә ҡуша.

Минеңсә, яуызлыҡҡа яуызлыҡ менән түгел, ә яҡшылыҡ менән яуап бирергә кәрәк.

6 октябрь.

Төнгө сәғәт 3-сө ярты. Мин бөгөн бик бәхетле: лекцияларҙан һуң күпте көткән почта миңә үҙемдең тәүге китабымды — «Йүрүҙән»де килтерҙе! Бына ул «Йүрүҙән»— эргәмдә ята!

Әгәр ҙә хәҙер атайым иҫән булһа, мин уға бөгөн ҙур хат яҙған булыр инем. Ә ул минең, беҙҙең йәшлегебеҙҙе һаҡлап һәләк булды.

Әле бына Р. Островскаяның Николай Островский тураһындағы китабын уҡып сыҡтым да әллә нисек күңел тулып китте. «Ҡорос нисек сыныҡты»— минең тәүге мәктәбем һәм тәүге ҡабат йәшәү тураһында бәләкәй генә йөрәгемә ҙур ут һалған китап был. Островскийҙың Тормош тураһындағы бөйөк һүҙҙәре минең үҙ ғүмеремдең иң яуаплы сәғәтенән ҡотҡарып алып ҡалды. Аҕиҙел күпере аша сыҡҡанда поездан һыуға һикерергә ҡулды ысҡындырған саҡта был һүҙҙәр мине тотоп ҡалды һәм мин яңынан тормошҡа ҡайттым. Уға инде бына дүрт йыл үтте. Һәм бына шул иң ауыр йылдар эсендә мин иң матур тормошомдо йәшәнем һәм бына уның тәүге емеше — «Йүрүҙән»!

Ҙур һүҙҙәр яҙғым килмәй. Ләкин мин ҙур эш эшләйәсәгемә ышанам. Мин кешеләргә кәрәкле!

Йүрүҙәнем, был төндө һин дә хәтереңдә һаҡла!

Рафаэль миңә бөтә китапты ҡысҡырып уҡып сыҡты.

7 октябрь.

Горький Октябрь революцияһын иртәрәк тип ҡараған! Ленин, Сталин Горькийға уның «хатаһын» бөтә йөрәктән аңлата. Ләкин Горький үҙ фекерен Ленинға һөжүм яһалғандан һуң ғына үҙгәртә.

Шекспир, Маркс, Ленин, Горький — кешелек өсөн иң күп эшләгән кешеләр. Донъяның бөйөк кешеләре, иң-иң кешеләкле һәм иң-иң тәрән кешеләре — минең өсөн мәңгелек ҡояштар. Мин уларҙың яҡты аҡылын, ҡайнар йөрәген тик ҡояшҡа ғына сағыштырыу мөмкин икәнлегенә ышанам. Художник булыу яғынан Толстой миңә бөтәһенән дә (Шекспирҙан башҡа) юғары.

30 октябрь.

Добролюбовтың мәҡәләләрен ҡабат уҡып сыҡтым. Бик оҙаҡ уҡыным. Мәктәптә уҡыған саҡтағынан хәҙер бер ни ҙә ҡалмаған. Бөтөнләй яңыса аңлайым, яңыса тоям. Уҡып бөткәс, Сүриәгә ҙур хат яҙҙым. Хәҙер мин тик уның менән генә яҙышам. Ғәжәп ҡатын ул! Рафаэлгә минең был бәйләнеш көлкө тойола. Әгәр ҙә ул минән бер нисә йәшкә йәш ҡыҙ булһа, мин, һис һүҙһеҙ, унда үҙем теләгән ғүмерлек юлдашымды күрер инем. Мин әле бер ниндәй ҡатын-ҡыҙға ла шундай ҙур хөрмәт менән ҡараманым. Ул миңә бик ҡәҙерле.

31 октябрь.

Үтә ваҡыт! Мин һаман да имтихан тапшырмай йөрөйөм. Хәҙер инде ҡышҡы сессия ла килеп етте. Стипендия түләмәйҙәр. Бер нисек тә үҙ тормошомдо әҙәм рәтле ойоштора алмам, ахыры. Нисек йәшәрмен мин киләсәктә? Ауыр миңә үҙ тәбиғәтемде еңеү. Шул тиклем мин китап кешеһе!.. Ысынлап та, мин атайыма оҡшағанмын. Ул да бит үҙенең эшенән башҡа нәмәне белмәгән. Фәйзи ағай уның һуғышта үлеп ҡалыуын үҙе тураһында уйлай белмәүенән, хәйләһеҙ булыуынан күрә. Миңә лә бит уның кеүек ғүмер буйы һалдат булаһы ғына ҡалған! Әҙәбиәтсе булыу миңә бик ауыр буласаҡ. Миңә үҙ яҙмышын бәйләгән кеше ни тиклем түҙемле булырға тейеш.

14 декабрь.

Иртәгә совет яҙыусыларының II съезы асыла. Уның нисек үтеүенә бөтә донъя ҡарап тора.

Мин был съезды М. Горький исемендәге институттың һуңғы курсы студенты булып, үҙемдең тәүге китабым менән ҡаршы алам. Ә тәүге съезд үткәндә мин ике йәшлек бала ғына булғанмын. Бынан һуң егерме йыл үткән.

Эш муйындан. Имтихандар килеп етте. Зачеттар башланды. Диплом өҫтөндә лә ултырырға кәрәк. Көҙгө бурыстар ҙа бар. Ноябрь һәм декабрь айында уҡылғандарҙы мин бер йыл буйына ла уҡый алмағанмындыр. Бик арытты. Аҡса яғы бик хөрт. Тик институтты тамамлау өмөтө генә дәртләндереп тора.

Диплом эшем — «Йүрүҙән». Семинарҙа ул хупланды. Подстрочниктар менән генә яҡларға тура килер, ахыры, тәржемәләр юҡ.

Кисә Шакир, Рәйес, Рафаэль һәм мин үҙебеҙҙең делегаттарҙы ҡаршы алырға төштөк. Поезд килеп туҡтау менән вагондарға ҡаршы йүгерҙек. Бына иң тәүҙә Әкрәм Вәли, уның артынан Әхнәф Кирәй, Рәшит Ниғмәти, Сәғит Агиш килеп төштө. Күрешеү уңайһыҙ булды. Улар беҙгә иғтибар ҙа итмәй. Алдан Хәниф Кәрим бара. Беҙ уларҙың сумаҙандарын тотҡанбыҙ. Автобуста Әхнәф Кирәй:

— Ниңә алғараҡ ултырманығыҙ?— тине.

Шакир:

— Сумаҙандарығыҙҙы ҡарайбыҙ, сәлдереүҙәре мөмкин! — тип ҡысҡырҙы. Бөтәһе лә көлөштө.

— Кем, Ғарипов ҡайҙа һуң?— Әхнәф Кирәй мине танымаған, күрәһең. Мин тимер юлсылар кейеме кейеп йөрөгәнгәлер инде.

Башҡа төрлө бер нисек тә беҙгә һүҙ ҡушыусы булманы.

Автобус «Гранд Отель» ҡунаҡханаһында туҡталғас, сумаҙандарҙы алып подъезға йүнәлгәйнек, былар, кереп йөрөмәгеҙ инде, тигән һымаҡ, сумаҙандарын алып та өлгөрҙө. Мин эстән генә:

— Һеҙме яҙыусылар?— тип ҡысҡырҙым. Ғәрлегемде баҫырға тырышып, уларҙы ололап ҡаршы алырға килеүебеҙгә бик үкендем. Юҡ, беҙ иң бәләкәй генә иғтибарға лайыҡлы инек!

Надяны күптәнән бирле күргәнем юҡ. Бик күрге килә. Беҙҙең арала бик сәйер мөнәсәбәт. Ул ярата мине. Мин уның был тойғоһон бик хөрмәтләгән кеүекмен. Яратҡан кеүекмен уны. Тик мин уны ла, үҙемде лә бер ни менән дә өмөтләндермәйем. Әммә ул булмаһа, мин үҙемде һаҡлай алмаҫ инем кеүек. Ул йылытты мине. Яҡтылыҡ бирҙе миңә, һәм иң ауыр мәлдәрҙә уның менән йыуандым, шатландым. Бәлки, мин уны үҙемдең ҡорбаным итәмдер. Ләкин мин уның менән үҙемде һәр саҡ сафланған кеүек тоям. Яңырам, көсәйәм. Ғәжәп! Ләкин был ҙур яратыумы? Белмәйем. Шулай ҙа ул яҡын, ҡәҙерле бик.

Бына ул үҙе лә килеп етте. Уның «һағындым» тиеүе мине шатландыра.

— Ниңә шулай һин миңә ғәзиз икән?— ти Надя. Ә мин көләм...

Надяларҙа сәй эстек, һүҙҙәр осраҡлы һәм мәғәнәһеҙ. Ләкин беҙгә яҡты, күңелле. Ҡайтҡанда һуң ине. Йырлай-йырлай атлайым. Бөтә донъяны ҡосаҡлап алғым, ҡарға ятып аунағым, йүгергем килә. Ярты төн уртаһында бер үҙем башҡа килгән

шиғырҙарҙы уҡыйым, йырлайым. Ғәжәп! Ниңә һуң ул бер башҡорт ҡыҙы түгел?

Уға әле мәктәп тамамларға, институтта уҡырға, ә миңә тулы тормош менән йәшәй башларға кәрәк. Мин уға үҙемдә булған нәмәнең тамсыһын да бирә алмайым. Беҙҙең арала бик бейек, бик ҡалын китаптар ҡәлғәһе тора. Был ҡәлғәне мин бөтә ғүмерем буйы тырышып һалдым, уны емереү мөмкин түгел — был минең тормошом. Мин уны үҙем торған баҫҡыҫҡа күтәрә лә, үҙем ул торған баҫҡыҫҡа төшә лә алмайым. Ә уның иң ҙур маҡсаты — минең менән бәхетле булыу ғына. Ләкин был минең өсөн бик аҙ, мин ҡомһоҙ...

15 декабрь.

Яҙыусылар съезы көндөҙгө 4-тә башланған. Йәштәрҙе тәрбиәләү, алмашсылар кәрәклеге хаҡында һөйләүҙәр ҡоро һүҙ генә булып ҡалыуын дауам итә. Әҙәбиәт институтының 150-нән дә артмаған студентын онотоп ҡалдыралар. Бик үкенесле!

16 декабрь.

Сурковтың съездағы телмәренән мин күберәкте көткәйнем. Ә ул библиографик отчет кеүегерәк. 20 йыллыҡ ҙур әҙәбиәтте теоретик яҡтан да дөйөмләштереү кәрәк ине. Анализ урынына ҡайһы бер ҙур яҙыусыларҙың исемдәре генә һанап сығылған.

Көндөҙ институтта Недоседкинды тикшерҙек. Ул беҙҙең күрше бүлмәлә Леонов тураһында алама һүҙҙәр әйткән. Горькийҙы (!) яҙыусы түгел тигән. Алексей Толстой тураһында: «Әгәр ҙә Толстой эмиграцияһан Советтар Союзына ҡайтмаған булһа, ул сит илдә яҡшыраҡ әҫәрҙәр яҙа алыр ине һәм «был бы более русским писателем»,— тигән. Рафаэль был һүҙҙәрҙе ҡағыҙға яҙып ҡуйған. Ә Егор Исаев, беҙҙең бүлмәгә инеп, Рафаэлдән ни ишеткәнен һорашып ултырған да иртәгәһенә был хаҡта курс парторгы Ванцет Чукреевҡа әйткән. Шунан — йыйылыш. Унда мине Шәрип Әлбәриевтең, «башҡорт» һүҙенә баҫым яһап, Рафаэлде ошаҡсылыҡта ғәйепләүе ғәжәпләндерҙе. Бик асыуым килде. Рафаэлдең һүҙ йөрөтә торған сифаты юҡ!

17 декабрь.

Съезда Ғәйнан ағайҙың Сәғит Агишты үҙ әҫәрҙәрендә автобиографияһын яҙыуҙа ғәйепләүе көлкө. Әҙәби әҫәргә былай ҡарау Горькийҙы трилогияһы өсөн ғәйепләүгә килтерер ине.

21 декабрь.

Иртә менән бөтә газеталарҙа ла — Сталин рәсеме. Ул үлгәндән һуң уның исеме элеккесә яңғырауынан ҡапыл икен-

се төрлө ишетелә башлағайны. Газета-журналдар ҙа тынып ҡалғайны. Ә халыҡта был сәйерерәк тойғо тыуҙырҙы булһа кәрәк. Редакторҙар шәхес культынан ғәҙәттән тыш өркә башланы.

22 декабрь.

Институтта Анна Зегерс һәм Эрнест Фишер менән осрашыу булды. Улар съезд тәьҫирҙәре менән уртаҡлашты.

Фишер Шолоховтың съездағы сығышы менән теләктәш түгел икәнлеген белдерҙе. Мин үҙем Шолоховтың телмәрен тыңлай алмай ҡалдым, шуға ла билдәле бер фекерем юҡ.

Съезға беҙ, студенттар, инә алмайбыҙ. Ә шул уҡ ваҡытта институттағы ниндәйҙер лаборанткалар, машинисткалар унан ҡалмай йөрөй! Бик асыу килә.

Кис Рафаэль, Шакир һәм мин ГИТИС ҡыҙҙары янына барып килдек. Атнабаева Зинира — бик батыр ҡыҙ. Үҙен иркен тота. Ул — «Ҡыҙыл таң», мин «Совет Башҡортостаны»нда эшләгән сағыбыҙҙа ай ярым тәҙрә аша ҡарашып ултырҙыҡ, әммә мин уны яҡындан күргәнем юҡ ине. Мин кис буйы ҡыҙҙар һымаҡ уңайһыҙланып, һөйләшергә һүҙ тапмай ултырҙым. Ярай әле Шакирҙың теле һөйәкһеҙ! Сарлап ҡуйған кеүек. Ни генә әйтһә лә, урынында булып сыға.

Гөлсәсәк Мөбәрәкова бик тәмле сәй менән һыйланы. Тауышы иҫ киткес! Йомшаҡ, яғымлы. Әсәһенә — Рәғиҙә Янбулатоваға — бик оҡшаған. Мин уларҙың өйҙәренә барып йөрөгән саҡта, Гөлсәсәк бөтөнләй бала ғына ине. Күҙ алдымда уның ҙур бер ҡурсаҡ ҡосаҡлап йөрөүе ҡалған. Ә хәҙер ул һоҡланғыс ҡыҙ инде! Уға хатта Рафаэлдең дә күҙе төшкәс, мин был баһамдың дөрөҫлөгөнә ышанам.

Бөтә һөйләшеү бик тәбиғи килеп сыҡты. Бик күп көлдөк.

Өс ҡыҙ — өсөһө өс төрлө. Яңы йылды ҡаршылағанда мин уларҙы бик ныҡ күҙәтергә тейешмен. Надя мине бик ныҡ белә инде. Бер ҡарауҙан уҡ минең «серҙе» күреп аласаҡ.

23 декабрь.

Съезға инә алманым! Ишек төбөндә бер сәғәттән дә артығыраҡ тилмереп тороу шул тиклем ғәрләндерҙе. Иртәгә һуңғы тапҡыр ынтылып ҡарарға ла Мостафа ағайҙы осратырға кәрәк. Шакир, Рәйес, Рафаэль билет тапҡандар, мин ауыҙ асып ҡалдым. Йүнһеҙ!

24 декабрь.

Съезға инә алманым. Мостай Кәримде күреүҙең файҙаһы булманы. Рәшит менән ҡунаҡханаға барып, Сибғәт Хәким

менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул беҙҙе ресторанға алып инеп һыйланы. Шунда Мостай Кәрим менән Сәйфи Ҡудашты күреп һөйләштек.

— Алданыраҡ киләләр уны,— тине Мостафа ағай.— Китабына үҙем рецензия яҙырға ла ҡанатланып ҡуйғайным әле,— тине ул.

Сибғәт Хәкимгә инеп, татар яҙыусылары менән күрешеп ҡалдым. Абдрахман Әпсәләмов, Зәки Нури, Фатих Хөсни, Ҡәүи Нәжми менән таныштым. Зәки Нури, уҡып бөткәс, Ҡазанға эшкә кил, тип ҡысҡырҙы. Татарҙар үҙҙәренә эләктерергә генә торалар, юҡ инде,— тип ҡуйҙым эстән генә. Ҡәүи Нәжми Шолоховтың сығышынан риза түгел.

— Партия менән былай ҡапма-ҡаршы килеү шәп түгел инде! — тип ҡыҙып һөйләне.

Сибғәт Хәким бик ябай, йомшаҡ кеше. Бик оҡшаны.

25 декабрь.

Роберт Бернсты уҡып яттым. Рафаэль съездан бик һуңлап ҡайтты. Ул Назар Нәжмигә Мәлих Харистың йыйынтығын насар сығарыуын әйткән. Ә Нәжмигә был оҡшамаған. Беҙ үҙебеҙҙең яҙыусыларҙың бик бәләкәй кеше булыуҙары тураһында һөйләшеп яттыҡ.

Бик күп студенттар Шолоховтың сығышына табынып һөйләй.

13 ғинуар.

«Тымыҡ Дон»ды уҡыйым. Элек уҡымаған өсөн үкенмәйем. Миңә хәҙер уҡыу яҡшы. Тик ваҡыт ҡына тар. Имтихандар... Институттағы һуңғы көндәр. Ә унан һуң?.. Күҙ күрер. Хәҙергә эштәр хөрт. Стипендия юҡ. Ә бурыстар ике меңдән ашып китте. Шулар йөрәкте өйкәп тора.

Ҡайҙа эшкә ҡайтырға? «Совет Башҡортостаны»на ҡайтһам, хәбәрсе партия ағзаһы булырға тейеш. «Ленинсы» газетаһында бик күңелһеҙ буласаҡ. Ниндәйҙер ҡыҫыр газета был. Ә миңә тормош кәрәк!

Кисә Надяны Киев вокзалына барып ҡаршы алдым да электричкала бергә ҡайттыҡ. Вокзалда уға ниндәйҙер бер иҫерек егет бәйләнеп маташа ине. Надя, мине күреп, ҡыҫҡырып ебәрҙе. Мин тыныс ҡына барҙым да, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, уның ҡулынан тотоп, етәкләп алдым. Надя ҡуркҡан. Минең килеп сығыуға шатланды.

Поселок осонда ғына аҫты йолҡонған бесән кәбәнен табып алып, уның аҫтында бик оҙаҡ ҡосаҡлашып торҙоҡ. Төн йылы һәм тын. Ваҡыт-ваҡыт эттәр өргән тауыш ишетелә, төнгө самолеттар гөүләп уҙып китә. Кәбәндән хуш еҫ аңҡый. Надяның ҙур ҡара күҙҙәрендәге ялҡын томалана һәм оҙон ҡара керпектәре аша ҡомһоҙ ҡараған был күҙҙәрҙе мин ирендәрем менән ябам...

14 ғинуар.

«Тымыҡ Дон»дың беренсе китабын уҡып сыҡтым. Шолохов — ниндәй көс! Күптән минең бындай китапты уҡығаным юҡ ине. Ни тиклем тормош!.. Һаранлыҡ эсендә иҫ киткес байлыҡ! Бөйөк художник Шолохов!..

Иртән тороуға буран ҡотора. Унда ниндәйҙер матурлыҡ бар. Тәбиғәттең ғәҙәттән тыш күренештәре миңә һәр саҡ матур күренә. Күңелдә лә дауыл ҡотора.

Рафаэль менән беҙҙең дуҫлыҡ юғала бара. Беҙ бик оҙаҡ, ауыр дуҫлаштыҡ. Хәҙер иһә беҙҙең арала уртаҡ булған тик бер генә нәмә ҡалды — Әҙәбиәт. Ләкин хәҙер беҙ әҙәбиәтте лә ике-

бөҙ ике төрлө аңлайбыҙ шикелле. Ҡайһы саҡта мин үҙемде әҙәбиәт кешеһе итеп тоймайым. Быға ниндәйҙер ғәҙәттән тыш кешеләр кәрәк кеүек. Ә мин?.. Ҡыйын миңә үҙ-үҙем менән көрәшеү. Үҙемә үҙем ауыр мин. Институттағы был һуңғы йыл ниндәйҙер буталсыҡ, аңлайышһыҙ йыл булды. Ә китабымдың сығыуы шиктәремде көсәйтә төштө. Яҙа алырмынмы мин? Әллә был тәүге китап һуңғыһы ла буласаҡмы? Белмәйем. Бары ҡайҙалыр йөрәктең иң төбөндә ниндәйҙер өмөт яҡтыһы бар. Шул ғына мине йылыта.

Төрлө яҡтан да ҡурҡыныс бер ҡамау эсендә ҡалдым. Иң ауыры — яңғыҙлыҡ. Буш, мәғәнәһеҙ, һалҡын яңғыҙлыҡ! Тик мин уны бөтәһенән дә йәшерәм.

Бөтәһе лә әҙәбиәт өсөн башланды, бөтәһе лә әҙәбиәт өсөн бөтә... Бүтән бер ниндәй эш тә шул тиклем кешенең иң ғазаплы, иң ауыр, иң нескә тормошона әйләнмәйҙер... Был — ҡот осҡос ауырыу!..

24 ғинуар.

«Тымыҡ Дон»ды уҡып бөтөрҙөм. Һоҡланып бөтә алмайым. Ярай әле, элек уҡымағанмын. Ҙур мәктәп! Көткәндән күберәк алдым. Көнө-төнө Шолохов геройҙары менән йәшәнем һәм бына бөгөн уларҙан айырылыу моңһоу ҙа, шатлыҡлы ла. Миңә хәҙер 23 йәш. Ә Шолохов 23 йәшендә «Тымыҡ Дон»дың ике китабын сығарған!

Китаптың һәр юлында поэзия һәм кешелеклелек! Тик тәбиғәттә һүрәтләгән биттәрҙе бергә йыйып, айырым бер китап итеп сығарғанда ғына ла ғәжәп бер поэма булыр ине. Тәбиғәт үҙе генә лә китаптың үлемһеҙ бер геройы.

Ярты ай буйы мин бөйөк һәм ҡот осҡос тормошта йәшәп сыҡҡан кеше кеүек булдым.

Һуңғы главаны тағы бер ҡабат уҡып сыҡтым, яҡшылап ҡырындым да Надяға йүгерҙем. Өйҙә юҡ ине.Станцияға йүгерҙем. Поезға ултырып киттем. Надя вагонда юҡ. Ә минең уның менән китаптан алған тәьҫораттарымды уртаҡлаша һалғы килә. Надя Переделкинола поездан төшкәс тә күренмәне. Икенсе поезды көттөм. Ул юҡ. Тағы өйҙәренә йүгерҙем. Тәҙрәләренән генә ҡараным да тағы станцияға төштөм. Поездар үтеп торҙо, ләкин ул күренмәне. Бәлки, икенсе юлдан ҡайтҡандыр тип, тағы уларға йүгерҙем. Ләкин ул һаман да юҡ. Кире станцияға киттем. Һуңғы поезд менән килгән кешеләр араһында ла күренмәне. Кире йүгерҙем. Буран ҡотора. Ә миңә эҫе. Надяны өйҙәренә етер саҡта ғына ҡыуып еттем. Ул бик ғәжәпләнде. Өйгә инеп сәй эскәндә мин үҙ-үҙемдән көлөп тик ултырҙым.

— Ниңә йылмаяһың?— ти Надя.

— «Тымыҡ Дон»ды уҡып бөтөрҙөм!— тим. Ләкин хәҙер уға был хаҡта һөйләү нисектер ҡыҙғаныс тойолдо. Байрам үткән һымаҡ тойолдо. Надя ҡулдарын минең тубыҡҡа һалып:

— Һинең ирендәрең ниндәй киҫкен, ә үҙҙәре балаларҙыҡы кеүек!— тине.

Шунан ҡапыл ғына торҙо ла, «Предшественник» романын алып килеп, минең ҡосаҡҡа һыйынып, Ольга Сократовнаның һәм Чернышевскийҙың ғаилә ҡороп бергә йәшәй башлаған мәлдәрен, Чернышевскийҙың Ольга Сократовнаны офицерҙарҙан көнләп бик ныҡ киҫереүен һүрәтләгән главаны уҡыны. Ниңә? Белмәйем. Ләкин Надяның был хаҡта уҡыуы миңә бик оҡшаны.

Нимәһе менән мине үҙенә шулай бәйләй һуң ул? Яратыумы был, түгелме — һаман да аңламайым. Бына бер йыл инде ул минең уйҙан сыҡҡаны ла юҡ. Ғәжәп. Баш етмәй хатта.

26 ғинуар.

Кис Егор Исаев менән бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Йыр, тәбиғәт (асфальт, үлән), әҙәбиәт һәм тормош, тәбиғилек һәм яһалмалылыҡ, мөхәббәт һәм ахмаҡлыҡ, ат һәм самолет, генерал ҡатындары, диңгеҙ, урман, «Тымыҡ Дон» һәм «Күтәрелгән сиҙәм», тормошто баһалай белеү тураһында һөйләштек. Шундай фекергә килдек:

— Кеше үҙенең характерын тормош эсендә ҡайнап, көрәштә тәрбиәләргә тейеш.

— Ахмаҡлыҡ һәр саҡ күҙгә күренеп йөрөй, һәр саҡ тәлмәрйен кеүек һикереп сыға, ә аҡыл тәрәндә ята, ҡыҫҡырып тормай.

— Яҡшыны эҙләгәндә насарлыҡ күберәк осрай. (Мин Яңы йылға ҡаршы шыршы эҙләгәндә насарҙарын күп күргәнем хаҡында һөйләнем.)

— Яратҡан кеше ваҡлыҡты ғәфү итмәй. Уға яратҡан кешенең бәләкәй генә етешһеҙлеге лә ҙур булып күренә.

— Үҙеңде яҡшы итеп күрһәтеү яҡшы булыуға ҡарағанда бик еңел.

— Атты машина үлтерә алмай. Уны кешенән айырырға кәрәкмәй.

— Эшһеҙ йәшәгән генерал ҡатындары диңгеҙҙе лә ванна итеп күрә. Тормош уларға комфорт. Уларҙың ҡайғыһы ла, шатлығы ла бәләкәй.

— Йәш тәбиғәтле булмаған кешенең яҙыусы булыуы мөмкин түгел. Яҙыусы һәр саҡ яңыны асыусы, ноҡлана белеүсе һ. б.

Был беҙҙең һөйләшеүҙең схемаһы ғына — мин яҡшылап яҙа алмайым. Быны тойорға кәрәк.

27 ғинуар.

Кис Рауил килде. Электричкаға оҙатып ҡуйҙым да икенсе электричка менән киттем. Кешеләрҙе ҡарап йөрөнөм. Ҡыҙыҡ — бер аҙ бер ҡайҙа ла сыҡмай торһам, нисектер кешеләрҙе күреп йөрөгөм килә. Бер ниндәй эшһеҙ, электричкала йөрөйөм. Күңелгә нимәлер тапҡан кеүек булам.

28 ғинуар.

Рифҡәт Баязит Бикбайҙың минең китапҡа яҙған рецензияһын ебәргән («Ленинсы», 22 ғинуар, 1955) — «Тәүге аҙымдар». Шатланырға ла, ҡайғырырға ла белмәйем. Сөнки беҙҙә рецензиялар нисек яҙылыуын алдан уҡ белеп торам. Тик үҙемдең китап тураһында Баязит Бикбай яҙыуы ғына йыуата. Бала саҡтан уҡ яратҡан шағирым. «Салауат», «Ҡарлуғас» һәм «Диңгеҙ һыуы ниңә тоҙло булған?» әҫәрҙәре өсөн. Ләкин рецензияһының тоҙо юғыраҡ. Үҙемде ғазаплаған һорауҙарға яуап тапманым. Кем мин? Нимәлә минең үҙ тауышым? Бармы был тауыш? Әҙәбиәттә үҙемде таба алырлыҡмы мин? Нимәлә минең үҙенсәлегем? Рецензия йылы яҙылған. Ләкин минең өсөн йылыһы аҙ. Уҡыусылар өсөн дә кәрәкле фекер юҡ. Фәҙәттәге дежур рецензия яҙыуҙан Баязит ағай ҙа ҡотола алмаған.

Рифҡәт хат эсендә Рафаэлдең поэмаһына яҙылған мәғәнәһеҙ бер рецензия киҫәген дә ебәргән. Әҙәбиәттең нимә икәнен дә аңламаған ниндәйҙер Карманов тигән кеше яҙған.

Әгәр ҙә ул «Әҙәби Башҡортостан»да баҫыла ҡалһа, уны донъяға сығарған кешеләр алйот буласаҡ. Рафаэлгә уны бирмәҫкә лә иткәйнем, бирҙем. Күтәреп өйрәнһен ауыр һүҙҙе лә.

28 ғинуар.

Шолоховтан һуң Макаренконы уҡырға кәрәк, тип уйланым. Ул минең өсөн — Горькийҙан һәм Шолоховтан һуң өсөнсө яҙыусы.

Бала — тормош сәскәһе. Уны тулы тормош үҫтерергә тейеш. Сәскә яңғыҙ үҫмәй. Сәскә сәскәләр араһында үҫә. Сәскә яҡтылыҡһыҙ үҫмәй — уға көн кәрәк. Көн кеүек яҡты аҡыл менән ҡарау — ата-әсәнең изге бурысы. Сәскә менән һоҡланыу ғына етмәй. Һуңынан был һоҡланыу өсөн иларға тура киләсәк.

6 февраль.

Миңә Макаренконың «Ата-әсәләр өсөн» китабын тәүге курста уҡ уҡырға кәрәк булған. Беҙгә, яңы кешенең тыуыуы тураһында яҙасаҡ кешеләргә. Макаренконың был китабын

уҡымайынса тороп, кешеләр тураһында яҙырға мөмкин дә түгел, яҙыу өсөн хаҡыбыҙ ҙа юҡ.

Бөгөн иртә менән Макаренконың «Педагогик поэма»һын башланым. Бөтәһе лә таныш. Уның тәүге өлөшөн мин ҡасандыр уҡығайным. Ләкин иғтибарһыҙ уҡығанмын. Китапты уҡый белмәү күпме ваҡытты әрәм итә! Үҙ өҫтөңдә системаһыҙ эшләүҙең бер ниндәй ҙә файҙаһы юҡ. Бөтәһе лә бушҡа сыға. Хәҙер минең өсөн иң беренсе урында — система!

Декабрь һәм ғинуар арытты. Бер аҙ ял итеп алырға булдыҡ. 5 көн буйы бер ни уҡыманым. МДУ-нан Диҡҡәт Бураҡаев килеп сыҡты. Өс көн уның менән бергә булдыҡ. Туйғансы һөйләштек. Китапхана институтына, үҙебеҙҙең Башҡортостан ҡыҙҙары янына, барҙыҡ. Ҡыҙҙар араһында булыу миңә һәр саҡ еңеллек бирә. Күңелгә яҡты, иркен, йылы булып ҡала. Ҡыҙҙарҙан башҡа йәшәп, үҙеңдәге иң матур кешелегеңде туңдырып ҡуйырға ла мөмкин. Был күрешеү миңә бик оҙаҡ төрмәлә ҡояшһыҙ йәшәгән кешенең ҡапыл иреккә сығып, ҡояшҡа ҡарауы менән бер булды. Һәм мин донъяны бөтөнләй икенсе төрлө күрҙем!

Диҡҡәт менән милли мәсьәлә тураһында ла һөйләштек. Бында политиканың иң нескә урыны. Яңылышмаҫ өсөн ғәҙәттән тыш уйлап эш итергә кәрәк. Юҡһа, һинең иң изге, иң яҡшы тойғоларың да хатаға илтергә мөмкин. Иң аҡыллы, ҙур кешеләр ҙә был мәсьәлә буйынса әрәм булғандар.

Диҡҡәт менән ГИТИС ҡыҙҙары янында ла булдыҡ. Был ете ҡыҙҙың тормошо бик ҡыҙыҡлы. Шәүрә, Рәмзилә, Фәрдүнә, Зинира каникулды бында үткәрә, ә Гөлсәсәк, Роза, Гүзәл Башҡортостанға ҡайтып киткән.

Һөйләштек, ҡунаҡ булдыҡ, киноға барҙыҡ. Кискә табан Зинираны алып «Буревестник» катогына киттек.

Ете ҡыҙҙың һәр береһен ныҡлап белге килә. Араларында иң аҡыллыһы һәм иң матуры — Фәрдүнә. Бай тойғоло һәм тормошто ла күберәк күргән булырға тейеш. Шиғырҙар ҙа яҙып ҡараған. Мин кешенең шағирлығы алдында һәр саҡ табынам. Шиғыр яҙған кешелә тормошҡа һәм кешеләргә ҡарата талап та башҡасараҡ. Ул бәхеттең ҙурын теләй, ә бәләкәйенә риза түгел. Тормошто ул нығыраҡ ярата һәм уның нәфрәте лә ҙурыраҡ була. Был Фәрдүнәнең күҙҙәрендә лә бар. Уның күҙҙәре ниндәйҙер эске донъя аша кешегә тәрән ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай һәм кешене үтә күргән кеүектәр. Уларҙа ниндәйҙер йәшлек ялҡыны бар, «миңә бик ҙур бәхет кәрәк!» тигән кеүек улар. Фәжәп матур күҙҙәр!

З-ның күҙҙәренә сәғәттәр буйы ҡарарға ла мөмкин, ләкин бер ниндәй уңайһыҙланыу ҙа, ҡәнәғәтләнеү ҙә тоймайһың. Үҙе ҡыйыу, ләкин был ҡыйыулыҡта ниндәйҙер бушлыҡ. Бәлки,

уның эске матурлығы бик нык йәшерелгәндер? Бөтә кешенең дә эсендәге тышында булмай бит. Бәлки, ул сәхнәлә бик матур булыр? Йырында уның ниндәйҙер бик тәрәндән сыҡҡан моң бар кеүек. Ләкин был моң бик ҡыйыуһыҙ! Фәжәп! Тышҡы күренешенә ҡапма-ҡаршы бер сифат.

Ете ҡыҙ араһында берәүһе — ғәҙәттән тыш яланғас. Ҡыҙҙарға хас тотанаҡлылыҡ юҡ. Уны минең йоҙроҡтарым менән иҙеп ташлағым килде. Мин уның менән үҙ телемдә һөйләшергә мәжбүр булдым. Бик ауыр булды һөйләшеү. Ләкин көтмәгәндә миңә бер яңылыҡ асылды: ҡапыл миндә уға ҡарата йәлләү тойғоһо уянды, уның йомшарып ҡалыуынан ниндәйҙер сәйер хөрмәт тә тыуҙы. Сөнки ул үҙенең кәмселеген үҙе лә һиҙҙе. Әгәр ҙә уға ысын күңелдән ярҙам итеүсе кеше булһа, уның киләсәгенә ҙур ышаныс бар! Уға коллективтың сәләмәт ифтибары кәрәк. Бының өсөн ете ҡыҙҙың бик яҡшы коллектив булып ойошоуы мөһим!

Был минең тәүге фекерҙәрем генә. Мин уларҙың береһен дә әле яҡшылап белмәйем. Бәлки, мин бөтөнләй яңылыш уйлайымдыр? Кеше ғәҙәттән тыш ҡатмарлы.

Бына — Гөлсәсәк (Мөбәрәкова).

— Я хочу, чтобы вы сегодня были моим кавалером!

Мин хатта ҡыҙарҙым. Ярай әле шыршы ултырған залда ҡараңғы ине.

— Юҡ, мин кавалер була белмәйем!

Гөлсәсәк, минең кире яуаптан хәтере ҡалғандай, Рафаэль янына китеп барҙы. Ә Рафаэль, әлбиттә, ысын кавалер! Ул ҡыҙҙар мөхәббәтендә йөҙөп өйрәнгән инде! Ҡыҙҙар уны бер күреүҙән оҡшата. Ул — ут, ҡыҙҙар — күбәләк. Йөрәге менән янмайынса ла, яндыра.

Үҙемдең йүләр хәлдә тороп ҡалыуҙан һуң бик оҙаҡ уйландым. Бәлки, Гөлсәсәк, үҙе тураһында бөтә ғүмере буйына ла шулай уйламағандыр.

Был тиклем ҡыйылығы уны бәхетле итерме? Ниндәй матур бала әрәм булырға мөмкин! Ә үҙенә һоҡланып бөтмәҫлек! Әсәһе кеүек матур, ләкин унан да йылыраҡ.

— Әйтегеҙ әле, Рәми ағай, мин нисек күренәм һеҙгә?

Уның күҙҙәре шундай һораулы ҡарай, әйтерһең минең яуабымдан уның бөтә яҙмышы хәл ителә. Ниңә шулай һорай ул минән? Шундай ғәмһеҙ балала ололарға ғына хас күҙәтеү булырға мөмкинме? Әйтерһең, минең бөтә уйлағаным йөҙөмә сыҡҡан... Эсемдәген йәшерә белмәүемә үземә-үзем асыуландым хатта. Шул уҡ ваҡытта Гөлсәсәктең яғымлы, уйсан һоро күҙҙәренә, ҡалын һәм тулҡынланып торған сәстәренә, бәрхәт кеүек йомшаҡ, бейек, киң, ап-аҡ маңлайына, баланыҡы кеүек наҙлы ирендәренә һоҡланып бөтмәҫлек. Һылыу һыны боронғо

гектарҙы ла һоҡландырырлыҡ. Минең уға үҙемдең шундай тупаҫ ҙур ҡулдарым менән ҡағылып ҡуйыуым ғына ла ҙур оятһыҙлыҡ булыр кеүек. Гөлсәсәк иң оҫта художниктың бөтә илһамын биреп эшләгән, ғүмер буйы ижад иткән картинаһы кеүек. Уға ҡулыңды тейҙереү ҙә — художниктың намыҫын бысратыу һымаҡ. Миңә ул — һоҡланыу өсөн генә яратылған изге йән эйәһе. Шунлыҡтан мин уның менән күрешкәндә лә уңайһыҙланам, уның ап-аҡ һәм матур ҡулын бик ҙур һаҡлыҡ менән генә тотам. Әйтерһең, бик ҡиммәтле, нескә бияләны нығыраҡ ҡыҫып ҡуйыуҙан бөтә нәмә юҡҡа сығырға мөмкин.

Мин бына ниндәй ахмаҡ һүҙҙәр яҙып ултырам! Ә үҙемә бөтә күрелгәндәрҙе кисереү рәхәт тә. Миндә ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙҙар культы! Мин өндәшмәй генә табынам уларға.

Бәлки, был ете ҡыҙ тураһында миңә киләсәктә яҙырға ла тура килер. Бәлки, улар башҡорт сәнғәтен күтәреүҙә ҙур эш эшләрҙәр. Нисектер быға ышанғым килә.

Мин тиҙҙән ҡайтып китәсәкмен. Ә Рәйестәр ҡала. Беҙҙең арала ысын коллектив булманы.

Тәүҙә мин уларҙы Әҙәбиәт институтына саҡырып хаттар яҙғанда яңы, ҙур бер маҡсат менән тупланырбыҙ тип хыяллана инем. Ләкин... был булманы. Мин инде институт менән яңғыҙ ғына хушлашыу алдында. Ғәжәп, беҙ хәҙер байрам мәжлестәрендә генә аралашабыҙ. Тимәк, беҙ бик бәләкәй әле.

9 февраль.

Өфөнән Шакир минең өсөн бик шатлыҡлы хәбәр алып килде: Таңһылыу Күсимова ГИТИС-ҡа башҡорт телен уҡытырға ебәрелә! Таңға ҙур хат яҙғым килде. Таңһылыу Мәскәүҙә, Луначарский исемендәге театр сәнғәтенең башҡорт студияһында, башҡорт телен уҡытасаҡ! Был, тарихи күҙлектән ҡарағанда, иҫ киткес! Ул, минеңсә, иң кәрәкле уҡытыусы буласаҡ.

10 февраль.

Өфө яңылыҡтары. Таң тураһындағы хәбәр мине бик тулҡынландырҙы. Йоҡо ҡасты. Төнө буйы уҡып сыҡтым. Тәҙрәгә ҡараһам, бөтә донъя эҡиәттәге кеүек: аҫтарҙан күҙҙе лә алғы килмәй. Яҙып аңлата алмаҫлыҡ матурлыҡ. Ҡапыл Рафаэлдең будильнигы шылтыраны ла йөрәк һыҙлап ҡыҫыла башланы. Хәҙер ҡапыл минең өсөн эле күҙәткән матурлыҡ юғаласаҡ. Әйтерһең, ҡалайҙы тимер менән сыялар һәм ул һинең тешеңә тейә. Дуҫымдан туйыуым ғәжәп! Бына икенсе ай инде һөйләшә лә алмайым. Ниңә мин шулай? Хәҙер мин бөтөнләй яңғыҙ.

Имтихандарҙы бөткәс тә тормошто яңынан ҡарап сығырға кәрәк. Уф, уф, уф!.. Үҙемде үҙем аңлай алмайым.

Бер көндө ярты төндә үҙемде көҙгөнән ҡарап торҙом: күҙҙән йәш сығыр урынға — йылмаям! Күҙҙәр эскә батҡан, төптәре күгәреп, сирышып бөткән. Ҡыҙылығы алынған ҡарт ҡыҙ кеүекмен. Мин ниндәйҙер хыялыйға әйләнеп барам.

11 февраль.

Иван Николаевич Серегин тағы ла киҫәтеү яһаны:

— Йә институттан сығарабыҙ, йә дүртенсе курсҡа төшөрәбеҙ, Ғарипов. Отличник булып килдең дә ҡапыл боҙолдоң. Кем ғәйепле? Мартҡа тиклем бөтәһен дә хәл ит!

Институттан ҡайтҡас, «Педагогик поэма»ны уҡып бөтөрҙөм. Күп уйланым, күп иланым, күп көлдөм мин был китап өҫтөндә. Әллә үҙемдең һуңғы ваҡытта сепрәккә әйләнеүҙән, әллә поэманың көсөнән был? Белмәйем. Был китапты бынан биш йыл элек уҡыған булһам, пединститутта документтарҙы алмаҫ инем.

Иртәгә — тыуған көнөм. 1932—1955. Аҙ ваҡыт түгел. Ләкин Добролюбов был йәштә бөтә Россияны аҡылға өйрәткән. Мин уның буйынса имтихан бирергә лә ҡурҡып йөрөйөм. Яңғы аңланым: ни тиклем наҙан әле мин!

12 февраль.

Бына Кремль куранттары төнгө 12-не һуҡты. 12 февраль башланды. Бүлмәлә тынлыҡ. Барыһы ла йоҡлай. Аҡ ҡар юрғаны күм-күк төҫкә инеп, ҡатып ҡалған. Ай юҡ — ҡараңғы һәм тыныс. Сәғәт ашыға. Үткән йылдар сәғәт кеүек уҙа. Уларҙың һәр береһендә кешеләр, халыҡтар, илдәр яҙмышы. Шулар эсендә минең дә яҙмышым бар. Мин дә йәшәйем донъяла. Ҡыҙыҡ. Ләкин йәшәй белмәйем. Бәләкәй генә нәмәләрҙә лә аҙашып ҡалам. 23 йәш миңә. Бына хәҙер 24-енсеһе башланды. Ҡыҙыҡ. Үҙемде бик ярлы тоям. Аҙ йәшәгәнмен һәм яңғыҙмын. Минең үҙем теләгән ысын дуҫым да, үҙем теләгән бөтә йөрәктән яратырлыҡ ҡыҙым да юҡ. Был ҡыҙыҡ ҡына түгел, ҡурҡыныс та.

17 февраль.

Горькийҙың «Клим Самгиндың тормошо»н уҡыйым. Мин был китапты уҡыр өсөн биш йыл әҙерләндем. Унда тормоштоң бөтә йөйҙәре ярылып ята. Беренсе курста, әлбиттә, мин уны аңламаған булыр инем.

Өфөнән Марат килде. «Йүрүҙән»де 5 дана килтергән.

19 февраль.

Горькийҙы уҡығанда үҙеңдең бер ни ҙә белмәүеңде нығыраҡ тояһың. Ләкин был ҡурҡытмай, дәртләндерә генә. Кеше — ғорур яңғырай! Иларға, һыҡранырға, быҫҡырға кәрәкмәй. Был — үҙ-үҙеңдән көлөү, мыҫҡыл итеү, матурлығыңды зәғифләү; үҙ-үҙеңде уйлап сығарыу һәм шул уйҙырмаға ышандырыу кешене Клим Самгинға әйләндерә, һуҡырайта. Хыянатсы, һатлыҡ йәндәр, ҡәбәхәт кешеләр шунан барлыҡҡа килә. Тап улар яһалма һәм мәғәнәһеҙ тормош уйлап сығара. Уларҙың мөхәббәте лә уйлап сығарылған, тәбиғи түгел. Улар кеше ғазабынан ләззәт табыусы садиҫка әйләнә. Уларҙың девизы: донъяла мин генә! Мин бөтәгеҙҙән дә аҡыллы һәм өҫтөн! Мин генә бәхеткә хаҡлы! Мин, мин, мин!

Был иң ерәнгес ҡоллоҡ! Бындай тип — Клим Самгин. Ул күктән төшмәгән. Уның социаль өйө бар. Ул шунда тыуған, шунда тәрбиәләнгән. Уның философияһы ла яңы түгел, ҡолдар һәм хужалар барлыҡҡа килгәндән бирле йәшәй һәм төрлө-төрлө «изм»дарға барып тоташа. Ләкин уның һуңғы «изм»ы — фашизм.

Ниңәлер беҙҙә Клим Самгин тураһында һөйләшмәйҙәр. Ләкин мин был хаҡта аңлатыуҙы үҙемдең бурысым итеп тоям.

28 февраль.

Дипломға тотондом. Тәржемәселәр булманы. Булмаһын әйҙә! Телде белмәгән тәржемәселәргә инәлеп йөрөгәнсе, үҙем тәржемә итергә булдым. Бары менән байрам.

Әсғәт (Әшрәпов) 50 һум аҡса ҡалдырған. Ярап төштө. Бындай саҡта 50 тине лә ҡәҙерле!

Рафаэль менән бөтөнләй ара өҙөлдө. Мин, бер алйот кеүек, алдандым. Мариятҡа мин үҙемдең саф мөхәббәтемде бирep алданһам, Рафаэль мине үҙенең меҫкен дуҫлығы менән алданы. Фәрләндерә.

16 март.

Бер тин аҡса ла юҡ. Кисә лә, бөгөн дә ашаманым. Башҡа бер уй килде: ниндәй хаҡҡа булһа ла, шинелде һатырға! Дядя Сережаға барҙым да кейҙерҙем. 100 һум аҡса тап! Ул ышанманы хатта. Уңайһыҙланды. Ләкин алды.

17 март.

Надяның әсәһе Куйбышевҡа китте. Ләкин уға әсәһе булмағанда барыу нисектер ҡурҡыта. Һуңғы ваҡытта беҙ бик

яҡынайҙыҡ. Был көндәрҙә ул ғына миңә берҙән-бер йыуаныс. Уның яратыуы миңә нисектер ҡәҙерле, йылы, яҡты.

Әгәр ҙә мин уны үҙемдең яҙмышҡа бәйләһәм, уны ла, үҙемде лә ғазаплаясаҡмын. Мин уға үҙемдең бөтә яратыуымды бирә алмайым. Ҙур яратыу ҡайҙалыр тәрәндә кем өсөндөр һаҡланып ятҡан кеүек. Мин тағы ла аҡылдан яҙып ярата алырмын кеүек. Ҡасан? Кемде? Белмәйем. Бәлки, тәүге тойғолар кире ҡайтмайҙыр? Ләкин миңә тиҙерәк өйләнергә кәрәк. Надя кеүек бер кем дә мине шулай үҙенә тартҡаны юҡ ине әле. Ләкин уның менән яҡынайған һайын уны һаҡлағы килә.

18 март.

Ҡатын-ҡыҙ тураһында уйлағанда мин иң ғазаплы уйҙар кисерәм хәҙер. Бик күптәрҙең үҙҙәренә тик ҡатын-ҡыҙ ғына итеп ҡарауҙары асыуҙы килтерә. Мин шундай ваҡсыл һәм һайлансыҡ, үҙем эҙләгән ҡыҙҙы табыуға ышанмай ҙа башланым: был бер йөк бесән эсенән эҙләү менән бер.

23 март.

«Клим Самгиндың тормошо»нда Горький башҡорттарҙы бик йыш телгә ала. Был хаҡта минең уҡығаным юҡ ине әле. Шулай уҡ Горькийҙың «Телһеҙ» легендаһын да яңынан ҡарап сығырға кәрәк.

«Клим Самгиндың тормошо»ндағы башҡорттар хаҡындағы фекерҙәр Ғаяз Исхаки һәм Ғ. Баттал фекерҙәренә оҡшаш. Шовинизм ни хәтлем бысраҡ һәм түбән! Күңел болғандырғыс! Горькийҙың был күренешкә ҙур иғтибар биреүе бик характерлы. Семинарҙағы докладсыларҙың береһе лә Горький ижадының шундай мөһим яғына туҡталманы. Горький шундай киң һәм тәрән, ә беҙ уны шундай тар һәм һай итеп өйрәнәбеҙ. Беҙ уның ижадының әһәмиәтен ҡаплап ҡалдырабыҙ һәм Горькийҙың донъя әҙәбиәтенә ниндәй яңы фекерҙәр алып килеүен яҡшылап күрмәйбеҙ.

Доклад өсөн Л. Толстойҙың «Кешегә күпме ер кәрәк» тигән хикәйәһен дә алырға тура килер. Горький уны ла телгә ала (1910 йылдар — Башҡортостан ерен талау йылдары. Столыпин башҡорттарҙың ерен һаттырып, уларға үҙенең элмәктәрен ташлай — отрубтар, утарҙар барлыҡҡа килә).

Көлкө лә, ғәжәп тә: ике көн буйы мин асҡа ҡаңғырып бына нимәләр хаҡында уйлайым һәм уҡыйым.

24 март.

Донъяла минең иң яҡшы белгән нәмәм — аслыҡ! Бына өсөнсө көн инде мин ас. Хатта ашағым да килмәй. Башты

күтәреп, күҙҙәремде китаптан алһам — ҡапыл ҡараңғы булып китә. Был көндәрҙе оноторға теләһәм дә, булдыра алмам.

Ай-һай, донъя, туйҙым һинән,
Һин дә туйҙыңмы минән?
Дуҫтар! Ниңә һеҙ аҡса булған саҡта ғына яҡынһығыҙ миңә?

25 март.

Бик нык йонсоном. Ләкин бөгөн ниндәйҙер еңеллек менән килеп торҙом. Шундай еңелмен, әйтерһең, мин ҡош!

Дүртенсе көн... Нимә булһа ла табып ашарға кәрәк. Юҡһа, мин елберләп торам... Бүлмәнән тышҡа сыҡҡайным — үҙемде бик сәйер тойҙом. Яңы ғына тәпәй баҫҡан бала кеүекмен. Хатта көлөп ебәрҙем. Ҡояшҡа күҙ сағыла. Бөтә донъя яңырып киткән кеүек — ҡайындар, ҡарағайҙар яҙ һулышы менән һулай. Донъя шундай иркен. Шулай ҙа иркен донъя аяҡ кейемең тар булғанда күңелһеҙерәк икән. Эс шундай бушаған — салбар төшөп бара. Бүлмәгә инеп, ҡайышҡа тағы бер тишек арттырҙым да, емтек эҙләгән эт кеүек, сығып киттем. Ҡойроҡ ҡына етмәй икән был студентҡа! Тихоновтың дачаһына йүнәлдем.

— Тетя Маруся, я очень есть хочу. Проголодался...

Өйҙәге кеүек һөйләшәм. Тетя Маруся сигареттар ҙа табып бирҙе. Рәхәтләнеп тартып ебәрҙем. Бәхет! Хатта йырлағы килә. Ярай әле минең тормошомда һәр саҡ яҡшы сторожихалар, сторождар осрап тора. Астың хәлен туҡ белмәй, тиҙәр. Ә улар, әйтмәһәң дә, белә. Онотма! Онотма! Онотма! Был һүҙҙәрем ант булһын. Улар һине бик күп кәмһенеүҙән ҡотҡарҙы.

Бына 3 ай инде, ҡаяға беркетелгән Прометей кеүек, имтихандарға әҙерләнеп ғазапланам. Башҡаса былай бер ҡасан да рәхәтләнеп уҡырға тура килмәйәсәк. Тормошҡа уҡып тотонорға кәрәк. Бер кем дә минең 5 йыл буйы студент булып йөрөүемдән көлөрлөк булмаһын.

26 март.

Ура! Клим Самгиндың тормошо ла таныш хәҙер. Хуш, Самгин! Һин тормошҡа кәрәкмәйһең. Һин донъялағы иң ҡәбәхәт кеше! Һин йәшәргә ҡамасаулайһың. Үҙеңде үҙең юғарыға күтәрәһең, ләкин һинең кеүек ҡырмыҫҡаны йөк башында ла күрмәйҙәр. Горькийға рәхмәт. Был китапҡа мин мәңге бурыслы.

Йөрәктә шундай һағыныу! Шундай яҡты нур! Үҙем бында, ә күңелем Башҡортостанда. Шул тиклем ҡайтҡым килә. Тыуған ерҙең моңон, йырҙарын, һөйләшеүен, көлөүен тыңла-

ғы, һәр ҡайынын, ташын йөрәгемә ҡыҫҡы, устарыма уның туп-рағын алып, илағы килә!

Күгәрепкәй ятҡан Уралҡайым
Ата-олатайҙарымдың төйәге.
Ерен-һыуын ҡурсып ҡорбан булған
Шунда ята батырҙарҙың һөйәге.

Донъяла ошонан да яҡшы йыр юҡ миңә! Ниндәй мөһәбәт киңлек, аҡыллы моң, һағыш бар был йырҙа! Ниндәйҙер тойоп ҡына аңлай торған көс бар унда. Кемдең йөрәгенән һығылып сыҡты икән ул иң тәүҙә? Кем уны сығарҙы икән? Бөйөк шағир булған ул кеше Уралда. Шул йыр өсөн генә лә мин баш-ҡортмон!

Батталдың «башҡорттар тәбиғәтте, яҡшы келәмгә оялаған көйә кеүек, боҙалар» тигән һүҙҙәре ни тиклем бысраҡ! Халыҡҡа оятһыҙ рәүештә яла яғыусыларҙың тамырҙары һаман да йәшеренеп ята бит әле! Ә радионан ниндәйҙер мәғәнәһеҙ таҡмаҡтар йырлап йән көйҙөрәләр. Әйтерһең, башҡорт йырға фәҡир! Кем һуң «Урал»ды йырлай ала? Юҡ! Ә халыҡ йырлай. Унда йырсылар күп, тик эҙләмәйҙәр генә. Сөнки беҙҙә әле Батталдарҙың артҡы боттары етерлек. Һатыусы, сауҙагәрҙәргә халыҡтың рухи байлығы ят һәм аңлайышһыҙ.

Ғәжәп, беҙҙең йырҙарҙа тәбиғәттең шундай бай булыуы бик уйландыра. Тыуған ил образы — шундай тәрән һәм киң, эпик образ. Шул уҡ ваҡытта шундай нескә лиризм бар был йырҙарҙа, иҫ киткес фәлсәфә! Улар тарихи һәм социаль эстәлекле.

Һағындыра Башҡортостан! Мәскәү мине һағына белергә өйрәтте.

Надяға Степан Злобиндың «Салауат Юлаев»ын алып барҙым.

29 март.

Беҙҙең курс диплом яҡлай башланы. Ә мине әлегә индермәнеләр. Имтихандарҙы тапшырмайынса, минең диплом эшем юҡ тип ҡарала.

Ҡыҙыҡ хат алдым бөгөн Татарстандан, Кукмар районындағы Аман-Оштарма ауылынан Асия Ғарипова тигән ҡыҙ яҙған. Дилара шунда уҡыта икән. Был ҡыҙҙың өйҙәрендә тора. Дилара уға минең турала һөйләгән, күрәһең. Хат миңә бик ҡыҙыҡ тойолдо.

30 март.

«Асия! Һеҙҙең хатығыҙ бер аҙ ғәжәпләндерҙе мине. Беренсенән, миңә бөтөнләй таныш булмаған Асия яҙа, икенсенән, миңә бик таныш Дилара тураһында яҙа...

Ә ниңә һеҙ уның мине туғаным тиеүенә ышанмайһығыҙ? Ул дөрөҫ әйтә бит! Беҙ, ысынлап та, туғандар. Ул да шиғырҙар яҙа, мин дә. Тимәк, беҙ бик яҡын кешеләр! Ә Дилара апа ысынлап та бик һәйбәт! Мин уның бигерәк тә балалар өсөн яҙған шиғырҙарын яратам. Әсә кеүек һөйләшә белә ул балалар менән. Унан һуң, ул татар халыҡ йырҙарын бик яҡшы тоя. Үҙенең шиғырҙары ла уларға тартым. Тәбиғәт иһә уның эске тормошо менән бергә йәшәй.

Ул үҙенә шулай ҙа хөрмәт менән ҡарай белмәй кеүек. Ә был кешене ваҡлай. Был, бәлки, ҡатын-ҡыҙҙың үҙенә тик ҡатын-ҡыҙ итеп ҡарарға ғына күнеккәненән киләлер, белмәйем. Юҡһа Дилара кеүек аҡыллы ҡыҙ үҙе яратмаған кешегә тормошҡа сығып, үҙ намыҫынан үҙе көлмәҫ ине. Кеше үҙенең кешелек ғорурлығын шулай кәмһетергә хаҡһыҙ.

Дилараны мин бер генә ҡабат күрҙем һәм был осрашыу һуңғыһы булды, ахыры.

Һеҙҙең унан йәшерен генә хат яҙыуығыҙҙы фаш итергә кәрәк булыр, ахыры. Әйҙә, шаян ҡыҙҙың ҡолағын бороп алһын...

Хушығыҙ. Рәми».

Ни тиклем таҫма телгә әйләндем мин! Һәм был телем күпме кешеләрҙе үҙенә бәйләй! Ә ҡайһы берәүҙәр менән ысынлап та мауығам, шикелле.

31 март.

Һуҡыр Ғиззи һәм сатан Мәнзүмә— йырсылар. Минең балалығымдың иң матур иҫтәлектәре уларҙа. Ауылға ҡайтҡас, Сәрби әбейҙең башынан үткәндәрен яҙып алырға кәрәк. Был һуҡыр ҡарсыҡ бит минең күҙемде асыусы. Бөгөн уның һәр саҡ әйтә торған «буйтым» тигән һүҙе иҫкә төштө. Күпме характерҙар ауылымда ғына ла. Хәҙер улар тураһында роман яҙыу өсөн бик ныҡ уйлай башларға кәрәк. Сөләймән мәзин — колхоз төҙөүсе! Иван ҡарттың башҡорт телендә иҫ киткес оҫта һөйләшеүе! Ғатаулла бабайҙың аслыҡ йылдарында ҡалаҡ менән он өләшеүе! Зәйнулла ҡарт менән тәүге колхоз тракторын йәшен атыу! Тәүге тракторсы Мофаззал ҡарт! Партизан Ахун быуай! Парумсы Шәрәфи ҡарт. Көлҙәбиғә әбейҙең үксәләре, күҙҙәре, тауышы! Ҡыптыр Мәрйәм. Корчагин Хизбулла — әтәс батшаһы, һөйәк йыйыусы... Һәр береһе тип бит быларҙың.

1 апрель.

Алдаҡсы көн. Ләкин бер кемде лә алдаманым.

Төндә Баязит Бикбайҙың рецензияһына пародия яҙҙым. Икенсе шиғыр — коммунизм һүҙе менән уйнаусылар тураһында.

Ғәжәп беҙҙә:
Күпме буш һайыҫҡан
Йырға һанап йүнһеҙ таҡмағын,
Коммунизм һүҙе менән биҙәй
Һәр бер шиғырының аҙағын.

Ғәжәп, шул бәләкәй генә әйберҙәр өсөн дә төнө буйы йоҡлай алманым.

4 апрель.

Көнө буйы сыйырсыҡ ояһы эшләнем. Йыштым, быстым, шаҡылданым. Надя эштән мин ҡыйыҡ башында ултырғанда ғына ҡайтты. Ашарға әҙерләне. Һуңғы көндәрҙә мин көнөнә бер генә булһа ла уларҙа ашайым. Быны мин уға һиҙҙермәйем, ә эстән шундай ҡыйынһынам. Әйтерһең, мин уға астан хәлһеҙләнеп ятмаҫ өсөн генә килгәнмен!

5 апрель.

Иртән Нюра военкоматҡа барырға повестка килтерҙе. Ахыры, биш йыл уҡығандан һуң, һалдат булырға тура килер. Институтҡа барып белешмә алдым да Кунцевоға киттем. Үҙем ас, үҙем өшөйөм. Бальмонттың Шеллиҙан тәржемәләрен уҡып барҙым. «Озимандия» шиғырын табып уҡыным. Клим Самгин Башҡортостан тураһындағы фекерҙәрен шул шиғырҙың һуңғы юлдары менән тамамлай.

Ҡыҙыҡ, минең шул тиклем йылы аш ашағым килә, «асығыуҙан үҙәк өҙөлөп бара», ә үҙем әллә ниндәй Египет сахраларындағы батша тураһында уҡыйым.

6 апрель.

Төн. Һаман да Шеллиҙы уҡып ятам. Нишләптер шиғырҙарының айышына төшөнөп етмәйем. Шағирҙарҙы үҙ телдәрендә уҡымайынса, уларҙың йөрәк тибешен башҡа кешеләр аша ишетеү һәр саҡ шикләндерә мине. Тәржемә — май юҡта маргарин инде.

«Берегите себя прежде всего для себя, тогда и людям много останется»,— тигән Толстой. Аҡыллы һүҙҙәр! Ләкин минең

өсөн түгел. Мин үземде һаҡлай белмәйем. Бөтә яҡтан да. Кешеләргә минән бик аҙ ҡаласаҡ. Был ҡурҡыта мине.

Ежик ҡаланан ҡайтып инде. Ҡулында — ашамлыҡ төргәге, консерва. Минең шундай ашағым килә, хатта ауыҙға һыу йыйыла! Ни тиклем мәғәнәһеҙ күренеш: уның хәҙер рәхәтләнеп, туйғансы ашаясағына асыу килә! Был аслыҡ психологияһы мине кәмһетә, йәберләй. Бөгөн көнө буйы икмәк тотоп килгән кешеләргә ниндәйҙер бер түбән көнләшеү менән ҡараным. Ас булыуҙан да бигерәк, миңә үземдең шул түбәнлек тойғоһонан сыға алмауым ауырыраҡ. Ҡайҙалыр юғалғым килә. Кис дядя Сережаға инеп сәй эсеп сыҡтым, ләкин бер нисек тә туя алманым. Улар иртәгә төшкө ашҡа саҡырҙы һәм был миңә шундай ҙур байрам булып тойолдо. Уйҙар ҙа мәғәнәһеҙ. Үҙ-үземде күрә алмайым... Ах, был 55-се йыл! Ниндәй ауыр йыл һин миңә!

Жора Исаев миңә оҡшаған — көн һайын миңә тәмәке һорап керә. Мин теләнселәп табам, ә ул минән һорай. Хәйерсене теләнсе талай. Көлкө лә, ҡыҙғаныс та...

Бына инде 7 апрель башланды. Мин һаман уҡыйым. «Тымыҡ Дон» иң популяр китаптарҙан булһа, «Клим Самгиндың тормошо» бөтөнләй икенсе мәсьәләләрҙе күтәрә. Диңгеҙ йылға кеүек күренеп ятмай, ул сикһеҙ!

Институтта бөгөн өсөнсө төркөм диплом яҡланы.

Киев вокзалында Надяны осраттым. Уның:

— Рәми!— тип ҡысҡырып ебәреүенән уңайһыҙланып ҡалдым. Ҡыҙҙар көлөшәләр һәм Надяны ирештерәләр. Надя минән ҡыҙҙар артына йәшеренде, уның менән күрешмәнек. Мин һүҙ ҡушманым. Вагонға инеп ултырғас, «балда» тигән уйынды уйнарға тотондоҡ. Надя «балда» булып сыҡты. Рәхәтләнеп көлдөм. Бер аҙ барғас, ул минең ҡулбашҡа башын һалып йоҡлап китте. Переделкиноға еткәс, ҡулын ҡыҫып уяттым да уларға киттек. Уларҙа мин үземде өйҙә кеүек хис итәм. Әйтерһең, беҙ инде күптән бергә торабыҙ. Бына икебеҙ ҙә эштән арып ҡайттыҡ. Ул сәй ҡуйҙы ла минең фуражкаға козырёк ҡуйырға тотондо. Ә мин икмәк ҡайыра башланым. Ә бармаҡтары уның матур һәм оҫта — ысынлап та, тегенсе бармаҡтары! Оҙон һәм нәфис бармаҡтар. Тик тырнаҡтарының оҙон булыуы ғына һәр саҡ күңелде ҡыра. Надя башын эйеп аҫҡа ҡарағанда, оҙон керпектәре тағы оҙонораҡ һәм сөм ҡара булып күренә. Ә буй-һыны ҡарап туйғыһыҙ һылыу һәм ныҡ.

— Ни тиклем ғазаплайһың мине! — тип бышылдай Надя һәм көслө ҡулдары менән үҙенең күкрәгенә башымды ҡыҫа-ҡыҫа тиргәй. Ләкин был тиргәү миңә иң татлы һүҙҙәр булып ишетелә. Мин уның ирендәренән айырыла алмайым.

— Етәр!— тип бышылдай ул шатлыҡ менән. Был тауыш уның күкрәк төпкөлөнән, ҡайнар тәрәнлектән килә. Мин күтәрмәнән шундай бер еңеллек менән һикереп төшөп, бөтә көсөмә йүгерәм, осам! Ә ҡолаҡта тик ирендәрҙең бер-береһенән һурып алынған матур тауышы ғына тороп ҡала. Бөтә донъяны яңғыратып йырлағым һәм:

— Надя, яратам һине!— тип ҡысҡырғым килә.

8 апрель.

Радионан скрипка минең йөрәктә уйнай кеүек! Уянғас та, тормайынса тыңлап ятам. Күҙ алдымда — Надя, башҡортса был исем — Өмөт! Скрипка минең өмөтөмдө моңға һала. Миңә ул ышаныс булһа ине! Ышаныс! Надяның фуражканы тегеп ултырғанда әйткән һүҙенә йылмаям.

— Ә быныҡ өсөн мин һинән нимә көтөрмөн?

Мин уға ниндәй бүләк бирә алам? Ул теләгән бүләккә генә түгел, үҙемде йөрөтөрлөк тә аҡсам юҡ минең. Көлкө! Мин шундай мәғәнәһеҙ хәлдә.

15 апрель.

Әсғәттең тыуған көнө бөгөн. Уға шундай яҡшы берәй нәмә бүләк итке килә. Ләкин мөмкинселегем юҡ. Йоҡлай алманым. Сәләмде, Хәйҙе, Мәлих Харисты, Мостай Кәримде, Бикбай ағайҙы уйлап яттым. Улар тураһында яҡшы әҙәби портреттар яҙғым килә. Йәштәр ижады тураһында фекерҙәр баштан сыҡмай. Башлап яҙыусылар өсөн шиғыр культураһы, тел, белем, халыҡ ижады, тормошто һәм әҙәбиәтте күҙәтә белеү, традиция һ. б. бик күп нәмәләр тураһында үҙемдең бөтә белгәндәрем, уҡығандарым, тойоуым менән уртаҡлашҡым килә.

Кисә ЦКШ-ла Марат янында булдым. Йөҙ һум аҡсаһын ул тағы ла миңә бүлде. Кешегә иғтибарлы.

Кис мин Мараттан ҡайтҡас, Рафаэль, Шакир менән сәй эстек.

1 май.

Әле сәғәт төнгө 2 генә. Надя менән йөрөп ҡайттым да яҙырға ултырҙым. Был көндәрҙә мин уға булған мөнәсәбәтем тураһында күп уйланым һәм бер генә ҡарарға килдем — өйләнергә! Бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, бергә йәшәргә. Ләкин Надя минең ҡарарға ышанмай. Кисә хатта минең күҙгә йәштәр тулды. Апрель айы шул уйҙар менән ғазапланыуҙа үтте. Был ҡарарға килеү өсөн шул тиклем ныҡ икеләндем.

Тел башҡалығы ла, белем башҡалығы ла Надя менән миңә кәртә була алмай. Телгә, теләһә, өйрәнер. Ә белем кешенең үҙе менән бергә тыумай — русса әйткәндә, дело наживное! Ғүмер буйы уҡыясаҡбыҙ! Ә белем тигеҙлеге тураһында ғазапланыу буш нәмә! Быны мин хәҙер ныҡ аңлайым. Был хаҡта уйлайым, көлкө хатта. Хатта Маркс ҡатынынан белем талап итмәгән. Бөтә эш бер-береңде аңлауҙа, хөрмәт итеүҙә һәм яратыуҙа! Бына нимә тураһында уйларға кәрәк! Надя миңә бөтә яҡтан оҡшай — ул минең эшемде лә, кешемде лә аңлай, дуҫ та була ала, ярата ла. Ул хәҙер бөтөнләй мин тәүге күргәндәге Надя түгел. Быны мин уны матурлап күреүҙән әйтмәйем. Юҡ, мин ғәҙәттән тыш һалҡын аҡыл менән ҡараным уға һәм был уны яҡшылап күреү өсөн бик һәйбәт булды. Юҡһа, һуҡыр рәүештә яратыу — иң үкендергес нәмә. Ә мин уны бөтә ваҡлыҡтарына тиклем өйрәндем — минең ҡатыным тап шундай булырға тейеш. Мин уның яҡшы әсә буласағына ла ышанам. Беҙ бәхетле буласаҡбыҙ.

Ниңә һуң мин баштан уҡ шул фекергә килә алманым? Күпме ғазапланым мин Надяны! Хатта ул хәҙер минең бер ҡарарға килеүемә ышана ла алмай. Сөнки мин уны киләсәктә бергә була алмауыбыҙға ышандырҙым. Ә хәҙер башҡа була алмауыбыҙға ышандырырға кәрәк! Был хатта ауырыраҡ. Бөтәһен дә Надя ғына хәл итә ала.

Уның күҙ ҡарашында ышанысһыҙ яратыу ғына. Шундай саҡта мин уның күҙҙәренән үпкем килә. Ләкин ул быны рөхсәт итмәй. Ғәжәп хәл был. Ә ирендәренән теләгәнсә үбәм, ләкин туя алмайым. Мин үҙемде бер ҡасан да шулай ҡомһоҙ булырмын тип күҙ алдына килтермәй инем. Был минең иң тәүге татлы ләззәттәрем — нисек итеп мин уларҙы онота алырмын? Кәрәкмәй, кәрәкмәй! Үлгәндә лә, минең ошолай үлгем килә. Тормош миңә иҫ киткес яҡты был яҡынлыҡтан һуң. Минең осҡом килә! Арыу юғала. Йәшәреп китәм. Бөтә тәнгә көс тулыша. Тимәк, мин уны бик ныҡ яратам! Тик был ниндәйҙер ғазапһыҙ, бәхетле, кешелекле яратыу, яҡты яратыу. Ә тәүге яратыуым ғазаплы булған өсөн ярһыу һәм тау йылғаһы булып тойолған. Ләкин тормош өсөн кешелекле, яҡты һәм оҙаҡ яратыу кәрәк. Был ниндәйҙер ҙур һәм киң, тәрән бер йылға. Ул тауыш-тынһыҙ ғына аға. Шуның өсөн ҡайһы саҡта хатта аҡмаған кеүек. Ләкин, тәрәнгә ингән һайын, уның үҙенә йотоп барыусы көсөн тояһың. Һай йылға ярһып, шаулап аҡһа ла, уның көсө бәләкәй һәм тиҙ юғала. Уның ярһыуында булһаң да, ике яҡ яр бөтөнләй яҡын... Ләкин тормоштоң ярҙары юҡ. Мөхәббәт тә шулай булырға тейеш. Надяның күкрәгенә башымды ҡуйып, уның йөрәк тибешен тыңлап, мин шул хаҡта уйланым...

Мин уны һәр саҡ ҡолонсаҡҡа сағыштырам. Сөнки минең иң яратҡаным — ҡолон. Иң яратҡан өләсәйем дә миңә «Ҡолонсағым!» тип өндәшә торғайны. Ә әсәйем мине:

— Аттан тыуғанһыңдыр, ахыры,— тип әрләр ине.

Белмәйем, ниңә мин шул тиклем ат йәнле булғанмындыр. Атҡа менеп сабыу хәҙер ҙә әле миңә ниндәйҙер бер бәхет булып тойола. Колхоз тигән һүҙ ҙә минең аңыма ат тигән һүҙ булып ингән. Ғәжәп был, Надяға был хаҡта аңлау ҡыйыныраҡтыр инде. Был хис тик башҡорттарға ғына шулай хас.

Надя минең сәстәрем эсенә бармаҡтарын тығып иркәләй... Минең сәстәрем ат ялы кеүек ҡалын һәм ныҡ. Ә Надяның йөрәге ҡолон тояғы кеүек тыпылдап ярһый...

Май байрамы менән, Надя!

2 май.

Надя шат, бәхетле, матур! Тик минең ҡарарға ышанып етмәй. Мин бәхетле! Киләсәк, бөтә киләсәк алда! Беҙ яҡшы йәшәргә тейешбеҙ. Мин уны бәхетле итәсәгемә ышанам.

Тәүҙә ауыр буласаҡ. Мин еңел йәшәй белмәйем. Китаптарымдан башҡа бер нәмәм дә юҡ. Гол как сокол! Ләкин баш иҫән булһын. Мин эшләргә яратам. Надяны яратам. Башым, йөрәгем, сәләмәтлегем бар. Юлым еңел түгел. Ләкин ул Надяны ҡурҡытмай. Ул иң яҡын дуҫым буласаҡ минең.

1 июнь.

Надя! Ҡатыным минең!..

Хәҙер беҙҙең «Икәүебеҙгә бер яҙмыш.
Тормоштан тейгән өлөш.
Күпме ғүмер бар, беҙ шуны
Ғәҙел йәшәргә тейеш!»

Беҙ бәхетле буласаҡбыҙ!..

Был бәхет тураһында Надя менән күп һөйләштек. Беҙҙең эшебеҙ ҙә, телебеҙ ҙә, тәбиғәтебеҙ ҙә башҡа, ләкин бәхетте бер төрлө аңлайбыҙ. Беҙҙең донъяға ҡарашыбыҙ бер. Тик минең ҡарашым киңерәк, тәрәнерәк, сөнки ул белем менән нығытылған. Надя ла уны үҙенең уҡыуы менән нығытырға тейеш. Уны уҡытыу хәҙер минең иң ҙур бурысым. Уға системалы, тулы һәм ныҡлы белем кәрәк. Уның китаптар уҡыуын да башҡаса ойоштороргә кәрәк. Мин дә уның менән бергә үҫәсәкмен! Сөнки уҡытыу үҙеңде лә уҡыта. Надя ғәҙәттән тыш ҡыҙыҡһыныусан, тиҙ ҡабул итеүсән, ҡомһоҙ һәм түҙемле. Ул миңә бик ҙур хөрмәт менән ҡарай. Был мине үҙ көсөмә ышандыра. Мин һәр саҡ был хөрмәттең ҡәҙерен белергә һәм үҙ-үҙемә

яуаплыраҡ булырға тейешмен. Үҫеү өсөн Надяның бөтә тәбиғи мөмкинлектәре лә бар. Беҙ ауырлыҡтарҙы күтәрергә әҙер. Сөнки уларҙы икебеҙ ҙә бик йәшләй күтәреп өйрәнгәнбеҙ. Мин эшләрмен, ул уҡыр. Беҙ бер-беребеҙгә ярҙам итә алырлыҡбыҙ.

Унан һуң ул башҡорт телен өйрәнергә тейеш! Тел — минең тормошом! Сөнки мин эшемде телдән башҡа күҙ алдына ла килтерә алыуым мөмкин түгел! Беҙ ир менән ҡатын булып ҡына йәшәй алмаясаҡбыҙ. Хәҙерҙән үк беҙгә башҡорт теленә тотонорға кәрәк. Һуңға ҡалдырырға ярамай. Бер сәғәт ваҡытты ла бушҡа әрәм итмәҫкә! Торғанда ла, бергә йөрөгәндә лә, ашағанда ла мин уны һиҙҙермәйенсә генә өйрәтергә тейешмен! Шаярып һөйләшеү, минеңсә, быныҢ иң яҡшы юлы. Был ғәҙәткә әйләнәсәк! Уға башҡорт телен өйрәтеү мәктәптәгесә дәрес биреүгә генә ҡайтып ҡалмаҫлыҡ булһын! Уны тел белеменә, яҙыусыларҙың тел өҫтөндә эшләүенә, тарихҡа һәм әҙәбиәткә, халыҡ ижадына, йыр һәм музыкаға, психологияға бәйләп, тормошҡа бәйләп өйрәтергә кәрәк. Тел бөтә нәмәгә асҡыс булырға тейеш. Минең өсөн башҡорт телендә аңлата белеү генә бик аҙ һәм бәләкәй нәмә. Тел өйрәнеү Надя өсөн ҙур бер эшкә, үҙ өҫтөндә эшләүгә әйләнерлек булһын. Мин Надяның биш йыл эсендә башҡорт телендә уҡый-яҙа аласағына ышанам. Ул 1960 йылда минең был уйҙарымды уҡып көлөрлөк буласаҡ. Минең был көндө тиҙерәк яҡынайтҡым һәм үҙ уҡыусыма ҡарап бөтә күңелдән шатланғым килә. Был бәхетте мин хәҙер үк тоям һәм ғорурланам. Ул көндө мин үҙем дә уның туған теленән Тарас Шевченко шиғырҙарын тәржемә итеп уҡырлыҡ булырға тейешмен! Ә беҙҙең тәүге балабыҙ был көндө русса ла, башҡортса ла һөйләшеп йөрөйәсәк!

Юҡ, мин быларҙың тик хыял ғына булып ҡалыуын теләмәйем. Быға тиклем минең хыялдарым тормоштан айырылманы. Бынан һуң да мин үҙемә тоғро ҡаласаҡмын.

Надя менән беҙ бәхетле буласаҡбыҙ!

2 июнь.

Надя — ҡатыным минең! Ғүмергә! Был бергә йәшәй башлау бер ҡасан да үкенерлек булмаҫ кеүек миңә. Надя миңә һаман яҡыныраҡ, матурыраҡ була бара.

Надя — ҡатыным минең! Беҙ бик бәхетле!

Беҙ бер нисек тә өйләнгән кеүек түгелбеҙ. Һаман да элекке кеүәбеҙ, шаярабыҙ, һөйләшәбеҙ.

— Беҙ балалар кеүек! — ти Надя.

Ысынлап та, был шулай. Беҙ балалар кеүек шат һәм ғәмһеҙ. Тик ул мине:

— Ирем,— тип иреште рә. Ә мин уға:

— Ҡатыным!— тигән булам.

Беҙгә бик күңелле. Әгәр ҙә беҙ үҙгәрһәк, тик яҡшы яҡҡа ғына үҙгәрҙек. Беҙ хәҙер, нисектер, байыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ! Мин быны беҙгә ҡарап үткән һәм беҙҙең менән һөйләшкән кешеләрҙең ҡарашынан да күрәм. Был ҡарашта беҙҙең менән һоҡланыу бар. Ул бер нисек тә һүҙ менән әйтелмәй — уны тик тояһың ғына.

Ғәжәп, миңә хәҙер кешеләр яғымлыраҡ һәм матурыраҡ күренә, донъя мәғәнәлерәк тойола.

— Көнләшәм минheҙҙән! — тине Рафаэль. Беҙ бик оҙаҡ һөйләшеп йөрөнөк. Мин уны оҙатып барҙым, ул мине оҙатып килде. Һуңғы ваҡытта ул миңә яңынан яҡынайҙы, иғтибарлыраҡ, йылыраҡ була башланы. Бигерәк тә туйҙан һуң Шакир менән Рәйес яҡыная төштөләр. Ә мин киреһенсә булыр тип уйлай инем. Туй үткәреүҙе улар үҙ өҫтәренә алды! Һәм был студентса ғына әҙерләнгән туйҙан бөтәһе лә ҡәнәғәт булды. Мин шатланып бөтә алманым.

Надяның мине яратыуында ниндәйҙер матур бер әсәлек тойғоһо ла бар.

Надя, ҡатыным минең!..

Етмәһә, тәбиғәттең иҫ киткес матур сағы! Муйылдар апаҡ сәскә атып, күперешеп, күбекләнеп ултыра. Алмағастар, сейәләр сәскә атҡан. Бөтә тирә-яҡта хуш еҫ аңҡый. Аяҡ аҫтында йәм-йәшел йомшаҡ үлән, баш өҫтөндә зәңгәр күк. Ҡыуаҡтарҙың ҡуйы япраҡтары араһында һандуғас һайрай. Көнө буйы һабан турғайының моңо ҡойолоп тора. Йөрәк иҫерткес бер шатлыҡ менән тулыша. Яратам мин Надяны! Мин уны тормошто яратҡан кеүек яратам.

6 июнь.

Надя — минең ҡатыным! Бөтә кешеләргә, бөтә донъяға был хаҡта ҡысҡырғым, йырлағым килә хатта. Тик мин ҡысҡырмайым — яҙам ғына. Надяны эсәм. Туймайым. Ышаныслы, ҙур бәхет был.

Бына ул, минең ҡатыным, эшкә китте. Тегеү фабрикаһында эшләй. Эшләп үҫкән ҡыҙ ул. Ашығыс, етеҙ ныҡлы аҙымдар менән атлай ул. Етеҙлеге һылыу һынына килешеп тора. Ул йыйнаҡ, ынтылышлы, шул уҡ ваҡытта, уйнаҡлап барған тай кеүек, еңел, тилбер. Ниндәй оҡшай миңә уның атлауы! Әйтерһең, ул бына, хәҙер, хәҙер йүгереп китер... Үҙе шундай ныҡ, үҙе иҫ киткес еңел! Осоп йөрөй. Ул баҫҡан ер, ул атлаған юл, юл ситендәге үләндәр, ҡайын япраҡтарының елберләп тороуҙары, аҙымы һайын алмағастарҙың, сейә, груша, муйыл сәскәләренең хуш еҫтәрен уға бөркөп тороуҙары, ул аша атлап сығып йөрөгән йылғаның бер туҡтауһыҙ сылтырап ағыуы, йылға ситендәге тирәктәрҙең уның юлына күләгәләрен ташлап

ултырыуҙары, һандуғастар сутылдауы — бөтәһе лә, бөтәһе лә ҡәҙерле миңә. Ул быларҙың бөтәһен дә миңә ҡарағанда нескәрәк тоя белә. Шуның өсөн дә ул йырлай. Надя үҙенең йырлауы менән минең кәмһетелгән иң саф тойғоларымды тормошҡа ҡайтарҙы. Мин яңынан үҙемдең тәүге мөхәббәтемде таптым унда. Тик был мөхәббәт минең үҙемдә генә түгел. Беҙ уны икәүләп кисерәбеҙ. Бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамайынса, беҙ уны ғүмер буйы һаҡларға, уның менән бөтә тормошобоҙҙо биҙәргә тейешбеҙ. Беҙ еңәсәкбеҙ!

Беҙҙең балаларыбыҙ ҙа матур буласаҡ. Улар — мөхәббәт емештәре булыр.

Донъяның минең өсөн яңы яҡтары асыла. Ҡыҙыҡ!

27 июль.

Мин атай буласаҡ кеше! Был бик сәйер ҙә, көлкө лә һәм шатлыҡлы ла. Тимәк, мин бик нормальный кеше!

Хеҙмәт юлы башланғанда...

3 февраль.

Шулай итеп, минең газетала эшләй башлауыма биш ай ҙа үтеп китте!

Бөгөн мин әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлегенең мөдире! Газетала мин иң йәш мөдир. Ә эшләйһе эш муйындан! Ауыр буласаҡ. Ләкин мин үҙемдең көсөмә ышанам. Унан һуң был эште мин бөтә күңелемдән яратам. Сөнки әҙәбиәтте, сәнғәтте яратам.

Минең эшемдә был күренергә тейеш. Тырышасаҡмын!

Бына партияның XX съезы етә. Был минең съезым!.. Йөрәк ашҡына — мин партияға инергә уйлайым. Был уйымды тик Надя ғына белә. Ләкин мин үҙемде һаман да әле партияға инерлек итеп тоймайым. Мин әле бер ниндәй ҙә эш күрһәтә алманым.

Мин был юлдарҙы яҙғанда Надя Горькийҙы уҡып ята. Мин уны Горький менән тамам ағыуланым. Был минең бәхетем! Торған һайын мин уны нығыраҡ яратам. Тиҙҙән беҙҙең балабыҙ буласаҡ!.. Йә ул, йә ҡыҙ тыуырға тейеш. Мин, әлбиттә, ул тыуыуын теләйем.

Исеме лә әҙер — Салауат!

Әгәр ҙә ҡыҙ тыуһа — Тамара.

Был хаҡта Надя менән килешеп ҡуйҙыҡ.

— Нимә яҙҙың? Уҡы! — ти Надя. Ә мин бер ни ҙә йүнләп яҙа алмайым. Көндәлек алып бармағанға инде бик күп ваҡыттар үтеп китте. Нисектер онотолған. Яҙыуы ҡыйын. Эстәге бөтә кисергәндәрҙе, уйланғандарҙы бер нисек тә ҡағыҙға төшөрөп булмай.

Бынан һуң көндәлекте тәртипле алып барырға кәрәк. Юҡһа, эшкә сумып, бөтөнләй яҙырға ла онотоуым мөмкин. Шиғырҙарға ла ҡул тейгән юҡ. Ғөмүмән, был биш ай эсендәге баштан үткәндәр бик ҡыҙыҡлы булды. Мин бөтөнләй үҙгәрҙем булһа кәрәк...

Ниндәйҙер бик ҡоро кешегә әйләндем кеүек. Кисерергә ваҡыт та юҡ. Бик аҙ уҡыйым. Горькийҙың хаттарынан башҡа

күҙгә күренерлек бер ни ҙә уҡыманым. Ә Надя уҡый. Баштан башлап Горькийға тотондо. Уның уҡыуы менән үҙем етәкселек итәм. Уға уҡырға өйрәнергә кәрәк. Уҡыу культураһын үҙләштереү хәҙер уға иң, иң кәрәклене.

Бөтә нәмәне Горькийҙан башларға булдыҡ.

Һәр нәмәгә Горькийҙан сығып ҡарарға!— Был, минеңсә, үҙ өҫтөндә эшләүҙең иң яҡшы методы!

Горький!..

Унан да якыныраҡ кешем юҡ минең. Надяға ла ул шулай булырға тейеш. Горький — беҙҙең ғаиләбеҙҙең нигеҙе. Был нигеҙҙе ғүмерлеккә һалып ҡалдырыу – был хәҙер минең иң, иң изге уйҙарымдың береһе. Үҙем аҫтыртын ғына быны уға һеңдерәм. Мин — хәйләкәр уҡытыусы!..

Надя быны тоя. Бөгөн төндә был хаҡта бик оҙаҡ һөйләштек. Ни бары өс сәғәт кенә йоҡлай алдыҡ.

Беҙ бик бәхетле. Шуның өсөн был хаҡта яҙыу ҙа бик ауыр. Сөнки ҡайғы, һағыш тураһында кешеләр мәңге яҙып өйрәнгәндәр. Ә бәхет, шатлыҡ ул әле яңы ғына башлана. Шуның өсөн уны яҙыуы ла ауыр. Был яңылыҡты һүрәтләп биреү өсөн бөтөнләй яңы бөйөк художник булырға кәрәк. Бындай художниктың тыуыр көнө бик алыҫ әле. Сөнки донъяның ҡайғылары яҙып бөтөлмәгән әле. Хәҙер шатлыҡты бик ҙур ҡыйынлыҡтар менән яулап алыу заманы.

Нишләптер дөйөм һүҙҙәр яҙам. Ә бит бөгөн ҡот осҡос күренеште күреп, иҫем китте.

Редакцияға Батыр Вәлидтең яҙмышы тураһында хат килгәйне. Бөгөн көнө буйы шул хат өҫтөндә ултырҙым. Эшләй-эшләй торғас, шундай хат килеп сыҡты.

Киләсәктә быны онотмаҫ өсөн, күсереп ҡуям. Бик сәйер һәм ҡатмарлы мәсьәлә. Был мине бик ныҡ борсой һәм мин уны яҙмайынса булдыра алмайым...

Редакцияға хат

Шағирҙың яҙмышы хаҡында

Шағир үҙе онотолһа ла, халыҡ уның йырын онотмай. Ул уны үҙ йыры итеп, яратып йырлай һәм ҡәҙер итә. Шуның өсөн дә республикабыҙҙың китап уҡыусылары шағир Батыр Вәлидтең «Бүләгем» исемле кескәй генә китабын ҙур шатлыҡ һәм ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул итте.

Был йырҙар һәм шиғырҙар йыйынтығы шағир Ғәйнан Әмири тарафынан төҙөлөп, уның ҙур булмаған, ләкин тулҡынландырғыс инеш мәкәләһе менән асыла. Беҙ, китап уҡыусылар, Ғәйнан Әмиригә уның һуҡыр шағирға күрһәткән был намыҫлы хәстәрлеге, ярҙамы өсөн ысын күңелдән рәхмәт белдерәбеҙ.

Мин, уҡыусы булараҡ, Батыр Вәлид ижадына анализ яһарға йыйынмайым. Был — тәнҡитселәрҙең, әҙәбиәт белгестәренең эше. Ләкин был китаптың донъяға сығыуы бик мөһим факт, һәм уның авторы хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләшергә кәрәк.

Батыр Вәлид — башҡорт эшселәре араһынан сыҡҡан беренсе пролетар шағир. Ул үҙе тыуған Баймаҡ районының Түбә руднигынан — шахталарҙан әҙәбиәткә килде. Һәм үҙенең тәүге шиғырҙарында уҡ эшселәр синыфы темаһын күтәреп сыҡты, Бөйөк Октябрь революцияһын һәм коммунистар партияһын данлап йырланы. Киҫкен синфи көрәш йылдарында уның поэмалары, шиғырҙары һәм йырҙары барлыҡҡа килде... Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Батыр Вәлид күп йылдар буйына райондарҙа уҡытыусы булып эшләне, һәм шулай итеп ул, башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, әҙәбиәттән ситтә тороп ҡалды.

Ләкин башҡорт әҙәбиәтенең барлыҡҡа килеү һәм үҫеү тарихын белмәгән кеше генә Батыр Вәлидте оноторға һәм белмәҫкә мөмкин. Шулай ҙа уны үҙенең ҡәләмдәштәре, әҙәбиәт белгестәре, башҡорт әҙәби телен тикшереүселәр һуңғы ваҡытҡа тиклем «онотоп» килделәр.

Мәҫәлән, 1953 йылда сығарылған «Башҡорт поэзияһы» китабында Батыр Вәлид тураһында бер генә һүҙ ҙә әйтелмәне. 1955 йылда сығарылған «Башҡорт халыҡ йырҙары» китабында ла шағирҙың исемен оноторға тырыштылар. Шулай уҡ СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан әҙерләнеп, филология фәндәре кандидаты Ә. Харисовтың инеш мәҡәләһе менән сығарылған «Башҡорт халыҡ ижады» китабында ла ул телгә алынмай. Ә бит был китаптарҙың барыһында ла уның һәр кемгә билгеле булған «Ҡуңыр буға» йыры урынлаштырылған.

Был китаптарҙың төҙөүселәре, редакторҙары һәм комментаторҙары донъяла уның авторы — Батыр Вәлид барлығын беләләр инеме һуң?

Әлбиттә, беләләр ине!

Был ғына ла түгел, улар шағирҙың бөгөнгө көнгә тиклем ижад итеп килеүен дә күрәләр ине.

Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың береһе, филология фәндәре кандидаты Ә. Харисов был йырҙың авторын юҡҡа һанап, был «Ҡуңыр буға» йырының «һүҙҙәре 1938 йылда Белорет районы Исмаҡай ауылы Ноғман Тайбановтан яҙып алынған», тип яңы «асыш» яһай («Башҡорт халыҡ ижады», I том, 291-се бит)!

Ләкин Ә. Харисов был йырҙы ҡайҙан ғына яҙҙырып алһа ла, йырҙың авторы Батыр Вәлид булып ҡала.

Ә был йырҙың халыҡ йырына әйләнеп китеүе һәм республикабыҙҙың профессиональ йырсылары репертуарынан төшмәй килеүе шағир ижадының ни тиклем халыҡсан булыуын ғына күрһәтә. Был шағирҙың ысын бәхете! Батыр Вәлид, инде 30 йылдан артыҡ халыҡ тарафынан йырланып килгән, ошо «Ҡуңыр буға», «Салауат маршы» һәм «Күк Ирәндек буйында» йырҙары менән генә лә башҡорт әҙәбиәтендә онотолорға хаҡһыҙ шағир.

Ә уның ижады был йырҙар менән генә сикләнәме һуң? Юҡ, әлбиттә, — быны Батыр Вәлидтең «Бүләгем» китабына ингән шиғырҙары ғына ла әйтеп тора. Ә уның был йыйынтыҡҡа инмәй ҡалған күпме әҫәрҙәре бар! Тик уларҙы йыйырға ғына кәрәк. Әгәр ҙә уға ҡәләмдәштәре, бигерәк тә йәштәр, үҙҙәренең ярҙам ҡулдарын һуҙһалар, шағирҙың 1935—1939 йылдарҙа шиғыр менән яҙылған романын һәм шиғырҙарын, йырҙарын, поэмаларын эҙләп табырҙар ине. Ләкин уның «Бүләгем» китабына ингән әҫәрҙәрен дә әле библиотекаларҙан, иҫке газета һәм журналдарҙан эҙләп, күсереп алыуҙа әҙәбиәткә бөтөнләй ҡатнашы булмаған кешеләр ярҙам итте. Ә беҙҙең яҙыусыларыбыҙ шағирға шундай ярҙамды күрһәтергә лә теләмәнеләр.

Бөйөк Ватан һуғышынан тома һуҡыр булып ҡайтҡан Батыр Вәлидтең трагик хәле бөтәһенә лә асыҡ. Ул дуҫтарса ижади ярҙамға мохтаж. Етмәһә, шағир, ижад итер өсөн иң кәрәкле тормош шарттарынан да мәхрүм булып, бик ҡыйын шарттарҙа йәшәй. Уның ярҙам итер кешеһе лә, торор урыны ла юҡ. Был хаҡта Өфө ҡала Советы исполкомына күптән уйларға ваҡыт инде.

Беҙ, китап уҡыусылар, Батыр Вәлид йырҙарын яратабыҙ һәм уның тағын да яҡшыраҡ әҫәрҙәр ижад итеүенә лә ышанабыҙ. Уның «Бүләге» беҙҙең был ышанысты тулыһынса раҫлай. Тик уға тейешле ижади шарттар тыуҙырырға һәм ярҙам итергә генә кәрәк.

Шағирҙың яҙмышы хаҡында Башҡортостан Совет яҙыусылары союзы һәм Өфө ҡала Советы ысынлап уйларға һәм тейешле сара күргергә бурыслылар.

Бына шул Г. Әхмәтовтың хатын мин Батыр Вәлидтең үҙенә уҡырға булдым.

10 апрель.

Минең күптән инде, Мәскәүҙән ҡайтҡандан бирле, көндәлек алып барғаным юҡ. Бик насар иттем, әлбиттә. Сөнки был ваҡыт эсендә уйланылған күпме уйҙар, күпме хистәр, күпме күҙәтеүҙәр яҙылмайса ҡалды. Ә был ваҡыт эсендә бит бөтөнләй яңы, бөтөнләй башҡаса тормошом башланды!.. Мин инде студент та, уҡыусы ла түгел. Мин инде үҙ аллы эшләй башланым,

үҙ аллы йәшәй башланым, өйләндем, ғаилә ҡорҙом, бала атаһы ла булып киттем. Йөрәктә быға кисерелмәгән яңы хистәр тыуҙы, ә башыма яңы уйҙар килде, яңы ҡайғылар, яңы шатлыҡтар өҫтәлде. Тормош миңә быға күрелмәгән бөтөнләй яңы яҡтарын күрһәтте. Минең яҙмышыма ғәжәп ҡатмарлы булған бик күп кешеләрҙең яҙмышы килеп бәйләнде. Мин беренсе ҡабат шулай тормоштоң иҫ киткес ҡатмарлы һәм ҡыҙыҡ күренештәре менән йөҙгә-йөҙ килеп осраштым. Быларҙың бөтәһен дә яҙып барыу ни тиклем яҡшы булған булыр ине!.. Хәҙер ул көндәрҙе нисек булған, шул көйөнсә кире ҡайтарып булмай инде. Сөнки һәр бер көн үҙенсә ҡыҙыҡлы, үҙенсә матур, үҙенсә ғәжәп. Иртәгә инде ул кисәнгесә булмаясаҡ. Хатта үткән көндөң һалҡыны ла бөгөнгө көндөң һалҡынына оҡшамаған. Хатта ҡар еҫтәре лә бөгөн башҡаса аңҡый, ҡояш та кисәнгесә йылытмай, ә нисектер икенсерәк. Кисәге ишеткән бер генә һүҙ ҙә бит бөгөн икенсе төрлөрәк ишетелә. Бер кеше тураһында кисәнге фекергә бөгөн ниндәй ҙә булһа бер яңылыҡ өҫтәлә. Бергә эшләгән, бергә йәшәгән кешеләр һәр көн һайын ниндәй ҙә булһа бер яңы яғы менән асыла төшә. Кисәге бына Ғата Имаев менән «Отелло»ны ҡарап сыҡҡандан һуң, бик оҙаҡ һөйләшеп йөрөнөк һәм миңә уның үткәндәре, эске донъяһы, уйҙары асылды. Быға тиклем ул минең өсөн тик бер бүлмәлә эшләп ултырған ауыл хужалығы бүлегенең мөдире генә булһа, бөгөн миңә уның үткәндәре, тәүге мөхәббәте, ғаиләгә, тормошҡа булған ҡарашы ла билгеле. Һәм был кеше миңә ни өсөндөр ҡапыл яҡынайып, матурайып китте. Ә бөгөн бына Яҙыусылар союзында Динис Исламовтың яңы ҙур әҫәре тураһында бик ҡыҙыҡлы һөйләшеү булды. Миндә уға ҡарата ниндәйҙер бер ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Ғәжәп бер үҙенсәлекле кеше. Ә быға тиклем минең өсөн тик эскесе генә ине. Әгәр ҙә ул бынан һәләк булып ҡалмаһа, бик оригиналь яҙыусы буласаҡ кеше. Тормошто, кешеләрҙе үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай белә һәм үҙ эшенә ысын күңелдән ғашиҡ булған кеше. Тик уны беҙҙең тәнкитселәр боҙмаһа ғына ярар ине. Юҡһа, үҙҙәренә аҡыл етмәгән кешеләр бик аҡыл бирергә яраталар. Был сифаттың бер күренешен мин бына әле генә күреп, бик һыҙланған килеш ошо юлдарҙы яҙырға булдым...

Ярай, яҙмышҡа бының өсөн дә рәхмәт. Юҡһа, мин милләтсе булған кешенең ниндәй меҫкен, ниндәй бысраҡ һәм түбән икәнлеген күрә алмаған булыр инем. Үҙ халҡыңдан башҡа бүтән халыҡтарҙы күрә алмау — иң әшәке хис икәнлеген мин бөгөн ахырғаса аңлап еттем буғай. Бына Надя менән был квартираға килеп йәшәй башлағандан бирле мин һәр көн һайын тиерлек ошо өй хужаһының бысраҡ һүҙҙәрен тыңлайым. Был өйҙә ялғанлыҡ, ҡуркаҡлыҡ һәм һөрһөгән

милләтселек еҫе сыға. Был өйҙәге еҫкә түҙеп йәшәү ҡыйын миңә. Ләкин — нишләйһең — йәшәргә тура килә... Урамда тороп булмай. Етмәһә, хәҙер бала бар. Шул баланың ғүмере өсөн, уны һаҡлап ҡалыу өсөн был өйҙә мин яңғыҙ тороп ҡалдым. Бушлыҡ был өйҙә... Күңелһеҙ. Әгәр ҙә бында минең китаптарым булмаһа, Горький булмаһа, мин йәшәй алмаҫ инем... Мин төндәр буйы уҡыйым, яҙам һәм донъялағы иң яратҡан, иң яҡын кешем — Горький менән һөйләшәм — миңә еңелерәк... Нисек кенә Толстой бөйөк художник булмаһын, мин уны Горькийға алмаштыра алмайым!!! Был, әлбиттә, минең бер ҡатлы, балаларса ҡыҫҡырыуым. Аңлайым быны. Ләкин бына минең шулай ҡыҫҡыраһым килә был минутта. Һәм миңә нисектер рәхәт, яҡты, иркен!..

Бына ул, Бөйөк Дөрөҫлөк Кешеһе, минең алдымда ниндәйҙер мин белмәгән бер скульптор ҡулы эшләгән ябай бюста «Дауыл ҡошо» булып ултыра. Юҡ, яңылыш яҙам, бюст түгел, бюст һүҙлектә — кешенең баш яҡ ярты кәүҙәһенең скульптураһы, тиелгән; статуэтка был — кеше фигураһын бөтә буйы менән һүрәтләндергән һын — бәләкәй статуя. Уны беҙҙең туйыбыҙға бүләк итеп, Надя менән бер фабрикала эшләгән егет — Дмитрий килтергәйне. (Надя уны ҡалын иренле булған өсөн Митя-Губошлеп тип йөрөтә). Туй бүләктәренән миңә иң оҡшаған, иң ҡәҙерле бүләк шул ине. Мин уны ғүмер буйынса ватмайынса һаҡлағым килә. Бына, нишләптер, күҙгә йәш тула. Бына ул минең аллам бер ағас төбөнә ултырған да ниндәйҙер ғорур ҡараш менән башын юғары күтәреп, күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа-алыҫҡа төбәп, бер тубығын ике ҡулы менән дә ҡаушырып ултыра. Ә уның бер аяғына һөйәлеп ҡуйылған фотокарточкала Надя менән мин өй алдында үҫеп ултырған аҡ ҡайынға һөйәлеп торабыҙ. Донъялағы иң матур, иң ҡәҙерле аҡ ҡайын был миңә, ул әле яңы ғына япраҡтар ярып килә. Был япраҡтар шундай наҙлы, шундай кескәйҙәр әле, улар кисә генә бөрөләрен ярып сыҡҡандар ҙа май ҡояшының йылы нурҙары менән ҡойоноп, балланып, йылтырашып торалар. Уларҙы мин хәҙер сыйырсыҡ йөрәктәре кеүек кенә итеп күҙ алдыма килтерәм. Ләкин был ҡайындың башына мин элеп ҡуйған ояға бер ниндәй сыйырсыҡ та ояламаны, ә мин уны элгән саҡта: «Әгәр ҙә беҙ Надя менән пар була алһаҡ, был ояға ла пар сыйырсыҡ килер», — тип уйлағайным. Ләкин был юрау бушка сыҡты, сыйырсыҡтар был ояла бала сығарырға, бергәләп йәшәргә, бергәләп һайрарға теләмәнеләр. Ә беҙ... был яҙҙа бергә ҡауышмайынса булдыра алманыҡ. Муйылдар ап-аҡ булып сәскә атҡайнылар инде. Шул сәскәләр араһында, уларҙың хуш еҫенә иҫереп, шатлыҡтан иҫереп, бәхеттән иҫереп, беҙ туй үткәрҙек... Студенттар туйы ине был, иң матур, иң

ғәҙел, иң шатлыҡлы туй!.. Был миңә киҫәге генә булған кеүек. Ләкин ул көнгә инде тиҙҙән бына йыл да туласаҡ! Беҙҙең мөхәббәттең тәүге емеше булып улыбыҙ Салауат та тыуҙы. Был исемде беҙ уға тыумағанда уҡ ҡушҡайнык инде. Әсәһенең йөрәк аҫтында ҡыймылдаған саҡта уҡ мин уға:

— Салауат! — тип өндәшә инем. Ә ҡыҙ тыуырына мин нисектер күңелем менән ышанманым. Бына инде ул хәҙер Мәскәүҙә. Беҙҙең иң яратҡан аҡ ҡайыныбыҙ янында.

Надя уның тормошо тураһында телефондан тик бер-ике һүҙ менән генә хәбәр итте:

— Имә лә йоҡлай, йоҡлай ҙа имә!

Ғәжәп кеше был, атаһы тураһында уйлап та бирмәй. Ә мин?.. Һағынам уны, төрлөсә итеп күҙ алдыма килтерәм, илаған тауышын ишетәм, әсәһе менән бергәләп ҡойондораһым килә уны, йырҙар йырлап ҡосаҡлап йөрөтәһем килә, донъяға аҙашып ҡараған күгелйем ҡара күҙҙәрен күрәһем килә, уртаға ярылған сейә кеүек кенә ирендәренән үбәһем килә...

Был, моғайын, аталыҡ тойғолары була торғандыр инде. Ҡыҙыҡ был тойғо. Мин әле уны тойоп өлгөрә лә алманым, һәм мин ҡайһы саҡта уны ла, әсәһен дә иҫтән сығарам... Ләкин был эшкә сумғанда ғына. Эш ваҡытында ла әле ул кескәй генә йоҙроҡтарын сығарып:

— Онотма беҙҙе, атай! — тип янай һәм тағы ла үҙ эшенә керешеп, әсәһенең күкрәгенә тотона. Имә-имә лә тағы йоҡлап китә... Ярай, миңә лә йоҡларға ваҡыт!..

15 апрель.

Туҡтағыҙсы, зинһар, туҡтағыҙсы, уйҙарым!.. Юҡ, туҡтамайҙар улар! Ә баш ауырта. Бына төн уртаһында уянып киттем дә йоҡлай алмайым. Бүлмәм буш һәм һалҡын. Улым да юҡ, улымдан әсәһе лә юҡ янымда. Улар булһа, башым да былай ауыртмаҫ ине. Белмәйем, әллә һыуыҡ тейҙе, әллә йоҡламауҙан был. Кисәге дежурстонан һуң өйгә ҡайтып тормайынса, редакцияла ҡалдым. Бер мәртәбә типографияға төшөп мендем дә Горькийға тотондом. Ләкин оҙаҡ ултыра алманым шикелле, диванға тәгәрәнем. Иртән тороуға — баш таш кеүек ҡатҡан. Ғәжәпләндем. Был нилектән шулай? Сөнки мин редакцияла ҡунғанда һәр саҡ яҡшы, саф баш менән килеп тора торғайным. Һыуыҡ ҡына теймәгән булһа ярар ине. Көндәр һыуыҡ, ә мин апрель башынан бирле яланбаш йөрөйөм. Бер һалғас, яңынан кейгем килмәй. Ниңә һуң инде бындай фанатизм!.. Әллә бик күп тартыуҙан ауыртамы? Бөтәһе лә бергәлер инде, ахыры. «Отелло»ны ҡарап сыҡҡандан бирле ауырта.

Отелло! «Черный я..!» Ни тиклем көс, ни тиклем дөрөҫлөк һәм ни тиклем кешеләргә ышаныс! Ә был ышанысты алдайҙар! Яуыз Яго!.. Ялған, ялағай, яланғас «Я»!.. Ялған донъя!.. Бөйөк Ышаныстың алданыу трагедияһы! Пушкин ни тиклем тәрән аңлаған Шекспирҙы! Пушкиндан һуң хатта Горький ҙа Отеллоны көнсөллөк тибы тип яңылыш яҙған. Ә Отеллола ысынлап та кешегә Горькийса ышаныу!

Фильмда тик Дездемона ғына матур түгел. Отеллоны ғазаптары өсөн яратҡан сабый күңелле тиң булырлыҡ матур ҡыҙ юҡ. Шундай ғәжәп трагедияның был иң үкенесле кәмселеге!.. Дездемонаны йөрәк менән яратып булмай.

«Она меня за муки полюбила,
А я ее за состраданье к ним».

Сострадание — аяу, йәлләү, ҡыҙғаныу, ҡайғыһын уртаҡлашыу, Отеллоның ауыр ғазаптар менән үткән тормошон, уның кешелекле, саф матурлығы һәм уның шундай ҡаҡшау белмәҫ ихтыяр көсө, батырлыҡтар менән нығытылған тәүәккәллеге алдында баш эйеүсән мөхәббәт юҡ был Дездемонала.

Мин быны хатта бына хәҙер генә төшөмдә күреп уяндым... Әйтерһең, мин уйҙар ғазабын кисергән Отелло һәм минең шундай яғымлы, шундай нескә күңелле, шундай матур йөрәкле Дездемонам минең күҙҙәремдән, ирендәремдән үбә!.. Мин үземдең был ғазаптарымды аңлай белгән, уларҙы бөтә тәрәнлеге менән күреп, үҙенең мөхәббәте менән баһалай белгән ҡатын-ҡыҙ тойғолары алдында баш эйәм!..

Юҡ, юҡ ул мин уянып киткәс!.. Ул ҡайҙалыр алыҫ Мәскәүҙә минең улымды, кескәй генә Салауатымды тирбәтә, имеҙә, иркәләй... Ә мин яңғыҙ, бүлмәм буш һәм һалҡын. Мин тик ошо юлдарҙы яҙып ҡына йыуанам, йылынам һәм был һалҡын бушлыҡ ниндәйҙер бер йәнлелек менән тулған кеүек. Мин һаман да әле хат яҙа алмайым һиңә, Надя! Кисер мине, ҡәҙерлем!.. Быға һин үҙең дә ғәйепле. Мин яҙмаһам, һин үҙең яҙырға тейеш инең. Ә һин минең яҙыуымды ғына көтәһең!.. Ә, бәлки, көтмәйһеңдер ҙә? Сөнки минең менән йәшәү, минең ҡатыным булыу бик еңел эш түгел, дуҫҡай! Ни тиклем мин һине бәхетһеҙ итеүемдән ҡуркҡанлығымды белһәң ине!.. Был минең берҙән-бер ҡурҡынысым. Мин үҙем өсөн ҡурҡмайым. Мин үземдең йәшәү маҡсатымды, был маҡсатҡа барыр юлымды һәм был маҡсатҡа юл күрһәтеүсе кешемде тапҡанмын инде...

Бына ул кеше минең эргәмдә ултыра. Мин ул ҡушҡанса эшләйем, уҡыйым, яҙам. Һинең өсөн уның һуңғы китабы тураһында яҙған уйҙарымды хәҙер үҙ телемә тәржемә итәм. Тиҙҙән был эш бөтәсәк. Һәм мин иркенләп тын аласаҡмын. Сөнки был — Еңеү! Белһәң ине һин Еңеү шатлығын, Надя!

Был иң матур шатлыҡ донъяла — эшең менән еңеү шатлығы! Беләм, уның минең өсөн күпмегә тороуын аңлай белмәгән кешеләр ҙә булыр, улар бар ҙа инде... Ләкин күп кешеләр уны йылдар үткәс тә баһалай белерҙәр. Мин быға ышанам! Шул ышаныс ҡына мине көслө итә. Бәлки, мин эшләгән эш үҙем теләгәнсә көслө лә булып сыҡмаҫ. Ләкин ул минең бөтә күңелемде һалып эшләгән эшем! Һин бының беләһең, Надя. Уны баҫып сығарыу тураһында бөгөн журнал редакторы менән һөйләштем. Ыңғай фекер әйттеләр. Мәҡәләнең русса тексын Әхнәф Харисҡа уҡырға биргәндәр. Яҡшы! Был кешегә мин бик ҙур хөрмәт менән ҡарайым. Кешегә иғтибарлы кеше. Мин әле малай ғына саҡта ул мине Мәскәүгә, Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәргән кеше. Мин уның байтаҡ ҡына ярҙамдарын күрҙем. Минең эшем уға оҡшаясаҡ. Нисектер ышанам. Кешегә, уның яҡшылығына ышаныу күңелле.

Бына бөгөн Ихсан менән һыра эсеп ултырҙыҡ. Байтаҡ нәмәләр тураһында һөйләштек. Мин уны юҡҡа ғына артыҡ түбәнһетеп күргәнмен. Бергә эшләй башлағандан бирле ул миңә оҡшай башланы. Эшен яратып эшләй. Тик нимәлер етмәй уға. Артыҡ тарҡау булһа кәрәк. Уйлап еткермәй. Һәр саҡ иғтибар итеп тороуҙы талап итә. Әлбиттә, был кәрәк. Бөгөн уға Горькийҙың утыҙынсы томын алдырҙым. Уҡыһын әйҙә. Был уға тәүге тәжрибә!..

22 апрель.

Надяға хат яҙып бөттөм дә, баш аҫтыма костюмды йәйеп, диванға яттым... Һәм шунда уҡ йоҡлап киткәнмен. Иртән, нисек ятҡан булһам, шулай ҡилеп торҙом. Үлек кеүек йоҡлағанмын. Редакциялағы шул диванда ятып йоҡлауҙан да тәмле йоҡо юҡ. Баш саф, күңелгә яҡшы. Тышта ҡояш. Радионы борҙом — Ленин тыуған көн!..

27 апрель.

Надя менән телефон аша һөйләштек. Тауышы насар ишетелә, ул нисектер бойоҡ. Ә Салауат үҫә, бик яҡшы, ти. Шулай ҙа был һөйләшеүҙән нисектер күңелгә ауыр булып ҡалды. Ниңә ебәрҙем инде уларҙы!.. Ахмаҡтың ахмағы мин!..

Дипломды көҙгә ҡалдырғандар. Ә госэкзаменға май аҙағында килергә. Тағын да бер ай көтөргә!.. Күңелһеҙ хәбәр.

— Тиҙерәк кил, Рәми!.. — ти Надя. Үҙе саҡ-саҡ ҡына илamай. Уға бигерәк тә ҡыйын, ахыры. Май байрамын үткәрергә Рафаэлдәр үҙҙәренә саҡырғандар. Рафаэль ҡарап ҡына йөрөтһә ине инде.

28 апрель.

«Әҙәби Башҡортостан»ға «Клим Самгиндың тормошо»н илтеп бирҙем. Хәким ағай ҙа, Әхнәф Харис та ыңғай фекерҙәләр. Июнь номерына биреләсәк. Хәким ағай һуңғы шифырҙы уҡып:

— Көслө шифыр бит был! — тине һәм үҙенә алып ҡалды. Бәлки, май номерында «Таш сәскә», «Ҡайтыу» һәм «Кәмәлә» менән бергә баҫылыр.

Хәким ағай менән квартира тураһында, Плеханов һәм Луначарский тураһында һөйләшеп ултырҙыҡ. Уның ҡатыны ла ул тапҡан. Исеме — Азамат.

— Беҙҙең дә икенсе ул тыуһа — Азамат буласаҡ! — тинем мин. Ул көлдө.

Кис аҡса бирҙеләр. Ихсан менән салбар эҙләргә сығып киттек. 632 һумға бер салбар кейеп алғас, Миәссәр, Ихсан һәм мин — өсәүләп «йыуырға» киттек тә бәләгә ҡаптыҡ. Ресторандан сыҡҡанда инде беҙ иҫерек инек. Ихсан бер иҫереккә бәйләнде:

— «Мин һине котлетҡа әйләндерәм!»

Һүҙҙән-һүҙ, йоҙроҡтан-йоҙроҡ китте. Мин айырырға ла өлгөрмәнем, милиционерҙар эләктереп тә алдылар. Ә мине машинаға ултыртманылар.

Урамда кисәге күргән һатыусы ҡатын осрап:

— Минең ирем бик көнсөл бит, — тип әйтергә лә өлгөрмәне, ире килеп сыҡты. Иҫерек булһа кәрәк.

— Ниңә һин минең ҡатын артынан йөрөйһөң! — тип яҡанан бөрөп алды ла һуғышырға саҡырҙы. Ә минең ҡулда әйберҙәр, китаптар.

— Мин һиңә ҡулымды бысратмайым, — тинем. Һәм ул ҡатынын елтерәтеп алып ҡайтып китте. Бик тупаҫ әҙәм, үҙе артист! Ҡатынына көн күрһәтмәй, ахыры. Уныһы бер меҫкен кол кеүек. Беҙ Надя менән Өфөгә ҡайтҡанда поезда бергә килгәйнек. Надя менән күрешеп-һөйләшеп йөрөйҙәр ине. Бала тапмай — аборт яһатҡан ҡатын. Үҙе бик йәш кенә. Бик кыҙғаныс хәлдә.

Был күренештән һуң мин баҡсаға барып ултырҙым. Юлда Назар Нәжми, Ғилемдар ағай һәм Муса Ғәли йондоҙҙарға ҡарап торалар ине, уларға күренмәй генә уҙып киттем һәм мин дә йондоҙҙар ҡарап ултырҙым.

Төн йылы, ағастар яңаҡ ярырға әҙерләнәләр. Кеҫәнән бер лимон килеп сыҡты — ҡайҙан килеп эләккәндер!.. Ашағас, бөтөнләй айныным буғай, трамвайға ултырҙым да ҡайтып киттем. Ишекте Хәлил ағай асты. Йоҡо килмәй — альбомдар аҡтарып, Надяның һүрәттәрен ҡарап яттым. Тиҙҙән инде беҙҙең өйләнешеүгә бер йыл да тула!.. Ә ваҡыт иҫ киткес тиҙ үтә. Бөтәһе лә кисәге генә булған кеүек...

Ресторанда беҙҙең менән бергә Баязит Бикбай ҙа бергә ултырҙы. Мине үлтерҙе ул:

— Һинән, Рәми, шағир сыҡмай. Һин ғалим булырға мөмкинһең, ә шағир була алмайһың. Һин бик аҡыллы егет, ике кәмәнең ҡойроғон тотоп булмай ул. Шағирҙар бит чудаковатый була. Янырға кәрәк. Янмайынса шиғыр яҙып булмай. Ғәфү ит мине, ләкин мин һиңә, ҡустым, дөрөҫөн әйттем,— тине ул. Был һүҙҙәрҙе ишетеү бик ауыр булды миңә. Бәлки, ысынлап та, шулайҙыр? Ә мин яҙам. Китап та баҫтырып сығарҙым. Ә ул үҙе бик йылы рецензия ла яҙып сыҡты. Бөгөн килеп миңә: «Һинән, Рәми, шағир сыҡмай»,— ти! Ғәжәп! Ниңәлер мине аҡыллы итеп ҡарайҙар. Ләкин минән дә ахмағыраҡ кешеләр бармы икән һуң? Тик мин шул тиклем үҙемдең ахмаҡлыҡты йүгәнләп тотам ғына!.. Бөтәһе лә эстә яна, кешеләргә үҙемдең ҡайғыларымды, ғазаптарымды күрһәткем килмәй. Ә минән дә буталсыҡ кеше юҡ кеүек...

Маркс шағирҙарҙы йүләрерәк була тигән. Ә мин, тимәк, йүләр түгел!.. Үҙемде-үҙем генә йүләр тип йөрөгәнмен, ахыры. Ғәжәп, ғәжәп. Ғөмүмән, кешеләр бик ҡатмарлы!..

Ләкин мин яҙмайынса булдыра алырмынмы икән һуң? Белмәйем. Хәҙергә был хәлемдән килмәй минең. Мин үҙемде бер кемдең дә ҡулы теймәгән ҡыҙ кеүек итеп тоям. Һәм мин үҙемдең ҡыҙлығымды нисек итеп инде яратмаған бер кешемә бирәйем ти? Булмай! Бер нисек тә булдыра алмайым. Үлермен, ләкин намыҫымды бер кем дә таптай алмай. Поэзия ул минең намыҫым!.. Мин уны тик бер кешегә генә — халҡыма ғына, туған телемә генә бирә алам.

Был, әлбиттә, ҙур һүҙҙәр!.. Ләкин мин уларҙы үҙем өсөн иң ауыр саҡта ғына әйтә алам. Был һүҙҙәр ни тиклем ҙур булһа ла, мин уларҙы йөрәгемә һыйҙыра алам.

Шулай ҙа ауыр миңә!.. Бязит ағайға үҙемдең намыҫымды яҡлап ҙур хат яҙаһым килә. Дөрөҫ аңлай белмәй ул мине. Юҡ, яҙмайым. Бәлки, берәй ваҡыт һөйләшеп ултырырбыҙ әле. Киләсәк күрһәтер. Мин нишләптер үҙемдең киләсәгемә бик ныҡ ышанам.

Кешеләр яңылыша, ләкин ваҡыт үҙенекен итә. Бөтә фекерҙәр ҙә, бөтә хистәр ҙә ваҡыт менән генә һынала!..

29 апрель.

Иртән Миәссәр менән Ихсан килеп керҙе. Эштәр хөрт. Ихсан милиция бүлегендә ятып сыҡҡан. Редакцияла ла белгәндәр. Ҙур ғына тауыш ҡубасаҡ. Барыһына ла мин ғәйепле: ҡарап тороп һуғыштырҙым бит! Айырманым. Мин Ихсанды аҡылға ултыртырҙар аҙыраҡ, тип уйлағайным. Ә ул һуғышҡан егетенең күҙенә ултыртҡан — күҙе күренмәй, ҡап-ҡара янып

сыҡҡан, ти Ихсан. Үҙенең костюмы ҡанға буялып бөткән. Ҡан йыуылыр, ләкин был араҡының эҙенән байтаҡ ҡына ҡыҙарып йөрөргә тура киләсәк.

Ҡалаға киттек. Майҙы бергә үткәрергә булдыҡ. Тик, нишләптер, күңел тартмай. Мунса инеп сыҡҡас, «Родина» кинотеатрында «Девушка из Бомбея» картинаһын ҡараным. Икенсе ҡабат күрҙем инде. Бик матур музыка! Шамала Надя менән ниндәйҙер уртаҡлыҡ бар!..

12 октябрь.

Нимә эшләргә?

Йыйылыштан сыҡҡандан һуң, өйгә ҡайтып еткәнсе шул хаҡта уйланым. Был һорау хәҙер миңә бер минутҡа ла тынғы бирмәйәсәк.

Ысынлап та, нимә эшләргә миңә?

Мин бит бөгөндән алып «Совет Башҡортостаны» газетаһының комсомол ойошмаһы секретары!..

Эште нисек итеп, нимәнән башларға?

Минең быға тиклем был эштә эшләгәнем юҡ, тимәк, тәжрибә лә юҡ тигән һүҙ. Етмәһә, мин бик ҡыйыуһыҙ, яй һәм «шым» кеше... Үҙ тәбиғәтем — үҙемә дошман. Өҫтәүенә, йыйылыш-фәләндәрҙә һөйләй ҙә белмәйем, бик тулҡынланам, һәм, нисектер, үҙ тауышымды ишетеүҙән үҙем ҡурҡҡан кеүек-мен. Ә миңә хәҙер һәр бер йыйылыш, һәр бер ултырыш һайын сығыш яһарға тура киләсәк. Иң ҡурҡытҡаны — шул инде.

Ә йәнһеҙ, ҡоро, бушты-бушҡа ауҙарып һөйләнеүҙәрҙе мин йәнем-тәнем менән күралмайым.

Һүҙ әйткәс — һүҙең кешеләрҙең күңеленә инерлек, яндырырлыҡ, уйландырырлыҡ булһын!

Кешеләр менән эшләүҙән дә ауыр эш юҡ. Һәр бер кешенең үҙ тәбиғәте, үҙ донъяһы, үҙ тормошо бар. Уларҙың һәр береһенә төрлөсә яҡын килә белергә, эсенә үтеп инә белергә, уртаҡ тел таба белергә кәрәк. Шунһыҙ бер эш тә сыҡмаясаҡ. Ә эш ҙур, ҡатмарлы һәм ҡыйын. Нисек кенә булмаһын, һиңә кешеләр яҙмышы бәйләнгән. Ысын етәксене мин башҡаса күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Миңә нәҡ бына шундай ысын етәксе булырға кәрәк. Был — минең теләгем, уйым һәм кешелек бурысым.

Был бурысты түләй алырмынмы һуң мин? Был ышанысты аҡлай алырлыҡмы һуң мин? Бының өсөн мин нишләргә, эште нимәнән башларға тейешмен? Үҙемдән! Башҡа бер кемдән дә түгел. Үҙемдең эштән, үҙебеҙҙең әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлегенән... Ә бүлектә эштәр шәптән түгел.

Икенсе иң кәрәкле эш — стенгәзиткә иң ҙур иғтибарҙы бирергә һәм уны ысын ҡоралға әйләндерергә.



Р. Фәрипов ҡәләмдәш дуҫтары — С. Әлибай, Т. Йосопов, Д. Бүләковтар менән. 1973 йыл.

Өсөнсө — ойошмалағы ун бер комсомолецтың һәр береһенә үҙенең ҡулынан килерҙәй, яратып башҡарырлыҡ эш бирергә.

Бөгөнгә етеп торор, йыйылыш тураһында иртәгә яҙырмын. Башҡа бик күп фекерҙәр килде. Былай ғына яҙып бөтөрөрлөк түгел.

Иртәгәнән эшкә башларға кәрәк.

Иң беренсе эш — редакция йорто уртаһында баҡса булдырырға, эште ағастар ултыртыуҙан башларға кәрәк. Йыйылышта мин шундай тәҡдим индерҙем. Бөтәһенә лә был тәҡдим оҡшаны. Бигерәк тә үҙемә. Был минең күптәнге хыял.

Ҡайҙа ғына булма, ҡайҙа ғына эшләмә, Горький әйткәнсә, үҙ артыңдан йәшел эҙ — йәшлек эҙе ҡалдыр!..

13 октябрь.

БЮРОКРАТ I

Эшләү ауыр буласаҡ. Беренсе аҙымда уҡ ҡаршылыҡ!..

Иртән редакцияға килгәс тә үк, редакция йортона сығып, йорт уртаһында өйөлөп ятҡан ике ҙур сүп-сар тауына ҡарап торҙом. Ҡайҙан сыҡҡан был тиклем ер!.. Был ике тауҙы ҡул көсө менән генә юҡ итеү мөмкин түгел. Машина менән сығарғанда ла бер йөҙ йөктән кәм булмаҫ. Көрәктәр менән дә эш сыҡмаясаҡ. Экскаватор кәрәк. Майҙаңды һуңынан кирбес-таштарҙан таҙартырға кәрәк. Шунан һуң ғына ағастар ултыртыу мөмкин.

Эште нисек башлап ебәрергә? Кәңәшләшергә кәрәк. Фүмәргә керҙем. Фүмәрҙә минең иң ҙур таяныс. Унан һуң, әлбиттә, Флюра. Ул элекке секретарь, хәҙер — минең ярҙамсым. Дәртле ҡыҙ. Ләкин үҙе: «Мин инде хәҙер эт ҡайышына әйләнеп бөткәнмен инде», — ти. Кисәге йыйылыштан һуң беҙ уның менән тәүге ҡабат асыҡтан-асыҡ бөтә күңелдән һөйләшеп ҡайттыҡ. Быға тиклем... һөйләшмәү хатта бик ғәжәп һәм сәйер булып тойолдо миңә. Үҙенең бөтә зарҙарын һөйләп ташланы. Мин уйлағанса, фекерҙәр — уртаҡ. Ә Фүмәр менән инде мин күптән бирле таныш, ул художник булғас, уның менән редакцияла эшләй башлағандан бирле бер-беребеҙгә яҡынбыҙ. Ә башҡаларҙы тик эш буйынса ғына беләм.

— Ну, Фүмәр, нишләйбеҙ? Эште нимәнән башлайбыҙ?

— Баҡсанан башлау кәрәк булыр, — тине ул. Икәүләп Флюраға индек тә коридорға сығып ҡына тәүге кәңәшмәне үткәрҙек һәм нәшриәт директоры Зәки Фәттәхов менән һөйләшергә булдыҡ.

Беҙҙең бер юлы өсәүләп килеп инеүгә ул бер аҙ аптырап ҡалды булһа кәрәк. (Ҙур бер конвертҡа «Москва, ЦК КПСС»

тип яҙып ултыра ине. Мин уның бөтә хәрәкәттәрен күҙәтеп торҙом.)

— Беҙ һеҙгә ҙур йомош менән керҙек, — тине Фүмәр уға. Директор өҫтәл өҫтөндәге быялаға бармаҡтарын бер-береһенә ҡаушырып ҡуйҙы ла, башын артҡараҡ ташлай биреп:

— Йә, ниндәй йомош? — тип өсөбөҙгә лә сәйерһенеп кенә ҡарап алды һәм йөҙөндә йылмайыу билдәләре яһаны. Мин уның ҡаушырылған бармаҡтарының быяла өҫтөндә бейеүен ҡарап торҙом.

Фүмәр бик ҡыйыу ғына итеп бөтә эште аңлатып бирергә кереште. Директор бармаҡтарын бер-береһенән ысҡындырып, өҫтәл өҫтөндә ятҡан шырпы ҡабынан теш таҙартҡыс ярып алып, үҙенең иң төп эшенә күскән һымаҡ, тәмләп-тәмләп, тештәрен соҡой башланы. Һәм йөҙөнә төрлөсә ҡиәфәттәр сығарып, һәр бер һүҙгә үҙенең ғүмер буйы ятланған һүҙҙәрен бүләк итә торҙо. Беҙҙең был инициатива, уныңса, әлбиттә, бик яҡшы... Ләкин... бөтә нәмә Ағиҙел күперенә барып бәйләнгән һәм йортто сүп-сарҙан таҙартып, баҡса ултыртыу райком һәм горком ҡөҙрәтенән башҡа бер нисек тә мөмкин булмаған хәл. Ул үҙенең бөтә дәлилдәре менән был фекерҙе раҫлап, райком һәм горком етәкселәренең телефон номерҙарын бер карточкаға яҙып бирҙе. Ләкин был номерҙар барып сыҡманы. Сөнки Өфө менән Черниковск ҡалаларының бергә ҡушылыуына бер нисә ай үтеп китеү сәбәпле, телефон номерҙары ла алмашынып бөткән икән!.. Шулай ҙа ул телефон номерҙарын табып бирҙе. Күп һорауҙар менән беҙ телефон хужаһын борсоп торманыҡ. Уның ике сүп-сар тауы араһында аптырап ултырыуы беҙгә асыҡ ине инде. Мин уның Яңы йылға ҡаршы яҙылған бер мәҡәләһен дә иҫкә төшөргәс, был ағайҙың ижади эшмәкәрлеге лә уның хужалыҡ эшмәкәрлегенә ярашлы икәнлегенә бер ниндәй ҙә шик-шөбһә ҡалманы.

Беҙ парторг Зөлҡәрнәев ағай менән генә кәңәшләшергә булдыҡ, ул беҙҙең инициативаны хупланы, һәм беҙ ВЛКСМ-дың район комитеты менән һөйләштек. Эште дүшәмбе ҡарарға булдылар.

Был тәүге ҡаршылыҡ беҙҙе нисектер дәртләндереп ебәрҙе. Мин Фүмәр менән Флюраның миңә бик ҙур таяныс буласаҡтарына ла ышандым. Тик был ялҡын һүрелеп кенә ҡалмаһа ине.

— Фәттәховтан да бюрократ кеше юҡ, — тине Флюра.

— Бюрократ I булды улайһа, — тинем мин. Көләштәк тә был эште Фүмәргә тапшырҙыҡ. Йәшеллек өсөн ул яуаплы. Кейгән костюмы ла йәшел, әйҙә, йәшеллек эшен дә ул алып барһын. Был — беҙҙең ойошма алдында тәүге крепость, тәүге ҡаршылыҡ. Коллективты туплауҙа был эш тәүге һынау буласаҡ.

16 февраль.

Башҡортостан китап нәшриәтендә эшләй башланым. Бөгөндән алып мин — редактор. Хәйерле булһын!..

Редакция мөдире Фәрит Иҫәнғолов:

— Аяғың еңел булһын әйҙә! — тип, эш планы менән таныштырып сыҡты.

Эш ҡыҙыҡ, минең үҙ эшем был.

Шәйехзада Бабичтың, Дауыт Юлтыйҙың һайланмаларын, Крыловтың баҫняларын, «Йәш көстәр» альманахын, Рабиндранат Тагорҙың хикәйәләрен һәм Горькийҙың «Фома Гордеев» китабын сығарырға кәрәк.

Эште ҡайҙан, нимәнән башларға?

Горькийға тотондом! Күңелгә иң яҡын эш шул кеүек. Тәржемә — Хәсән Мохтарҙыҡы. Редакторлауҙы Әкрәм Биишев башлаған — мин уны дауам иттерергә тейешмен. Сөнки мин уның урынына күстем. Ә ул филиалдың президиумына китте.

Эш еңелдән булмаһа ла, ҡыҙыҡлы буласаҡ. Сөнки үҙеңә үҙең хужа! Бер кем дә һине тартҡыламай, бер кем дә һиңә ҡыҫҡырмай. Үҙ алдыңа эшләйһең, һәм бөтәһенә лә үҙең яуап бирәһең. Ә газетала бит редакторҙан алып корректорға тиклем эте лә, бете лә йәнеңде кимерә. Секретариат та тартҡылай, авторҙар ҙа йөҙәтә. Газета көн һайын сыға — көн һайын уға сейле-бешле әйберҙәрҙе бешереп биреп кенә өлгөрт!.. Мин эште минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе тип эшләй белмәйем. Ҡулдарым да бармай, намыҫым да ҡушмай. Үҙ эшемә теләһә кемдең ҡулын да тыҡтыраһым килмәй. Эште еренә еткереп, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәҫлек итеп эшләйһем килә. Сөнки газетаны халыҡ уҡый, уның ҡулына буш нәмәләр тоттороу — енәйәт!.. Уға биргән нәмәләр уҡырлыҡ булһын...

Ләкин редакцияла минең был ҡараштарым һәм минең был тәбиғәтем менән иҫәпләшеп тормайҙар.

— Давай оперативность ! — тип ҡыҫҡыра ғына беләләр. Ә ҡулынан эш килерҙәй кешеләр бик аҙ. Күбеһе наҙан һәм ҡурҡаҡ. Телде лә белмәйҙәр. Редакцияла корректорҙан редак-

торға тиклем (күбеһе) татар... Һәм шул кешеләр башҡортса газета сығарырға тейеш! Үҙҙәре белмәгән һүҙ булһа (ә улар бик күп), был һүҙ башҡорт телендә юҡ, тип ҡысҡырырға ғына торалар. Дежурный булған көндәрҙә һуғыша-һуғыша нервыларың ҡалмай, төҙәтә-төҙәтә күҙҙәрең сыға. Етмәһә, корректорҙары ла, редакторҙары ла:

— Баш ҡитмәҫлек хата булмаһа, ниңә уны төҙәтеп ултыраһың! — тип ҡысҡыралар, типографияға төшһәң дә — шул уҡ «философия». Дежурный булған көндәрҙә бөтә йәнең-тәнең иҙелеп ҡайта. Фәҙәттәге көндәрҙә лә эшем бөтмәй тороп, башҡалар кеүек ваҡыт етеү менән үк ҡайтып китә алмайым.

Эшләйһең, эшләйһең — эшеңде күргән кеше лә юҡ. Бына бер йыл мин әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеген бер үҙем тиерлек алып барҙым. Йылдар буйы өйөлөп килгән материалдарҙы хәл итергә — хаттар яҙырға, бүлектә таҙартырға тура килде. Шул арала экзамендарға әҙерләнергә, диплом да яҡларға кәрәк ине. Етмәһә — комсомол ойошмаһына секретарь ҙа итеп ҡуйҙылар...

Тел буйынса дискуссия материалдарын һәм Бабич менән Юлтый шиғырҙарын баҫтырыу өсөн редакторат менән дә, секретариат менән дә һуғышырға тура килде. Бабич һүрәтһеҙ сыҡты, ә Дауыт Юлтыйҙың һүрәтен художник Мөхәмәтшин менән цинкографтарҙан ялбара-ялбара, секретариатҡа әйтмәйенсә эшләтеп, подпольно сығарып ебәрҙек.

Тел һәм әҙәбиәт уҡытыу, башҡорт культураһының яҙмышы тураһындағы дискуссия материалдары өсөн редактор Рамазанов менән дә, урынбаҫары Вахитов менән дә бик нык бәрелешеп алырға тура килде.

Мине милләтселек юлына баҫыуҙа ғәйепләргә һәм, коммунист булараҡ, миңә, комсомолецҡа, аҡыл өйрәтергә тырыштылар. Юҡ, мин бынан тамсы ла «аҡылға» ултырманым! Тик күңелдә бик ауыр тойғолар ғына тороп ҡалды.

Дискуссия барып сыҡманы, уны төрлөсә юлдар менән баҫып, томалап ҡалдырҙылар. Материалдарҙы бик нык ҡыҫҡартып, «бестереп» һәм бер-береһенән бик нык айырып, бер нисә көндәр үткәс кенә, сығарҙылар. Бик күп материалдар баҫылмайынса, «обзорға» ғына тороп ҡалды. Бына һиңә матбуғат ирке!.. Бына һиңә милли культура тураһында ҡайғырыу!..

Ҡайғыңдан, теләһең, аҫылынып үл! Ә көрәшер өсөн яңғыҙ булмаҫҡа кәрәк! Бер нисә генә кеше был эште эшләй алмай. Бөтә урында юғарыға ҡарап табыналар. Бөтәһе лә үҙ урыны өсөн ҡурҡа, ҡалтырай. Йөрәгендә халҡы булған кешеләр беҙҙә бик аҙ шул әле. Уларҙы ултыртып, төрмәләрҙә ҡырып

бөткәндәр. Ә тороп ҡалғандарҙың ҡото осоп бөткән. Йәштәр уйларға, ҡайғырырға, янырға белмәйҙәр. Түргә ултырған һәр береһе сабатаһын түргә элә, кабинетҡа, яҡшы квартираға инеп алғас, халҡын да онота... Хатта туған телен дә онота!.. Шулай итеп, кешеләр кеше булырға ла онота...

Ә эш эшләрҙәй егеттәр эш тураһында түгел, ҡайтып йоҡларлыҡ бер мөйөш тураһында уйларға мәжбүр була. Торорға уларҙың квартиралары юҡ, бурыстарын түләргә аҡсалары юҡ, ижад утында янаһы урынға донъя ваҡлыҡтары тураһында уйлап, меҫкен хистәр менән быҫҡырға мәжбүрһең...

Өйгә ҡайтыуыңа ҡатының:

— Утын бөтә, аҡса юҡ, — тип ҡаршы ала. Балаң һалҡында күгәреп илап ултыра. Күңелһеҙ булып китә, йөрәгең әрней, ҡайғыларҙан башың ҡата.

Ни тиклем фәкир беҙ — китаптарыбыҙҙан башҡа бер нәмәбеҙ ҙә юҡ.

Был хаҡта уйламаҫҡа тырышаһың, был хаҡта яҙыуы ла оят, ләкин уйламай сараң юҡ, был уйҙар һинең кешелегеңде иҙә, йәберләй һәм кәмһетә.

Ни тиклем бирешмәҫкә тырышһаң да, бирешәһең. Юҡ ҡына нәмәләр өсөн дә яратҡан ҡатыныңа ауыр һүҙҙәр әйтәһең, шул һүҙҙәрең өсөн һуңынан выжданың ғазаплай. Ҡайһы саҡтарҙа өйгә ҡайтаһың килмәгән көндәр ҙә була. Ҡайҙа барырға ла белмәйһең.

Күптәр эсәләр, ә мин хатта быны ла булдыра алмайым бит. Кешеләр менән һөйләшеп ултырыр инең, һөйләшерлек һүҙең дә юҡ. Ҡайғыларың ғына бар. Уларҙы тештәрең араһына ғына ҡыҫаһың да өндәшмәйһең. Был хаҡта һөйләшеү миңә кәмһеткес булып тойола.Был хаҡта башҡаларҙы ла тыңлайһың килмәй. Юмористарға — еңелерәк, ләкин, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, мин юморист та түгел, исмаһам!.. Ә ғүмер үтә, йәшлек үтә, иң ҡәҙерле алтын ваҡыттарың үтә!.. Эшләнгән эш бик аҙ. Күңелдә ҡәнәғәтһеҙлек. Донъя менән дә, үҙең менән дә риза түгелһең. Тәбиғәткә, балаларға ҡарайһың — бер аҙ еңелерәк булып ҡала. Ләкин һуңынан тағы ла ауырыраҡ. Тәбиғәт үҙенең сафлығы, матурлығы, бөйөклөгө менән һинең тормошоңдоң ни тиклем тәбиғи булмауын күрһәтә. Ә балалар һинең ни тиклем уларҙан алыҫайған булыуыңды әйтә. Ни тиклем саф уларҙың ҡараштары, ни тиклем ғәмһеҙ һәм хәйләһеҙ...

Ауыр миңә, ҡайһы саҡта бик, бик ауыр. Кешеләргә хатта ышанысың ҡаҡшаған кеүек. Был — иң ҡурҡынысы!.. Ҡайҙалыр юғалаһың, онотолаһың килә. Ләкин онотолоп та, юғалып та булмай. Күңелдә өмөт бар. Үтер, барыһы ла үтер әле, тип йыуанған булаһың. Былар бөтәһе лә ваҡытлыса, тиһең.

Тарихҡа ҡара! — тиһең. Шундай ауыр саҡтарҙа мин үткәндәргә ҡарайым һәм күңелгә яҡты, матур, аҡсаһыҙ киләсәк бик яҡын булып тойола. Шул киләсәкте яҡынайтыу өсөн нимәлер эшләргә, файҙалыраҡ булырға тырышаһың.

Һәм бына мин яңы эшкә килдем.

Ә кешеләр ҡайҙа ла кеше!..

17 февраль.

Әйе, кешеләр ҡайҙа ла кеше... Мин үҙемдән дә, кешеләрҙән дә ҡәнәғәт түгел. Кешеләрҙең күбеһе еңел генә йәшәргә яраҡлашҡан, үҙенең тормошон бер төрлө юлға һалып алһа, күптәргә шул еткән. Уйларға ла, тойорға ла, һөйөргә лә, нәфрәтләнергә лә ҡурҡа улар. Үҙ-үҙҙәре менән ҡәнәғәттәр, тыныстар!..

... Хатта дуҫым Әсғәт тә шул юлға төшөп бара, шикелле. Элекке Әсғәт түгел. Бик нығытып һөйләштек. Үҙен аҡларлыҡ бер һүҙ ҙә әйтә алманы һәм аҡланманы ла.

Мин уға, бер көн кис ултырып, һуңынан үҙен АҒиҙел күперенә алып барып, бөтә ҡараштарымды, бөтә уйҙарымды һөйләп бирҙем. Башҡорт теле, әҙәбиәте һәм сәнғәте, уларҙың үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында үҙемде ғазаплаған бөтә мәсьәләләргә лә ҡағылдым.

— Айырылдың һин, Әсғәт. Башҡортостан һиңә хәҙер ҡунаҡҡа ҡайтыу урыны ғына, ә беҙгә... бына үҙең күреп тораһың, хат яҙырға ла ваҡыт юҡ.

— Нишләйһең инде, — ти Әсғәтем, — фотограф булып ҡайтайыммы?

— Юҡ, кинооператор булып!..

— Давай, ас әйҙә студияңды!

— Бергәләп асырға кәрәк. Башҡортостанда быныҢ өсөн бөтә мөмкинлек бар, минеңсә...

Һүҙ бына шул хаҡта — Башҡортостанда киностудия асыу мәсьәләһен күтәрергә кәрәклек тураһында.

Артистар һәм режиссерҙар буласаҡ. ГИТИС бына тигәндәрҙе сығарырға мөмкин. Бер ҙә булмаһа, Татарстан менән уртаҡ бер студия төҙөргә мөмкин.

Беҙҙең бөгөнгө артистарҙың да ҡулдарынан байтаҡ нәмә килергә мөмкин. Тик уларҙың ҡулдары ғына бәйле. Хатта рәхәтләнеп уйнарлыҡ театр ҙа юҡ бит. Булғанын да һаман ремонтлап бөтмәйҙәр. Йәй буйы, ҡыш буйы маташалар. Беҙҙең Культура министерствоһы башҡорт культураһы өсөн эшләмәй, минеңсә. Юҡһа, булыр ине беҙҙең редакциялар ҙа, типографиялар ҙа...

Татарҙарҙың театрҙары ла, китап фабрикаһы ла, матбуғат йорто ла бар. Ә беҙҙең иҫ киткес ғәмһеҙлегебеҙ генә бар. Был бик күңелһеҙ булмаһа, әлбиттә, бик көлкө булыр ине...

«Наше чувство родины складывается из любви к тому месту, где родился, и устремлением вдаль, путешествием, расширяющим и обогащающим нашу родину».

М. Пришвин

В очерке своем «В Сирийской пустыне за Ефратом» Ник. Тихонов приводит старую китайскую поговорку: «Лучше один раз увидеть, чем сто раз услышать».

«Смотрите, слушайте, ощущайте, пользуйтесь всеми своими чувствами и неиссякаемой жаждой новых впечатлений. Пусть ваши юные головы и руки не знают усталости в работе и отдыхе, пусть ваши сильные ноги не устанут карабкаться на горы и танцевать, ищите себе друзей и подруг, слушайте и создавайте музыку, отвергайте жестокость во всех ее проявлениях, откройте ваши сердца, как этого требует ваша человеческая природа, и боритесь со всем, что мешает братским отношениям между людьми.

Если молодые люди повсюду будут следовать этому наказу, мы, наконец, увидим мир столь же прекрасным внутри, как и снаружи, мы будем жить жизнью такой же увлекательной и величественной, как и сама земля, на которой мы живем, — чудесный дворец, в котором не должно быть грязи».

Эдисон Маршалл, американский
писатель-путешественник.
«Вокруг света», 1, 1957.

«Польша» журналының редакторы Дориан Плонскийға Вас. Захарченконың бик ҡыҙыҡ хаты баҫылғайны. Бөгөн шуға Плонскийҙың яуабын уҡыным. Ҡыҙыҡ. Бер нәмәһен дә ҡабул итмәгән. Үҙем менән бергә уҡыған Ричард Донецкий иҫкә килеп төштө. Нишләй икән ул? Беләһе килә. Шул Плонский менән ниндәйҙер уртаҡлығы бар ине.

Лозунг «Пусть расцветают все цветы, пусть соперничают все ученые» направлен против чертополоха. Китайские товарищи любят аромат разнообразных цветов, за исключением, однако, тех, чей «аромат» ядовит и лишь отравляет, а не освежает воздух.

Ә был «шайтан таяғына» күптәр таяна!..

26 февраль.

Өс көн, өс төн Рабиндранат Тагор хикәйәләренең корректураһы өҫтөндә ултырҙым. Бөгөнгө көнгә әҙер булырға тейеш ине. Ләкин титул битен өлгөртмәгәндәр икән. Иртәгә типографияға!

Ә хикәйәләр иҫ киткес! Был минең тәү башлап Һиндостанды асыуым! Шулай уҡ кешеләр яҙмышы асыла миңә. Был

яҙмыш мауыҡтырғыс һәм фажиғәле, матур һәм ҡот осҡос!.. Бөтәһенән дә бигерәк үҙенең ҙур йөрәге һәм тәбиғи аҡылы менән Тагор үҙе матур.

Быға тиклем мин уның тик:

— Никакому идолу не поклоняйся, ничьей веры не оскорбляй! — тигән һүҙҙәрен генә һәм уның тураһында Илья Эренбургтың фекерҙәрен генә белә инем.

Бына хәҙер мин уның үҙе менән күрештем, һәм мин өс көн, өс төн буйы уның менән ғорурланып һәм үҙемдең уға бик яҡын булыуыма ҡәнәғәтләнеп йөрөнөм. Был минең өсөн ысын тормош ине. Мин бөтөнләй был донъянан ситкә киттем. Миңә өндәшкәндәрен дә ишетмәйем һәм ишетергә лә теләмәйем.

— Өйгә алып ҡайтып эшләһәң дә, нәшриәттең эше бөтмәҫ ул! — тип көлдө егеттәр.

Бөгөн Зөфәр менән Йәдгәр шахмат уйнап ултырғанда:

— Исмаһам, обед ваҡытында ял итер инең, — тинеләр.

Ләкин мин Тагорҙан айырыла алманым. Уҡып сығырға ете бит ҡалғас ҡына йыйылышҡа саҡырҙылар. Йомағужин ҡарт Верховный Советтың сессияһы тураһында һөйләне, Рәис Ғабдрахманов серем итеп ултырҙы!.. Ә мин кешеләр, яңы ҡылыҡтар менән танышып, күҙем күргән бөтә нәмәне күҙәтеп ултырҙым.

Тагорҙы уҡыған корректор ҡыҙ (К. Г. Шәрипова булһа кәрәк, китапҡа шулай яҙылған) минән ҡапыл ғына:

— Урал ҡайҙа? — тип һораны.

— Урман киҫә, — тинем үҙенә.

Был ҡыҙыҡай минең ҡустым менән бергә уҡыған икән. Уның эргәһендә Резеда Солтанова ултыра. Мин нәшриәткә килгәне бирле, осрашҡан һайын ул миңә тура ла ҡарай алмай, ҡолаҡ остарына хәтле ҡыҙара, иҫәнләшә лә алмай... Күргән һайын, минең дә күңел ҡытыҡланып тора. Ҡыҙыҡ ҡыҙыҡай. Уның тарихы бар. Берәй буш ваҡытта яҙып ҡуйырмын әле. Кешеләр көн һайын бер-береһен белә күреп тә, һөйләшә алмай йөрөгәс, был тарих ҡыҙыҡлы ғыналыр, әлбиттә...

27 февраль.

Был хаҡта яҙырға ваҡыт юҡ. Уҡырға, уҡырға кәрәк. Баштан хәҙер аспирантураға инеү уйы сыҡмай. Немец теленә тотонорға кәрәк. Иң ауыры шул. Бына инде тел өйрәнмәүҙең бәләһе!.. Гейнены немец теленән тәржемә итергә кәрәк булыр. Тәржемә — тел өйрәнеү өсөн иң яҡшыһы.

Аҙнабаевтың шиғырҙары тураһында доклад яһарға тейешмен. Яҙа башланым да, ташланым. Башта йөрөткән уйҙарҙы яҙырға кәрәк, фекер әйтергә кәрәк. Буш һүҙ генә һөйләгем килмәй.

Ләкин Тагорға сумып киттем дә, был эште ҡуйып торҙом. Бөгөн кис ултырырға иткәйнем, Надя менән һүҙгә керешеп киттек. Кәйеф боҙолдо, кис бушҡа үтте. Надяны урамға алып сығып, йыйылып килгән бөтә үпкәләремде әйттем.

— Һиңә яраҡлашырға булдыра алмайым, — тигән һүҙҙәре бик күңелгә тейҙе.

— Миңә яраҡлашыу кәрәкмәй, һинең аңлауың кәрәк! — тинем.

— Я не могу быть чутким человеком, — ти.

— Не надо быть чутким, надо раз навсегда понять: «чуть-чуть» для меня — все!.. Шунһыҙ беҙ бергә йәшәй алмаясаҡбыҙ. Мин һинән артыҡ бер ни ҙә талап итмәйем, мөмкин булғанды ғына талап итәм. Был талап та түгел, үтенес. Йә, әйт, Надя: нимәнән һин ҡәнәғәт түгел? Нимә хаҡында уйлайһың бына хәҙер? Бөтәһен дә әйт, — тим ярһый-ярһый.

— Иң ҡыйыны — өйҙә эшһеҙ ултырып, буш йәшәү, — ти.

— Ә уҡыуың? Эш түгелме?

— Уҡыу — мин теләгән эш түгел шул.

— Уҡымағас, нисек эшләрһең? Барыбер үҙең теләгән, үҙеңде ҡәнәғәтләндергән эш таба алмаҫһың бит, Надя?..

Өндәшмәй. Килештек буғай. Байтаҡ нәмәләр иҫкә алынды. Өшөнөк. Төндәр һалҡын әле. Минең күңел өшөй...

28 февраль.

Кисәге Тагор хикәйәләренең корректураһын Фәрит ағай менән бергәләп ҡарап сыҡтыҡ та баҫырға бирҙек. Баш редактор Ҡеүәтов ҡарап та торманы. Был мине бик ғәжәпкә ҡалдырҙы... Юҡ, был кеше редактор түгел!.. Минең был тәүге эш — уға шундай ҡараш!.. Ҡыҙыҡ! Бик сәйер мөғәмәлә.

Корректураны бик ентекләп уҡыным, бөтә күңелемде бирep эшләнем. Эшемдән ҡәнәғәт. Тик тәүге биттәрҙәге инеш һүҙҙә киткән рус һүҙҙәре генә күңелде ҡырып тора. Синыф — класс, эшмәкәр — деятель булып китте. Ҡайһы бер килешмәгән һөйләмдәр ҙә төҙәтелмәй ҡалды.

— Хәҙер инде һуң, — ти Фәрит ағай. — Үҙең редактировать иткәндәрҙе рәхәтләнеп төҙәтерһең.

Фөмүмән алғанда — тәржемә бик матур, руссаһынан да яҡшыраҡ кеүек. Әлбиттә, Әкрәм быға күп көс һалған. Тәржемәсе Найманов та иренмәй эшләгән. Миндә уға бик ҙур хөрмәт тыуҙы. Шәп егеттәр бар беҙҙә! Нисектер ғорурланаһым килә. Тик Фәрит ағайҙың китеүе генә үкенеслерәк. Ғәжәп, матур кеше! Бөгөн ул эшен Василий Андреевич Трубицынға тапшырҙы. Ул да миңә оҡшай. Ләкин башҡорт әҙәбиәте тураһында русса һөйләшеү ҡыйынға тура киләсәк. Тиҙерәк Кулибай килһен ине инде.

Тағы ла военкоматҡа барҙым. Мине һаман да әле учетҡа алмайҙар. Йөрөй-йөрөй ялҡтым инде. Комиссарға ғариза яҙҙым.

Иртәгә иртән рентгенға барырға ҡуштылар. Военкоматтан милиция бүлегенә индем — унда ла минең эштәр яҡшынан түгел: һаман да мин прописканыҙ йөрөйөм. Ғәйеп, әлбиттә, үҙемдең ығышлыҡта. Нишләптер мин был тәртиптәргә һыя алмайым, юҡ ҡына нәмәләр өсөн дә үҙемә-үҙем ҡайғы арттырып ҡуям. Ҡасан бөтөр икән был формальностар?!

Ҡайҙа ғына кермә — формализм. Ҡайҙа ғына ҡарама — формализм. Нәшриәт эшселәре иртән эшкә килгәс, секретарға инеп ҡул ҡуялар! Был минең өсөн шул тиклем түбәнһеткес бер күренеш. Был дисциплина түгел инде: май булмағанға маргарин... «Сквозь строй» менән кешелә аңлы эш дисциплинаһы булмаясаҡ.

Магазинда Цвейгты күреп ҡалып — күҙҙәрем дүрт булды. Аҡса юҡ, ә иртәгә китап та булмаясаҡ. «Ленинсы»ға йүгерҙем. Марат командировкала икән. Сәйфуллиндән 15 һум алып, китапты ҡулға элэктерҙем.

— Китапҡа аҡса тапҡанһың, ә Салауатҡа һөт алырға — тапмағанһың!.. — ти Надя. Дөрөҫ әйтә!.. Ләкин:

— Иртәгә был китап булмаясаҡ ине. Һуңғыһын алып ҡалдым, — тим. Ышанмай. Минеңсә, ялғанлағаң булһам да — ышанырға кәрәк ине.

«Литературная газета» менән «Комсомольская правда»ны редакцияһан өй адресына күсерттем. (С. Ҡудаш, 8, кв. 4. — көндәлеккә әле был адресты яҙғаным юҡ. Ғүмеремдәге иң ауыр адрес был! Хужаға хәҙер ике меңгә яҡын бирәсәк бар. Шуны түләү өсөн хәҙер И. Франконың хикәйәләрен тәржемә итергә издательство менән договор төҙөштөм. Белмәйем, был бурыстарҙан нисек кенә ҡотолормон инде? Уйлаһаң — баш ҡата, уйламаҫҡа тырышам. Өй һыуыҡ, утын бөттө, бала өшөй, ашарға юҡ, ҡатын ауырлы, ә үҙемдең эстә — донъяға асыу ғына ҡайнай...)

Надя мәктәптән асығып ҡайтҡан. Мин дә ул ҡайтҡансы газеталар ҡарап Цвейгты уҡып, бик асығып ултырғанмын икән. Ҡапҡылап алырға бер ни ҙә юҡ. Надяны бәрәңге бешерергә күндерҙем.

— Давай, тәмле итеп бәрәңге бешереп тороп ашайыҡ әле!

Ул теләр-теләмәҫ кенә бәрәңге әрсергә тотондо. Мин кухняла уға Цвейгтың Горький тураһындағы портретын уҡыйым. Ғәжәп ҡанатлы һүҙҙәр!..

Горькийҙың башынан кискән бөтә нужалары, бөтә ғазаптары иҫ киткес шиғыр итеп яҙылған.

— Бына, — тим мин, — Горький беҙҙең ише генә интеккәнме? Мин уның тормошон үҙебеҙҙеке менән сағыштырып ҡараһам, мин бит дворян?!.

Надя рәхәтләнеп көлә.

— Ә һин просто королева! Бына, һинең ҡулыңда әле, әрсерлек бәрәңгебеҙ ҙә бар!

— Әйтмә инде һинең дворянлығыңды!

— Ниңә һин уға (бәрәңгегә) улай ирония менән ҡарайһың әле, — тим мин, — көлмә, был бәрәңге бит Бөйөк Ватан һуғышында еңеп сыҡҡан бәрәңге ул!.. — һ. б.

1 март!

Бына 1957 йылдың яҙы ла башланды!.. Үтә ғүмер!.. Әйләнергә лә өлгөрмәйһең, ҡышы үтә, яҙы ла килеп етә. Йыл бик яҡшы килә быйыл. Ҡар күп булды. Яҙ ҙа иртә килергә самалай...

Март!..

«Март айының нескә билле еле
Һуҙылып ятып ергә ҡар ашай!..»

Ә тамсылар февралдә үк тыпылдаша башланы быйыл. Иртән туңдыра, көндөҙ бөтөнләй яҙ һулышын тояһың: ҡояш яҡтылығы ҡарға бәреп, күҙҙе ҡамаштыра, хатта күҙҙәр ауыртып китә, ҡыҫып ҡына йөрөйһөң. Ҡар тамсылар менән тишкеләнә һәм аяҡ аҫтында тоҙ кеүек ярмаланып ята. Сыпсыҡтар серелдәшә, күп тә үтмәҫ, ҡарғалар яҙҙы ла башлап ебәрер...

Яҙ!.. Ләкин бер ни ҙә яҙып булмай әле. Күптән инде минең шиғыр яҙғаным юҡ. Мостай Кәримдең хаттарынан һуң яҙыу ҙа ҡурҡыныс. Ҡапыл үҙемде бик ҙур йөк күтәргән кеүек тоя башланым.

Башҡортостан тыуған көн етә. Тиҙҙән бына Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына дүрт йөҙ йыл тулыу байрамын да үткәрербеҙ.

Ә циклды һаман да бер төҫкә индереп булмай әле. Яҡшы итеп яҙаһы ине!..

Китапхананы таҙарталар. Нәшриәткә барғас та һағалап йөрөй башланым. Элекке китаптарҙы алып ҡалырға кәрәк. Бер ҡосаҡ китаптар алып ҡайтып киттем! Ләкин иҙәндә ятҡан шағирҙарҙы күреү күңелгә ауыр...

Эш хаҡы бирҙеләр. «Совет Башҡортостаны»ндағы кеүек сират юҡ бында. Хатта бухгалтериянан үҙҙәре саҡырып йөрөйҙәр. Тик минең эш хаҡым бик бәләкәй бында. 360 һум (ярты айға).

Надя Салауат менән килеп ҡаршылап торғандар. Малай ас, Надя тиҙ генә печенье һатып алып сыҡты ла магазиндарға йүгерҙе. Мин, Салауаттың арбаһын һөйрәп, өйгә ҡайтып киттем. Юлда малайҙы ла, үҙемде лә печенье менән һыйлайым. Ҡулымда сеткаға тултырылған бер ҡосаҡ китаптар.

Хәким ағай осрап, көлөп китте.

Төшкә тиклем военкоматта йөрөнөм. 7 мартта комиссия буласаҡ. Учетҡа алындым. Секретарь ҡыҙ менән ҡыҙыҡ булды. Салауаттың тыуған йылын әйтә алмайынса, ҡыҙарып ҡуйҙым.

— Бар, ҡатыныңдан һорап кил, — ти ҡыҙыҡай. — Бына һиңә атай!..

Дауыт Юлтыйҙы әҙерләргә тотондом.

2 март.

Юлтый өҫтөндә ултырам. Ниңәлер бөтә күңелемде биреп эшләй алмайым. Ҡайһы берәүҙәрҙең Юлтый ҙа Юлтый тип ауыҙ һыуҙары ҡойолоуын аңлап етә алмайым... Бәлки, күңелдә ҡалған «халыҡ дошманы» тигән һүҙҙәрҙең ҡанға һеңгән нахаҡ таптары шулай итәләр? Белмәйем...

Сәләм, Ниғмәти, Мостай Кәрим уларҙы ни тиклем артта ҡалдырғандар инде!.. Тик уларҙы беҙ баһалап бөтә генә белмәйбеҙ әле.

Ә бына Бабич, исмаһам, шағир!..

Йыйынтыҡҡа Юлтыйҙың бик примитив шиғырҙары ла индерелгән. Фөмүмән, шиғыр культураһы түбән. Хистәр, уйҙар бар, ниндәйҙер талпыныу бар, ләкин бөтә тәне менән, оҫталығы менән оло шағир йөрәген күреп булмай.

Әҙәби факт булараҡ, әлбиттә, ҡыҙыҡлы. Шулай ҙа шағирҙы заманы шулай булған бит тип үлсәп булмай...

Кис коллектив менән «Муса Йәлил»де ҡарарға барҙыҡ. Мин ниндәйҙер ашҡыныу менән көткәйнем уны.

Шулай ҙа... Муса Йәлил сәхнәлә юҡ, Вәли Ғәлимов ҡына бар. Ут-ялҡын, мөхәббәт һәм нәфрәт менән тулған шағир рухын, Муса Йәлилдең иҫ киткес бай эске донъяһын, кешелек сифаттарын, уның үҙенә генә хас булған тәбиғәтен күрә алманым мин.

Уңышлы ғына характерҙар бар, ләкин улар бик тарҡау, бергә бер бөтөн булып тупланмаған һәм Муса шулар эсендә юғалып ҡалған.

Фөмүмән, Муса Йәлилде әле генә табып булмаҫ кеүек. Ул әле дан эсендә, маҡтау эсендә. Уның ысын образын тыуҙырыу өсөн ысын художник кәрәк. Һәм ул художник геройлыҡ даны-

на һәм шул данды файҙаланып ҡалыу өсөн мауыҡмаҫҡа тейеш!

Муса Йәлил беҙҙән алыҫлашҡас ҡына яҡын буласаҡ. Ә хәҙергә әле ул аңлайышһыҙ һәм герой кеше генә. Әҙәби герой һуңлап тыуа.

Нәҡи Иҫәнбәт бик ашыҡҡан.

Театр ҙа әле быны аңлап етмәгән.

3 март.

Һайлау көнө. Ҡояш. Иретә. Баланы күтәреп, Надя менән һайлауға киттек. Надя һайланы, мине һайлатманылар. Пропискала тормағас, исемлеккә лә индермәгәндәр. Бөтә кәйеф боҙолдо. Үҙемде нисектер донъяла юҡ кеүек итеп тойҙом. Бына һиңә гражданин-обыватель!..

Кешегә әйтһәң, кеше ышанмаҫ...

4 март.

Квартира хужаһына хат яҙҙым.

«Хөрмәтле Ғаян ағай!

Хатығыҙҙы алдым, уҡыным. Бөтәһе лә аңлашыла. Тик бер нәмә генә күңелгә аңлайышһыҙ, ауыр тойолдо. Ул — һеҙҙең хатығыҙҙың тоны:

«Нисек тора теге һеҙҙең ғинуар аҙағында түләп бөтөрәм тип өсәүләшеп торжественно әйткән вәғәҙәгеҙ?» — тигәнһегеҙ.

Әлбиттә, квартира хужаһы булараҡ, был хаҡта борсолорға һеҙҙең хаҡығыҙ бар, ләкин, кеше булараҡ, етмәһә, оло кеше булараҡ, бындай мыҫҡыллы тонда ирония менән өндәшеү урынһыҙ. Берҙән, беҙ һеҙҙең алда былай ҙа кәмһеткес хәлдә. Икенсенән, бер кем дә һеҙгә «торжественно» вәғәҙә биргәне юҡ. Аптыраған көндән әйтелгән һүҙҙәр генә бар.

Ярай, эш һүҙҙә лә, һеҙҙә лә түгел, беҙҙә! Ә беҙҙең хәл, билгеле, еңелдән түгел әле. Тик һеҙҙең кешегә кешеләрсә ышаныуығыҙ, кеше хәленә керә белеүегеҙ генә кәрәк, Ғаян ағай.

Хәлдәр шулай: бурысты һеҙ ҡайтыуға тотош түләрмен. Быныҡ өсөн мин Иван Франконың хикәйәләрен тәржемә итергә нәшриәт менән договор төҙөштөм. (Шуны хәл итмәйенсә тороп, һеҙгә яуап яҙыуҙы ла бер аҙ һуңлаттым буғай.) Хәҙер бына төндәрен шул хикәйәләр өҫтөндә ултырам. Июль айында мин был ауыр бурыстан да, был йәһәннәм тишегендәге квартиранан да ҡотолормон тип уйлайым. Еңелгә тура килмәне был ҡыш беҙгә! Дөрөҫөн генә әйткәндә, беҙ тишек кәмәгә ултырҙыҡ инде, Ғаян ағай... Бына ун кубометр утын елгә лә осто! Сөнки өйҙә ел уйнай, тамсы ла йылы тормай. Балаға һыуыҡ тейеп бара, ауырый. Шулай итеп, һеҙгә түләйәсәк

аҡсаның яртыһы утынға-утҡа ғына китеп тора. Ә газетала аҡса эшләп алырлыҡ ваҡыт булманы миңә. Ҡулым да бармай, намыҫым да ҡушмай. Шуның өсөн издательствоға китергә мәжбүр булдым. Редактор булып эшләйем хәҙер. Көҙгә аспирантураға китергә әҙерләнәм. Бына шулай хәлдәр. Онотҡанмын: әсәй ҡайтып китте.

Быларҙы мин һеҙгә бик яҙаһым килеп торғандан яҙманым, тик һеҙҙе хәл менән таныштырып ҡуйыу өсөн генә яҙҙым. Борсолмағыҙ! Хәҙергә йонсоп килеп йөрөмәһәгеҙ ҙә ярай тигән һүҙем инде был. Ә налог-фәләнде түләйәсәк бурыс иҫәбенән үҙем түләп ҡуйырмын.

Бына шул ғына. Сәләм менән Рәми».

4/III-57.

Бына шул ғына!.. Эйе, донъяла бына шул ғына нәмәләр өсөн дә ярты ғүмерең әрәм була!.. Күпме түбәнлектәр, күпме хурлыҡтар бына шул ғына нәмә өсөн һинең йәшлегеңдән, намыҫыңдан, аҡылыңдан көлә. Ә бит ғүмер бер генә ҡабат бирелгән кешегә... Шул ғүмерең һинең мәғәнәһеҙ бер нәмә өсөн әрәм була.

Ҡайһы саҡта мин: «Три карты, три карты!..» тип аҡылынан яҙған Герман кеүек: «Квартира, квартира, квартира!» — тип үҙемә үҙем әсенеп ҡысҡырам.

Бәләкәй генә Салауатымдың ҡулдары ҡыҙарып, йөҙө күгәреп илап ултырыу йөрәккә үтә! Яратҡан ҡатыныңдың ауырға ҡалған сағында йыртыҡ күлдәк кейеп, ауырыу баланы ҡарап, ас көйөнсә ултырған көндәрен кисереү йөрәкте телгеләй.

Ҡайҙан аҡса табырға?

Бурыстарҙан нисек ҡотолорға? — тигән уйҙан ҡайһы саҡта баш ҡатып китә.

Эштән арып ҡайтаһың, һин ҡайтыуға ҡатының киске мәктәпкә уҡырға китә. Икегеҙгә кейеп йөрөр өсөн бер студент вельветкаһы булған була. Һин уны өҫтөңдән сисеп биргән булаһың да бала ҡарап ултырып ҡалаһың. Бала бер төрлө ашатыуҙан ябыҡ, ҡаҡса, мыжыҡ. Уны үҙең ашаған аш менән көсләп-көсләп ашатаһың да, ул йоҡлап киткәнсе үҙең асығып, хәлдән тайып бөтәһең. Шунан һуң уҡырға, шифырҙар яҙырға кәрәк!.. Күңел төшмәй, илһам ҡаса һинән. Ләкин һин үҙеңде көсләп булһа ла эшкә, өҫтәл артына ултыртаһың. «Мин бәхетле» тип яҙыу ҡыйын. Нисек кенә һин оптимист булма, нисек кенә тормошҡа һин тарих күҙлегенән сығып ҡарама, үҙеңдең ошо фәкирлегеңде тоймау мөмкин түгел. Сөнки берәүҙәр үҙҙәренең йылы, яҡты өйҙәрендә ванналарында тәгәрәп ятып ҡорһаҡ үҫтерәләр һәм шул «кешеләр» һинең яҙмышың, йәшле-

гең, иң матур хыялдарың, иң саф хистәрең менән һатыу итеп ултыралар.

Донъя, әлбиттә, һинең эт ояһындай мөйөшөң менән генә сикләнмәгән. Донъя киң ул, матур ул. Ләкин донъя киңлегенән ни мәғәнә, аяҡ кейемдәрең тар булғас, тигәндәй, һинең донъяла йәшәүең иҫ киткес ҡыйын.

Һин ижад итәһе урынға үҙеңде үҙең кәмһетәһең, ваҡлайһың, донъяның ниндәйҙер бер квартираһы тураһында уйлап зиһенең ҡайта, тойғоларың тупаҫлана һәм һөйөп туя алмам тигән иң яҡын кешеңә иң ауыр һүҙҙәр әйтергә мәжбүр буласаһың!..

Юҡ ҡына нәмәләр өсөн дә тауыш сығаһың. Юҡ ҡына нәмәләр өсөн кешелегең юҡҡа сығаһың.

Бына шул юҡлыҡтан сыҡҡан нәмәләр һинең выжданыңды кимерә. Һин шул тиклем ваҡ бер меҫкен әҙәмгә әйләнәһең. Шундай саҡтарҙа һинең ҡәләм тоторға намыҫың ҡушмай. Сөнки һин инде шағирҙың кем икәнлеген, уҡыусылар һинән нимә көткәнлеген яҡшы беләһең!..

Бына инде шул нәҡ үҙе аҡыллылыҡ бәләһе!.. Их, һин тормош!.. Бының һайын һин ҡәҙерлерәк, тормош!..

Тормошто артыҡ яратҡан, уға артыҡ мөхәббәт менән янған һайын — ул һиңә мәрхәмәтһеҙерәк һәм үгәйерәк...

Бына ниндәй ҡаршылыҡ килеп тыуа! Был ҡаршылыҡ өйөңдә, эшеңдә, йөрәгеңдә!.. Һәр аҙымың һайын..

Ярай әле йөрәк бөтәһен дә һыйҙыра ала!.. Бөтәһенә лә түҙә. Шартлап ярылырҙай булғанда ла, ярылмай ҡала бит...

Бөгөн эштән ҡайтып килгәндә Сәриә осраны.

— Йылмайып китеп бара үҙе, ә күрмәй ҙә, исмаһам, — ти. Ғәжәп: мин хатта йылмая ла беләм икән әле!.. Күрәһең, мин донъяны яратам. Яҙ тураһында уйлап килә инем:

— Март айының нескә билле еле һуҙылып ятып ергә ҡар ашай!..

— Һине Мостай Кәримдең хаты менән ҡотлайым тип, бер көн редакцияға шылтыратҡайным, ә һине издательствола эшләй, тинеләр. Унда ла юҡ инең. Мин ул хаттарҙы рәхәтләнеп уҡыным, — ти Сәриә. Оҙаҡ ҡына һөйләшеп торҙоҡ та:

— Ярай, минең танау өшөй,— тип хушлашып, китеп барҙым. Ә ул көлөп-йылмайып институтҡа инеп китте.

Зәфәр Ғәбсәләмовтың С. Ҡудаш тураһындағы мәҡәләһе тураһында минең фекерҙе һорағас, мин уға:

— Бик урынлы, бик кәрәк сығыш, — тинем. — Ә уны хулиган сығышы тип әйтәләр.

— Кем әйтә?

— Сәйфи Ҡудаштың ҡатыны журналға шылтыратҡан. Бына нишләй ҡатындар әҙәбиәттә!..

Көлөштөк.

Ләкин Зөфәр көлмәй, шыртлабыраҡ йөрөй егетең. Ничего! Был бөтә йәштәрҙең фекере. Ул яңғыҙ түгел. С. Ҡудаш үҙенең ниндәй шағир икәнлеген белеп үлергә тейеш.

Һәр ялтыраған нәмә алтын түгел.

С. Ҡудаш алтын менән ялатылған. Үҙен хөрмәт итә белмәһә лә, әҙәбиәтте хөрмәт итә белергә тейеш инде кеше. Ә беҙҙә әле үҙҙәрендә әҙәбиәтте түгел, ә әҙәбиәттә үҙҙәрен яраталар.

Мостай Кәримдең Сәйфи Ҡудашты ҡанат аҫтына тығып, һаҡлап килеүе һис тә тәбиғи түгел. Был мине бик нык ғәжәпләндерә. Был бик сәйер күренеш уға булған хөрмәтемде кәмһетеп торған кеүек. Ғәжәп инде кеше?!

5 март.

Көн боҙолоп тора. Ямғыр ҡатыш ҡар яуа. Күңелһеҙ.

Дауыт Юлтый менән ултырам.

Исмаһам, шифырҙар ҙа күңелде йылытмай. Ғайсаға асыу килә. Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе тип кенә эшләгән. Оригиналды сағыштырып, машинканан һуң уҡып та сыҡмаған.

Институтҡа шылтыраттым. Юҡ. Һуңынан үҙе хәбәр итте.

— Хөрт эшләгәнһең, — тим.— Оригинал менән сағыштырып уҡып та сыҡмағанһың, шикелле? Бит һайын хата тулып ята. Һинән быны көтмәгәйнем, Ғайса.

— Һин бит редактор, Рәми, үҙең шунда ҡара инде. Бик ашығыс булды бит.

— Шуның менән бында эш шәбәйеп китер тиһеңме? Һин бит инде китапты төҙөүсе, Ғайса, эшен бөтөрөп бирергә кәрәк ине!..

— Уның өсөн гонорар түләмәйҙәр бит миңә, — ти Ғайса. Мин хатта уңайһыҙланып, оялып киттем был һүҙҙән. Аптырағас:

— Ярай, Ғайса, берҙекһәгә мин ҡалдырып торам, эшләрмен инде үҙем. Тик былай ҡарау эш түгел инде.

Гонорар — аҡса!.. Эх, егеттәр! Шундай егеттәр ҙә аҡса ғына тип торғас инде... Төшкөгә ҡайтҡанда Ғайсаның үҙен осраттым. Һөйләшеп торманыҡ. Ниңәлер, үҙем дә һиҙмәҫтән, көлөп кенә үтеп киттем. Ғалим Ғайса!..

Филиал эргәһендә янымдан Сабир Баһапов үтеп китте. Йәйәүләп йөрөй ағайың. Артыма боролоп ҡараным. Ҡараһам, миңә лә артына боролоп, Баһапов түгел, бер ҡыҙ ҡараны ла шәп атлап китеп барҙы. Резеда икән!.. Ҡыҙыҡ ҡына күренеш булып тойолдо был миңә. Мин издательствоға килгәне бирле

беҙҙең әле һаман да һөйләшә алғаныбыҙ юҡ. Бер көндө, МПВО-нан зачет тапшырған көндө, ул минең алда ғына ултыра ине. Ҡапыл артына боролоп, миңә топ-томалдан атом бомбаһының шартлауын күрһәткән бер таблицаны бирҙе. Мин дә үҙемдең ҡулдағы таблицаны тотторған булдым:

— Мә, һиңә лә булһын!

Кисәге ул Найман менән телефондан һөйләште. Мин иректеҙҙән ҡолаҡ һалдым. Әллә быларҙың бер-бер эше бармы? Тегеһе ниҙер үтенә. Бынһы:

— Театрға бараһы бар бит әле. «Зимагорҙар»ҙы ҡарарға, — ти.

Мин аҙаҡтан һорап ҡуйҙым:

— Нимә, «Зимагорҙар»ҙы ҡарарға итәһеңме?

— Әйе, әйҙә, һин бармайһыңмы?

— Юҡ, минең бит ҡатын уҡып йөрөй. Бала ҡарарға кәрәк.

— Ә, улай икән. Нимә, киске мәктәптә уҡыймы?

— Әйе. Ә һин ҡыҙың менән бараһыңмы?

— Эйе, шунда бергә-бергә...

— Шәпме ҡыҙың? — тип шаярыу ҡатыш һорашҡан булдым.

— Шәп тип ни — үҙемә ярағаи инде, — тип Найман, уныбыны һиҙмәйенсә, ҡыҙы менән дә таныштырып ташланы. Пединститутта уҡый икән. Литфакта. Ҡыйғы районынан Йыланлы ҡыҙы икән... һ. б.

Тимәк, Резеда түгел!.. Күңел тынысланып ҡалды. Юҡһа, нишләптер бик ҡытыҡланып тора инем. Бына инде йүләрлек! Резеданы үҙебеҙҙең егеттәр менән күрәһе килмәй. Ә егеттәр уны йыш ҡына телгә алалар. Мин өндәшмәй генә, иғтибар итмәгән кеше булып ултырам. Ә башта уның менән булған бөтә тарих йөрөй. Шуның өсөн дә егеттәрҙән был үткәндәрҙе көнләшеп ҡуям. Сөнки ҡыҙыҡайға булған ҡыҙыҡһыныу һаман да әле бөтмәгән. Был ниндәйҙер бер сер булып йөрөй. Ләкин бер ҙә уға сер бирмәҫкә тырышам. Шуның өсөн беҙҙең күрешеүҙәр бик сәйер генә килеп сыға, ҡайһы саҡта иҫәнләшергә лә тура килмәй...

Ай-һай ҙа ғына сайҡай керҙәр йыуа,
Талмай микән уның беләкәйҙәре.
Күрше лә генә тороп, күрә йөрөп,
Янмай микән уның йөрәкәйҙәре?..

Минең был яратҡан йырыма тағы ла бер мәғәнә өҫтәлде!.. Беҙ бергә эшләп, бер-беребеҙҙе күрә йөрөп, янмай микән уның йөрәкәйҙәре?

Күңел әле йәш, дәртле һаман. Кемделер яндыраһы килә, кем өсөндөр ғәмһеҙ генә янаһы килә!.. Бына һиңә өйләнгән кеше, бына һиңә бала атаһы!.. Ләкин былар өсөн үҙемде ғәйепле итеп һиҙмәйем. Миңә был хистәр нисектер яҡты, һәм

уларҙың бер ниндәй ҙә күләгәһе-шәүләһе юҡ кеүек. Ә, бәлки, был аҙғынлыҡтыр? Тик мин быны тоймайым ғыналыр? Күңелем — күбәләкме әллә? Белмәйем.

Тик мин өйгә саф намыҫ менән ҡайтып керәм, саф намыҫ менән ҡатынымдың күҙҙәренән үбәм, саф намыҫ менән баламды ҡулға алам!.. Надяға булған тойғоларым ниндәйҙер тәрән, тормоштоң үҙе кеүек үк ҡатмарлы һәм ҙур. Ул тойғолар ниндәйҙер оло бер йылға кеүек. Ә башҡа хистәр ниндәйҙер ваҡ ҡына шишмәләр улар һәм ошо ҙур йылғаға килеп ҡоялар...

6 март.

Дауыт Юлтый менән ултырҙым. Кис Стефан Цвейгтың Эмиль Верхарн тураһында иҫтәлектәрен уҡыным һәм Сергей Городецкийҙың шиғырҙарына тотондом.

Үҙемдең шиғырҙарға һаман да ҡул тейгәне юҡ. Яңғыҙ ғына ҡалып булмай. Күңел дә төшмәй. Бер нигә лә ҡул бармай.

Эштән һуң тик бала менән йыуанам, уны йоҡлатҡас, китап-газеталар уҡыйым. Художниктар съезы бик оҡшай миңә. Шепиловтың доклады ғәжәп матур.

7 март.

Көн буйы военкомат менән милиция бүлегендә ураландым. Арытты. Бына ҡайҙа икән бюрократтар ояһы!.. Хәрбиҙәрҙе яратмайым. Бер өтөк кенә писарына тиклем һинең йәнеңде үртәп ултыра. Хәрби билетҡа алып барған һүрәткә ҡараны ла мәғәнәһеҙ бер ирония менән:

— Как-будто деятель сидит какой-нибудь, — тип ҡуйҙы, өҫ-башыма ҡарап алды.

— Во всяком случае деятельнее вас, — тип әйтәһем килде лә, әйтмәнем инде. Эттәр менән эт булып булмай бит. Ҡойоп ҡуйған солдафон!..

Мең бәлә менән билет алдым. Ағайың, шулай итеп, запастағы һалдат...

8 март.

Йырҙар йыйынтығы менән баш редакторға керергә тура килде — бөтә йәнем, тәнем менән әрнеп сыҡтым. Баш редактор — үҙенең башы юҡ. Күҫәк бер!.. Әҙәбиәт-сәнғәт тураһында әлепте таяҡ та тип белмәй. Шул бәндә инде әҙәбиәттең яҙмышын хәл итеп ултыра!.. Әй алла!.. Ҡасан бөтөр былар? Нисек эшләргә кәрәк? Нишләргә? Ҡайһы ерҙәренән тотоп ырғытырға?

Ныҡ ултыралар бит улар. Теше-тырнаҡтары менән обкомға йәбешкәндәр бит! Нисек итеп обком үҙ тәнендә шундай һөлөктәрҙе тоймай икән.

Хәйер, обком үҙе бит был киҫекбашты баш редактор итеп ебәргән! Йәнәһе аппаратты нығыталар!..

Издательстволағы кешеләргә аптырайым: нисек итеп коммунист булған кешеләр шул хәлдәргә түҙеп йөрөйҙәр икән?

Юҡ, мин быны былай ғына ҡалдырмам! Йә мине иҙерҙәр, йә мин уларҙы. Тик мин бындай әҙәм көлкөләрен күтәрә алмам! Хурлыҡ! Ниндәй әйбәт егеттәр бар, шулар ҙа инде күнегеп бөткәндәр.

— Юҡҡа аптырайһың, Рәми. Һин әле беҙҙең директорҙы белмәйһең: тупица бит ул, — тип көлөшәләр...

Төштән һуң был баш редактор янына тағы ла индем. Минең менән Зөфәр ҙә керҙе. Икәүләп минең «Нимә ул мещанлыҡ?» тигән мәҡәләне кескәй генә бер брошюра итеп сығарырға, планға индерергә тәҡдим иттек. Уҡымаған көйөнсә һаман үҙенекен һөйләй. Имеш, беҙ план буйынса ғына, обком рөхсәте менән генә эшләйбеҙ. Имеш, бындай теоретик мәҡәләне кем уҡый? Унан башҡа ла етерлек эш күп һ. б. шуның кеүек лығырҙау!

— Ә һеҙ үҙегеҙ был мәҡәләне уҡыманығыҙмы һуң? — тинем мин.

— Юҡ, күргәнем дә юҡ.

— «Әҙәби Башҡортостан»ды уҡымайһығыҙмы ни?

— Ҡайҙан бөтә нәмәне уҡып бөтөрәһең, — тип ҡыҙарҙы «баш»ыбыҙ! — Мин бит Мәскәүҙә йөрөнөм.

— Бәй, һеҙ Мәскәүҙә йөрөгәндә, мин дә Мәскәүҙә булдым, — тим.

—Ярай, ҡалдырығыҙ. Уҡып сығырмын.

— Ҡасан уҡып сығырһығыҙ икән?

— Бына бер аҙ эштәр бөткәс...

— Улайһа, мин хәҙергә кире алып торайым. Фәҙәттә, уны редакторҙар бер йыл уҡый торғандар, — тигәс, ул күҙҙәрен йылтыратып йылмайыу ғәләмәте сығарҙы ла:

— Ярай, уҡырмын, — тип ҡалды.

Бер аҙҙан һуң миңә шылтырата:

— Икенсе варианты юҡмы? Былай бик ҡыйынлыҡ менән уҡыла (машинкалағы өсөнсө экземпляр ине).

— Юҡ, ҡулъяҙмаһы ғына бар, — тинем.

Эштән ҡайтҡанда бүлмә асҡысын секретариатҡа ҡалдырырға инһәм, был редактор тигәнем әлеге башын ишектән сығарып стеналағы сәғәткә ҡарап тора. Мине күреү менән башын тиҙ генә кабинетына тыға һалды.

«Бик пунктуальный» тиҙәр, моғайын, артыҡ ултырып китмәнем микән, тип ҡарайҙыр.

Рәхәтләнеп көләһем килде. Тик әҙәп һаҡлап, үҙемде-үҙем тыйып ҡалдым.

Шулай итеп, был баш менән бәрелешеп алдыҡ.

Ә өйҙә ҡатын:

— Иртәгә яғырға утын юҡ, — ти.

— Давай, минең һыңар аяҡты ҡырҡайыҡ, — тинем дә өндәшмәнем.

Күңел өшөп китте тағы. Ул больницанан йөрөп ҡайтҡас, өндәшмәй, мыш-мыш килеп илай: тимәк, икенсе бала ла донъяға киләсәк!..

Их, донъя, донъя!.. Байрамға — бүләк!..

9 март.

Рафаэль Ҡыйғынан ял итеп килде. Бер аҙ таҙарған. Ауылдан бик ҡәнәғәт. Өс шиғыр яҙған. Уҡыныҡ, бәхәсләштек. Төндә ҡаланы урап килдек. Сөнки өйҙә Надя алдында башҡортса рәхәтләнеп һөйләшеп булмай. Пушкин буйлап, К. Маркстан Ленинға боролдоҡ та Луначарский баҡсаһына килдек. Төн һалҡын ғына, ҡар яуҙы. Рафаэль килһә, миңә байрам. Бөтә донъя тураһында һөйләшәһең.

10 март.

Ял көнө. Маратҡа барҙыҡ. Ауылға, аяҡ кейемдәрен тултырып, посылка ебәрергә әҙерләнеп яталар. Театрҙа бөгөн «Зимагорҙар». Бергәләп театрға барырға булдыҡ. Билет алғас, өсәүләп Мөбәрәковтарға барып ултырҙыҡ. Арыҫлан ағай Рафаэлде араҡыға ебәрҙе. Беҙ ҡарыша-ҡарыша эстек; һүҙ драматург һәм театр тураһында барҙы.

— Мостай Кәрим һеҙҙе бик маҡтап ташлаған бит әле, — ти Арыҫлан ағай. — Бик яҡшы хаттар яҙған. Тик маһайып китмәгеҙ.

— Рәхәтләнеп уҡыным ул хаттарҙы, — ти Рәғиҙә апай. Зәйни Иғдәүләтовты ла телгә алып, рәхәтләнеп көләштөк. Арыҫлан ағай беҙҙе барған һайын пьеса яҙырға димләй. Бөгөн дә байтаҡ ҡына өгөт-нәсихәт уҡып ташланы. Бер яртынан дүрт кеше арыу уҡ ҡына кәйефләнеп алдыҡ. Ләкин оҙаҡ ултырырға тура килмәне — театрға ашыға инек. Рәғиҙә апайҙың «Ынйыҡай менән Юлдыҡай»ҙан өҙөктәр уҡыуын тыңланыҡ та, был пьесаны үҙемә алып, театрға йүгерҙек.

«Зимагорҙар» ҙа артыҡ ҡәнәғәтләндермәне. Ҡарарға ҡыҙыҡ, ләкин иҫкерәк инде — күңелгә ҙур шатлыҡ алып ҡайтмайһың. Артыҡ оҙон тойола, ялҡыта, ҡайһы бер картиналар

ышандырмай. Федор — резонер. Иғдәүләтов, Туҡаев яҡшы уйнайҙар.

11 март.

Надя менән бала тураһында ҙур һүҙ булып алды. Больницала булып ҡайтҡан. Баланы төшөртәм, ти. Минең инде әйтер һүҙем ҡалманы. Был хаҡта мин үҙемдең ҡарашты әйткәйнем инде. Мин ҡаршы, ә ул барыбер үҙенекен эшләйәсәк. Бала өс ай ярымлыҡ булған, хирург иртәгә килергә ҡушҡан.

Рафаэль менән был хаҡта һөйләшеп йөрөнөк. Уға ла был хәл оҡшамай. Ләкин башҡаса юл юҡ: Надя уҡырға тейеш, квартира юҡ, тормош ҡыйын. Салауаттың ни бары йәше тулған. Шулай итеп, уның ҡустыһынмы, һеңлеһенме юҡ итергә тура килә. Уйлай-уйлай инде баш ҡатты. Тик башҡаса сараң юҡ!..

Рафаэль Шакирҙарҙа ултырып ҡайтҡан. Улар бала көтәләр. Ә беҙ баланы үлтерергә әҙерләнәбеҙ!..

Күңелдә ҡара тап ҡалыр кеүек. Надяның сәләмәт ҡалыуы ла бик икеле.

12 март.

Көнө буйы бала тураһында уйлап, ҡайғырып йөрөнөм. Етмәһә, Шәриф Бикҡол килеп, йырҙары өсөн тауыш сығарҙы. Минең иҫкәртмәләр өсөн:

— Мин һуғышта ҡан ҡойоп йөрөгәндә һин әле маңҡа ғына инең! Хәҙер килеп миңә йыр яҙырға өйрәтеп ултыраһың! — тип ҡысҡырынды.

Мин унан бындай түбәнлекте көтмәгәйнем. Йырҙарын радио менән дә, премиялар менән дә страховать итә, маҡтай, һүгенә. Минең бөтә хөрмәтем юғалды, бөтә асыуым сыҡты, тик үҙемде ҡулға алырға тырыштым. Төштән һуң Композиторҙар союзында йыр текстарын тикшереп ҡарарға булдыҡ. Тик шағирҙарҙан Ғәйнан Әмири менән Хәким Ғиләжев ҡына килгәйне. Композиторҙарҙан Заһир Исмәғилев, Камил Рәхимов, Р. Сәлмәнов (музыкаль редактор) һәм йырсы Мәғәфүр Хисмәтуллин, издательстволан Василий Трубицын булды.

Мин текстарҙы уҡып, үҙемдең бөтә замечаниеларҙы әйтеп сыҡтым.

— Хөрт икән шул эштәр! — тине Исмәғилев. Ҡалғандар ҙа минең замечаниелар менән ризалаштылар.

— Бынан кире текстарҙы шағирҙар секцияһында тикшермәй тороп, композиторҙарға бирмәҫкә, — тигән фекергә килештек. Йыйынтыҡҡа инә торған байтаҡ текстарҙы авторҙарына кире биреп, яңынан эшләп сығартырға тинек.

Был минең тәүге ҡабат композиторҙар араһына кереүем ине.

— Рәхмәт, ҡустым, — тигән булды Заһир ағай. Рәшит Ниғмәтигә текстарын ҡире бирергә ҡушты. Ҡайтҡан ыңғайға мин Рәшит ағайға керҙем. Ул тәүҙә ризалашмай маташты.

— Быға тиклем һеҙҙең шундай әйберҙәрегеҙҙе уҡығаным юҡ ине, Рәшит ағай, — тинем. — Был йырҙар бик хөрт, һеҙҙең кеүек шағирҙан бындай йырҙар алып булмай.

— Ләкин, ҡустым, һинең фекерең миңә закон түгел бит әле. Һиңә оҡшамаҫҡа мөмкин, ә берәүгә ул оҡшарға мөмкин. Уларҙы бит йырлап йөрөтәләр...

— Йырлап йөрөтөү генә әле критерий түгел, Рәшит ағай. Был йыйынтыҡ бит руссаға ла тәржемә ителә, беҙҙә генә тороп ҡалмаясаҡ.

— Йә, нимәләре менән риза түгелһең? — тип Рәшит ағай текскә тотондо. — Минең әле Ҡадир Даяндан хөртөрәк яҙғаным юҡ.

— Даяндың бит яҡшы йырҙары ла бар?

— Юҡ Даяндың яҡшы йырҙары!


Ул «Туған партияға дан» йырын уҡый, ә мин тағын да бер әрләү ишетәм инде, ләкин бирешмәҫкә, бөтә әйтәһе һүҙҙәрҙе әйтеп сығып китергә кәрәк тип ултырам.

Туған партияға дан!.

Рәшит Ниғмәти шиғыры Х. Әхмәтов музыкаһы.

Дан совет ерендә,
Салт аяҙ күгендә
Коммунизм уттары балҡыны.
Был сыуаҡ көндәргә,
Был яҡты төндәргә
Беҙ килдек дауылдар арҡыры.

Ҡушымта:
Дан һиңә, партия,
Партия, дан һиңә,
Бөйөк Ленин байрағы ҡулында.
Ант итә халыҡ һиңә,
Халыҡ һиңә ант итә,
Шул байраҡҡа гел тоғро булырға.



Астылар яҡты юл,
Байлыҡтар асты мул (?)
Партияның аҡыл нурҙары. (??)
Шул нурҙа кешеләр
Үҫтеләр, үҫтеләр
Бар булған байлыҡтан юғары.
Үҫтерә баҡсалар,
Аттыра сәскәләр
Мең йыллыҡ ҡомлоҡтар бушлығы (?)
Ҡоростан ҡатыраҡ,
Ҡояштан яҡтыраҡ
Бер туған халыҡтар дуҫлығы.

«Был — партия тураһында яҡшы йыр түгел. Автор тексты яңынан ҡарап сыҡһын ине. Был көйөнсә бармай», — тип яҙылғайны аҫтан.

Рәшит ағай уны уҡып сыҡты ла ниндәйҙер бер ирония менән:

— Здорово сказано, крепко сказано! — тине. (Ә мин риза түгел) — һин, әлбиттә, редактор кеше, килешмәҫкә лә мөмкинһең.

— Килешеүе ҡыйын.

— Һин минән абстракт тип, нимә талап итәһең? Ниндәй конкретлыҡ?

— Һеҙ үҙегеҙ тойорға тейешһегеҙ инде, Рәшит ағай. Аҡылдың нуры буламы инде? Был бер ҙә матур түгел. Унан һуң:

«Астылар яҡты юл,
Байлыҡтар асты мул
Партияның аҡыл нурҙары», —

бер ҙә башҡортса түгел инде. Бигерәк буталсыҡ.

— Бер ҙә буталсыҡ түгел!

— Белмәйем, һеҙҙең үҙ иркегеҙ.

Бына шул тонда байтаҡ бәхәсләштек. Ахырҙа, ул:

«Яҡты юл астылар,
Байлыҡтар таптылар,» —

тип төҙәтте. Ләкин «аҡыл нурҙары»н ҡалдырҙы. Ә ҡушымтаны:

«Партия, дан һиңә,
Дан һиңә, партия,
Бөйөк Ленин байрағы ҡулыңда.

Һин булдың яҡты нур,
Етәкләп илткән ҡул
Беҙ барған коммунизм юлында», —

тип ҡуйҙы.

— Дуҫлыҡ ҡоростан ҡатыраҡмы, нығыраҡмы? — тигәнгә:

— Уныһы дело вкуса: һин нығыраҡ, тиһәң, мин ҡатыраҡ, тим.

«...Аттыра сәскәләр
Мең йыллыҡ ҡомлоҡтар бушлығы».

Быныһы шулай ҡалды, төҙәтмәне.

Ә «Дан һиңә, Башҡортостан» йырын ул үҙендә ҡалдырҙы. Быныһын яҡлай алманы. Эшләп ҡарармын, тине.

Минең фекер: был йырҙы руссаға тәржемә иткәндә, Советтар Союзы гимны килеп сыға, тик уға механик рәүештә «Дан һиңә, дан, ирекле Башҡортостан» тигән припев ҡына тағып ҡуйылған. Башҡортостандың төҫө лә, еҫе лә юҡ. Шул уҡ Башҡортостанды Ҡазағстан менән дә, Татарстан менән дә алмаштырып ҡуйып була.

— Ә нимә һуң ул, һинеңсә, Башҡортостандың төҫө менән еҫе? — тип һораны Рәшит ағай.

Мин «Урал» йырын әйттем:

— Уралҡайым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың,
Тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан сағта
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Бында мин тауҙарҙы ла, талдарҙы ла күрәм, шул талдарҙы ҡырҡҡандан тамып ҡалған ҡан еҫен дә тоям. Бында Башҡортостандың бөтә тарихы, географияһы, характеры бар.

Рәшит ағай оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы ла:

— Ул йырҙы халыҡ быуаттар буйы эшләгән, — тип ҡуйҙы. Шулай тигәс мин:

— Урал! Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда!
Быуаттарҙан баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрүр тора бында ҡаялар, —

тип уның үҙ шиғырын әйттем. — Был һуң быуаттар буйы яҙылғанмы? Ә мин уны халыҡ йыры менән тиң ҡуям.

Рәшит ағай менән һөйләшеү бер-береһен аңлаған яҡын кешеләрҙең һөйләшеүенә әйләнде.

— Уны Мәскәүҙә чудовищный образ, тинеләр бит?

— Русса, бәлки, шулайҙыр. Ләкин образдарҙы тәржемә менән генә баһалап та булмай. «Йәмле Ағиҙел буйҙары»н нисек итеп русса матур итәһең. «Ултер, улым, фашисты!» ла, «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» ҙа русса юғалып ҡалыр ине.

Мин үҙемдең был поэмаларға булған мөхәббәтемде әйттем:

— Юҡ хәҙер бындай әҫәрҙәр. Һеҙ ҙә яҙмайһығыҙ, башҡалар ҙа яҙа алмай.

Шунан һуң бөгөнгө поэзия тураһында һүҙ китте. Поэзия, минеңсә, хәҙер бер урында тапанып тора, күтәрелмәй. Башҡорт поэзияһын Сәләм, Ниғмәти һәм Мостай Кәрим күтәрҙе. Хәҙер ул Мостай Кәримдән ары күтәрелә алғаны юҡ.

— Бына һеҙ, йәштәр, күтәргә тейешһегеҙ: һин, Марат Кәримов, Сафин,— тине Рәшит ағай.

— Белмәйем, беҙ һеҙҙең кеүек яҙа алырбыҙмы, юҡмы?

— Яҙырға кәрәк. Хәҙер һеҙҙең самый яҙа торған ваҡытығыҙ.

Унан һуң һүҙ Зөфәргә, Юлтыйға, редакцияға, телгә һәм сәйгә күсте...

16 март.

Бөтә был көндәр Рафаэль менән үтте. Бер ни ҙә эшләмәнем, бер ни ҙә яҙманым. Шиғырҙар уҡыныҡ та һөйләштек, һөйләштек тә шиғырҙар уҡыныҡ. Көндәрҙең үткәне лә һиҙелмәне. Бәхәсләштек, хатта үпкәләштек. Әлбиттә, мин үпкәләнем. Сөнки мин уны төбө-тамырынан аңлайым, ә ул мине һаман да аңлап бөтөрә алмай кеүек. Эш шунда: минең өсөн Башҡортостан тыуған ер генә түгел, Башҡортостан минең тарихи йөрәгем, Башҡортостан минең өсөн ул бөгөнгө көн генә түгел, ул минең халҡымдың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге. Мин бөгөн бер нисек тә уның үткәндәрен онота алмайым һәм уның киләсәге лә мине ғәҙәттән тыш борсой. Бигерәк тә тел мәсьәләһе менән ауырыйым мин. Башҡортостандың төҫө лә, еҫе лә юғалмаһын тигән уйҙар мине ғәҙәттән тыш нык тулҡынландыра. Был мәсьәлә — шул тиклем ҡатмарлы һәм ауыр мәсьәлә. Шул хаҡта һүҙ сыҡтымы — мин бер нисек тә тыныс ҡына һөйләшә алмайым. Был минең иң ауыртҡан ерем, һәм был минең тормошомдоң йәне. Беҙҙең быуын ниҙер эшләп ҡалырға, ниҙер әйтергә тейеш. Беҙҙән һуң был кәрәк булмаясаҡ. Ул саҡта инде һуң буласаҡ. Ул саҡта инде милли культура тарихҡа ғына ҡаласаҡ. Сөнки беҙ эшләмәйбеҙ, ә татарҙар эшләй. Беҙ Бабичты газетала мең бәлә менән сығарғансы, улар күҙ асып күҙ йомғансы уның менән антология ла килтереп сығарғандар! Китабы ла беҙҙән алда сығасаҡ! Ә беҙҙә уның китабы әҙерләнеп бөтмәгән әле... Ултыралар шунда филиал тулып. Кисәге

татар антологияһын алып иҫем китте: юҡ ҡына яҙыусыларына ла улар йәбешеп яталар, һаҡлап ҡалырға тырышалар. Ә беҙ Бабичыбыҙҙы ла ҡулда тота алмайбыҙ әле. Фәлимйән Ибраһимовтың өс томын да баҫтырып өлгөргән улар, ә ул Башҡортостанда тыуып та, етмеш йәше тулыуға ҡарата уның тураһында беҙҙә бер-ике ауыҙ һүҙ яҙып сыҡҡан кеше юҡ! Әҙәм көлкөһө!.. Ибраһимов тураһында «Ҡыҙыл таң»да ғына бер мәҡәлә сыҡты. Ул да булһа — Халиттыҡы!

— Шәп эшләй татарҙар! — ти Рафаэль.

— Да, малай, улар беҙ түгел шул! — тим мин. Ә эс яна, йөрәк әрней. Сөнки беҙҙә лә бөтә эште татарҙар эшләй, тик улар беҙҙә Татарстандағы кеүек эшләмәйҙәр генә.

Башҡорт әҙәбиәтенең, башҡорт сәнғәтенең бөтә бәләһе лә шунда шул...

Татарстанда татарҙар ижад итә, ә беҙҙә уларҙың күбеһе кәсеп итә. Шулай булғас, әҙәбиәтеңдең яҙмышы кем ҡулында, шул ҡулдар уны хәл итәләр ҙә инде. Туған әҙәбиәт, туған тел, туған сәнғәт тип кем ҡайғырһын инде? Ҡайғырғандар һирәк. Шуларҙың бер меҫкене мин инде... Һәм мине Рафаэлдең аңлап етмәүе бик тәбиғи.

Минең өсөн Башҡортостан темаһы изге, был минең — тормошом, ҡайғым, шатлығым. Был минең ғорурлығым һәм кәмһенеүем. Был минең — йөрәгем.

Мостай Кәримгә ул — ҡайын япрағы; ел иҫкәндә шаулай, ел иҫмәһә, юҡ. Ел ҡайһы яҡтан иҫә, ҡайын япрағы ла шул яҡҡа елберҙәй. Шуның өсөн ул: «Мин башҡортмон» тимәй, ә «Россиян мин», ти. Әйтерһең, башҡорт булыу һаман да хурлыҡ. Ә бит революция һәр халыҡтың үҙ төҫө менән сәскә атыуы, үҙ төҫө менән бәхетле булыуы өсөн яһалған. Шуның өсөн бит беҙ: социалистик эстәлекле милли культура тибеҙ. Был эстәлектең формаһы тураһында беҙ «онотабыҙ». Минеңсә, форманы онотоу ҙа формализмдың бер формаһы. Сөнки формаһыҙ эстәлек түгелә, юҡҡа сыға, йәки икенсе бер яһалма формаға һалына. Яһалмалыҡ сәнғәттең юлдашы түгел. Һәр нәмәнең үҙ тәбиғәте, үҙ законы бар. Тәбиғәттең шул эске закондарын аңламау йә булмаһа уны бер формаға, бер ҡалыпҡа яраҡлаштырыу, руслаштырыу — ул инде әҙәбиәтте үҫтереү түгел. Тәбиғәтеңә ҡаршы килеү ул эш түгел. Природа умеет за себя мстить, тиҙәр. Был — дөрөҫ. Рустарҙан беҙгә өйрәнергә кәрәк, ә ярамһаҡланыуға улар мохтаж түгел. Рустар быны яратмайҙар. Уларға башҡа халыҡтар үҙ тәбиғәттәре, үҙ телдәре, үҙ моңдары менән ҡыҙыҡ.

Бер-береңдән өйрәнергә мөмкин һәм был кәрәк, ә бер-береңә маймыл кеүек оҡшарға тырышыу — түбәнлек.

Минең ауыҙ тултырып:

— Мин башҡорт! — тиәһем килә. Башҡорттарҙың кем икәнлеген күрһәтәһем килә.

Шуның өсөн тарихты ла оноторға ярамай.

Рафаэлгә был тема сәйер тойола. Сөнки уның үҙен был тема борсомай. Мостай Кәрим менән бер аҙ полемикаға кереү ҙә уға юҡ нәмә булып күренә. Мин «Йөрәгем»дә уҡыным:

Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Йәйрәп ята тыуған еркәйем,
Шул йөрәктең ҡан тамыры булып
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем...

Был образ уға бик дөйөм булып күренә. Ә минең өсөн был бик конкрет, бик яҡын. Был минең йөрәгем. Шул йөрәктә минең үҙ халҡым бар. Әгәр ҙә минең йөрәгемдә шул булмаһа, минең йәшәүемдең, шағир булыуымдың бер ниндәй мәғәнәһе лә юҡ.

Мин әҙәбиәттә һөйгән ҡыҙым йәки ҡатыным, йә булмаһа төрлө кендек әбейҙәре менән сикләй алмайым.

Рафаэль ауылдан кендек әбейе тураһында шиғыр яҙып килтергән һәм шуны конкретлыҡ, ти. Ә миңә был натурализм ғына булып күренә.

Рафаэль: «Мәжит Ғафури шағир түгел», — тип еңешә. Ә миңә ул шағир, халыҡ шағиры.

Рафаэль бер шағир менән мауыҡһа, башҡалар онотола, хатта Некрасов та юҡҡа сыға. Уға Лермонтов булған саҡта Пушкин юҡ.

Бына шулар хаҡында һөйләштек.

Кисәге уны Мәскәүгә оҙаттым.

— Бәләкәй генә булһа ла, хатҡа ҡаршы хат яҙ, малай,— ти.

Ҙур бер хат яҙаһы бар әле уға.

Надя больницала ята. Бөгөн барып, тәҙрә аша һөйләшеп ҡайттым. Әҙ генә айырылып торһаҡ та, ул әллә нисек яҡын, матур булып китә. Уға бик ныҡ асыуым килһә лә — барҙым. Был юлы роддомға инеү бик сәйер булды. Бынан бер йыл элек мин был йортҡа ниндәйҙер ғорур бер шатлыҡ менән килә инем. Мин медсестраға ни тип әйтергә лә белмәйем.

— Хәле нисекме?

— Эйе.

— Ҡасан кергәйне?

— Өсөнсө көн инде.

— Улай булғас, тыуҙырғандыр инде.

— Юҡ, ул тыуҙырырға тейеш түгел.

— Нисек инде?

— Шулай.

— Абортницамы?

«Абортница» тигән һүҙҙе әйтергә телем бармай, башымды ғына ҡағам. Оят, хурлыҡ, түбәнлек!..

Надя бала ташламаған әле.

— Әйҙә, ҡайт та кит, — тим.

— Һуң инде хәҙер, — ти Надя, күҙҙәре йәшләнеп. — Иртәгә хәл ителәсәк. Бына инде дүртенсе укол ебәрҙеләр, хина эсерҙеләр. Һаман да юҡ әле. Маткаң бик юғары, тиҙәр. Организм да бик таҙа... Ныҡ...

«Әҙ баланы тыуҙырыуҙан ҡурҡтың», — тим мин эстән генә. Йәл дә, йәл дә түгел. Мин инде килешергә мәжбүр булдым. Ләкин эстән бер нисек тә был хәл менән килешеп булмай. Үҙ балабыҙҙы үҙебеҙ үлтерәбеҙ! Йәшәүҙән ҡурҡыу был, түбәнлек. Быныҡ менән генә ауырлыҡтан ҡотолоп булмай икәнлеген мин йәнем-тәнем менән тояm. Был беҙҙең ғаиләбеҙҙә булған иң ҙур һәм иң мәғәнәһеҙ ҡаршылыҡ ине. Әҙ киләсәк? Белмәйем.

Бала менән, бәлки, мөхәббәт тә юғалыр? Был бит беҙҙең мөхәббәттең емеше ине. Нисектер, ҡурҡыныс... Надя минең күҙҙән төшөп ҡалыр кеүек. Киләсәктә уның әсә була алмау ҡурҡынысы ла бар. Ҡатын-ҡыҙ әсә була алмаһа, ҡатынмы инде ул?

— Бала — бәлә, — тинек беҙ.

— Бала — тормоштоң сәскәһе, — тимәнек. Әҙ бит уның тағы ла малай булыуы, Салауаттың ҡустыһы Азамат булыуы мөмкин ине. Юҡ ул хәҙер!..

Әҙ Салауат үҫә. Ғәжәп бер бала. Мин диванда Хафиз шиғырҙарын уҡып ятам. Әҙ ул иҙәндә йүгереп уйнап йөрөй ҙә миңә үрелә. Мин юрый ғына ҡулға алмай торам. Ул барыбер үҙенекен итә: тырышып-тырмашып өҫкә менеп ултыра ла минең китапты тартҡылай. Мин биргәс, уның тышындағы һүрәткә, яҙыуға ҡарап, аңлаған кешеләй булып, йылмайып торған була. Унан һуң бик килешле генә итеп биттәрен асҡылап, ирендәрен ҡыймылдатҡан була. Йәнәһе, ул да уҡый белә!.. Әле теле лә асылмаған бер йәшлек баланың шулай ҡыланыуы минең иҫте килтерә. Һин нимә эшләйһең, ул да шуны эшләй. Ул һинең көҙгөң. Ҡапыл уның китапҡа сумып ултырыр көндәре күҙ алдыма килеп, әллә нисек күңел яҡтырып китә. Бик зирәк бала булырға оҡшай, хәйерлегә булһын инде.

Юҡ, уны былай яңғыҙ ғына үҫтереү кеше итмәйәсәк. Уның ҡустылары — ҡайғылары булырға тейеш!..

17 март.

Салауатты йоҡлаттым да Жуковскийҙы уҡырға тотондом («Шағир китапханаһы», икенсе баҫма). Радионан ял концерты бирәләр.

Шамил Ибраһимовтың Мәхмүт Фәйзуллин һүҙҙәренә яҙылған «Яңғыҙ ҡайын» йыры ғәжәп матур! Һуңғы ваҡытта сыҡҡан йырҙарҙың иң яҡшылары шул «Яңғыҙ ҡайын» менән Шамил Ҡолбарисовтың Игебай һүҙҙәренә яҙған «Йәшермәсе, иркәм» йырҙары. Шуларҙы тыңлаған һайын көнләшәм дә, шатланам да. Үҙемдең шундай йырым булмағаны өсөн көнләшәм, ә шундай йырҙар тыуыуы өсөн шатланмай мөмкин түгел. Икеһенең дә музыкаһы ғәжәп оригиналь һәм тәрән хисле. Һүҙҙәре аҙыраҡ музыкаға ярабыраҡ етмәһә лә, яҡшы текст...

Йәшермәсе, иркәм!

Күҙҙәреңдә — көҙгө ҡояш нуры;
Ниңә, иркәм, һалҡын ҡарайһың?
Телгеләнеп янған йөрәгемә
Тағы тәрән яра яһайһың.

Әллә уйҙарыбыҙ айрыламы
Айырсалы юлдар шикелле?
Әллә мөхәббәтең һүнеп ҡалды,
Яландағы усаҡ шикелле?

Йәшермәсе, бәғрем, әйт дөрөҫөн,
Бүтәндәме хәҙер күңелең?
Умырзая кеүек зая ғына
Булды мәллә һинең һөйөүең?..

Яңғыҙ ҡайын

Беҙҙең туғай уртаһында
Үҫә бер яңғыҙ ҡайын.
Әллә ниңә шул ҡайынды
Мин бер ҙә онотмайым.

Иҫеңдәме, үткән йәйҙең
Ямғырлы бер көнөндә
Ышыҡланып торҙоҡ икәү
Ошо ҡайын төбөндә.

Ниңәлер шунда күң(е)лемдә
Серле хистәр уянды;
Ғүмеремдә беренсе ҡат
Йөрәгем тулҡынланды.

Хәҙер күңелем тыныс түгел:
Шул ваҡытты һағына,
Аяҙ көндә, ямғыр теләп,
Барам ҡайын янына.

Текст бер аҙ яһалма, әлбиттә. Ләкин музыкала икһеҙ-сикһеҙ киңлек уртаһында иҫ киткес моң менән бер яңғыҙ ҡайын шаулап тора. Был шауҙа ҡояш нурҙары ла, әйтеп бөтөрә алмаҫлыҡ яңғыҙлыҡ һағышы ла бар. Әйтерһең, ул ҡайын бик күп ҡайындар менән бергә үҫеп ултырған да ҡапыл ғына ул бөтә дуҫ-иштәренән айырылып тороп ҡалған; һәм ул хәҙер бөтә япраҡтары, бөтә ботаҡтары менән үҙенең яңғыҙлығын киҫереп шаулай, йырлай, моңая. Уға хатта елдән башҡа ҡоштар ҙа килеп ҡағылмай кеүек. Уға көҙгө ҡояш нурҙары төшөп торһа ла, елдәре һалҡын кеүек. Япраҡтарым һарғайып, ҡойолоп бөтмәҫ борон йәшәп ҡалайым тигән кеүек шаулай ул ҡайын, сайҡала. Шул шаулы сайҡалыу «А» өнөнә ҡоролған ҡатын-ҡыҙ хоры тарафынан иҫ киткес моң менән башҡарыла.

Мин бөтөнләй ғәшиҡ был ҡайынға!..

Ике йырҙы ла йыйынтыҡҡа индерҙем.

Тышта һуңғы буран йөрөй, ел олоуы күңелһеҙ. Тик был бурандарҙың көнө бөтә инде тигән уй ғына күңелде йыуатып тора. Өй нигеҙен буран ҡапшаһа ла, түбәнән тамсылар тама. Яҙ яҡынлай!.. Был ҡыш минең иң күңелһеҙ ҡышым булды. Саңғыға аяҡ та баҫманым. Тиҙерәк инде яҙ килһен, ер сәскәләргә күмелһен. Урманға сығып китеп, үләндә аунап шифыр яҙғым килә. Юҡһа, мин көндәлекте лә яңғыҙ ғына ҡалып яҙа алмайым. Яңғыҙ булғанда ғына, үҙ-үҙең менән, үҙ уйҙарың менән тороп ҡалаһың. Ә бүлмәлә сәғәт тауышы ла ваҡытың әҙ тип ҡыҫҡыра, баландың йоҡлап ятҡандағы һулышы ла ниндәйҙер бурыстар тураһында уйлата, студентка Фәниәнең: «Абый, мейескә яғайыҡмы?» — тигән һүҙе лә утын бөткәнлектә хәтергә төшөрә, стенала элеүле торған ир менән ҡатын портреты ла ҡатыныңдың больницала ятыуын әйтеп тора, гөл төбөнә өҙөлөп төшкән япраҡ та күңелгә ниндәйҙер шомло хистәр һала!..

Һағынам мин яҙҙы, күңелемде яҙға әйҙәйем:

Әйҙә, күбәләк булып ос,
Нескә ҡанатлы күңел, —
Сәскәләрҙең хуш еҫенә,
Тормош шауына күмел!

Әйҙә, һабантурғай һымаҡ,
Күккә күтәрел, күңел, —

Зәңгәр бейеклектән ергә
Көмөш моң булып түгел!

Әйҙә, ысыҡ тамсыһылай,
Сафлыҡ менән тул, күңел, —
Тул һин ҡояш нуры менән,
Кит яҡтырып, бул еңел!..

«Литературка»ла Алексис Парнистың «Дезертирлыҡ философияһы» тураһындағы мәҡәләһен уҡыным. Анджей Браунға асыҡ хат итеп яҙылған. Горькийса үткер һәм горькийса матур. Был поляҡтарҙан шундай нәмәләр сығып ҡына тора. Ғәжәп!

Кис Әлтәф килде. Минең балалыҡ дуҫым минән ни тиклем алыҫ хәҙер!.. Һөйләшергә һүҙ ҙә юҡ кеүек. Минең мәҡәләне уҡыған икән. «Көслө яҙылған», — ти.

Киноға барып, Димитров тураһында «Тарих һабағы»н ҡараныҡ. Матур кеше! Бөтә кешеләр ҙә коммунист исемен шулай күтәрһендәр ине!..

18 март.

Төн инде. Бына 18 март та башланды. Париж коммунарҙарының көнө. Коммунист тураһында көслө бер әйбер яҙаһы ине! Юҡ, әлегә яҙа алмайым. Ләкин йөрәктә Зоя йөрөй, йәшәй. Димитровты ҡарағас, ул тағын да күҙ алдыма килеп баҫты. Яҙырға тейешмен мин: кеше, кеҫәһендә партбилет йөрөтмәһә лә, нисек коммунист була — бына шуны күрһәтергә, коммунистың ҙур йөрәген күрһәтергә кәрәк! Беҙҙең әҙәбиәттә әле коммунистар бик һирәк. Сөнки ысын коммунист булған яҙыусыларыбыҙ аҙ, улар Ватан һуғышынан ҡайтманылар... Йә төрмәлә сереттеләр уларҙы! «Халыҡ дошманы» тип атанылар. Башҡорт әҙәбиәте өсөн был иң ҙур удар булды, әлбиттә. Ә егерме йыл эсендә улар күпме әҫәрҙәр яҙған булырҙар ине! Уйлаһаң, иҫең-аҡылың китә!.. Ниндәй трагедия был!..

Был хаҡта өндәшмәйҙәр, яҙмайҙар. Ғәлимйән Ибраһимовтың ғазаптары тураһында ла «Һайланма әҫәрҙәре»ндә бер ни ҙә әйтелмәгән. Әйтерһең, ул да үҙ үлеме менән үлгән!..

Ярай, Благойҙың «Мастерство Пушкина» китабын уҡыйым.

18 март.

Бала менән булышып, эшләргә ваҡыт бик аҙ ҡала. Йоҡо туймай, арыта. Ҡатын-ҡыҙға түҙем бирһен!.. Юҡ, балалар баҡсалары күберәк булһын!.. Надя янына барҙым.

— Тимәк, һин ҡәбер? — тим.

— Эйе, ҡәбер! — ти Надя.

Бала үлгән, тик үле көйө лә тыуа алмаған әле. Надя таҫын да:

— Иртәгә хәл ителәсәк, — ти.

— Бик оҙаҡ, — тим мин. Тимер селтәр көпләнгән тәҙрә аша һөйләшәбеҙ. Тәҙрә туңған — Надя тырнаҡтары менән боҙҙо ҡыра. Бәләкәй генә уйым аша ғазаплы күҙҙәре ҡарай. Күҙ керпектәре тағы ла оҙонораҡ булып киткән кеүек, күҙ төптәре лә күгәреп тәрәнәйә төшкән.

— Йоҡлай алмайым, — ти Надя, — Бунинды килтер, Грузин әкиәттәрен дә, Хафизыңды ла уҡып сыҡтым.

— Ярай, ҡыҙҙар килтерер.

— Салауат нисек?

— Нисек булһын — йүгерә. Һине онотто булһа кәрәк: ишек тауышына ҡарап та бирмәй хәҙер. Ҡыҙҙарға эйәләшеп китте.

— Ҡыҙҙар ярҙам итәме?

— Ниндәй ярҙам? Үҙем бешерәм, үҙем төшөрәм. Тик Салауаттың йүргәктәрен йыуырға ғына ялҡау килә.

— Һин бысаҡ менән ҡыр, Рәми. Бысаҡ мейес аҫтында. Йыуырға әйбәтерәк булыр.

— Юҡ, тәүҙә мин, йүргәктәрҙе соланға ташлап, туңдырам — аҙаҡ инде йыуам.

— Яңы метод!— тип көлә Надя.

— Әлбиттә. Еҫе лә юҡ, анһатыраҡ та...

Бына донъяның иң нескә серҙәре тураһында шулай һөйләшәбеҙ. Ә бер йыл элек кенә былар төшкә лә инеп сыҡмай ине бит. Күрәһең, төшкә үҙеңдең күҙең күргәндәрең генә керә!..

Надя үҙе ятҡан палаталағы бер ҡыҙ тураһында һөйләп аптыратты. Ун биш йәшлек ҡыҙ балаға ҡалған. Шуға аборт яһайҙар. VII класта уҡый икән. Көсләнгән. Балаһы хәҙер дүрт айлыҡ булған.

— Кем ҡыҙы?

— «Ленинсы» газетаһының фоторепортеры Я.-ның ҡыҙы.

— Кем көсләгән?

— М.-ның улы! Байыҡтың туғаны. Хәҙер төрмәлә ултыра.

— Шуның өсөнмө?

— Юҡ, кемделер бысаҡ менән сәнскән.

Бына һиңә донъя яңылыҡтары!..

Надяға алма, шәкәр ҡалдырҙым. Грузин әкиәттәрен, Хафиз шиғырҙарын алып ҡайтып киттем. Надяның запискаһынан

көләһем килә. «Аҙ ғына колбаса кәрәк,— тигән дә,— үбәм»,— тигән! Ҡайтҡанда магазинға инеп колбаса, керәндил алдым. Өйҙә май ҙа бар. Тауиләне ебәрҙем. Үҙем Буниндың шиғырҙарын уҡыйым.

Ғәжәп оҫта шағир! Тәржемә итергә кәрәк! Франконың хикәйәләре лә көтөп ята. «Күтәрелгән сиҙәм»де лә очерк итеп бирәһе бар. Шиғырҙарға ла ҡул теймәй. Дауыт Юлтыйҙы ла, мартта эшен бөтөрөп, наборға бирергә тейешмен. Уҡырға ла күп. Аспирантура ла уйландыра. Нисек итеп өлгөрөргә, нисек итеп етешергә? Ҡырҡ ҡуллы булаһы ине!.. Ләкин ике ҡулды ла тулыһынса үҙ урынында ғына файҙаланып булмай. Их, бер биш йылға иртәрәк өйләнгәнмен!

Бына Салауат тауышын сығара башланы. Иҫнәй. Иларға самалай.

— Ш-ш-ш!!!

Тынды. Юҡ. Ярай, етер!..

(Тағы яҙам.)

Биләүен систем. Еүешләнгән. Балыҡты күп тота. Сәйҙе лә күп эскәйне шул... Ниндәй матур баланың йоҡонан уяныуы!.. Йүргәген асып ебәргәс тә ҡулдарын артҡа ташлап, аяҡтарын һоноп ебәреп рәхәтләнеп кирелә.

— Үҫ-үҫ-үҫ!— тип күкрәгенән аяҡ остарына тиклем һыпырып алғанда үҙеңә лә рәхәт булып китә.

Ул салҡан ятҡан еренән, бесәй кеүек йылп итеп, йөҙ түбән әйләнә лә башын мендәргә батырып туңҡайып ята. Аяҡтары эҫе, шундай йомшаҡ, бөтә тәне йылы бәрхәт кеүек. Һыҡырыҡ еҫе лә һиңә иң татлы хушбуй еҫе кеүек. Бөтә тәнен үбеп бөтөрәһең, ҡабып йотаһың килә. Ә уның йоҡо аралаш шыңшып йылмайыуы, күҙҙәрен бер йомоп, бер асып һиңә теклән ҡарауы!.. Ырғып китеп, мендәргә үрмәләүе!.. Башын иң үргә һалып, бөтә нәмәгә күҙ йөрөтөп сығыуы!.. Телен лепер-лепер буталдырып, әллә ниндәй өндәр сығарыуы һәм ҡапыл ғына иҫнәп ҡуйыуы!..

Мин тиҙ генә, йоҡоһо осмаһын тип, уның тыңлауһыҙ тәнен, ярҙа тыпырсынып ятҡан балыҡты тотҡан кеүек, шәп-шәп кенә сепрәктәренә урай башлайым.

(Бына уның бөтә уяныуын яҙғансы инде ул йоҡлап та киткән!..)

Башта ул ҡарыша, ләкин бер уратып алғас, башҡаса инде көс түгеп тороуҙың кәрәге юҡ тигән һымаҡ, артабан һинең ихтыярыңа ғына буйһоноп ята.

Биләп бөткәс, мендәргә һалам.

Йоҡоһо янында ғына көтөп тора. Тик ниҙер етмәй. Асыҡҡандыр, күрәһең. Эйе, асыҡҡан. Бидон ҡапҡасы шылтырау менән:

— Эһе,— тип башын ырғытып ебәрә.

Һөт һалғансы түҙемһеҙләнеп көтә, көтөп ала алмай.

Тәүҙә тын да алмай һемереп эсә лә тәрән итеп һулап ҡуя. Ниндәй тәмле был һөт тигәнең. Һалҡын ғына, йомшаҡ ҡына, үҙе шундай хуш еҫле!.. Уны бит атайың сиратта тороп алған, ярты төн уртаһында, тамсыһы ла түгелмәһен, көймәһен-янмаһын тип, плитка эргәһенән китмәйенсә тәмләп-татлап ҡына бешергән һәм бына икенсе көн инде шул һөт менән һыйлай һине. Һин ни тиклем яратып эсһәң, уға ла шул тиклем рәхәт, күңелле. Һин туҡ булһаң, ул да туҡ бит.

— Мә, тағы ла эс, Салауат!..

Ул эсә. Тик тәүҙәге һемереп эсеү түгел инде был. Аҙлап ҡына, тәмләп кенә, яйлап ҡына һыйланыу был.

— Тағын бер йотһаң ине, тағын бер, бөткәнсе!.. Атайыңдың бөтә иғтибары хәҙер һинең ауыҙыңда. Һинең ирендәрең аҙ ғына алға сығып ослайһа, уның ирендәре ҡолағына етерлек булып йәйелеп китә.

— Эх-х!.. Тәмле был һөт!..

Ләкин һин туйҙың, иренеп кенә йотаһың, ҡыҫтатып ҡына эсәһең, көрһөнөп алған булаһың, йән эйәһе!

Ҡапыл тәҙрәгә боролоп ҡарайһың. Селтәр аша туң тәҙрәгә төшкән әллә ниндәй семәрле, әллә ниндәй сихырлы абаға сәскәләре артында мамыҡ йомғағы һымаҡ йомшаҡ ай күренә.

Тик һин уның ай икәнен, ғашиҡтар ҡояшы икәнен белмәйһең әле, улым. Бына һиңә 17 йәш булыр, һин биләүҙәреңде онотоп, тормош биләүҙәренә уратылырһың, ниндәйҙер матур бер ҡыҙ йөрөр йөрәгеңдә,— бына шул саҡта һин айҙың да нимә икәнен тойорһоң!.. Ә хәҙергә тағын бер йотом ғына эс тә — йоҡла, әйҙә. Йоҡоң һине эҙләй, ауыҙыңды асып һигеҙ бөртөк кенә тешеңде һанай,— ниндәй матур һинең ул ваҡ ҡына ынйыларың!.. Тик береһе генә икегә айырылып, төптән бер тамыр булып тора. Юҡһа, һин ете тешле генә булыр инең.

Ҡапыл һин радиоға ҡарайһың. Радио өндәшмәй. Мәскәү дикторы ла инде һөйләп арыны. Кисәге Доктор Айболитты тыңлап, һин радиоға ғәжәпләнеп ҡарап тора инең. Радионың да ни икәнен белмәйһең шул әле һин. Ул да һиңә әле ай кеүек түңәрәк бер нәмә генә. «Эх, шуны һөйрәп төшөрөп булғанда, шәп уйынсыҡ булыр ине!» Хәҙергә һинең философияң шул ғына! Ә бөгөн унан Венгрия философияһы тураһында һөйләнеләр. Һиңә аҡыл теше сыҡҡанда инде һин был хәлдәрҙе тарихтан ғына уҡып белерһең, улым... Бәлки, ул саҡта инде

«атом уйындары» тураһында түгел, бына әле генә һин ҡарап алған айға осоу тураһында һөйләрҙәр.

Һин дә атай булырһың. Ләкин һин, үҙ балаңды ҡулыңа алып ултырғанда, минең кеүек квартира, һөт, утын тураһында уйламаҫһың ул ваҡыт!..

Йә, йоҡла инде, улым, йоҡла. Мин һинең йомшаҡ ҡына сәстәреңдән һыйпайым, ирендәрем менән биттәреңде, муйыныңды ҡытыҡлайым. Һин йылмайып ҡына йоҡлап кит. Иртән оҙағыраҡ йоҡла. Миңә лә аҙыраҡ йоҡо тейһен. Миңә бит эшләргә кәрәк. Мин мәңге эшләргә тейешмен. Тик эш эшләгәндә генә мин һинең кеүек саф һәм матур, бәхетле!.. Һин инде йоҡлайһың...

Мин улым тураһында бер рәхәтләнеп яҙайым әле, тип ултырғайным, сәғәт инде дүртенсе ун биш минут булып киткән... Ә үҙем ни тиклем тиҙ яҙған кеүекмен!.. Тимәк, оҙаҡ яҙамын.

Берәй ваҡыт был төн тураһында Салауат был юлдарҙы үҙе уҡыһын ине. Мин уның бәхетле, матур, эшсән кеше булыуын теләйем.

Беҙ уны бик ауыр саҡтарҙы кисереп үҫтерәбеҙ. Ул быны онотмаһын ине. Әгәр ҙә онотоп ҡуйһа, был юлдарҙы уға уҡытып алырға кәрәк булыр. Бәлки, уның йөрәге атаһының иң изге теләктәрен аңлап, яңыса тибә башлар.

Кеше бул һин, улым. Бер ҡасан да үҙеңдең кешелек намыҫыңа тап төшөрмә! Мин үҙем шулай йәшәргә тырыштым, шулай йәшәнем һәм йәшәрмен.

Йөрәгендә иң ҡәҙерлеһе — халҡы булмаған кеше кеше түгел. Кескәй генә йөрәгеңә бөтә донъя һыйһын — шунда ғына һин донъяның дуҫы булырһың. Йөрәгенә донъяны һыйҙырған кеше бер ҡасан да үҙе өсөн генә йәшәй белмәҫ. Тик шул бер нәмәне генә белмәгән кеше — бәхетле кеше!..

19 март.

Салауат бөгөн рәтләп йоҡламаны. Ҡыҙҙар институттан иртә ҡайттылар ҙа, шырҡылдашып, уяттылар. Дауыт Юлтыйҙың һаман да осона сыға алмайым. Надя нисек уҡыйҙыр, мин эшләй алмайым өйҙә! Өй эше менән булашып, бөтөнләй ваҡыт ҡалмай. Көн үтә лә китә, үтә лә китә. Ҡыҙҙарға бик асыуым килә. Башҡа бер бәлә генә булдылар — ҡыуып сығарыр инең — хужа ҡыҙы!.. Етмәһә, студенткалар. Үҙҙәре йүнләп уҡымайҙар ҙа. Егеттәре килеп ялҡыта. Русса һөйләшеп маташҡан татар егеттәре. Белмәйем, былар нисек уҡытыусы булырҙар икән!.. Институттан бик күп буш баштар «уҡып» сыға. Шулар инде балаларға тәрбиә бирергә тейеш!.. Эх, донъя!.. Бөтә донъяны, үрмәкес ауы кеүек, формализм сорнап

алған. Нисек итеп уларҙы йырып-йырып ташларға?.. Прозаға тотонмай булмаҫ. Үс алыр инем шул үрмәкес ауынан!.. Күпме нәфрәт йыйылған миндә хәҙер!..

Бына әле Буниндың «Һуңғы күрешеү» хикәйәһен уҡып ҡына бөгөнгө кәйефте алып ырғыттым. Йөрәккә әллә ниндәй кеше хистәре, ниндәйҙер һағыш тулды. Бер өс-дүрт битлек хикәйәлә лә күпме тормош, күпме тәбиғәт моңо Һыйған!

Бер ҡулымда китап, бер ҡулымда ҡалаҡ, һөт бешерәм һәм уҡыйым...

30 март.

Төн. Скрипка өҙөлә...

Нисек ышанайым мин кешегә,
Кешеләрем мине алдаһа?
Кешеләргә аҡса ҡояш таһа,
Кешеләргә кеше мал даһа!..
Үкһеп-үкһеп иланым мин бөгөн,
Үкһеп-үкһеп тәү ҡат иланым.
Һулҡып, һулҡып һыҙлай йөрәккәйем,
Имә уны ҡайғы йыланы.
Күпме ялғанлыҡ бар кешеләрҙә,
Күпме бысраҡ, күпме хәйләлек!..
Мөмкин булһа, сәйнәп ырғытыр ҙа,
Бер ҡарамаҫ инем әйләнеп.
Күҙгә күҙлек кейә шул маймылдар,
Йөҙгә кейә кеше битлеге.
Ҡулдарынан бер эш килмәһә лә,
Ҡыла һиңә төрлө этлеген!..
Нимә уға һинең хыялдарың,
Нимә уға керһеҙ йөрәгең!..
Бысраҡ аҡса уның бар теләге,
Аҡса уның бөтә терәге.
Ул ҡандала булып ҡаның эсер,
Үрмәкестәй үрер ауҙарын.
Ниңә йәшәй шулар, ниңә баҫмай
Емерелеп бер көн тауҙары!..

Ярай, бөтәһен дә һуңынан яҙырмын әле. Ауыр миңә. Ир була тороп иланым...

31 март.

Рафаэлдән хат килде! Дипломдарын яҡлағандар. Рафаэль менән Рәис — яҡшыға, Шакир —уртасаға. Рафаэлдең дипло-

мы отлично булыр тип көткәйнем мин. Шакирҙың да уртасаға яҡлауын күҙ алдыма килтермәй инем. Тимәк, бик объектив ҡарағандар.

Шулай ҙа диплом пустяк нәмә!..

Ижадты дипломға һыйҙырыу ауыр. Бөтәһен дә киләсәк күрһәтер әле. Рафаэль тар булһа ла, унда өмөт бар. Ә Рәис менән Шакирҙа ысын әҙәбиәтселәрҙе күрмәйем. Ваҡ кешеләрҙең ысын әҙәбиәтсе буласағына ышанғым килмәй. Шакир телде яҡшы белә, яҡшы тәржемәсе булырға мөмкин. Ә үҙенең ҡайғыһы, үҙенең кешеһе, үҙенең идеалы юҡ. Рәистә көнсөллөк кенә бар. Ләкин ул кешеләргә ярай белә. Журналист булырға йәки берәй урын биләп ултырырға мөмкин. Бындайҙар әҙәбиәтте түгел, әҙәбиәттә үҙҙәрен ныҡыраҡ яраталар, ә үҙҙәре менән риза булмаған кешеләрҙе яратмайҙар.

Диплом яҡлаған көндәрендә, дипломдарын йыуып, шул фекерҙе әйтәһе килгәйне. Ләкин мин улар янында түгел!..

Рафаэль бик ҡаты ауырып алған. Ауырыу уның артынан күләгәһе кеүек йөрөй. Бер ҙә айныҡаны юҡ. Укол менән генә ҡотҡарып ҡалғандар.

Хатын уҡып көйөндөм дә, һөйөндөм дә. Яратам мин уны. Берҙән-бер ярата торған кешем бар, ләкин уның менән дә һәр саҡ риза ғына булып тора алмайым. Әҙәбиәткә ул ҡыҙҙарға ҡараған кеүек ҡарай. Ҡапыл ярата ла ҡапыл һыуына.

Гөлсәсәк менән дә эштәре бешмәй тора, күрәһең. Был турала икенсе хатта яҙырмын тигән.

Минеңсә, бөтә бәлә — икеһенең дә бик матур, бик ғорур булыуында. Икеһе лә бер-береһенә ал бирмәҫкә тырыша. Икеһе лә бер-береһен яндырырға ярата. Тәрән дуҫлыҡ юҡ, көнсөл яратыу ғына бар. Әгәр ҙә уларға бергә йәшәргә тура килһә, икеһенә лә бик ауырға тура киләсәк. Икеһе лә артистар! Әгәр ҙә Рафаэль ҡыҙ булһа, беҙҙән дә яҡшы пар булмаҫ ине донъяла!.. Беҙҙең дуҫлыҡ ниндәйҙер ҡыҙ менән егет араһындағы мөхәббәт кеүек. Был дуҫлыҡ оҙаҡҡа, ғүмергә булыр кеүек. Быны беҙ икебеҙҙә лә бик саф килеш һаҡларға тейешбеҙ!..

1 апрель.

Төнгө сәғәт 4. Дауыт Юлтыйҙың «Һайланма әҫәрҙәр»е, I том, баҫырға әҙер! Иртән барғас та документацияһының эшен бөтөрөп производствоға бирергә кәрәк. Намыҫ менән эшләнем. Минең Дауыт Юлтый алдында намыҫым саф. Эшемдән ҡәнәғәтмен. Өҫтән тау төшкәндәй булды. Инде миңә тыныс күңел менән дүрт сәғәт кенә булһа ла йоҡлап алырға мөмкин.

Минең эште өйгә алып ҡайтып эшләүемдән көләләр. Бәлки, мин ахмаҡтырмын да... Шулай ҙа мин башҡаса булдыра алмайым.

Ҡайҙа ла эш муйындан икән минең өсөн. Ҡайҙа ла тыныслыҡ юҡ. Сөнки мин үҙем тыныс түгел!..

Бөгөн бына шундай һөҙөмтәгә килдем. Иртәгә «Йәш көстәр»гә тотонорға кәрәк. Иртәгә Франконың хикәйәләрен дә тәржемә итә башларға кәрәк. Иртәгә түгел, бөгөн!..

2 апрель.

Юҡ, тәржемәгә тотона алманым. Баш тубал кеүек! Юлтый бик йонсотҡан икән. Бөгөн дә төшкә тиклем баш зыулап тик торҙо. Бер нәмә лә эшләй алманым.

Март айының планын үтәү буйынса отчет бирҙек. Василий Андреевич:

— 300 процентҡа үтәгәнһең!— тине.

Юҡ, башҡаса мин былай һыпырылмам. Тик Юлтый өсөн генә үҙ-үҙемде аяманым. Ләкин, барыбер, эшеңде күрмәйҙәр. Кисәге баш бик ауыртҡас, директорға керҙем.

— Ағай, мин бөгөн ял итеп алайым инде?

— Шундай йәш ваҡытыңда ниндәй ял ти ул. Беҙ һеҙҙең кеүек саҡта көн буйы бесән сабып, төн буйы ҡыҙҙар артынан саба торғайныҡ!.. һ. б. төрлө мораль уҡыу!..

Ниңә эйткәнемә үкендем.

— Баш редакторға ин, минең бер ҙә...

— Кәйеф юҡмы?

— Эйе.

— Ярай, улай булғас...

Ләкин, теләнсе кеүек кәмһенеп, редакторға кереп торманым. Уныһы ла шул бер үк сыбыҡтан ҡыуылған нәмә.

Кис директор беҙҙең бүлмәгә инеп:

— Бәй, һин ҡайтманыңмы ни?— тигәйне, мин моменттан файҙаланып:

— Һеҙҙең кәйефегеҙ булмағас, ҡайтманым инде, ағай!..— тип ҡаптырып ҡуйҙым тегегә. Бер ни ҙә эйтә алманы. Мин уның күҙ алдында эшләгән кеше булып ултыраһым килмәйенсә, тартаһым килмәһә лә, тартырға сығып киттем.

Был кеше миңә урта быуат инквизиторы булып күренә башланы. Һәр нәмәнән шикләнеүсе, үҙенән-үҙе ҡурҡа торған тупаҫ һәм бик сикләнгән кеше. Мәғәнәһеҙ ҙур күҙҙәрен тағы ла ҙурыраҡ асып, һиңә һарыҡ кеүек ҡарап тора-тора ла, тоҡтомалдан, бөтөнләй кәрәкмәгән, мәғәнәһеҙ бер һүҙ әйтеп ҡуя. Сыҫҡан менән бесәй булып уйнарға ярата, күрәһең! Ләкин барып сыҡмай. Нисектер хәле бөткән, йүне киткән меҫкен ҡарт бесәй кеүек килеп сыға. Хатта йәл булып китә. Хәҙергә бер ни ҙә эйтмәйем әле үҙенә. Тағы бер ҡабат аҡыл һатҡанда сдачаһыҙ ҡалдырмам әле үҙен.

Кисте саҡ көтөп алдым. Райкомға барып учеттан төштөм, учетҡа индем. «Совет Башҡортостаны»на инеп, Файыҡтан профсоюз билеты яҙҙырып алдым. Ул альманахҡа шифырҙарын да биреп өлгөрҙө. Ләкин индерерлек түгелдәр. Редакцияға ингәндә нисектер күңелгә яманһыу булып китә. Бөтәһе лә:

— О, беҙҙең юғалған Рәми, оноттоң бит, ниңә килеп тә сыҡмайһың!— тип килеп күрешәләр, хәлде һорашалар, «онотма, онотма, килеп йөрө», тиҙәр.

— Ваҡыт юҡ бит,— тигән булам, ә үҙем эстән генә һыҙланам. Әҙәбиәт бүлегендә күренмәйҙәр. Әхмәтшин психбольницаға ингән, ә Саръян минең кеүек эшкә батып ултырырға яратмай, ахыры, һәр саҡ сығып киткән була. Кире нәшриәткә барып, эш хаҡы алдым да, взностарҙы түләнем, учетҡа яҙылдым. Бында формализм иҫ киткес көслө күренә: профсоюзда ла, комсомолда ла. Йыйылыштар иҫ киткес ҡоро, йәнһеҙ үтә. Кешеләрҙе көсләп һөйләтәләр. Фөмүмән, эштән башҡа миңә бер ни ҙә оҡшамай бында. Эште эшләү ҙә бик ҡыйын шарттарҙа. Күрше бүлмәлә суд, залда иртәнән кискә тиклем судҡа килгән халыҡ шаулай, бүлмәлә һалҡын һәм тәртипһеҙлек. Беҙҙең менән бергә техник обществоның бухгалтерияһы «эшләй». Күңелгә ауыр, һалҡын, ҡараңғы...

Шуларҙы уйлап, кисәге мин өйгә нисектер һул аяҡ менән ҡайтып керҙем. Кеpһәм, Салауат китаптарҙы иҙән буйлап туҙҙырып ташлаған, Надя ла күңел йыуатырлыҡ һүҙҙәр эйтмәй. Тиҙерәк эшкә ултырырға ашығам. Ләкин Надя мәктәпкә китергә ашыҡмай, һөткә барам тип, мәктәпкә бармаҫҡа булған. Кухняла ҡыҙҙар шырҡылдаша. Минең бөтә кәйеф боҙолдо. Етмәһә, Надя минең алға сәғәтте килтереп ултыртты ла:

— Сәғәт унда уятырһың,— тип бала янына йоҡларға ятты. Мин эстән генә эсенеп, бөтә был күренештән тыныслана алмайынса, сәғәт унды саҡ еткерҙем. Тәржемәгә тотона алманым. Иҙән буйлап арлы-бирле йөрөй башлағас, Надя:

— Ни булды?— ти.

— Дежурю в этом вокзале!

Был һүҙҙәргә үҙемдең бөгөнгө бөтә асыуымды һалып эйттем. Тағы ла һүҙгә килеп тораһы килмәй. Өндәшмәүҙән башҡа бер ни эшләр ҙә сараң юҡ. Ә өндәшмәү икебеҙгә лә ауырыраҡ. Эх, был донъянан бер өс сәғәткә генә юғалып тороп, тыныс ҡына эшләйһе ине!..

Юҡ, Корней Чуковский тураһында Зелинскийҙың мәкәләһенән башҡа бер ни ҙә уҡый алманым.

Төн бушҡа үтте.

Ә көн тағы ла әрәм булды. Кешеләр эшләй. Әнүәр Бикчәнтәев:

— Эшләргә кәрәк!— ти. — Бальзак кеүек эшләргә кәрәк. Все остальное — ерунда!..

Белмәйем, ул үҙе ҡасан эшләйҙер? Көн буйы уны урамда йә редакцияла, йә нәшриәттә күрәһең. Ә үҙе бөтәһенә ҡарағанда ла күберәк эшләй. Китаптарын русса ла, башҡортса ла сығара. Мәскәүҙән дә, бынан да аҡса ала. Тегегә лә, быға ла дуҫ. Бөтәһе лә уның өсөн «дуҫ кеше». Бөтәһенә лә яғымлы, бөтәһенә лә ярай, бөтәһе менән дә ризалаша. Бөтә урында ла уға ишек асыҡ. Бөтәһенә лә ул ҡулын бирә. Ул минең менән күрешкән һайын мин уға бирәсәк бурысым тураһында уйлайым. Һаман да ҡотола алмайым шунан. Уның менән һөйләшеүе уңайһыҙ, күҙгә ҡараған һайын ул да шул хаҡта уйлай кеүек. Ләкин уның: «Эшләргә кәрәк, кеше былай ҙа ярты ғүмерен йоҡлап үткәрә» тигән һүҙҙәре менән ул миңә оҡшай. Тик ул үҙе бер ҙә аҙ йоҡлаған, эш менән йонсоған кешегә оҡшамай. Бал менән майҙа йөҙгән кеүек һимеҙ, хәҙер генә бәлеш төбөн түңкәреп ҡуйған кеше кеүек туҡ һәм мөләйем!.. Аңлап етмәйем мин уны. Китаптарын башҡортса итеп редакторҙар эшләп сығара, ә русса сыҡҡандарына: «Перевод с башкирского автора» тип ҡуя!.. Һәм үҙен «Комсомольская правда»ла, «Литературная газета»ла маҡтай. Бөтә ерҙә лә «дуҫ кешеләре» бар шул уның!..

Рәхәт йәшәй кешеләр!.. Бер ҙә «башҡорт әҙәбиәте» тип ҡайғырып йөрөмәй, ә үҙе башҡорт әҙәбиәте кәмәһендә йөҙә генә бирә... Башҡортса бер һөйләм төҙөй белмәүенә лә бошоноп тормай.

Кис Ғәйнан ағай менән һөйләшеп ултырҙыҡ, шифырҙарын уҡыны. Шатланып уҡырлыҡ шифырҙары юҡ кеүек. Ләкин үҙе яҡшы, ти. Мин ышана алмайым. Нисектер һүнеп бара буғай ул. Бик арыған, бик йомшарған, кемдәрҙер үҙен бик ныҡ иҙгән.

Миңә лә: «Ергә төш, Рәми»,— ти. Юҡ, мин әле башты эймәйәсәкмен!..

Кискә табаныраҡ Мәскәүҙән Рафаэль шылтыратты. Шифырҙары тураһында һораша. Гөлсәсәк менән эштәр боҙолоп тора, ти.

— Әллә өйләнәйем дә ҡуяймы?— ти.

— Юҡ, юҡ, ауыҙыңды ла асма хәҙергә,— тим мин.

Ҙур итеп хат яҙырға кәрәк булыр.

3 апрель.

Беҙгә Мостай Кәрим килде, һәм миңә әллә ниндәй рәхәт булып китте.

— Кәйеф нисек?

— Хөрт, ағай.

— Үҙең китап сығармаһаң да, кешеләрҙекен сығарайым тип ултыраһыңмы?

— Эйе,— тим мин.

Рафаэлдәрҙең диплом яҡлауында булып ҡайтҡан. Нимә һөйләгәнен һөйләп ташланы.

Н. Задорновтың Латвияла баҫылған башҡорттар тураһындағы романын килтергән («Парус» журналы). Баҫырға кәрәк, ти.

Бер-ике һүҙ һөйләне, миңә әллә күпме һөйләшкән кеүек булды.

Камиль Сен-Санс 16 йәштән яҙа башлаған композитор. Ромэн Ролландың «Музыканты наших дней» тигән китабынан уҡырға! (Радионан әйттеләр.)

8 апрель.

Кисә Өфөгә яҙ килде. Иретә. Йылы. Быҫҡып ҡына ямғыр һибәләй. Яҙ, ахыры, ҡапыл килергә уйлай. Март һалҡын, буранлы булды. Ҡар күп быйыл: яҙ бик ярһыу буласаҡ.

Луначарский баҡсаһында һәм уның ҡаршыһындағы тирәктәрҙә ҡарғалар шаулаша. Төндә лә сәүкелдәшеп туймайҙар.

Сыйырсыҡтар булмағанда ҡарғалар ҙа яҡын күңелгә. Нисектер донъя йәнләнеп, тулыланып киткән кеүек. Нисек кенә булмаһын, яҙҙы ҡарғалар башлап ебәрә бит.

Әллә ниндәй быйылғы яҙ: моңһоу ҙа, ярһыу ҙа... Нимәлер етмәй, нимәлер юҡ кеүек.

Быйылғы ҡыш минең тәнде генә түгел, күңелде лә туңдырҙы буғай. Күңел ҡатҡан. Кешеләргә ҡарата ышанмау тойғоһо, һәр нәмәгә шикләнеп ҡарау тойғоһо көсәйгән миндә. Тормош миңә үҙенең иң әшәке яҡтарын асып бирҙе быйыл.

Көн һайын шул тормоштан бер өс-дүрт сәғәткә генә булһа ла юғалып тораһым һәм бер кемде лә күрмәйенсә, бер кемде лә ишетмәйенсә туйғансы, хәлдән тайып йығылғансы яҙаһым, яҙаһым килә.

Ҡулға ҡәләм тотмай торһаң, ҡәләм алыҫая, тупаҫлана. Яҙыу эше һиңә нисектер ят, бөтөнләй таныш булмаған эш кеүек тойола башлай.

Эштән тик бер хыял, тик бер теләк менән ҡайтам: бер-ике сәғәт кенә булһа ла, яҙып ултырһаң ине!..

Яҙыу — иң көтөлгән, иң ҡәҙерле, иң матур сәғәт булып тойола.

Ҡайтһаң — бала! Надя мәктәпкә китә. Баланы йоҡлатҡансы үҙең дә йоҡлап китә яҙаһың. Етмәһә, ҡыҙҙар ҡамасаулай. Асыуҙың сигенә етеп, ҡыҫҡырып ебәрәһем килә. Шунда ла тешемде ҡыҫып ҡалам.

Бөгөн Салауатты йоҡлаттым да, егеттәре сығып киткәс:

— Ҡыҙҙар, һеҙгә әйтеп ҡуяһы бер һүҙ бар әле,— тинем. Тауыш шундай ҡалтырап сыҡты, хатта үҙем дә туҡтап ҡалдым. Ҡыҙҙар бер-береһенә ҡарашып алдылар ҙа:

— Нимә һуң?— тип бик мөһим нәмәне тыңларға торған кеүек, тынып ҡалдылар.

— Һеҙҙең бына иң теләгән, иң хыялланған нәмәгеҙ бармы?

— Әллә, нимә һуң?

— Бына мин көн һайын бер генә бит булһа ла яҙырға хыялланып ҡайтам. Ә ултырып булмай. Һеҙ сәғәт туғыҙға тиклем бөтә эшегеҙҙе лә бөтөрөп ҡуйһағыҙ ине. Салауатты йоҡлатып булмай, тауыш булмаһын ине, ҡыҙҙар. Һөйләштекме шулай?

— Ярар,— тиеште ҡыҙҙар.

Һәм ҡапыл өй тынып ҡалды.

Мин улар алдында бик ғәйепле һәм шуның өсөн бик ныҡ ғәфү үтенгән кеше һымаҡ һөйләштем. Нисек кенә тырышһам да, үҙемдә йыйылып килгән бөтә асыуҙы йәшерә алманым кеүек һәм быны бик уңайһыҙланып, бик түбәнһенеп белдерҙем шикелле... Ләкин өҫтән бер йөк алып ташланған кеүек булды.

Үткән аҙнала Әнғәм Атнабаевтың шиғырҙары тураһында поэзия секцияһында доклад яһаным. Ололарҙан Ғәйнан ағай, Сәғит Агиш, Кулибай һәм Хәким Ғиләжев бар ине. Минең сығыш бик әҙерлекһеҙ булһа ла, бик оҡшаны, буғай.

— Секция исеменән рәхмәт әйтәһе килә,— тине Хәким ағай.— Быға тиклем бындай доклад булғаны юҡ ине әле. Рәми үҙенә бирелгән тәүге поручениены бик добросовестно, бик яҡшы итеп үтәне.

— Башҡа секцияларҙа ла бына шундай сығыштар булһын ине,— тип ҡуйҙы Сәғит Агиш.

— Ғәжәп искренно, тәрән, доброжелательно һөйләне Рәми,— тине Ғәйнан ағай.

Икенсе көндө издательствоға килгәндә ул:

— Кисәнге сығышың өсөн,— тип ҡулды ҡыҫҡан булды.

Белмәйем, был сығыш минең үҙем өсөн бер ҙә улай тойолманы. Мин бик ҡурҡа-ҡурҡа ғына барғайным. Докладтың яртыһын ғына яҙып өлгөргәйнем. Ҡыҙып китеп, ҡағыҙһыҙ ғына һөйләргә тура килде. Мин үҙемдең һөйләй белмәүемә зарланам, тотлоғам, һүҙҙәрҙе нисектер боҙоп, төҙәтә-төҙәтә әйтәм. Үҙемдең ҡағыҙға ҡарап һөйләүемә йәнем әрней. Шундай ҡағыҙҙан айырыла алмаған кешеләрҙе йәнем-тәнем менән күрә алмайым. Ә бер ҡыҙып китһәм, үҙ-үҙемде һиҙмәй һөйләп китәм дә һуңынан аптырап ҡуям: әллә ҡайҙан телгә һүҙҙәр килеп тора, әллә ҡайҙан фекер сығып тора!.. Әйтерһең, мин кем менәндер бик ныҡ бәхәсләшәм, һәм, нисек кенә булһа ла, үҙ фекеремә уны ышандырырға тырышам.

Мин иң юморһыҙ кеше булһам да, кешеләр көлә һәм мин көтмәгәнсә ниндәйҙер бик иғтибар менән тыңлайҙар. Әйтерһең, мин ниндәйҙер бер һүҙҙәр шаманы!..

Әллә ҡайҙан — «Игорь полкы тураһындағы һүҙ»ҙән башлап реализм хаҡындағы бөгөнгө бәхәстәргә килеп етәм. Йософ менән Зөләйха ла, Ромео менән Джульетта ла, Гейне менән Таҡташ та, натурализм менән формализм да ҡалмай — бөтәһе лә бер епкә килеп теҙелә һәм мин үҙем һөйләгәнгә үҙем дә ышанам, башҡаларҙы ла ышандырам...

9 апрель.

Надя больницанан үкереп илап ҡайтты.

— Ниңә, ни булды?

— Операция яһамайҙар.

— Ә бала нисек?

— Тыуҙырырға...— тине лә буҫлығып-буҫлығып илай башланы.

Бала үлмәгән — тере!.. Тыуһын инде әйҙә! Тик мине уның зәғиф булып ҡуйыуы ҡурҡыта. Ә врачтар, киреһенсә, уның бик теремек буласағын әйткәндәр.

Күрәһең, икегеҙҙең дә организмығыҙ бик ныҡ,— тигәндәр.

Был шатландыра. Ләкин минең өсөн хәҙер аспирантура ишеге ябыҡ булыр, ахырыһы. Эх, тормош!..

— Прощай теперь, аспирантура!..

Надя тағы ла йәштәрен субырлатып ағыҙып иларға тотондо.

Мин бер һүҙ ҙә өндәшмәй, уның башын күкрәгемә ҡыҫып алғас ҡына, илауҙан саҡ тымды. Күңелгә әллә нисек — өмөттәр өҙөлә, буғай...

— И, мөкәддәс моңло сазым... — тип йырланым-йырланым да китапханаға барып, 1930 йылғы «Октябрь» журналын аҡтарырға тотондом.

Ҡыҙыҡ сыҡҡан журнал.

Бына ҡайҙа әҙәбиәттең ысын тарихы! Тик был тарихты эшкәртергә, бөгөнгө күҙлектән ҡарап, фәнни тәртипкә килтерергә, бик күп нәмәләрҙе асыҡларға кәрәк. Ләкин ҡайҙа кешеһе?! Кем тотонһон инде быға? Күпме эш, күпме эш! Ни тиклем ҡыҙыҡлы материалдар!.. Әгәр ҙә мөмкинлек булһа, баш-аяғым менән сумыр инем был эшкә. Юҡ, мөмкин түгел. Асҡа үлмәҫ өсөн юҡты бар итеп ултырырға тура килә. Донъяның бөтә шул ваҡлыҡтарынан азат булһаң ине лә, йәнең теләгән эште эшләһәң ине!.. Күпме ғүмер, күпме көс бушҡа әрәм була.

Шуларҙы уйлайһың-уйлайһың да йөрәк һулҡып-һулҡып һыҙлап китә. Китапхананан ҡайтҡанда ла Туҡайҙың «Өҙөлгән өмөттәр»ен йырлайым:

«Осто донъя ситлегенән
тарһынып күңелем ҡошо!..»

Юҡ, минең күңел әле быҒаулы!..

10 апрель.

Зөфәрҙән Ғайса китабының корректураһын алып, Сәләм тураһындағы мәҡәләһен уҡыным. Яңыса фекерҙәр. Ғайсаға бик асыуҙарым күп булһа ла, хөрмәтем ҙур. Толковый егет, талант та бар, ләкин юҡ-бар авторитеттарҒа тотоноп үҙен әрәм итә! Ҡурҡаҡлыҡ көслө, бик дипломат кеше. Алдын-артын ҡарап ҡына йәшәй.

Бөгөн «Йәш көстәр» өҫтөндә нык ҡына ултырырҒа тура килде. Яҡшы шиғырҙар бик аҙ. Бөтәһе лә бер төрлө, бөтәһе лә ваҡ. Йә бала саҡ, йә мөхәббәт тураһындағы шиғырҙар. Эҙләнеү юҡ, тематика тар, эшләнештәре йомшаҡ. Етмәһә, Зөфәр шуларын да һайлап ала белмәгән. Ихсан менән телефондан һөйләштек. Ә. Ғайсин менән Б. Рафиҡов үҙҙәре килде. Кисә Әнүр Вахитов килгәйне. Бөтәһенә лә шиғырҙарын яңынан ҡарап сығырҒа, яңынан эшләп килтерергә биреп ҡайтарҙым. Ризалашҡан булдылар.

Тик Нур Хәбировҡа килеп еткәс кенә күңелем яҡтырып китте. Ғәжәп үҙенсәлекле шағир! Эйе, был шағир, әгәр ҙә эҙләнһә, боҙоп ҡуймаһалар, был егеттән эш сығасаҡ. Шиғырҙарын ҡат-ҡат уҡып рәхәтләнеп ултырҙым. Үҙемә күсереп алып ҡуйыр өсөн өйгә алып ҡайттым, НадяҒа башҡортса уҡып, русса тәржемә итеп күрһәттем. УҒа ла бик оҡшаны был шиғырҙар. Минең шатланыуым НадяҒа ла күсте булһа кәрәк, өй эсе яҡтырып, йылынып киткән кеүек булды. Мин был шиғырҙарҙың башҡорт поэзияһына ниндәй матур кеше алып килеүе, уларҙың, ни тиклем яңы һәм тәрән фекерле, ни тиклем халыҡсан булыуы тураһында һөйләнем. Йәштәр араһында әле бындай үҙ аллы, бындай үҙ тауышлы шағир юҡ.

Егет үҙе ауылда тракторист булып эшләгән, Яҙыусылар союзы уны ауылдан килтереп, беҙҙең мәктәптең интернатына урынлаштырған. Бынһы ла бик ҡыуандыра. Ә шиғырҙарын бына яҙып ҡуям.

Нур Хәбиров шиғырҙары

ТЫУҒАН ИЛЕМӘ

Илемде мин әгәр һөймәһәм,
Уның өсөн янып-көймәһәм,
Ҡыҙғанһам мин дәртле йөрәкте,
Ҡыҙғанһам мин эшкә беләкте,—

Ни ҡыйыулыҡ менән, арыным, тип,
Үләнеңә килеп ятырмын?!.
Ниндәй выждан менән, һыуһаным, тип,
Һыуҙарыңдың тәмен татырмын?
Оялырмын сәскә-гөлөндән,
Иркәләүсе талғын елеңдән:
Ниндәй илдәр миңә ил булыр,
Тормошомдо ҡорор ер булыр?!.

ҒҮМЕРЛЕККӘ ҠАЛҒАН ҠАЙҒЫМ БАР

Ғүмерлеккә ҡалған ҡайғым бар,
Онотолмай торған ҡайғым бар.
Минең менән бергә йөрөргә,
Йөрәгемдәй булып ғүмергә
Килгән миңә ошо бер ҡайғы,
Онотолмай торған бер ҡайғы.

Онотолмай торған ҡайғым бар,
Ҡалғандары шундай ҡайғылар:
Былтырғыһын — быйыл онотам,
Быйылғыһын — бөгөн онотам.
Тик береһе генә ғүмерлек,
Ғүмер буйы бергә йөрөрлөк.

Ғүмерлеккә килгән ҡайғым бар,
Онотолмай торған ҡайғым бар:
Үҙем тыумаҫ элек туҡтаған
Батыр йөрәк өсөн ҡайғым бар.

ҠУЛДАРЫМ ДА ЭШКӘ БАРМАЙ ТОРҘО

Ҡулдарым да эшкә бармай торҙо
Һин киткәстен, иркәм-һөйөүем.
Тик иҫемдә ҡалды киткән саҡта:
«Сабыр итерһең бит?..» тиеүең.
Ҡыймай ғына, ләкин теләк менән
Әйттем шул саҡ: «Тимәк, китергә...
Ярай,— тинем,— тырыш, беҙ йәштәрҙән
Халыҡ хаҡлы уңыш көтөргә».
Һин уҡыуҙа хәҙер, минән ситтә,
Өйрәнәһең баҡса эштәрен.
Мин колхозда — эштән ҡайтҡан саҡта
Йөҙөм — ҡара, ап-аҡ тештәрем.
Ең һыҙғанып эшләр эшем бар,

Тир сығарып эшләр эшем бар.
Ялға туҡтар өсөн ҡайтып барһам,
Һөрөп бөткәс колхоз яланын,
«Ҡулдарым да ҡара...» тип тормайса,
Сәскәләрҙе өҙөп аламын.
Кәрәк булып торор һиңә, тим,
Баҡса эшен ул бит һөйә, тим.

Ҡулдарым да эшкә бармай торҙо
Һин киткәс тә, иркәм-һөйөүем.
Тик иҫемдә ҡалды киткән саҡта:
«Сабыр итерһең бит?..» тиеүең.

Һин ҡәҙерле миңә, халҡыма ла
Ҡәҙерлеһең бит, һөйгәнем.
Шуға ла мин: «Китмә..»— тимәнем,
«Үпкәм булыр һиңә...»— тимәнем.

Бына, исмаһам, шифырҙар! Ни тиклем тәбиғи һәм аҡыллы тойғо был егеттә! Тел ниндәй яғымлы — башҡортса.

Бәлки, мин артыҡ ғашиҡтыр?..

Бына тағы ҡыҙҙарҙың егеттәре килде. Ну йөҙәтәләр!.. Лыбыр-лыбыр, лыбыр-лыбыр килеп альбом ҡарайҙар, мәғәнәһеҙ анекдоттар һөйләйҙәр. «Салауат уянмаһа ғына ярар ине»,— тип ултырам. Ултырҙым-ултырҙым да түҙмәнем:

— Егеттәр! Ғәфү итегеҙ — мин эшләйем, әй,— тинем.

— Хәҙер, хәҙер, абый, беҙ китәбеҙ...

Абый, имеш! Тапҡандар абый кешене. Үҙҙәренә мыйыҡһаҡал сығып бөткән. Аулаҡ әҙләйҙәр...

Мин тәмәке тоҡандырып тышҡа сыҡтым. Ә тышта ғәжәп матур яҙ!.. Аяҡ аҫты туңһа ла, ҡар һыуҙары һаман да әле сылтырап ағып ята. Өфө, нисектер, тын да алмай, ошо тәүге ҡар һыуҙарының көмөш йырын тыңлай кеүек. Ай ҙа, туп-тулы булып, бөтә донъяға нурлы ҡоласын йәйгән дә ҡарағуҫкыл яҙғы күк балаҫында, йәп-йәш бала кеүек, тәгәрәп ята... Яҙ һулышы күкрәккә дөрөп инә лә, бөтә тәнеңде еңеләйтеп, ниндәйҙер тығыҙ иркенлеккә осороп алып китер һымаҡ...

Мин шулай хыялланып тәмәке көйрәтеп бөткәнсе егеттәр ҙә сығып тайҙылар. Мин Гейненың «Лирик интермеццо»һына сумдым. Үҙемдең шифырҙар өҫтөндә ултыра алмаһам, мин тәржемәгә тотона торғайным. Хәҙер ҙә шул элекке ғәҙәтте эшкә егергә булдым. Илһам эшкә тотонғас та килә... Ҙур шағирҙың донъяһына инеү һинең дә йоҡлап ятҡан хистәреңде уята. Мин үҙ шифырҙарын яҙа алмаған саҡта һәр бер кешегә

тәржемә итергә кәңәш бирер инем. Тик был кәңәште һуңғы ваҡытта үҙем дә тотмай килдем. Ә ғүмер үтә!.. Ах, ғүмер!.. Һинең ебеп ятыуыңды көтөп тормай шул ул — бына шул төн мәлендә лә сылтырап аҡҡан яҙғы ҡар һыуҙары кеүек, аға ла аға. Нисек итеп уны тотоп тораһың инде. Ул һинең ихтыярыңда түгел — һин тик үҙ ихтыярыңды уға буйһондора ғына алаһың!.. Ә шулай ҙа һүлпәнлек көслө, күрә тороп эшләмәйһең.

Юҡ, былай эш сыҡмай. Көн һайын яҙырға, бер-ике юл ғына булһа ла яҙырға кәрәк!..

11 апрель.

Көн ҡояшлы булһа ла, нисектер һалҡынса әле көн. Шулай ҙа үҙенекен итә — иретә. Ҡоштар сутылдаша. Ҡолаҡҡа беснәк тауышы ла, һабан турғайының да, сыйырсыҡ тауыштары ла килгән кеүек. Ләкин береһен дә күрмәйем. Тирәктәрҙең яланғас ботаҡтарында уҡмашып торған ҡарға оялары тирәһендә ҡарғаларҙың зыҡ ҡубышып шаулауҙары ғына асыҡ ишетелә. Тауыштары көр, ҡарлыҡмағандар әле... Шуларҙы булһа ла тыңлап барыу өсөн автобуҫҡа ултырмайынса, нәшриәткә йәйәүләп йөрөйөм. Өйҙән ашығып сығам да, урамда иркенләп барам... Тиҙҙән инде ағастар ултырта башларҙар. Ә мин ҡайҙа, кем баҡсаһына ултыртайым?.. Кешеләр һаҡлап үҫтерәме һуң инде?... Интернат баҡсаһында мин ултыртҡан ағастарҙан ни бары бер ҡарама ғына тороп ҡалған. Ул да әле иҫән микән? Барып ҡарағаным юҡ әле. Минең рәхәтләнеп баҡсала эшләйһем килә. Ләкин был хәҙергә тик хыял ғына! Үҙемә түгел, сыйырсыҡҡа ла оя ҡороп булмай бит, исмаһам!..

Тиҙҙән сыйырсыҡтар ҙа килеп етер инде. Баштан бер шиғыр сыҡмай йөрөй:

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ!
Ояңдан осоп сыҡ!

Ләкин ҡалған юлдары шәп түгел. Сыйырсыҡтың башҡа ҡоштар моңон ни тиклем оҫта башҡарыусы булыуын бик матур итеп һүрәтләргә ине. Күпме телдәрҙе белә сыйырсыҡ! Ә һуң уның үҙ теле бармы? Бына быныһы ғәжәп бер һорау!.. Быны нисек хәл итергә? Бөтә телдәрҙе белеүсе лингвист, ә үҙенең туған теле лә юҡ булып сыҡмай түгелме һуң әле был? Юҡ, сыйырсыҡ лингвист түгел, ул иң яҡшы музыкант — башҡарыусы!

Кисәге мин дә шул сыйырсыҡ кеүек, үҙ тауышым булмағас, Гейне теле менән һайрап ултырҙым. Ләкин мин яҡшы башҡарыусы түгел кеүек. Нисектер ябайлаштырам һәм бик үҙемсә килеп сыға. Тимәк, минең ҡайҙалыр төптә үҙ тауышым бар!..

Гейне Вейнберг тәржемәһендә былай:

В чудеснейшем месяце мае
Все почки раскрылись вновь,
И тут в молодом моем сердце
Впервые проснулась любовь.

В чудеснейшем месяце мае
Все птицы запели в лесах,
И тут я ей сделал признанье
В желаньях моих и мечтах.

Ә минең тәржемәлә ул бына нисек килеп сыҡты:

Ғәжәп матур май айында
Япраҡ ярҙы ҡарт тирәк.
Бына шул саҡ йоҡоһонан
Уянды минең йөрәк.

Ғәжәп матур май айында
Урман йырға төрөндө.
Бына шул саҡ астым уға
Бөтә йөрәк серемде.

Ләкин тәржемәнән ҡәнәғәт түгелмен. Бик ябай килеп сыҡты. Был Гейнены асыу түгел — үҙемде ҡабатлау. Бигерәк тә «ҡарт тирәк» кәрәкмәй. Был «йөрәк» өсөн генә рифма булды. Улай тиһәң, «вновь» менән «любовь» һәр бер рус шағырының рифмаһы бит? Моғайын, Гейненың үҙендә был юҡтыр? Немецса уҡыйһы ине. Жәлил Кейекбайға Гейнеһын һорап барырға тура килер, ахыры. Нисектер мин Вейнбергҡа ышанып етмәйем. Улар ҡол кеүек тоғро булһа ла, был тик тышҡы тоғролоҡ: ҡол тоғролоғо! Ә Лермонтов менән Блок, Гейненың көндәштәре булһа ла, улар шағирға эстән тоғрораҡ була. Жуковскийҙың был хаҡтағы фекере бик дөрөҫ! Шағир шағирға көндәш булһа ла, шағир шағир күңелен нығыраҡ тоя, нығыраҡ аңлай. Ә ҡол шағир өсөн алыҫ, ул тик уның һүҙҙәрен генә ишетә, ә һүҙҙең мәғәнәһен, эске фекерен бөтә йөрәге менән тоя белмәй. Сөнки ул көнләшмәй шағирҙан. Ә көнләшмәгәс, яратыу ҙа бик халҡындыр ул!

Юҡ, Гейненың үҙен уҡып ҡарарға, белергә кәрәк был серҙе! Бына инде илһам да тыуып килә, буғай. Ҡулың эшкә тотонһа, эштең илһамы — үҙеңдә!.. Бына был фекер Чайковскийса, исмаһам!..

12 апрель.

Кәйеф шәп бөгөн! Әллә ни эш ҡырмаһам да, нисектер күтәренке күңел менән йөрөнөм. Иртән эшкә барғанда ҡырынып сыҡтым. Нәшриәткә барып инеүгә Василий Андреевич Гейненың «Йырҙар китабы»н килтереп ҡуйған. Мин үҙемдең бөгөн төндә Гейне менән ултырыуымды һөйләп, тәржемә тураһында һүҙ сығып китте.

Күп тә үтмәне, Нур Хәбиров килеп сыҡты. Уның менән тәүге ҡабат икәүҙән-икәү һөйләшеп, был егеттең үҙен дә бик оҡшаттым. Ғәжәп аҡыллы, тыйнаҡ егет. Беҙҙең мәктәптә уҡый. Минең «Йәшлек»те дауам итә икән унда. Яҙғы каникул ваҡытында ауылда булып, яңы шиғырҙар яҙып килгән. Шиғырҙары — үҙенсә, яҡшы! Тик «бында яҙып булмай», ти, математиканан зарлана. Шиғырҙарын уҡып, үҙенең шиғырға булған ҡараштары менән дә таныштым. Ғәжәп һиҙгер, шул уҡ ваҡытта бик талапсан да. Был егеттән эш сығасаҡ. Тик ярҙам итергә, ниндәй китаптар уҡырға кәрәклеген әйтергә, ғөмүмән, әҙәбиәт тураһында бик яҡшылап һөйләшеп ултырырға ине!

Ул быға бик риза булды. Журналдарҙы (элек мин сығарған ҡулъяҙма журналдарҙы, шулай уҡ минән һуң сыҡҡандарын да) алып килергә һөйләшһәк тә, нишләптер, ул килмәне. Мин уны көтөп, бәрәңге бешереп йөрөгәндә ҡыҙы Гүзәл менән Марат килеп керҙе. Салауат тәүҙә Гүзәлдән ятһынды, аҙаҡ өйрәнеп китте. Рәхәтләнеп уйнарға керештеләр. Бала бала кешегә ни тиклем эҫе!

Ә беҙ, ололар, һис тә уларға оҡшамағанбыҙ. Уйнап-көлөп ултыраһы урынға әллә ниндәй донъя ваҡлыҡтары тураһында, ялыҡтырғыс шиғырҙар тураһында, тормошто нисек итеп юлға һалыу тураһында теләр-теләмәҫ кенә һөйләшәбеҙ.

Ғәжәп: Маратҡа булған ҡарашым үҙгәрҙе. Бөтә йөрәктән һөйләшеп булмай. Быға иң беренсе сәбәп — уның ни өсөндөр татарса һөйләшә башлауы. Был мине һүрелдерҙе лә ҡуйҙы. Сөнки элек ул минең менән дә, башҡалар менән дә башҡортса һөйләшә ине. Һәм был бик тәбиғи булып, уның нисек һөйләшеүе тураһында уйлап та ҡарағаным булманы. Ә хәҙер күрешеп һөйләшкән һайын мин быға иғтибар итмәйенсә ҡала алмайым. Был хаҡта уның үҙенә әйтеү нисектер уңайһыҙ — хәтере ҡалып ҡуйыуы мөмкин. Шаярып та әйтеп булмай. Сөнки бер ҡабат Рафаэль, Марат, мин — өсәүләп — Матросов баҡсаһында һыра эсеп, бик яҡшылап ҡына һөйләшеп ултырғанда ул Рафаэлдең шаяртып әйткән бер һүҙенә ҡапыл хәтере ҡалып, беҙҙе ташлап сығып киткәйне. Беҙ бик аптырашта ҡалдыҡ, бына шунан бирле, бер ауыҙ бешкәс, һалҡын һыуҙы ла өрөп кенә эсергә тура килә!.. Рафаэль был хәлде бик

ауыр кисерҙе. Ләкин ул да, мин дә бының сәбәбенә төшөнә алманыҡ. Ә был хәл миндә ниндәйҙер бер күңелһеҙ эҙ ҡалдырҙы. Шунан һуң беҙгә өсәүләп бик күп ваҡыт бергә булырға, тура килгәндә, уйнап һөйләшһәк тә, уйлап һис бер нәмәгә шикләнмәйенсә, асыҡтан-асыҡ, балаларса йәки дуҫтарса һөйләшеү түгел. Бөтә күңелеңде асып һөйләшеп булмай икән, кешеләр нисек кенә яҡын булмаһындар, барыбер үҙ-ара иң яҡын дуҫтар була алмайҙарҙыр. Ә беҙ — дуҫтар!

Маратҡа минең хөрмәтем ҙур, шифырҙарына ла ҙур хөрмәт менән ҡарайым, уны йәштәр араһында иң талантлы шағирҙарҙан иҫәпләйем, ләкин... бөтә күңелдән яратып етә алмайым. Бының өсөн минең үҙемә лә уңайһыҙ. Әйтерһең, мин уның алдында ниндәйҙер бер ғәйепле кеше!.. Уның менән, Рафаэль кеүек, һуғыша яҙып бәхәсләшеп тә булмай. Тимәк, миңә һәр саҡ «аҡыллы кеше» генә булып ҡалырға тура килә. Ә һәр саҡ «аҡыллы» булыу ул үҙе бер ахмаҡлыҡ! (Бына һиңә бер афоризм!) Һәр саҡ «аҡыллы» булыу ялҡыта. Шуның өсөн дә беҙҙең ҡайһы бер күрешеүҙәр бер-береһен яратмаған бер туған кешеләрҙең күрешеүе кеүек. Күрешмәҫ инек, бер туған булғас, һағынмағанда ла күрешергә кәрәк.

Беҙ бөгөн бына шулай ултырҙыҡ. Балаларҙы уйнаттыҡ, бәрәңге ашаныҡ, сәй эстек. Тамаҡ туйҙы, күңел туйманы. Күңелдә әйтелмәгән һүҙҙәр, уртаҡ ителмәгән хистәр... Ә үҙебеҙ бер әсәнән тыуған туғандар кеүекбеҙ. Кәрәк булғанда, бер-беребеҙгә ярҙам итешергә лә мөмкин, бер-беребеҙҙең йөгөн күтәрешергә лә мөмкин, бер кейемде кейергә лә мөмкин. Ә йөрәкте уртаҡ итеү мөмкин түгел! Фәжәп күренеш!.. Беҙгәме һуң шулай булырға?!. Ләкин шулай булмайынса сараң да юҡ...

Сара тигәндәй, уның ҡатыны ла бер... Сара! Марат менән Сараны... бергә күҙ алдына килтереү ауыр булды. Был берәй төрлө махинациялыр, тип уйланыҡ. Юҡ, Марат өйләнмәгәндер, уны өйләндергәндәрҙер! Алғушай ахмаҡ башҡоҙа быларҙың бөтә эшен боҙа!.. Көлөрһөңмө, иларһыңмы? Беҙ көлә лә алманыҡ — көлөү мөмкин түгел ине.

Марат, шулай итеп, Сараға өйләнде, һәм улар бер-береһенә бала менән бәйләнде. Бер-береңә мөхәббәт менән бәйләнмәгән яҙмыштан да ауыр ни булырға мөмкин һуң?

Шағирҙың күңел ҡошо тар донъя ситлегенә шулай бикләнәлер инде? Был ситлектә берҙән-бер йыуаныс — бала! Мараттың бөтә яратыуы балаға күсте. Яңғыҙлыҡтан киләлер был артыҡ яратыу. Бер кем менән бүленмәгән хистәрҙе йөрәктә тотоп тороу мөмкин түгел бит. Уны кемгә булһа ла түгергә кәрәк. Бала күңеле иркен һәм уға бөтә хистәреңде бушатырға мөмкин. Ләкин бала ул хистәргә яуап бирә алмай. Тимәк, был

хистәр күңелдәге бөтә хистәрҙе лә үҫтерә алмай. Был кешенең донъяһын тарайта, ҡыҫа, йәберләй. Тышҡы донъянан алған ҙур тойғолар был бәләкәй генә бер яҡлы эске донъяға һыймай. Кешенең эске донъяһы тышҡы донъя менән килешә алмай башлай. Ул үҙ-үҙе менән дә, тышҡы донъя менән дә ҡәнәғәтһеҙ булырға мәжбүр. Донъяның шатлыҡтары ла ҡайғыға әйләнә. Яҡтылыҡ та ҡараңғы булып күренә!..

Марат үҙе бөгөн:

— Стеналарҙы аҡлап ташланыҡ әле,— тигән була. Белмәйем, быныҡ менән генә бүлмәлә яҡты булып китерме икән? Булмаҫтыр.

Уларға барып инһәң, нисектер тығыҙ, уңайһыҙ, бөркөү. Тиҙерәк тышҡа сығып китәһең килә. Был бүлмәлә мин шифыр уҡығаным юҡ, шифыр тураһында һөйләшә лә алмайым.

Сара йыш ҡына:

— Мараттың шифырҙары нисек?— тип һорай. Мин ҡаушап ҡалам, ни тип әйтергә лә белмәйем. Ә уның, әлбиттә, «бик яҡшы» тигән һүҙҙе ишеткеһе килә. Мин беләм: ул үҙенең ирен гений итеп, ә үҙен гений ҡатыны итеп иҫәпләй...

Бына минең Надя ла мәктәптән ҡайтты. Күҙҙәре балҡый.

— Мин бөгөн физиканан яуап бирҙем!— ти.

— Нисек яуап бирҙең һуң?

— Яҡшылыр, белмәйем.

Ә үҙе шат һәм үҙенән яҙ еҫе аңҡый. Миңә уның яҙ һулышы менән ҡайтып кереүе рәхәт. Физиканан яҡшы билдәһен дә мин үҙем алған кеүекмен.

— Теге шағирың килмәнеме?

(Нур тураһында һорай инде.)

— Юҡ, Марат килде. Бына уның тураһында яҙып ултырам әле.

— Яҙаһың, ә минең турала яҙмайһыңмы ни?— тип шаярыу ҡатыш үпкәләгән була. Ә мин уға:

— Һинең турала йөрәккә генә яҙам,— тип әйткем килә.

Ләкин мин былай шаяра белмәйем. Марат үҙен «мин бит артист», ти. Ә мин, күрәһең, артист була алмайым...

13 апрель.

Әле генә «Октябрь»ҙә «Ике океандың сере» тигән картинаны ҡарап ҡайттым. Бөтөнләй икенсе төрлө донъя! Ҡайһы бер кешеләр «әбекәй әкиәте», тип ултырған булалар. Ә миңә был бик матур донъя! Нисектер бала саҡты, Жюль Вернды хәтер-

ләтә. «Серле утрау», «Һикһән мең саҡрым һыу аҫтынан» китаптарының фантазияларына сумған кеүек булаһың.

Ә океан ғәжәп матур төшөрөлгән, шулай уҡ диңгеҙҙәге хайуан-үҫемлек донъяһы ла бик ҡыҙыҡ. Кеше характерҙары ла бик бай. Тиҙерәк икенсе сериялһын ҡарайһы килә.

Бөгөн бер ни ҙә эшләп булманы. Нур Хәбировтың шиғырҙарын машинкала баҫтырып алдым да Зөфәр менән бер аҙ бәхәсләшеп алдыҡ.

— Бер тирәлә уранҡылай,— ти Зөфәр. Ә минеңсә, тирәяҡҡа ташланыуҙан да мәғәнә юҡ. Ул бик тәбиғи үҫә. Тора-бара киңәйер. Бер кем дә тәүге шиғырҙары менән донъя проблемаларын хәл итмәгән.

Нурҙың шиғырҙарын Василий Андреевичҡа ла тәржемә итеп уҡыным. Уға ла был шиғырҙар бик оҡшай. Тәржемә итәсәкмен, ти. Мин подстрочниктар яһап бирергә булдым.

Бынан һуң Афзал Ҡудаш килде. Кисә лә бик күп ваҡытты алды ул.

Мәжит Ғафуриҙың ҡулъяҙмаларын һатырға йөрөй. Институттың аҡсаһы юҡлыҡтан беҙгә ебәргәндәр. Ә беҙҙә ундай «Һатып алыу законы» юҡ икән. Ләкин Ғафуриҙың VI томына был яҙмаларҙы индерергә кәрәк. Директор уларҙы миңә уҡытып, заключение яҙырға ҡушҡан. Кисәге Афзал Ҡудаш шуларҙы уҡып ултырҙы. Ғәлимйән Ибраһимов сығарған 1917 йылдың февраленән һуңғы «Ирек» газетаһында М. Ғафуриҙың «Тәүге аҙымдар» тигән мәҡәләһе бар. Ә газетаның был номеры бер ҡайҙа ла юҡ, Ҡудаш уны: «Миндә генә бар»,— ти. Унан һуң Ғафуриҙың 1921 йылғы аслыҡ тураһында яҙған иҫтәлектәре лә бик ҡыҙыҡлы. Шулай уҡ Ҡазандағы бер профессор ҡатынына яҙған хаты ла кәрәкле буласаҡ. Бынан башҡа Афзал Ҡудашта М. Ғафуриҙың 1919 йылдарҙа яҙған һигеҙ шиғыры һаҡлана икән. Улар бер ҡайҙа ла баҫылмаған, М. Ғафуриҙың тулы йыйынтығына ла индерелмәй ҡалған. Ә Ҡудаш уларҙы, бесән өҫтөндәге эт кеүек, институтҡа ла бирмәй. Үҙе лә йүнен таба алмай йөрөй.

«Нисек итеп мин уларҙы егерме ике йыл һаҡлап, бушҡа бирәйем? Мин уларҙы тағы егерме ике йыл һаҡлармын, ләкин бер кемгә лә бирмәм! Ҡазанда Туҡай менән төп башына ултыртҡандары ла етер...»

Был һүҙҙәрен ул шундай оятһыҙ бер маҡтаныу менән һөйләй, мин хатта уның, һөйәгенә тире йәбешеп, архив ҡағыҙы кеүек һарғайып бөткән бысраҡ йөҙөнә күҙҙәренән ут сәсрәткәнсе һуғып ебәргем килә...

Ни тиклем меҫкен, ни тиклем түбән, ни тиклем намыҫһыҙ был кеше! Уның йөҙөнә ҡарау ҙа ҡурҡыныс: ул үҙенең кешелек намыҫын ғына түгел, хатта кеше йөҙөн дә юғалтҡан. Күҙҙәре эскә батып, ниндәйҙер йәнһеҙ бер ялҡын менән секерәйеп ҡарап торалар. Уң яҡ күҙенең ҡабаҡтары тартылып, күҙ ағы нисектер һыҙнар күҙен ағырайтып тора. Күҙ ҡарашы мәйеттеке кеүек ҡатып ҡалған —ауыр. Мин уның «бына һүнәм, бына һүнәм, аҡса бирһәгеҙ генә яҡтырып китермен» тип торған был меҫкен күҙҙәренә ҡарағанда бөтә тәнем сымырҙап китә. Ул тәүҙә миндә ҡыҙғаныу тыуҙырҙы, ә шул һүҙҙәрен ниндәйҙер таш йылмайыу менән һөйәк ҡулдарын һелтәй-һелтәй һөйләгәндән һуң, тик ерәнеү тойғоһо ғына ҡалдырҙы. Мин уға үҙемдә бер ҡасан да булмаған һалҡын бер нәфрәт менән ҡарап әйтәһе һүҙҙәремде әйттем:

— Һеҙ, ағай, нисек итеп Ғафуриҙы шулай һатырға йөрөйһөгөҙ? Һеҙ бит әҙәбиәтсе! Етмәһә, үҙегеҙҙе иҫкәрмәләрегеҙҙә филология фәндәре кандидаты тип атайһығыҙ. Һеҙҙә бит аҙ ғына булһа ла Ғафуриға, үҙегеҙгә, фәнгә хөрмәт булырға тейеш инде?

— Бына шуның өсөн дә мин уның яҙмаларын егерме ике йыл һаҡлап киләм бит!

— Юҡ, ағай, һеҙ уларҙы халыҡтан йәшереп кенә киләһегеҙ!

— Минән бит һорамайҙар?!.

— Һеҙҙән дә һорап тороу кәрәкме инде?

— Кәрәк шул. Мин все же Ғафури өҫтөндә байтаҡ ултырған кеше.

— Ярай, ултырыуығыҙ яҡшы. Әгәр ҙә берәй төрлө мөғжизә булып, Ғафури ҡәберенән бер минутҡа ғына сыға алһа, был күренеште күреп, рәхмәт әйтмәҫ ине һеҙгә!..

— Юҡ, Ғарипов туған, һеҙ йәштәр әле, бер ни ҙә белмәйһегеҙ.

— Бәлки, шулайҙыр ҙа. Тик бындай хәлде белмәү хәйерлерәк. Беҙ йәштәргә был бер ғибрәт булһын.

Ҡудаш һарғайып бөткән ҙурештәрен ыржайтып, ҡара янған ирендәрен йыйырып ҡуя. Ләкин йылмайыу ҡиәфәте барып сыҡмай.

Миң уға Муса Йәлил шиғырҙарын үлем эсенән, ут-ҡылыс аҫтынан алып сығып, үҙенең был эше өсөн бер ни ҙә талап итмәгән белгиец Андре Тиммерманс тураһында әйткәс, ул быға ла яуап тапты:

— Совет иленда ундай түләмәҫкә тигән закон юҡ.

— Закон һеҙҙең намыҫығыҙҙа!— тинем мин, һәм башҡаса һөйләп тороу урынһыҙ ине. Мин өндәшмәнем. Был күренеш минең күңелде таш кеүек итте. Иҫем-аҡылым китеп ултырҙым.

Был «эшкә» тығылмаҫка булып, бөтәһен дә Василий Андреевичҡа тапшырҙым.

Ул бухгалтерия менән, институт менән һөйләшеп, ҡулъяҙмаларҙың копияһын һатып алырға булдылар. Сөнки Ҡудаш оригиналдарын бирмәй. Уларын, күрәһең, Ҡазанға һатырға уйлайҙыр... Башы эшләй тәнҡитсенең!..

Ҡудаш сығып киткәс, Зөфәр уны тәүҙә яҡлап маташты.

— Кеше сараһыҙҙан йөрөй инде,— ти. Ләкин мин уның был фекерен пыр туҙҙырып ташланым.

— Ғафуриҙың ҡәбере өҫтөндә һатыу итеү — оят. Бының әҙәбиәтсе намыҫы менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ һ. б.

Коридорға сығып, Найман, Зөфәр, мин — өсәүләп, оҙаҡ ҡына һөйләштек. Һуҙ Сәйфи Ҡудашҡа күсеп китте. Зөфәр уның тураһында ҡот осҡос нәмәләр һөйләне. Әгәр ҙә былар ысын булһа, Сәйфи Ҡудаштың ҡулдары бик ҡанлы!.. Имай Насыри, Булат Ишемғолдарҙы ул һәләк иткән булып сыға. Ә хәҙер башҡорт әҙәбиәте, башҡорт теленең яҙмышы өсөн ҡайғырыусы кеше һүрәтенә инеп, бысраҡ эҙҙәрен юйырға маташа, үҙе һәләк иткән кешеләр тураһында мемуар китабы яҙа, партия һәм тыуған ил, халыҡтар дуҫлығы һәм шағирҙар дуҫлығы тураһында шығырҙар рифмалай. Кешелек, намыҫ, тоғролоҡ тураһында матур һүҙҙәр һөйләй. Ә үҙе... Ярай инде, бәлки, былар дөрөҫ тә түгелдер. Ләкин уны яҡшы белгән кешеләрҙән уның тураһында яҡшы фекер ишетеп булмай.

Ғәжәп бер тип был! Ишетеп белгәндәрҙән ул Тартюф менән Иудушка Головлев кеүек һәм Клим Самгиндың бер игеҙәге булырға оҡшай. Тыуған ауылы Келәштә уны яратмайҙар, тиҙәр.

Был кеше мине бик ҡыҙыҡһындыра. Ә Мостай Кәримдең уға яҡын булыуы мине ғәжәпкә ҡалдыра.

Кешеләр иҫ киткес ҡатмарлы, иҫ киткес буталсыҡ. Юҡ, мин уларҙы аңлау, үҙ-үҙемә асыу өсөн проза яҙмайынса булдыра алмаҫмын, ахыры!..

Бына Ф. М.-да аптыратты мине бөгөн. «Йәш көстәр»гә егермеләп шиғырҙары араһынан алты шиғырын һайлап алдым да үҙе менән телефон аша һөйләштем.

Зөфәр уны альманахҡа индермәгән:

— Ҡартайып бөткәнсе яҙа алмағас, инде нисек уны йәштәр араһына ҡыҫтыраһың?— ти.

Ләкин мин ризалашманым. Кешегә былай ҡарау бик тупаҫ кеүек. Сөнки Ф. яҙа, көн һайын яҙа, яҙмайынса тора алмай. Бәлки, эш сығып ҡуйыу мөмкин. Әҙәбиәт тә бик ҡатмарлы бит. «Поэзия — езда в незнаемое!»— тигән Маяковский. Аксаков ҡартайып бөткәс яҙа башлаған. Шуның өсөн мин Ф.-ны индерергә булдым. Шиғырҙары йомшаҡ булһа ла, бәлки, дәртләнеп китер тип уйланым.

Һәм ул бына, мин эштән сығыуға, бик ашҡынып килеп инде. Мин Рафаэлгә бөгөн сыҡҡан шифырҙарын һалып, ун көн буйы кеҫәлә йөрөткән хатты яҙып бөтөрөп, почтаға инеп сығырға йыйына инем.

Ф. мине һыра менән һыйларға итә. Ә миңә был нисектер уңайһыҙ. Ләкин кешенең һүҙен нисек йығаһың инде? Редакцияға киттек. Ә һыра бөткән. Ашханаға индек. Унда халыҡ күп. Ф. үҙҙәренә саҡыра. Мин бармай ҡарышам. Ул, берәй яртыны алайыҡ та һеҙгә барайыҡ улай булғас, ти. Мин юҡ тип торайыммы? Киттек. Ә үҙем эстән шул тиклем риза түгел. Эсәһем дә, Ф. менән ултыраһым да килмәй. Башҡа бер бәләбулды был. Үҙе редакция кешеләренә күренмәҫкә тырыша. Был да минең күңелде бутай. Теләр-теләмәҫ кенә ямғыр һибәләй, ә беҙ теләр-теләмәҫ кенә һөйләшеп киләбеҙ. Тәбиғәт тә кеше күңеленә яраҡлашып тора бит. Аяҡ аҫтындағы бысраҡ һыуҙар ҙа минең күңелгә тула кеүек. Күңелдә ниндәйҙер болғансыҡ.

Ф. миңә берәй тоҡ бәрәңге барып алырға тәҡдим итә:

— Һин әллә нимә уйлап ҡуйма тағын, мин һиңә ысын күңелдән әйтәм: ал әйҙә, минеке барыбер артып ҡала. Үҙем дә кис ҡорон килтерешеп ҡуйырмын,— ти. Мин үҙемде урлашып тотолған кеше кеүек хис итәм. Ләкин уның күңелен ҡырмаҫ өсөн, үҙемдең күңелде ҡырған нәмәне әйтә алмай ғазапланып киләм.

Шифырҙар һәм бәрәңге!..

Ғәйнан Әмиригә бер ваҡыт Зәки Ишморатов шифырҙарын баҫтырыу өсөн ҡаҙ тотоп килгән икән. Ғәйнан ағай уны ҡыуып сығарған. Ә миңә бына ни хәл итергә? Ф. мунса япрағы кеүек йәбеште бит!..

Магазинға инеп, вино алып сығыуға ҡатыны менән И. баҫып тора. Уны күреүгә минең күңел тағы ла болғанып китте. Сөнки И. алама ҡатын кеүек, ғәйбәтсе бер кеше. Бер көн минең Рафаэль менән телефон аша һөйләшкәнде М. уға ҡайтып һөйләгән дә, тегеһе уны Әхмәтшингә барып еткерә һалған. Ә Ғабдулла ағай миңә үпкәләй. Сөнки Рафаэль шифырҙары тураһында һорашҡас, мин уға:

— Баҫылмай әле. Әхмәтшин психбольницала ята, унда эштең ата-инәһе юҡ бит,— тигәйнем. Шул һүҙ барып та еткән. М. менән бергә эшләйбеҙ. Ул бөгөн минең Зөфәр менән һөйләшкәнде лә ишетеп торҙо. «Әһә, Ф.-ның шифырҙары бына ни өсөн яҡлана икән» тип, тағы ғәйбәт сығарыуҙары мөмкин. Сөнки И. һәр саҡ миңә үпкәләп йөрөй. «Һин үҙеңдең дуҫтарың булғанға Рафаэль менән Мараттың шифырҙарын баҫтыраһың, ә минекен И. булған өсөн генә баҫтырмайһың». Хәҙер ул

Ф.-ны ла минең дуҫым итеүе мөмкин. Унда ниндәйҙер сыщик сифаттары бар.

Ул Ф.-ны тотоп алды ла юҡ һүҙен бар итеп, бәйләнергә тотондо, ә тегеһе, нисектер аҡланырға тырышҡан һымаҡ:

— Һине столовыйҙа күрҙек. Бик шәп итеп ултыра инегеҙ,— ти.

Мин тамам йөҙәнем дә:

— Әйҙә инде, әйҙә,— тип алып китеп барҙым.

[...] Надя өйҙә юҡ ине. Ф. минең шиғырҙарҙы маҡтарға тотондо. Минең асыу килә, күңел болғана.

Ярай әле Надя ҡайтып керҙе. Салауат менән бергә мине ҡаршыларға барғандар икән.

Өсәүләп ултырҙыҡ. Ф. миңә элек һөйләгән нәмәләрен ҡабатлап һөйләй. Мин бер аҙ бүлдермәй ултырҙым да түҙмәнем:

— Һин һөйләгәйнең уларҙы, Ф.,— тигәс, ул башҡа нәмәләргә күсте. Саҡ ҡотолдом... Фу, шуны яҙып күпме ваҡытты әрәм иттем инде... Сәғәт 4-се ярты!..

Тышта томан. Башта ла томан. Әтәстәр ҡысҡыра. Өй ҡыйыҡтарынан тамсы тама. Ҡар ирей. Гөрләүектәр шаулап ята. Тиҙерәк көндәр йылытып, май килеп етһә ине.

Иртән нәшриәт йортон ҡарҙан таҙартырға барыр кәрәк. Йоҡлап ҡалмаһам ярар ине!.. Оҙаҡ ултырылып ҡуйылған.

14 апрель.

Иртән бөтә ерҙе аҡһыл томан ҡаплап алған. Мин зарядка яһап алдым да сәй эсеп нәшриәткә киттем.

Бөтә Өфө ҡар көрәргә сыҡҡан. Мәктәптәр тирәһендә балалар, учреждениелар тирәһендә йәштәр, ҡарттар ең һыҙғанып эшкә тотонғандар. Урамдар күңелле, шау-шыу килеп тора.

Мин барып ингәндә завхоз менән сторож ғына көтөп ултыра.

— Әйҙә, көтөп ултырғансы, башлай торайыҡ,— тинем мин. Көрәк-лом алып тышҡа сыҡтыҡ. Башҡалар ҙа килеп етте. Байтаҡ боҙ аҡтарып ташланыҡ. Мин ҡара тиргә төштөм. Ләкин бөтә тән рәхәтләнеп ҡалды.

Бергә эшләү күңелле.

Эштән һуң Василий Андреевич менән китап магазинына инеп сыҡтыҡ. «Калевала» һатыла! В. А. һатып алды. Ә минең аҡса юҡ. Ул да ҡарайым тип кенә ҡулына алғайны, алмайынса булдыра алманы. Китап күрһә, ул да минең кеүек икән — икебеҙ ҙә бер ауырыу менән ауырыйбыҙ!

Надяға ҡайтып әйттем.

Ул миңә, матур уйынсыҡ күреп ҡайтҡан балаға ҡараған кеүек ҡарап, башын сайҡап йылмая. Ләкин аҡса юҡ икәнлеген икебеҙ ҙә беләбеҙ шул. Аҡса булғанда Надя миңә ҡаршы килә алмай.

Шулай ҙа кәйеф күтәренке, йөрәк ашҡынып, шиғырҙар өҫтөндә ултыраһы килеп тора. Надя мине яңғыҙ ғына ҡалдырырға ашығып, Салауат менән ҡалаға сығып китте.

Башҡортостан тураһындағы циклға — «Йөрәгем»ә тотондом. Ләкин, бик дәртләнеп кенә эшкә башлағанда, Марат килеп инде лә бөтә кәйеф ҡырылды, бөтә дәрт һүнде. Минең иң ҡәҙерле, иң яҡты минуттарым юҡҡа сыҡты. Был ваҡытты мин аҙналар буйы көтөп йөрөйөм бит. Бер һүҙ ҙә һөйләшкем, бер кемде лә күргем килмәй.

— Оһо, шиғырҙарға тотондоңмо?

— Эйе, шиғырҙарға...

Марат минең яҙған-һыҙған юлдарҙы уҡып сыҡты ла:

— Ҡайҙан алаһың шундай яҡшы дәфтәрҙәрҙе һин?— ти. Ә мин нишләргә лә белмәйенсә, шартлар сиккә етеп ултырам.

— Кәрәк булһа, табаһың инде уны,— тигән булам.

Уның артынса Сара ла килеп инде. Уларҙы Надя эйәртеп килтергән икән. Уға ла асыу килә.

Мәғәнәһеҙ, кәрәкһеҙ, буш нәмәләр тураһында һөйләшеү башланды.

— Беләһеңме, Рәми, Надя миңә нимә тине?— ти Сара.

— Нимә тине һуң?

Ул, бик ҙур сер әйтергә йыйынған кеүек, миңә ниндәйҙер мәғәнәһеҙ бер ҡараш менән ҡарап алды ла көлөп ебәрҙе:

— Әйтәйемме?

— Әйт әйҙә.

Ул тағы ла көлдө. Был көлөү минең йәнгә тейә — тоҙ һибә.

— Надя миңә: «Һинең эсең минекенән ҙурыраҡ»,— ти!..

Бына һиңә бер һүҙ! Минең уға: «Ахмаҡ!»— тип ҡысҡырып ебәргем килде. Баш ауырта башланы хатта.

Улар ҡайтып киткәс, Надяға:

— Ниңә шуларҙы эйәртеп килдең инде? Белеп тораһың бит — мин яҙырға ултырып ҡалдым!..— тинем.

— Нишләйһең инде, мин уларға әйттем, ләкин «килмәгеҙ» тип әйтеп булмай ҙа?..

— Их, булһа ине бер үҙем һыйырлыҡ ҡына бүлмә!.. Ахыры, мин йәйгә сыҡмайынса, иркенләп ултыра алмам,—тип койкаға барып яттым. Баш һыҙлай. Шул тиклем үкендергес, шул тиклем йәл миңә ваҡытым!.. Бөтә донъяға асыуым килә, бер дүрт-биш сәғәткә генә юғалып тораһым килә унан.

Яҙам ғына тигәндә — яҙып булмай бит! Етмәһә, ҡыҙҙары ла шунда, йоморткa баҫҡан ҡаҙҙар кеүек, өйҙән сыҡмай ултыралар...

Нишләргә? Ҡайҙан берәй аулаҡ урын табырға? Нәшриәткә барып ултырһаң? Киттем. Ләкин кәйеф юҡ. Исмаһам, көндәлеккә шул ғазаптарҙы яҙып ҡуяйым тип, бына шуларҙы яҙып ҡуйҙым.

Әллә мин һуңғы ваҡытта бик арыным? Әллә яҙыу өсөн һыуһау миңә шулай яңғыҙ булырға ҡушa? Иң теләгән нәмәм, иң ҙур хыялым, иң көткән сәғәттәрем —яңғыҙ ҡалыу! Юҡ бит шунда бер бәләкәй генә бүлмәң!.. Нисек итеп бикләнеп, рәхәтләнеп яҙып ултырырға? Шунан да ҙур теләгем юҡ кеүек.

Был хәлде нисек итеп кисереүемде хатта яҙып аңлатыуы ла мөмкин түгел!.. Быны тик үҙ башынан үҙе шулай кисергән кеше генә аңларға мөмкин.

Мин Лев Толстойҙың, ҙур-ҙур бүлмәләре була тороп та, ни өсөн подвалдағы бер складта яҙып ултырыуын бик нык аңлайым үҙем. Пушкин был эште «тайный труд» тип бик дөрөҫ әйткән. Башҡа һүҙ менән әйтеп тә булмай уны. Яҙыу, ысынлап та, иң йәшерен, иң серле, иң интим хеҙмәт.

Тик был үҙҙәре яҙмаған кешеләр өсөн генә билгеһеҙ.

Мин, өйҙәгеләр йоҡлап бөтмәйенсә, шифыр түгел, хатта хат та яҙа алмайым. Ни тиклем ғазаплы был эш! Ләкин һинең өсөн шул яҙыу ғазабынан да ләззәтлерәк нәмә юҡ донъяла!..

Балалар өсөн тәүге шиғырым:

Сыйырсыҡ

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ!
Ояңдан осоп сыҡ!
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң-көйөң!

Ҡошсоғом сыҡты ла,
Ҡанатын ҡаҡты ла,
Һоҡланды ояға,
Таң ҡалды донъяға.

Йәм-йәшел болонда
Бер ғәмһеҙ ҡолондай,
Ул кешнәп ебәрҙе,—
Кәйефен күтәрҙе.

Инә ҡаҙ артынан
Сылбырҙай тартылған
Бәпкәләр шикелле
Субырҙай күңелле.

Ул һайрай мең телдә
Булғанға күп илдә.
Дәртләнә, һөйөнә
Ҡайтҡанға өйөнә!..

14/VI—57.

15 апрель.

Көнө буйы баш ауырта. Кисәңге күренеш миңә бик ныҡ тәьҫир иткән, ахыры. Ләкин нәшриәткә барып та кешеләрҙән ҡотола алманым. Бер аҙ ултырғас та, ҡарауылсы Хәмит кереп, аҡса һораны. Тик аҡсам булманы. Һуңынан ул, бер аҙ төшөрөп алған көйөнсә, шешә тотоп килеп инде. Ярты стакан вино һалып алды ла:

— Давай, эсәбеҙ,— ти. Мин баш тарттым. Ләкин ул минең ай-вайыма ҡараманы. Бик ҡыҫтағас, мин эстем. Бик ҡеүәтле булып сыҡты был — шунда уҡ башҡа китте.

Минең бөтә эш өҫөлдө. Шифырҙар уҡырға тотондом үҙенә, ә ул баштан үткәндәрен һөйләп ташланы. Минзәлә яғынан килгән егет икән. 27-се йылғы. Тәүге ҡатыны менән балаһы үлгәс, уның дуҫ-әхирәтенә өйләнгән. Пристандә балта эшендә эшләп йөрөгәндән һуң нәшриәткә килеп кергән.

— Бер китап яҙаһы ине,— ти Хәмит.—Тик бына яҙа белмәйем.

— Ә элек шифыр-фәлән яҙғаныҡыҙ юҡмы?

— Бәйеттәр сығара торғайным мин.

— Яҙып ҡарағыҙ. Бер кем дә бит яҙып тыумаған. Бәлки, сығып ҡуйыуы ла бар.

— Дәрт бар ҙа, дарман юғыраҡ шул...

Бына шулай оҙаҡ ҡына ултырҙыҡ.

Ваҡыт һуң ине инде. Мин ҡайтырға булдым. Ләкин уның папирос төпсөгөн пепельницаға һүндермәй һалыуын күреп ҡалдым да:

— Һүндерегеҙ, ағай, юҡһа бер көнгө кеүек янғын сығыуы бар,— тинем.

— Бәй ул шулай сыҡты бит!— ти Хәмит.

— Нисек? Әллә неҙме?

— Эйе.

— Нисек булды һуң?

«Мин сәғәт дүрттәрҙә диванға кереп яттым. Арыу уҡ иҫерек булғанмын»,— тип ул бер көнгө янғын тарихын һөйләй башланы.

Ул иҫерек көйөнсә, сисенеп, тәмәке тартып йоҡлап киткән. Ә тәмәке ҡулынан төшөп, телогрейкаһының мамығына, унан диван аҫтына эләккән дә мамыҡ-сүбәк быҫҡып яна башлаған. Төтөнгә сәсәп, утҡа бешеүҙән был уянып китһә, ни күҙе менән күрһен, ут сыҡҡан. Диван яна, бүлмәлә тын да алырлыҡ түгел — әсе төтөн. Ҡурҡыуынан айнып китеп, ырғып тора ла, ни эшләргә лә белмәйенсә, күлдәк-ыштанына ут ҡапҡан килеш бүлмә эсендә йүгереп йөрөй, диванды аҡтарып ташлай. Ялҡын өс метрға күтәрелеп яна. Кранға тотонһа — һыу юҡ. Бәҙрәфкә йүгереп сыға. Ундағы кран аҫтына биҙрә һыймай. Үҙ бүлмәһенә йүгереп барып, ҡатынын уята ла, һыу ташып, утты саҡ һүндерәләр...

Беҙ иртән эшкә килеүгә диван урынында көл-күмер генә. Бөтә бүлмә ыҫ еҫе менән тулған, иҙән ҡарайып ҡалған. Уборщицалар таҙартып йөрөйҙәр.

Шулай итеп, нәшриәт саҡ ҡына янмай ҡалған. Бөтә ҡулъяҙмалар юҡҡа сыға ине.

— Барыбер төрмәгә ултыртырҙар тип, аҫылынырға йөрөнөм,— ти Хәмит. — Әллә нисек аҡыл етеп, аҫылынмай ҡалғанмын. Ҡатын да бар ине шул...

Мин Хәмит янынан ҡайтҡанда, Надя йоҡламағайны әле. Ул арыған булһа ла, уға был хәлде һөйләнем дә бәрәңге ашаныҡ, сәй эстек.

16 апрель.

Миәссәр килеп китте. Миңә, Маратҡа эпиграммалар яҙған. Ярайһы ғына. Үҙенән күсертеп алып ҡалдым.

«Йүрүҙән» китабының авторына:

Йүрүҙәнгә сумаһың,
Сумаһың да сығаһың.
Бер ер тәрән, бер ере һай,
Бер ерендә ғәжәп йылы,
Бер ерендә туңаһың.

«Бөрөләр» китабының авторына:

«Бөрөләр»ең магазинда
Шиңеп бөтмәһен, Марат.
Йәһәтерәк һатып ал да
Дуҫ-иштәреңә тарат.

Бер аҙ ваҡыт үткәс...

«Бөрөләр»ең магазинда
Һатылып бөткән, Марат.
Дуҫ-ишеңдән йыйып ал да
Магазиндарға тарат. М. М. Б.

Көлөп рәхәтләндек. Миәссәр үҙенең тормошо тураһында ла һөйләне. Сатираға өйләнгән!..

Нур ҙа килде. Исеме генә түгел, үҙе лә нур! Ниндәй матур кеше үҫеп килә. Көн буйы шатланып йөрөнөм.

Кис Зөфәрҙән 25 һум аҡса алып, магазиндан Ашот Грашиҙың «Лирика» китабын алдым. Зөфәргә:

— Һин алмайһыңмы?— тигәс, ул:

— Юҡ, мин хәҙергә китап йыймайым әле. Барыбер улар һуңынан баҫылып сыға бит,— ти!

— Нисек һин улар баҫылып сыҡҡансы шиғырҙар уҡымай йәшәрһең?— тип ғәжәпләндем.

Ә минең күңелдә — оло бер байрам! Мин тағы ла бер матур шағирҙы астым үҙем өсөн.

Эштән ҡайтҡас, Ашот Грашиҙың шиғырҙарын Надяға уҡып, икебеҙ ҙә һоҡландыҡ. Ғәжәп көслө лирик.

— Юҡ,— тим мин,— поэзия Есениндан ғына тормай!

Мин был шиғырҙарҙы уҡып, дәртләнеп киттем дә үҙемдекеләргә тотондом. Надя уҡырға китте, ҡыҙҙар ҙа өйҙә юҡ ине. Салауатты йоҡлаттым да рәхәтләнеп ултырҙым.

«Күстәнәс» шиғырын яҙып бөттөм булһа кәрәк. Үҙемә оҡшай хәҙер. «Әсәйем ҡулдары»на өҫтәмә булырлыҡ.

Надя мәктәптән ҡайтҡас, уға тәржемә итеп күрһәттем. Оҡшаны.

Күстәнәс

Оло байрамдыр ул студент саҡта
Ауылыңдан алыу күстәнәс,
Таныҡ өсөн, тиеп әсәң үҙе
Ҡош телендәй хат та өҫтәгәс.

Астым күстәнәсте: ни генә юҡ!—
Ҡаҙ, бауырһаҡ, йүкә балдары...
Тик күгәрсен һөтөн генә тапмай
Бала өсөн әсә ҡулдары!

Бына бит ул бейәләй ҙә һалған
Йәш бәрәндең мамыҡ йөнөнән.
Май төрөлгән «Район гәзите»нең
Һәр бер хәрефенә һөйөнәм.

Кескәй генә ошо бер ҡумтаға
Һыйған һымаҡ бөтә Уралым.
Гүйә, шул мәл елдәй Аҡбуҙатта
Тыуған ергә етеп ураным.

Әйҙә, дуҫтар, ауыҙ итәйек бер
Минең әсәй ҡойған ҡаҡтарҙы.
Уның ҡулы йыйып алып килгән
Еҫен-тәмен тыуған яҡтарҙың!..

4/III, 5/II—16/IV-1957.

Надя менән оҙаҡ ҡына шифырҙар тураһында һөйләшеп яттыҡ.

—Беҙ бәхетле шулай ҙа,— ти ул.

17 апрель.

Зөфәрҙең Фәрит Иҫәнғолов тураһында «Ҡыҙыл таң»да мәҡәләһе баҫылған. «Йәш яҙыусының үҫеүе» тигән. Ә йәш тәнҡитсенең үҫеүе күренмәй. Зөфәр менән, шаярып булһа ла, көн һайын бәрелешеп алабыҙ.

— Һинең өҫтәлеңдән күсәйем әле,— тинем уға.—Юҡһа, миңә тәнҡитсе рухы керә башланы.

— Нисек?— тип көлә Зөфәр.

— Бына Сәйфи Ҡудашты ла туҙҙырып ташлайһы килә. Һәр газетала көн һайын мәҡәлә сығараһы ла килеп китте. Радиоға обзорҙар яҙаһы ла килә!..

— Көлмә, көлмә,— тигән була Зөфәр.— Бына хәҙер повесть яҙырға тотонам әле. Күрерһең унда!..

Эш хаҡы алдыҡ. Бик аҙ тейә, налогка ла тотола, лотереяһына ла түләр кәрәк, взностары ла күп. Бурыстар ҙа түләнмәй. Нишләмәк кәрәк? Айлыҡ эш хаҡы ашарға ла етмәй. Бына Зөфәр кеүек унан да, һулдан да алып торһаң ине. Ләкин ул да йәлсемәй. Ҡыҙыҡ был тормош. Уйлаһаң, эс бошоп, ҡанаттарың төшөп китә...

Кис Салауат менән боҙ киткәнен ҡарарға Ағиҙел күперенә барҙыҡ. Күпер халыҡ менән тулған. Фәжәп матур кис! Тонйорап ҡояш байый. Иҙел өҫтөнә уның оҙон ҡыҙғылт таҫмаһы һуҙылған. Иҫке күпер аша гөүләп электричкалар үтеп китә. Тау башында мөһабәт булып Өфө йәйелеп ята. Ә Иҫке Өфөнөң шәүләһе Иҙел өҫтөндә тағы бер ҡала үҫтергән. Ни тиклем һоҡланғыс киске Өфө! Күпер шундай бейек, яр ситендәге ҡуҙғалмай ятҡан боҙ майҙаныһына, болғансыҡ булып ташып ағып ятҡан Иҙел һыуына ҡараһаң, баш әйләнеп китә. Боҙҙар инде бер-береһен ватып-емереп, шаулап аҡмай, беҙ өлгөрмәй ҡал-

дыҡ. Һирәк-һаяҡ ҡына килеп сыҡҡан боҙ киҫәктәре хәҙер талғын ғына, иркенләп аға. Салауатты ҡулға алып, уға шул боҙҙарҙы күрһәткән булам. Ул ғәжәпләнеп, күҙен дә алмай ҡарай. Ҡайһы берәүҙәр инде кәмә менән балыҡ тоторға ла сыҡҡан.

Салауат шат — көлә, тауышлана, коляскаһында ҡулдарын болғап, осам-осам тигәндәй талпынып ултыра. Оҙаҡ ҡына сәйәхәт итеп ҡайттыҡ. Икебеҙ ҙә арыныҡ...

18 апрель.

Ниндәй ғәжәп картина был — «Ватерлоо күпере»!.. Бына, әллә етенсе ҡабат инде, мин шул бер картинаны ҡарайым. Күпме генә күрһәм дә ҡарап туймам кеүек. Кинофильмдарҙан был минең иң яратҡан картинам. Рой менән Майраның был бәхетһеҙ мөхәббәте бер ҡасан да минең күҙ алдымдан китә алмай. Улар минең тормошома инделәр. Быны тик Надя ғына белә. Мин уға был фильмдың «Хушлашыу вальсын» көйләп күрһәтәм, шул көйгә яҙған йырымды йырлайым. Ҡайһы саҡта Салауатты ла шул көйҙә көйләп йоҡлатам...

Ә бөгөн уны Ашот Грашиҙың шиғырҙарын уҡып йоҡлаттым да «Ватерлоо күпере»нә киттем. Әйтерһең дә, Рой ул — мин үҙем — Рәми!.. Әйтерһең, был минең үҙемдең мәңгегә юғалған тәүге мөхәббәтем!.. Мин уны бик һирәк иҫкә алам, ләкин уны иҫкә алғанда — мин үҙемдең иң саф, иң тәрән, иң яҡты тойғоларымды яңынан кисерәм. Был ниндәйҙер икһеҙ-сикһеҙ булған тәрән бер һағыш. Был һағыш йөрәктең иң тәрән төпкөлөнән һығылып сығып, мәңге-мәңге хушлашыу, мәңгегә-мәңгегә айырылышыу йыры булып түгелә:

Хуш бул инде, хуш, һөйөклөм,
Хуш бул, минең бәхетем,
Хуш, хыялым, хуш, өмөтөм,
Хуш, тәүге мөхәббәтем!..

Был минең таш кеүек ҡатҡан күңелемдең күҙгә күренмәй торған иң әсе, иң татлы күҙ йәштәре менән тын ғына үкһеп-үкһеп илауы:

Мәңге ҡайтмаҫ, ҡабатланмаҫ
Тауышың ғына ҡалды,
Ғүмергә мин онотмамын,
Һағынырмын был таңды!..

Өйгә ҡайтып еткәнсе мин инглиз көйөнә үҙемдең бына шул йырҙарымды йырлап ҡайттым.

Төн ҡараңғы, яҙғы Өфө төнө, ә быныҡ һайын йондоҙҙар яҡтыраҡ һәм баҙығыраҡ балҡый. Арала берәүһе айырыуса

асыҡ һәм ҙур булып күренә. Яҡты йондоҙ ине ул ҡыҙ миңә. Ләкин инде быға хәҙер ун бер йыл!..

Рой менән бергә мин дә Лонгфеллоның йәшлек тураһындағы һүҙҙәрен ҡабатлайым: «Мысли о молодости — далекие-далекие мысли...» Эйе, йәшлек бик алыҫ!..

19 апрель.

Иртән эшкә килгәс, егеттәргә лә «Ватерлоо күпере» тураһында һөйләнем. Сәлмәнов ағайға теге йырҙың тыуыуы хаҡында һөйләгәс, ул миңә һүҙҙәрен яҙып бирергә ҡушты. Яҙҙым. Зөфәр ҙә уны минең арттан күсереп алды. Бөтәһенә лә йыр оҡшаны. Сәлмәнов ағай йырға көй яҙырға ла ҡанатланып китте. Көйҙөң характеры тураһында бәхәсләшеп, «Ватерлоо күперен» икәүләп ҡарарға булдыҡ. «Родина» кинотеатрына барғанда мин уға Гейненың үҙем тәржемә иткән шиғырҙарын уҡыным. Улар ҙа оҡшаны.

— Давай, беҙ дуҫлыҡты нығытып алайыҡ әле, бер цикл яҙайыҡ,— ти.

— Давай,— тип, мин дә шатланып риза булдым әлбиттә.

Минең, ысынлап та, үҙ йырҙарымдың йырланыуын ишетәһем килә. Рафаэль менән бергәләп яҙған йырҙар баҫылып ҡалғас, мин бынан өмөт өҙгәйнем, хәҙер тағы ла йырҙар яҙыу теләге ҙурая башланы.

Әгәр ҙә Сәлмәнов берәй яҡшы көй яҙһа, мин ең һыҙғанып эшләйәсәкмен!

Бына Ашот Грашиҙың «Һандуғас»ын тәржемә итеп ташланым. Нисектер йыр интонацияһындараҡ килеп сыҡты.

Баҡсаларға сығам таң алдынан —
Һандуғастың йырын тыңларға.
Һандуғастың моңло һайрауҙарын
Ел осора әллә ҡайҙарға!..
Һағайтышып йәшел ҡолаҡтарын,
Бар ағастар уны тыңлайҙар,—
Тыңлайҙар ҙа уға таң ҡалалар,
Серле моңон тыңлап туймайҙар.
Күҙгә күренмәгән таң йырсыһын
Күрмәйенсә күңел түҙалмай,—
Тик тапмайым уны ҡыуаҡтарҙан,
Эҙләһәм дә үҙен күҙ алмай.
Бул һин, йырсы, шул һандуғас һымаҡ,
Һандуғастың һүҙен ал әйҙә,
Кешеләргә —тик йырыңды йырла,
Күренмәй ҙә үҙең ҡал әйҙә!..

20—26 апрель.

«Йәш көстәр» менән ҡаңғырҙым. Бөтөнләй яңынан төҙөргә тура килә. Төрләндерергә, йәнләндерергә кәрәк. Иркенләп эшләп булмай. Нәшриәттә бер ниндәй ҙә эш шарты юҡ. Бер ҙә иғтибарҙы туплап ултырып булмай. Өйгә алып ҡайтып эшләү ҙә мөмкин түгел. Кистәрен, Салауатты йоҡлатҡас, үҙемдең әйберҙәр өҫтөндә ултырам. «Таш сәскә»не июнь айында тапшырырға кәрәк. Франконың хикәйәләрен дә шул уҡ ваҡытҡа өлгөртөргә тейешмен. Аспирантураға ла әҙерләнергә!..

Нишләргә инде? Теләһәң шартлап кит! Тиҙҙән хужалар ҙа ҡайтасаҡ. Квартира өсөн ике меңде теләһә ҡайҙан табып бир! Яңы квартира ла эҙләргә кәрәк. Ваҡыт аҙ ҡалды.

Надя менән шул хаҡта һөйләшәбеҙ ҙә башыбыҙ ҡата.

— Беҙ Мәскәүгә китәйек, ә һин иркенләп эшлә,— ти Надя.

Шулай итергә булдыҡ. Надя мәктәп директоры менән һөйләште — ризалашҡандар. Бөтә фәндәрҙән дә отметкалары сығып бөткән.

Тик ҡайҙан аҡса табырға?

Алты шиғырҙы радиоға тапшырҙым. Ләкин улар май айында ғына уҡыласаҡ.

Бухгалтерия менән һөйләшеп ҡарарға кәрәк.

27 апрель.

Эшкә килгәс тә Сәйфуллингә хәлде аңлатып бирҙем. Кеше хәленә керә торған бухгалтер икән. Үҙе кереп әйтте: аҡса бар. Кассаға төштөм. Тик иртәгәге поездарға билет ҡына юҡ. Вокзалға төшөп, поезд китер алдынан ғына алырға мөмкин. Надяға ҡайтып әйттем дә бөгөн үк хушлашырға булдыҡ. Надя инде керҙәрен йыуып бөтөрөп ҡуйған...

Кис Надя менән Салауатты Мәскәүгә оҙаттым. Әйберҙәрҙе чемоданға тултырғанда Салауат шул тиклем йөҙәтте, арып бөттөм. Күҙенә ни күренһә, шуны килтереп һала, йә үҙе чемоданға кереп ята. Надя минең Салауат менән көрәшеүҙән көлөп арып бөттө. Ә минең шул тиклем эс боша, шул тиклем күңел әрней — бер туҡтауһыҙ йырлайым, һыҙғырам... Хәҙер Салауатты күрмәйенсә нисек итеп йәшәрмен? Тыуған саҡта ул минең өсөн юҡ кеүек ине. Ә хәҙер ул минең бөтә тормошома ингән... Хәҙер мин баланың нимә икәнен йәнем-тәнем менән тоям. Үҙемдең яңғыҙ тороп ҡалыуымды күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Ләкин бына мин инде яңғыҙ!..

28 апрель.

Күңелдә әллә ниндәй бушлыҡ. Уяныһам, китаптар туҙып ята — ҡыҙҙар тәҙрә пәрҙәләрен алып, кер йыуырға тотонған-

дар. Надя менән Салауаттың юҡлығы шул тиклем күҙгә ташланып тора, хатта мин был ялды нисек үткәргә лә белмәйем. Тиҙерәк был хәлдән ҡотолоу өсөн китаптарҙы тәртипкә килтерергә тотондом — туҙандарын һөрттөм, шкафҡа, гардеробҡа яңынан рәтләп теҙҙем. Гөлдәрҙе тышҡа сығарып ҡуйҙым. Ә тышта шул тиклем йылы, ҡояшлы — ҡайҙалыр урманға, тауҙарға осоп китәһе килә. Ҡоштар һайрай.

Өфө — майҙы ҡаршыларға, ағастар бөрөләрен асырға әҙерләнде.

Мунсаға барырға булдым.

Юлда Лира осраны. Әсғәт тураһында һөйләне. Үҙе шат, таҙа. Салауаттың фотоларын Әсғәт тиҙ көндә ебәрермен тигән. Тиҙерәк ебәрһен ине инде! Исмаһам, өйҙә уның һүрәте торһон! Хушлашҡанда мин уны бер үбә лә алманым. Мунсанан һуң «Башҡортостан»да бик оҙаҡ итеп һыра эсеп ултырҙым.

29 апрель.

Күңелһеҙ! Эс бошоп тик тора. Үҙем кешеләр араһында, үҙем япа-яңғыҙмын. Тик кисен үҙебеҙҙең нәшриәт артистарының концертын ҡарап ҡына бер аҙ кәйеф күтәрелеп китте. Йырланылар, бейенеләр, шифыр һөйләнеләр. Аҙаҡ буфетҡа инеп һыра эстек. Егеттәр аҡты ла алып ингәндәр икән, уны ла өҫтәл аҫтынан ғына йөрөтөп, байрам иттек. Былай ҙа ҡәнәғәтләнмәгәс, бүлмәгә инеп ултырҙыҡ: Сәлмәнов, Зөфәр, Ҡотошов, Игебай ҡатындары менән, Фәрит Иҫәнғолов, Найман һәм мин — үҙебеҙ генә. Фәрит ағай русса-башҡортса һүҙлекте эләктереп алған да бөтәһенә лә фал асып ултыра. Һуңынан-ыраҡ Шакир Насыров та килеп ҡушылды. Тик береһе лә йырламаны. Василий Андреевич бик кәйефләнеп алған. Ул килеп ингәс тә, мин унан Есенинды уҡыуын һораным. Ул «Әсәгә хат»ты уҡыны. Тик быныҡ өсөн Найман мине шелтәләп алды. «Ниңә шул урыҫты һөйләндерәһең...» һ. б. Был миңә һис тә оҡшаманы. Һуңынан ҡыҙҙарҙы оҙатышҡанда уның менән тағы бер эске бәрелеш булып алды. Резеданы мин оҙатып ҡуйырға иткәйнем, Найман йөрөй икән уны оҙатырға! Бер аҡһаҡ егете миңә ҡаршы төштө: «Һин өйләнгән кеше, һиңә килешмәй, намыҫ кәрәк», фәлән-фәсмәтән... Миңә был бик сәйер тойолдо. Ул Резедаға:

— Һеҙ нисек, таныштармы?— тигәс, уныһы:

— Беҙ илле икенсе йылдан бирле дуҫтар,— тип ысҡындырҙы.

Ләкин, ҡыҙ минең менән китергә торһа ла, мин ҡаршылашып, ҡыҙ бүлешеп торманым. Заманында мин уны оҙатҡанмын — етер, тинем. Шулай ҙа күңел ҡытыҡланып ҡуйҙы, нисектер күңелһеҙләнеп киттем. Ҡайтырға тип сығып бара

инем, Мәрйәм исемле ҡатын (ул бухгалтерияла эшләй) мине исемем менән саҡыра. Мин тәүҙә икенсе берәүҙе саҡыралыр тип уйланым. Ләкин ул миңә ҡул болғағас, янына барҙым. Теге аҡһаҡ егет уның янында ла ураланып йөрөй. Бергә сыҡтыҡ. Мәрйәм:

— Әйҙә, бергәләп йөрөп киләйек,— тигәс, мин нишләптер, үҙем дә һиҙмәҫтән, уны ҡултыҡлап алдым. Ниндәйҙер йылылыҡ һәм ныҡлыҡ бар был ҡатында. Уның менән бергәләп йөрөйһөм, һөйләшәһем килә. Тик теге егет бөтә эште боҙоп йөрөй. Бушты бушҡа ауҙарып, оҙаҡ ҡына көләп һалдыҡ. Һуңынан мин уларҙы ҡалдырҙым да, иҫерек баш менән уйлап та тормай, машинистка Суфиялар яғына саптым. Урамда үҙ-үҙем менән япа-яңғыҙ ҡалыу нисектер бик ауыр ине. Минең ниндәй генә булһа ла ҡатын-ҡыҙ заты менән бергә булаһым, үҙемдең ҡот осҡос яңғыҙлыҡты онотоп тораһым килә. Ләкин Суфия ҡайтмаған. Ә сәғәт инде төнгө өс. Әсәй ҡарсығының ҡотон алып киттем шикелле. Һуңынан үҙем йондоҙҙарға ҡарап ҡысҡырып тороп көләм. Ни тиклем ахмаҡ бит мин!.. Әгәр ҙә был күренештәрҙе Надя күреп торһа, уға мин ни тиклем ҡыҙғаныс һәм түбән булып күренер инем! Мин үҙемде уның алдында ғәйепле итеп күрергә тырышам, ләкин үҙемде һис тә ғәйепле итеп тоймайым. Ә уйлап ҡараһаң, ир менән ҡатын араһында ни тиклем йәшерен тормош йәшәй, тик былар бергә булған саҡта бөтөнләй онотола йә бөтөнләй әһәмиәтһеҙ нәмә булып күренә. Бәлки, мин генә шулайҙыр? Белмәйем. Бәлки, мин бик аҙғын хисле, боҙоҡ тәбиғәтле кешелер? Белмәйем. Нисек кенә булмайым, мин шулай. Надяны ни тиклем генә яратһам да, тормошомдо уға ғүмерлеккә бәйләһәм дә, мин тик уға ғына ҡарап тора алмам кеүек. Матур ҡыҙҙар күрһәм, мин барыбер иғтибарһыҙ ҡала алмайым — миндә ниндәйҙер бер сәйер дәрт уяна. Мин мауыҡам, ярһыйым, хыялланам. Күп ҡыҙҙарҙың әле башын әйләндерәһем, уларҙың «яратам» тигән һүҙҙәрен ишетәһем, татлы ирендәренән үбәһем килә. Күрәһең, миндә Дон Жуан тәбиғәте йәшәй. Тик мин был тәбиғәтте аҡылым менән тыйып, үҙемдең төрлө нәфселәремде төрлө әхлаҡ ҡанундары менән кәртәләп киләм генә. Әгәр ҙә шул әхлаҡ ҡанундары булмаһа, бәлки, кешенең шундай йәшерен нәфселәре лә булмаҫ ине? Сөнки һәр бер тыйылған нәмә һиңә татлы, мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡ булып тойола. Ә был «тыйылған» нәмәне «асыу» менән үк уның бер ниндәй ҙә сере юҡ икәнлеген күрәһең. Уның ҡәҙере лә, тәме лә, ҡыҙығы ла бөтә. Һин инде икенсе ҡыҙыҡты, икенсе серҙәрҙе асырға теләйһең. Күңелең бер сәскәнән икенсе сәскәгә ҡунып йөрөгән күбәләк кеүек. Был —минең аҙғын күңелем, ахыры. Ләкин, улай тиһәң, ни өсөн һуң мин саф, ҙур, мәңгелек тойғо алдында баш эйәм?

Ни өсөн «Ватерлоо күпере» миңә шул тиклем нык тәьсир итә. Шундай зур тойғо өсөн мин үземде корбан итергә лә әзер кеүекмен. Был иҫ киткес тәрән кешелек тойғоһо минең өсөн үземдең хайуани хистәремдән мең-мең мәртәбә юғары тора. Шундай зур тойғо ҡуҙғалғанда ғына мин яҙа алам. Ғәжәп! Мин хатта үземде үзем аңлай ҙа алмайым. Бына бөгөн төндә үземдең бер машинистка артынан сабыуым иҫ киткес көлкө! Үземдән үзем илай-илай көләһем килә. Ә шулай ҙа үземдең яңғыҙлыҡ был күренештәрҙән һуң бер аҙ юғалып торған кеүек булды. Ҡайттым да иҙерәп йоҡлап киттем.

30 апрель.

Иртән тороп, зарядка яһап, йыуынып, сәй эсеп алғас, Дауыт Юлтыйҙың «Ҡарағол»она тотондом. Тел ғәжәп матур, бай!

Ҡыҙҙар ҡайтҡансы эшләнем дә, улар ҡайтҡас, ҡалаға сығып киттем. Ағастарҙан бөрө еҫе аңҡый, ҡояш ҡыҙҙыра — мин һаман да йылыға туя алмайым. Ҡыш буйы ҡатып ултырыуҙан һалҡын, ахыры, бөтә тәнгә һеңеп ҡалған!.. Шуның өсөн ҡояштың арҡаны нығыраҡ ҡыҙҙырыуын, бешереп алыуын тояһым килә. Ләкин ҡояш әлегә бик оялсан, бик йомшаҡ, бик мөләйем. Бөрөләр ҙә уның нурҙары ҡайнарыраҡ булыуҙы көтөп, ослайып сығып тора. Уларҙың да тиҙерәк, тиҙерәк эҫелә әлһерәп торған япраҡ булып елберҙәйһе килә кеүек. Талдар инде һарғылт йәшел алҡаларын таға башлаған. Сәпсектәр сыр-сыу килеп ем эҙләй уларҙан. Тал ботаҡтары һығылып китә лә йәшел алҡалар ергә ҡойола.

Ә Луначарский баҡсаһындағы ҡарт йүкәләр әле үҙҙәренең ҡарайып бөткән йөҙйәшәр ботаҡтарын йәйеп ебәреп, ҡояш нурҙарын тартып алырҙай булып, һаман да әле ҡатып ҡалған көйөнсә торалар. Яратам мин шул йүкәләрҙе!.. Аяҙ күк фонында уларҙың ҡара сатырҙары нисектер мөһабәт, серле булып күренә. Һәр көн улар янынан үткәндә мин тормоштоң ниндәйҙер кеүәтле бер көсөн, йәшәүгә булған ынтылыштың ғорур һәм ҡаҡшамаҫ булыуын тоям. Уларға ҡараған һайын мин ни өсөндөр Лев Толстойҙың бөйөк һынын күҙ алдыма килтерәм. Ах, был йүкәләрҙе Пришвин күрһә, әллә ниндәй бөйөк бер серҙе асыр ине! Ә мин тик һоҡланып үтеүҙән башҡа бер ни ҙә әйтә алмайым улар хаҡында. Бер матур шиғыр яҙаһы ине улар хаҡында! Ниндәй шиғыр, ниндәй һүҙҙәр? Белмәйем. Ләкин уларға ҡарағанда, күңелдә ниндәйҙер һүҙһеҙ генә шиғыр уянған кеүек. Мин уларға тере кешеләргә, иң тәрән аҡыллы сал һаҡаллы сәсән ҡарттарға ҡараған кеүек ҡарайым.

Урам буйлап йөрөп ҡайтҡас, диванға ятып Бунинды уҡырға тотондом һәм ҡапыл тоноҡ ҡына күк күкрәгән тауышты ишетеп, ырғып тороп, тышҡа сыҡтым.

Тәүге күкрәү!.. Хәйерлегә булһын!— Һул ҡолағым менән ишеттем. (Был көлкө булһа ла, бала саҡтан ҡалған ғәҙәт буйынса, күк күкрәүен мин уң ҡолаҡ менән ишетергә яратам.) Ямғыр яуырға итә. Болоттар күгәрешеп, күк йөҙөндә үҙҙәренә эш тапмаған кеүек, йә бик мөһим эш эшләргә йөрөгән кеүек, йөрөй, өйөрөлә...

Тәбиғәттең һәр бер күренеше минең өсөн һәр саҡ яңы, һәр саҡ серле. Мин уның шулай булыуын яратам. Хәҙер йәшен ялтлап, минең йөрәкте ярып үтһен ине!.. Йомшаҡ ҡына йылы ел иҫә. Күңелгә рәхәт булып китте лә мин тағы урамға сыҡтым. Почтаға барып, Салауатҡа зәңгәр сәскәле хат яҙып ебәрҙем, ә Рафаэль менән Гөлсәсәккә «Пью за вашу весну» тигән телеграмма ебәрҙем. Ә үҙемдең кеҫәлә аҡса ла ҡалманы. Исмаһам, күңел тыныслаңып ҡалһын, тинем. Ысынлап та, күңелгә рәхәт булып ҡалды. Тик әсәй менән Әсғәткә генә бер һүҙ ҙә әйтә алмау үкендергес. Ни эшләйһең инде? Аҡса юҡ. Надянан илле һум менән тороп ҡалдым. Был май айын нисек үткәреп ебәрермен инде, белмәйем.

Маратҡа киттем. Юлда Шакир менән Хәҙисә осраны. Хәҙисә ауырлы. Бөгөн-иртәгә әсә булам тип тора. Төҫө үҙгәргән, тупаҫланған, күҙҙәре ҙур асылып, хәлһеҙ генә ҡарай.

Марат һаман донъяға, социалистик реализмға һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың ахмаҡлығына зарлана, пародиялар хаҡында һөйләй. Ләкин минең һис тә генә был темаға һөйләшкем килмәй. Мин бөрөләрҙең еҫен еҫкәп, ағастар тураһында һөйләйем. Ә уның танауы еҫ тоймай!.. Миңә был бик йәл булып күренә.

— «Бөрөләр» тип китап сығараһың, ә үҙең бөрөләрҙең еҫен дә тоймайһың!— тим. Ул көлә...

Тормоштан мин ни тиклем риза булмағанда ла, миңә ул ҡәҙерле; мин уның еҫен дә, тәмен дә тоям, хатта бөрөләрҙең хәле лә миңә үҙ хәлем кеүек, ә бына Мараттың бөтә нәмәне лә кире ҡағыуы, бөтә нәмәнән туйыуы миңә оҡшамай.

— Мин бик асыҡтым,— тинем Маратҡа.

Бәрәңге ашап, сәй эстек тә мин ҡайтып киттем.

Тауилә аҡбур менән мейес ағартҡан — аҡбур еҫе менән өй тулған. Ә үҙе әйбер үтекләй. Фәниә ауылға ҡайтып киткән. Тимәк, беҙ бер бүлмәлә икәү. Ләкин был ҡыҙ менән бер бүлмәлә була тороп та, мин уны күрмәйем, тоймайым. Был ҡыҙ нимәләр уйлай, ниндәй эске донъя менән йәшәй, миңә нисек ҡарай — минең өсөн барыбер. Был да ҡыҙыҡ, уйлап ҡараһаң.

Бына ул иҙерәп йоҡлай... Бер кем ҡулы теймәгән, бер кем ҡулы ҡосмаған саф ҡыҙ. Ә мин күбәләк күңелле, аҙғын хисле бер ир... Ләкин был ҡыҙ минең өсөн бөтөнләй юҡ кеүек. Ниңә был шулай? Кеше ни тиклем аңлайышһыҙ!..

Ярай, бик тәрәнгә кереп киттем. Иртәгә демонстрация, иртәгә байрам, иртәгә май. Май инде башланды ла. Әтәстәр ҡысҡыра. Электропоездарҙың гөүләп үткән тауыштары ишетелә. Тиҙҙән таң да атыр. Сәғәт инде дүртенсе ярты. Йоҡларға кәрәк.

1 май.

Бына беренсе май ҙа үтеп китте. Был иҫ киткес матур көн булды. Шундай йылы, шундай ҡояшлы ине был көн. Ләкин был көн, әгәр ҙә художник Ғүмәр Мөхәмәтшинды осратмаһам, барыбер бик күңелһеҙ булған булыр ине. Демонстрациянан һуң Мараттарҙа эс бошороп ултырҙым. Кис ҡала буйлап сығып киткәйнем, Ленин урамында ике малайы, ҡатыны менән Ғүмәрҙе осраттым. Һүҙҙән һүҙ сығып китеп, бик рәхәтләнеп һөйләштек. Ул үҙҙәренә саҡырҙы.

Мәжит Ғафуриҙың портретын яҙа. Ғәжәп оригиналь портрет! Бик эске кисерешле — психологик портрет. Ғафуриҙың бик матур образы. Шағирҙың һуңғы көндәре, һәм ул үҙенең һуңғы шиғырҙарын ижад итә. Бына шул ижад процесын Ғүмәр бик матур итеп тотоп алған. Шағир үҙенең эске донъяһына сумып, күҙҙәрен бер нөктәгә төбәгән дә бик көсөргәнешле хистәр кисерә. Был бер нөктәгә төбәлеп, үҙенең йөрәк ашҡыныуын тыңлаған күҙҙәр иҫ киткес тере һәм мәғәнәле. Быны һүҙ менән аңлатыуы ҡыйын — портреттың үҙен ҡарарға кәрәк. Был Ғафуриҙың иң яҡшы портреты буласаҡ кеүек. Тик миңә уның танауы ғына бер аҙ сығып етмәгән — тупаҫыраҡ булып күренә һәм ҡәләм тотҡан ҡулы һынып ҡалған кеүек тойола.

Ғүмәр үҙе лә шулай ти. Тимәк, мин дөрөҫ әйтәмдер. Портрет әле яҙылып бөтмәгән. Тик Ғафуриҙың образы инде бар! Кешеләргә ул бик оҡшаясаҡ. Ғүмәр ғәжәп талантлы егет, уйлай торған художник. Мин әллә нисек терелеп киттем. Күңелдә был егет менән ғорурланыу, уның шундай эше өсөн шатланыу хистәре уяна. Ә уның шундай ауыр тормошта йәшәүе, уға бер кемдең дә иғтибар итмәүе йөрәкте әрнетә. Эшләү, ижад итеү өсөн уның иң элементар эш шарттары ла юҡ, минең кеүек үк, кеше өйөндә, хәйерселектә йәшәй. Ике бәләкәй балалары (Урал менән Игорь) өҫтөнә өсөнсөһө булырға тора — ҡатыны ауырлы!.. Ә Ғүмәр үҙе хәҙер бер ҡайҙа ла эшләмәй — шул портретты яҙа. Бөтә мөхәббәте шул Ғафури! Ул миңә уның төрлө фотографияларын, Ғафуриға оҡшаған кешеләрҙең һүрәттәрен, Ғафуриҙың скульптураһын, эскиздарын күрһәтте. (Бер ваҡыт ул Ғафуриҙың скульптураһын да эшләгән икән.) Ғафуриҙы оҙаҡ өйрәнгән һәм уның хаҡында күп нәмәләрҙе белә, шағирҙы бөтә йәне-тәне менән ярата. Ғөмүмән, уның бөтә нәмә менән дә ҡыҙыҡһыныуы ҙур.

Ләкин ни өсөн һуң бына шундай бик ҡәҙерле, бик матур кешеләр шундай ҡот осҡос тормошта йәшәйҙәр? Ниңә уларға иң кәрәк саҡта ярҙам итеүселәр юҡ? Был яҙмыш күпме кешенең кешелеген кәмһетә? Ни өсөн кешене ул әле танылмаған саҡта таный белмәйҙәр?

Мин Рембрандттың тормошон күҙ алдыма килтерәм дә кеше үҙе үлгәс кенә уның бәхет табыуы тураһында уйлайым. Ни өсөн бәхет, дан һәм байлыҡ кешегә һуңлап килә?.. Был иҫ киткес мәғәнәһеҙлек бит! Күпме таланттар шулай һәләк булған!..

Фүмәр өҫтәлгә бер сиреклекте алып ултыртты ла, һуғанды тоҙға манып, тамаҡ сылаттыҡ... Башҡа бер ни булмаһа ла, минең өсөн был иң яҡшы һый ине. Мин бөтә күңелем менән рәхәтләнеп эстем, һөйләштем, көлдөм.

— Рембрандт закускаһы!— тип көлөштөк, һәм донъяла был яҙмыш бер беҙҙең баштан ғына үтмәгән тип йыуандыҡ.

Беҙ, әлбиттә, Рембрандт та, Бетховен да, Горький ҙа була алмайбыҙ. Ләкин улар менән бергә булыу беҙҙе көслө итә һәм шатландыра!

Бик яҡшы кис булды был. Һүҙ әҙәбиәттән музыкаға, музыканан живописҡа, йәштәрҙән ҡарттарға, ҡарттарҙан балаларға, балаларҙан милли мәсьәләгә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға күсә, орнаменттар менән килеп бөтә. Фүмәр халыҡ орнаменттары менән мауыға, төрлө иҫке ҡайыу-сигеү өлгөләрен, иҫке кейемдәрҙе йыя.

— Орнаментҡа бик ныҡ иғтибар итергә кәрәк ул,— ти Фүмәр хушлашҡанда.

— Миңә байрам булды,— тим мин.

— Миңә лә булды. Давай, һин йышыраҡ килеп йөрө әле, малай.

— Ярай, һин дә барып сыҡ, Фүмәр.

Өсөнсө ҡабат ҡул ҡыҫышабыҙ инде, һаман да һүҙ бөтмәй. Күңелгә яҡты...

2 май.

Эс боша. Иҙел буйына барып ултырҙым. Быйыл Ағиҙел шул тиклем ташҡан — хатта иге лә, сиге лә күренмәй.

24 май.

Төнгө сәғәт дүртенсе яртыла Виталий Бианкиҙың хикәйә һәм әкиәттәрен редакторлап бөттөм. Фәжәп матур яҙыусы! Иртәнге сәғәт ундан алып, көнө буйы, төнө буйы ултырҙым. Үҙемдә лә сыҙамлыҡ бар икән!.. Әле эшләргә була! Баш бөтөнләй саф әле. Үҙемдең сәләмәтлегемә шатланам. Тик бына был айҙа көндәлекте яҙып бара алманым.

Иртәгә ултырырға тура килер.
Хәҙер Крылов мәҫәлдәренә тотонорға кәрәк!

31 май.

Бына май ҙа үтеп китте. Май айы минең быйыл яҡшы айым булды. Рәхәтләнеп эшләнем! Йыйынтыҡ (үҙемдең «Таш сәскә») инде әҙер тиерлек. Надяны, Салауатты һағыныу, яңғыҙлыҡ минең йөрәкте моңландырып, шиғыр уты яндырып торһа, уларҙың өйҙә булмауы шиғыр яҙып ултырыу өсөн ваҡыт та бирҙе. Бөтә иғтибарымды биреп, иркенләп ултырҙым. Тик аҡсаһыҙ интегеү генә бер аҙ күңелһеҙ булды. Шулай ҙа был көндәр минең өсөн иң яҡты, иң матур көндәрем ине.

Бына бөгөн инде мин ул көндәрем менән хушлаштым... Кемдер минең «үҙ эшем» менән дә булышҡанды «начальствоға» илтеп еткергән!.. Ни тиклем түбән йәнле кешеләр була! Ә был тегеләренә етә ҡалған. Баш редактор (башһыҙ бәндә!) иртәгә үк миңә нәшриәткә килеп эшләргә ҡушты. Мин әйтәһем килгән нәмәләрҙе ныҡ ҡына итеп әйтеп ташланым.

Ҡот осҡос формализм!

Ҡайҙа ғына барма, ҡайҙа ғына инмә — кешеләр шул формализм ауы менән сырмалып бөткән.

Һин теләһәң асҡа үл, урамда ятып йоҡла, теләһәң сәсрәп кит — унда уларҙың эше юҡ, тик һин графикка һый, планды үтә! Ә нисек үтәйһең, нисек эшләйһең, шул эшкә һин күпме көсөңдө һалаһың — был мөһим түгел. Сөнки һинең эшеңдең сифатына ҡарап тормайҙар.

— Мин әле бик йәш, тәжрибәһеҙ редактор. Ә минең кәңәш һорап керер кешем дә юҡ. Бына һеҙ минең эште уҡып та тормай, ҡул ҡуяһығыҙ ҙа наборға ебәрәһегеҙ. Ә ташҡа баҫҡанды бит ҡул менән юйып булмай аҙаҡ. Китаптарҙы халыҡ уҡый бит. Һеҙ миңә шундай эш тапшырғас, мин уны «минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе» тип кенә эшләй алмайым. Текст өҫтөндә лә ултырырға кәрәк, авторҙар менән дә эшләргә кәрәк. Етмәһә, шундай эш шарттары: бер яғында көнө буйы телефондан һөйләшәләр, бер яғында машинистка тыҡылдатып ултыра, коридорҙа судҡа килеүселәр шаулаша. Техник обществоға ла, беҙгә лә күпме кеше килә көнөнә. Бөтә иғтибарыңды туплап ултырып эшләргә ниндәй мөмкинселек бар һуң?— редакторға бына шуларҙы әйткәс, ул быға бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Шулай ҙа, Ғарипов, графикты үтәргә кәрәк,— ти.

— Ниңә мин әллә үтәмәйемме? Шул шарттарҙа ла мин пландан артыҡ эшләнем бит? «Йәш көстәр» ҙә, «Ҡарағол» да, Бианки ҙа май айында бирелде лә баһа. Етмәһә, композиторҙарҙың йырҙар йыйынтығы планға ла индерелмәйенсә әҙерләнде.

— Яҡшы. Ә һеҙ бит май айында Крыловты ла бирергә булғайнығыҙ. Һүҙегеҙҙә торманығыҙ бит.

— Мин машина түгел, ағай. Әҙерәк башығыҙ менән уйлап ҡарағыҙ. Һеҙ үҙегеҙ шуларҙың бөтәһен дә эшләп ҡарағыҙ — шунан әйтерһегеҙ. Һеҙ әллә көләһегеҙме? Был тиклем формализмды мин бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ ине. Ғәжәп кеше һеҙ...

— Бына һеҙ ғәжәберәк, Ғарипов. Һеҙҙе өйҙә үҙ эшегеҙ менән ултыра тигән сигналдар бар.

— Ниңә һеҙ ғәйбәт тыңлайһығыҙ? Һеҙ мин эшләгән эшкә ҡарағыҙ тәү башта. Унан мин үҙ эшемде үҙем беләм. Һеҙ әллә мине шифыр яҙыуҙан да тыйыр инегеҙме?

Һәм башҡалар, һәм башҡалар...

Был Ҡыуатов бына шундай редактор. Ә директор бер ҙә унан ҡалышмай.

Был издательство түгел, издевательство!

Бына хәҙер мин тағы ла шунда ултырып эшләргә тейешмен! Был мөмкин түгел. Миңә яҙырға кәрәк, уҡырға кәрәк, аҫҡа ла үлмәҫкә кәрәк. Бына мин инде егерме биш йәшкә етеп, шул аслыҡ тураһында уйламаған ваҡытым юҡ! Ни тиклем туйҙырҙы мине был аслыҡ!.. Төрмәләге кешеләр ҙә бит минән туғыраҡ йәшәй. Намыҫлы булып йәшәү ни тиклем ауыр кешегә! Ә намыҫһыҙ йәшәү? Быны мин булдыра алмайым. Былай булыуҙан йәшәмәүең артыҡ! Ә йәшәйһе килә. Сөнки алда маҡсат бар, өмөт бар, үҙ көсөңә ниндәйҙер дыуамал бер ышаныс бар. Мин үҙемдең тормошҡа булған үпкәләремде нисек тә бәләкәйтеп күрергә, быларҙың бөтәһенә лә ваҡ нәмә, үтеп китә торған ваҡытлы нәмә тип ҡарарға тырышам. Үҙемдең киләсәккә булған ярһыу-ынтылышымды аңламаған, уның мәғәнәһен аңламаған кешеләрҙән ҡоторонҡо бер ғорурлыҡ менән көлөп, уларҙы һыта баҫып үтеп китәһем килә. Үҙемдән башҡа, үҙемдең бушҡа үткәргән ваҡыттарымдан башҡа бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым. Сөнки минең юғалта торған бер нәмәм дә юҡ — бөтәһе лә үҙем менән, бөтәһе лә үҙ башымда, бөтәһе лә үҙ йөрәгемдә. Бөтәһен дә мин үҙ көсөм менән, үҙ тырышлығым менән тапҡанмын.

Мин донъяны, кешеләрҙе матурлап күргә тырышһам да, барыбер уларҙы нисек бар шулай күреп өлгөрҙөм инде. Был минең тәүге аллы-гөллө хыялдарымды туҙҙырып ташлап, ысын ышаныс, ысын көс биреп, уларҙы әсе күҙ йәштәрем менән һуғарып үҫтерҙе һәм мин уларҙы бер кемдең дә бысраҡ аяғы аҫтына һалып тапата алмам. Көс етерҙәй ҡаршылыҡты мин ватып, онтап, селпәрәмә килтереп уҙасаҡмын, ә көс етмәҫтәйен хәҙергә урап үтермен. Ләкин мин ниндәй урында нимәләр барын, ниндәй урында ниндәй кешеләр барын — бөтәһен дә хәтергә алып, белеп, күреп китәсәкмен. Бер өс йыл уҡып

алырға ла яңы көс менән мин уларға яңынан килергә уйлайым. Юҡһа, минең баш осомда төрлө-төрлө меҫкендәр төрлө-төрлө ҡағыҙҙарын, төрлө-төрлө дәрәжәлек билгеләрен, авторитеттарын болғарға тырышалар.

Уҡырға кәрәк миңә! Быйыл аспирантураға инә алмаһам, икенсе йылға мотлаҡ инергә кәрәк.

Надянан хат алдым бөгөн. Ул да минең уҡырға инеүемде теләй. Беҙҙең турала уйлама, ти!..

Нисек һуң уйламаҫҡа?

Салауат үҫә, йүгереп йөрөй, һөйләшә лә башлаған. Шуларҙы мин күрмәйем дә, ишетмәйем дә — тик һағынам ғына. Бик һығындыра был малай. Мин уны шул тиклем яратырмын тип уйламағайным... Ә ярҙам итә алмайым!..

1 июнь.

Йәй башланды! Бөгөн иртән хужаның ҡарсығы килеп төштө! Инде өйҙә лә ултырып булмаҫ. Мин ҡараңғы ғына элекке бәләкәй бүлмәгә күсендем. Китаптарҙы ҡуйырға урын да юҡ. Минең китаптарым торған шкафҡа һауыт-һабалар, рюмкалар, төрлө шундай мәрәнәһеҙ йыһаздар ҡуйылды. Минең хатта илайһым килеп китте...

Былар барыһы көлкө булыр ине,

Әгәр бик күңелһеҙ булмаһа!..

Шулай итеп, бөгөндән башлап мин кельялағы монах! Ә нәшриәттә —машина, китаптар сығарыусы машина.

«Прощай, свободная стихия!..»

Тиҙҙән хужа үҙе лә килеп етәсәк. Уға ике меңде теләһә ни ереңдән сығарып бир. Ә минең эш хаҡым бурыстарҙы түләргә лә етмәй. Надяға 150 һум ебәргән булдым — бигерәк тә шуныһы ғәрлек!

Надя унда бала менән интегә, үҙе, етмәһә, икенсеһенә ауырлы! Тыуасаҡ баланың яҙмышы бик ҡурҡыта мине. Уның берәй төрлө зәғиф булып тыуыуы ла мөмкин. Үлтерә алманылар, ә тыуҙырыу бынан да ауыр буласаҡ!.. Уйлаһаң — ҡот осҡос хәл бит был. Уйламау ҙа мөмкин түгел. Әллә нисек булды минең был тормош — бик ашыҡтым, күрәһең!.. Үкенеүҙән файҙа юҡ, һуң инде хәҙер. Тик бөтә ҙур тормоштан һуңламаҫҡа кәрәк! Башҡаса юл юҡ.

Мин Надя киткәс, уға хыянат итермен тип ҡурҡҡайным. Киреһенсә, ул минән алыҫыраҡ булған һайын, мин уға тоғороҡ.

Кешеләр минең япа-яңғыҙ ике ҡыҙ менән бергә гонаһһыҙ ғына йәшәүемә шикләнеп ҡуялар. Ә мин улар менән бик матур йәшәйем — улар минең бер туған һеңлеләрем кеүек булып

китте. Тормош ҡына түгел, хатта мин үҙем дә бик ҡыҙыҡлы тойолам. Фәжәп!

Фәниә минең «кельям»ды йыуып бирҙе, китаптарымды рәтләште, миңә хатта күңелле булып китте. Эстән генә мин: «Кеше ғәжәп матур бит!»— тип уйлайым. Кешеләр өсөн йәшәргә лә мөмкин! Кешеләргә тормош нисек кенә рәхимһеҙ булмаһын, кеше үҙенең матурлығы менән барыбер уның бөтә түбәнлектәренән өҫтөн тора!

2 июль.

Мәрйәм апа минең шифырҙарҙы Заһир Исмәғилевҡа һөйләгән дә, ул уларҙы үҙенә һораған. Күрәһең, Мәрйәм апа шифырҙарҙы бик маҡтағандыр инде!..

Кис, Баязит Бикбайҙың «Ҡаһым түрә»һен ҡарарға барғанда, мин үҙемдең «Туған тел»де, «Дан һиңә, дан, Башҡортостан» һәм «Әсәй-Рәсәй»ҙе күсереп алдым да уларҙы Мәрйәм апаға бирҙем.

Ишек алдында Заһир аҙай үҙе осрап:

— Ғарипов ҡустым, килтер шифырҙарыңды!— тине.

— Ярар, — тинем мин. — «Ҡаһым түрә»не ҡарағас бирермен.

Ә үҙем ҡыйманым, Мәрйәм апаға бирҙем дә ҡуйҙым — телəһə нишләһендәр! Заһир Исмәғилев ни тиклем ябай булһа ла, минең өсөн ул Башҡортостандың ғорурлығы, иң матур улдарының береһе. «Салауат» операһы менән ул башҡорт музыкаһында иң беренсе ысын башҡорт батшаһы!

Мин уны күргəндə — донъя яҡтырып, күңелгə рəхəт булып китə. Мин уның менəн сикһеҙ ғорурланам, үҙемдең башҡорт булғаныма шатланам. Салауат увертюраһы минең өсөн һəр саҡ көтөп ала торған милли хистəр байрамы!

Шундай Кешемə мин нисек итеп үҙемдең шифырҙарҙы килтереп тотторайым ти? Уның мин яҙған шифырға музыка яҙып ултырыуы минең өсөн татлы бер хыял ғына! Күңелем ҡурҡа хатта. Әлбиттə, мин үҙемдең яҙғандарҙы башҡаларҙың йырҙары менəн сағыштырып ҡараһам, был эшкə үҙемдең дə көсөм етер кеүек. Минең текстар, сағыштырып ҡарағанда, бер ҙə уларҙыҡынан кəм түгел, хатта яҡшыраҡ та. Лəкин миңə музыка — кеше хисенең иң юғары, иң матур гармонияһы. Музыканы миңə ниндəйҙер ғəҙəттəн тыш кешеләр генə тыуҙыра кеүек тойола. Музыканы мин кеше ижадының, кеше фантазияһының иң юғары бер күренеше итеп тоям. Шуның өсөн дə миңə Чайковский Пушкиндан да юғары һəм бөйөгөрəк.

Бəлки, был тойоу минең музыкала тома наҙан булыуымдандыр? Белмəйем. Ниндəй генə насар композиторға ла мин донъяның иң нескə күңелле бер кешеһе итеп ҡарайым. Хатта

ябай бер ауыл гармунсыһы ла минең өсөн тәбиғәттең ниндәйҙер бер серле мөғжизәһе! Мин уларҙы көнсөл бер яратыу менән яратам.

Лев Толстой композиторҙарҙы, ғөмүмән музыканттарҙы, аҡылға һайыраҡ кешеләр итеп күргән, «музыка притупляет ум» тигән. Бәлки, ул хаҡлылыр. Тик мин бөйөк Толстой менән дә килешә алмайым был урында. Минең өсөн музыканан да аҡыллыраҡ нәмә юҡ кеүек. Музыка тормоштоң иң матур күренеше бит! Ә миңә иң аҡыллы нәмә генә иң матур.

Бәлки, донъялағы бөтә халыҡтар ҙа берәй заман бер телдә һөйләшә башлар, ләкин шул ваҡытта ла һәр бер халыҡтың үҙ моңо һаҡланып ҡаласаҡ.

Ярай, музыка тураһындағы был философия миндә бик оҙон. Берәй саҡ был хаҡта бөтә уйлағандарымды ла яҙырмын, хәҙергә ваҡыт юҡ.

3 июль.

Рафаэль Мәскәүҙән шылтыратты: кисә минең ҡыҙым тыуған! Ләкин был хәбәр минең күңелдә бер ниндәй шатлыҡ та уятманы. Күрәһең, мин бөтөнләй таш йөрәкле кешегә әйләнгәнмен. Башҡа тик Надяның был баланан һау-сәләмәт ҡотолоуы яҡшы тигән фекер генә килде. Бала ла сәләмәт. Тимәк, мин инде ике баланың атаһы һәм миңә 25 йәш!.. Ә Надяға — 24!.. Уға уҡырға, ә миңә яҙырға кәрәк. Ә беҙҙең балаларҙың тыуған өйө лә, бер нәмәһе лә юҡ. Беҙ инде хәҙер дүрт кеше!..

Нисек йәшәргә?

Был хаҡта уйлаһаң, баш ҡата, ә уйламай мөмкин түгел!

Ҡоштарҙың да ояһы бар, ә кешеләрҙең аяҡ һонор мөйөшө лә юҡ. Фәжәп был донъя!..

Бәлки, мин шул хаҡта уйлағанлыҡтан шатлана алмайымдыр?

Мин хатта һуңғы ваҡытта кисергәндәремде яҙа ла алмайым. Ә ни тиклем үҙгәреш минең тормошомда! Ни тиклем ҡыҙыҡлы һәм ҡайғылы ваҡиғалар! Ни тиклем шикләнеүҙәр! Ошо һуңғы ваҡыт эсендә генә минең хатта донъяға ҡарашым үҙгәрҙе. Ләкин был хаҡта яҙаһы ла килмәй, яҙып та булмай һәм ваҡыт та юҡ.

21 август.

Традиция һәм новаторлыҡ

Был мәсьәләлә буталсыҡ күп. Йыш ҡына новаторлыҡ традицияға ҡаршы ҡуйыла. Был формализм!

Традицияһыҙ новаторлыҡтың булыуы мөмкин түгел. Үткән көн бөгөнгөнө әҙерләй. Бөгөнгө иртәгәне тыуҙыра.

Бөтә нәмәлә лә был шулай. Шулай уҡ — поэзияла ла.

Пушкинды уның үҙенә тиклем булған бөтә рус әҙәбиәте тыуҙырған. Карамзин, Державин, Батюшков һәм Жуковский-ҙарһыҙ Пушкин да булмаған булыр ине. Пушкин өсөн Байрон да ижад итергә тейеш булған. Әҙәбиәттә бәләкәй генә урыны булған шағирҙар ҙа яңы ҙур шағир өсөн урын әҙерләшәләр. Был хаҡта Белинский бик дөрөҫ әйткән.

Ысын яңылыҡ, ысын новаторлыҡ бер ҡасан да үткәндең тәжрибәләрен, алдағы быуындың ҡаҙаныштарын кире ҡаҡмай. Был тик нигилистарға ғына кәрәк. Ысын новатор һәр саҡ традицияға бәйле, традицияға тоғро.

Эш тик шунда: ул традицияны ижади үҙләштереп, уны үҙ тәжрибәһе, үҙ ижады, үҙ тормошо менән байытҡтырып, уны артабан дауам итә һәм яңыны, үҙенең киңлеге һәм тәрәнлегенә ҡарап, үҙ заманының талабына ярашлы рәүештә, бөтөн бер эпоха булырлыҡ яңыны тыуҙыра.

Новаторлыҡтың формализм менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Новаторлыҡ яңы йөкмәткене иҫәбенә тыуа һәм был яңы йөкмәткене үҙенә ярашлы форманы ла килтерә, ә форма ғына бер ҡасан да новатор өсөн үҙмаҡсат була алмай. Әйтер фекере, әйтер һүҙе булмаған тормошһоҙ, йәнһеҙ фокусниктар өсөн генә форма үҙмаҡсат, сөнки формализм һәр ваҡыт үҙенән ысын асылыңды, бушлығыңды томалау өсөн кәрәк.

«Немногим избранным доступен язык поэтов и богов» тигән формула үҙе өсөн һәм үҙе кеүек бик аҙҙар өсөн генә ҡыҙыҡ булған графоманға кәрәк. Халыҡ өсөн был мәғәнәһеҙ бер уйын ғына. Халыҡ — бөйөк ижадсы һәм уға ысын ижадсылар ғына кәрәк.

Ялған һәр саҡ ялтырауыҡлы, ә ысын һүҙ һәр ваҡыт ябай һәм теүәл. Бөйөклөк һәр саҡ ябай, аңлайышлы, матур.

Шуның өсөн иң нескә лирик Блок төрлө эстеттар иң тупаç шағир тип иçәпләгән Некрасовтан өйрәнә. Некрасовта — меңмең төрлө тормош тауышы, шиғри интонация, ритм һәм тасуирлау байлығы тупланған.

Ысын шағир үҙ тауышын ҡайҙан таба алһа, шунан ала. Бал ҡорто балды төрлө-төрлө баллы сәскәләрҙән ала. Йүкәнән дә, сағандан да, алманан да, мең-мең төрлө ялан сәскәләренән дә, хатта шайтан таяғынан да!..

Ал әйҙә, бөтәһен ал, тик үҙеңдеке ит, «был уныҡы» тип һинән дә алырлыҡ булһын. «Ҡояш юҡ» тип торма, яҡтылыҡты, ҡояш булмаһа, айҙан ал, ай булмаһа, йондоҙҙарҙан ал, йондоҙҙар булмаһа, яҡтылыҡты хатта ҡуңыҙҙарҙа ла күргә тырыш. Уларҙа ла яҡтылыҡ була. — Баҙлауыҡ тиҙәр ундай ҡуңыҙҙарҙы.— Ҡояш яҡтыһын һуҡыр ҙа тоя, ә бына ҡуңыҙҙар яҡтыһы һәр кемгә лә күренеп тормай. Ә шағир бөтәһен дә күргә, бөтәһен дә белергә тейеш. Күргәндән күҙең һуҡыраймаç бер ҙә, ә күрмәһәң, һуҡырайырға ла мөмкин! Һәр нәмәне күңел күҙең менән күргә тырыш.

«Тыңла, йөрәк, донъя бышылдауын. Һәр һүҙе менән ул һиңә «һөйәм һине» тип бышылдай» (Тагор).

Шағир бына шул донъяның һәр бер тауышына яуап ҡайтарырға тейеш. Сөнки «шағир үҙ күңелен генә тирбәтеүсе түгел, ә ул — донъя яңғырығы»—«Эхо мира» (Горький).

Тотоп ҡал һин донъя тауыштарын. Сөнки ул туҡтап тормай, донъя ул, аяғы талмаç юлсы кеүек, сәләм бирер ҙә — ишетмәһәң — күҙ асып күҙ йомғансы китеп тә барыр. Донъя сәләменә ҡаршы сәләм бирһәң, сәләмеңде ул киләсәккә илтер. Ул тик киләсәккә атлай бит, кире ҡайтмай, кире атламай.

Утыңды алдан тот, күләгәң артта ҡалһын, «кем утты арттан тотоп килә, күләгәһен алдан төшөрөп килә» (Тагор). Күләгәңдән алда йөрө. Быныңөсөн ҡояшҡа ҡарап барырға кәрәк.

Ел — шағир ул — үҙ тауышын табыр өсөн, урман-тауҙар, диңгеҙҙәр өçтөнән оса (Тагор).

Блок үҙ тауышы өсөн Пушкин, Лермонтов һәм Некрасовтарға ғына түгел, хатта күҙгә күренеп тормаған Полонский, Григорьев кеүек шағирҙарға ла бурыслы, үҙ замандашы Брюсовҡа ла бурыслы.

Был хаҡта Блок Брюсовҡа яҙған бер хатында әйтә: «Вы знаете, что я издавна люблю Вашу поэзию, и многим обязан ей как ученик» (Блок, 2 том, 563–сө бит).

Икенсе бер хатында былай ти: «Спасибо Вам за книгу. Перелистываю стихи, давно запечатлевшиеся в памяти, и опять пленяюсь ими. Многое отсюда я узнал первым в новой русской литературе. Многое — всегда со мной...» (Блок, 2 том, 599-сы бит.)

Блок үҙ стилен («стиль, отвечающий теме») шулай тыуҙыра. Тик быны ябайлаштырып аңларға кәрәкмәй. Фекерҙе ябайлаштырыу — фекерҙе үлтереү менән бер!

Я. Полонскийҙың Бунинға булған йоғонтоһон да тикшерергә мөмкин. (Полонский — «Дорога»— Бунин.)

«Ир ирҙән быуаҙый» тигән мәҡәл дә бар бит. Был бик мәғәнәле мәҡәл! Ғөмүмән, мәҡәл мәғәнәһеҙ буламы? Мәғәнәһеҙҙәре лә була шул. Мәҫәлән, Кирәй мәҡәлдәре — «Туҡтатма фонтанды, бәрһен әйҙә!»... һ. б.

Бунин — һүҙ ювелиры! (Горький.)

Бунин — Пушкин традицияһын, бөтә поэзияны декадент-тар, символистар, имажинистар һырып алғанда, иҫ киткес бер ҡыйыулыҡ менән яңы рус поэзияһына килтереп тапшырыусыларҙың береһе.

Новатор «мин новатор» тимәй, ә төрлө Бенедиктовтар, Игорь Северяниндар ғына шулай ти.

Новаторлыҡ — иң яҡшы традицияны үҙләштереү һәм уны, яңы баҫҡыҫҡа күтәреп, артабан дауам итеү. Традицияға, үҙ поэзияңдан тыш, донъя поэзияһы ла, халыҡ поэзияһы ла инә (Маяковский, Есенин, Демьян Бедный, Твардовский, Исаковский, Тихонов).

Халыҡ ижадына оҡшатырға тырышыу — стилизация — халыҡ ижадынан көлөү генә.

«Если молодой писатель не смеет ни на одну минуту забыть, что нет мастера без великого содержания, и должен поэтому постоянно учиться познанию жизни, то он также должен помнить, что параллельно с этим ему надо бороться за чистую, ясную, богатую форму, которая вовсе не дастся ему в качестве бесплатного приложения постольку, поскольку он изучает жизнь». (Луначарский, «Мысли о мастерстве».)

Традиция — для искания нового. (Н. Рыленко, «Традиции и новаторство». «Литература и жизнь» 57, 17.VIII.58.)

22 август.

Көн бушҡа үтте. Төш ваҡытында ғына килеп торҙом. Сәй эстем дә нәшриәткә киттем. Бөтәһе лә элеккесә: Сәләх Кулибай, Зөфәр Фәбсәләмов, Ғ. Байбурин, Шакир Бикҡолов. Маһиҙә юҡ, Трубицын да күренмәй.

Эш бөткәнсе китап магазиндарын барлап сыҡтым да Туманян менән Багрицкийҙың йыйынтыҡтарын һорап алдым, Зөфәр менән «Башкирия»ла ултырҙыҡ. Ул һөйләмәне, күберәк мин һөйләнем. Тәүге мөхәббәт, Марият һәм өйләнеү тураһында. Күптән инде минең бер кем менән дә һөйләшкән юҡ. Нисектер — һөйләйһе килде.

Ете йылдан һуң Мәүлиҙә менән күрешеү. Ҡара ерҙә ятып ҡара айғырҙың аунауы. Һөйләшеү. Шиғырҙар һәм Мәүлиҙәнең аҫылынып үлеүе...

Зөфәр үҙе менән бергә уҡыған ҡыҙҙы яратып йөрөй. Ҡатыны менән бер ниндәй ҙә мөнәсәбәт юҡ. Балаһы ауырыу. Мәсьәлә бик ҡыйын хәлдә.

Бер ниндәй ҙә кәңәш бирмәнем. Тик, уйлап эшлә, тинем.

Ҡайтҡанда Биишевтарҙы осраттым. Фуат, Ләлә. Ләлә иренән айырылып ҡайтҡан. Нәшриәттә эшкә башлаған. Балаһы ауылда. Үҙе ағаһында — Әкрәм менән бергә тора. Конфликт. Был тағы үҙе бер повесть.

Бер ҙә яҡшы хәбәр ишетеп булмай. Һәр кемдең ҡайғыһы, үҙ ауырыуы, үҙенең бәхетһеҙлеге.

Донъя, ғөмүмән, ҡатмарлы һәм буталсыҡ. Хатта шундай уй килә башҡа: «Бәхетлеләр бармы икән һуң был донъяла?»

Минең әле үҙ күҙем менән күргән бәхетле кеше юҡ. Лира композитор Сабитовтарҙың тормошон идеал итеп һөйләгәйне, ләкин мин быға ла ышанмайым. Был бер мещан бәхете генәлер. Сабитов миңә шулай тойола. Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт, үҙен бик юғары тотҡан бер бәндә. Музыкаһында ла мин бер ниндәй ҙә милли бер моң, яңылыҡ тоймайым. Тормош юҡ — формализм ғына бар. Унан һуң — музыка ла цитаталарҙан торорға мөмкин икән — Сабитовты радионан тыңлап шуны белдем. Был, күрәһең, халыҡ ижадын файҙаланыу тип аталалыр инде!..

Әкрәм төшөрөп, еңеләйеп, ҡанатланып ҡайтҡан. Фәриттәрҙә ултырғандар. Мин уның менән рефератты яҙып бөтмәйенсә күрешергә лә ҡурҡа инем. Ләкин — күрешергә тура килде. Әкрәм бик ҙур ғына нотоҡ һөйләп ташланы. Дөрөҫ, бөтәһе лә дөрөҫ. Ләкин минең бер нигә лә ҡул бармай. Күңел төшмәй, бөтә ишеткән был ҡара хәбәрҙәргә иҫем китеп, аптырап тик йөрөйөм. Әхнәф Кирәй минең турала хатта Йоматауға барып Фәриткә һөйләгән. Имеш, мин ҡаршы түгел, ә обком Сайранов, Ғәйнуллин һәм Әхнәф Харис ҡаршы. Ғәжәп, ниндәй кешеләр һуң былар? Нишләргә? Бер нигә лә ҡарамай, миңә ең һыҙғанып эҙерләнергә, уҡырға, шул аспирантураһына инергә, күҙгә күренерҙәй бер эш эшләргә ине.

Юҡ, күңел бармай, хатта был хаҡта уйлауы ла ауыр...

Бына быларҙы иҫерек баш менән ҡайтып яҙып ултырам. Ә күңелдә ниндәйҙер бушлыҡ — төпһөҙ бер бушлыҡ. Бер ниндәй ҙә дәрт юҡ, хатта теләк юҡ. Юҡ, былай ярамай. Иртәгәнән башлап эшкә тотонорға кәрәк. Рефератты яҙырға ла — өндәре тығылһын! — немец теленә йәбешергә кәрәк.

Бер аҙ йәшәрлек аҡса булды, көн-төн ултырып эшләргә мөмкин хәҙер. Тик ваҡыт бик аҙ ҡалды инде. Надя ла килеп етер. Уҡыуын ҡалдырмаҫҡа кәрәк. Салауат ауылда тороп торор әле. Китапҡа аҡса алһам, инәйгә бер аҙ ебәрермен. Ярҙам

итеп булмай. Надяның әсәһе лә ауыр хәлдә... Быйыл бер тин ярҙам итеп булманы. Эх, тормош, что за тормош был?

Аңламаҫһың, белмәҫһең... йә, ярай...

23 август.

Йоҡонан тороуға Марат килде. Төш еткәйне инде. «Әйҙә, Ҡыйғыға китәйек, Рафаэль саҡырҙы»,— ти. Башта мин дәртләнеп киттем. Әллә йөрөп, елләп килергәме?..

Марат командировка алырға китте. Мин ике ут араһында тороп ҡалдым. Барырғамы, юҡмы? Барһаң, эш ҡала һаман. Ҡыйғыға барып еткәс, өйгә лә һуғылмай булмай. Өйгә, ҡайтҡас, Надяны ла алып килмәй булмай. Барыбер бер нисә көндән уға килергә кәрәк. Ә минең эш һаман ҡуҙғалмай... Юҡ, Надя Салауатты ҡалдырып үҙе генә килер. Бер аҙым да сығып йөрөмәҫкә кәрәк!..

Рафаэль көтәлер? Хәйер, ниңә көтөргә уға мине? Беҙҙең арала хәҙер ни бар? Тик үткәндәр генә. Йәшлек яҡынлығы ғына. Хәҙер инде аралар алыҫайҙы, дуҫлыҡ юғалды, уртаҡ фекерҙәр ҙә ҡалманы. Ул яңы дуҫтар тапты үҙенә. Беҙҙең яҡын булыуға бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ инде хәҙер. Әҙәбиәт? Әҙәбиәт уға үҙенсә кәрәк, миңә үҙемсә кәрәк. Мине ғазаплаған нәмәләр уға бер ни ҙә түгел. Ҡайғыларыбыҙ, маҡсатыбыҙ уртаҡ түгел беҙҙең. Ул — әҙәбиәттә, ә миндә — әҙәбиәт. Бөтә ҙурлығы, бөтә ваҡлығы менән! Әҙәбиәттең ҡара эштәре лә минеке. Миңә һәр бер корректура өсөн көрәшергә кәрәк, һәр бер һүҙҙе күтәрергә кәрәк. Башҡорт әҙәбиәте башҡортса булырға тейеш. Был миңә, минең өсөн — хәҡиҡәт. Бына шул иң ябай хәҡиҡәттә бөтә ҡаршылыҡтар килеп сыға ла беҙҙең. Ә ул, нисек кенә яҙмаһын — башҡорт әҙәбиәте тип янмаясаҡ. Был бер уның ғына бәләһе түгел. Беҙҙең әҙәбиәттең аристократтары байтаҡ. Ә эш эшләргә тиһәң, улар әҙәбиәт тураһында ҡайғыртып, ус аяһындай мәҡәлә лә яҙмаҫтар. Быны инде мин беләм. Яҙһалар, үҙҙәрен яҡлап ҡына яҙырҙар, йә яҙҙырырҙар. Яҙҙырырҙар ҙа «холуй» тип көлөрҙәр... Бына шул ғына. Ғөмүмән, был бик ҡатмарлы мәсьәлә.

Уҡырға кәрәк — шул ғына. Башҡаса көрәшеү мөмкин түгел. Киләсәк эш өсөн уҡырға кәрәк.

Ләкин бөгөн дә уҡып булманы. Марат урап килгәс, яртыны алып ултырҙыҡ. Туҡайҙы уҡыныҡ, Цвейгты уҡыныҡ та, ул урамда «тәртип һаҡларға», ә мин «тәртип боҙорға» киттем. «Октябрь»ҙә яңы картина ҡараным. «Когда чувства побеждают рассудок». Ярайһы ғына, бик тормошсан картина. Ҡайтҡанда тағы Маратты, Булатты осраттым да «Стилягалар донъяһын» ҡарарға киттем. Урамдан төрлө ҡыҙҙарҙы, иҫеректәрҙе, балаҫағаны тотоп индерәләр ҙә һорау алалар. Йәштәр араһындағы

боҙоҡлоҡҡа комсомол походы! Яҡшы! Ләкин ысын көрәш юҡ, ысын яныу юҡ. Беҙҙең агитаторҙарҙан милиционер яҡшыраҡ эшләй. Матур ғына кейенгән ҡыҙҙарға Б.: «стиляга булыу оят түгелме?»— тип нотоҡ һөйләй. Үҙенең бөтә һын-ҡиәфәте, һөйләүе, өҫ-башы кире ҡаҡсытып тора. Исмаһам, аҙнаһына бер сәсен генә тарап йөрөһәсе! Ултырған өҫтәл эргәһендә («Родина» кинотеатрының уҡыу бүлмәһендә) үҙе бырлатып тәмәке тартып ултыра, үҙенең сәсе ялбырҙап тора, ботинкаһы батҡаҡҡа сумып ҡатып бөткән — үҙе нисек итеп ысын культуралы булырға өйрәтә. Күңел болғандырғыс, уҡшытҡыс бер демагогия! Әйе, бындай демагог йөҙ стиляганан да хәтәрерәк!

Аҙаҡ үҙе ҡайҙалыр Иҙел буйындағы өйҙәрҙең береһенә — аулаҡҡа китте. Икенсе ҡыҙҙарға!.. Улар ниндәй һүҙ һөйләйҙер — быныһы инде уның «шәхси эше»— ҡараңғы... Бөтә бысраҡлыҡ күберәк ҡараңғыла эшләнә бит?!.

Бына һиңә шағир, бына һиңә әҙәбиәтсе! Һинең дуҫың да булырға мөмкин, бер көн килеп, һине һатырға ла мөмкин. Уйлап ҡараһаң, ниндәй күңелһеҙ хәл!.. Ләкин беҙ быға күнеккәнбеҙ, ғәҙәти хәл итеп күргә өйрәнгәнбеҙ. Етмәһә, теләктәшлек белдерәбеҙ. Был ниндәйҙер егетлек!.. Бына шундай егеттәр инде донъяны, тормошто, йәшлекте ҡап-ҡара дегеткә буяп йөрөйҙәр ҙә. Берәүҙәр асыҡтан-асыҡ, икенселәр төрлө романтика ҡатыштырып, хатта быға үҙҙәре лә ышаналар...

Тормоштоң бәләкәй генә картиналарынан был «тормош күренештәре»...

24 август.

Төндә И. Груздевтың Горький тураһындағы китабын ҡарап сыҡтым. Материалға бай, ҡыҙыҡлы китап, ләкин тәрән түгел. Тәрәнлек — тик Горькийҙың үҙендә, уның үҙ һүҙҙәрендә. Китаптың яртыһы Горькийҙың автобиографик әҫәрҙәренән, мәҡәләләренән, хаттарынан һәм төрлө кешеләрҙең Горький тураһындағы иҫтәлектәренән килтерелгән өҙөктәрҙән тора. Цитаталар йыйынтығы! Шулай ҙа ғалим йәки әҙип булырға мөмкин... Үҙ фекерең, үҙ фантазияң, үҙ тормошоң булмаһа ла йәшәп була, күрәһең. Әлбиттә, әҙәбиәт һәм сәнғәт тураһында Стефан Цвейг кеүек һөйләргә лә, янырға ла, эҙләнергә лә мөмкин. Ә һуңынан, үҙең теләгән дөрөҫлөктө, матурлыҡты тапмаһаң, үҙ-үҙеңде атып үлтерергә лә ярай. Тик туҡтап ҡына ҡалма. Ярһыған ат кеүек сабып бар, бар ҙа — сәсрәп барып төш! Йә һандуғас кеүек һайра, һайра ла — йөрәгең ярыл да үл! Был хатта матурыраҡ! Рухың һинең алға китә, ә үҙең —

юғалаһың да ҡалаһың. Маяковский, Есенин, Фадеев — улар ҙа бар...

Төн менән көн буталды. Башҡа әллә ниндәй уйҙар килә. Күңелдә буталсыҡ хистәр. Ваҡыт аҙ ҡалды. Өлгөрөргә кәрәк. Кешеләр ҡамасаулай — эшләргә ултырам ғына тигәндә, Рауил килде, сәй эсте, газета уҡырға тотондо. Уға бөгөн ял. Кешеләрҙең ял көндәре була, һәм һине лә улар ял итә тип уйлай!.. Унан Диҡҡәт Бураҡаев килде —аҙыраҡ һөйләшер һүҙҙәр ҙә бар уның менән. Ләкин һөйләүҙән ни мәғәнә? Күпме ғүмер һүҙ һөйләп үтә! Етмәһә, шул бер балыҡ башы инде... Тағы сәй ҡуйҙым. Ярай әле — бөгөнгә аҡса бар — һый юҡ тип әйтерлек түгел. Унан һуң ашханаға киттек. Көнөнә бер ҡабат йылы аш та кәрәк бит ҡорһаҡҡа. Ашаныҡ. Рауил менән Диҡҡәт киноға китте. Мин ҡайтып эшкә ултырғайным, бөтә Биишевтар килеп инде — Әкрәм, Фуат, Фуаттың ҡатыны — Сажидә апа ике балаһы менән һәм Ләлә. Өйгә балалар тауышы тулды. Күңелле лә, күңелһеҙ ҙә; минең баламдың тауышы етмәй бында; минең ҡатыным юҡ янымда. Сәй яһауҙы Ләләгә ҡуштым. Ҡасандыр ул матур ғына бер ҡыҙ ине. Ҡайһы саҡта беҙ бер партала ултырып уҡый торғайныҡ. Хатта мин уны яратып та йөрөй торғайным булһа кәрәк. Үҙҙәренең йортонда, ҡасандыр бик йәш саҡта, ул миңә шәм яҡтыһында ҡыуыш эсенә урын йәйеп бирҙе. Әйтерһең дә ҡыуыш эсен шәм түгел, ул яҡтырта ине. Шундай матур ине ул төн!.. Һандуғастар һайрай, сиңерткәләр сырылдай, Эйек буйына томан ятҡан. Дала төнөнөң иҫ киткес үҙ матурлығы, үҙ моңо бар. Таң атҡансы мин ҡыуыш ауыҙынан башымды сығарып, күк йөҙөн ҡаплап алған йондоҙҙарға ҡарап яттым. Арала бер йондоҙ айырыуса балҡып емелдәй һәм мин шул йондоҙҙо сәскә кеүек үҙемә өҙөп алғым килә... Ләкин — теймәнем уға. Миңә түгелдер, тинем. Ләлә ҡалды, аҙаҡ уҡытырға китте, иргә сыҡты, ире менән, нишләптер, бергә йәшәй алманылар. Бер балаһы менән Ләлә Өфөгә ҡайтты. Нәшриәткә эшкә инде. Хәҙер ул ҡыҙ — яңғыҙ әсә — бына минең алда ултыра, сәй яһай. Үҙе ни уйлайҙыр, ләкин мин уның тураһында уйлайым. Был да тормош китабының бер бите бит! Тормош, тормош!

Күмәкләп урамға сыҡтыҡ. Көҙ һулышы килә. Һары япраҡтар күбәйгәндән-күбәйә бара. Ләкин тәбиғәттә әле матурлыҡ бөтмәгән. Ғөмүмән, тәбиғәттә ул бөтмәйҙер. Көҙҙөң яҙы бар, ҡыштың йәйе бар. Был — мәңгелек. Матурлыҡ — ғәрәп күңелендә, ти Горький. Ләкин бөтә ғәрәп тә ике йәшәмәй шул. Кеше ғүмере бер генә — матурлығы ла уның бер генә — йәшлек, кеше йәшлеге ҡабатланмай. Япраҡтар миңә шул хаҡта шыбырлай... Әкрәм менән хикәйәһе тураһында һөйләштек. Бөгөн уның тәүге әҫәре баҫылып сыҡты. Бөгөн ул бәхетле.

Аспирантураға ла сақырыу ҡағыҙы алған. Ә хикәйәләр яҙасаҡ ул. Бик матур теле. Ысын башҡорт теле бар уның, фантазияһы ла етерлек. Әйтер һүҙе лә күп. Ә хикәйәләге характерҙар, ваҡыты еткәс, тыуасаҡ улар. Ғәжәп — бөтә Биишевтар ҙа яҙа торған кешеләр.

«Идиот»ты ҡарарға иткәйнек, билет булманы. Ҡайтып «Сурағол»ға тотондом. Иҫ киткес бай теле!..

25 август.

Көндәр гел ямғырға китте. Болот та болот. Һыу инеп булмай. Офицерҙар йортона барып ашандым да Ағиҙел буйына төшөп киттем. Көн кисләп килә. Ҡояш ҙур бер ҡыҙыл шар кеүек, Ағиҙел күперенә аҫылынып торҙо ла тау артына тәгәрәп төшөп тә китте. Бер аҙ Иҙел ситендә ултырҙым да мин дә һыуға сумып киттем. Һалҡын! Бөтә тән ҡатып, нығып китә. Рәхәт тә. Һыу һағындырып та өлгөргән. Тик һыуыҡ үтмәһә ярар ине. Бер ары, бер бире йөҙҙөм-йөҙҙөм дә, зарядка эшләп, баҫҡыстан йүгереп менә башланым. Тәнгә бер аҙ йылы йүгергәндәй булды. Һыу инеүселәр юҡ, тик кәмәлә йөҙөүселәр, балыҡсылар ғына бөгөн Иҙелдә.

Ҡайтҡас, Плехановтың «Адресһыҙ хаттар»ын ҡарап яттым. Ныҡлап, яңынан уҡып сығырға кәрәк булыр. Бөтәһе лә онотолған тиерлек.

Нисек кенә рефератҡа тотонорға? Бер ҙә ҡул бармай бит. Әллә нишләһәм әле мин. Ни уҡып булмай, ни яҙып булмай. Кисәге төнө буйы татар мәҡәлдәрендә ултырҙым. Татар мәҡәлдәре биш йөҙгә лә тулмай. Минеке ике меңгә етеп килә! Ҡайһы бер мәҡәлдәрен күсереп алдым. Ләкин быларҙың күбеһе миндә бар. Китапта баҫылған мәҡәлдәрҙе уҡығанда, бер шик тыуа: беҙҙә лә, татарҙа ла «мәҡәл яһау һөнәре» бар. Ысын халыҡ мәҡәлдәрен йыйыу урынына фольклористар үҙҙәре «күт аҫтынан» мәҡәл сығарып ултыралар. Ярай ҙа әле мәҡәлдәре мәҡәл булһа, әллә ниндәй туҙға яҙмаған «афоризмдар» килеп сыға: «Йылан менән дуҫ булма — ағыуланырһың», имеш! Шул мәҡәл булдымы инде? Крылов баҫняһының морален тәржемә итеп алалар ҙа, бына һиңә мәҡәл килеп сыға. Крылов бындай кәсепте белгән булһа, моғайын, мәҫәл яҙыр ине был хаҡта! Ярай әле Крылов урынында Михалков ҡына! Юҡһа, беҙҙә шундай тапҡыр мәҡәл сығаралар — иҫ китә: яҙ етһә — ҡар ирер, көҙ етһә — ҡар яуыр! Асыҡһаң — ашарға кәрәк! «Ну и логика!» Кирәйҙең «мәҡәлдәре» ҡайҙан тиһәм, ул да, меҫкенең, татарҙан урлай икән!..

Бер көн үҙенә был хаҡта әйткәйнем, яратманы — хәҙер шуны эсендә һаҡлап йөрөй. «Был юл менән китһәң, ҡустым, бик

ҡыйынға тура килер үҙеңә»,— ти. Күрәһең, тура әйткән туғанына ярамай.

Мәҡәлдәр тураһында мәҡәлдәр рустарҙа күп: Пословица недаром молвится. Без пословицы не проживешь. Добрая пословица не в бровь, а прямо в глаз. На пословицу ни суда, ни расправы. Пословица несудима. Старая пословица век не сломится. Пословица плодуща и живуща. Не всякое слово пословица. На всякое слово есть пословица. Пословица не покорница, а с нею добро. На твою спесь пословица есть. Не всякая пословица при всяком молвится. Хороша пословица в лáд да в масть... һ. б. Мәҡәлдең үҙе тураһында Далдән әллә күпме мәҡәлдәр табырға була.

Ләкин беҙҙә мәҡәлдәр ни тиклем генә күп булмаһын, мәҡәл тураһында мәҡәл юҡ, минеңсә. Сөнки «мәҡәл» һүҙе — беҙҙең һүҙ түгел. Мәҡәл ғәрәп һүҙе, беҙгә татарҙар аша ингән китап һүҙе бит. Халыҡта был һүҙ әлек бөтөнләй ҡулланылмаған булырға тейеш. Сөнки ул һуңыраҡ килеп ингән беҙгә. Ә мәҡәлдәр быуаттар буйы тора, эшләнә, юныла, ҡойола. Шунлыҡтан «мәҡәл» һүҙенә мәҡәл дә юҡ тиерлек. Сөнки ул һүҙҙе берәй бабайға әйтһәң, аңламай ҙа тора әле ул. «Йә, бабай, берәй боронғолар һүҙе, ололар һүҙе әйтеп ташла әле»,— тиһәң генә аңлай ул мәҡәлде. «Һүҙ ыңғайында ғына сыға бит ул, аны ҡалайтып әйтәһең инде, кәрәк саҡта иҫкә төшәме һуң ул»,— тип ул үҙе лә һиҙмәҫтән берәй мәҡәл әйтеп ысҡындыра шунда.

Ә Кирәй мәҡәлде руссанан тәржемә итеп, йә үҙе сығарып «мәҡәл» төҙөй ҙә, бына мәҡәл, тип уҡыусыларға тәҡдим итә. Ләкин быны «халыҡ ижады» тип атаһаҡ, дөрөҫ булырмы һуң? Ниңә үҙебеҙҙең ижадты «Халыҡ ижады» тип атарға? Быға әллә халыҡ мохтажмы? Ниңә булмаған нәмәне бар тиергә? Быныңменән беҙ халыҡ ижадын кәмһетәбеҙ генә, ә бер нисек тә байып тормайбыҙ. Алтынға ниңә баҡыр буярға? Руста мәҡәл тураһында мәҡәл бар икән, беҙҙә лә булған һүҙ түгел әле ул. Рустарҙа «самовар» булған, беҙ уны «самауыр» тип алғанбыҙ. «Горшок» «көршәк»кә әйләнгән. «Деготь» — «дегет»кә. «Арыш» — «рожь», «өҫтәл» — «стол»дан, «ҡуласа» — «колесо»нан. Һәр нәмәнең тарихы бар. Һәр нәмәнең исеме тураһында ла уйлап ҡарарға кәрәк. Рустарҙа булмаған нәмә беҙҙә булырға мөмкин. Һәм ул шулай ҙа. Тик дөрөҫөн әйтергә кәрәк. Рустарҙа ла төрлө төрки телдәренән ингән һүҙҙәр күп.

Ә «пословица» бик боронғо рус һүҙе. Был хаҡта уларҙың мәҡәлдәре үк әйтеп тора. Был һүҙ Далдән әллә ҡасан элек булған. Даль уны «по́слову» тигән һүҙ эргәһенә (гнездоһына) индерә.

Посло́вье, пословка — присловье или поговорка, оборот речи и способ выраженья. Пословица — краткое изреченье,

поученье, более в виде притчи, иносказанья, или в виде житейского приговора; пословица есть суть языка, народной речи, не сочиняется, рождается сама; это ходячий ум народа; она переходит в поговорку или простой оборот речи, а сама о себе говорит: «Пословица не даром молвится. Пословица не на ветер молвится!!!»

Кирәй журналға мәкәлдәр тураһында мәкәләһен килтергәндә бына шул хаҡта бәхәсләшкәйнек. Хәҙер ҙә мин үҙемде яңылышҡанмын тип иҫәпләмәйем. Тик мине Кирәйҙең тоны, һүҙҙәре ғәжәпләндерҙе. Ул миндә әллә ниндәй дошманын күрҙе. Хәҙер бына, уңайы тура килгәндә, нисек булһа ла миңә аяҡ салырға тырыша. Йәнәһе мин тәкәббер, нигилист, ә ул үҙе инде — был эштә теше сыҡҡан белгес! Уға ҡаршы минең кеүек малай-шалай һүҙ ҙә әйтергә тейеш түгел.

Ярай, ҡарап ҡарарбыҙ. Тик рефератҡа был хаҡта яҙыу ярармы икән? Бәхәсләшәһе нәмәләр байтаҡ. Йырҙар тураһында ла һүҙ әйтәһе бар.

Бына тураһын әйтһәң инде, рефераттың үтмәүе лә бар. Улар бит түрә!..

26 август.

Надя ҡайтты! Салауат ауылда ҡалған. Өйгә йән керҙе, тормош башланды. Күңелдәге бушлыҡ бөттө. Йәтим бала инәһен тапҡан кеүек булдым.

Ҡыҙыҡ. Тимәк, беҙ бер-беребеҙҙән башҡа йәшәй алмайбыҙ. Был яҡынлыҡ тик айырылып торғанда ғына беленә. Нисә ҡабат инде быға яңынан ышанырға тура килде.

Башта, нисектер, быларҙың бөтәһе лә сәйер төҫлө. Хатта бер-береңдән ятһынған кеүекһең, һуңынан — бөтәһе лә элекке кеүек. Тормош яңынан башлана. Мин һаҡлаған бөтә тәртип юҡҡа сыға һәм был тәртипһеҙлектә ниндәйҙер тәртип бар. Йылылыҡ тула өйгә, һәр нәмә терелә, йәшәй башлай, нурға сума.

Ләкин мин быға тиҙ генә күнегеп етмәйем шикелле. Һәр бер яңы хәрәкәткә эстән генә ҡаршы торола, ризаһыҙлыҡ белдерәһе килә. Яңғыҙлыҡ, күрәһең, кешенең бөтә кешелеген һыуыта.

Юҡ, һүҙҙәр дөрөҫ сыҡмай. Дөрөҫөрәге, был яңылыҡты яҙырға һүҙҙәрем юҡ минең.

Бергә ҡалаға сыҡтыҡ. Урамдан атлауы ла нисектер башҡаса: еңел һәм уңайһыҙ кеүек... Кис кенә бөтәһе лә үҙ урынына ултырып бөттө. Мунсаға барҙыҡ, Офицерҙар йортонда ашап сыҡтыҡ та өйгә ҡайттыҡ. Бер ҡайҙа ла бараһы килмәй. Уҡыйһы ла килмәй. Тиҙерәк бөтә донъяны онотоп бергә, бер тәнгә әйләнәһе генә килә һәм утты һүндерҙек...

Бик һағындырған. Тирләнек, яндыҡ. Надя иҙерәп йоҡлап китте, мин утты яндырып, яңынан Далгә тотондом. Йоҡо килмәй, уҡыйһы ғына килә.

Бөтә был яңылыҡты шундай матур, шундай дөрөҫ итеп һүрәтләйһе килә. Ләкин минең һүҙҙәрем етмәй һәм был хаҡта яҙып та өйрәнелмәгән... Фөмүмән, шатлыҡ һәм бәхет, тыныслыҡ һәм рәхәтлек тураһында беҙ яҙа ла белмәйбеҙ. Кеше ҡайғыға ғына күнеккән. Кешегә ҡайғы ғына шифри. Был әҙәбиәттә лә, тормошта ла шулай. Ғәжәп күренеш был. Был хаҡта минең күп уйлағаным бар. Ләкин ни өсөн бының шулай булыуын һаман да төшөнөп етә алмайым. Бәхетте тойорға, күрергә генә мөмкин, ә күрһәтеү ауыр...

27 август.

Шул уҡ хистәр, шул уҡ уйҙар. Бергә ашау, бергә йөрөү, бергә йоҡлау. Тик көндөҙ генә мин бер үҙем. Надя, мин эшләһен өсөн, үҙ эштәре менән ҡалаға сығып китте. Библиотеканан «Йәш гвардия»ны алып ҡайтҡан, баҙарҙан — помидор, ә магазиндарҙа йөрөп әллә күпме «кәрәкле нәмәләр» күргән!.. Ләкин беҙҙең аҡса бик иҫәпле. Китап сыҡмайынса тороп, бер ҡайҙан да килер ере юҡ!..

Кис «Родина» театрында «Алтын симфония» тигән австрия картинаһын ҡараныҡ. Тик картинаны ҡарауҙан бигерәк билет табыу ҡыҙыҡлыраҡ булды. Билеттар һатылып бөткән. Ләкин бер картинаны күрәйем тигәс, күрмәйенсә ҡайтҡы килмәй. Һәр кешенән «артыҡ билетығыҙ юҡмы?» тип һорау алаһыҡ. «Юҡ», тиҙәр. Шулай ярты, бер сәғәт буйы йөрөйһөң театр алдында. Был үҙе бер картинаға әйләнә! Өмөт, шатлыҡ, үкенеү, асыу килеү — бөтәһе лә кисерелә... Һәм бына — ике билет!.. Ләкин картинанан күңелдә бер ни ҙә ҡалмай.

28 август.

Ярай, рефератҡа тотонорға кәрәк. Нисек башларға? Нимәнән? Мөхтәр Сәғитов менән бергә яҙа башлаған мәҡәләне дауам итергәме, әллә бөтөнләй башҡаса яҙырғамы? Нисек яҙһаң да шул уҡ бер фекер, бер нәмә — «Йыяйыҡ башҡорт халыҡ ижадын, өйрәнәйек уны һәм үҙебеҙ ижад итәйек». Төп фекер шул. Шуны киңәйтеп, хәҙерге башҡорт фольклористикаһының торошо тураһында яҙырға кәрәк. Тәүҙә башҡорт халыҡ ижадының байлығын, күп төрлө булыуын, үҙенсәлеген, әһәмиәтен билдәләргә һәм уны йыйыуҙың, өйрәнә башлауҙың тарихына туҡталырға һәм хәҙерге эште асыҡларға, «Башҡорт халыҡ ижады»ның ике томына ҡарата ҡайһы бер фекерҙәр әйтергә һәм артабан эшләү өсөн үҙемдең тәҡдимде индерергә

кәрәк. Ҡыҫҡаса план шулай тора. Ләкин ваҡыт бик аҙ ҡалды инде. Ярай, хәйерле булһын — башлайым.

26 сентябрь.

Бына бер ай инде мин бер туҡтауһыҙ фольклор менән һаташам. Башҡорт халыҡ ижады тураһында ни яҙылған — шуларҙы уҡыйым, ҡулға ни эләгә — шуларҙы аҡтарам. Китапханаларҙа, китап палатаһында иҫке каталогтарҙы, газета һәм журналдарҙы аҡтарам. Ләкин библиография, картотека эше беҙҙә ифрат насар тора икән, бөтә нәмә ташландыҡ хәлдә. Күп нәмәләр 1937 йылдан һуң юҡ ителгән, ә булғандарына бер ниндәй ҙә иғтибар юҡ. Китап палатаһында хатта газеталарҙың подшивкалары ла тулы түгел. Һуғыш ваҡытында методик кабинеттың директоры булып торған бер бәндә газета подшивкаларын урлап, һатып эскән, һәр газетаны спекулянттарҙан өсәр һумға һаттырып, тәмәке ҡағыҙы итеп яндыртҡан. Шулай итеп, был әҙәм аҡтығы тарихты яндырған!.. Хәҙер инде уларҙы башыңды ташҡа ороп илаһаң да таба алмаҫһың!.. Булһа тик Мәскәүҙә, Ленин библиотекаһында ғына булырға мөмкин. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының Мөхәмәтша Буранғол яҙып алған бер вариантын 1940 йылғы «Октябрь» журналынан күсереп алдым. Ә шул уҡ Буранғол тарафынан яҙып алынған икенсе бер варианты «Башҡортостан» газетаһында булған, ә уның башы шул яндырылған подшивкаларға эләккән. Был бик ҡыҙыҡлы вариант булырға тейеш. Ә Нәҡи Иҫәнбәт тарафынан яҙып алынған өсөнсө бер вариантын татарса «Коммуна» газетаһынан таптым. Ләкин был вариант бөтөнләй башҡаса, һәм ысын халыҡ эпосы булыуҙан алыҫ тора. Нәҡи Иҫәнбәт уны, Татарстанға киткәс, татар халыҡ эпосы итергә маташып ҡараған булһа кәрәк һәм бөтә эште һәләк иткән. Быныңарҡаһында, Үҙәк комитеттың ҡарары буйынса башҡорт эпосы ла юҡҡа сыҡҡан. Был ҡарарҙан һуң эпостарҙы йыйыу һәм өйрәнеү эше бөтөнләй туҡтап ҡалған. Иҫ киткес ҡыҙғаныс хәл... Беҙҙең «ғалимдар» бынан һуң эпоҫҡа бөтөнләй ҡул һелтәгәндәр. Белмәйҙәр ҙә, күрмәйҙәр ҙә хәҙер. Белмәгәндең беләге тыныс бит. Ләкин фольклористикаға был бик ҙур зыян килтергән. Бынан тик беткә үсеген тунды утҡа яғыу ғына килеп сыҡҡан. Кемдеңдер иҫ киткес ғәмһеҙ ҡулы менән ҡаш ҡуям тип күҙ сығарылған!

Бына бер ай инде мин шул эпостар менән һаташам. Уларға ҡағылышлы мәҡәләләрҙе аҡтарам. Ни тиклем уларҙа вульгар социология, демагогия тулып ята!..

Төп тонды бында Шәрки ҡарт биргән булһа кәрәк. Уға төрлө Зөлкәрнәевтар, Мамлеевтар ҡушылған, хатта үҙенең аҡылы, фекере, халыҡ ижадын нормаль тойоуо булған Рәшит

Ниғмәти ҙә ашаған табағына төкөргән! Ә Харис кеүек ҡурҡаҡ ғалимдарға был етә ҡалған — һаман да шул бер балыҡ башын сәйнәй. Бер ҡурҡҡан эт өс көн өрә, ти, ә ул ғүмер буйы өрәсәк. Үҙе лә ашамаҫ, кешегә лә ашатмаҫ.

Эпостарға бөтөнләй яңыса, эпостарҙың үҙҙәренән сығып ҡарарға кәрәк. Эпос тарих түгел, эпос геройҙарын тарихи шәхестәр менән бутарға ярамай. Тарихи шәхестәрҙе халыҡ ижадында булған герой менән бер итеп ҡарау тарихтың үҙен дә боҙоуға килтерә һәм халыҡ ижадының асылын да аңламауға йәки кире ҡағыуға килтерә.

Эпостың тыуыуы тарихи, ләкин эпостан ҡойоп ҡуйылған марксистик тарих төҙөү тарихта күрелмәгән хәл. Эпостарҙы ныҡлап өйрәнмәйенсә, уларҙың асылына, художество үҙенсәлегенә ныҡлап төшөнмәйенсә, был мәсьәләне хәл итеп булмаясаҡ.

Эпостың барлыҡҡа килеүе, уның үҫеш тарихы, уның ниндәй ерлектә, ниндәй ваҡытта тыуыуы һәм артабан ниндәй мотивтар менән үҙгәреүе һәм кемдәр ҡулынан үтеүе — бына быларҙың бөтәһен дә өйрәнергә, белергә, башҡа халыҡтарҙың эпостары менән сағыштырып, шулай уҡ бер үк эпостың бер нисә вариантын тикшереп ҡарарға кәрәк. Шунан һуң ғына дөйөм фекергә килергә мөмкин.

Башҡа республикаларҙа үҙ эпостарын өйрәнәләр, ә беҙ һаман да ҡул ҡаушырып ултырабыҙ. Ә ваҡыт үтә, үҙенекен итә, шулай итеп бик күп нәмәләрҙе беҙ юҡҡа сығарабыҙ.

Башҡа жанрҙарға ҡарата ла бик тар ҡараштан сығып киләбеҙ. Халыҡтың шундай ҙур, шундай бай, быуаттар буйына ижад иткән коллектив ижадын бер нисә кешенең монополияһына ғына тапшырып ҡуйыу мөмкин түгел. Был эшкә күмәклəп тотонорға кәрәк. Бер аҡыл яҡшы, ләкин ике аҡыл яҡшыраҡ. Ә ҡырҡ кешелә ҡырҡ төрлө аҡыл бит.

Бына бөгөн нәшриәт Кирәй Мәргәндең баҫырға тапшырған мәҡәлдәр, әйтемдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр йыйынтығын, йыйынтыҡҡа ҡарата Баязит Бикбай менән Шакир Насыров яҙған рецензияларҙы ҡарап ултырҙым.

Йыйынтыҡты был килеш кенә сығарыу ярамаҫ ине. Рецензенттар әйткән фекерҙәр бик ҡиммәтле. Ә институттың был эште бер кешегә генә тапшырып ҡуйыуы ҡыҙғанысыраҡ.

Әлбиттә, бер кеше лә байтаҡ эш эшләргә мөмкин, кәрәкле генә фекерҙәр ҙә әйтергә мөмкин. Ләкин төҙөүсе лә, әҙерләүсе лә, редакторлаусы ла бер кеше булһа, йыйынтыҡты асып ебәргән мәҡәләне лә шул уҡ кеше яҙһа, был, әлбиттә, бер яҡлыраҡ килеп сыға.

Быны мин үҙем өсөн (хәҙергә) ныҡлап асыҡларға булдым.

Тәүҙә Кирәйҙең мәҡәләһе тураһында. Мәҡәләһен ул «Тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр хаҡында бер нисә һүҙ» тип атай. Хатта бына шул мәҡәләнең исемендә генә лә уйлап еткермәү бар. Йыйынтыҡ үҙе лә «Башҡорт телендә тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» тип атала. Был дөрөҫ түгел, минеңсә. Сөнки мәҡәлдәр йыйынтығы — һүҙлек түгел. Был исемде фольклорист түгел, лингвист ҡына ҡуйыр ине. Бында төп иғтибар мәҡәлдәргә бирелергә тейеш.

Мәҡәләнең башланып китеүе лә бик тоҡон ғына. Минеңсә, иң тәүҙә мәҡәлгә жанр булыу яғынан фәнни төшөнсә бирергә кәрәк ине. Нимә һуң ул мәҡәл? Бына шул һорауға яуап табаһы килә. Ә Кирәй тота ла һәр кемгә билдәле булған дөйөм хәҡиҡәтте әйтә: 1) «Мәҡәлдәр — халыҡ телендә быуаттан-быуатҡа күсеп килгән гүзәл хазиналарҙың береһе булып тораҙар». Был асыҡ ишекте асыуҙан башлау кеүек. 2) «Тулы бер мәғәнә аңлатҡан фекерҙе йыйнаҡ, оҫта, тапҡыр итеп әйтеп биргән һәм телдән-телгә күсә килә шымара-шымара художество яҡтан теүәлләнгән афористик фразалар булып ойошҡан мәҡәлдәрҙә халыҡ үҙенең быуаттар буйына һуҙылған тормош тәжрибәһен, яҡшы идеалға булған ынтылышын сағылдыра». Бына һиңә һөйләм! Әллә ниндәй тавтология был.

Беренсе һөйләмгә бер ниндәй ҙә логик бәйләнеш юҡ. Бер атыуҙа ике ҡуянды үлтерә Кирәй Мәргән! Унан һуң һүҙҙәр, бүрек өҫтөнә бүрек кейгән кеүек, ҡат-ҡат эпитеттар менән өйөлгән. Һәм автор һөйләменең аҙағын уйлап та бөтөрмәгән:«Яҡшы идеал», ти. Идеал насар буламы һуң инде? Идеал бит үҙе үк иң яҡшы, яҡшының яҡшыһы, иң юғары камиллыҡ (совершенство) тигән һүҙ? Һәм өсөнсө һөйләм «Бөйөк яҙыусы А. М. Горький әйткәнсә, мәҡәлдәр «хеҙмәтсән халыҡтың тормош һәм социаль-тарихи тәжрибәһен өлгөлө рәүештә формалаштыралар»— бик хөрт тәржемә һөйләме.

Беренсе абзацты ғына шулай тикшереп ҡараһаң да әллә күпме мәғәнәһеҙлек! Икенсе абзац та шул уҡ стиль менән башланып китә: «Ғәҙәттә мәҡәлдәр тормошта осрай торған күренештәрҙе күҙәтеү йомғағы булып, ошо күренештәргә ҡарата кешеләрҙең аңында тыуған фекер һөҙөмтәһе булып барлыҡҡа киләләр». Әйтерһең, фекер кешеләрҙең аңында тыумай, башҡа ерендә тыуа!

Беҙҙең ғалимдарҙың яҙғанын уҡып ҡараһаң, иҫ китә: әйтерһең, улар үҙ баштары менән уйламай, әҙер формулалар, әҙер һүҙҙәр менән «уйлайҙар», бөтә фекерҙе шулай «ғәҙәттә»ге бер өлгөгә һалып, «өлгөлө рәүештә формалаштыралар». Ентекләберәк ҡараһаң, һәр юлда тавтология тулып ята.

Ҡыҙғаныс бер фекер фәкирлеге был. Ә үҙҙәре шундай һауалы, шундай «күпте белгән» булып, «ғәҙәттә» тип кенә ебәргән булалар!..

Артабан мәҡәлдәрҙең тематикаһын, материалын аңлатыу китә. Бөтәһе лә дөрөҫ, бөтәһе лә үҙ урынында. Сөнки был турала күп яҙылған, был турала мәктәп балаһы ла белә.

Ләкин бына мин аҡса мәсьәләһен аңламайым. Аҡсаның килеп инеүе «Башҡортостан ерлегендә» капитализмдың, «капиталистик мөнәсәбәттәрҙең килеп инеүе һәм киңәйеүе» була аламы һуң?

Археологик ҡаҙылмаларға ҡарағанда, аҡса Башҡортостан еренә бик боронғо замандарҙа уҡ килеп ингән, ете ырыу ваҡыттарында ла аҡса булған, ләкин мин тирмәләр эсенә капиталистик мөнәсәбәттәр килеп инеүен төшөнөп етмәйем. Башҡортостан ерен талаған хандарҙың да аҡсаһы булған, ләкин улар капиталист булғанмы ни?

Бик күп халыҡтар, тарихта билдәле булыуынса, капитализмды, капиталистик мөнәсәбәттәрҙе ситләтеп үткәндәр. Хатта Россияға ла капитализм бик һуңлап инә бит.

Бына был мәсьәләне Кирәй нисектер аҡса аша ғына хәл итә: «Капитализм шарттарында аҡсаның көсөн һәм тотҡан урынын һәм шул аркала халыҡтың тормошо тағы ла ауырлаша барыуын күрһәткән мәҡәлдәр тыуа. Был тәңгәлдә «Аҡсаны аҡса таба», «Аҡса таш аҫтында, таш аждаһа башы аҫтында» кеүек мәҡәлдәрҙе күрһәтергә мөмкин», тип яҙа ул һәм шул миҫалдар аша ғына Башҡортостан ерлегендә килеп тыуған «капиталистик мөнәсәбәттәрҙе» күрә.

Әбей батша һүрәте төшөрөлгән тәңкәләрҙе таҡҡан апайҙарҙың, килендәрҙең сәс толомона ла шулай капитализм сәсмәү булып үрелде микән ни? Йылҡы, һарыҡ көткән башҡорт ағайҙары пролетариат булдымы икән ни?

Бына был мәсьәлә бик еңел генә сиселә, һәм нисектер күңел ышанып етмәй.

Бәлки, миңә диалектика етешмәйҙер? Бәлки, патриархаль ырыу тормошонда ла капиталистик мөнәсәбәт булғанлығын күреп етмәйемдер мин?..

Тағын да бер томанлыраҡ мәсьәлә.

«Өҫтөнлөк итеүсе синыф вәкилдәре халыҡты ҡыҫып ҡоллоҡта, ҡараңғылыҡта тотоу һәм халыҡтың аңын томалау маҡсатында, халыҡ ижадын үҙенең синфи теләгенә ҡулайлаштырырға тырышалар. Мәҡәл һәм әйтем кеүек хәрәкәтсән ижад төрөнә лә йоғонто яһамай ҡалмайҙар. Шул юл менән мәҡәл-

дәргә халыҡты пассивлыҡҡа өндәү идеяларын сағылдырған мотивтар за килеп инә. «Ашау — байҙан, үлем — хоҙайҙан», «Түрә барҙа түргә уҙма», «Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта», «Яҙмыштан уҙмыш юҡ», «Эйелгән башты ҡылыс сапмай», «Ырыуына күрә йолаһы, саҙаҡаһына күрә доғаһы» һәм башҡа шундай типтағы мәҡәлдәр, ана шул рәүешсә, халыҡ аңына иҙеүсе синыф тарафынан индерелгән күренештәр, иҫкергән йолаларҙы һәм кеше аңындағы иҫке ҡалдыҡтарҙы сағылдырған күренештәр булып торалар».

Эйе, килтерелгән миҫалдарҙың бөтәһе лә был фекергә ярашлы булып бөтмәһәләр ҙә, был фекер үҙе дөрөҫ.

«Ләкин был күренештәр халыҡ ижадында, ғөмүмән ораҡлы булған кеүек, мәҡәлдәрҙә лә, халыҡ йөрәге өсөн ят булған, хатторалар. Шуның өсөн дә халыҡ үҙе үк ул күренештәргә ҡаршы сыға һәм был хәл мәҡәлдәрҙең үҙендә үк сағыла. Халыҡ: «Байлыҡ — байлыҡ түгел, берлек — байлыҡ» тигән һөҙөмтә сығара».

Был фекер ҙә дөрөҫ! Тик был фекерҙе ҡүәтләү өсөн килтерелгән миҫалдар нисектер мәҡәл булып бөтмәгәндәр. Был миҫалдарҙы ла бер нисек тә реакцион идеялы, халыҡ фекеренә көслəп тағылған мәҡәлдәргә ҡаршы торорлоҡ, протест мәҡәлдәре тип булмай. Мәҫәлән: «Пассивлыҡҡа өндәүгә буйһоноу идеяларына ҡаршы» халыҡ мәҡәлдәре итеп килтерелгән: «Дошманды ҡуй тип уйлама, ул — бүре», «Дуҫтан дошманды айыра бел», «Йыландың аҙы ла йылан, ҡараһы ла йылан», «Йылан менән дуҫ булһаң, аҙыуланырһың», «Йыландың ҡойроғона баҫма, башына баҫ» тигән мәҡәлдәрҙе бер нисек тә тапҡыр һәм мәғәнәле мәҡәлдәр тип булмай. Былар «яҙ булһа, ҡар ирей», «Басня яҙһаң, мораль ҡуй» тигән кеүек бик зәғиф мәҡәлдәр. Уларҙы автор ҡайҙан алғандыр — билгеһеҙ. Әгәр үҙең уйлап сығараһың икән, исмаһам ул афоризм һымағыраҡ тапҡырыраҡ булһын ине! Ә бындай бик йомшаҡ ҡына, мәғәнә яғына бик самалы булған басня моралдәренән мәҡәл яһауҙың халыҡ ижады менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ кеүек. Был «тейһә — тейенгә, теймәһә ботаҡҡа» тоҫҡау ғына. Ә автор уларҙы халыҡ мәҡәлдәре итеп, халыҡ бына шундай «активлыҡҡа, хәрәкәткә өндәүсе тәрән мәғәнәле мәҡәлдәр ижад итә һәм халыҡты уяу булырға, ысын дошманды күрә белергә, дошмандарға ҡаршы актив хәрәкәт итергә саҡыра», тип раҫлай, һәм был раҫлау һауала аҫылынып ҡала. Сөнки фекерҙе миҫалдар менән раҫлау юҡ. Минеңсә, был бик кәрәк ине.

Унан һуң беҙ халыҡ аңын артыҡ идеялаштырып та ҡуябыҙ кеүек. Әйтерһең дә, халыҡ аңына төрлө ваҡыттағы төрлө тарихи шарттарҙа ла һәр саҡ иң революцион идеялар ғына хас булған! Халыҡ аңының төрлө дәүер өсөн төрлө баҫҡыстары бар

икәнлеген оноторға ярамай. Халыҡ аңының да, бөтә ижтимағи фекерҙең дә үҙ тарихы, үҫеш тарихы бар бит. Һәм мәҡәлдәрҙәге фекер ҡаршылығы синфи ҡаршылыҡтарҙа ғына түгел, ә халыҡтың үҙ аңындағы ҡаршылыҡтарҙан да килә. Был ҡаршылыҡ, берҙән, халыҡ аңына хакимлыҡ итеүсе синыфтарҙың быуаттар буйы дин-шәриғәт аша һәм башҡа төрлө юлдар менән баҫым яһап үткәрелһә, икенсенән, был ҡаршылыҡ уның үҙ аңының әле үҫеп етмәгән булыуынан да, ҡараңғылыҡта, ҡыҫынҡылыҡта йәшәүҙән дә, крәҫтиән тормошоноң бер урында ҡатып ҡалыуынан да һәм бөтә йәмғиәт тормошоноң озаҡ ваҡыттар буйы ҡанунлашып ҡатҡан ижтимағи мөнәсәбәттәрҙән дә килеп тыуған.

Унан һуң мәҡәлдәрҙең авторы халыҡ массаларының иң күп өлөшө булған крәҫтиәндәр икәнен дә оноторға ярамай. Ә крәҫтиән аңының бөйөк Толстой әҫәрҙәрендә һәм Толстойҙың донъяға ҡарашында сағылған ҡаршылыҡтарҙы беҙгә Ленин үҙенең Толстой тураһындағы мәҡәләләрендә бик яҡшы аңлатып биргәйне инде.

Фольклористар хәҙер был моментты иғтибарға алып еткермәйҙәр. Һәм шунлыҡтан мәсьәләнең был яғы һис тә өйрәнелмәй. Фольклорҙы йыйғанда был айырыуса эһәмиәтле момент. Әгәр ҙә беҙ халыҡ ижадында халыҡ тормошон бөтә яҡтан күргебеҙ теләһәк, халыҡ аңындағы ҡаршылыҡтарҙы ла күрә белергә тейешбеҙ. Ә беҙ һәр саҡ йөҙ процентлы хәҙерге идеяны ғына күргебеҙ тырышабыҙ. Был момент эпостарҙы, шулай уҡ халыҡ ижадының башҡа төр жанрҙарын өйрәнеүгә лә зыян итә. Әйтәйек, хан заманындағы халыҡ аңынан беҙ бөгөнгө пролетариат аңын, коммунистик аңды талап итһәк, эпостарҙан беҙгә үҙ аңыбыҙҙы табыу ҡыйын буласаҡ. Эпостағы халыҡсанлыҡ шул ваҡыттағы һәм унан һуң үҙгәрә, үҫә килгән халыҡ аңының сағылышы менән билдәләнә булһа кәрәк? Беҙ Пушкиндан да социалистик реализм әҫәбиәтендәге халыҡсанлыҡты талап итә алмайбыҙ. Пушкин беҙгә үҙ ваҡытындағы халыҡсанлығы менән ҡиммәт. Һәр бер төшөнсә тарихи һәм халыҡсанлыҡ проблемаһы тигән төшөнсә лә тарихи. Дворяндар әҙәбиәте уны үҙенсә аңлаған, разночинецтар уны артабан үҫтергәндәр, ә беҙ үҙебеҙсә ҡарайбыҙ уға. Һәр дәүерҙең, һәр осорҙоң үҙенең сағыштырмаса өҫтөнлөгө һәм тарихи сикләнгәнлеге бар.

Мәҡәлдәрҙә шулар юҡмы ни? Минеңсә, «халыҡта булған бөтә нәмә лә халыҡсан түгел», тигән фекерҙе иҫтә тотоп, халыҡта булған бөтә нәмәне лә өйрәнеү өсөн, заманды, халыҡтың үткән тормошон һәм тарихын наҡлап өйрәнеү өсөн, халыҡ телендәге бөтә нәмәне йыйып алыу мотлаҡ. Йыйыу, өйрәнеү — бер эш, ә халыҡҡа уның иң яҡшы үрнәктәрен, халыҡ ижадының иң матур ҡомартҡыларын ҡайтарып биреү —

икенсе эш. Шуның өсөн мин халыкта булған бөтә нәмәне һайламай йыйып алыу һәм һайлап сығарыу кәрәк тигән фекерҙәмен. Алтынды рудаһы менән эҙләргә кәрәк.

27 сентябрь.

Һаман да — мәкәлдәр!

Артабан мәкәлдәрҙе йыйыу эше тураһында. Был эш ун туғызынсы быуаттың уртаһында башлана. Быға тиклем мәкәлдәрҙең шәжәрәләрҙә яҙып ҡалдырылыуын Кирәй дөрөҫ әйтә: «Башҡорт халҡының яҙма әҙәбиәте тарихында гүзәл ҡомартҡы булып торған шәжәрәләр янында тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү, малсылыҡ һәм игенселек эшенә бәйләнгән кәңәштәрҙе, тормош көтөү өсөн кәрәкле өгөт-нәсихәт бирә торған тапҡыр һүҙҙәрҙе, мәкәлдәрҙе осратырға мөмкин. «Ай башында аяҙ булһа, ай буйы аяҙ була», «Ай кәртәләнһә, көн йонсоу була», «Ай кәртәләнһә, аяғыңды нығыт, көн ҡолаҡланһа, ҡолаҡсыныңды нығыт» кеүек мәкәлдәрҙе башҡорт шәжәрәләренең исемһеҙ авторҙары яҙып ҡалдырғандар».

Ә башҡорт мәкәлдәре баҫылған беренсе китап Ырымбурҙа Неплюев исемендәге башҡорт балалары өсөн асылған кадетский корпуста ғәрәп һәм фарсы телдәре уҡытыусыһы коллежский советник Сәлихйән Кукляшев тарафынан сығарылған. 1859 йылда Ҡазан университеты типографияһында баҫылған «Татарская хрестоматия» тип аталған был китапта күп кенә башҡорт мәкәлдәре урынлаштырыла.

Шул уҡ типтағы китапты шул уҡ типографияла шул уҡ кадетский корпус уҡытыусыһы генерал Бикчурин Мирсәлих тигән бер мәғрифәтсе 1869 йылда баҫтырып сығара. (М. Бикчурин. «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана». Казань, 1869.)

Был китаптарҙағы материалдар төрки телендә бирелгән. «Ләкин башҡорт халыҡ ижады менән эш иткәндә, авторҙар фразеологик әйтелештәрҙең һәм мәкәлдәрҙең тәбиғи хәлен, тел үҙенсәлектәрен һаҡларға тырышҡандар». Әлбиттә, китап теле йоғонтоһо юҡ түгел: «Зәр ҡәҙерен зәркән белер», «Заман башҡа, заң башҡа», «Атайым йорто һаламдыр — һарай булып күренә, ҡайным йорто ҡабыҡтыр — тамуҡ булып күренә» кеүек мәкәлдәр ҙә бар.

Мәкәлдәр дини-реакцион китаптарҙа ла үҙгәртелеп баҫылалар. Ләкин Кирәй быларҙың миҫалдарын килтермәй. Ә быны тикшереү бик ҡыҙыҡ булыр ине. Нисек һуң төрлө реакцион әҙәбиәт вәкилдәре халыҡ аҡылының тәьҫирле көсөн үҙҙәренсә файҙаланалар? Нисек уны үҙ идеялары менән буяғандар? Был бик ҡыҙыҡ бит? Ләкин беҙ быны өйрәнмәйбеҙ. «Бындай юл

менән донъяға сыҡҡан мәҡәлдәрҙе тормош үҙе кире ҡаҡты. Халыҡ уларҙы үҙ ижады итеп ҡабул итмәне»,— ти Кирәй. Ләкин бындай мәҡәлдәрҙе әле лә халыҡ араһында осратырға мөмкин. Тимәк, улар ҙа иғтибарға лайыҡлы. Белергә кәрәк: нимәһе менән һуң улар һаман да йәшәп килә? Уларҙы белмәй тороп, уларға ҡаршы көрәшеү ҡыйыныраҡ. Ә беҙҙең тормошта улар менән көрәшәһе бар бит әле. Быны мин үҙем күреп-ишетеп беләм.

Артабан, XIX быуат аҙаҡтарында башҡорт мәҡәлдәренең рус телендә баҫылып сыға башлауы тураһында. Был өлкәлә шағир һәм мәғрифәтсе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән Мөхәммәтғәлим Ҡыуатовтың эшмәкәрлеге ҙур булған.

1. М. Өмөтбаев. Приметы, поверья, поговорки и изреченья магометан Уфимской губернии. (Справочная книга Уфимской губернии. Уфа, 1883.) 2. М. Ҡыуатов. Башкирские пословицы. (Известия Оренбургского отдела русского географического общества. Выпуск 6, Оренбург, 1895.)

Улар башҡорт мәҡәлдәрен руссаға тәржемә итеп һәм рус графикаһы менән башҡорт телендә (Ҡыуатов) баҫтырып сығарғандар. Икеһе лә башҡорт мәҡәлдәренең үҙенсәлеген нык һаҡларға тырышҡандар. «Был яҡтан уларҙың халыҡ ижадына булған ҡарашын һәм мөнәсәбәтен өлгө итеп ҡуйырға мөмкин», — ти Кирәй. Бына был сифат Кирәйҙең үҙендә етешмәйерәк кеүек.

Революцияға тиклем башҡорт мәҡәлдәрен М. Ғафури, Ш. Бабич, С. Ҡудаш, Ф. Туйкин, З. Өммәти кеүек яҙыусылар ҙа йыйып өйрәнгәндәр, тик уларҙы баҫтырып сығара алмағандар.

Революциянан һуң был эш ғилми ойошмалар ҡулына күсә. Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте башлап ебәргән был эште артабан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты дауам итә. Һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күп кенә байлыҡты туплаған фонд барлыҡҡа килә.

1923 йылда башҡорт мәҡәлдәренең Ғ. Вилданов, Х. Ғәбитов тарафынан төҙөлгән айырым йыйынтығы баҫып сығарыла. («Боронғоларҙың һүҙҙәре». Өфө,1923.) һәм юғары баһалана. Н. К. Дмитриев был тәүге китап тураһында «Книгоноша» журналында рецензия яҙа һәм ул йылдарҙа тыуып килгән башҡорт фольклористикаһы өсөн уның әһәмиәтен, ҡиммәтен билдәләй. Шул уҡ йылда был китап кесерәк күләмдә баҫып сығарыла, ә 1924 йылда Мәскәүҙә СССР халыҡтарының үҙәк нәшриәтендә баҫылып сыға.

Кирәй әйтеүе буйынса, «диалектизм һәм натурализм элементтары» булыуға ҡарамаҫтан, был китаптарҙың өсөһө лә

«нигеҙҙә башҡорт мәҡәлдәренең нәфислеген, халыҡса тәбиғи әйтелешен» һаҡлаған йыйынтыҡтар.

1936 йылда Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты тарафынан «Башҡорт мәҡәлдәре» тигән йыйынтыҡ сығарыла. (Төҙөүсеһе Ғ. Амантай.) Был хеҙмәт быға тиклем сыҡҡандарҙан «иң ҙурыһы һәм күләмлеһе тип әйтергә мөмкин». Унда бөтәһе меңдән артыҡ мәҡәл урынлаштырылған. Беренсе ҡабат мәҡәлдәрҙе ғилми классификациялау, тематик яҡтан айырым бүлектәргә төркөмләп урынлаштырыу яғынан да был китап ғилми әһәмиәткә эйә булып тора. Баш һүҙ урынында «Башҡорт мәҡәлдәре тураһында» Ғ. Амантай мәҡәләһе бирелеп, мәҡәлдәрҙең тарихи-социаль ерлеге һәм ҡайһы бер художество үҙенсәлеге хаҡында ҡайһы бер әһәмиәтле күҙәтеүҙәр һәм фекерҙәр әйтелә.

Быларҙан башҡа егерменсе һәм утыҙынсы йылдарҙа — Бөйөк Ватан һуғышына тиклем — газета һәм журнал биттәрендә ваҡыты-ваҡыты менән мәҡәлдәр йыйып баҫыла һәм халыҡ телендә йөрөгән тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәл һәм әйтемдәр тураһында ғилми-популяр күҙәтеүҙәр урынлаштырыла (Ғ. Амантай, Ә. Харис, Ә. Усманов, Ғ. Әмири, Ғ. Идрис һәм башҡалар).

Артабан Кирәй яңы мәҡәлдәргә күсә. «Антты бирә лә бел, үтәй ҙә бел», «Илдекен урлаған ҡазаға эләгер, ҡазаға эләкмәһә, язаға эләгер», «Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк», «Эшләмәһәң эш көнө, ни ашарһың ҡыш көнө?», «Колхозың алда булһа, ауыҙың балда булыр», «Байлығы булған келәткә ҡар ҡуна алмаҫ, колхозың туҡ булһа, нужа килә алмаҫ» (был да мәҡәл микән ни?..), «Ялҡауға эш ҡушһаң, ғариза килтерер», «Байрамда айран эскән, эшкә иҫереп килгән», «Иҫәпһеҙ колхоз — ишекһеҙ йорт», «Быҙау һайын бухгалтер, һарыҡ һайын секретарь».

«Тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәлдәрҙә Башҡортостан ерлегендә барлыҡҡа килгән хужалыҡ, промышленность үҫеше һәм шул нигеҙҙә килеп тыуған яңы мөнәсәбәттәр ҙә сағыла. Был яҡлап шул уҡ газета һәм журнал биттәрендә күренгән: «Туҡтатма фонтанды, бәрһен әйҙә!», «Нефть — лоторей түгел: өлөшкә сыҡмай, эшкә сыға». Быларҙың тапҡырлығы бик самалы, әлбиттә. Ярай әле «һ. б» бар!.. 1944 йылда (Әхнәф Кирәй) Мәргәндең үҙе йыйған «Һуғыш фольклоры» сыҡты. Ярайһы ғына йыйынтыҡ. Китаптың йөкмәткеһенән бигерәк уның йыйылыу факты ҡиммәтерәк, әлбиттә.

Ләкин бына Кирәйҙең: «Һуғыштан һуңғы осорҙа халыҡ ижадын баҫтырып сығарыу эше киң ҡолас алып китте», тип белдереүе ғәжәберәк. Был раҫлау дөрөҫлөктән бик йыраҡ тора. Бушҡа ҡыуыҡ осороу ғына был! Хәҙер инде һуғыштан һуң 13 йыл үтеп китте. Ә революция булғанға 40 йыл тулды. Шуның

20 йылын беҙ әҙәбиәттә лә, фольклористикала ла «халыҡ дошмандарын» әрләп уҙҙырҙыҡ. Ә улар тарафынан һәм революцияға тиклем 1812 йылдан башлап рус ғалимдары, сәйәхәтселәре һәм рус музыка белгестәре тарафынан, шулай уҡ бик күп яҙыусылар, шағирҙар, әҙәбиәтселәр һәм халыҡ ижадын һөйөүселәр менән телселәр тарафынан йыйылған бай материалды һаман да әле ярты-йорто өс том итеп булһа ла сығарып бөткәнебеҙ юҡ. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан әҙерләнгән «Башҡорт халыҡ ижады» китабының I томы сығыуға 4 йыл, ә III томы сығыуға 3 йыл үтте инде. Ә II том һаман да юҡ.

Ләкин был баҫылып сыҡҡан томдар ҙа әле башҡорт халыҡ ижадының күп төрлө жанрҙарын тулы, теүәл итеп биреп еткермәйҙәр. Был баҫмалағы томдар академик баҫма булыуҙы дәғүә итһәләр ҙә, улар ысын академик баҫма була алмайҙар әле.

Был хаҡта аҙағыраҡ яҙырмын. Әле мәҡәлдәр тураһында ғына фекер йөрөтөп ҡарарға кәрәк.

«Был күләмле эштең беренсе томында (Ә. Харисов редакцияһында) һәм башҡорт халҡының совет осорондағы ижадына арналған өсөнсө томда (К. Мәргәндең үҙ редакцияһында) тапҡыр һүҙ, мәҡәлдәр һәм әйтемдәргә лә киң урын бирелә», — ти Кирәй.

Минеңсә был да дөрөҫ түгел. Мәҡәлдәр бында башҡа жанрҙарға өҫтәмә (приложение) кеүек кенә итеп бирелә. I томда бирелгән мәҡәлдәр 550-нән дә артмай, ә III томда ни барлығы 200-ләп кенә мәҡәл бирелгән. Һәм был мәҡәлдәрҙең дә күбеһе элек баҫып сығарылған мәҡәлдәрҙе ҡабатлау булып тора. Унан һуң был томдарҙағы мәҡәлдәргә ҡарағас, шундай уй тыуа: мәҡәлдәрҙе былай алфавит тәртибендә теҙеп сығарыуҙан ни мәғәнә? Был формализм ғына бит. Был методты әле Владимир Даль бынан йөҙ йыл элек үк тәнҡит итеп сыҡҡайны (Мәҡәл йыйынтыҡтары тураһында): «Обычно сборники эти издаются в азбучном порядке, по начальной букве пословицы. Этот способ самый отчаянный, придуманный потому, что не за что более ухватиться! Изречения нанизываются без всякого смысла и связи, по одной случайной и при том нередко изменчивой внешности. Читать такой книги нельзя: ум наш дробится и утомляется на первой странице пестротой и бессвязностью каждой строки; приискать, что понадобилось, нельзя; видеть, что говорит народ о той либо другой стороне житейского быта, нельзя; сделать какой-нибудь свод и вывод, общее заключение о духовной и нравственной особенности народа, о житейских отношениях его, высказавшихся в пословицах и поговорках,

нельзя; относящиеся к одному и тому же делу, однородные, неразлучные по смыслу пословицы разнесены далеко врознь, а самые разнородные поставлены подряд...»

«Словом, азбучный сборник может служить разве для одной только забавы; чтобы, заглянув в него, поискать, есть ли в нем пословица, которая мне взбрела на ум, или она пропущена... Но пословицу, которую я уже знаю, мне и отыскивать не для чего...» (Вл. Даль. «Пословицы русского народа», «Напутное», 26—27 стр.)

Был бик аҡыллы фекерҙе бөтә мәҡәл йыйыусылар ҙа иҫтә тоторға тейеш. Сөнки беҙ мәҡәлдәрҙә халыҡтың ысын тарихын, тормошон, көрәшен, һәр бер нәмәгә уның мөнәсәбәтен, һәр бер күренешкә уның ҡарашын күргә теләйбеҙ бит.

Унан һуң мәҡәлдәрҙе дәүерҙәргә (революцияға тиклемге һәм унан һуңғы осорға) бүлеп йөрөтөү ҙә бик формаль ҡараш. Был мәҡәлдәрҙең тыуыуы, барлыҡҡа килеүе, үҫеү һәм үҙгәреүе, быуаттар буйынса үткерләнә, шымара һәм камиллаша килеү үҙенсәлеге менән иҫәпләшмәү тигән һүҙ. Әйтерһең, революциянан һуң үҙенә бер башҡа яңы мәҡәлдәр осоро башланған! Ә халыҡ телендә бит мәҡәлдәр яңыларын тыуҙыра, яңылары иҫкеләр ҡалыбында барлыҡҡа килә. Һүҙҙән һүҙ сыға бит инде! Мәҡәлдәрҙең тәбиғәте тураһында рус мәҡәлдәрендә бик яҡшы әйтелгән: «Пословица плодуща и живуща», «Хороша пословица в лад да в масть», «Старая пословица век не сломится».

Ә мәҡәл тураһында башҡорт мәҡәлдәре бармы? Бына был мәсьәлә миңә бәхәслерәк тойола. Әлбиттә, тура һүҙ, тапҡыр һөйләү, ғөмүмән, ауыҙ-тел, сәсәндәр тураһында күп мәҡәлдәр бар. Мәҫәлән, «Тура һүҙ күҙ сығара», «Тура әйткән туғанына ярамаған», «Тура һүҙгә йән фиҙа», «Тел ҡылыстан үткер», «Тән яраһы төҙәлер, тел яраһы төҙәлмәҫ», «Кырын ултыр, тура һөйлә», «Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың, йөрөй-йөрөй күсәм булырһың», «Һүҙең көмөш булһа ла, өндәшмәүең алтын», «Һөйләй белмәгән һуғып ҡасыр», «Һүҙең үлгәнсе үҙең үл», «Һүҙ — сәпсек, ысҡындырһаң — тотолмаҫ», «Һүҙенә күрә яуабы, саҙаҡаһына күрә сауабы», «Һөйҙөргән дә тел, биҙҙергән дә тел», «Һүҙ артынан һүҙ сыға, күп һөйләһәң күҙ сыға», «Һүҙҙе әйтмә, әйтһәң — һатма», «Әйткән һүҙ — атҡан уҡ», «Һүҙең башынан элек төбөн уйла», «Уйнап һөйләшһәң дә, уйлап һөйләш», «Бер олоноҡон, бер кесенекен тыңла», «Сәсән дауҙа, батыр яуҙа һыналыр», «Оҫта барҙа — ҡулың тый, сәсән барҙа — телең тый», «Сәсәндең һүҙе уртаҡ, һөнәрсенең ҡулы уртаҡ», «Сәсәнмен тип кем әйтмәй — дау килгәндә өнө юҡ, батырмын тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юҡ», «Оло һүҙен тотмаған — оронған да бәренгән, оло һүҙен тыңлаған —

ҡырын ятып йырлаған», «Оло һүҙен тыңламаған мәңге рәхәт күрмәгән» һ. б. шундай бик күп мәҡәлдәр табырға мөмкин. Ләкин бына мәҡәл тураһында мәҡәлдәрҙең халыҡ араһында ишетелгәне юҡ. «Мәҡәл» тигән һүҙҙең үҙен дә тик китап менән эш иткән кешеләр һәм йәштәрҙән, интеллигенция араһында ғына ишетергә мөмкин. Ә ҡарттар ул һүҙҙе ҡулланмайҙар ҙа. Ҡулланһалар ҙа бөтөнләй икенсе мәғәнәлә (боронғо берәй тарихты һөйләү, ғибрәтле берәй кинәйәле хикәйә, көләмәс һөйләү мәғәнәһендәрәк, күберәк дини нәмәләр тураһында һөйләгәндә) ҡулланалар. Сөнки «мәҡәл» һүҙе беҙҙең һүҙ түгел, беҙгә китап теле, татар әҙәбиәте аша ингән ғәрәп һүҙе. Халыҡта ул һүҙ элек бөтөнләй ҡулланылмаған булырға тейеш. Халыҡ ижадының үҙендә «мәҡәл» һүҙен осратып та булмай. Ул беҙгә китап теле аша һуңыраҡ ингән. Шунлыҡтан, «мәҡәл» һүҙенә мәҡәл дә юҡ тиерлек. Сөнки мәҡәлдәрҙең күпселек өлөшө бик боронғо ваҡыттарҙа тыуған һәм быуаттар буйынса эшләнә, юныла, ҡойола килгән. Шуның өсөн дә беҙҙә мәҡәлде «боронғолар һүҙе», «ололар һүҙе», «ҡара (ҡара-иҫке) һүҙ», «аҡыллылар һүҙе», «ҡарттар һүҙе» тип йөрөтәләр. Бының менән мин, әлбиттә, «мәҡәл» һүҙен кире ҡағырға теләмәйем — был бик уңайлы, был жанр төшөнсәһенә бик тап килә торған атама. Ләкин был атаманың халыҡ аңында нисек йәшәүен дә иҫкә алырға кәрәк. «Мәҡәл» һүҙенең этимологияһын да (килеп сығыу тарихын да) күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ә беҙҙә бына шундай терминдар — атамалар мәсьәләһендә йыш ҡына буталсыҡтар килеп сыға. Шул уҡ буталсыҡ «әйтем» атамаһында ла йәшәп килә.

Нәмә ул «әйтем»? Кирәй хәҙер был атаманы башҡаса аңлата, ләкин аңлатып еткермәй (минеңсә, был мәсьәләлә бик уйлап эш итергә кәрәк, ҡаш ҡуям тип, күҙ сығарыу килеп сыҡмаһын ине). «Поговорка» мәғәнәһендә булған «әйтем» атамаһы тураһында ла уйлап ҡарарға кәрәк. Сөнки башҡа телдән алған, йәки руссанан һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп алған (калька) атамалар, йәки ул атаманы туранан-тура күсереү башҡа ерлектә тыуған телдең һәм шул телдәге халыҡ ижадының үҙ тәбиғәтенә, уның үҙенсәлектәренә ярашлы булып бөтмәй. Был бик яһалма килеп сыға. Ә беҙ хатта бына мәҡәлдәрҙе лә яһайбыҙ, тәржемә итәбеҙ һәм үҙебеҙ уйлап сығарабыҙ. Уйлап сығарырға, ижад итергә, афоризмдар әйтергә һәр кемдең хаҡы бар, әлбиттә. Ләкин уны үҙ ижадыңда файҙаланырға, үҙ исемеңдән әйтергә кәрәк. Ә халыҡ ижадына быны бәйләргә, көслəп тағырға кәрәкмәй. Был халыҡ ижадын байытыу түгел, ә боҙоу, фальсификациялау ғына. Һәм халыҡ ижады бер ҙә быға мохтаж түгел. Ләкин бына Кирәй булмаған мәҡәлдәрҙе лә халыҡ ижады итергә тырыша: «Туҡтатма фонтанды, бәрһен

әйҙә»,— ти. Ләкин мәҡәл бындай мәғәнәһеҙ булмай. «Мәҡәл аҡыллы баштан сыға», — ти Кирәй. Ләкин был да мәҡәл түгел, сөнки мәҡәл йүләр баштан сыҡмай икәнен һәр кем белә. «Һүҙ башы — мәҡәлдә» тигәнгә лә ышанып булмай. Ә «Һүҙ сәнғәтенең башы — фольклорҙа» тигән Горький һүҙҙәренә ышанырға була. Сөнки был бер кем тарафынан да үҙгәртелмәй торған ҡанатлы һүҙ. Уны тәржемә итеп мәҡәл яһауҙың кәрәге лә юҡ. «Мәҡәлле һүҙ — аҡыллы һүҙ» тигән кеүек, һәр бер аҡыллы һүҙ ҙә мәҡәл була алмай әле. Рус мәҡәле әйткәнсә: «Һәр һүҙгә мәҡәл бар» («На каждое слово есть пословица»), «Тик һәр һүҙ мәҡәл түгел» («Не каждое слово пословица»). Халыҡ: «Йөҙ күрке — һаҡал, һүҙ күрке — мәҡәл» тигән гүзәл фекер әйтеп ҡалдырған»,— ти Кирәй. Белмәйем, был оҫта ғына яһалған кеүек, һәр һүҙе эстән дә, тыштан да рифмаланған, ҡыҫҡа ла, еңел дә үҙе, ләкин шик тыуҙыра. Нисектер, был халыҡ телендә тыуған мәҡәл түгел һымаҡ. Бәлки, минең генә ишеткәнем юҡтыр. Бәлки, Кирәй бер алдағас, башҡа һүҙҙәре лә ялған булып күренәлер. «Бер ҡабат ауыҙың бешкәс, халҡын һыуҙы ла өрөп эсәһең», ти бит мәҡәл!.. Ҡурҡҡанға, бәлки ҡуш та күренәлер? «Мәҡәл — һүҙ асҡысы, әйтем — күңел асҡысы», «Мәҡәл әйткән — юл өйрәткән, әйтем әйткән — күңел йыуатҡан» кеүек мәҡәлдәргә лә ышанып етмәйем. Былар мәҡәл тураһында мәҡәл булдырыу өсөн һәм Кирәйҙең «әйтем» атамаһын аңлатыуҙа миҫал менән нығытма булдырыу өсөн генә тыуҙырған мәҡәлдәре кеүек. Бәлки, яңылышамдыр. Уға ҡарата мин артыҡ асыу менән эш итәм булһа кәрәк? Ярай, «ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә», ти, хәҙергә мин был эҙәрләүҙе ҡуйып торайым. «Күп һүҙ китапҡа яҡшы!» (Бигерәк тә Әкрәм Вәли китаптарына!)

Архаик мәҡәлдәр тураһында Кирәй дөрөҫ әйтә: «Алынған ваҡиға һәм күренештәр һәм уларҙың сағылышы булып күтәрелгән образ халыҡҡа барып етеү көсөн юғалтҡан булһа, ундай мәҡәлдәрҙә архаизм еҫе аңҡый башлай һәм улар әкренләп йәнле репертуарҙан төшөп ҡала баралар. Әлбиттә, халыҡтың художестволы фекерләү тарихын һәм үҫешен тикшергәндә, тел, стилистика ҡоролошоноң үҙенсәлектәрен тикшергәндә, бындай мәҡәлдәрҙең шулай уҡ әһәмиәте бар. Ләкин инде улар халыҡтың бөгөнгө йәнле аҡыл шишмәһенең көҙгөһө булып күтәрелә алмайҙар».

Дөрөҫ, аҡты ҡара тип булмай. Тавтология теле менән әйткәндә: что верно, то верно!..

Мәҡәлдәрҙең айырым шарттарҙа үҙгәрә барыуын бер үк күренеш йәки ваҡиғаны образлы сағылдырған мәҡәлдең бер нисә вариантта йәшәүе менән аңлатыу ҙа дөрөҫ. «Бындай хәлдә һәр бер вариант мәҡәлдең образлылығын үҙенсә тултыра».

Дөрөҫөрәге — һәр бер вариант төп вариантҡағы фекерҙе мәҡәл әйтелгән ваҡыттағы төп шартҡа, хәл-ваҡиғаға ҡарата яраҡлаштыра: Мәҫәлән, «Арбам ватылды тип ылауҙан ҡалма, башым ауырта тип эштән ҡалма»,— «Күсәрем һынды тип күстән ҡалма, ямғыр яуҙы тип яуҙан ҡалма»,— «Һаҙағым һынды тип һунарҙан ҡалма, аяғым ауырта тип ауҙан ҡалма» һ. б.

Халыҡ ижадына хас булған сатира, юмор, ирония, сарказм элементтарының мәҡәл жанрында сағылыуын Кирәй мәҡәлдәрҙең художество үҙенсәлегенә, һүрәтләү сараларына бәйләп тикшерә. Һәм был яҡшы. «Афористик жанрҙағы художество оҫталығы... тормошта осрай торған күренештәргә күсереп ҡабул итергә мөмкинлек тыуҙырған типик һәм конкрет образ таба белеүгә нигеҙләнгән».

Мәҡәлдәрҙең төҙөлөшө (техникаһы), поэтикаһы, һөйләм төҙөлөштәрендәге үҙенсәлектәре, һүҙҙәрҙәге өндәр гармонияһы, ритм һәм рифма ҡоролошо тураһында яҙған өлөшөндә яңылыҡ юҡ. Мәҡәлдәрҙең поэтикаһы һәм ҡоролошо һаман да әле үҙенең тикшереүсеһен көтөп ҡала.

Ә бына «әйтем» жанры буйынса бик ҡыҙыҡ һәм бәхәсле фекер ҡуҙғатыла. Хатта мәҡәләнең дүрттән бер өлөшө «әйтем» атамаһын асыҡлауға арналған. Әйтемдең элеккесә «поговорка» мәғәнәһендә йөрөүе юҡҡа сыға, һәм әйтем «тапҡыр һүҙ» тигән атама менән алыштырыла. Рецензенттарҙың икеһе лә — Баязит Бикбай ҙа, Шакир Насыров та — был атама менән килешәләр, Баязит ағай «Кирәй Мәргәндең әйтемдәр тураһындағы теоретик ҡарашы төплө фекер», ти.

Был мәсьәләне ентекләберәк ҡарарға кәрәк. Шуның өсөн тәүҙә Кирәйҙең нимәгә «әйтем» тип әйтеүен асыҡлап китергә булдым (үҙем өсөн).

28 сентябрь.

Ул үҙенең «әйтем» тураһындағы фекерен мәҡәлдең формаль яғынан, саф техник яғынан башлай.

«Ритм һаҡлау, рифмалашыу һәм гармониялы һүҙ ағышын һаҡлау — ойошоу яғынан ҡатмарлыраҡ күренгән мәҡәлдәрҙә лә, йәғни дүртәр, бишәр, хатта алтышар синтаксик бер тиң киҫәктәрҙән ойошҡан мәҡәлдәрҙә лә киң урын алған. Мәҫәлән:

Эшең хаҡ булһа,
Ҡулың пак булыр;
Ҡулың пак булһа,
Йөҙөң аҡ булыр;
Йөҙөң аҡ булһа,
Семьяң шат булыр.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: бындай бер тиң киҫәктәрҙең тағы ла ишәйеү тенденцияһы бар. Йәғни бер мәғәнә тирәһендә бер үк художестволы алым менән (ғәҙәттә, антитеза йәки параллелизм) бик күп һанда оҡшаш бер тиң киҫәктәр ойошорға мөмкин. Был хәл инде мәҡәлде ауырлаштыра, ҡатмарлыраҡ күренешкә әйләндерә. Мәҡәл үҙенең тәбиғи төҫөн (мәҡәллеген) юғалта башлай һәм ҙурыраҡ, киңерәк жанр өсөн, иркенләберәк башҡарыла торған ижад төрө (әйтем) өсөн хас булған күренештәрҙе эсенә ала башлай. Был осраҡта һан үҫеше сифат үҙгәрешенә килтерә, ошо нигеҙҙә әйтем жанры барлыҡҡа килә»,— ти Кирәй.

Әлбиттә, бер жанрҙың барлыҡҡа килеүен бындай механик юл менән аңлатыу формалерәк төҫ алған кеүек. Ләкин жанр менән жанр араһында үтеп сыға алмаҫлыҡ ҡәртә лә ҡуйып булмай бит. Был урында форма ла ҙур роль уйнай. Һәм Кирәй әйткән фекер үҙе ҡыҙыҡ, был фекер халыҡ ижадының төрлө жанрҙары араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе тикшереп ҡарау һәм билдәле бер күҙәтеүҙәр нәтижәһендә килеп сыҡҡан фекер. Әгәр ҙә халыҡта үҙенсәлекле бер жанрға ҡарата теүәл бер атама ла бар икән, уны шулай алырға ла кәрәктер. Әлбиттә, русса «поговорка» булып йөрөгән жанрҙы беҙ «әйтем» тип атарға күнегеп киткәс, был бик ыҡсым һәм, мәҡәлгә бик яҡын торғанлыҡтан, «мәҡәл һәм әйтемдәр» тип йөрөтөргә телебеҙ өйрәнеп бөткәнлектән, унан баш тартыу ҡыйыныраҡ. Ләкин, ни хәл итәһең, «дөрөҫ һүҙгә йән фиҙа» тигәндәй, ризалашырға ла тура килер. Сөнки был хәл Кирәйҙең үҙ белдегенән генә килеп сыҡҡан нәмә түгел. Был мәсьәлә уның үҙен дә ғазаплаған булырға тейеш. Халыҡ ижадында әйтемдең үҙ аллы жанр булып йөрөүе тураһында Ғ. Амантай ҙа һүҙ ҡуҙғатып ҡуйған. Кирәй уның 1935 йылда «Башҡортостан» гәзитендә баҫылып сыҡҡан «Башҡорт фольклоры тураһында» тигән мәҡәләһен күрһәтә. Амантай әйтем жанрын оҙонораҡ була, тигән. «Поговорка төшөнсәһен ул ҡара һүҙ тигән термин аша бирә», ти Кирәй һәм Баязит Бикбайҙың фольклор буйынса бер сығышында әйткән фекерен дә өҫтәп, ул «әйтем жанрын ҡобайырға яҡын торған ижад төрө итеп билдәләй», ти. Ләкин мин Амантайҙың да, Бикбайҙың да был сығыштарын гәзиттәрҙән тапманым. Тәүгеһе республика китапханаһында юҡ, гәзиттәрҙең подшивкалары тулы түгел, ә Бикбай мәҡәләһе баҫылған номерҙы Кирәй үҙе яңылыш күрһәткән. Был адрес буйынса мин тик (1950 йылғы «Совет Башҡортостаны», № 133) Бикбайҙың «Әҙәби Башҡортостан» журналының 5-се һанына яҙған рецензияһын ғына таптым. Унда Кирәйҙең таҡмаҡтар тураһындағы мәҡәләһе генә тикшерелә һәм, «әйтем» тигән бер һүҙенән башҡа, әйтем жанры тураһында бер ниндәй фекер ҙә әйтелмәгән. Ти-

мәк, Кирәй уның икенсе берәй мәкәләһен күҙ уңында тотҡан булһа кәрәк.

Ләкин Бикбайҙың әйтем тураһында әйткән фекере миңә билдәле: «Ул (әйтем) рус халҡының приговорки-прибаутки төрөнә керә», ти. Был дөрөҫ түгел. Даль «приговорка» һәм «прибаутка» мәғәнәһен бөтөнләй икенсе төрлө аңлата: «Приговорка или пустоговорка, которую также иногда зовут поговоркой — это изречение, иногда одно слово, часто повторяемое, приговариваемое, без большого толку и значения, а по местной или личной привычке говорит: взял, взямши; оченно хорошо это самое дело; тово-воно как-оно. В сказках таких условных поговорок много: «Скоро сказка сказывается, не скоро дело делается»; «Близко ли, далеко ли, низко ли, высоко ли»; «за тридевять земель, в тридесятом государстве» и пр. Как простые, так и сказочные пустоговорки иногда обращаются в пословицу, заключая в себе условный смысл; например: «Я бы и того, да, вишь, жена-то не тово; ну и я растово»; о пустом, грозном начальнике: «Проскакал выше лесу стоячего, ниже облака ходячего»; о строгости и непотачке кому: «Он тише воды, ниже травы стал» и пр. С другого конца, переходя в набор слов, приговорки сливаются с прибаутками».

«Прибаутка» ла әйтем төшөнсәһен бирмәй. Ул күберәк һүҙ уйнатыуға ҡайтып ҡала, еңел генә әйтелә торған уйынкөлкөлө тапҡыр һүҙҙәр улар. Улар мәкәл төҫөнә лә инергә мөмкин, әлбиттә: «Тит, пойдем молотить!— Брюхо болит.— Тит, поди кисель есть!— А где моя большая ложка?» Ләкин был беҙ эҙләгән әйтем түгел. Баязит ағай быны бер аҙ бутаған. Ул үҙе үк был фекеренә ҡаршы сыға: «Әйтемдәр — ҡартыраҡ кешеләр өсөн хас,— ти.— Сөнки улар, йырларға дәрт бар ҙа, дарман булмағас, табындарҙа, йыйындарҙа ярым көйләп, әйтемләп ултырыусан булалар. Уларҙың әйтемдәре поэтик яҡтан төҙөгөрәк тә (ритмлы), мәғәнәлерәк тә килеп сыға. Ҡыҙғаныс, К. Мәргән әйтемдәрҙең үрнәген аҙыраҡ биргән!»— тип әйтем тураһындағы һүҙен шуның менән тамамлай.

Б. Бикбай әйтемдәрҙең башҡарылыу характерын һәм уларҙың тәрән мәғәнәле булыуын бик дөрөҫ билдәләй.

Был яҡтан Амантайҙың бөтөнләй икенсе бәйләнештә әйткән бер фекере бик характерлы. 1936 йылда сыҡҡан «Башҡорт мәкәлдәре» тигән йыйынтығында «Башҡорт мәкәлдәре тураһында»ғы баш һүҙендә былай тип яҙа: «...боронораҡ, башҡорттар араһында, ҡайһы бер сәсән ҡарттар бөтә һөйләмдәрен мәкәлдәрҙән ойоштороп, оҙон телмәрҙәр һөйләгәндәр». Был турала Амантай үҙенең 1931 йылғы экспедиция яҙмаларынан Маҡар районы Иҫке Һәйет ауылында 78 йәшлек Ғатаулла Мырҙабаев ҡарттың һөйләүен килтерә:

— Әле мин йәш саҡта, бала саҡта, йыйындарҙа, ярыш алып, кем уҙарҙан, икешәр-өсәр көн буйы табындан тормай, ҡарағаршы әйтешеп, йырлашып, һүҙ көрәштереп ултырыуҙар була торғайны. Алға сыҡҡандарға тәкә йәки йүгерек бүләк ителә торғайны... Ҡайһы бер сәсән ҡарттар бер табын уҙғансы шау боронғолар һүҙенән (мәҡәлдәрҙән.— **F. A.**) ҡороп, бата һөйләп ултыра торғайны.

Был бик ҡыҙыҡлы факт. Һүҙ көрәштереү, сәсәндәрҙең ҡарағаршы һүҙ әйтешеүе ҡаҙаҡтарҙағы аҡындар импровизацияһы — әйтеш (айтыс) кеүек бит был.

Минеңсә, был әйтемгә тура килә. Сәсәндәрҙең ҡара-ҡаршы әйтешеүе формаһы яғынан ҡобайырға ла бик яҡын тора, ләкин был алдан әҙерлекһеҙ көйө, сәсәндең потенциаль әҙерлеге, байлығы, тапҡырлығы иҫәбенә, импровизация юлы менән башҡарыла. Ә ҡобайыр тотороҡлораҡ һәм ҡанунлашҡанораҡ жанр, һәм үҙенең стиле, тематикаһы һәм тотҡан урыны менән юғарыраҡ баҫҡыста тора. Ҡобайыр ул тыуған ил, тыуған ер һәм батырҙар тураһында данлау, маҡтау йыры. Ҡобайыр ҡолас кинәрәк, мөһимерәк, эпигыраҡ. Был яҡтан уны ода тип атарға ла мөмкин. «Ҡобайыр» һүҙенең этимологияһы ла шуны әйтеп тора (телселәр әйткәнсә, «ҡоба» һүҙе — боронғо башҡорт һүҙе — данлау, маҡтау мәғәнәһендә. Монгол телендә лә был һүҙ шул мәғәнәлә ҡулланыла, тиҙәр...) Ә «әйтем» һүҙе һөйләүҙең моментын, процесын аңлатҡан хәҙерге заман ҡылымы булған «әйтеү» һүҙенән килә, дөйөмләштергән мәғәнәне аңлата. Шуның өсөн был жанр күберәк ваҡыт импровизация емеше тиергә мөмкин. «Әйтем»дәр үрнәгең Кирәйҙең аҙ килтереүе лә шунандыр, бәлки. Сөнки хәҙер импровизация һирәгерәк күренеш. Ҡыҫҡаһы — «әйтем» жанры үҙенә бер башҡа тәбиғәтле жанр һәм уны үҙ атамаһы менән йөрөтөү кәрәк булыр, моғайын.

Был фекерҙе ҡеүәтләү өсөн Шакир Насыровтың һүҙҙәренә лә бик ныҡ ҡолаҡ һалырға кәрәк. «Көйләп, моңлап әйтелгән һүҙҙәрҙе тау башҡорттары «ауаҙа» тип тә атайҙар,— ти ул үҙенең рецензияһында.— Ә инде «әйтем» термины таҡмаҡ, һамаҡ, таҡмаҙа кеүек төрлө һамаҡлауҙарҙы эсенә ала. Ҡайһы бер урындарҙа, хатта, сюжетлы тарихи йырҙарҙы ла әйтем рамкаһына индерәләр. Мәҫәлән, бына ошондай әйтем бар:

Ауаҙалы ҡыҙҙың ауыҙы тар,
Күрәҙәле илдең күҙе тар,
Уңышлы йылдың ҡары аҙ,
Уңышһыҙ йылдың яҙы ҡар.

Бында күренеүенсә, ауаҙа һүҙе — моң мәғәнәһен аңлата. Ләкин һүҙ йырлаусы, йырсы моңо тураһында түгел, һамаҡлаусы, көйләүсе моңо тураһында бара.

Әйтем әйткәндә халыҡ әйтемде йыш ҡына шул һүҙҙең үҙенән үк башлап алып китә. Мәҫәлән:

Әйтем әйтһәм талғышып,
Иретер яуыз ҡарғышын,
Яуызға яғын булмағыҙ,
Яуызлыҡты ҡылмағыҙ,
Тилмереп килгән етемдең
Өмөтөн ергә ормағыҙ...

Был инде әйтемдең ябай йырҙан да, ҡобайырҙан да айырылып тороуын, уның ниндәйҙер бер конкрет мәғәнә аңлатыуын күрһәтә.

Йыйынтыҡта халыҡ һүҙҙәренә классификация яһағанда Кирәй Мәргән әйтем жанрына дөрөҫ баһа биргән, тип раҫлағы килә. Шулай ҙа әйтемдең тағы ла киңерәк мәғәнә аңлатыуын бер аҙ асыҡлай төшөргә кәрәк ине».

Тимәк, әйтемдең поговорка булмауында, уның үҙ аллы бер жанр булыуында шик ҡалманы буғай.

Ләкин «поговорка» мәғәнәһен бирә торған атаманы «тапҡыр һүҙ» тип алыу бик дөйөм булмаҫмы? Мәкәлдәр ҙә, әйтемдәр ҙә — улар бөтәһе лә тапҡыр һүҙ инде ул. Ә поговорка өсөн бик конкрет бер атама кәрәк ине. Бәлки, был хәҙергә ҡолаҡ өйрәнмәгәнгә генә бик дөйөм (родовое понятие) төшөнсәһен бирәлер?

Йәнтөйәккә йән тартҡас...

15 апрель.

Бына тағы — онотҡанда бер — көндәлек яҙырға ултырҙым. Исмаһам, бөгөнгө көндө генә булһа ла ҡағыҙға төшөрөп ҡуяйым тип. Хәҙер элекке кеүек көндәлек яҙып ултырып булмай. Кисәме шулай — элеккегөн икән — эштән ҡайтҡас (Надя өйҙә юҡ, мәктәптә ине), нишләптер, эс бошоп китеп, элекке — мәктәптә, институтта уҡыған йылдарҙың көндәлектәрен аҡтарып ҡарай башланым. Күңел әллә нишләп нескәреп китте. Ҡасандыр бик яҡын булған, хәҙер инде күптән юғалған бер кешемдең тормошо күҙ алдыма килеп баҫты... Ул кеше, әлбиттә, мин үҙем булғанмын икән!..

Ирекһеҙҙән «Ватерлоо күпере»ндә Рой әйткән Лонгфеллоның һүҙҙәре иҫкә килеп төштө:

«Мысль о юности — далекая, далекая мысль». (Был һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнәһен донъяла бер мин генә тоямдыр кеүек!..) Эйе, йәшлек тураһындағы уйҙар алыҫ, бик алыҫ уйҙар!.. Үкһеп, үкһеп илағы килә — илап булмай, йөрәктән сығырлыҡ күҙ йәштәре лә ҡалмаған!.. Минең бөтә иң матур тойғоларым «Таш сәскә»мә һеңеп ҡалды, шикелле. Шул таш сәскәгә бөтә күңелемде сүкеп-сүкеп яҙып бөттөм дә, хәҙер мәғәнәһеҙ бер бушлыҡ эсендә тороп ҡалдым. Бер йылға яҡын инде — минең йүнле шиғыр ғына түгел, әҙәм рәтле бер генә шиғыр юлы ла яҙғаным юҡ бит! Бына әле генә — февралдә генә — мине Яҙыусылар союзына алдылар, китап тураһында мәҡәләләр, рецензиялар, хатта өс-дүрт шиғыр ҙа яҙҙылар, минең исем телгә алынған хәбәрҙәр ҙә баҫыла, осрашҡан бер таныш-белештән йылы ғына һүҙҙәр ҙә ишетәм, ләкин мин үҙем күптән инде шағир түгел... Күптәр минән: «Ниндәй яңы нәмәләр яҙып ятаһың?» — тип һорайҙар, мин: «Яҙмайым», — тим. Ләкин был дөрөҫ һүҙгә ышанмайҙар. «Һин шым ғына әллә нимәләр яҙып ятаһыңдыр әле», — тип ҡуялар. Көлөрһөңмө, илармыңмы? Аптырағас, «Франконың хикәйәләрен тәржемә итеп ятам», — тип, үҙемде лә шул һүҙгә ышандырырға тырышам.

Ләкин... ләкин инде: һаман шул бер балыҡ башы — яҙа алмайым; ваҡыт та юҡ, ваҡыт булһа, кәйеф булмай, уныһы булһа, көтөлмәгән ғәҙәттәге хәлдәр килеп сығып тора: ҡатын менән тормоштоң иң түбән стилдәге, иң кәмһеткес, иң мәғәнәһеҙ, иң көлкө... трагедияһын уйнайбыҙ!.. Был «трагедия»ның төп ролен шағирҙарҙың мәңгелек иҙеүсеһе, мәңгелек дошманы — Аҡса-батша уйнай. Ә беҙ, ҡатын менән мин, тик уның ҡолдары ғына — ғәҙәттәге хәйерсе ролдәрен башҡарабыҙ. Бер көн килеп, яҙғы матур апрель иртәһендә, бик күп илдәр гиҙгән сыйырсыҡтар ҡайтып, мең-мең телдә донъялағы иң саф моңдарын түккән бер мәлдә, мин әле йоҡонан айнып, был яҡты донъяға күҙҙәремде асырға ла өлгөрмәҫ борон минән алдараҡ тороп өлгөргән һөйөклө ҡатынымдың иркә, яғымлы тауышын ишетәм:

— Рәми, беҙҙең аҡса бөттө. Икмәк алырға аҡса юҡ...

Юҡ?.. Аҡса?.. Тағы бурыҫҡа инергә! Тағы кемдән булһа ла аҡса һорарға! Кемгә булһа хәйерселәнеп, теләнеп барырға? Тағы, тағы, тағы... Ай һайын, ун биш, ун көн һайын — йылдар буйына!.. Ниңә минең ҡатыным был аҡсаны әҙерәк тота белмәй икән? Эш хаҡы алғансы, айҙың 16-сы көнөнә хәтле, ай ахырына саҡлы аҙ ғына булһа ла ҡыҫып тоторға мөмкин түгелме икән ни? Кешегә аҡса теләнселәп барыуҙың ни тиклем ауыр икәнлеген саҡ ҡына ла тоймаймы ни минең был Надя?..

Ә ул, бер ни булмағандай:

— Ой, какой хороший день сегодня! — тип көн менән һоҡлана. Бик ярата шул минең ҡатын тәбиғәтте!.. Нисек итеп уға ауыр һүҙ әйтмәк кәрәк? Бындай сыуаҡ, әнә осондай ҙа болотһоҙ, иҫ киткес ҡояшлы көн уға, минең 25 йәшлек кенә «балама», шундай матур, шундай һоҡланғыс бер уйынсыҡ бит! Нисек итеп, ниндәй ҡулдарың менән уны тартып алмаҡ кәрәк? Иртәнсәк, яңы көн башланғанда, ҡалай итеп был баланың уйнатып йөрөгән уйынсығын юҡҡа сығараһың?

— Ниндәй яҡшы көн! — тип тешеңде ҡысып, йылмайырға ғына кәрәк бындай саҡта, йәғни 24 сәғәтлек көндөң был изге минутында инде!..

Етмәһә, боронғо ата-бабайҙарҙан ҡалып, был көндөң ошо минуттарына тиклем килеп еткән бик аҡыллы һүҙҙәре бар:

1. Һәр көн, һәр кеше үҙ ризығы менән!
2. Иртән ыҙғышырға ярамай!
3. Ҡул яраһы уңала, һүҙ яраһы уңалмай!
4. Юҡ талаштыра, бар яраштыра.

Һуң, шулай икәнен белә тороп, нисек инде ата-бабай һүҙен тотмайһың? Тоторға кәрәк. Кеше хәтерен, бигерәк тә үҙ ҡатыныңдың хәтерен һаҡлай белергә кәрәк. Хатта һүҙең көмөш булһа ла, әйтмәй ҡалғаны — алтын...

Минең, 16 йыл уҡып, 4 йыл эшләп, айына 780 һум аҡса алып, редакция эшен өйгә лә алып ҡайтып, төрлө наҙандарҙың хәреф хаталарын уҡып ултырыуыма, алдаша, хәйләләй белмәүемә, «үҙ әҙәбиәтем» тип йәнем сығырҙай булып йөрөүемә әллә ҡайҙағы Мәскәүҙән, әсәһенән, эшенән айырып алып ҡайтҡан ҡатыным ғәйепләме ни?

Бөтәһенә лә бит үҙем ғәйепле!..

— Ярай, Надя, мин бөгөн, бәлки, аҡса алырмын, — тим ҡатынға.

Эшкә, редакцияға китәм.

Эйе, бәлки, аҡса ла булыр. Культура министерствоһында минең аласаҡ бар. Хатта меңләп аласаҡмын. Мәскәүҙән йыр текстарым өсөн бухгалтерияға лимит ҡына килеп етһен. Договор төҙөлгән. Көн матур — кешеләрҙең кәйефтәре лә яҡшылыр. Өс йырға бишәр йөҙ түләргә тейештәр. Бына бит «бирәһе килгән ҡолона — сығарып ҡуйған юлына» тигәндәй, мөхәббәт, иң саф тәүге мөхәббәт менән хушлашып яҙған йырҙарҙы ла аҡсаға әйләндерергә мөмкин донъяла! Бына шулай, исмаһам, мөхәббәттән тамағыңды туйҙырырлыҡ йыр булһа ла ҡалһын!..

Хыялымда, яңғыҙ елкән булып,
Сайҡалаһың йылдар буйына.
Йә һис юғалмайһың үҙең унан,
Йә бирмәйһең тынғы уйыма.

Әллә индең һин аҙашып уға,
Әллә индең мәңге ҡалырға?
Ниңә шулай онотмайым һине?
Ниңә шулай һаман янырға?

Әрнеүле лә миңә һәм татлы ла
Тәүге хистәремде ҡуҙғатыу.
Ҡурҡыныс та миңә һине уйлау,
Ҡыҙғаныс та һине юғалтыу...

Эйе, йәшлек тураһындағы уйҙар алыҫ, бик алыҫ уйҙар... Ләкин онотолмай.

Ә унан һуң «һуңғы осрашыу». Әллә булған, әллә булмаған осрашыу был. Командировканан, Баймаҡ районындағы Йылайыр совхозынан, сиҙәм ерҙән ҡайтып килә инем. Силәбе вокзалында, поезд көтөп, диванда серем итеп ултырам. Ҡапыл касса алдынан бер бик таныш ҡыҙҙың, ҡасандыр минең бөтә тормошомдо, бөтә йөрәгемде дер һелкеткән, саҡ ҡына мине поезд тәгәрмәстәре аҫтында иҙмәй ҡалдырған «фәрештә»мдең

шәүләһе үтеп китте һәм күҙ асып йомғансы юҡ та булды. Мин үҙ-үҙемде белмәй, ҡапыл иләүһетеп тороп, дауыл ырғытҡан бер юнысҡы һымаҡ, ултырған еремдән перронға атылып сыҡтым...

Ләкин шау-шыу, шығрым тулы кешеләр араһынан йырып сыҡҡансы поезд ҡуҙғалып та китте. Иң остағы вагон подножкаһында тороп, ниҙер ҡысҡырған, ҡул болғаған бер ҡыҙҙың артынан йүгереп барһам да, бер һүҙен дә асыҡ ишетеп, уның үҙен дә асыҡ төҫмөрләп ҡала алманым. Күҙгә тик артҡы вагондың ҡыҙыл уттары ғына бик оҙаҡ күренеп барғандай булды...

Бына ошо тиле төн ҡараңғылығында күренеп ҡалған бер яҡтылыҡ менән хушлашыу тураһындағы йыр ғына тороп ҡалды үҙем менән: ә ул яҡтылыҡ китте, мәңгегә киткәндер инде, күрәһең!.. Эйе, һуңғы осрашыу ине был. Мин уны романс тип атаным.

Юлдар буйлап, уйҙар уйлап,
Алыҫ китеп барғанда,
Көтмәгәндә осраштыҡ беҙ,
Йылдар уҙғас, бер таңда.

Күрешмәнек, һөйләшмәнек —
Поезд ҡуҙғалып китте.
Тик йөрәккә яҡын тауыш
Утлы ҡуҙ һалып китте!..

Мәңге ҡайтмаҫ, ҡабатланмаҫ
Тауышың ғына ҡалды.
Ғүмергә мин онотмамын,
Һағынырмын был таңды.

Хуш бул инде, хуш, һөйөклөм,
Хуш бул, минең бәхетем,
Хуш, хыялым, хуш өмөтөм,
Хуш, тәүге мөхәббәтем!..

Ә хәҙер бына «кеҫәләге финанстар йырлағас романстар» — мин был йырҙы һатырға барам булып сыға инде. Мине был хатта ғәжәпләндермәй ҙә. Ҡасандыр мин, донъяға гел ғәжәпләнеп ҡараған бер егет, хәҙер инде бер нәмәгә лә шул тиклем иҫем китеп барған кеше түгелмен. Хәҙер мин тормош трагикомедияһының талантһыҙ бер актеры!.. Хатта суфлерҙар һүҙен дә ишетмәй уйнайым кеүек. Ә был кәрәк ине. Сөнки суфлерҙар аҙ яңылыша бит. Китап биттәрендә аҡҡа ҡара менән ни тип яҙылған — шуны уҡып йәшәйҙәр улар. «Эй, кеше, хәҙер

һин ят та үл», тип яҙылған булһа, улар һиңә шуны тутыйғош кеүек әйтер ҙә торор. Сөнки уларға баш тигән нәмә уйлар өсөн, фекер йөрөтөр өсөн бирелмәгән. Уларҙың эше юҡ һиндә. Ләкин һинең эшең уларға бәйләнгән...

Сәнғәт бүлегенә индем. Бер ҙә ашыҡмайҙар. Ә мин ашығам. Ләкин астың хәлен туҡ белмәй шул. Йыр текстарын цензураға ебәрмәгәндәр икән.

— Ниңә уны ҡырҡ ҡабат цензуранан үткәреп йөрөтөргә, китапта баҫылып сыҡҡан бит инде улар, — тинем мин.

— Шулаймы ни? — тине Сатира.

— Эйе, — тинем мин Юмор булып. Өҫкө ҡаттан «Таш сәскә»не йүгереп алып төштөм.

Һәм китте эштәр!..

Ҡайҙан әйткән көнгә төштөм: бухгалтер булмай, министр булһын! Улар һиңә шиғыр уҡып ултырамы инде! Үҙем әйтеп һалмаһам — бөтә эш майлаған кеүек китер ине. Ләкин бухгалтер ҙа, министр ҙа минең йырҙар китапта баҫылғас, артыҡ аҡса минең күҙҙе сығарыр тигән ҡарарға килгәндәр.

Быға тиклем һәр бер йырға түләнгән, ләкин, тартай теленән таба тигәндәй, миңә генә сират килеп еткәйне, бөтә эште бөлдөрҙөм дә ҡуйҙым! «Юғалған иллюзиялар» ғына ҡалды. Хәйерсегә ел ҡаршы шул: мин аҡса алайым тигәйнем, министры ла алышынған — Ғүмәров урынына Вахитов, имеш!

Минең бөтә асыу әлеге шул меҫкен ҡатын башына төштө. Исмаһам, бер хикәйәһе булыр тип, яҙып ҡуйырға булдым...

10 май.

Күптән инде шиғыр яҙғаным юҡ, әйтерһең мин һис тә уларҙы яҙмағанмын!..

Яҙмағанмын!..
Ә бит күпме төндәр
Шиғыр яҙып ғүмер уҙғарҙым.
Кешеләрҙе әллә алданыммы,
Алданыммы әллә үҙемде?
Әллә берәй башҡа сәбәптәнме,
Әйтеп бөттөм шиғри һүҙемде?
Ә бит белә инем
Шағир шатлығының
Күҙ йәш менән ташып барғанын...
Ә хәҙер һуң?..
Ҡайҙа юғалттым мин
Йөрәктәге хистәр байрамын?..
Бер йыл үтеп китте инде бына —
Бер генә юл яҙһам исмаһам!
Юҡ!..



Переделкинолағы Ижад йортонда. 1969 йыл. Һулдан уңға: 1) Г. Радов — рус яҙыусыһы, очеркист, 2) Х. Ярми — Ҡазаҡ прозаигы тәнҡитсеһе, фольклорисы, 3) —?, 4) М. Шәкәров, 5) Р. Мәкимов, 6) А. Игебаев, 7) Р. Ғарипов

Ҡанатын йәйеп, илһам ҡошо
Һис тә осмай икән осмаһа...
Ҡайҙан оҫон,
Ҡайҙа оҫон инде?
Киңлек кәрәк уға осорға!
Ә беҙ,
Күкәй баҫҡан тауыҡ кеүек,
Ултырабыҙ шундай осорҙа,
Өйҙә, тар бүлмәлә,
Ғәйбәт тыңлап,
Ләстит һатып, төтөн эсендә...
Ҡайҙан бында
Шиғыр тыуһын инде? —
Үлеп бөтөр булған хисең дә!
Ә бит һиңә эшләр, яныр кәрәк,
Көлөр кәрәк,
Кәрәк иларға!..
Тик шул саҡта ғына
Һин — Кешеһең
Һәм хаҡлыһың
йыр ҙа йырларға!
Шағир — ел ул,
иркен, күңелле ел,
Ҡайҙа булһа,
Нигә ҡағылһа,
Йырын шунан ала,
Шунан таба,
Шунда ғына тыуа йыр, илһам...

Был минең йә һуңғы шиғырым, йә — тәүгеһе... Йөрәктәге туң бер шеш шартлап һытылырға тора. Башҡаса мин былай йәшәй алмайым. Был — йәшәү түгел! Мин ниндәйҙер бер обывателгә эйләнеп барам. Тимәк, мин үҙ-үҙемә дошман булыр сиккә килеп еткәнмен!..

Юҡ, был минең маҡсатым, хыялым, ынтылышым түгел ине. Яҙырға хаҡым юҡ минең. Шуға күрә лә яҙа алмайым мин. Сөнки алдаша белмәйем һәм теләмәйем дә бындай ахмаҡлыҡты! Әҙәбиәтте, яҙыусы эшен мин яратам. Үҙемсә уны бик тәрән итеп аңлайым да, тоя ла беләм кеүек. Был эштә алдашып булмай. Чехов әйткәнсә, ул эш шуныһы менән изге лә... Мөхәббәттә, политикала, медицинала ла алдашырға мөмкин, кешеләрҙе, хатта «алланың үҙен» алдарға мөмкин... ләкин был эштә алдашыу мөмкин булмаған эш. Бында тик дөрөҫлөк, иң ҙур дөрөҫлөк кенә булырға тейеш. Һәм яҙыусының эше шул дөрөҫлөккә ниндәй дәрәжәлә уның тоғро була белеүе менән үлсәнә. Шунда уның матурлығы, шунда уның ҡиммәте, кәрәклеге.

Был хаҡта мең-мең ҡабат әйтелгән, был мең-мең ҡабат һыналған. Ә мин үҙемде шул хәкиҡәтте реаль тормошҡа, конкрет ысынбарлыҡҡа әйләндереп күрергә һаман да күндереп етә алмайым. Һаман да һуҙам, һаман да киләсәккә ҡалдыра киләм. Һаман да шул бер ҡыҫыр өмөт менән йыуанам...

Көлкө!.. Биллəһи, ахмаҡ бер көлкө! Ҡурҡаҡлыҡ был, эшләргә, бөтəһен дə яңынан башлап эшләргə, янып йəшəргə кəрəклектəн ҡурҡыу.Ҡойоп ҡуйған мещан ҡурҡаҡлығы! Урынымды, ҡатынды, квартираны юғалтырмын тип ҡурҡыу... Ә былай бит мин үҙемде юғалтам тип ҡурҡыу, изге ҡурҡыу, кешесə ҡурҡыу юҡ. Ә һин үҙең юғала барғанда быларҙың бар булыуы нимәгə кəрəк! Тфү!.. тип бер төкөрəһе лə ҡалмай бит. Ә бөтəһен дə бит яңынан башларға, ҡара ерҙе аҡтара һөрөп, үҙ ҡулыңдың көсө, йылыһы, яҡтыһы кергән емеште күреп ҡыуанырға, шул емештең иң аҡыллы, иң ябай бəхетен татып белеүҙəн башларға кəрəк. Шунда ғына һин кеше үҫтергəн емештең тəмен үҙең белеп татырһың. Шунда ғына һин кешенең уйын, фекерен, хисен, тойғоһон, өмөтөн, хыялын — кешенең иң матур эске донъяһын белəм тигəн бер һүҙ менəн хаҡлы булырһың. Үҙеңдə шул эш эшлəп, яңы донъя ҡорған кешеләрҙең яҙмыштары менəн байыҡтырмай тороп, үҙеңдең шул тормоштан сыҡҡан тормош тəжрибəң булмай тороп, нисек итеп һуң ҡулыңа ҡəләм алырға хаҡың булһын. Был бит һинең хаҡың юҡ тигəн һүҙ! Күкрəп үҫер ерең булмағас, һин ниндəй үҫемлек һуң? Ереңə, яралған тупрағыңа, асылыңа ҡайтыр кəрəк. Шул тупраҡҡа бер-ике бөртөк булһа ла таҙа орлоҡ сəсеп, эшеңдең емешен күрергə кəрəк! Шулай итеп кенə һин кешеләрҙе лə шуға өйрəтергə — яҙырға хаҡлы буласаҡһың. Яҙ, рəхəтлəнеп яҙ, көлөп, илап яҙ — рəхəтлəнеп, көлөп, илап уҡырҙар.

1 июнь.

Бөтə был фекерҙəремде бынаҙ бөгөн, ауылға ҡайтып килгəндəн һуң, асыҡлап яҙҙым. Ялға ҡаршы төнгө поезд менəн Салауатҡа барып төштөм дə сельпо машинаһы менəн ауылға ҡайтып еттем.

Бөтə күргəндəрҙе яҙып тормайым. Ҡайтып, малай менəн бер аҙ шаярып, инəйем менəн ултырып сəй эскəс тə, колхоз идараһына киттем. Ҡыҙыҡ — хатта правлениеның ҡайһы йортта икəнен дə белмəйем — элекке МТС биналары колхоз ҡарамағына күскəн. Правление ике ҡатлы йортта, беҙҙең баҡса артында. Элек бынан баҫыу башлана ине. Ә хəҙер бынан егерме ауылды берləштергəн колхоз заводы башлана. Минең күҙгə ташланып торған нəмə — ағастар, йəшеллек юҡ һымаҡ. Был урынды шаулап үҫеп ултырған ҡайындар менəн ҡаплағы

килә!.. Ауылдың баҡсалар эсендә күмелеп ултырғанын күргә килә.

Председатель бүлмәһенә инерҙән элек секретарь-машинистка бүлмәһе аша үтергә кәрәк. Ғүмерҙә күрелмәгән хәл...

— Председателгә инергә мөмкинме? — тип һорағы килә. Бәлки, мин тәүге кеше булып һорағанмындыр ыны.

Инәм — өҫтәл башында счет төймәһен үҙе тартып ултырған председатель Кинзин. Эргәһендәге диванда партия ойошмаһы секретары Яруллин, икенсе яҡтағы ултырғыстарҙа минең элекке класташым Ким — хәҙерге колхоз агрономы Шәйхисламов, уның менән бергә минең туғаным — колхоздың инженер-механизаторы Камил Булатов. Ниҙер кәңәшләшәләр, сәсеү тураһында һөйләшәләр. Өҫтәлдә телефон шылтырай, стенала барометр эленеп тора, ә тышта ямғыр яуа. Кешеләр арыған булһалар ҙа, йөҙҙәре бик шат күренә. Ямғырҙы тындары менән тартып алырҙай булып көткәндәр.

— Бына һеҙгә ямғыр алып килдем, — тип һөйләшеп киттем.

11 июнь.

Правление ултырышы булды. Ҡадир Даяндың ижады тикшерелде, журналдың планын ҡаранылар, яҙыусыларға йәйгелеккә аҡса өләштеләр.

Бик ҡыҙыҡ булды. Ләкин был хаҡта яҙып тормайым. Минең өсөн хәҙергә иң мөһиме шул: был ултырышта минең яҙмыш та хәл ителде! Колхоздан Яҙыусылар союзына Кинзин менән Яруллиндың хаты килеп тә еткән. Хатты уҡынылар, минең ғаризаны ла ҡаранылар. Бөтәһе лә минең колхозға китеүемде бик хуп күрҙе. Ике айға командировка ла бирергә булдылар. Тәүҙә юлға инеп киткәнсе һәм бер аҙ өҫ-башын бөтәйтергә ярап торор, тинеләр.

Ғөмүмән, бындай мөнәсәбәтте күреп, мин бик шатландым, төрлө шиҡ-шөбһәләргә урын ҡалманы, дәртләнеп, ҡанатланып ҡайтып киттем. Тик өйҙә генә конфликт булып алды. Ҡатынға мин һаман да хыялый бер еңел баш. Ә башта минең әллә күпме ауыр уйҙар, әллә күпме тарих, әллә күпме философия! Башта ғына түгел, минең ышанысым, донъяға ҡарашым, ынтылышым бөтә тәнемдә, йөрәгемдә! Ләкин быларҙың бөтәһен дә нисек итеп һуң уның башына һалаһың? Булмай! Бына шунан юҡ ҡына нәмәләр өсөн дә ҡаршылыҡ тыуа. Юҡ ҡына нәмә өсөн дә һүҙ көрәштерәбеҙ, ғазапланып баш ватабыҙ, бөтә тормошто аҡтарып сығабыҙ, хатта айырылышыуға тиклем барып етәбеҙ!.. Белеп тораһың: иртән былар барыһы ла юҡҡа сығаҫаҡ. Ләкин тамсы тама-тама ташты ла тишә бит. Таш булып ҡалырға теләһәм дә — сабырлығым етмәй — тоҡанып китәм...

Ә быны кисереүе бик ауыр. Ярай әле ул йоҡлап китә, ә мин төнө буйы дулап сығам, уҡшығансы тәмәке көйрәтәм. Ниҙәр генә килеп, ниҙәр генә үтеп китмәй баштан!.. Күпме көс бушҡа түгелә! Рәхәтләнеп эшләй торған сәғәттәрең шундай мәғәнәһеҙ, шундай буш нәмәләргә әрәм була! Ғәжәп был тормош...

Ләкин минең сыҡҡан юлымдан боролоп ҡайтаһым юҡ. Был юлдан мин саҡ ҡына ла тайпыла алмайым. Бөтәһе лә шул юлда! Бөтәһе лә!..

12 июль.

Колхоздан килгән хат тураһында кисәге ултырышта Мостай Кәрим:

— Бик шәп! Был председателде Яҙыусылар союзына консультант итеп ҡуйырлыҡ! — тине. Бөтәһе лә көлөштө. Хатта, хатты яҙған кеше, мин үҙем дә көлдөм. Мин яҙғанға бер һүҙ ҙә өҫтәмәгәндәр, баҫтырғандар ҙа ебәргәндәр. Ҡултамға, мисәт һәм амин!..

Ярай ҙа һуң мин әйткәндең һәр һүҙенә мисәт һуғып ҡына торһалар!.. Ләкин тормош — ҡағыҙ яҙыу түгел шул. Беләм: күп көс кәрәк буласаҡ. Ләкин инде тәүәккәлләйем: ни булһа ла булыр, үҙемде һынап ҡарарға, белергә кәрәк. Бәлки, үҙ артымдан кешеләрҙе эйәртеү түгел, тракторға ултырып, сәүкәләр ҙә эйәртә алмаҫлыҡ кешемендер?

Нисектер ҡурҡыныс та, шатлыҡлы ла. Ҙур бер һынау — тормош көтә алда!.. Боҙҙай һалҡын һыуға һикереп төшөргә торған кеүекмен. Был тойғоно һәр бер һынау алдынан күп мәртәбә кисерҙем. Ләкин үҙемде һынатҡаным юҡ шикелле... Бел: «Һыуға кермәйенсә, йөҙөргә өйрәнеп булмай».

13 июль.

Нужа ҡалас ашата, ти. Эйе, төрлө ауырлыҡтар, төрлө ҡыйынлыҡтар ғына уларҙы күтәрергә, еңергә өйрәтәлер инде. Уҡый белһәң, тормош — ҙур мәктәп, белмәһәң, ул һине баҫырға ла мөмкин. Тормош баҫҡан уны, тиҙәр халыҡта. Әгәр ҙә тормошто төҙөшмәһәң, уға тик аҫтан ғына ҡарап, ҡул ҡаушырып ҡына торһаң, әлбиттә, ул баҫасаҡ һине. Ләкин уның ни өсөн баҫҡанын, уның сәбәптәрен белгән кешегә, йөрәгендә — дәрте, ҡулдарында — көсө, башында аҡылы булған кешегә бынан ҡурҡырға ярамай. Мин йәш әле, һәм быларҙың миндә бөтәһе лә бар кеүек.

Минең тормоштағы яңылыҡ әллә ҡайҙан таралып та өлгөргән. Төрлө кеше төрлө фекер әйтә. Ләкин минең үҙ фекерем күптән уйланған инде. Уның ике төрлө булыуы мөмкин түгел! Тик шуныһы ғәжәп: ҡарттар йәштәрсә ҡарай, ә йәштәр нисек-

тер уғата ҡарт булып китәләр, иртә ҡартайыу бар беҙҙең йәштәрҙә. Был ниңә шулай?.. Сәбәбе ниҙә бының?..

14 июль.

Ауылдан Ахун ағай килгән. Надя менән Мәймүнә апаларға барып күрештек. Күптән инде уларға барған юҡ ине. Хәҙер инде оноттоғоҙ, килеп тә сыҡмайһығыҙ, ти. Эйе, ул ваҡытты оноторға яҙһын!.. Юлда Надяға бынан ун өс йыл элек булған хәлдәрҙе һөйләп барҙым. Мәймүнә апа бынан ун өс йыл элек, мин ғүмеремдә тәүге мәртәбә ҡалаға килгәндә, ун дүрт йәшлек малайҙы «Хәйерсе» тип ҡаршы алды. Ашағанда «бисмилла» итеп ашарға ҡушҡан «коммунист» апай ине ул. Бынан һуң ул төрмәлә ултырып, еҙнәмдең сәстәрен ағартып сыҡты. Ләкин һаман да йөҙөндә, яһалма йылмайып тороуҙан башҡа, бер ниндәй ҙә яңы сифаттар күренмәй... Балалары уҡып бөтөп, квартиралары яңырыуҙан башҡа, бер нәмәһе лә үҙгәрмәгән. Минең ауылға китеү тураһында һүҙ сыҡҡас, үҙенең бөтә булған донъяға ҡарашын билдәләп: «Бындай квартираны ауылға алыштырып буламы һуң?» — тине. Ҡасандыр яҙмыш мине шул кеше ҡулына килтереп индергәндән һуң ун өс йыл үтте. Кеше ғүмере өсөн аҙ ваҡыт түгел был. Ләкин был апайҙың ҡулынан ҡотолғанға ун өс көн дә үтмәгән кеүек... Ҡыҙыҡ та инде кешеләр!.. Ә Ахун ағай — шул апайҙың йөрәк әрнеткес ҡорбаны хәҙер. Ул уның аслыҡ менән мейеһен кип-тергән — һәм уға хәҙер был йылдар өсөн бик ҡиммәт түләргә тура килә. «Баш эшләмәй, туғанҡай, баш», — ти. «Донъяла сәләмәтлеккә ни етә, һаҡла үҙеңде, туйғансы аша, туйғансы йоҡла!» тигән һүҙҙәрҙе ул миңә әллә нисә ҡабат үтенеп, ялбарып, васыят һымаҡ итеп әйтте. Уның был һүҙҙәре миңә иҫ киткес ныҡ аңлашыла. Был уның һүҙе түгел — үҙе!.. Ә ул үҙе иҫ киткес яҡшы күңелле, ҙур йөрәкле бер кеше ине. Ләкин тормош уны иҙгән, ватҡан, баҫып ҡалдырған. Уның тик балаларса саф, балаларса яҡты булған күҙҙәре генә ҡалған... Әлбиттә, ҡатыны, өйө бар, өйөндә биш балаһы бар. Ләкин ҡатыны ла, өйө лә үҙенеке түгел. Хатта эшләгән тракторы ла үҙенеке түгел: «Списать ителгән тракторға ултырттылар», — ти. «Тура әйткән туғанына ярамай, тигәндәй, председатель Камалов менән һүҙгә килешкәйнек», ти...

15 июль.

Кис Ахун ағай балаһын етәкләп беҙгә килде. Малайы Рафиз исемле, теремек, матур, бик «үҙ һүҙле» малай. Ҡулына уйынсыҡ та тотоп өйрәнмәгән. Салауаттың тишек башлы ҡурсағын тотҡас, бөтә донъяны онотто...

Ахун ағай килеүгә яртыны алып ҡуйғайныҡ. Ләкин ул бик эсмәй ҙә икән. Ярай әле, Марат килеп керҙе, бергәләп эстек. Һүҙ... мөхәббәт тураһында барҙы! Ахун ағайҙың бында бик күптән яратып йөрөгән Рауза исемле ҡыҙы бар икән. Әле шуның менән осрашырға һүҙ ҡуйышҡандар ҙа, шуға ашыға.

— Ниндәй ҡыҙ һуң ул? — тинек. Ә ул ҡыҙҙы ире бер балаһы менән ташлап киткән булып сыҡты. Ләкин был ғына мөхәббәтте юҡ итә алмай икән... Ләкин беҙ Ахун ағайға:

— Биш бала — биш ғүмер тураһында уйла, — тинек. Һәм был хаҡта бик етди итеп һөйләштек. Ғәжәп ҡыҙыҡ бер тарих ине был!..

Марат тороп ҡалды, ә беҙ, малайҙы етәкләп, «ҡыҙ» менән күрешергә киттек. «Ҡыҙ», балаһын етәкләп, беҙгә ҡаршы килә ине. Баҡсаға индек. Ә балалар бер ни белмәй, беҙҙең тирәлә оҙаҡ ҡына уйнап йөрөнө...

16 июль.

Надя менән магазиндарға йөрөп, өҫ-башҡа яңы костюмдар һатып алдыҡ. Ауылға яланғас ҡайтырға ярамай. Өҫ-башың әҙерәк кенә «әҙәм рәтле» булырға тейеш. Магазиндарҙа хәҙер йәнең ни теләй, шул бар. Ләкин беҙ йән теләгән нәмәләр тирәһендә оҙаҡ туҡтап тормайынса, кеҫә теләгәндәрен генә ҡараныҡ. Шулай ҙа хәҙер кеше күҙенә күренерлек булдыҡ шикелле... Юҡһа, «үҙе яҙыусы, үҙенең бер йүнле салбар ғынаһы ла юҡ» тип әйтеүсе кешеләр бер Мәймүнә апа ғына булмағандыр. Уларға барғанда, мин ни тиклем генә тубығымдағы ямауҙы ҡаплап ултырырға тырышһам да, ямауҙы йәшереп ҡала алмағанмын икән... Күргән тәки!.. Үҙемә әйтмәһә лә, Ахун ағайға әйткән. Кеше күңеленде күрмәһә күрмәҫ, ә кейемеңде күрмәй ҡалмаҫ инде ул...

Ә Ахун ағай Чеховтың матурлыҡ тураһындағы фекерен иҫкә төшөрөп:

— Кейемеңде лә ҡарап йөрө, һин бит ауылға йәштәр араһында эшләргә ҡайтаһың, — тине. Дөрөҫ, хаҡ һүҙҙәр!..

21 февраль.

Әҙәбиәттең бурысы.

Әҙәбиәттең бурысы — кешене кешелекле итеү, кешелә иң матур кешелек хистәрен уятыу, шул хистәрҙе тәрбиәләү һәм, шундай кешеләрҙе тыуҙырышып, иң бай, иң ғәҙел һәм матур кешелек йәмғиәтен төҙөшөү...

Кешене кешегә ярҙамсы, дуҫ һәм туған итергә теләү — шағирҙың иң ҙур теләге шул.

Шағирҙың төп бурысын Пушкин күптән әйткән: «И чувства добрые я лирой пробуждал».

Яңылыҡ тойғоһо. Һәр көн — яңылыҡ. Һәр көн — яңы асыш. Һәр көн — яңылыҡ өсөн көрәш. Мин артҡа ҡалам кеүек: яңылыҡты аҙ ишетәм, аҙ күрәм, аҙ беләм. Нисектер мин яй ҡуҙғалам...

Ә мине ашығыуҙа ғәйепләйҙәр! Район партконференцияһына килгән обком вәкиле Ғәйнуллин Миҙхәткә: «Ул былай бар нәмәгә тиҙ үтеп инә, ләкин бигерәк ҡайнар баш — бөтә нәмәне бер көндә төҙөмәксе була», — тигәндәр райкомда.

Был мине бер аҙ шатландыра ла һәм бик аптырата ла. Сөнки кешеләрҙең алға атлауын тотоп торған иң зарарлы нәмә — ул кешеләрҙең элеккесә, нисек күнегелгән, шулай уйлауҙары, шулай йәшәүҙәре, боронғо ғәҙәткә һуҡыр рәүештә буйһоноу.

Был — яңылыҡ тойғоһо етешмәү.

Быны кешеләрҙән йәшереү өсөн, аҡланыу өсөн улар: «Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ» йәки «Мәскәү ҙә тиҙ төҙөлмәгән» тигән мәҡәлгә ышыҡланалар. Мин Мәскәүҙә биш йыл йәшәнем, шунда Мәскәүҙең ни тиклем тиҙ үҙгәреүен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем: Мәскәү көн һайын йәшәрә. Кисен булмаған ағастар иртән инде әкиәттәге һымаҡ япраҡ ярырға бөрөләнеп ултыра!..

Шундай ваҡытта нисек итеп инде юрғаныңа ҡарап ҡына аяҡ һуҙырға кәрәк? Мәҡәлдәр контекста төрлө мәғәнә ала. Яңы контекста улар иҫкергән булып сыға. «Мәскәү ҙә тиҙ төҙөлмәгән» тигән мәҡәл бөгөн Мәскәү өсөн үткән заман тари-

хы ғына. Ә бөгөн уны «тиҙ төҙөлмәй» тип, хәҙерге заман ҡылымда әйтергә мин булдыра алмайым. Хәҙер ул йыл үҫһен ай үҫә, ай үҫһен көн үҫә!.. Һәм бөтә үҫештә лә — әлбиттә, бөтә яҡшы үҫештә — Мәскәү үҙе үк шуны талап итә бит.

Нисек итеп быны тоймаҫҡа?

Был минең күптән уйлап йөрөгән уйым. Һәм бына бөгөн «Комсомольская правда» газетаһында был уйҙы нығытып ҡуйыр, шуны башҡаларға еткерер өсөн, бик ҡыҙыҡлы миҫал:

«Мәскәү әкиәттәге кеүек тиҙ төҙөлә!» тигән миҫалды табып шатландым.

Хрущевтың Бхилай металлургия заводында совет һәм һинд белгестәре менән бик матур һөйләшеүе баҫылған.

Беҙҙәге төҙөлөш темпы хаҡында һөйләп, Хрущев уҙған 1959 йылда ғына Мәскәүҙә 2 млн 700 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөлгәнен әйтә.

Был һандар теге мәҡәлде бөтөнләй юҡҡа сығара. Сөнки быйыл был һан 3 миллионға күтәреләсәк.

Ә революцияға тиклемге Мәскәүҙә бөтә торлаҡ майҙаны 11 миллион кв. м булған. Был төҙөлөш 800 йәшлек Мәскәү тарихының һигеҙ быуаты буйынса барған. Был өйҙәрҙең дә күбеһе аҫтан булып, канализация-водопровод кеүек нәмәләр төшкә лә инеп сыҡмаған бит.

Шулай итеп, Мәскәүҙә һигеҙ быуат буйына 11 млн кв. метрлыҡ өй булһа, был хәҙер инде өс-дүрт йылда төҙөлә!..

10 март.

Яҙыусының тормош менән бәйләнеше тураһында уйлайым. Бөтәһе лә тормошсан яҙыусы булыу тураһында уйлай, бөтәһе лә тормошто белергә кәрәк, ти, бөтәһе лә был фекер менән риза. Бер кем дә тормоштан ситтә булырға, тимәй.

Был — һүҙҙәр! Әлбиттә, һүҙҙәр!

Һүҙ һөйләргә беҙ өйрәнгәнбеҙ.

Ә эшкә килгәндә инде — эш менән һүҙ араһында тәрән упҡын ята... Һүҙҙең эштән айырмаһы — ер менән күк айырмаһы...

Был айырманы, был упҡынды күрмәү өсөн төрлө-төрлө «бәйләнеш» теориялары уйлап сығаралар. Телдең һөйәге юҡ, был «бәйләнеште» төрлөсә «бәйләп» йыуанабыҙ. Ә тормошҡа килгән кеше юҡ. Бөтәһе лә үтелгәндәр тураһында иҫтәлектәр яҙа, бөтәһе лә үҙенең үткәне тураһында һоҡлана.

Йәштәр ҙә бала саҡтары тураһында мемуар яҙа... Ә иң ҙур бәхәстәре — рифма, ритм тураһында.

Юҡ, был тормош менән бәйләнеш түгел. Был бәйләнеш ҡатын-ҡыҙ менән өндә түгел, э төштәге бәйләнеш кеүек кенә...

Ижади командировкалар, минеңсә, шул төштәге бәйләнеш өндәгеһенә оҡшағанмы, юҡмы икәнлеген белеү өсөн генә. Был тик күренеп торған нәмәләрҙе күреү өсөн генә... Ә күренеп торғандарҙы күреү, әлбиттә, еңел. Ә бына күренмәй торғанды күреү өсөн бер кешене көн һайын, төрлө хәлдә күргә кәрәк. Шунда ла әле күреп бөтә алмайһың, күргән һайын әле уның бөтөнләй күренмәгән яҡтары асыла. Уның бөтә асылын асыу өсөн уның менән йәшәргә, эшләргә, хатта әрләшергә лә кәрәк бит.

Төҙөлгән тормоштоң бөтә тәрәнлеген, бөтә киңлеген, бөтә ауырлығын һәм шатлығын тойоу өсөн, уны үҙ ҡулдарың менән төҙөшөргә кәрәктер.

Бына был «ҡара эш» беҙҙең яҙыусыларға оҡшап етмәй. Шуның өсөн тормош менән бәйләнеш тураһында төрлө теориялар уйлап сығаралар ҙа инде. Бына шуның өсөн дә төрлө рифмалар, ритм һәм үлсәүҙәр тураһында бәхәсләшәләр ҙә.

Ә бит һин әгәр ҙә ысынлап та яҙыусы икәнһең, яҙмайынса булдыра алмайһың икән, үҙең яҙа торған дөрөҫлөктән — яңылыҡтан ситтә йәшәй алмайһың. Был яңылыҡты тик тормош үҙе генә бирә ала. Һәм ул уны шуға һыуһаған кешегә генә бирә... Рифмаларын да, ритмды ла ул үҙе бирә...

Әлбиттә, бында яҙыусының шул тормошҡа булған актив мөнәсәбәте лә бик мөһим. Һыу эсендә муйыныңдан кисеп тороп та, һыуһап тороуың мөмкин... Тап тал һымаҡ!

Быныһы инде — икенсе мәсьәлә.

Быныһы тормош эсендә булып та, унда тик күҙәтеүсе генә булып ҡалыу. Утрау кеүек бер урында ғына ла ҡуҙғалмай ятырға мөмкин. Был саҡта һин дөйөм ағышҡа тик тотҡарлыҡ ҡына булып ятаһың...

Бынан бер кемгә лә, зыяндан башҡа, файҙа юҡ.

Кешеләрҙең ҡайғыһы һинең үҙ ҡайғың, үҙ тормошоң булһын. Уларҙың шатлығы ла үҙеңдекенә әйләнһен. Бына шул саҡта ғына һин улар исеменән һөйләргә хаҡлыһың.

Ә кешелә һинең эшең булмаһа, ул саҡта ниндәй кеше һуң һин? Обыватель, мещан ғына һин!..

10 март.

Ниңә беҙҙең етәкселәр халыҡҡа ҡысҡыралар? Нимәне аңлата һуң был ҡысҡырыу? Ни бирә һуң был? Үҙенең кире яғын ғына бирә бит был. Шулай түгелме?

Халыҡ — күп кеше. Һин әгәр ҙә халыҡҡа төкөрөп ҡараһаң, ул да һиңә төкөрөп ҡараясаҡ. Һин бер төкөрһәң, күп кеше бер төкөргәндә генә лә күл төкөрөр, һәм һин күлдә батып ҡалырһың.

Шулай булғас, нисек итеп һин эскән ҡойоңа төкөрә алаһың?

Халыҡ күңеле ул күк йөҙө кеүек киң, сикһеҙ. Ә һин улай күккә ҡарап төкөрһәң, төкөрөгөң үҙеңдең йөҙөңә генә төшөр... Ә күк йөҙөн һин үҙеңдең төкөрөгөң менән ҡаплай алмаҫһың.

Көлкө был ҡысҡырыу, көсһөҙлөктән генә килә ул. Тәрән итеп уйламауҙан, тәрән итеп тоймауҙан килә. Балалыҡ был. Бала ауыртынһа, ҡысҡыра. Ә оло кеше ауыр булғанда ла түҙә, сабыр була. Сөнки ҡысҡырыуҙан бер ниндәй ҙә мәғәнә юҡ.

Халыҡ менән иҫәпләшмәйһең икән, ул да һинең менән иҫәпләшеп тормай. Һин уның алдында хаҡты эшлә, хаҡ эште халыҡ яҡлай.

Халыҡтан айырылдыңмы, тимәк, хаҡлыҡтан айырылдың тигән һүҙ.

Бына шуны беҙҙең етәкселәр бик ныҡ онотоп китәләр. Әйтерһең улар — халыҡ өсөн түгел, ә халыҡ улар өсөн йәшәй.

Юҡ, былай баш түбән уйлауҙан, ултырған ерең менән генә уйлауҙан бер ниндәй ҙә эш барып сыҡмай. Бындай етәкселәрҙең кәрәге лә юҡ. Был тик етәксе исемен бысрата ғына...

Тағын бер мәсьәлә борсой. Был уҡытыусылар мәсьәләһе — ни өсөн уҡытыусыларҙың күбеһе уҡытыусы түгел? Тәбиғәте менән уҡытыусы булмаған кешеләр хәҙер сусҡа тубығынан, ә ысын күңелдән бөтә йөрәген биреп эшләгән уҡытыусылар аҙыраҡ.

Мәктәптә балаларҙы уҡыталар, ә уларҙың ата-әсәләрен уҡытмайҙар. Ә был ата-әсәләр бит — халыҡ! Ниңә улар халыҡ араһында эшләмәйҙәр? Уҡытыу эше бит дөйөм халыҡ эше!

Әгәр ҙә уҡытыу дөйөм халыҡ эше түгел икән, был бит мәғәнәһеҙ эш... Иләк менән һыу ташыу...

Сөнки бала мәктәптә бер һүҙ ишетә, ә өйҙә икенсе төрлө эшләй. Был бит һүҙҙең эштән айырылыуы, уҡыуҙың тормоштан айырылыуы.

Әгәр ҙә уҡытыусы мәктәптән тыш та эшләмәй икән, ул уҡытыусы түгел. Уҡытыусы түгел икән, ниңә уларҙың ҡулына киләсәктең яҙмышын тапшырып ҡуйырға? Был енәйәт бит, уйлаһаң... Балаларҙы боҙоу ғына. Сөнки бала күҙе, бала күңеле иң элек уҡытыусының үҙенән өйрәнә, унан үрнәк ала. Ә ул ҡойоп ҡуйған мещан икән, ниңә ул шундай яуаплы эштә ҡалдырыла?..

Ҡыҙыҡ хәл. Бик ҡыҙыҡ!..

Беҙҙә бит хәҙер күп уҡытыусылар хосуси милексегә әйләнгән. Дәүләттән аҡса ла ала, үҙендә лә бөтөн бер хужалыҡ алып бара... Үҙ өҫтөндә эшләргә, үҙенең эше тураһында уйларға ваҡыт та ҡалмай уға. Ул мал аҫрап, әйбер йыйып, мал һәм

әйберҙәр ҡоло булып йәшәй. Шуның өсөн уның авторитеты ла юҡ.

11 март.

Ултыра торғас, төнгө сәғәт 3-сө ярты ла булып китте. Тышҡа сыҡтым. Көндөҙгө ел баҫылған. Ап-аяҙ айлы төн... Шундай матур айлы төндәрҙе күпме күргәнем бар инде — ләкин һәр бер төн үҙенсә матур. Йондоҙҙар шундай бейек бөгөн — шундай яҡтылыҡ артында хатта уларҙың барлығы ла тойолмай. Йондоҙҙар бар инеме, юҡмы, хатта иҫләмәнем дә. Күк йөҙө бик юғары күтәрелеп киткән кеүек. Тик ай ғына үҙ урынында. Ап-аҡ ҡар һәм ап-аҡ күгелйем төҫлө. Айҙың һул яғынан йомшаҡ ҡына, татлы, еңел генә серем иткән кеүек, шыйыҡ аҡ томан булып бер болот һалынып төшкән. Әйтерһең муйыл сәскәһенән бер генә тәлгәш... аҫылынып, елберҙәп тора...

Ғәжәп бер шатлыҡлы яҡтылыҡ. Күңелдә лә шул яҡтылыҡ. Овечкиндың «Үҙ ҡулдары менән» тигәнен дә уҡып сыҡтым... Шәп!..

12 март.

Көҫәпәйҙән Ғиниәт ағай үҙен «Крокодил»ға төшөргәнде ишетеп килеп тә етте.

— Ҡара әле, Ғарипов ҡустым, — ти. — Яҙыуын яҙғанһың да, политик яҡтан бик дөрөҫ түгел бит әле. Мин ҡарт ҡына көйөмә наҙан ғына башым менән бөтә эште алып барам, ә бына шул «Крокодил» хәҙер бөтөн ауылға таралған, халыҡ төрлөсә һөйләй. «Ғиниәт ағай, һине анда үтергәндәр», тиҙәр. Шулай итеп, нисек инде бригадирҙың авторитеты булһын, күҙҙән төшә бит кеше. Ә мин яманмы-яҡшымы шул колхоз тип һөрәләнеп йөрөп ятҡан булам...

— Бына шул һөйрәлеү тураһында әйтелгән дә инде, Ғиниәт ағай, — тим. — Бер ҙә һине тәнҡитләйһе килмәй ҙә бит ни, тәнҡитләргә тура килә. Фермаңда эш шәптән түгел бит. Иғтибар итеп еткермәйһең. Былтыр өс йөҙҙән ашыу сыҫка үлгән, ә быйыл ун алты... Әле бөгөн төндә тағы бер сыҫҡағыҙ үлгән. Фактмы?

— Әй, ул ауырыу бер сыҫка балаһы ине лә...

— Ниңә ауырыу? Тыуғанда ауырып тыумағандыр бит, ә үлгәндә — ауырып үлгән...

— Мин барып үтермәгән дә аны.

— Һин бит бригадир — үлтертмә! Мин бит һин үтергәнһең тип яҙманым, һеҙҙең ферма тип яҙғанмын.

— Ә әнә кунный дувырҙа «сусҡам быйыл ун алты баштан да артыҡ үлмәһә, исемем Финиәт булмаһын» тип әйткән тип һөйҙәйҙәр бит.

— Нишләп улай булһын, киреһенсә, шул «ун алты баштан да артһа...» тиелгән дә инде. Бына шунан артыҡ үлтертмә!.. Әйҙә, сығып уҡып ҡарайыҡ.

— Әйҙә...

Парткомдан сығып стенала элеүле торған «Крокодил»дың «Көҫәпәй ҡайғылары»н уҡып күрһәттем.

— Шулаймы?

— Шулай инде лә...

— Шулай булғас, бына бынығын да тыңлап ҡара, тәңкит тураһында ла әйтелгән. Файҙалы бынығы ла, — тип «Тәңкиткә — тәңкит» шиғырын да уҡып сыҡтым. — Бына шулай, Финиәт ағай, ауыҙың әҙерәк ҡыйыш икән, көҙгөгә үпкәләмә...

Ҡарт бер һүҙ ҙә әйтә алманы — бирелде. Ләкин һүҙҙе бик ауырға алды. Газета тирәһенә йыйылған халыҡтан тиҙ генә ситкә китеп, Фөбәй ағайҙың бүлмәһенә кереп китте.

Шунда торған Фәббәсова Ира:

— Ҡайҙа, берәйегеҙҙә ҡәләм юҡмы? — тип, минән ҡәләм алды ла «Көҫәпәй ҡайғылары»н күсереп яҙырға тотондо...

Мин Күҙәгә киттем. Ләкин йыйылыш тағы тороп ҡалды. Арҡауылға уйынға сыҡҡандар. Юлай менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Күҙә бригадирында ла шул уҡ хәл. Эш көсө етешмәй, ҡатын-ҡыҙ эшләмәй. Хеҙмәт көнөнә иген дә, аҡса ла юҡ.

— Бына үҙем инде 6 айға 50 һум аҡса алдым ни бары, — ти Юлай. — Шунан нисек эшләгең килһен инде. Талпынып-талпынып ҡараным да, булмай инде...

Бөтә бригадаларҙағы кеүек үк шул уҡ һүҙҙәр, шул уҡ мәсьәләләр.

Орлоҡ юҡ. Туңға ни бары 300 га ер һөрөлгән. Яңынан 500 га һөрөп сәсәһе бар. Ә бөтәһе 125 эш көсө бар (63 ир, 62 ҡатын). Уларҙың да күбеһе штатлы эштә — фермала һәм башҡа урындарҙа. Ә бригадала эшләүсе ҡыҙҙарҙан ни бары бер генә ҡыҙ ҡалған!.. Бигерәк тә орлоҡ аяҡтан йыға. Орлоҡ алыштырыуҙа көҙ машиналар буш ҡайтһа, хәҙер тракторҙар буш бара. Иҫәпләп ҡараныҡ: был «эшкә» Күҙә фермаһының ике айлыҡ һөтө бушҡа түгелә...

Ат һарайында ла шул хаҡта һөйләшеп ултырҙыҡ. Бөтәһе лә бушҡа эшләйбеҙ тип зарлана. Совхоз булыуы-булмауы тураһында һорашалар.

— Шул совхоз ғына ҡотҡармаһа, бүтәнсә ышаныс ҡалманы, — тиҙәр.

— Сабитов директор була, имеш, тип һөйләйҙәр, шул дөрөҫмө икән?

— Кинзин кем булып ҡалыр икән?

Бына шундай һорауҙарҙы бирәләр. Аптырайһың — был хәбәрҙе ҡайҙан ишетеп өлгөргәндәр, ҡайҙан белгәндәр тиң әле... Өйөңдәген күршеңдән барып һора тигәндәй, идаралағы яңылыҡтарҙы бригадаға сығып ҡына бел. Ә идарала был хаҡта теләр-теләмәҫ кенә, сер һаҡлап ҡына, быш-быш теле менән генә һөйләшәләр.

Ләкин бригадаларҙа бөтәһен дә белеп торалар! Күрәһең, бөтә көткән нәмәләре шул булғас, белмәй мөмкин дә түгелдер... Совхоз булыуын совет власын көткән кеүек көтәләр!..

Бынан нығымта шул: беҙҙең замандың әйҙәүсе сәғәте Мәскәүҙә икән, үҙеңдең ғүмер сәғәтеңде шул сәғәт менән дөрөҫлә!.. Сөнки ул сәғәт һәр кемдең сәғәтенә бәйләнгән.

Быны хатта биш йәшлек балалар ҙа белә: улым Салауаттың дүрт йәше тулып бишкә китте.

— Салауат, һиңә нисә йәш? — тиһәң, ул ҡулын юғары күтәреп, биш бармағын тарбайтып ебәргән була.

Бына был бала ла «Кремль сәғәте» тип шиғыр һөйләй. Был уның ятҡа белгән тәүге шиғыры. Быйыл ул, дүрт йәше тулғанда, көн һайын тиерлек балалар баҡсаһынан яңы шиғырҙар отоп ҡайта башланы. Ләкин уның ата-әсәһен шатландырған тәүге шиғыры бына ошо сәғәт тураһында:

Кремль сәғәте
Тора бейектә.
Ул әйтә беҙгә:
«Хәйерле иртә!..»

Был юлдарға мин әллә күпме тарихи мәғәнә һалам һәм улым миңә донъялағы иң бөйөк шиғырҙы һөйләгән кеүек. Белмәйем, был шиғырҙың авторы кем? Хәйер, был әллә ни мөһим дә түгел. Ул үҙе бер баланың атаһы был хаҡта уйланып, әллә ниндәй фәлсәфәләр аҡтарып ултырыр тип башына ла килтермәгәндер.

Яҡшы шиғыр!

Бына Салауат әсәһе менән кино ҡарап ҡайтты.

— Салауат, — тим һалҡында бите, танауы ҡыҙарып ҡайтҡан малайға, — йә, «Кремль сәғәтен» һөйлә әле.

— Ниңә? — ти әсәһе, аптырап.

— Мин шул хаҡта яҙып ултырам.

— Йә, һөйлә улайһа.

Улым һөйләй ҙә бирә:

Кремль сәғәте
Һуға бейектә.

Ул әйтә беҙгә:
«Хәйерле иртә!..»

Мин яңылышҡанмын икән әле: «Кремль сәғәте тора бейектә» түгел, ә «һуға бейектә» икән... Ысынлап та, ул бит тормай, ә һуға!..

Сәғәттең эленеп тороуы ғына етмәй, һуғыуы кәрәк уның!

Улым атаһын төҙәтә!

Һәм бына ул яныма килде лә янып торған (ҡара янып торған) ике йондоҙҡайы менән бик талапсан итеп, ләкин бышылдап ҡына:

— Ҡағыҙ бир, атай, — ти.

Мин ишетмәгән кеше булам, ә ул һаман:

— Ҡағыҙ, ҡағыҙ... — тип бышылдай.

Ниндәй саф уның был һорауы! Аҡ ҡағыҙ ул — бала күңеле, тип тиккә генә әйтмәгәндәр. Был ҡағыҙға ни яҙһаң, шуны уҡырһың...

— Ике ҡағыҙ бирҙең дә, — ти улым.

— Ә һиңә берәү генә кәрәкме?

— Берәү... ә юҡ... икәү кәрәк.

— Бына икәүҙе бирҙем инде.

— Ә мин бына ҡәләмдәрҙе юғалтманым, — тип ҡыҫҡырып, шатланып китте ул. Һәм ултырғыста ултырған яҙыу машинкаһының төймәһенә бәләкәй генә ҡыҙыл бармағы менән ҡағылып алды ла икенсе ултырғыҫҡа ҡағыҙҙарын, ҡәләмдәрен илтеп һалды. Буяу ҡәләмдәре менән ҡатлап-ҡатлап ул хәҙер үҙе белгән иң тәүге ике хәреф менән иң тәүге һүҙен яҙа: МАМА.

Был әҫәрен яҙыу өҫтөндә инде ул бер нисә көн ижад ғазабы кисерә — ҡәләме бик буйһоноп етмәй уның фантазияһына. Баҫып та яҙып ҡарай, сүгеп тә яҙып ҡарай, ләкин үҙенең эше менән һис тә ҡәнәғәт булып етмәй. Ижад оҫталығы бына шул ижади ҡәнәғәтһеҙлектән башланалыр ҙа инде. Ике хәрефте кире лә төшөрөп ҡуя.

— Быныһы насар... — ти улым.

— Ә бына шул дөрөҫ, — ти әсәһе.

Мин дә барып ҡарайым: дөрөҫ!

— Һин буталманыңмы? — тим.

— Юҡ, үҙе яҙҙы! — ти әсәһе.

Ысынлап та, әсәһе ябай ҡәләм менән һыҙып биргән ике буй һыҙыҡ араһында йәшел ҡәләм менән ярайһы уҡ төҙәк ташҡа баҫмалы хәрефтәр менән «Мама» тип яҙылған. Тик бәләкәй генә яңылышлыҡ килеп сыҡҡан: һуңғы «А»ның өҫтөнә — «А» тип тағы бер бәләкәйерәк бала «а» өҫтәлгән. Ни әйтһәң дә, бала инде. Шунда уның бөтә матурлығы. Әсәһе лә һөйөнөп йыл-

майып ҡарап тора. Ышаныс ҙур: тиҙҙән ул «атай» тигән әҫәрен дә ижад итәсәк.

Бына ғүмер!..

Әле генә мин үҙем шулай яҙа инем. Төрлө ҡәләмдәр менән яҙылған лозунгылар менән бөтә стеналарҙы йәбештереп бөтөрә торғайным. Бының өсөн инәйҙән элэккәне лә бар.

Бына хәҙер үҙ балаң үҙеңде ҡабатлай, ләкин унда яңылыҡ тойғоһо күберәк. Уның телендә инде «ракета» һүҙе лә бар...

Ләкин оло кешеләргә ниңә бына ошо яңылыҡ тойғоһо, заман тойғоһо етешмәй икән? Иң ғазаплаған нәмә ошо...

Кисә Мәхмүткә «Нимә ул мещанлыҡ?» тигән темаға лекция яһарға киттем. Үткән көн генә Зарипова килгәйне. Уға, бик оҙаҡ һөйләшеп, бәхәсләшеп ултырғандан һуң, Мәхмүткә барып йыйылыш үткәрергә һүҙ биреп ҡалғайным. Ләкин бик ҡаты буран сығып китте. Етмәһә, ат та юҡ. Сәйфуллин ҡунаҡҡа тип атты Таймыйға егеп китте. Ат хәҙер минең ҡулға күскәс, мин үҙе кеүек түрә булып торманым, кеше һиңә таш менән орһа ла, һин уға аш менән ор, тигәндәй, үҙемә ат кәрәк булһа ла, бирҙем дә ебәрҙем. Көн кискә табан ине инде. Буран һаман нығыраҡ ҡотора башланы. Шулай ҙа әйткән һүҙҙе боҙоп булмай — киттем. Барғансы йырлап барҙым... Был — яҡшы түгелме? Шул буранды еңеү ҙә шатлыҡ кешегә. Ә берәүгә был бик сәйер тойола. Үҙемдең кейәүем — Урал, а/с председателе:

— Ниңә шундай буранда йәйәүләп Мәхмүткә барып йөрөгән була? — тип, Надяға үҙенең өҫтөнлөгөн белдергән. Ҡатын аңлатып биргән, ләкин ул аңламаған.

Мин, әлбиттә, председатель кейәүҙең минең арттан аты менән барып етеүен теләмәйем, ләкин уның минең уйға теләктәш булыуын теләр инем. Ә ул көлгән дә ҡуйған. Бер ул ғына түгел, башҡалар ҙа шулай мыҫҡыллы бер көлөү менән ҡарай. Был, нисектер, бик обывателдәрсә килеп сыға.

Лекция бик ауыр, киң темаға булһа ла, яҡшы үтте, буғай. Оҙаҡ һөйләйем, ләкин һөйләп бөткәс тә бик оҙаҡ һөйләшергә, бик күп һорауҙарға яуап ҡайтарырға тура килде. Нисек китап уҡыу тураһында ла, Клим Самгин тураһында ла, тел, әҙәбиәт, яҙыусыларҙың нисек яҙыуы тураһында ла, Маленков һәм Молотовтар, колхоз эштәре, хатта... тауыҡтар тураһында ла һөйләштек.

Ә һорауға яуап биреү ҡыҙыҡлыраҡ та, күңеллерәк тә. Ҡыҫҡаһы — был эштән ҡәнәғәт булып ҡалдым.

Был лекцияны тыңлағанда уларҙа яҙған лекцияның да эҙе ҡалған кеүек. Тик Ҡаҙыев Тимербай ағай — бригадир үҙе килмәне.

Иртән буран баҫылғайны инде. Көн ҡатырып һыуытып ебәргән — салт аяҙ һыуыҡ. Ҡайтҡанда юл ыңғайына Арҡауыл фермаһына кереп сыҡтым.

Эштәр хөрт. Ҙур бер ата сыҫҡаны келәт араһында ҡыҫтырып үлтергәндәр. Завферма Искәндәр ағай сыҫҡа ҡараусыларға он таратып ята ине. Ҡыҙҙар ҙур-ҙур тоҡтарҙы күтәреп он ташыйҙар. Бөтөнләй ҡыҙҙар эше.

— Шунан, хәлдәр нисек? — тим Искәндәр ағайға.

— Насар, — ти Искәндәр ағай, — сыҫҡаларға бына тик он ғына болғап ашатабыҙ. Был Хөснуллин менән аптырап бөттө инде кеше. Бесән килтертмәй, бәрәңге юҡ, дробилкаға кеше лә бүлмәй. Әллә нишләп йөрөй... Аптыраш инде был бригада менән.

Сыҫҡа аҙбарына индем.

Һәр бағанала тиерлек ҡыҙыл плакаттар эленеп тора. Йөкләмәләр яҙылған. Шул йөкләмәләр аҫтында теге ҙур сыҫҡаны тунап яталар. Ярҙай ҙур бер сыҫҡа! Ике центнер самаһы булыр...

Созин Петр менән Ҡәнзәфәр Хафизов тунай, Ҡәүи Хафизов тотоп тора. Созин ҡарауылсы Таһир ҡарттың фермала булмауына һылтана.

— Төндә дүрт ҡабат эҙләп барҙым, юҡ ине, һуйырға бысаҡ та үткерләп ҡуйҙым, начальство булмағас, нисек итеп һуяһың? Сәғәт төнгө 12-ләрҙә үлде, — ти. Ә Ҡәүи бөтөнләй икенсе төрлө һөйләй.

— Ул сыҫҡаны көндөҙ үк тартып сығарҙыҡ — вис ҡанға туҙып бөткәйне, — ти.

Ҡыҙыҡ килеп сыға!..

Быны асыҡларға кәрәк булыр. Кем ғәйепле — шул үҙе күтәрһен.

Ҡыҙыл мөйөшкә индем.

Рәмилә Ғәниева менән Әхмәрова Мәрйәм йылынып ултыралар. Бүлмәлә бысраҡ, иҙән сүп-сар менән тулған. Дежурный юҡ. Газета подшивкалары йолҡоноп бөткән. Бына һиңә ҡыҙыл мөйөш!

Ҡыҙҙарҙы ныҡ ҡына оялтып алдым. Үҙҙәренә лә уңайһыҙ булып китте. Быҙауҙар янына сыҡтыҡ.

Быҙау аҙбары тишек-тошоҡ. Бер яҡҡа ҡыйшайып тора. Бысраҡ. Алдарында ашарҙарына ла юҡ малдарҙың. Өшөп, дуға кеүек кәкрәйеп, дер-дер ҡалтырап торалар.

— Ашарға һалдығыҙмы? — тим.

— Һалғайныҡ, — тиҙәр.

— Һалғас, ҡайҙа? Ас торалар бит?..

— Ашап бөтөргәндәр.

— Эсерҙегеҙме һуң?

— Юҡ әле...

— Нисек эсерәһегеҙ? Йылғананмы?

— Әлегә йылғанан эсерә инек...

— Юҡ, бындай һыуыҡта йылғанан эсерһәгеҙ, быҙауһыҙ ҡалырһығыҙ. Давай, йылытып эсерегеҙ. Өйҙә бит үҙегеҙ йылытып эсерәһегеҙ!..

Өндәшмәйҙәр комсомолкаларым.

— Нимә ашатаһығыҙ? — тим.

— Бесәндән башҡа бер ни ҙә юҡ быйыл. Концентрат бирмәйҙәр. Сусҡаларға ғына, — тип зарлана ҡыҙҙар.

— Улай булғас, нисек итеп привесығыҙ булһын?

— Привес юҡ инде, үлмәйенсә ҡыш сыҡһалар, шул инде.

— Ә ниңә шул хаҡта давайлашып парткомға, председателгә бармайһығыҙ?

— Улар беҙҙең менән һөйләшеп торалар ти ҙә... Барһаң, баҡырталар ҙа сығаралар инде.

— Ә ниңә комскомитетҡа килмәйһегеҙ? Һеҙгә бит һуғышырға кәрәк малдарығыҙ өсөн! Ниңә әйткәнде генә көтөп тораһығыҙ? Ә үҙегеҙ ана ете йыллыҡты дүрт йылда эшләйбеҙ, тип яҙып ҡуйғанһығыҙ. Былай бит ун дүрт йылда ла эш сыҡмаҫ...

— Сыҡмай инде.

— Ә ниңә малдарығыҙҙың йөнө ҡойолоп бөткән?

— Лишай...

— Фельдшер килмәйме?

— Килһә лә — дарыуы булмағас ни... Бер көн килеп һөртөп киткәйне лә...

— Ә үҙегеҙ һөртмәйһегеҙме?

— Беҙ ни фиршел түгел дә...

— Ниңә, тимерәү-ҡорсаңғыға дарыу һөртөү өсөн фельдшер булыр кәрәкме? Һорашығыҙ, белегеҙ, үҙегеҙ эшләгеҙ. Юҡ, былай эш барып сыҡмай.

Бына шундай хәлдәр фермала.

13 март.

Клубта уҡытыусыларҙың концерты булды. Надя ла ҡатнашты. Гоголдең «Май төнө»нән бер өҙөк һәм Г. Молодцовтың «Салауат йыры»н һөйләне. Фәниә менән бергә ҡушлап йыр ҙа йырланы. Яҡшы!.. Мин эстән генә борсолоп та, ғорурланып та ултырҙым.

Ҡайтҡанда ут тураһында һөйләштек. Надяның ут тураһында мәҡәләһе стенгазетала сыҡҡас, ут нормаль яна башланы.

— Шулай ҙа беҙҙең һүҙгә ҡолаҡ һалалар, — тип ҡуйҙы Надя.

Сәй эстек тә, Салауатты йоҡларға һалып, Надя Овечкинды уҡырға, ә мин көндәлек яҙырға — уйланырға ултырҙым. Бөгөн төшкә тиклем Овечкиндың «Бер колхозда» тигән очеркын уҡып сыҡтым. Ғәжәп, ни өсөн һуң мин элек уҡымағанмын икән уны?! Һәр бер бригадир, һәр бер председатель, һәр бер райком секретары белһен ине был хаҡта...

Ни өсөн совхоз?

Был хаҡта Мартынов һорай.

Етмеш йәшлек Тихон Андроныч Ступаков ҡарт уға:

«— Һуң унда яҡшыраҡ бит, иптәш Мартынов. Билдәле хеҙмәт хаҡы. Ә колхозда хеҙмәт көнөнә ни нәмә алырыңды алдан белмәйһең», — ти... «Колхоз насар председателдән күргән зарарға ҡарағанда, совхоз насар директорҙан аҙыраҡ зарар күрә. Унда ни генә булһа ла эшсе үҙенең хеҙмәт хаҡын ала. Фәләнә ҡәҙәре эшләгәнһең икән, фәләнә ҡәҙәре аҡса ал да магазинға бар, шул аҡсаға икмәк ал, ярма, май — үҙеңә ни кәрәкһә, шуны ал. Контора хеҙмәт хаҡын тота икән — суд бар, профсоюз бар, эшсе халыҡты яҡлайҙар. Ә колхозда — ни сәсһәң, шуны ураһың. Председателлеккә бер йүнһеҙ, ахмаҡ килеп эләгә икән, ул хужалыҡты ла бөлгөнлөккә алып бара, кешеләрҙе лә икмәкһеҙ ҡалдыра. Етмәһә, бергә сәсһәң, әллә ни эш тә ҡыра алмаҫһың, тип йыуатам үҙемде. Нимә эшләргә кәрәк икәнен минән башҡа ла беләләр, тимен. Унан һуң был Таймый халҡының бик һауалы, маҡтансығыраҡ, башҡорттарҙы нисектер кәм күреп, түбәнһетеп, уларға көлөп ҡараған булыуын тойоуҙан нисектер күңел дә тартмай. Нишләптер был Атау татарҙарын башҡорттар ҙа бик һөйөп етмәй кеүек. Мәхмүттән Таймыйға киткән юлды Мәхмүт халҡы ниндәйҙер бер түбәнһеткес интонация менән «Татар юлы» тип атай. Һәр ике араның тел төбөндә бер-береһен ек күреү кеүек нәмә ята. Таймый халҡы үҙен бик егәрле, уңған, тырыш һәм башҡорттарға ҡарағанда байтаҡ өҫтөн итеп күрә, үҙе тирәһендәге ауылдарҙағы халыҡты ялҡау, эшкә булдыҡһыҙ һәм ғәмһеҙ башҡорт итеп, мыҫҡыллы бер көлөү менән ҡарай. Ҡыҫҡаһы, борон-борондан килгән ниндәйҙер ҡаршылыҡ, хәл ителмәгән мәсьәлә бар. Атау татарҙарынан башҡорт ауылдарына килен булып төшкән ҡатын-ҡыҙ һәр бер ауылда ла тиерлек бар, ләкин Таймыйға килен булып төшкәндәрҙе мин белмәйем. Ни өсөн был шулайҙыр, белмәйем. Унан һуң был килендәрҙең күбеһе, Атау телен ташлап, башҡортса ғына һөйләшәләр һәм Таймый халҡын яратып та бөтмәйҙәр кеүек. Мин бәләкәй саҡта уҡ әле беҙҙең күршеләге Атауҙан төшкән Сәмсинур әбей үҙҙәренә Таймый кешеләре килһә, беҙгә йомош-фәләнгә кереп сыҡҡанда: «Татарҙар килеп төштө әле», — ти торғайны. Әйтерһең, үҙе шул ауылдың ҡыҙы булмаған... Хәҙер шуларҙы

уйлап ҡараһаң — бик ҡыҙыҡ. Был күренеш хәҙер ҙә бар, тик хәҙерге килендәр бик ныҡ башҡортлашып китмәйҙәр, телдәрен ныҡ тоталар, ә инде ирҙәре менән бик ныҡ әрләшеп китһәләр, ирҙәрен «башҡорт» тип әрләйҙәр.

Бына шул ниндәйҙер «бүленмәй ҡалған мал» кеүек, ике арала ҡаршылыҡ тыуҙырып килгән бик боронғо бер нәмә минең күңелгә бәләкәй саҡтан уҡ һеңеп ҡалған да, хатта Таймый ауылына барып инеүе хәҙер ҙә әле бына ошо сана табанын тотоп ятҡан ҡоро, үткер һыҡы ҡар һалҡынлығы булып тойола миңә... Был тойғоно хатта яҙып аңлатыуы ла ҡыйын. Ләкин башҡа яҡтарҙағы татар ауылдарында булғанда, мин быны тоймайым.

Радио индерелде — радио ватылып та өлгөргән — саҡ-саҡ ҡына ишетелеп тора. Шырпы эсендәге себен һымаҡ.

Ут та индерелде — кемдер лампочканы бороп алып сыҡҡан.

«Совет Башҡортостаны», «Октябрь юлы» газеталары килеп тора, ләкин уларҙы тәмәке төрөргә өҙөп-йолҡоп бөтөрәләр.

Бер ниндәй ҙә агитмассовый, аңлатыу-тәрбиә эше алып барылмай.

Бында мин дә ғәйепле, әлбиттә.

Ләкин бында комсомолдарҙан башҡа, ферма мөдире коммунист Искәндәр ағай бар. Ул ни ҡарай?

Фермала комсомол группоргы бар. Ә ул ни эшләй? Билгеһеҙ.

Арҡауыл комсомол ойошмаһының секретары — партия членлығына кандидат иптәш Фәйзуллин бар. Ул да телмәр һөйләү, зарланыу менән генә сикләнә. Ә бригадирҙар өсөн комсомол бөтөнләй юҡ.

16 март.

Фән һәм поэзия

Был темаға ярһып-ярһып, әрнеп-әрнеп бәхәсләшәләр. Был бәхәскә мин дә ҡолаҡ һалам, уҡыйым, эсемдән генә үҙ-үҙем менән бәхәсләшәм.

Был бәхәстә фән өҫтөнлөк алырға тырыша. Замандың талабы шулай тиҙәр. Ләкин нығытып уйлап ҡараһаң, бер ҙә көйөнөр урын юҡ. Ҡайһы берәүҙәрҙең поэзияны кешелек тормошонан ырғытып ташлауҙары миңә хатта көлкө булып тойола.

Ниңә йөрәкте баштан айырырға?

Фән һәм поэзия — бер-береһенән башҡа йәшәй алмай, минеңсә. Тәү ҡарашҡа, улар араһында ер менән күк айырмаһы бар кеүек. Уйлаһаң, улай түгел. Хыял, шифыр, йыр — фәнгә ҡанат ҡуя. Фән тик шул ҡанаттары менән генә айға оса. Сөнки кеше хыялы айға күптән меңгән. Ракета әле барып та

етмәй, ә кеше хыялы күптән инде айҙы яулап алған була. Ракета әле юлда, ә халыҡ телендә инде анекдоттар, йырҙар, мәҡәлдәр... Шағирҙар айҙы бынан әллә нисә мең йылдар элек яулағандар, ә ғалимдар уға яңы ғына барып етте. Бөтә фәнни ҡаҙаныштар, хәҙерге фән еңеүҙәре халыҡтың әкиәттәрендә күптән инде тормошҡа ашҡан булған бит... Был поэзия түгелме һуң?

Сәнғәт — гармония.

Фәндең әле бындай гармонияға ирешә алғаны юҡ. Фән әле үҙе ҡапма-ҡаршылыҡлы. Фәнгә әгәр ҙә гармония ҡатышмаһа, ул үҙен-үҙе юҡ итергә лә мөмкин. Фән атом бомбаһын уйлап сығарҙы, ләкин бөтә атом бомбаларын юҡ итерлек нәмә уйлап сығарғаны юҡ әле... Быныңменән политика, поэзия, сәнғәт, кешенең һүҙе көрәшә. Әгәр ҙә шул көрәш булмаһа, фән үҙ-үҙен юҡ итеү ахмаҡлығына барып етергә мөмкин!

Фән Марксҡа тиклем донъяны аңлатып ҡына килде, ләкин донъяны үҙгәртеп ҡороу фәне тәбиғәт фәне түгел, ә кешелек фәне (гуманитар) фән булды һәм бөтә фәндәрҙең фәненә әйләнде. Был фән бөтә фәндәрҙе күҙле итте, уларға үҙҙәренең тәбиғәтен, ҡаршылығын асып бирҙе.

Ҡыҙыҡ — ни өсөн һуң был бәхәсте бәхәс фәненән башҡа — диалектиканан тыш суфыйҙар бәхәсе кеүек алып баралар? Аптырарһың!

Тәбиғәт фәндәренең үҫеше менән кеше ғорурланырға хаҡлы бөгөн. Ләкин мин, тере кеше була тороп, күктә осҡан ер юлдашына һоҡланам икән, нисек итеп тротуар боҙон тумырып йөрөгән тимер ломға күҙ йомайым ти? Шул ломды ҡатын-ҡыҙ ҡулында күреп, нисек итеп йөрәгең һыҙланмаһын?..

Тәбиғәт фәне ғәләм киңлектәренә оса икән, ул әгәр ҙә ер өҫтөндәге шул таш быуаттан ҡалған ломдарҙы күрмәһә, мин әле уны һуҡыр тип иҫәпләр инем. Ә уны бына кешелек фәне күрә һәм был ҡаршылыҡты төҙәтеү өсөн тәбиғәт фәненән уның аҡыллы булыуын, күңел күҙле булыуын талап итә. Сөнки сәнғәт өсөн сәнғәт мәғәнәһеҙ булған кеүек, фәндең фән өсөн булыуы ла мәғәнәһеҙ.

Йондоҙҙарға ынтылыу беҙҙең өсөн үҙмаҡсат (самоцель) түгел, Айға беҙ Еребеҙ өсөн, ерҙәге кеше бәхете өсөн, бөтә яҡтан да азат, матур, ғорур кеше өсөн, уның гармониялы киләсәге өсөн менәсәкбеҙ.

Фән — поэзияның ялсыһы ғына ул. Әлбиттә, мин был төшөнсәләрҙе артыҡ ябайлаштырып әйтәм, ләкин, нигеҙҙә, был фәнни ҡараш. Сөнки тиккә генә айға кешелектең иң матур шиғри символы ебәрелмәгән...

Бер фән икенсе фәнде тыуҙыра. Киләсәктә фәндәр бер-береһенән айырылып сығып, тағын да нығыраҡ үҫәсәк. Бына шул

үсешкә таянып, кеше иң зур шағир буласаҡ та инде. Шулай булғас, бөтә кешеләргә лә уртаҡ фән ул кешелек фәне, гуманитар фән буласаҡ тип уйларға кәрәк.

Математик символдар бөтә кешегә аңлайышлы ураҡ-сүкеш символына хеҙмәт итәләр.

25 март.

Кем иҫерек?

Ысынлап та, кем иҫерек һуң?

Әле генә күргән күренештән һуң, күңелде ошо һорау ғазаплай. Күңел өшөткөс күренеш был.

Әйтерһең дә, мин иҫерек!.. Бик ҡаты эсеп иҫергәнмен дә, бер аҙ айный төшкәс, үҙемдең бик күп енәйәттәр эшләп ташлағанымды тойған кеше хәлендәмен кеүек. Оят та, ҡурҡыныс та, көлкө лә... Бындай хәлде тиҙерәк күҙ алдынан ҡыуып ебәреү өсөн, тиҙерәк онотолорға теләүҙән кешегә тағы ла иҫерергә кәрәк була.

Ләкин мин эсмәйем — бүлмәгә бикләнеп яҙырға ултырам. Тик был хәлде яҙып та килештереп булмаҫ инде. Шулай ҙа, ихтыярһыҙҙан, яҙырға, ҡағыҙға булһа ла эс сереңде бушатырға мәжбүр булаһың!.. Әйҙә, яҙғанда ҡалһын!

Хәл шулай бик күңелһеҙ булмаһа, бик көлкө булыр ине, әлбиттә. Ләкин көлкө түгел.

Партком секретары парткомға килгән трактористы ишектән төрткөсләп сығарып ебәрҙе. Ә кеше уға бик зур мәсьәлә менән, үҙенең йөрәк әрнеткес мәсьәләһе менән килгән. Һәм ул эшлекһеҙ бер ялҡау ҙа, рвач та, бушбоғаҙ бер әрәм тамаҡ та түгел, ә колхоздың иң алдынғы механизаторҙарынан булған, йылдың-йылы бер туҡтауһыҙ эшләп йөрөгән тракторист егет.

— Бөтәһе лә минең кеүек эшләһендәр ине әле!.. — тип әйтергә ул тулыһынса хаҡлы. Ул быны һис бер маҡтаныуһыҙ, һис бер биҙәкһеҙ, эскерһеҙ бер ғорурлыҡ менән әйтә. Ул быны тик янып торған күҙҙәре һәм ер менән майға ҡатып бөткән ҡулдары менән генә әйтә. Уның председатель һәм партком секретарына табан һуҙылып, аптырауҙан ни эшләргә белмәйенсә ҡатып ҡалған ауыр һәм көслө ҡулдары артында аҡтарылып ятып ҡалған әллә күпме ерҙе, әллә күпме игенде күреп тораһың... Был ҡулдар ишелеп ятҡан бураҙна кеүек ҡара, алтын кеүек тос орлоҡто умырып алған көрәк һымаҡ ауыр һәм һәлмәк. Был ҡулдар бер ҙә партком секретары һәм председателдең еңел һәм телмәр һөйләгәндә буш һауаны киҫеп тора торған йылғыр ҡулдарына оҡшамаған. Әйтерһең, улар ерҙән яралып, ер өсөн генә барлыҡҡа килгән һымаҡ. Был ҡулдар

яҙыу яҙғанда, дөрөҫ һәм матур хәрефтәр менән яҙмаһа ла, һәр саҡ дөрөҫ һәм йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәрҙе генә яҙа белә. Сөнки ул һүҙгә ярлы, бер ауыҙ һүҙенә әллә күпме мәғәнә һалып әйтә. Шуның өсөн мин уның һүҙҙәренә ышанам. Ул үҙенең тормошо тураһында ғына әйтһә лә, бөтә колхозсыларҙың хәлен әйтеп биргән һымаҡ:

— Рәшит ағай, кешене күпме алдарға мөмкин?

— Кем алданы? — тип председатель урынынан һикереп торҙо.

— Һеҙ алданығыҙ! Һеҙгә әйтеп торам бит, — ти тракторист Камил. — Былтыр быҙау бирҙем — былтыр алданығыҙ. Түләмәнегеҙ — бушҡа китте.

— Ашлыҡ алдың бит?!.

— Алдым — серегән ашлыҡты.

— Алма ине, ниңә алдың?

— Бирмәгеҙ ине серегәнен... Бүрәнә кәрәк, тинем, бирмәнегеҙ. Өй бит емерелергә тора, терәү терәтеп кенә ҡуйғам, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, Рәшит ағай. Эшләмәгәндәр өй һалып керә, эшләгәнгә — юҡ. Быйыл ҡышлауҙы бирҙем, аҡтыҡ малды. Ҡайҙа түләү?

— Сабыр ит, бер-ике көндән.

— Күпме сабыр итергә мөмкин?

— Итмәһәң, быҙауыңды ал да ҡайт, һинән башҡа колхоз бөтмәгән.

— Ҡайтырмын...

— Ҡайт бар, мешать итмә!..

— Юҡ, мин һөйләшергә килдем.

— Һинең менән һөйләшеп ултырырға ваҡыт артып тормай.

— Һөйләшерһегеҙ. Һеҙҙән дә олораҡ кешеләр бар.

— Һин иҫереп килдеңме әллә? Бузить итергә килдеңме? Сығып кит бар!

Ләкин трактористың тиҙ генә сығып китергә ниәте юҡ ине. Күрәһең, бер аҙ төшөрөп тә алған. Һүҙ хәҙер уның иҫереп килеүенә күсеп китте — йомшаҡ урын табылды. Ҡыҙҙырырға тотондолар.

— Мин иҫерек түгел, иҫерек булып ниндәй яман һүҙ әйттем, ни эшләнем һеҙгә?..

Председатель сығып китте. Партком секретары ырғып тороп, уны етәкләп ҡыуа башланы. Теге ҡарышҡан һайын быныһы ҡыҙа төштө һәм бөтә көсөн ҡулланып, төрткөсләп ҡыуып сығарҙы.

Ләкин эш бының менән бөтәме?

Кем иҫерек?

Нишләп шул хәлгә килеп етте колхоз?

Март.

Дини байрамдар урынына яңы байрамдар булдырыу тураһында ла бик ҡыҙыҡ фекер бар. Уны ҡарт колхозсы Пелагея Ильинична әйтә:

— ...Мин былай уйлайым, иптәш Мартынов, — ти ҡарсыҡ, — дин тотҡанлыҡтан түгел ул, кешеләр байрам итергә теләй, шунлыҡтан. Һеҙ шуны иҫәпкә алмайһығыҙ. Эш талап итәһегеҙ, кешеләр нисек итеп яҡшылап ял итергә, күңел асырға тейеш — ул хаҡта борсолмайһығыҙ!..

Һәм ҡарсыҡ яңы байрамдар менән иҫке байрамдарҙы ҡыҫып сығарырға тәҡдим итә: «Һәр бер колхозда кешеләргә үҙҙәренең колхоз байрамдарын булдырырға кәрәк!» — ти.

— Ул бик ҙур мәсьәлә күтәрҙе бит! — тип уйлай Мартынов, Суконцева, әлеге ҡарсыҡ киткәс. — Сөйҙө сөй менән бәреп сығарырға!

Иҫке сиркәү байрамдарының үҙенсә матурлығы, поэзияһы күп булған. Дини байрамдарҙың бөтәһе лә, престол һымаҡ, мәғәнәһеҙ, иҫерек байрам түгел... Иҫке байрамдарҙы бер нәмә менән дә алыштырмайынса ғына бөтөрөүе ҡыйын. Яңы, матур, поэтик байрамдар булдырырға кәрәк. Бында комсомолға ла эш бар. Уңыш көнө, тракторист көнө, йыр байрамы — бына шундай колхоз байрамдары булдырырға кәрәк. Ә инде мәктәптәрҙә имтихандар тамамланған көндәрҙә егеттәргә һәм ҡыҙҙарға өлгөрөү аттестаттары тапшыралар бит? Быны ла йәштәр көнө итепме, халыҡ байрамы яһарға мөмкин. Һуң шундай бик күп нәмә уйлап табырға мөмкин бит инде! Тик уны ысын күңелдән ойоштороргә ғына кәрәк!..

Ысын күңелдән! Бөтә эш тә шунда шул. Ә беҙ бына тигән халыҡ байрамдарын, һабантуйҙарын да байрам итеп ойоштора белмәйбеҙ бит?

Рәшит ағай:

— Кирбес заводы төҙөйәсәкбеҙ! — ти. — Бөтә нәмәне үҙебеҙҙә етештерәсәкбеҙ, — ти.

Ләкин колхоз бит промкомбинат, йәки берәй кустарь хужалыҡ түгел. Көстө төрлө тармаҡҡа бүлгеләүҙән ниндәй мәғәнә? Икенсе бер күрше колхозда ла шул уҡ хәл булһа?..

Ә ниңә урындағы промышленносты үҫтермәҫкә? Әйтәйек, ниңә колхоз-ара предприятиелар булдырмаҫҡа? Кирбес менән бөтә районды тәьмин итеп тороржай завод төҙөү насар булыр инеме ни?

Был хаҡта ла уйланырға кәрәк.

21 апрель.

Мине иң ныҡ ғәжәпләндергән нәмә — етәкселәрҙең етәксе булмауы. Етәксе булмағас, ниңә етәксе булырға? Хатта был

ябай бер хәкиҙәт көлкө, бик көлкө тойола. Көлкө, ләкин хәкиҙәт!..

Бөгөн яңы парткомдың эшен күреп, тағы ла шул хаҡта уйландым. Барый ағай үҙ урынында, Бәҙертдин Шәйхисламов ағай яңынан парткомға кире ҡайтты.

Мин Өфөнән ҡайтыуға — бөтә булған яңылыҡ шул. Парткомдан Сәйфуллин киткән, ә башҡа үҙгәреш юҡ.

Шәйхисламов ағай взнос йыя, беренсе майға лозунгылар, флагтар әҙерләй, плакаттар ҡаға, элекке белдереү таҡталарындағы, стена газеталарындағы «колхоз» тигән һүҙҙе «совхоз» һүҙе менән алыштырыу идеяһы менән яна, мине лә был бөйөк үҙгәрештәр ағымына тыҡмаҡсы була.

— Бына был яҙыуҙарҙағы ике хәрефте генә алыштырып ҡуйырға кәрәк: «к» урынына «с», «л» урынына «в»ны яҙырға ла «совхоз» килә лә сыға. Бер ҙә баш ватып тораһы юҡ, — ти Бәҙертдин ағай.

— Ну, баш та инде үҙеңдә, Бәҙертдин ағай, — тигән булам мин.

— Һеҙ, Рәми Йәғәфәрович, бына был плакаттарҙы урындарын табып йәбештереп сығығыҙ инде, минең бил ауыртып тора, Фәриткә төшөп, банка ултыртайым булмаһа.

Беренсе ҡабат мин үҙемде атайымдың исеме менән хөрмәтләгәндәрен ишетәм һәм эстән генә «һинең бил ауыртыуҙарың да минең елкәгә төшмәҫме икән» тип уйлайым. Сөнки был абзыйҙың мине Сәйфуллин урынына егеп ҡуйырға бер ҙә иҫәбе юҡ түгел. Ләкин мин бер ҙә был бөйөк үҙгәреш эштәренә ялҡынланып тотонғом килмәй. Минең яландарға, кешеләр янына киткем килә... Шулай ҙа яңы начальниктың тәүге көндән үк күңелен китәһем килмәне, лозунгы яҙылған ҡағыҙҙарҙы, клей, кнопкаларҙы алып, проходнойҙа ултырған Афзал менән уларҙы ҡапҡа таҡталарына беркетеп сыҡтым.

Бөгөн төндә яуып ҡуйған ҡар бөтә аяҡ аҫтын бутҡаға әйләндергән, өҫтән һаман да ямғыр ҡатыш ҡар һибәләп тора, төньяҡтан үҙәккә үткес һалҡын ел иҫә — күшегеп, өшөп бөттөм.

— Был ҡағыҙҙар хәҙер үк елгә йолҡоноп, һыуға сыланып бөтә бит, Бәҙертдин ағай, — тигәс, ағайым был эштең бөтә серен асып бирҙе:

— Лучше ҡағыҙ ҡуйыр кәрәк, райондан килһәләр, иң элек шундайға күҙҙәре төшөп, бәйләнеп бара торғандар, әйҙә, йолҡонһа йолҡонһон, тик беҙҙе йолҡмаһындар!..

Ни тиклем кеше район кешеләренән ҡурҡырға мөмкин! Был да бер етәкселек ҡорбаны!..

Барый ағай: «Мин хужалыҡ эштәре менән булырмын, ә һеҙ шуларҙы эшләгеҙ инде», — тип директор бүлмәһенә һыҙҙы.

Аҙаҡ мин тағы ла магнитофон һәм башҡортса яҙыу машинкаһы тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, уларҙың хаҡтарын яҙып алды, оҫоҙораҡтары юҡмы икәнлеген һорашты. Миңә был һаҡсыллыҡ оҡшай, хужаларса хәл итеү бит был мәсьәләне. Ләкин мин Өфөгә киткән көндө уға яландарҙағы янған ашлыҡ-һаламдарҙың ялҡынына күрһәтеп:

— Бына, Барый ағай, күреп ҡалығыҙ был уттарҙы, күпме кеше көсө, күпме аҡса, фураж яна. Быны тик колхоздар ойошҡан саҡта тик кулактар ғына эшләй алған, ә коммунист кешегә был оят, — тигән һүҙҙәремде һис тә онотмайым...

Декабрь.

Үтте лә китте ғүмер,
Үткәнен дә тойманым.
Йә үтмә тип, йә китмә тип,
Үҙен бер ҙә тыйманым.
Иҫте елдәр, аҡты һыуҙар,
Япраҡ, тулҡын шауланы...

Марат Мостай ағайҙың костюмын алып ҡайтырға тейеш булған да, вокзалға ҡаршыларға төшә.

— Костюмығыҙҙы ҡаршыларға төшкән булғанһығыҙҙыр әле. Алып ҡайтманым бит инде, — ти Марат.

— Уның өсөн генә төшмәнем инде. Һин мине ул ҡәҙәре меркантильный тип уйлама, — ти.

Мостай ағай һүҙҙәре

Рафаэль квартира тураһында шылтыратҡас:

— Башҡа был мәсьәлә менән мине борсома, — тигән. —Даже Атнабайға обещать итмәнем бит әле мин...

— Нисек инде улай сағыштыраһығыҙ Атнабай менән? Атнабай үҙ урынында, мин үҙ урынымда, — тигәс:

— Даже тип ни... улай түгел инде, Атнабайға ла әйткәйнем мин, булыр, тип...

— Ғәфү итегеҙ, Мостай ағай, башҡа борсомам инде, — тип Рафаэль башҡа борсомай.

Яңыраҡ шул хаҡта һүҙ сыҡҡанда, Нәжибәккә берәй бүлмә тураһында әйткәс, Мостай ағай:

— Һиңә, Рафаэль, шул сират менән булыр инде, — тип ғәмһеҙ генә әйтеп ҡуя (Союздағы өҫтәл артында).

Мәскәүҙән Рафаэль отпускыға ҡайтҡас, шиғырҙарын Мостайға килтергәс, урамда:

— Ниңә бөтәгеҙ ҙә миңә киләһегеҙ әле, егеттәр, минән башҡа шағир бөткәнме, ана Бикбайға, Ғәйнанға уҡығыҙ, —тип китә.

3 март.

Мин әле тормошто күп күрмәгәнмен, ләкин уның мин генә күргән урындары ла бар.

Тәңкитселәр уйланырға бер ни дә ҡалдырмайҙар, бөтәһе өсөн дә үҙҙәре уйларға тырышалар. Йөҙәһең был йылғанан, ләкин аяҡтарың ташҡа тейеп тора.

Мин, бәлки, беҙҙең ғалимдар әйткән фекерҙәрҙе әйтә алмам, ләкин беҙҙең ғалимдар яратып уҡырлыҡ шифырҙар яҙа алырмын.

Фән менән поэзияны ҡапма-ҡаршы ҡуйыу — фән менән поэзияның үҙҙәрен аңламай, бер-береһе менән бутау ғына. Фән менән поэзияның дошман булғаны юҡ һәм улар киләсәктә лә дуҫ буласаҡ. Сөнки улар бер әсәнең — ерҙең балалары. Улар икеһе лә үҙҙәренсә бер эште эшләй, ә бер-береһен алыштырмай. Был мөмкин дә түгел. Был яңынан фән һәм поэзияның балалығына ҡайтыу булыр ине. Балалыҡ ул үҙенең балалығы менән матур. Ир уртаһы кешегә бала булыу килешмәҫ ине. Поэзия һәм фәнгә тарихи күҙлектән ҡарар кәрәк.

Шифыр яратмайым, тиһең. Яратмаһаң, һине бер кем дә көсләп шифыр яратырға ҡушмай. Ләкин һин ҡояш яратмауҙан башҡалар ҙа нурһыҙ йәшәргә тейешме һуң? Бөтәһенә лә тиҙәк йәки серек аҫас төбөн яратҡан бәшмәк булырға тимәгән бит. Әйҙә ултыра бир — ләкин бәшмәк көнө бер-ике сәғәт, унан уға тейергә лә ярамай. Үҙеңдең бөкөрөң менән маҡтанма.

12 апрель.

Надя конторанан:

— Человек из космоса возвратился! — тип ҡайтып керҙе.

Ләкин мин бер ҙә ғәжәпләнә алманым. Әйтерһең, был бер ҙә тарихтың бер бөйөк көнө түгел!.. Ә бит, уйлап ҡараһаң, был иҫ киткес һикереш! Ләкин инде был хәлгә бер ҙә иҫ китмәй. Өйрәнелгән. Фәҙәти. Ышанып бөтөлгән. Ҡулымдағы улым Азаматтың геүелдәүе мине ныҡыраҡ ғәжәпләндерә.

Үçеп буйға етер ул,
Осоп айға китер ул! —

тип таҡмаҡлайым, һикертәм улымды.

Шулай ҙа эленеп торған радионы ҡулға алып тыңларға керештем: донъя шаулай... Шифырҙар ҙа өлгөргән! Юрий Гагарин — яңы герой — яңы шифырҙар тыуҙыра. Белеп торам — иртәгә бөтә газеталарҙа ла уның тураһында шифырҙар буласаҡ! Кисәге генә бер кемгә лә билгеһеҙ бер кеше бөгөн донъяның һәр бер мөйөшөндә билгеле, һәр бер кеше уның исемен телгә ала. Бөгөн ул — тарих кешеһе. Дан кешегә бик ҡыҙыҡ килә бит! Ә уның урынында теләһә ниндәй икенсе бер кеше шуны уҡ эшләй алыр ине. Бөтә эш — беренсе булыуҙа! Кемдер беренсе булырға тейеш. Был бик осраҡлы булырға ла мөмкин. Ләкин беренсе кешене ғәләмгә осороуҙа беҙҙең илдең беренсе булыуы — был инде осраҡлы түгел... Тарихи еңеү был! Кеше, тәбиғәттең ҡоло булыуҙан ҡотолоп, уның хужаһына әйләнеп бара. Кеше үҙенең тыуған ерен үҙе теләгәнсә күреү өсөн күк серҙәрен аса. Күкте ул үҙенең Ере өсөн яулай. Тиҙҙән ул Ергә тулыһынса хужа булып, үҙе теләгәнсә уның менән идара итә аласаҡ: теләгәндә көндө йылытып, теләгәндә ямғыр яуҙырыр көн алыҫ түгел инде?..

Мин был көндө күреремә ышанам!.. Гагариндың, ғәләмгә осоп, Ерҙе уратып ҡайтып төшөүенән һуң быға ышанмау мөмкин дә түгел.

Бик ҡыҙыҡ заманда йәшәйбеҙ!
Ғорурланғы, маҡтанғы килә...

13 апрель.

Кисә лә, бөгөн дә көн комитет ҡағыҙҙары менән үтте. Учет карточкаларын тәртипкә килтерҙем, архивҡа бирер өсөн элекке протокол, учет, отчет ҡағыҙҙарын рәтләп ултырҙым.

Райкомдан Дистанов шылтыратты. Ул Сочиҙа ятҡан икән, ниңә минең янға кермәй киттең, ти. Митингылар тураһында отчет һорай. Һәр кемгә — отчет!.. Гагарин бюрократтарға ла, шағирҙарға ла күп аҙыҡ бирҙе. Шәйхисламов та баҡа яллап һыу эсергә йөрөй. Радионан белдереү өсөн мин иғландар яҙҙым. Почтала Фая аҡса һорай. Миәшәгәрҙән Абдрахманов ағай менән һөйләштек. Кискә табан Мансур Әхмәтйәнов килеп инде. Һаман ел ҡыуып йөрөй, вазифаһы ғына башҡа!..

Кис. Клубта митинг үткәрҙек. Халыҡты көсләп индерҙек. Йәштәр волейбол уйнай. Керәһеләре килмәй һис тә. Былтыр ултыртҡан акацияларҙы кәзәләр кимерә. Быйыл тағы ултыртырға кәрәк. Митинг алдынан Камил Булатов Чехословакия тәьҫирҙәрен һөйләне. Бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар. Ләкин

һорау биреүсе тик Шәрип абый ғына булды. Яуабын үҙе белеп тора.

— Кеше әйберенә ҡул тейҙермәүҙәре тураһында һөйлә, — тине.

Ләкин бөтәһе лә кино башланғанын көтә, һорау бирергә ҡурҡалар. Шул саҡ Шәйхисламов, тороп, Гагариндың Ергә әйләнеп ҡайтыуы, совет фәненең ҡаҙаныштары, тыныслыҡ һәм беҙҙең совхоздың производство хәле тураһында бик оҙон телмәр уҡып сыҡты ла, бөтә кеше иркенләп тын алайым ғына тигәндә, күҙлеген ҡағыҙҙарынан айырып:

— Тантаналы митингыны асыҡ тип иғлан итәм! — тине.

Залда теләр-теләмәҫ кенә ҡул саптылар ҙа берәм-берәм генә ишек яғын ҡарай башланылар. Сөнки тантаналы митингыны ябыҡ тип һанайым тигән ваҡыт еткәйне инде. Быныҡ өҫтәүенә, етмәһә, киномеханик Динисламов, Шәйхисламовтың «инеш һүҙе» дауам иткән саҡта, сәхнәгә менде лә, ни өсөндөр утты һүндереп алғас, экран эргәһенә килеп:

—. Бөгөн кино булмай! — тип ҡыҫҡырҙы. Халыҡ ни тип әйтергә лә белмәй, тынысһыҙланып, ҡыймылдашып алды ла икенсе ораторҙы тыңларға мәжбүр булды. Тарих уҡытыусыһы Ғимал Әминев донъяла беренсе булып совет космос карабында Юрий Гагариндың ергә әйләнеп ҡайтыуы һәм уның политик әһәмиәте тураһында балаларса яңғырауыҡлы тауыш менән бик оло һүҙҙәрҙе уҡыны һәм үҙенә бер ҙә тәбиғи булмаған пафос менән йәшелле-күкле итеп бер нисә «дан» һүҙен ҡыҫҡырҙы.

Унан һуң Шәйхисламов үтә тантаналы тауыш менән:

— Совхоздың комсомол ойошмаһы секретары иптәш Ғариповҡа һүҙ бирелә! — тип белдерҙе. Әйтерһең, мин иң хәл иткес телмәрҙе һөйләргә тейеш инем. Залдағылар хатта мин һөйләмәҫ элек үк ҡул сабып ебәрҙеләр. Әйтерһең, комсомол секретары бик мөһим бер фекерҙе аҡтарып һалаҫаҡ!..

— Телмәр һөйләп тормайым мин, иптәштәр, тик үҙемдең кисә был хәбәрҙе ишетеп, ни уйлауымды ғына һеҙҙең менән уртаҡлашҡым килә, — тинем һәм бер ниндәй пафоһыҙ, бер ниндәй лозунгыһыҙ кешенең тәбиғәткә хужа була барыуы, кешенең үҙ ихтыяры менән тиҙҙән теләгәндә ямғыр яуҙырып, теләгәндә уны ҡыуҙырып ебәрәсәге тураһында һөйләнем һәм һүҙемде «һөйөнсө» шиғыры менән бөтөрҙөм. Нисек ҡабул иткәндәрҙер — быныһын белмәйем, бик тулҡынландым...

Бәҙертдин ағай, митингынан сыҡҡас, ни өсөндөр:

— Әйҙә, ҡайттыҡмы? — тине.

— Юҡ әле, — тинем мин, үҙем ҡайтырға сыҡһам да. Сөнки беҙҙең юлдар бит ҡапма-ҡаршы яҡҡа. Быныҡ менән ни әйтергә теләгәндер — билгеһеҙ. Һүҙ юҡта һүҙ булһын, ата ҡаҙың күкәй һаламы, тигән кеүек булып сыҡты был.

Ҡайтҡанда арттан Абзалдың тауышы ишетелде:

— Постой, сука! Постой!

Туҡтаным да көтәп торҙом.

— Ә, Рәми аҡай, был һин икәнһең дә, ғәфү ит инде, мин Билал тип уйланым, — ти минең комсомолецым!..

14 апрель.

Донъя Гагарин тураһында шаулай. Радио иң тантаналы көйҙәрҙе бирә. Мәскәүҙең Внуково аэродромында ғәләмдән ҡайтҡан Гагаринды ҡаршылайҙар. Мәктәптәр, урамдар, совхоздар уның исеме менән аталған.

Бына самолет ергә ултырҙы. Тантаналы марш уйнала. Мин, радио эргәһендә ултырып, ғәләм кешеһенең тәүге һүҙен көтәм.

Самолет ишеге асылды. Баҫҡыстан Гагарин төшә, трибунаға йүнәлә. Алҡыштар.

— Товарищ Первый секретарь, — тип һүҙ башлай ул, — рапорт бирә майор Гагарин. — Хрущев уны ҡосаҡлап алды. Гимн уйнап ебәрҙе. Ниндәй көслө беҙҙең гимн. Был минутта ул яңыса яңғырай, яңыса тантана итә. Бөтә донъя тыңлай уны.

Ә тышта ваҡ ҡына ҡар бөртөктәре төшә. Гагарин ҡулын козырегына ҡуйып тыңлай уны. Бына ул ата-әсәһе, ҡатыны менән иҫәнләшә. Йә үлемгә, йә мәңгелек данға оҙатҡан ҡатыны Валя Гагарина минең күҙ алдымда. Уның бөркөтөнә бөтә донъя ҡарап тора!.. Ҡосаҡлашыу, үбешеү, ҡул ҡыҫышыуҙар:

— Рус һүҙе «спутник» халыҡ-ара һүҙгә әйләнде, — тип һөйләй диктор.

Бына ул ниндәй Юрий Гагарин!.. — тип мин дә уның һүрәтен «Совет Башҡортостаны»нан ҡарап ултырам. Ябай ғына, колхозда тыуған, 27 йәшлек егет бөгөн XX быуат КОЛУМБЫ! XX быуат тиҙлеге шундай — кеше бер көн эсендә Колумбҡа әйләнә!.. Ә Колумб быныҡ өсөн нисә айҙар буйы йөҙгән?.. Ғәжәп! Иҫ киткес! Хатта ышаныуы ла ҡыйын. Ләкин был хәҡиҡәт: Юрий Гагарин — космос Колумбы!

Бына ул, машинаға ултырып, Никита Сергеевич менән аэродромдан Мәскәүгә, Кремлгә йүнәлә... Шул саҡ өйгә ашығып ҡына райком шоферы килеп инде лә Мәсетлегә барырға, тине. Митинг үткәрергә инде, моғайын. Ярай, киттем. Райкомдың өсөнсө секретары Хәкимов килгән икән. Әгәр митингы-фәлән була ҡалһа тип, Гагариндың биографияһы яҙылған «Совет Башҡортостаны»н да кеҫәгә тығып алдым.

Мәсетле. Контораға индем. Хәкимов та, Рәис тә юҡ. Рәистең килеүе тураһында юлда шофер әйтте:

— «Башҡортостан» газетаһынан собкор Низамов килгән, — тине.

Хәкимовтың сакыртыуы бер аҙ күңелде кырып тора ине, Рәистең килеүен ишеткәс, шатланып киттем. Уға һөйләйһе бик күп нәмәләр бар, ләкин икебеҙ, ике күҙ кеүек, күрше райондарҙа йәшәһәк тә, бер ҙә иркенләп кенә һөйләшеп ултырған юк. Бик ашығыс кына, төрлө кәңәшмәләрҙә генә күрешәбеҙ ҙә, һөйләшеп тә булмай! Беҙҙең Салауат районына ул бик һирәк йөрөй.

— Улар төшкө ашка киттеләр, шикелле, — тине Рәйсә Хамматова. Мин клубка индем. Кәрт һуғалар, бильярд уйнайҙар. Кәртте йәшерҙеләр... Мәктәпкә индем. Рәис менән Хәкимов та килеп еттеләр. Күрештек. Эш шунда: редакцияға Рәйсә Хамматовалар хат яҙған да шуны тикшерәләр икән... Бына Рәйсә һөйләй:

— Миңә инде эш тә юк. 5 йыл агроном булып эшләнем, хәҙер эш бирмәйҙәр. Булатов тураһында хат яҙдыҡ. Шуға асыу итеп, Ғайнановтар минән ҫс ала. Мин йыйылышта тороп һөйләнем... Минән йә партбилетымды алһындар, йә эш бирһендәр. Былай ятыу миңә оят, — ти.

— Һоло өсөн һеҙ Булатовты партиянан сығарыуға барып етәһегеҙ, ул электән бер ниндәй ҙә шелтә алмаған!.. Һеҙ уны бөтөрөп ташларға иткәнһегеҙ. Ул кәрарҙы беҙ отказ иттек. Шелтә бирҙек, — ти Хәкимов. Һоло өсөн ул понес наказание, хәҙер бер грамм да һолоһо юк.

— Бер атка 50 центнер һоло кәрәкме ни? Мин әҙерәк кенә беләм дә инде — агроном булып эшләнем бит, — ти Рәйсә. Ныкыша. Кыйыу ғына. (Дыуан ауыл хужалығы техникумын бөткән, вакытында ауыл хужалығы күргәҙмәһендә лә катнашкан ул.)

Яруллина Зифа, Ниғмәтуллина Айлита килеп инделәр. Икеһе лә комсомолка. Тәүге йыл уҡыталар. Мәсәғүт техникумын бөткәндәр...

— Ну, нисек һеҙҙең коллективта берҙәмлек? — ти Хәкимов.

— Беҙгә ни бер ҙә оҡшамай бында коллектив, — ти Ниғмәтуллина.

— Һеҙҙең дәрестәргә кергәндәре бармы?

— Бар. Булатов кергәндә яҡшы анализ яһай, завуч йөкмәткеһен генә һөйләп сыға. Үҙҙәренең дәрестәренә беҙҙе, йәш уҡытыусыларҙы, кертмәйҙәр ҙә, вообще әллә нисек...

Зифа Жәмиғә Нуриеваның ярҙамы, Фәниә Рәхмәтуллинанан өйрәнеүе тураһында һөйләне.

Айлита 6-сы класта булған бер хәлде хәтерләй. Бер телсәр малай иптәше менән дәрестә тауыш сығарғандар ҙа, уҡытыусы уларҙы сығарып ебәргән. Завуч Солтанов:

— Һинән уҡытыусы сыҡмай, баштан уҡ әйттем мин һиңә, — тигән.

— Хәҙер шундай настроение менән нисек эшләмәк кәрәк инде? Балалар ҙа күҙеңә ҡарап шулай тиҙәр, — ти Айлита.

— Минең бер һорау бар. Һеҙ бишенсе класс уҡыусыһы Агишевты берәй төрлө ҡыйнаныҡмы? — тине Рәис уға.

Айлита көлөп ебәрҙе лә һөйләргә тотондо. Әйтерһең, бер ни ҙә булмаған. Малай тыңламаған. Циркуль менән тейҙергән, ә малай башын үҙе тыҡҡан!.. (Агишевтың әсәһе — Физзи апай.)

— Мин үҙемде ғәйепле һанайым инде — ҡыҙыулыҡ менән ҡәләменә һуҡтым инде. Башына тейеп, сыйып алды циркуль, — ти Айлита.

— Бына, Яруллина, һеҙ милли мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ? — ти Рәис. — Берәй төрлө ҡушаматтар тағып, балаларҙы башҡорт тип кәмһетеү кеүек нәмәләр булмаймы?

Зифа үҙенең башҡорт телен бик яратыуы, уҡығанда уҡ уны яҡшы белеүе тураһында һөйләне.

— Тау башына балалар менән уйнарға барғанда, бер көн, Салауат булып: «Башҡорттарым, әйҙәгеҙ минең арттан!» — тип йүгереп төшкәйнек. Шуны ғына әйтмәһәләр... — ти Зифа, аптырай.

Радик Исмәғилев керҙе. Секретарь: «Ҡайҙа эшләйһегеҙ?» — тигәс:

— Клубты ремонтлайбыҙ, — тине. Шунан һүҙ һолоға күсеп китте.

— Юҡ, ул кешенән дә көлөп ебәрмәһен бик, ул бит коммунист. Кешегә сопляк тимәһен, — ти Радик. — Булатов известе берәр һум менән һатты. Юҡ өсөн төрлө документтар төҙә... — тине Радик.

Рәхимова Роза — тел уҡытыусыһы, коллектив тураһында һорағас:

— Хәҙер һуң инде, беҙ һеҙгә мөрәжәғәт иткәс үк килергә кәрәк ине, — тип һөйләй.

Уның әйтеүенсә, балаларҙы ҡыуып сығаралар, ҡушамат тағалар. Мәҫәлән, Айлита Нигмәтуллина. Балаларҙы яҡлап сыҡһаң, һин балаларҙы ҡотортоп ҡуяһың, тиҙәр. Балаларҙы улай ҡотортһаң, уларҙың ауыҙында һүҙ торамы? Улар бит бик тере кешеләр!.. Ата-әсәләр йыйылышы үткәрелмәй. Балаларға ҡул көсө лә ҡулланып ебәрелә. Директор класҡа керергә рөхсәт итмәй, һинең ниндәй эшең бар, ти. Дуҫлыҡ юҡ инде, әллә ни ғәләмәт беҙҙең коллектив. Әйтһәң, жалобщиктар, тиҙәр. Әллә ҡайҙа илтеп еткереҙҙәр, бүтән инде бер һүҙ ҙә әйтмәҫкә булдыҡ. Телеңдән әллә нигә тарырһың. Әҙерәк әйтте ниһәң, эшеңә яла яғып бара. Шулай булғас, етәкселәр юҡтыр

инде беҙҙә. Был мәктәптең эшенә хайранмын мин, беренсе йыл эшләүҙән үк инде.

Балаларҙы «башҡорт» тип кенә ҡуялар. Башҡорттар тип милләт айырыу ул тулып ята.

Бик ҡыйын бына шулай эшләүе, бергә йыйылып һөйләшкән юҡ, айырым алып саҡырып ҡына допрос ала директор. Шул саҡ директор кереп шуны әйтте:

— Бер тапҡыр эштән сығарылған был Рәхимова, уҡытыусы булмаған өсөн генә алдыҡ уны эшкә. Уның тураһында «Мачеха с дипломом» тигән фельетон сыҡты, — ти.

— Ҡәйнәһе араларына кереп, улымдың быуыны һайын бер ҡатын, тигәс, мин ташлап ҡайтып киткәйнем, — тип аңлатты Рәхимова был фельетон хаҡында.

— Эштән сығарыу менән ҡурҡыталар, әйтһәң, какое твое дельце, тип кенә ебәрә директор. Ауыҙ асып һүҙ әйтер хәл юҡ. Дөрөҫлөк юҡтыр инде беҙҙә, — ти Рәхимова.

Исмәғилева Фирҙәүес (Нәҡи ағайҙың ҡатыны).

— Коллективта хәлдәр нисек? — тигәс, Фирҙәүес, көрһөнөп алды ла:

— Нисек булған, шул көйөнсә ҡалды. Директор «бына һеҙ жалоба бирҙегеҙ, барыбер һүҙегеҙ һүҙ булманы», тип үс кенә ала хәҙер. Мин Ниғмәтуллинаның етешһеҙлеген әйткәйнем, Солтановҡа директор был хаҡта тотҡан да:

— Ҡатының белер-белмәҫ көйө баш ҡатырып йөрөмәһен инде, — тигән.

Мин-минлеге бик көслө. Элек әйбәт кенә егет ине. Бергә уҡыныҡ — уҡыһанда яҡшы уҡыны. Белеме бар, теле лә бар инде...

Завучты ла уҡытыусының дәрестәренә кертмәй.

Аҡса тураһында һүҙ сыҡҡас: «Мин директор, бер кемдең дә эше юҡ», — тип кенә ҡуйҙы. Ревизия ҡарарын районға илтеп бирмәне. Мин әйткәс, дәрестәрҙән ғәйеп табырға тырыша башланы.

Шәйхисламов менән Ғайнанов килгәндән һуң һөйләшерлек тә мөмкинлек ҡалманы.

— Бер йөк һоло Зиязетдиновҡа, бер йөк машина һоло Мамалимовҡа һуғым ашатырға киткән, мин үҙемдең начальниктарыма акт яҙмайым, — тине ревизор. Был һоло үлсәнмәне, тоҡтарға тейәп кенә оҙатылды. Тейәгән кешеләре белеп тора.

Кашапов Памир, Минһажев Рәдис уҡыуҙан баш тарттылар, бер аҙна буйы Нуриева Жәмиғә дәрескә кертмәне уларҙы.

Бына шулар тураһында йыйылып һөйләшәйек әле, тип әйтһәң, «үҙем хәл итермен әле» ти ҙә ҡуя. Бер үҙгәреш тә юҡ. Булырҙай ҙа түгел. Беҙ райкомға бик ышанғайныҡ, ләкин беҙҙең өмөт юҡҡа сығып тора, быны мин үҙемдең исемдән генә

әйттем инде. Әллә беҙҙең фекерҙе аңламанылар, әллә аңларға теләмәнеләр райкомда...

Миңә ышанығыҙ тип әйтмәйем, тик эсемдә булғанды һөйләп ҡалаһым килде һеҙ килгәс. Мин барыбер икенсе йылға беҙҙе сығарырҙар, тип уйлайым. Директор чистка үткәрәм, ти. Минең бик насар ғәҙәтем бар — хәтерем яҡшы, бер ҙә күргән нәмәне онотмай, шуны әйтеп барам. Тура әйткән туғанына ярамай инде. Бәлки, дөрөҫлөк берәй ваҡыт булыр. Эш эшләргә, план төҙөргә яратмаған кешеләр подхалим була бит —улар директорға ярап китте, шунлыҡтан коллектив икегә бүленде. Мин, бәлки, үҙемде яҡшылар категорияһына индергән кеүек булғанмындыр инде, ғәфү итегеҙ, — тип ҡуйҙы Фирҙәүес апа.

Булатова Рауза (күҙлекле):

— Мин Булатова булам, — тип таныштырҙы Булатовтың ҡатыны. — Минең бер һорауым ғына бар: нимә бар икән — күңелдә әллә ниндәй борсолоу. Ауылды ташлап ҡасырҙай булдым инде. Китер инек!.. Күпме беҙ шул тиклем хәүефле булып йәшәрбеҙ икән? Нимәлә икән быныҡ асылы? Шуны һорайһы килә һеҙҙән.

— Булатовтың үҙендә лә бер аҙ ғәйеп бар, бюроға тиклем ул тейешһеҙ һүҙҙәр ҙә ысҡындырғылай ине, ә хәҙер ул ыңғай яҡҡа китте, — ти Хәкимов Булатов тураһында.

Шулай тигәс, Роза асылып китте:

— Нәҡи аҡай бит уға: «Ғәйепле көйө һыуҙан ҡоро сыҡтың», — ти бит. Уларҙың ялыуҙарын һанап бөтөргөһөҙ. Ҡайҙа ғына яҙманылар инде!.. Егерме дүрт бит. Парткомда, районола, райсоветта, обкомда ялыуҙары бар, — ти Хәкимов. — Тик Булатов үҙе лә әҙерәк ҡырын һуға бит?

— Их, шул теле! Әйттем мин уға! Шул Рәхимова килеү менән бөтә коллектив боҙолдо... Ә мин Ғамирға мөмкин тиклем әйтермен. Ә ул үҙе миңә ҡайтып һөйләмәй. Хәҙер йөрәгем ҡалтырап тора бына...

Хисамова Ғәлиә (алдағы өҫкө теше төшкән). Башҡорт теле уҡытыусыһы икән. Оло ғына йәштәрҙә.

Рәхмәтуллиндың яҡшы булыуы, ләкин эсеүе менән генә китеүе тураһында һөйләй. (Үлгән һыйыр һөтлөрәк инде.)

— Миңә ҡарата уның бер ниндәй ҙә ҡарашы үҙгәреп киткәне юҡ. Уборный ҡаҙытып беҙҙән, түләмәне лә аҡсаһын. Нуриеваға өҫтәл һуғып ҡысҡырғанда шәм торбаһы төшөп китте. Райкомға яҙҙыҡ, яуап та булманы. Уҡытыусылар көнөндә барлығы ла күренмәне. «Бер ҡосаҡ жалоба яҙып, эш ҡырҙығыҙмы, беҙҙең һүҙегеҙ һүҙ буламы?» — ти Булатов. Хәҙер оторо уҫаллана төштө. Бармағын янап ҡына тора. (Ғәлиә апай Булатовтың бармаҡ янауын һүрәтләп күрһәтә.) (Тәҙрә аҫтынан ҙур бер үрмәксе килеп сыҡты ла улай ҙа бы-

лай йүгереп йөрөй башланы. Ҡапыл Булатов миңә шул үрмәксе булып күренде!..)

Ҡарауылсы Сәлимә апай Ғәйнуллина Булатовтың, ҡунаҡтан ҡайтҡас, атына бесән килтертеүе тураһында һөйләй. Шул саҡ Булатов уға:

— Апай, һин ҡыҙыңдыр инде... — тигән. Шуға минең бик асыуым килде, хәтерем ҡалды, 51 йәшлек кешегә шундай һүҙ әйтәме кеше? — тип әбей ҡыҙып китте.

— Шул һүҙҙе генә әйттеме?

— Шул етмәгәнме? Шул һүҙ бысраҡ түгелме? Ниңә яҡлашаһығыҙ? Яҡлаш та яҡлаш инде кругом. Һуғыш ваҡытында ла беҙ бик иҙелгәнбеҙ. Хәҙер ҙә кәмһетмәһендәр. Әле зарплатаны тотам, ти, әле эштән ҡыуам, ти...

Ғайсина Ғәрифә апа, 21 йыл химиянан уҡыта. Андижанда учительский институт бөткән. Уны директор яғында тип ғәйепләйҙәр. Балаларҙы туҡмап, китап менән һуғып эш итә, тиҙәр уның хаҡында. Ләкин ул үҙе быларҙың барыһынан да тана. Ҡарап торғанда, былай ул бер ҙә уҫал түгел кеүек. Шулай ҙа күҙҙәре хәйләкәр күренә. Меҫкенлек аҫтында ниҙер бар... Иң ғәжәпләндергәне — ауыл хужалығы машиналарының айырым частарын да белмәгән был апайҙың балаларға хеҙмәт дәресен... уҡытыу... Был хәл анекдот ҡына булһа, көлөр ҙә ҡуйыр инең. Ләкин был хәл, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ысын хәл икән шул!..

Кискә мәктәптә ата-әсәләр йыйылышы башланды. Бер ҙур класс халыҡ менән шығырым тулы!..

Бына ата-әсәләр йыйылышы. Рәис хатты уҡый. Хатты кемдәр яҙғанын әйтә. Фамилияларын уҡый. Халыҡ исемдәрен дә теүәлләп һорай. Унан Хәкимов һөйләп, бөтә эште һылапһыйпап сыҡты.

Һоло тураһында, «начальник ҡушҡас, ебәргәндер инде», — ти. Ә 12 тинлек известь һаттырыуына «добрая душа, күрәһең», ти. Һәләтле, уҡыған, эште алып китер, ти. Әле йәш, энергиялы, йәнәһе. Шыр тиле лә түгел (шыр алйот түгел)?!

Уҡытыусыларға туҡтала. Уҡытыусылар саф башҡорт телендә һөйләшәләр, ти. Ә һөйләшкәндә яртыһы русса килеп сыға.

— Бында уларҙың ҡайһы бер яңылышлыҡтарын төҙәтергә генә кәрәк ине. Директорға ла, завучҡа ла. Ләкин бөтә уҡытыусылар ҙа достойный, полноценный. Йәш уҡытыусыларға ярҙам итергә кәрәк ине.

Хәҙер нимәгә генә туҡталырға? Коллективта икегә бүленеп йәшәйҙәр. Был ярамай. Беҙ бит коммунизм төҙөүселәрҙе, Гагариндарҙы тәрбиәләйбеҙ. Башҡа теге ауыл хужалығында эшләгән геройҙарҙы.

Ә күберәк беҙҙең мыслдәр ваҡ нәмәләргә тарҡала, какой-то мелочный нәмәләргә. Бар, әлбиттә, Булатовтың етешһеҙ яҡтары. Ләкин кешене ярҙан төртөп төшөрөргә ярамай, тәрбиәләр кәрәк. Ул үҙенең мин-минлеген бөтөрһөн. Хәҙер иң яуаплы ваҡыт — һынауҙар етә. Ҡулға-ҡул тотоношоп эшләр кәрәк. Ә ҡул менән яҙғанды юйып булмай. Дөрөҫ яҙмағандар судҡа тиклем барып етергә мөмкин.

Хәкимов һөйләп бөткәс:

— Һүҙең бөттөмө? — тине Нуретдин ағай (төшөрөп алған, күрәһең).

— Ә ниңә йыйылыш председателһеҙ бара? Ниңә протоколһыҙ эшләйһегеҙ? Күҙ буяр өсөн генәме? — тип шаулаша халыҡ.

— Был бит колхоз йыйылышы түгел, — ти Хәкимов. Шулай ҙа председатель һәм секретарь һайланды. Һәм Булатов һүҙ башланы.

— Ағай-энене чистартып алыу бик кәрәк. Мин ҡайһы бер хаталарымды таныйым. Эшләмәй мейес башында ултырған кеше генә яңылышмаҫҡа мөмкин. Ул да осоп төшөп үлергә мөмкин. Ә беҙҙең зур коллектив — уның менән эшләргә кәрәк. Яңылышаһың да, РК тартҡылап алһа, бик яҡшы. Беҙҙең мәктәпте артҡа ҡалған икән тип һис уйларға ярамай. Беҙҙең электричество, машина, уҡыу әсбаптары, спорт инвентарҙары — бөтәһе лә бар. Беҙ был яҡтан Арҡауылдан бер секундҡа ғына ҡалышабыҙ. Китаптар алдыҡ. Физкабинет, химкабинет булдырҙыҡ. Алған әйберҙе ҡуллана ла белер кәрәк. Беҙ беләбеҙ. Сигеү-ҡайыу эшенә өйрәтәбеҙ. Токарь станогында эшләйҙәр. Шатланып китәһең — һин һалған зерно бит! Труд эше беҙҙең мәктәптә по-крайней мере эшләнә. Рус теленән — мин үҙем уҡытҡан кластарҙы алам — балаларҙың үҫеше күҙгә күренеп тора. Бына тигән һөйләшәләр. Эстетик тәрбиә, то есть матурлыҡты танырға өйрәтеү буйынса ла күп эшләнек. Бына тигән концерттар ҡуялар. Тимер йыялар, көл йыялар, тауыҡ фермаһын шефҡа алдылар, общественный эштә актив ҡатнашалар. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ бит. Ҡуян клеткалары эшләп бирҙеләр совхозға. Һеҙҙең балалар бит былар! Әлбиттә, эштә хатаһыҙ булмай. Хат яҙылмаған да булыр ине. Әлбиттә, хат төрлөсә яҙыла. Ләкин мин бер ҡасан да башҡорттарҙан агрономдар, врачтар сыҡмай, тип әйткәнем юҡ. Ә Ниғмәтуллина минең ниндәй яҡыным булһын, ҡайһы ере менән миңә оҡшаған? Туғандың бит төҫө булмаһа, сәсе булһа ла оҡшарға тейеш... (?!!)

Тауыш китте залда. Ике иҫерек бар. Булатов анекдот һөйләп алды — һоло тураһында анекдот. «Көлкөгә һабыштырма!» — тип ҡысҡырҙылар уға залдан.

— Уҡытыусыларҙың недостаткалары буйынса. Һәр кемдең етешһеҙлеге бар. Етешле булһаң, бөтә яҡтан да фәрештә булыр кәрәк. Лично Кочергин минең өйҙә эсеп ятманы. Проверять иттеләр, һолоно ла үлсәнеләр, аҡса ҡайҙа киткәнен дә белделәр. Бөтәһенең дә документы бар, — ти Булатов. (Ҡайһы аҡса ҡайҙа киткән?) — Известь мәсьәләһе. Ҡәһәр известь булды инде. Икенсе мәртәбә бер грамм да известь һатмам! Хата миндә булды. Аҡса юҡ ине. Түтәйләр өй тирәһендә ҡараңғылап йөрөйҙәр ине, һаттырҙым — биҙрәһен унар һумдан. 240 һум минең сығып киткән. Нужда тигән нәмә заставила, икенсе һатмабыҙ, мәктәп торгующая организация түгел. Шулай ҙа беҙ совхоздан осоҙораҡ һатҡанбыҙ әле... Ниғмәтуллина тураһында. Чистейший белем алып ҡайтҡан. Ләкин опыт тигән нәмә етмәй. Хата килеп сыҡҡандыр, сыҡмаһа, уның циркуле Агишевтың башына килеп ҡунмаҫ ине. Хата ул есть хата. В некоторой степени мин дә упущение эшләгәнмен тип һанайым. Ярҙам итмәгәнмен вакытында. Бынығын таныйым.

Ғайсина иптәш, әлбиттә, с/х машиналарҙы белмәй, тәүге йыл эшләй бит!.. Хатаһыҙ, конечно, булмай. Унан һуң районо тарафына әйтер кәрәк: уҡытыусылар етмәй! Иң беренсе бурыс — булған уҡытыусыларҙы тәрбиәләргә кәрәк...

— Йә, етәр инде, ҡыҫҡартығыҙ! — тип ҡысҡыралар Булатовҡа.

(Һорау бирәләр, Булатов приказчик кеүек «пожалыста» тип кенә тора. Ну, тел! Адвокат та һуң!)

— Һоло менән разбираться иттек. Күмәкләп урлағанһығыҙ икән. Ә теге һуҡыр ҡарттың утынын урлауың нисек? — тип һорау бирә Шәихов Муллахмәт ағай.

— Мин һуҡыр ҡарттың утынын урлағаным юҡ, ә ул урлаған — мәктәп утынын киҫкән — шулай ҙа мин уға бер машина утын бирҙем, — ти Булатов... Минең эргәлә ултырған Нуриев ағай шаулай:

— Биш балам уҡый минең! Шул балаларҙың береһенә пальто биргәндәр икән, күҙҙәренә кереп бара. Кире килтереп бирермен — кейелмәгән. Рәүилә кейһен әйҙә, кейем күрмәгән икән, — ти. Тауыш китә залда:

— Вис аталыларҙы кейендерергә икән, ә йәтим балалар йөрөһөн әйҙә шыр яланғас!..

— Ниңә, һинең балаңа ла бирҙеләр ҙә инде, — ти кемдер.

— Бирҙеләр атаң башын!..

— Аталыларға әйбер бирәләр, ә беҙҙекеләрҙең башын тишәләр!..

— Минең балам һинең улың кеүек бандит булып, тәмәке тартып йөрөмәй әле, — ти Нуриев ағай.

— Һин ниңә ул циркуль менән һуҡҡанды яҡлайһың? Иҫкелекте яҡлайһыңмы? Етәр инде иҫкелек!.. Был колхоз собраниеһы түгел, ҡысҡырышмағыҙ, — ти Хәкимов.

— Әйтһәң, минауат булаһың инде...

— Тәүге ҡабат йыйылыш булған икән, унда ла һөйләтмәйҙәр.

— Миңәргә башҡа һорауҙарығыҙ юҡмы, һыуһаным, һыу эсеп керәм, — ти Булатов.

— Беҙҙең мәктәптә Гагариндар үҫергә тейеш, тиһегеҙ. Үҫә ниңә улар!.. Минең малайҙы иҫтән яҙғансы күкрәгенә менеп тапағандар — бына ниңә Гагариндар!..

— Ул Раяндың малайы бит!..

Фәизов ағай:

Кәнишнә, иптәштәр, әллә нимә әйтмәм инде, мин агитатор түгел. Шуны әйтәм: балалар түгел, ололар ҙа бына бер нәмә булһа, гөү итеп ҡалабыҙ. Некоторыйҙар балаларын өйрәтеп куялар, нарушнай. Уҡытыусылар шундай хат яҙып ултырғансы, Уфанан тиклем кешене бындай бысраҡта йөрөтөп ятҡансы, үҙҙәре йыйылышып һөйләшһендәр ине. Шул һүҙем!..

Алкин:

— Был тәүге йыйылыш, ләкин хат буйынса һүҙ бармай. Һеҙ, Хәкимов иптәш, һүҙҙе икенсе яҡҡа борҙоғоҙ ҙа ебәрҙегеҙ. Ата-әсәләргә башта һүҙ бирмәй, заблуждениеға керттегеҙ ҙә ҡуйҙығыҙ. Алай булғас, ниңә беҙҙе саҡырҙығыҙ? Ҡыуығыҙ ҙа ҡайтарығыҙ. Ваҡыт әрәм итеп йөрөмәбеҙ.

Ишбирҙин:

— Ысынлап та, ниңә һеҙ, Хәкимов иптәш, алдан сығарған ҡарар менән киләһегеҙ? Һеҙ беҙҙең фекерҙе белергә килдегеҙме, әллә беҙҙе Булатовҡа ышандырырға килдегеҙме? Ул ниндәй защита?..

Китте тауыш! Бер ҡатын түбән яҡҡа төшөп китте. (Инәң..., фәлән-төгән-фәсмәтән...)

Рәйсә Хамматова һөйләй:

— Булатов бөтә нәмәне үҙ өйөндә тота, — ти.

Вара Ғималов:

— Хатта яҙылған факттар дөрөҫ. 29 центнер, 76 килограмм һоло ине. Комиссия иҫәпләне. Өс гектар илле ете сутый ине. Хәҙер ниңә ул алты гектарға барып еткән? Кем Булатовҡа фиктивный документты биргән? Яҡупов килгәйне обкомдан. Проверка үткәрҙе. Сельсоветҡа һоло һатҡан Булатов егерме бишенсе августа. Ә һолоно мәктәп ун бишенсе сентябрҙә урып ала!.. Нишләп былай килеп сыға? Нишләп ул урылмаҫ борон һатыла һоло? Һоло документы шаҡмаҡ дәфтәр битендә ине. Райком был эштә бик ҙур хата эшләне. Мин хатты лично Сабитовтың үҙенә илтеп бирҙем, халыҡ шаулаша башлағас.

Ләкин ул хаттың эҙенән бер ниндәй проверка килмәне. Буталыш килеп сыҡты. Булатов выговор менән генә ҡотолоп ҡалды. Мин тәүге йыл партияла һәм был мине бик ғәжәпләндерә. Комсорг Исмәғилев Радикты «сопляк, синең белән сөйләшмим дә» тип, уны тиргәп сығып китте, шуның менән эште срывать итеүгә булышлыҡ ҡына итте. Тракторҙы туҡтатты эшенән. Шундай ҡыҙыу эш ваҡытында. Мәктәпкә күп әйбер алдыҡ, тип маҡтана Булатов. Ләкин был бит мертвый капитал! Зал юҡ, ә козел, брустар тик ултыра. Ә йәй улар кәрәкмәй. Ә һарғамыштағы кеүек эшләһәгеҙ, ул булыр ине заслуга!..

Илле кубометр утыныҡыҙ ята, ә мәктәптә һалҡын булыуҙан балаларҙы уҡытмай ҡайтараһығыҙ. Балаларҙың тәртибе ифрат насар. Балалар ташлаған окурканы әләктереп алып тарталар. Ата-әсәләр ҙә бик ғәйепле, уҡытыусылар ҙа ҡарамай. Төндә йөрөйҙәр. Ә уҡытыусылар беҙҙең халыҡтан да айырым йәшәй. Лекция, доклад тигән нәмә юҡ. Булатов, үҙеңдең дә бер лекция уҡығаның юҡ ике йыл эсендә. Ялған авторитет менән генә йәшәйһеңме! Партия ойошмаһы бюроға саҡырҙы, ә һеҙ барманығыҙ. Бюроны ла ташлап сығып китәһегеҙ. Сессияға ҡуйыҡ һеҙҙең отчетты. «Мин сельсовет алдында отчитаться итергә не должен» тип кенә ҡуйың. Нишләп һуң һеҙ сельсоветты ла танымаҫҡа итәһегеҙ?..

Ишбирҙин:

— Булатов, алай итеп тә, былай итеп тә алдыҡ, ти. Был һуғыш ваҡыты түгел бит инде. Ул самообложениеға, үҙебеҙҙең аҡсаға алынған әйберҙәр. Бер директорҙың ғына заслугаһы түгел был. Беҙ уның тәртибен партбюроға ҡуйҙыҡ, ә ул килеп аяҡ та баҫманы. Ә йыйылышта уның тәртибен бер генә коммунист та яҡламаны бит. Партияла ҡалырға недостойный ине и беҙ сығарҙыҡ уны партиянан. Ә райком беҙҙең решениены отменять итте. Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ бар шул. Ҡул ҡулды йыуа. Ә ул Булатов властвует рәхәтләнеп. Йәшәй бирә помещик һымаҡ. Мәктәп аты үҙенә генә эшләп йөрөй. Үҙенә, етмәһә, ялсы тота — завхоз, имеш. Батрак ул Вальшин, директорҙың тиҙәген дә түгә, һыуын да ташый, йомошона ла йүгерә. Кеше көсөнән файҙаланырға уның ни хаҡы бар? Эксплуатация заманы үтте бит инде. Вальшин бына үҙе әйтер, үлмәгән! Канса да консов беҙ Вальшинды эштән бушатыуҙы һораныҡ. Был һорау ҡәнәғәтләндерелмәне. Булатов явно башҡорттарҙан көлә. Әйт, көлмәйһеңме һин? Ана теге...

— Ҡыҫҡараҡ һөйләгеҙ. Был колхоз йыйылышы түгел, — ти тағы Хәкимов. (Ғәжәп, нисә ҡабат инде ул колхоз йыйылышы түгел был, ти. Әйтерһең колхоз йыйылышы иң түбән бер эшәке

нәмә. Ҡайҙан ағыуланып бөткән был етәкселәр — ахыры, колхоз йыйылыштары уларҙың үҙәктәренә үткән!..)

Бер апай тороп мәктәптә балаларға ҡарата көс ҡулланыуҙың түбәнлеге тураһында һөйләй. Элекке иҫке мәҙрәсә методы тип атай.

— Беҙ яңы тәрбиә, коммунистик тәрбиә тураһында һөйләйбеҙ. Ә уҡытыусылар үҙҙәре һуғышып, мәхшәр булып яталар. Бер бала үлем хәлендә — уның хәлен белгән кеше лә юҡ. Ул методты һеҙ, уҡытыусылар, ташлағыҙ инде, — ти был апай. (Исемен ишетмәй ҡалдым.)

Нуриев ағай баянан бирле һүҙ һорай — халыҡ һүҙ бирмәй кире ултырта.

— Ҡайтып, бар, төҙәтеп кил башыңды! — тиҙәр. Ләкин Хәкимов уның Булатовты яҡларға теләүен белеп:

— Бер-ике һүҙ һөйлә, — тип иҫерек кешегә һүҙ бирҙе.

Бынығы торҙо ла:

— Биш балама мин гордюсь! — тип күкрәк ҡағырға кереште. — Минең һымаҡ воспитать итегеҙ әле балаларығыҙҙы, шунан һөйләшерһегеҙ минең менән! Ә бала араһына кермәгеҙ. Не позволю. Бала-сағаны воспитать надо. Бисмиллаһыҙ һүҙ әйттеме, ауыҙына һуғыр кәрәк. Понимать надо. Булатовҡа ҡаҙалдығыҙ. Ул дөрөҫ эшләй...

— Етәр, әллә Булатовтың яртыһына һатылдыңмы?

— Директорҙың первый защитнигымы әллә һин?

— Айныҡ саҡта ауыҙынан һүҙе сыҡмай, бында килеп ҡыҫтыбый булып ултырған була!..

Нуриевтың ауыҙын япҡас, Муллахмәт ағай тороп һөйләй башланы.

— Директор килеү менән үҙен бик грубый тотто. Мин университет бөткән, йәнәһе. Ул ғына уҡыған кеше. Халыҡ тома наҙан инде. Баһауға ул «һин кешегә оҡшамағанһың, маймылға оҡшағанһың» тине. Мәктәп баҡсаһына төшкән бала-сағаның муйынына шалҡан аҫып ҡуйып мыҫҡыл итте. Элек муллалар ғына эшләгән шулай. Муйынына спектаклдәге кеүек тимер-томор тағып йөрөткәндәр!..

(Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, минең бар тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Кеше шул тиклем дә садист булырға мөмкин икән!..)

Шул саҡ Хәкимов тороп:

— Булатов бит партияның дошманы түгел, халыҡтың дошманы түгел. Ҡыҙмай ғына һөйләгеҙ. Кешегә дөрөҫ юл күрһәтегеҙ. Ниңә шулай юҡты өйөргә, ярҙан төртөп төшөрөргә?! — тине.

Ләкин уны тыңламанылар.

— Директор шулай икән, мәктәптә коллективтың булмауы ғәжәп түгел, — тине Басыров ағай. — Шуға күрә коллективтың авторитеты ла юҡ. Улар нисек итеп балалар тәрбиәләһен? Директор коллективты туплау түгел, уны тарҡата ғына. Балаларҙы шуның өсөн ҡул көсө ҡулланалар ҙа, тыңлата алмағас...

Гаттарова апай:

— Төштән һуң ҡараңғыла уҡып, балам һәләк булды. Шул ҡарамағанлыҡ арҡаһында тракторға тапалды. Әнә шул Малаяҙҙан килгән татар уҡытыусы һәләк итте баламды. Ниә башҡорт балаларын татар уҡытыусылары уҡыта? Әллә үҙебеҙҙә уҡытыусылар бөткәнме?

— Милләт айырмағыҙ улай! — тип ҡысҡырҙы Хәкимов. — Беҙ нисә йыл инде бөтә халыҡтар менән татыу йәшәйбеҙ!

— Уларға айырырға ярай, беҙгә ярамай икән!

— Көлмәһендәр улар үҙҙәре балаларҙан. Ҡушамат таҡмаһындар! Ташбатыр, күҙле бүкәндәр, сусҡалар... Шулай яраймы?

Залда тағы тауыш китте.

Парторг, мәктәп завучы Солтанов торҙо.

— Тынысланығыҙ, иптәштәр! Бына һеҙ халыҡҡа ҡарағыҙ, иптәш Хәкимов, тағын да мине ҡотортоп ҡуйған тигән фекер ҡалмаһын, — тине ул Хәкимовҡа ҡарап. — Халыҡ үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡарай. Булатовтың бөтә хаталары үҙен генә белеп, «Я», «Я» тиеүҙән ҡала. Әле һеҙҙең алда сәғәттән артыҡ пропел, ауыҙҙы асып ҡарап ултырҙыҡ. Булатов булдыҡһыҙ кеше тип әйтмәйем мин, ләкин ул коллектив фекеренә ҡолаҡ һалманы. Бөтә был мәсьәләләр бер бөгөн генә килеп сыҡманы бит. Ул, үҙенә яраҡлы кадрҙар һайлап, коллективты икегә бүлде, йәштәрҙе ололарға ҡаршы ҡуйҙы. Юҡһа, ниңә беҙҙең һигеҙ йыллыҡ мәктәптә ете класлыҡ белеме генә булған кешеләр ҙә уҡыта. Дөрөҫмө был? Ҡул көсө ҡулланыу тураһында әйттеләр. Булатов әйтте, Агишев циркулде үҙе килеп һөҙөп ебәргән булып сыҡты! Булатов маҡтанды — имеш, беҙ бына ул эшләгәндә грамоталар, маҡтау ҡағыҙҙары алдыҡ. Уларҙы беҙ элек тә күп алдыҡ. Бер Булатов килгәс кенә түгел. Беҙҙең мәктәпте художественный эшмәкәрлек өсөн газетаға ла маҡтап та яҙҙылар...

Унан Солтанов Нигмәтуллинаның дәрестәренә анализ бирҙе, коллектив тураһында һөйләне, ләкин Булатовтың махинацияларына туҡтап торманы.

Йыйылыш төнгө сәғәт берҙәрҙә генә бөткәндер. Хәкимовты тыңларға мәжбүр иттеләр. Рәистең был хаҡта газетаға яҙып сығыуын һоранылар, талап иттеләр. Райком, партком һәм Кинзин адресына ҡарата ла бик ҡаты һүҙҙәр әйтелде. Булатовтың башҡа мәктәптәрҙә эшләп ҡыуылғанлығы ла, ике балаһын

ташлап китеүе лә, тағын әллә күпме бысраҡлыҡтары телгә алынды.

Минең бер ҡасан да әле был тиклем шаулы йыйылышты күргәнем юҡ ине. Күрәһең, бындағы хәлдәр ғәҙәттән тыш хәлдәр. Халыҡтың күңеленә, үҙәгенә үтеп, сығырынан сығып киткән. Ошо яҙғы ташҡында райком секретарының үҙе баҫып торған бик йоҡа боҙ киҫәгенән башҡа бер ниҙе лә күрә алмай, үҙен шундай ташҡынға ҡаршы ҡуйыуы, бер бушбоғаҙ үткенсене, ерәнгес бер шарлатанды яҡлап ҡалыуы бик ҡыҙғаныс булып күренде...

Әҙер фекер, әҙер күрһәтмә буйынса эш итеп, ҡараны аҡ итеп күргә тырышыуы, бындай бик ҙур мәсьәләгә формализм ҡоло булып ҡарауы мине бик ныҡ ғәжәпләндерҙе.

Тимәк, район етәкселегендә әле мин белмәгән бик ҙур нәмәләр йәшеренеп ята. Хәҙергә миңә бер генә нәмә асыҡ: был етәкселек халыҡҡа ят, уның ah-зарына һаңғырау бер машина. Хәкимов уның механик рәүештә бер урында әйләнеп торған бер тәгәрмәсе генә. Бәләкәй тәгәрмәс, ләкин башҡа бик күп тәгәрмәстәр менән бергә был да бик күп нәмәне иҙергә мөмкин. Иң ҡурҡынысы шул — был тәгәрмәстәр бөтәһенән элек халыҡтың күңелен иҙә. Халыҡта үҙенең нисә йылдар буйына ышанып килгән партияһына ышанмау тойғоһо тыуҙыра. Сөнки халыҡ бит уларға партияның урындағы иң авторитетлы органы итеп ҡарай. Райкомға ҡарата уның йылдар буйы тәрбиәләнгән иң ҙур ышанысы бар. Һәм бына шундай етәкселәр был ышанысты емерәләр, ваталар...

Быны төҙәтеү бик ауырға төшәсәк. Теләһә ниндәй емерек хужалыҡты бер нисә йыл эсендә аяҡҡа баҫтырырға мөмкин, ләкин кеше күңелен төҙәтеү, кешенең ышанысын яулап алыу — был инде бер нисә йылдың ғына эше түгел.

Был ни тиклем ҙурыраҡ масштабта булһа, шул тиклем ҡурҡынысыраҡ, уның эҙе лә шул тиклем тәрәнерәк һәм зарарлыраҡ (һуҙымлыраҡ).

Һәр кешелә асылмаған ҙур бер көс ята. Кеше үҙенең тәбиғәте менән ғөмүмән яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа ынтыла. Ләкин бына шундай иғтибарһыҙлыҡ, оятһыҙ бер ғәмһеҙлек, формализм машинаһы аҫтында бик күп көс баҫылып, йәберһетелеп ҡалырға мөмкин...

Йыйылыштан ҡайтҡас, Нәҡи ағай менән шул хаҡта һөйләшеп яттыҡ. Ләкин был күренеште үҙем тойғанса бөтә үткерлеге, бөтә тәрәнлеге менән аңлатып бирә алманым шикелле. Унан һуң быны тойоуы ла ауыр, күрәһең. Кешеләрҙең күбеһе тормош күренештәрен бик конкрет рәүештә, бер ниндәй фекерләүһеҙ, дөйөмләштереүһеҙ күргә өйрәнгән. Шунлыҡтан һинең бик ғазаплы уйлаған уйың күп кешеләргә аңлашылмай ҙа. Сөнки күнегелгән. Иң ауыртҡан ергә тейһәң генә, ауыртыу

ныҡ тойола. Таш төшкән ерендә ауыр шул. Һәр кешенең үҙ шеше!.. Ә мин нисектер ҙурыраҡ шеш тураһында уйлайым. Фекер өсөн факттан аҙ ғына өҫкәрәк ҡалҡыр кәрәк һәм шул фекер менән, тағы ла үткерерәк күҙ менән, шул уҡ фактҡа кире килә белергә кәрәк. Юҡһа, факт үҙе генә күҙеңде терәп ҡарағанда бөтә ҡырҙары менән күренмәй. Бальзак «глуп как факт» тип бик тапҡыр әйткән!..

Ә шулай ҙа халыҡ — көслө! Был көслө ышаныу ғына һине көслө итә, ҙурыраҡ, тулыраҡ итә...

15 апрель.

Яландарҙа ап-аҡ ҡар ята. Иртән Мәсетленән машина менән ҡайттым. Надяға ҡайҙа булғанды әйттем дә, өйгә лә кереп тормай, Һарғамышҡа киттем. Бәҙертдин ағай ҙа ултырҙы. Мәсетле хәле тураһында әйткәс, үҙенең был мәсьәләне көҙҙән үк белеүен һөйләне.

— Ниңә, Бәҙертдин ағай, шул хәлде белә тороп, дөрөҫлөктө яҡлап сығырға булмай инеме? — тип һорауыма ул үҙенең бөтә философияһын асып бирҙе.

Ҡасандыр ул да йәш булған, ҡыйыу фекерҙәр ҙә әйткән, һуғышҡан да. Ләкин дөрөҫлөк ул — кем көслөрәк, шуның ҡулында. Бер ауыҙың бешкәс, һалҡын һыуҙы ла өрөп эсәһең. Тура әйткән туғаныңа ярамай. Дөрөҫлөктө әйтеп, үҙеңдең барыр юлыңды ла кәртәләп ҡуйырға мөмкин. Начальствоға ярамайһың икән, эшһеҙ ҙә тороп ҡалырға була. Унан һуң һин бер үҙең генә йәшәмәйһең бит, ғаилә — ҡатын, бала-саға ла бар... Уларҙы бит аҫрар кәрәк... Артыҡ тура булыуҙың файҙаһы юҡ. Әкрен генә эшләп тик йөрө. Башыңды бик күтәреп ҡарама. Ә эйелгән башты ҡылыс та киҫмәй. Бөтәһенә лә яра, бөтәһен дә яраштыр. Алдың-артың ҡарап йөрө. Миңә теймәгән йылан әйҙә йөҙ йыл йәшәһен!..

Был философияны нығытып әллә күпме мәҡәлдәр килтерергә мөмкин. Күрәһең, тормош һабағын ныҡ уҡыған Бәҙертдин ағай.

Юл бик бысраҡ ине. Бәҙертдин ағай йөрәгән ус төбөндә генә тотоп килә.

— Ҡурҡма, Бәҙертдин ағай, йәшәгәнһең бит инде, — тип көләм.

— Әһе-һе, балалар бар бит! — ти ҡарт философ...

Кис.

Юрий Гагаринға

Һинең хаҡта
Иң, иң көслө һүҙҙе
Әйтке килә...

Булмай, юк һүзем.
Батырлығың —
Иң көслө йыр
Бөгөн һин — үзең!..

Ҡайтҡанда Марстың атына атланып ҡайттым. Юл бысраҡ булғас, тау арҡаһынан юрттырҙым. Марстың аты яҡшы ғына. Ниндәй күңелһеҙ саҡта ла атта йөрөү күңелле — йырлағы, шиғыр яҙғы килә. Гагарин тураһында уйланым, Һарғамыштағы хәлдәр тураһында ла. Халыҡтың эше — батырлыҡ. Тик күҙгә генә ғәҙәти булып күренә.

19 апрель.

Тағы Мәсетлеләмен.

1. «Әхтәрова Тәнзилә — һауынсы. Йыйылышҡа йөрөмәй, тормошта, балалары — берәү», — ти Радик.

2. Вальшин Әнис — тракторист, ләкин трактор бирелмәгән, төҙөлөштә эшләй, ҡайҙа ҡушалар, шунда йөрөй.

3. Ғатауллин Әҙһәм, 1934 йылғы, шофер, ҡатын алғаны бирле аяғын да баҫҡаны юҡ. Яңы йылдан бирле взносын да түләмәй. Һөйләшергә.

4. Ғәниева Әнүҙә, эшләмәй, иптәше сығып киткән, йыйылышҡа йөрөмәй. Яңы йылдан бирле взносын түләмәгән. Һөйләштек.

5. Дусыев Тельман, киномеханик, күптән бирле взносын түләмәй. Йыйылыш ваҡытында кино күрһәтеп, ярты халыҡты йыйылыштан сығартҡан. Әйткәс, минең маршрут шулай, ти. Ә суббота көн кино ҡуймаҫҡа ине.

6. Исламғолова Йәүһәрә, совхоз башланғаны бирле эшләмәй, взносын да түләмәй. Бер балаһы бар.

7. Исламғолов Рәүис, механизаторҙар курсында уҡыған, трактор бирелмәгән. Эшһеҙ.

8. Нәсибуллина Рима, эшләмәй, ике балаһы бар, йыйылышҡа йөрөмәй, взносын түләмәй.

9. Садиҡов Әхәт, армиянан сокращениеға эләгеп ҡайтҡан, хәҙер ҡайҙа эшләргә теләй — билгеһеҙ.

10. Сәфәрғәлина Роза — ике балалы, йыйылышҡа йөрөмәй, түләмәй взносын.

11. Фәхретдинов Ҡазыйхан, учетта түгел, кермәҫкә лә уйы бар.

12. Ханова Талия — йәше үтә, ни уйлай?

13. Яппарова Әнгиҙә — элеккесә.

14. Ғәлимов Радик, учеттан төшмәй йөрөй, һуғыша. Билетын тикшерергә.

15. Ғиззәтуллина Әнүзә, учетка кермәгән.

Бына шул иптәштәрҙең өйҙәренә кереп, нисек йәшәүҙәрен, ни уйлауҙарын белергә булдыҡ.

Башта Радиктың үҙе менән ауыл артына сығып, ҡыш юл һаҙлығында һөйләшеп йөрөнөк. Комсомол эшен һыуындыра башлаған. Күңеле төшөнкө. Эш етмәй халыҡҡа, ти Радик.

— Совхоз булғас, эше лә, ашы ла юҡ, — тип зарлана. Ысындан да, Яппаров ағайҙың район газетаһына яҙған мәҡәләһе бик дөрөҫ. Бик ҙур мәсьәләне күтәргән. Ләкин мәҡәләне баҫмайынса, парткомға тикшерергә ебәргәндәр. Район газетаһы, күрәһең, РК секретарының кеҫә газетаһы булыуҙан ары китә алмай. РК-ға барып тейә торған нәмәләр тураһында һүҙ ҡуҙғатырлыҡ та түгел. Ә бик күп мәсьәләләр шуның арҡаһында баҫылып ҡала.

Кисә Мәсетле мәктәбендә профсоюз йыйылышынан һуң Айлитаның ағыуланып үлеүе тураһында бөтә район шаулай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыҙында шул ғына. Уксус эссенцияһы эсеп үлгән, тиҙәр.

Бөгөн беҙ барған машина Айлитаны ла килтерергә тейеш ине, ләкин уны Таймый машинаһы алып ҡайтҡан икән. Булатов партком машинаһында юлда осраны. Кинзин биреп ебәргән. Булатов үлекте ҡалдырып үҙе генә ҡайтып килә!..

Бына һиңә финал!

Мәсетлегә Сабитов та килеп еткән, протоколдарҙы аҡтара, ти.

— Үҙенең дә ҡойроғо таҙа түгел шул, — ти Алкин ағай...

20 апрель.

Совхоздың партия йыйылышы. Совхозда 207 коммунист, 14 кандидат.

Көн тәртибе: «Совхоз партия ойошмаһының партия Үҙәк комитеты пленумы ҡарарҙары яҡтылығындағы бурыстары».

Докладсыға — егерме минутлыҡ һүҙ.

Шәйхисламов яңылыштан, элекке ғәҙәте буйынса:

— Яруллинға һүҙ бирелә, — тип ебәрҙе лә хатаһын тиҙ үк төҙәтә һалды. — Иптәш Ғайнановҡа һүҙ бирелә, — тине.

Ғайнанов партия Үҙәк комитетының ғинуар пленумы тураһында һөйләй, совхоз хәленә күсә. 1953 йыл менән 1960 йыл сағыштырыла. Проценттар, күрһәткестәр үҫешен күрһәтә. Етешһеҙлектәр тураһында һөйләй. Карьеристар, күҙ буяусы етәкселәр тураһында әйтеп китә.

Совхоз 730 гектар яңы ерҙе үҙләштерергә тейеш. Ике меңдән артыҡ һаҙамыҡ ерҙәр киптереләсәк (1961 йылда). Ҡырмыҫҡалы, Шишмә райондары һәр гектар ерҙән 14,5—15 центнер иген ала. Беҙҙә Ворошилов исемендәге колхоз да шу-

лай ала. Ләкин башҡа колхоз, совхоздар был тәңгәлдә бик артта ҡала. 7—8 центнерҙан уҙыра алмайҙар. Бурыс — 11,5 центнер алыу!.. — ти Ғайнанов.

Беҙҙә арыш сәсеүҙе арттырыр кәрәк. 5100 гектар арыш сәселергә тейеш совхозда. Һоло сәсеүҙе ҡыҫҡартырға кәрәк. Һолоно таҙа көйө бесәнгә сәсеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа юҡ. Вика, борсаҡ менән ҡатнаштырып ҡына сәсергә кәрәк. Беҙҙә орлоҡҡа һоло сәсеү 30 процент тәшкил итә.

Ҡарабойҙайға вәхшиҙәрсә ҡарайбыҙ. Ә был бик файҙалы культура беҙҙә яҡшы үҫә. Ғайнанов ҡарабойҙай сәсеү агротехникаһын һөйләп китә. «Беҙгә, игенселәргә, ҡарабойҙайҙан насар уңыш алыу хурлыҡ!» — тип ебәрә. Нисектер был көлкөлө булып яңғырай. Үҙе бит был хаҡта яҡшылап белмәй ҙә!.. Әйтерһең үҙе иген игеп ҡараған!

Малсылыҡҡа туҡтала. Аҙыҡ базаһын нығытыу, кукуруз тураһында һөйләй. Һарыҡтар, быҙау-сыҫҡаларҙың үлеүе кеүек хурлыҡлы күренеште бөтөрөр кәрәк инде, ти. Һыйырҙарҙы ҡасырыуға иғтибарһыҙлыҡ тураһында әйтә. Перинды ҡыҙҙырырға тотона, тоҡомло һыйырҙарҙы әрләй, ә һыйырҙар Һарғамышта ас тора!.. Бына был хаҡта нығлап уйланырлыҡ.

Һөттө әсетеү бик күп. Һарғамыштың зоотехнигы Марс Закировтың, управляющий Перинды кустарь май тапшырыуын тәнҡитләй. Һандар бирә.

Маяҡ-һауынсылар тураһында: улар яңғыҙаҡ булырға тейеш түгел, ти.

Сыҫҡа ите етештереүҙең үҙкиммәте бик юғары. Сыҫҡа балалары күп үлә. Тыуғандың үлгәне 23 процент. Миәшәгәр һәм Мәсетлелә 30 процент. Совхоз буйынса быйыл бөтәһе ...* баш сыҫҡа бәрәсе үлгән. Беренсе кварталда 900 центнер ит алып еткерелмәгән. Миәшәгәрҙә сыҫҡа балаларын ашатыу насар.

Был хаҡта һөйләшер кәрәк.

Совхоз хәҙер тәжрибә-үрнәк совхозы тип аталды. Белгестәр тураһында нығлап уйланырға кәрәк. Күп управляющийҙар иҫкесә йәшәй, яңылыҡҡа ынтылмайҙар. Коммунист һәм иң яҡшы комсомолецтарҙы иң яуаплы участкаларға ҡуйырға кәрәк. Райкомға коммунист һәм комсомолецтар исеменән һүҙ бирә.

(Комсомол һүҙен Ғайнанов тәү башлап телгә алды. Ахыры, минең әйткәндәр ҡолағына кергән, буғай. Ғәжәп, шул һүҙҙе әйтһәләр ҙә күңел йылынып киткән була бит!..)

Фекер алышыуҙар башланды. Баш зоотехник Пендюрин һөйләй. Һыйырҙар быйыл 250 башҡа артырға тейеш. Ете йыл аҙағына — 4200 башҡа. Ләкин малды арттырыу ифрат насар

* Һан ҡуйылмаған.

бара. Тана һыйырҙарҙы иртә ҡасырыу эште һәләк итә. Ә 20 — 22 айлыҡта ҡасырырға кәрәк. Иҙелбайҙа иртә ҡасырып, хәҙер тана һыйырҙар һөттө әҙ бирә.

Сусҡасылыҡта бәрәстәр алыу менән эш ҡыйын. Таймый фермаһы ғына йөкләмәһен үтәне (I кварталда). Алынған бәрәстәрҙе һаҡлау насар бик. Хәҙер маткаларҙы һайлап алыр кәрәк — 400 баш матка булдырырға кәрәк.

Һарғамыш фермаһы һөт алыуҙы бик кәметте. Таймый фермаһы 45 центнер һөттө быҙауҙарға артыҡ тотҡан.

Һөттөң ҡуйылығын билдәләү менән дә эш насар. Контроль юҡ. Күҫәлә Зиннуров яҡшы эшләй. Ә Һарғамышта был эште яҡшы белһәләр ҙә, быға иғтибар итмәйҙәр. Бишәүҙәрҙән Хәйрисламов, маслозавод эргәһендә йәшәп тә, һөттө әсетә. Вечканов та унан ҡалышмай.

Таймый, Иҙелбай, Йыланыш фермалары һөт һауып алыуҙы 100 литрға кәметкән.

Малдарҙы хәҙер көтөүгә сығарыр ваҡыт етә. Тәүлек әйләнәһенә көтөүҙе яҡшылап ойоштороpға кәрәк. Былтыр Таймыйҙа бит йүнләп көтмәнеләр төндә. Шунлыҡтан улар артта ҡалып килде. Ҡыш яҡшы эшләнеләр, ләкин йәй тураһында ныҡлап уйлар кәрәк.

Мал ҡараусыларҙы һайлап алырға!

Йоморткa алыу буйынса Миәшәгәр, Мәхмүт ҡошсолары яҡшы эшләй. Ә Мәсетлелә Ғәлимов 3000 тауыҡтан 400 йоморткa ала. Себештәрҙе үлтерә. Былтыр мең баш себеште бер төн эсендә үлтерҙе.

Малдарҙы һаҡлауҙан уңманыҡ. Миәшәгәрҙә 104 баш суска бәрәсе үлгән. Арҡауылда, Иҙелбайҙа күп үлә. Групповой методҡа күсеүгә консерватив ҡараштa тороусылар бар.

Тоҡомсолоҡ эше совхозда әле юҡ тиерлек. Һарғамыштан башҡа был эште башҡармайҙар. Был эш әле бәбәктә генә. Беҙ насар зоотехниктар, күрәһең. Зоотехучетты алып бармайбыҙ.

Яһалма ҡасырыу эше лә шәптән түгел. Һарғамышта Багаев — тәжрибәле кеше, ләкин учетты бутаған.

Контрактация үткәреүҙе башлар кәрәк. Йәйге лагерҙарҙы әҙерләп, яҙмаларҙы ябып ҡуйырға кәрәк.

Етешһеҙлектәргә түҙеп торғоһоҙ атмосфера булһын.

Борис Перин. Тәнҡит дөрөҫ булды, ти. Һөттө кәметтек (сағыштырма һандарын килтерә). Сәбәп ниҙә? Февраль-март айҙарында һыйырҙар һыуалды. Ләкин төп сәбәп — аҙыҡты дөрөҫ бүлмәүҙә. Мал башына (750 баш һыйырға) ер майҙаны аҙ тура килә. Миәшәгәрҙә һалам тулып ята, ә беҙҙә малдар ас тора. Ҡайҙан һөт булһын? Тоҡомло һыйырҙарға ла бит ашарға кәрәк. Ғайнановҡа быны белер кәрәк ине. Ләкин ул беҙгә һирәк килә. Ә беҙ бик ҡыйын хәлдә. Киләсәктә был етешһеҙ-

лек бөтөрөлһөн. Быйыл 15 баш мал үлде. Багаев һыйырҙарҙы ҡасырыуҙа учетты бутаны. Журнал алып барманы.

Механик һауыуҙы башланыҡ. Бик яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Экономиялы, гигиена өсөн дә яҡшы. Механизацияға ныҡлап тотонор кәрәк. Сливпункттарҙы маслозавод ҡарамағына бирер кәрәк. 30 кешеһе бар. Ә беҙҙә бер кеше. Уның приборҙары ла етешмәй. (Кислотноҫты билдәләү өсөн.)

Сәсеү етте. 2 трактор әҙер түгел әле. А/х машиналары әҙер. Йыйылыш үткәрҙек. Агротехника буйынса дәрес үтте. Әҙербеҙ тиерлек.

Яруллин Әнис — Миәшәгәр ферманың йәш управляющийы. 13 центнер иген алырға тейешбеҙ, ти, һәр ганан. Быға шарттар нисек һуң? Беҙгә бойҙайҙы 500 гектар ғына сәсергә мөмкин. Ә беҙгә меңдән дә ашыу ер бирелә. Техника ла етешмәй. 7 көнгә һуҙыласаҡ сәсеү. Егерме көнгә лә һуҙылыу мөмкинлеге бар.

Механизаторҙар яҡшы, әгәр ҙә ярҙам булһа, беҙ сәсеүҙе үткәрә аласаҡбыҙ.

Малсылыҡ өсөн тәңкитләнеләр. Һыйыр-һарыҡ өсөн йәйге лагерға көтөүлек етмәй. Сейәлетау яғынан ер бирелһен ине.

Торлаҡ мәсьәләһе борсоулы хәлдә. Торлаҡтар етмәй, һауынсылар, сусҡа ҡараусыларға өйҙәр кәрәк. Буралар биреүегеҙҙе һорайбыҙ. 100 башҡа сусҡа һарайы төҙөргә кәрәк. Овчарник та төҙөр кәрәк. Һарыҡ аҙбарҙары емерелеп бара.

Белов — прораб. Торлаҡтар төҙөү тураһында һөйләй. План былтыр арттырылып үтәлде, ти. Быйыл 47 мең һум бүленгән — хужалыҡ төҙөлөштәре өсөн.

Кирбес заводы өсөн 20 мең һум бүленгән. Киптереү хужалығы төҙөргә кәрәк. Ләкин управляющийҙар бик ыҙлап бирмәйҙәр. Торлаҡ йорттары өсөн 125 мең һум бүленгән. Хәҙерге көндә 29 бура бар.

Яруллинға, «күпме төҙөй алаһығыҙ, төҙөгөҙ», ти. Сүбәк етмәй. Абдуллин уйламай эшләй. Шуның арҡаһында өйҙәр күтәрелмәй тора. Управляющийҙарҙың етен сәсеүен һорай Белов.

Мәсетлелә ике йыл буйы себештәр өсөн торлаҡ төҙөй алмайҙар. Уларға орлоҡ һалыу өсөн кеҙәт төҙөргәме, юҡмы? (Ә халыҡҡа эш етмәй.)

Таш әҙерләнмәй. Гел ағас ҡына көтәбеҙ. Урындағы материал файҙаланылмай.

Совхозды электрификациялау өсөн баҫаналар етешмәй. Биш меңләп баҫана кәрәк. Ә баҫаналарҙы Дыуанға йөрөтөп ыҫмалалау бик ҡиммәткә төшәсәк. РК бында эшләргә ярҙам итһен ине.

Һәр бер төҙөлөш бригадаһына транспорт кәрәк. Прицептар етешмәй. Һәр фермаға берәр генә булһа ла прицеп кәрәк.

МТМ төҙөлөш заказдарын бик ялындырып ҡына эшләй. Әйтерһең, сит хужалыҡ.

Совхозда тик бер генә ағас эшкәртеү станогы бар! Ҡайҙан алырға был станоктарҙы?

Абдуллин — рабкооп председателе. Бөтә был мәсьәләләрҙе тере кешеләр хәл итә. Бер кем дә дөйөм туҡланыу тураһында һүҙ ҡуҙғатмай. Ә был эш тейешле кимәлдә тормай. Поход кухнялары килгән станцияға. Уларҙы килтерер кәрәк. Заявкалар килмәй. Аҙыҡ-түлек менән совхоз тәьмин итергә тейеш. Бешекселәр билдәләнмәгән. 3-4 көнгә Лағыр совхозына уҡырға ебәрер кәрәк. Беҙгә бер автолавка бүлһендәр ине. Дефицит тауарҙар эшселәргә һатылһын.

Белов сүбәк һорай. Ниңә сүбәк көтөп торорға? Мендәр кеүек күпереп ятҡан мүкте һәнәк менән ҡайырып ал да һал әйҙә өйөндө. Ғүмер буйы мүк менән һалдыҡ бит өйҙәрҙе. Ниңә сүбәк кенә көтөп ятырға?

Ҡазыханов — Иҙелбай управляющийы. Ер структураһын үҙгәртеү тураһында һөйләй. Осиновка ере 50 кг иген бирҙе. (Һәр гектарынан.) Ниңә ундай бойҙай сәсергә? Арыш йәки үлән генә сәсергә мөмкин. Бындай ерҙәр Таймыйҙа ла күп. Сәсеү әйләнешен был яҡтан ҡарап сығырға кәрәк.

Зиннуров, Харисов яҡшы эшләйҙәр.

Управление должно быть управляемым. Ләкин беҙҙә управление бик тарҡау. Централизация үткәрергә кәрәк.

Латыпов — баш инженер. Механизация тураһында һөйләй. 110 тракторҙан 105 трактор сәсеүҙә ҡатнашасаҡ. Резина, бортшестернялар етешмәй. Тракторҙарҙы ремонтлауҙа ҙур етешһеҙлектәр булды. Эксплуатациялауҙа тәртипһеҙлек күп.

Сәскестәр етә. Етмәгәнен Гутаптан килтерергә мөмкин. Һабандар ҙа, культиваторҙар ҙа етә. Тырмалар ҙа етерлек.

Миәшәгәр, Һарғамыш, Йылаңыш һәм Таймый фермалары сәсеүгә яҡшы әҙерләнделәр.

(Алты һуҡалы һабан биш һуҡалы һабандан бер ни менән дә айырылмай. Бишенсе һуҡаға көс күп төшә, алты һуҡа булғанда, тартыу көсө тигеҙ була.)

Перин, Ҡазыханов механизацияға ҡаршы киләләр. Бәрәңгене ҡул менән сәсеү яғындалар.

Техника етерлек, тик техниканы файҙалана белеү генә етмәй. Һәр механизатор яңы машина, яңы запчасть ҡына һорай. Былтыр эшләгән комбайндан да баш тарталар. Бик яман өйрәтәбеҙ былай беҙ механизаторҙарҙы.

Борханов үҙ белдеге менән рационализация үткәрә. Ләкин был бер нигә лә ярамай.

Әбйәлилов эсеп культиваторҙарҙы тапатҡан. Шоферҙар бик эсә.

Техуход насар. Техниканы һаҡлау насар. Запчастар тиҙ иҫкерә.

Переаттестация үткәрелде. Ләкин уны үтмәгәндәр ҙә бар. Уларға техниканы бирергә ярамай.

Янғындан һаҡланыу юҡ. Мәсетленең ауыл уртаһында нефтебаза урынлашҡан. (Техника безопасности.)

Б. Шәйхисламов ағай һорауҙарға яуап бирә. Агитмассовый эш тураһында һөйләй. Бөтә комсомол эшен үҙенә ала.

Кинзин. Былтырғы күрһәткестәрҙе онотмайыҡ. Иген һәр га-нан 8 ц 70 кг алынды. Йөкләмә үтәлмәне. Ер эшкәртеү культураһы түбән. Бәрәңге һәр га-нан 40 центнер ғына алынды, ә 20 центнер сәселде! Кукуруз да бик кинәндермәне.

80 мең центнер игенде хөкүмәткә тапшырыр кәрәк, 88 мең центнер фуражға китәсәк. Быныҡ өсөн валовый уңыш 200 мең булырға тейеш. Һәр га-нан 12—12,5 центнерҙан да кәм алырға ярамай.

Яҙғы сәсеүҙе иң юғары сифатта үткәрергә кәрәк. Агротехниканы аҙ ғына боҙоусылар ҙа язаһыҙ ҡалмаясаҡ! Материаль яза буласаҡ.

Бер йыллыҡ үлән быйыл мең гектар сәселәсәк. Борсаҡ, викаға тотонасаҡбыҙ. Ә һолоно бесәнгә сабыуҙың бер ниндәй файҙаһы юҡ. Ул һалам менән барыбер. Беҙгә малды яҡшы сифатлы аҙыҡ менән тәьмин итеү тураһында уйларға кәрәк, күләмле аҙыҡтан файҙа юҡ. Шәкәр сөгөлдөрө, бәрәңге, кукуруз һәм ҡуҙаҡлы үҫемлектәр үҫтерәсәкбеҙ быйыл. Кукурузсыларға өҫтәмә түләү тураһында. Мәсетле, Күҫәләрҙән өйрәнергә кәрәк.

Дәүләткә 28 мең центнер һөт һатырға кәрәк быйыл. Бынан башҡа эске файҙаланыуға күпме һөт китә! Ләкин һөттө кәметәбеҙ.

Мәсетлелә кис һауалар, ә бригадир үҙ эше менән Ахунда йөрөй — Хурамшин Батырша. Шул һөт өсөн көрәш буламы? Һәр һыйырға ярты айҙа ун етешәр литр һөт кәмегән.

Зоотехниктар эшләмәй. Һарғамыш зоотехнигы Марс Закиров күпме һөт әсетеп йөрөгәнен дә белмәй. Быны маслозавод эшселәре хәбәр итә, ә зоотехник белмәй.

Бына Нуриев — обком секретары үҙе һөт кәмеүе тураһында телеграмма бирә. Эшкә бик ғәмһеҙ ҡарайбыҙ. Илья Иванович, вы и сами не работаете и люди не работают. Вы измените положение, или мы что-нибудь сделаем с вами! Придется с вами сегодня говорить по прямому проводу. Брагин, сколько вы можете пьянствовать? Вы не работаете. По улице пьяным

ходите. Свиней губите, молока не даете! Работайте, если не хотите — уходите, найдем других.

Мәсетле фермаһының эшенән тауыҡтар ҙа көлөр. Ғәлимов эшләмәй. Инкубаторҙан алып ҡайтҡан себештәр бик ҡырыла.

Совхоз — бөлгөнлөктә, 1 млн 45 мең һум зарар булды! (иҫке аҡса менән.) Алдашыу күбәйҙе. Етәкселәр нисек теләй, шулай эш хаҡы түләйҙәр. Перин тракторҙа ике өйҙө емергән кешеләргә 9 мең түләгән! Иҫ китерлек бит, шунан да ғәмһеҙ хужалыҡ булырмы икән? Бер ҙә иҫәпләп тормайбыҙ, — ти Кинзин.

Тәнәфестән һуң РК секретары Сабитов һөйләй. (Халыҡ һирәгәйгәйне инде.) Ғинуар пленумында төп мәсьәләләрҙең береһе булып сәсеү майҙандарының структураһын үҙгәртеү торҙо. Шәкәр сөгөлдөрө, кукуруз, ҡуҙаҡлы культуралар үҫҙәренә киңерәк урын һорай хәҙер.

Иптәш Хрущев «Һарғамыш» совхозының сәсеү структураһы менән таныша, арттырмайса әйтәм, моғайын: «һеҙ — дуракстар», — тип әйтер ине. Беҙ һоло менән ерҙе тултырҙыҡ. Был хәлде төҙәтергә кәрәк! Борсаҡты 300 га түгел, виканы 800 га түгел, ә күберәк сәсер кәрәк. Әле ваҡыт үтмәгән. Һолоно кәметеү иҫәбенә кукуруз сәсеүлеген арттырыр кәрәк. Был ете йыллыҡтың өсөнсө яҙы. Сәсеүҙе беҙ 7—8 көндә үткәрәбеҙ, тибеҙ. Дөрөҫ түгел, сәсеүҙә беҙ утыҙ көн булабыҙ.

Яҙ насар килмәй. Ләкин ерҙе тигеҙ ҡоротмай, — ти Сабитов.

(Залда ишек алдында Әнүк иҫереп ята ине, Сабитов һөйләй башлағас, ул геүелдәргә тотондо.)

22 апрелдән тырматыуға төшөр кәрәк. Шулай елләтһә, ер өлгөрәсәк. (Сабитовтың ҡул һелтәп һөйләүе нисектер һүҙҙәренә тура килмәй.)

Көнсығыш райондарҙы дымлы, тиҙәр. Дөрөҫ түгел. Мин бында ете йыл эшләйем. Май, июнь айҙары бында ҡоро була. Ямғырҙар августа башлана.

Тырматыуҙың сифатына иғтибар итергә кәрәк.

750 га яңы ерҙе үҙләштерер кәрәк. Ә һөрә башламағанһығыҙ. Хәҙерҙән үк төшөр кәрәк. Сиҙәм ерҙе һөрөп була хәҙер ҙә.

Иртәгәнән үк кукуруз, шәкәр сөгөлдөрө сәселәсәк ерҙәрҙе ашларға кәрәк. «Беларус»тарҙы егегеҙ. Серетмәһеҙ бер гектар ҙа булмаһын. Ялан эсенә кереп булмаһа, ситкә түгеп торор кәрәк. Аҙаҡ — таратырға.

Ерҙе эшкәртеүгә иғтибар! Былтыр Заһиҙуллин яланда вагон эсендә ултыра, ә эргәһендә брак һөрөлгән ер. Былай етәкселек итергә ярамай. Ысын крәҫтиән булырға кәрәк. Ерҙең ситенән

баш ҡалҡытып ҡарарға түгел, ерҙең эсенә кереп ҡарарға кәрәк. Итектәрең батып торһон!..

Борсаҡ, вика, көнбағышты 27 апрелгә сәсеп бөтөргә кәрәк.

Мин сәсеү агротехникаһына туҡталып тормайым, рекомендациялар менән танышҡанһығыҙҙыр.

100 га ерҙе эшкәртеүгә 17 мең өҫтәлмә түләү буласаҡ. Кукуруз квадраттары — иң мөһиме. Бер квадрат та кукурузһыҙ булмаһын. Ун процент квадрат буш булһа, 100 га ерҙең ун га-һы буш ята тигән һүҙ бит.

Кукурузды нисә йыл үҫтерәбеҙ, өс йөҙ центнерҙан ары китә алмайбыҙ. Ә беҙҙә кукуруз 600 центнер бирә ала. Быйыл яҡшы сорт орлоҡ индерелде — «Стерлинг». Миәшәгәрҙә бер йыл был сорт кукурузды балта менән киҫтеләр. Мин ниндәй оҙон кеше, мине күмерлек ине.

Сәсеү темпы тураһында. Кукурузды ярышып сәсергә, теүәл сәсергә кәрәк. Беҙ бер аҙна рәхәтләнеп сәсә алабыҙ, сәскестәр етерлек.

Шәкәр сөгөлдөрө — яңы культура, был беҙҙе бик тулҡынландыра. Былтыр хатта торнапистан 20 центнер ғына уңыш алдыҡ. Ҡурҡыта, бик ҡурҡыта был шәкәр сөгөлдөрө. Беҙ уны һәр га-нан 200 центнер алырға тейешбеҙ. Иртәгә беҙ семинар үткәрергә тейешбеҙ. Шәкәр заводынан минең менән бергә специалист килде. Көҙөн шәкәрҙе ул аласаҡ һеҙҙән.

Сәсеү ваҡытында ер-әсә йөҙөндә иң идеаль тәртип булдырыр кәрәк. Ҡарағуралар үҫмәһен. Бер метр ер ҙә һөрөлмәй ҡалмаһын. Был — агропромдар, механизаторҙар, бригадирҙар эше. Агрономия грекса — ерҙә тәртип булдырыу эше, был һүҙҙең мәғәнәһен онотмайыҡ, иптәштәр.(?) Беҙҙә бер бригада эш хаҡын бер төрлө ала, икенсеһе икенсе төрлө ала. Эшенә ҡарап эш хаҡы түләйһең. Ете йыл эшләп, йыл һайын 8 центнер иген алабыҙ. Әгәр түләүҙе үҙгәртмәһәк, был шулай ҡаласаҡ. Үҙгәртергә кәрәк. Гел юғарынан әйткәнде генә көтөп ултырмайыҡ.

«Трактор бригадаларында трактор отрядтары булһын», — тине иптәш Хрущев. Берәү баш эшсе булһын, уйларға кәрәк был турала ла.

Ергә бөтә күңелде биреп эшләр кәрәк. Контроль менән генә эшләһәләр, икмәк икмәҫһең. Һәр кем үҙен яуаплы тойһон. Бөтә секретарҙар, коммунистар аңлатыу эшен алып барһындар. Мәҙәни-көнкүреш хеҙмәтләндереү кешесә булһын. Күсмә библиотека ауылда, ә төп библиотека яланда булһын.

Кооператорҙар һөйләргә шәп, ә яланда йөрөгәндә, папирос сәлдереп йөрөргә мәжбүр булаһың. Трактористарҙан тәмәке һорап тартаһың. Абдуллин әллә ниндәй катапункттар тура-

һында һөйләй, ә тәмәке һатыуҙы ла ойоштормай. Был хаҡта ла ныҡлап уйларға кәрәк.

Н. С. Хрущев Гагаринды ҡаршылағанда крәҫтиән хеҙмәтен дә ҡотланы. Был бик дөрөҫ. Икмәкһеҙ космоҫка ла бик осоп китә алмаҫһың. Ас көйө аҡыл да эшләмәй. Космоҫка осоуҙа крәҫтиәндең дә хеҙмәте ҙур.

Трапезникова һөйләп китә:

— Һин председатель булғанда, ҡаҙаҡҡа ла, банкка ла, шиферға ла үҙең йүгерә инең. Ә хәҙер һин тик хужалыҡ менән генә идара итәһең. Ә эш бармай.

Бөтә малды завҡа тапшырған да, ә ул завы һаҡалын да ҡырып йөрөй белмәй!.. Былай беҙҙе һаҡал баҫып бөтөр. Управляющий эште ойоштороргә тейеш. Һәр бригадала ком. ойошма бар. Һәр ике ауылға бер ауыл советы бар. Ниңә эшләмәйҙәр?

Йоморткa буйынса бер хужалыҡ эсендә шундай ҙур контраст. Бер һөҙөмтәгә килер кәрәк бит! Бер үк директор, бер үк парторг. Ә эш төрлө урында төрлөсә. Был нормаль хәл түгел. Тимәк, етәкселек юҡ. Ярышты ойоштора белмәйҙәр. Һөт буйынса ла шундай уҡ контраст. Суркова һәм Фәлләева араһында ер менән күк араһы. Бына партия ойошмаһының эше!

Мин Шәйхисламовтың сығышын бик ныҡлап тыңланым. Дөрөҫ һөйләнегеҙ. Ләкин ҡыш буйы коммунистар һеҙҙең етәкселек аҫтында уҡыманылар. «Кәрәк» тигән һүҙҙе әйтәнегеҙ, башлап эшләмәйһегеҙ. Шуның өсөн беҙҙә «стрекунистар» күбәйҙе. Ялыусылар күп. Сәйәси аңдары түбән. Солтанов һәм Булатов кеше туҡмау сәнғәтенә өйрәнгәндәр. Нормаль хәлме шул? Комсомолка үҙ-үҙен үлтергән. Мәжбүр иткәндәр уны. Хәкимов, был эште бөтөрөгөҙ, йәш уҡытыусыны үҙ ҡанатығыҙ аҫтына алығыҙ, тип РК исеменән әйтеп киткән. Ә икенсе көндә профсоюз йыйылышы йыйып, уны тағы ҡыҙҙыралар. Һәм ул йыйылыштан сығып китергә, үҙен-үҙе һәләк итергә мәжбүр була.

Был мәсьәлә менән Ғайнанов та, Шәйхисламов та ҡыҙыҡһынмаған. Коммунистар ғәйбәт, үҙ-ара ыҙғыш менән шөғөлләнгән. Идея-сәйәси кимәлдәре түбәнәйгән.

Тәрбиә мәсьәләһенә ныҡ иғтибар итер кәрәк. Партия-комсомол ойошмалары эшләһендәр, уяу булһындар, — тип һүҙен бөтөрҙө Сабитов.

Ғәжәп, ғәжәп хәл: бер фактты бына нисек бороп ебәрергә мөмкин икән! Берәү фәрештә кеүек, берәүҙәр бөтә бысраҡты йотһондар, имеш. Ә бит бындай хәл бөтөнләй булмаған булыр ине, әгәр...

10 май.

Бына көндәлектең май дәфтәрен яҙырға башланым. Бынан кире көндәлекте тәртиплерәк алып барырға кәрәк. Юҡһа, бик күп нәмәләр яҙылмай ҡала ла, аҙаҡ уларҙы яҙып ултырырға йә ваҡыт булмай, йә ирендерә, йә уларҙың әһәмиәте кәмегән кеүек булып күренә. Яңы көн яңы тәьҫирҙәр, яңы фекерҙәр килтерә, ә кисәге көндөң күренештәре тоноҡлана, үҙенең буяуҙарын юғалтып, әкрен-әкрен генә шулай күмелә башлай...

Ә һәр көн үҙенсә матур бит!.. Бер көн дә икенсе көн булып ҡабатланмай. Әгәр ҙә һәр бер кеше үҙенең һәр көнгө тормошон, үҙенең уй-кисерештәрен яҙып барһа, донъяла һәр бер кеше тураһында бик ҡыҙыҡ китаптар тыуған булыр ине!..

Ләкин был эшләнмәй. Хәйер, бының кәрәге лә юҡтыр? Әгәр ҙә һәр кем яҙа белһә, һәр кем үҙе теләгәнсә алдаған булыр ине... Сөнки кеше үҙенең тормошон үҙ күҙҙәре менән бөтә тулылығында күрә алмай. Был мөмкин дә түгел. Һәр кем үҙен теләгәнсә матурлаған, биҙәгән булыр ине. Йәки бының киреһенсә булыуы ла мөмкин. Кешенең эске донъяһы уның үҙе тураһында яҙғандарынан әллә күпме ҡатмарлыраҡ, ҡаршылыҡлыраҡ һәм байыраҡ. Тормошоңда ҡағыҙға яҙып ҡына аңлатыуы мөмкин булмаған күпме нәмәләр бар! Юҡ, бөтә дөрөҫлөктө яҙыу мөмкин түгел...

Хатта донъялағы иң асыҡ, иң эскерһеҙ, иң интим көндәлектәрҙән булған Добролюбовтың көндәлектәре лә уның үҙе тураһындағы бөтә дөрөҫлөктө әйтеп бирә алмай.

Ләкин көндәлек яҙыу нисек кенә субъектив булмаһын, миңә уны яҙырға кәрәк.

Беренсенән, мин үҙемдең хаҡта ғына яҙмайым. Был яҙмалар ниндәйҙер дәрәжәлә билдәле бер заман йәштәренең уйтойғолары, тормошо тураһында һөйләүсе бәләкәй генә бер көҙгө булһа, икенсенән, мин башыма ни килә, күҙемә ни күренә, шуны ғына яҙмайым бит; ә тормош күренештәрен мөмкин тиклем дөйөмләштерергә, уға ҡарата үҙ мөнәсәбәтемде билдәләргә, үҙ ҡарашымды әйтергә һәм тормош материалдарын һайлап алырға тырышам.

Шулай булғас, был яҙмалар ниндәйҙер бер кешенең шәхси яҙмалары ғына түгел, ә әҙәбиәттә үҙенең бер урыны булған әҙәбиәтсе яҙмалары ла. Миңә, әлбиттә, мәкәләләр, очерктар, зарисовкалар яҙырға ла мөмкин булыр ине. Ләкин мин быға «Комсомол секретарының көндәлектәре»н яҙам. Сөнки минең хәҙерге тормошом туранан-тура шул эшкә бәйләнгән, һәм мин үҙемдең эшем буйынса ла уны яҙмайынса булдыра алмайым. Һуңынан, әлбиттә, был яҙмалар бер әҙәби әҫәргә төп нигеҙ булырға тейештәр, тип уйлайым.

Унан һуң көндәлек яҙыу минең ғәҙәткә ингән. Бына ун биш йыл инде мин көндәлек алып барам. Был эш, билдәле бер тәртиптә булмаһа ла, һуңғы ваҡытҡа тиклем дауам итеп килә. Кем белә, бәлки, уны мин йәшәүҙән туҡтағансы дауам итермен...

Һәр кемдең үҙен мауыҡтырған бер эше була: берәү ғүмер буйы төрлө маркаларҙан коллекция йыя, берәүҙәр ғүмер буйы һирәк осрай торған иҫке китаптар эҙләй, ә мин бына — яҙам. Һәм шул эш миңә иң ҙур шатлыҡ килтерә. Мин үҙемдең дәфтәрҙәргә бөтә ғүмере буйы һандығына алтын йыйған кеше шул байлығына ғашиҡ булып ултырған кеүек ҡарамайым.

Әгәр ҙә улар юғалып ҡуйһа, әлбиттә, мин үҙем өсөн бик кәҙерле булған нәмәмде юғалтҡан булыр инем. Башҡалар өсөн уларҙың, бәлки, бер ниндәй ҙә ҡиммәте-кәҙере булмаҫҡа мөмкин. Ләкин минең өсөн улар — үткән тормош дәфтәремдең биттәренә әйләнгән...

Ә кеше олоғайған һайын үткән юлына әйләнеп ҡараусан, ҡарттар — йәшлектәрен хәтерләүсән.

Күп шиғырҙарҙың аңлатмалары ла ошо яҙмаларҙа, әлбиттә. Улар икегә бүленгән бер үк әйбер. Был яҙма шиғырға, Рабиндранат Тагорҙың ысыҡ тамсыһы күлгә әйткәне кеүек:

— Һин — лотос япрағы аҫтындағы ҙур тамсы булһаң, мин уның өҫкө яғындағы бәләкәй тамсы, — тигән булыр ине.

Мин был яҙмалар өҫтөндә ныҡлап эшләп ултырмаһам да, уларҙы ихлас күңелдән яҙам. Уларға бөтә күңелдән ғазапланып уйлаған уйҙарымды, бөтә күңелдән тулҡынланып кисергән тойғоларымды ышанып тапшырам.

Бәлки, был билдәһеҙ бер ябай сәскәне үҙенең туғаны тип уйлағанда, берәй көнбағыштың йөҙө ҡыҙарып китер. Ләкин, Тагор әйткәнсә, ҡояш сығыр ҙа, был сәскәгә лә йылмайып: «Һиңә яҡшымы, минең һөйөклөм?» тип һорар...

Ҡояш бит бөтә кешегә лә бер төрлө ҡарай, бөтә сәскәләргә лә үҙ нурҙарын бер тигеҙ өләшә. Тик һәр бер сәскә уларҙы, ҡояш нурҙарын, күпме ҡабул итә ала? Бынһы икенсе эш. Мәҫәлән, тәмәке сәскәһенә яҡтылыҡ бик аҙ кәрәк: ул йонсоу көндәрҙә лә сәскә ата, ә төндәрен ул үҙе яҡтылыҡ биреп ултыра, хатта төндәрен ул хуш еҫлерәк тә, матурыраҡ та.

Минең төнө буйы тәмәке төтөнө эсендә яҙған был яҙмаларым нәҡ ошо тәмәке сәскәләре кеүек. Көндөҙ ваҡыт та юҡ. Шуға ла төнгә ҡарата минең үҙ фәлсәфәм бар.

Мин уйланыр, яҙыр, уҡыр өсөн
Төндө көтәм, төндө һағынам.
Төндә минең серле илһам ҡошом
Уяна ла ҡанат ҡағына.
Тик ут ҡына булһын, яныһын бергә,

Мин арымай тороп һүнмәһен.
Көндөҙгө эш, тауыш, ығы-зығы
Уйҙарымды кереп бүлмәһен...
Төндә мин ниндәйҙер башҡа кеше,
Башҡа уйлы, башҡа хыяллы.
Төн йөҙөндә тик бер төҫ булһа ла,
Донъям минең мең-мең буяулы.
Һәр бер тауыш, һәр бер һулыш төндә
Ниндәйҙер бер мәғәнә, моң ала.
Ә көндөҙ һин шул диңгеҙгә сумып,
Күҙ-ҡолағың шунда юғала...
Көн — кешенең ҡул-аяғы булһа,
Төн — кешегә аҡыл-йөрәктер?..
Күрәһең шул: көндө күрер өсөн
Төнгә китеп торор кәрәктер?..
Күптәр төндө әрләй. Меҫкен төн ул
Иң ҡараңғы төҫкә буяла.
Ә бит сәскә көнгә, төн булмаһа,
Сыҙар инеме һуң донъяла?..

Йоҡо яҫтыҡ һорамаған кеүек, минең илһамым да көндө генә көтөп ултырмай. Илһамды мин төндә эшләргә лә мәжбүр итәм. Сөнки яҙған кешегә көн һайын яҙырға кәрәк. Ҡул яҙырға күнеккән булһын. Яҙмайынса, яҙырға өйрәнеп булмай. Һыуға кермәйенсә, нисек итеп йөҙөргә өйрәнергә һуң?

Был хаҡта бөтә классиктар әйтеп тора миңә. Әҙ генә яҙмай йөрөһәм: «Яҙ, Рәми, яҙ, көн һайын яҙ!» — тиҙәр улар. Гоголь һүҙҙәре минең өсөн иң беренсе ҡағиҙә:

«Человек пишущий так же не должен оставлять пера, как живописец кисти. Пусть что-нибудь пишет непременно каждый день. Надобно, чтоб рука приучилась совершенно повиноваться мысли». (Гоголь.)

10 май.

Бына кис конторағa управляющийҙар, агрономдар йыйылды. Сәсеү барышына арналған кәңәшмә буласаҡ. Райком секретары Сабитов та килгән. Әле Кинзиндың кабинетында ултыралар. Ә беҙ — партком бүлмәһендә. Совхоз тәжрибә-үрнәк совхозы тип иғлан ителгәс, беҙгә килгән яңы зоотехник Сафин да бар. Кисә беҙ райондан малсылар слетынан ҡайтҡанда, беҙҙең машинала ултырып килде. Тәүге ҡабат һөйләшеп танышып алдыҡ. Үҙе Нәсибаштыҡы икән. Мине күптән белә, тик мин генә уны белмәйем. Күрәһең, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһына торғандыр инде...

Бына Сабитов Кинзин менән килеп керҙеләр. Тауыш тынып ҡалды. Кәңәшмә башланды...

13 май.

Төштәр...

Егерме йыл үткән,
егерме йыл
Атай өйҙән сығып киткәнгә.
Күпме кәкүк ғүмер һанап киткән
Алыҫ яҙҙа һуғыш бөткәнгә...
Тик инәйем һаман төштә күрә
Ҡайтып кермәҫ беҙҙең атайҙы.
— Ҡайтҡан, имеш... — тиеп,
һөйләй-һөйләй
Һарғайҙы ул, инде ҡартайҙы...
Бына бөгөн дә ул, сәйен яһап,
Төшөн һөйләй тағы...
Бер үк төш!..
— Хәс элекке төҫө,
кейеме лә
Үҙгәрмәгән, имеш, шул килеш.
Тере микән әллә?..
Йөрөй микән
Сит илдәрҙә әллә тилмереп?..
Әллә инде уйлап ҡуя микән,
Булһа ине, тиеп, бер күреп?..
Изге төштәр!..
Һис бер юрау, яуап
Әйталмайһың һин был төштәргә...
Тик теш ҡыҫып,
тағы тотонаһың
Атайҙарҙан ҡалған эштәргә.

Надя менән Салауатты концертҡа ебәрҙем дә тиҙ генә шул шиғырҙы яҙып ташланым. Кисәге инәйемдең тағын шул төшөн һөйләүе көнө буйы баштан сыҡмай йөрөнө лә яҙмайынса булдыра алманым. Надяға шиғыр оҡшаны, тәржемә итеп тә, былай ҙа уҡып күрһәттем. Ул тик аҙағын икенсерәк бөтөрөргә тәҡдим итте. «Бындай төштәрҙе беҙҙең ҡатындарға күрергә яҙмаһын ине» тигән фекерҙе әйтергә кәрәк, ти. Ләкин мин был фекер менән килешһәм дә, үҙ фекеремдә ҡалдым. Сөнки Надя әйткән фекер әйтелгән инде, күп ҡабатланған, артыҡ трафарет булып китә. Минеңсә, уны былай ҙа аңларға мөмкин.



Шағир тыуған ауылы Арҡауылда. 1968 йыл. Һулдан уңға ултыралар: күрше Ямал әбей, Рәми Ғариповтың әсәһе һәм үҙе балалары менән

Шиғырҙар был арала байтаҡ яҙылды. Тик эшкәртеп ултырырға ваҡыт юҡ. Ат менән юлға сыҡһаң, тирә-яғың тулы шиғыр!..

Атты туҡтатып, һыҙғылап алам да тағы ары китәм, тағы яҙам. Йә эйәр өҫтөндә ултырған килеш, йә аттан төшөп яҙырға керешәм. Иң күңелле, иң бәхетле минуттар был!..

Ғәжәп, юл шиғыр, йыр килтерә. Тәбиғәт күренештәре кешене нисектер сафландыра, тулҡынландыра ла яҙырға йә йырлап ебәрергә мәжбүр итә. Шуның өсөн атты мин бер ниндәй машинаға ла алыштырмаҫ инем! Машина кешенең күңелен ҡорота, уйҙарын, хыялдарын томалай. Миңә бик күп начальниктар тап бына шул машинала елдереп йөрөү арҡаһында уйхыялһыҙ, хисһеҙ-кисерешһеҙ туң кешеләр булып китәләр кеүек. Сөнки уларға уйланырға, хыялланырға, үҙ-үҙҙәре менән һөйләшергә ваҡыт та ҡалмай! Тиҙлек, хәҙерге машиналар тиҙлеге, уларҙы иң яҡшы кешелек сифаттарынан мәхрүм итә бит. Тимәк, тиҙлек кешене физик яҡтан алға илтеү менән бергә рухи, мораль яҡтан артҡа ла илтә булып сыға түгелме? Минеңсә, бында дөрөҫлөк бар! Бәлки, был миңә генә шулай тойолалыр? Шулай ҙа мин быға үҙем бик ышанам. Сөнки ке-

шенең ниндәйҙер дәрәжәлә тәбиғәттән айырылыуы ул шул уҡ дәрәжәлә тәбиғилектән, үҙ-үҙенән айырылыуы ла бит... Кеше ул — тәбиғәт балаһы, тәбиғәт кешене яратҡан, кеше иткән, кешегә иң кешелекле сифаттарҙы биргән, был ғына ла түгел, тәбиғәт уға икенсе бер тәбиғәтте — кешенең үҙ ҡулы барлыҡҡа килтергән тәбиғәтте бүләк иткән. Был икенсе тәбиғәт — кешенең ҡоралы, ғәжәп бер көслө ҡоралы! Был ҡорал менән ул икһеҙ-сикһеҙ көслө, икһеҙ-сикһеҙ бай һәм ҡаршылыҡлы тәүтәбиғәтте, ысын тәбиғәтте яулай, уға хужа булып бара, уны үҙ ихтыярына буйһондороп, үҙ ихтыяры өсөн тырыша. Горький әйткәнсә, «аҡыллы ҡул» кешелектең үҙе өсөн бөйөк эштәр эшләй. Ләкин «аҡыллы ҡул»дың аҡылы башҡа аҡырыныраҡ менә шул. Кешенең көнкүреше, тормошо, йәшәйеше уның аңынан, аҡыл-белеменән алғараҡ сығып китә, ә аң-белеме арттараҡ ҡалып килә һәм ҡул менән баш араһында бик күп ҡаршылыҡтар тыуҙыра... Быныҡ хаҡында күптән әйтелгән. «Бытие определяет сознание, сознание отстает от бытия» тигән һүҙҙе иң ҙур аҡыл эйәләре әйткән. Ләкин беҙ был хаҡта аҙ уйланабыҙ, аҙ эҙләнәбеҙ, үҙ алдыбыҙға ҙур һорауҙар ҡуйып, уға дөрөҫ яуаптар табыу ғазабынан ҡасырға тырышабыҙ кеүек. Уйланған хәлдә лә ҡайһы бер уйҙарыбыҙҙы асыҡтан-асыҡ әйтергә ҡурҡабыҙ. Уйҙарыбыҙ шуның өсөн дә йә тормоштан бик айырылған уйҙар була, йә, киреһенсә, бик тормош күренештәренән күтәрелеп етмәгән, ваҡ нәмәләр менән күмелеп ҡалған булып сыға... Һәр күренешкә ентекләп, иғтибар биреп, төптән ҡарап дөйөмләштереү етешмәй. Шунлыҡтан ваҡ нәмәне ваҡ, ҙур нәмәне ҙур итеп алдан күреп тә булмай, яңылышырға мәжбүр булаһың, һуңынан бик бәләкәй нәмәлә ҙур нәмә йәшеренеп ятҡан булып сыға, ә ҙур итеп күргәнең бик бәләкәй булып та ҡуя... Бер яңылышҡас, бер ауыҙың бешкәс, һалҡын һыуҙы ла өрөп эсәһең. Юғарынан әйткәнде көтөп йәшәү шул ҡурҡыуҙан да килә бит. Ә гел көтөп йәшәү кешенең кешелеген, эшмәкәрлеген, дәртен һүрелдереп, бик күптәрҙең эҙләнеү, уйлау һәләтлеген юғалтыуға, оятһыҙ бер ғәмһеҙлеккә — формализмға килтерә. Ә ул бөтә тере нәмәне юҡ итеү ҡоралы. Минеңсә, был иң ҡурҡыныслы ҡорал...

Был хаҡта һәр бер етәксегә ныҡлап уйланырға ине. Ләкин күп етәксенең уйланырлыҡ ваҡыты ла юҡ. Уға ашығырға кәрәк, машинала елдерергә кәрәк. Ваҡыт менән тиҙлек араһында бына шундай ҡаршылыҡ килеп сыға.

Минең атты елдереп уҙып киткән газиктарға ҡарап мин:

— Их, артҡа китте был түрә!.. — тип ҡалам. — Ваҡыт менән тиҙлекте яраштырырға ине һиңә!.. — тимен.

Ләкин ул ишетмәй кеше һүҙен...

Ул үҙ машинаһының геүләүен генә, үҙ телмәрҙәрендәге һүҙҙәрҙе генә ишетә. Ул халыҡтан, халыҡтың уй-хыялынан,

моң-йырынан, уның тел-әҙәбиәтенән айырылған, уның килəсәгенән айырылған. Ә үҙе һəр бер телмәрен «йəшəһен кешелектең яҡты киләсәге!..» тигән һүҙҙəр менән бөтөрə. Ләкин ул кешелектең был яҡты киләсәгенə ниндəй юлдар, ниндəй сифаттар, ниндəй көстəр менән барыу тураһында уйлап та бирмəй. Сөнки ул киләсəккə барырға тейеш булған һəр бер кешенең уйын, теләктəрен, хис-тойғоларын белмəй, күберəк үҙе тирəһендəге үҙе кеүек үк бер үк һүҙҙəрҙе ҡабатлаған кешеләрҙе генə тыңлай. Əйтерһең ул халыҡ өсөн түгел, ə халыҡ уның өсөн йəшəй!.. Ләкин халыҡ уның өсөн йəшəй алмай, уның үҙ тормошо, үҙ эше бар. Бер түрə өсөн генə йəшəргə ул ғəҙəттəн тыш ҙур, бөйөк: ул тарихты ижад итə!..

26 май.

Кəңəшмə.

1) Һатыу-сауҙа ойошмалары менəн төҙөшкəн договорҙың үтəлеше тураһында.

Əҙерләүҙəр буйынса баш инспектор Шəмсетдинов һөйләй. Договор проекты менəн таныштыра.

Һыйыр малдары 250 килограмға, сусҡалар 80 килограмға еткерелеп, урта көрлөктəн түбəн булмаҫҡа тейеш.

Договорҙа килешелгəн тəртипте боҙоу булһа, госинспекторҙың совхозға бирелгəн кредитты туҡтатырға ла хаҡы бар.

905 меңлек продукция тапшырылырға тейеш.

10 сентябргə тиклем иген дə тапшырылып бөтөргə тейеш. Иген ташыу заготзерно өçтөндə буласаҡ. Тейəтеү, ебəреү эше генə совхоз елкəһендə ҡала.

Малдарҙың көрлөгө түбəн. Ашатыу норма буйынса бармай. Бəрəсләгəн инə сусҡалар тəртипһеҙ рəүештə йөрөйҙəр, ноябргə — иң уңайһыҙ ваҡытҡа — бəрəслəйəсəктəр, ашатыуға ҡуйылмаған. Сусҡа һарайҙары Осиновкала, Арҡауылда бик бысраҡ, һауа етмəй; тынсыу һауала сусҡалар ябып тотола.

Бигерəк тə сəсеү ваҡытында малсылыҡҡа иғтибар бөтөнлəй йомшарҙы. Концентрат етмəй. Ə кесерткəн ашатыу юҡ. Был бит 50 процент концентратҡа экономия булыр ине. Малдарҙы төнгө көтөү бик насар ойоштороlған. Иҙелбайҙа төнгө көтөү юҡ. Хурамшин малдарҙы кистəн үк биклəтеп ҡуя.

500 тонна шəкəр сөгөлдөрө тапшырыу тураһында һүҙ сыҡҡас, тауыш китте.

— Сөгөлдөрҙө мин малдарға ашатыу өсөн генə тип торам тағы! — ти Заһиҙуллин.

— Быйылға үҫтереп кенə ҡарарға кəрəк ине, — ти Трапезников, Йыланыш управляющийы.

Һөт ташыу өсөн флягалар етмәй, Арҡауылда һөт әсей, ә рабкоопта флягалар буш көйө бал ваҡытын көтөп ултыра. Абдуллин быға мыйығын да бормай.

— Сусҡаларҙы Златоустҡа тапшырмайбыҙ, унда барып еткәнсе бөтә ит юғала. 20—30 центнер юлда ғына тороп ҡала, — ти баш зоотехник Пендюрин.

Ҡош ите Ҡыйғыға тапшырыласаҡ. Дөрөҫләнеләр: сусҡалар йә Сулеяға, йә Мөрсәлимгә китәсәк. Сулеяла скидка ташланмай, ә Мөрсәлимдә ташлана.

— Ниңә улай? — ти Даһи, Миәшәгәр зоотехнигы. — Был бит жульничество! Ниңә уны йәшерергә? Хатта шоферҙар ҙа баш тарта бит!..

— Май заводына тапшырылған продукцияға квитанциялар тәртипһеҙ төҙөлә. Һөттөң майлылығы күрһәтелмәй, был контроль яһап тороуға тотҡарлыҡ итә, — ти бухгалтер Тычкин.

— Бынан кире эшләрбеҙ, — ти яуап бирә Ғимранов, май заводы директоры.

— Ҡош ите менән нишләргә? — ти Кинзин.

— Яңы партия себештәр алырбыҙ, — ти Михаил Михайлович.

— Ул партия йомортҡа эсендә бит әле, — ти Кинзин, көлдөрөп.

— Ҡош ите урынына йылҡы ите тапшырып ҡотолорбоҙ әле, — ти Бәйтуллин Алмас. — Аттар һау булһын.

Биш мең центнер сортлы бойҙай тапшырылырға тейеш — орлоҡ бойҙайы. Был бик ҡиммәткә төшәсәк. Әгәр ҙә дымлылыҡ менән алһалар, тапшырырға мөмкин, әлбиттә. 40 процент өҫтәмә түләү буласаҡ бының өсөн.

— Борсаҡ тапшырғанда шәп булыр ине! — ти ҡайһы берәүҙәр.

— Юҡ, ҡарабойҙай.

— Борсаҡтың эше күп бит уның!

— Ниндәй эше булһын ти?..

— Сөгөлдөрҙө төшөрөр кәрәк тә, планды ҡабул итер кәрәк, — тиҙәр.

— Алай булмай инде... Был бит дәүләт планы буйынса билдәләнгән. Һатыулашып торор урын юҡ, — тип Шәмсетдинов ҡаршы төшә. Шулай ҙа договор ҡабул ителә.

— Һеҙҙең исемдән ҡул ҡуйырға мөмкин инде? — тип һорай Кинзин управляющийҙарҙан.

— Мөмкин! — тиҙәр тегеләр.

— Бик етди мәсьәлә был, — тип Пендюрин һөйләй башлай. — Һөт алыу бик түбән әле. Валовой һауым 110 центнерға тура килә һәр һыйырға. Ярты йыллыҡ планды үтәп еткереү өсөн яңынан ... центнер кәрәк.

Һөт тапшырыу былай барһа, эштәр хөрт. Изместьев менән Брагин Йыланышта һөттө түгеп-сәсеп ташыйҙар. Флягаларҙан түгелеп йөрөй.

Берәүҙәр өс ҡабат, берәүҙәр ике ҡабат ҡына һауалар. Хәйрисламов Бишәүҙәрҙә, майзауыт эргәһендә йәшәп тә, һөттө әсетеп тапшыра. Флягалар йыуылмай. Шул тиклем ғәмһеҙ булырға мөмкинме? Күпме һөт әрәм була!

Әле һуң түгел — эште юлға һалыр кәрәк. Ҡайтыу менән сусҡаларҙы көтөүгә сығарыр кәрәк. Концентрат етмәй. Инәләргә 1,5 килограмм, көтөлгәндәргә — 700 грамм, ә ашатҡандарға 2 килограмм аш-һыу бирергә кәрәк.

Йәш инә сусҡаларҙы һайлап алырға күптән әйтелгән, ләкин был эшләнмәй. Ә улар ҡасырыу ваҡытына 80 килограмға етергә тейеш.

Кесерткәнде әҙерләр кәрәк. Киптереп ҡуйыр кәрәк ҡышҡыға ла. Күләгәлә тотоп, елләтеп кенә киптерер кәрәк.

Зоотехник Марс Закиров һөйләшеп ултыра.

— Сығып кит, бар! — ти Кинзин.

— Туҡта, тыңла, Марс, тағы телефондан шылтыратып һорарһың юҡһа, — ти Пендюрин. — Мәсетлелә Ғәлимов ҡарт — йоҡлай, алыштырыр кәрәк уны. Алтын күкәй һала ул! Ә Мәхмүттә Зарипова тырышып эшләй, ләкин айыртылған һөттө майзауыттан ташымайҙар. Күкәй әҙәйеп китте. Ә майзауытта һөт шул килеш тороп ҡала бит!

Көткән малды бөтөнләй йәйге аҙбарҙа тоторға кәрәкмәй. Көнө-төнө көтөлһөн. Тәүлеккә 800 грамм артым булырға тейеш.

Һыйырҙарға һыу эсереүҙе механикалаштырып, юлға һалыр кәрәк.

Тауыҡ себештәренең яңы партияһы киләсәк. Әҙер торорға кәрәк.

Һарыҡтарҙан йөн ҡырҡыу 1 июндән башланасаҡ. Һөт урланмаһын. Бәрәстәрҙе бер айҙан һуң ҡырҡтырырға, таҙартырға кәрәк.

Бейәләрҙе тороҡтороуҙа тәртип юҡ. Ҡыҫыр тороп ҡалмаһындар инде, яҡшы нәҫел айғырҙар булмаһа, ябай айғырҙар ҙа ярай, ҡолондар иткә китә бит... (!..) — ти Пендюрин.

Таймыйҙа 41 баш һарыҡ, 13 баш быҙау үлгән. Йыланышта 13 баш сусҡа, 6 баш быҙау үлгән.

— Өсөһөн бүре ашаған бит! — тип аҡлана Йыланыш малсыһы.

— Фермаларҙы тиҙәктән таҙартырға, сусҡа һарайҙарының бер яҡ тәҙрәләрен асып ҡуйырға кәрәк. Беҙҙең совхоз хәҙер тәжрибә-үрнәк совхозы, ләкин ғәмәлдә был тойолмай әле.

— Зоотехник Сафин фермаларға: «Сусҡа килтерегеҙ», — тип шылтырата, ә управляющийҙар бар тип тә белмәйҙәр. Арҡауылда мең баш сусҡа булырға тейеш бит. Уны бер механизатор ҡараясаҡ. Эшкә ең һыҙғанып тотонорға ваҡыт инде һеҙгә, — ти Сафин.

Сусҡаларҙы яһалма ҡасырыуға иғтибар юҡ һаман да. Был эштә тәртип булдырырға кәрәк инде.

Тиҙәктәр бер урынға өйөлөп, өҫтән тупраҡ менән күмелеп ҡуйырға тейеш.

Хурамшин тороп:

— Малды тәүлек әйләнәһенә көтөргә, тибеҙ, ике кеше нисек көтһөн? Тирә-яҡта ашлыҡ, мылтыҡ менән торһаң да көтә алмаҫһың! — тине. — Кеше бирегеҙ! Кешеләргә 7 сәғәтлек эш көнө тибеҙ бит! 18-әр сәғәт эшләй кешеләр...

— Һеҙҙе профсоюз аҙҙырып бөттө инде. Ул ниндәй ете сәғәт булһын көтөүҙә? Ете сәғәт менән һеҙ, месткомдарҙың, башы томаланып бөткән. Местком һөйләй бына! Ә эш хаҡы сдельно бит, привесҡа ҡарап түләнә. Теләһә нисә сәғәт эшләһен!

— Кешенең йәне бар бит! — ти Хурамшин.

Бәҙертдин ағай тороп, ете сәғәттең ни икәнлеген аңлата.

— Һеҙ профсоюз тип киҙәнмәгеҙ бик. Профсоюзды мин уйлап сығармағанмын бит. Ҡаршы булһағыҙ, партия, хөкүмәткә ҡаршы сығығыҙ улай булһа! — тип ҡыҙып китте Бәҙретдин ағай, түҙмәне ҡартың.

Хәниф Заһиҙуллин да профсоюзды әрләп алды.

— Һыйырҙарға мин расписание төҙөп ҡуйҙым инде шул ете сәғәт арҡаһында, — ти.

Ҡазыханов малсыларҙың күп эшләп тә аҙ эш хаҡы алыуы тураһында әйтә.

— Тракторист үҙенең сәғәтенән артыҡ эшләһә, уның материаль ҡыҙыҡһыныуы бар, өҫтәлмә эш хаҡы ала, ә малсыларға бит был юҡ. Эш ауыр, малсылар араһында ризаһыҙлыҡ килеп сыға. Нисектер быны министерство аша берәй төрлө хәл итер кәрәк ине, — ти Ҡазыханов.

— Элек һеҙ совхозды нисек тотоп килдегеҙ? Әллә расценкалар башҡа инеме, Михаил Михайлович? — тип һорай Кинзин зоотехниктан.

— Юҡ, шул уҡ тәртип ине! Ахунда быҙау көткән өсөн 4-әр мең, привес өсөн премия ала торғайнылар, көнө-төнө көтәләр ине, ә быйыл баш тарталар эштән.

— Ни өсөн? Тәртип юҡ унда! Привестары акт менән беркетелеп тапшырылмаған, премиялата түләнмәгән. Кем, зоотехник Закиров инеме? — тип ҡыҫҡыра Кинзин.

— Ул сакта мин бында ла юк инем, — ти Марс ултырган еренән.

— Минең бер һорау, — ти Казыханов. — Айырым хужалыктарҙағы мал менән нишләргә? Осиновкала сускалар көтөүһеҙ йөрөп, ашлыкка, бәрәңгегә төшәләр. Берәй төрлө хәл итер кәрәк ине быны.

— Акт төҙөргә, ауыл советы аша штраф түләтергә и все! — тиҙәр уға.

— Сускаларын ябырға ла, түләмәйенсә сығармаҫка кәрәк.

— Актты ике экземпляр төҙөп, береһен ауыл советына, икенсеһен үҙегеҙгә калдырырға кәрәк, — ти Тычкин, Кинзин да шуны кабатлай. — Эш хаҡын тотоп калыр кәрәк, совхозда эшләмәгәндәрҙекен аҡсаһын түләмәйенсә сығармаҫка кәрәк, — тип куя.

— Беҙҙә, Йыланышта, һәр хужалыкта икешәр инә суска бар, бер ни ҙә эшләй алмай, Абдрахманов килде лә: «Райсоветтың карары әле «сырой материал», мин бер ни ҙә эшләй алмайым, хаҡым юк», — тип китте лә барҙы, — ти Трапезников.

— Кәзәләр менән нишләргә? Көтөүселәр көтмәй уларҙы, үҙ юлдары менән тик йөрөйҙәр баҡса коротоп, — ти Бәйтуллин.

— Һеҙ ниңә миңә зарланаһығыҙ, приказ-документ бар, Үҙәк комитеттың карары бар, тотоғоҙ ҙа эшләгеҙ, тамашасы ғына булып йөрөмәгеҙ. Һеҙ бит үҙегеҙ ышанмайһығыҙ... Ә Лағырҙа быны эшләп тә бөтөрҙөләр, беҙ болтун ғына булып калдык. Йыйылышта үҙебеҙ һөйләшкән булдык, ә эштә эшләмәнек. Бына шулай беҙ эшселәрҙе аҙҙырабыҙ ғына. Бына элек, 20-се йылдарҙа, раскулачивание үткәрҙек, колхоз төҙөнөк, ә хәҙер артык мал тотоуҙы тыйырға ла курҡабыҙ, — тип кыҙып китте Кинзин. — Бәҙертдин Саҙретдинович, һеҙгә шуны әйтер кәрәк: һеҙ ете сәғәт килеп сыкҡас та, уны эшселәргә дөрөҫ аңлатманығыҙ. Нисек итеп көтөүсе сәғәтләп көтһөн? — ул бит эшенә карап аҡса ала, күпме привес булдыра — шуныңса аҡса ала!..

— Ә беҙ бит 7 сәғәт итеп наряд яҙабыҙ, ә эшселәр — төҙөүселәр күпме сәғәт эшләгәнбеҙ, шуны яҙығыҙ, тиҙәр, — ти Казыханов.

— Беҙ ете сәғәт эшләтергә лә мөмкин, өс смена куйырға ла була, ләкин эш хаҡы бик аҙ буласаҡ! — ти Кинзин. — Ә һеҙ, иптәш Шәйхисламов, шул хаҡта аңлатманығыҙ яҡшылап.

— Бәй, приказды бит бергәләп яҙып, бергәләп кул куйҙыҡ та?..

— Кул куйыу ғына етмәй эшкә, кул да һалырға кәрәк, Бәҙертдин ағай. Ә һеҙ, Михаил Михайлович, зоотехниктарығыҙҙы тәртипкә килтерегеҙ, юкһа улар фермаларҙа тәртипһеҙлек тыуҙырып кына йөрөйҙәр. Бына бит хатта кәңәшмәлә

лә улар ҡыҙ менән уйнап ултыралар. Бына Закировтан ниндәй эш көтәһең? Уттай эш ваҡытында бәрәңге ултыртып йөрөй. Ниңә мин ултыртмайым? Мин дә кеше бит!

— Дөрөҫ түгел, Рәшит Кинзин! — ти Марс. Ләкин директор уға һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй.

— Һине Мәсетлегә зоотехник итеп күсерҙек, ни үҙгәрҙе? Һөтөң юҡ бит. Ҡайҙа һөтөң? Ә Йыланыштың зоотехникһыҙ ҙа һөтө бар. Бына бындай Булатов Ким, Закиров кеүек белгестәрҙән ҡотолор кәрәк беҙгә, Михаил Михайлович. Бына мин иртәгә үк ул Булатовты эшенән ҡыуам! Сүпле ергә кукуруз сәстереп йөрөй.

Иптәш Сәлиховҡа шундай дәғүә бар. Беҙҙең менән һөйләшеп тә тормай, күпме һөт бар, шуны Кропачевоға оҙата ла ебәрә. Ә беҙҙең быҙауҙарға, тауыҡтарға аҙыҡ етмәй. Арала контракт булырға тейеш. Беҙҙең һөт ташыусылар бер эштә эшләйҙәр, әҙерәк улар менән һөйләшергә, эшләргә кәрәк, әйтергә кәрәк. Һеҙ, майзауыт эшселәре, шул эштең белгесе бит. Ниңә эшләмәйһегеҙ шуны?

— Һүҙ ыңғайында бер һорау мөмкинме, Рәшит Кинзич, — ти Ҡазыханов.

— Подожди! — тип ҡуя уға Кинзин.

— Июнгә тиклем 250 баш малға контрактация үткәрер кәрәк! Ә кесерткән әҙерләүгә ҡул-аяҡ менән тотонорға кәрәк хәҙер. Биш килограмм кесерткән ашатып бер килограмм артым алығыҙ, зоотехниктар, ишетһен ҡолағығыҙ!

Бынан һуң Кинзин кесерткәндең мал аҙығы булыу яғынан ниндәй файҙаһы, өҫтөнлөгө булыуын һөйләп, уның составын тикшерергә тотоноп китте...

27 май.

Кәңәшмә ғәҙәттәгесә бик оҙаҡ барҙы. Тәнәфестән һуң тағы бер оло мәсьәлә тикшерелде. Иҫәп-хисап эшенең бик насар барыуы, артабан нисек итеп эште юлға һалып алып китеү тураһында баш бухгалтер Тычкин үҙе бер доклад һөйләне. Ул шундай йоҡлатҡыс итеп һөйләй, ҡайһы берәүҙәр рәхәтләнеп серем дә итә башланылар. Бигерәк тә яңы килгән йәш зоотехник Сафиндың түземе етмәне. Минең дә артабан яҙып ултырыр хәлем ҡалманы. Һаман да шул бер үк балыҡтың башы тылҡына: иҫәп-хисап эше ифрат насар бара, фермаларҙағы бухгалтерҙар бер ҡасан да отчетты ваҡытында ғына биргәндәре юҡ, эшләнгән эштең күпмегә төшөүен тикшергән кеше юҡ, управляющийҙар финанс-хужалыҡ эшенә анализ яһамайҙар, бригадирҙар наряд яҙыуҙы бик примитив рәүештә алып баралар, нарядтарҙа эш күләме билдәләнмәй, берәүҙәргә артыҡ, берәүҙәргә кәм яҙыла, ә ҡайһы берҙәренә бөтөнләй

яҙылмай ҙа тороп ҡала. Ҡайһы бер ҡул эштәренең хаҡы ла билдәле түгел, сама менән генә ҡуйыла. Зоотехниктарҙың отчеттарында ла тәртип юҡ. Шуның арҡаһында үҙәк статистика идараһына (ЦСУ-ға) ла хатта отчет сама менән генә, бабайҙарса «ҡара иҫәп» менән генә бирелә. Сама саманы тартһа, шул етә. Иҫәпһеҙ малдың һаны теүәл, ти бит...

— Бер килтереп беҙҙе төп башына ултыртасаҡ был хәл, — ти Кинзин һәм иҫәп-хисап тураһында Ленин һүҙҙәрен хәтерләргә тырыша.

— Ҡасандыр бөйөк юлбашсы Ленин үҙе әйткән: иҫәп-хисапһыҙ йәшәп булмай, хужалыҡты алып барып булмай, тигән, — ти.

— Социализм ваҡытында, — тип өҫтәп ҡуя Тычкин. Ләкин ул да Лениндың «Социализм — это есть учет», тигән һүҙен иҫенә төшөрә алмай.

Шулай ҙа «Ленин үҙе әйткән» тигән һүҙ бик ышандырырлыҡ булып килеп сыҡты. «Ленинды ла уҡый бит был директор» тигән фекер ҡалыуы бик мөмкин ине... Сөнки был һүҙҙәрҙең ҡасан, ҡайҙа, ниндәй уңай менән әйтелгәнен кем генә белһен инде?.. Шулай булғас, беҙҙең директор хужалыҡҡа ғына бирелеп, башҡа яҡҡа, әйтәйек, теорияға әйләнеп тә ҡарамаған кеше түгел, ә хужалыҡҡа — практикаға теорияны ла бәйләп алып бара торған етәксе булып сыға. Әгәр ҙә уның ҡулынан килгән булһа, үҙ хөкөмө үҙ ҡулында булһа, профсоюз менән комсомол ойошмаһын да бөгөндән үк юҡҡа сығарып, уларҙы эшкә ҡамасаулаусы ойошма тип иғлан итер ине, әлбиттә.

Сөнки ул, кисәге колхоз председателе, бөгөн совхоз директоры булып алғас, бер нәмә булһа:

— Был һеҙгә колхоз түгел! — тип кенә ебәрә. «Колхоз» һүҙе хәҙер уның өсөн әрләшеү һүҙенә әйләнеп китте. Шулай уҡ «комсомол» һүҙе лә уға кәмһетеү һүҙе генә. Ғәжәп тә инде!..

Был хатта шундай көлкө хәлдәргә барып етә.

Ат ҡараусылар мин йөрөткән атты «Комсомолец» тип атағанға, директор уларҙы пыр туҙҙырып ташлаған. Трушков Николай бының өсөн ярай әле эшенән ҡыуылмайса, үлеп ҡотолдо!.. Ауыр тупрағы еңел булһын инде бахырҙың... Мин үҙем атты «Леток» тип йөрөтһәм дә, уның был ҡушаматын ҡамытына яҙып ҡуйһам да, Трушков ҡушҡан исем һаман да йөрөй бирә. Берәйһе ат һорап килһә:

— Әнә «Комсомол»ды ек, — тип кенә ебәрәләр ат ҡараусылар.

Һәм «Комсомол» шулай итеп егелә генә — аҡса таратырға ла, дарыу килтерергә лә, һыу ташырға ла, һолоға барырға ла,

туй-ҡунаҡҡа йөрөргә лә шуны егәләр, ә һоло менән һыйланыу, ваҡытында ашатыу-эсертеү тигән нәмә уға бик эләкмәй.

— Ярай ул «Комсомол»ға!.. Уның ҡәҙерен мин үҙем генә беләм. Совхоздың бөтә эшен эшләгән комсомол да бына шул ат хәлендә булмаһа, мин был ваҡиғаны иҫкә лә алып тормаҫ инем, әлбиттә. Шуға күрә был атты мин әрнеү ҡатыш яратам, бикләнеп ятҡан, ас торған еренән сығарып эсерәм, яланға ҡыуам, үләнле ерҙә йөрөргә ҡарышҡан саҡта ла баҡсалар артына илтеп ҡуям, хатта төндә килеп хәлен белеп китәм... Юҡһа, уның тураһында ҡайғыртҡан кеше лә юҡ. Мин алып ҡайтҡанда уҡ уның артҡы аяҡтары аҡһай ине, эҫеләй эсереп аяғына төшөргәндәр ҙә, хәҙер уны бик ҡарап ҡына йөрөтөр кәрәк — һаман төҙәлеп етмәй — тамам боҙғандар... Ә ниндәй матур, аҡыллы йәш ат был минең «Комсомол»!..

Тик шуныһы йәл — мин китермен — ул ҡалыр. Кем ҡулына ҡалыр — билгеһеҙ. Ярай ҙа уны минең кеүек яратҡан кеше ҡулына ҡалһа!.. Оҙаҡ онота алмам мин уны, күп шифырҙар яҙылыр әле был ат хаҡында, күп уйҙар уйланыр... Ә һолола ғына тороп, майҙарына быуылып, йөрәге ярылып йә һейә алмай үлгән айғырҙар хаҡында кем йыр яҙыр? Ни ҡалыр уларҙан? Ат аунаған ерҙә төк ҡалыр, әлбиттә, ләкин ел уларҙы ла осороп алып китер... Улар бит һарайҙа ажғырып торғанда ғына мал, ә юлға егеп сыҡһаң — барыр ереңә барып етеүең дә шикле... Муйындарын бөгөп, ергә генә, аяҡ аҫтарына ғына ҡарап йөрөй улар — бына-бына берәй соҡорға барып тәсмәр!.. Күҙҙәренә аҡ-ҡара ла күренмәй. Ә минең тураткайым хатта йондоҙҙарҙы ла күрә, умырзая сәскәләре араһында ла йөрөй, машина-тракторҙар яныңда ла теләгәнсә ҡунаҡ булып китә, бураҙналар буйлап та, алтын башаҡтар юлынан да елдерә, урман һуҡмаҡтарынан да юрғалай, сыйҙым китеп ятҡан киселеүҙәрҙе лә ярып сыға, таш-тау яғалап үткән юлдарҙан да күтәрелә, тау башындағы маяҡ янында ла үлән утлап китә, кәбәндәрҙең хуш еҫен дә еҫкәп тора... Һәм ул икәүҙән-икәү ҡалған саҡтарҙа, исмаһам, шифри юлдар тыуғанын ишетеп, йыр ҙа тыңлай белә:

Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы?!.

...Һәм ул юлда осраған кескәй генә ҡолонда ла үҙ туғанын күреп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, ысын күңелдән сәләм биреп, бер кешнәп ебәрә бит әле...

Айғырҙарға бындай бәхет тейәме һуң? Юҡ, әлбиттә! Уларҙың бар тапҡан бәхет-ләззәттәре йүгән аҫтынан сылбырлы нуҡта кейеп йөрөү ҙә берәй бейә күреү!.. Бына һиңә эш!

Шулмы тормош?!!

Йәшәгәс, турат кеүек йәшәр кәрәк! Атҡа ла бит ғүмер бер генә тапҡабат бирелгән!.. Ысынлап та, һуңынан үкенерлек булмаһын!..

30 май.

Әле генә Күҫәлә, Көҫәпәйҙә, Мәсетлелә йөрөп ҡайттым. Күңелдә әллә күпме тәьҫирҙәр! Бөтә күргән-белгәндәрҙе яҡшылап яҙаһы ине, ләкин яҙып булмаҫтыр инде: арылған да, ваҡыт та һуң. Етмәһә бөгөн мин юҡта обкомдан килеп төшкәндәр. Мәсетлелә Ғайнанов ағай, мин конторала ултырғанда, Кинзиндар, Миһрановтар менән килеп инде лә:

— Рәми, тиҙ ҡайт, һине унда обкомдан килгән кешеләр көтә, — тине. Ләкин мин ашыҡманым, сөнки килгән кешеләрҙән берәй төрлө файҙа күреүҙән инде күңел төңөлөп бөткән. Бер кем дә үҙ теләге менән берәй төрлө эш эшләп китергә, ярҙам итергә, бындағы юлда аҡыры ятҡан нәмәне буйға һалышып китергә килмәй. Ебәргәс — киләләр, командировкаларына мисәт һуҡтыралар ҙа ары китәләр. Улар менән һөйләшеүҙән һуң йән көйөп, ғазаплы уйҙар ғына тороп ҡала. Ваҡытың да бушҡа әрәм була...

Ярай, был хаҡта яҙып тороуҙың да кәрәге юҡ. Иртәгә күреп һөйләшкәс яҙырмын.

Бынан кире шундай ҡарарға килдем: мөмкин тиклем фәлсәфәгә аҙыраҡ урын биреп, күберәк портреттар яҙыуға, кешеләрҙең үҙҙәрен күрһәтеүгә иғтибар итер кәрәк. Юҡһа бик характерлы деталдәр, һөйләшеүҙәр яҙылмайынса ҡала. Ә кешеләр иҫ киткес ҡыҙыҡлы!.. Эйе, улар минең үҙ фекерҙәремдән, үҙ уйҙарымдан мең мәртәбә ҡыҙыҡлыраҡ. Ә мин ни өсөндөр күберәк үҙемдең уйҙар, үҙемдең кисерештәр менән мауығам, күберәк фәлсәфә һатам... Бынан кире лирикаға — артҡы план! Һүрәтләргә кәрәк. Һүрәтләүе ауырыраҡ шул. Бында инде ижад башлана.

Бына бөгөнгө көндө нисек итеп һүрәтләргә? Бәлки, был мөмкин дә түгелдер... Кемдәр менән генә осрашманым һуң мин бөгөн. Исем-фамилияларын ғына теҙеп китһәң дә (... бына ут та һүнде, лампаға ут тоҡандырып алдым — бик йәнгә тейә был уттары!..) был исемлек нисә кешенән тора! Исмаһам исемдәрен булһа ла һанап сығайым.

Иртән тороп Азаматты инәйемә алып барғанда күргән кешеләрҙе яҙып тормайым. Эш буйынса сыҡҡанда осратҡан кешеләрҙе генә һанап ҡарайым әле.

Ат һарайында күргән кешеләр: 1) Закиров Риф — иҫәпсе, 2) Фәйзуллин Камил — нефтебаза мөдире. Улар мин ат һарайына барып ингәндә минең атты егеп маташалар ине.

Аҡса таратырға китергә йөрөй Рифе, ә Камил «яғылыҡ мәсьәләһе» буйынсалыр инде.

— Беҙ атыңды ектек инде, һин ҡайһы яҡҡа бараһың? — ти Камил.

— Кире яҡҡа, — тим мин.

— Әҙерәк шунда конторала ултырһаң ни була инде.

— Етерлек ултырам мин конторала. Минән башҡа ла ултырыусылар күп унда. Атты туғарығыҙ.

— Ат юҡ бит башҡа... Беловтыҡы ғына ҡалған. Конюхтар бирмәй әнә.

— Бирерҙәр, минекен бирәләр бит... — Ат ҡараусылар янына инәм.

3) Гладких Николай менән 4) Томилин Михаил — ат ҡараусылар. Миша элек шофер булып эшләне, хәҙер, Трушков Николай һыуға батып үлгәндән һуң, уның урынына ат ҡарай.

— Дядя Коля (Гладкихҡа мин һәр саҡ шулай өндәшәм), ниңә Беловтың атын бирмәйһегеҙ?

— Әрләшә ул, бирҙертмәй.

— Ә мин әрләшмәгән өсөн минең атты теләһә кемгә бирергә ярай инде? Әрләшәйемме мин дә?..

— Әрләшегеҙ, нишләйһең инде, беҙ әрләштән башҡаны ишетмәйбеҙ бит? Өйрәнелгән.

— Әрләшеп тормайыҡ. Миңә лә китер кәрәк. Ә Беловтың аты буш тора. Екһендәр әйҙә.

— Миша! — тип ҡысҡыра Гладких ярҙамсыһына. — Давай, Беловтың атын сығар!

Тегеһе сығара атты. Туғарып, икенсе атты егәләр. Мин һыбай ғына китергә булдым. Атты эйәрләнем дә Күҫә паромына йүнәлдем.

Паром аръяҡта ултыра. Елгә ҡаршы паромсы бер үҙе генә сығара алмай, кешеләр килгәнен көтә. Ә был яҡта (5-се кеше) машинаһы менән шофер егет, комсомолец Рәхимов Марсель ултыра. Ул миңә үҙенең бөтә шоферҙар араһында эсмәй, тартмай торған булыуы менән ҡыҙыҡ. Мин атты теҙгенләп, эйәр ҡашына бәйләп ебәреүгә минең менән килеп күреште лә:

— Атың бик аҡыллы, ахыры, ҡасмаймы? — тине.

— Юҡ, аҡыллы ул, комсомол бит, — тип ҡуйҙым мин, атымды маҡтап.

Яр башында тырым-тырағай килеп туҙып ятҡан яңы һабан, культиватор, сәскестәр янына ултырып, хужаһыҙлыҡ тураһында һөйләшә башланыҡ.

— Тутығып та бөткән бит былар. Ниңә һаман йыйып алмайҙар?

— Әллә, механизаторҙарҙың эше лә юҡ инде хәҙер. Сәсеү ҙә бөттө тиерлек, сығып алмайҙар ҙа һаман. Шулай инде ул

беҙҙә. Бына шулай ямғырға тутығып, частары юғалып бөтә лә, бер-ике сезон да эшләмәй списать ителә машиналар. Ҡайғыртҡан кеше юҡ. Хәҙер совхоз булғас, техника күп — кәҙере юҡ инде...

— Ә берәй айырым хужа ҡулында булғанда, был техниканы ул бер 25 йыл эшләтер ине. Шулай бит?

— Шулай, конечно!..

— Эш бөткәс, һүтеп алып, майлап, сепрәккә төрөп, һаламға ғына күмеп ҡуйыр ине, йә япма аҫтында ғына тотор инеме?

— Һу, белер ине ул!..

— Ә беҙ бына яҙын һаламды аҡса түләп яндырабыҙ ҙа, аҙаҡ япма ябырлыҡ та һалам булмай.

— Бәлә инде ул, халыҡтың малына ла юҡ, совхозға ла зыян...

Ҡыҙыҡ һөйләшеү бит?!.

Һәр кем бына шундай хәлдәрҙе күҙе менән күреп, күңеле менән тойоп йөрөй, улар хатта быға асыуҙары килеп ҡарай, коммунист та, комсомолец та була улар, ләкин... (ярай, тағы фәлсәфәгә күсәм!..) Бына (6-сы кеше) һөт ташыусы егет Зарипов Эдуард та килеп туҡтаны. Мин уны тау аҫтында уҙып киткәйнем. Ул да комсомолец. Уның да ҡыҙыҡ тарихы бар. Уның комсомолға кереүе өсөн мин райком ҡомаҡтары менән бик нык һуғыштым.

Бюро бара ине. Комсомолға ҡабул итәбеҙ. Был Эдуард та ғаризаһы, анкетаһы менән килгән. Йыйылышта уны комсомолға алғайнылар. Үҙе 7-се класта уҡып йөрөй. Уҡыуы ла, тәртибе лә йомшағыраҡ. Ләкин көнө-төнө ферманан ҡайтмай. Әле һыйыр һауып ҡарай, әле йөк тейәшергә, әле тиҙәк түгешергә ярҙам итә, ә йәйен йә көтөү көтә, йә һөт ташый. Бик эшкә әүәҫ малай. Кистәрен клубҡа килеп комсомолдар тирәһендә уранҡый — йә репетицияға, йә йыйылышҡа кереп ултыра.

— Давай быны комсомолға алабыҙ! — тигән ҡарарға киләләр. Ә был үҙе шунда уҡ ғариза бирә, устав менән дә ныҡлап танышып сыға. Ә мәктәптә уны комсомолға алмай йөрөтәләр. Беҙ ҡайһы бер формальносте боҙоп, уны тоттоҡ та алдыҡ. Райкомсыларҙан Әхмәтьянов Мансур, донъяға тыуғанда уҡ ҡойоп ҡуйған формалист булып тыуған әҙәм балаһы, комсомолға керәм тип ашҡынып торған был егеткә теше-тырнағы менән ҡаршы тора, үҙе лә аңлап етмәгән һорауҙарҙы бирә, ә башҡаларҙан һорашып та тормай...

Мин Эдуардты ишек артына ҡуйып керҙем дә, эш принципҡа киткәс, бюро ағзаларына бөтөн бер лекция уҡып, бик ныҡ һуғышырға тотондом. Ахырҙа, был хаҡта бер фельетон яҙыу менән дә ҡурҡытып ҡарағас, егетте алырға булдылар һәм

беҙ Эдуард менән еңдек. Үҙ өҫтөбөҙгә бик ҙур йөкләмәләр алдыҡ. Мин мәктәп ойошмаһы менән дә һөйләшеп-килешеп бөттөм.

Һәм бына 7-се класты яҡшы ғына тамамлағандан һуң, фермала ҡалып, бик яҡшы ғына эшләп йөрөй.

— Һөтөң әсемәйме, Эдуард? — тигәс, ул:

— Юҡ, ағай, һөт әсетеп йөрөп булмаҫ инде, — ти. Юҡ, был һөт әсетер егет түгел!.. Ә бит беҙҙә май заводы эргәһендә тороп та күпме һөттө әрәм иткәндәр бар...

Бына Риф менән Фәйзуллин дә килеп етте. Риф Эдуардҡа шунда уҡ аванс аҡсаһын да бирҙе.

Һыу ташыу, Йүрүҙән болғансыҡ, ҡап-ҡара булып тулҡынланып ята. Ахун ауылында тағы бер кеше һыуға батып үлгән бөгөн.

— Йүрүҙән быйыл кешене йота ғына, — тип һөйләшеп, беҙ паромға керҙек. Һыу ташҡанлыҡтан паром пристандән байтаҡ уҡ ҡалҡып тора. Эдуардтың флягалар тулы арбаһын күтәрә-этәрә генә мендерҙек.

— Ямғырҙан һуң һөт кәмеп китте әле, — ти Эдуард. — Зауытҡа 7—8 фляға алып бара торғайным, бөгөн алтыны ғына алып барҙым.

Паромсы ҡарт (7-се кеше) Трушков һыуға батҡандан бирле, паромын кәртәләп кенә йөрөтә. Бер ауыҙың бешкәс, халҡын һыуҙы ла өрөп эсәһең шул. Ҡурҡҡан үҙе лә...

Паромда (8-се кеше!) Гөлзәбиғә әбей менән күрешеп, һөйләшеп сыҡтыҡ. Был үҙе бер хикәйәлек әбей! Ғүмер буйы — ҡыш та, йәй ҙә — ялан аяҡ йөрөп, үксәләре тубырсыҡ кеүек булып бөткән әбейем дә хәҙер сәләмәтлегенән зарлана. Ҡартайып киткән, күҙҙәре лә бирешә башлаған, ахыры — мине тик үҙем килеп күрешкәс кенә таныны.

— Кем икән тип торам даһа. Һин икәнһең дә, улым. Беҙ ҡартаймай кем ҡартайһын инде — ҡалай олоғайып киткән! — тигән булды. Күҫәгә ҡунаҡҡа сығып бара. Ахунда батып үлгән кешене телгә алып:

— Араҡы ғына һәләк итә был әҙәм балаһын, араҡы башты ашай, арыу нәмәләй итеп донъя тутырып сығаралар бит шул нәмәһен, йүнле әйбере килмәй, араҡы тиһәң, магазин тулы! — тип ҡуйҙы әбейем. — Эй халыҡ аҙҙы ла инде шул араҡы арҡаһында. Олоһо ла эсә, олонан күреп, кесеһе лә эсә... Бөтөр микән был бер заман? Элек бит был тиклем эсмәй торғайнылар...

Паромдан сыҡҡас уҡ медпунктҡа Гөлсирә Зиннәтуллина (9-сы кеше) янына йүнәлдем. Комсомол ойошмаһының секретары, фельдшер. Эшен бик яҡшы алып бара.

Ярай, ҡалғанын һуңынан яҙырмын инде. Әтәстәр ҙә ҡысҡыра башланы. Таң атып та килә!.. Сәғәт 20 минуттан өс тула.

Ай яҡтыһын таң яҡтыһы менән ҡушып һабан турғайҙары һайраша. Һандуғас тауышы ишетелмәй. Ул да арый, күрәһең...

16 июнь.

Обкомда пленум. Пленум иртәнге сәғәт 10-да башланды. Клара Төхвәтуллинаның докладынан һуң фекер алышыуҙар китте. Ләкин фекер алышыу тигән нәмә үҙе булманы. Бөтәһе лә ҡағыҙҙан уҡыйҙар, бөтәһе лә отчет бирәләр, йөкләмәләрен үтәүгә ышандыралар. Ләкин бер кем дә нисек эшләүе, ниндәй етешһеҙлектәр барлығы тураһында һөйләмәй.

Миңә тик Өфө химзаводының секретары Козлицкийҙың, Салауат ҡала комитеты секретарының һәм Шишмә районының йәш колхоз председателе (1937 йылғы) Мөхәмәҙиевтың һәм бер уҡыусы ҡыҙҙың сығыштары ғына оҡшаны. Мөхәмәҙиев һөйләгәндә көнләшеп ултырҙым. Шундай председатель беҙҙә булһа ине!.. Бөтә председателдәр ҙә шулай булғанда, комсомол әллә ниндәй тауҙарҙы күсереп ҡуйыр ине... Ләкин бик һирәк шул бындайҙар.

Салауаттың горком секретары һөйләгәндәрҙе тыңлап ултырғанда, әллә бер-ике йыл шунда барып эшләргәме, тигән һорау ҡытыҡлай башланы.

Илеш районынан сусҡа ҡараусы Гәрәева һөйләне. Һәр сусҡанан 25-әр сусҡа балаһы алырға уйлай. Хәҙер инде 20-шәр сусҡа балаһы алған да. Коммунистик хеҙмәт ударнигы исемен алыу өсөн көрәшәм, ти. Беҙ сусҡаларға сусҡаларса ҡарашты бөтөрөү бурысын ҡуйҙыҡ, тине. Үҙен ял йортона, иптәшен Чехословакияға ебәргәндәр.

Обком секретары Шафиҡов.

Бөтә сығыштар ҙа комсомолдың төрлө нәмәләр менән тәрәндән ҡыҙыҡһынып йәшәүен күрһәтә. Быны ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоһо менән ҡабул итергә кәрәк.

Промышленность мәсьәләһенә туҡталып, ауыл хужалығына күсә. Хәҙер совхоз-колхоздар бесәнгә, ураҡҡа ойошҡанираҡ рәүештә эҙерләнәләр.

Мин доклад һәм сығыштар менән бөтә күңелдән килешәм. Ләкин...

106 завод һәм предприятиелар дәүләт планын үтәмәгәндәр. Был бит бик хәүефле хәл. XX съезға шундай ауыр йөк менән килергә мөмкинме? Урман хужалыҡтарының яртыһы тиерлек пландарын үтәмәгән. 8 трестың да эше шундай хәлдә. Төҙөлөш трестары былар. Бынһыҙ күп мәсьәләне хәл итеү мөмкин түгел. Урындағы пром. предприятиелары үҙ пландарын үтәй алмайҙар. Комсомол былар янынан үтеп китергә тейеш түгел.

Икенсе бик мөһим мәсьәлә. 95 предприятие (совнархоздыҡы) планын үтәмәй.

Стәрлетамаҡ станоктар эшләү заводы йылдар буйы артта ҡалып килде. Хәҙер был заводта комсомол эшләй башланы. 7 сәғәтлек эш нормаһын 6 сәғәттә үтәргә тип ҡарар иттеләр. Был бик ҡатмарлы мәсьәлә. Биргән һүҙеңдә торорға кәрәк.

Ярышта һәр кешегә иғтибар итеү менән бергә бригада, смена һәм вахталарға ҙур иғтибар итер кәрәк. Бригада тотош яҡшы эшләһен. Бөтә эшселәрҙе лә тәртипкә, технологик дисциплинаға күндерергә кәрәк.

Ун класлыҡ белем менән эш урынына баралар, тибеҙ. Яҡшы. Ләкин артабан ни?

АҠШ белгестәре совет предприятиеларында бик күп халыҡ һәм бик күп ҡорамалдар тип бик дөрөҫ иҫкәртеү яһанылар. Ысынлап та шулай.

Беҙҙә уҡыған кешеләр күп эшләй производствола, ләкин улар бер төрлө профессияға ғына эйә булып ҡалалар. Күп һөнәргә өйрәнергә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә, үҙҡиммәтте кәметергә кәрәк.

Хужаһыҙлыҡҡа ҡаршы комсомолға аяуһыҙ рәүештә көрәшергә, дәүләт тиндәре менән иҫәпләшә белергә кәрәк.

Стәрлетамаҡ төҙөлөштәрендә былтыр күпме цементты әрәм иттеләр!

Беҙ теккән кейемдәр менән сауҙа итеү бик ауыр. Насар тегәбеҙ әле. Комсомол яҡшы тегеү өсөн көрәшһен.

Беҙҙә бөтә промышленность тармаҡтары бик йылдам үҫә. Беҙ союзда ҙур урын тотабыҙ. Ләкин беҙҙең мөмкинлек бик ҙур.

Нефть-химия промышленносе был 7 йыллыҡта 16 мәртәбә күтәрелергә тейеш. Быға комсомол тотонорға тейеш. Беҙҙең Стәрлетамаҡ сода заводы, синтезспирт заводтары донъя әһәмиәтендәге заводтар. Улар беҙҙә артып торалар.

Нефтехимия — хәҙерге көндә беҙҙең икенсе сиҙәмебеҙ. Һәм был сиҙәмде комсомол күтәрергә тейеш. Был сиҙәмдең киләсәге ифрат дәрәжәлә ҙур. Пафос, төҙөү пафосы кәрәк комсомолға.

Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Орджоникидзе районына эшселәр етмәй. Комсомол Өлкә комитеты йәш эшселәр менән тәьмин итеүҙе үтәй алмай әле.

Синтетик каучук, спирт, парафин эшенә комсомолды сағырабыҙ.

Милли кадрҙар етешмәй. Әле XX съезда партия был мәсьәләне ҡуйҙы. Яңы квалификациялы эшселәр араһында башҡорттар бик аҙ, татарҙар ҙа аҙ. Был сәйәси яҡтан нисек

килеп сыға? Уйлап ҡарағыҙ. Был хәл тураһында ҡайғыртырға һәм юлға һалыу кәрәк.

Башҡорт, татар кадрҙарының удельный весы бик түбән. Мин райком секретарҙарының быға бик нык иғтибар итеүҙәрен һорар инем. Ебәрегеҙ башҡорт-татарҙарҙан уҡырға, ярҙам итегеҙ, квалификациялы милли кадрҙар әҙерләшеүҙә ҡатнашығыҙ.

XX съезды лайыҡлы ҡаршылау өсөн был пленум импульс бирһен, — тип һүҙен бөтөрҙө Шафиҡов.

Унан һуң Клара Төхфәтуллина һорауҙарға яуап бирep, йомғаҡлау һүҙен һөйләне.

Комсомолға ҡул һелтәп, комсомол эшен ҡоро тәнҡитләү менән генә шөғөлләнгән кешеләр күбәйҙе һуңғы ваҡытта.

Быға ҡаршы эш менән көрәшергә кәрәк. Иң яҡшылар үрнәгендә ил тойғоһо, патриотизм тойғоһо тәрбиәләргә кәрәк йәштәрҙә. Иң яҡшы иптәштәрҙе етәксе итеп һайларға кәрәк.

Ҡарар уҡыу башланғас, тағы залдан ҡысҡыралар:

— Только постановляющую часть!

— Постановляющую!

Председатель ҡулын күтәреп тауыштарҙы туҡтата.

1 сентябрь.

Төн. Афиногеновты уҡыйым. Үҙебеҙҙең ғазаптарға яуап эҙләйем...

Ғазап — эш тағын да туҡтап ҡалыуҙа. Марат Мәскәүҙән ҡайтты ла беҙҙең яҙғанды юҡҡа сығарҙы, дөрөҫөрәге, мин яҙғанды юҡ итте. Сөнки Рафаэль менән бергәләп яҙғанда, Рафаэль минең яҡта булыр ине. Ләкин хәҙер мин яҙған Маратҡа оҡшамағас, уға ла оҡшамай башланы. Ә кисә генә бит икәү бергәләп шатланып йөрөнөк, бөгөн ул шатлыҡ юҡҡа сыҡты... Хатта Марат алып ҡайтҡан күстәнәсте эсергә лә хаҡыбыҙ юҡ. Эсәһе лә килмәй.

Аптырашып ултырҙыҡ-ултырҙыҡ та, мин үҙ бүлмәмә кереп, уҡырға яттым.

Афиногеновтың фекере беҙҙең эш бармауҙы бер аҙ асыҡлап биргән кеүек. Уның да туҡтап ҡалған саҡтары булған.

«...Сегодня опять застопорило, как всегда, и роковой вопрос: «А в чем мораль, дорогой товарищ?» — не дает двигаться дальше. Без морали получается прекрасно, а с моралью — нет.

...А может быть, и не надо так ставить вопрос, может быть, надо писать не о чем, а о ком... и тогда вопрос решается — пишешь о людях, и, если у тебя уже есть характеры, а они есть, то и пиши именно о них, а что они делают и зачем, будет видно из самой работы...» (173-сө бит.)

Беҙ ҙә кеше тураһында түгел, ә шифыр тураһында яҙырға тотонҙоҡ түгелме икән?..

Как мне нравится жить, когда меня любят... Всем, наверное, нравится... (Афиногенов, 1941.)

Йоҡлап булмай, таң да аталыр инде. Ут яҡтыртып, тағы Афиногеновты ҡулға алам...

Кис. «Разбитые мечты» картинаһын ҡараныҡ. Көслө!

Көндөҙ бөтә ваҡыт бәхәс менән үтте. Был юлы мин яңғыҙ ғына ҡалдым. Күберәк Рафаэль менән мин бәхәсләштем.

— Рассуждение! — ти Рафаэль. Ә мин сәхнәлә публицистика ла кәрәк, тим. Сөнки Нур — шағир. Ул фекерләргә лә тейеш. Ә беҙ уны Шәрәфиҙән дә ярлы итеп күрһәтәбеҙ.

Пьесаның төп геройы — Нур. Ә уның әйтер һүҙе лә, маҡсаты ла, характеры ла юҡ.

Нур мөхәррир Айтуғановҡа әҙәбиәт тураһында өс һөйләмдән торған бер фекер әйтергә тейеш.

Беҙҙең бәхәстән һуң ул бер генә фекерҙе лә әйтә алмай. Имеш, Нурҙың, бөгөнгө уҡыусы тураһында, уның поэзияһан алыҫлашыуы тураһында әрнеүе — рассуждение!..

Миңә Горькийҙың «Кеше» поэмаһы һәм «На дне» пьесаһында Сатиндың кеше тураһындағы һүҙҙәре, Тарас Шевченко тураһындағы картинаны хәтерләтергә тура килде.

Рафаэль да, Марат та был мәсьәләлә хаҡлы түгел. Беҙ Нурҙы бик ярлы итәбеҙ — ул хатта фекерләй ҙә алмай. Әҙәбиәт тирәһендә уранҡылап йөрөгән Шәрәфи әҙәбиәт тураһында үҙ фекерен әйтә, ә Нур — юҡ. Көлкө!..

Шулай ҙа кискә табан ризалаштылар, һәм Нур менән редакторҙың әйбәт кенә һөйләшеүе килеп сыҡты. Шуның менән икенсе шаршауҙы тамамланыҡ. 13 көн буйына бер шаршау өҫтөндә эшләнек (33 бит шикелле).

Беҙ бик ябай һөйләшеүҙән ҡурҡабыҙ. Йәнәһе, был бик баналь һөйләшеү, сәхнә өсөн бармай. Чеховтың «Сейә баҡсаһы»н уҡып ҡараныҡ. Бик ябай һөйләшәләр, һәр кемдең үҙ донъяһы шул ябай ғына һөйләшеү аша бирелә. Ошо ябайлыҡта бөйөк бер ышандырыу көсө. Ә беҙ һәр бер диалогты шаҡ ҡатырғыс афоризм йәки күп мәғәнәле тапҡырлыҡ итергә тырышабыҙ — һәм ялған мәғәнәлелек кенә килеп сыға. Тормошсанлыҡ бөтөнләй юғала.

2 сентябрь.

Тәүге шаршауҙың беренсе күренешен яңынан яҙҙыҡ. Хәҙер пьеса бесәй менән түгел, кешеләр менән башлана. Пәрҙә асылғанда, йорт ҡараусы Ямал апай урам һепереп йөрөй, үҙ

алдына моңло ғына итеп көйләй — уның бөтә ғүмере яңғыҙлыҡта үткән. Ул шулай йөрөгәндә өйҙән Ғәйшә әбей —Нурҙың әсәһе килеп сыға. Улына ҡунаҡҡа килгән әбей, был өйҙә үҙенә урын тапмай, тотҡон булып ултыра. Уның кешеләр менән кешеләрсә һөйләшәһе, кешеләрҙең ҡайғы-шатлыҡтары менән йәшәйһе килә. Ләкин был өй — мещан һаҙлығы. Был өйҙә ысын кешелек мөнәсәбәттәре, ысын кешелек шатлығы юҡ. Шуның өсөн ул йорт ҡараусы Ямал апай менән һөйләшеп ултырырға ярата. Сөнки улы менән дә ул иплэп һөйләшә алмай, Нур үҙенең эшенә сумған, өйҙәге трагедияны бик ныҡ кисереп, үҙ эсенә бикләнгән.

Шуның өсөн Ғәйшә әбейҙең Ямал апай менән һөйләшеүендә был өйҙөң ауыр тарихы, Ямалдың бәхетһеҙ яҙмышы асылырға тейеш. Ямал бик колоритлы фигура булып сыҡты.

Ғөмүмән, беҙҙең элекке сәхнә балалар уйыны ғына булып ҡалды. Ә хәҙер беҙ — драматургтар. Беҙҙең алда кешеләр яҙмышы, тере кеше характерҙары. Был күренеш алдағы бөтә күренештәргә асҡыс булып тора.

Ямал менән Ғәйшә образдары ғәжәп матур килеп сыҡты. Юлдаш та улар янында бөтөнләй терелеп китте. Ә тел!.. «Мостай ағай көнләшерлек» тинем мин егеттәргә. Халыҡ тураһында яҙғанда, уның теле лә аҫылташтар кеүек йымылдап янып тора.

— Һин, әйтерһең, ҡарсыҡ булып ҡарағанһың, — тине Марат. Сөнки Ғәйшә әбейҙең телен мин яҡшы беләм — уның телендә минең бала саҡта уҡ бөтә күңелемә һеңеп ҡалған иң яратҡан әкиәтсе әбейҙәремдең аҡылы, тапҡыр, йәнле теле бар.

Рафаэль башта ҡатнашмай ултырҙы. Минең кәрәгем юҡ шикелле, тип, ул да бөгөн кәзәләнеп алды. Сиратлап кәзәләнәбеҙ шулай. Марат яҙа, ә мин әйтеп йөрөп, бергәләп диалогтар төҙөйбөҙ, Рафаэль йөҙөн һытып, ҡағыҙға ниҙер һыҙғылап ултыра. Ләкин аҙаҡ ул да ҡабынып китте. Көлөшә-көлөшә кискә тиклем бик яҡшы эшләнек, ә кис урман буйлап йөрөргә сығып киттек. Кис шундай йылы, тыныс һәм ҡараңғы. Күк йөҙө томанланып, йондоҙҙар һирәкләнеп ҡалған. Ай сыҡмаған эле. Һирәк-һаяҡ ҡына төн ҡоштары сутылдашып ҡуя. Аяҡ аҫтында юлға һибелгән ҡырсынташтар ҡыштырҙай. Күңелгә рәхәт, яҡты һәм иркен.

Юлда ҡыҙҙар осраны. Уларҙы кире бороп, үҙебеҙ менән алып киттек. Женяны мин, Катяны Рафаэль ҡултыҡлап алды.

— Бөгөн мин ҡыйыу буласаҡмын,— тинем егеттәргә һәм хәлдән килгән тиклем ҡыйыу булырға тырыштым. Ләкин быға бик күп көс һалырға тура килде. Быуындар ҡалтырап, бөтә тәнем дерелдәп торған кеүек, ә үҙем бик тыныс булып күренергә бөтә көсөмдө бирәм. Эстән үҙ-үҙемде әрләйем — сөнки

кешеләр алдында ҡыҙҙар менән бөтөнләй һөйләшә алмайым, бөтә һүҙҙәр урынһыҙ һәм мәғәнәһеҙ килеп сыға кеүек. Ә Марат менән Рафаэлдең бөтә һүҙҙәре лә килешеп тора. Ҡыҙҙар көләләр, шаяралар, йырлайҙар.

— Кем роялдә уйнаны бөгөн?— тип һораны Женя.

— Ҡайһыбыҙ уйнағанын үҙегеҙ белегеҙ,— тине Рафаэль һәм аҙаҡ был эштә мине ғәйепләне.

Шулай итеп, мин музыкант булып сыҡтым. Был һөнәргә «эйә» булыуымды танманым. Сөнки ҡыҙҙар алдында мин исмаһам бер генә яғым менән булһа ла иғтибар итерлек кеше булып күренергә тейешмен бит!.. Юҡһа, минең тышҡы ҡиәфәтемә ҡарап, ниндәй генә ҡатын-ҡыҙ минең менән ҡыҙыҡһыныр ине!..

Рафаэлдең әйтеүе минең файҙаға булып сыҡты — ҡыҙ минең менән китте. Ә яңғыҙ ғына икәүҙән-икәү тороп ҡалғанда минең дә әйтер һүҙҙәрем була, ахмаҡлыҡ та поэзияға әйләнә... һәм мин берәй сәғәткә генә булһа ла бәхетле кеше булып йөрөйөм.

Ҡараңғы урман юлы буйлап төпкә кергән һайын, мин үземде ҡыйыуыраҡ, иркенерәк тотам. Берәй төрлө ҡурҡыныс хәл була ҡалғанда, мин әллә ниндәй батырлыҡтар эшләргә лә әҙер. Хатта берәй хәтәр күренешкә тап булаһың килә. Ләкин батырлыҡ күрһәтергә бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ. Һөйләшеү, юҡ ҡына бер нәмәнән дә ысын күңелдән көлөү ошо өнһөҙ-тынһыҙ урман ҡосағында иҫерткес бер моңға, һүҙһеҙ генә йырлана торған йырға — балалыҡҡа әйләнә.

Кешегә ни тиклем аҙ ғына яҡтылыҡ та етә!.. Башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Эргәңдә ҡултыҡлап килгән ҡыҙыңа яҡшы булһа, һиңә лә бынан рәхәт...

АҒастар араһынан яңы ғына сыҡҡан ҡыҙғылт-һары ай күренә. Ярты ай ҡыйырсығы һаран ғына нур тарата. Ошо тоноҡ ҡына яҡтылыҡта йылмайып килгән йөҙҙө күреү үҙе бер оло шатлыҡ, һәм был шатлыҡ бөтә тәнеңде яндырған хайуанлыҡ хисен еңеп ҡала. Сөнки ниндәйҙер бер наҙлы тауыш һиңә:

— Мин һиңә ышанам,— ти...

Уға тыныс йоҡо теләгәс, Рафаэль янына керҙем.

— Һин нишләп йөрөйһөң? — тине ул, күҙҙәрен ыуып.

— Дипломатик мөнәсәбәтте урынлаштырҙыҡ,— тим мин.

Мин һөйләйем, ул да һөйләй. Ҡапма-ҡаршы тойғолар, ҡапма-ҡаршы тәьҫирҙәр.

— Әллә нисек бына сит ҡатындарҙың еҫен яратмайым, малай,— ҡайтып бына йыуынып яттым,— тип ул ҡатын-ҡыҙҙарҙа төрлө еҫ булыуын ерәнеп һөйләй.

— Ҡомалаҡ еҫеме?— тим мин.

— Түгел, әллә ниндәй тән еҫе,— тип йөҙөн һыта Рафаэль.

Ә мин бындай еҫтәрҙе белмәйем, ғәжәпләнәм. Хәйер минең еҫ тойорлоҡ тәжрибәм дә юҡ инде. Мараттан һорашырға Марат инде ҡайтып йоҡларға ла ятҡан.

Ә мин үҙемдең бүлмәгә күтәрелеп, бөгөнгө тәьҫирҙәрҙе яҙып ҡуйырға булдым: яҡшы тәьҫирҙәр. Бер ниндәй ҙә еҫ юҡ минең өсөн. Күрәһең, еҫ тойорлоҡ кеше түгелдер әле мин.

Мин тик урман, шыршы-ҡарағайҙарҙың сайыр еҫе менән дымлы ер һәм бәшмәктәр еҫен генә тоям. Йорт алдындағы сәскәләр еҫе тағы...

— Бында тәмәке сәскәләре юҡ икән,— тим мин.

— Улар бит матур түгел.

— Матур түгел, ә хуш еҫе көслө.

— Тонко сказано,— тигән яуапты ишетәм. Ысынлап та, матур сәскә түгел улар, ә хуш еҫтәре танауҙы ярып килә — татлы.

Мин ултыртҡан тәмәке сәскәләре хәҙер ап-аҡ булып ултыралыр инде...

3 сентябрь.

Беренсе шаршау менән икенсе шаршауҙы яҙып бөттөк тиергә мөмкин. Үҙебеҙсә, әлбиттә, был еңеү ине. Ләкин бик ҙур еңелеү ҙә ине был.

Владимир Федорович Пименов менән Инга Люсановна Вишневскаяға уҡып, үҙебеҙгә тәүге һынауҙы үткәрҙек бөгөн.

Пьеса тураһында Вл. Федорович тәүге һүҙҙе әйткән кеше булды һәм уның әйткәндәре беҙгә бөтөн бер мәктәп булып ҡаласаҡ, әлбиттә.

Был һөйләшеү беҙҙең бик томанлы ғына уйлап йөрөгән уйҙарға, бик аҫтан ғына тойған нәмәләргә ҙур бер таяныс.

Иң ҙур етешһеҙлек — сәхнә характерҙарының бер яҡлы булыуында һәм һәр характерҙа ла драматик элементтың бик пассив булыуында.

Характерҙар үҫеш динамикаһында бирелмәй. Драматик элементҡа ҡарағанда комедия элементтары өҫтөнлөк ала. Был, әлбиттә, беҙҙең комиклыҡта түгел, ә еңеллектә.

Фөмүмән, был һөйләшеүҙе бер-ике һүҙ менән генә яҙып бөтөрөү мөмкин түгел. Беҙ бик ҡаты тәнҡитләндек, ләкин был тәнҡит беҙгә иң кәрәкле тәнҡит булды, сөнки иң ихлас, иң киң күңелдән бирелгән кәңәштәрҙе ишетеп, беҙ үҙ көстәребеҙгә нығыраҡ ышандыҡ...

4 сентябрь.

Кисәге пьесаны уҡып, һөйләшеп ултырғанда, беҙҙең уңышһыҙлыҡ та үҙе бер бәхет ине. Ә иртән тороуға мин бөтөнләй

ауырыуға әйләндем. Күңелдә шундай бушлыҡ, әйтерһең ундағы бөтә нәмәне талап, емереп, таптап сыҡҡандар. Бөтә нәмә ҡотһоҙ бер харабаға әйләнгән. Бер мөйөштә туҡмалған йөрәк кенә тороп ҡалған, әрнеп, һыҙланып ята...

Пьесаны бөтөнләй яңынан яҙырға кәрәк. Етмәһә, Марат: «Юлдашты бөтөнләй алып ташларға кәрәк»,— ти. Әгәр Юлдаш менән Зөһрә булмаһа, пьесаны артабан яҙышыуҙың бер ниндәй ҙә ҡыҙығы ҡалмай. Улар тураһында мин үҙенә бер башҡа пьеса яҙырға теләр инем... Мин уларҙы тоям хәҙер, күреп торам, әгәр ҙә яҙһам, уларға мин үҙемдең бөтә хистәремде һалып, бөтә уйҙарымды биреп яҙыр инем. Ә хәҙер мин ирекле түгел, ике авторға буйһонорға тейешмен. Төп герой Нур өсөн Юлдаштың аҡылын да, хис-тойғоларын да сикләргә кәрәк. Ниндәй мәғәнәһеҙлек!.. Ә ниңә Юлдашты ла, Нурҙы ла бер тигеҙ дәрәжәлә бай һәм ҡыҙыҡлы характерҙар итмәҫкә? Ни өсөн һуң ул саҡта Нур менән Юлдашты дуҫтар итергә? Ниндәй нигеҙҙә? Ҡыҙыҡ хәл бик. Мин аңламайым.

Ғөмүмән, был пьеса өсөн мин күберәк ғазапланам, бәхәсләшәм. Бәлки, мин дөрөҫ позицияла ла тормайымдыр. Ләкин үҙеңде ғазаплаған мәсьәләләр күтәрелмәһә, ниңә һуң әле минең ҡыҫылышым булырға тейеш? Төрлө деталдәр, драматик орлоҡ эҙләп ултырыуҙың ниндәй мәғәнәһе бар?

Мине пьесаның ғәҙәти бер мещан драмаһы ғына булып сығыуы бик ҡурҡыта. Сөнки мещан донъяһына ҡаршы икенсе бер ҙур көс юҡ. Ул көс Юлдашта булырға тейеш ине, сөнки Нур үҙе шул донъя эсендә тороп ҡалған — шунда уның трагедияһы ла. Юҡһа беҙ ни өсөн драма яҙабыҙ? Иң драматик образдар Нур менән Гөлназ булырға тейеш бит. Уларҙы шул донъянан ҡотҡарырға, уларҙың мөхәббәтен, киләсәген һаҡлап ҡалырға кәрәк. Нур быны үҙе генә хәл итә алмай, үҙе генә хәл итә алғанда, драма ла булмаҫ ине.

Ә Зөһрәгә Юлдаштың бурыстарын биргәндә, Зөһрә уны күтәрә алмаясаҡ. Был яһалма килеп сығасаҡ һәм ул саҡта Нур Гөлназ менән түгел, ә Зөһрә менән булырға тейеш буласаҡ.

Ә Нур Гөлназды ярата... Гөлназ да үҙенсә Нурҙы ярата. Ләкин уның яратыуында бик ҙур ҡаршылыҡ.

Бына шул ҡаршылыҡтар әле беҙҙең образдарҙа юҡ.

Көн бөгөн пьесанан башҡа үтте. Рафаэль менән Марат финдың пьесаһын уҡынылар, ә мин шифырҙар менән булыштым, подстрочниктар яһап, тәржемәсе Борис Лейтинға бирҙем. Бик ҡыҙыҡ ҡына ҡарт, тышҡы ҡиәфәте менән нисектер Бунинды хәтерләтә. Байрон, Шелли, Гейне шифырҙарын тәржемә иткән ул. Шифырҙарҙы биргәс, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Белмәйем, нисек тәржемә итер. Яҙыусылар союзына быйыл

ғына алынған икән. Тәржемәселәргә, күрәһең, Союзға алыныу бик ҡыйын. Ә бөтә ғүмерен үҙе әҙәбиәткә биргән.

Чайковскийҙың Бишенсе симфонияһын тыңлағас, урманда йөрөнөм. Ләкин ҡыҙҙың күҙҙәрен бер ҙә күҙ алдыма килтерә алмайым. Ҡыҙ сәскә атты, хатта мин үҙем дә йәшәреп киттем. Төрлө юҡ-бар нәмәләр тураһында һөйләшеү ниндәйҙер бер мәғәнә алып, үҙе бер поэзияға, Чайковский симфонияһына әйләнде. Ғәжәп — бында бер ниндәй ҙә аҙғынлыҡ күрмәйем үҙем, ә бит аҙғынлыҡ был. Бер аҙналап ваҡыт өсөн роман яҙып маташам. Ләкин яҙаһы килә. Баҫылырмы, юҡмы — унһынында эш юҡ. Кеше булып йәшәйһе килә, әйтерһең башҡаса кеше булыу мөмкин түгел!..

Төн һыуыҡ ҡына, ләкин өшөтмәй, тимәк, мин йәш икән әле.

Күк йөҙө йондоҙҙар менән ҡапланған — улар йылы булып тойола. Ярты ай урағы ҡалҡҡан — ул да ярты бәхет булып күренә.

5 сентябрь.

Эш бармай. Марат менән Рафаэль Вишневскаяның килгәнен көтәләр. Әйтерһең Вишневская беҙгә пьеса яҙып бирәсәк. Әйтерһең уның өсөн беҙҙең пьесаның яҙмышы боғаҙға килеп тығылған бер мәсьәлә! Ниндәй малайлыҡ!..

Юлдашҡа заговор. Ә Юлдашһыҙ минең өсөн пьеса ла юҡ. Бер ай ваҡыт әрәмгә генә китте. Бөтә ваҡыт мәғәнәһеҙ биллиард һуғыу менән үтә. Ә һөйләшеү бер-береңде кәмһетеүҙән ары китә алмай. Йәнәһе, мин бер нәмәгә йәбешеп алғанмын да, үҙ һүҙемде һүҙ итер өсөн генә тырышам... Һәм мин килешергә тейешмен, имеш.

— Килеш инде һин, Рәми. Ике кешенең фекеренә нисек бер үҙең ҡаршы киләһең, — ти Рафаэль...

6 сентябрь.

Бына Вишневскаяның төп фекере.

— Һеҙ яҙғанда хәҙерге көндөң һулышы тойолмай. Был 50-се йылдарҙа ла булырға мөмкин. Тамашасы йәшәгән ваҡытты күрһәтергә кәрәк. Бына Евтушенконың шиғырҙары, уларға ниндәй генә ҡараш булмаһын, бөгөнгө көндөң шатлыҡтары, ҡайғылары менән тулҡынландыра бит. Бөгөнгө көндөң багажы һеҙҙең пьесала юҡ әле — философик, интеллектуаль, социаль яҡтан мөһим булған бер ваҡытты тотоп алырға кәрәк. Ә һеҙҙең геройҙар был хаҡта уйланмайҙар ҙа, ә бит тормошта кешеләр һәр саҡ тормош тураһында һөйләшәләр. Бөтәһе лә көнкүреш тирәһендә генә өйөрөләләр. Ә тор-

мош бәреп кермәй был мещандар донъяһына. Ә бит һеҙҙең мещаниндар бөгөнгө көн мещаниндары. Улар үҙ файҙалары өсөн булһа ла бөгөнгө көн менән ниндәйҙер дәрәжәлә ҡыҙыҡһынырға тейештәр. Уларҙа бөгөнгө маска булырға тейеш.

Әйтәйек, XXII съезд етеп килә, көнбайыш Берлинда ниндәй хәлдәр бара һ. б. Бит бөтә халыҡ ҡыҙыҡһынып йәшәгән идеяларҙы, партияның ҡарарҙарын улар ҙа үҙҙәренсә ҡабул итәләр, үҙҙәренсә аңлайҙар.

Ленин һәм энтузиазм, тәүге коммунистик субботниктар...

Тәүҙә кешеләр быға ышанып йәшәнеләр, эшләнеләр. Ләкин хәҙер энтузиазм ғына етмәй, кешегә нормаль тормош менән йәшәү ҙә кәрәк. Партия материаль ҡыҙыҡһыныу мәсьәләһен ҡуйҙы. Быны обыватель үҙенсә ҡабул итә, бөтә нәмәне аҡса менән үлсәгән типтар барлыҡҡа килә. Түлә уға — эшләй. Ә түләмәйенсә эшләргә ул тамсы ла риза түгел. Улар газета ла уҡый, хәҙерге сәйәсәтте лә үҙҙәренсә ҡабул итәләр.

Ә ниңә шуны күрһәтмәҫкә?

Уларҙың үҙ философияһы булырға тейеш. Тормошҡа яраҡлашыу, унан бөтә нәмәне алыу теорияһы —хәҙерге мещанин-обывателдың теорияһы ул. Быны пьесала бирергә кәрәк.

Ыңғай герой мәсьәләһе. Ыңғай герой сәхнәгә сыҡһа, күңелһеҙ. Ни өсөн? Сөнки ыңғай герой кеше түгел. Бөтәһе лә унда дөрөҫ, бер ниндәй ҙә яңылышыу юҡ. Беҙ уны таяҡ кеүек итәбеҙ.

Бына һеҙҙең Нур — дөрөҫ, бөтәһе лә. Ҡалғандар яңылыш булып сыға. Ә ул ни эшләй? Бер ни ҙә эшләмәй. Сыға ла китә аҙаҡтан!

Ул бөтөнләй эшкә сумған, материаль яҡҡа бөтөнләй ҡул һелтәгән. Тора-бара ул идеалист, бушбоғаҙ ҙа булырға мөмкин.

Ниңә ундағы кешелек ҡаршылығын күрһәтмәҫкә?

Партия программаһы хәҙер кешеләр тарафынан икегә бүлеп ҡабул ителә. Уны тулыһынса ҡабул иткән кешеләр һирәк.

Всеволод Вишневский тик идея менән йәшәгән кеше ине, мещан ояһында үлде.

Дон Кихот ҡаршылығы ла шулай бит.

Хәҙер йәштәр араһында, беҙ тыныслыҡ яҡлы, тип, хәрби хеҙмәттән ҡасып йөрөгән Эдиктар ҙа бар бит.

Уларҙың барлыҡҡа килеүе ниҙән? Уларҙың тыуыуына идеалистар ҙа материалистар ҙа ғәйепле. Һәм ул үҙенә файҙалы программа төҙөп алған.

Юлдаш, Зөһрә ауылдан килгәндәр. Улар Нурҙан нимә менән айырылалар? Айырмалары күренмәй. Бер төрлөләр.

Ауылға китеү — сафланыу тигән фекер бар. Народниктар теорияһы. Хәҙер ҙә бар.

Шундай характерҙы Юлдашта бирергә лә мөмкин. Ләкин ул үҙенең «военный коммунизм»ы менән көлкө. Ә Эдик унан современныйыраҡ — үҙенең вкустары менән.

Ләкин Юлдаштың көлкөлө булыуы яҡын.

Зөһрә ауылса, эшмәкәр, ләкин эстән уның ҡатын-ҡыҙ булаһы килә, ә уның мөмкинлеге юҡ. Ул Нурҙы ярата, ә Гөлназды күрәалмай. Уның һөнәрен күрәалмай — йыр йырлап ҡына йөрөй.

Юлдаш — Полетаев фекерҙәрен яҡлай, хәҙерге атом заманында сәнғәттең кәрәге юҡ, тигән фекерҙе әйтергә тейеш.

Юлдаш Нурҙың ҡаршылығын көсәйтергә генә мөмкин. Әйҙә ауылға минең арттан!— тип ғаиләне айырырға мөмкин.

Ләкин Юлдаш, Нур, Зөһрә, Алмаларҙың сифаттарын алған, бөтә яҡшыны бергә йыйған тәжрибәле кеше кәрәк.

Хәҙерге мотив кәрәк. Һәр геройҙың үҙ етешһеҙлеге булһын.

Урмановтың да ғәйебе бар. Нур уның хатаһын ҡабатламаҫҡа тейеш.

Иҫерек Урмановтың хатаһын ҡабатлаған кеше — иҫереп йөрөй. Островскийҙың «Доходное место» пьесаһындағы алым.

Урманов барыбер бәхетһеҙ. Эдикты, Гөлназдарҙы тормошҡа яраҡһыҙ рәүештә ҡалдырып киткән.

Алешиндың «Одна» пьесаһы Алма ханым ҡуҙғатҡан мәсьәләне ҡуҙғата.

Пьесала заман һулышы, бөтә ил йәшәгән тормоштоң бер киҫәге булырға тейеш. Вишневскаяның был фекере менән мин килешәм. Мин дә шул хаҡта тылҡыйым бит, тик мин әйткән фекер мин әйткән өсөн генә иғтибарға алынмай. Был бит һәр кемгә билгеле хәҡиҡәт. Шунһыҙ ниндәй әҫәр булырға мөмкин? Көлкө хатта. Ләкин ундай ҙа әҫәр була икән шул.

Бөгөн мин Вишневская менән һөйләшерҙән алда Юлдаш менән Зөһрә диалогын яңынан ҡарап, бер аҙ өҫтәмәләр керетеп ултырҙым. Юлдаш ауыл хәлдәре тураһында һөйләгәндә, партияның яңы программаһын да телгә ала.

Марат кереп, минең төҙәтмәләрҙе ҡарап сыҡты ла:

— Программаны ла ҡыҫтырған,— тип көлөп ҡуйҙы.

Миңә ғәжәп: ни өсөн быға бер ирония менән ҡарарға? Бөтә ил хәҙер шул турала шаулай, артабанғы бөтә тормош шул программаны ғәмәлгә ашырыу өсөн әллә күпме драмалар тыуҙыра торған бер көрәшкә әйләнәсәк. Бөтә киләсәк, халыҡтың бөтә тормошо шул программаға бәйләнгән... Әгәр беҙҙең геройҙар шуны тоймайынса, был хаҡта уйланмаһалар,

хатта уны телгә алырға ла ҡурҡһалар, беҙ ниндәй яҙыусылар һуң? Беҙ үҙебеҙ ҙә шул уҡ мещан, обывателдәргә әйләнәбеҙ түгелме?

Фәжәп, шул хәкиәттә белер өсөн дә беҙ бер Вишневскаяның ауыҙына ҡарап ултырырға тейешбеҙ инде. Көлкө хатта!.. Етмәһә лә Вишневская беҙҙең пьеса менән таныш та түгел! Беҙ уларға тәүге күренеште көс-хәл менән генә тәржемә итеп уҡып сыҡтыҡ та, аҙаҡ Рафаэлдең бер яҡлы ғына итеп һөйләп биреүенән пьеса тураһында ул капитальный бер фекер әйтеп бирергә тейеш инде...

Был хаҡта әйткәс, Рафаэль туҙынып китте, мине ниндәй генә етешһеҙлектәрҙә ғәйепләмәне!..

— Һин генә беләһең дә, һин генә дөрөҫ!

— Һин, Рәми, әллә ниндәй бер яҡлы!

— Һин, әйтерһең, драматургияның бөтә закондарын белеп бөтөргәнһең.

— Һин вообще үҙ һүҙле кеше.

— Һинең менән бергә эшләһәм, мин бөтөнләй һинең менән эшләй алмаған булыр инем.

— Бел, Рәми, һинең бөтә етешһеҙлектәреңе, бөтә трагедияңә шул үҙеңдең шундай характерыңдан!.. һ. б. һ. б.

Быларҙы миңә Рафаэль бармағын ултырғыс арҡаһына һуға-һуға һөйләй, һөйләмәй, ә ҡыҫҡыра. Хәленән килһә, бәреп тә йығыр ине!.. Минең бөтә мөхәррирҙәр менән булған ҡаршылыҡтарҙы ла ҡаҙып сығара. Өйҙәге хәлдәрҙе лә миңә бер ғәйепләү акты итеп ташлай. Минең ауылға ҡайтып китеү ҙә, унда комсомолдар менән эшләп йөрөү ҙә ниндәйҙер бер утыҙынсы йылдар хатаһы...

Кеше бер ҡыҙып алһа, нимәләр генә һөйләмәҫкә мөмкин!.. Минең хатта баш ауырта башланы.

Минең ҡаршы әйткән төп фекер шул булды.

— Һин, Рафаэль, көн һайын фекереңде алыштырып торма. Ел ҡайһы яҡҡа иҫһә, шул яҡҡа елберләп торған сепрәк булмаһын кеше фекере. Унан һуң кеше әйткәнде икенсегә борма, дөрөҫ аңла, ябайлаштырма.

Юҡһа миңә бергәләшеп эшләүҙең кәрәге лә ҡалмай. Ике вариантта яҙып ҡарайыҡ. Мин үҙ вариантымды үҙем яҙырмын. Мин үҙ фекеремде лә әйтмәһәм, нимәгә минең ҡатнашлығым кәрәк? Яҙығыҙ үҙегеҙ! Миңә мещан драмаһы кәрәкмәй. Юлдаштары бер алйот итеп бирергә мин дә алйот түгел. Уның прототибы бар, әгәр тормошта Юлдаштар хәҙергә аҙ булһа, иртәгә улар күберәк булыр. Уның демагог Полетаевтың вульгар фекерҙәре менән бер ниндәй уртаҡлығы юҡ. Мин пьесаны Афиногеновтың «Страх» пьесаһы кеүек итергә йыйынмайым бер

ҙә. Сәхнәлә характерҙар һәм шул характерҙың үҙгәренән сыҡҡан хәрәкәте булырға тейешлеген мин дә беләм.

Юҡ, мин ауыл хужалығы тураһында пьеса яҙырға йыйынмайым, кешеләр тураһында, кешеләрҙең драмаһы тураһында яҙырға уйлайым мин.

7 сентябрь.

Пьеса тураһында һуңғы бәхәс иртәнән үк башланды. Марат менән беҙ беренсе күренешкә ҡайһы бер өҫтәмәләр кертә башлағайныҡ, Рафаэлгә был оҡшаманы, Марат пьесаны ташлап сығып китте.

Рафаэль төштән һуң кереп, Юлдашты Зөһрәгә әйләндерә башлауын әйтте. Миңә был һалҡын һыу һипкән кеүек булды. Был инде бәхәс кенә түгел, ә ниндәйҙер мыҫкыллау — был бер ауырыуҙың циниктарса көлөүе.

Бер-беребеҙгә ҡаты-ҡаты бер нисә һүҙ әйтешеп алдыҡ та, мин Рафаэлгә үҙемдең һуңғы ышанысымды ла юғалттым.

— Әгәр ҙә һин һаман да шулай итәһең икән, Рафаэль, башҡаса минең был пьесаға ҡатышым юҡ, бынан һуң ғөмүмән беҙҙең арала бер ни ҙә булырға тейеш түгел — бөттө, — тинем мин, башҡаса пьеса менән кереп йөрөмәүен һораным.

Шуның менән беҙҙең ун өс йыллыҡ дуҫлыҡ та бөттө, буғай. Минең инде уға бер ҡабат күңелем ҡатып ҡалғайны, хәҙерге боҙҙо инде бер ни ҙә иретә алмай. Еңел түгел был, ләкин артабан беҙ дуҫтар булып ҡала алмайбыҙ. Был инде бер-береңде аңламау ғына түгел, ә аңларға ла теләмәү — башта һөйләшкән уртаҡ фекергә хыянат итеү. Мин быны бер нисек тә ижад характерынан килеп сыҡҡан ҡаршылыҡ тип уйлай алмайым.

Был — принципһыҙлыҡ, ирлек түгел был!.. Был ниндәйҙер үҙ-үҙенән һуңғы сиккәсә ҡәнәғәт булған, үҙ-үҙенә үлеп ғашиҡ булған әшәке бер ҡатындың ерәнгес холҡо... Үҙеңдең фекереңде теләһә ниндәй бер осраҡлы хәл алдында икенсегә бороп ебәреү — был инде проституция — фәхишәлек...

Башҡаса минең бындай хеҙмәттәшлеккә йоғонаһым да юҡ. Бер баланың өс атаһы булмай!

8 сентябрь.

Пьеса минең өсөн юҡ, ә ниндәй яҡшы пьеса булырға тора ине!.. Ғүмер булһа, мин үҙем берәй пьеса яҙып ҡарармын, ләкин башҡалар менән ҡатышып, инде бер юллыҡ әйбер ҙә яҙасаҡ түгелмен. Был драма миңә ғүмер буйы онотмай торған һабаҡ булһын!.. Бергәләп тик ысын дуҫлыҡ булғанда ғына, бер-береңдең фекерен тәрән аңлағанда ғына һәм бер-береңде сикһеҙ ихтирам иткәндә генә эшләргә мөмкин. Ә кейәүгә

сыҡмай ҡалған ҡарт ҡыҙ шикелле, һәр бер һүҙгә ҡуҙғып барғанда, бер ниндәй ижадтың да булыуы мөмкин түгел. Кеше бер нәмәлә икенсе кеше менән килешә алмай икән, уларҙы көсләп килештереп булмай һәм бының кәрәге лә юҡ.

Мин, Рафаэлдең фекеренсә, утыҙ йылға артта ҡалған тар һәм бер яҡлы ҡарашты яҡлаусы булып сыҡтым. Имеш, мин ауыл менән ҡаланы ҡаршы ҡуям!..

Кешенең фекерен ниндәй дәрәжәлә ябайлаштырырға мөмкин!

Эйе, мин ауыл менән ҡала араһында ҙур айырма күрәм. Сөнки был шулай һәм был айырымлыҡты беҙҙең быуын ғына бөтөрә алмаҫ әле. Был тарихи бурыс. Ләкин мин ауылды ҡала кимәленә күтәреү тураһында уйлайым. Быны бер мин түгел, ә бөтә ил уйлай, бөтә ил шуның өсөн көрәшә. Был ауыр көрәш. Пьеса шул көрәште аҙ ғына ла сағылдырмағас, ул обыватель әҫәре буласаҡ.

9 сентябрь.

Рафаэль менән Марат бильярд уйнайҙар, ә мин шифырҙар яҙам.

Пьеса тураһында һөйләшмәйбеҙ. Рафаэль менән һөйләшер һүҙ ҙә юҡ. Марат ҡына кереп йөрөй, иртән уятып сыға.

10 сентябрь.

Яҡуп Ҡолмой, Марат, мин Рафаэлдең бүлмәһенә кереп ике шешә ликер эстек. Марат ҡайҙандыр табып килтергән. Ненец яҙыусыһы Истоминдан аҡса алып торған, буғай... Был хушлашыу кисе булды. Мин тағы бер көнгә ҡалырға тейешмен. Сөнки яҙырға эш күп, унан һуң хәҙер беҙгә өсәүләп ҡайтыуҙың бер ҡыҙығы ла юҡ. Мәскәүҙә берәйһенән аҡса алып торормон да үҙем генә ҡайтырмын инде. Зәңгәр күҙле ҡыҙыҡай ысынлап та ҡыҙ булып сыҡты — теймәнем. Бик аҡыллы ҡыҙ, бер-беребеҙҙең фекерҙәрҙе яҡшы аңлаштыҡ, буғай. Сәғәт төнгө өскә тиклем һөйләштек.

11 сентябрь.

Рафаэль менән Марат ҡайтып киттеләр, мин бер үҙем генә тороп ҡалдым. Марат миңә тәмәкегә аҡса ҡалдырҙы ла, хушлаштыҡ. Рафаэль бер ни ҙә өндәшмәне. Ләкин йөҙөнә ҡарағанда, кәйефе шәптән түгел — бәлки, бөтә был хәлгә үкенәлер ҙә.

Яҡуп Ҡолмой кереп шифырҙар уҡыны. Һаман да биҙәктәр, матур образдар артынан ҡыуа, үҙенең ысын уйҙарын, ахыры, ул бер ҡасан да әйтеп бирә алмаҫ. Мин үҙ фекеремде асыҡтан-асыҡ әйтеп бирҙем — аҙаҡ ул кермәне.

Кис ул ҡыҙ минең плащты ямап бирҙе.

Төндә хушлаштыҡ. Күҙҙәрендә тоҙло йәш. Әй, бала!..

Ниндәй ахмаҡ килеп сыҡты был танышыу — уйындан уймаҡ сыға шул. Нишләйһең — миңә ары китергә, уға ҡалырға кәрәк. Бәлки, бер ҡасан да күрешмәбеҙ. Ҡыҙыҡ был тормош: осрашып таныш та, бик яҡын кешеләр булғас, мәңгегә хушлаш имеш.

Ниндәй ахмаҡ хәл. Ә мин уйнап ҡына күрешеп йөрөнөм, ҡатындыр тип уйлағайным, яңылыштым. Быныҡ менән уныҡ хәтерен ҡалдырҙым буғай.

— Иң яратҡан ағасың нимә?

— Ҡайын.

— Ярай, мин һинең тыуған көнөңә берәй ҡайын ултыртырмын... Рус ҡайыны. Хуш бул, ғәйепләп иҫкә алма!

12 сентябрь.

Малеевканы ҡалдырып, автобуста Дороховоға киттек. Минең автобуҫҡа ла, поезға ла аҡса юҡ. Билеттарҙы Ҡолмой алды.

Иртән торғас, урман юлы буйлап һуңғы ҡабат йөрөп килдем. Көн матур — йәйге иртә кеүек ҡояшлы, йылы, уйһыуҙарға ап-аҡ булып томан төшкән. Ағас япраҡтарынан тып-тып килеп тамсы тама. Быуанан пар сығып ята. Кәмәлә йөрөп булманы инде. Күңелдә әллә ниндәй ашҡыныу. Бындағы кешеләрҙе ҡалдырып китеү әллә нисек моңһоу. Женяны һуңғы ҡабат күреп китермен тигәйнем, ләкин улар мин урманда йөрөгәндә, бәрәңге ҡаҙырға китеп барғандар. Шулай, бәлки, яҡшыраҡ та булғандыр. Сөнки беҙ төндә бик яҡшы хушлаштыҡ, ә иртән ул ҡоро, һалҡын бер культурница ғына булған булыр ине. Шулай ҙа уның күҙҙәренә һуңғы ҡабат ҡарап китәһе килә. Фәжәп — ниндәйҙер туғанлыҡ хисе тулған күңелгә. Бөтөнләй таныш булмаған кеше менән бер-ике аҙна эсендә бик яҡын булып туғанлаш та, уны бер ҡасан да күрмәҫ өсөн мәңгегә ташлап кит, имеш, ти!.. Ниндәй ахмаҡлыҡ! Тормош шундай бик сәйер осраҡлыҡтары, көтөлмәгән шатлыҡтары, ҡайғылары менән тулы, күрәһең..

Бына юлда барғанда тағы бер ҡыҙыҡ танышыу! Бер ай буйы бергә йәшәп тә сәләмләшеп кенә йөрөгән кеше менән ҡайтырға сыҡҡас ҡына яҡынайып киттек. Ул «Огонек» журналының фотокорреспонденты булып сыҡты. Үҙенең исем-фамилияһын да белмәйем, ләкин мин уны, бер утыҙ йыл үткәс тә онотасаҡ түгелмен — шундай яҡын дуҫтар булып айырылыштыҡ. Ә бер ай буйы бергә йәшәп тә ныҡлап танышырға тура килмәне!.. Минең был баҫалҡылыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ миңә кешеләр менән танышып китергә бик ҡамасаулай, шуның

арҡаһында мин бик күп матур кешеләрҙе юғалтып ҡалам. Ә бер тапһам, мин уларҙы ғүмер буйы онота алмайым. Беҙҙең менән Мәскәүгә тағы йәш кенә бик һылыу бер ҡатын ҡайтты. Ире летчик, ике балалары бар, ләкин бәхетһеҙ ҡатын. Күҙҙәре зәңгәр күк кеүек асыҡ, ә ҡаштары ҡарлуғас ҡанаттары кеүек ҡап-ҡара булып һыҙылып киткән. Сөм ҡара оҙон керпектәре уның күм-күк күҙҙәрен тағы ла тәрәнәйтеп, матурлап тора. Беҙ бер-беребеҙгә бер һүҙ ҙә әйтешмәнек, ләкин бик күп нәмәләр тураһында һүҙһеҙ генә һөйләшеп килдек. Иҫ киткес матур был аңлашыу. Белорус вокзалында ул беҙҙән айырылды. Ҡул биреп хушлашты ла, мәңге күрешмәҫ өсөн, ул да Мәскәү шаушыуына инеп юғалды. Үҙе Одессаныҡы, Мәскәүҙә йәшәйҙәр. Моғайын, йә атаһы, йә әсәһе грек булғандыр — мин уны гречанка итеп күрҙем. Ниндәй матур һәм ниндәй бәхетһеҙ ҡатын. Ниңә кеше үҙенең юлында осратҡан бөтә кешеләрҙе лә бәхетле итә алмай?.. Ә ниңә һуң мин кешеләрҙә, бөтөнләй ят, бөтөнләй таныш булмаған кешеләрҙә үҙемдең бик яҡын туғандарымды күрәм.

Хатта Яҡуп Ҡолмой ҙа был юлдан һуң миңә ниндәйҙер бер яғы менән яҡын булып ҡалды. Тупһыҙыраҡ, ләкин бынан һуң ул миңә яҡын кеше. Күңелдә ниндәйҙер килешеү; бөтә донъя менән туғанлыҡ хисен бәйләү бар миндә...

Кешелә беҙ матурлыҡты эҙләмәй, унда тик тышҡа сығып торған насар яҡтарҙы ғына күрергә өйрәнгәнбеҙ, уға артыҡ бер яҡлы, үҙебеҙҙең бик шәхси мөнәсәбәттән генә сығып ҡарарға күнеккәнбеҙ түгелме? Был үҙ-үҙеңде артыҡ баһалауҙан, тик үҙеңде генә яратыуҙан килеп сыҡҡан рухи фәҡирлек, минеңсә.

Рафаэль менән, бик күп йылдар буйы дуҫлашҡан кешем менән, хушлашҡандан һуң, мин үҙемдә ниндәйҙер яңы бер тойғоно астым. Һәм миңә был йөктән бушанғас, нисектер бик моңһоу ҙа, бик еңел дә. Мин ҡайҙалыр осоп барам, мин бик ирекле кеүек!..

Ни өсөн һуң мин уға мәңге бурыслы, мәңге бәйле кеше булып йөрөргә тейешмен һуң әле? Мин бит уға, бик күп булһа, бер нисә йөҙ аҡсаһын ғына ҡайтарып бирергә тейешмен бит?.. Беҙҙең арала тик шул ҡағыҙҙар менән металл бөртөктәре генә тороп ҡалды түгелме?

Үҙемдә булған байлыҡты мин уға йылдар буйы бүләк иттем, был уға кәрәк ине, үҙ ваҡытында хатта был бик кәрәк булғандыр, ә хәҙер минең хис-тойғоларым, фекерҙәрем уға ни өсөн кәрәк һуң? Бөтәһе лә аға, бөтәһе лә үҙгәрә, тигән бит Гераклит, ә мин ниңә шул үҙгәреште, ваҡыт дәүмәлен күрмәҫкә тырышам, башҡа кешеләргә лә үҙемдең кәрәкле икәнлегемде тойорға кәрәк. Үткәндәрҙән, үҙемдән уға биргән байлыҡтан мин бит ярлыланып ҡалманым, тимәк, йәлләп тораһы бер ни

ҙә юҡ. Әйтәһе һүҙҙәр әйтелгән, әгәр ҙә ул аҡыллы булһа, аңлар, бөгөн аңлап еткермәһә, ҡасан да бер аңлар. Сөнки үҙ тормошоңда ваҡытында бик кәрәкле кешеләрҙе бер ҡасан да хәтереңдән сығарып ташлап булмай, уларҙың яҡты иҫтәлеген һин ғүмерең буйы ҡәҙерләп һаҡлайһың, иң ауыр һынау ваҡыттарында, тормошоңдоң иң киҫкен бер мәлендә ул кешеләр һинең өсөн яңынан терелеп, һиңә бөтөнләй яңы яҡтары менән асылалар. Һин кешеләрҙе ни тиклем тәрәнерәк аңлай һәм баһалай белгән һайын, уларҙың да шул тиклем үк ҡиммәте, ҡабатланмаҫ матурлыҡтары, уларҙың тик үҙҙәренә генә хас сифаттары һиңә бик ҡәҙерле булып күренә.

Ҙур йөрәкле, шағир күңелле кеше быны барыбер тоясаҡ.

Беҙ бит бөтәбеҙ ҙә үҙгәрәбеҙ.

Тормош шул үҙгәрештең үҙе бит, башҡаса ул тормош та булмаҫ ине.

Пушкин — кешелектең иң кешелекле шағиры — ниндәй дөрөҫ әйткән:

Асыуланма, ҡайғырма һин,
Алдаһа әгәр тормош.
Килмәй булмаҫ, килер шат көн,
Тик һин йәшәргә тырыш.
Йөрәк йәшәй киләсәктә,
Күңелһеҙ тик бөгөнгә.
Һәр ни китә, һәр ни үтә,
Ә үткән хуп күңелгә...

Ҡайғыңды бына шулай еңеләйтә белергә лә, кешеләргә ышана белергә лә бик кәрәк. Ә тормош ул, нисек кенә булмаһын, барыбер... яҡшы!..

Бына беҙҙең институт баҡсаһында мин ултыртҡан ағастар ниндәй матур булып үҫеп киткән... Шуларҙы күреү ҙә бәхет! Сирендәр бөтөнләй ҡыуаҡланып ултыра, ә тополдәр инде элекке ҡарт тирәктәрҙе алыштырырлыҡ булып килә. Миләштәр ҙә ҡып-ҡыҙыл тәлгәштәрен һалындырып, баҡсаны биҙәп ултыра. Һәр бер ағас менән күрешеп сыҡтым, тик шыршылар ғына ҡороған... Уларҙан тик шифыр ғына тороп ҡалған. Бер заман килеп, тирәктәр ҙә ҡартайыр, сирендәрҙең дә яңыларын ултыртырҙар. Ләкин әле уларға ҡарап, әҙәбиәт институтының бик күп студенттары шифыр яҙасаҡ, бик күп йәштәр шул тирәктәр төбөндә бер-береһенә мөхәббәттәрен әйтерҙәр, бик күп кешеләр шул тирәктәр төбөндә осрашырҙар, танышырҙар, айырылышырҙар. Ә йыр дауам итер...

Үҙең үткән юлда ниндәйҙер тормош ҡалдырыу ни тиклем яҡшы!.. Был хаҡта мин тәүге ҡабат Горькийҙың улы Максимға яҙған хатынан белгәйнем, ә хәҙер был хаҡта мин үҙем дә бик

күп кешеләргә әйтә алам. Һәм шул һүҙе әйтә алыуым менән генә лә бәхетле мин...

Рафаэль менән Маратты институттың ятағында Нәжип Асанбаев бүлмәһендә осраттым. Нәжибәк Хафизов та бар ине.

Мин юлға аҡса юҡлығын әйткәс, Марат нәшриәттән аҡсаны бик аҙ алыуына зарланырға кереште, ә Рафаэль сырайын һытып, Ҡазан егете Аяздар бүлмәһенә сығып тайҙы. Кәтибә апайҙың да аҡсаһы юҡ. Асанбаевтан биш һум алып торҙом да Союзға киттем.

Николай Старшиновты Союз йортонда осраттым, ләкин ул яңы ғына отпусканан килгән икән, ярлыланып ҡалған, Игорь Сеньковҡа керергә кәңәш итте. Игорь — СССР Яҙыусылар союзы секретарының урынбаҫары булып киткән, ләкин ул да аҡсаһыҙ. Элекке курсташ студент кеүек. Шулай ҙа уның файҙаһы тейҙе. Литфонд директорының урынбаҫары Тараканов менән һөйләшеп, миңә бер яҙыу тотторҙо ла:

— Бар тиҙерәк барып ет, юҡһа һуңларһың,— тине. Ә мин, Пирем ҡул Ҡадыровҡа кереп, совхоздағы эштәр тураһында һөйләшеп ултыра инем.

Барлы-юҡлы аҡсаға такси алдым да Литфондҡа елдерҙем. Унан 25 һум юлға аҡса алып, Ҡазан вокзалына билетҡа киттем. Билетҡа сират бәләкәй генә ине — иртәнге Өфө поезына билет алдым да, Әкрәм Биишевты күргә тип, I Черемушкинскаялағы аспиранттар ятағына йүнәлдем.

Ләкин Әкрәм өйҙә юҡ, Мөхтәр Сәғитовты күреп, уның менән бер ҡыҙылды бушатып, фольклор, Ырғыҙ буйы тураһында һөйләшеп ултырҙыҡ, Әкрәм ҡайтманы, мин Переделкиноға ашыҡтым.

Киев вокзалы... Бөтәһе лә таныш бында!.. Туңдырма һатыусылар, электричкаға ашыҡҡан кешеләр, шаулап ҡуҙғалып киткән электричкалар тимер юлдағы йәшел, ҡыҙыл светофорҙар... Вокзал сәғәте...

Вагондарҙа һаман да шул уҡ тормош дауам итә... Һөйләшәләр, йырлайҙар, көләләр, кәрт һуғалар, газета-журнал, китап уҡыйҙар, йоҡлайҙар... Ара-тирә иҫеректәр килеп сыға, ғашиҡтар ҙа әҙерәк... Һирәк-һаяҡ таныш йөҙҙәр осрай, ләкин таныш кешеләр генә юҡ. Студенттар хәҙер Мәскәүҙең үҙендә тороп уҡыйҙар. Шуның өсөн дә хәҙер ҡысҡырып шифыр уҡып барған кешеләр күренмәй...

Был юлдан тәүге ҡабат студент булып йөрөгән көҙҙән һуң ун йыл үтеп киткән... Ун көҙ, ун яҙ, ун ҡыш, ун йәй... Әйтерһең мин хәҙер бер ҡасан да студент булмағанмын, был тормошто ниндәйҙер бер китаптан ғына уҡып беләм, ә бит шул юлдан минең бөтә киләсәгем, бөгөнгөм башланған, шул юлдан минең икенсе мөхәббәтем башланған...

Надя менән бынан ун йыл элек беҙ ошо юлда таныштыҡ. Шул юлда бынан ун йыл элек башына ҡуян мамығынан бәйләнгән аҡ башлыҡ кейгән, нәҙек кенә буйлы, ҡулдарын ҡанат кеүек һелтәп, тилбер атлап йөрөй торған, ҡара һөрөнкө йөҙөн ваҡ ҡына һипкелдәр ҡаплап алған ҙур ҡара күҙле ун ете йәшлек бер ҡыҙ һәр көн иртәле-кисле поезға ашыға торғайны...

Тәүге йылды мин уға бер һүҙ ҙә өндәшмәй, һәр саҡ ситтән генә күҙәтеп, һәр саҡ ул ултырған икенсе вагонға ултырып йөрөй торғайным.

Икенсе йыл да шулай үтте...

Нимәһе менәндер ул миңә бик яҡын, нимәһе менән икәнен мин үҙем дә белмәйем. Уның менән танышырға, һөйләшергә кәрәкме —уныһын да асыҡ ҡына тоймайым...

Ләкин ул бер генә көн дә минең күҙ уңымдан китмәй. Ул нисектер башҡа ҡыҙҙарға оҡшамаған, бер кем менән дә артыҡ һөйләшеп бармай, ҡысҡырып көлөп тә ебәрмәй. Ләкин бөтә тирә-яҡҡа иғтибарлы, һынсыл, күҙәтеүсән күҙ менән ҡарай.Иғтибарҙы иң ныҡ тартып торғаны — уның күҙҙәре, ҡапҡара оҙон керпектәр араһынан ниндәйҙер моңһоу һәм шул уҡ ваҡытта оҫконло бер тәрән ҡараш менән тулған ҙур күҙҙәр. Уға бик килешеп тә бөтмәй. Фөмүмән, уның бөтә үҙ-үҙен тотошонда, буй-һынында ниндәйҙер бер ҡаршылыҡ бар: уның тәбиғәтенә йәшәгән тормошо бер ҙә тура килмәй кеүек.

Ҡайҙалыр ул эшләй ҙә, уҡый ҙа булһа кәрәк. Ләкин, эшләй тиһәң, ул әле бик йәш, уҡый тиһәң, бер ҙә мәктәп уҡыусыһына оҡшамаған. Үҙен бик ололарса, эшлекле тоторға тырыша, ә үҙе нисектер был тырышыуы менән бик балаларса, аҙашҡан кеүек күренә.

Миңә уның тормошо ла, сығышы ла, милләте лә бер йомаҡҡа әйләнгән. Ни менән йәшәй был ҡыҙ, ата-әсәһе кем уның, бармы улар, әллә берәй апаһында торамы, шулай уҡ милләте менән кем ул?.. Иң тәүҙә мин уны берәй ситтән килгән татар ҡыҙылыр тип уйланым, унан һуң, еврейка микән әллә, тип тә шикләндем, аҙаҡ нисектер сиған ҡыҙына оҡшата башланым... Ләкин һуңғы төҫмөрләү ҙә бик ҡаршылыҡлы булып сыҡты. Нишләп ул улай булһын? Ҡайҙан?..

Өҫ-башына ҡарағанда, ул ҡасандыр бик бөтөн генә йәшәгән, ләкин аҙаҡ бөлөп ҡалған бер интеллигент ғаиләһенән булырға тейеш. Һәр ваҡыт ҡулына китап тотоп йөрөүе лә, вагонға кергәс үк, ултырып китап уҡый башлауы ла шул хаҡта әйтеп торғандай бит. Унан һуң тағы бер сәйер күренеш— ул ниндәйҙер иҫке хәрефтәр менән яҙылған революцияға тиклем сыҡҡан ҡалын күн тышлы, тик букинистарҙа ғына йәки элекке бай китапханаларҙа ғына осрай торған китаптарҙы уҡый.

Тимәк, уларҙың үҙҙәренең бай ғына китапханалары бар, йәки шундай китапханалары булған берәй таныштары, китап һөйә торған, ғөмүмән әҙәбиәт йәки сәнғәткә бик яҡын булған кешеләре бар...

Был уй минең ҡыҙыҡһыныуымды тағы ла арттыра төштө. Берҙән-бер көндө, өсөнсө көҙ киткәндә буғай, мин бөтә ҡыйыулығымды туплап, уның менән иҫәнләшеп үттем. Ул быға бик кәрәкле һүҙҙе ишеткәндәй, ихлас күңелдән әҙәпле генә итеп яуап ҡайтарҙы.

Уның иҫәнләшеүендә лә минең өсөн ниндәйҙер бер сәйер айырымлыҡ күренде. Был иҫәнләшеү ауылса бик ябай ҙа түгел, шул уҡ ваҡытта ҡаласа бик ҡылансыҡ та түгел. Шулай тик ҡарт уҡытыусыларҙың бик тәрбиәле, әҙәпле үҫкән ҡыҙҙары ғына иҫәнләшергә мөмкин. Шул иҫәнләшеүҙән һуң беҙ һәр саҡ, һөйләшмәй генә, бик йылы итеп иҫәнләшеп йөрөй башланыҡ. Әйтерһең беҙ бик күптәнге таныштар, ләкин беҙҙең арала иркенләп һөйләшеп китергә мөмкинлек бирмәгән ниндәйҙер бер хәл булған да, шул хәлдән һуң беҙ бер-беребеҙгә элеккесә хөрмәт йөҙөнән, шулай һаман да элеккесә иҫәнләшеп кенә йөрөйбөҙ. Ләкин тора-бара мин уның күҙҙәрендә минең менән дә ҡыҙыҡһыныу, нисектер һөйләшәһе килеү теләген күрҙем. Мин уны күреү менән ирекһеҙҙән йылмайып ебәрәм, ул да бик йылы бер йылмайыу менән яуап ҡайтара. Ә бер кис шулай, лекциянан һуң, Горький паркында катокта коньки шыуып, һуңлабыраҡ ҡайтып килгәндә, уның ғәҙәттәгесә икенсе вагонға кереүен күрҙем дә, ул китабын алып уҡырға ултырғас уҡ, уның ҡаршыһына килеп ултырҙым. Уның ҡулында иҫке хәрефтәр менән баҫылған боронғо китап ине. Һәм мин был юлы инде өндәшмәй ҡала алманым, тәүге ҡабат ауыҙ асып, бик ҡыйыу ғына:

— Ниндәй китап уҡыйһығыҙ? — тинем. Ул да бик күптәнге танышына яуап биргәндәй:

— «Горе от ума»,— тип яуап бирҙе... Һәм беҙ бик иркен генә һөйләшеп киттек...

Шулай итеп, был юлда беҙҙе бөйөк рус драматургы илсе Грибоедов таныштырҙы...

Хәҙер инде ул ҡаҡса ғына буйлы, ҡара күҙле сәйер ҡыҙыҡай миңә ике ир бала, бер ҡыҙ бүләк иткән ҡатыным!.. Ғәжәп был тормош!.. Иҫ киткес ғәжәп!..

Бына мин беҙҙең тормош юлыбыҙ башланған өйгә, ҡәйнәм ҡарсыҡҡа китеп барам.

Иҫке таныш һуҡмаҡ, таныш тирәктәр, таныш баҡсалар, дачалар һәм бына Надяларҙың өйө... Ҡапҡа бикле, ҡапҡа төбөндә генә мин ултыртҡан һыуһар ағасы. Ул инде өй ҡыйығына тиклем булып үҫкән, ай яҡтыһында уның емештәре ҡарайып

күренә. Ҡапҡа аша һиҡереп төшәм дә, сәскәләр, алма ағастары, сейә ҡыуаҡтары аша үтеп, өҫкө верандаға күтәрә торған иҫке баҫҡыс күтәрмәһенә баҫам. Ашыҡмай ғына күтәрелеп, ишек шаҡыйым. Эстән ҡәйнәм ҡарсыҡтың таныш тауышы ишетелә...

24 октябрь.

Шулай итеп, мин яңынан журналист! Кисәге үҙебеҙҙең район газетаһында эште башланым.

Эш редакцияға килгән материалдар менән танышыуҙан башланды. Байтаҡ материалдар бар — ҡайһыһын тотоп уҡырға ла белмәйем. Минең өсөн улар бөтәһе лә мөһим, бөтәһе лә ниндәйҙер сер туплаған, бөтәһенең дә артында тере кеше тора. Уларҙың һәр береһенә кеше яҙмышы бәйләнгән. Кеше яҙмышы — журналист өсөн иң мөһиме бына шул!

XXII съезд бара Мәскәүҙә һәм съездың бөтә эше бына ошо кеше өсөн, уның бөгөнгөһө, иртәгәһе өсөн. Тик быны кешесә аңлай белергә генә кәрәк. Бына ошо кеше яҙмыштары өсөн һуғышырға, үҙ һүҙең менән уларға ярҙам итергә, уларҙың тормошон төҙөшөргә кәрәк. Ә һуңынан, ғүмер булһа, улар хаҡында ҙурыраҡты ла яҙырға мөмкин. Быныҡ өсөн кешеләрҙе, уларҙың тормошон, эшен, бөтә уй-хистәрен үҙеңде белгән кеүек белергә кәрәк.

Шул маҡсат менән мин редакция эшенә тотондом. Әле бына радионан Шолоховтың съезда яһаған телмәрен бирҙеләр. Бөтә йәнем-тәнем менән тыңланым. Минең телмәрем был, минең уйҙарым. Һәм мин үҙем өсөн шатланып бөтә алманым. Был миңә ҙур таяныс — мин яңылышмағанмын!.. Был хаҡта бөтә кешеләргә әйтәһе килә, ләкин быны эшең менән әйтергә кәрәк.

Кисәге районға килгәндә партком машинаһында Иван Кузьмич менән дә шул хаҡта бәхәсләшеп килдек. Ул минең совхозда комскомитет секретары булып эшләүемде лә, хәҙер район газетаһына эшкә күсеүемде лә көстө бушҡа әрәм итеү тип иҫәпләй.

— Кеше ҡайҙа файҙалыраҡ, шунда эшләргә тейеш, — ти ул. — Әгәр минең ҡулда булһа, мин һине Өфөгә саҡырып алыр ҙа, яҙырға ултыртыр инем.

Дөп-дөрөҫ фекер! Ләкин был өҫтән ҡарағанда ғына дөрөҫ, әлбиттә. Мин артабан бәхәсләшеп торманым. Ул минең үҙемде лә, минең эшемде лә аңлап етмәй, ә үҙе яңы ғына партия мәктәбен бөтөп ҡайтҡан төплө генә кеше.

Мин яҙыр өсөн үҙең яҙған тормошто үҙ ҡулдарың менән төҙөшөргә лә кәрәк тигән фекергә ышанғанмын һәм бынан бер

кем дә дүндерә алмай. Ләкин был еңелдән түгел, бының өсөн байтаҡ йөҙ һыуынды түгергә тура килә.

Бына әле юлаусылар йортонда ятам.

Бүлмәләр һалҡын, эшләргә бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ, бына әле яҙып ултырам — кешеләргә йоҡларға ҡамасаулайым, ә улар миңә эшләп ҡайтҡандан һуң яҙырға, уҡырға ҡамасаулай. Ләкин мин бынан да файҙа табырға тырышам. Шул кешеләрҙең тормошон күҙәтәм, һөйләшеүҙәрен тыңлайым — төрлө кешеләр бар, төрлө типтар... Юлаусылар йортонда ла ҙур тормош бара.

Бына әле Шолоховтың телмәренән һуң әҙәбиәт, тормош тураһында һөйләшәләр, Шолоховты маҡтайҙар, Есенин һәм Маяковскийҙы үҙ-үҙҙәрен үлтереүҙә ғәйепләйҙәр. Зощенконы телгә алалар, беҙҙең Салауат районы етәкселәренең тетмәкәйен тетәләр. Уларҙың береһе — райсоюзға килгән ревизор булһа кәрәк — татар ағай, икенсеһе — ДОСААФ эшмәкәре — рус кешеһе. Икеһе лә беҙҙең район хәлдәренән риза түгелдәр. Ә күрше бүлмәлә тағы ике кеше: МВД эшселәре, Өфөнән килгәндәр. Бер кис улар менән ҡунырға тура килде.

— Ниндәй эш менән килдегеҙ? — тигәс:

— Бандитизм менән көрәш буйынса, — тинеләр. Күберәк тимер юл буйындағы ауылдарҙа — Яхия яҡтарында йөрөйҙәр. Эштәренең ҡыйынлығы шунда: күп енәйәттәрҙең эҙе күрше Силәбе өлкәһенә илтеп сығара — был тикшеренеү эштәрен бик ҡыйынлаштыра, шунан зарланалар. Мин тәүҙә уларға бик иғтибар ҙа итмәгәйнем, ләкин ашхана ремонтҡа ябылғанлыҡтан, юлаусылар йортондағыларҙың бөтәһе лә күршелә генә төҙөлөп ятҡан интернат бинаһына — төҙөлөштә эшләгән эшселәр буфетына ашарға йөрөйҙәр, мин дә улар менән бергә шунда йөрөйөм һәм ирекһеҙҙән был чекистар менән танышып китергә тура килде. Буфеттағы ҡыҙҙар уларҙың икеһен дә ғариза яҙырға мәжбүр иттеләр. Шунда улар көлөшә-көлөшә икеһенә бер ғариза яҙып бирҙеләр. Юлда йөрөгәндә шундай етди кешеләр ҙә балаға әйләнә, күрәһең. Мин дә улар менән шунлыҡтан бик ҡыҙыҡһына башланым. Мин хатта улар менән бергә енәйәт эҙҙәре буйынса йөрөргә лә риза булыр инем. Ләкин был мөмкин түгел. Тик уларҙың мөмкин тиклем шул хаҡта һөйләүҙәрен ишетергә тырышам, ә улар үҙ эштәре хаҡында һөйләргә бик яратып та бөтмәйҙәр, бәлки, был ярамайҙыр ҙа, шуның өсөн бик төпсөнөп тә бармайым.

Ҡаршы бүлмәлә Өфөнән килеп тулған врач ҡатын-ҡыҙҙар, көлөшәләр, йырлайҙар. Ләкин уларҙың ниндәй эш башҡарып йөрөүҙәрен белмәйем әле. Өфөнән тағы, магнитофонын тотоп, радионың ауыл хужалығы бүлегенән Кучуков ағай килгән, уға кереп «маяҡтар», ауыл хәлдәре тураһында һөйләшеп ултыр-

ҙыҡ. Кис уны күрер алдынан ғына Жәлил Кейекбайға илле йәш тулыу айҡанлы радионан уның мәҡәләһен тапшырҙылар. Яҡшы мәҡәлә. Мин бик ҡыҙыҡһынып, Жәлил ағай өсөн ғорурланып тыңлап ултырҙым. Үҙебеҙҙең филология фәндәре докторы бит! Баҡһаң, мәҡәләнең авторы ла эргәлә генә булып сыҡты.

Юлаусылар йорто бына шул яҡтан яҡшы йорт. Көтөлмәгән осрашыуҙар, көтөлмәгән танышыуҙар, көтөлмәгән сюжет һыҙыҡтары — бөтәһен дә табырға мөмкин бында. Ятырға койка булмағанлыҡтан, диванда ятып йөрөһәм дә, мин был йорттан бик риза булып торам. Редакция ла ҡаршыла ғына, буфет та яҡын, киноға барып ҡайтыуы ла уңайлы. Тик бына яҙырға ғына ҡыйын. Кешеләрҙең йоҡлағанын көтөргә, утты таҫтамал менән ҡаплап ултырырға кәрәк. Ә яҙаһы нәмәләр күп, яҙаһы килә. Фөмүмән, яҙыу, редакция эше бик һағындырған!..

9 ноябрь.

Сталинградтың исемен дә алыштырғандар!..

Сталинград һүҙе лә тарихҡа ҡала. Белмәйем, был, бәлки, дөрөҫ эшләнәлер. Аҡылың менән уйлап ҡараһаң, быға үҙең ризалашҡан да кеүекһең, ләкин бөтә үткәндәр, яҙылған йөрәк тә бар шул... Ауырта йөрәк, әрней — ҡысҡыраһы килә, йә йөрәкһеҙ генә ҡалаһы килә... Бөтә үткәндәрҙе нисек итеп унан ҡутарып алып ташламаҡ кәрәк? Указ артынан указ, ҡарар артынан ҡарар. Белмәйем, бының шул тиклем ҡотолғоһоҙ тарихи кәрәге бар микән ни һуң? Үҙе бер бөйөк тарих тыуҙырған Сталинград инде хәҙер тарихҡа ғына тороп ҡала... Тарихта ла быны яңылыш бер нәмә, осраҡлы ғына хәл тип танырҙар микән ни? «Сталинград» тип үлгән, тарихты — үткәндәрҙе, бөгөнгөнө, киләсәкте ҡотҡарып үлгән миллиондар шәхес культы арҡаһында һәләк булғандарҙан аҙыраҡ булды микән ни? Әгәр ҙә беҙ, бөгөнгө тере кешеләр, бөтә үткәндәрҙе ошо үлгәндәр исеме менән генә үлсәһәк, беҙҙең бизмәндең артыҡ ябай булыуын күреп, киләсәктә тыуыр кешеләр беҙгә ни әйтерҙәр? Уларҙың тарихи бизмәне бит беҙҙекенән теүәлерәк буласаҡ...

Эйе, мәңге онотолмаҫлыҡ, иң ауыр, иң тупаҫ хаталар эшләнгән беҙҙең тормошта. Ләкин был бит әле беҙҙең бөтә тормошобоҙ хата булған тигән һүҙ түгел бит. Юҡһа, беҙ нисек шул хаталарҙы асыу дәрәжәһенә тиклем күтәрелер инек? Бер нисә йыл эсендәме? Юҡ, был хәл миңә аңлашылмай. Былай булыу мөмкин түгел! Беҙҙең ил имәненең — ниндәй генә дауылдарҙы күрмәгән ил имәненең! — тамырҙары былай ғына булмағандыр...

10 ноябрь.

Кисәге редактор урынбасары Всеволод Кочев «Обком секретары»н килтереп бирҙе. Эштән ҡайтҡас, иртәнге сәғәт 4-кә тиклем уҡып яттым. Был минең быйыл йыл башынан бирле уҡыған... икенсе романым!.. Был хаҡта яҙыуы ла оят хатта... Кешеләр аҙна һайын бер роман уҡыһанда, мин, әҙәбиәтсе, үҙем китаптар яҙырға хыялланған кеше, йылына өс-дүрт роман уҡып, шуға ла үҙемде бәхетле әҙәмгә һанап йөрөйөм. Берҙән-бер йыуанысым, үҙ-үҙемде яҡлай торған берҙән-бер һүҙем шул: йөҙ китап уҡыһансы бер китап уҡы ла йөҙ көн буйы уйлап, уны үҙеңдең бер тормош баҫҡысың ит!.. Әлбиттә, был бик аныһат аҡланыу... Шулай ҙа китап уҡыу — онотолмаҫ бер оло байрам ул миңә. Мин ашаһанда ла китап уҡып, уҡыһандың бөтәһен дә ашҡаҙан юлына ебәреүселәрҙән түгел. Күп уҡый алмау үкендергес, әлбиттә, ләкин аҙ ғына уҡыһандарым да үкенесheҙ. Бәлки, мин ғүмер буйы бер генә китап та яҙа алмам, ләкин бер генә яҙыусы ла минең мәғәнәһеҙ уҡыуыма әрнемәҫ...

Шулай ҙа миңә хәҙер бик ныҡ уҡырға кәрәк. Ике йыл буйы күргәндәргә йомғаҡ яһарға, үҙемде ғазаплаған һорауҙарға яуаптар эҙләргә, тормош күренештәрен дөйөмләштерергә һәм ныҡлы бер фекергә килергә, үҙемә лә ҙурыраҡ бер әйбергә тотонорға кәрәк. Яҙырға, яҙырға, яҙырға! — юҡһа, мин шартлаясаҡмын.

Кешеләрҙең маңлай күҙе күреп тә, күңел күҙе күрмәй үткән бөтә нәмәне тәрәнәйтергә, күрерлек итергә, шуларҙы уларҙың үҙҙәренә үҙҙәренеке итеп ҡайтарып бирергә — бик күптәргә үҙҙәренең кешелеген ҡайтарып бирергә кәрәк. Бына әҙәбиәттең бурысы — минең ғүмерлек бурысым. Бөтә нәмә кеше өсөн икән, уның үҙе өсөн икәнен кеше үҙе күрһен, үҙе тойһон, үҙе аңлаһын. Бөтә нәмә кеше бәхете өсөн икән, һәр кеше үҙ бәхетен уртаҡ бәхет итер өсөн ни тиклем яуаплы икәнлеген дә йәне-тәне менән тойорлоҡ булһын. Кешегә уның кешелек бәхетен төҙөшөргә кәрәк. Ғүмер ҡәҙерле, бер кем дә уны бушҡа әрәм итмәһен. Шуны тоймау арҡаһында ғына тормошта күпме кешеләрҙең ғүмере әрәмгә үтә — йә ул асылған ишекте асып йөрөй, йә бушты бушҡа бушатып, иләк менән һыу ташыу, йә ҡомдан арҡан ишеп, донъяға үҙен ошо арҡан менән генә бәйләп ҡуя ла: «Мин донъяның кендеге, донъя минең тирәлә әйләнәсәк», — тип уйлай...

Кочевтың секретары кеүек, һәр кемгә үҙ эшенең мәғәнәһен аңлатып бирәһе ине...

«Завтракали вместе. Василий Антонович подробнейшим образом расспрашивал Лисицына о работе партийной организации, Лисицын рассказывал о собраниях нескольких последних

месяцев, о тех вопросах, какие обсуждались, рассказывал о коммунистах, о том, как выполняют они поручения. Но было в его рассказах нечто такое, что настораживало Василия Антоновича. Получилось так, словно бы не парторг сидел перед Василием Антоновичем, не руководитель партийной организации колхоза, а кто-то вроде второго председателя правления, будто бы его двойник. О весеннем севе Лисицын рассказывал точно так же, как рассказывал вчера Сухин. О животноводстве — теми же словами. Одни и те же случаи называли и Сухин, и Лисицын, одни примеры, одни цифры.

— А вот вчера ваша молодежь предъявила счет на культуру. Серьезный счет. Культуры хотят люди. Что вы думаете об этом, товарищ Лисицын?

— Так видите ли, Василий Антонович, — начал было Лисицын, — культуру можно строить только на крепкой материальной базе. Прежде всего мы занимаемся хозяйством, ставим на ноги полеводство, животноводство...

— Это верно, это верно, — согласился В. А. — Но ведь у вас уже определенная — и не плохая — материальная база есть. Будет неправильно думать, что за культуру можно браться только тогда, когда материальные блага подымутся выше головы. — Он смерил ладонью над лбом. — Надо же вести работу параллельно. Чем больше материального, тем успешнее пойдет дело с культурой, и чем больше культуры, тем успешнее будут хозяйственные дела. Они друг друга станут подталкивать, тянуть, помогать одно другому. Разве не так?

— Да, оно конечно...

— С партийной учебой у вас, видите, неважно, с идейным воспитанием. А без этого какие мы коммунисты, без идейного вооружения! Так просто, хозяйственники. Вот я вам скажу, товарищ Лисицын. И вы, товарищ Сухин, послушайте. Наши противники, из капиталистического лагеря, обычно нажимают на то, что, вы, коммунисты, то есть мы с вами, не нашли такой, движущий прогресс, силы, которая была бы равна силе, действующей у них, силе частного предпринимательства, частной инициативы, когда есть конкуренция, которая заставляет-де напрягать творческую мысль и все время искать новое и новое, чтобы не отставать в этой борьбе частных инициатив и не слететь с круга, — словом, силе частной наживы, силе набивания кубышки. Человек, мол, так устроен, что дороже кубышки для него ничего на свете нет и быть не может. Сейчас они, между прочим, в связи с нашими успехами в ракетной, например, технике, в которой мы блестяще обогнали Америку, призадумываются: а нет ли у нас такой силы, которая не только равна их частничеству, но еще и превосходит его?

В. А. отставил пустой стакан, достал папиросу, закурил.

— И они в своем прозрении правы, такая сила есть у нас. Она возникла вместе с нашей марксистско-ленинской партией. Это сила идей, сила идейности. Почему же партия, выросшая из горстки людей, сумела стряхнуть с плеч народа и трехсотлетнюю династию Романовых, и авантюристическое правительство Керенского, сумела отбить контрреволюционный поход четырнадцати империалистических держав, разбила белогвардейщину Красновых, Деникиных, Врангеля, Юденичей, Колчаков, сумела неизмеримо поднять хозяйство страны, неизмеримо против того, что было при Николае Романове, то есть при частном предпринимательстве, сумела отбить нападение Гитлеровской Германии, отбить и разбить фашистские армии, уничтожить само государство Гитлера, сумела построить социализм и строит коммунизм? Почему? А потому, что сила кубышки, конечная, могучая сила, но сила идей, порождающая силу социалистического соревнования, выше нее. У нас есть такое ходячее изречение: на одном энтузиазме, дескать, ничего не построишь. Правильно, энтузиазм должен быть подкреплен материально. Но нельзя забывать и того, что поначалу-то советское государство строилось почти на одном энтузиазме. Ничего ведь не было — ни машин, ни оружия. Ничего, словом. А сейчас что уж тут говорить: «На одном энтузиазме!» Сейчас мы имеем мощную материальную базу, мы второе по экономической мощи государство в мире. Недалек тот день, будем первым государством. Мы с вами, во всяком случае, доживем до такого дня. Словом, сила у нас есть, сила идей, ее надо укреплять и наращивать, надо развертывать и развертывать социалистическое соревнование. Это наша первейшая обязанность, товарищ Лисицын. Они там, в капиталистическом мире, ошибаются — у нас тоже есть кубышка, но кубышка не частная, а общественная. Существует она, конечно, не как самоцель, а как средство для всестороннего, широкого развития человека, для удовлетворения его все растущих и растущих потребностей. Вот коммунизм — как вы его мыслите, товарищ председатель и товарищ парторг колхоза?

Сухин повертел на блюдце стакан с остывшим чаем, сказал:

— От каждого по способности, каждому по потребностям.

— А вы, товарищ Лисицын, как думаете?

— Да так же, как Иван Савельевич.

— Вы правильно оба думаете, но потребности ведь мыслятся для человека не только в материальном. Если бы человек был просто животное, ему бы нужна была только еда в изобилии, да поскольку он, в отличие от других животных, бесшерстный, то и одежда в изобилии, на все сезоны разная, а еще,

поскольку он склонен к комфорту, разные предметы домашнего обихода, и так далее. Но он же существо разумное, существо не только материальной, а и духовной жизни. Поэтому потребность у него тоже не только в изобилии материального, но и в изобилии духовного. Мы вчера здесь это явственно слышали. Правда, товарищ Сухин? Ну вот, почему же мы не можем себе представить человека, духовная потребность которого заботиться о других, помогать другим, работать для других? Вы, товарищ Сухин, вы, товарищ Лисицын, неся свои нелегкие обязанности — председателя и парторга, работая для других, заботясь о других, вы много откладываете в свою кубышку?

Лисицын только засмеялся. Сухин сказал:

— Был бы я не председателем, а бригадиром, или даже рядовым колхозником, я бы заработал больше. Я работы не боюсь, люблю работу. У нас свинари каждый вдвое против председателя зарабатывают. Доярки есть — дай боже заработки!

— Ну вот, а доставляет вам хоть какое-нибудь удовлетворение ваша работа председателя?

— Так ведь когда дела идут хорошо...

— Ну, а если плохо? Бросить хочется?

— Бывает, и бросил бы. Но больше бывает иначе — сделать хочется, чтобы было хорошо. Ведь у каждого, как говорится, гордость своя есть. Что, думаешь, ты хуже других, что ли?

— И ночь спать не будешь, если дело требует, и про выходные забудешь, и про все другое? — расспрашивал Василий Антонович.

— А как же! Забудешь про все, это точно.

— Ну вот, а они думают, что только во имя кубышки можно забыть про все иное, только во имя нее не спать ночей, напрягать все силы — мускульные и умственные! Нет, наш двигатель сильнее их двигателя».

Шәхес культы поэзияла панегиризм стилен ҡанунлаштырҙы. Бер кешегә табыныу шулай уҡ бер төрлөлөк күренешен тыуҙырҙы. Ижади эш шаблонға әйләнде. Ә ҡайҙа шаблон, унда инде ижад юҡ тигән һүҙ. Бөтә кеше өсөн дә бер кеше уйлай икән, башҡа кешеләргә уйлап тораһы юҡ, ә бер кеше әйткәнде ятларға ғына кәрәк! Шағирҙар ниндәйҙер бер ҡот осҡос тутыйғошҡа әйләнделәр. Кешене хайуандан айырып торған аҡыл, фекер йөрөтөү ғәҙәттән тыш ғәрипләнде һәм бындай яһалмалыҡ беҙҙең иң тәбиғи хистәребеҙҙе лә яһалма кисерештәр менән алмаштырҙы һәм беҙ тәбиғи тормош дөрөҫлөгөнән ситкә киттек, әҙәбиәттең төп предметын — кешене оноттоҡ! — Был бик, бик үкенесле хәҡиҡәт!.. Бер кешенең ғәҙәттән тыш көсөнә табыныуҙың иң ҙур фажиғәһе бына шунда инде...

Хәҙер быны йәнең-тәнең менән аңлап тояһың... Башта ғазаплы уйҙар, йөрәктә ғазаплы кисерештәр. Нисек итеп быларҙан ҡотолорға? Нисек итеп уйлай башларға? Нисек итеп яҙырға?

Ысын күңелдән ышанып, алдандыҡ бит беҙ!.. Бөтә йөрәктән ышандыҡ!.. Шуның өсөн хәҙер дөрөҫлөккә ышаныуы ла бик ауыр!.. Ышаныу тойғоһо хәҙер бик ныҡ ҡаҡшаны. Алданмайынса ышаныу өсөн хәҙер бик ҙур белем, бик ҙур ихтыяр көсө һәм бик күп ваҡыт кәрәк...

Ләкин тормош беҙҙе көтөп тормай. Ваҡытты ҡыҫырға, бик ныҡ ашығырға кәрәк. Ә ашыҡҡанда абынып алмайынса булмай. Хаталар күп буласаҡ. Хәҙер дөрөҫлөктө аҙым һайын һуғышып алырға кәрәк. Сөнки кешеләрҙә күнегеү ғәҙәте, элекесә «уйлау» ғәҙәте бик көслө. Күп көс түгергә тура килер!..

Принципиаль булырға өйрәнмәгәнбеҙ. Шуның өсөн бер яҡтан икенсе яҡҡа аумаҡайлап ҡыҫҡырыныусылар ҙа күп. Үҙеңдең хаталарыңды таныу ҡыйын, ә бөтә ғәйепте бер кеше өҫтөнә өйөү еңелерәк. Кешеләрҙең теле шундай сиселеп китте хәҙер, хатта улар нимә һөйләгәндәрен үҙҙәре лә белмәйҙәр, ҡыҫҡыралар, күбектәрен сәсеп бөтә үтелгәндәргә лә төкөрәләр...

Лермонтовтың һүҙҙәре хәтергә килә: былар барыһы көлкө генә булыр ине, әгәр бик күңелһеҙ булмаһа!.. Телһеҙ хәҙер болтунға әйләнде. Был хәҙер бөтә мещандарға, бөтә обывателдәргә бер һағыҙ булды инде — сәйнәйҙәр ҙә сәйнәйҙәр.

Был күренеште күреү бик ауыр!.. Нығытып уйлап ҡараһаң, беҙҙең көндәр бик ауыр заманға тура килде. Бер ҡараһаң — героика, бер ҡараһаң — трагедия (история и истерия!). Бир ҡулыңды миңә, тарих!..

Күҙ ҡараһы кеүек һаҡла, шағир,
Тарих дөрөҫлөгөн йырыңда.
Сөнки ул тарихты халҡың ҡорған
Хыялланып хаҡлыҡ турында!
Ҡан-йәш түгеп алған азатлыҡты
Алыштырма ғәйбәт иркенә.
Барыбер һин матур булалмаҫһың,
Ҡарамаһаң халҡың күркенә.
Бер генә юл ысын дөрөҫлөккә,
Ул да булһа — яҡын киләсәк.
Йөрәтһәң һин йөрәгеңдә уны,
Тик шул ғына емеш бирәсәк.
Тик шул ғына йөрәк йырҙарыңдың
Һаҡлап ҡалыр ысын ғүмерен.
Табынма һин төрлө атайҙарға,
Булған саҡта әсәң — үҙ ерең!..

1962

Сарланғанда ҡәләм осҡайы

1 ғинуар.

Яңы яуған ҡарға баҫып,
Тағы яңы йыл килә!...
Сыҡһам уны ҡаршыларға,
Йә моңаям, йә көләм.
Ябалаҡлап яуа ҡарҙар,
Битемә ҡунып ирей.
Иҫке йылдан яңы йылға
Улар ҙа күсеп йөрөй.
Әллә нисек сәйер миңә
Үткәндәрҙе оҙатыу.
Мөмкинме һуң был йылдарҙы
Тик бер аҙға оҙайтыу?..
Ябалаҡлап яуа ҡарҙар,
Үтте тағы бер йылым.
Эшләнмәгән күпме эш бар,
Ә ҡыҫҡа ғүмер юлым...
Бушҡа үткән көндәрең бит
Томанлы бер төш кенә.
Ашыҡ яҡшы эш эшләргә,
Бәхетле өн — эш кенә!
Ҡар һарыған аҡ ботаҡтар,
Әйтерһең, сабый ҡулы!
Юҡ, моңайма, шатлан, тиеп
Ҡул һуҙа һымаҡ улым...

Яңы йылды бына ошо иҫке йыр менән ҡаршыланым... Инде икенсе улым, бер йәшлек Азаматым, ҡул һуҙа. Уға яңы йыл көнөндә бер йәш тулды!.. Хәҙер инде ул да ауа-түнә алпантолпан килеп йөрөгән бер малай. Бәләкәй генә ҡулдары менән ике ҡолағына баҫып, ул да донъяның бер тынып, бер шаулап тороуын тыңлай башланы. Иртәле-кисле ҡулдарын болғап оҙатып ҡала, ҡаршы ала. Төш ваҡытында әсәһе менән минең эштән ҡайтҡанды ҡарап көтөп тора ла, ишектән килеп кереү

менән аяҡтарыма килеп йәбешә, күтәреп алып, үҙен һикертеүҙе талап итә... Ә Салауат ағаһы инде саңғыла йөрөй, утын ташый, минең менән бергәләп, әгәр йүкә сөйҙө нығыраҡ ҡаҡһаң, бик дәртләнеп, утын быса, хәҙер хәрефтәрҙе лә яҡшы яҙа башланы. Йәренгә, бәлки, мәктәпкә лә китер...

Бына бит нисек үтә ғүмер!

Ә мин әле һаман күңел ҡәнәғәтләнерлек бер эш тә эшләй алғаным юҡ. Редакцияла эшләү бөтә ваҡытты ала. Арып ҡайтаһың эштән. Эшенән бигерәк кешеләрҙең ваҡлығына йәнең көйөп арыйһың, ә теләгән нәмәңде эшләп тә булмай. Өйгә ҡайтһаң, өйҙә лә эшләргә мөмкинлек юҡ, тәртипһеҙлек, донъя мәшәҡәттәре, ығы-зығы йәнде иҙә. Бала-сағаларҙың йоҡлағанын көтөп, төндө көтәһең. Берәй нәмә яҙырға ултырыу менән төнө лә үтеп китә... Һәр төндө йоҡоһоҙ үткәреү ҙә мөмкин түгел. Бына шулай итеп, һәр бер яҙған юлың донъя ваҡлыктары менән, үҙ-үҙең менән бер өҙлөкһөҙ көрәшеү нәтижәһендә генә яулап алына...

Иң яҡшы йылдар шулай бушҡа әрәм була! Үҙеңдең донъяла йәшәүеңде аҡларлыҡ та эшләй алмағас, көн һайын йыйылып килгән йөрәк әрнеүҙәреңә һәр бер яңы йылды ҡаршылаған һайын бына шундай моңһоу уйҙар уйларға мәжбүр итә. Күңелде хатта ҡуркыу тойғоһо биләй башлай...

Ә илдә ниндәй үҙгәреш! Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яңылыҡтар!.. Донъя ҙур бер һикереш алдында тора.

Шуларҙы үҙең бөтә йәнең-тәнең менән тоя тороп, бөтә хыялдарың менән киләсәктә йәшәп тә, үҙеңдең ошо бөгөнгөңә ҡарауҙан тағы ла күңелһеҙерәк булып китә.

Бәлки, мин үҙ тормошомдо ҡора белмәгәнмендер инде. Эшләгән эштәрҙе генә лә күрһәтә белмәү мине һаман да ошо ҡыйын хәлдә ҡалдырып килә.

Бына Өфөләге һуңғы сығыш хаҡында бөтә газеталарҙа ла мәҡтәп яҙған булдылар. Ә минең ниндәй шарттарҙа эшләүем, нисек йәшәүем хаҡында кем генә белә инде. Ә ул шиғырҙар бит эш араһында ғына, эйәр өҫтөндә генә, өҙөп-йолҡоп тапҡан ваҡыт эсендә генә яҙылған нәмәләр. Әллә ни яҡшы ла булмаһын, ләкин йөрәк ҡаны менән яҙылған бит улар.

Әгәр ҙә миндә талант тигән нәмә бар икән, мин уны бындай шарттарҙа үҫтереү өсөн түгел, ә тик һаҡлап ҡалыу өсөн генә, үлтермәү өсөн генә һуғыша алам...

Күптәр шулай һәләк булғандарҙыр инде. Минеңсә, донъяға күренгән таланттарҙан күренмәй ҡалғандары күберәк булғандыр.

Бына япон шағиры Исикава Такубоку әйткәнсә, тормошта икенсе ҡабатланмай торған шундай айырым бер мәлдәр була, уларҙы ҡулдан ысҡындырмай, шунда уҡ бөтә нәмәне онотоп

яҙырға ултырырға кәрәк. Был һинең иң бәхетле сәғәттәрең!.. Ләкин уларҙың күбеһе һәләк булып ҡала. Ни тиклем уларҙы күберәк юғалтһаң, шул тиклем үк үҙеңдең киләсәгеңде лә юғалтаһың.

Ул сәғәттәрҙе тормоштоң рәхимһеҙлеге, үҙ тирәңдәге кешеләрҙең тупаҫ ғәмһеҙлеге һәләк итә. Ә улар үҙҙәре һин эшләгәндең бөртөгөн генә эшләргә лә һәләтһеҙ була...

Ниндәй ғәҙелһеҙлек!

Иҫ киткес нескә шағир Исикаваны ғүмер буйы ошо шәфҡәтһеҙ бер ғәмһеҙлек, мохтажлыҡ эҙәрләй... Ә үҙе ул ниндәй ынйылар һибә донъяға!..

Вдруг безотчетно вспомнилось мне,
Как падали капли дождя
На светло-лиловые цветы
Картофеля на полях...
Льет на камни в столице дождь!

Үҙе аслыҡты татымаған кеше, әлбиттә, шулай яҙа алмаҫ ине. Ас ҡәҙерен туҡ беләме ни!..

Был шиғырҙы бөтә нескәлеге, бөтә тәрәнлеге менән тик уның тормошон белгән һәм был тормошто үҙе татыған кеше генә тойорға, аңларға мөмкин.

Фәҙәти бер шиғыр кеүек уны уйламайынса уҡып та, аңлап та, тойоп та булмай.

Унда ни тиклем нескә поэзия булыуын тойоу өсөн үҙеңә лә ижад итергә кәрәк. Шағир һине шул ижадҡа әҙерләй.

Әҙерәк кенә беҙҙең Даяндар шундай шиғырҙарҙы уҡыһалар ине икән!..

Иҫ киткес поэзия был!

Һәм шул поэзияны тыуҙырыусы ғүмер буйы бер... өй хаҡында хыялланып үлһен, имеш..

Ул үлгәс, иптәше Есано Тэккан шиғыр яҙа:

Да, ты рано угас,
Но имя твое, Такубоку,
В грядущих веках не умрет,
Как счастлив такой удел
И как бесконечно печален!

Миңә һәр саҡ ауыр булғанда, шул ауырлыҡты ултырып шиғыр яҙырлыҡ бер бүлмәм булмауҙа күреп, мин уның «Өй»өн уҡыйым.

Едва открыв глаза сегодня утром,
Опять — который раз! —
Я вдруг подумал:
«Как хочется иметь мне дом,

Который я бы мог назвать своим!»
Я, умываясь, все о нем мечтал,
Мечтал и после трудового дня,
Прихлебывая свой вечерний чай,
Покуривая папиросу...
Лиловый дым плыл в воздухе тихонько,
И передо мной
Плыла моя мечта,
Напрасная и грустная мечта!
Я с толком выбрал место для него:
От станции не слишком далеко,
С деревней тихой по соседству.
Уютный домик в европейском стиле.
Без лишних украшений, невысокий,
Но лестница широкая,
Балкон
И светлый кабинет!
Да — не забыть бы! —
Такие стулья, чтоб сидеть удобно.
О, много, много раз за эти годы
Во всех подробностях,
Меняя каждый раз
Расположенье комнат понемногу,
Я все отчетливее рисовал
В своем воображении этот дом!
Уставившись рассеянно глазами
На ярко-белый абажур над лампой,
Я живо представлять себе люблю,
Как будет в этом доме жить чудесно!
И в тесной комнатушке, где жена
Ребенка плачущего кормит грудью,
Я в угол отворачиваюсь вдруг,
Чтоб спрятать беспричинную улыбку.
Пусть перед домом будет двор широкий,
И пусть трава растет на нем привольно.
С приходом лета
Звонкий летний дождь
Польется на ее густые листья,
А там, в углу двора,
Сосну я посажу,
Под ней поставлю белую скамейку,
Дождь отшумит, и буду я в тени
Покуривать египетский табак,
С таким густым, таким приятным дымом!
Я буду разрезать неторопливо

Страницы новых книг,
Которые мне будут посылать
От «Мурудзэна» чуть не ежедневно.
Так я смогу блаженно отдыхать,
Пока меня не позовут к обеду,
Там на свободе я смогу созвать
К себе всех деревенских ребятишек...
О, сколько я историй расскажу!
Какие будут круглые глаза!
Заслушавшись, дышать забудут дети...
Напрасная и грустная мечта!
Я разлучился с юностью моей,
Устал я каждый день с нуждой бороться,
Но если ты, и сам не знаю как,
Меня, измученного, посетила
Здесь в сутолоке городской,
Напрасная, и грустная моя,
И бесконечно милая мечта,
Мне было б жалко потерять тебя!
О да, я знаю, что тебе не сбыться.
Я столько раз
Тобою был обманут,
Но ничего не говоря жене,
Я все гляжу на белый абажур.
Таким же взглядом, как, бывало,
В дни юности на девушку глядел,
Когда в нее я тайно был влюблен,
И думаю в молчанье одиноко
Все о тебе, любимая мечта!..

Яңы йыл кисенән алда культура йортонда уҡыусы балаларҙың маскарадын ҡарап, күңелдәге моңһоу уйҙар тағы ла артып ҡайтты. Был маскарадта, әлбиттә, моңһоу булған бер ни ҙә юҡ ине. Шулай ҙа бик моңһоу булды.

Бөтөнләй яңы балалыҡ, яңы йәшлек!.. Бөтәһе лә яҡшы кейемдәләр — донъя халыҡтарының төрлө костюмдарын кейеп, шыршы тирәләй әйләнәләр, бейейҙәр, йырлайҙар, көлөшәләр, фотоға төшәләр. Бөтәһе лә шат, бөтәһе лә бәхетле.

Ҡапыл шул саҡ бер бәләкәй генә нәмә минең күңелде өтөп алды: бер малай ҡайҙандыр табып алып, хәҙер инде бөтөнләй кейелмәй торған кейем кейеп килгән. Ул да булһа сабата!..

Шунда шул сабатаны күреп, бөтә үткәндәр — сабата кейеп үткән балалыҡ, сабата кейеп килгән тәүге мөхәббәт, сабата кейеп татыған бөтә ыҙалар күҙ алдыма килеп баҫты ла... хыялым менән бөтөнләй икенсе бер маскарадты кисереп ултырҙым...

Яҙырға ине был хаҡта! Яҙам тип өйгә ашҡынып ҡайтһам, яҙыр мөмкинлек булмауын күреп, бик ныҡ кисерергә тура килде.

Башланым да ташланым.

Уйлаған эш, икенсе бер илһам килгәнен көтөп, ятып ҡалды. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк тә бит ни, булмай — ҡулдарың бәйле...

Газетаның Яңы йыл номерын бөтөнләй әҙерлекһеҙ сығарҙыҡ. Минең Яңы йыл номерына тип әҙерләгән Зоя Космодемьянская тураһындағы очеркты редактор төшөрөп ҡалдырҙы.

— Темаһы менән йәбешеп етмәй,— тине. Мин дә:

— Йәбешеп етмәһә, йәбештереп тороп булмай инде,— тип, ныҡышып торманым, карикатуралар аҫтына шиғыр текстары яҙып булһа ла номерҙа ҡатнашырға булдым. Шунда уҡ улар наборға китте.

Бынан алда карикатуралар ҡарап ултырғанда, редактор бүлеккә инеп:

— Карикатуралар ҡарап ултырып ҡына эш бармаҫ бит әле,— тип сыҡҡайны, хәҙер, кәмә ҡомға килеп терәлгәс, бер ни ҙә өндәшмәне, хатта руссаға тәржемә итеү өсөн үҙе лә рифмалар табырға маташып ҡараны. Ләкин поэзия яғы самалы булып сыҡҡас, өҫтәл тирәһендә уранҡылап йөрөүҙән башҡа, был тәңгәлдә үҙенән бер өлөш тә «йәбештерә» алманы. Шулай ҙа төрлө әрәмтамаҡ, ялҡауҙар тураһындағы:

«Һәр урында табылыр,
Йөҙө шунан танылыр:
Аш янында ат кеүек,
Эш янында ят кеүек»

тигән куплеттағы «һәр урында» һүҙенә бәйләнеп:

— Былай дөрөҫ булып бөтмәҫ бит әле,— тине. — Былай эш ҙурға китмәйме? Һәр урында, һәр урында... Юҡ, быны ҡайһы урында тип алыштырырға кәрәк булыр.

— Бәй, әрәмтамаҡтарҙы һәр урын табырға була инде...

— Булыуын була ла, был бит дөйөмләштереү булып килеп сыға түгелме?

— Бәлки, әҙәбиәттә бит дөйөмләштереү тигән нәмә бар. Бер-ике бөртөк әрәмтамаҡ өсөн шиғыр ҙа яҙып торорға кәрәкмәй ул саҡта.

— Яҙырға кәрәк, шулай ҙа «бөтә урында» тип әйтеү хата булыр.

— Ярай, «әле беҙҙә табылыр» булһын. Страхованиеһыҙ булмайҙыр инде,— тип, мин артыҡ һүҙ көрәштереп торманым.

Шулай итеп, текстар әҙер булды. «Яңы йылда бындайҙарға урын булмаһын».

Күҙ буяусыға

Күҙ буяусы ҡырҡ алдарҙың
Һүҙҙә эше ал да гөл:
Тауығын да тауис итер,
Тик тауыҡ тауис түгел.

Иҫереп һуғышыусыға

Бар аҡылы йоҙроҡта,
Аҡ-ҡара күрмәҫ күҙе,
Теле һыймаҫ ауыҙына,
Эт тә ашамаҫ һүҙен.

Волокитасыға

— Ашарға ҡайт,— тиеп уға
Килгән икән ҡатыны:
— Фариза яҙ,— тигән ти ул,—
Берҙе түгел, алтыны.

Һуңғыһы ярайһы ғына сыҡты буғай. Руссаһын:

Встретить можно его везде,
В бумажном сидит он гнезде,
Зовет жена его на обед,
А он? Без заявления — нет! —

тип тәржемә иткән булдым. Ә «Күҙ буяусыға»:

Втирать очки мастер он:
У него и муха — слон! —

тинем. Ҡалғандарының русса текстары бар ине:

Для работы нет у него охоты.
За один же присест
Он барана съест.

Сенька Хамов бьет баклуши,
Слово скажет — вянут уши.

Шуларҙан да әҙерәк дүртенсе биткә йән кереп ҡалғандай булды.

2 ғинуар.

Иртән газетаны уҡып:
— Шәп сыҡҡан бит,— тинеләр.

3 ғинуар.

Редакцияға килгән материалдарҙың иҫәбен алып барыу өсөн, яңы йылға яңы кенәгә төҙөнөм. Элекке форманы бер аҙ үҙгәртергә тура килде.

«Һәнәк»тә минең тәүге шиғыр «Фәҙәт» баҫылып сыҡҡан. Ғабдулхаҡ Ғәйнуллин уҡып:

— Үткер бит әй,— тигән булды.

Минең үҙемә лә яңы жанрҙа яҙылған шиғырҙар араһынан бынығы ярайһы ғына кеүек. Шул шиғырҙан башлап минең, бәлки, сатирик булыуым да ғәҙәткә инеп китер. Көлмәйенсә лә булмай был донъяла!..

Фәҙәт

Яратты ул түрәлекте,
Белде түрәлек тәмен.
Түрә булыуҙа күрҙе ул
Йәшәүҙең бөтә йәмен.
Көн һайын ул кешеләргә
Әмер яҙҙы ҡоромдан:
Бирһен алды, бирһен ҡуйҙы
Алыштырып урындан.
Бер көн килеп ул үҙе лә
Төшөрөлдө түбәнгә.
Тик ғәҙәте тороп ҡалды...
Нишләһен һуң? Өйрәнгән!..
Бүлмәһендә яңғыҙ ҡалһа,
Әмер яҙа ҡоромдан:
Ултырғыстарын булһа ла
Алыштыра урындан!..

Минең сатирик булып киткәнде Башгосиздатҡа ла илтеп еткергәндәр, ахырыһы. Директор Миңнеғәлиевтан плакаттар аҫтына шиғыр-текстар ебәреүҙе һорап яҙған ҡош телендәй хат та килеп төштө. Ебәрергә кәрәк! Маяковский тиклем Маяковский ҙа быны ҡара эшкә һанамаған бит. Йәнгә тейгән бөтә нәмәләрҙән көлөргә кәрәк хәҙер. Көлмәгәндәрҙең, әйҙә, ауыҙы ҡыйыш булһын! Гоголь күҙ йәш аралаш та көлә белгән. Көлөү — ҙур көс. Тик көлә белеп көл, үҙеңдән көлөрлөк булмаһын.

Был хаҡта Сергей Михалков бик дөрөҫ әйткән:

«Сатирика, если сравнивать с рядом войск, можно сравнить с сапером. И тот, и другой должны ставить мины, на которых будет подрываться противник. И сатирик, и сапер обязаны хо-

рошо понимать всю ответственность своей профессии, умело владеть своим оружием и минировать только там, где положено, иначе можно и подорваться на собственной мине».

Ә дошмандар шуны ғына көтөп тора. Идеологик кәңәшмәлә Евтушенконың «Бабий яр» шиғырын тағы телгә алдылар. Чаковскийҙың телмәрендә: «В частности, они использовали политически вредное стихотворение Евг. Евтушенко «Бабий яр» и недостойный писателя-интернационалиста ответ ему А. Маркова»,— тиелгән.

С. И. Павловтың «Готовить краснозвездную гвардию» тигән сығышында был идеологик көрәш тураһында бик ҡыҙыҡлы һүҙҙәр бар.

В. Аксенов, А. Кузнецов һәм С. Рассадиндың Тулала студент-йәштәр менән осрашыуҙа үҙҙәрен бик насар тотоуы һәм К. Паустовский кеүек оло яҙыусының бындай пижондарға килешеп ҡарауы тураһында Павлов бик үкенеп һөйләй.

Беҙҙең Үҙәк комитетта булған кәңәшмәне лә телгә алған.

«Совсем недавно ЦК комсомола собирал совещание молодых поэтов. Мы, откровенно говоря, немного волновались, о чем будет разговор на этом совещании. Разговор был очень хороший. Собрались представители нашей молодой поэзии, поэты из всех союзных республик. Они дали хороший бой вредным тенденциям в литературе. Наши молодые литераторы единодушно отвергли попытки выдавать скептиков, всякого рода молодых неврастеников или бездельников за современное поколение молодежи.

Я хочу прочесть стихотворение Егора Полянского из Курска, адресованное тем, кто проповедует нигилизм и нытье всяких «хлюпиков»,— тип Павлов шиғыр ҙа уҡыған икән. Яҡшы! Комсомолдың шиғырға тотоноуы бик шатландыра.

Я так скажу твоим знакомым —
Пустое видя шутовство.
Вам, кроме собственных дипломов,
Не защищавших ничего.
Эй, вы, с походочкой утиной,
Глаза ухмылкой не мозоль!
В России хватит нафталина,
Чтоб навсегда исчезла моль!

Был кәңәшмә тураһында мин һаман да яҙа алмайым әле. Бик ныҡлап бер яҙып сығырға ине!

Был кәңәшмә беҙҙең обком вәкиленең күҙен асып ҡайтарҙы, ләкин ни өсөндөр бергә һөйләшкән эштәр эшләнмәй әле. Йәш яҙыусылар кәңәшмәһе булмағанға күпме ваҡыт үтеп китте инде хәҙер!..

14 ғинуар.

Рая Носратуллина тураһындағы зарисовкам бағылып сыҡты. Ләкин шатлығы әҙ булды. Был яҙма ла өҙөп-йолҡоп урынлаштырылды: башы клише менән 2-се биттә, аҙағы —4-се биттә. Һаман да шул секретарҙың мәғәнәһеҙлеге. Үҙе иртән бүлеккә ингән дә:

— Их, әрәм иттек! — тип торған була.

Мин шулай тип әйткән һүҙенә лә риза булдым.

Ярай, был материалды яңынан эшләп радиоға ебәрермен инде. Бәлки, «Ленинсы»ла ла баҫырҙар. Беҙҙә «Районда беренсе» исемендә сыҡты. «Көндәштәр» итергә кәрәк булыр.

15 ғинуар.

«Районда беренсе» «Көндәштәр»гә әйләнде. Руссаға тәржемә итеп бөтөрмәнем. Башҡортсаһы әҙер.

Көндәштәр

Районда беренсе!..

Әйтеүе генә аңһат! Ә райондағы өс йөҙләп һауынсы араһында беренсе булыу уйын эш түгел.

Быныҡ өсөн Раяға күпме тырышырға, күпме көс һалырға тура килгәйне, белһә, ул тик үҙе генә беләлер...

Етмәһә, уның «Һарғамыш» совхозында ғына түгел, ә бөтә Салауат районында иң алдынғы һауынсы булып, сая көндәше бар!

Клава менән ярышыу хәтәрерәк. Ни тиһәң дә, Клава туғыҙ йыл эшләгән тәжрибәле һауынсы. Ә Рая әле дүртенсе йыл ғына эшләй. Уҙған йылдарҙа Клава беренселекте тотоп килгәндә, Рая Носратуллина унан байтаҡ ҡалыша ине.

Элекке йыл Клава һәр һауын һыйырҙан уртаса 3114-әр кг һөт һауып алһа, Рая —2476-шарҙы алды. Әлбиттә, ярышҡас, шундайҙар менән ярышырға кәрәк! «Аҫылынһаң да аҫылын ағастың аҫылына» тигәндәр бит боронғолар...

Ә ярыш ярыш инде ул: быйыл районда Рая беренсе! Клаванан ул һикһән дүрт килограмға артығыраҡ һауҙы. Йөкләмәләрен икеһе лә арттырып үтәнеләр: Клава йөкләмәне 2700 алып, уны 2837 килограмға, ә Рая —2800 алып, 2921 килограмға үтәне.

— Тағы әҙерәк тырышҡанда, өс меңгә еткерергә булыр ине лә, үҙем ялға киткәндә, һөт кәмеберәк ҡуйҙы шул,— ти Рая, үкенеп. Әйтерһең, ял итергә лә ярамай! Ләкин уныһыҙ ҙа булмай бит: батырға ла ял кәрәк.

Хәйер, Клава ла бер аҙ ваҡыт һыйырҙарын үҙе һаумай торҙо. Ул да шул ике арала байтаҡ һөтөн юғалтып ҡуйҙы.

Тимәк, һөт, ысынлап та, һыйырҙың телендә генә түгел, ә һауынсының ҡулында ла икән шул.

Күпме эшләргә тура килә уларға! Ә Рая бик иртә эшләй башланы.

Ҡәниф ағай менән Ғәйникамал апайҙың балалары итәк тулы булды. Рая бишенсе бала ине. Атаһы ауырыу булып, әсәһе лә эшләп ялсыта алмағас, алты кластан ары ул уҡый ҙа алманы. Тотто ла совхозда эшләй башланы. Тәүҙә төрлө эштә йөрөнө. Аҙаҡ мал ҡараусы Әнис ағаһы янына фермаға барып, бер йыл быҙау ҡарағас, малсылыҡҡа бөтә ил буйынса йәштәр тотонғанда, ул да һауынсы булып китте. Уның артынан һеңлеһе Венера ла эйәрҙе. Бер өйҙән өсәүләп эшләй башланылар.

Ул көндәрҙе хәтерләп:

— Башта эшләй алмам тип ҡурҡтым,— тип һөйләй Рая.— Ике көн эшләгәс тә, был эштән ваз кисергә булдым. Эштән сығарыуҙарын һорап, контораға килдем. Бик ҡулдар һыҙлай ине шул, кис йоҡларға ятҡанда түҙер әмәл дә юҡ. Бер юлы ун һигеҙ һыйыр бирҙеләр бит... Зоотехник өгөтләп тә, үртәп тә, йүкә сөй ҡағып та күндерҙе тәки. Ярай, өйрәнеп китерһең әле, тине. Аҙаҡ, бер биш көн эшләгәс, ысынлап та, өйрәнеп киттем. Ул йылды 2450-шәр килограмм һауҙым, тик йөкләмәмде үтәп булманы. Группала ҡарт һыйырҙар бар ине шул...

— Ә хәҙер нисек әле?

— Хәҙер яҡшы. Тик бер генә оло һыйыр бар — бынау Маковка. Тиле һөт ваҡытында ла һөтө биш литрҙан артмай. Һөтмө инде ул? Ә үҙе әллә ниндәй холоҡһоҙ тағы: быҙаулаһа, яҡын барырлыҡ та түгел, тибешә...

— Ә Клава менән нишләп боҙолошоп тораһығыҙ әле?

— Шул бер анау Актриса тигән һыйыр арҡаһында инде... Игеҙ быҙау быҙауланы ла, ябығыраҡ булғас, өҫтәлмә аҙыҡ биреүҙәрен һораным. Управляющий көнөнә дүртәр кило ондо артыҡ бирергә ҡушты. Бына шуға инде Клава һүҙ итә. Имеш, яҡлашалар... Улайға ҡалһа, үҙенең Фиалкаһына ул да ала ла бит ни...

Күрәһең, эш барышында бындай ғына ҡаршылыҡтар булмай булмайҙыр инде...

— Шулай ҙа тыныс, һыйышып йәшәү еңәсәк,— ти гурт бригадиры Мөхәмәтнур Хәбибуллин.— Ә эш яғынан икеһе лә ут кеүек улар. Һыйырҙары өсөн үлеп баралар. Әҙ генә етмәй торһа, һүҙҙәрен күтәреү еңел түгел... Юҡты ла таптырырҙар. Тик быйыл аҙыҡ етерлек. Әнә, силосы ла бешкән балан кеүек

аңҡып ята бит... Һыйырҙары ла яҡшы. Икеһенең дә быҙаулай торған һыйырҙар. Ярышырға мөмкин!..

— Өс меңде бирәсәкмен! — тип ҡуйҙы Клава, һәнәген ныҡ ҡаҙап һәм йылт итеп һырмаһын кейеп алды.

— Ҡара, Клава, был һүҙеңде бөтә район ишетәсәк бит? — тигәс, ул бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Ничего, һүҙҙе елгә осорған юҡ әле,— тип, ишекте шар асып, сығып та китте. Асыҡ ишектән тышҡа йылы быу бөркөлөп, ферма нисектер тәрән һулап ҡуйғандай булды. Тышта Клаваның артынан «тиҙерәк, тиҙерәк» тигән кеүек, ҡар ғына шығырлап ҡалды...

Тик Рая Носратуллина ла һүҙен һәнәк менән һыуға яҙа торғандарҙан түгел. Тимәк, ярыш ҡаты буласаҡ быйыл!..

— Өс меңде ни мин дә алам! — тип, ул да «көндәшенең» йөкләмәһен артмаҡлап, төшкөгә ҡайтып китте. Уның аяҡ аҫтынан да «тиҙерәк, тиҙерәк» тип ҡар шығырлап ҡалды.

Сәмләнделәр ҡыҙҙар!

Һауынсыларын оҙатҡас:

— Ҡыштырлаймы ҡыш та ҡомалаҡтар? — тип ҡуйҙы Мөхәмәтнур ҙа, күҙен ҡыҫып.

Эйе, Раяның һүҙҙәре лә ныҡлы, ысын комсомолка һүҙҙәре ине шул. Бригадир менән хушлашып, мин дә ҡайтыу яғына ыңғайланым. Юҡһа, буран көсәйергә тора. Һепертмә ҡар ҡыҙҙарҙың эҙен күмеп тә өлгөргән...

Шәп ҡыҙҙар!

Уҡытаһы ине уларҙы! Саҡ ҡына булһа ла эштәрен еңеләйтәһе ине.

Ләкин беҙ был хаҡта аҙ уйлайбыҙ шул. «Ит, һөт!» — тибеҙ, ә шуларҙы биргән кешеләр тураһында ҡайғыртыу етмәй әле.

Был тәңгәлдә райкомдар ҙа шул ҡыҙҙар кеүек ярышып эшләһәләр, совхоз идараһында ла һүҙҙе аҙыраҡ һөйләһәләр, был ҡыҙҙарҙың ҡулдарына аппараттар тоттороп, китап уҡырға ла, киске мәктәпкә йөрөргә лә, сәхнәгә күтәрелергә лә күберәк ваҡыт тейер ине бит...

Ләкин әлеге шул «ләкин» йәнгә тейә. Булған агрегаттар ҙа тутлап ята Һарғамышта. «Елочка»ны урынлаштырырға ла нигеҙ генә ҡаҙып ҡуйылған да, ҡалған эшкә ҡар яуып ҡуйған...

«Ә киске мәктәп быйыл да асылманы»,— ти бит Рая. Ул уны дүрт күҙ менән көтә ине.

Былтыр уның тормошонда ҙур ваҡиға булды: уны комсомол сафына алдыҡ. Егерме икенсе съезды Рая комсомолка булып ҡаршыланы.

Ә район конференцияһында уны комсомолдың өлкә конференцияһына делегат итеп һайланылар. Һәм дөрөҫ эшләнеләр.

Ул быға лайыҡлы. Күҙгә күренеп яңы кеше үҫә! Бына инде ул районда беренсе!.. Бындайҙарҙы тик күрә белергә генә кәрәк.

... Ә ҡар шығырлай. Шул ҡар шығырлауында ла заман тауышы бар бит:

— Тиҙерәк!

— Тиҙерәк!

— Тиҙерәк!

11 июль.

Мең-мең бәләләр менән ете йыл буйы хыялланған квартираға ордер алып ҡайттым!

Күпме ғүмер, күпме көс шул квартира арҡаһында бушҡа һәләк булды!..

Һигеҙ йыл буйы бергә йәшәп тә, ҡатынға бөгөнгө кеүек ҙур бүләк биргәнем булманы. Ул бүләк — ошо квартираның асҡыстары (ике асҡыс) инде.

Бөтә күргәндәр, бөтә кисергәндәр артта инде. Ҡалған ғүмерҙе иҫән-һау ғына эшләп үткәрергә яҙһын!

Хәҙер минең төн ултырып шиғыр яҙырға үҙ мөйөшөм бар. Ике бүлмә, кухня айырым, бөтә уңайлыҡтары менән. Тыныс буласаҡ кеүек. Тәҙрәләр эргәһенән генә урман башлана. Иң яҡшыһы шул.

Ярай, ғүмерҙе яңынан башлап ҡарайыҡ.

3 ғинуар.

«Ағиҙел» редколлегияһында «Аманат»ты тикшерҙеләр. Рафаэль уҡып бөткәс, береһе лә һүҙ башлай алмай, ауыр тынлыҡ урынлашты. Бөтәһенең дә йөҙө ет ди, бөтәһе лә үҙ эсенән генә һөйләшә ине. Хәким ағай, ахы ҙа, Әхнәф Харисовҡа һүҙ бирҙе. Харис ағай ғәҙәтенсә «капа ҡ» тимәне.

— Шиғыр ҡобайырҙың бөтә м өмкинлектәрен файҙаланып, до предела эшләгән. Һәр бер юлы ҡойоп ҡуйылған. Уйландыра ла, тағы ла икенсе уйҙар тыуҙыра.

«Теле юҡтың иле юҡ,
Иле юҡтың ирке юҡ»,—

тигән категорически формулиро вка менән килешеп булмай, — ти.

Фөмүмән, бик йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултыртты. Был түшәген Әсғәт Мирзаһитов күтәреп алды. Шиғыр эшләнеше яғынан, уныңса, классически эшл өнгән. Ләкин идея йәһәтенән партия программаһына тура килмәй. Йәнәһе, хәҙер, ассимиляцияға юл тотҡанда, бөтә телдәрҙең берләшеүенә барғанда, был шиғыр төрлө толкованиеларға юл ҡуясаҡ.

Унан алда Хәниф Кәрим: «Мин Әхнәф Ибраһимовичтың фекеренә ҡушылам»,— тине. Ә бының политик ғәйепләү менән Харис фекерен йөплəп ҡуйҙы. Шиғырҙы берҙән-бер кеше — Ғайса Хөсәйенов ҡына яҡлап сыҡты, баҫырға тәҡдим итеп:

— Мин алда әйтелгән фекерҙәр менән килешə алмайым. Шиғыр ғәжəп көслө. Бында бер башҡорт теле хаҡында ғына һүҙ бармай, ə бөтə туған телдəр хаҡында һүҙ бара. Телһеҙ халыҡ булырға мөмкинме һуң? — тине.

Ҡайһы яҡҡа ауырға белмəй ал тырап торған Фəрит Иҫəнғолов Ғайсаның фекеренə ҡушылды ла аҙаҡтан, берəй хəл булып ҡуймағайы тигəндəй, Харис фекеренə яраҡлашырға булды.

Был позиция бик уңайлы ине шул: ике яҡҡа ла ярай, шул уҡ ваҡытта авторҙың да күңеле ҡырылмай ҡалырға тейеш булалыр инде.

Ә Рафаэль бик наивный бала кеүек, Ғамзатовҡа, Туфанға һылтанып, шиғырҙы яҡламаҡсы булғайны ла, үҙ фекеренә үҙе уралып, ауҙағы балыҡ кеүек булып ҡалды.

Ике яҡтың позициялары асыҡланғас, үҙенең хәл иткес хөкөмөн сығарырға Хәким ағай һүҙ алды. Марксизм-ленинизм положениеларынан сығып, тарихҡа ҡаршы барып булмай, мин, мөхәррир булараҡ, был яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә ала алмайым, тине. Онотҡанмын: унан алда Назар ағай бер-ике һүҙ әйтеп, бер һүҙ ҙә әйтмәне.

Нишләйһең инде, беҙ был хаҡта һүҙ күтәрә алмайбыҙ. Ваҡиғалар барышына буйһонорға тура килә. Йә уны баҫтырыр өсөн Ғамзатов булырға кәрәктер, тигән фекерҙе уйын-көлкө менән алмаштырҙы. Ауырғазы районында бер татар ағайҙың «туған тел менән леспромхозға ла барып булмай, балаларҙы тик русса ғына уҡытырға кәрәк, татар дәреслектәрен сығармағыҙ» тигән фекерен әйтеп, үҙенең кисә әйткән һүҙҙәрен ташланы:

— Ә ниңә һуң әле Рәми бер үҙен туған телдең поборнигы итеп ҡуя, беҙ һуң туған телде һаҡламайбыҙмы? Унан һуң ниңә ул һәр ҡайҙа шул шиғырын уҡырға тырыша, телевизорҙан да ике ҡабат шул шиғырын уҡыны,— тип, уларҙы ҡасан, ҡайҙа уҡыуҙың даталарын килтерҙе. Аҙаҡ, ни өсөн яҙа һуң әле, тигән һорауҙы ҡуйҙы.

Мин һалҡын ҡанлыраҡ булырға тырышып, үҙемсә яуап биргән булдым.

— Улай булғас, туған телде һанға һуҡмаған обывателдәргә арнап яҙырға ине уны йә берәй мәҡәлә менән генә сикләнергә ине,— тип ҡуйҙы.

Хәким ағай бәхәсте йомғаҡлап, үҙен тиҙерәк ҡотҡарып ҡалырға тырышты.

Ә кисә генә «икенсе номерҙа баҫырбыҙ», тигәйне.

О времена, о нравы!

4 ғинуар.

Ғ. Байбуриндың «Йырҙа осрашыу»ы

Йырҙа осрашыу өсөн, әлбиттә, йыр кәрәк.

Бармы улар? Бик аҙ. Ләкин бар. Бары менән байрам.

Донъяға ниндәйҙер йылы, үҙ итеп ҡарау, кешеләрҙе үҙ итеп күреү, уларға үҙ серҙәрен ышаныу, ысын күңелдән сер һөйләү бар шиғырҙарҙа. Йылы юмор.

Әсә күңеле — иң яҡшынан. Ләкин донъя киң түгел. Үтә бер төрлө. Бик осраҡлы деталдәр бар. Бөтөнләй әһәмиәте булмаған

нәмәләр күп. Иң етди етешһеҙлек хәбәр һөйләүҙә һәм фекер әйтмәүҙә. Традиция йөҙәтә.

Артыҡ бала булып китә Ғабдулла, ә ололарға был кескәй Апуш булып күренеү ҡыҙыҡ түгел.

Мәҫәлдәр һәм Петефи тәржемәләре арыу ғына. Ләкин оригиналь шиғырҙарҙы яҡшы итеү өсөн ашығырға кәрәк.

Автор үҙен-үҙе сикләй, бәләкәйтә кеүек. Тематика ла бик сикле, ә үҙе бит оло ғына тормош юлын үткән кеүек.

Унан һуң автор ни өсөндөр сағыу, яҡты буяуҙарҙан, хистәр ташҡынынан ҡурҡа кеүек. Әйтерһең, яңы туңған боҙ өҫтөнән атлай. Ә бит уның күкрәк киреп иркен атларлыҡ мөмкинлеге бар.

Менор, акварель — һәм һаран ғына юмор — бына уның бар ҡоралы. Тоноғораҡ. Унан һуң ябайлыҡтың бер ҡатлылыҡҡа күсеп киткән саҡтары ла күп.

Һай урында тәрән фәлсәфә соҡоу ҙа бик тотҡарлай. Ниндәйҙер динамика, хәрәкәт, киңлек һәм фекер киңлеге етмәй.

Бәлки, тәбиғәте шулайҙыр. Улай булһа, тәрәнерәк булырға кәрәк ине. Ниндәйҙер бик баҙау тауыш. Бәлки, проза хаҡында ла уйларға кәрәктер?.. Шағир хатта таш затынан булған скрипкасы ҡыҙға ғәшиҡ булып та, ғәйбәттән ҡурҡа. Ниңә ул тиклем аскет монах кеүек булырға?

Ғашиҡ булғас, булыр кәрәк, исмаһам, тере ер ҡыҙҙарына. Исмаһам, йыр ҡалыр.

Былай һоро донъяла йәшәү шағир өсөн артыҡ ҡыҙыҡтан түгелдер. Бушҡа атыуҙары күп.

20 ноябрь.

Поэзия йылымы быйыл? Ҡайһы берәүҙәр поэзияның быйыл ҡытлыҡ йылы булды, тиҙәр. Белмәйем. Мин игенде ботлап үлсәгән кеүек, поэзияны бизмәнгә һалып һандар менән үлсәү яғында түгелмен.

Биш-алты уртаса китап сығыуға ҡарағанда биш-алты яҡшы шиғыр сығыу мөһимерәк. Ул күп булмаһа ла, бер авторҙыҡы булһа ла, бары бер поэзияны билдәләй.

Сөнки юҡтан бар булмай. Ул бөтә поэзия үҫешенән.

Поэзия — үткән юл. Халыҡ ижады ерлегендә тыуған һәм бөтә тамырҙары менән ошо ергә ереккән поэзиябыҙ үҙенә күрә үҙенсәлекле, әле ныҡлап тикшерелмәгән, фәнни яҡтан дөйөмләштерелеп тә бөтмәгән үҙенсәлекле тарихы бар.

Халыҡтың ауыҙ-тел ижадында бөгөнгө профессиональ поэзияның бөтә башланғыстары ята. Был икеһе бер-береһенә үҙара йоғонто яһап үҫкән поэзия.

Салауаттың ялҡынлы, һуғышсан поэзияһынан башланған поэзиябыҙ суфыйсылыҡ томандары, М. Өмөтбаев һәм Аҡмуллаларҙың өгөт-нәсихәткә ҡоролған мәғрифәтселек дидакти-

каһы, Бабич һәм Юлтый романтикаһы, Ғафури реализмы менән аҙыҡланып, Октябрь революцияһынан һуң үҙенең яңы дәүерен башлап, революцион-космик символизм аша үтеп, күмер — кейәү, таштар — кәләш булып йөрөгән саҡтарын артҡа ҡалдырып, Сәләм, Ниғмәти, Хәй поэзиялары менән өлгөрөп, Бөйөк Ватан һуғышы һынауын үтеп сығып, Мостай лирикаһында үҙенең иң юғары баҫҡысына күтәрелде һәм Бөтә Союз аренаһына сыҡты. Культ һәләкәтен еңеп сыҡты. Күптәр физик һәм мораль яҡтан был осорҙоң ҡорбаны булды, күп юғалтыуҙар күрелде.

Ноябрь

Яңыны төҙөү өсөн, бәлки, иҫкене ватырға кәрәктер? Ләкин, иҫке матур икән, ниңә уны ватырға, мыҫҡылларға? Иҫкенең йәмһеҙен, туҙғанын ғына ватырға кәрәктер. Был аҡыллыраҡтыр ҙа, арзанғараҡҡа ла төшәлер.

Ә ниңә дисгармония? Ниңә емерәү ҡомары ғына булырға тейеш? Маяковский башта емерергә тотонған, аҙаҡ аңлаған. Фадеев та «долой Шиллер» тип сыҡҡан, ә аҙаҡ.

Ш. Мәхмүтов емерә генә, ә үҙенекен төҙөмәй эле. Инверсия — кире һөйләм төҙөлөшө лә йөҙәтә — арт менән йүгергән кеше кеүек булаһың. Инверсия юлы — конькиҙа оҫта йөрөгән фигуристың арты менән йылғыр әйләнеп шыуып китеүе булһын ине, ләззәт бирһен, ә ғазапламаһын.

Ритм да, үлсәүҙәре бер тигеҙ булмаһа ла, ритмлы аҙым кеүек булһын ине. Ш. Мәхмүтов шиғырҙары аҡылға күнегеү, физзарядка яһау маҡсатын ҡуйып яҙылған кеүек. Йә шиғырҙарын тәржемә итеп, йә проза кимәш күреп уҡыйһы килә. Бер моңға төшә алмай, арып бөтәһең. Соҡор-саҡырлы арба юлы кеүек кешене йонсота башлай, был арбаға ултырмай йәйәү генә бараһы килә. Ниндәйҙер тәбиғи булмаған ҡылансыҡ форма. Тәкәт бөтә.

Ш. Мәхмүтов тураһында.

Һәр шағир үҙенсә яҙырға хаҡлы булған кеүек, Ш. Мәхмүтов та үҙенсә яҙырға хаҡлы. Ниңә кешене үҙенсә, һинең алымдарың менән яҙмаған өсөн әрләргә? Барыбыҙ ҙа бер төрлө яҙһаҡ, беҙ ниңә кәрәк һуң әле?

Ш. Мәхмүтовты башҡаларға оҡшамаған өсөн мин уны әрләй алмайым. Ниңә һуң әле ул Муса Ғәлигә йәки Назар Нәжмигә оҡшарға тейеш?

Эш бында түгел, башҡала. Мин үҙем, мәҫәлән, уның шиғырҙарын уҡығанда арып-йонсоп бөтәм. Уларҙа фекер бар, ләкин шул фекерҙе биреү формаһы юҡ. Рифмаларын алып ташлап, уларҙы сәсмә хәлендә уҡыйһы килә. Ә былай асыуыңдан, бер ҙә юҡҡа, һис бер ғәйепһеҙ ҡатыныңды әрләп таш-

ларға мөмкин. Ниңә кешеләрҙе бисәләре менән талаштырырға? Киреһенсә, талашҡандарҙы яраштырырлыҡ булһын ул шиғыр.

Бит поэзияның бурысы кешелә, Пушкин әйткәнсә, яҡшы тойғолар уятыуҙа ла баһа?

Ш. Мәхмүтов фекер уята, әлбиттә. Ләкин был фекерҙе киңәйтмәй, тик үҙ тирәһенә туплап, тарайта. Был фекерҙән сығып, уны яңыса бирәһе килә. Уға әҙерәк хис һалаһы, йән өрәһе килә. Сөнки улар һалҡын аҡыллы, геометрик ҡағиҙәләр, иҫбатлауҙар һымаҡ.

Логик фекер һәр саҡ үҙе менән генә сикләнә, ә үҙенең квадрат, конус, түңәрәктәренән ситкә сығарып, фекереңә ҡанат ҡуя, ярһыта, тулҡынландыра алмай. Ә кеше фекере ҡанатлы булғанда ғына донъяны кешегә яҡын итә.

Унан һуң ул үҙ аллымы? Бик үҙ аллы түгел бит — Назым Хикмәт, Элюар, Незвалдар хәтергә төшә, уларҙың интонацияһын ишетәһең.

Бер яҡтан, беҙҙең поэзияға яңы интонациялар керетеү яғынан был файҙалы, ыңғай күренеш булһа, икенсе яҡтан, Ш. Мәхмүттең үҙе өсөн, оригиналь һәм тәьҫирле булыу өсөн бик нык зыян да итә. Ул отмай, беҙ отабыҙ — шағирҙар.

Арыҫас, рәхәтләнеп Пушкинды, Есенинды, Блокты, Туҡай, Таҡташтарҙы, Мостайҙы алып уҡыйһы килә. Үҙеңдең дә тағы яҙғың килә. Ш. Мәхмүтте уҡығандан һуң шиғыр яҙғы килмәй, ә уның менән бәхәсләшеп мәҡәлә генә яҙғы килә. Ләкин ниңә бушҡа бәхәсләшергә, уныһы өсөн дә ваҡытыңды ҡыҙғанаһың. Яҙһын әйҙә, яҙа бирһен, тиһең. Ул бит һәләтһеҙ түгел. Уҡыусыларға булмаһа, шағирҙарға файҙаһы булыр, бәлки, тиһең.

Поэзияны алгебра менән дә тикшереп ҡарарға кәрәктер.

Поэзиябыҙҙың үҙенең тотороҡло традицияларының, үҙ тәбиғәте бар ул, әлбиттә, Шамилдағы интеллект кимәлен үҙенә аласаҡ, ләкин был характерҙы алыуы шикле. Уның үҙ киләсәге бар. Ә төрлө тәжрибәләр уға кәрәк, тим мин.

1 декабрь.

Йәш, ләкин йәшел түгел.

Быларҙың бөтәһен дә мин Рәшит Назаровтың «Азатлыҡ йырын» уҡыҫас уйланым.

Тәүҙә һоҡландым тәүге строфаға — һүҙҙәр ни тиклем алыштырғыһыҙ, үҙ урынында, мәғәнәле.

Артыҡ бер һүҙ ҙә юҡ. Скульптор бөтә артыҡ материалды алып ташлай. Шулай ташлай белеү — ысын оҫталыҡ.

Был беҙҙең башҡорт халҡының образы, уның поэзияһының — рухының образы һәм шағирҙың үҙ образы ла.

һуңғы боҙ — шәхес культының бөтә тере, ижади көскә ҡаршы образы.

Шаҡ ҡатырғыс түгел. Ләкин һоҡланаһың.

Хәтерләйһең Марат Кәримовтың «Ташҡын» шиғырын. Был яҙғы ташҡын образы — традицион образ.

Ләкин уға шағир тоғро ла, түгел дә —ул ары китә. Образ күп мәғәнәле, дөйөмләштереү дәрәжәһенә күтәрә. Азатлыҡ йырына әйләндерә. Ысынлап та, был ысын азатлыҡ. Тимәк, традицияға тоғро булыу — уны дауам итеү, үҫтереү азатлығы.

Поэзия — подтекст.

Талант — необъясним!

Рифмалар ҙа, һүрәтләү алымы ла — бөтәһе лә башҡорт поэзияһының иң яҡшы ҡаҙаныштарынан.

Етешһеҙлеге лә шул уҡ ҡаҙаныштан.

Рифма — «ишелә — кеше лә» — баҫымды боҙоу беҙҙә әле ныҡ таралған.

Ләкин шуныһы менән дә яҡын хатта был шиғыр.

Ш. Мәхмүтовтағы кешегә оҡшамаҫҡа тырышыу юҡ бында. Мәхмүтов — сыбар, ҡорама кеүек, ә Назаровта тәбиғи гармония, бөтөнлөк, тәбиғи стихия — бөтә уй-фекере менән үҙ туҙрағына ереккән. Бында үҙ туған телендең интонацияһын, туғанлығын, яҡынлығын тояһың. Ә Шамилда ниндәйҙер бер сит телдең һүҙмә-һүҙ тәржемәһен тояһың. Был тойоу арыта.

Туған телдең тәбиғәтен, байлыҡ һаранлығын, күп мәғәнәлелеген, төҫмөрҙәр байлығын, уның һығылмалылығын шул тиклем яҡшы тоя белеүен күрһәтеү өсөн мин уның ҡыҫҡа ғына 6 юллыҡ шиғырын күрһәтер инем. Омоник рифмалы «Йәшен» шиғыры. Рифмалы ниндәй шиғри культура — был бөтә шиғри ҡаҙаныштан килә. (Бабич, Мостай, Назар, Р. Ниғмәти) ниндәйҙер тәбиғәт балаһы итеп күреү (М. Фәлисә) мөмкин түгел, ул ғәжәп иғтибарлы, ғәжәп зирәк уҡыусы.

Традицион бер образды ул бөтөнләй үҙенсә асып бирә.

Шунда ла уның шағирлығы.

Был шиғырҙы, мәҫәлән, мин рус теленә тәржемә итеп булмай, тим. Ғөмүмән, яҡшы шиғырҙарҙы уның бөтә байлығында икенсе телгә тәржемә итеү мөмкин түгел. Шиғыр ни тиклем туған телдең үҙенсәлегенә нигеҙләнгән икән, уны тәржемә итеүе лә шул тиклем ауыр.

Ә Т. Арсланды рәхәтләнеп тәржемә итергә һәм бынан ул бик ныҡ оторға мөмкин. Ләкин поэзияға бынан отош булмаҫ ине. Тәржемә — проблема булып ҡала.

Беҙҙең ҡобайырҙарҙы нисек тәржемә итергә? Мостайҙы? Белмәйем. Тәржемәселәргә телде белергә кәрәк.

Подстрочник — шағирға ҙур һынау, тигәйне бер мәл Н. Хикмәт. Ләкин был балаҫтың тиҫкәре яғы. Йәки тәржемәсе,

Герасимов кеүек, баш һөйәгенә ҡарап кешенең портретын тыуҙырырға тейеш. Бының өсөн ҙур Герасимов кеүек булырға кәрәк, әлбиттә. Ләкин Симоновтарҙы ҡайҙан табып бөтәһең?

Беҙҙә тәржемә культураһы бик түбән әле. Был хаҡта һүҙ ҙә булмауы бигерәк тә аяныс.

Был — ҙур культура мәктәбе. Беҙгә Пушкин, Лермонтов, Некрасов, Шевченко тәржемәләрен бөтөнләй яңынан ҡарап сығырға кәрәк. Йософ Гәрәй Лермонтовты, Мартынов кеүек, икенсе ҡабат үлтерергә генә мөмкин. Ә улар беҙҙең әҙәбиәттә лә йәшәргә тейеш.

Бер көн Әхиәрҙә был тәржемәләрҙе күреп иҫ-аҡылым китте. Юҡ, Лермонтовты Йософ Гәрәй һәләк итмәһен.

Фөмүмән, классиктарҙы үҙе шифыр яҙа белмәгән мөхәррирҙәрҙән дә ҡотҡарырға кәрәк.

Шағир тупраҡҡа бәйләнгән. Был тупраҡ та яңы түгел. Бикбай, Мостай еренең тупрағын алығыҙ. Ләкин ул тупраҡты үҙенсә услап алып ҡарай белә.

Уның тупрағы бик тос. Емкость, күҙ күләме күп һыйҙырышлы. Ярмалы, һәлмәк, һүрәтле, ул ер китабын уҡый белә. Һәм үҙенсә тос фекер әйтә белә:

Ергә йылы бирһә, үтелгән дә
Хәҙерге ул, эйе, хәҙерге!

«О» — шәп түгел. М. Фәлиҙең насар йоғонтоһо! Ялған ауаз. Был да традициянан килә.

«О»-ны Некрасов әйткәндә, йәки «О, рус ере!» тип әйткәндә бик тәбиғи. «О»-ны ла әйтә белергә. Беҙҙең грек Муса Фәли:

(О времена, о нравы)

Эй, замана, Эй, кешеләр! Шулай дөрөҫөрәк булыр ине.

Сәнғәттә «саҡ-саҡ» үҙе бер ғүмер ул. (В искусстве чуть-чуть это все.)

Бындай ваҡлыҡтарға бик ныҡ иғтибар итер кәрәк. Рәссамдың бер генә яңылыш сыйығы күҙгә ҡылау һалырға мөмкин. Әгәр ҙә Рәшит үҙ талантын кешеләр байлығы итеп ҡарап, уны юҡ-барға туҙҙырыу бик харам эш тип уйлаһа, поэзия алдында үҙен яуаплы итеп тойһа, үҙ-үҙенә аяуһыҙ булһа, эҙләнһә, табылған табыштары менән аҙыраҡ ҡәнәғәт булһа, киләсәктә тағын да һөйөндөрөр тип уйлайым.

Әлбиттә, ҡапҡан һайын ҡалъя булмай. Етешһеҙлектәр ҙә бар. Күҙ күремен киңәйтергә, бығаса күтәрелмәгән сиҙәмдәрҙе күтәрергә, кешеләр яҙмышына күберәк күҙ һалырға, тәбиғәттең дә тик үҙең генә аса торған серҙәрен асырға кәрәк. Традицион образдарға вариациялар тыуҙырыу менән дә артыҡ

мауыҡмаҫҡа кәрәк. Был бит Бабичса, Мостайса, Ниғмәтисә тиерлек булмаһын, Был бит Рәшитсә! — тиерлек булһын. Бының өсөн, әлбиттә, әҙәбиәткә генә ҡолаҡ һалырға түгел, тормошҡа ла бик ентекләп күҙ һалырға кәрәк. Тематика ла күберәк булһын. Үҙ темаңды ла күтәрергә кәрәк. Үҙ материалың булһын. Был, әлбиттә, улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла тигәндәй, бөтәбеҙгә лә ҡағыла.

Рәшиттең «Мин — үлтереүсе» тигән шиғыры бар ине. Шунда ул үҙенең насар шиғырҙарҙы үлтереүсе булыуын да әйтмәйме икән?

Ғүмере бөткәндең үлгәне яҡшы.

Рауил Бикбаев — бик ҡыҙыҡлы, бай донъялы шағир. Ләкин балиғлыҡ етешмәй әле. Быны ул үҙе лә аңлай булһа кәрәк. Образдар, ҡуйы буяуҙар йөҙәтә. Бик матур образдар мәғәнәне томалай. Ябайлыҡ етешмәй. «Не говори слишком красиво!» — тип әйтке килә Базаров һүҙҙәре менән! Луначарский Цвейг тураһында шулай ти. (Былтырғы шиғырҙары менән сағыштырырға.) Былар үҫеш сире. Бала үҫкәндә гел оса, ерҙе ташлап китә — ҡот осҡос, шаҡ ҡатырғыс төштәр күрә. Был тәбиғи. Ләкин уны һуҙырға кәрәкмәй. Инфантильность шиғриәткә насар юлдаш, ул балалыҡ түгел.

6 декабрь.

Йомағужа районынан Ғәлим Ильясов тигән егет бер дәфтәр шиғырҙар яҙып килтергән. Бик үҙенсәлекле, өмөтлө. Бөтә шиғырҙарын да тикшереп булманы. Үҙе лә ашыға, минең дә ваҡыт юҡ ине. Шулай ҙа әйткән һүҙҙәрҙе бик иғтибар менән, ышанып тыңланы.

Мостайҙың күҙ күреме ғәжәп киң: ул Европанан Азияға сығып барған ҡырмыҫҡаға ла иҫе китеп ҡарап тора, шулай уҡ Уралды Европа-Азияны пар ҡанаты итеп осҡан гигант ҡош итеп тә күрә белә. Шулай уҡ ул уны ҡайын япрағы итеп тә күргә мөмкин.

Мостайға теләк — бәпестең йомарланған ҡулы ла бар икәнен онотмаһын ине.

Был донъяла ул да бик кәрәк. «Сабырлыҡҡа күнмә, күңел».

Таш төшкән ерендә ауыр, ти. Һүҙең дә ваҡытында әйтелгәне яҡшы. Һуңлап әйтелгән фекер, хатта ул бөйөк булһа ла, рухи аҙыҡ була алмай. Шағир һүҙҙе ваҡытында әйтә белһен.

Ямғыр үткәс бөркәнсек кәрәкмәй. Ә беҙҙә яу үткәсерәк батыр күбәйә.

Рәшит Назаровтың йөрәк хаҡындағы был шиғырын һәр кем белә, шулай ҙа уны тағы бер, ҡат-ҡат уҡыйһы килә. (Фөмүмән, шиғырҙы гел уҡыйһы килеп кенә торғанда ниндәй шәп.)

Мин Мостайға, М. Ғәли кеүек, Шамил өсөн «Мин Мостайҙы не прощу!» тип әйтә алмайым, ләкин, Шамил үҙенсә яҙырға хоҡуҡлы булған кеүек, мин дә үҙемсә уның яҙғандары хаҡында үҙ фекеремде әйтергә хаҡлы. Ләкин был фекерҙе бер кемгә лә бәйләргә тырышмайым — тик үҙ алдыма уйланым ғына.

Башҡорт поэзияһының географияһы киң. Был бик яҡшы сифат. Башҡорт башҡа ерҙән барыбер йыр алып ҡайта. (Халыҡ поэзияһында ла был шулай: 1812 йыл, Һырдаръя — Перовский — Аҡ мәсет —1905 — Порт-Артур. 1914— Сувалкин бәйете.)

Вьетнам алыҫ түгел — шағирҙар яҡынайта халыҡтарҙы. Н. Нәжми ҡапҡалар асты. Бындай ҡапҡалар күп булһын ине. Ҡапҡа асыусы малайҙар ҙа.

Фөмүмән, башҡа халыҡтарҙы асыу ниндәй ҡыҙыҡ. Яҡшыны күреү бәхете — үҙеңде лә тәрәнерәк тойоу бәхете.

Кавказ — диңгеҙ генә лә күпме гәрәбә бирә! (Мостай белә быны.)

Фөмүмән, халыҡтар ниндәй ҡыҙыҡ — туғандар. Поэзия был туғанлыҡты тәрбиәләүсе. «Европа уртаһына» барып репортаж биреү ҙә насар түгел.

Был барыуҙан Мәхмүтов тәржемәсенән шағир булып ҡайтты.

Күберәк барырға ине лә — бигерәк тә йәштәргә — юҡ. Был күҙ күремен ифрат киңәйтә. Ә бына Тажи ағай 25 йыл буйы хатта Кәртәлеһенә лә ҡайта алмай. Ғәжәп хәл бит. Ә ул күпте табыр ине.

Даян

Минең үҙемә лә ул бик ҡыҙыҡ күренеш. Дөрөҫөн әйткәндә, мин Даян ағайҙан ҡәнәғәт түгелмен. Ләкин мин ҡәнәғәт булмау Даян юҡ тигән һүҙ түгел.

Күптәр Даян инде ул юҡ, тип уйлайҙар. Даян бар, нисек кенә ҡайһы берәүҙәргә был хәбәр күңел ҡайтарғыс, фәләнтөгән булмаһын — Даян бар.Уның бар булыуына мин бына үҙем эстән генә шатланам. Бик күп ауыр һүҙ әйтерем булһа ла, шатланам. Сөнки Даян ағай үҙе алданырға мөмкин, ләкин ул беҙҙе алдамай. Сөнки ул, ни тиһәгеҙ ҙә, шағир һәм уның

шағирлығы башҡаларға ғына түгел, үҙенә лә бер сер! Әгәр ҙә ул ошо серҙе үҙе лә белгән булһа, ул үҙенең ауыр яҙмышында бик күп тәнҡиткә осрамаған булыр ине.

Ләкин был серҙе белеү уның үҙенә генә түгел, беҙгә лә ауыр.

Мин шул серҙе үҙем өсөн бына яңы ғына, шул докладҡа әҙерләнгәндә генә астым. Шуға ла мин уның хаҡында һөйләгәндә доклад өсөн һөйләгән өсөн һөйләй алмайым. Беҙ инде Даян аҡай примитив шағир тип ғәҙәтләнгәнбеҙ.

Сер ниҙә? Сер уның ғәжәп яланғас, бер ҡатлылыҡ менән бер ҡатар торған ябайлығында. Ул шул тиклем ябай, хатта беҙҙең кеүек шиғриәттең шаҡ ҡатырғыс образдары, тел төптәре, кинәйәләре, ҡайһы саҡта үҙебеҙ ҙә аңлап етмәгән, ләкин аңлағанға һалышып ҡабул иткән метафора томандары менән аҙған кешеләргә бик примитив күренгән ябайлығында.

Был ябайлыҡты беҙ уның иң яҡшы йырҙарын тыңлағанда үҙебеҙ тойған кеүек тә булабыҙ, ләкин төрлө тәнҡит, традицияһы буйынса (ә тәнҡиттең йоғонтоһо беҙгә юҡ тиһәк тә, ул бар — ул йылдар буйы, беҙҙең лепкәләр ҡатҡанға тиклем, тамсылап тамып торған тамсы һымаҡ бик ныҡ тәьҫир итә!..) бына шул тәнҡиттең артыҡ меркантильный, хатта үҙ заманында артыҡ вульгар булыуы арҡаһында Даянды бер әҙәби, оригиналь күренеш итеп күрмәҫкә өйрәнгәнбеҙ.

Быны тик берҙән-бер, беҙ юҡ тип һанаған, беҙгә ҡағылышы бөтөнләй юҡ тип һанаған — беҙ меҫкен, «наҙан» уҡыусы тип иҫәпләгән уҡыусылар — композиторҙар тойоп алған һәм Даянды улар үҙҙәренсә күрә белгәндәр. Мәҫәлән, «Башҡорттар китте һуғышҡа, оҙатып ҡалды күк Урал» (киң Урал түгел) тип йырлағанда беҙ Даянды нисек бар, шулай ҡабул иткәнбеҙ.

Бөгөн Даян ғына шул Даян ул. Һүҙем бер күҙ бәйләү өсөн генә булмаһын өсөн Даяндың иң һуңғы, әле яңы ғына сыҡҡан «Таң алдынан» тигән китабына мөрәжәғәт итәйек. («Таң алдынан» тигән исем дә Даян тәбиғәте өсөн бик хас сифат. Даян аҡай бик оптимист, халыҡ ижадындағы оптимизм унда ла бар.)

(Мин үҙем, шағир булараҡ, бик оптимист, ә фекерҙәрем менән бик пессимист.)

Мин китаптың тәүге шиғырына туҡталмай (ул бик яңы күренеш хаҡында булһа ла, бик иҫке), икенсе «Тыуған ер» тигән шиғырға туҡталмаҡсымын. Бындағы һәр һүҙҙе ни аңлата, ниндәй йөкмәткеле, нисек бар шулай булғанса ҡабул итегеҙ — алдан әҙерләнгән атакаларҙы аҙ ғына кисектереп торороҙ, шул һүҙҙәрҙе тәүге күркәмлегендә, уларҙы бөтә тулылығында, бөтә сафлығында, бөтә ғиффәтлегендә ҡабул итергә тырышығыҙ.

Тулыһынса уҡып сығам.

(Миҫал)

Беренсе класс балаларына яҙған кеүек ҡабул итергеҙ. Бәхәсләшмәйем. Ләкин күңелегеҙҙән тағы бер ҡат шиғырҙы барлап сығығыҙ һәм күңелегеҙгә шартлы рәүештә генә булһа ла яҙғы таң атыуы темаһына берәй көй килтереп ҡарағыҙ — һәр һүҙ үҙенсә терелер, һәр кем күңеленең бөтә күҙәтеү тәжрибәһен һалыр уларға — үҙенең күңелендә ҡалған иң мөһим деталдәрҙе терелтер һәм, валлаһи тип әйтәм, бында иң төп нәмәне — күңелегеҙгә иң тәрән һеңеп ҡалған бер образды, үҙегеҙ аҡыл менән баһалап та бөтмәгән, ләкин бөтә йән-тәнегеҙ менән тойған тәрән бер тойғоно — ер тойғоһон, нәк бына тыуған ер тойғоһон кисерергегеҙ. Әгәр ҙә инде үҙегеҙҙә саҡ-саҡ ҡына көй сығарыу ҡеүәһе булһа, шул һүҙҙәр үҙҙәре үк саҡырып торған берәй моңдо шәйләп алырһығыҙ.

Композиторҙар беҙҙең шиғырҙарҙы бик аҙ уҡый торған булһа ла, бына шул тере бер этәргесте, моң орлоғон тоя, таба беләләр. Шул бөрө уларҙың фантазияһы аша үтеп асыла, терелә, япраҡ яра башлай. Ә һәр япраҡ ул таң еле килеп ҡағылыу менән үҙенсә бер моң, көй сығара башлай. Минеңсә, сер бына шунда: яланғас йәш бер ҡыҙ һыныңың кейемһеҙ ҙә матур булыуында. Быны мәжүси гректар бик яҡшы тойған, һәм уларҙың Алкей, Сафо Анакреондатында Вознесенскийҙарҙың кеше аҡылы аңламаҫ романдарын күрмәҫһең.

Пушкин быны «нагая простота» тип прозаның иң төп закондарының береһе тип иҫәпләгән. Һәм был прозала беҙ әле лә поэзия табабыҙ. Арыһаҡ, шул саф шишмәгә килеп, шул «шишмәләргә ятып», ябай, бик яҡын, бик таныш, теште ҡамаштырғыс һыуҙар эсәбеҙ.

Блок символизм кинәйәләре аша үтеп, ә Есенин төрлө имажинизм шаҡ ҡатырғыстары аша үтеп, бик ябай, бик әҙәмсә тел менән һуңғы шиғырын ҡаны менән яҙған: «До свиданья...».

Быныңменән мин, әлбиттә, Даян ағайҙы һис тә Блок, Есенин дәрәжәһенә ҡуйырға теләмәйем. Быға ул үҙе лә риза булмаҫ ине, моғайын. Ләкин бынан Даян поэзияһына аҫҡыс эҙләп ҡарарға мөмкиндер тип уйлайым.

Бәлки, арттырамдыр.

Һәр кешегә мауығыу хас — мин дә кеше, һәм бала саҡтан бирле «Ас бүре хаҡындағы әкиәт»те онота алмай йөрөйөм. («Ҡыҙыл букет хаҡындағы баллада», «Диңгеҙ һыуы ниңә тоҙло булған», «Өйрәнде нисек өрөргә көсөк?», «Эт үҙенә нисек хужа тапты?» әкиәттәре кеүек үк.)

Шуға ла мин һәр позиция күренешенә ас бүре кеүек ҡарайым, ә уға туйынған, хатта йөрәктәрен май үрә башлаған, бер телем икмәктең ни ҡиммәт икәнен онотҡандар кеүек ғәмһеҙ, вайымһыҙ, бариндарса ҡарай алмайым.

Сөнки шул телем икмәк өсөн мин үҙемдең бөтә булмышым менән бурыслы. Ул икмәк беҙҙең балалыҡҡа һирәк тейҙе, ләкин тоноҡ ҡына ай яҡтыһы аҫтында ла мин уны бөйөк кинәнес менән йоттом. Алабута күмәсе түгел ине улар минең өсөн. Бәлки, хәҙер әлеге байлыҡ менән шул телемдәрҙән кәйлегеп китһәм, ҡулымдағы, тәнемдәге, ҡанымдағы икмәк мине ғәфү итһен.

Сөнки беҙ, бигерәк тә йәштәр, әҙәбиәтебеҙҙең нисек тамыр йәйеп, ниндәй ел-дауылда, ниндәй афәттар килгәндә үҫеп етеүен — уның тарихына күҙ һалмайынса, уның әҙер, бешеп еткән емештәре менән генә туйынып, ҡайһы саҡта әҙәбиәтебеҙҙең ҡаһармандарса һәм фажиғәле ҡаҙаныштарын бик йыш онотоп ебәрәбеҙ. Ләкин бөгөн беҙгә Ҡ. Даян, Б. Бикбай аҡайҙар менән бергәләп шарап эсә алыу улар кискән йылғаларҙы кисә алыу түгел әле ул. Бер кескәй йылғаны икенсе ҡабат кисеү мөмкин түгел. Быны борон Гераклит ҡарт та әйткән — «Все меняется, все течет», тигән.

Бәс, шулай булғас, беҙгә хәҙер йылғаның үткәнен көтөп тороу үҙе бер туҙға яҙмаған хәл, анахронизм булыр ине. Әйтәйек беҙ бөгөн «юҡтырһың да аллам» тип һөрән һалһаҡ, беҙҙе совбольница яғына оҙатһалар ҙа ғәжәп булмаҫ ине. Ләкин таш төшкән ерендә ауыр. Ул ваҡытта М. Ғафуриға бөтә мосолман донъяһы ҡәһәр уҡырлыҡ шундай бер шиғыр яҙыу ҙа әҙәбиәттең генә түгел, ә фекер үҫешенең оло бер һикереш осоро булған.

Ә беҙгә хәҙер Ғафури ҙа бер ҡатлылыҡ кеүек. Ләкин был беҙҙең тарихи ҡарашыбыҙҙың бер ҡатлылығы.

(«Диплом»)

Ғөмүмән, беҙ ижади мираҫҡа тарихи күҙлектән ҡарай белмәһәк, башҡорт, татар донъяһында бөйөк кешеләр булмаған тигән ахмаҡ ҡарашта ҡалырбыҙ.

Туҡайға, Бабичҡа, Ғафуриға ла скептик булып ҡарарбыҙ. Ә улар — революция.

Кисеү бирмәҫ йылға юҡ. Кискәндәрҙең бөтә ҡыйыулығын иҫкә алып, беҙ тормош кисеүенең һаман киңәйә, тәрәнәйә барған кисеүҙәрен кисергә тейешбеҙ. Ҡыйыулыҡ — тәжрибә. Уны алырға кәрәк. Хатта уларҙың тормошҡа булған мөнәсәбәтен

генә лә... Улар тормошто, милли культураны төзәшкән. Ә беҙҙең алда күберәк буш шешәләр теҙелешкән.

Ә тормош беҙҙе утрау кеүек урап үтә.

Даянды аңларға, ә ҡабатламаҫҡа кәрәк.

Декабрь.

Тормош-шағир

Тормошҡа бирелү өсөн тормоштан алырға ла кәрәк.

Ләкин мәктәп-вуз ғына бөтөргән кешелә, тормош университетын — иң юғары уҡыу йортон бөтмәй тороп, ниндәй тормош, ниндәй фекер–позиция, ниндәй ныҡлы ҡараш булырға мөмкин?

Тимәк, раҫларлыҡ нәмә лә, кире ҡағырлыҡ нәмә лә, дуҫ та, дошман да юҡ. Раҫламай тороп кире ҡағып та, кире ҡаҡмай тороп раҫлау ҙа юҡ. Тормошҡа актив үҙ мөнәсәбәтең, үҙ һүҙең юҡ. Шуға ла шифырҙар бик һай, ялҡынһыҙ. Шуның өсөн беҙҙә бик күптәрҙең үҙ материалы, үҙ сюжеты, үҙ фәлсәфәһе бик аморф, шәкелһеҙ, ҡалыпһыҙ хәлдә йәки ул бөтөнләй юҡ.

Ҡайҙан булһын — юҡтан бар булмай бит.

Һәр көн тултырып тормаған белем кәмей бара, ти ҡытай мәҡәле. Элекке запас, түл дә кәмей бара. Сөнки тормош бер урында туҡтап көтөп тормай беҙҙе. Заманның тиҙлеге лә башҡаса хәҙер. Көндән-көн яңылыҡ килә. Әле генә оло химия килде. Ә ул кеше аңын бик ныҡ үҙгәртәсәк.

Ваҡыт, заман толпары беҙҙе үҙ эйәренән ситкә ырғытып китә. Ҡоро йүгән теҙгене тотоп, уның артынан ике аяғың менән генә елеү бер ни ҙә бирмәй. Бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ йөрәгең ярылып үлерлек ашҡыныу, йөрәкһеү, дәрт ҡомары, тәүәккәллек, саялыҡ ҡайҙа беҙҙә? Ниндәйҙер һүлпән беҙ, тормош ағымы беҙҙе, утрау кеүек, уратып үтә. Ә ағымға ҡаршы йөҙөү ҡеүәте шифырҙарҙа аҙ.

Унан һуң беҙ ғәжәп ныҡ сикләнгәнбеҙ. Туристик сәйәхәттәрҙе иҫкә алмаһаҡ (өҫтәүенә, улар ҙа бик сикле — улар ҙа шағирға донъя ҡапҡаһын аса! (Н. Н.) Улар ҙа донъяны сағыштырып күргә ярҙам итә), беҙ тик Өфө тирәһендә генә, Өфөнөң дә тик «Өфө»һө, «Башкирия»һы, «Алтын балығы» тирәһендә генә уранҡылайбыҙ.

Ә беҙҙең егет-ҡыҙҙар сит илдәрҙә нефть сығарыша. Кубаларҙа яңы техникаға өйрәтә, Бохара — Урал газопроводтарын үткәрә, алыҫ Себер тайгаларын ярып яңы юлдар, ГЭС-тар һалыша, яңы ҡалалар төҙөй, сиҙәм күтәрә, ил сиген һаҡлай, ә ҡайһылары, бәлки, ғәләмгә осорға ла әҙерләнеп яталыр.

Ә беҙ белмәйбеҙ уларҙы. Газеталар аша ғына беләбеҙ белһәк тә. Беҙ тик Башҡортостан сигендә генә сикләнәбеҙ. Ә бит

беҙҙең халыҡ күрше өлкәләрҙә лә йәшәй. Улар ҙа совет кешеләре. Ләкин улар беҙҙең әҙәбиәттә сағыламы?

Уларҙың үҙ ҡайғылары, ҡыйынлыҡтары бар. Ә беҙ хатта публицистика менән дә ярҙам итә алмайбыҙ. Мәктәптәр хәле. Дин.

Әҙәбиәткә әҙәбиәттән килеү, литературщина, әҙер ҡалыптар менән яҙыу, асылғанды асыу, сәйнәлгәнде тылҡыу — шаблон беҙҙә иң йөҙәткән нәмә.

Ә тормошта — заводтан килгән Ләүи Сафаровтарға беҙҙә иғтибар юҡ, улар үҙ мөмкинлектәрен күрһәтә алмай, Нур Хәбиров кеүек бер балҡыйҙар ҙа юғалалар. Рәшит Назаровтың да яҙмышы бик борсолдора. Ә был иптәштәрҙең иҫ киткес мөмкинлектәре бар. Ләкин әҙәби тәнҡит уларға бер ҙә ҡолаҡ һалырға уйламай, сабыр рәүештә ниҙер көтә, Чеховтың футлярҙағы кешеһе кеүек, «Как бы чего не вышло» тип бик һаҡ ҡылана. Сөнки әҙәби тәнҡит әҙәбиәттең бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәмәй, үткәндәрҙә ҡаҙына, хатта йәштәр ҙә Аҡмулланың ҡәбер таштары тирәһендә урала, уға Кирәй Мәргән етмәгәнме? Соҡоройҙарҙы Әхнәф Харистар соҡоғаны етмәйме? Фөмүмән, ҙур әҙәби тәнҡитселәрҙең докторлыҡ хеҙмәттәре менән генә мауығып, бөгөнгө әҙәби күренештәргә һүҙ ыңғайы йәки юбилейҙарҙа ғына бер-ике һүҙ әйтеү менән генә сикләнеүе бик үкенесле хәл. Йәки бөгөнгө әҙәби процесс съезд докладтарында ғына ҡуҙғатыла. Ул да булһа өҫтән-мөҫтән генә.

Әлбиттә, үткәндәргә лә әйләнеп ҡарарға кәрәк. Ләкин үткәнгә әйләнеп ҡарау бөгөнгө көнгә айныраҡ, иртәгәһе көнгә ентекләп ҡарау өсөн кәрәк. Юҡһа, фән өсөн фән тыуҙырыуҙың мәғәнәһе юҡ. Алмағасты беҙ алмаһы өсөн үҫтерергә тейешбеҙ. Ә декорация өсөн генә түгел. Декорацияға америка сағаны ла ярай. Ул да әле саң йотор өсөн үҫтерелә! Файҙаһыҙ матурлыҡтың мәғәнәһе аҙ. Беҙгә актив, һуғышсан, эшсән матурлыҡ кәрәк. Халыҡтың яҙылмаған эстетикаһы бына ошо хаҡта һөйләй бит.

Әҙәбиәттә, ҡыҫҡаһы, егерме кандидат булғансы ике тормошсан, һуғышсан, етеҙ тәнҡитсе булһа, был эшкә ҙур ярҙам итер ине. Монографияларҙан беҙгә оло дөйөмләштереүҙәргә күсергә, әҙәбиәттең дөйөм процесын асыҡлауға, уның характерлы һыҙаттарын асыҡлауға күсергә ваҡыттыр инде. Әҙәби тәнҡит үҙе лә тормоштан айырылмаһын ине.

Һәр бер тойғо ялған булһа, ул меҫкен тойғо рухи ғәриплек, фәкирлек тойғоһо. Ләкин ул мөхәббәттә лә ялған булһа, был тойғо меҫкен генә түгел, ә ерәнгес бер эшәкелек.

«Шағир иптәштәр, беҙҙе бар иткән, кеше иткән был әсәлек тойғоһон йәберләмәйек, рәнйетмәйек, эшәке һүҙҙәр менән күммәйек. Кеше мөхәббәттә һынала». (К. Маркс һүҙҙәре.)

9 декабрь.

Төрлө уйҙар
Шағир

«Мин — шағир һәм шуның менән мин ҡыҙыҡ та», — тигән Маяковский.

Был ҙур фекер.

Был фекер шағирҙың йәмғиәттә тотҡан урыны хаҡында.

Шағир — донъя яңғырағы. Әйе, быны Горький әйткән.

Шағир хаҡында Гейне әйткән һүҙҙәрҙе лә хәтерләмәй булмай. Әгәр ҙә ер ярыла икән, уның ярығы шағир йөрәге аша үтә!..

Бөгөн генә беҙ шағирҙы ниндәйҙер бер подручный, төп эш эшләгән кешенең бер ярҙамсыһы итеп ҡуйҙыҡ.

Ә киләсәк менән ғалимдар һәм шағирҙар етәкселек итәсәк!

Быға мин ышанам.

Сөнки «киләсәк ул тотош ижад иле, киләсәк ул миңә йыр, шифыр. Бына шуның өсөн мин — коммунист, революционер һәм шағир!..»

Киләсәк ул — минең көн һайын ҡайтып килә торған өйөм.

Шуға ла мин уның хаҡында башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ уйлайым, нығыраҡ борсолам, нығыраҡ янам.

Мин — ул киләсәктең хәбәрсеһе. Минең ниндәй хәбәр алып ҡайтыуым бөгөнгө кеше — минең замандашым өсөн бик мөһим.

Һәм мин бөтә нәмәне мотлаҡ бөтә кешеләр күргәнсә күрергә тейеш түгелмен.

Минең үҙ күҙем, үҙ һүҙем бар һәм мин үҙемсә күрергә, үҙемсә әйтергә хаҡлы. Тик мин уны насар әйтергә генә хаҡһыҙмын. Ә неҙ мине ваҡытлы быҡауҙар менән быҡауларға тырышмағыҙ. Фекеремде быҡаулатмам! Шағир фекере фәхишә түгел.

Батшаларға башын эймәгәнде, башҡаларға шағир баш эймәҫ. Уны сабып өҙөү йәки сит илдә серетеү уныһы неҙҙең эш. Был сәнғәттә тарихтың үҙе кеүек оло тәжрибәһе бар.

Ләкин тарихтың иҫ киткес хәтере лә бар: ул онота белмәй онотмаҫты...

Ә бөгөн мин шуның өсөн дә «ике икең дүрт» тигән фәкирлек фәлсәфәһе менән йәшәй алмайым.

Минең үҙ фекерем үҙемә мөкәддәс һәм изге. Әгәр ҙә мин бөгөн:

Теле юҡтың иле юҡ,
Иле юҡтың ирке юҡ,
Ирке юҡтың күрке юҡ,—

тип әйтәм икән, ни әйткәнемде үзем беләм. Сөнки йәшәйем мин, фекерләйем, ә ханжа булғым килмәй.

Йөрәк ярып сыҡмаған һүҙ булһа, мин уны әйтмәй ҙә түҙә алыр инем.

Мин ғазапланып яуап эҙләйем. Сөнки поэзия ул «вся езда в незнаемое».

Мин арифметик логика кешеһе түгел.

Ил менән тел төшөнсәһе миңә бер бөтөн. Мин әсәмдең телен уның үҙенән йолҡоп алып ҡарай алмайым. Ул тел минең үҙ телем һәм ул минең иң тура ата торған ҡоралым. Кеше ҡоралы менән атыу ҡыйын, ә ҡайһы бер мәргәндәргә был мөмкин дә түгел.

Быны әле әкиәттәрҙә үк аңлағандар, батырҙы ҡылысы менән данлағандар, ҡылысын ул үҙ әсәһенең һөтө менән йыуған — шуға ла уны дошман ҡаны үткерләгән.

Шағир ул иң элек үҙ халҡының улы.

Шуға күрә лә Хосе Рисаль (филлипин шағиры):

Һаҡлай белһә халыҡ үҙ телен,
Һис иркенән яҙмаҫ илендә:
Ул күктәге бөркөт шикелле —
Кем тота ала уны күгендә?..

(Когда народ умеет сохранять
Язык, дарованный его стране,
То никогда его свободу не отнять,
Как не поймать орлицу в вышине),—

тигән.

Нимә: ил менән тел уға бер бөтөн булмағанмы?

Некрасов Добролюбов хаҡында «Он родину как женщину любил» тип тыуған илдән көлгән булып сығамы?

Ә Блок «О Русь моя, жена моя!» тип үкһегәндә, һинең «идентичность»ыңды уйлап торғанмы!

Ә Маяковский негрҙы кешегә һанамаған булып сығамы?

Ә Симонов аҡ ҡайынды үҙенең аҡ иле итеп күргәндә, күҙенә ҡылау һалғанмы, һеҙҙеңсә?

Шағир үҙенсә күрергә хаҡлы, тик был күреүе уның йәшәргә, тойорға, күрергә ярҙам итһен.

Мин дә үҙ илемдең йәшәүен, башҡа илдәр менән тиң булып йәшәүен күрергә теләйем. «Оло, ирекле ғаиләлә» тиң булыуын теләйем. Сөнки беҙҙең байраҡҡа әлегә «дуҫлыҡ, туғанлыҡ, тиңлек, азатлыҡ» тигән һүҙҙәр ҙә яҙылған.

Ә быныҡ өсөн минең халҡым аҙ ҡан түкмәгән тарихта, аҙ фажиғә кисермәгән...

Тарих онотмаған быны, халыҡ уны онотасаҡ та түгел.

Ташҡайҙарға яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта,—

тип тиккә генә йырламай ул.

Ә һеҙ бөтә йондоҙҙарҙан бер яһалма ай яһарға ултырағыҙ!..

Йондоҙҙарҙың үҙ ғүмере бар. Ғүмере бөтһә, улар үҙҙәре лә атылып һүнә. Ләкин яҡтылыҡ үҙҙәре һүнгәс тә килә. Яҡтылыҡҡа урын етерлек. Ярғанатҡа ғына унда урын юҡ. Шағир йондоҙ телен белергә, һаҡларға тейеш!..

Һәр йондоҙҙоң үҙ яҡтыһы үҙ ғүмеренә етерлек.

Йондоҙҙарҙың айҙан ҙурҙары ла бар. Тик әле беҙ асып етмәгәнгә генә улар бәләкәй күренә. Ләкин улар бер-береһен яҡшы күрәләр. Яҡшы аңлашалар ҙа.

(Звезда с звездою говорит.)

Йәшәһен мәңгелек йондоҙҙар дуҫлығы!

Әгәр ҙә беҙ ҙә бер-беребеҙҙе аңларға өйрәнһәк, бер-беребеҙ өсөн йондоҙ булып балҡырбыҙ. Әгәр йондоҙҙо ғүмерҙә күрә алмаған суҫка кеүек булһаҡ, бер-беребеҙҙе сәйнәшеп данһыҙ үлем менән үлербеҙ.

«Бейек йондоҙҙар» булырға кәрәк. Дағстан тауҙарынан донъяға баҡҡан Рәсүл быны яҡшы аңлаған. Бейектәгенең күҙ күреме лә бөйөк шул.

Шағир шағирҙар тыуҙыра.

Үҙ халҡыңдың, үҙ заманыңдың улы бул, башҡа халыҡтар ҙа, киләсәк заман да һине үгәһетмәҫ. Халыҡ — халыҡты, заман заманды аңлай ул. Һәр хәлдә, тамыр — тамырҙы, япраҡ япраҡты аңлай ул. Улар бергә генә йәшәй ала, ә бер-береһенән башҡа йәшәй алмай.

10 декабрь.

Әҙәби юғалтыуҙар

Әҙәбиәт ул аҫтыртын, күҙгә күренмәгән, ләкин аяуһыҙ бер яу. Кешеләр йөрәген яулау өсөн көрәш. Ә кеше йөрәгенә үтеп инеү крепостарҙы ватып инеүҙән ауырыраҡ. Быныҡ өсөн бер көнлөк йәки бер-ике йыллыҡ ҡына подвиг етмәй. Ә йөрәккә ингәндән һуң унда һаҡланып ҡалыу йәки алынған йөрәкте һаҡлап ҡалыу тағын да ауырыраҡ. Был, моғайын, Брест крепосын һаҡлау менән берҙәр?

Был хаҡта Василий Федоров бик дөрөҫ әйткән:

Сердца, не занятые нами,
Немедленно займет наш враг.
Он их займет не за красоты —
Займет, засядет, нас разя,
Сердца — ведь это же высоты,
Которых отдавать нельзя.

Был бейеклеккә төрлө дошман үрмәләй. Был дошман тәү ҡарашҡа Антанта кеүек ҙур ҙа, фашизм кеүек ҡурҡыныс та, атом бомбалары кеүек һәләкәтле лә түгел һымаҡ. Ләкин был дошмандар — кешелектең күптәнге әшәке юлдаштары, иҫке тормоштоң ерәнгес ҡалдыҡтары кеше күңеленә ғәжәп тиҙ үрмәләп менә һәм кешенең иң яҡшы сифаттарын юҡҡа сығара, уны рухи яҡтан ғәрипләндерә, беҙҙән шулай итеп кеше йөрәген тартып ала.

Был дошман хатта кеше йөрәге, кеше күңеленең сафлығы өсөн көрәшеүселәрҙең үҙҙәрен дә һәләк итә.

Әҙәби юғалтыуҙар әҙәбиәт тарихында байтаҡ. Һәм, минеңсә, был ҙур юғалтыу.

Фәйзи Сиражетдиновты ғына алып ҡарағыҙ — әҙәбиәткә индем генә тигәндә юҡ булды бит. Уның матбуғатта күптән күренгәне юҡ. Быйыл, әлбиттә, ул күҙгә күренеп ҡалды, ләкин был ниндәй аяныс күренеш!..

Алғушаев менән дә шулай булды. Сафаров та юғалды.

Унан һуң үҙенден һәләтлегенә, талантыңа яуапһыҙ ҡараш та ҙур юғалтыу. Сөнки ғүмер үтә, кеше һаман сәстәре ағарғансы йәш яҙыусы булып йөрөй, йәш шағир булып йөрөй, үҙе ең ныҙғанып эшләмәй, әҙәбиәт тирәһендә ураланып, хатта әҙәбиәткә килеүсе башҡаларға ла тотҡарлыҡ яһай. Беренсенән, сөнки улар әҙәби йәштәргә насар үрнәк күрһәтәләр, икенсенән, үҙҙәренең төрлө дәғүәләре, претензиялары менән эшләгән кешеләр тирәһендә ниндәйҙер әҙәбиәтселәргә хас булмаған үҙҙәренсә бер «әҙәби фекер» тыуҙыралар. Ә ысын ижади фекер, ысын ижади яңыу уларҙа булмай башлай. Ижад менән халтура араһында тороп, дөйөм әҙәби процесҡа улар файҙа түгел, ә ниндәйҙер дәрәжәлә зыян ғына яһай. Кемдер берәү әйтмешләй, улар, әлбиттә, погода яһай алмай, шулай ҙа арыу ғына погоданы ярайһы уҡ боҙорға мөмкин улар. Өсөнсөнән, улар беҙҙең әҙәбиәт өсөн ҡағыҙға бик ҡыҫаныс ваҡытта, китаптар сығарыуға ҡарағанда таштан май һығып сығарыу еңелерәк булған саҡта, үҙҙәренең ара-тирә яҙған ижадтары менән башҡа ижади өлгөләрҙең өлөшөнә инәләр.

Ләкин беҙҙә был хәл менән бер кем дә ҡыҙыҡһынмай. Бындайҙар менән бер кем дә эш алып бармай: Яҙыусылар союзы ла, Комсомол өлкә комитеты ла бындайҙарҙы күҙ уңында тотмай.

Ә был бик аяныс хәл!

Фөмүмән, беҙҙә һәр кем үҙенсә йәшәй, үҙенсә хөрриәттә. Ләкин был хөрриәт, был «ижади ирек» бик ҡиммәткә төшә. Был бик ауыр «ирек».

Әҙәби көстәрҙе бергә тупламау — ул уны барыбер тарҡатыу, кәмәне үҙ ағышына ҡуйыу тигән һүҙ. Был барыбер күҙгә куренмәгән анархия түгелме? (Яңы, йәш, күп афәттәр кисергән әҙәбиәтебеҙҙә.)

Был тәңгәлдә Союз ҙур эш, көн һайын өҙлөкһөҙ эш алып барырға тейеш.

Онотҡанда бер семинар үткәреү, онотҡанда бер секция ултырышы үткәреү йәки үҙ йүнегеҙҙе, әйҙә, үҙегеҙ күрегеҙ тигән һымаҡ әҙәби кисәләргә ебәреү генә был әле әҙәбиәт менән етәкселек итеү түгел.

Мәскәү һ. б. үҙәктәге кәңәшмәләргә кеше ебәрмәү ҙә беҙҙе бик сиклә́й, милли рамка эсендә генә бикләп ҡалдыра.

Унан һуң әҙәби көстәрҙе ойоштороуҙа административ метод бөтә эште һәләк итергә лә мөмкин. Яҙыусылар менән эшләү ҡысҡырыныу-екеренеү, протоколдар яҙыу, ярлыҡ тағыуҙарға, алдан әҙерләнгән фекерҙәргә нигеҙләнергә тейеш түгел.

Тәнҡитләнмәҫ бер кем дә юҡ, ләкин беҙҙә айырым бер тәнҡит ҡаҡтырмай торған айырым каста кешеләре лә бар. Уларға инде ҡыйып бер һүҙ әйтеү үҙе бер әҙәби ваҡиға. Юҡ, әҙәбиәттә былай эшләп булмай. Әҙәбиәт алдында беҙ барыбыҙ ҙә бер тигеҙ.

Бында Станиславскийҙың бер этик ҡағиҙәһен хәтерләмәй булмай: сәнғәт һинең өсөн түгел, ә һин сәнғәт өсөн булырға тейешһең. Сәнғәттә үҙеңде түгел, ә үҙеңдә сәнғәтте ярат. Был ҡағиҙә туранан-тура әҙәбиәткә лә ҡағыла. Горькийҙың да кәңәшен иҫтә тоторға кәрәк. Береҙ-береҙ командалыҡ итергә түгел, береҙ-береҙ уҡытыусы булырға, тигән һүҙҙе онотмаһаҡ ине. Быны ҙур әҙәби тормош тәжрибәһе үткән кеше әйткән.

Юҡһа, беҙҙә берәүҙәр ҡылыс, пистолет таҡҡан кеүек йөрөйҙәр. Әҙәбиәттә бындай регалиялар артыҡ, әҙәбиәттә тик ҡәләм тигән ҡорал ғына хөрмәт ителергә тейеш. Унан һуң беҙ, яңы кешене тәрбиәләшеүсе кешеләр, әҙерәк үҙ-үҙебеҙҙе тәрбиәләү хаҡында ла уйлап ҡараһаҡ ине. Ҡәләмдәшеңә хөрмәт менән ҡарарға кәрәктер ул.

13 декабрь.

Тарих һәм хәҙерге заман

Хәҙерге заман геройы тип, беҙгә тарихты, халыҡ тормошонда булған тарихи шәхестәрҙе, халыҡ тарихының күренекле ваҡиғаларын оноторға ярамай.

Ҡайһы бер шәхестәр беҙгә бөгөнгө геройҙан да бөгөнгөрәк. Тарихтың бер кеҫкен моменттарында улар беҙҙең иң яҡын замандаштарыбыҙға әйләнәләр. Үткәндәге шәхестәр ҡайһы бер беҙҙең бөгөнгө замандаштарыбыҙға ҡарағанда терерәк, байыраҡ. Улар киләсәк быуындарҙың да замандаштары. Әҙәбиәт бына шундай замандаштарҙы оноторға тейеш түгел. Үткәндәр бөгөнгөнө тыуҙырған, ә бөгөнгө киләсәкте әҙерләй. Һәм был берлекте күрмәй ҡалыу мөмкин түгел.

Эш тик шунда: замандаштарға ниндәй күҙ менән ҡарайһың. Бөгөнгө көнгә лә үткән заман күҙе менән ҡарарға мөмкин, үткәнде лә бөгөнгө көн яҡтылығында күргә мөмкин.

Минеңсә, үҙенең үткәненә ҡарай алмаған әҙәбиәт ул әле бик сабый әҙәбиәт. Был тәңгәлдә беҙгә әле бик күп эшләйһе бар. Ҙур эпопеялар тыуҙырырлыҡ материал халҡыбыҙ тарихында етерлек.

1812 йылда башҡорттарҙың Ватан һуғышында ҡатнашыуы, әгәр ҙә үҙ яҙыусыһы тыуһа, «Война и мир» эпопеяһына торорлоҡ ваҡиға бит ул.

Кешелектең ижад донъяһында рус әҙәбиәтенең гигант аҙым яһауы бына ошо эпопеяға бурыслы. Был әҫәрҙән башҡа рус әҙәбиәтен күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел.

Йәки ҡаҙаҡ әҙәбиәтендә «Абай» кеүек әҫәрҙең тыуыуы үҙе бер тарихи ваҡиға.

Бындай миҫалдар күп.

Һәм бына был бик мөһим нәмәгә — халыҡтың тарихи үткәненә күҙ йомоп ҡалыу һәм тарихи темалар өҫтөндә эшләгән әҙиптәрҙе үткән заман менән мауығыуҙа ғәйепләү иҫ киткес ҙур әҙәпһеҙлек. Бының әҙәбиәт өсөн зарары һәләкәтле.

Һәҙиә Дәүләтшинаның башҡорт әҙәбиәтенә «Ырғыҙ» романын ҡалдырып китеүе баһалап бөткөһөҙ тарихи подвиг ул.

Шулай уҡ Баязит Бикбайҙың тарихи темалар өҫтөндә эшләүе лә башҡорт совет әҙәбиәтенең иң ҙур ҡаҙаныштарынан. Ләкин ни өсөндөр беҙ был оло ижадты күрмәмешкә һалышабыҙ.

Беҙҙең йәштәр араһынан да бындай эшмәкәрҙәр табылһа, беҙ бик үкенесле, бик аяныслы хәлде булдырмаҫ инек.

Беҙ ҡайһы саҡта уйлап ҡарарға ҡурҡабыҙ. Ни өсөн рус ижад донъяһында «Могучая кучка» кеүек эшмәкәрҙәр барлыҡҡа килгән дә ни өсөн улар рустың бөтә үткәнен яҡтыртырға тырышҡан?..

Кәти

Ә шулай ҙа ул шағирә! Яҙыусы-Кәтиб кенә түгел, ә үҙ донъяһы, үҙенә генә хас моңо, теле булған нескә шағирә.

Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә әҙәбиәт институтынан һуңғы йылдарҙа, ул үҙенең данын арыу уҡ төҫмөрләтеп килә. Төҫмөрләтеп, тим, сөнки ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ әйтә торған фекерҙәрен ул баҙауыраҡ әйтә, бик үҙенсәлекле сифаттарын бөтөнләй асып һалырға уға ниҙер тотҡарлай әле. Шунлыҡтан ҡайһы бер уй-тойғоһон ул ымлыҡтар, ишаралар менән генә әйтергә мәжбүр була.

15 декабрь.

Беҙҙә үҙенең, тик үҙенә генә хас философияһы, үҙ донъяһы булған шағир, яҙыусы юҡ. Бөтәһе лә дөйөм фекер ҡоло, бөтәһе лә алдан әҙерләнгән бер фекер буйынса яҙа, бөтәһе лә дөйөм ағымға яраҡлашырға тырыша.

Бер халыҡтың яҙмышына ҡарата әйтелгән иң тарихи, иң дөрөҫ фекер ҙә хәҙер икенсе бер халыҡтың яҙмышына ҡарата булған дөйөм фекер алдында иң реакцион фекер булып ҡалырға мөмкин.

Һәр халыҡтың үҙ тарихы бар, ләкин ул ҙур халыҡ тарихының ҡорбаны ғына, уның тарихы менән бер кем дә иҫәпләшмәй. Ғөмүмән, бәләкәй халыҡтар ҙур халыҡтың тарихи ҡорбандары. Был тәнгәлдә тарихи ғәҙеллектең булғаны ла юҡ, булмаясаҡ та.

Бәләкәй халыҡтарға бирелгән ваҡытлыса ирек ул ҙур халыҡтың позицияһын тамам нығытыу өсөн генә. Был тик тарихи процестың интенсив үҫеше өсөн ваҡытлыса (бер ярты быуатлыҡ) сигенеше генә. Был сигенеү нығыраҡ алға китеү өсөн генәлер ул?

Билдәле бер тарихи дәүерҙә ваҡ халыҡтарға ирек бирмәй тороп, ҙур халыҡ үҙе теләгән иректе яулап ала алмаған булыр ине. Сөнки һәр ваҡ халыҡ, үҙ теләген ҡуйып, ошо дәүерҙә ҙур халыҡ алдында көслө булыр ине.

Ә һуңынан һәр ваҡ социаль һәм иҡтисади яҡтан оло халыҡтың хакимлығында тороп ҡалғас, оло халыҡҡа уларҙы бербер артлы йотоу һәм үҙенә нығыныу бер ни ҙә түгел. Был үҙенән үҙе эшләнә. Быныҡ өсөн хатта көс ҡулланыу ҙа кәрәкмәй. Был тарихи ҡотолғоһоҙ хәл.

17 декабрь.

Кисә лә, бөгөн дә Шамил Мәхмүтовты күрҙем. Китабын нисек тә яҡларға тырышып йөрөй. Халыҡҡа оҡшай, ти. Ә мин бына бер ҙә эле оҡшатҡан кешене күргәнем юҡ. Редакцияға бер ниндәй ҙә был хаҡта хаттар ҙа юҡ. Ә Шамил ниңә

йәшерәләр ул хаттарҙы, ниңә миңә күрһәтмәйҙәр, тип редакцияларҙы әрләй.

Минең доклад яһаясағымды ишеткәс, Әбдрәшиттән ҡилеп еткән. Ҡыҙыҡ та инде — арҡаһына ҡалҡан тағып килгән, ләкин был ҡалҡан бер ҙә мин һуға торған урында түгел... Мине формаға бәйләнер тип уйлағаң, халыҡ йырҙарының ритм-үлсәүҙәрен барлап сығып, әллә ниндәй иҫәпләүҙәр, схемалар төҙөп бөткән, ә мин бөтөнләй был хаҡта һөйләргә лә уйламайым.

Күрәһең, был хаҡта ла әйтергә кәрәктер.

Ләкин эш формаламы ни? Эш шағирҙың үҙе менән ниндәй донъя алып килеүендә, ниндәй яңылыҡ асыуында, нимә өсөн көрәшеүендә, нимәне раҫларға тырышыуында.

Ә бына был тәңгәлдә инде мин бер ниндәй ҙә әҙәби яңылыҡ күрмәйем. Бөтә был фекерҙәр асылған, күптән әйтелгән фекерҙәр бит. Уларҙың береһе лә Шамил фекере түгел.

Иң үкенеслеһе шул: шағирҙың үҙ донъяһы, тормошо юҡ, шул тормошто тик үҙенсә генә күрә торған күҙе юҡ, иң аяныслыһы ла шул — оригиналь шиғыр юҡ. Бысағымамы форма? Ни килтерә ул форма? Нимә өсөн был форма?

Был һорауға яуап биреү юҡ. Тимәк, форма форма өсөн булып ҡала асылда.

Ә бөтә фекерҙәре (улар дөрөҫ, бәхәсһеҙ) — әҙәбиәттән, ә тормоштан түгел.

Ә тел инде бөтә башҡорт, татар тел үҙенсәлеген емереү, төрки теленең грамматик закондарын аҙым һайын боҙоу, бер ҙә кәрәкмәгәнгә тел өйрәнмәҫ инверсиялар йәки рифмаланған проза.

Бөтә обороттар, һүҙбәйләнештәр русса. Тот та машинистка эргәһенә ултырып туп-тура руссаға ауҙар ҙа сық инде шиғырҙарын. Хатта һүҙлек тә кәрәкмәй.

Кемде руссаға тәржемә итеү еңел тиһәләр, мин иң беренсе сиратта Ш. Мәхмүтовты күрһәтер инем. Бөтә фекер ағышы, һөйләм конструкциялары русса эшләнгән.

Юҡ, исключенияларҙан грамматика төҙөп булмай инде!..

Былай яҙғанда телде эске яҡтан тарҡатыу ғына булыр ине. Беҙҙә әлегә быны иң шаблон рифмач та эшләй алмай.

Ә Шамил эшләй. Быны аҡлау өсөн әллә ниндәй теориялар уйлап сығара, үлә яҙып бәхәсләшә, ләкин был бәхәс мәғәнәһеҙ — сөнки ул һинең фекереңде, һүҙеңде бар тип тә белмәй, һинең һүҙең уның мең һүҙенә бәхәсләшеү аҙығы ғына. Уның менән бәхәсләшкәндә үҙеңде ахмаҡ итеп тоя башлайһың.

Унаң алдында һинең бөтә уй-фекерең консерватив, иҫке ҡалыплы, ә яңы фекер, яңыса ижад итеү ул тик Мәхмүтов ғәли йәнәптәрендә генә. Ни даулай ул! Нимә эшләргә тыры-

ша? Һәм ни өсөн? Мин хатта аңлай ҙа алманым. Әгәр ҙә былар ысын-ысындан әҙәбиәт өсөн, уның киләсәге өсөн икән, ниңә ул сәкта ала ҡарға булып ҡыланырға? Неужели Шамилдан башҡа башҡорттоң үҙ әҙәбиәте өсөн янған үҙ шағирҙары юҡ? Неужели улар бөтәһе лә шул тиклем аңра һәм артта ҡалған?

Фәжәп бер тип был Шамил! Фәжәп һәм сәйер. Әгәр ҙә инде ул шағир икән, ниңә ул шул тиклем үҙенең шағирлығын көсәнеп, шул тиклем тиреһенән сығырҙай булып иҫбат итергә тырыша? Был бит бер ҙә уның файҙаһына түгел!..

Форма ул үҙе менән ниндәйҙер яңылыҡ килтермәһә, ул тик форма ғына. Нимәгә беҙ Рәсүл Ғамзатовты ҡабул иттек шулай? Форма өсөнмө? Һигеҙ юллыҡ шиғырҙар ул борон-борондан килгән форма Шәреҡтә. Ә ул ошо һигеҙаяҡтары менән бөтә донъяны атлап сыҡты. Һәм беҙ һәр бер шиғырын уның көтөп алабыҙ.

Сөнки ул беҙҙең уй-тойғоларыбыҙҙы, беҙҙең күңелдә ятҡанды, беҙҙең аһтарҙы әйтеп бирә. Ниңә беҙ уны, Вознесенскийҙан өйрәнмәгән өсөн, ят күргә тейешбеҙ?

Шекспирҙың был хаҡта бер сонеты быға бик яҡшы яуап бирә. (Маршак тәржемәһе.)

14 декабрь.

Иң мөһиме — тормош сумып йөрөп йөҙһөн ине беҙҙең йөрәктәрҙә. Һүҙҙәребеҙ ҡыу ҡалҡыуыс кеүек өҫтән генә дерелдәп йөрөмәһен ине. Күҙҙе йома-йома уҡыуҙан да, йәки шиғырҙы йылмайып, ҡулды һелтәй-һелтәй уҡыуҙан да уның фекере тәрәнәймәй. Танау менән уҡыҡанда шул уҡ һөҙөмтә шикелле. Йәки быйыл мин күберәк ғилми эштәр менән мәшғүл булдым тип, уҡыҡанда ла ул тәрәнәйеп китмәй. Шулай уҡ бик оло бас та ярҙам итмәй. Таҡыр башыңды бер-ике бөртөк сәсең менән ҡаплап ҡуйып уҡыҡанда ла шағирҙың риторикаһын ҡаплап булмай.

Әммә ләкин уҡыусы шиғыр көтә, түҙемһеҙлек менән көтә. Төрлө-төрлө шиғырҙар көтә. Моңһоуын да, шаянын да, тупаҫырағын да, нескәһен дә.

Ҡояшты социаль яҡтан «дурак һин» тип иғлан итеү менән, поэзияла юмор артып китмәй. Даян ағайҙың ҡайһы бер ҡыҫҡа шиғырҙары шул тиклем оҙон, уларҙы һис тә ҡурҡмайынса бер юлы ла ҡалмаҫлыҡ итеп ҡыҫҡартырға мөмкин!

Уларҙа ғәжәп көслө фекерһеҙлек. Яҙ булһа, ҡар ирей, ҡояш булһа, көн аяҙ, көҙ булһа, япраҡтар һарғая тип шатландырмағанда ла, был яҡты донъяла шатлыҡ тигән нәмә арыу уҡ бит. Ул үҙе ошо дүрт юллыҡ бик оҙон шиғырҙарын шул тиклем бирелеп уҡый, хатта әллә уларҙа бик шиғри, минең зиһе-

нем асып еткермәгән фекерҙәр бар микән тип ғәжәпкә ҡалаһың. Артыҡ ныҡ ғәжәпләндермәһен ине Даян ағай. Юҡһа, үҙеңде нисектер ҡәбер ҡаҙып ҡайтҡан, таланған, меҫкен кеше кеүек итеп тояһың. Һинең зиһен-аҡылыңдан кемдер көлгән кеүек тойола башлай, донъя арыу уҡ төҫһөҙләнеп киткәндәй була.

Донъя беҙҙең шиғырҙарҙа үҙенең барлыҡ буяуҙары менән йәшәһен, көлһөн, илаһын, үҙенең бөтә серҙәрен, мәғәнәһен кешегә асып бирергә тырышһын ине.

Юҡһа, беҙ уны мәктәптәге ятланып бөткән ер шары кеүек зыр итеп әйләндерәбеҙ ҙә һ тигәнсе бына Мәскәү тибеҙ.

Бына Европа, бына Азия йәки бына Америка тип, яңы донъя асабыҙ.

Поэзияла аҙыраҡ уйланырға ла кәрәктер. Юҡһа беҙҙең ҡайһы бер ағайҙар поэзияға аҡыл кәрәкмәй тип, беҙҙе һаман тал сыбыҡҡа атландырып йөрөтмәксе булалар.

Пушкин һүҙенә аңлатма:

Әҙәмдәрҙән әҙәм кәм түгел,
Тик бәхете генә тиң түгел...

Тезистар:

«Яңы заман
яңы йыр һорай».

Нисек итеп яңыны яҙырға! Яңыһыҙ үҫеш юҡ. Ә яңыны асыу иҫ киткес ауыр, яуаплы. Ул ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, ижади тәүәккәллек һорай. Быны һәр кем үҙе генә эшләргә тейеш. Бер кем дә был өлкәлә ярҙам итә алмай.

Тик тормош, үҙеңдең тормош тәжрибәң һәм үҙеңдең шул заманың тормошона булған мөнәсәбәтең.

Ләкин бер-береңдең мөмкинлектәрен, үҙенсәлеген таныу өсөн бергәләп һөйләшеү, әгәр ҙә ул һөйләшеү ихлас булһа, бик кәрәк.

Яңыны тоҫмаллау өсөн, киләсәккә ҡарау өсөн бөгөнгөгә, үткәнеңә әйләнеп ҡарайһың.

Бына беҙ бында шуның өсөн йыйылғанбыҙ ҙа инде.

Беҙҙең күптән инде һөйләшкәнебеҙ юҡ. Һәм бында һөйләшеүҙәр хаҡында ла һөйләшергә кәрәк.

1. Заман-тормош (етмәй! Тормош!). Элеккеләр менән сағыштырып ҡарарға).

2. Ҡыйыулыҡ етмәй. Ғамзатов. (Рус поэзияһы менән сағыштырып ҡарарға.) Баҫыуҙа тормоз ғәжәп ҙур тотҡарлыҡ яһай.

3. Ваҡытында һүҙ әйтергә. (Таш төшкән урынында ауыр.) Башҡаларҙан һуңламаҫҡа.

4. Йәштәргә — башлап сығыш яһағанда ғына иғтибар итәбеҙ, ә аҙаҡ ул үҙ алдына япа-яңғыҙ тороп ҡала. Был зарарлы.

5. Ижади тарҡаулыҡ — көстәрҙе бер маҡсатҡа тупламау ҙа бик зыян итә.

6. Тәнҡиттәге бер тауыш — дөрөҫмө, юҡмы ул — һуңғы һүҙ булып ҡала. Шуға һүҙ ҡушырға, бер фекергә килергә активлыҡ етмәй.

7. Китап сығарыуҙағы тәртипһеҙлек. Бөтөнләй кәрәкһеҙ китаптар сығарыу кәрәклеләрен сығарыуҙы сиклә́й.

Мөхәррирҙәр менән булған мөнәсәбәт бик хөрт.

8. Монографиялар манияһы. Яңы антология. Теория. Дәреслектәр. Мөхәррир йәштәр юҡ.

9. Поэзияны пропагандалау, китаптар һатыу, яҡшы лирика үрнәктәрен сығарыу, уҡыусылар менән осрашыу.

Образ — ағастың йәшлеге, үҫеүҙә — ос һабаҡтар, һиҙгерлек. Тамырҙарҙың, төп олондоң ныҡлығы.

10. Яуаплылыҡ — һәр нәмәлә.

11. Башҡа туғандар менән аралашыу.

12. Бер-берең өсөн яныу, һаҡсыллыҡ хаҡында. Бик эгоисбыҙ! Ә үҙебеҙ коммунистик әхләҡ, этиканы раҫлаусы кешеләрбеҙ.

13. Халыҡ яҙмышы хаҡында уйланырлыҡ нәмәләр аҙмы ни. Башҡортостандан ситтә аҙмы башҡорт, татар йәшәй. Уларҙың культураһы тураһында кем уйларға тейеш? Дини фанатизм. Артталыҡ. Ә бит бында бөтөн бер халыҡ йәшәй. Эскелек.

14. Әҫәрҙең теле ифрат ярлы. Ә беҙ бит әҙәби телде лә үҫтерергә саҡырылған кешеләр. Яҙ. Телде ҡулланыусы ғына түгел, тыуҙырыусы ла. Борсолоу күренмәй. Ә урыҫтар борсола. Тел һағында ниндәй гиганттар тора — Шолохов, Твардовский, Чуковскийҙар. Ә беҙҙә кем?

Телһеҙ поэзия юҡ. Әлеге ул беҙҙең төп ҡоралабыҙ һәм ул киләсәкте яулашырлыҡ тел булырға тейеш. Ғамзатов шуның өсөн дә халыҡ шағиры. Уртаҡ шағирға әйләнде ул.

15. Йыр текстары тураһында. Йыр — рухи байлығыбыҙ. Ә йөк һаман да бер урында. Союз хужа булырға тейеш. Халтура хужа булмаһын.

16. Теоретиктар ниңә бик яй ҡуҙғала? Ниңә улар үткәнгә генә ҡарай.

Оҫталыҡ тураһында

17. Формализм тураһында Н. Хикмәт формулировкаһы.

Шамил Мәхмүтов әҙләнергә хаҡлы, ләкин ҡатындарға асыу килерлек булмаһын.

18. Аҡыл һәм тойғо. Пушкин һәм Бикбай.

19. Халыҡ ижадына иғтибар йыйырға, ижади үҙләштерергә.

20. Тәржемә — руссанан һәм руссаға. Хоҡуҡ. Татарса иң яҡшыларҙан бер йыйынтыҡ сығарғанда бик шәп булыр ине (башҡорт шағирҙары, әҙәби бәйләнеш тураһында баш һүҙ яҙып).

21. Балалар өсөн шиғырҙар инфантильный булмаһын ине. Бик аныһат яҙыла. Марат та Айрат. Күпме шаблон. Балалар өсөн был шиғырҙар күпме балаларҙа шиғырға нәфрәт тәрбиәләй (Әлфинур Вахитова, К. Кинйәбулатова, Ф. Рәхимғолова, Ф. Мөхәмәтйәнов, Әфғ. Фиҙҙәтов) — яҡшы үрнәк. Ә халтура күп. Тематика тар. Белинский һүҙе.

Төрлө уйын текстары, таҡмаҡ, йырҙар кәрәк. Быныңбик күп тармаҡтары бар. Әкиәттәр! (Шиғри, балладалар — «Ҡыҙыл букет», «Диңгеҙ һыуы ниңә тоҙло булған?», «Өйрәнде нисек өрөргә көсөк».)

22. Сатира һәм юмор. Марат Кәримов, Т. Арслан һ. б. «Һәнәк». Ҙур үҫеш, ләкин социаль сатира юҡ дәрәжәһендә.

«Башҡорт көлөүе» тигән бер йыйынтыҡ әҙерләргә кәрәк ине. Был үҙе бер ҙур таяныс буласаҡ.

Баштан башлап бөгөнгө көнгә тиклем. Фәжәп бай ҡорал буласаҡ. Кәтүк менән Бағанай аҡылдан шашыр ине.

23. Нәҫерҙәр. (Ш. Фидаи — И. Абдуллин.) Уртаса шағир булыуҙан уртаса прозаик булыу яҡшыраҡ. Уны, исмаһам, уҡыйҙар. Ул яҡшы прозаик тыуҙырышырға ярҙам итә. Ә уртаса шағир поэзияны ултерешә.

Поэзияла яҡшы өлгө генә яҡшыны тыуҙыра.

Шуның өсөн шиғыр яҙып та шағир була алмағандар прозаға күсеү хаҡында иртәрәк уйларға тейештәр. Ә яҡшы шағир ҡасан да яҡшы прозаик була ала. Яҙылғанда ул шиғыр яҙһын.

Ижади ғүмерҙе йәлләй белергә кәрәк.

Ғүмер буйы шиғыр яҙып та, шағир булмай үлеү — бик ҙур фажиғә.

Әкрәм Вәли ағай, ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең, шулай күп ғүмерен әрәм итте. Уға һуғыштан ҡайтҡас уҡ прозаға тотонорға кәрәк ине — юҡһа, ул бер шәп шағирҙың урынын алып йәшәне, ә үҙенән ни бары ике юллыҡ шиғыр ҡалды.

Мин йырымды ҡайҙан башлаһам да,
Һиңә ҡайтып ҡала, Ватаным.

Сәйфи Ҡудаш ритмы тураһында.

Ритм боҙола, ә үлсәм дөрөҫ. Ләкин ритм — үлсәм генә түгел. Прозала ижектәр һаны юҡ, ләкин ритм бар. С. Ҡудаш ритмды шулай аңлы рәүештә эшләйем ти. Ләкин бынан поэзия өсөн отош күрмәйем мин. Ә ҡарт шағир өсөн уңайһыҙланырға тура килә.

Был үҙенсәлек түгел, сир.

Дауаларға кәрәк сирҙе, ә беҙгә был сир менән ауырырға ярамай.

Ритмик быуын бар, ул быуын тоторға тейеш, шылҡылдап тормаһын. Бабичта ул юҡ.

Ләкин беҙҙә ҙур пост, етәкселек урынын алып торған кеше генә коммунисҡа, партия вәкиленә иҫәпләнә, ә партия эше өсөн йәнен биргән, уның өсөн бөтә көсөн аямаған ысын кеше быға ярамай.

Рангыһы түбән...

Ә бит ысын партия вәкиле пьесала Чекмарев. Унан һуң авторҙың үҙ маҡсаты бар. Ул тарих яҙмай, уны даталарға сынйырлап ҡуйырға ул этме ни?

Беҙҙә туҡмалғандарҙы туҡмау модала. Ш. Мәхмүтов, Азат Абдуллинды туҡмайҙар. Һәм был туҡмаҡты ҡыҙылға төрәләр. Ләкин нисек кенә төрмә, бының эсендә кешегә иҫ киткес ғәмһеҙ, оятһыҙ, әшәке бер күҫәк ята.

«Онотма мине, ҡояш!» — минең өсөн һуңғы йылдарҙа иң тулҡынланып, кисереп ҡараған сәхнә әҫәре.

Был кеше рухы тураһында поэма ине. Һәм кеше 30-сы йылдарҙағы иң яҡшы, иң ысын коммунист Сергей Чекмарев ине.

17 декабрь.

Поэзияла илебеҙҙең төҫө ниндәй?

Беҙ уның тарихи, рухи, тәбиғи йөҙөн тулыһынса күрһәтә алдыҡмы?

Башҡортостан ниндәй ил бөгөн?

Әгәр ҙә беҙҙең поэзиянан сит ил уҡыусыһы уның төҫөн күргә, халыҡтың характерын күргә теләһә, нимәләр таба алыр ине?

Ә бит халыҡтарҙы уның әҙәбиәтенән, халыҡтың рухи тормошон уның поэзияһынан танып беләләр.

Ләкин беҙҙең поэзияның ни биреүен әйтеүе бик ауыр.

Нишләптер беҙҙә Сәләмдән һуң яңы «Республика иртәһе»-нең булғаны юҡ әле. Ә бит унан һуң Башҡортостан иртәләре ни тиклем үҙгәрҙе, ни тиклем байыҡты!..

Ләкин бына хәтерҙә ҡалырлыҡ шундай уҡ көскә эйә булған шиғри иртәнең булғаны юҡ әле.

Бәлки, тормоштағы был иртәләр ғәҙәти бер иртәгә әйләнгәнгәлер?

Ләкин поэзияның бурысы ошо күнегелгән ғәҙәти иртәләрҙе ғәҙәттән тыш хәл итеп күрһәтә белеүҙә түгелме?

Беҙ артыҡ ғәмһеҙ һәм хуш күңеллегә эйләндек түгелме?

Ә башҡа илдәрҙең төҫөн күрһәтеү?

М. Кәримдең Вьетнам, Н. Нәжмиҙең Һиндостан тураһындағы шиғырҙарынан был илдәрҙе төҫмөрләргә мөмкин. Ә Рамазановтың ғәрәп циклынан ниндәй Фәрәбстанды күргә мөмкин?

Ш. Мәхмүтов та Праганың һәм Чехтарҙың алтын булыуы тураһында, беҙ белгәндәрҙән уҙып, әллә ни әйтә алмағаң. Нисектер былар бик дөйөм.

Ә бит Есениндың «Персидские мотивы» циклынан, ул Персияла үҙе булмаһа ла, Персияны күрәһең, тояһың. Ул ышандыра һине.

23 декабрь.

Төнгө сәғәт 4-тә йөрәккә приступ. Нитроглицериндан баш тубал һымаҡ. Врач Хәбибуллин тиҙ ярҙам машинаһы менән килеп ике укол яһаны.

Врач Ғафури районынан, 18-се больницала эшләй.

Укол: атропин, водород морфийы.

24 декабрь.

Шамил Мәхмүтов «яңы»лығына ниңә иҫегеҙ китә? Новатормы ул? Минеңсә, ул бер кемгә лә оҡшамаҫҡа тырыша ғына.

Ләкин үҙе төрөккә лә, французға ла, испанға ла оҡшап тора. Чехҡа ла.

Төрөк Назым Хикмәт хатта уны бөтөнләй ҡаплап китә. Артур Рембо ла, Луи Арагон да, Неруда ла, Незвал да, хатта Солоухин да Шамилды күрһәтмәҫкә тырышалар. Ә ул был тауҙарға менеп үҙен күрһәтергә тырыша. Йөк башындағы ҡырмыҫҡа һымаҡ. Ә һин күренергә теләһәң, улар кеүек үҙең тау бул. Ә тауҙар һәр береһе үҙ илдәрендә, үҙ милли тупрағында, үҙ географик һәм тарихи киңлектәрендә үҫеп сыға.

Маяковский, мәҫәлән, шундай яңы тауҙарҙан. Уитмен да шулай уҡ. Лонгфелло ла үҙенең Гаявата хаҡындағы йыры менән шулай үҫеп сыҡҡан тау.

Бигерәк тә беҙгә Маяковский яҡыныраҡ. Ул әле һары кофта кейеп йөрөгәндә үк һары эсендәге оло йөрәге менән быға донъялағы тел-әҙәбиәт тарихы белмәгән әҙәби революция яһай. «Тринадцатый апостол» йәки «Облако в штанах» поэмаһында бит ул бөтөнләй яңы фекерҙәр, быға күренмәгән бөтөнләй яңы сюжет, быға күрелмәгән яңы ритмика, яңы рифмалар системаһы, яңы синтаксис, яңы һүҙлек алып килә рус әҙәбиәтенә.

Ә Шамил ни алып килә? Быға ишетелмәгән яңы фекерҙәрме? Юҡ. Яңы сюжеттармы? Юҡ. Яңы ритмикамы? Юҡ.

(Уны беҙ Пушкиндың Балда тураһындағы әкиәтендә үк күргәйнек инде.)

Яңы рифмалармы? Юҡ. Уның рифмалары барыһы ла Бабичтан башлап Назаровҡа тиклем барыһы ла беҙҙә бар.

Яңы синтаксисмы? Ул да, йәғни русса обороттар, беҙҙә башҡортса уйлай белмәгән шағирҙарҙа байтаҡ бар.

Һәм беҙ быны әлегә, башҡорт теленең быуаттар буйы нығынып, ҡалыплашып килгән синтаксисы бар ваҡытта, әҙәби телебеҙгә индерер өсөн бер ниндәй ҙә мохтажлыҡ күрмәйбеҙ.

Ә яңы һүҙҙәр?

Улар ҙа юҡ Мәхмүтовта. Булһа ла, улар ғәрәп-фарсы һүҙҙәре генә. Ә башҡорт теленән ингән берәй яңы һүҙҙе мин унда күргәнем юҡ әле.

Ғөмүмән, ни һуң бар унда новаторлыҡ затынан. Ҡобайыр алымын шифырға һалып, шифырҙар үлсәүен халыҡ йырҙарының үлсәүенә тарттырып ҡына новатор булып булмайҙыр ул?

Стиль ул, кемдер әйтеүенсә, ул кешенең үҙе, характеры. Форма ла йөкмәткенең кәүҙәләнеше, шифри фекерҙең мотлаҡ бер шәкеле генә.

Ҡайнар ҡурғашты һирпеп ебәрһәң, ул төрлө шәкелгә кереп һынлана. Шифыр ялҡыны ла, минеңсә, шундай шәкелгә керергә тейеш.

Ни һуң яҡшы Шамилда? Эҙләнеү.

Ләкин был эҙләнеүҙә ни һуң насар?

Кешеләр эҙләнеп үткән ерҙән эҙләнеү насар.

Кеше инде елəген йыйып киткән аҡланда, әлбиттә, ҡайһы бер япраҡ аҫтына боҫоп ҡалған елəктəр ҙə, əле ваҡытында аҡый ғына булып бешеп етмəгəн, ләкин ваҡыт үтеү менəн инде бешеп еткəн елəктəр ҙə табылырға мөмкин (ҡайһы бер бындай тəлгəштəр унда юҡ түгел).

Ләкин ни тиһəң дə үҙ аҡланыңды, үҙ елəгеңде эҙләргə кəрəк. Кеше аяғы баҫмаған урынды табырға ине.

Ҡасандыр донъялағы донъяны танып белеү фекере яҙылған юлдар бөтəһе лə шифри юлдар менəн яҙылған. Боронғо грек философтары, рим ғалимдары хатта фəнни фекерҙе лə шифыр менəн яҙғандар. Кар Лукреций «О природе вещей» китабында хатта атом төҙөлөшө тураһында һөйләгəндə лə шифырҙан айный алмаған. «Илиада», «Одиссея»ларҙан алып Ҡөрьəнгə тиклем, хатта Буалоның шифыр төҙөлөшө тураһындағы «Поэтика»һына, хатта Ломоносовтың быяла тураһындағы трактатына тиклем шифыр менəн яҙылған. Шəреҡ шағирҙары?!

Хəҙер фəндəр айырымланған, фəндəр эсендə фəндəр барлыҡҡа килгəн ваҡыт. Шифыр күп йөктəн бушаны.

Ә бынан шиғырҙың бурысы кәменеме һуң? Шиғырҙан аҡыл китергә тейешме һуң? Юҡ, әлбиттә.

Шиғыр фекерҙең юлдашы. (Был хаҡта Виноградов бик яҡшы әйткән.)

Поэзия яңы осоштар алдында тора. Кеше аҡылы нескәргән фекерҙән синтезға, ҙур дөйөмләштереүҙәргә, ҙур һикерештәргә килә. Яңы поэзия ошо һикерештәрҙән яңы фекер аласаҡ. Ә беҙҙең культура министрынан түгел, әлбиттә.

Кеше күңеле үҫә. Ә поэзия — кеше күңеле.

Тимәк, беҙҙең поэзияға бөтә йәһәттән — нескәлек яғынан да, интеллектуаль яҡтан да — оло эҙләнеү юлына сығырға кәрәк!

Был тәңгәлдә эҙләнеү мотлаҡ нәмә. Ләкин Шамил кеүек эҙләнеү артҡа китеп эҙләнеү булыр ине.

Беҙгә артҡа китеп тороу кәрәкмәҫ. Былай ҙа беҙҙең поэзия 20 йыл буйы артта ҡалып килде. Шәхес культының был һәләкәтле ҡоршауҙары бигерәк тә иң милли әҙәбиәттәргә һәләкәтле булды. Беҙ әле лә уның шауҡымынан ҡотолоп етә алмайбыҙ. (Х. Кәрим, Ғ. Рамазанов, М. Марат, Б. Вәлит...)

Йәштәр быны, әлбиттә, еңелерәк кисерҙе. Ләкин ҡайһы бер йәштәргә ул бигерәк тә һәләкәтле булды. (Игебай, Шакир Бикҡол һ. б.)

Күптәр был ҡырауҙы күтәрә лә алмаҫҡа мөмкин.

М. Кәрим публичное раздевание — бөтә халыҡ алдына сығып сисенеү тураһында бик дөрөҫ әйтә.

Эйе, был сисенеүҙә урам буйында хәйер һорап ултырғандарҙың ғәриплеген генә күрәһең (Евтушенко).

С. Ҡудаштың алма баҡсаһы бик бай, әлбиттә. Ләкин ул серек алмаһын сығармаһын ине. Ашлама ғына итһен ине.

Хәҙер химия бик яҡшы гербицидтар эшләп сығара, шуларҙы ул үҙ баҡсаһында файҙаланһын ине. Шулай уҡ, тәбиғәттән шәфҡәт көтмәй, уға ҡарт ағастарын әҙерәк яңыртыу, прививка үткәреү яғын да ҡарарға кәрәк. Алмаһының нәҫеле аҙмаһын. Юҡһа, бик күп алмаларынан бик күбеһе ашарға яраҡһыҙ булып сыға. Журналда, газеталарҙа аптырашып ултыралар. М. Кәрим, мәҫәлән, күп тә, яҡшы ла булһын — шул талант, ти, Рәсүл тураһында һөйләгәндә. Әлбиттә, мин йәштәрҙән өйрәнһен тимәйем. Тютчев, Фет кеүек, Гюго, Баранже, Гете кеүек талапсаныраҡ ҡарттарҙан өйрәнергә лә була.

Унан һуң шағирҙар тураһында иҫтәлектәр яҙғанда Корней Чуковский кеүек ҡарттарҙың иҫтәлегенә лә күҙ һалыштырғанда насар булмаҫ ине.

Беҙ, йәштәр, үҙебеҙҙең татар, башҡорт шағирҙарының сәй эсеү, ҡымыҙ эсеү оҫталығына артыҡ иғтибар итмәйенсә, уларҙың шиғыр яҙыу оҫталығына нығыраҡ иғтибар итер инек.

Юҡһа, беҙҙә М. Ғафуриҙы шағир итеп танымаған йәштәр ҙә юҡ түгел.

Беҙгә әҙәбиәтебеҙҙең әле яҙылмаған шиғри тарихы бик кәрәк. Миңә, мәҫәлән, Бабичтың оло ҡолағы булыуҙан бигерәк, уның оло оҫталығы тураһында белеү ҡыҙыҡлыраҡ.

Кулибай ағайға ла, башҡаларға ла ошо теләкте еткерәһе килә.

25 декабрь.

Атнабайҙың «Мин һиңә өндәшәм» йыйынтығын бер тын менән уҡып сыҡтым. Поэзия шырлығынан һуң хуш еҫле, йыйнаҡ, иркен, яҡты бер аҡланға барып сыҡҡан һымаҡ булдым.

«Замандашым» поэмаһынан башҡалар бөтәһе лә оҡшаны. («Замандашым»да замандаш юҡ, бик примитив урындары күп, дөйөм хәҡиҡәт һөйләп сығылған, ғөмүмән, был әҫәр поэма түгел.) Ә шиғырҙар шиғыр инде. Ни генә тимәһендәр, Атнабай шағир һәм бик оригиналь шағир. Тик һайыраҡ, тарыраҡ. Тәрәнәйергә, киңәйергә, тормош тураһында күберәк уйланырға кәрәк.

Унан һуң бик сәйер ғәҙәт бар Атнабайҙа: әгәр ҙә юлы кеше баҡсаһы тирәһенәнерәк үтһә, берәй деталь йәки образ йылмайыбыраҡ сәскә атып ултырһа, уны өҙмәйенсә йәне түҙмәй инде уның. Кеше баҡсаһына төшөүҙә, әлбиттә, поэзия ла барҙыр, ләкин поэзия баҡсаһына төшөүҙе китап маҡтап бөтмәй. Бында әҙерәк тәнҡитсе кесерткәне ҡулланыу бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине.

Кеше баҡсаһында, әлбиттә, гөлдәр ҙә матур, емеш тә тәмлерәк күренәлер. Шулай ҙа был сифат балаларға хас. Ә ололарға «түҙ, йөрәгем, түҙ» тип үтергә кәрәктер.

28 декабрь.

Нишләптер беҙҙең шиғырҙарҙа авторҙарҙың үҙҙәренә генә хас оло маҡсаты, йәне-тәне менән нимәнелер яҡлауы, ни өсөндөр һуғышыуы, ҡыҫҡаһы, үҙҙәренең актив философияһы юҡ.

Шиғырҙар һалҡыныраҡ, тулҡынландырмай, шыма, шыйғалаҡ, бер ҙә күңелгә һеңеп ҡалмай. Нишләптер барыһы ла үҙ-үҙҙәренән ҡәнәғәт, күңелдәре тымыҡ күлдәй тыныс, бер нинди ҙә борсолоу, болоҡһоу тигән нәмә юҡ. Нилектән был?

Бөгөнгө поэзиянан был һорауға яуап табалманым. Ә уҡыусы уны бик көтә ине.

Хәҙер халыҡ яңынан үҙенең халыҡлыҡ хоҡуғын шәхес ҡулынан тартып алды, яңынан уның үҙаңы (самосознаниеһы) кире ҡайтты, халыҡ үҙен яңынан тормоштоң хужаһы булыуын, тарихты ижад итеүсе берҙән-бер көс булыуын тойҙо.

Әлбиттә, шәхес культының йоғонтоһо, зарарлы эҙҙәре күп әле. Әле һаман атрофия алған нәмәләр бар. Бына шуның өсөн, халыҡта уның үҙ рухын нығытыу өсөн, халыҡ үҙен берҙән-бер хужа итеп тойһон өсөн, үҙ көсөн тойһон өсөн бик күп эшләргә кәрәк.

Халыҡ үҙен эш эшләүсе генә итеп түгел, ә үҙ яҙмышын үҙе хәл итеүсе итеп тойһон. Инициативаһыҙлыҡ, ҡул һелтәп ҡарау, күңел һүрәнлеге кеүек пассив тойғоларҙың тамсыһы ла тороп ҡалмаһын ине. Етәкселек тә үҙ мәнфәғәтен, үҙ карьераһын ғына ҡайғыртып йөрөүсе «тәжрибәле» тип танылған, ләкин асылда халыҡта бер ниндәй ҡайғыһы булмаған дежур етәкселәрҙән һаҡ булһын, формализмға юл ҡуймаһын ине.

Поэзияның бурыстарын киңәйтергә, уның үҙ хоҡуҡтарын тиҙерәк ҡайтарып бирергә кәрәк.

Поэзия тормошто биҙәкләү йәки әҙер фекерҙәргә иллюстрация ғына түгел, ә ул тормошто төҙөшөү, үҙгәртеү ҡоралы. Ул үҙе фекер бит. Ниңә ул әҙер фекерҙәргә генә тағылып йөрөргә тейеш һуң әле?

Ул тормошҡа һиҙгерерәк, ҡыйыуыраҡ ҡарашлы булһын. Шунда ғына ул беҙҙең иң матур идеалдарыбыҙға хеҙмәт итәсәк. Ә беҙ хатта әҙер фекерҙе лә ҡыйыуыраҡ әйтергә ҡурҡабыҙ.

Ә шул арҡала күпме рухи ҡиммәттәр юғала? Әйтәйек, шул тел мәсьәләһе. Һыу менән бергә баланы ла сайып ташламайбыҙмы? Бит халыҡтың бөтә быуаттар буйы тыуҙырған рухи культураһына ҡурҡыныс тыумаймы ни? Бер ниндәй халыҡ та рухи яҡтан хәйерсе булмаған. Дөйөм хазинаға һәр халыҡ үҙ өлөшөн индерә аласаҡ.

30 декабрь.

Бөгөнгө ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы, героик тормошто хатта Мостай ҙа ситләтеп үтә, уҡыусыны ғазаплаған һорауҙарға төрлө «сер»ле йылмайыуҙары, кинәйәле «ҡара һыуҙары» менән генә яуап бирә. Пьесаһы ла алыҫ үткән замандарға — тағы кинәйәгә ҡоролған. Ә ниңә бөгөнгө көндөң үҙенә туп-тура ҡарап, туп-тура ҡыйыу һүҙ әйтмәҫкә? Әлеге дистанцияны һаҡларғамы? Ваҡиғалар һыуына төшкәнен көтөргәме? Һалҡын һыуҙы ла өрөп эсергәме? Фөмүмән, әҙәби йүнәлеш шулмы әллә?

Назарҙың да һуңғы ижады мәңгелек темаһына — йыр һәм уның урынын асыклауға ҡайтып ҡала. Ул хатта конкрет шағир Мәлих Харис тураһында ла түгел һымаҡ.

Сәнғәтте сәнғәттә сағылдырыу тормошто төрлө көҙгөләр аша сағылдырыу түгелме?

Фәжәп шартлылыҡ күп. Йәки «Ике йылға» кеүек примитив әҫәрҙәр.

Х. Ғиләжев та курорт шиғырҙары менән үҙенең трибун тауышын томалап ҡалдырҙы.

Кемдән үрнәк алырға?

Мостайҙа ниндәйҙер морализация, ә мораль тема күтәреү түгел. Ә бөгөнгө тормош — «йырланмаған йыр» булып ҡала килә.

Ә нужа, промышленноста, кешеләр характерында күпме үҙгәреш. Интеллигенция тормошо ла ентекле күҙ һалыуҙы һорай. Ҡайҙа уның интеллектуаль йөҙө? Беҙҙең әҙәбиәттә ул хәҙер бөтөнләй күренмәй. Ә ҡайҙа хәҙерге, бөгөнгө көн йәшлеге? «Замандашым» поэмаһындамы? Юҡ, унда беҙҙең замандаш үтә фәҡир, үтә примитив. Беҙ ҡайһы заманда йәшәгәнебеҙҙе онотабыҙ шикелле?

Әҙәби тормошобоҙ, әгәр ҙә йәштәр менән үткәрелгән бер семинарҙы, традицион шиғыр кисәһен, бер нисә районға сығып әҙәбиәт һәм сәнғәт аҙналығын үткәреүҙе иҫәпкә алмағанда, бик бер төрлө, тоноҡ.

Партия йыйылыштары үткәрелә, ләкин унда ниндәй мәсьәләләр күтәрелгәне беҙгә мәғлүм түгел.

Юбилейҙар яһап ҡына әҙәби процесты йәнләндереп буламы икән?

Йәки Абдуллин һәм Ихсандарҙың судлашып йөрөүҙәре беҙҙең әҙәби хөкөмдән ниңә ситтә ҡала икән? Әллә тәнҡитселәр урынына беҙҙең әҙәбиәт торошо тураһында прокурор йәки следователдәр генә хөкөм йөрөтөргә тейешме икән?

31 декабрь.

Ихсан Әхтәмйәнов, Әхмәт Ғайсин, Абдулхаҡ Игебаев, Муса Сиражетдинов, Яҡуп Ҡолмой Яңы йыл шиғырҙарын уҡынылар. Ниндәй иҫкелек, ниндәй шаблон шиғырҙар!.. Утыҙ йыл артҡа, шиғырҙар шырлығына китеп аҙашаһың.

Ялтырауыҡ шыршы биҙәктәре генә бит был шиғырҙар.

Унан һуң яһалма тауыш менән, ялған пафос менән М. Кәрим шиғырҙарын уҡыйҙар. Бәлки, уҡыусы ла быға күнегеп бөткәндер?

4 ғинуар.

Һәр аҙыҡты үҙе һеңдергән, эшкәрткән организм ғына көслө. Зарарлы, яраҡһыҙ матдәгә ул үҙенең уларға ҡаршы торорлоҡ антиматдәләрен эшләп сығара.

Әҙер сәйнәлгәнде йотоу организмға бик аҙ йоғонто яһай. Бында әле беҙ белмәгән әллә ниндәй химик реакциялар барҙыр әле?

Кеше лә бит колба эсендә тыумай. Тик тәбиғи үҫеш кенә сәләмәт.

Тәбиғәткә ҡаршы барыу барыбер үҙенең кире йоғонтоһон яһай, нәҫел боҙолоуға, вырождениға килтерә.

Үҙе, үҙ көсө менән үҫкән матур. Әҙәбиәт тә шулай уҡ кеше тәбиғәтенең үҙ ҡаҙанышы. Уны беҙгә бер халыҡ та бирмәгән һәм бирмәйәсәк тә. Ул башҡа халыҡтарҙың ижад мираҫынан өйрәнергә мөмкин һәм өйрәнергә тейеш тә. (Ваҡытты ҡыҫҡартыу өсөн.) Ләкин ул үҙ аллы булғанда ғына көслө.

Өйрәнеү — ҙур мәктәп. Ә үҙең ижад итеү — бөйөк эш. Һәр бөйөк шағир үҙ уҡытыусыһынан юғары (үҙенсә).

Әгәр бер бөйөк шағирҙың иң тырыш уҡыусыһы булып та, үҙ бөйөклөгөң булмаһа, һин тик шәкерт кенә. Шулай уҡ халыҡтарҙа ла кеше тәбиғәте йәшәй. Һәр халыҡ ижадҡа һәләтле, һәр халыҡ бөйөк. Тик уның бөйөк шарттарға, тарихи шарттарға эләгеүе генә шарт.

Ә беҙ ни өсөндөр һәр милли әҙәбиәттә тик шәкерт итеп кенә күргә күнеккәнбеҙ.

Ҡыйыу һүҙҙе әлегә бер билдәһеҙ кеше әйтһә, ҡолағыбыҙ ҡарпайып, күҙебеҙ дүрт була. Был бик зарарлы, үҫеү өсөн зарарлы.

Ғамзатов миҫалы — үрнәк миҫал поэзияла. Ул өйрәнгән, ләкин хәҙер күптәрҙе өйрәтә. Һәр әҙәбиәттә лә Ғамзатовтар булырға тейеш. Ә булғандарын быуырға ярамай.

Әҙерҙе генә йотмайыҡ.

Терешкова космоста әллә ниндәй ҡиммәтле пилюлдәр йотоп туҡланған, ә ергә төшкәс, иң ябай арыш икмәге менән йәшел һуған ашайһы килгән. Тимәк, был кәрәк организмға.

Беҙҙә мин һине үлеп яратам, мин һиңә ғашиҡ булдым, ғишыҡ тотам, мин һинең өсөн янам-көйәм, мин һиңә күңелемдә оло мөхәббәт йөрөтәм йәки һөйөү һаҡлайым, ғашиҡ булдым ҡара ла ҡашыңа, тип әйтмәһәң, үҙ хистәреңде саҡ ҡына башҡа һүҙҙәр менән әйтеп бирһәң йәки шул мөхәббәттең үҙен күрһәтеп бирһәң, ни өсөндөр һинең яратыуыңа, һөйөүеңә, ғашиҡ булыуыңа, мөхәббәтеңә ышанмайҙар.

Әтәс һүрәте аҫтына мотлаҡ әтәс тип яҙып ҡуйырға кәрәк булып сыға.

Ә бит халыҡ быны аңлай, ә беҙ уның тойоу ҡеүәһенә, зирәклегенә, нескәлегенә ышанмайбыҙ.

«Тыуған илкәйемә лә ҡайтыр инем, аяҡтарым талһа, имгәклəп»,— тип бит халыҡ тыуған ерен яратыуы хаҡында әйткән.

«Таштуғайҡай, һинең ҡамышың юҡ, кире Уралҡайыма ҡайтайым»,— тип тә халыҡ ошо хисен йырлаған.

«Үҙҙәренең ҡойоһо бар, беҙгә килеп һыу ала»,— был да бит «ул мине ярата» тигән һүҙ.

Тик уның тәүгеһендә образ — шифриәттең үҙе, ә икенсеһендә яланғас хәбәр, отчет йәки тоҙһоҙ сөсөлөк.

Ниңә әле беҙ ошо меңәр йылдар буйы килгән поэзиябыҙҙан баш тартырға тейешбеҙ? Шағирға — образ, ғалимға — төшөнсә. Был хаҡта Белинский бит бынан йөҙ йыл элек әйткән!.. Ҡайһы саҡта беҙҙең мөхәррирҙәребеҙ, хатта берҙән-бер журналыбыҙ «Ағиҙел» өсөн оят булып китә.

Ләкин Х. Ғилəжев ҡасандыр бик матур шиғырҙар яҙған өсөн, үҙенəн ҡасандыр бик аҡыллы уҡытыусың булған өсөн һəм мөхəрриəттəге иптəштəрҙең ҙур исемле — фəн докторҙары булған өсөн, ҡайһы бер əҫəрҙəрен ҡасандыр бик яратып уҡыған өсөн — был хəҡиҡəтте əйтеп торғо килмəй. Сөнки:

«Һин минеке булып тыумаһаң да,
Һин минеке иттең донъяны»,—

тигəн һүҙҙе уҡыусының уларҙан башҡа ла бик ныҡ аңлаясағына бөтə күңелдəн ышанаһың. Ышанмаһаң бик күңелһеҙ булыр ине, əлбиттə.

4 ғинуар.

Химия бик наҙан булғанда, əле Менделеевтың элементтар таблицаһы тик тəбиғəттең үҙ сере булып ятҡанда, алхимиктарҙың төрлө матдəлəрҙе бергə бутап, алтын-көмөш килтереп сығарырға баш ватыуҙарында ла мин бер оло мəғəнə күрəм. Əлеге яһалма алтын-көмөш юҡ шикелле, ләкин киләсəктə уларҙың булыуына бөгөнгө химияның тылсымлы ҡулдары, ниңəлер, бик ныҡ ышандыра. Сөнки оло тəжрибə тарихы ышандыра кешене, уны өмөтлө итə. Сəнғəттең дə үҙ тəжрибə тарихы бар. Уның киләсəгенə бик ныҡ ышандыра был тарих...

6 ғинуар.

Рафаэлдең «Ышаныс» поэмаһын уҡыйым.

Кеше партияға алыуҙы ҙур шатлыҡ менән көткән. Ләкин алмағандар. Әлбиттә, ауыр, күңелгә ниндәйҙер болғансыҡ юшҡын ултыра. Өлгөрмәгәнһең, әле тигәндәр. Ҡарт коммунист, етмәһә, «коллективты ла һанға һуҡмай» тип ҡуйған. Ояты ни тора, әлбиттә.

Ләкин быныңменән донъя бөттө тигән һүҙ түгел бит әле. 25 йәшлек кешегә был бер ҙә башты ташҡа ороп, сәс йолҡоп иларлыҡ нәмә түгел бит?

Өлгөрмәгәнмен икән — өлгөрөрмөн, ышанысты аҡлап етмәйем икән хәҙергә — аҡлармын. Коллективты һанға һуҡмайым икән, был әле мин бөткән кеше тигән һүҙ түгел. Коллективтың да төрлөһө була. Унан һуң ҡарт коммунист быны әйтә икән, тимәк, ул үҙе ниндәйҙер бер көсһөҙ кеше, хатта уның ысын коммунист булыуы ла шикле. Тәжрибәле ҡарт коммунист икән ул, ниңә быны йыйылышҡа тиклем күрмәгән. Тимәк, коллектив үҙе лә ғәйепле.

Логика шулай.

Әгәр логиканан тыш икенсе бер хәл булһа, был инде осраҡлы хәл, характерлы түгел. Ә ниңә шуны белә тороп ah ororғa?

Өлгөрмәгән тигән һүҙ бит «халыҡ дошманы» тигән һүҙ түгел дә.

Тимәк, герой түгел был поэма өсөн. Истерик ҡына. Үҙенең шәхесен ғәҙәттән тыш өҫтөн күргән кеше генә үҙенең бер ғәҙәти ҡайғыһын донъя трагедияһы дәрәжәһенә күтәрергә мөмкин.

Унан һуң партияға инеүҙе кеше нишләп ул тиклем идеаллаштырырға тейеш әле. Бик күп, хатта бөйөк кешеләр ҙә партияһыҙ булған. Партияға инеүҙең маҡсаты сәләмәт икән, кеше уға үҙенең тик эске бер үҫеш баҫҡысы итеп ҡарай икән, үҙенең тәбиғәте ҡушҡанса керергә теләй икән, ул был хәлде бик нормаль кисерергә тейештер.

Ә бында бит трагедия, күпме «ах», күпме үрһәләнеү. Юҡ, сүтәки, был бик личный кисереш, хатта был «ох»тар арта барған һайын авторға ышанмай башлайһың.

Был инде — балаларса.

Кеше менән бындай ғына хәлдәр булмаймы инде. Унан да былайыраҡтары ла була бит әле уның!.. Көслө, нормаль кеше уны бик тәбиғи итеп ҡабул итә.

Унан һуң партияға алмауҙың да мотивтары бер ҙә ышаныслы түгел — сөнки ҡапма-ҡаршы көстәр, фекерҙәр көрәше юҡ. Бик мораль-психологик планда ғына хәл ителә мәсьәлә.

Конкрет тормош мотивтары етмәй.

Поэмала бик көслө юлдар, техник оҫталыҡ, һүҙҙәр динамикаһы бар, ләкин улар маҡсатһыҙ, бушҡа эшләй. Күбектәрен сәсеп зырлап әйләнгән тирмән ҡуласаһы бушҡа әйләнә. Ҡайһы заман хаҡында һүҙ барыуы ла томанлы.

Фәмүмән, был поэма түгел, монолог ҡына. Турғайға туптан атыу килеп сыҡҡан. Ленинды риторика (бәхәс сәнғәтенең) уҡытыусыһы итеп алыу уны бик бәләкәйләтә бит. Үтә бәләкәйләтә.

Тыуған шишмә

Тау аҫтынан таш ярып,
Урғып сыға шишмәкәй.
Алыҫ-алыҫ китә...
Хыялымдай әллә ҡайҙарға.
Ә төндәрен
һөйләй серҙәрен
Йондоҙ-айҙарға.
Эсеп һыуһындарым ҡанмай...

«Бер ҡасан да...» шиғыры ла тик шәхси ҡаршылыҡтарға ҡайтып ҡала. Етмәһә, шәхси дошман менән бәхәсләшеү өсөн генә Ленинды һәм уның хеҙмәттәрен саҡыра шағир. Артығыраҡ түгелме был? Ленин бындай ҡаршылыҡты хәл итеүҙә түгел, ә социалерәк, тормош өсөн кәрәклерәк мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ярҙам итһен ине. Ваҡлама!

7 ғинуар.

«Һабантурғай йырҙары»н нәшриәткә илтеп бирҙем. Асып ҡараусы ла булманы. Бер генә лә ысын әҙәбиәтсе ултырмай шул бында. Берҙән-бер ысын күңелдән ҡыҙыҡһынған нәмәләре — шахмат. Ҡасан ғына барма, мөкиббән китеп шул шахмат шаҡмаҡтарына сумған булалар. Әҙәбиәт тураһында берәй һүҙ ишетермен тип уйлама ла... Күпме ваҡыт — айҙар, йылдар буйына бушҡа әрәм ителә. Ә беҙҙең газета редакцияларында иртәнән алып кискә тиклем шашка уйнайҙар. Бер кемгә лә ваҡыт йәл түгел. Хатта был күренешкә ҡарап торһаң, күңелде ҡот осҡос бушлыҡ солғап ала. Ә уларға ҡатышмаған кеше, моғайын, бөйөк бер ләззәттән мәхрүм кеше булып тойолалыр инде.

Төштән һуң Союзда рус секцияһының йыйылышы булды. Сотников доклад яһаны. Мәғәнәһеҙ, шаблон, примитив фекер йөрөткән был бәндәне сәғәт ярым самаһы тыңлап ултырғандан һуң әҙәбиәт үҙе лә бер мәғәнәһеҙ нәмә булып тойола. Был,

әҙәбиәтселәр йыйылышынан бигерәк, ниндәйҙер бер профсоюз йыйылышы ине.

Ғөмүмән, был хаҡта яҙып ултырыу ҙа мәғәнәһеҙ. Тик бына яңы дәфтәр тегеп алғас, ниҙер яҙып ҡарарға кәрәк. Хәҙер мин көндәлек яҙыуҙы ташланым, тик ҡайһы бер фекерҙе генә яҙып барасаҡмын.

Союзда Назар ағай ҙа, Шәриф ағай ҙа, Ғайса ла:

— Ҡасан инде һин докладыңды әҙерләп бөтәһең? — тип яғанан алдылар.

Ә минең бөтөнләй мөмкинлек юҡ. Эштән арып ҡайтаһың да, ҡулға ҡәләм алырлыҡ хәл дә ҡалмай.

Өйҙә балалар, ауырыу әсә, ығы-зығы. Фекерҙе туплап ултырып та булмай. Редакцияға барып ултырырға — алыҫ, сәғәт 12-нән һуңға ҡалһаң, ҡайтыуы үҙе бер проблема. Мөхәррирҙән бер 4—5 көн һорап, ҡунаҡханаға ҡасырға тура килер, ахырыһы. Ярай бөгөн китаптан ҡотолдом әле. Өҫтән бер тау төшкәндәй булды. Тик китап сығарыуҙың инде ҡыҙығы ла ҡалманы. Үҙең теләгәнсә сығарыу мөмкин түгел. Биш йыллыҡ эште 2 табаҡҡа һыйҙырырға кәрәк. Алдан уйлаған уй бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Бары менән байрам итәһе генә ҡалды инде. Китап сығарыуҙан хәҙер беҙҙә таштан май һығып сығарыу еңелерәктер. Планды торған һайын ҡыҫа баралар, ҡыҫа баралар... Әллә ниндәй яҙмышҡа юлыҡты инде был башҡорт...

1963 йылда «Аҡиҙел» журналында сыҡҡан шиғырҙар.

1963 йыл Мостай Кәримдең «Ҡабарды-Балҡар дәфтәре»нән асылып китте. Һәм ҡыш уртаһында беҙҙең күңелдәргә «алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтындағы» тау иленең еле бәреп ингәндәй булды. Тау иленең зирәк аҡылы кисергән фажиғәләрен, мөһабәт тәбиғәтен тойҙоҡ беҙ был шиғырҙарҙа. Һәм, иң мөһиме, шағир был шиғырҙарҙа үҙенең күңеле менән халыҡтар араһындағы күрер күҙгә күренмәҫ, ләкин бөтә нәмәләрҙән дә нығыраҡ һәм кәрәклерәк булған дуҫлыҡ күперен һала. Был ике ҡая араһындағы илгиҙәр болот кеүек ышанысһыҙ күпер түгел. Был ҡылдан нескә, ләкин бөтә суйын-таштарҙан нығыраҡ күпер.

Был Мостай Кәримдең яңы бейеклектәргә үрләүе. Был бейеклектәр Мостай ағайҙың үҙенә генә хас киң ҡоласлы, ләкин мин киң ҡоласлы тип ҡысҡырып тормай торған образдары, бәрәкәтле, тос һәм теүәл, ләкин шул тиклем ябай һүҙҙәр нағышы, тауҙар һымаҡ уйсан, тәрән, сабыр фекер ағышы (ләкин был тәрәнлек упҡындарға төшкән шарлауыҡ һымаҡ шаулап та тормай), донъяны, беҙҙән ситтә булған, әллә ҡайҙағы Ҡаф тауы булған донъяны, үҙ күреү тойғолары менән яулап алына.

Был ниндәйҙер бала күҙе менән генә күрә торған әкиәт донъяһы ла, шул уҡ ваҡытта кешеләр мөнәсәбәтен бик яҡын итеп һүрәтләгән реаль донъя ла.

Был шағирҙың донъяны үҙенсә аса белеү ҡеүәһе:

Йөрәгәнем бар, мин тауҙарҙың
Хәүеф-хәтәрен беләм,
Менгәнем бар бейектәргә,
Шуға ҡәҙерен беләм.
Ҡәҙерен беләм. Бейеккә
Көн бит иртәрәк ҡарай.
Тараҡ түбәләр ҡояштың
Алтын толомон тарай.
Шунан ғына балҡый Йыһан —
Беҙҙең мәңгелек һарай.

Йыһан һүҙе беҙҙә күп яңғырай, ләйсән кеүек тәүге матурлығында уны беҙ Мостай ағайҙа күрҙек, ләкин был һүҙ унда һаман да яңыса, тәүге күркәмлегендә яңғырай. Хатта беҙгә инде тик «ат һарайы» тип әйткәнде генә иң тар мәғәнәлә генә ҡабул ителә торған һүҙ үҙенең тағы күркәм «дворец» — «баҡсаһарай, Каруанһарай» мәғәнәһен ала. Ниндәйҙер әкиәт донъяһында ғына була торған серле тылсым көсө терелтә был һүҙҙәрҙе. Ниндәйҙер сихыр бар. Ләкин был сихыр ҡурҡытмай күңелде, ә яҡтырта, биҙәй, хатта ябай ғына нәмәләрҙе лә мәғәнәле, йәнле итә. Хатта был телдең бер заман булмауына күңел һис кенә лә ышана алмай.

Мостай Кәримдең был үҙенсәлеген тәржемәлә биреү, хатта татар телендә биреү ҙә мөмкин түгел кеүек.

Тәржемә — Мостай өсөн иләк төбөндә тороп ҡалған көрпәон эрене, һәр хәлдә уны подстрочниктан тәржемә итеү бик аяныс. Быға русса тәржемәләрен, хатта иң яҡшы тәржемәләрен уҡығанда ла күңел ризалашмай.

Һүҙ моңо, музыкаһы, буяуҙар, фекерләү манераһы, бәрәкәт юғала. Ҡоро фекер генә ҡала. Ә бит оригиналда һәр һүҙ икенсе һүҙҙе терелтеп, уның урынын, күркен әҙерләп тора. Һүҙ гармонияһы.

Ләкин Мостай Кәрим һүҙҙәр менән әүрәмәй, һүҙ уға үҙмаҡсат түгел, ул һүҙҙең ҡоло түгел, ә хужаһы.

Нишләптер был юлдарҙы яҙғанда «Уйҙар» шиғырынан:

Бит Ватанһыҙ була ҡолдар ғына.
Ә мин улы. Уның хужаһы,—

тигән юлдар иҫкә төштө.

Бер мәл Мостай ағай менән һөйләшеп ултырғанда, ҡайҙандыр ҡыйыулыҡ килеп (күрәһең, ҡыйыу кеше башҡаларҙы ла

ҡыйыу итәлер инде), мин уны ритмды, фекер ағышының музыкаллеген боҙоуҙа ғәйепләнем. Ул ваҡытта юлдарҙы былай бүлгеләү миңә бик сәйер тойола ине. Ул аҙаҡ, үҙең аңларһың әле, тигән һымаҡ йылмайҙы ла ҡуйҙы. Бына хәҙер был һүҙҙәрҙең шулай ҡуйылышын үҙем бик тәбиғи итеп аңлайым.

Был шулай кәрәк булған икән.

Сөнки ул ер улы, уның хужаһы булған кеүек, телдең улы ла, уның атаһы ла. Ул ярата ла белә һүҙҙе, уға хужа ла була белә.

Рифмаларға бәйләнеүсе кеше «Ҡабарды-Балҡар дәфтәре»нән соҡонһа, «Хәтәрен беләм — ҡәҙерен беләм», «Ҡарай — тарай (үҙең миңә ҡарайһың да сәстәреңде тарайһың)», «туған-буғай», «сабалар — һалалар», «аҡһа ғына — арта ғына» кеүек тәү ҡарашҡа бик примитив, бик тапалған, хатта бик самалы ассонанстарға йәки тик ҡылымдан ғына торған үтә ябай рифмаларҙы һөйрәп сығара алыр ине. Сөнки был факт. Ләкин шиғырҙың дөйөм туҡымаһынан тартып сығарһаң, айырым һүҙҙәр, рифмалар бер ни ҙә әйтмәй. Глуп как факт, тиер ине Бальзак бындай тәнҡитсене.

Хәҙер улар беҙҙә бөттө тиерлек инде.

Ләкин был хәл Мостай Кәрим яңы рифмалар тапмай, эҙләмәй, тик әҙер рифмаларҙы ғына терелтеү менән мәшғүл икән тигән һүҙ түгел. Традицион рифмалар ҙа, образдарҙы яңынан терелтеү менән бергә Мостай Кәрим ғәжәп бай образдар ҙа, рифмалар ҙа, яңы фразеологик әйтемдәр, һүҙ бәйләнештәре лә ижад итә. Шағир, тимәк, һүҙҙәрҙең дауасыһы ла, табыусыһы ла.

Беҙҙең поэзияла хәҙер һүҙҙәр ҡытлығы булған мәлдә, һүҙҙәр инфляцияһы барған ваҡытта Мостай Кәримдең был ҙур эше беҙгә бик ҙур һабаҡ әшкәртә. Бик күптәрҙән ғибрәт алып, был тәңгәлдә лә унан фәһем алырға булыр ине.

Мин был «Ҡабарды-Балҡар дәфтәре»ндәге шиғырҙарҙың тажы итеп «Дуҫтар бүләген» алыр инем. Дуҫтар иле ысындан да оло бүләк биргән шағирға.

Уны тулыһынса уҡып сығам. Бында бик ҙур һәм тапҡыр фекерҙең шундай йыйнаҡ, композицион теүәллек һәм афористик һаранлыҡ менән бирелеүе һүҙ сәнғәтенең көслөләгән тоя белгән һәр кемде көнләштерерлек, минеңсә. Шағир менән нисектер ғорурланаһың килә.

Дуҫтар бүләге

Чегем шарлауығын бүләк итте миңә Ҡайсын.
Шарлауыҡһыҙ Чегем бойоғор бит, шунда ҡалһын.
— Һиңә булһын беҙҙең тәрән Күккүл,— тине Адам.

Күлен алһам, тауҙар күҙһеҙ ҡалыр, нисек алам?
Алим әйтте:— Ҡушбаш Эльбрустың ал бер тажын.
Юҡ. Батша тау кем иңенә һалыр янғыҙ башын?
Бирегеҙ һеҙ миңә, шарлауыҡтай, мәңгелек йыр.
Тәрән күлдәй тыныс аҡылығыҙ серҙәш булыр,
Ҡуш түбәле тауҙай дуҫлығығыҙ — таянысым,
Һеҙҙең кеүектәргә таянғандар таямы һуң?
Ут яныһа, үрсемле. Йылға тере, аҡһа ғына.
Йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ бүлешкәндәр арта ғына.

Был шиғырҙың күрке ниҙә һуң? Минеңсә, уның бөтә тамырҙары менән халыҡ ижадына ереккән булыуында.

Был борон-боронда — әкиәттәрҙән үк килгән яҡшылыҡ өсөн бүләк алыу, бүләк биреү йолаһы һәр халыҡта була торған иң матур традиция.

Дуҫтар дуҫлыҡҡа хатта илдәрен бүләк итә. Ләкин ысын дуҫ дуҫтың илен алмай — ил баҫмай, көслөк йәберен һалмай. Ерһыу ул һәр халыҡтың, һәр кешенең үҙенеке.

Ә «йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ» бүлешкәндән арта ғына. Ысын аҡыл эйәһе дуҫты таламай, йәберһетмәй, кәмһетмәй торған бүләкте, дуҫты байыҡтыра торған бүләкте генә ҡабул итә. Шундай дуҫлыҡ ҡына кешеләр күңелен биҙәй, кешеләрҙе бер-береһенә йондоҙ итә, табындыра. Халыҡтарҙы ла бындай ғәҙел дуҫлыҡ ҡына бер ҡорға йыя, туплай һәм туғанлаштыра.

Был тәбиғилек, был тормошсан мөнәсәбәт кенә изге. Сөнки ут үрсемле — яныһа ғына. Йылға тере — аҡһа ғына.

Ғәжәп бай һәм бөгөнгө халыҡсан фәлсәфә.

Был инде кешене йәки бер милләтте культлаштырыу түгел, был беҙҙең байрағыбыҙға яҙған ғәҙеллек һүҙен ысын шағирҙарса сәнғәт әҫәре аша асып биреү.

Беҙҙә халыҡтар дуҫлығы тураһында бик күп шиғырҙар яҙылды. Бик яҡшылары ла бар уларҙың. Ләкин күпселеге был оло теманы ваҡлай ғына. Уларҙы уҡый башлаһаң, үҙ халҡыңды бик кәм итеп, бер нәмәгә лә һәләтһеҙ итеп, бер халыҡтың артынан үрмәләгән, һөйрәлгән, бер йәнһеҙ, төҫһөҙ, шәкелһеҙ бер шәүлә генә итеп тоя башлайһың.

Был шиғырҙар хатта дуҫлыҡ тойғоһо урынына икенсе бер тойғо — меҫкенлек һәм йәберһенеү тойғоһо ғына уята.

Ә бит донъяла ундай меҫкен халыҡ юҡ, меҫкен кешеләр генә, үҙ халҡын шул меҫкенлеккә этәрешкән шәхестәр генә бар.

Дуҫ — дуҫтың көҙгөһө, ти рус мәҡәле. Тимәк, дуҫлыҡ ул беҙҙең байтаҡ шағирҙар аңлағанса ҡоллоҡ тойғоһо ғына түгел икән. Дуҫың булғас, үҙеңә иш булырлыҡ дуҫ булырға тейеш.

Дуҫ дуҫты биҙҙерерлек булмаһын.
Әҙәбиәттә лә был оло тойғоно ваҡларға ярамай.

Минеңсә, «Ҡабарды-Балҡар дәфтәре»н уҡыған булһалар, Ҡайсын Кулиев та, Адам Шогенцоков та, Алим Кешоков та Мостай Кәримдең уларға был яуап бүләгенән бик ҡәнәғәт булырҙар ине.

8 ғинуар.

Кәтибә Кинйәбулатованың «Минуттар» тигән шиғырҙары ғәжәп тәбиғи, нескә, интонацияға бай, тик ҡатын-ҡыҙға ғына хас тауышлы, яҡты тойғоло шиғырҙар.

Һуңғы йылдарҙа Кәтибә апай бик байыны, үҫте. Нескәлек яғынан ул танылған ғына рус шағирәләренән бер ҙә кәм түгел. Ниңәлер ҡайһы бер ҡәләмдәштәр уның хаҡында һүҙ сыҡһа, түбәнһетеп ҡарайҙар. Ә минеңсә, ул ҙур талант эйәһе һәм тел оҫтаһы.

Әнғәм Атнабаевтың үҙенсәлекле тауышы ла был номерға «бер семтем» йылмайыу өҫтәй. «Утыҙ йәш ул нишләп ҡарт булһын?!» тип, ысынлап та, Әнғәм бындай задорлы йәшлек дәртен ҡырҡта ла, иллелә лә юғалтмаһын ине. Һирәк талант. Йылмайыуы уның беҙгә бик яҡын, кешесә, бөгөнгөсә. Тик фекер тәрәнлеге лә, тематика киңлеге лә шатландырһын ине уның. Телгә иғтибар итергә кәрәк, әлбиттә.

Ә бына F. Байбуриндың «Ҡашҡа»һы башҡа. Башың ҡашҡа булһа ла, авторҙың ни әйтергә теләүен билдәләү бик ауыр. Фекерен табып булмай, сөнки ул юҡ. Шундай уңыш менән ауылдың сыбар тауығын да, иң алда ҡыҫҡырған таң әтәсен дә, хатта колхоздың иң көслө һыйыры «Йондоҙҡай»ҙы ла хәтерләргә булыр ине.

Ләкин хәтерләү үҙе генә поэзия була алмай бит әле. Нимәләрҙе генә хәтерләмәҫкә мөмкин һуң!

«Бер дуҫка» — «ә» тигәнгә «мә» тиешһәк, булмаҫ та ине дуҫлыҡ» тигән хәкиҡәтте әйтеү өсөн дә ир ҡашҡаһы булыу кәрәкмәйҙер.

«Сәскәйҙәрең толом-толом» тигән шиғыр ҙа был хаҡта әлек яҙылған бик күп шиғырҙарға бер ни ҙә өҫтәй алмаған. Ни юмор, ни сатира түгел, автор үҙе әйтмешләй, «ике ут араһында» тороп ҡалған.

«Мин һине һәр көн күрәм, ул мине күрә микән?» Күрәбеҙ, күрәбеҙ: «мин сине күрми түҙәлмим, ә син түҙәләсеңме?» Шул тирәлә бит. Яҙмай ҙа түҙергә, баҫтырмай ҙа түҙергә мөмкин ине был иҫке йырҙы.

Милләт хаҡында

Социалистик милләттәрҙең барлыҡҡа килеүен һәм үҫешен өйрәнеүҙә милләттең дүрт билдәһенең үҙгәреүен асыҡлау бик мөһим. Әҙәбиәттә был мәсьәлә бик аҙ яҡтыртылған. Бының

өсөн һәр халыҡтың совет власы йылдарында ҡаҙанған уңыштарын һанап сығыу ғына етмәй.

Һәр милләттең башҡа милләттәрҙән айырымлығын асыҡлауҙа һәр милләттең экономик тормош берлеген (общносын) тикшерергә кәрәк. Халыҡтың үҙ эсендәге, ауыл менән ҡала араһындағы бәйләнештең үҫеше, үҙгәрештәре был тәңгәлдә иң мөһиме. Был бәйләнеш формалары производство мөнәсәбәттәренә бәйле, әлбиттә. Һәм быны дөйөм ил иҡтисады шарттарында яҡтыртырға кәрәк.

Шулай уҡ милләттәрҙең психик складын яҡтыртыуҙа ла асыҡлыҡ юҡ. Ниҙән ғибәрәт һуң был үҙенсәлек? Был бик ҡатмарлы мәсьәлә йыш ҡына милләттәрҙең идея йөҙө менән алмаштырыла. Идея йөҙө бит психик склад менән бер нәмә түгел. Был хәл социалистик төҙөлөш осоронда психик склад тамырынан үҙгәрә тигән дөрөҫ булмаған һығымтаға килтерә түгелме? Ә бит психик склад ул базисҡа ла, өҫкормаға ла ҡарамаған үҙенсәлек. Әгәр ҙә бер халыҡтың психик складын, йәғни «милли характер»ын уның идея йөҙө итеп кенә ҡараһаҡ, был саҡта беҙ өҫкорма тураһында һөйләйбеҙ булып сыға лаһа? Өҫкорма синфи нәмә, базисҡа бәйле төшөнсә, ә һәр халыҡтың милли характеры, психик склады ул бөтә халыҡҡа хас нәмә. Ул синыфтарға ҡарап йөрөмәй. Идея йөҙө, киреһенсә, милләт башында торған синыфҡа, уның партияһына ҡарап билдәләнә. Быны бер нисек тә милли характер менән бутарға ярамай. Әлбиттә, милли характер һәр синыфта төрлөсә кәүҙәләнгән. Был элекке культурала ике төрлө культура булыуы тураһында һөйләй (Ленин әйткәнсә).

Идея йөҙө (облик) милләттең үҙенсәлеге түгел, шулай ҙа ул милли характерға бик ҙур йоғонто яһай. Донъяға яңы ҡараш психик складты үҙгәртә бара, әлбиттә. Ләкин был әле һәр милләт үҙенең иң яҡшы традицияларын, үҙенең тарихи культура ҡаҙанышынан баш тарта тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, яҡшы мираҫты беҙ үҙ байлығыбыҙ, ғорурлығыбыҙ итеп алырға һәм уны артабан үҫтерергә тейешбеҙ.

Милли характер үҙенсәлектәре коммунистик төҙөлөш осоронда яңы төҫ ала, үҙгәрә, уртаҡ сифаттар менән байый бара, иҫке ғәҙәттәр юйыла. Был шулай булырға тейеш тә. Ә яҡшы ғәҙәттәрҙе ниңә ташларға? Был бит баҫып торған ерлегеңде ташлау тигән һүҙ. Уларҙың уртаҡ, дөйөм һыҙаттарға ниндәй зыяны бар? Был тик уртаҡлыҡты байыта, биҙәй генә бит.

Халыҡтар үҙ иҙеүселәрен бергәләп алып ырғытҡан кеүек, үҙҙәренең киләсәктәге мөнәсәбәттәрен дә үҙҙәре билдәләргә, тигеҙлек, ғәҙеллек нигеҙендә нығытырға, үҙ-ара дуҫлыҡ нигеҙендә нығытырға, ә һәр төрлө шовинизмға һәм милләтселеккә юл ҡуймаҫҡа тейештәр. Бер милләткә ҡыҫым яһау ул

революцияның бөйөк ҡаҙаныштарын мыҫҡыл итеү булыр ине. Шәхес культы был тәңгәлдә лә яман эҙ ҡалдырҙы. Милли сәйәсәттә үткәреүҙә бик күп закон боҙоуҙарға юл ҡуйылды, хатта айырым бер халыҡтарҙың яҙмышы бер шәхестең башбаштаҡлығы арҡаһында оло фажиғәләргә осраны.

Фөмүмән, великодержавный шовинизм менән буржуаз милләтселектән дә ерәнгес нәмә юҡтыр.

Минеңсә, был мәсьәләгә ҡағылмаған, тығылмаған кеше иң тыныс кешелер. Был хаҡта уйлауы бик ауыр. Ҙур милләт барыбер өҫтөнлөк итәсәк, ысын ирек булмаясаҡ.

9 ғинуар.

Кис өйгә ҡайттым да, уйланырға, ҡағыҙ менән һөйләшергә ултырҙым.

Ауылдан инәйем килгән. Йөҙө борсоулы, йонсоған. Аяғы һаман да һыҙлай. Хәлдәре шәптән түгелдер инде. Ләкин бер нәмәне лә һиҙҙермәҫкә, ҡайғыртмаҫҡа тырыша. Тик мин күңелем менән бөтәһен дә белеп торам. Беребеҙ ҙә өйҙә юҡ, тормош еңелдән түгел. Күңелендә уй ҙа уй. Телкәйе әйтмәһә лә, күҙкәйҙәренән ни булғандарын мин бөтәһен дә аңлап торам — уйында тик беҙҙең ғәмһеҙлек кенә.

10 ғинуар.

Назар Нәжмиҙең «Ер һәм йыр» китабынан һуң ер ҙә, йыр ҙа тойолмай. Был китапта ер аҙыраҡ, йыр күберәк ине. Фөмүмән, уның йырына конкрет беҙ баҫып торған һәм үҙ ҡулыбыҙ менән үҙгәрткән донъяның төрлө ҡаршылыҡтары, ҡайғы, һағыштары, социаль һәм мораль катастрофалары менән тулы ер етмәй. Һуҡмаҡ тарыраҡ. Орбитаһы тик үҙ йөрәге тирәһендә генә. Был уны бик сиклә́й, донъяның яңы ҡапҡаларын астырмай тора.

Унан һуң Назар Нәжмиҙең тик бер жанрҙа — телмәр һөйләү жанрына ғына күсеүе уҡыусыны, беҙҙе борсолдора төшә. Ярай ҙа һуң был дауыл алдынан була торған тынлыҡ ҡына булһа?

Унан һуң телмәрҙәре лә бик сикле. Ҡайһы бер сығыштарында фекер түгел, тик фраза ғына ишетеп бошонаһың.

Нишләптер тормош, әҙәбиәт тураһында ысын борсолоу тойолмай.

10 ғинуар.

Салауат бөгөн үҙ ғүмерендәге тәүге китабын уҡып сыҡты. Ул китап — «Аҡъял батыр» әкиәте (русса тәржемәлә). Ҡайһы бер биттәрен башҡортса ла уҡытып ҡараным. Уҡый, арыу

ғына килеп сыға. Аҙаҡ белмәмеш кеше булып, әкиәттең дауамын һөйләтеп ҡараным. Үҙ күҙе менән күреп торған кеүек һөйләй. Хәҙер инде уҡып бөтөрмәйенсә туҡтамаҫ. Бына шулай бала китап та уҡый башланы.

11 ғинуар.

Рауил, Урал кейәү, инәйем килде.

Вл. Огнев — Книга про стихи. 1963.

Лучше стихи, чем книга о стихах. Әгәр ҙә шиғыр тураһында шағирҙар яҙмаһа, мин ниңәлер ышанып етә алмайым. Ашаған белмәй, тураған белә, тип уйлауҙан ғына түгел был.

Шиғыр үҙе бер оло сер. Күптән шул серҙе асабыҙ тигән булып, ошо сер юғарылығында булып күренергә тырыша. Ләкин бында бик күп нәмә ялған булып сыға.

Минеңсә, шағир шиғыр тураһында бик һирәк һөйләһә лә, күберәк белә, һәм был белемде ул бер кемгә лә бәйләргә тырышмай.

Ғөмүмән, шиғыр өлкәһе әле дөм ҡара урман ул.

12 ғинуар.

Тәнҡит хаҡында

Ниңә яҙыусы «мин» тип үҙ исеменән һөйләй ала ла, тәнҡитсе быны эшләй алмай?

Ул гел «беҙ Николай II» тип бөтә Рәсәй исеменән генә һөйләй. Бөтә халыҡ исеменән фекер әйтергә тырыша һәм шуның арҡаһында үҙенең ысын фекерен әйтә алмай. Ә уның да бит үҙ фекере булырға тейеш түгелме һуң? Уның да бит яңылышырға, бәхәсләшергә үҙ фекерен үткәрергә хаҡы бар. Ул да бит кеше! (Тәнҡитсе лә кеше!) Ә беҙҙә әйтерһең, уның үҙ төҫө, үҙ теле булмаҫҡа тейеш булып сыға.

Шиғыр барлыҡҡа килгәндән бирле поэзия донъяға ниҙер әйтергә, кешене нимәгәлер өйрәтергә, кешелә ниҙер тәрбиәләргә тырышҡан, донъяны танып-белеп, уны үҙгәртергә булышҡан.

Халыҡ хаҡында яҙыусыларына ҡарап та фекер йөрөтәләр.

Тапҡыр һүҙ әйтергә теләйһең икән, Даян ағай, әйт һин уны, тик тапҡыр итеп әйт.

Көнбайыш поэзияһында хәҙер, ғөмүмән, форма тарҡала, форма аморфлыҡ төҫөн ала, поэзия хаоҫҡа әйләнә бара. Бы-

ның тарихи-социаль сәбәптәре бар. Унда хәҙер шиғырҙың рифмаһы менән үлсәүе генә түгел, хатта шиғырҙы шиғыр иткән ритм да юҡҡа сыға. «Гаявата хаҡында йыр»ҙы хәҙер булһа Лонгфелло нисек яҙыр ине — хатта күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Шиғыр сөнки тураҡланған прозаға әйләнгән унда.

Хәҙерге Америка һәм Англия формалистары, Морозов әйткәнсә, ғөмүмән һәр төрлө формаға ҡаршы сығып, поэзияны анархия мәҙһәбенә этәрәләр.

Беҙҙең Шамил да бит быуаттар буйы кристаллашҡан формаларҙы һанға һуҡмай, формаһыҙлыҡты форма тип иғлан итте бит. Ә ул, әйтәйек, Шекспир сонеттарын, Петрарка сонеттарын йәки Дантенең «Илаһи комедия»һын ниндәй форма менән тәржемә итер ине икән?

Йәки үҙе сонеттар шәлкеме яҙырға тотонһа? Шамилса хәҙер сонет яҙырға мөмкин түгел. Ә япон танкаларын, хоккуҙарын нишләтергә?

11 ғинуар.

Коммунизм урмандарында ла үҫер әле Урал ҡурайы, шул көндә лә һинең шатлыҡ менән тулып, һайрауыңды, ҡурай, һорайым!..

17 ғинуар.

Йыһат Солтанов
Төнгө хәбәр

Төн. Көтмәгәндә-нитмәгәндә генә берәү ишек шаҡыны. Әле бер кем үтмәгән һуҡмаҡтан үҙ һуҡмағын ярып, үҙ алдына ғына үҙенсә моң көйләп, тормоштоң асыһын-сөсөһөн күп татыған, кемдер тарафынандыр байтаҡ ҡына рәнйетелгән, ләкин үҙенең ғәжәп саф күңелен, кешелеген, үҙенең кешелек бәҫен һаҡлап ҡалған бер юлсы ишек шаҡыны. Был шаҡыуҙа бер ниндәй тупһыҙлыҡ та, ҡыҫҡырынып-екеренеп торған талап та, бер һөмһөҙлөк тә юҡ. Был шаҡыу ниндәйҙер кешенең кешелегенә ышаныусан, ғәжәп кешелекле, хатта кеселекле, үҙенең йылы күңел төбөнән сыҡҡан ихлас һүҙенә ихлас яуап табырына шикшөбһәһе булмаған тыйнаҡ өмөт менән ҡараған кешенең шаҡыуы.

Һис бер икеләнеүһеҙ ишек асаһың. Күңел күҙең алданмаған.

Бөтөнләй көтмәһәң дә, күптән көткән, күптән күңелең эҫенеп бөткән бер теләктәге үҙ кешең килеп инә. Өйөңә түгел, туп-тура күңелеңә инә.

— Йыһат Солтанов икән дәһә, нишләп былай күҙгә-башҡа күренмәй йөрөнөң? Һине бит беҙ күптән көткәйнек, әйҙә, рәхим ит, беҙ бит һин күреп белмәһәң дә тойоп белгән күмәк дуҫтарың. Һинең моңоң тураһында ла, кеше булыуың тураһында ла бер ултырып һөйләшке, кәңәш-төңәш итке килә. Йә, Ырымбур хәлдәрен аҡтарып һал, әйҙә!.. Ил ирҙән, ир илдән туямы — бик хуш килдең, төклө аяҡтарың менән, тип ҡаршылайһың уны. Һуңғы һанды уҡығас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә, түңәрәкләнә бара, тип ҡыуанаһың.

Мостай Кәрим әйтмешләй, яңы шифыр ғына түгел, ә яңы шағир килде, тиергә мөмкин, Йыһат шифырҙары менән таныш ҡас.

Киң кейем туҙмаҫ тигәндәй, Йыһат Солтановҡа ошондай кәңәште бирге килә.

Моңоң яҡтыраҡ булһын, дуҫҡай. Үҙеңдең шәхси тормошоңда төрлө күңелһеҙ хәлдәр булһа ла, үҙ яҙмышыңа ил күҙе, заман зирәклеге, конкрет тормош солғанышы менән ҡара. Үҙенсәлекле тауышың көрөрәк, баҙығыраҡ, ҡыйыуыраҡ булһын. Күҙ күремең дала киңлектәрен иңләрлек булһын. Үҙ моңоң менән әүрәмә, башҡаларҙың да йөрәк ҡағышын той — үҙ итеп күр. Ер-һыуыңдың сағыу буяуҙарын, йорт-аймағыңдың йор һүҙҙәрен, беҙ ишетмәгән мәкәл-әйтемдәрен, ҡарт-ҡороларыңдың мәғәнәле тел төбөн, далалағы яңы тормош һыҙаттарын — бөтәһен-бөтәһен дә таныһыҡ өсөн генә түгел, таныһыҡ ҡанһын, күңел һоҡланһын өсөн алып кил.

Һеҙҙә лә бит XX быуаттың 64-се йылылыр, һеҙҙә лә Ер юлдаштарының осоуын күҙәтәләрҙер, һеҙҙә лә бала-саға космонавт булып уйнай торғандыр, һеҙҙә лә ҡайырып сиҙәм күтәрәләрҙер, дала буйлап юғары вольтлы ток ташыусы ҡорос баҫаналар атлап уҙалыр, бына тигән коммунистик хеҙмәт кешеләре барҙыр, ҡарттарҙың да биш ваҡыт намаҙ ғына уҡымай, «Ырғыҙ», «Абай», «Йәш гвардия» китаптарын уҡығандары барҙыр. Кешеләр араһында яңы мөнәсәбәт, яңы заман ҡараштары ерегеп киләлер.

Бына шуларҙы ла күргәң, тойорға һәм моңоңа ҡушып йырларға кәрәк!

Шуныһыҙ бөгөн әҙәбиәт була алмай.

Бына яҡташың Рауил Бикбаев Өфө тауҙарынан даланы башҡасараҡ күрә.

Был тәңгәлдә уның ижадына күҙ һалыу зыян итмәҫ ине.

Әлбиттә, кеше яҙмыштары төрлөсә. Ләкин әҙәбиәт яҙмышы бер. Мин быныңменән һис тә Рауил Бикбаев тауышы менән йырла, тиергә йыйынмайым. Уның кешеләргә, тормошҡа, донъяға мөнәсәбәте бөгөнгөсә, яңы. Хатта уның шул уҡ далаға булған мөнәсәбәте лә башҡасараҡ.

18 ғинуар.

Бөйөк сер. Тәржемә

«Советская Башкирия»ла Елена Николаевская тәржемәһендә Мостай Кәримдең «Сер» исемле әкиәт-шиғыры баҫылып сыҡты.

Тәьҫир нисек һуң?

Был әҫәр Мостайҙыҡымы? Эйе, Мостайҙыҡы ла, түгел дә. Был беҙ башҡортса уҡыған «Сер» түгел һәр хәлдә.

Фекер, композиция, хатта әкиәт фоны ла бар, әкиәт донъяһы ла бар, реаль характер ҙа бар. Әммә Мостай Кәрим поэзияһы юҡ. Ә бит Елена Николаевская насар тәржемәсе түгел, был әҫәрҙе лә ул яратып, ихлас күңел менән тәржемә иткән. Ә ниңә һуң ул оригиналдағы кеүек яңғырамай, уның тәьҫир көсө оригинал менән сағыштырғанда бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә.

Сер ниҙә һуң?

Сер шунда, иптәштәр, серҙең серлелеге ҡалмаған. Ә был сер һәр телдең бөйөк сере бит. Һәр телдең бөтмәҫ аҫыл хазинаһы бар. Ошо аҫыл хазина ҙур һүҙ оҫталарының тылсымлы ҡулдары тейеү менән, терелә, йәнләнә, моңлана башлай — һәм һин үҙең дә һиҙмәҫтән ниндәйҙер сихырлы хикмәт менән үҙеңдең бала саҡтан хыялланған ысын әкиәт донъяһына барып инәһең дә хайран-вайран булып, иҫең-аҡылың китеп, быраса үҙең татып белмәгән әллә ниндәй һүҙ менән генә әйтеп бирә алмаҫлыҡ бер оло ләззәт кисерәһең. Сөнки оҫта рәссам һинең үҙ донъяңды һүҙҙәр менән әйтеп бирә.

Был тылсым көсө һәр бер телдә бар. Сөнки һәр бер тел һәр халыҡҡа шуның өсөн бирелгән дә.

Һәр оло шағир, тел оҫтаһы, сәсән йәнле кеше үҙ теленең (первозданный) тәү яралғы һүҙҙәре, уларҙың еҫе-төҫө юғалмаған буяуҙары, мәғәнәүи нескәлектәре, күп яҡлы байлығы һәм теүәллеге, һүҙҙәрҙең тәүге күркәмлеге, бәрәкәте менән эш итә.

Бына шуға күрә лә ошо баҙрап ятҡан, йондоҙ һымаҡ йылҡылдашып торған һүҙҙәр менән тәрән фекер әйткәндә, поэзияның тәьҫир көсө әсир иткес.

Ә рус теле, бөйөк рус теле — Пушкин, Гоголь, Герцен, Толстой, Лесков, Блок, Бунин, Есенин һәм Маяковский теле ошондай сихырлы түгелме ни? Ә Шолохов, Леонов?

Уларҙың һәр береһе бөйөк тел сихырсыһы бит. Уларҙың сихыры үҙ донъяларында. Ә Мостайҙың үҙ донъяһы бар.

Шуны ла иҫкә алырға кәрәк. Елена Николаевская ҡулланған телгә бер 30—40 йыл донъя әҙәбиәте күрмәгән нагрузка, баҫым төшкән. Ул ҡулланған һүҙҙәр сәғәт һайын 30—40 йыл буйы инде илəктән алып илəккə һалына. Улар алйып,

йонсоп, туҙып, ҡырылып, әлһерәп бөткән. Уларҙың ниндәй көсө булһын?

Уларҙы хәҙер яңынан берәй яңы Пушкин ғына терелтергә мөмкин. Ғөмүмән, рус теленә иҫ киткес нагрузка төшә, бер егерме йылдан ул ниндәй хәлгә килер, белмәйем.

Миңә, мәҫәлән, был тәңгәлдә ҙур рус шағирҙарының, айырыуса Твардовскийҙың борсолоуы бик аңлашыла.

Шундай бөйөк телдең яҙмышы хаҡында рустар бик борсолоп, бик нервозно һөйләйҙәр. Күрәһең, ысын художник телдең бөйөк сере ниҙә икәнен бик яҡшы тоялыр.

18 ғинуар.

Быйылғы ысын поэзия әҫәрҙәренә мин сәсмә тел менән яҙылып та, халыҡ образын ғәжәп шиғри тел менән биҙәү юғарылығына күтәрелгән ике авторҙың әҫәрҙәрен индерер инем.

Беренсеһе — Әфғән Фәззәтовтың «Ҡәйнә» хикәйәһе, икенсеһе — Әнүр Вахитовтың «Салауат күпере» тигән хикәйәттәр йыйынтығы.

Был әҫәрҙәр айырым бер тикшереүгә лайыҡ. Тик шуны әйтәм: поэзияла халыҡ образын бирә белеү өсөн был тәңгәлдә был ике авторҙан да байтаҡ нәмәгә өйрәнергә мөмкин.

Кис. Үҙ алдыңа ғына поэзия тураһында һөйләшкәндә, үҙеңә байтаҡ нәмәләр әйтәһең. Ә бына башҡаларға һөйләгәндә, бөтә үҙең тойғанды, бөтә үҙең уйлағанды шулай тулы һәм ихлас күңелдән әйтеп буламы?

Әгәр ҙә шулай әйтмәһәң, һин әйткәндең ни кәрәге бар. Мин, мәҫәлән, бөтә кешенең башҡалар хаҡында үҙе ни уйлай, тик шуны ғына әйтеүен теләр инем. Бәлки, был үтә бер ҡатлылыҡтыр ҙа... Ләкин башҡалар миңә шул үтә бер ҡатлы булыуын йәшермәһен ине. Шулай булғанда, беҙ бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңлаған һәм поэзия тураһында бер һөйләшеү алып барған булыр инек. Быныңхатта бик ҙур файҙаһы ла булыр ине.

Мин бына үҙебеҙҙең поэзия хаҡында һөйләү бурысы миңә тапшырылғас, был хаҡта бик күп уйланым.

Тәүҙә үҙебеҙҙең поэзия хаҡында һөйләүҙән дә еңел нәмә юҡ кеүек тойолдо. Тик был хаҡта уйланған һайын, үҙебеҙҙең шағирҙарҙы һәм улар тураһында яҙылғандарҙы уҡыған һайын бөтә нәмә икенсе төҫ алды.

Мине ашыҡтыралар, ҡыуалар, ҡайһы берәүҙәр мине ниндәйҙер бик ҡыйын хәлгә ҡуйырға, ҡайһы берәүҙәр минән ниндәйҙер бик кәрәкле һүҙ ишетергә сабырһыҙланған кеүек тойола башланы.

Ике төрлө мотив та мине бик һағайтты. Сөнки, берҙән, минең бөтөнләй был хаҡта уйланырлыҡ мөмкинлегем юҡ, икенсенән, был хаҡта мин уйламайынса ла булдыра алмайым.

Сөнки поэзия тураһында һүҙ әйтеү — кемдәрҙеңдер ижады тураһында һүҙ әйтеү генә түгел, ә үҙ халҡыңдың ғәжәп ҡатмарлы тарихи юл үткән, бик боронғо замандарҙан бөгөнгө көнгә тиклем дауам иткән рухи донъяһы, ижад ҡеүәһе, уның үҫеше — үткәне, киләсәге һәм бөгөнгөһө хаҡында фекер йөрөтөү бит ул.

Был хаҡта уйлай башлағас, мин был хаҡта хатта төшөмдә лә уйлайым, эшемдә лә уйлайым, хатта минең бөтә ғүмерем ошо хаҡта бер көн килеп бер һүҙ әйтеү өсөн генә үткән кеүек тойола башлай.

Был минең етешһеҙлегем дә, етеш яғым да. Сөнки бик күп кешеләргә һүҙ һөйләү һулыш алған кеүек бик еңел нәмә, ә икенсенән, беҙҙә бик күп һүҙ һөйләнә, ләкин уның бер кемгә лә кәрәге юҡ. Ул һүҙҙәрҙе тыңлап бик күп ваҡыт әрәм була. Минең үҙ ваҡытым бер ҡасан да артыҡ булмағас, ваҡыт миңә бик ҡиммәтле бер нәмә булғас, башҡаларҙың да ваҡытын бушҡа алғым килмәй. Уларҙы үҙем менән бергә уйландырғым, үҙебеҙҙең бөтә ғүмерҙе арнаған эш хаҡында ысын күңелдән һөйләшке килә.

Тимәк, мин үҙ алдыма үтә ауыр бурыс ҡуям булып сыға, ә бының, бәлки, башҡалар өсөн бер ниндәй ҙә кәрәге, әһәмиәте юҡ кеүек булып та тойола.

Бына шул икеләнеү тойғоһо мине бик ныҡ йәберһетә, иҙә башлай. Мин өҙгөләнәм, һорауҙар ҡуям да яуаптар бирергә тырышам, был өҙгөләнеү ни өсөндөр мәғәнәһеҙ тойола башлай. Мин үҙ фекеремде бик юғары баһалайым кеүек. Ә бит әҙәбиәт минән башҡа ла йәшәгән, минән башҡа ла йәшәйәсәк. Бер уйлаһаң, тағы минең ҡыҫылышым да кәрәк кеүек уға. Сөнки, минең дә, башҡаның да ҡыҫылышы булмаһа, ул нисек йәшәргә тейеш һуң әле! Башҡалар ҙа минең кеүек бит. Бөтәбеҙҙең һүҙе менән йәшәй ул. Минең һүҙҙән дә ниҙер күрергә теләй ҡәләмдәштәр. Миңә ышанып һүҙ бирәләр. Был ышаныҫты аҡларға ла кәрәк бит әле.

Кеше ҡыҙыҡ!..

Хатта мин дә үҙ-үҙемә ҡыҙыҡ булып тойола башлайым, шул уйҙарым менән хатта үҙ-үҙемә үҫә барған кеүекмен.

Нисек кенә өҙгөләнһәм дә — был өҙгөләнеү миңә рәхәт, татлы. Аҙ ғына берәй яңы һүҙ әйтһәм ине был сығышымда!..

19 ғинуар.

Оло фекер әйтәһе булмай тороп, беҙҙең заманда оло шағир булып булмай.

Блокты беҙ ҡойоп ҡуйған шағир итеп кенә белә инек, ә бына 8 томлығы сыҡҡас, Блок үҙенең бөтә гигант һыны менән күренә.

Блок шул уҡ дәрәжәлә философ та икән. Иң ҡатмарлы заманның ҙур фекер эйәһе лә ул. Үткер күҙле, тәрән, үҙенсәлекле, көслө философ.

19 ғинуар.

Мостайҙы ҡат-ҡат уҡыйһың да яңынан асаһың. Тимәк, ысын поэзия иҫкермәй, ә яңыра ғына бара. Поэзия өлгөләренән быға әллә күпме миҫал килтерергә мөмкин.

Поэзияла һәр яҡшы шағирҙың үҙ урыны бар, уны бер кем дә ала алмай. Сөнки поэзия — рекорд ҡуйыу, спорт түгел. Мотогонщиктар бик тиҙ алышына, Ф. Шейнуров урынына яңыһы килә, ә тегеһе спорт тарихында ғына ҡала. Ә шағир йәшәй, үҙе үлгәс тә. Һәр төрлө рекордтың сиге бар, ә поэзияла ул юҡ.

21 ғинуар.

Поэзия тураһында әйтә торған һүҙемдең саҡ ибенә төштөм. Инде һуҡмаҡ бар, фекерҙе генә төйнәп алып барырға кәрәк. Арыу сығырға оҡшай. Өйҙә эшләргә мөмкинлек булғанда, бик һәйбәтләп эшләргә булыр ине. Ләкин әбейҙең өйҙә булыуы, үлем алдында ятыуы минут һайын иғтибарҙы ситкә тайпылдырып тора.

Ғөмүмән, был һүҙ миңә бик ҡимməткә төштө.

Ҡайһы бер обыватель минең был һүҙҙән байтаҡ сенсация көтә. Ләкин мин тик әйтергә теләгән һүҙҙе генә әйтәсәкмен. Шулай ҙа һаҡ булып булмаҫ инде... Дәрт шул тиклем таша башланы, яғалашҡы килә. Бынан поэзияға һис тә зыян килмәҫ тип. Тик позициялар ғына асыҡланасаҡ.

Үҙебеҙҙең һүҙҙе мин дә яҡлай белмәһәм, кем яҡлай белһен? Хәҙергә был шулай минең өҫтә. Мин бурысымды үтәргә тейешмен.

27 ғинуар.

Сәйфи Ҡудаш ғәжәп иҫкесә һәм казенно фекер йөрөтә кеүек, формаһы ла шул ижек вәзененән ғүмер буйы айнып бөтмәне, ритмды тоймай. Иҫкенән айырыла алмағас, исмаһам, бирһен ине ул шәрәктең ҡойоп ҡуйған ғәжәп бай формаларын.

Юҡ, 8—7, 10—9, 11—11, 13—13 ижектән аша сығып, бер ҡайҙа ла китә алмай. Ә ритмик быуын менән бөтөнләй иҫәп-

ләшеп тормай, прозаға тотона ла китә. Ә бит хатта проза ла үҙенсә ритмлы. Уның, нисектер, прозала ла ритмы юҡ.

Нилектән икән был?

Ә үҙе бит инде, ни әйтһәң дә, шағир, күп эшләгән шағир. Ләкин ғүмер буйы яҙып та әйберҙәрен эшләп еткермәй. Эшләп еткергәндәре тик осраҡлы ғына килеп сыға.

Үҙе фекер эйәһе кеүек, ләкин ҡайһы фекерҙәре һәр кемгә билдәле хәҡиҡәт кенә шул.

Был ныҡлы, яҡшы тәнҡит, кәңәш күрмәй ижад итеүҙәндер. Ә әйткән һүҙҙе һис тә яратмай булһа кәрәк. Тимәк, үҙ-үҙенә артыҡ ышана, тик был ышаныуҙан ул отмай, оттора ғына.

Шәхес булыу яғынан төрлө фекерҙәр йөрөй, интриган да, бик күптәрҙе һәләк иткән кеше лә, тиҙәр. Белмәйем.

Бәлки, был яғы дөрөҫ булһа, үҙенең кешелек намыҫы ла, выжданы ла бик тыныс түгелдер.

Элекке әҙәби тормошто ныҡ белгәнлектән, уның менән һөйләшеүе бик ҡыҙыҡ. Ләкин күп һүҙле, ялҡыта башлай. Бәлки, был ҡартлыҡтан да килә торғандыр.

Әгәр ҙә уның үткәне хаҡындағы һүҙҙәр дөрөҫ булһа, шул тиклем мөләйем, яғымлы йөҙ аҫтында нисек шундай мәкерле күңел ятырға мөмкин икән?

Был миңә үҙе бер серле донъя булып ҡала бирә. Ғөмүмән, был бик серле фигура, ҡартаймай ҙа бит үҙе. Бөтә йәйен баҡсала физик эш менән үткәрә, тартмай, бәлки, эсмәйҙер ҙә...

31 ғинуар.

Бар көсәнеп яҙғандар, бар ижад ғазабы кисереп, бөйөк хеҙмәт ләззәте татып, эшкә йәнен-тәнен биргәндәр, эшкә көс һалғандар, ғүмерҙәрен һалғандар.

Көсәнеү менән көс һалыу бер нәмә түгел. Шундай көс һалып эшлә, хатта уның эшләнгәне лә тойолмаһын, эйберең үҙенән-үҙе тыуған кеүек булһын.

(Делай раз по сто, будет просто,— тип Лев Толстой кеүек гигант тиккә әйтмәгәндер.)

Беҙгә бына ошо эшләү етмәй. Эшләгән кешеләр бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Төн йоҡоларын йоҡламай, «йәшерен эш» эшләгәндәр бик-бик һирәк шул.

6 февраль.

Сәйфи Ҡудаш:

— Һеҙ, йәштәр, мине яратмайһығыҙ инде,— ти. Был дөрөҫ түгел, Сәйфи ағай. Беҙ һеҙҙе түгел, ә һеҙҙең ҡайһы бер

тәнкитселәрегеҙҙе, һеҙҙең ижади юлығыҙҙы ал да гөл итеп күреүселәрҙе генә яратмайбыҙ.

Сөнки әҙәбиәт юлын боҙоп йәки биҙәп күрһәтергә ярамай. Был башҡаларҙы шулай дөрөҫ күрмәҫкә өйрәтә. Сөнки әҙәбиәттәге факт ул юйылмай торған нәмә. Аҡҡа ҡара менән яҙған юйылмай.

Әгәр ҙә һеҙ һәр ваҡыт халыҡ мәнфәғәттәренән сыҡмаған китаптар ҙа яҙғанһығыҙ икән, ниңә уны йәшереп, суфый булып ҡыланырға?

Әҙәбиәттә һәр күренеш, һәр дәүер үҙ исеме менән аталырға тейеш.

Һәр кем китә был донъянан, ләкин һәр кем үҙе менән дөрөҫлөктө алып китә алмай.

28 февраль.

Беҙ бөгөнгө Башҡортостанға бик ғәҙәти бер ил тип ҡарайбыҙ, уның яҙмышы хаҡында аҙ уйлайбыҙ. Әгәр ҙә бөтә донъя тарихының бейеклегенән ҡараһаң, ул бит донъяның бөтә иҙелгән халыҡтары араһынан кешелек тарихында беренсе булып милли ирек алған ил.

Һәм был илдең барлыҡҡа килеүен раҫлап, донъя пролетариатының юлбашсыһы Вл. Ильич Ленин үҙе ҡул ҡуйған уның тыуыу танытмаһына.

Ә беҙгә был хәҙер бик ғәҙәти күренә. Ғәжәп, бер уйлап караһаң. Ә ни өсөн ул беренсе ил булған? Был хаҡта бик уйланырлыҡ. Юҡ, был бөйөк ҡултамғаны һис кем, һис ҡасан, һис ҡайҙа ла юя алмаҫ!

Ул юйылыр өсөн ҡуйылмаған, һәм башҡорт ҡаны уны юйҙырыр өсөн ҡойолмаған. Рәсәйҙәге бөтә һуғыштарҙа уның даны бар, ҡаны бар.

Диңгеҙ арттарында өрмәһендәр был бөркөткә, уны һис кем булмаҫ өркөткән.

Батшаларға башын эймәгәнде,
Башҡаларға башҡорт баш эймәҫ!
Бөйөк әсәй — Рәсәйҙең билкәйенә
Сиселмәҫкә ул бит уралды.
Ҡәмәре бит Өфөм Уралдың.
Ныҡ тотабыҙ ҡында ҡоралды.

11 март.

Сәғәт иртәнге биш инде. Һаман йоҡо алмай. Көндөҙгө күренештәр күҙ алдынан китмәй.

Өлкә комитетында минең «Милләтселек» мәсьәләһен тикшерҙеләр.

Доклад өсөн һәм нәшриәттәге редсовет ултырышында һөйләгән һүҙ өсөн, әлбиттә. Әсғәт Мирзаһитов, Назар Нәжми, Шәриф Бикҡол минең тәртип тураһында информация яһаны.

Һуңынан Ғайса Хөсәйенов менән Мостай ағай ҙа килеп етте.

Өлкә комитет яғынан секретарь Солтанов һәм Розанов менән Урал Бакиров бар ине. Әлбиттә, Чуроваһы ла ҡалмағайны. Ул ҡаламы һуң?

Минең доклад та, редсоветта яһаған сығыш та Мирзаһитовтың информацияһы һәм нәшриәт директоры Ҡыуатовтың Яҙыусылар союзына яҙған хаты буйынса бөтөнләй кире төҫ алған, һәм, уларҙың фекеренсә, мин бер анархист-милләтсе, бер кемде лә танымай торған һауалы, маҡтансыҡ әҙәм затынан.

Йәнәһе, мин партияның пленумдарына ҡаршы сығыусы, ҙур халыҡтың бәләкәй халыҡтарҙы иҙеүен, бер халыҡтың культын раҫлаусы, татар менән башҡортто ҡаршы ҡуйыусы, донъяға буталсыҡ ҡарашлы һәм Сәйфи Ҡудаш кеүек намыҫлы ҡарт шағирға яла яғыусы, ә Әнғәм Атнабаев кеүек ҡәләмдәшемдең талантынан көнләшеп йөрөүсе!.. Ниндәй чепуха!!.

Кешене аңламаһаң йәки аңларға ла теләмәһәң, нимәнең нимә икәнен, ни өсөн һәм ниндәй шартта булыуын белмәһәң, уны ғәйепләүҙән дә еңел нәмә юҡ икән. Әгәр ҙә хәҙер 1937 йыл ҡабатланһа, мин күптән тегендә ултырған булыр инем...

Ғәжәп был донъя! Иң ғәжәбе бигерәк тә кешеләр!.. Үҙен аҡмаҡ урынға ҡуйһа, хатта иң аҡыллы кеше лә аҡмаҡ ҡарашта булырға мөмкин икән.

Унан һуң кешеләргә ни тиклем үҙ тиреһе яҡын, ни тиклем үҙ ултырғыстары, исемдәре кәҙерле!..

Ә намыҫ? Ундай нәмә бик самалы. Ваҡ маҡсатлы кешеләрҙә ул ҙур булмай.

Ниндәй ауыр был кешеләрҙе аңлауы!.. Бигерәк тә бынан һуң иң ышанған кешеңә ышаныуы ауыр.

Мостай ағай ҙа инде үҙ исеме өсөн тырышҡас, ҡалғандарҙан ни көтәһең?

Ә бына Ғайсаны күпме генә «ҡойроҡ болғай» тиһәк тә, шулай ҙа ул оло йөрәкле — берҙән-бер ысын яҡлаусы, үҙен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған ул булды. Минеңсә, уға әҙәбиәт — ашар икмәге, алып торған урыны ғына түгел, ә намыҫ эше, ғүмер маҡсаты. Ул әҙәбиәттә үҙе өсөн түгел, ә әҙәбиәт үҙе йәшәй унда.

Станиславскийҙың бөйөк һүҙҙәре хәтергә килә: сәнғәттә үҙеңде түгел, ә үҙеңдә сәнғәтте һөй.

Был еңел эш түгел. Ә әҙәбиәтең, культураң, халҡың менән һатыу итеү — был, күрәһең, еңелерәктер?..

тәнкитселәрегеҙҙе, һеҙҙең ижади юлығыҙҙы ал да гөл итеп күреүселәрҙе генә яратмайбыҙ.

Сөнки әҙәбиәт юлын боҙоп йәки биҙәп күрһәтергә ярамай. Был башҡаларҙы шулай дөрөҫ күрмәҫкә өйрәтә. Сөнки әҙәбиәттәге факт ул юйылмай торған нәмә. Аҡҡа ҡара менән яҙған юйылмай.

Әгәр ҙә һеҙ һәр ваҡыт халыҡ мәнфәғәттәренән сыҡмаған китаптар ҙа яҙғанһығыҙ икән, ниңә уны йәшереп, суфый булып ҡыланырға?

Әҙәбиәттә һәр күренеш, һәр дәүер үҙ исеме менән аталырға тейеш.

Һәр кем китә был донъянан, ләкин һәр кем үҙе менән дөрөҫлөктө алып китә алмай.

28 февраль.

Беҙ бөгөнгө Башҡортостанға бик ғәҙәти бер ил тип ҡарайбыҙ, уның яҙмышы хаҡында аҙ уйлайбыҙ. Әгәр ҙә бөтә донъя тарихының бейеклегенән ҡараһаң, ул бит донъяның бөтә иҙелгән халыҡтары араһынан кешелек тарихында беренсе булып милли ирек алған ил.

Һәм был илдең барлыҡҡа килеүен раҫлап, донъя пролетариатының юлбашсыһы Вл. Ильич Ленин үҙе ҡул ҡуйған уның тыуыу танытмаһына.

Ә беҙгә был хәҙер бик ғәҙәти күренә. Ғәжәп, бер уйлап ҡараһаң. Ә ни өсөн ул беренсе ил булған? Был хаҡта бик уйланырлыҡ. Юҡ, был бөйөк ҡултамғаны һис кем, һис ҡасан, һис ҡайҙа ла юя алмаҫ!

Ул юйылыр өсөн ҡуйылмаған, һәм башҡорт ҡаны уны юйҙырыр өсөн ҡойолмаған. Рәсәйҙәге бөтә һуғыштарҙа уның даны бар, ҡаны бар.

Диңгеҙ арттарында өрмәһендәр был бөркөткә, уны һис кем булмаҫ өркөткән.

Батшаларға башын эймәгәнде,
Башҡаларға башҡорт баш эймәҫ!
Бөйөк әсәй — Рәсәйҙең билкәйенә
Сиселмәҫкә ул бит уралды.
Ҡәмәре бит Өфөм Уралдың.
Ныҡ тотабыҙ ҡында ҡоралды.

11 март.

Сәғәт иртәнге биш инде. Һаман йоҡо алмай. Көндөҙгө күренештәр күҙ алдынан китмәй.

Өлкә комитетында минең «Милләтселек» мәсьәләһен тикшерҙеләр.

Доклад өсөн һәм нәшриәттәге редсовет ултырышында һөйләгән һүҙ өсөн, әлбиттә. Әсғәт Мирзаһитов, Назар Нәжми, Шәриф Бикҡол минең тәртип тураһында информация яһаны.

Һуңынан Ғайса Хөсәйенов менән Мостай ағай ҙа килеп етте.

Өлкә комитет яғынан секретарь Солтанов һәм Розанов менән Урал Бакиров бар ине. Әлбиттә, Чуроваһы ла ҡалмағайны. Ул ҡаламы һуң?

Минең доклад та, редсоветта яһаған сығыш та Мирзаһитовтың информацияһы һәм нәшриәт директоры Ҡыуатовтың Яҙыусылар союзына яҙған хаты буйынса бөтөнләй кире төҫ алған, һәм, уларҙың фекеренсә, мин бер анархист-милләтсе, бер кемде лә танымай торған һауалы, маҡтансыҡ әҙәм затынан.

Йәнәһе, мин партияның пленумдарына ҡаршы сығыусы, ҙур халыҡтың бәләкәй халыҡтарҙы иҙеүен, бер халыҡтың культын раҫлаусы, татар менән башҡортто ҡаршы ҡуйыусы, донъяға буталсыҡ ҡарашлы һәм Сәйфи Ҡудаш кеүек намыҫлы ҡарт шағирға яла яғыусы, ә Әнғәм Атнабаев кеүек ҡәләмдәшемдең талантынан көнләшеп йөрөүсе!.. Ниндәй чепуха!!.

Кешене аңламаһаң йәки аңларға ла теләмәһәң, нимәнең нимә икәнен, ни өсөн һәм ниндәй шартта булыуын белмәһәң, уны ғәйепләүҙән дә еңел нәмә юҡ икән. Әгәр ҙә хәҙер 1937 йыл ҡабатланһа, мин күптән тегендә ултырған булыр инем...

Ғәжәп был донъя! Иң ғәжәбе бигерәк тә кешеләр!.. Үҙен ахмаҡ урынға ҡуйһа, хатта иң аҡыллы кеше лә ахмаҡ ҡарашта булырға мөмкин икән.

Унан һуң кешеләргә ни тиклем үҙ тиреһе яҡын, ни тиклем үҙ ултырғыстары, исемдәре ҡәҙерле!..

Ә намыҫ? Ундай нәмә бик самалы. Ваҡ маҡсатлы кешеләрҙә ул ҙур булмай.

Ниндәй ауыр был кешеләрҙе аңлауы!.. Бигерәк тә бынан һуң иң ышанған кешеңә ышаныуы ауыр.

Мостай ағай ҙа инде үҙ исеме өсөн тырышҡас, ҡалғандарҙан ни көтәһең?

Ә бына Ғайсаны күпме генә «ҡойроҡ болғай» тиһәк тә, шулай ҙа ул оло йөрәкле — берҙән-бер ысын яҡлаусы, үҙен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған ул булды. Минеңсә, уға әҙәбиәт — ашар икмәге, алып торған урыны ғына түгел, ә намыҫ эше, ғүмер маҡсаты. Ул әҙәбиәттә үҙе өсөн түгел, ә әҙәбиәт үҙе йәшәй унда.

Станиславскийҙың бөйөк һүҙҙәре хәтергә килә: сәнғәттә үҙеңде түгел, ә үҙеңдә сәнғәтте һөй.

Был еңел эш түгел. Ә әҙәбиәтең, культураң, халҡың менән натыу итеү — был, күрәһең, еңелерәктер?..

Ә Солтанов аҡыллы кешегә оҡшай, уның урынында мин дә үҙемде шулай әрләр инем. Эштең айышына төшөнөп етмәһә лә (мин башҡортса һөйләнем), Розанов та объектив кеше, буғай. Тик Мостай ағай ғына уны бер аҙ һаташтырып ҡуйҙы. Йәнәһе, мине кемдәрҙер, ниндәйҙер милләтселәр төркөмө файҙаланырға тырыша!.. Тимәк, үҙендә лә бер төркөм бар тигән һүҙ. Төркөм бер яҡлы булмай. Ә причем бында мин? Минең халҡым бар, уның ауыр, ҡатмарлы тарихы бар, уның яулап алған хоҡуҡтары, киләсәге бар. Мин тик уның Октябрь биргән ошо хоҡуҡтарынан тулыһынса файҙаланыуын, бер кемдең дә уға бысраҡ ҡулын һуҙмауын, бер кемдең дә уны мыҫҡылламауын, уның исеме менән һатыу итмәүен генә һәм уның үҙ шағирҙарының 5 йылда 2 табаҡлыҡ китап сығарырға зар-интизар булып йөрөмәүен генә теләйем. Һәм ул китап үҙ халҡыма барып етһен ине, иң ғәҙел хөкөмдө мин уның ауыҙынан ишетһәм ине. Минең бөтә теләгәнем шул ғына. Шул теләгем изге булған өсөн генә мин бөгөн ямаулы салбар кейеп, аслы-туҡлы йөрөйөм, балаларҙы, ҡатынды интектерәм... Шуның өсөн генә мин бер баламды шул уҡ нәшриәт бүлмәһендә туңдырып үлтерҙем. Шул маҡсат өсөн генә 8 йыл төрлө кешеләрҙең утын һарайында, тамуҡ бүлмәләрендә, тауар складтарында, юлаусылар йортонда, гостиницаларҙа йәшәп, ярты эш хаҡымды, ҡан-йәшемде түгеп йәшәнем, эшләнем һәм бер генә юл да выжданыма, намыҫыма ҡаршы төшөп, аҡса өсөн яҙа алманым. Башҡа халыҡтарҙы үҙ халҡым кеүек үк күргән өсөн мин уларҙың шағирҙарын — тауыштарын үҙ телемә тәржемә иттем.

Әгәр ҙә кәрәк икән, шул халҡымдың киләсәге өсөн ҡорбан булыу миңә бер ни ҙә түгел.

Ләкин ҡорбандар биреү етте буғай, инде ижад итергә, эҙәмсә йәшәргә, эҙәмсә мөнәсәбәт булдырырға ине!..

27 апрель.

Тәүге ҡабат күк күкрәне. Бик сәйер күк күкрәү булды был. Рәхәтләнеп ҡар яуып тора. Киске сәғәт 11-ҙәр булғандыр. Мин редакцияла күк күкрәү тураһында «Һынау» тигән шиғырҙы яңынан эшләп ултыра инем, ҡапыл төндө яҡтыртып йәшен йәшнәне лә бик ҡаты итеп күк күкрәп ебәрҙе. Хатта һиҫкәнеп киттем, унан хат яҙырға тотондом.

Бик сәйер килә был яҙ. Хәйерлегә булһын инде.

Кисә урманға сығып, ҡар аҫтынан тәүге сәскәләр йыйып алып индек. Быға тиклем ҡар аҫтында сәскә үҫеп ултырғанын күргәнем юҡ ине әле. Фәжәп: ҡалын ҡар аҫтында яҙ күрке

(подснежники) рәхәтләнеп сәскә атып ултыра. Тәбиғәт үзенекен итә. Минең шиғырҙар ҙа шулай уҡ түгелме һуң әле?

Ниндәй генә һалҡын булмаһын, йәшен йәшнәп күк күкрәй. Нисек кенә ҡар ҡалын булмаһын, ҡар аҫтында яҙ күрке сәскә атып ултыра. Был апрелдә ниндәй генә әшәкелектәр башҡа ҡойолмаһын, барыбер минең рухты һындыра, өмөттө һүндерә алмайҙар.

Тик алданма арзан
дан-шөһрәткә
Осҡан саҡта ғүмер юлынан.
Йәшен балҡый тәүҙә,
Күк күкрәүе
Ишетелә бары һуңынан.

Кисә Шакир Галин миндә ҡунды. Төнгө сәғәт 4-кә тиклем шиғыр уҡыныҡ, һөйләштек. Ә иртән Рауил Бикбаев ҡатыны менән килеп сыҡты. Ә кискә табан ҡустым Рауил килде. АҒиҙел буйына барып ултырып ҡайттыҡ.

Көн эске менән үтте. Ә аҡса юҡ. Килгән ҡунаҡтар үҙҙәре ҡунаҡ итеп китте.

Китап һаман шул көйө ҡуҙғалмай ята. Нәшриәттән дә һорамайҙар, мин дә ҡул һелтәп ҡуйҙым. Шулай ҙа берәй төрлө хәл итергә кәрәк булыр инде.

1 май.

Әхмәт минең портретты яҙа башланы. Бик илһамланып тотондо. Шәп портрет сығасаҡ, ти. Үҙе йырлай, үҙе эшләй, үҙе:

— Беҙгә үҙебеҙҙең Фучиктарыбыҙ, Хикмәттәребеҙ, бөгөнгө Салауатыбыҙ кәрәк, — тип декламировать итә. Яланғас төшөрөргә иткәйне, мин ҡарышҡас, эске күлдәктән ҡалдым.

Партиялылыҡ ул миҙал түгел, уны әҫәрҙең муйынына тағып ҡуймайҙар: ул әҫәрҙең бөтә тәнендә, ҡанында, рухында булырға тейеш.

7 апрель.

Завет Льва Толстого, данный им самому себе еще в молодости, не только не лгать прямо, но не лгать и отрицательно — умалчивая.

Киске шәфәк пәрҙәһе төшкәс,
Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән
Әллә ниндәй илдәр күренә.
Һәйбәт китап уҡығанда
Тиҙ таң ата.

— Ну, бөгөн шәп бер шиғырыңды уҡыным, әй!..
— Ниндәй шиғырҙы әйтәһең?
— Теге ни... яҙылмағанын.

8 апрель.

Х. Фәлимовтың 60 йәшенә арналған кисә. «Һабантурғай йырҙары». Концерт. Банкет.

З. Исмәғилев:

— Салауаттарҙың башҡорт булыуы сомнительно.

— Ләкин шуны бел, ағай: салауаттарҙан башҡорт сыҡһа, ул инде ҡурҡаҡ башҡорт булмай.

Арыҫлан ағай, генерал Күсимов бейеүе.

9 апрель.

Нияз. Археология. Филми совет. Зәйнулла, Мөхтәр Сәғитовтың диссертацияһы — Күҫәк. Берләшеү идеяһы. — Сайран — ҡыҫтайҙар һөтимәрҙәр — Ира — Салауат, Азамат.

Ниязҙың балалары: Әлфиә, Ирек. Ҡатыны — Лена. Буран. Йәшәйһе килмәү. Ҡулдан бер эш тә килмәй. Билдәһеҙлек.

Ниңә тормошто мин
ҙтә ҡатмарлы бер,
Үтә сеймәлгән бер
төйөн итәмен?
Ә бит бөтәһе лә
ябайыраҡ,

Тик мин уны
ҡыйын һүтәмен...

Еңеү ҡайтты

Хәтеремдә ул көн,
тарих онотмаҫ көн:
Еңеү ҡайтты,
атай ҡайтманы.
Дүрт күҙ менән көткән
дүрт балаһын
Баштарынан һыйпап
әйтмәне,
Балаларым, тимәне...
Германия ере,
Польша ере,
Венгрия ере,
Америка ере!
Ер-әсәкәй, әйтсе миңә,
Ҡайһы ерҙә атай һөйәге?
Ҡайһы ерҙә һуңғы төйәге?
Ҡайҙа атайым?
Ҡайһы ерҙе
Атай ҡәбере тип атайым?
Әйтсе, Ер!
Ҡайҙа атайым?
Бер ус тупраҡҡайын
һалып ҡайтайым.
Ҡайҙа атайым?
Ул коммунист ине,
Данһыҙ үлем менән
үлмәгәндер?
Кеше күрмәһә,
Ҡайын күргәндер,
Таштар илағандыр,
Йондоҙҙар күҙләгәндер?..
Ниҙәр күреренде
Алдан белеп торһаң,
Йәшәүҙең бер ҡыҙығы ла
Ҡалмаҫ ине!..
Тыңлап таңға ҡалған тел,
Йәнгә рәхәт алған тел,
Яулап-ҡурсып алған тел,
Ҡан-йәш түгеп алған тел,
Күреп ирек емеше,
Күреп бәхет өлөшө,

Һаҡлар һине һәр кеше,
Яҡлар һине һәр кеше...
Телһеҙ инек, тел алдыҡ,
Илһеҙ инек, ил алдыҡ,
Һинең менән тәйән гелән
Яҡты таңға ҡуҙғалдыҡ,
Үткәнгә үрт, ҡуҙ һалдыҡ...
Үткәнгә үрт һалмағыҙ,
Тик үрелеп ҡарағыҙ,
Яҡын булыр арағыҙ,
Уңалып та бөтмәгән
Йөрәктәге ярабыҙ,
Тағы ярып барабыҙ.
Бөтә даһи һөйләшерлек,
Бөтә ғашиҡ серләшерлек,
Аңлаған тел көнләшерлек,
Ырыҫ-бәхет өләшерлек,
Һәр телгә лә тиңләшерлек,
Аңлашырлыҡ уртаҡ тел
Бөтә илдә табылыр.
Телде телдәр хушһынмаһа,
Артылмаҫлыҡ тау булыр,
Булмаҫ дуҫлыҡ, дау булыр.
Көслөк менән тел булмаҫ,
Үслек менән тел булмаҫ,
Көс үҙенә көс табыр,
Үс үҙенә үс табыр,
Ҡыҙыл ҡандар түгелгән,
Күп ҡорбандар бирелгән.
Ошо тыуған ил өсөн.

Бар донъяны айҡап сыҡ,
Күҙең менән байҡап сыҡ,
Бай һынын да табырһың,
Юҡһылын да табырһың.
Дуҫыңды ла табырһың,
Дошманға ла тарырһың,
Йөрәй-йөрәй арырһың,
Илең һағынып янырһың.

24 апрель.

Шиғыр ул логика түгел, ә логиканы боҙоу, дөйөм логикалағы эмоциональ баҫым. Әгәр шулай булмаһа, бер бөтөндөң айырым өлөшөнә айырыуса баҫым яһамаһаң, шиғыр ҙа тыумаҫ ине.

Шуның өсөн иң мөһим тип иҫәпләгән, үҙенде иң ныҡ борсоған нәмә хаҡында ғына яҙырға кәрәк.

Ә башҡаса яҙыу — ул тик алдашыу ғына.

Һинең өсөн үлер инем,
Мин үлгәс һин нишләрһең?
Ярай инде үлмәйем,
Мине, бәлки, ишләрһең.

1 июнь.

Мостай ағай менән өйҙәрендә һөйләшеү. Ул йә иҫ киткес бер мудрец, йә иҫ киткес бер «хәйләкәр». Теләгәнем — тәүгеһе. Уға ауыр һүҙҙәр әйтеүемә эс боша. Ә бит шағирҙар күңеле йәйғор һымаҡ кәрәк була.

Тормоштоң бөтә ҡаршылыҡтарына күҙ йоммаҫҡа, сәнғәт тип икенсе бер тормош уйлап сығармаҫҡа, халыҡтың намыҫы булырға ваҡыт инде. Һөйләшеү ошо хаҡта булды. Китапты бер биш-алты көндән берәй аулаҡҡа сығып уҡырға тигән һүҙгә килдек.

(Тик А. Н-ҙең дә бергә буласағына күңел шомлана.)

Университеттағы шиғыр кисәһе хаҡында бер бит кәрзинкә яҙҙы.

Борайға һайлауға барырға йыйына.

Хо-Ши-Минды бер нисә ҡабат күреп һөйләштем, ти. Бер вьетнам егетенең китабын уҡыны. Хо-Ши-Миндан шиғырҙар йыйып... бирҙе (француз телендә). Үҙенең «Торналар ҡайтҡанда»һын бүләк итте.

Проза яҙырға уйламайһыңмы, ти. Яҙырға кәрәк, шиғырҙың уҡыусыһы аҙ, халыҡ менән иркенләп һөйләшерлек, хатта үпкәләрҙе лә әйтерлек булһын, ти. («Ник йоҡлайһың, мужик?» тип Туҡай әйтә алған бит. Ә беҙгә халыҡ алдына ла ҡуя торған проблемалар аҙмы ни?)

Ҡанатһыҙ ҙа йөрәк
ник кәрәк,
Ҡанатлы ла йөрәк
бик кәрәк,
Ҡанатлы ла йөрәк
бик һирәк,
Ҡәҙеркәйен белеү
бик кәрәк.
Аҡ тирәккәй менән
күк тирәк...

23 июнь.

Детсад балалары алдында килгән тәрбиәсе кыз алыç балалыкъ уйынын хәтерләтте. «Алырымкош менән Бирмәмкош» уйыны ине ул!.. Ә тормош?..

Алырымкош менән Бирмәмкош
Түгел икән, дуçтар, был тормош.
Койон икән, дуçтар, был тормош,
Уйын ғына икән Бирмәмкош.
Алырымкош алһа аранан,
Бирмәмкошо ала аралап.
Алырымкош кейә каранан,
Бирмәмкоштан аk нур тарала.

30 июнь.

Беззең сафтарға ла үлем кағылды. Әле генә Ренат Алтайскийзы ерләшеп кайттым. Бергә интернатта уқығандарзан Диккәт Бураҡаев менән икәү генә инек.

Ял көнө Димдә һыуға батып үлгән. Бөгөн иртән генә тапкандар. Затонға барып сыкқан. Балыксылар күреп калған. Яңы ғына Өфөгә кайтып, квартира алып, Башэнергола эшләй башлағайны Ренат. Һуңғы кабат театрза күрешкәндә:

— Һөйләшеп ултырайык әле, Бабай, бер үткәндәрзе иçкә алып,— тигән булғайны.

— Ярай, ғүмер бар бит әле, ултырырбыз. Кайтып яқшы иткәнһең,— тигән булдым мин, «ғүмер» һүзен кыçтырып...

Шунда уқ Мариятты ла күрзек... Уны ул да, мин дә яратып йөрөй инек. «Көндәш» тә, серзәш тә инек. Ул минең ғазапланғанды күреп:

— Ярай инде, Бабай, третий лишний, мин артыкмындыр, арағызға кермәйем, һин үзең кара инде,— тигән булды. Ә кыз икебеззә лә караманы... Һөйләшеп ултырыр һүззәр күп ине лә, яzмағандыр, күрәһең.

Ғүмере иç киткес кыçқа булды шул. Үтә хәйләһез, үтә кеше йәнле, үтә эшенә бирелгән кеше ине.

Зыяраттан сыққанда бер әбей, кем ине, тип һорағас:

— Электрик, яқтылық үткәреусе ине,— тинем.

Ысынлап та, унан күңелдә тик яқтылық кына тороп қалды.

Хуш бул, дуçқай! Онотмам һине. Ауыр тупрағың еңел булһын инде. Үкенес, бик үкенес, мәғәнәһез үлем һағалаған икән үзеңде. Рәнйемә, һин, бәлки, уны ныграқ та яратқанһыңдыр. Яқтылық!..

— Шулай, үлеп-нитеп китһәк, бер ус тупраҡ һалышырбыз инде,— тинем Диккәткә хушлашқан сақта.

Ләлә апа, әсәһе, иç киткес сабыр, оло рухлы икән. Мин иçтән яzғандыр, аяқтан йығылғандыр тигәйнем. Ә ул хатта күз

йәше аша булһа ла элеккесә йылмая ла ала... Әсә... Ниҙәр генә кисермәне, күрмәне инде ул.

Берҙән-бер улы үлгәндә лә беҙгә һаман: «Балалар, минең балаларым»,— ти.

Онотмаҫҡа ине, йышыраҡ кереп йөрөргә ине уға...

7 август.

Ярты-йорто һөйләшәбеҙ,
Ярты-йорто һөйәбеҙ,
Ярты-йорто һөйөнәбеҙ,
Ярты-йорто көйәбеҙ...

Тик яртыны ҡағып алһаҡ,
Беҙ тәүәккәл, беҙ бөтөн.
Ант бирәбеҙ халҡыбыҙға
Һаҡлашырға өмөтөн.

Ә айныҡас, ҡан һыуынҡас,
. . . . . .

8 август.

Мин дә дуҫлыҡ өсөн янам, ләкин дуҫлыҡ ҙәҙел булһын. Ҡол менән хужа дуҫ була алмай. Мин дә халыҡтар дуҫлығын... Ул да ҙәҙел булһын. Байҙар менән ярлылар дуҫлығы ғына кәрәкмәй. Барыбыҙ ҙа бай булайыҡ. Бер кем дә рәйерлек, кәмһенерлек булмаһын.

26 август.

Ҡарт һәм диңгеҙ. Одесса.

Мин әлегә, юҡ, ҡарт түгел,
Һау-сәләмәт, бөтөн мин.
Сөнки туғыҙ йәшкә тиклем
Имдем әсә һөтөн мин.
Тешем үткер, күҙем күрә,
Тартам, эсәм, шаярам.
Ҡыҙҙарға ла күҙ һалам...
Етмәһә, шиғыр яҙам.
Ләкин күрһәм ҡарттарҙы мин,
Ауырыйым, һыҙланам.
Үҙемде шул төҫлө күрәм,
Ҡотом осоп ҡыҙғанам.
Бына әле минең янда диңгеҙгә төбәп күҙен,
Сал сәсле бер ҡарт ултыра,
. . . . . .

Октябрь.

Тәнкитселәр әҙәбиәттә погода яһай алмай, ләкин уны боҙоуҙары ихтимал. *М. Бурангол.*

Мин бер кем алдында ла баш эймәйем тиер инем, берҙән-бер кешем бар: ул — парикмахер. *Р. Нигмәти.*

Яҡшы һүҙҙе һыуға һал — халыҡ белмәһә, балыҡ белер...

Әҙәби көләмәстәр

— Абдуллин яңы пьеса килтергән.
— Үҙенекеме? (С. Агиш.)

Ю. Фучик элмәктә көйө — репортаж, М. Йәлил палач балтаһы аҫтында — шиғыр, ә Абдуллин Ихсан менән судлашырға барғанда ла пьеса яҙған... (С. Агиш.)

— Талант ни ул?
— Талант — Ибр. Абдуллиндың берҙән-бер үтеп инә алмаған тишеге. (С. Агиш.)

— Игебайҙың таланты ниҙә?
— Композиторҙарҙың талапһыҙлығында, әлбиттә.

— Сәхнәгә тыпылдашып менгән ни?— И. Абдуллин пьесалары.
— Сәхнәнән тыпылдашып төшкән ни?— И. Абдуллин пьесалары...
— Телһеҙ көйө тел хаҡында һөйләргә һәр саҡ теле ҡысытып торған яҙыусы кем?
— Йософ Гәрәй.

14 июнь.

Нәшриәткә 235 шиғырҙы илтеп һалдым. Исмаһам, 35-ен аңлай торған берәй әҙәм заты булһа икән — ниндәй бәхетле булыр инем... Күңелдә ниңәлер Чехов ҡына — бер шиғыр ҙа юҡ.

Йөрәк ауырта.

Миңә инде был донъянан тайырға ла ваҡыттыр инде.

Тик бынан берәй мәғәнә булһа!..

Халҡыңа!..

Юҡ шул...

Әле милли тойғо шул тиклем сабый тойғоһо ғына.

Ә шулай ҙа берәй эш эшләнем тип китке килә.

Иң аянысы — бушҡа ҡорбан булыу. 18 йыл!.. Бер кешенең ғүмере... Ә үҙемә ҡалһа — лириканы бар иттем тигән булам — һис бер ялғанһыҙ.

Хәйҙән һуң, Мәлих Харистан һуң... Ә Мостай ағай? Ул бит аҡыллы, милләттән өҫтөн булып ҡылана... Тимәк, уға ышанып булмай.

Минән дә бәхетһеҙерәк! Халҡы юҡ, ә үҙе ышанған кешеләре — барыһы ла һатлыҡ йән... Ә минең, исмаһам, Рауилдарым, Тимерҙәрем, Мөхәмәттәрем, Хәсәндәрем, тағы әллә күпме бөрөләрем бар... (Рәшит кенә ауырыу, зато — гений.) Юҡ, минең 18 йылым, бәлки, ул тиклем бушҡа ла үтмәгәндер.

Мин бит, күҙгә күренмәҫ булһам да, аҫтыртын ғына булһа ла — бөтәһен дә биргәнмен. Тик үҙемде табаһы ине. Ҡайҙа икән мин? Бәлки, мин юҡтыр ҙа. Тик намыҫым ғына бар, саф. Мин әҙәбиәтебеҙгә хыянатһыҙ. Ҡыҙыҡ: китап магазинында бер мәрйә апай һатыусыларҙың юҡлығына асыуланып, чегын кире килтергәндә:

— Убегают, как эти... — тине лә кире китте.

Аҙаҡ килеп:

— Как молодой месяц...— тип яңынан чек яҙҙырҙы.

Үҙенең сағыштырыуынан шул тиклем ҡәнәғәт булып ҡайтып китте, шикелле. Ә ҡарт ай ҡасмай микән ни?.. Ай ҙа уйнашсы икән дә баһа. Йәше — бигерәк тә...

Ә шулай ҙа кешеләрҙә шағирлыҡ көслө.

Шуғалыр микән, йәшәйһе килә әле.

«Как молодой месяц...» Ә тышта туп-тулы ай һәм, һыуыҡ булһа ла, һандуғас һайрай.

Гөлнар мыршылдап йоҡлай. Тәҙрә төбөнән иҫерек малайҙарҙы «сығып иҙәм» тип ҡурҡытып ебәрҙем. «Спиртыбыҙ бар» тип бирһе күрешеп китте. Әкәмәт донъя!..

19 июнь.

Таш имсәкле, ҡом һөтлө, имеҙһә лә, туймайҙыр. (Фәрит Иҫәнғоловҡа әнкәһе һөйләгән легенданан.)

Бөркөттәр килеп төшкәндә, уҡсыларҙың әйткән һүҙе бар. Ҙур бер эпостың өлөшө булырға тейеш. Ҡайҙа икән шуның дауамы? Сюжетын табырға! Бөркөт үҙенең балаһын тапҡанда ни ти?

1969

19 март.

Переделкино.

Мариэтта Шагинян бер режиссер менән һөйләшеп ултыра ине. Ҡалмыҡ шағиры Эренджанов менән фотоға төштөләр. Беҙ ҙә Игебай менән улар эргәһенә барып ултырҙыҡ. Беҙҙе лә бергә төшөрөүен һораныҡ.

Мариэтта Шагинян ниндәйҙер киносценарийының юғалып ҡалыуын һөйләне.

— Мин үлмәҫ борон табып бирһендәр ине. Бик үтенеп һорай Шагинян, тип әйтегеҙ,— ти.

Режиссер табышлып бирергә булды.

— Страшно не люблю киношников, глаза бы их выцарапала,— ти.

ГДР-ға ғашиҡ. Бигерәк тә производстволарына һәм Брехт театрына.

— Бына тигән драматургия һәм иң яҡшы музыка! Музыка уларҙа бына тигән булды һәм булып ҡала. Германияның фашизацияһын бик ауыр кисерҙем, һуғыштан һуң барырға ла ҡурҡып йөрөнөм. Ләкин барғас, фашизмдың эҙен дә күрмәнем. Төбө-тамыры менән йолҡоп алғандар. Немецтарҙан да фашизмды ныҡ яратмаған кешеләр юҡтыр.

Гомулкалар Ульбрихттың ҡойроғона ла тормай. Гомулка еврейҙарҙы репрессиялап, үҙен бөтә Европаға хур итте. Бер ниндәй классовый позициянан сығып түгел, ә тик милләтселек позицияһынан сығып эш итте,— тип һөйләй.

— Немец теле — минең икенсе туған телем. Мин ГДР-ҙы бала сағымдан беләм. Вкус етенкерәмәй, ләкин бөтә нәмә халыҡ өсөн эшләнә.

Үҙенең сценарийы тураһында: «Ул бик ҡыйыу, ләкин большевиктарса (большевично) ине, хөкүмәткә оҡшаманы ла шул көйө тороп ҡалды»,— ти. «Это была литература, а не драматургия Сафронова. Я сначала не придала этой вещи большого значения, т. к. писалась она легко. Ләкин сәхнәгә ҡуйғас,

үҙем дә аптыраным. Бына нисек ҡуйырға мөмкин әйберҙе сәхнәлә!» тип һөйләп ултырҙы.

Бында 20 майға тиклем эшләйәсәк икән. Ҡулында ГДР тураһында ниндәйҙер немецса белешмә ине.

Унан тимер башлы таяғын тотоп, йөрөргә сығып китте. Яланбаш, аяғында йөнө ҡырылып бөткән ботик — «прощай, молодость». Өҫтөндә ябай ғына йоҡа йәшел пальто. Ҡолағына зарлана.

— Это мое несчастье, то контакт есть, то прерывается, — ти.

Ғәжәп бай рухлы ҡарсыҡ. Кешеләрҙе маҡтағанда «Это высокообразованный, начитанный человек» тип маҡтай.

10 март.

Иртәнге сәғәт 6-сы ярты. Төш күреп уяндым. Комсомолда эшләгән ваҡыттағы ҡара юрғамды — Летокты күрҙем. Аҡтарылып боҙҙар киткәндә Йүрүҙән аша Мәсетле тәңгәленән йөҙөп сыҡтыҡ та ул һыулауға төшкән йылҡы һуҡмағына аяҡ баҫыу менән күҙҙән юғалды. «В легенды ушел»,— тигән шифыр һүҙе генә яңғырап ҡалды. Ә мине Арҡауылда Фадеев тотоп тора, имеш. Йәнәһе, мин ниндәйҙер батырлыҡ күрһәткәнмен дә, ул минең хаҡта ниҙер яҙырға булған, имеш. Ә мин бер боҙға һикереп, ярға шул боҙ өҫтөнән йүгереп сыҡҡанмын да Мәсетле йәштәре араһында һөйләшеп торам, имеш. Яр башында кемдер бейей, яҙғы шатлыҡ тауыштары, көлөшөүҙәр. Ҡараһам, был күҙектереп йәш быҙауҙарҙы үлтерә торған Мәслимә, имеш.

— Минең иремә бармағыҙ, атыу тағы эсерәһегеҙ,— ти кемгәлер.

— Ниңә, Йонос ҡорҙашҡа барырға ла ярамаймы? — тигәнемә:

— Юҡ, мин һеҙгә әйтмәйем бит. Мынау тонғорҙарға ғына әйттем. Ә һеҙ барығыҙ, хотя һеҙ, журнал сығарыусы, яҙыусы кеше, беҙгә барып тораһығыҙмы тағы?— тигән була.

— Һыуҙан өшөп сыҡҡанда берәй ярты эсте тишмәҫ ине,— тигән булам мин.

— Килегеҙ, килегеҙ.

Ә мин һаман ҡара юрғамдың йүгәнен һыпырып алып ҡалмағанға үкенеп бөтә алмайым — йәнәһе, теҙгене аяғына уралыр ҙа сәсәп йығылыуы бар. Тере ҡалырмы, юҡмы был боҙло һыуҙан? Тирле килгәйне бит, тип ҡайғырам.

— Ҡайғырмағыҙ, ана ҡалай сабып китте бит!— тип тыныслandыралар мине.

10 март.

Ҡара юрға

(Леток)

Таң алдынан төшкә керҙең дә һин
Өндәремдә әле уйҙа мин.
Ҡара ялҡын кеүек ҡара юрғам,
Ҡайҙа юғалдың һин,
Ҡайҙа һин?
Аҡтарылып боҙҙар киткәндә,
Йүрүҙәнкәй аша сыҡтыҡ та...

1 апрель.

1 апрель — алдаҡсы көн. Кәтибә апай ғәҙәтенсә Ҡәнифә апайҙы ебәрткән.

— Обкомдан килергә тейештәр, тиҙерәк килеп етә һалһын,— имеш.

Кешеләрҙең алдауы ла үҙенсә бит әле: редактор булмаһа, улай ебәрергә баҙнат итмәҫ ине. Кеше хәҙер үҙенә үҙе отчет та бирмәй.

Әнисәнең С. Садиҡованың: «Азат ҡатын»да баҫтырған йырына ҡаршы төшөүе.

— Кешеләр тапаған юлдан барырға ни...

— Йоҡлап ултырмаҫҡа ине,— тигән була бөтә сырайын һытып. Ҡәнифә апай әйтмешләй, «ҡолон һалғандай...»

Кешеләрҙең кешелеге иң ябай — бәләкәй кешеләргә булған мөнәсәбәтендә асыла. Кешене тулыһынса бергә эшләмәй тороп белеп булмай икән.

Исключительность, нетерпимость һәм гонор сифаттары нисек итеп аумаҡайлыҡ менән һыйыша?

Наҙанлыҡ һәр саҡ белемле булыуға дәғүә итә, ләкин был дәғүә һәр саҡ көлкө булып, «мин беләм»леккә генә ҡайтып ҡала.

Она у вас с фасоном (Лина).

2 апрель.

Илле йыллыҡ та үтеп китте. Оло һүҙҙәр яҙылған плакаттар, лозунгылар, символик һүрәттәр яҙғы бысраҡ һыуҙарға һөйрәп төшөрөлөп, тейешле урындарына инеп ятты...

Мин уларҙы, элгән саҡтағы һымаҡ уҡ, төшөргән саҡтарында ла ҡарап йөрөнөм.

Ләкин уларҙы элгәндәгегә ҡарағанда төшөргәндәге кешеләр ихласыраҡ ине. «Прошел сабантуй, их...» тигән һүҙ-

ҙәр ҡәнәғәтерәк яңғыраны. Әйтерһең, шуның менән минең илемдең — Башҡортостанымдың — өнө тығылды, алҡымы ябылды...

Әйтерһең, минең илем, шул илде ил итеп тотоп торған халҡым, бары шул шау-шыуға, ҡайһы бер предприятиеларға илле йыллыҡ исеме һәм ҡайһы бер булдыҡһыҙ ҙәҙәбиәт ҡомаҡтарына «атҡаҙанған» исемдәр биреүгә генә мохтаж булып торған икән...

«Октябрь революцияһы ордены» ла тағылды...

Ә ҡайҙа уның халҡым теләгән емештәре? Көлкө хатта!..

Өфөлә— баш ҡаламда минең — хәҙер күпме башҡорт йәшәгән ҡалала, күпме татар йәшәгән шәһәрҙә — бер генә башҡорт урта мәктәбе, бер генә татар урта мәктәбе булмаһын, имеш... (Интернат-мәктәпте мин иҫкә алмайым, сөнки ул хәҙер сит ил делегаттарына күрһәтеү өсөн генә һаҡлана.)

Башҡортса Өфөлә ике класс бар ни бары. Шуларҙың тәүгеһендә минең улым — Азаматым уҡый.

Уға унда уҡырға йөрөү — мең бәлә. Рогервик!

Ҡаланың бер ситенән икенсе ситенә ул теләһә трамвайҙа эсәге сығып йөрөһөн, теләһә (атаһы теләй әлбиттә!) йәйәү йөрөһөн. Сөнки ара 7 саҡрым ғына, ә уға инде — 7 йәш!

Илле йыллыҡ алдынан күпме йөрөнөк обкомға, күпме йөрөнөк горсоветҡа, күпме йөрөнөк Министрҙар советына, Башҡорт АССР-ының аталған хөкүмәт етәкселәренә, ә бер-ике тәгәрмәсле автобус булһа ла яулап ала алманыҡ беҙ, мәхлүк, һантый, хыялый башҡорттар!..

Башҡорт балаларына берәй арба ише бер автобус — миңә иң ҙур бер хыял булып ҡалды.

Теләһә Исикава Такубоку һымаҡ, уның бер өй тураһындағы һымаҡ, ошо автобус хаҡында хыялый бер шиғыр яҙ!..

Ләкин уны кем баҫһын!..

Мин тантаналарҙа үҙ-үҙен, үҙенең балаларына бер мәктәп кәрәклеген дә онотҡан Мостай ағаймы ни?..

Мостафа ағай, һин үҙ телмәреңдә әллә ниндәй ҡара шәүләләрҙе телгә алаһың, ә шул уҡ автономияға Лениндан алда үҙ халҡы исеменән ҡул ҡуйған Мстислав Ҡулаевты — башҡортҡа тәүге әлифба төҙөп биргән (притом рус графикаһы нигеҙендә) ғалимды, табипты, илсене телгә алмайһың... Әйтерһең, башҡорт үлем түшәгенә ятҡан еренән әле «ИРЕК» һүҙе барын ишетеп, яңынан бар асылына тоғро булып, иң аҫыл ирҙәренең ғүмере хаҡына ҡалҡынып тормаған... әйтерһең, шул «ирек» һүҙен әйткән Питер ҡалаһын үҙ күкрәге менән ҡурсып ҡалырға яңынан Салауат булып тыумаған!..

Ә бит Рәсәйҙең — шул иң ҡараңғы төрмәнең иң төпкөлөнә ташланған Салауаттар бер һүҙҙә булмаһа, ирек өсөн йәнен

күбәләк ғүмерәләй ҙә күрмәҫкә әҙер тормаһа, Октябрь революцияһының бисәләр һуғышынан ниндәй айырмаһы булыр ине?

Бабич һымаҡ ир-шағирҙар шул ут эсенә барып ташланыр инеме һуң?

Ә бит Бабич — күңелендә беренсе ҡабат башҡорт төшөнсәһен йәне-тәне менән тойған шағир. Шуны тоймаһа, ул йәнен-тәнен дә биреп тормаҫ ине...

Ә уның тирәһендә нисә йылдар — Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы автономиялы булып танылғаны бирле — миллион ҡорттар мыжғый!..

Ләкин үҙ ғүмерен үҙ халҡы өсөн ҡорбан иткән ҡаһарман йөрәкте башҡорт ни хәл генә итеп онотһон. Онотһа башҡа халыҡтар онотор, ләкин донъяла бер башҡорт ҡала икән, ул ирек шағирын онотмаҫ... (Был көндәлекте лә иҫерек баш менән яҙған Бабич улы — Рәми булыр.)

Атайҙар һымаҡ үлә алһаҡ, минең өсөн иң оло бәхет шул булыр ине донъяла...

Әгәр иртәгә мин булмаһам, һау бул, Башҡортостан, тере булһам, кисер, Башҡортостан!.. КИСЕР!!! Рәми.

Халҡым! Мин барыбер зиһенле, оло йөрәкле, яугир улдарың тыуырына ышанам. Ышанам!!!

Ә Рауил — һуңғы ышанысым — талантым — һин нимәләрҙе артыҡ күрҙең...

23 апрель.

Ахмаҡтың ахмаҡлығын күреү өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, ә бына аҡыллының аҡылын күреү өсөн байтаҡ аҡыл кәрәк.

Мы еще такие язычники
И верим в такие чудеса,
Что березка еще ничейная,
И ничейные — леса!

29 сентябрь.

Азат Таллин

Ҡайҙа ла бер беҙҙең халҡыбыҙ,
Йыллыҡтарҙы байрам итәләр,
Шатлыҡ йылғалары ташҡандай,
Майҙандарға байраҡ илтәләр.
Ҡайҙа ла бер беҙҙең малайҙар.
Ағас баштарына үрмәләп,
Һәр шатлыҡты, һәр бер байрамды
Тырышалар алдан күрмәгә.

Ҡайҙа ла бер беҙҙең ғәшиҡтар,
Ҡосаҡлашып ҡарап торалар.
Ситтә торған ҡарттар...
мыйыҡ боралар...

Яңы йыл сәнскеләренә

1) «Ниңә, иркәм?» көйөнә
Ниңә, ниңә икән,
Шиғыр яҙмай икән,
Йырҙа ғына микән күңеле?
Әллә файҙалыраҡ микән
Күтәреүе йөктөң еңелен?
2) Әйләнгән һайын бер пьеса,
Хәҙер уның ҡаҙна бай...
Ниңә шиғыр яҙһын Атнабай?
3) Һалдатмы ни һалдат погонһыҙ,
Поезмы ни поезд вагонһыҙ?
4) Шиғыр яҙған замандарҙа
Шағир инең, Назар Нәжми.
Хәҙер рәис булып ҡына
Шиғыр яҙмау насар, Нәжми.
5) Нисә йылдар буйы
Ҡосаҡлап бер ҡайының,
Ҡояшҡайың әллә байыны?
6) Иткәс иткәс «халыҡ шағиры»,
Халыҡ уҡырлыҡ та
Булһын икән шиғыры!..
7) Мәскәүҙә лә Мостай,
Өфөлә лә Мостай,
Ҡазанда ла Мостай —
Бәйгеләме өс тай?
8) Ай, ҡояш та тотолор —
Мостай барҙа ҡотолор.
9) Тыңлап «Тормош ҡушыуы»н,
«Мин белмәйем тыныс һөйөүҙе»,
Тик «ышаныс» аҙыраҡ булһа,
Һин үҙеңде, әйҙә, һөй үҙең!..
10) «Кәмһетелгәндәр»еңде лә күрҙек,
Күрәйек кәмһетелмәгәнеңде.
Илап ҡына тыуһаң да һин,
Йырлап китерһең әле...
11) Булған, тиҙәр, Б. Дауыл,
Хәҙер инде бығау ул...

10 декабрь.

Кешеләргә бирмәҫ йылың булһа,
Шул йылыңда үҙең туңырһың.

Дуҫың дошманыңа әйләнһә,
Мең дошмандан яман бер дуҫың.

Ялған дуҫтан мең артыҡ
Ысын ғына дошманың.

Ағай-эне талашыр,
Атҡа менһә ярашыр,
Дуҫ-иштәр бер талашһа,
Ғүмер баҡый талашыр.

8 октябрь.

«Алтын көҙ» — шиғыр кисәһе.

А. Игебайға

Мин — Ер-әсә, мин өндәшәм,
оран һалам
Был залдағы
күңеленең күге байға,
иле байға,
теле байға.
Күсәреңдән ысҡынма, тип,
һүҙ бирәмен
Игебайға, Игебайға, Игебайға!

Ф. Рәхимғоловаға

Шып-шым баҫып, көҙ кеүек,
Апайым да килгәнсе.
Был кисәнең булырын
Ҡайҙан уҡып белгәнсе.
Белгәс, белгән — ул бит инде
«Яҙыу таныған кеше».
Һеҙҙе лә һөйөндөрөр,
Бик мул уның емеше...

Ирек Кинйәбулатовҡа

Ирек ирлеген итер,
Ирәндектәргә китер,
Ирәндеккә киткәнде
Ирәндек шағир итер.
«Баҫыу юлы» үтер, китер,
«Ферма юлдары»н килтер.

Шәриф Бикҡолға

Шәриф Бикҡол —
беҙгә бик ҡул,
Әйҙә, һүҙ һиңә хәҙер,
«Пионер»ға шифыр илтһәк,
Һәр ваҡытта бул әҙер!

Ғәлим Дәүләтовҡа

Үҙе ғалим, үҙе дәүләт,
Сапһа, тау яра саба.
Тик аяғың сабып ҡуйма,
Балтаңа ла бел сама.

Ә. Сафуанға

Йырлай ҙа ул,
Шифырлай ҙа,
Ауҙара ла Әлибай,
Ни ҡыланһа, шул килешә —
Көсө-дәрте әле бай.
Әйҙә, барынса ҡыуан,
Һүҙ һинеке, Сафуан!

23 июль.

Архив!..

Төнгө сәғәт 4. Бөтә архивты аҡтарып бөтөрөп, бөтә баҫылған, яҙылған яҙмаларҙы тәртипкә килтерҙем. Инде минән дә, мин анархистан да!.. идеаль архивариус юҡ!..

Был бөтә 20 йыллыҡ ижадты барлап сығыу, үҙемдең хаҡта бик етди уйланыу һәм ҡалған ғүмергә эш пландарына асыҡлау көндәре булды.

Бөтә ялым шуға китте.

15—16-шар сәғәт эшләнем. Күрәһең, әллә ни йәшәйһе ҡалмағандыр инде. Һәр хәлдә, йәшәгән тиклем йәшәп булмаҫтыр. Йөрәк шулай тоя...

В этой жизни умереть не ново,
Но и жить, конечно, не новей...

Әлбиттә, йәшәге килә. Тик мәғәнәле итеп, үҙең теләгәнсә, донъяны, тормошто, кешеләрҙе үҙ итеп, дуҫ-туған итеп, яратып йәшәге килә.

Ләкин донъя аҙым һайын, сәғәт һайын, хатта минут һайын хәшәрәт мәхлүктәр менән тула бара. Ә көрәшергә, еңергә мөмкин түгел. Минең кеүектәр үтә яңғыҙ булмай. Бары тик халҡың, был донъяла иң кәмһеткес тарихтың иң кәмһеткес фажиғәһен кисергән башҡортоң хаҡына, бәлки, ул да үҙ һүҙен әйтер тип йәшәргә кәрәк.

Ah, әгәр ҙә был тиклем дә мөхәббәт булмаһа, тарих барышын аңламаһам, үҙ-үҙемдә шул тиклем яуаплылыҡ тоймаһам, минең ашар икмәгем дә, эсер һыуым да булыр ине!.. Хәсәндәр килмәне, шөрләнеләр, буғай.

Хәйер, бер уйлаһаң, яңғыҙлыҡ та үҙенсә бер тантана бит әле — ваҡлыҡтан, иҫәпселлектән, ғәмһеҙлектән... һ. б. нәмәләр өҫтөнән тантана.

Моғайын, Пастернак ҡарт шул тойғоно кисергәндер әле... Уға кешеләр иң ауыр мәлдәрендә генә килгәндәр. Ә ул, бөтәһе лә үтер, заман үҙ һүҙен әйтер, бәлки, беҙгә лә ҡояш көлөр, тип уйлағандыр инде. Иҫ киткес бала бөйөк булған шул ул!.. Ә мин?.. Мин бары тик үҙем теләгән кешеләргә яҡшылыҡ эшләүсе генә. Мин уның юғарылығына, уның культураһына — Шекспирҙы «һин дә мин — Мөхәммәт Әмин» кеүек күреү дәрәжәһенә күтәрелә алмайым шул. Минең бар булған уҡытыусым һуғыш та аслыҡ ҡына... Ваҡытында уҡый алманыҡ, башҡа телдәрҙе өйрәнеүҙең — тел асҡысының — кәрәклеген әйтер кеше булманы. Әгәр булһа, ай нуры аҫтында ла иң һәйбәт яҙыусыларҙы уҡып бөтөрөр инем. Юҡ, балтырғаным, һин генә минең иң бөйөк уҡытыусым булдың!..

Халҡым фажиғәһе — ул үҙемдең фажиғәм...

Йөрәгемдең һуңғы киҫәктәре һиңә булһын, һин һаҡлап алып ҡалғанһың мине — уны!..

Серле, хыялый, ҡырыҫ Ҡаратау... Йүрүҙәнкәй!.. Инәкәйем, ғәйепләмәгеҙ мине!..

11 ноябрь.

«Атай перед смертью» или «Атай слушает о Достоевском».

Первая работа Азамата с натуры.

Иҫ киткес күҙ һәм баланың атаһы хаҡындағы сабыйҙарса изге төшөнсәһе.

Тәүге ҡабат үҙемдең уҫаллығым үҙемә оҡшаны.

Был малай киләсәктә кем булыр? Шул тиклем дә тәбиғи юмор менән ул трагиканы бергә йөрөтә алырмы?

Бала күңеленә тейә торған ниндәй генә ауыр һүҙ булмаһын, шуны ул уйын-көлкөгә әйләндерә белә.

Күңелендә берәй тетрәткес ауыр хәл булмаһа, ул ғүмер буйы шулай бөтә бәхетһеҙлектә еңерлек юморист — башҡорт юморисы булып ҡаласаҡ... Ah, әйтеүе генә аннат! Юмор минең

өсөн трагедияның бер күренеше — ул үҙеңде еңә алыу! Ә еңеү — был донъяла аңһат эшме ни?!

Шулай ҙа ирлек — еңеүҙә. Үҙ балалығыңдың, үҙ йәшлегеңдең, аңлы тормошоңдоң бөтә михнәттәрен үтә белеү ҙә ирлек!..

Илағың килгәндә лә көлөү — бөйөклөк!..

13 ноябрь.

Әсхәл менән Хәсән

Әсхәл, Хәсән —
ике көҙгө әтәс,
Айырышалар мәңге бер йәтәс,
Бер-береһен мәңге оталмай,
Ҡый-сыу килә, теҙген тоталмай.
Улар шулай мәңге талашыр,
Атҡа меңһә генә ярашыр.
Шулай тинем.
Киттем. Вәт! Бәтәс,
Ярашҡан да икән ике әтәс...

Р. менән Т.

Күпме генә улар эсмәһен,
Күпме даръяларға кисмәһен,
Ниндәй генә хәлгә төшмәһен,
Ауыҙҙары күпме бешмәһен,
Шағир булып ҡалыр шағирҙар,
Булмаһа ла ҡайсаҡ шәп ирҙәр...

14 ноябрь.

Нимәгә һуң тәгәрмәс,
Булмағас үҙ күсәре?
Нимәгә һуң ул күсәр,
Тәгәрмәсе юҡ булғас,
Бушҡа түгә көстәрен...
Шулай бара тормош арбаһы...
Бер-береһен ни һуң арбаһын?..
Тәгәрмәсме — күсәрҙе,
Тәгәрмәстеме — күсәр?
Ә күсәр һуң тәгәрмәсһеҙ
Нисек урынынан күсәр?

30 ноябрь.

Миндә татар хәйләһе бар, уҫаллығы — урыҫтың, башҡорт башы, башҡорт йәне — бәлки, шул да ырыҫтыр.

7 декабрь.

Бикбай, Хәсән менән Мәхмүткә барып «баш төҙәтеү» мажаралары.

Төнгө яңғыҙлыҡ.

1972

12 февраль.

Ҡырҡымды уҡыттым. Ихлас һүҙҙәр, ысын дуҫлыҡ, ихтирам хисен кисерҙем. Ләкин күңелдә ҡот осҡос ҡәнәғәтһеҙлек, үҙемде үҙем күралмау, яңғыҙлыҡ хисе өҫтөнөрәк булып сыҡты — эстем. Бер ҡасан да шулай шешә төбөнә төшкәнем юҡ ине. Бүләктәр ғәжәп заң... менән, мин теләгәнсә шиғри, мәғәнәле, оригиналь ине. Ғөмүмән, кисә бик шәп үтте.

Ғайса ағайҙың бынан 22 йыл элек, миңә 18 йәш булған саҡта, яҙған нотоҡ хатын уҡый башлағас, ул уны бик илһамланып үҙе уҡып бөтөрҙө.

Мәрйәм апай, Рауил Бикбаев, Хәсән Назаров, Сафуан Әлибаев, Тимер Йосопов, Йыһат Солтанов, Динис Бүләков — бөтәһе лә ысын әҙәбиәтселәр — ысын күңелдән элеккесә фамилияһыҙ үҙ кешеләрем булып ҡалды.

Ауылдан кейәүем Урал, Мөршиҙә һеңлем, ҡустым Урал менән Фәниә килен, инәйем менән балалыҡ юлдашым Ғәйниямал әбей килгәйнеләр. Тик бер генә нәмә күңелде ҡырҙы: инәйем һаман да беҙҙе ҡустым Рауил менән яраштырырға тырышып, миңә ете ят киленде — Фәриҙәне алып килеп бөтә мәжлесте боҙа яҙҙы.

Әгәр ҙә мин айныраҡ булһам, кисәлә оло ғауға сығыуы бар ине.

13 февраль.

Ғауға барыбер икенсе көнөн, мине көсләп-көсләп Рауилдарға алып барғас, сыҡты. Мин мәжлестә ултырыуҙан баш тартып, ҡайтып киттем. Инәйем оҙата барғанда, бик ҡаты һүҙҙәр әйтештек. Түҙә алманым, тәки — рәнйеттем инәйемде. Күрәһең, минең нервылар сүбәккә әйләнгән...

Исмаһам, Надя ла шунда тыйып ҡала алманы. Хәйер, ул да бит шул хәлдә.

Ҡунаҡтарҙы яҡшылап оҙата алманым.

14 февраль.

Өлкә комитетта мәгәнәһеҙ һөйләшеү. Урал Бакиров, Хазеев, Йосопов өс сәғәт буйы мине Кәтибә апай менән «яраштырырға» маташтылар.

Инквизиция һәм Галилей ҡарт ҡына ярашырға мөмкин!..

Китмәй сара ҡалманы...

13 март.

Гөлнарҙың алты шәме янып һүнде — ҡыҙыма алты йәш тулды.

Ә кисерелгән уйҙар күпме!..

Ҡыҙымдың тыуған көнөнә — 13 мартҡа — Есениндың «Фарсы моңдары»нан 13 шиғырын тәржемә итеп бөттөм.

Үҙе бер донъя, үҙе бер мәктәп. Ғүмеремдең яртыһын ниңә икән мин иләк менән һыу ташып үткәргәнмен. Шул шиғырҙарҙы тәржемә итеп кенә лә мин күпме файҙа эшләр инем!..

Юҡ, ҡыркҡа еттем — аҡылға ултыра алманым.

Ҡыҙымдың 16 йәшенә тиклем йәшәйһе ине. Бүләк итер инем 16 шиғыр!..

14 март.

Балаларҙың өсөһө лә грипп менән ята. Гөңконг грибы тиҙәр. Температуралары 39-ҙы уҙып китә. Төрлө һут-маҙар, хатта дарыу алырға ла аҡса юҡ.

Етмәһә — партбюро Стәрле ваҡиғаһы менән ҡыҙыҡһына. Ахунзянов Т. И. Стәрлегә үҙе барып ҡайтҡан икән.

Фәрит менән һөйләшеп йөрөнөк. Эште ҙурға ебәрмәгеҙ, ти. Көлкө! Ә бер уйлап ҡараһаң — беҙҙең трагедия.

Дөрөҫлөктө аңлатыу өсөн дөрөҫ атмосфера, дөрөҫ уйлы кешеләр, дөрөҫ замана кәрәк шул.

Ләкин был хәл ҡайҙа? Тоташ экспансия һәм меҫкенлек!

Әй, кешеләр!..

15 март.

Скрябиндең 15 йәштәге этюдтары хаҡында Л. Толстой һүҙе:

— Искренность! Этим-то дорога его музыка!

15 март.

Есенинса бер образ:

Кес итте лә китте бер эт алдан,
Пионерса салют биргәндәй.

Нигә генә тукталмай һуң фекер,
Эштән бушап, ялда йөргәндә.
Ниңә китте? Ни уйланы икән,
Бик беләһе ине уйҙарын.
Ниндәй ҡараш икән унда яҙған —
Һағынамы кәнтәй туйҙарын?

16 март.

Ай-һай, донъя, туйҙым һинән,
Һин дә туйҙыңмы минән?
Ҡырҡ йәштәремә етеп,
Ни рәхәт күрҙем һинән?..

1 апрель.

Мәрйәм апайҙарға барып, Есенинды уҡыным. Надя — русса, мин — башҡортсаһын. Тәржемәләр бик оҡшаны. Гүзәл менән егете Валерий ҙа тыңланы.

Ил хәлдәре тураһында һөйләштек. Стәрле ваҡиғаһын ҡайһы берәүҙәр минең үҙемә ҡарағанда ла ауырыраҡ ҡабул иткәндәр. Ләкин был хәлдән сығыр әмәл юҡ. Тупиктабыҙ. Берҙән-бер юл — эш. Эш менән генә беҙ көслөрәк!..

2 апрель.

Есенин һәм депрессия. Төнө буйы йөрәк сәнсеп сыҡты. Көндөҙ йүнләп бер ни ҙә эшләп булманы. Кискә табан ғына «Табун» шиғырын бер хәлгә килтереп ҡуйҙым. Унан «Отговорила роща золотая» һәм «Не бродить, не мять в кустах багряных» шиғырҙарын 1965 йылғы варианттарынан яңынан эшләп сыҡтым. Ул юҡта әле мин Есенинды бөгөнгәсә тойоп еткермәгәнмен икән, шулай ҙа төп һыҙаттары бар.

22 апрель.

Һәр бер ысын шағир, рәссам үҙ һүҙен әйтер өсөн үҙ ғүмерендә кешелектең бөтә үткән юлын, фажиғәһен кисереп сыға, үҙенсә яңылыша, эҙләй, таба һәм үҙ һүҙен әйтә.

30 апрель.

«Батыршаға». Батыршаның сыуаштарға әйткән һүҙе.

Батырша Иҙел буйына ҡасҡанда, сыуаш бурлактарын осрата, бурлактар йырын тыңлай.

Суҡындырыуға ҡаршы вәғәз һөйләй:

— Эй, мәғлүм халыҡ, һеҙ шулай дәжжәл алдында баш эйеп, ҡул ҡаушырып ҡалһағыҙ, тора-бара үҙегеҙҙең атай-олатай-

ҙарығыҙҙың, үҙегеҙҙең исемдәрегеҙҙе лә онотоп бөтөрһөгөҙ, аҙаҡ бала-сағаларығыҙ, киләсәк быуындар һеҙҙең өсөн оялып, һеҙгә ләғнәт уҡырҙар.

Аңығыҙға килегеҙ, әле һуң түгел, һеҙ бит ҡәрҙәш, туған халыҡ. Кафыр булғансы мәжүс булып ҡалығыҙ! һ. б.

Бер көн Әхмәт менән урманда һөйләшеп йөрөнөк тә, яҡут рәссамдары хаҡында һүҙ сығып, Әхмәт уларҙың хәҙерге үҙ исемдәренән риза булмауы, кәмһенеүе, хатта хурланыуы хаҡында әйтте.

Бығы бигерәк тә рәссам һәм яҙыусы — шағирҙары ныҡ тоя икән.

Ошо тойғоно «Батырша»ла күрһәтергә кәрәк.

(Мазлум халыҡтар — тема.)

31 май.

Беҙҙә шулай: русса уйлайҙар,
татарса яҙалар,
башҡортса китап сығаралар!..

16 июнь.

Динис Бүләков, Рәшит Солтангәрәев, Венер Йәнбәков килеп, һәүетемсә һөйләшеп ултырҙыҡ.

Венер — Атайсал.

Барыбер миңә атай хаҡында поэма яҙырға кәрәктер. Исеме — «Атайым», «Атай, атаҡайым»? Атай, атаҡайым. (Гөлнар миңә атай, атаҡайым, матурҡайым, хатта яҡшыҡайым, ти бит.)

Аталар һәм балалар — үткән, бөгөнгө, киләсәк хаҡында — уйланыуҙарҙы иң конкрет деталдәр һәм донъя, тормош, һуғыштар — ғөмүмән, кешелек, милләттәр, хатта тәбиғәт яҙмышы хаҡында уйланыуҙар менән үреп бирергә кәрәк.

Беҙҙең атайҙар хаҡында изге уй киләсәктең дә уйы булып ҡалһын ине... Был фекергә тағы бер этәргес — кисә Яҡуп Ҡолмойҙоң (!) баш эйеп ҡалыуы, ултырғанда:

— Башҡорттоң бөйөк милли шағиры алдында баш эйәм! — тиеүе...

Бөйөгө — ерунда.

Тик — милли тигәне — миңә ҡарата дөрөҫтөр. Шунда ла — фәжиғәм.

19 июнь.

«Батырша». Батыр Иҫәнсурин килгәйне. Таңһылыуҙың «В мире мудрых мыслей», «Джамшидова чаша» китаптарын биреп ебәрҙем.

«Батырша»ның яҡынса планын һөйләнем.

«Батырша» полемик әҫәр буласаҡ, герой бөгөнгө көн менән, тарихсылар менән бәхәс алып барырға тейеш. Заман һәм киләсәк тоҡомдаштары, тарих алдында хаты менән үҙен үҙе аҡлаясаҡ.

Прологта — илдең болаларҙан йонсоған, миктәгән, ләкин тағы баш ҡалҡытырға торған хәле һүрәтләнә.

Иң төп сәбәп — социаль иҙеү, милли һәм дини иҙеүгә ҡаршы күтәрелеү.

Суҡындырыу күренеше бер вәхшәт итеп күрһәтелә. Сәхнә асылғанда мәсет айы, аҙан һәм халыҡтың таң йоҡоһон бүлдереп янғын башланыуы, мәсетте үртәү, һалдаттарҙың бәреп инеүе, ҡулына тәре тотҡан миссионер поптың күренеүе.

Ай өҫтөндә — тәре шәүләһе, ялҡын — төтөн эсендә зловещий шәүлә.

Торналар ҡайтыуы — сыңрау торна, ҡурай — илгә афәт килере хаҡында хәбәр.

Һәнәк, балта, уҡ-һаҙаҡ тотҡан халыҡ.

Батыршаға сапҡындар килеүе.

Батыршаның башта тыныслыҡҡа өндәүе, ләкин ваҡиғалар барышы уны бик төптән уйланырға һәм халыҡ башында торорға мәжбүр итә. Ил иңрәүе — уның күңел иңрәүе.

«Материалы по истории Башкирии», том III. Экономические и социалистические отношения в Башкирии в первой половине 18 века.

Социаль иҙеү,

Милли иҙеү,

Дини иҙеү — Батырша восстаниеһының төп таяуҙары, өс тағаны.

Батыршаның эволюцияһы — хатта дәһрилеккә барып етеүе, ике динде лә кире ҡағыуы. «Юҡтырһың да, алла, әгәр булһаң...» — төп мотив.

Батыршаның священник менән дискуссияһы. (Ай менән тәре.)

Батыршаның төп антиподы Йәнеш Абдуллин — Батыршаны батшаға һатҡаны өсөн күп бүләктәр ала, үҙе лә Петербурҙа үлеп ҡала.

Батыршаның Йәнеш менән Шлиссельбург крепосында осрашыуы — кульминация башы.

V 570. 1743 г. августа 12. Письмо мишарского старшины Сибирской дороги Яныша Абдуллина в Уфимскую провинциальную канцелярию о возвращении на прежние места жительства данных ему на службу башкирских детей.

П. Д. Аксаковҡа мөнәсәбәт, Елизаветаға Аксаков хаты.

(??) Капрал — Батыршаға ҡағыҙ, ҡәләм биреүсе, ыңғай көстәр.

Батыршаның икенсе антиподы — Сөләймән старшина.

15 ноябрь.

«Батырша»ның прологына тәүге монологын яҙып бөттөм.

17 ноябрь.

Шиғыр кисәһендә Батырша монологын уҡыным. Ләкин инеш һүҙҙә Шлиссельбург тәьҫирҙәрен бер ҙә йүнләп кенә һөйләй алманым. Бик күптән халыҡ араһына сыҡмағас, әллә ниңә ҡаушап төштөм. Мостай ағайҙың булыуы ла ҡаушатҡандыр. Уҡыйһы әйберҙең башҡаларҙыҡынан айырылып тороуы ла тулҡынландырҙы. Ләкин Әнүр, Йыһат, Хәсән, Динис:

— Шәп, ҡотлайбыҙ,— тигән булдылар. Әнүр:

— Есениндың Пугачев монологы һымаҡ, бик төптән уйланылған, киң ҡоласлы әйбер булмаҡсы. Яҙып бөтөр инде,— тип торҙо.

19 ноябрь.

«Батырша монологы»н яңынан ҡарап сыҡтым.

Эпиграфҡа «Урал» йырынан тал куплетын. Батырша менән Салауат хаҡындағы, Буранғол ҡарт яҙмаһынан ике строфаны бер строфаға ҡалдырып ҡуйҙым.

Показания Батырши

«В обширных показаниях вождя башкирского восстания Батырши, о котором я буду говорить в очерке о Шлиссельбургской крепости, где он был убит в 1762 году, прямо сказано, что башкиры видели в своем восстании единственное средство своего национального освобождения. Они были уверены, что местные начальники скрывают действительно тяжелое положение Башкирии. Не один раз Батырша возвращался в своих показаниях перед тайной экспедицией к жалобам на полное отсутствие правосудия в его стране. По его словам, «дьявол и зломысленный генерал», в руках которого находилась вся Башкирия, «воров правыми делает, а правых — ворами». Башкиры говорили: «Когда подданных рабов утесняют, никакого добра быть не может. Когда государынина милость до рабов не равна, и злодеи по винам их штрафованы не будут, а иноверным рабам милостивого презрения не будет, то

впредь ожидать нам нечего и таким худым поступкам когда-нибудь конец да будет».

Таким концом должно было быть восстание башкир, подавленное с беспощадной свирепостью. Сенат 12 сентября 1755 г. постановил сечь кнутом и ссылать в Рогервик всех башкир, пойманных с оружием, а тех, которые годятся для военной службы, сечь плетьми и отдавать в солдаты, а от 12 до 18 лет — во флот, женщин с малолетними детьми до 12 лет отправлять в Москву для распределения по фабрикам внутри государства, малолетних того же возраста, не имеющих матерей, раздавать в собственность желающим. Кроме того, было приказано всех этих женщин и детей обратить в православие. Их было отправлено в Москву более тысячи. Можно себе представить страдания такого громадного числа женщин и детей, лишенных отцов, мужей, семей, родного крова, во время их далекого пути в Москву и потом превращенных в рабов на фабриках и у частных лиц. Так закончилось искание правды восставшим народом в Башкирии, а для вождя этого восстания настали годы заточения в Шлиссельбургской крепости и преждевременная смерть в ней».

Бөтә был мәхшәрҙе эпилогта бирергә кәрәк. Ә баш күтәргән халыҡ хәрәкәтен һәм Батыршаның эшмәкәрлеген — уның хатында һүрәтләгәнсә — төп сюжет итеп алырға, уны башҡа тарихи сығанаҡтар менән байытырға, Батырша үҙе күрһәткән персонаждарҙың характер үҫеше, бөтә интригалары һәм ҡаршылыҡтары менән үреп барырға кәрәк.

Былар барыһы ла Батыршаның крепоста баташаға хат яҙыу фонында күрһәтелергә тейеш. Был Батырша образын тулыраҡ та, тәьҫирлерәк, йыйнағыраҡ та итәсәк. Хат яҙыусының сәбәбе лә, уның үҙ кисерештәре лә сағыуыраҡ асыласаҡ.

Ә Батыршанан яуап алыуҙы һәм уның старшина Сөләймән менән осрашыуын — уларҙың диалогын — башта уҡ бирергә ине. Был һүрәтләнәсәк ваҡиғаларҙың ҡырҡылышын һәм тарихи әһәмиәтен сәхнәлә күтәреү өсөн «драматик орлоҡ» та буласаҡ.

Был, беҙҙән, халыҡты, икенсенән, хөкөм әһелдәрен һәм хөкүмәт вәкилдәрен, өсөнсөнән, Батыршаның үҙ яҙмышын — трагедияһын — бөтәһен дә бер фокуҫҡа йыясаҡ. Ғөмүмән, трагедияның драматизмы хаҡында бик ныҡ уйларға кәрәк. Бөтәһен дә хронологик тәртиптә биреү сәхнә өсөн уңайһыҙ. Был монотонность тыуҙырасаҡ.

Сөләймән старшинаның йәшерелгән хазина хаҡында ҡайғыртыуы, был хаҡта Батыршаның суд процесында әйтеп һалыуынан ҡурҡыуы, фашланыуҙан һаҡланыуы, көмөш аҡсаларҙы ҡотҡарып ҡалырға тырышыуы, был хаҡта Батыршанан

яҙмаҫка үтенеүҙәре — былар бөтәһе лә өҫтәлмә сюжет ебеһ ныҡыраҡ төйнәргә булышлыҡ итәсәк.

Был деталде бик ныҡ уйларға һәм уйнатырға кәрәк. Бында алтын-көмөш, байлыҡҡа халыҡ мәнфәғәтен һатыу темаһы ҡалҡып сығырға тейеш.

Ә Батыршаның яуап биреүе, уның үҙ-үҙен тотоуы — бөтәһен дә батшаның үҙенә генә яҙып аңлатырға дәғүәләшеүе — алдағы ваҡиғаларҙың серлелеген арттырыуға бер аҫҡыс хеҙмәтен үтәргә ярҙам итәсәк. Ҡыҫҡаһы, уҡыусыны, тамашасыны интриговать итеү булһын был, ә композицияның ул төйөнләнеүе лә булһын.

Гернет шул уҡ 102-се биттәге иҫкәрмәһендә былай ти:

«Показания и поведение Батырши отличаются большой смелостью. Он отказывался отвечать на все вопросы, заявляя, что даст ответы только самой царице. Впоследствии он согласился дать свои показания письменно с тем, чтобы запечатанный пакет был передан царице. Батырша передал этот пакет обер-секретарю Хрущеву, заставив его дать клятву, что пакет будет распечатан только самой Елизаветой.

Во время его заточения в каземате к нему по его просьбе был послан из собора Петропавловской крепости священник (ключарь) для диспута по вопросам веры».

Был пакет үҙе бер «ҡуян туны» түгелме һуң? Был «ҡуян туны»н Пушкин Гриневтан алып Пугачевҡа кейҙермәһә, Гринев та, беҙ ҙә Пугачевты яҡшылап күрә алмаған булыр инек бит! Ә был «ҡуян тун» бөтә сюжетты тотоп тора һәм ҡапма-ҡаршы ике яҡтың, ике лагерҙың эсенә үтеп инергә мөмкинлек бирә.

Был «ҡуян тун», әлбиттә, Пушкин фантазияһы. Ләкин — ышандыра. Ә бит бында, Батырша яҙмышында, пакеттың яҙмышы иҫ киткес ҙур роль уйнай бит.

Әгәр ҙә Батырша үҙенең хатын яҙмаған булһа, башҡорт бик күпте юғалтҡан булыр ине. Ул пакетты Батырша батшаның үҙ ҡулына бирергә ант иттереп тапшырмаһа, кем белә, бәлки, ул хат яҙылмаҫ та, яҙылып та, беҙҙең заманға килеп етә алмаҫ ине!..

Батыршаның бында ни тиклем тәрән аҡыл эйәһе булыуы, алдан күреүсәнлеге, зирәклеге күренә. Юҡһа, ниндәй тотҡонға һуң шундай крепость эсендә ҡағыҙ-ҡәләм тотторoп ҡуйырҙар ине?

Был үҙе бер подвиг!..

Хатты яҙыу процесы, хатты Елизаветаның уҡыу, уҡымауы хаҡында, тикшереү барышы хаҡында бик ентекләп танышырға кәрәк. Быныҡ өсөн иң элек:

1) Батырша хатының оригиналын (төрки телендәгеһен) күсереп бөтөрөргә;

2) Батыршаның «Дело»һы менән ентекләп танышырға;

3) Батырша һәм уның заманы хаҡында бөтә әҙәбиәтте өйрәнергә кәрәк.

Әлегә мин белгән материалдар:

1) Башҡортостан тарихы буйынса очерктар.

2) С. Соловьев. История России с древнейших времен.

3) Н. Дубровин. Пугачев и его сообщники. Т. 1. СПб., 1884.

4) Реестр именным указом за 1762 г. ЦГАДА, VII, 1781, 1756 г.

5) Гернет әйтеүенсә: В этом же архиве имеются два очень обширных тома: «Дело о возмутителе в Башкирии мулле Абдулле Магзяльдине или Батырше».

6) Бөтә был эҙләнеүҙәргә этәргән Гернеттың «Батша төрмәһенең тарихы» (5 томы ла үҙемдә).

7) Батырша хатының русса тәржемәләренең күсермәһе һәм Мәһәҙиев Дәүләт ағай менән бергәләп күсерә башлаған төркисә оригинал күсермәһе...

Бынан тыш бөтә башҡорт болаларына ҡағылған фольклор материалдары менән танышып сығырға кәрәк.

Эш муйындан!

Бер 5—6 йылға ғына етерлек!.. Әгәр ҙә мөмкинлек булһа, бөгөндән Мәскәүгә сығып китер инем дә, Мәскәү түгел Өфөлә йәшәрлек тә әмәл ҡалманы...

Шулай ҙа ҡулдан килгәнде эшләй торорға кәрәк.

7 июнь.

Беҙ — шағирҙар.
Был донъяла
Бөтәһен дә күреп китәбеҙ.
Беҙгә баҡҡан
Бар үләндең
Баштарынан һыйпап үтәбеҙ.
Беҙ — бәхетле!..
Бәхетһеҙ тик
Белмәгәндәр
Беҙҙең
Бәхетте!!!

12 июнь.

Азаматты лагерға оҙаттым. Шул тиклем бараһы килмәй. Өйҙәге ирек уға бөтәһенән дә киммәт. Һүрәттәренән, яратҡан

китаптарынан, күрше малайҙарынан айырылып китеү уға донъянан айырылып китеү менән бер кеүек.

Өйҙән сыҡҡанда, ултырып алды ла «Грек мифтары»н рюкзагына һалып алды. Инде нисәнсе ҡат уҡый шул мифтарҙы, ялҡмай. Минең хатта күңел тулып китте...

17 июнь.

Төнгө 2. «Бер ҡыл»ды Хәсәнгә уҡыным. Командировкаға китер алдан Рауилға уҡығайным. Шәп, тиҙәр. Әммә үҙем өсөн — иң шәптәрҙең-шәбе.

Шағир һәм шәхес был шифырҙа бер бөтөн. Шәхестең бәхетһеҙлеге — шағирҙың бәхете, ә уның бәхете — шәхестең бәхетһеҙлеге. Софистика, әлбиттә. Шулай ҙа был закон.

Хәсән менән Гетеға башҡорттарҙың уҡ-һаҙаҡ бүләк итеүе хаҡында, шағир һәм шәхес, М. Кәрим, Р. Ғамзатов, Ҡ. Кулиев, Д. Күгүлтинов, Н. Нәжми хаҡында һөйләшеү...

Бәләкәй шәхес һәр саҡ шағирҙы үлтерә — был мәңгелек фажиғә.

Бөгөнгө шифриәткә шәхес етмәй — кеше етмәй.

3-4 август.

Герберт Кароян, Бетховендың 9-сы симфонияһы һәм күк күкрәп яуған киске ямғырҙан һуң тәүге томанлы төн!..

Оҙаҡ ҡоролоҡтан, ҡыуан елдәрҙән һәм ҡапыл килгән һалҡын көндәрҙән һуң ергә бәрәкәт, ҡот ҡайтыуы!.. Мин яңынан эшкә тотондом. «Алырымҡош менән Бирмәмҡош»...

8 август.

Ҡаратау башында усаҡ яғып йоҡлай алманым. Шулай ҙа Рауил менән Тимер шифыр уҡый яҙып ултырҙылар. Ә миңә сиңерткәнең әҙәм ышанмаҫ һағышы ғына ҡалды... Мәңгелек төн! Йәй ҙә үтер, сыңрап, һайрап... Көҙ ҙә етер... Уйым, ҡалыр, төнөм ҡалыр — сиңерткәнең сикһеҙ сыңылай... Йөрәгемсе — ниңә ул йылай?..

29 август.

Була икән тормошоңдан разый булған һантый саҡтар ҙа...

Ниндәй йылы йәйҙең һуңғы хушлашыу көндәре.

Тиҙерәк, тиҙерәк Йүрүҙәнде ҡайтып күрге, ай яҡтыһында бөгөнгө төндө хәтерләп ултырғы килә.

«Ағиҙел»дә Рәис менән һөйләшеү. Тимер, Ғариф ағай, Сәғит ҡарт...

Туфан бында тиҙәр...

1973

10 февраль.

Нисәмә йыл йәшәп, һаман аҡылға ултырып булмай!.. Инде ике көндән ҡырҡ берем тула, буғай. Ә һаман да мин ахмаҡ!.. Бер ниндәй ҙә ипкә килеү юҡ. Йәшәүҙең дә, эштең дә, уй-фекерҙең дә, кешеләргә булған ҡараштың да ныҡлы бер тәртибе ҡалманы. Бөтә нәмә — стихияла, үҙ ағышында. Студент саҡта мин әүлиә булғанмын икән... Юҡ, артабан былай булмай. Ниндәйҙер контроль тигән бер «күҙәтсе» кәрәк. Бәлки, был дәфтәр шуның башы булыр...

Башлы-күҙле булып, күҙ сыҡҡаны бирле көндәлек тигән нәмәне лә оноттом. Ә уның миңә файҙаһы була торғайны һымаҡ. Күпме кисереш, күпме уй-фекер кеүек нәмәләр онотола ла ҡала, һәм хатта үҙ-үҙемә иҫәп-хисап та бирә алмай башланым инде. Ә бит бер мөтәшағир ғына булһаң да, иҫәп-хисап кәрәктер ул.

Был фекер Шевченконың көндәлектәрен уҡып ҡарағас, тағы ла нығыйтөштө. Шевченконы мин үҙем өсөн яңынан астым. Ә бөгөнгө хәл «век живи, век учись» тигән урыҫ мәҡәленең бөтә мәғәнәһен төшөндөргәндәй булды...

Рауил менән Риф Тойғонов килеп инде лә, өйҙә бола башланды. Былай ҙа ҡыл өҫтөндә генә торған шәхси тормош өҙөлөп китерҙәй хәлгә килде. Шулай ҙа сабырлыҡ бар икән әле. Юҡһа, был Тойғондо иҙеп сығара инем!.. Сәбәптәрен яҙып тормайым инде, ваҡыт булғанда бер тимгетеп ҡуйырмын әле. Был — Әбйәлилгә барып ҡайтыу «бүләктәре». Тик үҙем өсөн иң ҡиммәтле нөҙөмтә шул: юлға сыҡһаң, байып сыҡ, юлдашыңды танып сыҡ! Икенсеһе — юлдаштарҙы ғына түгел, Тимер кеүек дуҫыңды ла танып ҡуйырға онотма! Был һығымта, бәлки, ашығысыраҡтыр ҙа... Сөнки, ни тиһәң дә, Тимер талант инде. Шулай ҙа мин уға ҡарата үтә ыштанһыҙ булып киттем. Был — минең үтә ныҡ ышаныстан. Инде был Әбйәлил юлы күҙҙе байтаҡ ҡына асып ҡарарға һабаҡ булды шикелле. Фөмүмән, был сәйәхәт байтаҡ нәмәгә яңысараҡ ҡарарға өйрәтте.

Өсөнсөһө — Рауилдың әүмәлеге. Иҫерегерәк булғанда ла, ул минән айнығыраҡ. Үҙе әйтмешләй, ике күҙе генә булһа ла, ҡарашы бер. Төплө, заманса, тәрән. Уның менән иҫерек килеш тә әҙәбиәт, маҡсат, тормош хаҡында әллә күпме һөйләшеп була, һәм һөйләшеп туймайһың. Ә күпме ағай-әне һинең күңеленде талап йә иҙеп кенә китә. Ә унан байығып, өмөтләнеп, йәненде терелтеп ҡалаһың.

Әбйәлилгә әйтмәй киткәнгә үпкәләгән.

— Ҡунаҡ ашы ҡара-ҡаршы, үҙең һуң Ҡазанға әйтеп киттеңме?— тип ҡотолдом.

— Ә шулай ҙа дуҫтарҙы юғалтмайыҡ әле,— тип ул да Ғамзат фекеренә яңы төшөнгәнен һөйләне.

Яңынан Ырымбур юлын урап ҡайтыу хаҡында һөйләштек. Мостай ағайҙы күндерергә булдыҡ. Бер подъезға кереп, бер ҡыҙылды йоттоҡ. Һүҙ Бабич хаҡында булды. Монографияһының II бүлеген бөткән. Шуға «еңеләйеп» йөрөй. Бынығында, әлбиттә, артыҡ зыян юҡ. Шулай ҙа Риф һымаҡтарға «компаньон» булып йөрөү ғәҙәте уның үҙен дә бер килеп «уҡытыр» әле...

Ә миңә бөгөндән һуң был хәл мәңгелек һабаҡ булһын: булырҙай талантҡа ваҡытыңды ҡыҙғанма, булмаҫтайына ҡурай менән өрһәң дә булмаҫ... Ниңә әле беҙгә Рәшит, Баязит ағайҙарға булған изге бер мөнәсәбәтте оноторға? Беҙ бит уларҙы «ләх» көйө һөйрәтеп алып ҡайтып йөрөһәк тә, изге итеп ҡараныҡ.

Хәтерләһең, уйлап ҡараһаң, ҡыҙыҡ иҫтәлектәр, күренештәр бар. Әҙерәк, ошоларҙы уйлап, фәһем алыр ерҙән — фәһем, ғибрәт алыр нәмәләрҙән ғибрәт алып, үҙ-үҙеңде лә барлап сығып, һирәк-һаяҡ булһа ла ҡағыҙ битенә тимгетә барырға кәрәктер.

Был «Хәтер дәфтәре» шуның бер сағылышы. Сәғәт иртәнге 5. Төнәп алырға ла ваҡыттыр...

27 март.

Сер асылды. Беҙ ҡапсыҡта ятмай. Миңә ниңә алдашырға? Минән ҡеше тыуған икән, мин енәйәтсеме? Мин бит кеше үлтереүсе түгел!..

Ниңә һиңә үҙ бәхетеңде уйлағанда, башҡаларға үҙ бәхете хаҡында уйламаҫҡа?

Минән мең бөртөк күҙ йәше менән кеше бер тамсы бүләк һорағанда, ниңә әле мин уны йәлләргә тейеш! Мин был донъяға мәңгегә килмәгәнмен дә?.. Был бүләкте мин 70 йәшлек ҡарт булғас бирә алмаҫ инем бит. Ә хәҙергә бирә алғанда, ниңә бирмәҫкә?

Бәлки, был егет үҫеп, кеше булғас, һинән дә, минән дә мең ҡат аҡыллыраҡ булыр. Мине ул ғына хөкөм итә аласаҡ!..

Ниңә уны һиңә ғәйепләргә
Булған өсөн бала әсәһе?
Ни ере кәм уның һинән?
Уның да бит килгән эсәһе...
Мөхәббәте, күҙ йәштәре менән
Теләп алған минең тамсымды.
Ниңә ошо изге бүләк өсөн
Күтәрәһең миңә ҡамсыңды?
Гонаһымда минең ни эшең бар,
Язаһын бит үҙем күтәрәм.
Һиңә һалған күпме көсөм
Емешһеҙ бит шиңә, китә әрәм.
Аҡылынан яҙған
Шундай һүҙҙәр яҙған:
Имеш, миңә хоҙай яҙған...
Кеше булыу юлдан яҙған...

30 март.

Саҡмағош районында Шакир Янбаев, Рафаэль Ғәниев менән йөрөйбөҙ. Бөтә ерҙә төҙөк ауылдар, мул тормош, уйынкөлкө һәм айырым өйҙәрҙең үҙ трагедиялары...

Иң тәүге кисә Үрнәк ауылында «Авангард» колхозында. Ауылдың элекке исеме Ҡара Көсөк булған. Йәштәр, комсомолдар уға Үрнәк тигән исем биреп, «Авангард» колхозын ойоштороған дар. Пропаганда бүлеге мөдире Низаев бөтә шаңҡып ултыра торғас, шул ауылды тәҡдим итте. Беҙҙе көтөп торған, ҡаршы алған кеше, әллә юҡ. Саҡмағошта бындай хәл булыр тип мин һис тә уйламағайным. Бөтәһе лә яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тикшереү эше менән йөрөй, тәүге секретарь Дәүләтшин Өфөлә икән. Икенсеһе ошо тикшереүҙә йөрөй. Ә өсөнсөһө — ҡасандыр үҙе лә шифыр яҙып маташҡан кеше — Рәкипов үҙе лә юҡ. Низаевтың беҙгә машина табырға ла ҡулынан килмәне. Шакир, Рафаэль райсовет председателе Имамов Рәис менән һөйләшеп кенә машина таптылар.

31 март.

«Красный Октябрь», мәктәптә үткәрелгән тәүге кисә бик һәйбәт булды. Оло кластар шифырҙы бик нескә тоялар. Тәрбиә эше буйынса завуч әҙәбиәткә бик ихтирамлы апай. Күрәһең, үҙе лә шифыр яҙғандыр. Фөмүмән, бында шифыр яҙыусылар күп. Айһылыу Баҡыева үҙенең шифырҙар яҙған блокнотын күрһәте. Тик уҡып кәңәш бирерлек хәл юҡ ине. Магазинға инеп, ки-

таптар эҙләнек. Тик беҙҙең китаптар күренмәне. Ғөмүмән, китаптарҙы галантерея күмеп тора.

Шулай ҙа парторг та, председатель дә бик егәрле, эшлекле күренә. Парторг, әлбиттә, кисәге тикшереүҙән һуң бик шаңкып ҡалғандай. Шулай ҙа үҙ эшен еренә еткереп эшләп ултырған көнө. Председатель бик аҡыллы буғай. Парторгка бик ихтирамлы, ләкин ҡыҙғаныу тойғоһо менән ҡарай. Шулай ҙа уларҙың эште бер төптән тороп эшләүҙәре, бер-береһенә тигеҙ ҡарашта булыуы әллә ҡайҙан уҡ тойолоп тора. Парторг бик тәжрибәле, үҙ аллы, халыҡ араһында абруйлы кеше. МТС заманында уҡ эшләй.

Ҡунаҡ йорттары бик йыйнаҡ, тәртипле. Хужабикә Рида ғәжәп алсаҡ, киң күңелле, ләкин ире үлеп, дүрт бала менән яңғыҙ ҡалған. Матур, аҡыллы, тәрбиәле балалар. Аталары Рифҡәт шофер булып эшләгән, председателде йөрөткән, үҙенүҙе аямай эшләп, бик йонсоған булған һәм ҡапыл, хәле бөтөп, ҡан баҫымы күтәрелеп китеп, Шакирҙың диагнозы буйынса, лейкемия (ҡан рагы) ауырыуы менән ҡапыл ғына үлеп киткән.

— Өфөгә үлер өсөн генә китте инде,— тип Рида бик өҙгөләнеп һөйләй. Иренең үлгәненә бер йыл ғына. Яралы күңел менән йәшәй. Ләкин кешегә ҡарата кешелеген, күңел байлығын, яҡтылығын саҡ ҡына ла юғалтмаған — яғымлы.

Кисәнән ҡайтҡас, парторг менән ҡатыны һәм Рида беҙҙең менән бергәләп мәжлес үткәрҙе. Бик ихлас һөйләшеү булды. Йыр, шиғыр, уйын-көлкө лә етерлек ине. Һый ҙа мул, иркен, йомарт күңелдән.

Парторг ҡатыны менән ҡайтып киткәс, хужабикәне оҙатып барыу минең өлөшкә төштө. Ләкин ике ҡыҙы әсәләрен алып ҡайтырға килгәйнеләр. Шулай ҙа мин оҙатып барырға булдым. Был барыу үҙе бер хикәйә. Ҡыҙҙар алдан китте — беҙҙең һөйләшеүгә ҡамасауламаҫҡа булдылар, ахыры. Уларҙың күңелендә ниндәй тойғолар булғандыр — уныһын мин үҙемсә генә һиҙемләй алам...

Аяҡ аҫтында көндөҙ иреп туңған ҡар шығырҙай, йоҡа ғына боҙло быялалар селпәрәмә килә. Һауа иҫ киткес саф. Күңелдә — ҡанмаған хис билдәһеҙлеге. Кеше ҡайғыһын уртаҡлашыу ҙа, әҙәбиәтсе ҡыҙыҡһыныуы ла, ир нәфсеһе лә. Ғәжәп ҡатмарлы хис. Тик кешелек хисе еңергә тейеш. Ә бөтәһе лә бик мөмкин булып тойола. Аҡ мунса, таҙалыҡ, болоҡһоу, наҙ, яҙ, сәй һәм ҡасандыр эселгәндән һуң тороп ҡалған бороспоҡай, шыбыр тир, хәстәрле ҡул килтереп биргән сигеүле таҫтамал һәм хатта үҙ ҡулдары һөртөп алған маңлай тирҙәре. Дарҫлап типкән ир йөрәге һәм үҙ-үҙеңде тыйыу.

Данилдың уяныуы, уның минең ҡулдар иркәләгән терпе сәнскеләре кеүек сәстәре һәм уның:

— Хәс минең әтей, минең әтейҙең урыны ул,— тигән йөрәк өҙгөс һүҙҙәре.

Ah, был сабый йөрәкәйҙәре. Күҙгә йәштәр тулып, ләкин нәфсене еңгән яҡты кешелек тойғолары менән еңеләйеп ҡайтып киттем.

Хушлашҡанда — мөлдөрәмә тулы ике күҙ!

Бәлки, был күҙҙәр ғүмер буйы минең күҙ алдынан китмәҫ!

Бөтәһе лә ниндәй ябай, тәбиғи — теләһә ни ҡылһаң да ҡулыңдан килә, ләкин ҡылмайһың. Шулай ҙа һис бер шаярыуһыҙ минән һуң мунсаға керәм тип торған ҡатынға:

— Үҙем генә ҡойондорор инем дә, ярамай. Үҙең беләһең,— тигән һүҙ әйтеү саялығы.

Ҡайтҡас, шифыр. Ебәк яулыҡ һәм һыңар һырға. Ҡарғалар. Яңғыҙ ҡарғаның ҡарылдап ҡуйыуы.

— Ҡар-р-р, онотма, яңы ҡәбер бар-р-р...— тигән кеүек.

1 апрель.

Иҫке Ҡалмаш.

Ҡара ҡайғылар

Минең ҡайғым ғына
Ҡайғы тиеп
Уйлағайным мин был донъяла.
Ә ысынлап баҡһаң
Был донъяға,
Ҡайғы йәшәй һәр бер ояла...
— Ҡарррт!— тине лә төштә яңғыҙ ҡарға,
Уң яғына ятты әйләнеп.
«Ҡартым!»— тигәнлеген аңламайса,
Ҡарт өйәңке, башы әйләнеп,
Ыңғырашып ҡуйҙы... ыңғырашты...
Ыңғырашты бөтә тамыры.
Көтмәгәйне тәүге апрель генә
Йылы, яҡты көндө табырын.
Ә шулай ҙа
Ерҙә яҙ, яҙ ине,
Наҙ, наҙ ине һиңә кергәндә.
«Бер ҡәбер бар...»—
тип шығырҙай
һуңғы ҡарҙар,
«Бер ҡәбер бар...»—
тип һөрәнләй
ҡара ҡарғалар.
Ышанмайым һеҙгә,

ҡар, ҡарғалар.
Беҙ йәшәрбеҙ,
йәшәтербеҙ,
йәшәһендәр,—
тине балалар,
Йәшәһен шул балаларҙың күҙе,
Күрһен улар,
Яҙа күрмәһен.
Емерһендәр улар
йәш бер әсәһенең
Ah, яңғыҙлыҡ тигән
төрмәһен...

Был китап хаҡында

Йыр-шиғырҙа ниндәйҙер ҡөҙрәт көсө бар.

Ҡайһы бер шиғыр һине бишегеңдән алып ҡәбергәсә оҙатып бара. Уға һин бөтә ғүмерең менән бурыслы булып ҡалаһың.

Ғәжәп булһа ла, хаҡ: ҡайһы саҡта ҡалын-ҡалын китаптар ҙа аңлатып бирә алмаған нәмәне һиңә бәләкәй генә бер шиғыр әйтеп бирә. Уны һин күпме уҡыһаң да уҡып бөтөрә алмайһың. Шиғыр шунан тыуалыр ҙа инде...

Минеңсә, йөҙәрләгән телдәге совет поэзияһының бөгөнгө йөҙөн билдәләүсе Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Эдуардас Межелайтис, Хәсән Туфан, Мостай Кәрим, Давид Күгүлтинов кеүек шағирҙар араһында Михаил Дудин да ошондай тылсымлы һүҙ оҫталарының береһе.

Уның быйыл Мәскәүҙәге «Замандаш» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Шайтан таяғы» («Татарник») тигән яңы шиғырҙар китабы бер минең генә түгел, моғайын, бик күптәрҙең күңелен тетрәткәндер.

Башҡортостандың, башҡорт әҙәбиәтенең күптәнге дуҫы, беҙҙең шиғриәтте бөтә Союз киңлегенә сығарышыуға күп көс һалған күренекле рус шағирының китаптары беҙгә айырыуса ҡәҙерле. Ә уның был яңы китабындағы һәр шиғырҙы тиерлек «үҙеңдеке» итке килә. Мин уларҙың күбеһен «үҙемдеке» итмәйенсә, башҡорт теленә күсермәйенсә, «үҙ антологиям»а индермәйенсә булдыра алманым.

Заманабыҙ хаҡында, йәшәүҙең мәғәнәһе хаҡында, кешенең был донъялағы урыны хаҡында — бик күпте уйландыра был китап. Хәйер, был турала шағирҙың үҙенән дә хикмәтлерәк итеп әйтеп булмаҫ: «Шайтан таяғы!..»

«Үҙенең йәшәү һәләтлеге менән иҫ киткес әрһеҙ булған был сәнскеле үләндең орлоҡтары, бәлки, беҙҙең Рәсәй киңлектәренә күсмә сапҡынсылар яуы ябырылғанда, уларҙың ялбыр

яллы төпөш аттарының ҡойроғона йәбешеп ингәндер. Уның ҡасандыр ҡан менән һуғарылып, һөйәк менән аҡбурланған ерҙе һайлап, бейек яр баштарында йәки яңғыҙ убаларҙа һерәйеп ултырыуы ла тикмәгә түгелдер, күрәһең.

Заманыбыҙҙың хәүефле-хафалы һәм үтә яуаплы булыуын иҫтә тотоп, үҙемдең был яңы шиғырҙар китабымды мин шулай — «Шайтан таяғы» тип атаным да инде.

Был йылдарҙа миңә донъяның теләһә ниндәй яҡҡа үҙгәреп китеү мөмкинлеге сикһеҙ булып тойолдо. Донъяның һәр нөктәһе уның үҙәгенә әйләнергә мөмкин, был донъяла әллә ниндәй афәттәр килеп сығыуы бар һәм ерҙә кешенең яуаплылығы уның үҫешендәге мөмкинлектәрҙе уҙып киткән кеүек ине. Мин үҙ Россиям аша, уның фажиғәләре, ҡыуаныстары аша үҙемде Ер йөҙөнөң улы итеп тойорға һәм алыҫыраҡ, киңерәк ҡараш ташларға тырыштым.

Бына хәҙер мин әллә ҡайҙа эстә, күңелем төпкөлөндә өлгөрөп еткән ошо орлоҡтарҙы услап алып һибеп ебәрмәксемен. Бәлки, ул орлоҡтар йән-фарманға елгән замана толпарының ялдарына сырмалып, үҙҙәренә бәрәкәтле тупраҡ табыр; бәлки, кемделер мин уйлаған шул уҡ уйҙарға һалыр. Мин дә бит замандашым ҡәбере өҫтөндә ләүкегән мәңгелек ут һымаҡ сәскә атҡан шайтан таяғының алһыу-күк ялҡынын күҙәтеп, нәҡ ошо уй-хистәргә сумып ултырҙым...»

Шағирҙың был сәсмә һүҙҙәре лә үҙе бер шиғри симфония булып яңғырай. Бигерәк тә донъяның төрлө мөйөштәрендә яңы афәт елдәре ҡоторғанда, күңелгә был уй-хистәрҙең ауаздаш булмауы мөмкин түгел. Тик мин уларҙы үҙемдең тәржемәлә ни саҡлы биреп еткерә алғанмындыр,— уныһы уҡыусы менән тәңкитсе хөкөмөндә...

30 апрель.

Үҙ балаларымдың башҡортса төш күреүе лә миңә оло бер бәхет...

Күҙгә йәштәр тула хатта. Ун туғыҙ йыллыҡ тырышлығым бушҡа китмәгән, тим. Быны әйтеүе генә аңһат. Ә бит был ун туғыҙ йыл нисә көндән тора!.. Иртән — май. Гөлнар ҡыҙым төш күрә...

18 май — Динистың тыуған көнө. Үҙе юҡ.

19 май.

Барыбер тыуған көндө үткәрҙек. Сафуан — Фәрҙиә, Динис — Рәйлә һәм беҙ. Утыҙ йәш һәм Нәғимә апай хаҡында һүҙ.

Ике күҙемдәй ике өй хаҡында һүҙ.

Бисәкәйҙәрҙең ғәҙеллеге, үҙебеҙҙең дә шәплек булды, буғай.

20 май.

Институтҡа бөтә бурысымды эшләп бөтөрҙөм: «Шайтан себендәре» (Лоссиевский, Игнатьев), «Аждаһа йылан хаҡында башҡорттар һөйләүе» (Юлаев), «Асылыкүл» (И. Старков?) һәм «Бейеш төшө» (кемдеке?) хикәйәтен әҙерләп, күсереп яҙҙым.

21 май.

«Шайтан себендәре»н Нур Зарипов уҡып сыҡты. Бер һөйләмгә ҡәләм тығып ҡараны. Риза булдым. Күңеле булһын, тинем. Икенсе һөйләмгә тығылдырманым. Ярамай: стиль һәм маҡсатым боҙола. Кәрәкле тавтология ине.

Ким, Әнүр менән Роза Нафиҡованың сәйен дә эстек. Фәнүзә планын әҙерләп бирә алманы.

Ким стиль тураһында һөйләшкәндә:

— Әнүрселек,— тине.

Ә Әнүр:

— Кимселек,— тигәс, тегеһе ҡойроғон ҡыҫты.

Л. Атанова менән Һөйөндөк Сәйетов музыка һәм театрҙа форма һәм йөкмәткене берлеге хаҡында семинар үткәрҙеләр.

Әнүр Атанова һөйләүе хаҡында:

— Бик ҡыҙыҡмы?— тип һорағас:

— Наҙандарға ҡыҙыҡ,— тинем.

Бәлки, быны үҙенә тип ҡабул иткәндер әле.

Ҡыҙығы миңә ине. Сөнки белгәнеңде лә яңыртып торор кәрәк, яңыртылмаған белгәнең дә юҡҡа сығырға әҙер генә тора.

Әлбиттә, Кабалевскийҙы ҡайҙан табаһың? Булғанына шөкөр. Һәр хәлдә, Верещагиндың үҙ күргәҙмәһен күрһәткәндә, Бородиндың «Урта Азияла»һын файҙаланыуы миңә билдәһеҙ ине. Минең өсөн был бик тәбиғи асыш.

Үҙем яҙған «Сүл йыры» яңынан күҙ алдымда яңғырағандай, күренгәндәй булды.

Кис пальтоны алырға барғанда, Тимерҙең «Алтын туҙаны»н алып ҡайттым.

Динис килде. Чеховтың «Аҡсарлаҡ»ын ҡарап ултыра инем.

Яйыҡбай тарихын теүәлләп, тирәктәр аҫтында бер яртыны ҡаҡтыҡ.

Аһ, был мәңгелек зар... Мин инде, аңлап ҡаныма һеңдергән, ә ул әле яңы тойған зар... Быны кем аңлаһын да, кем тойһон? Уны бары үҙен яҙыуға ҡорбан иткән кеше генә аңлай.

Бәлки, Чеховтың «Аҡсарлаҡ»ы ошо хаҡталыр ҙа әле?.. Ижад — ҡорбансылыҡ.

Ижад һәр саҡ емереү һәм емерелеү менән бергә күп ҡорбандар һәм ҡорбансылыҡ хаҡына ғына йәшәй ала. Ижадсы йәш булыуҙан туҡтаһа, ижад итә алмай. Ә һәр кем тойғоһо, уйхыялы, бөтә булмышы менән йәш булып ҡала алмай. Ижадсы ғына йәш булырға, тәүәккәл булырға, ҡорбансыл булырға мөмкин.

Тормош тәжрибәһен, кешеләр яҙмышын, йәшәү асылын аңлауҙы ул бары тик үҙенең тормошон пыран-заран килтерергә әҙер торғаны, үҙенең йәшлек рухын юғалтмауы, ҡомһоҙлоғо ҙурлығы менән генә яулап ала. Быны кем аңлаһын.

Әлбиттә, әҙәби подлецтарға, ханжаларға, карьеристарға был төшөнсә бөтөнләй ят нәмә. Уларға йәшлек тойғоһо ла үҙҙәренең меркантилизмы өсөн генә кәрәк.

Берәүҙәргә алдаҡ — йәшәү сығанағы, ә берәүҙәргә сараһыҙҙан сара ғына.

Хетагуровтың ас балаларын таш ҡайнатып йоҡлатҡан әсә фажиғәһе иҫкә төшә...

Ә иң мөһиме шул: ваҡ ҡына ҡар яуа, уҫка төшөп ирей, беләктәге төккә ҡунып, ярма һымаҡ аҫылынып тора, шуға ҡарамаҫтан, урман ситендә, бер ни булмағандай, һандуғас

һайрай. Тимәк, яҙ — яҙ булып ҡала, йәшлек йәшлеген итә, йәшәүҙе бер ни ҙә тыя алмай. Алмағастар сәскәһен ҡойҙо, ә миләш ҡотора...

24 май.

Ҡаратауым, күҙ ҡарам,
Мин һиңә ҡайтып барам...

30 май.

Таң ата.

«Ғәжәп итеп ҡарап торам ҡырмыҫҡаға». Сиктәр хаҡында уйланыу. Бер аҙымдан икенсе донъя, икенсе материк башлана.

«Урал». Ике ҡитғаны айырмай, ә тоташтырып тора. Урал һыуында һыу ингән балалар Европанан Азияға «һә» тигәнсе йөҙөп сығып йөрөйҙәр.

Башҡорт халҡы — азият та, европалы ла. Азияның башы беҙ, Европаның башы беҙ.

Ҡанат осо ғына Пиренейҙар, (ут яна).
Ҡанат осо ғына Сахалиндар.
Ҡанат осонан тамған тамсы һымаҡ — Курилдар...
Бер ҡанатын ай яҡтыртһа,
Бер ҡанатын ҡояш яҡтырта.
Ай-көн булмаһа ла, маҡсат яҡтырта.
Көн ҡуйырҙы, төн шыйығайҙы.
Көн оҙайҙы, төндәр ҡыҫҡарҙы.
Йәшәү артты, үлем сигенде.
Бер Баймағым бирә Эстон биргән игенде.
Башҡортостандан артта тороп ҡалған илдәр,
ҡушлығың.
Хәлегеҙҙән килһә, көсөгөҙҙө бергә ҡушығыҙ.
Тирмәләрҙән, төрмәләрҙән
Беҙ донъяға сыҡтыҡ, тик яҡты, күҙһеҙ
ҡалманыҡ.
Сөнки яҡтылыҡты мең йыл көттөк,
Мең йыл яуланыҡ.
Ярты Башҡортостан ҡорбан булды
Һаҡлап ҡалыр өсөн ирек иртәһен.
Порт-Артурҙан Парижғаса
Бүлешкәнбеҙ Рәсәй яҙмышын.
Аҡ диңгеҙҙән Ҡара диңгеҙгәсә
Башҡорт ҡәберҙәре уйылған...
Юҡ, белмәйбеҙ ерҙә сиктәрҙе,
Беҙ сиктәрҙе ситкә этәрҙек.
Башҡорт нефтсеһе Африкала,

Башҡорт инженеры Кубала.
Ул үҙенә эште күп ала!
Башҡорт космонавы осор Зөһрәгә,
Хыялдары (булмаҫ) китмәҫ зерәгә!
Һыу инәләр әле Уралда.
Бәхет әле алда, нур алда! Йыр алда.
«Беҙ йырлайһы йырҙар йырлап аға»,
Беҙ йырлайһы
Бәхет, йыр алда!
Байрамғолдоң балет һарайын
Ҡайын күҙе булып ҡарайым.

3 июнь.

Тарих — ул киләсәктең хәтәр уҡтарынан һаҡлар бөгөнгө ҡалҡан.

Тарих — ул бөгөнгөнән һоҫаһы аркау ебен туҡыған үткәндән киләсәккә һуҙылған буй еп (?)

Үҙ халҡының үткән тарихына ғәмһеҙ булған халыҡ (кеше) иң ҡырағай халыҡ (кеше).

Ә беҙҙе ҡырағай итмәкселәр ҙә бар әле.

4 июнь.

Ҡояш сыҡҡан да Динискә. Ҡанға батып һаман ҡояш сыға, ҡанға ҡыуанып ҡоҙғон ҡорҡолдай... Ә мин һаман ниҙер өмөт итеп, йәшәп ятам, донъям, бер ҡолдай... Ҡот осҡос һин, донъям. Бөйөкһөң дә, бейекһең дә — ҡулым еткеһеҙ. Аҡ юлдарың астыҡ ине лә бит — ҡара урманын ярып үткеһеҙ... Ә шулай ҙа киләм сабыр...

15 июнь.

Гөлнар ҡыҙым бөгөн, тышта уйнап кергәс, минең өҫтәл янына килеп, алдыма менеп ултырҙы ла, бик ҙур мәсьәләне хәл итергә теләгәндәй, үҙенән дә ҙур бер һорау ҡуйҙы.

— Атай,— ти был.

— Әү,— тим мин.

— Кем яҡшыраҡ — рустармы, татарҙармы?

— Ә ниңә?— тим, аптырап.

— Юҡ, һин әйт,— ти,— кем яҡшыраҡ?

Нисек инде уны яуапһыҙ ҡалдыраһың? Күҙҙәрен күҙгә төбәгән, балҡып тора. Күрәһең, уға был мәсьәлә бик мөһим. Ә башҡорттоң яҡшылығы тураһында уның шиге лә юҡ:

— Бөтәһе лә яҡшы, бөтә халыҡтар ҙа яҡшы,— тим мин.— Халыҡтарҙан береһе лә насар булмай, тик насар кешеләр генә була,— тигәс, үҙ алдына ул бик етди уйланып ҡуйҙы. Күрәһең,

ул икенсе төрлөрәк яуап көткәндер. Бала уйында бер ниндәй ҙә шик ҡалмаһын өсөн, мин был фекерҙе ул нығыраҡ һеңдереп ҡуйһын, тип, русса ла ҡабатлап ҡуйҙым.

— Все хорошие: и русские, и татары, и узбеки, и чуваши...

Ә ҡыҙым тиҙерәк үҙ фекерен әйтергә тырышып:

— И башкиры,— тип өҫтәп ҡуйҙы. Ә мин:

— Все народы хорошие, плохих народов не бывают, а бывает только плохие люди,— тигәс, уға был формулировка бик оҡшаны, буғай. Минән «үзбәк» һүҙен дә ишеткәс, ҡапыл иҫенә бер нәмә төшкәндәй:

— Атай, мин үзбәксә лә уҡый беләм. Ҡайҙа ул китап? — тип Фүмәр Хәйәмдең Ташкентта сыҡҡан фарсыса, үзбәксә, русса — өс телдәге «Рубаят» китабын эҙләргә тотондо. Ҡараһам, кәштәлә ул китап юҡ. Азамат түр яҡтан килтереп бирҙе. Күрәһең, былар икәүләп үзбәксә-русса уҡып маташҡандар. Минең машинкалағы ҡағыҙға беренсе робағиҙың беренсе юлын да баҫып ҡуйғандар:

«Где теперь эти люди мудрейшие нашей земли?»

Ҡалған юлдарын баҫырға түҙемдәре етмәгәндер инде. Күрәһең, Гөлнар баҫҡан!.. Тел хаҡында һорауҙар бирергә, һүҙҙәрҙе тәржемә итергә, үҙенең һүҙлегенә яңы һүҙҙәр яҙып ҡуйырға бик ярата был филолог ҡыҙыҡай. Әйткәнде һис онотмай. Әле һаман ул «мороженое»ны — «туңдырма», «пепельница»ны «көлниса» тип йөрөтә!..

Ҡайһы саҡта уның тәржемә эшмәкәрлегендә бик ҡыҙыҡ атамалар килеп сыға. Мәҫәлән, бер көндө ҡайсы эҙләп йөрөгәндә, мин:

— Ниндәй ҡайсы?— тип һорағас:

— Ана теге, йәшел ҡулдары менән,— ти.

(Ручка булғас, уныңса, мотлаҡ ҡул булырға тейеш! Ә «йәшел һаплы ҡайсы» тиер өсөн әле уға бик ныҡ филология курсын үтергә кәрәк. Ул әле «тышҡа сыҡмай», ә «тышҡа бара», уның өсөн «ямғыр яумай», ә «ямғыр бара»...)

Уның тәржемә үрнәктәрен һәр саҡ яҙып барырға кәрәк ине лә, ҡайҙа инде ул!..

Тик уның һөйләшеүен тыңлауҙан да рәхәт нәмә юҡ минең өсөн. Бигерәк тә төшөндә башҡортса һөйләшеүе миңә бер оло бәхет була.

Ә Азамат күберәк русса күрә төштәрен. Был уның күберәк русса уҡыуҙан, русса уйлауынан килә. Ә Гөлнар, тәржемә итеп булһа ла, башҡортса уйлай әлегә!

Кисә институтта булдым. Ике айға иҫәпләнгән эштәрен бер айҙа (дөрөҫөрәге бер ун көндә) эшләп илтеп бирҙем.

Фәнүзә «Урал — земля золотая» тигән китаптан ҡайһы бер легендаларҙы тәржемә итергә һораны.

Нур Зарипов Әхнәф Харисовтың 60 йәшенә мәҡәлә яҙып ултыра ине. Минән шифыр яҙҙырырға ныҡыша. Ләкин мин өлгөрөп булмаҫ, бының өсөн Әхнәф ағайҙың үҙе кеүек импровизатор булырға кәрәк, тип ҡотолдом.

Эш тураһында һөйләштек. Үҙемдең темаларҙы әйттем. Ләкин элеккесә өмөтлөрәк һүҙ ишетә алманым.

— Урын юҡ бит,— тигән була. Ә ысынында ике урындары бар... Күрәһең, алмаҫҡа тип һөйләшкәндәрҙер инде...

Нәшриәттә эштәр хөрт. Ағиш Ғирфанов: «Китабыңды төшөрөп ебәрҙек инде»,— тип ултыра. Пландағы өс табаҡ урынына ике табаҡҡа ҡалдырғандар! Ә мин дүрт табаҡҡа даулашып йөрөгән булам...

Әгәр хәйерсе хәлендә булмаһам, был китаптан бөтөнләй баш тартыр инем дә, булмай. Һыҙып ырғытҡан ярты китапты Клара Төхфәтуллинаға илтеп биргәйнем, шылтыратҡас, бик томһа тауыш менән:

— Уҡыйым әле, уҡыйым, понедельник килерһең,— тигән булды.

Тимәк, бер ниндәй ҙә ышаныс юҡ. Урал Бакиров ҡына берәй нәмә эшләмәһә, таштан йүкә һуйылмаҫ, ахыры.

«Миләш-кәләш» шулай минең иң хөрт китап булып ҡалыр, ахыры. Бөтә яңы шифырҙар һыҙып ырғытылған. Бөтәһе лә уҡып сығып, һәр береһе йолҡҡолаған. Хужа Насретдин тауығы итеп бөтөргәндәр.

Әмир ағай ҙа шул Нуретдинов, Байбуралар, Агиштар яғына ауған. Ә мөхәррирем кеше ышанмаҫ Шаммасов, флюгер менән бер. Етмәһә, Хөрмәт Бик-Ҡоло ла ҡыҫылып ултырған була. Үҙем бит шул ҡара йәнгә булышлыҡ итеп, тәүге тәржемә китабын — Бернсты сығарырға юллап йөрөнөм, ә хәҙер шул халтурщик та әҙәм булып ултыра.

Әҙәбиәт бүлегендә стенаға элеп ҡуйған йөкләмәләре өҫтөнә: «План выполнен... ура!..» тип яҙып ҡуйғандар. Минең китап иң һуңғы китап булып наборға төшкән...

— Һинең арҡала беҙ премияһыҙ ҡаласаҡбыҙ бит,— ти Әмир ағай.

— Кемгә — нимә...

Эй, замана!..

17 июнь.

Өлкәлә булдым, ләкин бер ниндәй ҙә өмөт юҡ. Сөнки бөтә был ығы-зығы шул өлкәнең ҡыҫылышы менән килеп сыҡты бит инде.

Клара Төхфәтуллина, китапты уҡып сыҡтым, ти. Бер төрлө мотив, пессимизм, тәржемәләрең дә шул уҡ характерҙа. Шу-

лай ҙа мин Нуретдиновҡа әйтеп ҡарармын, өс табаҡ итһендәр тип, тигән була.

Нәшриәткә барһам, Шаммасов:

— Наборға төшөрҙөк инде, бөтәһе лә уҡынылар, минең бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ,— тип ултыра.

Ә Ғирфанов:

— Һин беҙҙе оскорбить итеп сығып киттең. Беҙҙең үлемде теләйһең икән,— ти.

— Йәшәгеҙ, әйҙә, тик поэзияға, әҙәбиәткә ҡарата бындай ҡараш бер үлергә тейеш бит. Ниңә һүҙҙең мәғәнәһен аңламайһығыҙ?— тинем.— Бит Мәскәүҙән бер йыйынтыҡҡа егермешәр биттән торған ике рецензия яҙып ебәргәндәр. Бына был, исмаһам, кешесә ҡараш. Ә һеҙ хатта бер китапты өҙөп-йолҡоп рецензияға бирәһегеҙ, 20 йыл шығыр яҙмаған бер эскесегә, етмәһә...

Һеҙгә бер һүҙ әйтеп тораһың, ә һеҙ бөтөнләй икенсе нәмә уйлап ултыраһығыҙ. Есенинды, ана, ҡасан килтереп бирҙем, ә ул һаман ята. Ә планда булмаған ҡайһы бер нәмәләр шунда уҡ сығып китә... һ. б.

Шунан һуң был Рифтән Есениндың тәржемәләрен һорап алды.

— Заключение бармы?— ти.

— Шунда уҡ яҙып биргәйнем бит,— тип Риф Мифтахов үҙенең заключениеһын килтереп сығарҙы.

Агиш уҡып ҡараны ла, заключение 1972 йылдың сентябрендә үк яҙылған булып сыҡты.

— Хәҙер һуң инде, 1975 йылдың планы обком тарафынан раҫланған. Уны бит беҙ үҙгәртә алмайбыҙ,— тип 1976 йылға планға индереп ҡуйған булды.

Шунан Есенин рус шағирымы, совет шағирымы, тип баш ватып ултырҙы. Ҡайҙа индерергә: рус классикаһынамы, совет классикаһынамы?

Мин:

— Рус совет классикаһына,— тигәс, шулай тип яҙып ҡуйҙы.

Алдағы йылды Есениндың 80 йыллығы буласаҡ, шуға күрә 75 йылға индерергә кәрәк ине. Таш төшкән ерендә ауыр бит,— тинем.

— Есенинды үткәреү бик еңел түгел, есенинщина булғанлығын беләһең бит,— ти был.

— Ул бит булған да үткән. 20-се йылдарҙа уҡ. Хәҙер Есенинға ундай ҡараш күптән үтте бит,— тим.— Булған заманы: Есенин шығырын уҡыған өсөн генә лә комсомолдан сығарғандар. Ә хәҙер ул дәреслектәргә инеп бөткән һ. б.

Ләкин был әҙәмгә бер ниҙе лә йүнләп аңлатып булмай. Әллә ул, ысынлап та, наҙан, әллә белмәмешкә һалыша!.. Ғәжәп!.. Күрәһең, әҙәбиәткә «артҡы ишектән» килеп ингәндәрҙең тәбиғәте шулайҙыр инде... Шулай ҙа 1977 йылға «Минең антологиям»ды (6 табаҡ), 1978 йылға үҙемдең тотош һайланмаларҙы яҙҙырып сыҡтым (7 табаҡ).

18 июнь.

«Миләш-кәләш»тең редакция йолҡҡан өләшән Мостай ағайға илтеп бирҙем.

Башта шылтыратҡанда, трубканы ҡыҙы Әлфиә алды.

— Ул ҡайҙалыр сығыш яһарға китте, сәғәт 8-гә генә ҡайтыр. Унан дачаға китәсәк,— тине.

Икенсе шылтыратҡанда, килене Нәзифә һөйләште.

— Мин Илгиздең иптәше булам, мин һеҙҙе яҡшы беләм. Берәй ярты сәғәттән шылтыратығыҙ,— тине.

Ғәйниә менән «Башкирия» гостиницаһына килеп еткәс, ауылдаш милиционер, Зәйтүнә апайҙың улы, осраны. Унан Ким дуҫым килеп сыҡты. Өс ауылдаш булып киттек. Ким ағай директорҙар кәңәшмәһенә килгән икән. Һабантуй 22 июндә буласаҡ, тине. Бер аҙ ултырғас, Мостафа ағайҙың йортона аҡ машина инеп киткәнен күреп ҡалдым да гостиницаның милиция бүлегенән шылтыраттым.

— Һеҙҙе борсойом инде, Мостафа ағай. Бер нәмә хаҡында кәңәшләшеп алаһы ине,— тигәс:

— Мине әле борсоманың, ҡайҙан шылтыратаһың, кил әйҙә,— тип көлдө.

Ишекте Нәзифә асты. Асыҡ йөҙлө, алсаҡ. Унан йылмайып Мостафа ағай килеп сыҡты.

— Әйҙә, уҙ,— тип кабинетына алып сыҡты. Диванында Туҡайҙың академик баҫмаһының һәм унан һуңғы ике томлығының 1-се томдары ята ине. «Туҡайҙы уҡыштырып ала икән әле» тип ҡуйҙым. Минең һымаҡ, бысратып уҡымай икән.

Хәлде һөйләп бирҙем дә:

— Әллә мин ахмаҡ, әллә донъяһы шулай инде,— тинем.

— Бер һинең хаҡта шундай фекер таралғас, ул шулай булыр инде. Бер ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай ул. Ләкин һалҡыныраҡ аҡыл менән эш итергә кәрәк.

— Ниңә алданыраҡ килмәнең?— тигәс, мин:

— Һәр китап һайын һеҙҙе борсоп йөрөп булмай бит инде. Эш был тиклем хәлгә килеп етмәҫ тип уйлағайным,— тинем.

Китаптың йөкмәткеһе менән танышып сыҡҡас уҡ, Әмир Гәрәевтең телефоны юҡмы икән тип, өйөнә шылтыратмаҡсы булғайны ла, мин:

— Өйөндә телефоны юҡ, буғай,— тигәс, хат яҙырға булды.

Бер биттән ашыу хат яҙып, миңә уҡып сыҡты ла үҙенә илтеп бирергә ҡушты. Ахырында, төрөктәр әйтмешләй, аңлатып бирә белдемме икән, тигән һүҙенең яҙылышын һораны.

— Ҡайһыһы дөрөҫ?— «белдемме икән»ме, әллә «белдем микән»ме?— тигәс, мин:

— Ҡағиҙә буйынса, тәүгеһе дөрөҫ, ләкин мин, һөйләшкәнсә, «белдем микән» тип яҙам,— тинем. Килене Нәзифә лә:

— Тәүгеһе дөрөҫ! Шағирҙар ғына шулай яҙа,— тип көлдө.

Мостай ағай тағы: «резонный» тигән һүҙҙе нисек аңлатырға? — тигәс, мин:

— Контексҡа ҡарап инде,— тинем.

Бында китаптың мөхәррир тарафынан йолҡоноп, ярлыландырып, мөнтәҫләнеп бөтөүе, автор ихтыярын һанға һуҡмау һәм уның хаҡлы, нигеҙле таланттары хаҡында һүҙ бара ине.

Шуның өсөн Мостай ағай нәшриәттең автор теләктәрен дә иҫкә алырға тейешлеген әйтергә теләй ине.

— Автор теләктәренең хаҡлыһына,— тинем мин.

Мостафа ағай шулай тип яҙҙы ла. Унан минең әҙәбиәттә инде 25 йыл эшләп килеүем, минең һәр китапты күҙәтеп килеүе, рецензиялар ҙа яҙыуы, «Миләш-кәләш» китабының яҙмышы ла үҙенә яҡын булыуы хаҡында әйтеп, уны үҙе Мәскәүҙән ҡайтҡас, 24 июндәр тирәһендә бергәләп ҡарап сығырға, китапты наборға бирмәй торорға һораны.

Шулай итеп, хатты бергәләп һөйләшә-һөйләшә яҙып, уҡыны. Бына әле ул хат минең алда ята: «Әмир Гәрәевкә М. Кәрим».

Хаттың эшен бөтөргәс, Мостафа ағай:

— Ә китабың миндә ҡалһын, ҡайтҡас уҡ уҡып сығырмын да нәшриәттә бергә һөйләшеп алырбыҙ. Нисек тә планда билдәләнгән күләмде һаҡларға тырышырбыҙ.

Алдараҡ әйтәләр ул, ҡитап бит һинең төп эшең, бер-ике сәғәт ваҡыт табыр инем әле,— тип был хаҡта һүҙен бөтөрҙө лә:

— Әйҙә, араҡы эсәһеңме?— тине. Үҙе көлә.

— Эсәм,— тинем.

Кухняға сығып, буфеттан латинса яҙылған экспорт «Водка»һын килтереп сығарҙы.

— Хәҙер ни үҙем эсмәгәс, өйҙә араҡы-фәләп дә ултырмай. Бына бәхетең бар икән, һиңә тигәне ҡалған,— тигән була. Үҙе бер ҡыярҙы уртаға ярып, тоҙлап, алға ҡуйҙы. Килене Нәзифә сыр, икмәк телеп һалды.

— Хәҙер дачала булғас, ашау яғы бында бик таҡы-токо ғына,— тине Мостай ағай.— Әйҙә, эс.

— Һеҙ бар булған өсөн,— тип эстем. Нәзифә менән кейәүе Алик сухойҙы күтәрҙеләр.

— Осрашыу өсөн,— тине Мостафа ағай.

Унан һуң һүҙ бала-сағаларға күсте. Салауат менән булған хәлде һөйләгәс:

— Ҡайғырмағыҙ. Бөтәһе лә тәбиғи. Кеше бер тыуа донъяға. Яратҡас, ҡаршы килмәгеҙ. Яңылышһа, үҙе аңлар. 18 йәштә кешеләр, ана, колонияға ла барып эләгәләр, әллә ниндәй юлға баҫып ҡуялар. Киленгә әйт, юҡка борсолмаһын. Бер ҡасан да балалар атай-әсәй теләге менән генә үҙ яҙмыштарын ҡормай. Үҙебеҙҙең бөтә теләгәнде уларға бәйләп булмай. Кәрәкмәй ҙә был,— тип үҙенең Илгиз өсөн борсолғандарын һөйләп китте.

— Уға мин хәҙер консерватор ҡарт ҡына,— тип көлдө.

— Илгиз бөтөнләй икенсе егет тә ул,— тинем мин.

Нәзифә лә көлөп ултырҙы. Ул беҙҙе бер саҡ Әнғәм Атнабаев менән күргән дә, өйгә һуңлап ҡайтҡан, ниндәйҙер һүҙ булған икән...

— Һеҙҙең менән булғанда, донъяла ҡайғы ла юҡ һымаҡ, Мостафа ағай,— тигәс, ул:

— Һәр кемдең үҙ ҡайғыһы. Һин кисергәндәрҙе мин дә кисергәнмен. Бәлки, икенсе төрлөрәктер. Ләкин ағайыңдың хәҙер ҡайғыһы юҡ икән тип уйлама. Әлбиттә, улар икенсерәктәр. Беҙ донъяға үҙ донъябыҙҙы ҡаршы ҡуябыҙ. Ә ул үҙенсә. Ул ҡаршылыҡ булған һәм буласаҡ. Кеше шулай ҡоролған ул һ. б. тип һөйләп алып китте Мостафа ағай.— Һин бер ваҡыт дыуамалланып бер аҙ бутылкаға кереп алдың, әнә шуны берәүҙәр эләктереп алды ла хәҙер һиңә шул ҡараш эле лә дауам итә. Ләкин быны үҙеңдең ижадың, тормош тәжрибәң менән һин емереп сығырға тейешһең. Иң мөһиме — ваҡланырға ярамай.

— Ярай, Мостафа ағай, һеҙгә юлға бит, бер иркенләп һөйләшербеҙ әле,— тип мин тиҙерәк ҡайтырға ашыҡтым.

15 июль.

Мостай ағай менән һөйләшеү.

— Китабыңды уҡып сыҡтым, яңы шиғырҙарыңдан бер-ике минорныйынан башҡаһы барырлыҡ. Тәржемәләреңде оригиналдары менән уҡыным. Ахуньянов ҡайтҡас, барып һөйләшербеҙ. Бер аҙна көтөп тор инде. Йөрөп кил әйҙә. Мин башта үҙем һөйләшеп сығырмын,— тине.



Рәми Ғарипов ҡәләмдәше Рауил Бикбаев менән. Белорет — Учалы. 1972 йыл.

22 июнь.

Хәйбулла районына остом. Хәйбулла яҡтарында тәүге ҡабат булыуым.

Аэропортта билет юҡ ине. Әлеге журналист әрһеҙлеге яр-ҙам итте. 8-се һанға яҙған «Стюардесса» очеркын аэропортта йөк ташыу бүлеге начальнигы Фәндит Ирғәлиевич Арыҫлановҡа уҡып сыҡтым да ҡайһы бер өҫтәлмә белешмәләр алғас:

— Ә хәҙер Аҡъярға нисек осорға? Минең билет юҡ бит әле, Фәндит Ирғәлиевич,— тинем. Ул һүҙ ҙә әйтеп тормай рацияға өндәште:

— Иптәш Ғариповҡа бер билет биреген, Аҡъярға.

Һәм бына бер сәғәт тә үтмәне, мин инде Аҡъярҙа.

Аэродромға килеп төшкәс тә башты әйләндергес саф дала еҫе танауға ярып керҙе. Бөтә дала үләндәренең сәскә атҡан ваҡыты. Зәп-зәңгәр күктән дала ҡояшы ҡыҙҙыра. Мотор тауышы тыныу менән, бөтә донъяны һабантурғайының йыры биләп ала. Тирә-яҡта ике-сике киңлек һәм сиңерткәләр сырлауы... Иң беренсе теләк — ҡылғандары ап-аҡ булып тулҡынып ултырған дала төпкөлөнә инеп, ҡуйы үлән араһында салҡан төшөп ятаһың һәм бөтә барлығыңды онотаһың килә.

Ләкин, был рәхәтлекте алғараҡ ҡалдырып, тиҙерәк, тәүге автобус менән үк Аҡъярға ашыҡтым. Минең менән бергә осоп килгән Зәки Нафиҡов ағай менән Әминә апаның улы Фәритте лә көтөп торманым. Уларҙы ҡаршыларға машина килергә тейеш ине. Социологик экспедицияға килгәндәр. Халыҡтың миграцияһын, иҡдисадын өйрәнәләр. Фәритте бәләкәй сағында күтәреп йөрөткәндән бирле тиерлек күргәнем юҡ ине. Ир-егет булып, өйләнеп, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләп йөрөй. Мөсәлиә Ғәлиевна менән бергә торалар икән. Бер балалары бар. Күп һөйләй. Автовокзалда төшөп, райкомға индем. Ләкин секретарҙарҙың береһе лә юҡ ине. Комсомолдарға индем. Райкомдың икенсе секретары ғына ултыра ине. Комсомол билеттарын алыштыралар. Тирә-яҡ ауылдарҙан йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар йыйылған. Дала ҡояшына янған ап-аҡ тешле йәштәр. Ҡаҙаҡҡа тартҡандар.

18 ноябрь.

Камил ағай ғаиләһенең яҙмышы

Камил ағай инәйем менән бер туған, ата башҡа, инә бер. Ҡартинәйем Мөхлисә (Анна Шадрина), ҡартатайым Хизбулла Ғәйфуллин үлгәндән һуң, Ахун ауылының ҡыҙыл партизаны Ғәбитов Абдулла тигән кешегә сыға. Иртә үлә. Камил тигән улы ҡала. Инәйем менән һуғыш алдынан хат яҙышып торалар. Ләкин бер ҡасан да күрешмәйҙәр. Камил ағай һуғышҡа китерҙән алда, комбайнерҙар курсында уҡып йөрөгәндә, бер иптәше менән төшкән фотоһын ебәрә. Беҙ уны шул фотоһы буйынса ғына беләбеҙ. Камил ағай һуғышта үлеп ҡала.

Уның ғаиләһен 1970 йылда Әҙһәм ағай Шәрәфетдинов менән эҙләп йөрөһәк тә, осона сыға алмағайныҡ.

Быйыл көҙ Әсмә апай Мөслимова (ҡарт уҡытыусы, «Делегатка» тигән шиғырҙар йыйынтығының авторы) Учалыға барып, минең үтенесем буйынса, Ғәбитовтар ғаиләһенең яҙмышын асыҡлап ҡайтты.

Камил ағайҙың ғаиләһе ҡалала йәшәй икән. Ҡатыны Фатима Ғәбитова (Күсәрбаева) Ахун ауылында. Төрлө эштә эшләп пенсияға сыҡҡан. Әле рудникта йәшәй. Камил ағайҙан ике бала ҡала. Әле иҫәндәр. Бер улы, бер ҡыҙы бар. Улы — Троицкиҙа шофер, ҡыҙы Учалы районында, Степнойҙа тора.

Камил ағайҙың атаһы — Абдулла Ғәбитов бынан ике йыл элек үлеп ҡалған. Шахтала эшләгән икән.

Адрестары: г. Учалы-1, ул. Ленина, 26, кв. 3(23?).
Ғәбитова Фатима.

Уйланыузар



Музыкаль ижадтың бейеклектәренә

(Башҡорт композиторҙарының беренсе съезынан.)

Үҙ иленең яу һәм көрәштәр, ҡан һәм дан менән һуғарылған яҙмышы хаҡында, үҙенең тыуған Уралы кеүек үк, шундай киң, шундай мөһабәт һәм матур йыр йырланы башҡорт халҡы, һәм быуаттар буйынса был мөһабәт йырға уның сикһеҙ бай күңеленең иң тәрән еренән урғып сыҡҡан ҡурай моңо ҡушылды.

Был йырҙарҙа, был моңдарҙа меңәрләгән Ғилмиязаларҙың «илкәйемә лә шул ҡайтыр инем, аяҡтарым талһа, имгәкләп», тип тамған ҡанлы күҙ йәштәре, меңәрләгән Зөлхизәләрҙең, төн уртаһы еткәс, «йәш ғүмерем заяға, ай, үтә» тип илауҙары, меңәрләгән Көнһылыуҙарҙың «Таштуғайҡай, һинең кәкүгең юҡ, кире Уралҡайыма ҡайтайым» тип тыуған-үҫкән ерен һағыныуҙары һәм был ерҙең азатлығы өсөн яуға күтәрелгән Салауат кеүек ил батырҙарының тәүәккәллеге, тапҡырлығы, сәсәнлеге бар.

Был йырҙарҙа башҡорт халҡы үҙенең Буранбай, Бейеш кеүек ил эше һәм халыҡ өсөн һөргөндәргә киткән ирҙәренә мәңгелек хөрмәте, Тәфкилев, Ҡолой кантон кеүек яуыз түрәләргә аяуһыҙ нәфрәте тураһында бөтөн бер тарих яҙып ҡалдырған.

Ул үҙенең, йыртыҡ тирмәләрҙә йәшәп тә, ҙур-ҙур караванһарайҙар һалыуын, бөйөк рус халҡы менән бергә үткәргән боевой походтарын йырлай һәм был походтарҙа ир-егеттең тоғро юлдашы булған төрлө төҫтәге аттарын мактай; үҙенең тирә-яғын уратып алған тәбиғәттең күркәмлеге, уның ҡошҡорттары, йәнлектәре, Ирәмәле һәм Ағиҙеле, Ирәндеге һәм Һаҡмары менән һоҡлана; һәм ул ошо бай тәбиғәт ҡосағында ҡайғы-хәсрәт менән үткән ғүмере хаҡында ғәжәп тәрән философик фекерҙәр йөрөтә; үҙенең ауыр тормошон уйын-көлкө менән еңеләйтеү өсөн, ул бик тапҡыр шаян йырҙар уйлап сығара. Бәхетле киләсәк тураһындағы өмөт һәм хыялдарын, уй-тойғоларын, бай фантазияһын — бөтә эске донъһын ул иҫ киткес поэтик оҫталыҡ менән йырға һалған.

Ләкин шундай үлемһеҙ ҡомартҡылары булған был халыҡтың яҙмышы тураһында күрәҙәлек итеүсе уның дошмандары — иҙеүсе синыф вәкилдәре, ҡайһы бер буржуаз культура «белгестәре» башҡорт халҡын ижадҡа, хеҙмәткә һәләтһеҙ булыуҙа ғәйепләп, уға яла яғырға тырыштылар.

...Ул заманда үтте. Бына бөгөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында элекке ҡурайсы Заһир Исмәғилев яҙған «Салауат Юлаев» операһының увертюраһы яңғырай.

«Урал» көйөнөң мөһабәт киңлеген, тәрән моңон, бай фантазияһын һәм «Салауат» йырының тантаналы героик ынтылышын, азатлыҡ мотивын үҙ эсенә алған һәр кемгә аңлайышлы, яҡын был тулҡынландырғыс увертюраны тыңлағас:

— Беҙҙең музыкаль сәнғәтебеҙ бар!— тип ғорурланаһың. Һәм был профессиональ сәнғәттең тик совет власы йылдарында ғына ҡурайҙан алып үҙ халҡыңдың милли характерын, уның бөйөк рус халҡы менән тарихи дуҫлығын, азатлыҡ өсөн героик көрәшен ысын музыка теле менән күрһәтеп бирә алырлыҡ операға тиклем күтәрелеүе өсөн шатланмау мөмкин түгел. Был беҙҙең ысын-ысындан социалистик йөкмәткеле, милли формалағы культурабыҙҙың ҙур ҡаҙанышы.

Был ҡаҙаныш башҡорт әҙәбиәтенең һәм сәнғәтенең Мәскәүҙә булып үткән декадаһында өлгөргәнлек һынауын тотто, һәм Башҡортостан композиторҙары үҙҙәренә беренсе ҡабат съезд үткәреү хоҡуғын алдылар.

Съезд, алты көн буйы башҡорт композиторҙарының ижадын тикшереп, уларҙың эше тураһында Башҡортостан совет композиторҙары союзының председателе Заһир Исмәғилевтың отчет докладын тыңланы.

Докладсы КПСС-тың XX съезы совет халҡы алдына хужалыҡты һәм мәҙәниәтте үҫтереүҙә ғәйәт ҙур бурыстар ҡуйыуы, шулай уҡ башҡорт композиторҙарының алдында ла яңы бурыстар тороуы тураһында һөйләне. Өлгәшелгән уңыштар менән генә сикләнеп ҡалыу мөмкин түгел. Күп етешһеҙлектәр бар.

Уларҙың иң ҙурыһы — беҙҙең бөгөнгө иҫ киткес ваҡиғалар менән бай тормошобоҙҙоң, был тормошто төҙөүсе яңы совет кешеһенең образы башҡорт композиторҙарының ижадында үҙенең тейешле кәүҙәләнешен таба алмауҙа. Әлегә тиклем хәҙерге көн темаларына яҙылған тулы ҡиммәтле ҙур музыкаль сәхнә әҫәре юҡ, тик кантата жанрында ғына бер нисә әйбер яҙылған. Уларға Х. Заимовтың «Башҡортостан нефтселәре», «Башҡортостан», «Ялан киңлектәрендә», Н. Сабитовтың «Үлемһеҙлек», Р. Сәлмәновтың «Алтын туғай», «Сиҙәмгә», Х. Әхмәтовтың «Ҡотлау», «Хат» һәм Ленин тураһында ике кантатаһын, З. Исмәғилевтың йәш нефтселәр тормошона арналған вокаль-хореографик сюитаһын индерергә мөмкин.

Уларҙың ҡайһы берҙәренең форма яғынан едти кәмселектәре бар һәм музыкаль драматургия ла тулыһынса камиллашып етмәгән.

Башҡорт композиторҙарының күп кенә симфоник әҫәрҙәрендә конфликтһыҙлыҡ теорияһының эҙе ята һәм уларҙың тормош менән яҡындан бәйләнеше юҡ.

— Беҙ әле милли симфоник стиль үҫешенең тәүге стадияһын ғына үттек,— тип билдәләй докладсы.— Был үҫеш юлындағы уңыштарҙан Р. Мортазиндың «Байрам симфониеттаһын», Н. Сабитовтың симфоник поэмаһын һәм скрипка концертын, Х. Заимовтың увертюраһын, Х. Әхмәтовтың лирик сюитаһын, М. Вәлиев һәм К. Рәхимовтың оркестр өсөн яҙылған ҡайһы бер миниатюраларын күрһәтергә мөмкин. Шулай ҙа был бик аҙ. Башҡорт симфонизмын булдырыу өсөн ҙур активлыҡ менән эшләргә кәрәк.

Артабан докладсы халыҡ ижадын йыйыу һәм уны өйрәнеү эшенә туҡтала. Был өлкәлә Әхмәтов, Рәхимов, Мортазин, шулай уҡ элек Башҡортостанда эшләгән рус композиторы Ключарев һәм музыковед Лебединскийҙың эшмәкәрлеге айырыуса иғтибарға лайыҡлы. Уларҙың эше һөҙөмтәһендә «Башҡорт халыҡ йырҙары» кеүек капиталь хеҙмәт баҫылып сыҡты.

Ләкин башҡорт халыҡ йырҙарын йыйыу эше һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Композиторҙар райондарға сығып йөрөмәйҙәр, халыҡ араһында булмайҙар. Күптән инде фонограф валиктарға яҙып алынған ярты меңләп халыҡ йыры СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалында, ҡул да теймәгән килеш, эшкәртелмәйенсә ята. Музыкаль фольклор кабинетының эшен һис кисектергеһеҙ активлаштырырға кәрәк.

Республикабыҙҙа милли музыкаль кадрҙар әҙерләү эше бигерәк тә насар хәлдә тора. Хәҙер Өфөлә интернатлы музыка мәктәптәре булдырырға ваҡыт инде. Өфө музыкаль училищеһында теоретик бүлек һәм композиторҙар бүлеге асҡанда, йәш белгестәр әҙерләүгә был бик ҙур булышлыҡ итер ине. Шулай уҡ үҙешмәкәр композиторҙар менән эшләү үҙ ағышына тапшырылған. Уларға белемле консультанттар беркетелмәй.

Ижади һәм музыкаль-йәмғиәт эшмәкәрлегендә етешһеҙлектәрҙең төп сәбәбе — композиторҙар араһында уҡыу-тәрбиә эшенең насар ҡуйылыуында. Композиторҙарҙың күбеһенә эстетик, тарихи һәм теоретик белем етешмәй.

Шулай уҡ башҡорт композиторҙарының опера һәм балет театры менән дә, татар композиторҙары, башҡорт шағирҙары менән дә үҙ-ара ижади бәйләнештәре йомшаҡ.

Музыкаль әҫәрҙәрҙе баҫып сығарыу һәм башҡорт музыкаһын пропагандалау эше лә йомшаҡ ҡуйылған. Хатта иң кү-

ренекле ҡарт композиторҙарыбыҙҙың да айырым йыйынтыҡтары юҡ.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа ла был етешһеҙлектәр тураһында ныҡ әйтелде.

— Бөйөк Глинканың һүҙҙәрен ҡабатлайһы килә: «Музыканы халыҡ тыуҙыра, ә беҙ, композиторҙар, уны аранжировать итәбеҙ генә»,— тине композитор Бәширов. Ләкин беҙ халыҡтың бай музыкаль теленән ситләшәбеҙ. Шунлыҡтан беҙҙең массовый йырҙарҙа бер төрлөлөк килеп сыға. Ә был етешһеҙлектәрҙе күреү өсөн беҙҙә теоретик әҙерлекле профессиональ музыка тәнҡитселәре юҡ. Композиторҙар үҙҙәре лә был эшкә иғтибар бирмәйҙәр.

Тәрбиәсе иптәш М. Бикбова балаларҙы эстетик тәрбиәләүҙә музыканың ғәйәт ҙур роле тураһындағы мәсьәләгә туҡталды.

Татарстан композиторҙары М. Мозафиров һәм А. Ключарев артабан ижади дуҫлыҡты нығытырға саҡырҙылар.

Художник Р. Ишбулатов үҙенең сығышында:

— Ҡайһы бер композиторҙар халыҡтың рухын тейешенсә аңламайынса, халыҡ традицияһынан ситкә китеп, формалистик әҫәрҙәр ҙә яҙалар,— тине. Был йәһәттән йәш композитор Н. Сабитовтың ҡоро техника өсөн генә яҙылған эстәлекһеҙ әҫәре бик ныҡ тәнҡитилде.

Башҡорт композиторҙарының киң таралған йырҙары тураһында һөйләп, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Мәғәфүр Хисмәтуллин халыҡ ижадын фәнни яҡтан тикшереү, башҡорт музыкаһын пропагандалау, «Аҡбуҙат» кеүек ғәжәп бай операны, шулай уҡ «Азат» операһын яңынан сәхнәгә ҡуйыу мәсьәләләренә туҡталды.

Халыҡ ижадын механик файҙаланыу композиторҙарҙың халыҡ йырҙарын боҙоуға йәки стилләштереүгә килтерә. Был хәл уларҙың әҫәрҙәрен бер нисек тә халыҡсан итә алмай. Яҙыусы К. Мәргән композиторҙарға бына шул хаҡта иҫкәртте. Милли колорит, халыҡсанлыҡ һәм музыка теле тураһында шулай уҡ яҙыусы С. Агиш һәм шағир Ҡ. Даян ҡиммәтле фекерҙәр әйтте.

Съезд эшендә ҡатнашыусы СССР Композиторҙары союзы секретариаты вәкилдәре С. Аксюк һәм Солодухо иптәштәр башҡорт композиторҙарының ҙур уңыштарын күрһәтеүҙәре менән бергә, уларҙың әле профессиональ оҫталыҡты күтәреү өҫтөндә бик күп эшләйһеләре барлығын әйттеләр, уларҙы рус һәм Көнбайыш классик музыка культураһын, хәҙергә иң яҡшы совет һәм сит ил композиторҙарының ижад тәжрибәһен тәрәнерәк өйрәнергә саҡырҙылар.

Ләкин, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең ҡайһы бер танылған һәм йәш композиторҙарыбыҙ араһында үҙ-үҙҙәренән ҡәнәғәт бу-

лыу, һауаланыу кеүек, үҙҙәрендә сәнғәтте түгел, ә сәнғәттә үҙҙәрен яратыу күренештәре осрай.

Съезда КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретары иптәш Х. Сайранов сығыш яһап, башҡорт композиторҙары алдында торған яңы ижади бурыстар тураһында һөйләне.

Беҙҙең музыка халыҡтың культура талабын ҡәнәғәтләндереп етмәй әле, тине ул. Хәҙер халыҡтың эстетик талабы ғәйәт юғары күтәрелде. Ә уның ижади хеҙмәт шатлығы, бай һәм тәрән тойғоһо, уның ҡыйыу хыялдары беҙҙең композиторҙарҙың әҫәрҙәрендә бөтә күркәмлеге һәм тулылығы менән яңғырай алмай әле. Беҙгә бөтә Союз киңлегенә ишетелерлек йырҙар кәрәк, кантаталар, симфониялар һәм опералар кәрәк.

Беҙҙең композиторҙар әле үҙ эштәре өсөн халыҡ алдында ни тиклем яуаплы булыуҙарын төшөнөп етмәйҙәр. Улар араһында партиялы тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү рухы етешмәй.

Бының шулай булыуын съезда ла күргергә мөмкин ине. Башҡорт музыкаһы тураһында күберәк үҙҙәре композитор булмаған кешеләр борсолдо. Был — халыҡтың ни тиклем үҙ музыкаһын яратыуы, уның тураһында ҡайғыртыуы, уның композиторҙарға ни тиклем талапсан булыуын күрһәтеп тора. Сөнки халыҡ Башҡортостан композиторҙарының ижади көсөнә ышана, улар алдында ҙур һәм почетлы бурыстар ҡуя. Был ышаныҫты аҡлау һәм был бурыстарҙы үтәп сығыу өсөн Башҡортостан композиторҙары үҙҙәренең беренсе съезынан һуң ең һыҙғанып эшкә тотонорҙар, тип теләргә кәрәк. Был — халыҡтың теләге.

21 март, 1956 йыл.

Юлдағылар

Халҡыбыҙ мөғжизәләр тыуҙыра!

Ил эшендә хәҙер ғәләм киңлектәрен айҡаған ер юлдаштарының тиҙлеге бар. Ә хыял инде тағы ла алыҫҡарак — йондоҙҙарға ынтыла, ай серҙәрен ҡапшап ҡарай...

Кеше тормошто тағы ла матурыраҡ итеп күргергә тырыша. Сөнки ярата уны. Был яратыу һүрән генә һөйөү түгел. Был дәртле, ялҡынлы, эшсән мөхәббәт.

Поэзия бына шундай мөхәббәттән башланалыр ҙа.

Таҡташ Гейне фекерен ҡеүәтләп: «Мөхәббәт ул үҙе иҫке нәмә, ләкин һәр бер йөрәк уны яңырта», тигәйне. Шиғырҙа ла был шулай. Һәр бер шағир донъяны үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай, үҙенсә аса. Шулай булмаһаң, шағир ҙа түгелһең! Яңы тормош яңы йыр һорай.

Йөрәктәрендә «шифыр уты» булғандар бына шул әле асылмаған донъяға барыу юлына — яңылыҡ эҙләү, үҙҙәрен, үҙ тауыштарын эҙләү юлына сыҡҡандар.

Ауыр юл был! Был юлға кемдәр генә сыҡмаған да, кемдәр генә ятып ҡалмаған?!. (Әҙәбиәт тарихына ҡараһаң, был юл фажиғәләр менән тулы...)

Бына шуның өсөн дә беҙ, йәштәр, үҙ юлдаштарыбыҙ яҙмышына, үҙ ҡәләмдәштәребеҙҙең ижадына иғтибарлыраҡ, бөгөнгө уҡыусы кеүек талапсыраҡ булырға, бер-беребеҙ хаҡында ысын күңелдән һөйләшергә тейешбеҙ. Ә һөйләшәһе, бәхәсләшәһе нәмәләр байтаҡ! Беребеҙ яңылышһа, икенсебеҙ төҙәтер: хәҡиҡәт бәхәстә тыуа!

Һүҙҙе Әнғәм Атнабаевтан башлау урынлыраҡ булыр. Беҙҙең бер тиҫтер ҡәләмдәштәр араһында ул байтаҡтан эшләп килә, һәм тәүге китабын сығарырға ла ваҡыт инде уға.

Әнғәм Атнабаевтың үҙ тауышы бармы һуң?

Минеңсә — бар! Һәм был үҙенсәлекле, Атнабаевтың үҙ төҫө, үҙ ҡылығы, үҙ тәбиғәтенә генә хас булған тауыш. Уның шифырҙарына, хатта очерктарына ла иғтибарһыҙ ҡалып булмай. Унда ниндәйҙер дәртле, үҙе күреп тойғанды башҡаларға ла шундай яҡын итеп күрһәтә торған йылы бер көлөү — юмор бар. Был юмор ауылса ябай, халыҡсан һәм йәш күңелле. Шул уҡ ваҡытта уға йәнле һөйләшеү интонацияһы ла, лирик хикәйәләү алымы ла хас.

Атнабаевтың ысын үҙ тауышын мин бына шунда күрәм. Уның газетала сыҡҡан «Ярар, ҡарарбыҙ» тигән шифри фельетоны, элекке йылғы «Йәш көстәр» альманахында баҫылған һалдат көндәлегенән шифырҙар циклы һәм «Хикмәтле һыуҙан, тиҙәр» шифыры авторҙың иң яҡшы әҫәрҙәренән. Тик бында йыйынтыҡтағы «Хат ташыусы ҡыҙға» тигән шифырҙы ғына индереп булмай. Был шифыр, ҡыҙыҡлы ғына эшләнһә лә, оригиналь түгел — «суҡтин-суҡ сәләмдәр» менән тулған шаблон хат кеүек.

Беҙҙә ғәжәп сәйер бер күренеш бар. Бына шундай хат ташыусыларҙан башҡа, һәр бер шағирға дежур булып тороусы официант ҡыҙҙар күбәйеп китте.

Мөхәббәтте — кешенең иң матур тойғоһон — бындай «ғишыҡ һата» торған дежурный ҡыҙҙарҙан ҡотҡарырға ваҡыттыр инде. Юҡһа, был артыҡ сөсө, артыҡ арзан бер әҙәби «стилягалар модаһына» эйләнеп бара.

Яратмайһың икән, яратыу тураһында яҙма!..

Әгәр ҙә традицион бер нәмәне алаһың икән, уны яңыса асырға, үҙенсә күрһәтергә кәрәк. Бына «һалдат шинелен» дә беҙҙә Дауыт Юлтыйҙан башлап Шакир Бикҡоловҡа тиклем байтаҡ шағирҙар кейҙе. Был тәбиғиҙер ҙә. Тормош шинель

кейергә, (погон тағырға) ҡушҡас, шул хаҡта бик күптәргә шиғыр яҙырға ла ҡуша. Ләкин бөтә шағирҙарға ла бер шинель кейергә тимәгән! Минеңсә, Атнабаев уны үҙенсә кейгән. Шулай уҡ уның «Усаҡ янындағы уйҙары» ла йылы, тормошсан. Һәм был уйҙар уның уҙған һуғышта һәләк булып ҡалған атаһының «Һуңғы хатына»ла бик тәбиғи барып тоташа:

Өсмөйөшлө ябай һалдат хаты.
Ул һаҡлана инде күптәнән,
Инде уның ҡай бер хәрефтәре
Танымаҫлыҡ булып бөткәндәр.
Хаттың һуңғы юлы ҡыҫҡа ғына,
«Ҡайтып күрешкәнсе» тиелгән,
Шул һүҙҙәргә минең әсәйемдең
Көмөшләнгән башы эйелгән...
...Һәм йәштәре тама хат өҫтөнә.
Тамамлана шулай йыш ҡына.
Ерҙә ҡайғы күптән бөтөр ине,
Бөтөрә алһа уны йәш кенә!..

Бер Атнабаевтың ғына түгел, беҙҙең бик күп әсәйҙәребеҙҙең яҙмышын хәтерләтә торған һәм күңелгә күпте әйтә торған «һуңғы хат» был. Хәҙерге көндә иң мөһим булған тыныслыҡ темаһын да автор үҙенсә күтәргән һәм яңыса хәл иткән. Артабан да йәш шағирҙың тормош дөрөҫлөгөнә, тәбиғилеккә, фекер һәм тойғолар сафлығына тоғро булыуын күргә килә. Тик уға был юлда нәмә ҡамасаулай, уның үҙ тауышын нәмә ҡаплап, томалап тора һуң?— бына шул хаҡта ла ныҡлап һөйләшергә ине.

Әнғәм Атнабаев ижадына хас булған етди кәмселектәрҙе күреү өсөн, уның һуңғы ваҡытта «Әҙәби Башҡортостан» журналында (1957 йыл, № 8) баҫылған ике шиғырын алыу ҙа етә.

«Йөрәк менән һөйләшеү» тип атай ул бер шиғырын. Һүҙ, тимәк, бик мөһим нәмә хаҡында булырға тейеш. Кеше үҙенең выжданы менән тормошоноң ниндәйҙер хәл иткес ваҡыттарында, ниндәйҙер етди бер ҡарарға килгән мәлендә һөйләшә. Донъя поэзияһында ла, рус поэзияһында ла, үҙебеҙҙә лә йөрәк тураһында байтаҡ шиғырҙар бар. Ләкин эш бында түгел, ә ниндәй йөрәк булыуҙа һәм уның менән нисек итеп һөйләшеүҙә.

Ун ете йыл төрөк төрмәләрендә ғазап сиккән Назым Хиҡмәт ҡараңғы, еүеш зиндандарҙан үҙенең мөхәббәт һәм нәфрәт менән тулған, бөтә донъяны һыйҙырған ғорур йөрәген Данко һымаҡ күтәреп:

Йөрәгем, доктор,
иң алыҫ йондоҙ менән
тибә бер булып!—

тине. Ә Сергей Есенин үҙенең бөйөк йөрәген: «Глупое сердце, не бейся»,— тип һәләк итте.

Йөрәк,
Ян һин, ян һин, йөрәк,—
Ҡан бирелгән һиңә янырға!—

тип янды Таҡташ. Әлбиттә, был юлдарҙы иптәш Атнабаев белә. Ләкин, белә тороп та, шағир йөрәген буш бер уйынсыҡҡа алыштырыуы бик сәйер. Уның «һөйләшеүендә» бер ниндәй ҙә яңы поэтик фекер юҡ, ә үрҙә әйтелгән шағирҙарҙы артыҡ ябайлаштырып, мәғәнәһеҙ ҡабатлау ғына бар. Был «һөйләшеүҙән» арзан бер пародия ғына килеп сыҡҡан:

Йөрәк иптәш, (?) һинең менән былай
Хәтһеҙ инде ғүмер ителде.
Татыу ғына йәшәмәнек буғай,
Ыҙғышҡан да саҡтар күп булды.
Һинең генә ихтыярҙы тотһам,
Аҡыл — башлыҡ, Таҡташ әйтмешләй,
Ай-вайына һис тә ҡарамайса,
Сабыуыма килеп йәбешә». (?)

Был — поза, әлбиттә! Көлдөрөргә тырышып ҡыланыу! Ниңә ирҫәкләнергә былай? Минеңсә, бындай юлдарҙы яҙмаҫ өсөн, шағирға баш та бик кәрәкле нәмә.

Ҡыҙҙар һөйҙөк. Мин берене менән
Семья ҡорҙом тормош, йәм өсөн.
Ә һин, һаман (тиле тиәйемме?)
Һағынаһың уның тәүгеһен.
Эҙләнәһең. Кемде һин, нимәне —
Үҙең миңә өҙөп әйтмәйһең...

Өҙөп кенә әйткәнде — был поэзия түгел, «һүҙ юҡта һүҙ булһын»... тип кенә һөйләшеү был! «Юморҙы аңламайҙар!» тиергә мөмкин автор. Ләкин юмор шаштырыу түгел. Саманы белергә кәрәк, бигерәк тә — поэзияла! Халыҡ, бөйөк юморист, һәр һүҙен ете үлсәп әйтә: уйнап һөйләшһәң дә, уйлап һөйләш!— ти. Сөнки ташҡа баҫылған һүҙ юйылмай.

Йөрәк иптәш, ҡайсаҡ әйткән дә бар:
Минең өсөн генә ян әле!
Тыңламайһың, йоҙороҡ хәтле ергә
Һыйҙыраһың бөтә донъяны...

Юҡ, артабан инде авторға ышанып булмай — был уның үҙ образы түгел. Был хаҡта йәштәрҙән Марат Кәримов та яҙҙы, ә ололарҙан Ғәйнан Әмири инде уны һуғыш ваҡытында уҡ әйткәйне:

Күпме ғәйрәт, алһыныу, дәрт,
Күпме моң, йыр, уй, теләк,
Күпме мөхәббәт һәм нәфрәт
Һыйҙыра ала йөрәк!

Бер строфаға һыйған был фекерҙе ун өс йылдан һуң ун өс строфаға тартып һуҙыу бер ҙә мотлаҡ нәмә түгел, һәм быға мохтажлыҡ та юҡ шикелле?..

Ләкин Атнабаев бының менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмай. Үҙ йөрәге менән уйнап туйғас, шунда уҡ ул дуҫының йөрәгенә тотона. Был уйын «Минән дуҫҡа ни етә!» тип атала һәм «Ҙур йөрәкле дуҫҡа ни етә?» тип тамамлана. Әйтелгән фекерҙәре, әлбиттә. Тик яҙ етһә, ҡар ирей тиеүҙән ни мәғәнә? Бәлки, автор үҙенең лирик геройын тағы ла тәрәнерәк, төрлө яҡлап асырға, үҙ йөрәген башҡа йөрәк аша күрһәтергә ниәт иткәндер? Дуҫ — дуҫтың көҙгөһө, тиҙәр бит! Ләкин был көҙгө лә бик тоноҡ күрһәтә. Автор нисек кенә дуҫын ҙур йөрәкле тип маҡтамаған, беҙгә уның ҙурлығы күренмәй, ә фараз итеп кенә ышаныу ҡыйыныраҡ. Сөнки дуҫының бөтә күркәмлеген ул тик шунда күрә:

Уның үҙ йорто юҡ, аҡсаһы ла...
Булған сағы була бик һирәк,
Ләкин...

Һаҡ булығыҙ — бында ниҙер бар! Автор тиккә генә ритмды ватмаған, хәҙер ул бына ахыр сиккәсә фокусник һымаҡ йәшереп килгән бөтә сирҙе — шиғырҙың бөтә мәғәнәһен аҡтарып һалған «поэтик бомбаһын» ырғытасаҡ— мәгеҙ, күрегеҙ минең дуҫтың кем икәнен:

Мине аңлай торған йөрәге бар,
Шунан артыҡ миңә ни кәрәк?!

Бәй, тик шуның өсөн генә шул тиклем «ҙур йөрәкле» булыу кәрәкме икән ни? Күрәһең, «аҡыл-башлыҡ» үҙ вазифаһынан мәхрүм ителгәс, бөтөнләй автор файҙаһына эшләмәй: йөрәк хаҡында ике шиғырҙың икеһе лә йөрәктән сыҡҡан йыр түгел, ә еңел ҡулдан ғына яҙылған.

Кешенең, беҙҙең заман кешеһенең, бөтә рухи байлығын, бөтә эске матурлығын, бөтә өҫтөнлөгөн шундай тар мещан донъяһына ғына ҡайтарып ҡалдырыу бик ҡыҙғаныс, әлбиттә!..

Атнабаев кеүек йәш, һәләтле һәм шифырҙың нәмә икәнен белгән кешегә үҙ ижадын шулай ваҡлау, үҙенә талапһыҙ булыу, хатта үҙенең шағирлыҡ бурысын онотоп, ҡурсаҡ уйнатып ултырыу һис тә килешкән эш түгел.

Был хәлгә артыҡ туҡталмаҫҡа ла булыр ине, ләкин беҙҙең арала һүҙҙәр менән уйнау, төрлө биҙәктәр менән артыҡ мауығыу, төрлө тәтәй образдар артынан ҡыуыу кеүек формализм күренештәре бер Атнабаевтың ғына тауышын ҡаплап тормай. Был яман сир, былтырғы грипп кеүек, күптәрҙе ыҙалай беҙҙе. Хатта әҙәбиәттә инде ир уртаһы ир булған Карам Бакиров та айный алмай унан.

Юҡһа, Бакиров иптәштең яҙған бер шифырын — нисек кенә булһа ла!— төрлө-төрлө биҙәкле эпитеттар, ялтырауыҡ сағыштырыуҙар, күҙе күргән теләһә ниндәй деталдәр һәм башы уйлап сығара алған теләһә ниндәй образдар менән тултырырға тырышыуын ҡалайыраҡ аңларға һуң?

Уларҙы уҡый башлаһаң, ярып сыҡҡыһыҙ шифри шырлыҡ араһында тороп ҡалаһың. Ә һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнәһе, көсө һәм төҫө юғала, улар ниндәйҙер өндәр теҙмәһенә әйләнә башлай. Әйтерһең дә образ һәм һүҙҙәр уйлар өсөн түгел, ә уйнар өсөн!

Бакировты нахаҡ ғәйепләй тип яңылышмаһыңдар өсөн, бер шифырын алып ҡарайыҡ. Бына уның «Ер йылыһы» исемле китабын асып ебәргән, авторҙың бөтә шифырҙарына асҡыс булып торған шифыры. Ул былай башлана:

АҒастарҙа япраҡ булып яра
Яҙғы ерҙең һөттәй һуттары.
Үҫ һин ҡанат булып йөрәктәргә,
Шифырым,— һүнмәҫ дәртем уттары.

Күренеүенсә, дүрт юлдың дүртеһе лә дүртәр һүҙҙән тора тиерлек. Тик уларҙың береһе лә үҙ-ара кеше теленсә ябай ғына, асыҡ һәм теүәл мәғәнәле итеп бәйләнмәгән. Һәр юл һайын һүҙҙәргә абынаһың, һәр юлды «бөҙрә томан» ҡаплаған, һәр юлда ҡылансыҡ биҙәктәр!.. Кем генә башҡортса «япраҡ булып яра» тип һөйләшә икән? Етмәһә — «ерҙең һөттәй һуттары»!.. Һәм был образдың ниндәйҙер «ҡанат булып йөрәктәргә» үҫергә тейеш булған «һүнмәҫ дәрт уттарына» (йәғни шифырҙарына!) ниндәй бәйләнеше бар һуң? Әгәр ҙә был образды яһамағанда, шифырға зыян килер инеме? Юҡ, әлбиттә, бер аҙ томан ғына асыла төшөр ине. Был йомаҡты ҡойғанда автор уны үҙе лә сисеп бөтмәгән, күрәһең. Сөнки артабан уның бар булыуы ла онотола, ә автор инде шифырының үҙе өсөн нәмә икәнлеген һынарға керешеп китә. Ул уның «һүнмәҫ дәрт уттары» ғына түгел, ә «тәүге мөхәббәте» лә, «мәңге алыштырмаҫ серҙәше» лә, «ҡайғыларҙан түгел» (юҡ, зинһар, уйлай күрмә-

геҙ!), «тик шатлыҡтан тамған күҙ йәше» лә, «йоҡламаған йоҡолары» ла, хатта ниндәйҙер «кисерештәр төйөнө» лә һәм иң ахырҙа инде ул авторҙың «бер яндырып, берсә көйөндөрөп, гел тынғыһыҙ тотҡан» һөйөүе лә икән!..

Бер-береһен ҡабатлаған һәм икенсеһе беренсеһен юҡҡа сығарған төшөнсәләрҙе рифмалап сыҡҡандан һуң, был исемлеккә ул саманан тыш ҡыйыу бурыс йөкмәтә:

Баҡсаларға ҡайтҡан һандуғастай,
Күңелдәргә ҡун һин, шифырым,
Халҡым ижад иткән йыр шикелле,
Уят иң татлыһын тойғоноң»...

Ҡыйыу әйтелгән! Тик нисек ҡыйып әйтелгәндер! Пушкин, мәҫәлән, үҙенә «ҡулдан килмәҫлек һәйкәл» һалып та, бындай ҡыйыулыҡҡа тик үлер алдынан ғына ирешкән. Ә беҙҙең Карамға диңгеҙ тубыҡтан: Пушкинды ул тыумаған ҡолонға атланып та уҙып китә!..

Шифырыңдың «халыҡ ижад иткән йыр шикелле» булыуын теләү насар теләк түгел, әлбиттә. Ләкин шундай йыр тыуҙырыу өсөн хатта иң, иң яҡшы теләктәр ҙә аҙ. Теләгең ҡабул булһын өсөн, суртан әмере генә етмәй — ең һыҙғанып эшләргә лә, халҡыңдың бөйөк ҡомарткыларынан ғүмер буйы өйрәнергә лә кәрәк. Ә халыҡ йырының йыртығы булмай. Әгәр ҙә ул образ ҡуллана икән, уны иҫ киткес итеп ҡуллана ла белә:

Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ (ҙа) талдарың,
Тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан саҡта
Яуҙа үлгән батыр (ҙа) ҡандары.

Шундай ябай бер образға бөтөн бер тарих, башҡорт халҡының бөтә яҙмышы, барлыҡ фажиғәләре һыйған дөрөҫлөктөң үҙе кеүек үк бөйөк ябайлыҡ был! Ә ялған һәр саҡ ҡатмарлы, һәр саҡ буталсыҡ, ул тик тыштан ғына ялтырап тора.

Тимәк, образдың бөтә матурлығы дөрөҫлөктә, ябайлыҡта һәм үҙ урынында тороуҙа. Сөнки образ шифырҙың бөтә тәбиғәтенә ярашлы булғанда ғына ҡиммәт. Ә образ өсөн ғенә образ менән ҡыҙығыу күбәләктең сәскә тип утҡа ҡуныуы менән бер!..

Ҡыҫҡаһы, уҡты — сәпкә, сараны маҡсатҡа әйләндерергә ярамай. Был поэзия юлы түгел, ә поэзиялағы формалистар юлы. Билдәле булыуынса, формализм әйтер һүҙҙәре булмаған кешеләргә үҙҙәренең «фекер фәкирлеген» һәм «күңел бушлығын» ҡаплап ҡалдырыу өсөн генә кәрәк. Тик ысын, ҙур юл ғына һәр саҡ тормошҡа, халыҡ араһына илтә, ә фокусниктар йөрөй торған ҡыл арҡандай тар ғына һуҡмаҡтар ярып сыҡ-

ҡыһыҙ шырлыҡҡа, убып ала торған һаҙлыҡтарға илтеп олаҡтыра...

Өсөнсө бер ҡәләмдәшебеҙ Миәссәр Басыров бына шул хәҡиҡәтте аңланы булһа кәрәк. Хәҙер ул үҙен бик ныҡ йонсоҡан был шырлыҡтан ҡотолоп, ысын юлға сығып килә: эҙләнә, үҙ һүҙен әйтергә һәм шул һүҙгә яңы формалар табырға тырыша. Был тәңгәлдә уға тәржемәләр өҫтөндә эшләү ҙә ярҙам итәлер. Ә тәржемә ғәжәп ҙур культура һәм ижади оҫталыҡ мәктәбе бит! Басыровтың был эшкә ихлас тотоноуын теләргә кәрәк. Һуңғы ваҡытта ул Петефиҙан, Мицкевичтан һәм хәҙерге прогрессив донъя шағирҙарынан уңышлы ғына тәржемәләр бирҙе. Бында уның айырыуса «Дуҫтар йыры» тигән циклын күрһәтке килә.

Ләкин сит ил шағирҙарын үҙләштереү ижади төҫтә булһын ине. Юҡһа, Миәссәр Басыров үҙ шиғырҙарында ла уларҙың формаһы менән мауыға. Был бигерәк тә уның «Елдәр иҫһә» тигән шиғырында ныҡ һиҙелә. Николас Гильен формаһын Куба ере тыуҙырған, һәм уны механик рәүештә ҡабул итеү, әле үҙ ерендә лә ныҡ тормаған көйө, ҡуркынысыраҡ. Ҡапыл башҡа климатҡа күсеүҙән башыңа эҫе ҡабырға ла мөмкин. Ә яңы форманы яңы эстәлек үҙе үк талап итеп тора. Тик Басыров шиғырҙарында хәҙергә был күренмәй әле.

Был хаҡта айырыуса баҫым яһап әйтке килә. Сөнки күптән түгел генә тәжрибәле оло яҙыусыбыҙ Баязит Бикбай үҙенең «Шатлыҡлы тауыштар» тигән мәҡәләһендә әҙәбиәт юлына баҫҡан байтаҡ ҡына ҡәләмдәштәребеҙгә, шул иҫәптән Миәссәр Басыровҡа ла, киң күңелдән фатихаһын бирep, маҡтау грамоталары өләшеп сыҡты. Ләкин, боронғо гректар «Платонды беҙ яратабыҙ, тик хәҡиҡәтте — нығыраҡ» тигәндәй, дөрөҫөн әйтергә кәрәк: Баязит аҡай маҡтауға бик бай, ә талапҡа бик һай килгән, минеңсә: һәм уҡытыусыбыҙҙың ҡайһы бер фекерҙәре менән килешеү ауыр.

Мәҫәлән, әҙәбиәткә яңы ғына аяҡ баҫҡан йәштәрҙе ул, ғәҙәтенсә, бәләкәс балаларға оҡшата ла, күҙ асып күҙ йомғансы, өлгөргән яҙыусыларға әйләндереп ебәрә. Уныңса «айырым шағирҙар, прозаиктар инде ниндәйҙер өлгөргәнлек тойғоһо уяталар, уларға бары тағы уңышлыраҡ эшләүҙәрен теләйһе генә ҡала». Был теләк шиғыр яҙыусыларҙан Әнүр һәм Йәғфәр Ахитовтарға, Нур Хәбиров, Әхмәт Ғайсин, Ихсан Әхтәмйәнов, Миәссәр Басыров, Әфғән Ғиззәтов, Файыҡ Мөхәмәтйәнов һәм Булат Рафиҡов иптәштәргә ҡарата теләнә. «Яҡшы!..» Был ғына ла түгел әле — «уларҙың һәр ҡайһының үҙ тауышы, мәсьәләгә үҙенсә яҡын килеүе бар. Был яҡтан инде уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ урынында».

Әгәр ҙә уларҙың барыһы ла ысынлап та шулай булһа, әгәр ҙә был артыҡ хуш күңелле бер идиллия ғына булмаһа, әҙәбиәттең киләсәге өсөн борсолмаҫҡа ла мөмкин, әлбиттә. Ләкин... иртәрәк өлгөрөү түгелме был? Элегерәк, мәҫәлән, шағир М. Хәй биш-алты шиғыр яҙып түгел, ә биш-алты китап сығарып, уларҙың да иң һуңғыһын ғына «өлгөрөү» тип атағайны... Хәҙер, күрәһең, шағирҙар тиҙ өлгөрә! Баязит ағай быға ышандырыу өсөн «тормошта һәр йәш кеше һөйә» тип, «мөхәббәт мәсьәләһен» ала, һәм миҫалға Нур Хәбиров менән Әфғән Ғиззәтов шиғырҙарын килтерә. Тик ике шиғыр ҙа әле уларҙың өлгөргәнлеген, үҙ тауыштарын билдәләй торған әҫәрҙәрҙән түгел. Ә Ғиззәтов иптәш оригиналь булырға тырышһа ла, көсәнеберәк яҙған кеүек. Хәҙергә уны маҡтамай ҙа түҙеп булыр ине. Ләкин ағайҙың кәйефе шул яҡҡа ғына йылмайып торғас, ни хәл итәһең инде: «Әнүр Вахитов та «шул уҡ теманы... үтә үҙенсәлекле хәл итә... Ә Миәссәр Басыров инде шул уҡ теманы «Иҫһен елдәр» шиғырында тағы ла үҙенсәрәк, талантлыраҡ хәл итә. Ул хатта фекерен уҡыусыға еткереү өсөн яңыраҡ поэтик форма ла тапҡан...»

Поэзияла, шулай уҡ тәнҡиттә лә, бындай форманың эстәлек өсөн файҙаһы аҙ һымаҡ. Ниндәй генә матур протез булмаһын, ул тупаҫ ҡына бер ысын ҡулға етмәй! Ә тәнҡитсебеҙ артабан Басыровҡа тағы бер әйләнеп килеп, хатта «Йырламасы» тигән шиғырҙа авторҙың «ашығыслыҡ күрһәтеүен» йомшаҡ ҡына шелтәләп алыу өсөн дә,— «Ялт итеп торор», «Елдәр иҫһә» кеүек матур шиғырҙар биргән М. Басыров бик актив эшләй башлаған шағир...» тип әйтмәйенсә булдыра алмай. Басыровтың башы әйләнеп китмәүен генә теләргә ҡала. Сөнки уға ысындан да матур шиғырҙар бирергә, ысындан да бик актив эшләй башларға ваҡыт инде...

Ихсан Әхмәтйәнов тураһында ла шундай фекерҙе әйтергә кәрәк. Юҡһа, ул да, ни өсөндөр, ғәжәп бер меценатлыҡ аҫтында тороп ҡала. Имеш, «Йәш көстәр» йыйынтығына «Яҙғы бер таң» һәм «Һин һорайһың» шиғырҙарын алмағанда, «уның уңышлыраҡ шиғырҙарын һайлап индерергә артыҡ мәшәҡәт күрмәгән булһалар кәрәк...» Ләкин — булмағанды ҡайҙан алаһың? Бары менән байрам! Шағирҙы былай арҡаһынан ҡағып ҡына үҫтереп булмайҙыр? Ярай ҙа — ҡаҡҡан һайын бер шиғыр сығып торһа!.. Ләкин әҙәбиәттә бындай тылсымдың булғаны юҡ әле.

Әлбиттә, Ихсан Әхтәмйәнов иптәште яҙмай тип булмай, газета-журнал биттәрендә ул күптән яҙышып килә. Шыма ғына яҙа ла белә ул, шиғыр техникаһы ла, жанрҙар төрлөлөгө лә. фекер ҙә бар унда. Ләкин иптәшкә ниҙер етешмәй — шәүләһе бар, ә үҙе юҡ. Хатта Баязит ағай ҙа уны асыҡ төҫмөрләй

алмаған, бары тик «матур ғына үҫеп килгән шағир» тип «ашығыслыҡ күрһәткән» генә. Сөнки ҡыҫҡа яҙыу ғына әле берҙәнбер талант үлсәүе була алмай. Донъяла сама үлсәүе лә бар: боронғо гректар һәм Чехов та «ҡыҫҡалыҡ — таланттың һеңлеһе» тигәндәр икән, был «алтын хәҡиҡәт» уның Әхтәмйәнов ҡустыһына ла, Йәғфәр Вахитовҡа ла тура килеп кенә тора тигән һүҙ түгел әле. Ҡыҫҡалыҡ фекер байлығынан да, фекер һайлығынан да булырға мөмкин. Тәүгеһе уның олораҡ шағирҙарға хас.

Ә Йәғфәр Вахитов кеүек бик йәш иптәшкә хәҙерҙән үк Пришвинса һөйләшеү тәбиғи түгел. Үҙенең «Лирик парсаларында — уның тамсыла ла донъяны күргә, хатта дегәнәк сәскәһендә лә тыуған яҡ йәмен тойорға тырышыуы яҡшы, әлбиттә. Ләкин тормошто микроскоп аша ғына күҙәтеп ултырыу йәш кешенең тойғо иркенлеген, күҙ күремен ҡыҫыуға, яһалма аҡыл һатыуға, ә үҙен ҡайнап торған ҙур тормош диңгеҙенән ситкә сығарып ташларға мөмкин. Диңгеҙ һыуы стаканда ла тоҙло, ләкин диңгеҙҙе стаканда ғына күреү тоҙһоҙ була башлай.

Бына шул яҡтан Әхмәт Ғайсин дөрөҫөрәк юлда. Тәбиғәт уға пейзаж ғына түгел, ә лирик персонаж да. Тәбиғәт фонында ул бөгөнгө кешене, бөгөнгө ваҡиғаларҙы күрә белә. Тик Ғайсин әле кешенең эске донъяһына инергә баҙнат итмәйерәк тора. Ләкин ынтылыш бар. Шундай уҡ ынтылыш Ғәлим Дәүләтовҡа ла хас. Баязит ағай уны юҡҡа ғына үгәйһетә. Ул әле балаларсараҡ уйлаһа ла, күпте күрергә тырыша, һәм киләсәктә ул үҙ һүҙен әйтәсәк. Быныҡ өсөн уға ныҡышмалыҡ кәрәк.

Бик күптән яҙыша башлаған Файыҡ Мөхәмәтйәнов һуңғы йылдарҙа бына шул дәртле ныҡышмалығы, өҙлөкһөҙ эшләүе менән үҙенең йәшлеген яулап алды. Кешенең әҙәбиәткә шундай мөхәббәтен күреү бик шатлыҡлы. Яҙмайынса булдыра алмай икән, ул, әлбиттә, яҙасаҡ. Тик уға, тәүәккәллек итеп, киңерәк пландағы эпик әҫәрҙәрҙә лә үҙ көсөн һынап ҡарарға кәрәк ине. Ауыр һуғыш юлын үткән һалдатҡа һәм бай тормош тәжрибәһе булған Себер шахтерына күмер ҡатламдарын ғына түгел, ғүмер ҡатламдарын асып, кеше характерҙарын бирерлек мөмкинлек тә бар. Юҡһа ҡыҫҡалыҡҡа ғына ҡыҙығыу уның ижадын сикләп, киңерәк ҡолас йәйеп эшләргә ирек бирмәй торған һымаҡ. Ә шағирҙы артабан тик уның үҙ геройҙары ғына үҫтерәсәк.

Р. Зәйни иптәштең дә хәрби ҡәләме һис шикһеҙ шул уҡ хикәйәләү алымын талап итеп тора. Баязит ағай уны «поэтик яҡтан эҙләнмәй» тиһә лә, ул үҙенең «Офицер»ы менән дә, «Һалдат үксәһе» менән дә эҙләнә, «Яҙ...» кеүек матур ҡыҙҙы ла күрә белә, «Көнләшмәйем» тип шаяра ла, «Ҡоро тора дарыбыҙ» тип етди фекерләй ҙә белә, тик былар әле поэтик развед-

ка ғына. Әгәр ҙә ул, ваҡытты ысҡындырмайынса, лирик позициянан эпик һөжүмгә күсһә, еңеү уның яғында, һәм ул күп һүҙлелектән дә ҡотоласаҡ. Һөжүм алдынан Бородино ҡырында ла һүҙ күп булған...

Шул уҡ хәрби темаға «Яҡташтың үлеме» һәм «Иркәмдең теләге» кеүек йылы ғына шиғырҙар яҙған Шакир Биҡҡолға ла һалдат йыйнаҡлығы, һалдат ныҡлығы етеңкерәмәй. Шунлыҡтан уның «Имәне» лә, «Ике ярҙағы ике тирәге» лә башҡалар үҫтергән ағастарҙы хәтерләтә, кейгән «шинеле» лә ориғиналь түгел, туҙған шинель. Ә һалдат, ҡырҡтартмасы кеүек, артыҡ йөк артмаҡлап йөрөргә тейеш түгел. Биҡҡоловҡа ырамлыраҡ атларға ине. Юҡһа ул, «Ленинсы» газетаһында шиғырын яҡлап йөрөп тә, артҡа ҡала. Шағирҙы шиғыры яҡларға тейеш.

Ә йәштәр газетаһы, йәштәргә ярҙам итеү урынына, быныңкиреһен эшләй. Газета эшселәренә ижади талапсанлыҡ, принципиаллек етешмәйерәк. Мәҫәлән, бик тәбиғи генә үҫеп килгән йәш шағир Әнүр Вахитовтың иң йомшаҡ шиғырҙарын ҡыҫҡырып торған баш һүҙ аҫтында баҫып сығарыу бик күңелле күренеш түгел. Авторҙың «Йырҙар яҙам» һәм «Тауҙарҙағы яҡтылыҡ» шиғырҙарында яңылыҡ тойолмай, ә «Күкрәк» һәм «Хаттар» тигән шиғырҙары Атнабаевтың «Йөрәк менән һөйләшеүенә» һәм «Һуңғы хатына» уңышһыҙ бер вариация ғына булып сыҡҡан. Быныңменән ул үҙ тауышын боҙа һәм хатта үҙенең баҫалҡы холҡо менән дә иҫәпләшмәй. Ә Вахитовтың ысын тауышы быға ҡапма-ҡаршы бит! Ул нескә хисле һәм наҙлы тәбиғәт моңдары менән бергә ҡушылып үҫкән лирик. Уның лирикаһы кешелекле, сабыр һәм уйсан. Әнүргә үҙ кәләмдәштәрен ҡабатламаҫ өсөн, тормошто киңерәк күрергә һәм шиғырҙары өҫтөндә күберәк эшләргә кәрәк ине. Тик ул һаман да өй артында үҫкән «Тополь» тирәһендәрәк ураҡылай һәм бала саҡтағы етемлеге өсөн егет булғас та күберәк йәш ҡоя...

Булат Рафиҡовтың бына шул сентименталлеккә ят булыуы ҡыуандыра. Ул ололар өсөн дә, балалар өсөн дә көр күңелле шиғырҙар яҙа һәм уларҙа беҙҙең көн пафосы яңғырай. Әгәр ҙә ул ҡоро риторикаға бирелеп китмәгәндә һәм шиғыр теленә иғтибарлыраҡ булғанда, F. Сәләм позаһына тормайынса ла, баҙыҡ тауышлы шиғырҙар яҙырлыҡ ҡыйыу ғына ҡәләме бар. Ә иң мөһиме — уның үҙ быуынына һәм тормошҡа ҡарата актив мөнәсәбәттә булыуы!

Тормош, тормош!
Түгел танса залы
Бейек үксәләрҙә үтергә!..

Был, әлбиттә, фекерҙе үҙенсә әйтергә тырышыу. Булат шиғри хикәйәләүҙе, тапҡыр фекерҙе ярата. Бына шундай эҙлә-

неүсәң, яңы фекер әйтергә теләүсе йәштәрҙән Рәшит Әхтәровты ла күрмәй үтеү мөмкин түгел. Айырыуса уның «Иренсәк менән Күңелсәк» тигән әкиәт-поэмаһы ҡыуандыра. Әхтәров башҡорт халҡының бөтмәҫ-төкәнмәҫ ижад хазинаһына мөрәжәғәт итеп бик яҡшы эшләй. Киләсәктә лә уның балалар өсөн шундай яратып уҡырлыҡ талантлы әкиәт һәм легендалар бүләк итеүен күрге килә. Тик уға туранан-тура халыҡ ижадына стилизация яһауҙан һаҡланырға кәрәк.

Поэзия юлындағыларҙың иң йәше булыуға ҡарамаҫтан, иң үҙенсәлекле ҡәләмдәштәрҙең береһе — Нур Хәбиров. Тик уның үҙенсәлеге ниҙә һуң? Баязит ағай әйткәнсә, уның «бәхетле», «өмөтлө», «тәрән фекерле» һәм шифырҙарының «һығылмалы» булыуында йәки «беҙ быраса күнегеп бөткән нормаларҙы» боҙоуҙа ғынамы? Юҡ, был үҙенсәлек уның кешелек сифаттары шифырҙарынан айырылғыһыҙ, үҙе менән һүҙенең бер бөтөн һәм тәбиғи булыуында. Унан һуң был үҙенсәлек Нур Хәбиров шифырҙарының милли ерлектә тыуыуында: ул башҡортса уйлай, башҡортса тоя һәм саф башҡорт телендә һөйләшә. Нур үҙ еренең уйсан моңон һеңдергән күңеленә. Был моң уның «Тыуған илемә» тигән шифырында, тик үҙенә генә хас яғымлы бер көй булып, ҡурайҙан сыҡҡан кеүек, урғылып сыға:

Тыуған илем, һине һөймәһәм,
Һинең өсөн янып-көймәһәм,
Һинең өсөн йәлләп йөрәкте,
Һыҙғанмаһам эшкә беләкте,—
Ни ҡыйыулыҡ менән арыным тип,
Үлһеңә килеп ятырмын?
Ниндәй выждан менән һыуһаным тип,
Һыуҙарыңдың тәмен татырмын?..

Нур һүҙҙең урынын, ҡәҙерен белә торған, һүҙҙең көсөн тоя торған шағир.

Ә шағир һүҙгә йән кертә, һүҙгә үҙенең әүәлге сафлығын ҡайтара, һәм һүҙ үҙенең ысын мәғәнәһен алып, терелә, йәшәй, көрәшә башлай. Шул саҡта ғына шифыр уйландыра, тойғо уята һәм тормошоңа юлдаш булып китә. Шағирҙың бурысы ла, бәхете лә шунда.

Мин дә бәхетлемен, әгәр йырым
Йыр тыуҙырһа башҡа күңелдә,—

тип Нур үҙ бурысын дөрөҫ аңлай. Тик быныҡ өсөн уға үҙ-үҙен ҡабатлауҙан ҡурҡырға, маҡтауға ышанмаҫҡа һәм өҙлөкһөҙ эшләргә кәрәк.

Ләкин аҙ эшләйбеҙ, аҙ күрәбеҙ, аҙ беләбеҙ. Тормош етмәй беҙгә! Шуның өсөн дә геройҙарыбыҙ вағыраҡ, яһалмараҡ, төҫ-

һөҙөрәк. Үҙ йөрәктәребеҙҙе генә йырлайбыҙ, бышылдап ҡына һөйләшәбеҙ... Юҡ, бындай заманда халҡыбыҙға, партиябыҙға былай ғына ярҙам итеп булмаҫ. Поэзия юлындағыларҙы тормош геройҙары үҙҙәренә, ең һыҙғанып эшләргә саҡыралар. Ә беҙгә тик улар менән генә үҫергә мөмкин. Эш өҫтөндә үҫә кешеләр!

22 февраль, 1958 йыл,
«Совет Башҡортостаны».

Ваҡыт, йыр һәм ер

(Поэзиябыҙ хаҡында уйҙар)

Оса ваҡыт,
оса йыр,
оса ер!..
Н. Нәжми

1. Әйтер һүҙ хаҡында

Поэзиябыҙ хаҡында мин дә бер-ике ауыҙ һүҙ әйтергә теләйешмен. Тәүҙә һүҙ сәнғәтенең үҙе хаҡында. Уйлап тормаһаң, һүҙ әйтеүҙән дә аңһат нәмә юҡ кеүек донъяла!.. Тел һөйәкһеҙ бит — ни генә һөйләмәҫкә мөмкин ул?

Ә бына һүҙеңдең кем өсөн, ни өсөн булыуы, уның мәғәнәһе хаҡында уйлаһаң, уны әйтеү бик еңел дә түгел. Бит әйткәнең инде һинеке булмай, ишеткәндеке була. Телең ни әйткәнде ҡолағың ишетмәһә, халыҡ «туҙға яҙмағанды һөйләйһең» йәки, «һүҙеңдең бер ҙә инә-атаһы юҡ» ти.

Фәмүмән, һүҙ көсө, тел ҡеүәһе, сәсәнлек хаҡында халыҡ үҙенең меңәр йыллыҡ тормош тәжрибәһенән сығып, әллә ни саҡлы мәҡәлдәр әйтеп ҡалдырған, ҡобайырҙарҙа һөйләгән, йырҙарҙа йырлаған.

Уй-тойғоларыңды һүҙ менән асып биреү ни тиклем ҡыйын булыуы, ошо «һүҙ ғазабы» тураһында хатта иң ҙур һүҙ оҫталары ла иң әрнеүле һүҙ әйткәндәр бит. Иң нескә хистәр йырсыһы булған Феттың һүҙҙәренә генә ҡолаҡ һалайыҡ. Был ғазаптан үрһәләнеп, ул хатта башын ташҡа ороп, сәстәрен йолҡоп үкһегән кеүек бит:

Как беден наш язык:
Хочу и – не могу!
Не передать того ни другу, ни врагу,
Что буйствует в груди прозрачною волною!

Башҡаларға үҙ хистәрен һүҙһеҙ әйтеп биреү мөмкинлеге хаҡында хыялланып ул: «О, если без слова сказаться душой

было можно!» тип аһ орғанда, уның маңлайынан бөрсөк-бөрсөк һалҡын тир бәреп сыҡҡан һымаҡ. Ә иң тәрән фекер эйәләренән булған Тютчев унан да сәйерерәк, хатта ҡот осҡос бер уйға килгән. «Әйтелгән фекер ул торғаны ялған» тип, хатта өндәшмәҫкә, һис бер һүҙ әйтмәҫкә кәңәш биргән.

Как сердцу высказать себя?
Другому как понять тебя?
Поймет ли он, чем ты живешь?
Мысль изреченная есть ложь;
Взрывая, возмутишь ключи:
Питайся ими — и молчи!

Ләкин, нисек кенә булмаһын, фекер әйтелгән бит бына! Беҙгә Тютчевтың фекере көндәй асыҡ, тел төбөнәсә аңлашылып тора.

Кеше донъяға яралғандан бирле шулай ғазапланып, үҙенең иң көслө ҡоралы булған тылсымлы телен яратып, үҙенең иң тәьҫирле сәнғәтен — һүҙ сәнғәтен, поэзияны — бар иткән. Бөтә сәнғәттәрҙең, хатта донъяны танып-белеү фәндәренең дә башы булған был сәнғәт иң борон замандарҙан алып бөгөнгәсә кешелек үткән һикәлтәле һәм ҡатмарлы тарих юлында кешенең айырылмаҫ юлдашы, кеше рухының иң юғары ҡаҙанышы булып танылған. Үҙе үткән урау юлда ул кеше даһийының ғорурлығы булған Гомер, Данте, Шекспир, Низами, Гете һәм Пушкин ише гиганттарҙы ҡалдырып, һәр халыҡтың үҙ Абайҙарын, Туҡайҙарын, Бабичтарын бар итеп, кешеләрҙе бер-береһенә ҡан-ҡәрҙәш яһауҙа, тырым-тыраҡай ырыу-ҡәбиләләрҙең бергә уҡмашып, халыҡтарҙың милләт булып ойошоуында, уларҙың милли үҙаңы уяныуҙа баһалап бөткөһөҙ тарихи эште эшләгән. Һәм әле лә ул, иң оло социаль революцияны яһаш-ҡандың һуңында, яңы кешенең рухи донъяһын ҡорошоп, халыҡтарҙың бер-береһенә зиһен хазинаһын, күңел күркәмлеген асып, уларҙы бер-береһенә яҡынайтып, туғанлаштырып һәммә телдә йәшәй, үҫә, байыға бара, һәм һәр халыҡтың теле йәшәй икән, уның ошо һүҙ сәнғәте лә йәшәйәсәк. Ул сәнғәт замандарҙы замандарға олғаштырып, халыҡтарҙы халыҡтарға бәйләп, үҙенең мәргән һүҙе менән кеше күңелен, еребеҙҙең әле күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән бәхетле киләсәген биҙәтеп, ер йөҙөндәге иң ғәҙел йәмғиәтте, уның инде сағыу һыҙаттарын үҙ күҙебеҙ менән күргән йәмғиәтте төҙөшәсәк. Сөнки был йәмғиәт — поэзия яралғандан бирле уның иң бөйөк вәкилдәре хыялланған йәмғиәт.

Кеше аҡылы матдәнең иң нескә серҙәренә төшөнөп, уның иң ваҡ өлөшсәләрен тарҡатҡан атом быуатында; иң ҡатмарлы һан-хисаптарҙы хисаплап, төрлө телдәрҙе береһенән икен-

сеһенә тәржемә итеп, һәр сирҙең дауалау әмәлен әйтеп бирә торған әүлиә машиналар уйлап сығарған кибернетика заманында, кеше инде әкиәт балаҫтарында түгел, ә ысын ғәләм караптарында йыһанды айҡаған космос осоронда, оло химияның тылсымлы ҡулы тереклектең нигеҙе булған аҡһымды яһалма аҡһым менән алыштырыу дәрәжәһенә күтәрелгән мең-мең мөғжизәләр дәүерендә поэзияның инде кәрәге ҡалманы, тип, шиғриәткә үлем юраған күрәҙәселәрҙән ваҡыт, йыр һәм ер үҙе көлдө.

Сөнки ваҡыт, йыр һәм ер бер-береһенән башҡа йәшәй алмай икән шул. Ваҡытһыҙ йыр ҙа, йырһыҙ ер ҙә юҡ. Заман йырға үҙе ҡанат ҡуя, ә тик ҡанатлы йыр ғына осорға мөмкин һәм осоп китер, осоп ҡайтыр өсөн, әлбиттә, ер кәрәк. Ғәләмдә лә әҙәм балаһы ер һүҙҙәре менән үҙенең яратып туймаҫ ерен йырлай. Бәй, ул бит күккә лә ерем тип, ғәләм серҙәрен асып, ошо еремде биҙәйем тип оса лаһа!.. Шуның өсөн бит ул ваҡытты — заман атын эйәрләп, илаһи бәйгегә сыҡҡан. Һүҙҙәр донъяның үҙе һымаҡ иҫке, ләкин кеше уға һәр сәғәт һайын яңы мәғәнә һала һәм хатта үлеме хаҡында уйлағанда ла йәшәү хаҡына:

Ауһам ине шул саҡ, бәйгеләрҙә
Йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ,—

ти.

Сөнки киләсәк кешеһе ул һәр яҡтан да камил матурлыҡ кешеһе. Ә йыр иң камил матурлыҡ хаҡында, иң матур кешене тыуҙырып, ерҙе бөтә нәжестән, бөтә ялғандан, бөтә яуызлыҡтан азат итеп биҙәү өсөн йырлана.

Әйе, шағирса әйткәндә, оса ваҡыт, оса йыр, оса ер!..

2. Ҡайҙан ҡайҙа оса йыр?

Ысынлап та, ҡайҙан ҡайҙарға оса һуң йырыбыҙ? Поэзиябыҙ хаҡында һүҙ әйтер булғас, мин ошо хаҡта байтаҡ уйланып йөрөнөм. Үҙ-үҙемә ҡат-ҡат ошо һорауҙарҙы бирҙем.

Нисек һуң әле бөгөнгө поэзиябыҙ?

Уның үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге ниндәй? Халҡыбыҙ тормошонда тотҡан урыны, тормошҡа мөнәсәбәте башҡаларҙан айырмаһы, үҙенсәлеге, барған юлы нисек? Был юлда ниндәй ҡыйынлыҡтар, кәртәләр, кәмселектәр бар? Һәм, ахыр килеп, бурысыбыҙ ниҙә һуң әле?

Башта бөтәһе лә аңһат, көн кеүек асыҡ һәм билдәле һымаҡ ине. Тик бына поэзиябыҙҙы осҡан ваҡыт, осҡан йыр, осҡан ер менән күҙләштереп, һуңғы йылдарҙа ғына сыҡҡан шиғыр йыйынтыҡтары, газета-журналдарҙа баҫылған мәҡәләләр менән

өҫтән-өҫтән генә танышып сыҡҡас та, бик яйһыҙ хәлдә тороп ҡалдым.

Иң тәү белгән нәмәм — үҙ әҙәбиәтемде йүнләп белмәгәнлегемде белеү булды. Твардовский әйткәнсә, Пушкинды ла шулай тәү ҡарашта бик яҡшы белгән кеүекһең, ә уның ижад донъяһына ингән һайын, ул икһеҙ-сикһеҙ бер диңгеҙгә әйләнә башлай. Шуның шикелле үҙеңә иң таныш, бала саҡтан уҡ яҡын поэзия ла, ентекләп ҡарай башлаһаң, үҙ юлы, үҙ тәбиғәте булған оло бер даръя булып күҙ алдыңа килеп баҫа. Беҙ әҙәбиәтебеҙҙең үткәнен генә түгел, бөгөнгөһөн дә, хатта бер йыл эсендә бер-беребеҙҙең ни ижад иткәнен дә бик ҡойто беләбеҙ буғай? Әлбиттә, ҡайһы бер китаптарҙы уҡымауҙан ҙур зыян да юҡтыр, ләкин уларға ҡарата үҙ фекерең булыу өсөн, ғибрәт алыу өсөн булһа ла, барыбер уҡырға кәрәктер. Брюсов, «рустың иң культуралы шағиры, мәҫәлән»: «Яҙыусылар үҙҙәренә тиклем нимә яҙылғанды, нимәне яҙып тормаҫты белеү өсөн уҡыйҙар»,— тигән бит. Ә беҙ бик йыш ҡына асылған ҡапҡаларҙы асып ғүмер уҙғарабыҙ. Мәҫәлән, ҡайһы бер шағирҙарҙың ҡайһы яҡтарын үҙем өсөн тәү башлап асып, мин үҙемдән-үҙем оялдым. Сөнки беҙ, бигерәк тә йәштәр, тауыштыңһыҙ ғына эшләп ятҡан ҡайһы бер оло быуын шағирҙарына нисектер ҡул һелтәп кенә ҡарарға күнеккәнбеҙ. Йәнәһе, беҙ әҙәбиәткә килгәнсә, улар йырларын йырлаған, әйтәһен әйткән дә, хәҙер инде уларҙан яңы һүҙ көтәһе лә ҡалмаған!.. Ә, баҡтиһәң, ысын шағир ҡартаймай ҙа, үҙ урынын бер ниндәй йәш талантҡа бирмәй ҙә икән. Сөнки әҙәбиәттә «зам»дар юҡ, ә «сам»дар ғына бар. Һәр шағирҙың — ҙурмы, бәләкәйерәкме, барыбер! — үҙ урыны бар, урынбаҫарға ул мохтаж түгел. «Шағирҙың үлеменә» тигән мәшһүр шиғыр яҙып, бөтә Рәсәйҙе тетрәткән Лермонтов Пушкинды алыштырғанмы һуң? Ә үҙ һыны менән Маяковский Блокты, Тақташ Туҡайҙы, Сәләм Бабичты ҡаплай алғанмы һуң? Юҡ, әлбиттә. Тауҙар янында тау, йондоҙ янында йондоҙ ғына артҡан, улар бер-береһенең үлемһеҙлеген һәм шиғриәт донъяһының сикһеҙлеген генә раҫлаған. Бер телдең күркен икенсе телдең матурлығы алыштыра алмаған һымаҡ, төрлө телдәрҙә ижад иткән төрлө яҡшы шағирҙарҙы ла башҡалар алыштыра алмай. Бит шиғриәт баҙар ҡыҫырыҡлау өсөн конкуренция ла, рекорд ҡуйыу өсөн мотогонка ярышы ла түгел. Ер йөҙөндә батшалар, шаһтар алмашынған, ә шағирҙар ҡалған, үҙҙәрен тыуҙырған халыҡтары хаҡына ғына түгел, ә бөтә кешелек өсөн тороп ҡалған. Һәр талантҡа әҙәбиәттә урын етерлек.

Бәлки, был күптән билдәле хәҡиҡәттәрҙе әйтеү булыр, ләкин, Мостай Кәрим әйтмешләй, доғаны ҡабатлауҙан доға иҫкермәй. Ә кеше хәтере, ни тиһәң дә, онотоусан шул.

Бөгөнгө әҙәби процеста борсолдорған ҡайһы бер күренештәр хаҡында бәхәсләшер, кәңәшләшер, фекер уртаҡлашыр һүҙҙәр ҙә бар һымаҡ булғас, мин үҙем аңлаған хәҡиҡәттәрҙе иҫкә алмай булдыра алмайым, тик бүтәндәр ҙә үҙҙәренең ысын уйлағанын әйтһен ине. Партия беҙгә ҡайһы бер хәҡиҡәттәрҙе ҡат-ҡат иҫкә төшөрөүҙән бер ҙә тартынмай бит. Унан һуң поэзиябыҙ ҙа бынан ун йыл элек кенә булған поэзия түгел инде хәҙер. Заман башҡа, заң башҡа. Күп нәмәгә ваҡыт үҙенең төҙәтмәләрен индерә бара.

Башҡорт халҡының бөйөк ауыҙ-тел ижады ерлегендә тыуып, үҙенең бөтә тамырҙары менән ошо бәрәкәтле ергә ереккән шифриәтебеҙҙең үҙенә күрә бик үҙенсәлекле, әле бар яҡтан тәфсирләп тикшерелеп тә, фәнни яҡтан дөйөмләштерелеп тә бөтмәгән оло тарихы бар. Был тарихҡа тарихи ҡараш кәрәк хәҙер. Ә. Харис, Ғ. Хөсәйенов хеҙмәттәре был йәһәттән әҙәбиәтебеҙ ғилеменә ҙур өлөш!

Салауаттың ялҡынлы, һуғышсан сәсәнлегенән башланған поэзиябыҙ оҙаҡҡа һуҙылған колониаль һәм милли изеү арҡаһында ысын гражданлыҡ хоҡуғын ала алмайынса, төрлө дини суфыйсылыҡ романдары аша үтеп, һуңынан Рәсәйҙәге дөйөм уяныу йоғонтоһонда иҫкә килгән Өмөтбаев һәм Аҡмуллаларҙың өгөт-нәсихәткә ҡоролған мәғрифәтселек идеяларын алып, буласаҡ ҡанлы көндәрҙең таңы алдынан Бабичтың болоҡһоу романтикаһы һәм зәһәрле көлөүе, ҡойоп ҡуйған шифри мәктәбе менән байып, яңынан һуғышсан поэзия төҫөн алып, Ғафури һәм Юлтый реализмына аяҡ баҫты, баҫты ла үҙенең ысын байрағын — быуаттар буйы үҙ халҡының ҡанына мансылған «Ҡыҙыл байраҡ»ты күтәрҙе. Октябрь революцияһынан һуң иң ҡан ҡойошло көндәрҙә үҙенең яңы «Ғәйет»ен әйтеп, яңы осорон башлап, яңы юлдар эҙләп, төрлө абстракт символика, комик образдар ташҡыны аша үтеп, «Күмер — кейәү, таштар — кәләш» булып йөрөгән саҡтарын да артҡа ҡалдырып, йәш Сәләм, Бикбай, Ниғмәти һәм Хәй ижадтары менән өлгөрөп, Бөйөк Ватан һуғышына ташланды, был оло һынауҙы үткәндең һуңында Мостай Кәрим лирикаһында үҙенең иң юғары баҫҡысына күтәрелде һәм Бөтә Союз киңлегенә сығып, сит илдәр менән дә күрешә башланы был поэзиябыҙ. Ул бөтәһенән элек яңы тормош йыры, халыҡ күңеле булып, иң алдынғы фекер, заман фекере менән йәшәне. Был хәҡиҡәтте лә онотмайыҡ әле.

Башҡорт совет поэзияһы, бөтәһенән элек, «Дауылдар тыуҙырған ғүмер» поэзияһы булып, үҙенең ҡанлы-данлы тарихи «Ер»ен раҫлап, шул ерҙә балҡып тыуған яңы «Республика иртәһе»нә гимн йырланы; үҙ еренең аҙашҡан «Шоңҡар»ҙарын дөрөҫ йәшәү юлына сығарышып, иҫке аҙымдарға үҙенең яңы

«Баҫыу хөкөмөн» әйтте; яңы йәмғиәт кешеһенең мораль-этик нормаларын билдәләшеп, киләсәк быуын яҙмышын — «Бала» яҙмышын хәл итеште һәм яңы мөхәббәтте раҫланы; үҙенең философик «Өлгөрөү» дәүерен танып, үҙен һәр ваҡыт ошо барлыҡ ҡаҙаныштар һағында «Мин постамын» тип тойҙо. Шуға күрә лә был поэзия Бөйөк Ватан һуғышы көндәрендә, халҡыбыҙҙың киләсәге хәл ителгән иң ауыр һынау көндәрендә «Ултер, улым, фашисты!» тип үҙенең иң көслө һүҙен әйтергә әҙер ине инде. Шулай уҡ ул оло яу алдынан киләсәктә «Үлмәҫбай» булып таныласаҡ әлегә бик «Таныш булмаған ҡунағын» да күрһәтеп ҡуйҙы. Һәм бына ул ҡунаҡ Европаны һәләкәттән ҡотҡарып, байтаҡ «Сит уттар»ҙы күреп ҡайтҡандан һуң харабаларҙан өрәңге ташбулаттар күтәреп, тормоштоң асы-сөсөһөн татыған, ләкин тормош тантанаһына сая ышаныс, күңеле тулы өмөт менән яңы осор нигеҙен һалыусы, киләсәккә «бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ» сапҡан, үҙен «мин түгелмен ерҙең ҡунағы», ә уның улы, хужаһы тип белдереп, йыһан ағасының олонон ҡулына тотоп дер һелкеткән кеше булып сыҡты һәм «Һаумы, иртәгә!» тип киләсәккә ҡул бирҙе. Әлбиттә, хәтер хөкөмөнә ҡуйыр өсөн яулы-даулы «Ҡара һыуҙар»ҙы хәтерләргә лә кәрәк ине. Сөнки әлегә йән яралары ғына түгел, тән яраларының һыҙлауы ла баҫылмаған. Ләкин иртәгәне тыуырған бөгөнгө кеше, донъяның яҙмышы өсөн яуаплы кеше беҙҙең поэзияның төп геройы булып күтәрелде. Ошо кеше донъяға дуҫлыҡ ҡулын һуҙып, яңы «Капҡалар» асты, алыҫ Вьетнамдарҙы ла яҡын итте. Ләкин беҙҙең юлдарҙа шомло Ҡытай стеналары ла ҡалҡып тора. Тимәк, киләсәккә, бейеклеккә, киңлеккә осҡан йырға үтә һиҙгер, һәр нәмәгә әҙер торорға, килешмәүсән булырға кәрәк!

3. Бейеклектәр бүләге

Бөгөнгө поэзиябыҙ хаҡында фекер йөрөткәндә, бына ошо яуланған бейеклектәрҙән сығып ҡарарға кәрәктер.

Ҡайһы берәүҙәр уҙған йылды — ҡытлыҡ йыл, шифырға наҡыҫыраҡ йыл булды, тиҙәр. Белмәйем, мин игенде миллион боттар менән үлсәгән һымаҡ, поэзияны ла был үлсәүгә һалып, һандар менән үлсәү яғында түгелмен. Әгәр ҙә шулай иткән хәлдә лә был үлсәүес беҙҙе бик һаташтырыр ине. Сөнки бөгөнгө әҙәбиәттең үҫеше, уның бөгөнгө талаптары алдында беҙҙең китап нәшриәте боронғоларҙан ҡалған бизмәнде хәтерләтеп ҡуя шул. Һәр хәлдә, беҙҙә китап сығарыуға ҡарағанда таштан май һығып сығарыу еңелерәктер?

Ә былай, әлбиттә, тиҫтәләгән уртаса китап сығыуға ҡарағанда, биш-ялты яҡшы китап сығыу поэзия өсөн мөһимерәк.

Улар барыбер бөгөнгө поэзияның төҫөн билдәләй, сөнки уның иң яҡшы өлгөләре дөйөм ҡаҙаныштан килеп сыға. Ә уртасалыҡ йәки халтура ул иҫ китерҙәй нәмә түгел, уның ижад менән уртаҡлығы ла юҡ. Пушкин заманында ла булған ул, ләкин урыҫ поэзияһының кимәле Пушкин даһилығы менән үлсәнгән. Поэзия бар ерҙә уның шәүләһе лә булмай булмайҙыр. Тик шуныһы: «Күтәрелгән ҡояшҡа ҡарап» барған кеше үҙ шәүләһе артынан түгел, ә шәүләһе уның артынан йөрөй. Ҡояштан боролһаң, әлбиттә, шәүләң алға сыға. Был да хәҡиҡәт.

Поэзияның ҡаҙанышы, әлбиттә, бер нисә шағирҙың ижады менән сикләнмәй. Ҙур шағирҙың ижады ла төрлө ижад солғанышы эсендә үҫә. Шулай ҙа уның ижады дөйөм эҙәби үҫештең төп күрһәткесе-эталоны, әлбиттә.

Әгәр ҙә бөгөнгө поэзияның йөҙө ниндәй тиһәк, беҙ уны беренсе сиратта башҡорт поэзияһының бөтә ҡаҙанышын үҙенә туплаған һәм башҡорт шиғыр культураһын яңы бер баҫҡыҫҡа күтәргән Мостай Кәрим ижады менән билдәләр инек.

Уҙған йылдың башында Мостай Кәримгә Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелеп, шиғри календарь ҙа уның «Ҡабарды-Балкар дәфтәре»нән асылып китте. Ҡышҡы селлә булыуға ҡарамаҫтан, күңелдәргә «Алыҫ ҡояш, бейек йондоҙ аҫтындағы» тау иленең йәйге елаҫ еле бәреп ингәндәй булды. Тау иленең зирәк аҡылын, ҡунаҡсыл киң күңелен, кисергән фәжиғәләрен һәм мөһабәт тәбиғәтен күрҙек беҙ был дәфтәрҙән.

Иң мөһиме шулдыр: шағир был шиғырҙары менән үҙ Уралынан Кавказға йәйғор төҫлө бер күпер — халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ күперен ташлай. Был, ике ҡая араһындағы илгиҙәр болот һымаҡ, ышанысһыҙ күпер түгел, ә күрер күҙгә күренмәҫ ҡылдан нескә, булаттан ныҡ күңел күпере. Был Мостай ағайҙың алпан-толпан баҫып, шиғриәттең тау яғалап мең-гән хәтәр һуҡмаҡтары буйлап, яңы бейеклектәргә, сал зыңҡыйҙарға үрләүе тиер инем мин. Был үрҙәр, әлбиттә, уның үҙенә генә хас киң ҡоласлы, ләкин «мин киң!» тип ҡысҡырып тормаҫ алғыр образдары, бәрәкәтле, тос һәм теүәл, ләкин тәбиғәттең үҙе кеүек үк ябай һүҙҙәр туҡымаһы, уйсан тауҙар һымаҡ сабыр һәм серле упҡындар һымаҡ тәрән фекер ағышы менән яулап алына. Беҙҙән әллә ҡайҙа ситтә булған Ҡафтау донъяһын шағир үҙ илендәй эҫе күргән оло хөрмәт тойғоһо, ысын туғанлыҡ хистәре менән уратып ала. Был тойғо упҡындарға ҡапланып барып төшкән шарлауыҡ һымаҡ шаулап та тормай шиғырҙа, ләкин үҙ Ағиҙеленең талғын ағышы шикелле бөтә күңеленде арбап ала. Ҙур һыу үҙенә эскә тарта, ә ҙур бейеклектән донъя киңерәк күренә, тиҙәр шул. Дөрөҫтөр, күрәһең. Был бейеклектең ҡәҙерен белә шағир:

Ҡәҙерен беләм. Бейеккә
Көн бит иртәрәк ҡарай.
Йыраҡ түбәләр ҡояштың
Алтын толомон тарай,
Шунан ғына балҡый йыһан —
Беҙҙең мәңгелек һарай,—

ти шағир үҙенең «Тау һуҡмағы»нда һәм бөркөт күҙ, әлбиттә, бөркөт күрә:

Иртәнге мәл. Тарлауыҡтар
Яталар томан бөркөп.
Болот менән ике арала
Эленеп тора бөркөт...

Бөркөт, әлбиттә, тау пейзажын тулыландырыу өсөн генә эленеп тормай бында. Яҡшы бер деталь, Паустовский әйтмешләй, үҙе бер образға тора. Тауҙа күрер нәмә күптер ул, әммә рәссам күҙе тик үҙенә кәрәкте генә күрә. Уның өсөн бит был тауҙарҙа иң мөһиме «бөркөттән дә, болоттан да юғары» менеп, йырлай-йырлай бесән сапҡан кешеләр. Күп фажиғәләр кисергән халыҡтың ҡураһына «Гүйә, шом һис ҡағылмаған» кеүек йәшәүе, йырлауы таң ҡалдыра шағирҙы. Шул йыр булмаһа, халыҡтың сикһеҙ бейеклеккә талпынған ҡанатлы күңеле булмаһа, был тауҙар тик бер таш өйөмө генә булыр ине. Горький, матурлыҡ ул ғәрәптең сүлендә түгел, ә күңелендә, тигәндәй, тауҙар күрке лә таулылар күңелендә. Шағир күҙе бала күҙе кеүек, донъяны шулай тәү күргәндәй һәр саҡ йәнле, сағыу итеп күрә. Беҙ ҙә бөркөт халыҡты уның күҙе менән үҙебеҙ кеүек күреп:

Дуҫым! Һинең халҡыңда бит
Ҡуш йөрәк һәм пар ҡанат.
Аҙмы хәтәр юл үтте ул,
Упҡын күҙенә ҡарап.
Абынһа — ҡоламаны,
Ыңғырашһа — иламаны,—

тибеҙ.

Үҙ халҡының ҡанатлы күңелен тоя белгән шағир ғына башҡаны шулай үҙ итә белә. Тауға тау ғына килмәй, ә кеше кешегә килә һәм уға үҙенең күңел күҙе менән ҡарай белә. Шуға ла тау иле шағирҙы донъялағы иң ҡиммәтле бүләк менән бүләкләй.

Мин был «Ҡабарды-Балкар дәфтәре»нән шиғырҙарҙың тәжы итеп «Дуҫтар бүләген» алыр инем. Бында тәрән фәлсәфи һөкөрҙең шундай йыйнаҡ, композицион теүәллек һәм тапҡыр аранлыҡ менән бирелеүе һүҙ сәнғәтенең көсөн тоя белгән һәр

кемде көнләштерерлек, минеңсә. Был шиғырҙы уҡығанда, нисектер, шиғриәтебеҙ менән ғорурланғы килә. Уны мин тулыһынса килтерәм:

Чегем шарлауығын бүләк итте
Миңә Ҡайсын.
Шарлауыҡһыҙ Чегем бойоғор бит,
Шунда ҡалһын.
— Һиңә булһын беҙҙең тәрән Күккүл,—
Тине Адам.
Күлен алһам, тауҙар һүҙһеҙ ҡалыр,
Нисек алам?
Алим әйтте: — Ҡушбаш Эльбрустың
Ал бер тажын.
Юҡ. Батшатау кем иңенә һалыр
Яңғыҙ башын?
Бирегеҙ һеҙ миңә шарлауыҡтай
Мәңгелек йыр.
Тәрән күлдәй, тыныс аҡылығыҙ
Серҙәш булыр.
Ҡуш түбәле тауҙай дуҫлығыбыҙ
Таянысым.
Һеҙҙең кеүектәргә таянғандар
Таямы һуң?
Ут үрсемле — яңһа. Йылға тере —
Аҡһа ғына.
Йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ
Бүлешкәндән
Арта ғына.

Был шиғырҙың шиғриәте ниҙә һуң?

Минеңсә, уның бөтә тамырҙары менән бөйөк, тарихи аҡыллы халыҡ ижадына ереккән булыуында. Уны уҡығанда аҡыл менән көс һынашҡан аҡ һаҡаллы сәсәндәр әйтеше күҙ алдына килеп баҫа.

Бында борон-боронда — әкиәттәрҙән үк килгән, һәр халыҡта була торған бик матур йола — яҡшылыҡ өсөн бүләк бирегә, бүләк алыу йолаһы хаҡында һүҙ бара. Дуҫтар дуҫлыҡ хаҡына хатта илдәрен бүләк итергә лә әҙер. Ләкин ысын дуҫ дуҫының илен алмай. Ер-һыу ул һәр халыҡтың, һәр кешенең үҙенеке. Илен алып дуҫыңды ирекһеҙ итергә мөмкин. Башҡаны ирекһеҙ иткән үҙе бер ҡасан да ирекле булмай. Ә бына йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ үҙ-ара бүлешкәндән кәмемәй, киреһенсә, арта ғына. Ысын аҡыл эйәһе дуҫын йәберһетмәй торған, ә байыҡтыра торған бүләкте генә ҡабул итә. Шундай дуҫлыҡ ҡына кеше күңелен биҙәй, кешене кешегә йондоҙ итә, табындыра.

Халыҡтарҙы ла бына шундай ғәҙел дуҫлыҡ ҡына бер ҡорға йыя, туплай һәм туғанлаштыра. Был һәр халыҡтың үҙ мәнфәғәтенән сыҡҡан һәм бөтәһе өсөн дә уртаҡ булған иң тәбиғи, иң тере, иң тормошсан фәлсәфә. Сөнки «ут үрсеме — яңһа ғына, йылға тере — аҡһа ғына».

Беҙҙә халыҡтар дуҫлығы хаҡында бик күп шиғырҙар, йырҙар яҙылды. Бик яҡшылары ла бар уларҙың. Ләкин ҡайһы бер ғәмһеҙ әҫәрҙәр был оло теманы ваҡлай ғына. Уларҙы уҡый башлаһаң, нисектер үҙ халҡыңды кәм итеп, бер ниндәй ижадҡа ла булдыҡһыҙ, үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә лә һәләтһеҙ булған бер йәнһеҙ, төҫһөҙ шәүлә итеп кенә тойорға тейеш булаһың.

Был яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙән генә торған мәғәнәһеҙ риторика оло дуҫлыҡ тойғоһо урынына күңелдә бер меҫкен йәберһенеү хисе генә ҡалдыра. Ә бит донъяла ундай меҫкен «ваҡ халыҡтар юҡ!.. Кешенең бөйөклөгө уның буйы менән үлсәнмәгән шикелле, халыҡтың бөйөклөгө лә һис тә уның һан-күләме менән үлсәнмәй»,— тигән Гюго. Әгәр ҙә инде беҙ, ысынлап та, тарихи материалистар булһаҡ, халыҡтарҙы һәләкәткә, меҫкенлеккә дусар иткән сәбәптәрҙе уларҙың ниндәйҙер айырым сифаттарынан түгел, ә уларҙы шул хәлгә ҡуйған тарихи шарттарҙан сығып күрергә тейеш түгелбеҙме ни? Айырым бер халыҡтың ғәҙәттән тыш көскә эйә итеп күреү, культлаштырыу — был халыҡтар араһындағы мөнәсәбәттә ленинсы интернациональ принциптарҙы тупаҫ рәүештә боҙоп, ҡайһы бер халыҡтарҙың яҙмышы менән уйнаған шәхес культының зарарлы эҙемтәләренән килеп сыҡҡан хәл.

Шуның өсөн был теманы зирәк аҡыл менән уйлап, байрағыбыҙға оло хәрефтәр менән яҙылған «тиңлек», «туғанлыҡ» һүҙҙәренең ысын тарихи мәғәнәһенә төшөнөп хәл итергә кәрәк. Әҙәбиәттә был оло тойғоно ваҡларға ярамай.

Минеңсә, «Ҡабарды-Балкар дәфтәре»н уҡыған Ҡайсын Кулиев та, Адам Шогенцоков та, Алим Кешоков та Мостай Кәримдең был яуап бүләгенән бик ҡәнәғәт булғандарҙыр. Улар ҙа Рәсүл Ғамзатов һымаҡ уға:

Ярай әле, Мостай, һин эргәлә —
Тоғро дуҫ та, ысын шағир ҙа,—

тип әйтә алырҙар ине. Ә беҙҙең башҡорт поэзияһы өсөн, халыҡтар дуҫлығы темаһын яңыса хәл итеү яғынан, был бүләк оло бер ижад ҡаҙанышы, тиһәм, яңылышмам кеүек. Был беҙҙең шиғриәтебеҙҙең бәлиғ аҡылы, кешелеклелеге хаҡында һөйләй.

Ғөмүмән, Мостай Кәрим кешеһенең күңеле кешеләргә ниндәйҙер оло мәрхәмәт, кеше йәнле булыу, миһырбанлыҡ менән

тулы һәм шуның менән ул көслө лә, шуның менән ул иртәгәне тыуҙырған бөгөнгө кеше лә.

Бына «аҡ ҡайынды ҡосоп илаған Мәрйәмгә» генә ҡарағыҙ. «Ҡыҙ үҙе лә ҡайын кеүек кенә». Әле бер ниндәй ғазапты ла татып ҡарамаған ҡыҙҙың күңел елкенеүен, иләҫләнеп, аҡ ҡайынға барып һарылыуын шағир ниндәй нескә буяуҙар менән һүрәтләй. Бында саманы белеү ғәжәп мөһим. Буяуҙы саҡ-саҡ ҡына ҡуйырттыңмы, яңы япраҡ ярып килгән ҡайындың йәшкелт томаны һымаҡ был наҙлылыҡты, ғиффәтлекте «һә» тигәнсе һәләк итергә мөмкин. Сәнғәттә «саҡ-саҡ» тигән нәмә, ысынлап та, бөтә нәмәне хәл итә. Бында һәр һүҙ урынлы, һаҡ һәм һиҙгер.

Аҡ ҡайынды ҡосоп илай Мәрйәм.
Ниндәй ғазап, ниндәй әрнеүҙәр?
Юҡ, юҡ... Әле генә: «Һөйәм...»— тине
Ун һигеҙе тулған Әнүәр.

...һәм беҙ ҙә, үҙебеҙең тәүге татлы әрнеүҙәрҙе хәтерләп, шағир менән бергә: «Әйҙә илаһын!..» тип һүҙебеҙҙе өҙәбеҙ. Ләкин шағир тәьҫире күңелдән өҙөлмәй, ул онотолмаҫҡа ҡала. Ғөмүмән, Мостай Кәрим образдары, улар ҡалдырған тәьҫир онотолмай. Мин, мәҫәлән, берәй бәпесте күргән һайын, уның йоҙроҡтарын шифыр юлдары аша күрәм: «Күкрәгендә ята йомолоп, ике төймә — ике йоҙроҡ». Һәм ирекһеҙҙән: «Дөрөҫ, улым, улар бик кәрәк — оноторға быны иртәрәк», тип йылмайып ҡуям. Хатта ҡырмыҫҡа күрһәң дә, Европанан Азияға сығып барған ҡырмыҫҡа күҙ алдыңа килә. Шағир шулай донъяның хатта иң ваҡ нәмәләрен дә үҙ итеп күрергә мәжбүр итә.

«Ҡабарды-Балкар дәфтәре»нән башҡа Мостай Кәримдең былтыр «Ағиҙел» журналында баҫылған «ҡышҡы юлдан Аҡбуҙ килә» (№ 3) кеүек «замандың ярһыу аты» хаҡындағы, халҡыбыҙҙың иң ауыр һынау кисергән көндәрендә «халыҡ күңеленә өмөт сәсеп, йыр игеүсе сәсән» (№ 5) хаҡындағы шифырҙарҙы; сәнғәттең халыҡ тормошонда тотҡан урыны һәм уның бурыстарына арналған «Аяҡтарым юлда, күңелем йырҙа», «Сәсемдә сал — йылдар туҙаны», «Дуҫыма», «Йырым менән бәхәс» кеүек шифырҙар шәлкеме (№ 7) һәм шәхес культының ауыр йөгөн үҙ елкәһендә татыған ҡарт коммунистың данлы ғүмер юлын, уның йәшәү мәғәнәһен асып биргән «Торналар ҡайтҡанда» (№ 11) тигән ғәжәп бай йөкмәткеле, тәрән уйланыуҙар менән тулы шифырҙарына ла бик ентекләп туҡталырға булыр ине. Шулай уҡ шағирҙың ижад лабораторияһына ла күҙ ташлап, ҡайһы бер фекерҙәр менән уртаҡлашҡы килһә лә, былай ҙа уның менән мауығып киткәнгә күрә, һүҙемде ҡыҫҡартып, уның тик теле хаҡында ғына бер-ике һүҙ әйтеп китмәксе булам.

Сөнки беҙҙең поэзия хәҙер ниндәйҙер һүҙҙәр ҡытлығы, бер үк һүҙҙәрҙе тылҡып, уларҙы хәлһеҙләндереп бөтөп, һүҙ инфляцияһын кисергән бер мәлдә Мостай Кәримдең был тәңгәлдәге мичуринсылыҡ эше лә бик фәһем алырлыҡ.

Мәҫәлән, «йыһан» һүҙен генә алайыҡ. Ул һүҙ хәҙер беҙҙең һәр шиғырҙа тиерлек бар. Ләкин «Ләйсән» кеүек тәүге матурлығында беҙ уны Мостай Кәримдә күрҙек. Тик был һүҙ унда һаман да яңыса, тәүге күркәмлегендә яңғырай. «Һарай» тигән һүҙҙе лә беҙ хәҙер «ат һарайы» тигәндәге иң тар мәғәнәһендә ҡабул итәбеҙ. Ә Мостай Кәримдә ул тағы үҙенең киң мәғәнәһен — «Баҡсаһарай», «Каруанһарай» тигәндәге мәғәнәһен ала. Ниндәйҙер әкиәт донъяһында ғына була торған серле бер тылсым көсө терелтә был һүҙҙәрҙе. Ҡайһы саҡта шағир миңә бер сихырсы булып күренә башлай хатта. Тик был сихыр томанландырмай, күңелде баҫмай, ә тик «Дауыл ҡарҙарҙы өйөрә, томалап күкте ҡаплай, йә ул йыртҡыстай үкерә, йә бала төҫлө илай» тигәндәге һымаҡ, мең-мең ҡабат ишеткән, ләкин һәр сак яңы булып тойолған әүрәткес бер һүҙ моңо менән арбап тора. Был моң күңелде яҡты нур менән тултырып, ябай ғына нәмәләрҙе лә мәғәнәле итә, йәнһеҙ нәмәләргә лә йән өрә башлай.

Мостай Кәримдең был үҙенсәлеген тәржемәлә биреү, хатта татар телендә биреү ҙә мөмкин түгел һымаҡ. Һүҙҙең бөтә бәҫе, төҫө, еҫе юғала. Русса иң яҡшы тәржемәләрҙе уҡығанда ла, иләктә тороп ҡалған он эреһен генә күреп, күңел ризалашмай быға. Тәржемәлә бөтә һүҙ моңо, образдар ярашлығы, фекерләү үҙенсәлеге юғалып, яланғас ағас һымаҡ ҡоро фекер — логика ғына тороп ҡала ла, тойғо ағышы бик һайыға. Быны мин бигерәк тә уның Елена Николаевская тәржемә иткән «Сер»ен уҡығас, асыҡ тойҙом. «Сер»ҙең бер ниндәй ҙә серлелеге тороп ҡалмаған. Ә был сер ниҙә һуң? Был сер, минеңсә, һәр телдең бөйөк серелер ул./Һәр телдең бөтмәҫ-төкәнмәҫ аҫыл хазинаһы бар. Был хазинаға ҙур оҫтаның ҡулы тейеү менән ул, тылсымлы бер шишмә шикелле, йәнләнә, терелә, моңлана башлай. Был тылсым шишмәһе һәр халыҡҡа үҙ һыуһынын ҡандырыу өсөн бирелгәндер ҙә инде. Шағир үҙ теленең бына ошо ҡул теймәгән тәүге күркәмлеге, йондоҙ һымаҡ баҙрап, йылҡылдап торған һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнәүи нескәлеге, теүәллеге, буяуҙары менән эш итә. Һәр һүҙ шуға күрә лә икенсе һүҙҙе терелтеп, уның урынын, күркен әҙерләп тора. Үҙ халҡыңдың күңел күҙе менән күреп, уның тел төбө менән һөйләүҙә — халыҡтың психик склады, күңел төҙөлөшө тип аталған нәмәлер был сер.

Ләкин Мостай Кәрим һүҙгә бик наҡколаҡ, үтә тәмсел булһа ла, ул һүҙҙәргә әүрәп китмәй, һүҙ уға үҙмаҡсат түгел; һүҙ уға бик мәргән тоҫкап сәпкә тейҙерә торған уҡ ҡына; йәғни шағир һүҙҙәр ҡоло түгел, уның хужаһы.

Һәр шағир, әлбиттә, һүзгә үҙенсә йән өрә. Донъяны үҙенсә аса. Һәр яҡшы шағирҙың үҙ тауышы бар, һәм шағирҙарҙың шулай төрлө булғаны яҡшы ла инде поэзиябыҙ өсөн.

4. Шағирҙарҙың төрлө һәм яҡшы булғаны яҡшы

Әгәр ҙә бөгөнгө поэзиябыҙҙы уның бынан ун йыл ғына элек булған хәле менән сағыштырып ҡараһаҡ, ғәжәп бер оло һикереш күрер инек. Үҙҙәренең сағыу үҙенсәлеге менән бер-береһенән нык айырылып торған Р. Ниғмәти, М. Кәрим, Н. Нәжми һәм Х. Ғиләжев ижадын иҫкә алмағанда, оло быуын, урта быуын һәм йәш быуын шағирҙарыбыҙ ҙа бер-береһенән айырып алғыһыҙ оҡшаш, ниндәйҙер бер төрлө инеләр. Тормошта һәр береһенең үҙ ҡылыҡ-холҡо, үҙ тәжрибәһе булған был кешеләр поэзияла ни өсөн һуң шулай бер төрлө инеләр?

Әлбиттә, бер төрлө яҙмыш, бер төрлө һуғыш юлдары ла бында үҙ мөһөрөн баҫмай ҡалмағандыр. Һуғыш кешеләрҙән бик күп нәмәне тартып алды.

Ләкин бында иң төп сәбәп кешеләрҙең зиһен һәм тойғоларын бер ҡорос ҡоршау менән ҡоршап ҡуйған шәхес культында икәнлеген йәшермәйек. Уның һәләкәтле йоғонтоһо яңы аяҡҡа баҫҡан йәш милли әҙәбиәттәр өсөн айырыуса ҙур булды. Был хәл беҙҙең ҙур тормош мәктәбен үтеп, тормоштоң нәҡ үҙенән күтәрелеп сыҡҡан тәүге әҙәби көстәребеҙҙе юҡ итеп кенә ҡалманы, уларҙан һуңғы быуындарҙың ижади үҫешенә лә үкенеп бөткөһөҙ зыяндар килтерҙе. Күпме ижади ғүмер бер шәхестең иҫәнлегенә мәғәнәһеҙ ода йырлау менән әрәм ителде!.. Шәхес культы фашланғас та, оло һәм урта быуынға был тарихи фажиғәнең бөтә асылын күреп, уны үҙ күңеленән үткәреп ебәрәү еңелдән булманы. Үҙеңдең ғүмер юлыңдан күп нәмәне һыҙып ташлау аңһатмы ни! Кеше бит хатта оҙон юлда бергә килгән таяғынан да ауыр айырыла.

Шуның өсөн ғәҙәтләнгән ҡараш-фекерҙәрҙән арынып, яңы шарттарҙа баш-күҙ алып китеү, үҙеңдең ижад мөмкинлектәреңде барлап, яңы заман талаптарынан сығып яңы йыр йырлау үҙе бер батырлыҡ булғандыр ул. Был сая бер тәүәккәллек менән ғүмер юлыңды яңынан башлау менән бер ҡатар ижади батырлыҡтыр. С. Кулибай, Баязит Бикбай, Ғәйнан Әмири, Хәниф Кәрим, Ҡадир Даян, М. Сөндөклө кеүек урта быуын шағирҙарының һуңғы йылдарҙағы ижады тураһында уйлағанда, был хәлде иҫкә алмай булмайҙыр. Бигерәк тә Сәләх Кулибайҙың «Ғүмер юлын» байҡап сыҡҡас, мин ошо хаҡта уйландым. Был бәләкәй генә китапты мин ике ҡабат уҡып сыҡтым. Тәүҙә, ошо хәлде иҫкә алмай уҡығанғамылыр, әллә ни артыҡ иҫ китмәне. Ләкин поэзиябыҙҙың башҡа үрнәктәре менән та-

нышып сыҡҡас, мин был «Фүмер юлы»на тағы әйләнеп ҡайттым. Һәм Сәләх Кулибай миңә бөтөнләй икенсе яғы менән асылды. Дөрөҫөрәге, мин үҙем өсөн яңы бер шағирҙы астым. Ә бит ул шағир элек тә булғандыр, нишләп әле мин уны быраса, көн һайын күреп тә, күрмәй йөрөгәнмен?

«Әкиәт түгел» тигән тәүге шиғырға күҙ һалғайным, унда яңы ғына яҙған үҙ юлдарымды таптым һәм әллә нисек уңайһыҙ булып китте. Сөнки Сәләх Кулибай уны 1961 йылда уҡ яҙған икән:

Йәл түгел, тип, гүйә, күккә элгән
Һапһыҙ бер урағын игенсе,
Ниңә үҙ сүкешен был ураҡҡа
Сатраш һалмаған һуң тимерсе?..

Был ғәжәп шиғри һәм заманса образды мин, үҙем дә һиҙмәй, үҙемдеке итеп алғанмын. Тимәк, шағир үҙе лә һиҙҙермәй генә үҙенең мәғәнәле баҙыҡ образдары менән йәштәргә йоғонто яһай. Сөнки үҙ сиратында ул да йәштәрҙән йәштәрсә күрергә өйрәнәлер, күрәһең.

Мин Сәләх Кулибайҙың был «Фүмер юлын» тауыш-тыныһыҙ, ләкин тәрән бер йылға итеп күрәм. Заманында Юлиан Тувим был йылғаның шаулап сыҡҡан еренә тиккә генә күҙ һалмағандыр. Ләкин беҙ, йәштәр, нишләптер, тәүҙә шул йылғанан эсеп, шиғри һыуһыныбыҙ ҡанғанды онотоп китәбеҙ. Ә бит бер мәл

Аяҙ себер төнө ине.
Ер-һыу сатнай ине һыуыҡтан...

Шул саҡ шағир һинең бала сағыңды йылытып, «Алтау һәйкәлен» ҡойоп киткәйне күңелгә. Кулибай бала саҡта таныш тәбиғәт төҫлө, эсер һыуың, һулар һауаң һымаҡ ҡабул ителгән. Ошо ергә олоғайып ҡайтып бер баҡҡас, әллә күпме яҡынлыҡ, туғанлыҡ, баҫалҡы бер шиғриәт күрәһең.

Бәлки, был артыҡ сағыу ҙа, күҙҙең яуын алырлыҡ артыҡ биҙәкле лә түгелдер, хатта бер аҙ тынысыраҡтыр ҙа. Ләкин күпте күргән, күпте кисергән был «Фүмер юлын»да өлгөргән оҫтаның ышаныслы ҡулын, үткер күҙле лирик-рәссамды, бик тәбиғи интонациялы, үҙенсә йылмайып һөйләй, ә ҡайһы саҡта әсе генә итеп көлә торған тапҡыр һүҙле юмористы күрәһең.

Йыйынтыҡта «Дим ярында» тигән бер шиғыр бар. Унда шағирҙың үҙ ижад позицияһы бик асыҡ әйтеп бирелгән. Бында донъяға ике төрлө ҡараш, ике төрлө мөнәсәбәт. Берәү бөтә донъяһын онотоп, кәкре ҡайындың ороһон төшөрөү менән мәшғүл, ә икенсеһенә ошо кәкре ҡайын ышыҡлап торған донъя үҙенең бөтә тулылығы, күркәмлеге, кешелеклелеге менән

ҡәҙерле. Был бик ғибрәтле картина. Шағир тормоштоң кәкреһенән генә илһам алып, уның зәғиф күренештәрендә генә соҡсонғандарҙан көлөп, тормоштоң оло тантанаһын раҫлай. Шуның өсөн шағирҙың ҙур фажиғәне һүрәтләгән «Ышанмайым» тигән шиғырындағы иң шәхси тойғолары ла беҙҙең уртаҡ тойғобоҙ булып ҡабул ителә.

Минең өсөн шағирҙың тағы бер ҡиммәт яғы уның телендә. Кулибайҙың теле бай, тигән һүҙҙе әйтке килә. Ул әҙер фразалар менән кеше елкәһендә йәшәмәй. Тапҡаны — аҙмы-күпме хәләл көс менән табылған.

Унан һуң Кулибай тәбиғәт телен дә ғәжәп яҡшы белә. Уның «Урман иртәһен»дә мин шундай күренеште күреп һоҡландым:

Мөгөҙөнә һалып йәш балаһын,
Болан килде шишмә ярына,
Һис хәүефһеҙ кисеп, һыу эсте лә
Үҙ яйына китте яңынан.
Көмөш семәрҙәрен йылҡылдатып,
Таш өҫтөндә төлкө уйнаны.
Күҙҙе асып йомған бер арала
Ҡарттың ҡоралайы, ҡуяны
Һикереп үтте, ахыры, уянып...

«Европа уртаһынан репортаж» тип аталған шиғырҙар шырлығынан, «Балҡы, ҡояшым» тигән ялтырауыҡ һүҙҙәр йыйынтығынан һәм һәр бите «Йөрәк», «Күңел», «Йыр», «Моң» һүҙҙәре менән сыбарланған «Һөйәм һине» тигән китаптан һуң, шиғри һүҙҙең ни тиклем ҡәҙере китеүен, ҡот осҡос бер инфляцияға тарыуын күреп, арып-йонсоп, ниндәйҙер бер таланған кеше һымаҡ булып ҡалғанда, шағирҙың хатта бына ошо үҙемлек һәм йәнлектәр донъяһы ғына ла тарҡалған зиһенде йыйнап, болоҡһоған күңелгә йән рәхәте биргәндәй була.

Тәнҡит «Ләкин»һеҙ булмай, тиҙәр. Әлбиттә, шағирҙың яңынан ҡайтҡан йәшлегендә етешһеҙлектәрҙе лә күрергә, элекке инерциянан зарланырға, ҡайһы бер тәржемәләре менән дә килешмәҫкә булыр ине, ләкин ижади «Ғүмер юлын» былар билдәләмәй. Тик был юлдың киңерәк, халыҡ тормошоноң бөгөнгө ҡайнап торған урта тәңгәленән ярып үтеүен, заман билдәләренә байыраҡ булыуын һәм, әлбиттә, тынғыһыҙыраҡ булыуын теләйһе килә. Сөнки быға шағирҙың көс-дарманы әле етерлек тойола.

Ошондай уҡ йәшәреү һыҙаттарын, уй һәм тойғолар яңырыуын, үткән ғүмер юлын һәм асылмай ҡалған ғүмер хазиналарын яңы күҙ менән барлап сығыу ынтылышын мин уның Б. Бикбай һәм Ғ. Әмири, М. Сөндөклө ҡорҙаштарында ла то-

ям. Һәр шағир тик үзенә генә хас алымы, үҙ тауышы менән уны үҙенсә хәл итергә тырыша. Ләкин элекке инерция бик көслө әле.

Утыҙынсы йылдарҙа уҡ поэзиябыҙҙа үҙенең «Ҡыҙ» поэмаһы һәм Ильич һәйкәле хаҡындағы шиғыры менән балҡып ҡалған Хәниф Кәримде беҙ, мәҫәлән, байтаҡ йылдар буйы уның үҙенә генә хас төҫө, үҙенә генә хас һүҙе менән күрә алмайынса килдек. Байтаҡ поэма һәм шиғырҙар яҙып, әҙәбиәттә актив эшләп килһә лә, үҙе күҙ-ҡаш араһында була тороп, шағирҙың ысын «мине» ҡайҙалыр алыҫта, йөрәк ярып сығыр йыры ҡайҙалыр бик төпкә күмелгән ине. Һәр саҡ урыны түрҙә булып, тәнҡит тарафынан да ул ситкә ҡағылманы буғай! Әхнәф Харис ағай уның шиғырҙарын һәр докладында һәр саҡ дөрөҫ фекерле, «ҡапаҡ» тип баһалап килде, ә күңелгә ниҙер етмәй, юҡ, етмәй ине. Ильич һәйкәле янынан үткән саҡта, бала саҡтан хәтерҙә ҡалған таныш юлдарҙы ҡабатлап, һәр саҡ шағирҙың үҙенән дә:

Иптәш скульптор, тартынмайса
Йөрәк серҙәреңде әйт әле,—

тип һорайһы килә торғайны... Күрәһең, башҡа һәйкәлдәр уны ла оҙаҡ йылдар «йөрәк серен» әйтмәй, баҫып ҡалырға мәжбүр иткәндер?..

...Һәм бына, ниһәйәт, тоноҡ ҡына имәндәр шаулаған тауыш ишетелде. Ҡолаҡты һағайтыбыраҡ тыңлай башлағас, күптән күнегелгән ғәҙәти «Иртәнге уйҙар»ҙы ситкә таратып, Сәләм заманындағы «Йәшлекте хәтерләп» йырлаған ысын Кәримдең — көтөүсе һәм һалдат Кәримдең сәңгел һәм көр тауышы ҡолаҡҡа салынғандай булды. Йыр әллә яңынан «Шулай башланамы?» тиһең үҙ-үҙеңә. Был таныш тауышты «беләһең дә, белмәйһең»дә кеүек. Ул да, ул түгел дә кеүек «һуҡмаҡта». Тағы әҙерәк «Уйна әле», уйна, тиһең. «Тик шул саҡта ғына»... имән япрағындай ҡалын ҡаштар аҫтынан «һай, ҡайындар ҙа ҡайындар» тип йылмайған моңһоуыраҡ, ләкин йәшлек дәрте һүнмәгән күҙҙәрҙе күрәһең...

Бер ҡараһаң, дуҫтар, сәйер кеүек,—
Шағирҙың да яҙға тиң эше:
Гүйә, ишетәмен бөрөләрҙең
Леп-леп иткән йөрәк тибешен.

Һаран, ләкин оҙаҡ көтөлгән яҙ йылыһы һөйөндөрә башлай һине. Юҡ, шағир күңелендә «көн һаман аяҙ — һаман да яҙ, шағир күңелендә ҡыш булмай ҙа, ҡар яумай» икән!.. «Онотҡандар мине туғандарым» тиһә лә, «Алйылғалы ҡырҙар яғына, Гөлйылғалы ҡырҙар яғына» юлдар барын ул онотмаған икән әле. «Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла» тип ҡыҙҙарға

әйтер йор һүҙҙәре лә бөтмәгән икән уның. Әлбиттә, үҙ-үҙен ҡабатлауҙар ҙа, дөйөм хәҡиҡәттәр ҙә юҡ түгел. Шулай ҙа «Шифри» имәндәр шаулағанда, шағирҙың имәндәй ир уртаһы булып етеүен, имән һымаҡ баҙыҡ олпатлығы, имәндәй ныҡ шифри техникаһы тураһында уйлайһың. Фөмүмән, Кәримдәр һүҙҙе тоя, шифырҙы ҡоя белә. Ритм унда һалдат аҙымы һымаҡ ныҡ, теүәл һәм шифырҙың йөкмәткеһенә ҡарап төрлө-төрлө. Был тәңгәлдә өлкән шағирыбыҙ Сәйфи Ҡудаш үҙенең Ғәлиә мәҙрәсәһенән үк Мәжит ағай һымаҡ аҡһап килгән «вәзенен» төҙәттереп ала алыр ине унан. Ә рифмаһы инде уның көтөүсе сыбыртҡыһы һымаҡ һыҙырып ебәрә!.. Был сыбыртҡының осо ғына булһа ла «Өйрәнде нисек өрөргә көсөк?» тип ғүмерендә бер теүәл рифма тапҡан шағирға (шаяртып әйтәм) эләгеп ҡалһа, кинәнесенән ул һикереп китер ине кеүек...

Һүҙ ыңғайында уның тураһында ла әйтеп китәйек. Юҡһа, үпкәләүе бар Йософ Гәрәй ағайҙың. «Беҙҙең хәтер ҡалһа ҡалһын, һеҙҙең хәтер ҡалмаһын».

Йософ Гәрәй үҙе башҡаларға ғәжәп талапсан, ғәжәп ҡыйыу һүҙле, абсолют тәртип яратҡан кеше. Шәреҡтең дә, мәғриптең дә бар классиктарын һыу кеүек эскән эрудит ул, тәржемәсе лә, тәнҡитсе лә, публицист та, телсе лә. Тел тураһында һүҙ сыҡһа, уның теле түҙеп торғанын мин белмәйем. «Шифыр кемгә кәрәк?» тип поэзиябыҙҙың киләсәге өсөн дә, шәкәр сөгөлдөрөнөң уңышы өсөн дә ул берҙәй борсола. Йәштәргә лә ул ғәжәп иғтибарлы. Уның теләһә ниндәй яңы шифырҙы уҡырға иренгәнен, уға вайымһыҙ, ғәмһеҙ ҡарағанын күргәнем булмаҫ. Фөмүмән поэзия — уның бөтә булмышы, шатлығы, хәсрәте.

Тик шуныһы — шул Йософ Гәрәй ағайымдың ғәжәп бер сәйер яғы бар. Уның башҡаларға булған талапсанлығы бер ҙә үҙенә тура килмәй. Ул әҙерәк үҙе өсөн дә йәшәһен ине.

Бына уның «Ағиҙел»дәге «Дүшәнбе» циклын уҡый башлайһың да, йәкшәмбегә барып сығаһың. «Күренеш» тигән шифырҙан Дүшәнбене күреү бик ҡыйын. Өҫтәүенә тел дә насар тәржемә теле кеүек:

Мин һоҡланып торам: урам аша
Бер-беренә чинар үрелгән;

Быныһы, ярай, аңлашыла: һоҡланып тораһың икән ти. Ләкин бына:

Ағас аҫтарынан машиналар
Йөҙөп үтә йәшел туннелдән,—

тигәнде ҡалай аңларға? Бәлки, «йәшел туннелдән үткәндәй» тип әйтергә теләйҙер автор. Теләйһең икән, шулай тиген, ниңә «тел көрмәлтеп» тороргә?

Бында индустрия тауға менә,
Киловаттар төшә үҙәнгә.
Мөһабәт һуң бында ҡарлы тауҙар,
Әүерелгән ҡойған әҫәргә.

«Үҙәк китапхана» шиғырында ла «бронза, гипс» «әүерелгән ҡойған әҫәргә». «Бер ҡарт тажикса уҡый Лев Толстойҙы, бер ҡыҙ русса уҡый Йәлилде...» Ләкин нисек кенә уҡыһалар ҙа шиғырҙың үҙәк фекере юҡ. Әҫәр менән әҫәрҙе, яҙыусы менән яҙыусыны сағыштырыуҙан ғына йәки «Элек, хәҙер, киләсәк» тигән шиғырҙағы һымаҡ «төрлө эштәрҙең алға барышын» хәбәр итеүҙән, фактты тимгетеп ҡуйыуҙан ғына шиғри әҫәр тыумайҙыр. Автор «Һоҡланып торам», «Маҡтар инем, телем көрмәлде», «Мең йыл аша ҡайтҡан Фирҙәүсиҙәр коммунизм өсөн йәшәргә», «коммунизм өсөн фиҙакәр эш аҡ тау итеп өйә мамыҡты», «килгән шағир бынан йырһыҙ китмәй, сөнки илһам китмәй күңелдән» тиһә лә, Дүшәнбегә һоҡландыра алмай, йырһыҙ китә. Башҡа автор яҙған булһа, Йософ Гәрәй үҙе үк: «Кемгә кәрәк был шиғырҙар? Был бит инде поэзияла үтелгән этап» тиер ине.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: Йософ Гәрәй аҒай әйткәнде эшлә лә, ул эшләгәнде эшләмә. Шағирҙар оригиналь, төрлө-төрлө булһын, ләкин яҡшы булһын.

«АҒиҙел»дең шул уҡ һанында (№ 10) Тимер Арсландың Рәшит Ниғмәтигә арналған «Дуҫым иҫтәлеге» тигән оҙон шиғыры баҫылғайны. Әгәр Рәшит Ниғмәти үҙе иҫән булһа, был рифмалап яҙылған прозаны ғәфү итә алыр инеме икән? Моғайын, юҡ. Был АҒиҙел буйы иҫтәлектә, әлбиттә, ысын поэзия өлгөләре лә юҡ түгел. Ләкин, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, улар Р. Ниғмәтиҙең үҙ әҫәрҙәренән килтерелгән өҙөктәр генә шул. Ә тел тигән нәмә был Тимер аҒайҙа нишләп шулай шау аҒастан ғына тора икән? Бәлки, автор был иҫтәлеген проза менән яҙған булһа, байтаҡ отҡан булыр ине. Ни тиһәң дә, ул үҙе әйткәнсә, сирек быуат буйы шағир менән дуҫ булған кеше бит. Һәр хәлдә, халыҡ шағиры бындай «һәйкәлгә» мохтаж түгел.

Тимер Арслан «Һәнәк»тәге шиғырҙарынан, поэзия кисәһендәге сығышынан күренеүенсә лә үҙен сатира, юмор тәңгәлендә арыу уҡ иркен тоя. Тик үҙенең лирикаһына ул саҡ ҡына сатирик күҙе менән дә ҡараһын ине. Бит унда шиғри орлоҡ бар. Шулай уҡ сатирик көлөүен дә ул обыватель зауҡынан юғарыраҡ күтәрһен ине. Минеңсә, был дөйөм белем, әҙәби әҙерлек етешмәүҙән. Юҡҡа ул Әҙәбиәт институтын күпһенеп, ташлап ҡайтты. Әлбиттә, бер ниндәй институт та шағир тыуҙырмай. Ләкин бер ниндәй шағир ҙа үҙ һөнәренең бөтә серҙәрен белмәй тороп, яҡшы әҫәр тыуҙыра алмайҙыр.

Был тәңгәлдә Кәтибә Кинйәбулатованың ижады бик фәһем алырлыҡ. Ул Әҙәбиәт институтына тиклем дә талантлы шағирә ине. Ләкин институт уға бик күпте бирҙе, уның үҙ тауышын нығытырға, шиғри оҫталығын камиллаштырырға ярҙам итте. Уның «Һүнмәҫ мөхәббәт» китабы һәм «Ағиҙел»дә баҫылған «Минуттар» тигән шығырҙар шәлкеме шағирәнең күҙгә күренеп үҫеүен әйтеп тора. Донъяны бала күҙе менән күреп, балалар менән ололарса һөйләшә белеүе лә уның ҙур байлығы тиер инем мин.

Тик Кәтибә Кинйәбулатова үҙенең был байлығын, бөтә ижади мөмкинлектәрен асып һалырға ашыҡмай әле. Йәки үҙ тойғоһон ул ниндәйҙер ымлыҡтар, ишаралар менән генә белдереп, үтә йомоҡ образдарға биклəп бирə. Тормошҡа, кешеләр күңеленə киң ҡолас менəн осоп китерлек ҡыйыулыҡ етмəй. Бəлки, был тормош тəъҫирҙəренең етмəүенəн дə килəлер? Был хаҡта ла уйланырға ине. Талантҡа талап та кәрәк.

Ошо уҡ талапты икенсе бер үҙенсəлекле талант алдына — Ҡадир Даян таланты алдына ла ҡуйғы килə. Ҡадир Даян ымишаралар менəн һөйлəшмəй, ул ап-асыҡ шағир. Дөрөҫөн əйткəндə, мин үҙем уның был асыҡлығынан бик ҡəнəғəт тə түгел. Ләкин мин ҡəнəғəт булмауҙан Даян юҡ тигəн һүҙ түгел əле. Ҡайһы берəүҙəр уны юҡ тип тə уйлайҙар. Ләкин, нисек кенə булмаһын, Даян бар.

Бына уның «Таң алдынан» тигəн йыйынтығынан «Тыуған ер» шиғырын ғына алайыҡ. Тик бындағы һəр һүҙгə алдан əҙерлəнгəн фекер менəн ҡарамай, уларҙы нисек бар шулай ҡабул итергə, бөтə тулылығында, бөтə сафлығында ҡабул итергə тырышайыҡ:

Йəш ҡамышлы тыныс күлдə
Аҡҡоштар йөҙə.
Һандуғастар яр талында
Йөрəкте өҙə.
Күл өҫтəрен зəңгəрлəтеп,
Яҙғы таң ата.
Туғайҙарҙа, нурҙан ҡурҡып,
Аҡ томан ята.
Мин ғашиҡмын туғайҙарға,
Тыныс күлдəргə.
Мин ғашиҡмын ҡот йырына,
Йомшаҡ елдəргə.
Эй, тыуған ер, тыуған ер!
Матурлыҡҡа тулған ер!

Беренсе синыф балалары өсөн, тиер, ҡайһы берəү. Бəхəсləшмəйем. Ләкин күңелегеҙҙəн уны тағы бер ҡабат барлап,

шартлы рәүештә булһа ла яҙғы таң атыуы темаһына берәй көй көйләп ҡарағыҙ — һәр һүҙ үҙенсә терелер, һәр кем быға үҙенең бөтә күҙәтеү тәжрибәһен һалыр, иҫендә ҡалған иң мөһим деталдәрҙе төҫмөрләр һәм күңелгә һеңеп ҡалған иң тәрән бер тойғоно — ер тойғоһон, нәк бына тыуған ер тойғоһон киселерһегеҙ. Әгәр инде үҙегеҙҙә саҡ-саҡ ҡына көй сығарыу ҡүәһе лә булһа, ошо һүҙҙәр үҙҙәре үк саҡырып торған берәй моңдо тотоп алыр инегеҙ.

Был «досвиданья, друг мой, досвиданья» тигән кеүек яланғас ябайлыҡ. Шунда уның матурлығы ла. Ләкин бында саҡ-саҡ сикте уҙыңмы, примитивлыҡ та һағалап тора. «Таң алдынан» йыйынтығында «Ҡара бесәй» кеүек шиғырҙар ҙа аҙ түгел. Был «ҡара бесәй», ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шағир юлын һуңғы ваҡытта бик йыш ҡыйғылай. Быны бигерәк тә уның ҡыҫҡа шиғырҙарында күп күргә мөмкин. Афоризм булып яңғыраҙай тапҡыр шиғырҙар менән бергә ғәжәп таҡырҙары ла бар. Был дүрт юллыҡ ҡына шиғырҙарҙың ҡайһылары бик оҙон, уларҙың дүрт юлын да шағир рәхәтләнеп ҡыҫҡарта алыр ине.

Мәҫәлән:

Эсемлектән ҡаты иҫереүсе
Иртә менән айнып уяна.
Ә мөхәббәт менән иҫереүсе
Айный алмай йылдар буйына,—

тигән юлдарҙағы хәкиҡәтте бик яҡшы белгән бер һеҙ генә түгелдер, Даян ағай?

Йәнә «һөймәгән эш ауыр була», «Еңел килгән мал ҡәҙерһеҙ, ләззәте лә аҙ була», «Ярһыу ике йылға ҡушылғанда, ярҙар тулы, ағым көслө була, ике ғашиҡ йөрәк тиң ярһыһа, ошо тәрән йылға төҫлө була» тигән хәкиҡәттәр булмаған булһа, ни була?

«Ике алдар» кеүек ҡойоп ҡуйған ысын сәнғәт әҫәре тыуҙырған һәм халыҡтың йыр стихияһына эйә булған шағир бындай арзан өгөт-нисәхәттәрҙе яҙмай ҙа булдыра алыр ине.

Ләкин, Ҡадир Даян әйтмешләй, шуныһы «ҡыуаныслы: беҙҙә шиғыр-йыр хорында күп шағирҙар үҙ тауышлы һәр йырында».

5. Ә хорҙа ни етешмәй һуң?

Поэзиябыҙ күп тауышлы хор, тинек. Ә был хор бөгөнгө уҡыусының зауығын бөтә яҡтан да ҡәнәғәтләндерәме һуң?

Ентекләберәк тыңлаһаң, был хорҙа ниҙер етешмәй бит. Ә был етешмәүҙең сәбәптәре тураһында уйлап ҡараһаң, хатта бик борсолдора. Ни өсөн был хорҙың төп көсө булған Назар

Нәжми, Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Шәриф Бикҡол, Муса Ғәли кеүек шағирҙар һуңғы ваҡытта бик һирәк тауыш сығара йәки уҙған поэзия йылындағы кеүек бөтөнләй тиерлек тауышһыҙ ҙа тороп ҡала?

Әлбиттә, ижад эше бик ҡатмарлы процесс. Яңы ҙур әҫәрҙәр өҫтөндә эшләп, бер йыл ғына түгел, бер нисә йыл да өндәшмәй торорға мөмкин. Шулай ҙа шағирҙың һуңғы йыйынтығы «Ер һәм йыр»ҙы тағы бер ҡабат уҡып сыҡҡас, уның хаҡында Ким Әхмәтйәновтың мәҡәләһе менән дә танышҡас, мин, мәҫәлән, нисектер һағайырға мәжбүр булдым. Һүҙ юҡ: Назар Нәжми бөгөнгө поэзиябыҙҙың иң көслө лириктарының береһе. Башҡа жанрҙарҙа ла ул ҙур эш эшләне. Был бәхәсһеҙ мәсьәлә. Ләкин шағирҙың һуңғы йыйынтығында ерҙең, төрлө социаль ҡаршылыҡтар менән тулы ерҙең, тормоштоң әҙерәк булып, йырҙың үҙе поэзия предметына әйләнеп китеүелер, минеңсә, тәнҡитсегә борсолорлоҡ урын бар ине.

Поэзия ул бөтәһенән элек шиғри һүҙ менән тормошҡа, донъяға ҡарата үҙеңдең әүҙем позицияңды билдәләү, замандашыңды борсоған иң төп һорауҙарға яуап биреү, уның рухи тормошон төҙөшөү. Ләкин уҡыусы үҙен ғазаплаған, борсолдорған һорауҙарға был йыйынтыҡтан үҙе көткәнсә яуап таба алманы. Сөнки шағир күп осраҡта айырым шиғри образдар, табыштар менән генә сикләнеп, тормошҡа ниндәйҙер пассив мөнәсәбәттә тороп ҡала. Был һүрәнлек китаптың тәүге битендәге «Әсә теле» тигән шиғырҙан уҡ башлана. Әлбиттә, ул быға тиклем әйтелгән фекерҙәрҙе ҡабатламаҫҡа тырышкан. Ләкин был оригиналлек тә (тәбиғәттең бөтә моң-тауышын, биҙәген әсә теле тип атау) ҡәнәғәтләндермәй, был әсә теле тигән төшөнсәне бик тарайта, түбәнәйтә, минеңсә. Туған тел тураһында борсоулы фекерҙәр менән илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә Ғамзатовтар, Рыльскийҙар, Ухсайҙар, Туфандар күтәрелеп сыҡҡанда, Назар Нәжмиҙең был шиғыры нисектер уйынсыҡ ҡылыс күтәреп сыҡҡан һымаҡ булды. Бәлки, мин был шиғырҙың фәлсәфәүи айышына төшөнөп етмәгәнмендер, улай булһа, мине ғәфү итерһегеҙ. Шулай ҙа мин быны поэзияла тар һуҡмаҡ тип аңлайым. Был һуҡмаҡ донъяның киң «ҡапҡаларына» илтмәй, ә «Шәмшәдин күлдәре», «Мөхәббәт утрауҙары» менән генә сикләй, «Алмалар бешкән саҡта» тигән арзаныраҡ эротикаға ғына килтерә. «Любви все возрасты покорны» ти Пушкин, ләкин кеше ғүмеренең һәр дәүере өсөн үҙ мөхәббәте бар. Пушкиндың лицей эротикаһы менән А. Кернға арнаған шиғыры араһында ҙур айырма ята. Ғиффәтлек тигән нәмәне оноторға ярамайҙыр.

Һәр хәлдә, Назар Нәжмиҙең һәр саҡ оло хистәр шағиры, оло фекер, оло тормош шағиры булыуын күрге килә. Ә был

шауҡымдарҙы киң ҡоласлы поэзия юлындағы бер шиғри туҡталҡа, шиғри пауза итеп кенә танырға, ә шағирҙан «Ауыр», «Ике салғы», «Тәбиғәттә күпме аҡыллылыҡ», «Йылан арбаусы», «Һиндостандан ҡайтышлай», «Йыр тураһында баллада» кеүегерәк шиғырҙарҙы һәм «Ҡапҡалар» кеүегерәк поэмаларҙы көтөргә кәрәк. Ә ваҡыт көтмәй, «оса ваҡыт...», «Шул йылдарҙы эйәрләһен шағир намыҫы», ти шағир шағирға:

Һоҡланыр мәл түгел үҙ-үҙеңә,
Ашыҡтырып юлдар саҡыра.
Шөһрәт түгел, шиғриәтте наҙлап,
Йән аямай эшләр саҡ тора.

Ләкин тормош етмәй беҙгә. Мостай Кәрим үҙенең әле 1940 йылда һөйләгән докладында «Яҙыусы иптәштәрҙең күбеһендә бөгөнгөнө тойоу, уны тәрән кисерә алыу һәләтлеге етешмәй» тигәйне. Был һүҙҙе сирек быуат үткәс тә ҡабатларға мөмкин.

Ә бит тормошҡа биреү өсөн тормоштан ала белергә лә кәрәк. Әгәр ҙә үҙеңдең тормош тәжрибәң юҡ икән, йәки ул бик иҫкергән икән, тимәк, һинең раҫларлыҡ нәмәң дә, кире ҡағыр нәмәң дә, дуҫың да, дошманың да юҡ. Тимәк, тормошҡа әүҙем үҙ мөнәсәбәтең юҡ тигән һүҙ. Нисек инде юҡтан бар булһын? Һәр көн тултырып тормаған белем көн һайын кәмей бара, ти ҡытай мәкәле. Элекке запас, түл дә кәмей бара. Сөнки тормош көтөп тормай беҙҙе.

Шуның өсөн беҙҙә бик күптәрҙең үҙ материалы, үҙ сюжеты, фәлсәфәһе юҡ, булһа ла бик аморф, шәкелһеҙ, ҡалыпһыҙ хәлдә. Ниндәйҙер һүлпән беҙ, тормош ағымы беҙҙе утрау кеүек уратып үтә. Ә ағымға ҡаршы йөҙөү ҡеүәте беҙҙең поэзияла бик аҙ.

Бына «Ағиҙел»дең 2-се һанында иң өлкән шағирыбыҙ Сәйфи Ҡудаштың 18 шиғыры баҫылды. Туҡай, Ғафури, Бабичтарҙың замандашы булған, уларҙың ҙур мәктәбен үткән, оло тормош тәжрибәһе булған кешегә минең һүҙ әйтеп тороуым бик килешеп тә етмәйҙер, бәлки.

Ләкин Сәйфи Ҡудаштың юлы бар икән, беҙҙең әҙәбиәттең оло бер күренеше икән, ул оҙон ғүмер буйы алды-ялды белмәй ижад итә икән, был ижадты ситләтеп үтеү үҙе бер әҙәпһеҙлек булыр ине.

Был ижад етди һөйләшеүгә лайыҡ ижад. Мин тик ҡайһы бер үҙ фекеремде генә әйтеп китмәксемен.

Сәйфи Ҡудаш һуңғы йылдарҙа үҙенең ижади алма баҡсаһынан мул уңыш йыйнай. Һуңғы ун йыл эсендәге яҡшы һауа уның тырыш хеҙмәтенә бик ныҡ булышлыҡ итә. Сәйфи Ҡудаш бынан ун йыл элек булған шағир түгел инде. Дөйөм фекерҙән ул үҙ фекеренә, риториканан гражданлыҡҡа, тема-

тик сикләнгәнлектән ижади киңлеккә оло аҙымдар яһаны, ҡарт шағир рухы менән егеттәрсә йәшәрҙе. Мәҫәлән, «Мин түгелмен ярты кеше», «Һинең йөрәгеңдең келәһен», «Ул һорана», «Йәй», «Скрипка», «Арыш еҫе» ошондай ярты оригиналь шиғырҙарҙан.

Ләкин әлеге элекке инерция көсө, ашығыу уға ҙур тотҡарлыҡ итә. Өлгөрөп етмәгән алмаларын да табынға ҡуя.

Мәҫәлән, алмағасты терәтеп ҡуйған таяуҙан да шиғыр табырға тырыша. Ә шиғри таяу табылмаған.

Ҡайһы бер бөтөнләй осраҡлы шиғырҙар ҙа урын ала. Мәҫәлән, «Яҙмаһын» тигән шиғырҙы яҙмаҫҡа ла, яҙғанда ла баҫтырмай түҙергә булыр ине.

Шиғыр шулай:

Бер көндө урамда йөрөгәндә,
Осраны ла миңә бер бәндә,
Юл һорап барырға төрмәгә,
Ҡалдырҙы бик яйһыҙ бер хәлдә.
Әллә нишләп китте йөрәгем,
Үҙем кинәт **хәтерһеҙләндем.**
Тотлоҡтом, абындым, көрмәлдем,
Белмәнем адресын төрмәнең.
Һәм мораль:
Яҙмаһын донъяла кемгә лә
Өйрәтергә юлдар төрмәгә!

Был хәл ысын булғанда ла, кеше ышанмаҫ һүҙҙе һөйләмә, тиҙәр.

Ул берәй һантый булырға ла, Сәғит аҡай кеүек шутник булырға ла мөмкин бит әле.

Ниңә ҡойолоп төшөргә?

«Белмәнем адресын төрмәнең» тип әйтеү ҙә ҙур ҡаҙаныш түгелдер. Кем-кем, ә Сәйфи Ҡудаш, күпме дуҫтарын юғалтҡан кеше, һәр хәлдә, төрмә юлын ғына беләлер инде...

Был факт булырға ла, бик ныҡ тәьҫирләндерергә лә мөмкин. Ләкин факт әле үҙе генә мәғәнәһеҙ.

Бальзак факт тураһында «глуп как факт» тигән. Шуның өсөн уны фекерләп тә ҡарарға кәрәктер. Ниндәй генә ахмаҡ хәлдәр булмаҫҡа мөмкин, шағирға шуларҙың һәр береһенән шиғыр яһарға тимәгән.

«Пәрҙәһеҙ булһындар» ҙа — үтә шәхси шиғыр. Бер ниндәй ҙә шиғри яңылыҡ юҡ унда.

Сәйфи Ҡудаш үҙ-үҙен бик йыш ҡабатлай. Был бигерәк тә өгөт-нәсихәт шиғырҙарында күп. Унан һуң дөйөм хәкиҡәттәрҙе яңылыҡ итеп асыу ҙа үҙенең тапҡыр фекерҙәре булған шағирға иш түгел. Тел ҡытыршылығы, кәрәкһеҙ «һәм»дәр —

таяу (протез) һүҙәр ҡулланыу йәки һүҙәрҙе теүәл мәғәнәһендә ҡулланмау, бигерәк тә ритмды, ритмик быуындарҙы боҙоп, итек үлсәүенә генә ҡороу ҙа Сәйфи Ҡудаш шиғырҙарының күптәнге етешһеҙлеге.

Унан һуң Сәйфи Ҡудаш байтаҡ шиғырҙарында йөҙө-төҫө, социаль ерлеге асыҡ булмаған ниндәйҙер абстракт дуҫ-дошмандар тураһында фекер йөрөтә. Был дошман ниндәйҙер дәүерһеҙ, ерһеҙ, синыфһыҙ дошман. Шәхси дошмандар тураһында шулай күп яҙыу яраймы икән?

Ғөмүмән, Сәйфи Ҡудаш таланты талапҡа, яҡшы иптәштәрсә тәнҡиткә бик мохтаж. Өлкән шағирҙың өлкән оҫта булыуын да беҙ, йәштәр, бик теләр инек.

6. Яңы заман яңы йыр һорай

Әҙәбиәткә һәр саҡ кемдер етмәй. Ул көн һайын кемделер көтә. Уның бер ҡасан да таланттан туйғаны юҡ. Унда, булдыҡһыҙ һөнәрселәрҙән башҡа, бөтә таланттарға ла урын етерлек.

Был бик тәбиғи ҙә.

Сөнки бер ниндәй әҙәбиәт тә әле үҙенең бөйөк Пушкины, Туҡайы, Бабичы менән генә йәшәй алмаған. Һәр дәүергә үҙенең революционер Маяковскийы, Таҡташы, Сәләмдәре кәрәк булған.

Икһеҙ-сикһеҙ күк йөҙөн бер нисә йондоҙ ғына яҡтырта алмағандай, әҙәбиәтте лә бер нисә кеше генә тыуҙыра алмауы көн кеүек асыҡ. Улар эргәһенә йәки уларға алмашҡа әллә күпме таланттар кәрәк. Һәр ҡайһыһы үҙенең ижади ҡаҙанышы менән киләсәк быуынды ла әҙерләй.

Тормошсан, ҙур әҙәбиәттең үҫеүе башҡаса мөмкин дә түгел. Беҙгә, ысынлап та, яҡшы һәм төрлө-төрлө күп шағирҙар, әҙиптәр кәрәк.

Һуңғы осорҙа башҡорт әҙәбиәтенә яңынан-яңы йәш көстәр өҫтәлеүе, әҙәбиәтебеҙгә уларҙың яңы темалар, яңы образдар, яңы фекерҙәр алып килеүе, был хаҡта ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәрҙең йышая төшөүе лә бик ҡыуаныслы хәл.

Тимәк, әҙәбиәтебеҙ интенсив үҫеш дәүерен кисерә, ижади көстәрен туплай һәм илебеҙ тормошонда башланған иҫ киткес ҙур тарихи үҙгәрештәргә һиҙгер булырға, ҡанатлы заманыбыҙ ҡуйған ҡатмарлы бурыстарға, ҡаһарман халҡыбыҙҙың ай үҫәһен көн үҫкән ҡомһоҙ рухи талаптарына яуап бирергә, үҙенең дөрөҫ, үткер, сағыу һүҙен ваҡытында әйтеп барырға тырыша. Эҙләнеүсән, тынғыһыҙ һәм ҡыйыуыраҡ була бара әҙәбиәтебеҙ. Шулай булмай мөмкин дә түгел.

Был тәңгәлдә Ә. Атнабаев, Марат Кәримов, Рафаэль Сафиндарҙың быуыны байтаҡ эш эшләп өлгөрҙө тип әйтә алам. Мәңге йәшел әҙәбиәт ағасының иң йәш үҫентеләре, иң осҡо япраҡтары ваҡыт еленә һәр саҡ һиҙгерерәк, яуап биреүсәнерәк була.

Ошо һиҙгерлекте, ихласлыҡты, йәш дәртте мин үҙ ҡәләмдәштәрем Атнабаевта, Кәримовта, Сафинда нығыраҡ күрәм.

Донъя беҙҙең шиғырҙарҙа үҙенең барлыҡ буяуҙары менән йәшәһен, көлһөн, илаһын, үҙенең бөтә серҙәрен, мәғәнәһен кешегә асып бирергә тырышһын ине. Йөрәктә заман ҡысҡырһын.

Поэзия уйланырға ла, уйландырырға ла тейеш.

Киләсәк поэзияһы ул тәрән фекер, фәнни фекер поэзияһы. Синтез. Тойғо-фекер балаһы. Фекер ваҡытында әйтелһен ине. Таш төшкән ерендә ауыр. Һуңлап әйтелгән фекер ул бөйөк булһа ла рухи аҙыҡ була алмай.

Ижади ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, Р. Ғамзатовса ҡыйыулыҡ талап ителә.

Быныҡ өсөн, әлбиттә, ҙур тормош тәжрибәһе кәрәк. Юлтыйҙар кеүек тормошто төҙөшөргә кәрәк.

Шунан башҡа ваҡ тойғоларыңды асып һалыу —ул тик публично сисенеп ташлау ғына.

Уҡыусы өсөн, уның йөрәге өсөн көрәш. Аҫтыртын көрәш-поэзия.

Василий Федорович:

Сердца, не занятые нами,
Немедленно займет наш враг.
Он их займет не за красоты —
Займет, засядет, нас разя,
Серца — ведь это же высоты,
Которых отдавать нельзя,—

Поэзия һуғышҡанда ғына тере.

«Открой мои книги: там сказано все, что свершится». Блок шулай тигән.

10 февраль, 1964 йыл.

Шиғриәт — йәшлек иле

(Йәш яҙыусылар кәңәшмәһе алдынан)

1. Быуындар эстафетаһы

Ғүмер ҡалай тиҙ үтә!..

Ирекһеҙҙән ярым шаян, ярым моңһоу шундай бер йыр иҫкә төшә:

Йәш ғүмерҙе үтә тиҙәр,
Үткәнен күрһәң ине:
Үткән саҡта тотоп алып,
Кәрәген бирһәң ине!..

Ләкин бөтә бәлә лә шундай шул: йәшлектең үткәнен дә күреп булмай, үткән саҡта уны тотоп алып та, кәрәген дә биреп булмай.

Йәшлек һине үҙенең хыял ҡанаттары менән осороп йөрөткәндә, һин уның ҡәҙерен дә белмәйһең. Йәшлек ҡәҙере уның менән хушлашҡанда ғына беленә, йөрәкте өтөп ала.

Шуға күрә лә:

Йәшлек ваҡыт ике килмәй,
Белегеҙ ҡәҙерҙәрен,—

тип тиккә генә йырламағандарҙыр.

Ғөмүмән, иң ҙур шағир булған халҡыбыҙ берәй генә йырын булһа ла тиккә генә йырлай микән һуң?.. Тигән йоҫоҡҡа ғына йырланған йырҙарҙың ғүмере бик ҡыҫҡа. Улар халыҡ ижадында юҡ дәрәжәһендә. Сөнки халыҡ бөйөк шағир ғына түгел, бөйөк мөхәррир ҙә бит. Үҙенең күңеленә ятмағанын ул «йырҙың йыртығы юҡ» тип һыҙа ла ырғыта. Ә ысын йырҙарҙы ул быуаттар аша, төрлө батшалар, төрлө дәүләттәр, төрлө цензураларҙан ҡурсалап, үҙенең күңел дәфтәрендә һаҡлап килә.

Әйтәйек, бөгөн Бабичты яңынан үлтерһендәр икән, ти. Ләкин кем уны йөрәгенән йолҡоп ырғытһын!?

Поэзияның көсө лә шундалыр. Ысын шағир йәшлеге менән күпме генә хушлашмаһын, ул барыбер үҙенең рухы менән йәш булып ҡала. Бөйөк Туҡай әйткәнсә, «Шағир күңелендә көҙ булмай ҙа ҡыш булмай». Шағирҙың ялы ла юҡ, ул пенсияға ла сыҡмай. Сөнки шиғриәт үҙе үк йәшлек бит ул, эйе, ул — хыял, тойғо, фекер йәшлеге. Шиғриәт — йәшлек иле һәм уны асылда йәштәр йәшәтергә тейеш!

Ләкин рухың менән нисек кенә йәш булма, йәшлек менән хушлашыу тойғоһон кисермәгән шағир юҡтыр ул донъяла. Миңә, мәҫәлән, Есениндың бөтә поэзияһы йәшлек менән хушлашыу йыры булып тойола. Ә бит ҡанына мансып һуңғы шиғырын яҙғанда уға ни бары утыҙ йәш була! Пушкин егерме бер йәшендә үк:

Где прежний жар и слезы вдохновенья?..
Придите вновь, года моей весны!—

тип йәшлеген саҡыра.

Ғөмүмән, шағирҙарға был тойғо иртә килә. Был тойғо ғына түгел, бөтә тойғолар ҙа иртәрәк киләлер. (Әлбиттә, «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә» тиеүсе шағирҙар ҙа юҡ түгел...).

Шулай итеп, беҙҙең быуын да йәшлек менән хушлаша. Университетта, институттарҙа, ҡала һәм ауыл йәштәре менән осрашҡанда был тойғоно үтә үткер кисерәһең.

Был яңы быуын менән осрашыу күңелле лә, бер аҙ моңһоу ҙа.

Күңелле — сөнки үҙ йәшлегеңдең дауамын, уның бик күп матур яҡтарын, шул уҡ тынғыһыҙ рухты, шул уҡ оло хыялдар менән йәшәүҙе, шул ҙур эштәр эшләргә, яңылыҡҡа, романтикаға ынтылыуҙы, бөтә юлдарҙың башланғыс һуҡмаҡтарына баҫыу дәртен күреп ҡыуанаһың.

Бер аҙ моңһоу ҙа — сөнки был быуын ни яғы менәндер беҙҙән бер аҙ айырылып та тора. Ул үҙен иркенерәк тә, ҡыйыуыраҡ та тота. Фекерләүе лә яңысараҡ. Белемлерәк тә, культуралыраҡ та. Ҡыҙыҡһыныуҙары ла төрлө яҡлы. Уларҙың балалығы асылда ҡот осҡос үткән һуғыш ауырлыҡтары менән йәберһетелмәгән. Хатта ҡыҙҙар ҙа матурыраҡ кеүек. Был быуындың йәшлегенән көнләшеп тә ҡуяһың.

Шул уҡ ваҡытта был быуын ҡайһы бер яҡтары менән күңелдә ниндәйҙер болоҡһоу ҙа уята. Ниҙелер ул баһалап еткермәй, ҡайһы бер нәмәләргә еңелерәк, хатта ҡайһы бер бик изге нәмәләргә ҡул һелтәп ҡарай кеүек. Күңел күҙе менән күреүгә ҡарағанда, маңлай күҙе менән күреүҙе артығыраҡ күрә кеүек.

Был хәл һағайта төшә. Бәлки, уларҙың беҙҙән дә көнләшерлек яҡтары барҙыр. Беҙ ҙә үҙ быуыныбыҙ менән ғорурланырға хаҡлыбыҙҙыр. (Фәләмгә тәү башлап юл һалыусылар беҙҙең тоҡомдан бит...)

Эйе, әҙәбиәт юлы, ысынлап та, ауыр юл. «Был юлға кемдәр генә сыҡмаған да, кемдәр генә ятып ҡалмаған!» Ә тәнҡитселәр, нисек кенә тимә, һаман да әле әҙәби процестан артта ҡалалар. Бынан ун йыл элек йәш шағир тип иҫәпләнгән беҙҙең быуын шағирҙарынан Әнғәм Атнабаев, Рафаэль Сафин, Марат Кәримов күптән инде үҙ тауыштарын тапҡан, инде формалашып өлгөрөп еткән шағирҙар. Ләкин был быуындың поэзияға нимә алып килеүҙәре һәм ниндәй шарттарҙа килеүҙәре, уңыштары һәм етешһеҙлектәре хаҡында Мостай Кәримдең хаттарынан башҡа, уларҙың китаптарына сыҡҡан бер нисә рецензиянан башҡа бер ниндәй тәнҡитсе лә әле иркенләп фекер йөрөткәне юҡ.

Шул уҡ быуын вәкиле А. Игебаев та, Сәләм миҙалы тағыуға ҡарамаҫтан, етди тәнҡиткә һәм эшлекле кәңәшкә мохтаж. Ә уның китаптары сығып тора, йырҙары ла радионан иң күп йырланған йырҙарҙан. Бәлки, автор өсөн был рәхәттер ҙә, ләкин әҙәбиәт өсөн уларҙың һәр береһе берҙәй ҡиммәтле түгелдер.

Әҙәбиәт — һуғыш майҙаны, кешеләр йөрәге өсөн һуғыш майҙаны икән, бындай майҙанда нейтраль зона юҡ һәм булырға ла тейеш түгел. Шул уҡ быуынға яҡын торған Шакир Бикколов та үҙенсә көн күрә. Нәшриәттә эшләгән өсөн генә ул да өндәшмәү заговорында тороп ҡалырға тейеш түгелдер. Ә Карам Бакиров ҡайҙа икән? Һәләтһеҙ кеше түгел ине ул. Балалар өсөн матур ғына китабы ла сыҡҡайны бит. Оҙаҡ көттөргәндән һуң «Мин һинеке, тормош» тигән китабы менән Миәссәр Басыров үҙ тауышын раҫлаһа, «Бөркөт күтәрелер үргенәм» китабында ярайһы уҡ шиғри бейеклеккә өлгәште. Уның ҡорҙашы булған ғәжәп үҙенсәлекле Рәшит Әхтәров та шулай бер балҡып килеп сығыр әле. Ауылдан ебәргән һуңғы шиғырҙары ошо хаҡта изге хәбәр итә һымаҡ. Ә Зәйни Рафиҡов нишләй? Шулай уҡ ул беҙҙе алыҫ Венгр илендәге ҡәрҙәштәребеҙ менән бер иркенләп таныштырмаҫ микән ни? Йылдар, бәлки, айныҡ прозаға тарталыр уны? Әнүр Вахитов бит ана беҙҙең ҡырҙан ҡалай арыу прозаик та, ғалим да булып китте. Ә Нур Хәбиров йәшен кеүек бер балҡыны ла, күк күкрәүе алыҫҡа китеп тынғайны, тиһәк, «Ышанам» тигән китабы менән нәжәғәй һымаҡ балҡып ҡуйҙы. Уҡымай ҡалыу, күрәһең, беҙҙең заманда Кольцовтар тыуҙыра алмай. Шакир Ғәлин да шул арҡала ыҙа сигә бит. Был иптәштәр хаҡында ла ныҡлап уйланырға ине. Бына тигән ике таланттың юғалып ҡалыу ҡурҡынысы ла бар.

Талант тигәндән, талант бит ул тәбиғи һәләтлек кенә түгел, ә, Горький әйткәнсә, ныҡышмалы хеҙмәт тә һәм, моғайын, көслө ихтыярҙыр ҙа. Үҙ өҫтөндә ныҡышмалы эшләмәй тороп, уҡымай һәм тормош тәьҫирҙәре менән байымай тороп, көслө ихтыяры булмаған бик һәләтле кешеләр ҙә әҙәбиәттән ситтә тороп ҡалырға мөмкин. Китаптар сығарыу ғына ла әле был фажиғәнән сығыу тигән һүҙ түгел. Юҡ, донъяла китап сығарған кешеләр күп, ә ысын мәғәнәһендә шағир булып ҡалған кешеләр һирәк.

Шуның өсөн ихтыяр ҙа, эйе, бик, бик кәрәк нәмә! Шиғри эстафетаны ҡулға алғанһың икән, уны алға илтергә кәрәк. Сөнки талант ул һинең үҙ шәхси ҡаҙанышың ғына түгел, ә бөтә халыҡ байлығы, ил байлығы.

2. Һәр кемдең үҙ «Шәжәрә»һе булһын!

Көтмәгәндә-нитмәгәндә генә берәү ишек шаҡыны. Әле бер кем үтмәгән ерҙән үҙ һуҡмағын ярып, үҙ алдына ғына үҙенсә бер моң көйләп, тормоштоң асы-сөсөһөн күп татыған, кемдәр тарафынандыр байтаҡ ҡына рәнйетелгән, ләкин үҙенең ғәжәп саф күңелен, кешелек бәҫен һаҡлап ҡалған бер юлсы ишек шаҡыны. Был шаҡыуҙа һауалы талап та, әрһеҙ һөмһөҙлөк тә юҡ. Был шаҡыу кешегә ниндәйҙер сикһеҙ ышаныусан, ғәжәп

кешелекле, хатта кеселекле, үҙенең ҡуҙҙары баҙлап ятҡан күңел төбөнән сыҡҡан ихлас һүҙҙәренә ихлас яуап табырына бер ниндәй ҙә шик-шөбһәһе булмаған, тыйнаҡ өмөт менән килгән кешенең ишек шаҡыуы.

Һис бер икеләнеүһеҙ тороп ишек асаһың. Күңел күҙең алданмаған. Бөтөнләй көтмәһәң дә, күптән күңелең көткән, күптән күңелең эҙенеп бөткән бер теләктәшең, үҙ кешең, ҡорҙашың килеп инә. Юҡ, өйөңә түгел, туп-тура күңеленә, күңел түреңә килеп инә ул.

— Йыһат Солтанов икән дәһә! Нишләп былай күҙгә-башҡа күренмәй йөрөнөң. Һине бит, малай, беҙ күптән көткәйнек. Әйҙә рәхим ит. Беҙ бит һине күреп белмәһәк тә, тойоп белгән дуҫтарың. Һинең моңоң тураһында ла, «Кеше булыу»ың тураһында ла бер ултырып һөйләшке, кәңәш-төңәш итке килә. Йә, Ырымбур хәлдәрен аҡтарып һал әйҙә! Ил ирҙән, ир илдән туямы — бик хуш килдең, төклө аяҡтарың менән,— тип ҡаршылайһың уны.

Бынан бер нисә йыл элек мин Йыһат Солтановтың «Төнгө хәбәр» тигән ҡулъяҙма шиғырҙар йыйынтығы менән танышҡас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә бара, тип ҡыуанып, көндәлеккә ошо һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйғайным. Уның тәүге китабы сығыу менән был фекер көсәйә генә төштө. Мостай Кәрим әйтмешләй, әҙәбиәтебеҙгә яңы шиғыр китабы ғына түгел, ә яңы шағир килде, тиергә мөмкин.

Йыһаттың тормош юлы ла бик күптәр өсөн, айырыуса Нур Хәбиров менән Шакир Ғәлин өсөн, ғөмүмән, бөтәбеҙ өсөн дә бик фәһем алырлыҡ. Йыһат мәктәптә уҡып ни бары дүрт класс бөткән. Һуңынан аяҡтан яҙып, байтаҡ йылдар урынынан да ҡуҙғала алмай ятҡан. Тик үҙенең иҫ киткес ныҡышмалылығы, ихтыяр көсө менән әҙәбиәт өсөн аяҡҡа баҫып,— ҡайҙа тиһегеҙ?— Төньяҡ хәрби флотына киткән. Үҙ алдына уҡып, урта мәктәпте тамамлаған һәм бына хәҙерге көндә өс бала атаһы булып, эшләгән көйө Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, «АҒиҙел» журналында бүлек мөдире булып ултыра. Хикәйәләр ҙә, повестар ҙа яҙа. Ә иң мөһиме — ғәжәп оригиналь шағир ҙа. Шулай уҡ уның тел байлығы, фантазияһы, тәрән белемле булыуы, эш һөйөүсәнлеге, ихтыяр көсө мине хайран ҡалдыра. Йыһат универсаль талант эйәһе тиер инем мин. Бәлки, был үҙенсә бер ҡаһарманлыҡтыр ҙа әле. Был һүҙҙәрҙән уның һис тә башы әйләнеп китерлек йомшаҡлығы юҡ. Сөнки ул бик күп һынауҙарҙы үткән, үҙенең тамырҙары менән үҙ халҡының оло тарихына ерегеп үҫкән баҙыҡ нәҫел ағасы тамырҙары хаҡында йыр яҙған, үҙенең шиғри шәжәрәһен тапҡан кеше.

Тимәк, әҙәбиәткә килеү юлдары ла әҙәбиәттең үҙе кеүек төрлөсә һәм ҡыҙыҡ. Ысын талант үҙ быуынынан бер 15 йылға һуңлап килеп тә үҙ ҡорҙаштары араһында үҙ урынын табырға мөмкин икән.

Кәңәш итеп, Йыһатҡа шуны ла әйтке килә. Моңоң яҡтыраҡ булһын, ҡорҙаш. Үҙеңдең шәхси тормошоңда бик күп ауырлыҡтар кисерһәң дә, үҙ яҙмышыңа ил күҙе, заман зиһене, конкрет тормош солғанышы аша ла ҡара. Үҙенсәлекле тауышың көрөрәк, баҙығыраҡ, ҡыйыуыраҡ булһын. Күҙ күремең дала киңлектәрен айҡарлыҡ бөркөттөкө һымаҡ булһын. Үҙ моңоң менән генә әүрәмә, башҡаларҙың да йөрәк ҡағышын той. Ерһыуыңдың сағыу буяуҙарын, йорт-аймағыңдың йор һүҙҙәрен, беҙ ишетмәгән мәҡәл һәм әйтемдәрен, ҡарт-ҡороларҙың мәғәнәле тел төбөн, далалағы яңы тормош һыҙаттарын — бөтәһенбөтәһен дә танһыҡ өсөн генә түгел, танһыҡ ҡанһын, күңел ноҡланһын өсөн алып кил.

Тауҙан таш артмаҫ, тигәндәр боронғолар. Әҙәби Уралыбыҙ боронғо Башҡорт иленең бөтә аҫыл таштары, башҡорт әҙәби теле уның бөтә һөйләштәре менән байырға тейеш. Беҙҙең өлөшкә лә әҙәби телебеҙҙе үҫтереү, байытыу, уны иң ныҡ эшләнгән әҙәби телдәр рәтенә ҡуйыу бурысы төшкән. «Һин шағир булмаҫҡа ла мөмкин, ә гражданин булырға бурыслыһың, тигән рустың бөйөк шағиры Некрасов. Был тәңгәлдә беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ — бөйөк рус яҙыусыларының аҫыл үрнәге бар. Октябрь революцияһы биргән, быуаттар буйы хыялланып, көрәшеп, күп ҡорбандар биреп алған хоҡуғыбыҙ бар, ярты быуат йәшәгән Башҡорт совет дәүләтенең алтын китабы —Конституцияһы бар. Башҡорт әҙәби теле ул революцияның оло бер ҡаҙанышы, ленинсы милли политикаһының тантанаһы икән, беҙ, йәш әҙәбиәтселәр, уға изгеләрҙең изгеһе итеп ҡарарға тейешбеҙ. Тел — халыҡтың иң бөйөк байлығы. Һәр халыҡҡа ла үҙ теле изге, ҡәҙерле һәм матур. Киләсәктәге интернациональ культура өсөн телдәр кәртә була алмай, ә рухи хазина сығанағы ғына буласаҡ. Киләсәк быуындар 2269 йылда үҙҙәренә эсперанто телеме, башҡа телме кәрәклеген үҙҙәре хәл итерҙәр, улар беҙҙән байтаҡ аҡыллыраҡ булырҙар, теләһә Ер шарында, теләһә Айға, теләһә башҡа планетаға йыйылып, халыҡ-ара кәңәшмә үткәрерҙәр. Беҙ уларҙың эшенә ҡыҫылмайыҡ. Ерҙә беҙгә башҡа эштәр ҙә етерлек. Ерҙә иң ғәҙел, иң кешелекле, иң камил, иң бай йәмғиәт төҙөү, уның ғорур, матур, бөтә яҡтан азат кешеһен — коммунистик йәмғиәт кешеһен тәрбиәләү хаҡында уйлашайыҡ. Ә был хаҡта бөтә телдәрҙә лә уйларға мөмкин. Илебеҙ сиктәрендә үлем шәүләләре йөрөгәндә, дошмандар халыҡтар араһына ҡытай стеналарын күтәрергә тырышҡан заманда, Ер шарының имен-

леге хаҡында уйлайыҡ. Ул юҡҡа сыҡһа, бер тел дә кәрәк булмаҫ. Еребеҙҙе гөлдәй итеү хаҡында уйлайыҡ. Һәр телдә лә быны аңларҙар. Яуызлыҡ, ғәҙелһеҙлек, һуғыш теле генә булмаһын донъяла.

Ә донъя тыныс түгел. Уның төрлө мөйөшөндә кеше һуялар, ауылдарҙы яндыралар, ҡалаларҙы емертәләр, ер аҫтында әллә ниндәй шартлатҡыстар һынайҙар, ерҙең өҫтөндә лә — хатта ғәләм киңлегендә лә ерҙе юҡ иткес һуғышҡа әҙерләнәләр, хатта океан төптәрендә лә тыныс түгел. Бына был хаҡта шағирға уйланмай булмай, бөтә телдәргә тәржемә итерлек шифыр яҙаһы ине. Уолт Уитмен һымаҡ, киң ҡолас менән, ҡитғалар аша яңғырарлыҡ итеп. Беҙҙең йәш поэзияға шундай масштаблы фекерләү, киң ҡолас етмәй.

Әлбиттә, быға ынтылыш яһауҙар юҡ түгел. Беҙҙең поэзияла ла был процесс күптән бара.

Әйтәйек, Рәшит Ниғмәтиҙең:

Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда,—

тигән шифри образын нисек онотмаҡ кәрәк? Йәки Мостай Кәримдең «Европа — Азия» циклын һәм йыһан ағасын, заман атын! Назар Нәжмиҙең «Ҡапҡалар»ы ла ошо киңлеккә асылды.

Йәштәр ижадында ла бындай киңлеккә ынтылыуҙы беҙҙең быуындан Рафаэль Сафиндың «Икмәк тауышы»нда, йәшерәк быуындан — Рәшит Назаровтың «Таңды ҡаршылау» йыйынтығында бик асыҡ күргә була. Был киңлек бигерәк тә Рауил Бикбаевта, уның «Дала офоҡтары»нан алып «Ҡош юлы»на, «Автобиография»һына тиклемге ижадында, үҙенең заманса һәм шифри яҡтан ғәжәп талантлы сағылышын таба бара. Был киңлек инде бөгөнгө дөйөм шифриәтебеҙҙең төҫөн билдәләшә. Был киңлеккә ҡайһы бер үтә «новаторҙар»ҙа ынтылып ҡараны. Ләкин шаман ҡанаты менән шағир ҡанаты бер түгел шул. Шаман ана, Мәхмүт Эсамбаев бейеп күрһәткәнсә, күпме генә ҡыланып шашынмаһын, әллә ниндәй күктәргә ҡарап төкөрөнмәһен, барыбер хәле бөтөп, үҙен-үҙе өҙгөләп, ергә тәгәрәй. Ер гармонияһы булмағанды ер һөймәй.

Эҙләнеүһеҙ поэзия юҡ, әлбиттә. Үҫергә теләһәң, эҙләнергә, эҙләнгәс — табырға тейешһең. Ләкин алтынды ағас башынан эҙләмәйҙәр. Үҙ халҡыңдың культура традицияһына таянмаған эҙләнеү — ул барыбер, халыҡ әйтмешләй, иләк менән һыу ташыу йәки һәнәк менән һыуға яҙыу. Сара (средство) үҙмаҡсатҡа әйләнһә, ул инде сәнғәт түгел, ә формализм күренеше. Ә формализм әйтер һүҙе булмаған бушбоғаҙға ғына төҫ.

Форма, Назым Хикмәт әйтмешләй, ул ҡатын-ҡыҙ аяғындағы ҙтә күренмәле нәҙек ойоҡ кеүек тәбиғи, йөкмәткә менән ярашлы булырға тейеш.

Мин ҙәм теләһә ниндәй аҡыллы баш шиғырҙарынан аҡыллы йөрәк шиғырҙарын өҫтөн ҡуям. Мәҫәлән, Рәшит Назаровтың «Йөрәк» шиғырында күпме хис һәм аҡыл! Хатта уның ҡыйыу эксперимент яһап яҙған «Йәшен» шиғырында ла күпме хис, динамика, утлы йәшен бар:

Мөхәббәт —ул, әйтерһең дә, утлы йәшен,
Һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен,
Һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен;
Көйҙөрөр тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин, йәшен,
Ҡоя күрмә тик аҙаҡтан күҙең йәшен!
Мөхәббәт — ул, әйтерһең дә, утлы йәшен...

Был бит иң иҫке форма, ә яңы йөкмәткенән ул бөтөнләй яңыса яңғырай. Бер амонимик рифмаға ҡоролған иң иҫке вәзен менән яҙылған бөтөнләй яңы шиғыр. Теләһә ниндәй олпат антологияға индерергә була, ләкин уны ҡалай итеп тәржемә итмәк кәрәк? Мөмкин түгел!..

Тимәк, поэзия ла мөхәббәт кеүек бик иҫке нәмә, тик Гейне һәм Таҡташ әйткәнсә, һәр бер йөрәк уны яңырта. Тик ул Шамил Мәхмүтов эксперименттары менән генә яңыра алмай. Поэзия өсөн эксперименттар ғына етмәй, уның өсөн шағир булып тыуырға кәрәк һәм — иң мөһиме,— үҙеңдең шәжәрәңде табырға тейешһең!

3. Татлы йәшен түгеп, ҡайын илай...

Күренекле француз шағирәһе Марселина Деборд-Вальмор үҙе хаҡында: «Мин шундай белемһеҙ, минең белемем хатта һығылып-бөгөлөп, ни өсөн турайғанын да белмәй ултырған ағастарҙыҡынан бер ҙә артыҡ түгел»,— тигән.

Донъялағы шундай сәйерерәк кешеләр хаҡында яҙырға яратҡан Стефан Цвейгтың әйтеүе буйынса, Марселинаның шиғырҙарында рифмалар ҙа бик ярлы; теле лә әллә ни байҙан түгел, образ-сағыштырыуҙары ла ел тирбәткән сәскәләр, сәскәләргә ҡунған күбәләктәр, оя эҙләп осҡан ҡарлуғастар, «аяҙ көндә йәшен атыу» ише ҙтә ғәҙәти, иң тапалған сағыштырыуҙар тирәһенән алыҫ китә алмаған. Ә шиғыр формаһының бер төрлөләгө хаҡында әйтеп тә тораһы юк. Һүрәтләү саралары иҫ киткес ғәҙәти.

Ләкин уның күңеле илаһи бер музыка, моң, аһаң, иң нескә хис-кисерештәр менән тулы. Уға шундай бер көс бирелгән, ул

үҙенең шул көсө менән тотош бер моң-тойғолар донъяһын тыуҙыра. Иң айныҡ, иң ғәҙәти һүҙҙәр ҙә үтә күренмәле, утлы ритм менән тулы тойғоға әйләнә. Хатта иң ярлы рифмалар ҙа терелеп, йәнләнеп китәләр. Уның поэзияһы — тотош бер музыка, иң ихлас, күңелдең иң төбөнән урғып сыҡҡан моң. Ихласлыҡ — уның бөтә йөрәк серен, ҡатын-ҡыҙ үҙе генә белгән серҙәрҙе асып һала. Был шундай саф һәм ғиффәтле, тап Пушкин әйткән «яланғас ябайлыҡ». Замандаштарын ул үҙенең шундай поэзияһы менән һоҡландыра. Уның моңон ишетеп, Сент-Бев: «Ул шағирә түгел, ә үҙе бер шиғриәт», ти. Уны ҡотларға ахылдап-бохолдап ҡарт Бальзак үҙе килеп етә. Ә Виктор Гюго бала сағынан уҡ уға таң ҡала. Ләкин Марселина үҙен шағирә тип тә белмәй. Замандаштарына ул:

Чтоб вверить ветру слова, мысль свою,
Поэту строгая необходима школа.
А я, дикарка, просто так пою,
Мои учителя — леса и долы,—

тип кенә яуап ҡайтара.

Исеме һуңғы биш-алты йыл эсендә генә күренә башлаған йәш шағирә Әнисә Таһировано Марселина менән бер рәткә ҡуйырға йыйынмайым, әлбиттә, ләкин уның шиғырҙарын уҡығанда (бигерәк тә тыңлағанда), ни өсөндөр, мин бер саҡ ошо шағирәне иҫкә төшөрәм. Улар араһында ниндәйҙер бер эске уртаҡлыҡ бар һымаҡ.

Әнисә үҙе йырлаған ҡайындары, ҡарлуғастары, ҡоралайҙары һәм, әлбиттә, сәскәләре кеүек үк, тәбиғәт балаһы. Уның барлыҡ шиғырҙарында ла ошо тәбиғәт моңо, тәбиғәт наҙы, тәбиғәт һағышы. Был һағыш, наҙ, моң «яҡты сауҡалыҡтай» яҡты, ғиффәтле, иркә болан балаһының күҙҙәре һымаҡ саф. Ул үҙенең бөтә барлығы менән ошо стихияла йәшәй һәм уның ҡул теймәгән күркәмлеген йырлай.

Минеңсә, был иң оло тойғоларҙың береһе — ил тойғоһо ул. Илде һөйөү тойғоһо ошо тәбиғәтте тойоуҙан башланалыр ҙа. Кешенең бөтә эшмәкәрлеге, ижады ошо үҙен солғап алған тәбиғәтте үҙләштереүҙән, уны танып белеүҙән, уның ҡара көстәре менән көрәшеүҙән һәм, уларҙы еңеп сығып, хужа була белеүҙән башланған. Кешенең бөтә барлығы тәбиғәттән, һәм шуның менән генә ул тәбиғи ҙә.

Марселина кеүек, «А я, дикарка, просто так пою», тимәһә лә, Әнисә лә, «Минең уҡытыусыларым — урман һәм туғайҙар», тип әйтә алыр ине һымаҡ. Әлбиттә, уның уҡытыусылары бер улар ғына түгел. Әнисә әҙәбиәт менән яҡшы таныш, был танышлыҡтың ул кире яҡтарын да үҙ иңенә күтәргән.

Әлбиттә, уның бөтә поэзияһы тәбиғәт һәм мөхәббәт менән генә сикләнеп ҡалмай. Һуңғы ваҡытта халҡыбыҙҙың ҡаһарман рухлы ҡыҙы Һәҙиә апай Дәүләтшина иҫтәлегенә арнап яҙған «Халыҡ ҡыҙына», «Башҡортостаным», шулай уҡ әсә ғүмере хаҡындағы һәм башҡа яңы шиғырҙары шағирәнең тематикаһы үҫә, киңәйә барыуы хаҡында һөйләй.

Әлегә уның ижадында бөҙрә образдар, тапалған эпитеттар, йыр, моң, сәскә-гөлдәр, сәскәләрҙең таждары, күңел, йөрәк гөлдәре, ынйы-ысыҡтар, көмөш ысыҡтар, ай-йондоҙҙар, хыял-һағыш, яҙ-наҙ, гүзәл таңдар, «матур өндәр», «серле, татлы моңдар» ише тәтәй һүҙҙәр, «зәңгәр ауырыу» менән иҫереү күренештәре бик күп әле.

Мөмкин тиклем был әҙәби шауҡымдарҙан тиҙерәк айнып, теүәл, ябай һәм тос һүҙҙәр эҙләргә, үҙең менән генә әүрәүҙән тыйылып, башҡаларҙың күңеленә лә ентекләп ҡарарға; төрлөрәк яңы формалар эҙләргә; бигерәк тә үҙ-үҙеңде ҡабатлауҙан һаҡланырға; ҡыйыуыраҡ темалар күтәрергә һәм киңерәк юлға сығырға кәрәк. «Шағир үҙ күңеленең бағыусыһы түгел, ә донъя шаңдауы», — тигән бит М. Горький. Ер-әсәнең бөтә һөйөнөсө, бөтә көйөнөсө, донъяның бөтә фажиғәләре шағир йөрәге аша үтергә тейеш. Был — поэзияның асылы, йәне, тәме.

Әнисә Таһирова артынан һуңғы ваҡытта йәш поэзиябыҙға уның Таңһылыу Ҡарамышева, Гөлфиә Юнысова, Рәмзилә Хисаметдинова, Факиһа Нафиҡова, Зилә Күсәрбаева, Суфия Яҡупова, Роза Моратова, Фәлиә Кәримова, Әлмира Ғәйнетдинова, Фирҙәүес Ғәлиева, Миңзиә Шаһманова, Фәниә Абдуллина, Гөлнур Яҡупова кеүек ҡәләмдәштәренең ҙур өмөт уятып килеүҙәре бик шатлыҡлы күренеш! Уларҙың һәр береһенең үҙенсәлекле тауышы формалашып килә. Ләкин уларға иғтибар етмәй кеүек. Мәрхүм Жәлил ағай Кейекбаевтың васыятын үтәп, йәш шағирәләрҙең ижадына арналған бер йыйынтыҡ әҙерләп тә сығара алғанбыҙ юҡ. Ә уларҙың ҡайһы берҙәре айырым йыйынтыҡ авторҙары булырға ла бик хаҡлы. Ошо иғтибар етмәү арҡаһында, улар үҙ ҡаҙандарында ғына ҡайнап, ижади яҡтан пассивлаша башланылар булһа кәрәк, үтә интим лирика менән үҙ таланттарын сиклəп, бер урында тапанып тороусылар ҙа юҡ түгел. Бында, бәлки, уларҙың үҙ органы булған «Башҡортостан ҡыҙы»ның да ойоштороу ҡеүәһе етмәйҙер.

Ә иғтибар ҡыҙҙарға ғына түгел, егеттәргә лә етмәй, әлбиттә. Күптәр беҙҙә мәңгелек «һәм башҡалар» исемлегендә йөрөй. Был хаҡта мин бер ғибрәтле күренеште — Мәхмүт Уразаевтың әлегә баҫылып сыҡмаған тәүге шиғри йыйынтығының яҙмышын һөйләргә теләйем.

4. Бейеклектәр әйҙәй

(Мәхмүт Уразаевтың әлегә баҫылып сыҡмаған тәүге шиғри йыйынтығы хаҡында)

Була бит шундай кешеләр: берәүҙе һин күптән-күптән белгән кеүекһең, тик уның менән уртаға һалып һөйләшерлек әллә ни һүҙең дә юҡ һымаҡ. «Һаумы?» «Арыу ғына»... «Хәлдәр нисек?» «Бер көйө шунда...» «Эштәр барамы һуң?» «Барғандай ҙа»...— һүҙ шунан ары китмәй.

Шул рәүешле генә күрә-белә йөрөп, хатта ғүмер ҙә үтеп китеүе мөмкин. Ә кешене, уның кем икәнен, ни даулап, ниндәй донъя менән йәшәүен ысынлап белмәүең дә бар. Бындайҙар үҙҙәре лә бик күҙгә ташланып бармай, ғәжәп баҫалҡы була, тауыш-тынһыҙ ғына үҙенсә эшләп йөрөй бирә.

Шиғриәттә лә шулай. Берәүҙәрҙе, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, телдән дә төшөрмәйҙәр, ә берәүҙәр күнегеп бөтөлгән ҡәҙимге «һәм башҡалар» исемлегендә йөрөй бирә.

Күберәк «һәм башҡалар» исемлегендә йөрөгән Мәхмүт Уразаевты мин бына шундайҙарҙың береһе тип уйлайым. Уның исеме матбуғатта күренгәненә байтаҡ ваҡыт инде. Ләкин, йәш яҙыусылар семинарындағы бер һөйләшеүҙән башҡа, уның ижады хаҡында етди бер һүҙ ҙә булғаны юҡ. Унда ла әле ул, шағир булып түгел, ә прозаик булып ҡатнашты.

Ә бит Мәхмүт Уразаев, шаулап-ярһып тормаһа ла, «Бейеклектәр әйҙәй» тигән йыйынтығынан күренеүенсә, ғәжәп үҙенсәлекле шағир. Уның үҙенә генә хас шиғри донъяһы бар, һәм ул үҙ донъяһының телен яҡшы белә. Бәлки, был донъяның офоҡтары әлегә күҙ күреме ерҙәр менән генә сикләнәлер, ләкин ул ошо күҙ күреме ерҙә лә шиғриәт таба белә һәм был ер тик шифыр теле менән генә аңлатып була торған әкиәт серлелеге, моң-һағыш, хыял менән тулы һәм бөтә ваҡлыҡтары ла мәғәнәгә эйә булған бер донъяға әйләнә. Һәм — был иң мөһиме — шағирҙы бейеклектәр әйҙәй. Улар ниндәйҙер һынһыҙ-ҡиәфәтһеҙ абстракт бейеклектәр түгел, ә үҙҙәренең тарихи тамырҙары менән халыҡтың реаль тормошона ереккән, уның оло киләсәген байҡап, ошо киләсәккә сәмле өмөттәр бағлап торған, көс-ҡеүәт менән тулы, ҡыйыу ынтылышлы бейеклектәр. Шуға ла шағир уларҙы күп быуаттар һуҙымында үҙ халҡының тарихи ҡаһарманлығын һынландырған тере һәйкәлдәр итеп күрә:

Уралым байҡа: буйҙан-буйға
Һәр аҡланы уның шау сәскә.
Әллә Урал үҙе ҡыйыулыҡҡа

Һәйкәл булып ҡалҡҡан тау-сәскә?
Һәр аҡланы уның шау сәскә!..

Әлбиттә, шиғриәт донъяһында шиғырға инмәй тороп ҡалған бер генә күренеш тә юҡтыр, моғайын. Бигерәк тә тәбиғәт күренештәре, халыҡ ижадынан башлап бөгөнгө көн шағирҙарына тиклем, үҙенең бөтә энциклопедик тулылығында барлап сағылған.

Имән иргә лә, илгә лә, халыҡҡа ла хаҡлы сағыштырылды. Беҙҙең быуын, икенсе бөтә донъя һуғышының ҡәһәрле йөгөн йөкмәп үҫкән быуын, имәндең хатта бөрөләрен — туйраларын да онотманы...

Мәхмүттең дә үҙ имәне бар. Тәү ҡарағанда ул башҡаларҙан бер яғы менән дә айырылып тормаған һымаҡ: үҫкән, шаулаған, ҡороған... Ауыр һуғыш йылдарында «тәғәм ризыҡ ҡалмаһа», уның алма-туйраларына мең Мәхмүт «йүгереп килеп етер» булған. Ләкин шағир:

Ил иңенә төшкән ауырлыҡты
Күтәрештең һин дә ирҙәрҙәй,—

тигән дөйөмләштереү менән генә сикләнһә, имән хаҡында быраса әйтелгән фекерҙәргә бер ниндәй ҙә шиғри яңылыҡ өҫтәй алмаҫ ине. Шиғриәттең бөтә сере лә шунда шул: һәр имәнде һәр шағир үҙенсә терелтә, уға үҙенсә йән өрә.

Шундай йылдарға ла сыҙағанды,
Ниңә былай, ниңә ҡороноң?
Ултыртайым әле бер йәш имән,
Йәш-төҫ ташламаһын урының.

Һәм шиғыр бөтөнләй яңыса яңғырап китә, сөнки шағир имәнгә яңыса, үҙенсә, бик кешесә ҡараған. Ул быуындар яҙмышы, аталар һәм балалар мөнәсәбәте, киләсәкте хәстәрләп үҫтереү хаҡындағы оло гуманистик фекерле шиғырға әйләнгән.

Бына ошо гуманистик фекер — донъяға, тәбиғәткә, кешеләргә кешесә ҡарау — Мәхмүт Уразаевтың «Бейеклектәр әйҙәй» йыйынтығының төп асылын билдәләй ҙә инде. Бик күптәргә хас булған шиғри эгоизм Мәхмүт өсөн ят нәмә. Тәбиғәттән алыу ғына етмәй, уға бирә лә белергә кәрәк, уға һоҡланып ҡына ҡалмай, уны һаҡлай ҙа белергә кәрәк бит. Тәбиғәтте кешегә яҡынайтыу, тәбиғәт күренештәрен кешеләштереп күреү ҙә бына шунан киләлер.

Мәҫәлән, «Ерем еҫе» тигән кескәй генә этюдта ла шағир тәбиғәттең уяныуын һүрәтләп, уны кешесә кешегә яҡын итә.

Икмәк бештеме ни! Танау ярғыс
Хуш еҫ алды ялан, төпкөлдө.

Ысынлап та, бөтә донъя, ялан-ҡыр әсәң бешергән икмәк еҫе, тыуған өй йылыһы менән тулған һымаҡ! Бәлки, ҡары яңы әрселгән ерҙән икмәк еҫе лә сыҡмайҙыр ҙа, шулай ҙа ышанаһың. Шифриәттең ышандырыу көсө лә шунда.

Шулай уҡ эске рифмаларға һәм тышҡы ике рифмаға ғына ҡоролған «Яҙғыса» тигән виртуоз шифырҙа ла бөтә нәмә йәнле — «яҙғыса», «яңыса» булып тойола.

Был шифырҙағы тел эстетикаһы — телдең тәмен тойоу, һүҙ ҡәҙерен белеү, хатта һүҙ уйнатыу ҙа «яҙғыса», «яңыса».

Бер ҡарағанда, «Салауат» шифырында әллә ни яңылыҡ та юҡ кеүек. Ләкин ул, боронғо халыҡ йыры һымаҡ, үҙенең кешесә ябайлығы, батырҙың иң аҫыл сифаттарын үҙ эсенә йыйған бай һаранлығы менән яңыса яңғырай. Хатта ябай ғына констатация ла динамикалы хәрәкәткә әйләнә.

Тимәк, тыуған тауҙарға булған мөхәббәтте ҡысҡырмай ғына ла әйтергә мөмкин икән.

Шулай уҡ һөйгән ҡыҙыңа булған мөхәббәтте лә Мәхмүтсә, пластика саралары менән, традицион һүҙ буяуҙары, биҙәктәр гармонияһы менән һүрәтләп биреү яҙыҡ түгелдер.

Ә беҙҙә ҡайһы бер тәнҡитселәр хатта ҡурай хаҡында шифыр яҙыуҙы ла ғәйепкә һанайҙар. Йәнәһе был традицион-лыҡҡа, архаикаға, хатта милли сикләнгәнлеккә илтә, имеш!.. Ләкин, ни хәл итәһең, башҡорттоң ғүмерлек юлдашы булған ат менән ҡурай уның традицион поэтик символына әйләнеп, уның рухына, психологияһына һеңгән икән, уны бер киҙәнеү менән генә емерә һуғып булмайҙыр. Былай фекер йөрөтһәк, беҙ Рәсүл Ғамзатов менән Ҡайсын Кулиевтың да буркалар менән папахаларын һалдырып алып, һәр шифырында йырланған тау-таштарын да аяҡ аҫтарынан ҡырып-һепереп ташларға тейеш булыр инек! Улайға китһә, ай менән ҡояш та бик иҫке нәмә бит, ә йылыта, яҡтырта беҙҙе. Шулай уҡ Урал да бик боронғо тау, ләкин илең шул булғас, нисек йырламаҫҡа уны. Беҙҙең һәр беребеҙ Америкаларҙа, Һиндостандарҙа йөрөй алмай бит әле. Мәхмүт Уразаев әйткәнсә:

Һәр бер ҡаяң, һәр ҡарышың, Урал,
Йырланып та бөтмәҫ йырҙыр ул!..

Тик ул йыр тәбиғи, ысын йөрәк йыры ғына булһын. Урал менән Аҡиҙел, ҡурай менән Аҡбуҙаттар тураһында яҙып та, яһалма яңғыраған шифырҙар аҙ түгел беҙҙә. Аҡиҙел булып ағырға йәки ҡурай моңо булып ҡалырға теләк белдереү генә шағирҙы милли йөҙлө итмәй әле. Уның өсөн йәнең, рухың шул халыҡтың йәне, рухы булыу кәрәк. Милли колорит халыҡтың нәҡ ошо рухында икәнлеге Гоголь заманынан бирле билдәле хәҡиҡәт.

Ә бына «Ҡыуыш имән төбөндә», «Еҙ ҡурай» кеүек шиғырҙарҙы Мәхмүт кеүек шул ҡыуыш имәнгә ҡушылып, тәбиғәт балаһы булып үҫкән, шул ҡурай моңдарын йәне-тәне менән тыңлап рухланған шағир ғына яҙырға мөмкин. Уның хатта ҡурайсы әбей булыуына ла ышанаһың. Оло фажиғә һәм әсәлек мөхәббәте иңрәй был ҡурайҙа һәм был тәбиғи, рыяһыҙ, кешесә.

Бының менән мин, әлбиттә, Мәхмүт Уразаевҡа «һәйкәлтау» ҡуйырға ашыҡмайым. Был һәйкәлтауға шағир үҙе генә менергә тейеш. Ә унда менеп етер өсөн уға бик күп үткәүелдәрҙе үтергә, бик күп артылыштарҙы артылырға, бик күп бейеклектәргә үрләргә кәрәк әле. Бының өсөн уға иң беренсе сиратта ғәйрәтлерәк, сосораҡ, йылдамыраҡ булырға кәрәк, әлбиттә. Шундай шаулы-даулы заманда тау башындағы күҙәтеүсе булып ултырыу ғына ярамай. Шағир әҙерәк елләнеп-дауылланып алырға ла, дыуамалыраҡ, тәүәккәллерәк булырға ла тейештер. Кәрәк икән, илаһын да, көлһөн дә ул, үҙ тойғоларын бағыусы ғына булып ҡалмаһын, ә заманының күҙе-ҡолағы ла булһын. Әгәр һине бейеклектәр әйҙәй икән, тирә-яғыңа абайыраҡ та, айбарлыраҡ та ҡарарға кәрәк.

20—30-сы йылдарҙа радиоға гимн йырлау тәбиғи булһа, бөгөнгө поэзияла инде телевизорҙы ла — бәхет тотҡаһына һанау бер ҡатлыраҡ («Ырым һәм ырыҫ»). Шулай уҡ «Сергей Чекмаревҡа», «Тоҙтүбәнән үтешләй» кеүек шиғырҙар ҙа шул кимәлдә. «Йырын яныңдағы кисереш» тә бөгөнгө бейеклектәр кимәленән бик түбән. Ул ни поэма, ни монолог түгел, үтә примитив һәм оҙон. Күрәһең, өйрәнсек әйбер. Ҡайһы бер шиғырҙар үтә томанлы, ым-ишара менән тулы. Юҡ урында фәлсәфә эҙләү ҙә Мәхмүт Уразаев кеүек уйсан шағирға иш түгел.

Бөтә был кәмселектәрҙе мин текста күрһәтә барҙым; автор уларға етди иғтибар итеп, йыйынтығын тағы бер тапҡыр ҡарап сығыр һәм яңы шиғырҙары менән тулыландыра төшөр тип уйлайым. Ә тәржемәләрҙе йыйынтыҡҡа индермәгәндә ла зыян юҡ, сөнки улар М. Уразаев өсөн характерлы түгел. Тәржемә сәнғәтендә лә поэзия бейеклектәренә ҡарап эш итергә кәрәк. Йәштәрҙең китаптары нәшриәттә бик оҙаҡ ятыусан. Был йыйынтыҡ тиҙерәк уҡыусы ҡулында булһа ине.

Йыйынтыҡтың исеме есеменә тап килгәнсә, бейеклектәр әйҙәһен шағирҙы. Бейеклектәргә күтәрелгән һайын офоҡтар ҙа киңәйә барһын.

19 июль, 1969 йыл

ЙӨКМӘТКЕЊЕ

Шишмә башына сәйәхәт /*Әхиәр Хәкимов*/ 7

Көндәлектәр

Студент көндәлектәре /1951 — 1955/ 10
Хеҙмәт юлы башланғанда /1956 — 1958/ 195
Йәнтөйәккә йән тартҡас /1959 — 1961/ 313
Сарланғанда ҡәләм осҡайы /1962 — 1976/ 417

Уйланыуҙар

Музыкаль ижадтың яңы бейеклектәренә 538
Юлдағылар 542
Ваҡыт, йыр һәм ер 554
Шиғриәт — йәшлек иле 578

Литературно-художественное издание

Рами Ягафарович ГАРИПОВ

СОЧИНЕНИЯ

в 3 томах

Том II

Дневники, письма, очерки и путевые заметки

Редакция мөдире *Сабир Шәрипов*
Мөхәррире *Гөлназ Ҡотоева*
Биҙәүсе мөхәррир *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Наилә Зарипова*
Корректоры *Венера Сафина*

ИБ 5754

Йыйырға бирелде 30.06.97. Баҫырға ҡул ҡуйылды 23.02.98. Ҡағыҙ форматы 84 × 108$^{1}/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Тип Таймс гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 31,08 + 0,21 форзац. Шартлы буяу отт. 31,34. Иҫәп-баҫма таб. 33,01+0,12 форзац. Тиражы 5000 дана. Заказ № 483. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты, 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.